*Әхмәтьянов Р.Г.* Татар теленең кыскача тарихи-этимологик сүзлеге. – Казан, 2001.

*Юлдашев А.А.* Аналитические формы глагола в тюркских языках. – М., 1965.

*Юсупов Х.Г.* Асинский говор башкирского языка. Канд. дисс. (рукопись). – М., 1955.

*Ягафарова Г.Н.* Исследование тематических групп башкирской лексики (ономасиологический подход). – Уфа, 2008.

Языки мира: Тюркские языки. – М., 1997.

*Яруллина У.М.* Лексика дёмских башкир. – Уфа, 2009.

## ҠУЛЛАНЫЛҒАН МАТБУҒАТ БАҪМАЛАРЫ ИСЕМЛЕГЕ

## СПИСОК ИСПОЛЬЗОВАННЫХ ПЕРИОДИЧЕСКИХ ИЗДАНИЙ


| | |
|---|---|
| «Ағиҙел» (әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журнал) | «Агидель» (литературно-художественный и общественно-политический журнал) |
| «Атайсал» (Сибай ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Атайсал» (общественно-политическая газета г. Сибай) |
| «Ашҡаҙар» (Стәрлетамаҡ ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Ашкадар» (общественно-политическая газета г. Стерлитамак) |
| «Башҡортостан» (республика ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Башҡортостан» (республиканская общественно-политическая газета) |
| «Башҡортостан ҡыҙы» (ҡатын-ҡыҙҙар һәм ғаилә өсөн ижтимағи-сәйәси һәм әҙәби-нәфис журнал) | «Башкортостан кызы» (общественно-политический и литературно-художественный журнал для женщин и семьи) |
| «Башҡортостан панорамаһы» (республика ижтимағи-сәйәси журналы) | «Панорама Башкортостана» (республиканский общественно-политический журнал |
| «Башҡортостан уҡытыусыһы» (фәнни-педагогик һәм методик журнал) | «Башкортостан укытыусыхы» («Учитель Башкортостана») (научно-педагогический и методический журнал) |
| «Ватандаш» (ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис журнал) | «Ватандаш» (общественно-политический, научно-популярный и художественный журнал) |
| «Инйәр» (Архангел районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Инзер» (общественно-политическая газета Архангельского района) |
| «Йүрүҙән» (Салауат районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Юрюзань» (общественно-политическая газета Салаватского района) |

| | |
|---|---|
| «Йәншишмә»<br>(балалар һәм үҫмерҙәр гәзите) | «Йэншишма»<br>(газета для детей и подростков) |
| «Йәшлек»<br>(Башҡортостан йәштәре гәзите) | «Йэшлек»<br>(молодёжная газета) |
| «Киске Өфө»<br>(ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзит) | «Киске Офо»<br>(общественно-политическая и культурная газета) |
| «Көнгәк»<br>(Мәләүез районының ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни гәзите) | «Конгэк»<br>(общественно-политическая газета Мелеузовского района) |
| «Салауат»<br>(Салауат ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Салават»<br>(общественно-политическая газета г. Салават) |
| «Табын»<br>(Ғафури районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Табын»<br>(общественно-политическая газета Гафурийского района) |
| «Таң»<br>(Бөрйән районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Тан»<br>(общественно-политическая газета Бурзянского района) |
| «Торатау»<br>(Ишембай ҡалаһының һәм районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Торатау»<br>(общественно-политическая газета г. Ишимбай и Ишимбайского района) |
| «Урал»<br>(Белорет ҡалаһының һәм районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Урал»<br>(общественно-политическая газета г. Белорецк и Белорецкого района) |
| «Һәнәк»<br>(Башҡортостандың сатира һәм юмор журналы) | «Хэнек»<br>(журнал сатиры и юмора Башкортостана) |
| «Шоңҡар»<br>(Башҡортостан йәштәренең ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис журналы) | «Шонкар»<br>(общественно-политический молодёжный журнал) |
| «Юшатыр»<br>(Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Юшатыр»<br>(общественно-политическая газета г. Кумертау и Куюргазинского района) |

## ШАРТЛЫ БИЛДӘЛӘР

## УСЛОВНЫЕ ЗНАКИ

■ миҫал итеп алынған цитаталар алдынан ҡуйылған билдә — знак предшествует цитате, иллюстрирующей употребление толкуемого слова

□ рус теленә тәржемә алдынан ҡуйылған билдә — знак перед переводом на русский язык

.. һөйләмдәге ҡыҫҡартмалар — сокращения в предложении

♦ фразеологик берәмек — фразеологический оборот

● мәҡәл һәм әйтемдәр — пословицы. поговорки

/ исемдең сифат формаһындағы тәржемәһе — перевод имён существительных в форме имён прилагательных

// ҡылымдарҙың исем формаһындағы тәржемәһе — перевод глаголов в именной форме

## БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

## БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ

| | | |
|---|---|---|
| Аа | Ҡҡ | Фф |
| Бб | Лл | Хх |
| Вв | Мм | Һһ |
| Гг | Нн | Цц |
| Ғғ | ң | Чч |
| Дд | Оо | Шш |
| Ҙҙ | Өө | Щщ |
| Ее | Пп | ъ (ҡалын айырыу билдәһе) |
| Ёё | Рр | Ыы |
| Жж | Сс | ь (нәҙек айырыу билдәһе) |
| Зз | ҫ | Ээ |
| Ии | Тт | Әә |
| Йй | Уу | Юю |
| Кк | Үү | Яя |

# Б

**Б [бэ]** (Р.: вторая буква башкирского алфавита; И.: the second letter of the Bashkir alphabet; T.: Başkurt alfabesinin ikinci harfi)

Башҡорт алфавитының икенсе хәрефе, шартлаулы яңғырау ике ирен [б] тартынҡы өнөн билдәләй. Ҙур (баш) хәреф — Б, бәләкәй б формаһында яҙыла. Нумерацияла ҡулланыла. □ Вторая буква башкирского алфавита. *Б өлөшө. б) пункты. Б-ны дөрөҫ итеп яҙыу.*

**БА** (Р.: ба; И.: oh; T.: vay) *ымл. диал.*

Аптырау, ғәжәпләнеүҙе белдерә. □ Ба *(выражает удивление). Ба, һинме ул был?* ■ *Кәмәһен ярға тарта биреп, ят кеше лә юғары күтәрелде. Ләкин Хәмит шунда уҡ уны танып алды. .. Теге лә: «Ба, Хәмит!» — тип ҡосағын йәйҙе.* Д. Бүләков. *Азамат әллә нимәһенә ярһыны ла китте. .. Ни эшләргә? Ба, ана вертолёт тора ла! Ниҙер тейәйҙәр, тимәк, базаға китергә әҙерләнәләр.* Р. Солтангәрәев.

**БАБ** [ғәр. باب] (Р.: дверь; И.: gate; T.: kapı) *и. иҫк. кит.*

**1.** Ишек; ҡапҡа. □ Дверь, ворота. *Баб-тар асылды.*

**2.** Китаптың, әҫәрҙең бүлеге. □ Глава, раздел. *Китаптың беренсе бабы. Ҡиссаның өсөнсө бабы.* ■ *Ҡайһы бабтан һораһаң, яуабын тиҙ бирә, күпме баш мәғжүнселәргә балдан артыҡ ләззәте.* Я. Юмаев. *Уҡыным да китап, күрҙем бер баб.* Халыҡ йырынан.

**3.** Эш, тормоштоң бер йүнәлеше, өлкәһе. □ Область деятельности. *Игенселек бабы. Мәғрифәт бабында алға киткән. Сәйәсәт бабынан бер-ике һүҙ әйтеп китәйек. Был бабта мин бер ни ҙә белмәйем.* ■ *Халыҡтың уҡыу бабында был дәрәжәгә килә башлауы — аҙмы-күпме тәртипкә һалынған мәктәптәребеҙҙең күрһәткән нәтижәһелер.* М. Ғафури.

**4.** Мәсьәлә, тема. □ Тема *(для обсуждения или разговора). Мөһим баб. Был бабты хәл итергә кәрәк. Әңгәмә мөхәббәт бабына күсте.* ■ *Был Фатих мыҫҡыл бабында һәм әмир, һәм хан хәҙер.* Ш. Бабич.

**5.** Рәүеш, ҡиәфәт, һүрәт. □ Вид, облик. *Төрлө бабҡа инеү. Маҡсатҡа ирешеү өсөн төрлө бабтарға кереү.* ■ *Йөрөмәсе, Зыя Насир, һин төрлөсә ҡойроҡ бороп, мәғәнә сыҡмай төрлө бабтарға кереп, йүгереп йөрөп.* Ш. Бабич.

**6.** *күсм.* Юл, мөмкинлек. □ Способ, возможность. *Уҡырға баб асылды. Был бабтан файҙаланып ҡалырға кәрәк.*

**БАБА I** [дөйөм төрки *баба* 'атай'] (Р.: почтенный старец; И.: aged man; T.: baba) *и.*

**1.** Оло йәштәге хөрмәтле ир кеше. □ Почтенный старец. *Йыйылышҡа ауылдың иң оло аҡһаҡалы Ишдәүләт баба ла килгән.* ■ *Сәлим бабай Ғәббәс мулла бабайы улмай, бөтә халыҡ бабаһы ине.* Р. Фәхретдинов.

**2.** Нәҫел, ырыуҙың боронғо быуыны. □ Дед, предок. *Бабалар рухы. Бабалар һүҙе. Бабалар заманында.* ■ *Шәжәрәмдең юл башын Мәмбәт бабам башлаған.* «Йәншишмә», 8 июль 2009. *Аҙнағоловтар шәжәрәһенең ағасы туп-тура ауылға нигеҙ һалған, XVII—XVIII быуаттар сигендә йәшәгән Күҫәпкол бабаға барып тоташа.* «Башҡортостан», 28 декабрь 2009. *Борон-борондан төрки*

*бабаларыбыҙ бер күскә тупланып, дошман йөрәгенә ҡурҡыу һалған.* Ф. Аҡбулатова. *[Мөхәмәтша:] Мин ошо бабаларымдан ҡалған ергә хужа булып ултырырға тейеш инем дә бит.* «Ағиҙел», № 9, 2010. ● *Атаһы башҡаның бабаһы башка, бабаһы башҡаның доғаһы башҡа.* Мәҡәл.

**3.** *ҡар.* **бабай 2.** *Зиннәт бабамдарға барып киләм әле.* ■ *Сөнәгәткә, әлбиттә, атаһы менән бер туған Ваһап бабаһына, йәиһә Әҙһәм бабаһына туралап та ҡайтырға мөмкин ине.* Ж. Кейекбаев. *Эш былайға киткәс, Сәләх бабаһының Хәйбулланы эҙләргә ваҡыты иркен.* Ә. Хәкимов. *Быжырмәргән үҙенең бабаһына барып, яу уктары һорай.* Әкиәттән.

**БАБА II** (Р.: мужчина, совершающий обряд обрезания; И.: person performing circumcision; Т.: sünnetçi) *и.*

**1.** Сөннәткә ултыртыусы; бабасы. □ Мужчина, совершающий обряд обрезания. ■ *[Тәлмәҙинә:] Бөгөн баба килә, имеш, тип ишеткәйнем. Шул ысынмы икән? Ысын булһа, Хәмзәне сөннәткә ултыртҡанда шәп булыр ине.* Я. Хамматов. *Ауылға баба килһә, малайҙар йәшенеп бөтә торғайны.* Ф. Хисамитдинова. *Элек ир баланы сөннәткә ултыртҡан оло кешене ихтирам менән «баба» тип йөрөткәндәр.* «Йәшлек», 5 октябрь 2010.

**2.** Ир балаларҙың ҡаҫаһын ҡырҡыу йолаһы; сөннәт. □ Обряд обрезания. *Бабаға биреү. Бабаға ултыртыу.*

**БАБА-БАБА** (Р.: поколениями; И.: from generation to generation; Т.: nesillerce) *и. диал.*

Нәҫел-нәҫел менән. □ Поколениями. *Улар тарау булғандар баба-баба.*

**БАБАҒА БИРЕҮ (бабаға бир-)** *ҡ. ҡар.* **сөннәтләү.** ■ *Хаттан күренеүенсә, .. малайҙарын бабаға биргән ата-әсәләр бар икән.* В. Ғүмәров. *Ир баланы бер, өс, биш, ете йәштәрендә бабаға бирәләр.* Экспедиция материалдарынан. *Ир баланы бәләкәйҙән үк бабаға биреп сөннәтләндерәләр.* Г. Ситдиҡова.

**БАБАҒА УЛТЫРТЫУ (бабаға ултырт-)** *ҡ. ҡар.* **сөннәтләү.** ■ *Бабаға ултыртҡанда әпсен әйтәләр.* Экспедиция материалдарынан.

**БАБАЙ** (Р.: пожилой мужчина; И.: old man; Т.: ihtiyar) *и.*

**1.** Оло йәштәге ир кеше; ҡарт. □ Пожилой мужчина, старик. / Стариковский, дедовский. *Бик ҡарт бабай.* ■ *Бер көндө Аҡбулат бабай ауырып китҡән дә улдарын янына саҡырып алған, ти.* Әкиәттән. *Ҡояш ана-бына күренәм тигәндә генә, алыҫтан һайтылдап, Ҡашҡарын һөсләп, көтөүсе бабай йылҡылар янына килде.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Боронғо бабайҙарҙың, ай, һүҙҙәре аҡ ҡағыҙға яҙған хат кеүек.* Халыҡ йырынан. *Өй башынан төшөрөп, һәнәкте килтереп тотторғайным, Нажар бабай уны күтәреп, кәбән башына бесән ырғытҡан кеүек хәрәкәттәр яһап ҡараны, ҡәнәғәтләнеү һәм һоҡланыуын белгертеп, башын сайҡап ҡуйҙы.* Н. Мусин. *Сәлим бабай ҡурай уйнаған йәки йырлаған кисәлә йәш килендәр бик рәхәт ойорҙар, күңелле төштәр күрерҙәр ине.* Р. Фәхретдинов.

**2.** Атайҙың йәки әсәйҙең ағаһы йәки уларҙан оло ир кеше һәм шул кешегә өндәшеү һүҙе. □ Дядя, старший брат отца или матери или старше их мужчина и форма обращения к нему. ■ *[Урал] бер ҡартҡа тап булып: «Бабай, Тереһыу шишмәһенә юл ҡайҙа?» — тип һораны, ти.* «Урал батыр». *[Фәриҙә:] Боландар ирекtә йөрөп өйрәнгән, бабай. Артыҡ йылыла тотһаң, улар араһында төрлө сир таралырға мөмкин.* Н. Мусин. *Ҡалды, бабай, эшләгән әҙер тоҙаҡтарым да ҡалды, ти ҙә егет ҡалған барлыҡ тоҙаҡтарын ҡартҡа бирә лә ҡуя.* Әкиәттән.

**3.** Өлкән йәштәге ир *(ҡатынына ҡарата)* һәм уға өндәшеү һүҙе. □ Пожилой мужчина *(по отношению к жене)* и форма обращения к нему. *Бабай, әйҙә сәй эсергә. Бабайым иртә үлеп китте.* ■ *Бибиғәйшә ҡарсыҡ та нимәлер эшләй: үҙенән-үҙе аҡҡан күҙ йәшен бабайына һиҙҙермәҫкә тырышып, бер үк табаҡ-һауытты өс-дүрт тапҡыр йыуып һөрткән була.* Ф. Янышев. *[Сәғиҙә:] Бабай, әллә аҡса-фәләненде төшөрөп ҡал-*

*дырҙыңмы? — тигәйне, ҡарт ҡул һелтәне.* М. Тажи.

**4.** *диал.* Ҡатындың атаһы; ҡайны. □ Тесть. *Бабай бигерәк оҫта кеше ине.*

**5.** *миф.* Ата-бабалар менән киләсәк быуынды бәйләп тороусы абруйлы ҡарт. □ Авторитетный дед, связывающий предков и потомков.

**6.** *миф.* Бәләкәй балаларҙы ҡурҡыта торған мифик зат. Уны, ғәҙәттә, ялбыр сәсле, алама кейемле, бәләкәй күҙле, таяҡҡа таянған ҡарт ҡиәфәтендә күҙ алдына килтерәләр. □ Мифический персонаж, старик, которым пугают детей. ■ *Ышаныуҙар буйынса, бабай балаларҙың үтә ҡотороуын, шаярыуын, илауын яратмай. Шуға ла балалар артыҡ шаяра, илай башлаһа: «Ана, бабай килә! Илама, бабай алып китә!» — тип тыялар.* Ф. Хисамитдинова.

**7.** *миф. ҡар.* **өй эйәһе.** ■ *Өй эйәһен ҡурҡытмаҫ, борсомаҫ өсөн уны беҙҙә бабай тип тә әйтәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Донъя бабайы** донъя көтөүгә бик әүәҫ ир. □ Хозяйственный мужчина. *Әхтәм ни инде, донъя бабайы бит ул.* **Нужа бабай** 1) ярлы, ауыр тормошҡа ҡарата әйтелә. □ Тяготы жизни. *Нужа бабай үҙенекен эшләй;* 2) *миф.* Нужа һәм ярлылыҡ эйәһе. □ Дух нужды и бедности.

**БАБАЙБАШ I** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Урамда бабайбаш мамыҡтары оса.*

**БАБАЙБАШ II** (Р.: высушенное дерево; И.: dried wood; Т.: kuru ağaç) *и. диал.*

Ҡаҡ ағас. □ Высушенное дерево, используемое в строительстве. *Ҡарт бабайбаштарын лапаҫҡа алып инеп китте.*

**БАБАЙ БАШЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Ишек алдында һап-һары бабай баштары үҫә.*

**БАБАЙҒОЛАҠ (бабайғолағы)** (Р.: вареники; И.: curd dumpling; Т.: köfte) *и. диал.*

Сүсбәрә. □ Вареники. *Бабайғолаҡ бешереү. Әминәнең бабайғолаҡтары бик тәмле килеп сыҡҡан.*

**БАБАЙКА** [рус.] (Р.: бабайка; И.: kind of oar; Т.: kürek) *и.*

**1.** Һалдың, борамдың руле; ишкәк. □ Бабайка *(рулевое весло на плоту, пароме).* ■ *Йылғала сайҡала-сайҡала ағып барған һалсылар — бабайкаларын ҡуйып, ә кер сайҡаусы килендәр — керҙәрен, ауылдаштары эштәрен ташлап тыңлағандар ҡурай тауышын.* Т. Килмөхәмәтов. *Һалдың алдағы бабайкаһында бигерәк тә тәжрибәле кеше булырға тейеш.* Г. Ғүмәр.

**2.** *диал.* Ҡаҡ, нығынған борош ағас. □ Высохшее кривое дерево. *Бабайкаларҙы киҫеп, урманды таҙартыу.*

**3.** *диал.* Ҡаҙау һурғыс. □ Гвоздодёр. *Егет ҡаҙауҙарҙы бабайкаһы менән һурырға тотондо.*

**БАБАЙЛАТЫУ (бабайлат-)** *ҡ. диал. ҡар.* **сөннәтләү.**

**БАБАЙ ҮЛӘНЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1**. *Тәбиғәттең матур мәле: бабай үләне һап-һары булып күҙҙең яуын алып ултыра.*

**БАБАЙШИК (бабайшиғы)** (Р.: рулевой на плоту; И.: helmsman; Т.: dümenci) *и. диал.*

Һалда йәки паромда ҡойроҡта тороусы. □ Рулевой на плоту или на пароме. *Бабайшик һалға һикереп менде лә ҡуҙғалып та китте.*

**БАБАҠАЙ** (Р.: дед; И.: old man; Т.: dede) *и. диал.*

Бабай *(оло ир кешегә өндәшеү һүҙе).* □ Дед *(обращение к пожилому мужчине).* ■ *Түрҙән уҙ, бабаҡай. Кем булаһың?* «Һәнәк», № 2, 2011. *Йомро-йомро йомғаҡты ҡурмәнеңме, бабаҡай?* Әкиәттән. *Кейеҙбай ҡошто ояһына ҡуя ла ҡартҡа: «Бабаҡайым, йөҙ һум аҡса бирәм, зинһар өсөн, миңә уң ҡүҙе янып торған ҡошоңдо бир!» — тип инәлә.* Әкиәттән.

**БАБА ҠАРТ** *и. диал. ҡар.* **баба II, 1.** *Баба ҡарт малайҙарҙы сөннәтләй.* ■ *Баба ҡарт йөрөнө өй берено.* Экспедиция материалдарынан.

**БАБА ҠОШО** (Р.: пеликан; И.: pelican; Т.: kaşıkçı kuşu) *и. зоол.*

Оҙон йыуан моронло, морон аҫты тоҡсайлы эре һыу ҡошо. □ Пеликан (лат. *Pelecanus*). *Һаҙлыҡта йөҙҙәрсә баба ҡошо ҡыймылдаша.*

**БАБАЛАЙ** (Р.: козёл; И.: he-goat; Т.: keçi) *и. диал.*

Кәзә тәкәһе. □ Козёл. *Бабалайҙы кәртәгә ҡыуып индерҙеләр.* ■ *Нәҫел өсөн ҡалдырылмағанда, кәзә бабалайҙарын бик йәшләй көйҙөрөп (бесеп) һимертергә кәрәк.* Ф. Төхфәтуллин.

**БАБАЛАР ЗАМАНЫ** (Р.: далёкие времена; И.: days of yore; Т.: eski zamanlar) *и.*

Боронғо заман, хан заман. □ Далёкие времена. *досл.* Времена предков.

**БАБАЛАР РУХЫ** *и. диал. ҡар.* **әрүах 2.** *Бабалар рухына аят уҡытыу.*

**БАБАЛАР ҺҮҘЕ** (Р.: священные слова предков; И.: forefathers' sacred words; Т.: atalar sözü) *и.*

Ата-бабаларҙың изге һүҙҙәре. □ Священные слова предков. *Бабалар һүҙен тоторға кәрәк.*

**БАБАЛАТЫУ (бабалат-)** *ҡ. диал. ҡар.* **сөннәтләү.** *Малайҙарҙы бабалатҡандар.* ■ *Бабалатыу 3–5–7 йәштән, таҡ һандары булһын.* Экспедиция материалдарынан.

**БАБАЛАШ I** (Р.: сова; И.: owl; Т.: baykuş) *и. зоол. диал.*

Ябалаҡ. □ Сова, филин (лат. *Bubo*). *Ҡапыл миңә бабалаш килеп бәрелде.*

**БАБАЛАШ II** (Р.: троюродные; И.: second cousins; Т.: kuzenler) *и. диал.*

Ике туғандарҙың балалары. □ Троюродные (братья и сёстры). *Беҙ Нәсимә инәйең менән бабалаштар.*

**БАБАМ ТӨҪӨ** (Р.: могильная земля; И.: earth on the grave; Т.: mezar toprağı) *и. диал.*

Ҡәбер тупрағы. □ Могильная земля. *досл.* Память моего деда. *Бер ус бабам төҫө һалып алдым.*

**БАБАСАР** *и. бот. диал. ҡар.* **бабасыр уты.** *Болонда бабасарҙар сәскә атып ултыра.*

**БАБАСЫ** *и. ҡар.* **баба II, 1.** *Малайҙы бабасыға алып барырға ваҡыт етеп килә.* ■ *Мал һуйып сөннәт туйы үткәрә торғайныҡ, бабасыға күлмәк йә таҫтамал бирәһең.* Экспедиция материалдарынан.

**БАБАСЫЛЫҠ (бабасылығы)** *и. ҡар.* **сөннәтселек.**

**БАБАСЫР** [фарс. بواسير 'геморрой'] (Р.: глист; И.: helminth; Т.: solucan) *и. мед.*

Тура эсәктәге ваҡ ҡына паразит ҡорт. □ Глист, острица, власоглав. *Бабасырҙан яфаланыу. Бабасырҙан дауаланыу. Быҫраҡ һыуҙа бабасыр йомортҡалары тиҙ үрсей.* ■ *Асыҡ бассейндағы һыуҙар бигерәк тә яҙғы, йәйге осорҙа ныҡ быҫрана. Ундай һыуҙа, тимәк, бабасыр йомортҡалары ла була.* В. Ғүмәров.

**БАБАСЫР УТЫ** (Р.: горечавка; И.: gentian; Т.: centiyana) *и. бот.*

Яңғыҙ һабаҡлы, быуын-быуын сыҡҡан ҡара-ҡаршы ҡуш япраҡлы, күк сәскәле болон үләне. □ Горечавка (лат. *Gentiana*). *Бабасыр утының тамыры менән япрағы бик әсе була.*

**БАБАСЫР ҮЛӘНЕ** *и. бот. ҡар. диал.* **бабасыр уты.** *Бабасыр үләне йыйыу.*

**БАБАҪЫР** *и. диал. ҡар.* **бабасыр.** *Ул бит бабаҫырҙан яфалана.*

**БАБАТҠЫ** *и. диал. ҡар.* **битәл.** *Бабатҡыға балыҡ эләккән.*

**БАБАҺАР ҮЛӘНЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **бабасыр уты.** *Бабаһар үләне бик әсе була ул.*

**БАБАҺЫР** *и. диал. ҡар.* **бабасыр.** *Бабаһырҙан дауаланам мин.*

**БАБАШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ғәйнә башҡорттарының аймаҡ исеме. □ Бабаш *(название родового подразделения башкир-гайнинцев). Мин бабаш нәҫеленән булам.*

**БАББИТ** [рус. < ингл. *babbit* < *Babbit* 'И. Баббит (уйлап сығарыусы)'] (Р.: баббит; И.: babbit; Т.: babbit) *и.*

Аҡ ҡурғаштың баҡыр менән һөрмә ҡатышҡан иретмәһе *(подшипникка ҡойоу өсөн*

*ҡулланыла).* □ Баббит. / Баббитный, баббитовый. *Баббит иретеү.*

**БАБҠАЙ** (Р.: дедушка по матери; И.: grandfather from the mother's side; Т.: dede) *и. диал.*

Әсәйҙең атаһы. □ Дедушка по матери *(отец матери). Бабҡайымдарға барып киләм әле.*

**БАБЛАУ (бабла-)** (Р.: разделять книгу на главы; И.: divide a book into chapters; Т.: kısımlara ayırmak) *ҡ. иҫк. кит.*

Китапты, яҙманы бүлектәргә бүлеү. □ Разделять книгу, записи на главы, разделы. // Деление, разделение, разбивка. *Яҙманы баблап сығыу.*

**БАБУИН** [рус. < фр. *babouin*] (Р.: бабуин; И.: baboon; Т.: babun) *и.*

Павиандар төрөнә ҡараған маймыл. □ Бабуин *(обезьяна рода павианов)* (лат. *Papio cynocephalus).*

**БАБУЛ I** [рус. *бобыль*] (Р.: бобыль; И.: landless poor peasant; Т.: topraksız köylü) *и. иҫк.*

Ерһеҙ ярлы крәҫтиән. □ Бобыль *(безземельный крестьянин). Бабулдарҙың тормошо ауыр.*

**БАБУЛ II** [рус. *бобыль*] (Р.: бобыль; И.: loner; Т.: bekâr) *и. һөйл.*

Яңғыҙ, яңғыҙаҡ, ғаиләһеҙ кеше. □ Бобыль *(одинокий, бессемейный человек). Бабул булып йәшәү.*

**БАБУНӘЖ** [фарс. بابونج] (Р.: ромашка; И.: camomile; Т.: papatya) *и. бот. кит.*

Аҡ сәскә. □ Ромашка (лат. *Matricaria). Бабунәж гөлләмәһе.*

**БАБУР ЕҢГӘ** (Р.: сноха, ухаживающая за женихом и невестой; И.: senior daughter-in-law; Т.: yenge) *и. этн.*

Туй йолаһында кейәү менән кәләште ҡарай торған еңгә. □ Сноха, ухаживающая за женихом и невестой *(в свадебном обряде).* ■ *Ике бабур еңгә ҡуялар, улар кейәүҙе ашата, эсерә, мунса яғып индерә.* Экспедиция материалдарынан.

**БАБҮНӘ** [фарс. بابونه] *и. бот. кит. ҡар.* **бабунәж.** *Яланда ап-аҡ бабүнәләр үҫә.*

**БАБЫ БОРСАҠ (борсағы-)** *и. бот. диал. ҡар.* **ноҡот борсағы.** *Бабы борсаҡ үҫтереү.*

**БАБЫҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **бабҡай.** *Беҙгә бабыҡайым килде.*

**БАГАЖ** [рус. < фр. *bagage*] (Р.: багаж; И.: baggage; Т.: bagaj) *и.*

**1.** Пассажирҙың төрөп, үҙе менән юлға алған нәмәләре. □ Багаж *(вещи, груз пассажиров).* / Багажный. *Багажым ауыр. Багаж менән юлға сығыу.* ■ *Бер әбей .. багажына ултырған да әлеге бер көйөн көйләй.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Махсус вагонда, карап һәм самолёттың махсус бүлмәһендә оҙатылған пассажир йөгө. □ Багаж *(груз пассажира, отправленный в специальном вагоне, в специальной комнате корабля и самолёта). Сумаҙандарҙы багажға тапшырыу.*

**3.** *күсм. Кемдеңдер* билдәле бер өлкәләге белем һәм мәғлүмәттәре. □ Багаж *(знание и сведения у кого-то в определённой области). Белем багажы. Аҡыл багажы. Интеллект багажы.* ■ *Ул [Рәшиҙә] уҡыны, бик тырышты, аң багажы үҫте киңәйеп.* Ҡ. Даян.

**БАГАЖЛЫ** (Р.: с багажом; И.: having baggage; Т.: bagajlı) *с.*

Багажы булған. □ С багажом, имеющий багаж. *Аэропортта багажлы кешеләр тегеләй-былай үтеп йөрөйҙәр.*

**БАГАЖНИК (багажнигы)** [рус.] (Р.: багажник; И.: boot; Т.: bagaj) *и.*

Велосипед, мотоцикл, автомобилдең ваҡ багажды ҡуя торған урыны. □ Багажник. *Әйберҙәрҙе багажникка һалығыҙ.* ■ *[Гилман — Нәфисәгә:] Һин, ни... шым ғына әсәйеңә әйтерһең инде. машина багажнигында ҡустәнәс бар ине.* Д. Бүләков. *Шунда уҡ Батыр әкрен генә багажникты асты һәм тирә-яғына күҙ һалды.* Н. Ғәйетбаев. *Гүзәл атаһының ҡулындағы сумкаһын алды, ә кейәүе салғыны өҫкө багажникка бәйләп ҡуйҙы.* Ф. Янышев.

**БАГАЖНИКЛЫ** (Р.: с багажником; И.: having a boot; Т.: bagajlı) *с.*

Багажнигы булған. □ С багажником, имеющий багажник. *Багажниклы велосипед.*

**БАГГИ** [рус. < ингл. *buggy* ‘кабриолет, еңел коляска’] (Р.: багги; И.: buggi; Т.: spor arabası) *и. спорт.*

1—2 урынлы асыҡ башлы ярыш автомобиле. □ Багги. *Багги ярышы. Багги машинаһы.*

**БАГЕТ** [рус. < фр. *baguette* ‘таяҡса’] (Р.: багет; И.: plank; Т.: çerçevelik) *и.*

**1.** Көҙгө, картина тирәсе өсөн һырлап йәки биҙәп эшләнгән йоҡа тар таҡта. □ Багет *(резная планка для рам).* / Багетный, багетовый. *Багет тирәс. Багет тирәсле көҙгө. Багет салоны.*

**2.** Шул таҡтанан эшләнгән тирәс. □ Багет *(рама из резной планки). Көҙгөнөң ситенә багет ҡуйыу. Картинаны багет менән тирәсләү.*

**БАГОР** [рус.] (Р.: багор; И.: hook; Т.: zıpkın) *и.*

Оҙон һаплы осло ырғаҡ. □ Багор. / Багорный. *Багор ырғағы. Багор менән балыҡ тотоу. Багор менән һыуҙан бүрәнә сығарыу.* ■ *[Миһран] ҡайһы ваҡыт ҡулындағы багоры менән бүрәнәләргә йәбешкән боҙҙарҙы төрткөсләй, яр башындағы арҡандарҙы төкләп ала, уларҙы ергә йыйыштыра.* М. Тажи. *Ҡыуғын бик хәтәр эш: тамырға эләгеп торған йә ағас төбөнә эркелеп килеп тығылған бүрәнәләрҙе багор менән төрткөләп ағыҙғанда, ҡыуғынсы ҡайһы саҡта, яҙатайым һыуға төшөп, ағып та китә һәм һыуға батып үлә.* Ж. Кейекбаев. *Ерекле йылғаһының уң яҡ ярынан да, һул яғынан да оҙон һаплы багор, лом, балта тотҡан кешеләр төркөмө йылға түбәнләсенә табан ағыла.* Н. Мусин. *Багор ҡулдан-ҡулға күсте, Ҡарам яҡлы кешеләр арый башланы.* Ә. Хәкимов.

**БАГОРЛАП** (Р.: багром; И.: with a hook; Т.: zıpkınla) *р.*

Багор менән. □ Багром. *Бүрәнәләрҙе багорлап сығарыу.*

**БАҒ** [фарс. باغ] (Р.: сад; И.: orchard; Т.: bahçe) *и. шиғр.*

Баҡса. □ Сад. / Садовый. *Баҡ гөлө.* ■ *Донъя ул бер баҡ икән; йән эйәһе шул баҡта .. бары үҫемлек, гөл икән.* «Урал батыр». *Китте ҡорт, бағлар тапты, күк сәскә күкрәп торған тағлар тапты.* Ш. Бабич. *Һүнмәй мөхәббәт, көн һайын арта ғына, мин инеп аҙаштым, ахыры, ысын мөхәббәт бағына.* М. Ғафури. *Кавказ буйҙарында, балҡар бағында алһыулаңып алмалар бешкән, мул тормош ҡанат йәйгән.* Ғ. Хөсәйенов. *Күңелемдә баҡ астым таң нурында, ер гөлдәрен шунда теҙҙем мин.* Ғ. Амантай. *Ер йәшәрер, бергә ил йәшәрер, яңы тормош бағы гөлләнер.* Т. Йәнәби.

**БАҒАЛАНЫУ (бағалан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **инаныу.** *Кешеләр ниндәйҙер юғары көс барлығына бағалана.*

**БАҒАН** *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **бағана I, 1.** ■ *Баған ҡағыу.* ■ *Ауылға ҡәкүк килһә, баған төбөнә һөт-ҡатыҡ ҡуйғандар.* Башҡорт мифологияһынан.

**2.** Киндер урынындағы ян ағастар. □ Боковые стояки домашнего ткацкого станка. *Киндер урынының бағаны.*

**3.** *диал. миф. ҡар.* **бағана I, 8.**

**БАҒАНА I** [дөйөм төрки *бағана, баған* ‘бағана’] (Р.: столб; И.: pole; Т.: direk) *и.*

**1.** Ергә ҡаҙып ултыртылған бүрәнә. □ Столб. *Имән бағана. Телефон бағанаһы. Ҡапҡа бағанаһына һөйәлеү. Ҡойма бағанаһы ултыртыу. Бағана кеүек ҡатып ҡалыу.* ■ *Маһира менән Шәйхи ҡаҙылған соҡорға бағана ултыртып маташа ине.* Х.Ғиләжев. *Сым тартылған бағаналар теҙелеп киткән ауыл ситенән.* М. Ғәли. *Оло юл буйлап телефон бағаналары туҡтауһыҙ геүләй.* Ш. Янбаев. *Апайым менән беҙ атайыма ҡаршы йүгерҙек, әсәйем, ниңәлер, ары атларға хәле юҡ кешеләй, ҡапҡа бағанаһына һөйәлде.* Н. Мусин. *Ана, электр бағаналары Ҡаҙанғол үренә менеп еткән, бына-бына ауылға килеп инәсәктәр.* М. Кәрим. *Юламан аһ-уһ килеп ҡайтып етһә, егеүле ат уның ҡапҡа бағанаһына бәйләүле тора.* Ә. Хәкимов. *Бағана ултырт, ҡойма ҡойҙор, йәнем, урам буйына.* Халыҡ йырынан.

**2.** *күсм.* Яҙыуҙың йәки һандарҙың өҫтән аҫҡа төшкән тар буйы. □ Столбец, колонка. *Һүҙҙәрҙе ике бағанаға бүлеп яҙыу.*

*Гәзиттең бер бағанаһы ауыл хужалығы күрһәткестәренә бағышланған.*

**3.** *диал. ҡар.* **ҡаҙыҡ.** *Бағана ҡағыу. Ат бағанаһы.* ■ *Алты ҡола ала бейә тимер бағанала бәйле тора.* Әкиәттән. *Хатта яҡыныраҡ барған кеше өй урыны билдәләнгән ерҙә ҡыҫҡа ғына бағаналар ҡағылғанды ла шәйләр ине.* Д. Бүләков. *Зәкәриә уға [Сәмиғуллаға] бағана ослап биреп торҙо.* Ж. Кейекбаев. *Әйләр хандың тирмә алдындағы бағананан яусыларҙың бәйле аты өҙөлмәгән.* «Алпамыша».

**4.** *диал. ҡар.* **баҡан.** ■ *Буҙансы батыр йәйә менән уғын алған да баяғы ҡырҡ аршынлы бағана башына менеп киткән.* Әкиәттән.

**5.** *диал. ҡар.* **һыргауыл 1.**

**6.** *күсм. Нимәнеңдер* бейек булып һуҙылған вертикаль рәте. □ Столб. *Сан бағанаһы. Төтөн бағанаһы.* ■ *Тауҙар итәгендә төтөн бағаналары күренә, йәйләүҙәгеләр усаҡ яҡҡандар, күрәһең.* М. Кәрим. *Ел ҡара төтөн бағаналарын бергә ҡушып диңгеҙ өҫтөнә ҡыуа, шул сәбәпле яр буйы зәңгәрһыу-ҡара монар эсендә йөҙә.* Б. Рафиҡов. *Көтмәгәндә аҫтан урғылып һыу бағанаһы күтәрелде, аяҡ терәгән боҙҙары түңкәрелде лә, быларҙы батырып, өҫтән ҡапланы ҡуйҙы.* Г. Яҡупова. *Күп тә үтмәне, ҡаланың әле бер ерендә, әле икенсеһендә ялҡын бағаналары ҡалҡып сыҡты.* Ә. Хәкимов. *Бер ваҡыт, йылҡысы менән һунарҙа йөрөгәндә, Ҡоблан тау арьяғында туҙан бағанаһын күргән.* Әкиәттән. *Төтөн бағанаһы бөҙрәләнеп юғары күтәрелде лә, һүтелеп, юғалды.* Ғ. Хәйри. *Иртәнсәк томан һыуҙан бағана кеүек күтәрелһә, ямғыр булыр.* Һынамыш.

**7.** *күсм.* Терәк, таяныс. □ Опора. *Тормош бағанаһы.* ■ *[Хәҙрәт Шәрифуллаға:] Ун йылдар буйына үҙемдә торған, тормошомдоң бағанаһы булған һине нисек иттереп ҡалдырып китәйем?* Ғ. Хәйри. ● *Бала — атаинәгә алтын бағана.* Әйтем.

**8.** *миф.* Йыһандың төрлө донъяларының үҙ-ара бәйләнешен белдергән бағана; донъя ағасын, тауҙы йәки ат бәйләгесте кәүҙәләндерә. □ Столб, кол, который осуществляет связь между мирами Вселенной, выполняет роль мирового дерева или горы, коновязи, оси земли. ■ *Ҡайғы, бәлә-казанан һаҡланыу йөҙөнән кәкүк ултырған ағасҡа, бағанаға һөт йә бұлмаһа ҡатыҡ ҡойоу ғәҙәте бар.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Күҙле бағана** *шул уҡ* **күҙле бүкән** (*ҡар.* **бүкән**). **Тәре бағанаһы** шаҡ ҡатып ҡалған кешегә әрләп әйтелә. □ Как истукан *(о человеке)*. **Ҡатҡан бағана һымаҡ (кеүек)** аптырауҙан, ҡурҡыуҙан һ. б. ҡатып ҡалғанда әйтелә. □ Как истукан *(об удивлённом, испугавшемся человеке)*. ■ *Мин шыҡһыҙ бүлмә уртаһында ултырҙым да ҡатҡан бағана һымаҡ ҡуҙғала ла алмай тик торам.* М. Бураҡаева. *Ҡатҡан бағаналай баҫып тора бирә Сәлим.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *Тик наҙлы хистәрен һиҙҙерергә өйрәнмәгән бала тартынды, баҫҡан ерендә ҡатҡан бағана кеүек торҙо ла торҙо.* «Ағиҙел», № 7, 2010.

**БАҒАНА II** (Р.: нарыв между пальцами; И.: boil; Т.: çıban) *и. мед.*

Бармаҡ араһына сыҡҡан шешек. □ Нарыв между пальцами или на ладони. *Бағана сығыу.*

**БАҒАНА III** (Р.: столбики; И.: columns; Т.: sütün) *и.*

Йөн ойоҡто бәйләү ысулы. □ Столбики *(способ вязки шерстяного носка). Ойоҡто бағана менән бәйләү.*

**БАҒАНА IV** (Р.: куплет; И.: couplet; Т.: beyit) *и. диал.*

Шиғри әҫәрҙең рифма менән берләштерелгән бер нисә юллыҡ бер өлөшө. □ Куплет. *Өс бағаналы йыр. Йырҙың тәүге бағанаһын мин йырлайым.*

**БАҒАНА V** *р. диал. ҡар.* **бая.** ■ *Бағана мин килмәнем бит.* Әкиәттән.

**БАҒАНАҠ (бағанағы)** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бағанаҡ йөндәре оса.*

**БАҒАНА ҠАБЫРҒА** *и. анат. ҡар.* **бығым.** *Бағана ҡабырға ҡаҙыһы.*

**БАҒАНАЛАП** (Р.: в столбик; И.: in a column; Т.: alt alta) *р.*

**1.** *мат.* Һандарҙы бер-береһенең аҫтына яҙып математик ғәмәлдәрҙе башҡарыу юлы. □ В столбик. *Бағаналап ҡуйыу.*

**2.** Бер-береһенең аҫтына теҙеп. □ Столбиками. *Бағаналап яҙылған һүҙҙәр.*

**БАҒАНАЛЫҠ (бағаналығы)** (Р.: дерево, пригодное для столба; И.: timber fit for posts; Т.: direklik) *и.*

Бағана итеп ҡырҡырға яраҡлы ағас. □ Дерево, пригодное для столба. *Бағаналыҡтар әҙерләү.* ■ *[Әхмәҙиев:] Һарайҙы йүнәтер өсөн бағаналыҡ, урҙа, бәпкәлек ағас кәрәк инде.* Р. Солтангәрәев. *Кисә [Нәзиф], юл ыңғайында, ҡапҡа бағаналыҡтары өсөн ике имән алып ҡайтты.* Ғ. Лоҡманов. *Кисә, ана, .. [атайым] атты еккән дә төнөн урманға барып, имән бағаналыҡ тейәп ҡайтҡан.* Н. Мусин.

**БАҒАНА УМАРТА** (Р.: колодочный улей; И.: sort of a (bee)hive; Т.: arı kovanı) *и. диал.*

Түмәрҙе соҡоп яһаған умарта; түмәр умарта. □ Колодочный улей. *Бабай бағана умарталар яһап ҡуйған.*

**БАҒАН ТУБЫ** (Р.: игра в мячик; И.: sort of a ball game; Т.: top oyunu) *и. диал.*

Туп ҡағыш уйыны. □ Игра в мячик. *Баған тубы уйнау. Балалар баған тубы һуға.*

**БАҒАНУҠ** (Р.: давно; И.: long ago; Т.: çoktan) *р. диал.*

Бая уҡ. □ Давно. *Бағануҡ килдем.*

**БАҒАРА** (Р.: речной гольян; И.: minnow; Т.: golyan balığı) *и. зоол.*

**1.** Йылға маймаһы *(балыҡ).* □ Речной гольян (лат. *Phoxinus phoxinus*).

**2.** *диал. ҡар.* **ташбаш 1.**

**БАҒАУ** (Р.: топор с поперечным лезвием; И.: kind of an axe; Т.: balta) *и.*

**1.** Ялғаш, умарта кеүек нәмә соҡой, бүрәнә ыра торған арҡыры балта. □ Топор с поперечным лезвием *(для выдалбливания корыт, колодочных ульев и бортей, выемки пазов в брёвнах).* ■ *Яу уҙып, бер аҙ үткәс, хан башҡорттар араһына ғәскәре-нөгәрҙәре менән түрәләрен ебәргән. Улар .. ер-һыуҙарҙы ырыу-ырыу, йәйләү-йәйләү бүлеп биргән, һәр бер ырыу халҡына тамға, оран, ағас, ҡош тәғәйенләгән. Беҙҙең ҡатай ырыуының бағау тамғаһы, Салауат ораны, ҡарағай ағасы шунан ҡалған.* Легенданан.

**2.** *миф.* Умартаны ен-пәрейҙән, ауырыу эйәләренән ҡурсалай торған предмет. □ Топор *(мифологизированный предмет, охраняющий улей).*

**БАҒАУЫЛ** [боронғо төрки *баҡ-* 'ҡарау, күҙәтеү'] (Р.: караул; И.: guard; Т.: muhafız) *и.*

**1.** *Ниҙеңдер* именлеген күҙәткән һаҡ; ҡарауыл. □ Караул, наблюдение; надзор, присмотр. *Бағауыл ҡуйыу.* ■ *Кинйә яҡ-яҡтағы бағауылды көсәйтте.* Ғ. Ибраһимов. *Башҡорттарҙа бер ырыу башлығы үлер алдынан ҡапҡа алдына бағауыл ҡуя.* Легенданан. *Бағауылһыҙ ил эсе арҙандарһыҙ буламы?* Эпостан.

**2.** Шул һаҡта торған кеше; һаҡсы, ҡарауылсы. □ Наблюдатель; стража, караул. *Бағауыл ҡуйыу.* ■ *Борон-борон заманда, кәзә команда, өйрәк урәтник, күркә дисәтник, бүреләр бағауыл .. саҡта булған, ти, бер хан.* Әкиәттән. *Таң менән тирә-яҡты күҙәтергә сыҡҡан Шоңҡарҙың бағауылдары Тубыл яғынан драгундар яҡынлап килеүен хәбәр итт[е].* Н. Мусин. ● *Яманды бағауыл итһәң, «яу килә» тип ҡыҫҡырыр.* Мәҡәл.

**БАҒАУЫЛЛАТЫУ (бағауыллат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бағауыллау.** *понуд. от* **бағауыллау.** *Көтөүсенән малымды бағауыллатам.*

**БАҒАУЫЛЛАУ (бағауылла-)** (Р.: присматривать; И.: look (after); Т.: gözetmek) *ҡ.*

*Ниҙеңдер* именлеген, теүәллеген һаҡлау; ҡарауыллау. □ Присматривать, приглядывать *за кем-чем,* караулить *кого-что. Аттарҙы бағауыллау.* ■ *[Бай:] Ана ҡура янында һарыҡтарыңды бағауыллап ят, эт-ҡош теймәһен.* Т. Хәйбуллин.

**БАҒАУЫЛЛЫ** (Р.: находящийся под присмотром; И.: taken care of; Т.: bakımlı) *с.*

Ҡарауыллы. □ Находящийся под присмотром. *Бағауыллы йорт. Бағауыллы һарай. Бағауыллы ер-һыу. Бағауыллы малтыуар.*

**БАҒАЯҠ (бағаяғы)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.**

**БАҒБАН** [фарс. باغبان] (Р.: садовод; И.: gardener; Т.: bahçıvan) *и. иҫк.*

Баҡсасы. □ Садовод, садовник. *Бағбан үҫтергән сәскәләр.*

**БАҒБОСТАН** [фарс.-ғәр. باغبستان] (Р.: фруктовый сад; И.: orchard; Т.: meyve bahçesi) *и. иҫк. кит.*

Йәшелсә-емеш баҡсаһы. □ Фруктовый сад. ■ *Бағбостан эсе йәмгә сырмалды, балҡыны унда илһам нурҙары.* Ш. Бабич.

**БАҒИ I** [фарс.-ғәр. باغ] (Р.: деспот; И.: tyrant; Т.: zorba) *и. иҫк. кит.*

Йәберләүсе, залим. □ Деспот, тиран, притеснитель, угнетатель, поработитель. *Бағиҙар яуы.* ■ *Шуның өсөн дә хәҙер уны [Арыҫланды] үҙе ойошторған бағиҙар табында күргеһе килеп, [Килмәк] һаман да уға сат йәбешергә тырыша ине.* Ғ. Ибраһимов.

**БАҒИ II** [фарс.-ғәр. باغى] (Р.: распутный; И.: dissolute; Т.: ahlaksız) *с. иҫк. кит.*

Сиктән, тәртиптән сығыусы. □ Распутный, нарушающий дисциплину. *Бағи эш. Бағи ҡылыҡ.* ■ *[Хәлфә:] Һә?! Бына бит, бына ул бағи һүҙҙәр. Баштанан юғары булғың килмешме?* Ғ. Ибраһимов.

**БАҒИҪ** [ғәр. باعث] (Р.: причина; И.: cause; Т.: sebep) *и. иҫк.*

Сәбәп, һылтау. □ Причина, мотив, побуждение, стимул. *Бағиҫ булыу. Был хәлгә нимә бағиҫ булып тора?*

**БАҒЛАНЫУ (бағлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бағлау.** *страд. от* **бағлау.** *Ике дәүләт араһында дуҫлыҡ ептәре бағланды.*

**БАҒЛАНЫШ** (Р.: связь; И.: relation; Т.: bağlantı) *и. юғары.*

Ике арала булған ҡатнашлыҡ; бәйләнеш. □ Связь, сношения. *Бағланыш тотоу. Дуҫлыҡ бағланыштары.*

**БАҒЛАУ (бағла-)** [боронғо төрки *бағ* 'бау'] (Р.: устанавливать связь; И.: establish relations; Т.: bağlamak) *ҡ. юғары.*

**1.** Ике арала ҡатнашлыҡ, мөнәсәбәт булдырыу. □ Устанавливать связь. // Установление связи. *Туғанлыҡ бағлау.*

**2.** *иҫк.* Бәйләү. □ Привязывать. ■ *Ҡыуан, башҡорт, ҡыуанып хаҡҡа буйһон, ил битенә бағла биленде.* Ш. Бабич. *Күңелемде донъяға түгел, ожмахҡа бағланым, мәшәҡәт күрҙем.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**3.** *күсм.* Ирекһеҙ итеү; бәйләү. □ Делать подневольным. *Ул бик уҫал ир, ҡатынын бағлап тота.*

♦ **Ҡул бағлау** түбәнселек менән ике ҡулды бер-береһе өҫтөнә күкрәккә ҡуйыу. □ Сложить руки на груди *(в знак почтения). Ҡул бағлап күрешеү.* **Өмөт** *(йәки* **ышаныс)** **бағлау** өмөт йәки ышаныс менән ҡарау. □ Возлагать надежды, надеяться, рассчитывать *на кого-что.* ■ *Тәбиғәт күренешен күҙәткәс, киләсәккә ҙур өмөт бағлаған Ғәйзулланың күңеле бер аҙ күтәрелде.* Я. Хамматов. *Аңламай, тип мине шелтәләмә, кисерер, тип өмөт бағлама.* Р. Сафин. *Мин дә таныш тауҙарыма гел өмөт бағлап торам.* Т. Арслан. *Халыҡ уларҙы [илселәрҙе] ҙур өмөт бағлап оҙатҡан.* Ә. Вахитов. *Тимәк, Кәбирҙең киләсәгенә унда айырым өмөт бағлайҙар?* «Ағиҙел», № 10, 2010. *Атаһы күп өмөт бағлаған түрә улы Шағәле лә ана шулай үҫеп буйға етте, егет ҡорона керҙе.* К. Мәргән.

**БАҒРА** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **баҡра.** ● *Бүҙәнәнең дә үҙенә күрә бағраһы бар.* Әйтем.

**2.** *зоол. ҡар.* **бағыр I, 1.**

**3.** *зоол. ҡар.* **багара 1.**

**4.** *зоол. ҡар.* **бағыр үләне.**

**БАҒРЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **бағыр I, 1.** ■ *Умарталыҡтан алыҫ түгел, бөҙрә тирәктәр араһында, бәрҙе, бағры балыҡтарының төйәге — ташҡын йылға бер өҙлөкһөҙ үҙенең мәңгелек йырын йырлай.* З. Биишева. *Бишмәт кенә бишмәт, бишләр төймә, бағры меҫкен балыҡ һөйәге.* Халыҡ йырынан. *Бер саҡ был [карт] йылғаға төшөп йыуынайым тиһә, һыуҙан бер бағры килеп сыҡҡан.* Легенданан.

**БАҒСТАН** [фарс. باغستان] (Р.: сады; И.: garden plots; Т.: bahçelik) *и. иҫк. кит.*

Баҡсалыҡ. □ Сады. *Бағстан ҡоштары.*

**БАҒСЫ** (Р.: садовник; И.: gardener; Т.: bahçıvan) *и. иҫк. кит.*

Баҡсасы. □ Садовник, садовод. ■ *Был һүҙҙәрҙән баҡсыларҙа тәкәт бөтә, ауыҙҙан уттлы асыу сәсрәп китә.* Ш. Бабич.

**БАҒҮЛӘН** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бағүлән сәскәһе.*

**БАҒЫМ I** [дөйөм төрки *баҡ-* 'бағыу, ҡарау'] (Р.: знахарство; И.: healing; Т.: bağı) *и.*

Им-том, күрәҙәлек итеү эше. □ Знахарство, ворожба, гадание. *Бағым менән булыу. Бағым менән шөғөлләнеү. Бағым итеү. Бағымға йөрөү. Бағымға ышаныу.*

**БАҒЫМ II** (Р.: южный склон горы; И.: southern slope of a mountain; Т.: dağın güney yamacı) *и. диал.*

Тауҙың көньяҡ бите. □ Южный склон горы. *Малдар тау бағымында йөрөйҙәр. Бағымдағы ҡайындар ҡояш нурҙарына ҡойона.*

**БАҒЫМБА** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бағымба мамығы.*

**БАҒЫМ БАҒЫУ (бағым баҡ-)** (Р.: заниматься знахарством; И.: practice healing; Т.: fal açmak) *ҡ.*

Им-том, күрәҙәлек менән шөғөлләнеү. □ Заниматься знахарством, ворожбой, ворожить, гадать. // Знахарство, ворожба, гадание. *Бағым бағыу менән көн күреү. Өләсәйем бағым бағып, кеше ҡарап йәшәне.*

**БАҒЫМБАҠ (бағымбағы)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.**

**БАҒЫМ БАЛА** (Р.: приёмный ребёнок; И.: adopted child; Т.: evlatlık) *и. диал.*

Тәрбиәгә алынған бала. □ Приёмный ребёнок. *Бағым бала алған ғаиләләр дәүләт күҙәтеүе аҫтында була.*

**БАҒЫМЛЫҠ (бағымлығы)** (Р.: заговор; И.: kind of exorcism; Т.: bağı) *и. диал.*

Бағым бағыуҙа әйтелгән һамаҡ. □ Заговор, используемый в знахарстве. ■ *Бағымсы бағымлыҡ әйтә лә имләй башлай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҒЫМСЫ I** [боронғо төрки *баға* 'күрәҙә'] (Р.: знахарь; И.: healer; Т.: bağıcı) *и.*

Имсе, күрәҙәлек итеүсе. □ Знахарь, знахарка, ворожея, гадалка. / Знахарский. *Бағымсыға йөрөү. Бағымсыға барыу.* ■ *Бағымсы күрәҙәлек, им-том, арбау, ырым менән булышҡан. Ул кешенең үткәнен һәм киләсәген, ауырыу-сырхауҙарын, хатта өй-ниәттәрен дә белгән.* Ф. Хисамитдинова. *Юрау өсөн Тамъян иленә ҡайҙандыр Сулман яғынан килеп аҙашып тороп ҡалған бағымсы ҡарсыҡ саҡырылды.* К. Мәргән. *Бәләкәй сағында әсәһе уны [Гөлбаныуҙы] бағымсыға ла алып барып ҡараны.* Т. Ғарипова. ● *Бағымсыға барма, башыңа ҡайғы алма.* Әйтем.

**БАҒЫМСЫ II** *и. ҡар.* **бағыусы II.** *Кисәнең бағымсылары. Эшҡыуар сараның бағымсыһы булырға ризалашты.*

**БАҒЫМСЫЛАУ (бағымсыла-)** (Р.: заниматься знахарством; И.: practice healing; Т.: fal açmak) *ҡ.*

Им-том, күрәҙәлек менән шөғөлләнеү. □ Заниматься знахарством, ворожбой, ворожить, гадать. ■ *Им менән, күрәҙәлек менән шөғөлләнеүҙе бағымсылау тиҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҒЫМСЫЛЫҠ (бағымсылығы)** *и. ҡар.* **бағым I.** *Бағымсылыҡ менән шөғөлләнеү.*

**БАҒЫМСЫ ӘБЕЙ** *и. ҡар.* **бағымсы.** ■ *Бағымсы әбей балаһыҙ ҡатынды ике йылға ҡушылдығына алып барып әмәлләгән.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҒЫМТАЛ** (Р.: ухоженный; И.: well-groomed; Т.: bakımlı) *с.*

Яҡшы ҡаралған, тәрбиә ителгән *(малға ҡарата).* □ Ухоженный, упитанный, откормленный *(о скоте). Бағымтал мал.*

**БАҒЫНДЫРЫУ (бағындыр-)** (Р.: подчинять; И.: subordinate; Т.: bağımlamak) *ҡ.*

**1.** Көс ҡулланып, баш эйҙереү, бойондороҡло итеү; буйһондороу. □ Подчинять, покорять. // Подчинение, покорение. *Үҙеңә бағындырыу.* ■ *Их, тәбиғәт, .. кешеләр бөгөн һине үҙҙәренә бағындырыр өсөн килделәр.* Б. Вәлид.

**2.** Күнергә, яраҡлашырға мәжбүр итеү; буйһондороу. □ Заставлять приспосабливаться. ■ *Оҙаҡҡа һуҙылған аҡман-тоҡман буранлары ергә мәңгегә килгәндәй, бөтә үҫемлек һәм тереклек донъяһын үҙ ҡеүәтенә буйһондороп, бағындырып алырҙай булып туланы.* Т. Ғарипова.

**3.** Ҡулдарҙы күтәрттереп, буйһондороу. □ Заставлять поднять руки вверх. *Әсирҙе бағындырыу.*

**4.** *күсм.* Бөтә булмышты биләү; әсир итеү. □ Обвораживать, очаровывать, пленить. ■ *Егеттән ишеткән был йыр мине үҙенә бағындырҙы.* Экспедиция материалдарынан.

**БАҒЫНЫУ I (бағын-)** (Р.: оглядываться; И.: glance back; Т.: bakınmak) *ҡ.*

**1.** Тирә-яҡҡа ҡарау; ҡаранығ. □ Оглядываться, озираться, осматриваться. // Оглядка, осмотр. *Тирә-яҡҡа бағыныу.*

**2.** *диал.* Дауаланыу. □ Лечиться. *Мин бағынып йөрөйөм. Дауаханала бағынып ятам.* ■ *Бағымсыға барып бағынып аяҡҡа баҫтым.* Башҡорт мифологияһынан.

**3.** *диал.* Һаулыҡты тикшертеү, ҡаралыу; күренеү *(табипҡа).* □ Обследоваться *(у врача). Табипҡа бағынырға барыу. Бер аҙна булһа ла ятып табиптан бағынып ҡайтырмын тигәйнем.*

**4.** *диал.* Бағымсылыҡ менән шөғөлләнеү. □ Знахарствовать. *Ул әбей бағына ла, шикелле.*

**5.** *диал.* Хәйләләү. □ Хитрить. *Бағынмай ғына һөйләш.*

**БАҒЫНЫУ II (бағын-)** (Р.: подчиняться; И.: submit (to); Т.: uymak) *ҡ.*

**1.** Баш һалыу, буйһоноу. □ Подчиняться, покоряться. // Подчинение, покорение. *Батшаға бағынған ғәскәр.* ■ *Барыбер еңеп ҡайтырһың, бағынһаң да түҙ әйҙә.* Йырҙан.

**2.** Етәкселек аҫтында булыу, бойондороҡло булыу. □ Подчиняться, повиноваться *кому-чему. Түрәләргә бағыныу.*

**3.** Табыныу. □ Поклоняться *кому-чему.* ■ *Йыланға бағынған башҡорттарҙың йылан ырыу кәбиләләре хәҙер ҙә яҡшы билдәле.* Ғ. Хөсәйенов.

**4.** *күсм.* Бөтә булмышың менән бирелеү; табыныу. □ Отдаться полностью, преклоняться перед *кем-чем. Сәхнәгә бағыныу. Ижадҡа бағыныу.* ■ *Көсөгөҙгә иман итеп, мин бағындым, йөрәгемә мөхәббәт һал, матур һындар?* Ш. Бабич.

**БАҒЫР I** (Р.: форель; И.: trout; Т.: alabalık) *и. зоол.*

**1.** Һыртына төрлө төҫтәге төрткө төшкән затлы балыҡ *(ваҡ тау йылғаларында, саф һыуҙа була).* □ Форель. / Форелевый (лат. *Salmonidae*). *Бағыр ыуылдырығы. Бағыр үрсетеү.* ■ *Мин Һүрәмдең моңон тыңлап үҫтем, йөҙҙөм, һөҙҙөм бәрҙе, бағырын.* М. Кәримов. *Димдә бағырҙың ғүмерҙә булғаны юҡ, баҙарҙа уны һатмайҙар, ғөмүмән, бағыр тигәнен минең күргән дә юҡ.* Ә. Чаныш. *Ике-өс атлап ҡына аша сығырлыҡ, төбөнә сыйыр-таштар түшәлгән, күҙ йәшендәй саф һыулы йылғала бағыр, бәрҙе балыҡтары лығырлап йөрөй.* Н. Мусин. *Беҙ ҙә шулай ташбаштан, күкйөндән башланыҡ бит балыҡ ҡаптырырға, — тип уйлай Сөнәғәт, — унан бәрҙе, бағыр, ҡыҙылса, шамбы балыҡтары тота башланыҡ.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал. ҡар.* **этеш.**

**3.** *диал. ҡар.* **бағара 1.**

**БАҒЫР II** *и. диал. ҡар.* **баҡыр I, III.** *Бағырҙан эшләнгән алҡа.*

**БАҒЫР III** *и. диал. ҡар.* **бәгер.** *Бағырҙарым теленә.*

♦ **Ҡар бағыр** һауалы, тәкәббер *(кешегә ҡарата).* □ Высокомерный *(о человеке). Ҡар бағыр кеше ул.*

**БАҒЫР IV** (Р.: опекун; И.: guardian; Т.: bakımcı) *и. диал.*

Тәрбиәләүсе, ҡараусы. □ Опекун, ухаживающий за *кем-либо.* ■ *Бағыры юҡ, баяғы бахырҙың, бер үҙе. Ҡарт көнөндә бағыры юҡ, нисек көн итер?* Экспедиция материалдарынан.

**БАҒЫРА** *и. диал. зоол. ҡар.* **ташбаш 1.**

**БАҒЫРСА I** (Р.: небольшая форель; И.: small trout; Т.: küçük alabalık) *и. зоол.*

Ҙур булмаған бағыр. □ Небольшая форель. *Бағырса тотоу. Бағырса бешереү.*

**БАҒЫРСА II** (Р.: половник; И.: soup ladle; Т.: kerçe) *и. диал.*

Ижау, баҡрас. □ Половник.

**БАҒЫР ҮЛӘНЕ** (Р.: аконит; И.: aconitum; Т.: kurtboğan) *и. бот.*

Башлыса күк сәскә атыусы ағыулы декоратив үлән. □ Аконит, волкобой (лат.

*Aconitum*). *Бағыр үләне тамыры ағыулы була.*

**БАҒЫУ I (баҡ-)** [боронғо төрки *баҡ-* ‘ҡарау, күҙәтеү’] (Р.: смотреть; И.: look; Т.: bakmak) *ҡ.*

**1.** Күҙ ҡарашын йүнәлтеү; ҡарау. □ Смотреть, глядеть. // Осмотр, оглядка. *Тирә-йүнгә бағыу. Тура бағыу.* ■ *Кереш тартам, улым, уҡ атырға, мөлдөрәмә күҙең менән баҡ.* Р. Ғарипов. *Күҙҙәреңә бағып туя алманым, әйтә алманым әйтер һүҙемде.* Н. Нәжми. *Сығып текә, бейек яр башына, Зәйтүнәкәй алыҫҡа баҡты.* Г. Әмири. *Илһам өмөт итеп, күккә бағам: аҡ болотта йәш ай тирбәлә.* М. Кәрим. *Үрҙә һабантурғай берсә йырлай, берсә уҡталып тынып тора. Эй беләһе ине юғарынан ҡайҙа баҡҡанын.* К. Кинйәбулатова. *Ул [Азат], бер ҡулын маңлайына ҡуйып, яҡтылыҡ килгән яҡҡа ентекләп баҡты.* М. Ҡунафин.

**2.** Иғтибар йүнәлтеү, мөрәжәғәт итеү. □ Направить внимание, обращаться. ■ *Ҡаяға баҫып Салауат батыр киләсәккә һағынып баҡҡандыр.* Р. Сафин. *Әгәр тарих төпкөлөнә баҡһалар күңел биреп, күптәр таң ҡалыр халҡымдың ҡаһарманлығын күреп.* А. Игебаев. *Асыҡ тор һәр ваҡытта, эй, китап, баҡһам һиңә, ысын, асыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә!* Ш. Бабич. ● *Йөҙөнә баҡма, эшенә баҡ.* Әйтем.

**3.** Ҡарап тәрбиәләү. □ Присматривать, ухаживать *за кем-чем;* воспитывать, растить *кого. Бала бағыу. Ауырыуҙы бағыу. Ата-әсәне бағыу. Мал бағыу. Бер фельдшер бөтә ауылды баға.* ■ *Баланы бағыу әсәһенә ауырға төшөр тип, юғары белемле, яңы ғына институт бөтөргән тәрбиәсеһен дә тапты [Илһөйәр].* Х. Тапаҡов. *[Илбикә:] Үҙем бағып, үҙем буй еткергәс, үҙ ҡыҙыма үҙем хужа мин.* Х. Ғәбитов. *Яңғыҙым умартаны бағырмын, ти.* Ш. Бабич. *Кемдәр бағып үҫтерҙе һуң, утыҙ йәшкә еткәнсе?* Ҡ. Даян. ● *Баланы табыу һөнәр түгел, бағыу — һөнәр.* Әйтем.

**4.** Көтөүҙә йөрөтөү; көтөү. □ Содержать *кого;* пасти *(скот).* ■ *Бабайы бейә баҡты, әбейе һауҙы.* Экспедиция материалдарынан.

**5.** Им-том, күрәҙәлек менән шөғөлләнеү; бағымсылау. □ Заниматься знахарством, ворожить, гадать. *Бағым бағыу.*

**6.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең *ниҙелер* һынау, белеү маҡсатында башҡарылғанын аңлатҡан ҡушма ҡылым яһай. □ С деепричастием на *-п* осн. гл. выступает в роли вспом. гл.

♦ **Ҡыйып баҡҡыһыҙ** *шул уҡ* **ҡыйып ҡарағыһыҙ** (*ҡар.* **ҡарау**).

**БАҒЫУ II (баҡ-)** (Р.: подчиняться; И.: obey; Т.: uymak) *ҡ.*

**1.** Буйһоноу, бағыныу. □ Подчиняться, покоряться, повиноваться. // Подчинение, покорение, повиновение. *Ата-әсәгә бағыу. Батшаға баҡмағандар.* ■ *Минең картатайым бахыр «батшаға баҡмаған» тип орошҡан була торғайны мине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Тотоу. □ Ловить. *Балыҡ баға киткән.* ■ *Шулай бер көн бабай балыҡ бағырға барған.* Әкиәттән.

**БАҒЫУ БАҒЫУ (бағыу баҡ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бағым бағыу.**

**БАҒЫУСЫ I** (Р.: опекун; И.: guardian; Т.: bakımcı) *и.*

**1.** Ҡарап, күҙәтеп, тәрбиә итеп торған кеше; ҡараусы. □ Тот, кто присматривает *за кем-л.*; опекун. *Балаларҙың бағыусылары бар.* ■ *Сәбилә ошо бәхетле минуттар өсөн дә Хоҙайға гел шөкөр итте. Оло йортта балама яҡшыраҡ, яҡтыраҡ, йылыраҡ, әргәһендә бала бағыусы ла бар, шулай ышаныслыраҡ, тип үҙен йыуатты.* Т. Ғарипова.

**2.** *ҡар.* **көтөүсе 1.** *Башмаҡ бағыусылар юғары йөкләмә алдылар.*

**3.** *ҡар.* **бағымсы I.** ■ *Бер йыл үткән. Әбей менән бабай, теге күкәйҙе тотоп, йәнә бағыусыға барғандар.* Әкиәттән. *Түрә тирмәһе янында уралып йөрөгән бағыусылар шомло хәбәр һалдылар.* К. Мәргән.

**БАҒЫУСЫ II** (Р.: спонсор; И.: sponsor; Т.: kefil) *и.*

Матди ярҙам күрһәтеүсе. □ Спонсор. *Сараның бағыусыһы. Бағыусылар ярҙамы.* ■ *Бигерәк тә 1908 йылда «Шура» журналы сыға башлағас, Закир Рәмиев журналдың бағыусыһы, ә Әхмәтзәки Вәлиди авторҙарҙың береһе булараҡ, Ырымбурҙа йыш осрашалар.* «Йәшлек», 14 декабрь 2010.

**БАҒЫУСЫ ҠОРТТАР** (Р.: пчёлы-кормилицы; И.: provider bees; Т.: işçi arılar) *и. умарт.*

Ашатыусы ҡорттар. □ Пчёлы-кормилицы. *Бағыусы ҡорттар эшкә сыға.*

**БАҒЫУҺЫҘЛАНЫУ (бағыуһыҙлан-)** (Р.: запустеть; И.: become desolate; Т.: bakimsiz kalmak) *ҡ. диал.*

Ташландыҡ хәлгә ҡалыу. □ Запустеть, прийти в состояние упадка. *Өй бағыуһыҙланып китте. Ауыл бағыуһыҙланып ултыра.*

**БАҒЫУҺЫҘЛЫҠ (бағыуһыҙлығы)** (Р.: беспризорность; И.: stray children; Т.: evsizlik) *и.*

Балалар, үҫмерҙәр өсөн ғаилә йәки дәүләт тәрбиәһе булмауы. □ Беспризорность. *Күп енәйәттәр бағыуһыҙлыҡтан килә.*

**БАҒЫШ I** (Р.: посвящение; И.: dedication; Т.: ithaf) *и.*

Төбәлгән, арналған һүҙ, яҙыу йәки сара. □ Посвящение. *Шағирҙың тыуған көнөнә бағыш. Байрамға бағыш.*

**БАҒЫШ II** (Р.: косогор; И.: hillside; Т.: yamaç) *и. диал.*

Сағыл. □ Косогор. *Тау бағышы. Бағыш башы. Бағышҡа менеү. Бағышта ҡарағайҙар үҫә.*

**БАҒЫШЛАНЫУ (бағышлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бағышлау.** *страд. от* **бағышлау.** *Бағышланған әҫәр. Ғалим юбилейына бағышланған кисә. Әсәләргә бағышланған йыр.* ■ *Йырҙарымдың иң-иң аҫылдары бағышлана тыуған халҡыма.* А. Игебаев. *Туйға саҡырылған йырсылар, думбырасыларға ҡушылып, уйын-көлкөгә бағышланған йырҙарҙы башҡарҙы.* Я. Хамматов. *Ауыҙ-тел ижадының бик боронғо төрөнә ҡараған ҡобайырҙарҙың байтағы әҙәп-әхлаҡ, тәрбиә мәсьәләләренә бағышлана.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

**БАҒЫШЛАТЫУ (бағышлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бағышлау.** *понуд. от* **бағышлау.** *Бағышлатып йыр йырлаттым.*

**БАҒЫШЛАУ (бағышла-)** (Р.: посвящать; И.: devote, dedicate; Т.: adamak) *ҡ.*

**1.** *Берәй нәмәне кем* йәки *нимәләр* исеменә тәғәйенләү, төбәү; арнау. □ Посвящать. // Посвящение. *Йырҙы әсәйгә бағышлау.* ■ *Һалдат-йырсы! Һиңә бағышлайым йырҙарымдың хәтәр минуттарҙа тыуғанын.* М. Кәрим. *Бына әле менеп йөрөгән Турысайын атаһы Алдарға бағышлаған, бик тә аҡыллы, матур хайуан, шулай ҙа ул Ерәнкашҡаны ла һаман үҙенеке итеп иҫәпләй ине.* Н. Мусин. *Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: 1911 йылда донъя күргән тәүге ғилми хеҙмәте булған мәҡәләһен Вәлиди Иҙеүкәй тураһындағы дастанға бағышлаған булған.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Юҡ, әгәр ҙә Һабрауҙы осратмаһа, күңеленең наҙын, иң нескә хистәрен уға бағышламаһа. Ҡарасәс, моғайын, әлеге сәйер ҙә, өмөтһөҙ ҙә яҙмышты һайламаҫ, теләйме-юҡмы, йола ҡушҡанса, өлөшөнә төшкән көмөшө Айсыуаҡ менән йәшәй бирер ине.* Ә. Хәкимов. *Тик һандуғастар ғына, тейешле ваҡытты әрәмгә уҙғарырға теләмәгәндәй, бәхетле мөхәббәткә, шатлыҡлы киләсәккә бағышлап, йырҙар йырлай.* Я. Хамматов.

**2.** *Берәй* эш-хеҙмәткә бөтә булмышың менән бирелеү. □ Посвящать себя *чему-л.* *Ғүмерҙе фәнгә бағышлау.* ■ *[Зәки:] Нәзмиә! Үҙемде һиңә генә бағышлап йәшәгем килә лә.* Н. Асанбаев. *Әгәр ҙә кеше эшен ярата икән, ул үҙен яратҡан һөнәренә тулыһынса бағышларға бурыслы.* «Ағиҙел», № 3, 2010. *Ир-егет үҙен тулыһынса фәнгә бағышлап, ниндәйҙер бөйөк асыш яһау һәләтенә эйә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

**БАҒЫШЛЫ** (Р.: посвящённый; И.: devoted; Т.: bağlı) *с.*

Бағышланған, арналған. □ Посвящённый *чему-л.* *Мөхәббәткә бағышлы йыр. Байрамға*

*бағышлы шиғыр. Сәйәсәткә бағышлы таптырыу.*

**БАД** [фарс. باد] (Р.: ветер; И.: wind; Т.: rüzgar) *и. иҫк. кит.*

Ел. □ Ветер. *Сүллек бады.*

**БАДИ** [ғәр. بادي] (Р.: начинатель; И.: originator; Т.: başlatıcı) *и. иҫк. кит.*

Башлаусы, башлап ебәреүсе. □ Начинатель, инициатор; зачинщик. ■ *Берәүгә мөрат булһа хактың яды, белеме микдарынса уға бади.* М. Аҡмулла.

**БАДИЛИК (бадилигы)** (Р.: паровое поле; И.: fallow field; Т.: ekilmemiş alan) *и. диал.*

Бер йыл сәселмәгән ялан. □ Паровое поле. *Бадиликка быйыл бойҙай сәсергә булдылар.*

**БАДИРӘ I** [ғәр. بادرة] (Р.: признак; И.: mark; Т.: işaret) *и. иҫк. кит.*

Билдә, билге. □ Признак, предвестник; первая весточка. *Яҙ бадирәһе.*

**БАДИРӘ II** [ғәр. بادرة] (Р.: первые шаги; И.: first steps; Т.: ilk adımlar) *и. иҫк. кит.*

Тәүге аҙым. □ Первые шаги. *Шиғриәттәге бадирә.*

**БАДИРӘ III** [ғәр. بادرة] (Р.: слово, сказанное невзначай; И.: word uttered by chance; Т.: badire) *и. иҫк. кит.*

Уйламаҫтан ысҡынған һүҙ. □ Слово, сказанное невзначай. *Был бадирәгә иғтибар итмә.*

**БАДИША** *и. иҫк. кар.* **батша.** *Бадишаға баш һалыу.*

**БАДИӘ** [ғәр. بادية] (Р.: пустыня; И.: desert; Т.: çöl) *и. иҫк. кит.*

**1.** Сүллек. □ Пустыня. *Бадиә әҫелеге. Бадиә ҡомлоҡтары.*

**2.** Күсмә халыҡ; бәҙәүи. □ Кочевник. *Бадиә халыҡтар.*

**БАДМИНТОН** [рус. < ингл. *Badminton* ‘кала исеме’] (Р.: бадминтон; И.: badminton; Т.: badminton) *и. спорт.*

Ҡойроҡло тупты ракетка менән ҡаршы-ҡаршы һуғып уйнай торған уйын. □ Бадминтон. / Бадминтонный. *Бадминтон уйнарға өйрәнеү. Бадминтон уйнарға яратыу.*

**БАДМИНТОНСЫ** (Р.: бадминтонист; И.: badminton player; Т.: badmintoncu) *и. спорт.*

Бадминтон уйнаусы. □ Бадминтонист. *Бадминтонсылар командаһы.*

**БАДЫЯ БИҘРӘ** *и. диал. кар.* **баҙыя 1.** *Бадыя биҙрәне йыуып ҡуйҙым.*

**БАҘ I** [төрки] (Р.: погреб; И.: cellar; Т.: kiler) *и.*

**1.** Аҙыҡ, йәшелсә һаҡлау өсөн өй иҙәне аҫтына йәки тышҡа ҡаҙылған соҡор. □ Погреб, подполье, подвал. *Ер баҙ. Баҙға картуф һалыу. Баҙҙы тәрән ҡаҙыу. Итте баҙҙа һаҡлау.* ■ *Ирәкте хужаһы Аҫылғужа түрәнең махсус ҡаҙылған баҙына төшөрөп япҡанда, ни булаһын егет әле күҙ алдына килтерә алмай ине.* К. Мәргән. *Баҙ эсендә бер яңғыҙ ҡаҙ өҙөлөп-өҙөлөп ҡаңғылдай.* Әкиәттән. *Ер баҙындағы көбөләрҙәге ҡымыҙ, уның [Көнбикәнең] уңған ҡулы аша үткәнлектән, ҡыш уртаһынаса боҙолмай һаҡлана.* Н. Мусин. *Ҡулуртлар уртындағы һыуҙың яртыһын мунсаның баҙына ҡоя ла, бишеһе лә төшөп ята.* Әкиәттән. ● *Кешегә баҙ ҡаҙма — үҙең төшөрһөң.* Мәҡәл. *Баҙ ҡаҙыһаң, икене ҡаҙы — береһе үҙеңә булыр.* Әйтем. *Кешегә баҙ ҡаҙыһаң, үҙең буйы ҡаҙы.* Әйтем.

**2.** Дегет ҡайнатыу, күмер үртәү кеүек эш өсөн йәтешләнгән соҡор. □ Яма *(для перегонки дёгтя и обжигания угля). Дегет баҙы ҡаҙыу. Ағастарҙы күмер баҙында яғыу.* ■ *Ташбатҡан халҡы урмандың ҡәҙерен белә хәҙер, сөнки улар урман кәсебе менән көн күрәләр: йәй көнө .. улар бөтә ауыл менән һалабаш төшөрәләр, тау араларында баҙ ҡаҙып, ҡайын дегете үртәйҙәр; ҡатын-ҡыҙ, хатта аяҡтан баҫҡан бала-сағаға тиклем имән, тал ҡайыры һыйырға йөрөйҙәр.* Ж. Кейекбаев. *Бынан әллә нисәмә йылдар элек .. ошо ҡайын урманының урта төшөндә Йыһат тигән байҙың түҙҙан таҙа дегет ҡайната торған өс баҙы булған.* Н. Мусин.

**3.** Иҙән. □ Пол. *Баҙ түшәлгән ыҡсым ғына ихата, башы ҡыйыҡлы ҙур ҡапҡа.*

**4.** *миф.* Баҙ; аҫҡы донъя менән бәйле урын. □ Мифологизированное место, связанное с нижним миром. ■ *Төшөңдә баҙға төшһәң, йә үҙең, йә яҡының үлә.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Баҙ ҡаҙыу** аҫтыртын этлек эшләү. □ Рыть яму *кому (думать злость).* ■ *[Мазһар:] Янама, Мәғзүм, ҡаҙыған баҙыңа үҙеңә килеп ҡапланырға тура килмәһен.* Х. Ибраһимов. *[Кәримә:] Оят та юҡ, бит тә юҡ! Үҙ иптәшеңә, дуҫыңа баҙ ҡаҙып йөрө әле.* Яр. Вәлиев. *Туҡтамыш үҙ-үҙенә баҙ ҡаҙыны, янындағы ике йөҙ меңдән артыҡ ғәскәрҙе һәләкәткә дусар итте.* Ә. Хәкимов.

**БАҘ II** (Р.: подражание сиянию; И.: word for imitating radiance; Т.: parlak) *окш.*

Янған һымаҡ йылтырап тороуҙы белдергән һүҙ. □ Подражание сиянию, блеску. *Баҙ итеп янып тороу.*

**БАҘАҒЫЙ** [рус. *бодяк*] *и. диал. ҡар.* **һаҙ билсәне.** *Баҙағый япрағы. Баҙағыйҙар үҫә.*

**БАҘАМ** [фарс. بادام] (Р.: миндаль; И.: almonds; Т.: badem) *и. бот.*

**1.** Гөлйемештәр ғаиләһенә ҡараған алһыу сәскәле, сәтләүек һымаҡ емешле көньяҡ ағасы. □ Миндаль. / Миндальный, миндалевый (лат. *Prunus dulcis*). *Баҙам ағасы емештәре. Баҙам сәтләүеге йыйыу. Баҙам сәтләүеге һатып алыу. Баҙам плантациялары.* ■ *Урманлы тарлауыҡтан зәп-зәңгәр күлле аҡланға сыҡһаң, унда зәйтүн, баҙам сәтләүеге үҫкән плантациялар хайран итә.* «Башҡортостан», 24 август 2011.

**2.** Шул ағастың сәтләүеге эсендәге емеш. □ Миндалина *(ядро миндального ореха). Баҙам һалып бешерелгән күмәс. Ваҡланған баҙам. Әсе баҙам.* ■ *Һыуыткан ҡамырҙы алып, йәймә йәйәбеҙ ҙә, әҙер эслекте тигеҙләп һалып сығабыҙ. Өҫтөнә .. баҙам онтағын һибәбеҙ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 8, 2011.

**БАҘАМ БИҘҘӘРЕ** (Р.: миндалины; И.: tonsil; Т.: bademcikler) *и. анат.*

Ауыҙ ҡыуышлығының йотҡолоҡ өҫтөндә урынлашҡан лимфоид туҡыма тупланмаһы. □ Миндалины. *Баҙам биҙҙәре шешеү.* ■ *Тамаҡтағы баҙам биҙҙәре зарарлы вирустарҙы юҡ итеүсе һаҡсылар кеүек эшләй.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 12, 2010.

**БАҘАМЛЫ** (Р.: с миндалиной; И.: containing almonds; Т.: bademli) *с.*

Баҙамы булған, баҙам (2) һалынған. □ С миндалиной, имеющий миндалины. *Баҙамлы күмәс бешереү. Баҙамлы бәлеш. Баҙамлы турама эшләү.*

**БАҘАН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы аймағы. □ Базан *(название родового подразделения башкир рода карагай-кыпчак).*

**БАҘАНЫУ I (баҙан-)** *ҡ.*

**1.** *ҡар.* **баҙау I.** *Баҙанып ишек төбөндә торма, түргә үт.*

**2.** *диал.* Арыу. □ Утомляться. // Утомление. *Урман ҡырҡып баҙандылар.* ■ *Ҡатын, егетте үҙенең ире тип уйлап: «Был бик баҙанып ҡайтҡан икән», — ти.* Әкиәттән.

**3.** *диал.* Интегеү. □ Мучиться. // Мучение. *Икмәкһеҙ баҙаныу.*

**4.** *диал.* Биҙеү. □ Осточертеть. *Бынау күршенән баҙанып бөттөм.*

**БАҘАНЫУ II (баҙан-)** (Р.: замахиваться; И.: be about to strike; Т.: keskenmek) *ҡ. диал.*

Киҙәнеү. □ Замахиваться. *Баҙанып, һуғырға уйлай миңә теге.*

**БАҘАР I** [фарс. بازار] (Р.: торговля; И.: trade; Т.: pazar) *и.*

**1.** Кешенең үҙе эшләгән, йыйған йәки етештергән әйберҙәре менән сауҙа итеүе. □ Торговля. / Торговый. *Емеш-еләк баҙары. Ит баҙары.* ■ *Шөкөр, баҙар уңды. Шәлдәремде талашып алдылар, инде икенсе юлы ундан да кәмде алып бармаҫҡа кәрәк, — тип әсәйемдең һөйөнгәнен күреү шул тиклем ҡыуаныслы.* «Башҡортостан», 17 июнь 2011.

**2.** Шул сауҙа үткәрелгән махсус урын. □ Рынок. / Рыночный. *Баҙарға барып аҙыҡ-түлек һатып алыу.* ■ *Әсәйем үгеҙ менән һарыҡты баҙарға сығарып һатты ла*

*туй кәрәк-яраҡтары артынан ҡалаға сығып китте.* Ф. Әсәнов. *Бишенселәрҙә уҡыған-мындыр, әсәйем баҙарға шәл һатырға киткәс, һыйырҙы үҙем һауырға булдым.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 10, 2010. *Сәми ҡарт үҙенең тотҡан балыҡтарын йөкмәп баҙарға китте.* Д. Юлтый. *Тамам алйып, ҡайҙа барып баш төртөргә белмәй йөрөгәндә, баҙарҙа он һатырға килгән ауылдашы Бикмырҙаны осратты Шәрғиә.* Ә. Хәкимов. ● *Өйҙәге иҫәпте баҙарҙағы хаҡ боҙа.* Әйтем. *Өйҙәге уй баҙарға ярамаҫ.* Әйтем.

**3.** Ваҡыты-ваҡыты менән төрлө маҡсатта ойошторолған махсус сауҙа. □ Специальная торговля, организованная время от времени. *Бал баҙары. Сәскә баҙары. Ит баҙары.* ■ *Ҡаланың бер нисә урынында шыршы баҙары эшләне.* «Урал», 28 декабрь 2010.

**4.** *икт.* Тауар әйләнеше өлкәһе. □ Область товарооборота. *Баҙар иҡтисады. Баҙар мөнәсәбәттәре. Ҡиммәтле ҡағыҙҙар баҙары. Тармаҡ баҙары. Торлаҡ баҙары. Хеҙмәт баҙары.* ■ *Күп нәмә донъя баҙарында нефттең хаҡы күпме буласағынан тора.* «Ағиҙел», № 2, 2010. *Сауд Ғәрәбстанындағы бал баҙары бик бай — Европа, Ҡытай, Аргентина, Мексика һәм башҡа илдәрҙән килтерелгән балдың тиҫтәләрсә сорты бар. Әммә, күренеүенсә, башҡорт балы — иң яҡшыһы.* «Башҡортостан», 16 апрель 2011. *Бөгөнгө конкурентлы хеҙмәт баҙары мөхитендә һәр кешенең заман шарттарына яраҡлаша алыуы, һәр яңылыҡты ҡабул итә алыу һәләтенә эйә булыуы бик мөһим.* «Йәшлек», 29 ғинуар 2010.

**5.** *Нимәнеңдер* ирекле һатылыу хаҡы. □ Цена, стоимость. *Быйыл балдың баҙары артты. Йәшелсәнең баҙары төшкән.*

**6.** *күсм.* Халыҡ алдындағы баһа, дәрәжә. □ Авторитет. *Үҙ баҙарыңды белеү.* ■ *Ауылда ҡурайсы, гармунсының баҙары юғары.* Ә. Хәкимов. *Иркен генә йәшәгән, ҡырыҫ холоҡло, ауылда үҙ баҙарының хаҡын яҡшы белгән Һөйәрбикә Сабурға һырт биреп боролоп ултырҙы.* «Ағиҙел», № 5, 2010.

**7.** *күсм.* Геүләп торған шау-шыу, ығы-зығы. □ Шум, крик. *Был ниндәй баҙар?* ● *Балалы өй — баҙар, балаһыҙ өй — маҙар.* Мәҡәл. *Бер ҡатын — ҡатын, ике ҡатын — баҙар, өс ҡатын — йәрминкә.* Мәҡәл.

**8.** *миф.* Ен-пәрейҙәр ояһы. □ Чёртово логово.

♦ **Баҙары артыу (күтәрелеү, үҫеү)** 1) абруйы үҫеү, өҫтәлеү. □ Завоевать, повысить авторитет. ■ *Үҙе ише малайҙар алдында уның [Зиннурҙың] баҙары икеләтә артты.* К. Мәргән. *Ҡунаҡҡолдоң баҙары үҫә башланы. Ул хәҙер элекке кеүек кәпәс һалып бурыс һорамай.* Х. Ғиләжев. *Ил өҫтөнә барымта кеүек хәүефле бәлә-ҡаза килгәндә йәки башҡа шундай ваҡиғалар төшкәндә, түрәнең баҙары күтәрелеүсән була.* К. Мәргән. *Йөҙө ҡояштай балҡыған Вәғиздең баҙары артты, әммә эште үҙе боҙҙо.* «Ағиҙел», № 4, 2010. *Бикмырҙа тамағы ашҡа, өҫтө кейемгә туймаған иң фәҡир ғаиләлә тыуып, йәшләй уҡ көнө кеше тупһаһында үҙһа ла, форсаты еткәс, яҙмыш теҙгенен үҙ ҡулына алды, ыңғай холҡо, йомшаҡ һүҙе менән ауылдаштарын ауыҙына ҡаратып, Ҡаҙаяҡ тирмәнен ипкә-һапҡа килтереүе булды, баҙары күтәрелде лә китте кисәге байғоштоң.* Ә. Хәкимов; 2) *нимәнеңдер* ҡиммәте, баһаһы күтәрелеү. □ Повышаться в цене, дорожать. *Ситсаның баҙары артта.* **Баҙары төшөү** 1) абруйы кәмеү, төшөү. □ Потерять авторитет. *Хужаның баҙары төштө;* 2) *нимәнеңдер* ҡиммәте, баһаһы төшөү. □ Подешеветь. *Быйыл картуфтың баҙары төштө.* **Баҙарын күтәреү** 1) кешенең абруйын арттырып күрһәтергә тырышыу. □ Поднять *чей-л.* авторитет. ■ *Әллә үҙен белдеклегә һанап, баҙарын күтәрергә тырышамы? — тип уйлай Камалов йәш агроном тураһында.* Яр. Вәлиев; 2) нәмәнең ҡиммәтен арттырып күрһәтергә тырышыу. □ Повышать цену *на что-л.* **Әүен (төнәй) баҙарына китеү** йоҡоға китеү, йоҡлап китеү. □ Уснуть, заснуть. *Бала әүен баҙарына китте.* ■ *Тыштағы эштәрҙе бөтөрҙөм, әсәй, — тип ул арала Шәһүрә килеп инде. — Әллә һеҙ икәүегеҙ ҙә әүен баҙарына*

*киттегеҙме?* Н. Мусин. *Эңерҙән йоҡларға ятҡан Көнһылыу, ҡолаҡсын мендәргә баҫып һалып, әүен баҙарына китеп тә барған.* Т. Ғарипова.

**БАҘАР II** (Р.: воскресенье; И.: Sunday; Т.: Pazar) *и. һөйл.*

Йәкшәмбе. □ Воскресенье. *Ҡаланан үткән баҙар ҡайттым.*

**БАҘАР АЛДЫ** (Р.: суббота; И.: Saturday; Т.: Cumartesi) *и. һөйл.*

Шәмбе. □ Суббота. *Бөгөн баҙар алды булғас, бөтә кеше баксаларына китә башланы.*

**БАҘАР АРТЫ** (Р.: понедельник; И.: Monday; Т.: Pazartesi) *и. һөйл.*

Дүшәмбе. □ Понедельник. *Баҙар арты көндө район үҙәгенә барырға кәрәк.*

**БАҘАР КӨН** *и. диал. ҡар.* **баҙар II.** *Баҙар көндө ял итәбеҙ.* ■ *Үткән баҙар көн Кесе инәйем мине һабын алырға ебәрҙе.* М. Кәрим. *Баҙар көн кис, ҡыҙыл эңер төшкәс, Ташбатҡан ауылының бер төркөм ҡарттары Әхмәдиҙең урам буйында ятҡан бүрәнәләре өҫтөндә һөйләшеп ултырҙылар.* Ж. Кейекбаев.

**БАҘАРҠАЙ** (Р.: расписной; И.: painted; Т.: boyalı) *с. диал.*

Баҙыян (V). □ Расписной. *Баҙарҡай сеүәтә.*

**БАҘАРҠАН** [фарс. بازرگان] (Р.: купец; И.: trader; customer; Т.: pazarcı) *и.*

**1.** Сауҙагәр, һатыу итеүсе. □ Купец, торговец. / Купеческий. *Коньяк баҙарҡандары.* ■ *Ана шул каруандар өсөн, шәрек баҙарҡандары менән Рәсәй сауҙагәрҙәре осрашып, тауар алмашырлыҡ урын тип .. [Ырымбур] һалынғайны.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Баҙарсы, баҙарға йөрөүсе. □ Покупатель или продавец на базаре. ■ *Баҙар майҙанына барып ингәс, Сәйф бер мәлгә хатта аҙанып ҡалды. Ары һуғылып, бире ҡағылып, шау-гөр килеп йөрөгән баҙарҡандар араһынан йырып үтерлек түгел.* Ә. Хәкимов.

**БАҘАРЛАНЫУ (баҙарлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **баҙарлау I.** *страд. от* **баҙарлау I.** *Ял көндө ҡалаға сығып баҙарланып ҡайтырға тип уйлап торам.*

**БАҘАРЛАУ I (баҙарла-)** (Р.: ходить на базар; И.: visit a bazaar; Т.: pazara gitmek) *ҡ. диал.*

Баҙарға барыу (йөрөү). □ Ходить на базар. *Баҙарлап ҡайттым әле.*

**БАҘАРЛАУ II (баҙарла-)** (Р.: содержать в опрятности; И.: keep things tidy; Т.: eşyaları düzgün tutmak) *ҡ. диал.*

Әйберҙе, өҫ-кейемде ҡәҙерләп тотоу. □ Содержать в опрятности *(вещи, одежду). Әбей байрам кейемдәрен баҙарлап ҡына кейә.*

**БАҘАРЛАУ III (баҙарла-)** (Р.: ярко гореть; И.: glow brightly; Т.: parlamak) *ҡ. диал.*

Баҙлау *(күҙгә ҡарата).* □ Ярко гореть *(об углях). Баҙарлап ятҡан ҡүҙгә ғына һалып шөтөрләтеп ашай ҙа ҡуя.*

**БАҘАРЛАУ IV (баҙарла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **баҙрайыу.** *Баҙарлап ятып ҡала башаҡтар.*

**БАҘАРЛЫ** (Р.: имеющий рынок; И.: having a market; Т.: pazarlı) *с.*

**1.** Баҙары (I, 2) булған. □ Имеющий рынок. *Баҙарлы ҡала.* ■ *Ауыл биләмәһе — өйлө, ҡауарҙылар баҙарлы булды.* «Табын», 21 июнь 2011. *Ғөмәр ауылы өс мәхәлләле ҙур ауыл, баҙарлы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Үтемле. □ Ходкий, имеющий спрос. *Баҙарлы тауар.*

**БАҘАРЛЫҠ I (баҙарлығы)** (Р.: гостинец с базара; И.: present from a bazaar; Т.: pazarlık) *и.*

**1.** Баҙарҙан алып ҡайтҡан күстәнәс. □ Гостинец с базара. *Баҙарлыҡ менән һыйлау.*

**2.** *диал. ҡар.* **баһа I, 1.** *Тауарҙың баҙарлығын төшөрөү.*

**БАҘАРЛЫҠ II** (Р.: достаточный для совершения покупок; И.: sufficient for shopping; Т.: pazarlıklı) *с.*

Һатып алырға етерлек. □ Достаточный для совершения покупок. *Баҙарлыҡ аҡса эшләү.* ■ *Бәләкәс аҡса булмаҫмы тип килгәйнем баҙарлыҡ, .. берәй ҡаҙаҡ ит алһаң да. Һыҙырылған һалабаштар ҙа апаруҡ бар, — тине Әҙһәм ҡарт.* Ж. Кейекбаев.

**БАҘАРЛЫҠЛЫ** (Р.: ходкий; И.: being in demand; Т.: sürümlü) *с.*

Яҡшы һатыла торған, үтемле. □ Пользующийся спросом, ходкий, ходовой *(о товаре). Баҙарлыҡлы нәмә. Баҙарлыҡлы тауар.*

**БАҪАРОЙОҠ (баҙаройоғо)** (Р.: хлопчатобумажные чулки; И.: cotton stockings; Т.: pamuk çorap) *и. диал.*

Еп ойоҡ. □ Хлопчатобумажные чулки. *Күпләп баҙаройоҡ һатып алды.*

**БАҪАРСЫ** (Р.: продавец или покупатель на базаре; И.: bazaar customer; Т.: pazarcı) *и.*

**1.** Баҙарҙа һатыу итеүсе йәки һатып алыусы. □ Продавец или покупатель на базаре. ■ *Халыҡ әкренләп өйрәнә башланы, һатырға ла, һатып алырға ла сығалар, – ти баҙарсылар.* «Табын», 13 июль 2011. *Миңлегәле, атаһы ризалығын алғас та, арбалары туғарыулы йөк аттарына бесән һәм һоло ашатҡан баҙарсылар эргәһенә йүгереп барҙы.* Я. Хамматов.

**2.** Баҙарға йөрөргә яратҡан кеше. □ Человек, любящий ходить на базар. *Күрше бигерәк баҙарсы ла инде.*

**3.** Баҙарҙа урын өсөн хаҡ йыйыусы. □ Сборщик платы за место на базаре. *Кискә баҙарсылар һатыусыларҙан аҡса йыйҙы.*

**БАҪАРҺЫҪ** (Р.: неходовой; И.: unmarketable; Т.: sürümsüz) *с.*

Үтемһеҙ. □ Неходовой *(обычно о товаре). Был дәфтәрҙәр баҙарһыҙ булып сыҡты.*

**БАҪАТЫУ I (баҙат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҙау I.** *понуд. от* **баҙау I.** ■ *Иғтибар итәһегеҙҙер, мөхтәрәм йәмәғәт, «Әйт, тиһәгеҙ...» рубрикаһында беҙ ҡайһы саҡта яуабын таба алмай баҙатып ҡуя торған һорауҙарға яуап эҙләргә, тормошобоҙҙағы күҙгә сүп булып төшә, алға барырға кәртә булып ҡамасаулай торған мәсьәләләргә иғтибар йүнәлтергә тырышабыҙ.* «Киске Өфө», № 21, 2011. *Ҡыйыуһыҙ егеттең үҙ тойғоларын шулай ҡапыл әйтеп һалыуы мине лә баҙатҡайны, ҡапыл ғына ни тип яуап бирергә лә белмәй торҙом.* Р. Солтангәрәев. *Мөхәббәт тигәнең ниндәй ҡыйыу кешеләрҙе лә йомшарта, баҙата икән.* Н. Мусин.

**БАҪАТЫУ II (баҙат-)** (Р.: утомлять; И.: fatigue; Т.: yormak) *ҡ. диал.*

**1.** Йонсотоу. □ Утомлять, изнурять. // Утомление, изнурение. *Йоҡламай эшләү кешене баҙата.*

**2.** Интектереү. □ Мучать. *Егет ҡыҙҙы һаман баҙата.*

**БАҪАУ I (баҙа-)** (Р.: робеть; И.: be timid; Т.: çekinmek) *ҡ.*

**1.** Уңайһыҙлыҡ тойоу; ҡаушау, тартыныу. □ Робеть; стесняться, смущаться, стыдиться. // Стеснение, смущение. *Баҙап ҡалыу.* ■ *Шулай ҙа, Гөлбаныуҙы күреп ҡалып баҙамаһа, биреш мәҫ ине әле Ихсанбай.* Т. Ғарипова. *Баҙаным да баһа яҡшылыҡтар яғылғандан күңелем тулғанға.* Т. Ғәниева.

**2.** Ҡыйынһыныу, ҡурҡыу. □ Не осмеливаться взяться *за что-то;* опасаться *чего-л. Ул эште башлауға баҙап торам, бер ҡорал юҡ. Әйтергә лә баҙап торам.* ■ *Сәбиләнең һүҙе күп ағаһына, ләкин ул Лоҡмандың ҡыҫыҡ ҡабаҡтары араһынан һөңгөләй ҡаҙалған үткер ҡарашы аҫтында баҙаны.* Т. Ғарипова.

**3.** Көс, хәлдән яҙыу; арыу, йонсоу. □ Выбиться из сил; утомляться. // Утомление, изнурение. *Ауырыуҙан баҙау. Ауыр эштән баҙау.*

**4.** *диал.* Баҫылыу. □ Смириться. *Әрләп торғас, баҙайһың инде.*

**5.** *диал.* Ойоу. □ Неметь. *Шәл бәйләп ултыра торғас, баҙап киттем.*

**БАҪАУ II (баҙа-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ырыу II.** *Таҡтаны баҙау.*

**БАҪАУ III** (Р.: застенчивый; И.: shy; Т.: çekingen) *с.*

**1.** Ҡапыл уңайһыҙланып, ҡаушап барыусан; оялсан. □ Застенчивый, теряющийся от смущения. *Баҙау ҡыҙ.*

**2.** Арыған, йонсоу төҫлө; йонсоу. □ Утомлённый. *Арығандыр, ахыры, бик баҙау күренә.*

**БАҪАУЫЛ** *и. диал. ҡар.* **балауыҙ.** *Баҙауыл табағы. Баҙауыл һыҡҡыс.*

**БАҪАУЫЛ ҺАРЫ** *с. диал. ҡар.* **балауыҙ һары.** *Баҙауыл һары күлдәк кейеп алған.*

**БАҪ КҮМЕРЕ** (Р.: древесный уголь; И.: wood charcoal; Т.: ağaç kömürü) *и.*

Томалап яндырылған ағастан төшкән күмер; ағас күмере. □ Древесный уголь.

**БАҘЛАҒАН** (Р.: перезимовавший в подполе; И.: having wintered in a cellar; Т.: kilerde kışlamış) *с. диал.*

Баҙҙа ҡышлаған. □ Перезимовавший в подполе. *Баҙлаған бәрәңге. Баҙлаған кишер.*

**БАҘЛАТЫУ (баҙлат-)** (Р.: вызывать сияние; И.: cause shining; Т.: parlatmak) *ҡ.*

**1.** Йылҡылдатыу, нурҙар уйнатып йылтылдатыу. □ Вызывать сияние, сверкание *чего*; заставить сиять, сверкать *что*; поблёскивать. *Йөҙөк ҡашын баҙлатыу.* ■ *Шәректә офоҡ ситен тәүҙә алһыу-һары яҡтылыҡ баҙлата, күп тә үтмәй, күк йөҙө аҡһыллана башлай, йондоҙҙар бер-бер артлы һүнә, ағас баштарына ҡояш нуры төшә.* Ә. Хәкимов. *Йыраҡта, тау башында, бөтә тирәяҡты баҙлатып ниндәйҙер әйбер яна ине.* Д. Бүләков.

**2.** *йөкм. ҡар.* **баҙлау.** *понуд. от* **баҙлау.** *Ут баҙлатыу.* ■ *Усаҡ янды .. гүйә, баҡыр төҫлө баҙлатты ул янар ҡуҙҙарын.* А. Игебаев.

**3.** *күсм.* Осҡон сәскән кеүек йылтыратыу, йызлатыу. □ Делать блестящим. *Ҡыҙ күҙҙәрен баҙлатып йылмайып ҡарап тора.*

**БАҘЛАУ I (баҙла-)** (Р.: гореть без пламени; И.: burn with no flame; Т.: yanmak) *ҡ.*

**1.** Ялҡынһыҙ ут булып яныу *(ҡуҙға, утҡа ҡарата).* □ Светиться, гореть без пламени *(об углях, огне). Усаҡта ҡуҙҙар баҙлай.* ■ *Күп урында тәмәке уттары баҙлай, бөтә ерҙә һөйләшәләр.* Д. Юлтый. *Асылыҡүл ярҙарында усаҡтар ҡабыналар, төнгө усаҡтар баҙлаған әкиәти минуттарҙы күңелем һағыналыр.* А. Игебаев. *Тулған ай байыуға яҡынлашҡанда, Аҡмалдың ыҙмаһы баҙлап ятҡан ҡуҙ өйөмөнә әүерелгәйне инде.* Б. Рафиҡов. *Алыҫта баҙлап янған ут, килеп етергә бер сикрымдай ара ҡалғас, ҡапыл ғына һүнде.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 2010. *Мәмерйәнең алдында баҙлап ҡына янған ут күренә.* Н. Мусин.

**2.** Сағылйып йымылдау; йылҡылдау. □ Блестеть, сверкать; лосниться. *Сәскәләр баҙлай. Күлдәктең биҙәге сағыу, баҙлап тора.* ■ *Арыраҡ өйкөм гөлйемеш ҡыуағы баҙлап ултыра.* И. Ноғоманов. *Ярты икмәк хәтлем булған ай яҙғы урманды, ултырыш яланын сихри нурға күмгән, йондоҙҙар шул тиклем баҙлап яна, улар быуа хәҙер гөлт итеп тоҡанып китерҙәр ҙә бөтә күк йөҙөн ялҡын ҡаплар кеүек.* Н. Мусин. *Күктә, ынйы бөртөктәре кеүек, йондоҙҙар баҙлай.* Ж. Кейекбаев. *Тәҙрәләр асыҡ, шунда үк гөл һауыттары, баҙлап сәскә атҡан әллә ни исемле ят үҫемлектәр ҡояш нурҙары аҫтында ем-ем килеп, күҙ яуын ала.* Д. Бүләков. *Тын ҡулҡылар тәрән уйға сумған, күктә баҙлап йондоҙ атыла.* М. Ғәли.

**3.** Янған һымаҡ йызлап тороу *(күҙгә, йөҙгә ҡарата).* □ Сиять, светиться; блестеть, сверкать *(о глазах, лице). Күҙҙәр баҙлай.* ■ *Мине бүлдермәй, шым ғына тыңлаған Вәсиләнең күҙҙәрендә баҙлаған ҡуҙҙарҙы күреп, йәнемә йылы эркелде.* «Йәшлек», 17 июнь 2008. *Гөлбаныуҙың табаҡтай тулы бите буҙарҙы, ҡыҫыҡ күҙҙәре зәһәр баҙлап янды.* Н. Мусин. *Янғолдоң сырайында ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныу осҡондары баҙлап китте.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Батыргәрәй бик мәғәнәле генә йылмайып ҡуйҙы, күҙҙәре нимәгәлер баҙлап китте.* Р. Солтангәрәев.

**4.** *күсм.* Ялҡынһыҙ ут булып яныу *(тойғоларға ҡарата).* □ Гореть без пламени *(о чувствах).* ■ *Ғилмиязаның күңел төбөндә Алдарҙы күреү өмөтө баҙлай, уны күрһә, киләсәктә сит-ят ерҙәрҙә теңәлеп йәшәүҙән ҡотолоуға ышаныс уяныр кеүек.* Н. Мусин. *Күңелдәрҙә баҙлаған осҡон ялтлап-тоҡанып китһен өсөн күп кәрәкме ни?!* «Йәшлек», 29 май 2009.

**БАҘЛАУ II (баҙла-)** (Р.: положить в подпол; И.: store in a cellar; Т.: kilere koymak) *ҡ. диал.*

**1.** Баҙға һалыу. □ Положить в подпол. *Етмеш биҙрә картуф баҙланыҡ.*

**2.** Баҙҙа ҡышлау. □ Зимовать в погребе. *Картуф быйыл яҡшы баҙланы.*

**БАҘЛАУ III (баҙла-)** (Р.: преть; И.: rot; Т.: çürümek) *ҡ. диал.*

**1.** Ҡыҙыу, яныу, бәҫәреү. □ Преть. // Прение. *Бесән баҙлай. Иген баҙламағанмы тип, ҡарарға сығып киттеләр.*

**2.** Йылыныу, эҫеү, яныу, ҡыҙыу. □ Греться, прогреваться. *Баҙлап йылыныу. Баҙлап ҡыҙыу.* ■ *Арҡаһы баҙлап, шөйлә йылына барғанын тойған Айбулат ирәүән киәфәттә, усаҡ тирәләй йөрөштөргөләне.* И. Ноғоманов.

**3.** Әрнеп ауыртыу. □ Ныть. // Нытьё. *Аяҡ баҙлау. Табан аҫтым баҙлап тора.*

**4.** *күсм.* Ҡыҙып китеү, асыуланыу. □ Горячиться. *Баҙлап китеү.* ■ *Яманһаров был һүҙҙәрҙән ҡапыл баҙлап ҡабынып китте.* Д. Бүләков.

**БАҘЛАУЫҠ I (баҙлауығы)** (Р.: гнилушка; И.: piece of rotten wood; Т.: çürümüş odun parçası) *и.*

Ҡараңғыла ялтырап торған уҫаҡ ағасының сөрөк киҫәге. □ Гнилушка. ■ *[Ғәрифулла] ауыҙын асҡанда ғына тештәре серек түмәр башындағы баҙлауыҡ һымаҡ ялтырап ҡала.* Ф. Иҫәнғолов. *Бына ул алтын аҡсалар! Балауыҙ шәмдән төшкән тоноҡ яҡтылыҡта, баҙлауыҡ кеүек, ялтырашып яталар.* Н. Мусин.

**БАҘЛАУЫҠ II (баҙлауығы)** *и. зоол. диал. ҡар.* **быҙлауыҡ.** *Үлән араһында йәшкелт төҫтәге баҙлауыҡтар йымылдай.* ■ *Баҙлауыҡ баҙлай үләндә, һәр аҙым баҫҡан һайын.* Р. Ғарипов.

**БАҘЛАШЫУ (баҙлаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **баҙлау I.** *взаимн. от* **баҙлау I.** *Йондоҙҙар баҙлаша. Усаҡта ҡуҙҙар баҙлаша.*

**БАҘМАНСЫЛЫҠ (баҙмансылығы)** *и. диал. ҡар.* **ҡыйыулыҡ I.**

**БАҘМАУ (баҙма-)** (Р.: не осмеливаться; И.: not to dare; Т.: cesaret etmemek) *ҡ.*

Баҙнат итмәү. □ Не осмеливаться. *Әйтергә баҙманым шул.* ■ *Ҡатындың үҙенән һорарға ул [Фәрүкша] баҙманы, үпкәләтеп ҡуйыуҙан ҡурҡты.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**БАҘНАТ** (Р.: смелость; И.: boldness; Т.: cesaret) *и.*

Кеше ҡаршыһындағы ҡыйыулыҡ; батырсылыҡ. □ Смелость, решимость. *Баҙнат етмәү.* ■ *[Иҙеүкәй — Ғәнәкәгә:] Нисек итәһең, үҙең ғәйәрләнеп торғас, баҙнатым юҡ, китерһең шул изге сәғәттә.* М. Буранғолов. *Яҙмышты артабан да һынап торорға тәҡәтем ҡалмағанлыҡтан, баҙнатымды йыйып тотҡаға үреләм дә һелкетә тартып асам.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 10, 2010.

**БАҘНАТ ЕТЕҮ (баҙнат ет-)** *ҡ. ҡар.* **баҙнат итеү.** *Шуны һиңә әйтергә баҙнатым етмәне.* ■ *Гөлшандың үҙенең дә әйелгеһе килеп тора, тик баҙнаты ғына етмәй ине.* Д. Бүләков.

**БАҘНАТ ИТЕҮ (баҙнат ит-)** (Р.: осмеливаться; И.: dare; Т.: cesaret etmek) *ҡ.*

Ҡыйыулыҡ; батырсылыҡ етеү. □ Осмеливаться, решаться на *что.* // Смелость, решимость. ■ *[Таһир:] Ләкин һөйөүем тураһында уға белдерергә баҙнат итмәйем.* Ғ. Лоҡманов. *Бисәһенең һуңғы ваҡытта йыуаная башлауын Төлкөсура ла һиҙә, тик үҙе башлап һорарға баҙнат итмәй йөрөй ине.* Н. Мусин. *Ә Дилбәр тел осонда ғына торған һүҙҙәрен әйтергә баҙнат итмәй туҡталған, уларҙы ауыҙында әүәләп, әрем әсеһен тәм итә.* Г. Ғиззәтуллина. *Биктимер өндәшмәне, дөрөҫөрәге, ул түрәнең әмерен аңламай ҡалды, ә ҡабатлап һорарға баҙнат итә алмай торҙо.* К. Мәргән. *Атаһының ҡыҙыу холҡон белгән Барлыбай уның менән артабан һүҙ көрәштерергә баҙнат итмәй, арыҫлан тиреһен килтереп бирә.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**БАҘНАТЛАНЫУ (баҙнатлан-)** (Р.: осмеливаться; И.: resolve; Т.: cesaret etmek) *ҡ.*

Ҡыйыуланыу. □ Осмеливаться, решаться на *что.* // Смелость, решимость. *Йыйылышта сығыш яһарға баҙнатланыу.* ■ *Ғәҙәттә бик тыныс һәм яғымлы Михаилдың ныҡ тулҡынланыуына ғәжәпләнгән Хисмәтулла һорашырға баҙнатланманы.* Я. Хамматов. *Баҙнатланып Мәскәүгә сығып китмәһә, һаман шул торғонлоҡтан ҡотолоу юҡ ине уға [Нурисламға].* Ә. Хәкимов.

**БАҘНАТЛЫ** (Р.: смелый; И.: brave; Т.: yürekli) *с.*

Һәр эшкә ҡыйыу тотоноусан, ҡурҡмаҫ. □ Смелый. *Баҙнатлы кеше.* ■ *Хәҙер ул*

*[Кыҙырас] Юлдаштың күҙ алдына ҡыйыу, баҙнатлы, йылғыр егет булып түгел, ә тел менән яңаҡҡа ғына һалышҡан, ҡурҡаҡ, тәтелдәк малай булып килеп баҫа.* З. Биишева. ● *Баҙнатлы тыныслыҡ яратыр.* Әйтем. *Дөрөҫ эшкә баҙнатлы тор.* Әйтем.

**БАҘНАТЛЫҠ (баҙнатлығы)** *и. ҡар.* **баҙнат.** ■ *Моратов уның [Мәстүрәнең] матур йырлағанын, тик башлап ебәрергә баҙнатлығы ғына етмәгәнлеген белә.* Н. Мусин.

**БАҘНАТСЫЛ** *с. ҡар.* **баҙнатлы.** ■ *Будёновканы кейеп алһам, мин үҙемде көслөрәк тә, баҙнатсыл да тоям.* Т. Килмөхәмәтов.

**БАҘНАТСЫЛЫҠ (баҙнатсылығы)** (Р.: смелость; И.: audacity; Т.: yiğitlik) *и.*

Ҡыйыулыҡ; батырсылыҡ; баҙнат. □ Смелость, решимость. *Егеттең үҙ фекерен белдереүҙәге баҙнатсылығы хужаға оҡшаны.*

**БАҘНАТСЫЛЫҠ ЕТЕҮ (баҙнатсылыҡ ет-)** *ҡ. ҡар.* **баҙнатсылыҡ итеү.** *Хужаға ҡаршы өндәшергә баҙнатсылығым етмәне.*

**БАҘНАТСЫЛЫҠ ИТЕҮ (баҙнатсылыҡ ит-)** (Р.: осмеливаться; И.: dare; Т.: cesaret etmek) *ҡ.*

Ҡыйыуланыу; батырсылыҡ итеү. □ Осмеливаться, решаться на *что. Һүҙ әйтергә баҙнатсылыҡ итә алмай тороу.* ■ *Өйҙөң төп хужаһы алдында ул [Зөһрә] үҙ өйөндәге кеүек итеп йөрөргә ниңәлер баҙнатсылыҡ итмәй ине.* Н. Мусин.

**БАҘНАТҺЫҘ** (Р.: нерешительный; И.: timid; Т.: çekingen) *с.*

Ҡыйыуһыҙ. □ Несмелый, нерешительный, застенчивый, робкий. *Баҙнатһыҙ егет. Баҙнатһыҙ булыу. Баҙнатһыҙ тотоноу.* ■ *Яташ бөкрәйеберәк йөрөүсе ҡырҡ биш йәштәрҙәге баҙнатһыҙыраҡ ир булып сыҡты.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 2010. *Сафиндың ныҡлап эшкә тотоноп китә алмауын, баҙнатһыҙыраҡ йөрөүен Ҡолбаев үҙе лә белә, тик бының сәбәбен генә аңлап еткермәй ине.* Н. Мусин. *Көслө мөхәббәт кешене йә артыҡ тәүәккәл, йә үтә баҙнатһыҙ итә.* «Ағиҙел», № 7, 2010. *Мин оҙон көйлө бер йырҙы баҙнатһыҙ ғына һуҙам.* Т. Ғәниева.

**БАҘНАТҺЫҘЛАНЫУ (баҙнатһыҙлан-)** (Р.: стать нерешительным; И.: become indecisive; Т.: kararsız olmak) *ҡ.*

**1.** Баҙнатһыҙға әйләнеү. □ Стать нерешительным. ■ *Инде Мәҙинәнең тауышы баҙнатһыҙланды, үҙенең әйткәндәрен үҙе саҡ ишетә.* Т. Ғарипова.

**2.** Ҡыйыуһыҙланыу. □ Не решаться. ■ *[Сәриә:] Бүлмәне күңелемә яҡын бейеү көйө бәүелтә башлағайны, баҙнатһыҙланып ултырыуым ҡапыл бөттө, тороп бейергә кереште*м. Р. Солтангәрәев. *[Аҙнаев:] Менәүәрә, ниңә сит ергә килгән шикелле, баҙнатһыҙланып тораһың?* Н. Мусин.

**БАҘНАТҺЫҘЛЫҠ (баҙнатһыҙлығы)** (Р.: нерешительность; И.: indecision; Т.: kararsızlık) *и.*

Ҡыйыуһыҙлыҡ. □ Нерешительность, застенчивость. *Их, шул баҙнатһыҙлығы арҡаһында күпме яфалана егет.* ■ *Ғазраилдың шулай баҙнатһыҙлыҡ күрһәтеүе, алдашыуы тотҡондарҙы ҡыҙғатты ла ебәрҙе.* Б. Рафиҡов. *Балаларҙы етди эштәрҙән, тормош ығы-зығыларынан ҡурсаларға тырышып, улар урынына ҡарарҙар ҡабул итеү, үҙ аллы уйларға форсат бирмәү яуапһыҙлыҡҡа, баҙнатһыҙлыҡҡа килтерә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 3, 2010.

**БАҘ ӨЙ** (Р.: землянка; И.: dugout; Т.: zeminlik) *и.*

**1.** Ергә ҡаҙып эшләнгән торлаҡ. □ Землянка. *Баҙ өйҙә йәшәү.*

**2.** Ваҡ мал өсөн ерҙе ҡаҙып эшләнгән һарай. □ Овчарня.

**БАҘ ӨҪТӨ** (Р.: лаз в погреб; И.: manhole; Т.: mahzenin ağzı) *и.*

Баҙ ауыҙындағы ҡыуышлыҡ. □ Лаз в погреб. ■ *Шул арала баҙ өҫтөн йәнә ҡараңғылыҡ ҡаплап алған.* Легенданан.

**БАҘРА** (Р.: гладкий; И.: smooth; Т.: pürüzsüz) *с.*

Шыма, тигеҙ. □ Гладкий. *Баҙра бит.* ■ *Таштарың тупаҡ, олоноң ләпәк, үҙең бапаҡ, бер яғың баҙра, бер яғың шаҙра.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҘРАЙЫУ (баҙрай-, баҙрая)** (Р.: быть налитым; И.: gleam; Т.: dinç olmak) *ҡ.*

Эре, туҡ, тос, таҙа булып, яҡтыға сағылйыу. □ Быть налитым, ядрёным, чистым, высококачественным; поблёскивать. *Бойҙай ынйылай баҙрайып ята.*

**БАҘРАЙЫШЫУ (баҙрайыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **баҙрайыу.** *взаимн. от* **баҙрайыу.** *Келәттә баҙрайышып ятҡан арыш.*

**БАҘРАҠ (баҙрағы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Эске йылан ырыуы аймағы. □ Бадрак *(название родового подразделения башкир рода эске-елан). Баҙраҡ башҡорто.*

**БАҘРАУ (баҙра-)** (Р.: сиять; И.: glitter; Т.: parıldamak) *ҡ.*

**1.** Ныҡ баҙлап, өйөлөшөп яныу *(күҙгә ҡарата).* □ Ярко гореть, сиять, блестеть, светиться *(об углях). Мейестә баҙрап күҙ яна.* ■ *Өшөп килеп кергән кешеләр тимерлектән сығышмай, күрек алдындағы баҙрап ятҡан күҙ өйөмөнә ҡулдарын йылыталар, тегендәбындә терәлеп, һүҙ ҡуйырталар.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Яныу, йымылдау, йылтылдау. □ Сиять, светиться, блестеть. ■ *Баҙрап тора йылдар төпкөлөндә мәңге һүнмәҫ яуҙар ялҡыны.* С. Ғәбиҙуллин. *Күктә кисәге шикелле баҙрап торған йондоҙҙар ҙа күренмәй, ябалаҡлап яуған ҡар төнгә ниндәйҙер сихри төҫ бирә.* Н. Мусин. *Мунса нигеҙендә гладиолустар сәскә атҡан, арыраҡ бейек ләләләр күҙ яуын ала, өй алдында — аҡ, алһыу, һары, ҡыҙыл, ҡуңыр ҡыҙыл розалар, нигеҙ буйында күҙҙәй баҙраған ҡәнәферҙәр.* Т. Ғарипова.

**3.** *ҡар.* **баҙрайыу.** *Арыш бөртөктәре баҙрай.* ■ *Ҡараһыу йәшел япраҡтар араһында уттай баҙрап ятҡан еләктәрҙе күргәс, Ғилмандың ирекһеҙҙән ауыҙ һыуҙары ҡойолдо.* Н. Мусин.

**БАҘ ТҮШӘҮ (баҙ түшә-)** (Р.: во время перегонки дёгтя настилание на дно погреба бересты; И.: lay birch bark on a cellar bottom; Т.: katran damıtması için mahzene karaağaç döşemek) *ҡ.*

Дегет ҡайнатҡанда баҙ төбөнә ҡайын туҙы, туралған ҡарағай тамыры һалып сығыу. □ Во время перегонки дёгтя настилать на дно погреба бересту, изрубленные корни сосны. *Дегет ҡайнатырға булып, Сәлим бабай баҙ түшәй башланы.*

**БАҘ ҮРҘЕГЕ** (Р.: лага; И.: sleeper(plate); Т.: döşeme kirişi) *и. диал.*

Иҙән урҙаһы. □ Лага. *Баҙ үрҙеге яһау.*

**БАҘЫҒАЙТЫУ I (баҙығайт-)** (Р.: сделать крепким; И.: make hard; Т.: güçlendirmek) *ҡ.*

Баҙыҡҡа, көслөгә әйләндереү, баҙыҡландырыу. □ Сделать крепким, сильным. *Көндәлек спорт күнекмәләре егетте баҙығайтҡан.*

**БАҘЫҒАЙТЫУ II (баҙығайт-)** (Р.: сделать ярким; И.: make bright; Т.: parlatmak) *ҡ.*

Баҙыҡҡа, сағыуға әйләндереү; асыҡ, баҙыҡ итеү. □ Сделать ярким, красочным. *Һүрәтте баҙығайтыу.* ■ *Йәш сағында ул [Рафик] бик зирәк, тәбиғәткә иғтибарлы, уйсан, һәләтле, хискә бай егет ине. Уҙған йылдар уның был сифаттарын, ахырыһы, тағы баҙығайтҡан.* Л. Яҡшыбаева.

**БАҘЫҒАЙЫУ I (баҙығай-, баҙығая)** (Р.: становиться крепким; И.: become hard; Т.: güçlenmek) *ҡ.*

Баҙыҡҡа, көслөгә әйләнеү, баҙыҡ, ныҡ булыу. □ Становиться крепким, сильным. *Егет үҫеп баҙығая төшкән.*

**БАҘЫҒАЙЫУ II (баҙығай-, баҙығая)** (Р.: становиться ярким; И.: become bright; Т.: parlamak) *ҡ.*

Баҙыҡҡа, сағыуға әйләнеү, баҙыҡ, асыҡ булыу. □ Становиться ярким, красочным. *Ямғырҙан һуң сәскәләрҙең төҫтәре асылып, баҙығайып киткән.*

**БАҘЫҠ I** [боронғо төрки *баз-, бад-* ‘күпереү, һимереү’] (Р.: крепкий; И.: hard; Т.: sağlam) *с.*

**1.** Төрлө ҡаршылыҡҡа бирешеп бармаған; ныҡлы, төҙөк. □ Крепкий. *Баҙыҡ бағаналы ҡапҡа. Баҙыҡ имәндәр алып ҡайтыу.* ■ *Тормош әҙәмде йомшаҡ йүкә лә итә, баҙыҡ имән дә яһай, боҙло һыуға ла төшөрә, утҡа ла индерә.* «Ағиҙел», № 7, 2010. *Уҡтай*

*төҙ ҡарағайҙар, баҙыҡ имәндәр, һөйкөмлө ҡайындар, әсә күңелендәй йомшаҡ йүкәләр, сая сағандар бер-бер артлы күҙ алдымдан үтә.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

**2.** Йыуантыҡ, ныҡлы, көслө. □ Сильный, здоровый. *Баҙыҡ кәүҙәле егет. Ир-егеттең баҙыҡ ҡулдарының ғына көсө етә был эшкә.* ■ *Ул [Серопян] тәпәшерәк буйлы, киң яурынлы, ҡалҡыу күкрәкле, баҙыҡ кәүҙәле Зөфәрҙе күҙ алдына килтереп, йылмайып ҡуйҙы.* Н. Асанбаев. *Ҡыҙырас өсөн Юлдаш та сикһеҙ ҡыуанып ҡул сапты. Баҙыҡ кәүҙәле, ҡыйыу, теремек дуҫын ул бик яратта ине.* З. Биишева. *Шунан һуң майҙанға урта йәштәге көрәшсе, баҙыҡ кәүҙәле Көслөбай батыр сыға, аяҡтарын кирә баҫып, бәһлеүәндәрҙе үҙе менән көрәшкә саҡыра.* «Ҡуҙыйкүрпәс». *Фәриҙә буйсан ғына, баҙыҡ кәүҙәле ҡыҙ.* Н. Мусин.

**3.** Ышаныслы, ныҡлы, көслө. □ Твёрдый, уверенный. *Баҙыҡ тауыш менән яуап биреү. Баҙыҡ аҙымдар менән алға барыу. Егеттең баҙыҡ хәрәкәттәре.* ■ *Бына Ирғәленең ирҙәрсә баҙыҡ һәм Менәүәрәнең сыңырап торған саф һәм аҡһыл йоҡа болоттар араһынан көлтәләнеп һибелгән ҡояш нурындай яғымлы тауыштары ҡолаҡтарға килеп бәрелде лә йөрәктәргә үтеп инде.* Н. Мусин. *Мария Анисовна оло уҡытыусыларға ғына хас һалмаҡлыҡ менән баҙыҡ һөйләшә, һәр бер һүҙе күңелгә үтемле.* Ш. Янбаев. *[Аҡай батыр] бик баҙыҡ һәм көслө етәксе.* «Ҡуҙыйкүрпәс». *Аҡһаҡ Бүре үҙе лә бик ныҡ үҙгәргән. Сатанлаһа ла, йөрөш-тороშо баҙыҡ, ҡабырғалары, һырты йомролана төшкән.* Ә. Хәкимов. *Башта ышаныслыһыҙырак яңғыраған моң үҫкәндән-үҫә, баҙығыраҡ, тәрәнерәк яңғырай башланы, күңелдең иң нескә ҡылдарына ҡағылып үтеп, донъяға, йыһанға таралды.* Т. Ғарипова. *Ғилмияза, ҡапыл ҡыйыуланып киткәндәй, баҙыҡ ҡына атлап табын янына килде лә, дөйә тиреһенән эшләнгән сеүәтәне ҡулына алғас, Алдарға йылмайып ҡараны.* Н. Мусин.

**БАҘЫҠ II** (Р.: яркий; И.: bright; Т.: parlak) *с.*

**1.** Асыҡлығы менән күҙгә ташланған; сағыу. □ Яркий, красочный. *Ҡояштың баҙыҡ нурҙары. Баҙыҡ буяуҙар. Баҙыҡ биҙәкле ҡулдәк.* ■ *Ниндәй баҙыҡ айлы кистәр һиндә, һарылып инә тынлыҡ йөрәккә.* К. Кинйәбулатова. *Ал ҡояштың баҙыҡ нурҙары еҙ батмуста сағылып уйнаны.* М. Тажи. *Мәҙинә ҡулын күтәрә биреп ҡарауға, беләҙек ҡояш яҡтыһында меңләгән нур көлтәһе сәсте, фирүзәләр тағы зәңгәрерәк, баҙығыраҡ булып күренде.* Т. Ғарипова. *Балаларҙы тырпаҡ мыйыҡлы, киң яурынлы, япырайыбыраҡ торған ҡалын ҡара ҡашлы, баҙыҡ күҙле, утыҙ-утыҙ биш йәштәрҙәге бер кеше ҡаршы алды.* З. Биишева. *Балаҫтар кисә генә эшләнеп бөткән кеүек — иҫкермәгән дә, төҫтәре лә шул килеш баҙыҡ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010. ● *Ҡыш йондоҙ баҙыҡ янһа — һыуыҡҡа, тоноҡ янһа, йылыға тарта.* Һынамыш.

**2.** *күсм.* Асыҡлығы, тәьҫир итеү көсө яғынан айырылып торған; сағыу. □ Оказывающий воздействие ясностью, способностью убеждать. *Баҙыҡ образ.*

**3.** *диал.* Оялсан. □ Застенчивый. *Баҙыҡ ҡыҙ.*

**БАҘЫҠЛАНДЫРЫУ I (баҙыҡландыр-)** *ҡ. ҡар.* **баҙығайтыу I.**

**БАҘЫҠЛАНДЫРЫУ II (баҙыҡландыр-)** *ҡ. ҡар.* **баҙығайтыу II.**

**БАҘЫҠЛАНЫУ I (баҙыҡлан-)** (Р.: становиться крепким; И.: become hard; Т.: sağlamlaşmak) *ҡ.*

Баҙыҡҡа, көслөгә әйләнеү; баҙыҡ булыу. □ Становиться крепким, сильным, здоровым. *Балалар йәйге ялдан һуң баҙыҡланып киткәндәр.* ■ *Әхтәм дә тамам көскә ултырҙы, үҫмерҙәргә хас килбәтһеҙерәк һыны баҙыҡланды, йөрөш-торошона олпатлыҡ өҫтәлде.* Ә. Хәкимов. *Еңгәһенең ҡайғыһы хәҙер тарала төшкән, атлап йөрөүҙәре баҙыҡланған, юҡ-юҡта, сөм-ҡара күҙҙәрендә шаян осҡондар тоҡанып китә.* Н. Мусин.

**БАҘЫКЛАНЫУ II (баҙыклан-)** (Р.: стать ярким; И.: get bright; Т.: pırıldamak) *к.*

Бик асыҡ, сағыуға әйләнеү. □ Стать ярким, красочным. *Ҡояш нурҙары аҫтында гөлдәр баҙыкланып китте.*

**БАҘЫКЛЫК I (баҙыклығы)** (Р.: сила; И.: reliability; hardness; Т.: güven) *и.*

Ныҡлыҡ, ышаныслылыҡ. □ Сила, уверенность. ■ *[Миһрандың] тауышына баҙыклыҡ өҫтәлде.* Ә. Хәкимов.

**БАҘЫКЛЫК II (баҙыклығы)** (Р.: яркость; И.: brightness; Т.: parlaklık) *и.*

Асыҡлыҡ, сағыулыҡ. □ Яркость, ясность. *Тәҙрә төбөндәге сәскә атып ултырған гөлдәр ҙә өйгә үҙенә күрә баҙыклыҡ бирә.* ■ *Был көҙҙәрҙе нисәмәләр күрҙем — һаман баҙыклыҡҡа таң ҡалам.* Л. Абдуллина.

**БАҘЫЛДАУ (баҙылда-)** *к. ҡар.* **баҙлау I, 1.** *Баҙылдап янған күҙҙәр.*

**БАҘЫМ I** (Р.: смелость; И.: boldness; Т.: cesaret) *и. диал.*

Баҙнат. □ Смелость, решимость. *Баҙым етеү.*

**БАҘЫМ II** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **ырмау II.** *Баҙым алыу. Тәҙрә баҙымы.*

**2.** Бүрәнәне буйлап, ырырҙан алда ырыуыс менән һыҙылған һыҙыҡ. □ Линия вдоль бревна для снятия паза. *Баҙым һыҙыу.*

**БАҘЫМСАК** *с. ҡар.* **баҙнатлы.** *Баҙымсаҡ егет.*

**БАҘЫНЫУ I (баҙын-)** *к. ҡар.* **баҙыу.** *Көрәшкә баҙыныу. Һүҙ ҡыҫтырырға баҙынманы.* ■ *Беҙҙә тау-урман яҡын.* — *тине ул [Арыҫлан],* — *бынан үтергә баҙынмаҫ.* Ғ. Ибраһимов. *Баһау инде ололар алдында һөйләшергә, һүҙ ҡыҫтырырға баҙынманы һәм, аш өйө яғынан табаҡ менән аш, һауытһаба, самауыр, сынаяҡтар килтереп, ағаһына, еңгәһенә ярҙамлашты.* Ж. Кейекбаев. *Башҡорттоң: «Айбарлы ир-егеттәр бар сағында, баҙынмаҫ дошман еремә»,* — *тигән ғибәрәһе бар.* С. Поварисов.

**БАҘЫНЫУ II (баҙын-)** *к. диал. ҡар.* **баҙаныу I, 2–4.** *Ауырыуҙан баҙыныу. Кешенән баҙыныу.*

**БАҘЫРАЙЫУ (баҙырай-, баҙырая)** *к. ҡар.* **баҙрайыу.** ■ *Улар [ҡыҙҙар] баҙырайып торған сук ҡара ҡарағат бөртөктәрен кәрзинкәләргә тиреп тултыралар ҙа түкмәй-сәсмәй генә арбалағы йәшниктәргә алып барып бушаталар.* З. Биишева.

**БАҘЫРАУ (баҙыра-)** *к. ҡар.* **баҙрайыу.** ■ *Әйтерһең дә, кемдер түгеп киткән алтын бойҙай ята баҙырап!* Т. Ғәниева. *Юл ситтәре ҡытырмаҡ боҙ селтәре менән ҡапланған, ҡар ярмаланып, мәрйендәй баҙыраған эре бөртөктәр булып уҡмашҡан.* Т. Ғарипова.

**БАҘЫРЛАУ (баҙырла-)** (Р.: сиять; И.: shine; Т.: parıldamak) *к.*

Ныҡ баҙлап яныу. □ Сиять; блестеть. // Сияние, блеск. *Күктә йондоҙҙар баҙырлап яна.*

**БАҘЫУ (баҙ-)** (Р.: осмеливаться; И.: dare; Т.: cesaret etmek) *к.*

Баҙнат итеү, батырсылыҡ итеү, ҡыйыулыҡ күрһәтеү. □ Осмеливаться, решиться на *что. Һүҙ ҡушырға баҙыу.* ■ *Шәүәли йәш бисәне күргәс, баҙып һүҙ әйтә алманы.* Б. Бикбай.

**БАҘЫЯ** [фарс. بادیه] (Р.: бадья; И.: tub; Т.: badya) *и.*

**1.** Ҡалын тимерҙән йәки ағастан эшләнгән ҙур күнәк. □ Бадья. *Ағас баҙыя. Тимер баҙыя.* ■ *Һалҡын баҙыяға ирендәремде терәп өлгөрмәнем, ҡаршылағы ҡапҡа алдында торған бер әбей өндәште.* З. Ураҡсин.

**2.** Бәләкәй биҙрә. □ Маленькое ведро. *Әбей баҙыяһын тотоп сығып китте.*

**БАҘЫЯ БИҘРӘ** *и. диал. ҡар.* **баҙыя 1.** *Баҙыя биҙрә соланда ултыра.*

**БАҘЫЯН I** [боронғо төрки *бадыян* ‘ҡытай әнис үләне’] (Р.: бадьян; И.: anise; Т.: yıldız anason) *и.*

**1.** *бот.* Йыла япраҡлы, һарғылт сәскәле мәңге йәшел көньяҡ ағасы. □ Бадьян, анис. / Бадьяновый, анисовый (лат. *Illicium*). *Баҙыян япрағы.* ■ *Баҙыян сәскәләнгәс, Ислам ағайың сәскәләрен һыйпаған икән, усын, бармаҡтарын ауырттырғансы бешергән.* С. Бәзретдинов. *Баҙыян да менән алмаҙың күрһәң ине сәскә ярғанын.* Бәйеттән. *Һәр*

*төрлө лә ағас күп булыр, баҙыяндай ағас була алмаҫ.* Йырҙан.

**2.** Баҙыян ағасының еҫле май бирә торған емеше. □ Плод этого дерева, из которого выжимают душистое масло. *Баҙыян еҫе.* ■ *Баҙыян да менән кәләмферҙе бергә кушһаң, дарыу булмаҫмы?* Йырҙан. *Еләненә баҙыян бөркөп кенә кәләш әҙерләйҙәр.* Т. Ғәниева. *Әбейҙәр, еңгәләр, ҡыҙҙар таба-ла ҡыҙҙырылған баҙыян еҫтәре аҫтында Шәмсиҙең әсәһе Фатимаға кәфен текте-ләр.* Ғ. Хәйри. *Йөрәгемдең яныуына баҫтым баҙыян майҙары. Баҙыян майҙары ла баҫмай, яна торған айҙары.* Йырҙан.

**БАҘЫЯН II** *и. ҡар.* **баҙыян сәскәһе.** ■ *Көмөш кенә йөҙөк мин ҡойҙорҙом ун ике лә мыҫҡал аҡсанан, һеҙҙе, дуҫҡайҙарым, эҙләп таптым баҙыян-кәнәфер үҫкән баҡсанан.* Йырҙан.

**БАҘЫЯН III** (Р.: маленькая деревянная посуда; И.: small wooden dish, plate; Т.: küçük ahşap tabak) *и. диал.*

**1.** Бәләкәй ағас һауыт. □ Маленькая деревянная посуда. *Баҙыян эшләү.*

**2.** Тәрилкә. □ Тарелка. *Баҙыянға аш ҡойоу.*

**3.** Ҡапҡаслы май һауыты. □ Маслёнка с крышкой. *Баҙыяндағы май.*

**4.** Бал, май һауыты. □ Посуда для мёда, масла. *Баҙыяндағы бал.*

**5.** Таштабаҡ. □ Большая тарелка. *Баҙыяндағы ит. Баҙыянға аш ҡойоу.*

**БАҘЫЯН IV** (Р.: поталь; И.: tinsel; Т.: boya) *и. диал.*

Алтын, көмөш төҫөндәге буяу; бутал. □ Поталь. ■ *[Алтынсәс] һулҡ-һулҡ итеп һаҡлап, битенә, ҡояшта баҙыяндай янған яланғас беләктәренә һарылыусы сыбыҡ-сабыҡты айырып та тормай, алға ынтыл-ды.* Ә. Хәкимов.

**БАҘЫЯН V** (Р.: расписной; И.: decorated; Т.: boyalı) *с.*

Ағасҡа биҙәк төшөрөлөп эшләнгән. □ Расписной, расписанный *(поталью; о деревянной посуде). Баҙыян тәгәс. Баҙыян һауыт.* ■ *Күсәк бей килеп инеү менән, ҡатын баҙыян сеүәтәгә ойотҡан ҡойоп бирә.* Эпостан.

**БАҘЫЯН ГӨЛ** *и. бот. диал. ҡар.* **бөтнөк.** *Баҙыян гөл еҫе.*

**БАҘЫЯН СӘСКӘҺЕ** (Р.: ясенец; И.: dictamnus; Т.: gazelotu) *и. бот.*

Йыла япраҡлы, оҙон төҙ һабаҡлы, ал йә алһыу күк сәскәле күп йыллыҡ еҫле дарыу үләне. □ Ясенец (лат. *Dictamnus*). *Баҙыян сәскәһе йыйыу.* ■ *Баҡсаларҙа баҙыян, ай, сәскәһе, башҡынайын турғай өҙмәһен.* Йырҙан.

**БАҘЫЯН ҮЛӘНЕ** *и. бот. ҡар.* **баҙыян сәскәһе.** *Баҙыян үләне күп сыҡҡан.*

**БАҘ ЯҒЫУ (баҙ яҡ-)** (Р.: заниматься гонкой дёгтя и обжиганием угля; И.: special place for making tar; Т.: katran damıtma) *ҡ.*

Махсус соҡорҙа ҡайын, ҡарағай ағасын яндырып дегет ҡайнатыу, күмер яндырыу. □ Заниматься гонкой дёгтя и обжиганием древесного *(берёзового, соснового)* угля. *Ирҙәр баҙ яғып күмер һаталар.*

**БАҘ ЯНДЫРЫУ (баҙ яндыр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **баҙ яғыу.** *Баҙ яндырыу менән шөғөлләнеү.*

**БАҘ ЯНДЫРЫУСЫ** (Р.: человек, занимающийся перегонкой дёгтя и обжиганием угля; И.: person employed in tar marking; Т.: katran damıtan ve kömür yakan kimse) *и. диал.*

Баҙ яндырыу менән шөғөлләнеүсе. □ Человек, занимающийся перегонкой дёгтя и обжиганием угля. *Баҙ яндырыусынан күмер һатып алырға ине.*

**БАЖА** [дөйөм төрки *бажа* 'ҡәрҙәш'] (Р.: свояк; И.: brother-in-law; Т.: bacanak) *и.*

Апалы-һеңлеле ҡатындарҙың ирҙәре *(бер-береһенә ҡарата).* □ Свояк. ■ *Унда Сөнәғәт, Сәлиха һәм бажаһы Ғилаж ҡарт сәй эсеп ултыралар ине.* Ж. Кейекбаев. *Солтанбай батыр оло бажаһы менән көрәшергә тотона.* Әкиәттән. *Алдарҙың үҙе шаян, үҙе сая, үҙе ифрат кәрле бажаһы бар ине.* М. Кәрим. *[Әптекәй]: Түңгәүерҙәрҙе Көтөр ҡыҫҡандан-ҡыҫа бит. Аҡмәмбәт бажаның атаһын ҡурҡытып, Таштуғай яланының яртыһын алған.* М. Буранғолов. ● *Кәзәнең маллығы,*

*бажаның туғанлығы.* Әйтем. *Бажа менән бажа татыу, кәзә менән кәзә татыу.* Әйтем. *Барыр ере булмаған бажаһы өйөнә барыр.* Әйтем. *Нужа күргең килһә, юлға сығып кун, фатир тапмаһаң, бажаңа кереп кун.* Мәҡәл. *Эттең бажаһы күп, ҡоҙаһы юҡ.* Әйтем. *Өс бажаны бүре ашамай.* Әйтем.

♦ **Ете бажаны бер бүре ашаған** ҡурҡаҡ һәм тарҡау кешеләр тураһында. □ Семерых свояков один волк съел *(говорится о крайне трусливых и недружных людях).*

**БАЖА ВАҠЫТ** (Р.: заранее договорённое время для переезда невесты в дом жениха; И.: place agreed upon; Т.: gelinin gelme vakti) *и. этн.*

Ҡыҙҙы күсереүгә алдан билдәләнгән ваҡыт. □ Заранее договорённое время для переезда невесты в дом жениха. *Бажа ваҡыт еткәс, кәләште күсереп алып ҡайттылар.*

**БАЖАҒА** (Р.: старший деверь; И.: senior brother-in-law; Т.: kayınbirader) *и. диал.*

Ҡайнаға. □ Старший деверь *(старший брат мужа). Бажағам килеп ярҙам итеп тора.*

**БАЖАЙ** *и. диал. ҡар.* **бажа.** *Бажай менән балыҡ тоторға киттек.*

**БАЖАТ** (Р.: мятлик луговой; И.: meadow grass; Т.: çayır otu) *и. бот.*

Ҡыяҡ япраҡлы, һоло башлы, оҙон тамырлы малға бик туҡлыҡлы үлән. □ Мятлик луговой (лат. *Poa pratensis). Бажат сабыу.*

**БАЖАТЛЫ** (Р.: с мятликом; И.: having meadow grass; Т.: çayırlı) *с.*

Бажаты булған. □ С мятликом, имеющий мятлик луговой. *Бажатлы ялан. Бажатлы бесән.*

**БАЖАТЛЫҠ (бажатлығы)** (Р.: место, изобилующее мятликами; И.: place rich in meadow grass; Т.: çayırlık) *и.*

Өйкөм-өйкөм бажат үҫкән урын. □ Место, изобилующее мятликами луговыми. *Бажатлыҡҡа килеп сыҡтыҡ.*

**БАЖҠ** (Р.: кря; И.: quack-quack; Т.: vak vak) *оҡш.*

Өйрәк тауышын белдергән һүҙ; быжҡ. □ Кря, кряк *(подражание крику, кряканью утки).*

**БАЖҠ-БАЖҠ** (Р.: кря-кря; И.: quack-quack; Т.: vak vak) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бажҡ иткән тауышты белдергән һүҙ; быжҡ-быжҡ. □ Кря-кря *(подражание многократному кряканью утки). Бажҡ-бажҡ килеү. Өйрәктәр бажҡ-бажҡ килеп күлгә төшөп киттеләр.*

**БАЖҠ ИТЕҮ (бажҡ ит-)** (Р.: крякать; И.: quack; Т.: vakvaklamak) *ҡ.*

Бажҡылдау. □ Крякать. *Өйрәк бажҡ итеп ҡалды.*

**БАЖҠЫЛДАУ (бажҡылда-)** (Р.: крякать; И.: quack repeatedly; Т.: vakvaklamak) *ҡ.*

Бажҡ-бажҡ итеп ҡысҡырыу; быжҡылдау. □ Крякать. // Кряканье. *Бажҡылдығын сығыу. Өйрәк бажҡылдай.*

**БАЖҠЫЛДАШЫУ (бажҡылдаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бажҡылдау.** *взаимн. от* **бажҡылдау.** *Өйрәктәр күлдән бажҡылдашып ҡайтып инде.*

**БАЖҠЫЛДЫҒЫ СЫҒЫУ (бажҡылдығы сыҡ-)** *ҡ. ҡар.* **бажҡылдау.**

**БАЖЫҠ** (Р.: крепкий; И.: strong; Т.: sağlam) *с. диал.*

Ныҡ. □ Крепкий. *Бажыҡ ағас.*

**БАЖЫМ I** (Р.: бортевой паз; И.: special board slot; Т.: oyuk ağzı) *и.*

Солоҡтоң ауыҙы. □ Бортевой паз. *Солоҡ бажымы.*

**БАЖЫМ II** *и. диал. ҡар.* **ырмау II.** *Бажым алыу.*

**БАЖЫМ АЛЫУ (бажым ал-)** (Р.: делать пазы; И.: make slots; Т.: oyuk yapmak) *ҡ.*

Солоҡҡа ауыҙ яһау; бажымлау. □ Делать пазы *(в борти),* пазить.

**БАЖЫМЛАУ I (бажымла-)** (Р.: снять паз; И.: remove slots; Т.: yivlemek) *ҡ.*

Ырыу. □ Снять паз, пазить. *Ағасты бажымлау.*

**БАЖЫМЛАУ II (бажымла-)** (Р.: делать пазы; И.: make slots; Т.: yivlemek) *ҡ. диал.*

Солоҡҡа ауыҙ яһау, бажым алыу. □ Делать пазы *(в борти)*, пазить. *Солоҡто бажымлау.*

**БАЗА** [рус. < фр. *base* < гр. *basis* ‘нигеҙ’] (Р.: база; И.: base; Т.: temel) *и.*

**1.** Матди-техник саралар йыйылмаһы. □ База *(совокупность материальных и технических средств, ресурсов). Еңел сәнәғәт базаһы. Иҡтисади база. Сеймал базаһы. Матди база. Мәктәптең матди-техник базаһы.*

**2.** *Ниҙе лә* булһа хеҙмәтләндереү өсөн булған запас һәм махсус ҡоролмалар тупланған урын. □ База *(запас для обслуживания чего-то и место скопления специальных сооружений). Саңғы базаһы. Ял базаһы. Геологтар базаһы. Нефтселәр базаһы.* ■ *Уның [Ирназарҙың] аҙаҡ ишетеүенсә, күп тигәндә, ун-ун биш кешелек төркөмдәр, ойоша ғына башлап, урман төпкөлдәрендә база ҡороу, ышаныслы активты күрәшкә ылыҡтырыу, ҡорал туплау, аҙыҡ-түлек әҙерләү менән мәшғүл булған.* Н. Мусин. *Һулдараҡ барак тибындағы оҙон йорт нефть разведкалау экспедицияһының базаһылыр, моғайын.* «Ағиҙел», № 11, 2010. *Львов өлкәһе Долина ҡасабаһында училищеның утын әҙерләү базаһы бар ине.* А. Мағазов. *Азамат идаралыҡҡа инеп торманы, хәҙер был йорттоң янынан да үткеһе килмәй, быраулаусылар базаһына барҙы ла юл ыңғай машинаға ултырҙы.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Илдең ҡоралды көстәренең үҙ йәки сит территориялағы терәк пункты. □ База *(опорный пункт вооружённых сил страны в своей или чужой территории). Авиация базаһы. Хәрби-диңгеҙ базаһы.* ■ *Шулай итеп, апрель урталарында Шауляй ситендә йәйелеп урынлашҡан база аэродромында инем инде.* А. Мағазов.

**4.** Төрлө тәьминәт кәрәк-ярағы һаҡланған урын. □ База *(склад, место, где хранится разное необходимое снабжение). Йәшелсә базаһы. Базанан аҙыҡ-түлек һатып алыу.* ■ *Ғәбдеян, ҡайһы бер һатыусылар кеүек, артыҡ мутлашмай, шул уҡ ваҡытта базанан алып ҡайтҡан бер нәмәне өҫтәлгә сығарып һалырға, уны йәһәтләп һатып бөтөргә лә ҡабаланмай.* Н. Мусин. *Тауҙың ауыл яҡ ситенә ергә ҡаҙып ҙур цистерналар ултыртҡандар — быныһы инде яғыулыҡ базаһы була.* Р. Солтангәрәев.

**5.** *ҡар.* **мәғлүмәт базаһы.**

**6.** *күсм. Нимәгәлер* шарт, мөмкинлек биргән таяныс; нигеҙ. □ База *(основание, основа, исходный пункт). Фәнни базаға нигеҙләнеү.* ■ *Бында урман-һыу етерлек, эште башлап алып китергә база ла бар.* Н. Мусин.

**БАЗАЛЬТ** [рус. < лат. *basaltes*] (Р.: базальт; И.: basalt; Т.: bazalt) *и. геол.*

Күрән төҫтәге вулканик тау тоҡомо. □ Базальт. / Базальтовый. *Базальт ултырмалары.*

**БАЗЕДАУЫРЫУЫ** [рус. < нем. *K. Basedow* ‘табип фамилияһы’] *и. ҡар.* **куштамаҡ.**

**БАЗИЛИК** [рус. < фр. *basilic*] (Р.: базилик; И.: basil; Т.: fesleğen ) *и.*

**1.** *бот.* Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ярымҡыуаҡ үҫемлек. □ Базилик *(растение)* (лат. *Ocimum).*

**2.** Шул үҫемлектән эшләнгән аш тәмләткес. □ Базилик *(пряность).*

**БАЗИЛИКА** [рус. < гр. *basilike* ‘батша өйө’] (Р.: базилика; И.: basilica; Т.: bazilika) *и. архит.*

Эстән бағана рәттәре менән буйға бүленгән оҙонса тура дүртмөйөш бина. □ Базилика. *Базиликаға инеү. Базилика эсендә йөрөү.*

**БАЗИС** [рус. < гр. *basis* ‘нигеҙ’] (Р.: базис; И.: basis; Т.: altyapı) *и.*

**1.** Йәмғиәттең иҡтисади ҡоролошо, билдәле бер сәйәси, хоҡуҡи, әхлаҡи һ. б. ҡанундары булған етештереү мөнәсәбәттәре. □ Базис *(формация). Базис күренештәре. Базис булып тороу.*

**2.** Нигеҙ, ерлек. □ Базис *(основа). Иҡтисади базис. Һалым билдәләү базисы.*

**3.** *иҡт.* Ҡулдағы һәм килтереләсәк тауар хаҡының айырмаһы. □ Базис *(разница между ценой реального товара и товара с поставкой). Тауарҙың базисы.*

**БАЗЛАУ (базла-)** *к. диал. кар.* **баҙлау.**

**БАЗЫҠА** (Р.: небольшой хариус; И.: small grayling; Т.: küçük gölge balığı) *и. зоол.*

Ҙур булмаған бәрҙе. □ Небольшой хариус (лат. *Thymallus). Базыҡа тотоу.*

**БАИҠ (баиғы)** [ғәр. بائق] (Р.: продавец; И.: seller; Т.: satıcı) *и. иҫк. кит.*

Һатыусы. □ Продавец, торговец. *Баиҡтан әйбер һатып алыу.*

**БАИН** [ғәр. بائن] (Р.: явный; И.: explicit; Т.: açık) *с. иҫк. кит.*

Күренеп торған, асыҡ. □ Явный. *Баин дәлил.*

**БАЙ I** [дөйөм төрки *бай*] (Р.: богатый; И.: rich; Т.: zengin) *с.*

**1.** Мал-мөлкәте күп; мул, етеш; *киреһе* — ярлы. □ Богатый, состоятельный, зажиточный. *Бай ғаилә. Бай дәүләт. Бай халыҡ.* ■ *Бай булһаң, менгән атыңды алтын менән дағала.* М. Аҡмулла. ● *Иртә торған бай булған, һуңлап торған хур булған.* Әйтем.

**2.** Юғары дәрәжәлә етерлек; мул. □ Достаточный в высокой степени; богатый. ■ *Башҡортостан ере күлдәргә бай, һыуҙарға мул беҙҙең еребеҙ.* Р. Ниғмәти. *[Арыҫлан Байғужин:] Ә бит мин хәҙер инде үҙ телеңдә уҡый-яҙа белеүҙең ни хәтле ҙур бәхет икәнен дә, үҙ телемдең яҙғы, Оло Эйек туғайы шикелле сәскәгә, һутҡа, хуш еҫкә бай булыуын, шул туғайҙың һандуғасы шикелле йырсан, моңсан булыуын бөтә йәнем-йөрәгем менән тойоп белгән кеше бит әле.* З. Биишева. ● *Ере байҙың иле бай.* Әйтем.

**3.** Иркен, ҡуйы булып үҫкән. □ Густо растущий. *Бай ҡайын.*

**БАЙ II** [дөйөм төрки *бай* 'бай, малы күп'] (Р.: богач; И.: rich man; Т.: zengin) *и.*

**1.** Мал-мөлкәте күп булған, мул, етеш йәшәгән кеше. □ Богач. ■ *Бай оҙаҡ йылдар буйы бер үгеҙ һимерткән, үгеҙ шул тиклем үҫалланып киткән, хатта егерме туғыҙ хеҙмәтсенең косо етмәй икән.* Әкиәттән. *Байҙа эшләй инек үҙебеҙ.* Т. Арслан. *Малайҙар китеүгә күп тә үҙманы, бала-саға етәкләгән аҡһаҡалдар, карт-королар Әмин бай тирмәһе эргәһендәге асыҡ урынға йыйыла ла башланы.* Ә. Хәкимов. ● *Байҙың эше фарман менән.* Әйтем.

**2.** *иҫк.* Кешегә *(күберәк юғары ҡатлам кешеһенә)* хөрмәт менән өндәшеү һүҙе. □ Почтительное обращение *(в большинстве случаев к человеку высшего сословия). Әхмәт бай. Таһир бай.* ■ *[Алпамыша:] Берәй атыңды бир миңә, бай, — ти.* Әкиәттән.

**3.** *диал.* Ҡатындың ире. □ Муж жены. *Байым һуғышта үлеп ҡалды. Тәүге байым үлгәс, ҡәйнешем алды.*

**4.** *диал.* Хужа. □ Хозяин. *Байым эштән ебәрмәй.*

♦ **Ҡара бай** һаран бай. □ Скупой богач. **Серегән бай** бик ныҡ байыған бай. □ Очень богатый человек.

**БАЙ III** (Р.: эквивалент; И.: equivalent; Т.: eşit) *и.*

**1.** *Ниндәйҙер* эш-хеҙмәтте, хаҡты ҡайтарырлыҡ нәмә; бәрәбәр. □ Вещь, которая может вернуть цену труда, плату; эквивалент. *Ашау байына эшләү. Эшләгән байын ҡайтарыу.*

**2.** *Ниҙелер* үлсәгәндә, һуңынан кәмеү иҫәбенә артығыраҡ итеп ҡалдырылған өлөш. □ Часть, оставленная во время измерения с расчётом на уменьшение. *Күлдәк тауарын тегеү байы ҡалдырып бесеү.*

**3.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, яҙмыш, өлөш тәңреһе. □ Доля, плата, судьба, божество судьбы, доли.

♦ **Алдың байыңа (*йәки* байыңды)** *ниҙендер* аҙағы насар булып бөткәндә әйтелә. □ Говорится тогда, когда *что-либо* заканчивается плохо. *Йыйылған бесәнде күбәләп бөтмәйенсә, ямғыр яуып ебәрһә, алдың байыңды.* **Байына алыу** насар һөҙөмтә күреү; кәрәгенә алыу. □ Быть наказанным, получить по заслугам. *Был яман хужа байына алды.* **Байын биреү** 1) *ниҙелер* туйғансы эшләп күңел булыу. □ Довольствоваться, делая вдоволь *что-то,* делать *что-л.* как следует. *Байын биреп ашау. Байын биреп эшләү. Байын биреп әрләү;* 2) кинәнеп әрләү йәки туҡмау; эшен килтереү. □ Наказывать, ругать или избивать. *Әсмә ҡыҙының байын бирҙе генә.*

**Байын ҡайтарыу** эшләгән эштең хаҡын, ҡоһорон ҡайтарыу. □ Отплачивать, возмещать. *Көҙ еткәс, Усман бай Сәлимгә яҙ биргән картуфтың байын ҡайтарҙы: уны унлата арттырып түләтте.* **Көҙ байында** көҙ мул уңыш мәлендә, көҙгөһөн. □ Осенью. *Көҙ байында йыйып ҡалмаһаң ашлыкты, аҙактан көн булмаясаҡ.*

**БАЙ IV** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мул-ғәйнә ырыуы аймағы. □ Бай *(название родового подразделения башкир рода мул-гайна). Бай башҡорто.*

**БАЙ V** *и. һөйл. ҡар.* **пай.** *Бай ере бүлеп бирҙеләр.*

**БАЙ АҒАЙ** (Р.: почтительное обращение к богатым, старшим; И.: your eminence; Т.: beyefendi) *и.*

Байҙарға, өлкәндәргә ололап өндәшә торған һүҙ. □ Почтительное обращение к богатым, старшим.

**БАЙБАЙ АҒАСЫ I** *и. бот. диал. ҡар.* **осҡат.** *Бында байбай ағасы бик күп үҫә.*

**БАЙБАЙ АҒАСЫ II** (Р.: жёлтая акация; И.: caragana; Т.: bezelyeçalısı) *и. бот. диал.*

Һары сәскәле сәрүи ағасы. □ Жёлтая акация (лат. *Caragana arborescens).*

**БАЙБАҠ (байбағы)** *и. зоол. ҡар.* **һыуыр.** *Байбактар ҡышҡы йоҡоға талған.*

**БАЙ-БЕТСӘ** (Р.: сын богача; И.: young master; Т.: beyzade) *и.*

**1.** Бай улы. □ Сын бая, богача, барчук. *Бай-бетсә йыйылған.*

**2.** Байҙар ҡатламы, байғура. □ Сословие богатых. ■ *[Ҡыҙырас:] Аптырағас-йөҙәгәс .. бай-бетсәһенә үс итеп ҡорал алдым да ер-һыу яуларға үҙем сығып киттем.* Яр. Вәлиев.

**БАЙБИКӘ** (Р.: жена бая; И.: rich man's wife; Т.: bey hanimi) *и. иҫк.*

Бай ҡатыны; байбисә. □ Жена бая. ■ *Тайбәнең уңған да, күндәм дә булыуын һиҙеп алғас, байбикәләр уға ирҙәр эшен дә йөкмәтә башланылар.* Х. Мохтар.

**БАЙБИСӘ** (Р.: жена бая; И.: Oriental rich man's wife; Т.: hanımefendi) *и. иҫк.*

**1.** Бай ҡатыны; байбикә. □ Жена бая. ■ *[Гөлбаныу] әүәлге байбисәләргә окшатып. байпанлап атлап түрбаш яғына килде.* Н. Мусин. *Тырышлығы, күндәмлеге арҡаһында ул [Шәрғиә] тиҙ арала байбисәнең күңелен арбап өлгөрә, уның ике ҡыҙына эйәреп яңы ысулдағы мәктәпкә йөрөй.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ырыу башлығының ҡатыны. □ Жена главы рода. *Ырыу башлығы өйҙә юк, байбисә балалары менән генә ҡалған.*

**3.** *этн.* Баш ҡатын. □ Старшая жена. ■ *Туй мәжлесендә кейәү яғынан батыр егет еңеү яулаһа, кәләш байбисә исемен ала һәм ир икенсе ҡатҡа өйләнергә хоҡук ала.* Халыҡ ижадынан.

**БАЙБҮРЕ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуы аймағы. □ Название родового подразделения башкир-табынцев. *Байбүре аймағы йәшәй.*

**БАЙБЫЙ АҒАСЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **осҡат.** *Байбый ағасы үҫкән тау бите.*

**БАЙГИЛДЕ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Урман-гәрә ырыуы аймағы. □ Байгильде *(название родового подразделения башкир рода урман-гэрэ). Байгилде башҡорто.*

**БАЙҒА ТЕЙЕҮ (байға тей-)** (Р.: выйти замуж; И.: marry; Т.: evlenmek) *ҡ. диал.*

Кейәүгә сығыу. □ Выйти замуж. ■ *Күрше ҡыҙы байға тейеп күрше ауылға күсеп киткәс, әсәһе яңғыҙы донъя көтөп ҡалды.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЙҒОНДО** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуы аймағы. □ Название родового подразделения башкир-табынцев.

**БАЙҒОРА** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Меңле ырыуы аймағы. □ Байгура *(название родового подразделения башкир рода мин).*

**БАЙҒОШ** [ҡыпсаҡ осоро һүҙе *бай ҡуш*] (Р.: неясыть; И.: tawny owl; Т.: baykuş) *и.*

**1.** *зоол.* Өкөнөң бер төрө. □ Неясыть *(вид совы)* (лат. *Strix*). ■ *Баҡса артындағы өйәңкелеккә һәр саҡ байғош хужа булды.* «Торатау», 21 сентябрь 2010. *Намыҫ тапар ир булһа, .. күҙе ҡалғыр байғошто төндә аулап, шат булыр.* «Урал батыр». ● *Байғоштоң ояһын хоҙай ҡора.* Мәҡәл.

**2.** *күсм.* Ҡыҙғаныс, меҫкен хәлдәге кеше. □ Бедняга, бедняжка. ■ *[Аяҙғол]: Юҡ, улым, шымсы түгелмен мин, хаҡлыҡ эҙләп һеҙҙең янға килгән бер байғош.* Б. Бикбай. *Байғош тип, гәҙәттә, ярлы, меҫкен йәки ғәрип кешегә әйтәләр.* К. Мәргән. *Ниндәйҙер сәйер генә әҙәм: ҡиәфәте лә, һөйләшеүе лә самалы. Азамат, был — йөрөгән бер байғоштор, тип, һүҙенә ышанмайыраҡ та торғайны, әммә һөйләшә башлағас, инандырғандай итте.* Р. Солтангәрәев. *Субай түрә тап бына ошондай уйҙарға сумып, үҙенең бөгөнгө хөкөмөнән ҡәнәғәт булып ятҡан мәлдә, майҙанды ташлап китә алмаған халыҡ йыйынды башлап ебәреүсе думбырасы байғоштоң көйлө әйтемдәрен йотлоғоп тыңлай ине.* К. Мәргән. *Күпме ваҡыт хәсрәтен эсенә йомоп йәшәгәндән һуң, инде килеп эсен бушатырҙай тере йән, үҙе кеүек бәхетһеҙ бер байғош осрағанына ҡыуана-ҡыуана һөйләне бит ул [Ишмөхәмәт].* Т. Ғарипова. *Күнегелгән мөхитенән, ғаиләһенән айырылғас, өмөтөн юғалтҡан байғош ине Нурислам.* Ә. Хәкимов. *Быйыл ғына йәйҙең уртаһында ник һарғайҙым икән мин байғош.* Халыҡ йырынан. *Мин байғоштоң, әйтһәм дә, баһаһы юҡ, һүҙемдең ҡәҙере китеп өнөм осҡан.* М. Аҡмулла. ● *Тырыш тәкә һуйыр, байғош йүкә һуйыр.* Мәҡәл.

**3.** *мыҫҡ.* Кешегә кәмһетеп, мыҫҡыллап әйтелә. □ Бедняга, простак.

**4.** *миф.* Мифлаштырылған ҡош, яңғыҙлыҡ, яҙмыш, үлем символы. □ Неясыть; символ одиночества, судьбы, смерти.

**БАЙҒОШЛАНЫУ (байғошлан-)** (Р.: прибедняться; И.: feign poverty; Т.: miskinleşmek) *ҡ.*

**1.** Үҙеңде ҡыҙғаныс итеп күрһәтеү, меҫкенләнеү. □ Прибедняться. *Ҡайһы бер кешеләр байғошланып түрәнән уныһын-быныһын һоранып йөрөй.*

**2.** Ахмаҡланыу, ахмаҡлыҡ эшләү. □ Глупить, поступать глупо. ■ *Саимәнең әсәһе Шамилға ҡырын ҡарап тормаҫмы? Уның кем икәнен белһә, ҡыҙының утыҙға етеп барған, һаман байғошланып йөрөгән кешене өйөнә эйәртеп алып ҡайтыуына асыуланмаҫмы?* Н. Мусин.

**БАЙҒОШЛОҠ (байғошлоғо)** (Р.: прибеднённость; И.: bareness; Т.: yoksulluk) *и.*

Байғош, меҫкен булыу хәле. □ Прибеднённость, убогость. ■ *Әлдә ул [Мәҙинә] Ғәлимә, Сәяф, Ихсанбай ишеләрҙе бер-берегенән һатырға, бысратырға, берсә изге, берсә иблис ҡиәфәте алырға мәжбүр иткән ваҡтөйәктән, бахырлыҡтан һәм байғошлоҡтан һәр саҡ өҫтөн булып ҡала алды.* Т. Ғарипова.

**БАЙҒОШ ӨКӨ** (Р.: домовой сыч; И.: kind of little owl; Т.: kukumav) *и. зоол.*

Ябалаҡтың бер төрө. □ Домовой сыч (лат. *Athene noctua*). *Байғош өкө ҡанаты.*

**БАЙҒОШ ЯБАЛАҠ (ябалағы)** *и. ҡар.* **байғош өкө.** *Байғош ябалаҡтар оса.*

**БАЙҒУРА** (Р.: богач; И.: wealthy peasant; Т.: burjuva) *и. иҫк.*

Байҙар ҡатламы. □ Богачи. ■ *Ауыл тирәһенән ат етерлек алыҫлыҡтағы бер генә түрә-ҡара ла, байғура ла түй ниғмәтенән ауыҙ итмәй ҡалманы.* Ф. Иҫәнғолов. *[Гилман:] Донъя гел ошолай ғына бармаҫ. Беҙ уны дер һелкетәсәкбеҙ! Байғураларҙан саң да туҙан ғына тороп ҡалыр.* «Ағиҙел», № 7, 2010.

**БАЙДАРКА** [рус.] (Р.: байдарка; И.: kayak; Т.: kayık) *и.*

Ике башы ла ҡалаҡлы бер ишкәк менән йөрөтөлә торған ябыҡ өсләө еңел спорт кәмәһе. □ Байдарка. / Байдарочный. *Байдаркала йөрөү. Байдарка ишкәге.* ■ *Өфөлә үсмерҙәр араһында уҙғарылған байдаркала ярышта Дамир Даянов .. беренсе урынды яуланы.* «Йәшлек», 23 сентябрь 1999. *Ысынлап та, яҡындараҡ бер нисә байдарка ярға сығарып ҡырын һалынғайны.* Д. Бүләков.

**БАЙДАРКАСЫ** (Р.: байдарочник; И.: kayak boatsman; Т.: kayıkçı) *и.*

Байдарка йөрөтөүсе. □ Байдарочник. *Байдаркасылар ярышы.* ■ *Киң яурынлы, усланғай кәүҙәле, ауыр һөйәкле кеше ине ул. Ҡулдары ла бит әле үҙенең, әйтерһең, баяғы байдаркасыларҙың оҙон ясы ишкәктәре инде.* Д. Бүләков.

**БАЙҘА** *и. диал. ҡар.* **файҙа.** *Байҙаһыҙ мал булды инде.*

**БАЙҘАН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуы аймағы. □ Байзан *(название родового подразделения башкир рода табын).*

**БАЙҘАРСА** (Р.: по-байски; И.: like rich man; Т.: beyler gibi) *р.*

**1.** Бай кешеләргә хас. □ По-байски, как бай. *Байҙарса кейенеп алған.* ■ *Иртәнге ун берҙәр тирәһендә байҙарса кейенгән, тормоштан да, үҙҙәренән дә ҡәнәғәтлектәре йөҙҙәренә сыҡҡан ир менән ҡатын, матур арба этеп, паркка килеп инә.* Г. Ғизззәтуллина.

**2.** Иркенләп, бай кеше булып. □ На широкую ногу, на манер богачей. *Байҙарса ҡыланыш. Байҙарса йәшәй.* ■ *[Басариевтың] байҙарса ҡыланышына Бикбаев ҡайһы саҡ күңеле кителеп ҡуйһа ла, бөгөн ул бик яҡын күренә, һәүетемсә генә һөйләшеп, фекер алышып ултырғы килеп китте.* Р. Солтангәрәев. ● *Атыу-тороу байҙарса, өстә кейем йоҡараҡ.* Әйтем.

**БАЙҘЫҠАЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и.*

Күл-иле-мең ырыуы аймағы. □ Байдыкай *(название родового подразделения башкир рода куль-иль-мин).*

**БАЙКА** [рус. < пол. *bajka* < нидерл. *baai*] (Р.: байка; И.: thick flannelette; Т.: flanel taklidi pamuklu kumaş) *и.*

Мамыҡланып торған йомшаҡ туҡыма. □ Байка. / Байковый. *Байканан тегелгән кейем.*

**БАЙКЕР** [рус. < ингл. *bike* ‘мотоцикл’] (Р.: байкер; И.: biker; Т.: bisikletçi) *и.*

Мотоцикл йөрөтөргә яратыусы. □ Байкер. ■ *Сараны .. байкерҙарҙың сығыштары тағы ла күркәмләндерҙе, улар ҙа Торатауҙы яҡлаусыларға теләктәшлек белдерҙе.* «Таратау», 22 сентябрь 2011.

**БАЙҠАЙЫН** (Р.: одинокая кудрявая берёза; И.: solitary branchy birch tree; Т.: yalnız huş ağacı) *и.*

**1.** *диал.* Яңғыҙ бөҙрә ҡайын. □ Одинокая кудрявая берёза. *Элек байҡайынға бесәнселәр әйберҙәрен, йәш бала менән бишектәрен элгән.*

**2.** *миф.* Изге ырыу ағасы; ышаныуҙар буйынса, уның эйәһе була. □ Одинокая берёза; священное родовое дерево, у которого есть дух. ■ *Беҙ бәләкәй саҡта ауыл осонда оло байҡайын була торғайны.* Ф. Хисамитдинова.

**БАЙҠАЛЫУ (байҡал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **байҡау.** *страд. от* **байҡау.** *Өй эсе күҙ осо менән генә байҡалып сыҡты.*

**БАЙҠАНЫУ (байҡан-)** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **байҡау.** *возвр. от* **байҡау.** *Егет урамға инеп байҡана башланы.*

**БАЙҠАП АЛЫУ (байҡап ал-)** (Р.: обозревать; И.: survey; Т.: izlemek) *ҡ.*

Тикшереп, күҙҙән үткәреп алыу. □ Обозревать, осматривать; наблюдать, прочёсывать. ■ *Башта ул [Вәзир] ҡарашы менән тирә-яҡты байҡап алды.* М. Кәрим.

**БАЙҠАП КИТЕҮ (байҡап кит-)** (Р.: обозревать; И.: survey; Т.: izlemek) *ҡ.*

Тикшереп, күҙҙән үткәреп китеү. □ Обозревать, осматривать; наблюдать, прочёсывать. *Хәҙер яҙыусының икенсе әҫәрен байҡап китәйек.*

**БАЙҠАП СЫҒЫУ (байҡап сыҡ-)** (Р.: обозревать; И.: survey; Т.: izlemek) *ҡ.*

Тикшереп, күҙҙән үткәреп сығыу. □ Обозревать, осматривать; наблюдать, прочёсывать. ■ *Байҡап сыҡһаң, иғтибарға лайыҡ китаптарыбыҙ күп.* «Ағиҙел», № 5, 2011.

**БАЙҠАП ҮТЕҮ (байҡап үт-)** *ҡ. ҡар.* **байҡап китеү.**

**БАЙҠАТЫУ (байҡат-)** *ҡ. йөкм.* **байҡау.** *понуд. от* **байҡау.** *Көсөктө эҙләтеп, малайҙан тирә-яҡты байҡаттым.*

**БАЙҠАУ (байҡа-)** (Р.: обозревать; И.: survey; Т.: izlemek) *ҡ.*

**1.** Тикшереп, күҙҙән үткәреү; күҙ йөрөтөү. □ Обозревать, осматривать; наблюдать, прочёсывать. // Обозревание, осмотр, обзор; наблюдение. *Урманды байҡап сығыу. Йылғала балыҡтар һикерешкәнен байҡап ҡарап торҙом.* ■ *Һәйкәл тора ярҙың иң башында, байҡай кеүек Иҙел ярҙарын.* К. Кинйәбулатова. *[Усман] яланды бер аҙ байҡағас, офоҡта ҡыбырлашҡан нөктәләр күрҙе.* Ф. Иҫәнғолов. *Тағы бөгөн тауға мендем. Алтын көҙ. Ҡояш балҡый, һоҡланып туя алмай байҡайым тирә-яҡты.* Б. Бикбай. *Килә йоҡом, ә уйҙарым байҡай ҡитғалар өҫтөн.* Н. Нәжми. *Үҙ илендә табылмағас, эҙләүселәр Ирәктe иленең төп ҡорона ҡуйстеләр. .. бөтә йорт-тирмәләрҙе, кәртә-ҡураларҙы туҙҙырып байҡанылар.* К. Мәргән. *Салауат, япраҡһыҙ ботаҡтарға ышыҡланырға тырышып, диңгеҙ өҫтөн, яр буйын байҡаны.* Б. Рафиҡов. *Йыр Талморон аҡланына ғына һыймай, Кукмау, Олобейек, Ҡаратау буйҙарын иңләне, әҙәмдәрҙең күңел төпкөлдәрен айҡап-сайҡап, уй ғына буйлар аҡыл-зиһендәрен байҡаны.* Т. Ғарипова.

**2.** *диал. ҡар.* **абайлау 3.** ■ *Мин уны [Нинаны] ауыр серемгә китеп барғанда ғына байҡап ҡалдым.* Д. Юлтый.

**БАЙҠАШТЫРЫУ (байҡаштыр-)** (Р.: обозревать; И.: survey; Т.: izlemek) *ҡ.*

Тикшереп, күҙҙән үткәреү; күҙ йөрөтөү. □ Обозревать, осматривать; наблюдать, прочёсывать. // Обозревание, осмотр, обзор; наблюдение. ■ *Дәһшәтле хәбәр күптән килеп еткән булһа ла, Сафагәрәй ғәскәре шунда уҡ килеп баҫманы. Ҡапҡаларҙы аса торҙолар, сығып байҡаштырып килә торҙолар.* К. Мәргән. *Ихсанбай тирә-яғын байҡаштырған арала, Мәҙинә йүгереп китеп тә барҙы.* Т. Ғарипова. *[Карт оҫта] дәү һарыҡташҡа ултыра ла ниҙер самалай, тирә-йүнде ҡарашы менән һаҡ ҡына байҡаштыра.* Ә. Хәкимов.

**БАЙҠАШЫУ (байҡаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **байҡау.** *взаимн. от* **байҡау.** *Мин дә ҡыҙға китабын эҙләшеп, бүлмәне байҡаштым.*

**БАЙҠЫ** (Р.: название башкирского рода; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Һыуын ҡәбиләһе ырыуы. □ Байкы *(название башкирского рода племени ун).*

**БАЙЛАР** (Р.: название башкирского рода; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Башҡорт ырыуының исеме. □ Байлар *(название башкирского рода). Байлар ырыуы шәжәрәһе.*

**БАЙЛЫҠ (байлығы)** (Р.: богатство; И.: riches; Т.: zenginlik) *и.*

**1.** Ҡулдағы мал-мөлкәт; дәүләт. □ Богатство, состояние; достаток. *Байлыҡ йыйыу. Байлыҡ ҡуныу.* ■ *Һауаланма атаңдың байлығына, ололанма йөҙөңдөң аҡлығына.* М. Аҡмулла. ● *Байлыҡ күрке мал менән, батыр күрке дан менән.* Әйтем. *Байлыҡ — бер айлыҡ, һаулыҡ — ҙур байлыҡ.* Әйтем. *Ҡыҙ байлығы — күркәм холоҡ, ир байлығы — тәүәккәллек.* Мәҡәл.

**2.** Йорт-ҡуралағы йыһаз, ҡаралды. □ Утварь домашняя и на подворье, постельные принадлежности. *Йорт байлығы.* ■ *Шунан алтын ҡош йәнә ҡатынға әйләнеп, алтын йомғаҡты тәгәрәтеп ебәрә - бына тигән бер йорт төҙәлә, эсе тулы бүлмә, бүлмә һайын байлыҡ.* Әкиәттән. *Этколдоң өйө әллә ҡайҙан үҙенең матурлығы, байлығы менән ауылдағы*

*башҡа өйҙәрҙән ала бүләк булып айырылып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Матди яҡтан ҡиммәтле нәмәләр. □ Материальные ценности. *Ҡаҙылма байлыҡтар. Матди байлыҡтар.* ■ *Бына хазина, байлыҡ аяҡ аҫтында ята бит ул.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм. Ниҙеңдер* күп төрлөлөгө, бик күплеге. □ Запас. *Тел байлығы.* ■ *Башҡорт теленең һүҙ байлығы фәнни-теоретик яҡтан быға тиклем дә өйрәнелде.* Ж. Кейекбаев.

**БАЙЛӘР** *и. ҡар.* **байлар.** *Байләр ырыуы башҡорттары.*

**БАЙМАБАШ** (Р.: своевольный; И.: self-willed; Т.: inatçı) *с. диал.*

Башбаштаҡ. □ Своевольный, самовольный. *Баймабаш ҡатын-ҡыҙ.* ■ *Ҡайттым бына, .. бер баймабашты ла алып ҡайттым.* Н. Мусин.

**БАЙМАҠ** (Р.: одинокий; И.: single; Т.: yalnız) *с. диал.*

Яңғыҙ. □ Одинокий. *Баймаҡ булып йәшәп ятыу.*

**БАЙМАҠЛЫ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы аймағы. □ Баймаклы *(название родового подразделения башкир рода карагай-кыпчак). Баймаҡлы аймағынан булам.*

**БАЙМАН I** (Р.: благополучие; И.: calm; Т.: gönenç) *и.*

Тормоштағы ҡәнәғәтлек, тыныслыҡ, именлек. □ Покой, спокойствие, благополучие; благоденствие. *Байман таба алмай йөрөү.* ■ *Әммә затым аяғүрә баҫҡан. Үҙ күкрәге менән байман юллап, ҡаршы барған үҫал көстәргә.* М. Ғәли. *Йәше-ҡарты йоплашып, ҡанлы яуҙан тынышып, байман табып, тын алып, рәхәтләнеп ҡалған, ти.* «Урал батыр». *Бер төптән күтәрелеп, Урҙа ғәскәрен баҫмалатып Яйыҡ арьяғына ҡыуалай алһалар, боронғо төйәктәрендә, сәрхәт даланы иңләп, байманда йәшәр ине үҫәргән ырыуҙары.* Ә. Хәкимов.

**БАЙМАН II** (Р.: благополучный; И.: quiet; Т.: huzurlu) *с.*

Ҡәнәғәт, тыныс, имен. □ Благополучный, спокойный, невозмутимый. *Байман тормош. Байман дәүләт.* ■ *Үҙ йәнкәйен аяп байман ятҡан ир-егеткәй булып ҡот алмаҫ.* Ғ. Хөсәйенов.

**БАЙМАН III** (Р.: богатый природой; И.: with rich nature; Т.: zengin doğalı) *с. диал.*

Бай тәбиғәтле. □ Богатый природой. ■ *Ата-бабалар һилерәк, баймайыраҡ таулы-урманлы, йылға-күлле төбәктәргә төпләнеүҙе хәйерлерәк тапҡандар.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЙМАНЛЫҠ (баймандығы)** (Р.: благоденствие; И.: calmness; Т.: refah) *и.*

Тыныс, имен тормош; тыныслыҡ. □ Благоденствие, покой, спокойствие. *Байманлыҡта йәшәү.* ■ *Байманлыҡта туылларға, тип барыһы уйлаған.* «Урал батыр». *[Ихсанбай] атаһы һалған әҙер донъяла, әсәһе әҙерләгән әҙер һыйҙа — барлыҡта-байманлыҡта йәшәне.* Т. Ғарипова. *Иркендә, байманлыҡта йәшәп ятҡан, ти, халыҡ.* «Иҙел менән Яйыҡ».

**БАЙМАУЫР** (Р.: слабовольный; И.: weak-willed; Т.: iradesi zayıf) *с. диал.*

Йомшаҡ характерлы. □ Слабовольный. ■ *Мин, әллә йәш булғас, был баймауыр ғыналыр инде, тип уйлай инем әле.* Ж. Кейекбаев.

**БАЙНА** *р. диал. ҡар.* **бая.** *Байна килгәйнем.*

**БАЙНАҘАР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең, тиләү ырыуҙары аймағы. □ Байназар *(название родового подразделения башкир родов мин, тиляу).*

**БАЙНАҠ** *р. диал. ҡар.* **бая.** *Байнаҡ ҡына тыштан индем.*

**БАЙПАҠ (байпағы)** (Р.: войлочный чулок; И.: felt sock; Т.: keçe çorap) *и.*

**1.** Ҡата, итек эсенән кейә торған кейеҙ ойоҡ. □ Войлочный чулок. *Әбей байпағын кейеп алды.*

**2.** *диал. кар.* **быйма.** *Бабай аяғына байпаҡ кейеп алған.*

**БАЙПАҠЛЫ** (Р.: с войлочными чулками; И.: with felt socks on; Т.: keçe çoraplı) *с.*

Байпағы булған. □ С войлочными чулками. *Байпаҡлы итек.* ■ *Әхмәт өҫ-башын систе. Аяҡтағы байпаҡлы итеген сисеп ул түргә барып ултырҙы.* И. Көҫәпҡол.

**БАЙПАН-БАЙПАН** (Р.: вперевалку; И.: waddling; Т.: paytak paytak) *р.*

Аяҡ баҫҡан һайын ауыр итеп ян-яҡҡа сайҡалып. □ Вперевалку, вразвалку. *Байпан-байпан атлап йөрөү. Байпан-байпан тороп китеү.*

**БАЙПАН-БАЙПАН ИТЕҮ (байпан-байпан ит-)** *ҡ. кар.* **байпанлау.** *Байпан-байпан итеп йүгереп китеү.*

**БАЙПАН-БАЙПАН КИЛЕҮ (байпан-байпан кил-)** *ҡ. кар.* **байпанлау.** *Байпан-байпан килеп атлап йөрөү.*

**БАЙПАНЛАТЫУ (байпанлат-)** *ҡ. йөкм. кар.* **байпанлау.** *понуд. от* **байпанлау.** *Кәүҙәһен байпанлатып атлап китте.*

**БАЙПАНЛАУ (байпанла-)** (Р.: ходить вразвалку; И.: waddle; Т.: paytak paytak yürümek) *ҡ.*

Аяҡ баҫҡан һайын ауыр итеп ян-яҡҡа сайҡалып йөрөү. □ Ходить вразвалку, вперевалку. *Байпанлап барыу.* ■ *Һағынбай Аҡсурин инде. Байпанлап килеп, [етәксе] ҡаршыһына баҫты.* Яр. Вәлиев. *Тәүҙә ҡыҫҡа аяҡтары менән байпанлап Сөнәғәтов, уның артынса Баныу апай килеп инде.* Ғ. Ибраһимов. *Ана, байпанлабырак атлап Көнбикә килә, атаһының өйө яғында әсәһе — Гөлйөҙөм күренде.* Н. Мусин.

**БАЙРАҠ (байрағы)** [дөйөм көнбайыш төрки *байраҡ/байдак* 'байраҡ, ғәскәр'] (Р.: знамя; И.: banner; Т.: bayrak) *и.*

Һапҡа тағылған киң туҡыма рәүешендәге рәсми билдә *(дәүләт, ғәскәр йәки бер ойошмаға ҡарай).* □ Знамя. *Тыныслыҡ байрағы. Еңеү байрағы. Байраҡ йөрөтөүсе.* ■ *Берлин ҡалаһы өҫтөнә еңеү байрағын элдек.* Р. Ниғмәти. *Ошо ҡулдар быҒауҙарҙы өҙгән, мылтыҡ тотҡан, байраҡ күтәргән.* М. Кәрим. *Пароходтар бара, пристандәр байраҡ болғап оҙатып ҡалалар.* Ғ. Сәләм.

**БАЙРАҠА** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуы аймағы. □ Байрака *(название родового подразделения башкир рода тунгаур).*

**БАЙРАҠАЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Меңле ырыуы аймағы. □ Байракай *(название родового подразделения башкир рода мин).*

**БАЙРАҠСЫ** (Р.: знаменосец; И.: standard-bearer; Т.: bayraktar) *и.*

Байраҡ йөрөтөүсе. □ Знаменосец. *Байраҡсылар сафы.* ■ *Алыштың иң ҡыҙған мәлендә сигнал биреп тороусы байраҡсылар байраҡтарын төшөрөп, ғәскәрҙә паника тыуҙыра.* «Шоңҡар», № 3, 2011.

**БАЙРАМ** [төрки *bayram* 'тантана'] (Р.: праздник; И.: holiday; Т.: bayram) *и.*

**1.** Йәмғиәт әһәмиәтендәге бер ваҡиғаға бағышланған тантана көнө. □ Праздник. / Праздничный. *Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы. Яңы йыл байрамы. Милли байрам. Байрам үткәреү. Байрам менән ҡотлау.* ■ *Май байрамы. Сәйҙелде курорт менән бүләк иттеләр.* Ғ. Сәләм. *Ул кис бөтә өй эсе еңеү байрамы шатлығын үткәрҙе.* Д. Юлтый.

**2.** Дини яҡтан билдәләнгән махсус көн. □ Специально отмечаемый религиозный праздник. *Ҡорбан байрамы. Ураҙа байрамы. Мәүлит байрамы.* ■ *Мәүлит байрамы көндө лә оло ҡорбан салалар.* Т. Арслан.

**3.** Йәмғиәттең йәки айырым бер кешенең тормошондағы ҡыуаныслы ваҡиға уңайы менән ойошторолған һый һәм уйын-көлкө. □ Праздник, торжество. *Ғаилә байрамы. Байрам кисәһе. Байрам итеү.* ■ *Байрам көндө яндыралар шәмдәрҙең иң яҡтыһын.* М. Кәрим. *Байрам тантанаһына килеүселәр гәзитте уҡып, шарҡылдап көлдөләр, ферма*

*мөдиренә күрһәттеләр.* Б. Бикбай. ● *Иркә бала байрамы – яңы күлдәк кейгәндә, йәтим бала байрамы – ауыҙы ашка тейгәндә.* Әйтем. *Ялкауға көн дә байрам.* Әйтем. *Ат үлеме этка байрам.* Әйтем.

**4.** Матур, ҡыуаныслы бер нәмәгә бағышлап үткәрелгән махсус көн. □ Специальный день, посвящённый торжественному событию. *Уҡыш байрамы. Бейеү байрамы.* ■ *[Колтүбә – Сафияға:] Бөгөн һинең сәскә байрамың бит, ҡотларға килдем.* Б. Бикбай.

♦ **Байрам ашы ҡара-ҡаршы** һыйға ҡаршы һый менән яуап бирергә кәрәк тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Праздничное угощение взаимно. *соотв.* Долг платежом красен; как аукнется, так и откликнется. **Бары менән байрам** булғаны менән ҡәнәғәт икәнде белдергәндә әйтелә. □ Чем богаты, тем и рады. *Әйҙәгеҙ, ауыҙ итегеҙ. Бары менән байрам.* **Иртәгә байрам түгел** эшкә, һүҙгә әүрәп бик һуҡлап киткәндә, йоҡларға өндәп әйтелә. □ Завтра не праздник *(т. е. пора спать, отдыхать). Иртәгә байрам түгел, ятып йоҡларға кәрәк.* **Көн дә байрам, көн дә туй** эшһеҙ, хәстәрһеҙ йөрөгән кешегә ҡарата хуп күрмәй әйтелә. □ Что ни день – праздник, что ни день – пиршество *(о беззаботном, праздном человеке).* ■ *Сәлмәновҡа көн дә байрам, көн дә туй булһын уға.* С. Кулибай.

**БАЙРАМБАЙ** (Р.: человек, любящий праздновать; И.: person fond of feasting; Т.: bayram sever) *и. һөйл.*

Байрам итергә яратыусы. □ Человек, любящий праздновать. *Байрамбайға аҙнаһына ете көн байрам.*

**БАЙРАМ ИТЕҮ (байрам ит-)** (Р.: праздновать; И.: celebrate; Т.: bayramı kutlamak) *ҡ.*

**1.** Байрамды билдәләү, уҙғарыу; берәй тантанала ҡатнашыу. □ Праздновать. // Празднование. ■ *Инде яныңдағы бөтә бала-сағамды йыйып, үҙебеҙ генә байрам итеп, ҡыуанышып ултырайыҡ, балалар.* З. Биишева.

**2.** Берәй байрам уңайы менән эшләмәү. □ Праздновать. *1 Майҙа беҙ байрам итәбеҙ.*

**3.** Берәй ваҡиғаны тантаналы билдәләү. □ Ознаменовывать торжеством какое-либо событие. *Тыуған көндө байрам итеү.*

**4.** Берәй ваҡиға уңайы менән һый һәм уйын-көлкө ойоштороу. □ Устраивать пир, торжество по случаю *какого-либо* события; веселиться. *Ҡаланың 1000 йыллыҡ юбилейын байрам итеү.*

**5.** *һөйл.* Спиртлы эсемлектәр ҡулланып иҫереү. □ Опьянеть. *Был ир бөгөн ныҡ байрам иткән, ахыры.*

**БАЙРАМСА** (Р.: по-праздничному; И.: festively; Т.: şenlikli) *р.*

Байрамға хас. □ По-праздничному. *Байрамса кейенеү.* ■ *Хафиз инә. Ул байрамса кейенгән.* Ҡ. Даян.

**БАЙРАМСЫЛ** (Р.: праздничный; И.: festive; Т.: bayramlık) *с.*

Байрамға хас. □ Праздничный. *Байрамсыл кәйефәт. Байрамсыл төҫ.* ■ *Уттар балҡышы байрамсыл .. залдарҙа кешеләргә ҡыуаныс килтереп, .. бөгөлә-һығыла бейеүен күҙ алдына килтереп, .. Зәйтүнгөл бәхетле йылмайҙы.* Д. Исламов.

**БАЙРАМСЫЛАУ (байрамсыла-)** (Р.: хождение по домам во время религиозных праздников; И.: kind of ethnographic rite; Т.: dini bayram günlerinde çocukların evden eve yürüyerek hediyeler toplaması) *ҡ. этн.*

Байрам ашы ашау һәм күстәнәс йыйыу өсөн өйҙән өйгә йөрөү *(бала-сағаға ҡарата).* □ Хождение по домам во время религиозных праздников для получения праздничных угощений *(о детях). Ураҙа ғәйете етһә, балалар байрамсылап йөрөй башлай.*

**БАЙРАУ (байра-)** (Р.: багроветь; И.: turn crimson; Т.: morlaşmak) *ҡ.*

**1.** Бурлат ҡыҙыл төҫкә инеү, тонйорау *(ҡояшҡа ҡарата).* □ Багроветь *(о солнце на закате). Кис етеп, ҡояш байраны.*

**2.** Ялтыр төҫтә булыу, ялтырау; йылҡылдау. □ Блестеть. *Сәстәре байрап тора.*

**БАЙРЫҠАЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir

clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡырҡ-өйлө-мең ырыуы аймағы. □ Байрыкай *(название родового подразделения башкир рода кырк-уйле-мин).*

**БАЙСА** (Р.: байса; И.: nobility sign; T.: baysa) *и. иҫк.*

Боронғо Сыңғыҙ дәүләтендә ҙур дәрәжә билдәһе итеп бирелгән тамға. □ Байса *(знак принадлежности к высшим чинам в государстве чингизидов).* ● *Эт муйынына алтын байса таҡһаң да, тиҙәк ейеүен ҡуймаҫ.* Мәҡәл.

**БАЙСАБЫ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Байлар ырыуы аймағы. □ Байсабы *(название родового подразделения башкир рода байлар). Байсабы башҡорто.*

**БАЙСАУЫЛ** (Р.: одинокая берёза; И.: lone birch; T.: yalnız huş) *и.*

Яңғыҙ ҡайын; байҡайын. □ Одинокая берёза. ■ *Йәй булһа, ҡыҙҙар байсауылға шәл сәсәге, таҫма бәйләй торғайны.* Ф. Хисамитдинова.

**БАЙСУРА** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бишәй ырыуы аймағы. □ Байсура *(название родового подразделения башкир рода бишей). Байсура башҡорто.*

**БАЙСЫБЫ** *и. ҡар.* **байсабы.** *Беҙ байсыбы аймағынан булабыҙ.*

**БАЙТ** [рус. < ингл. *byte*] (Р.: байт; И.: bite; T.: bayt) *и.*

Иҫәпләү техникаһында (компьютерҙа) 8 битҡа тигеҙ булған мәғлүмәт иҫәпләү берәмеге. □ Байт. *Бер хәреф, һан йәки билдә 1 байтҡа тигеҙ.*

**БАЙТАҠ I** [ҡыпсаҡ осоро һүҙе] (Р.: изрядный; И.: considerable; T.: çok) *с.*

Һаны, күләме күп. □ Значительный, порядочный, изрядный. *Байтаҡ аҡса тотонолған. Байтаҡ ара. Байтаҡ кеше. Байтаҡ юл үтеү.* ■ *[Таяз:] Байтаҡ һыуҙар аҡты шул, Ғибадулла ағай.* Н. Мусин.

**БАЙТАҠ II** (Р.: немало; И.: considerably; T.: çok) *р.*

Һаны, күләме ғәҙәттәгенән күп, арыу уҡ күп, күп кенә. □ Немало, достаточно, порядочно. *Байтаҡ ҡына. Байтаҡтан бирле. Минән байтаҡҡа йәш.* ■ *Ул [Ғибад] минең был һүҙҙәремә ҡаршы өндәшмәйенсә, байтаҡ ултырҙы.* Н. Мусин. *Алыҫта, байтаҡ ҡына алыҫта, донъяны ҡаплап алған аппаҡ ҡар өҫтөндә бер-ике ҡараҫҡы күренде.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАЙТАЛ I** (Р.: кобыла; И.: mare; T.: kısrak) *и.*

**1.** Тай йәшенән сыҡҡандан тәү ҡолонлағанға тиклемге бейә малы. □ Кобыла *(не жеребившаяся). Байталды егеү.* ■ *Яр ҙа алыҫта ҡалды, унда һыйыҡ талға бәйләнгән турат менән байтал кинәнеп үлән йыпыра.* Р. Камал. *Вәлеев Нурғәли ҡарттың һары байталын тукмап әштән сығарҙы.* М. Тажи. ● *Ҡатын сәсән булып дан алмаҫ, байтал йүгерек булып дан алмаҫ.* Мәҡәл. *Байтал яманы ике айғырҙы үсләштерер.* Әйтем.

**2.** *диал.* Тыу бейә. □ Яловая кобыла. *Байталды тауға үлән утларға ҡыуҙыҡ.*

**3.** *миф.* Ҡорбан итеп салына торған изге бейә малы. □ Не жеребившаяся кобыла, священное животное, которое использовалось в жертвоприношениях.

**БАЙТАЛ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Күбәләк ырыуы аймағы. □ Байтал *(название родового подразделения башкир рода кубаляк). Байтал аймағы.*

**БАЙТАЛ III** *с. диал. ҡар.* **ярамһаҡ.** *Байтал хеҙмәткәр.*

**БАЙТАЛЛАНЫУ (байталлан-)** (Р.: подхалимничать; И.: be toady; T.: yaltaklanmak) *ҡ.*

Ялағайланыу. □ Подхалимничать. *Байталланып ярарға йөрөмәһәң тағын.*

**БАЙТАР** [фарс. بيطار] (Р.: ветеринар; И.: veterinarian; T.: baytar) *и. иҫк.*

Мал дауалаусы. □ Ветеринар. *Байтар булып эшләү.*

**БАЙТИРӘК (байтирәге)** [төрки сығанаҡлы] (Р.: одинокий тополь с густой кроной; И.: axis mundi; Т.: yalnız kavak) *и.*

**1.** Ҡуйы сатырлы яңғыҙ тирәк ағасы. □ Одинокий тополь с густой кроной. *Байтирәк төбөндә ҡыуыш ҡороу.*

**2.** *миф.* Изге ырыу ағасы; ышаныуҙар буйынса, уның эйәһе була. □ Одинокий тополь *(священное родовое дерево, у которого есть дух).* ■ *Байтирәк башы Тимерҡаҙыҡ йондоҙона етә, ти.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЙТУС** (Р.: водящий (*в детских играх*); И.: host; Т.: ebe) *и.*

Уйындағы көтөүсе. □ Водящий в детских играх. *Уйында байтус булып тороу. «Байтус» тапшырыуы.*

**БАЙУЛЫ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, байулы-бөрйән ырыуҙары аймағы. □ Баюлы *(название родового подразделения башкир родов бурзян, баюлы-бурзян). Байулы аймағы башҡорто.*

**БАЙУЛЫ-БӨРЙӘН** (Р.: название башкирского рода; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ҡәбиләһенә ингән башҡорт ырыуы. □ Баюлы-бурзян *(название башкирского рода в составе племени бурзян). Байулы-бөрйән ырыуы шәжәрәһе.*

**БАЙҺАҠАЛ** (Р.: густая борода; И.: thick beard; Т.: sık sakal) *и.*

**1.** Ҡуйы һаҡал. □ Густая борода.

**2.** *миф.* Муллыҡ, бәхет, байлыҡ символы булып тороусы ҡуйы һаҡал. □ Густая борода, символизирующая изобилие, счастье, богатство.

**БАЙҺАРЫ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуы аймағы. □ Байсары *(название родового подразделения башкир рода бурзян). Был ауылда байһары аймағы бар.*

**БАЙҺӨЙӘК (байһөйәге)** (Р.: кусок мяса, даваемый каждому гостю; И.: piece of meat for every guest; Т.: her misafire verilen bir lokma et) *и. этн.*

**1.** Һыйлағанда өлөшләп таратылған ит; өлөш, мөсә һөйәге. □ Кусок мяса, даваемый каждому гостю. *Байһөйәк өләшеү.*

**2.** *миф.* Өлөш, яҙмыш символы. □ Символ доли, судьбы.

**БАЙ ҺҮҘЕ** (Р.: ответ отца девушки свату; И.: last word addressed to the matchmaker; Т.: babanın son sözü) *и. этн.*

Ҡыҙ атаһының яусыға әйткән һуңғы, хәл иткес һүҙе. □ Ответ отца девушки свату. ■ *[Яусы — Үмәргә:] Ҡыҙың еткән. Алла сәстәрен бәйләгән булһа, бай һүҙенде ишетәйек.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЙЫ** (Р.: польза; И.: benefit; Т.: fayda) *и.*

**1.** Файҙа, табыш. □ Польза. *Байы сығыу. Был кәсептең байы булырмы икән?*

**2.** *ҡар.* **бай III, 2.** *Төндәрен дә эшләгән байҙы иҫәпкә алып, аҡса түләһәләр ярар ине.*

**БАЙЫҒЫЛЫУ (байыҡыл-)** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **байыҒыу.** *безл. ф. от* **байыҒыу.** *Байығылһа, һиңә ярҙам итер инем, ҡустым.*

**БАЙЫҒЫУ (байыҡ-)** (Р.: богатеть; И.: grow rich; Т.: zenginleşmek) *ҡ.*

**1.** Күп мал-мөлкәткә эйә булыу, байға әйләнеү, байыу. □ Богатеть; наживаться. ■ *[Шәрифулла:] Берәүһен дә саҡырмайым. Байығам. Аҡса йыям.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Сифат һәм эстәлек йәһәтенән тулыланыу. □ Обогащаться. *Рухи яҡтан байығыу.* ■ *Мин, үткәндәр менән байығып, киләсәккә ҡомһоҙ ҡарайым.* Р. Ғарипов.

**БАЙЫҠТЫРЫЛЫУ (байыҡтырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **байыҡтырыу.** *страд. от* **байыҡтырыу.**

**БАЙЫҠТЫРЫУ (байыҡтыр-)** (Р.: обогащать; И.: enrich; Т.: zenginleştirmek) *ҡ.*

**1.** *Нимәнелер* кәрәкле матдә менән тулыландырыу; байытыу. □ Обогащать. // Обогащение. *Тупраҡты ашламаға байыҡтырыу.*

**2.** *күсм. Нимәнелер* составы һәм эстәлек йәһәтенән тулыландырыу; төрләләндереү. □ Пополнить *что-л.* по отношению состава и содержания; видоизменить. ■ *Балетка шул юл менән халык бейеүенең хәрәкәттәре үтеп инә, халык сәнғәте классик сәнғәттең реалистик һүрәтләү сараларын байыктырыуға хеҙмәт итә.* Р. Шәкүр.

**3.** *кар.* **байытыу 1.** *Был кәсеп беҙҙе байыктырырға тейеш.*

**БАЙЫМ** (Р.: название родового подразделения; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Нуғай-бөрйән ырыуы аймағы. □ Баим *(название родового подразделения башкир рода ногай-бурзян). Байым аймағы башкорто.*

**БАЙЫМБАК (байымбағы)** *и. бот. диал. кар.* **бәпембә 1.** *Байымбак орлоғо.*

**БАЙЫП АЛЫУ (байып ал-)** (Р.: разбогатеть; И.: grow rich; Т.: zenginleşmek) *к.*

Байлык туплап, хәлле булып алыу. □ Разбогатеть. ■ *Малын ишәйтеп, байып алыу ниәте, бер кемдән дә бойондороҡһоҙ ил көроп, түрә булып йәшәү ниәте башын һәр сак быраулай ине уның [Суртмак баҫҡаҡтың].* К. Мәргән.

**БАЙЫП КИТЕҮ (байып кит-)** (Р.: разбогатеть; И.: grow rich; Т.: zenginleşmek) *к.*

Көтмәгәндә байлык килеп, хәлле булып китеү. □ Разбогатеть *(внезапно).* ■ *Аҙак һөйләп сығаралар: имеш, Дәүләтхан теге урыҫ кумтаһынан һанһыҙ акса тапкан. Акса түгел, алтын! Шуның менән байып киткән.* Р. Камал.

**БАЙЫРСА** (Р.: мыщелок; И.: condyle; Т.: kondil) *и. анат.*

Бот, кул һөйәктәренең мускулдарҙы беркетеп тотоу өсөн хеҙмәт иткән йәки һөйәктәрҙең быуынтыктары составына ингән тупалсак башы. □ Мыщелок, мыщелка. *Быуын байырсаһы.*

**БАЙЫТЫЛЫУ (байытыл-)** *к. төш. кар.* **байытыу 2.** *страд. от* **байытыу 2.**

**БАЙЫТЫУ (байыт-)** [боронғо төрки *байыт-*] (Р.: обогащать; И.: make rich; Т.: zenginleştirmek) *к.*

**1.** Байға әйләндереү, бай итеү; байыктырыу. □ Сделать богатым, зажиточным, обогащать. *Аксаға байытыу. Үтә байытыу.*

**2.** *кар.* **байыктырыу 1, 2.** *Әҫәрҙе байытыу. Телде яңы терминдар менән байытыу.* ■ *Молдаван ауылы йәштәре бейеүенең етеҙ ритмикаһы, киске уйындарҙы хәтерләткән күңелсәк күренештәр башкорт ансамбленең һүрәтләү палитраһын байытып ебәргәндәй.* Р. Шәкүр.

**БАЙЫУ I (байы-)** [боронғо төрки *байу-*] (Р.: богатеть; И.: grow rich; Т.: zenginleşmek) *к.*

**1.** Күп мал-мөлкәткә эйә булыу, байға әйләнеү. □ Богатеть, наживаться; разживаться. *Үҙ көсөң менән байыу. Тир түгеп байыу.* ■ *Шулай күпмелер вакыт үткәс, Һөнәрсе тағы байтак көршәктәр яһағас, бик нык байып, алтын-ебәккә мансылып, Өйрәнсек кайтып төшә.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Сифат һәм эстәлек йәһәтенән тулыланыу. □ Обогащаться. *Тәжрибәгә байыу.* ■ *Тәрәнәйҙе һулыш, байыны рух, тағы ла артты йәшәү шатлығы.* Ғ. Әмири.

**БАЙЫУ II (байы-)** [төрки] (Р.: заходить; И.: go down, set; Т.: batmak) *к.*

**1.** Офок артына төшөү *(күк есемдәренә карата),* батыу. □ Закатываться, заходить *(о небесных светилах).* // Закат, заход. *Кояш байып килә.* ■ *Урамдың осонан кояштың, кыҙғылт төҫкә буялып, байырға әҙерләнгәне белена.* С. Агиш. *Кояш байый, һин дә киттең, иркәм, икегеҙ ҙә күк тау артына.* М. Хәй. *Май көндәренең матур сағы. Кояш байыр алдынан каланың тынсыу һауаһы бөркөлә.* Т. Йәнәби. *Байып барған кояштың нурҙары, тәҙрәнән кыйылып төшөп, катындарҙың йөҙҙәренә кунды.* Б. Бикбай. *Һеҙ теләп йөрөгән тормоштоң айы байыған.* Т. Арслан.

**2.** *миф.* Ай менән кояштың һәр көн офок артына инеп юғалыуы *(был мәлдә йокларға, һыу түгергә ярамай).* □ Заходить, закатываться *(по поверьям, в это время нель-*

*зя спать, выливать грязную воду и т. д.).* ■ *Кояш байығас, бысраҡ һыу түгергә ярамай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЙЫШ I** *и. ҡар.* **кояш байышы.** *Кояш байышы ҡыҙарып тора. Кояш байышы илдәре.* ■ *Ғүмер шыуыр байыш яғына.* Й. Солтанов. *Күк йөҙөн ҡаплаған болоттар кояш байышы яғынан өргән ел менән ҡайҙалыр ашығып-ашығып ағалар ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**БАЙЫШ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkırt soyunun ismi) *и. этн.*

Һарт-әйле ырыуы аймағы. □ Баиш *(название родового подразделения башкир рода сарт-айле).*

**БАК (багы)** [рус. < гол. *back*] (Р.: бак ; И.: tank; Т.: tank) *и.*

**1.** Шыйыҡ нәмә ҡойоп ҡуя торған ҙур һауыт. □ Бак. ■ *Тәнзилә һыу багын алды ла, аяҡ остары менән генә баҫып .. сығып китте.* М. Тажи.

**2.** Судноның алғы өлөшөндә эшләнгән хәүефһеҙлек ҡоролмаһы. □ Бак.

**БАКАЛАВР** [рус. < лат. *baccalaureus*] (Р.: бакалавр; И.: bachelor; Т.: bakalavr) *и.*

**1.** Ҡайһы бер илдәрҙә күп баҫҡыслы юғары белем системаһында тәүге ғилми дәрәжә. □ Бакалавр *(первая учёная степень, присваиваемая студентам по завершении начального этапа обучения в высшем учебном заведении). Бакалавр булыу. Иктисад бакалавры.*

**2.** Хәҙерге Францияла урта мәктәпте тамамлаған һәм университетҡа инергә хоҡуғы булған уҡыусы. □ Бакалавр *(во Франции человек, сдавший экзамен за курс средней школы).*

**3.** Бакалавр (1) дәрәжәһенә эйә булыусы кеше. □ Бакалавр *(лицо, имеющее степень бакалавра).*

**4.** Православие руханиҙары семинарияһы уҡытыусыһы. □ Преподаватель православной духовной семинарии.

**БАКАЛАВРИАТ** [рус.] (Р.: бакалавриат; И.: bachelor's degree; Т.: bakalorya derecesi) *и.*

Бакалаврҙар әҙерләү системаһы һәм формаһы, күп баҫҡыслы юғары белем системаһының беренсе кимәлдәге дүрт курсын тамамлау. □ Бакалавриат. *Бакалавриат системаһы.*

**БАКАЛЕЯ** [рус. < ғәр. بقال] (Р.: бакалея; И.: grocery; Т.: bakkaliye) *и.*

**1.** Сәй, шәкәр, он, ярма кеүек ҡоро аҙыҡ-түлек. □ Бакалея. / Бакалейный. *Бакалея тауарҙары.* ■ *Бына шул Юлай ауылында .. ҡалانан төрлө ашамлыҡтар, эсемлектәр ташый торған, шуның менән бергә ауылда бакалея менән сауҙа итә торған Өммәтҡол ағай бар ине.* Д. Юлтый.

**2.** Бакалея тауарҙары һатылған магазин. □ Бакалея.

**БАКАЛЕЯСЫ** (Р.: бакалейщик; И.: grocer; Т.: bakkal) *и.*

Бакалея тауарҙары һатыусы. □ Бакалейщик. *Бакалеясы эше.*

**БАКАУЫШ** [рус. *упаковочный*] (Р.: свитая верёвка; И.: package rope; Т.: ip) *и. диал.*

**1.** Ишкән бау; бәй. □ Свитая верёвка. *Бабай бакауыш ишеп ултыра.*

**2.** Йүкәнән эшләнгән быҙау муйынсағы. □ Лыковый ошейник для телёнка. *Быҙау муйынына бакауыш кейҙерелгән.*

**БАКЕН** [рус. < гол. *baken*] (Р.: бакен; И.: beacon; Т.: fener) *и.*

Йылғала, күлдәрҙә фарватерҙы һәм ҡурҡыныс урынды билдәләү өсөн якорға ҡуйылған ҡалҡыуыслы билге. □ Бакен. ■ *Беҙ төн буйы бакендар яндырабыҙ. Алты фонарҙың өсөһө ҡыҙыл, өсөһө аҡ. Капитандар тап шулар араһынан уҙырға тейештәр.* Ә. Бикчәнтәев.

**БАКЕНБАРД** [рус. < нем. *Backenbart*] (Р.: бакенбарды; И.: side beard; Т.: favori) *и.*

Сикә һаҡалы. □ Бакенбарды. *Бакенбард үҫтереү.* ■ *Үҙе [механик] харап ҡупшы күренә: ирен өҫтөндә ҡыйыҡ ҡына мыйыҡ, шаҡтай ҙур бакенбард үҫтереп ебәргән.* Ә. Бикчәнтәев.

**БАКЕНСЫ** (Р.: бакенщик; И.: buoy attendant; Т.: ışık kaleci) *и.*

Бакен ҡарауылсыһы. □ Бакенщик. *Бакенсы булып эшләү.*

**БАКЛАЖАН** [рус. < төрк. < фарс. بادنجان] (Р.: баклажан; И.: aubergine; Т.: patlıcan) *и. бот.*

**1.** Көньяҡ баҡса үҫемлеге. □ Баклажан. / Баклажановый (лат. *Solanum melongena*). *Баклажан үҫтереү.*

**2.** Шул үҫемлектең ҡыҙыл күк ҡабыҡлы эре ҡыяр һымағыраҡ йәшелсәһе. □ Овощи этого растения наподобие крупного огурца. *Баклажан турамаһы.*

**БАКЛАН** [рус.] (Р.: баклан; И.: cormorant; Т.: karabatak) *и. зоол.*

Ҡыҫҡа ҡанатлы, оҙон ҡойроҡло, ҡара төҫтәге диңгеҙ ҡошо; диңгеҙ ҡарғаһы. □ Баклан. / Бакланий (лат. *Phalacrocorax*). *Баклан йомортҡаһы.*

**БАКТЕРИОЗ** [рус. < гр. *bakteria* 'таяҡса'] (Р.: бактериоз; И.: bacteriosis; Т.: bakteriyoz) *и.*

Бактериялар тыуҙырған ауырыу. □ Бактериоз. *Ҡорттар бактериозы.*

**БАКТЕРИОЛОГ** [рус.] (Р.: бактериолог; И.: bacteriologist; Т.: bakteriyolog) *и.*

Бактериология буйынса белгес. □ Бактериолог. *Бактериолог һөнәре.*

**БАКТЕРИОЛОГИК** (Р.: бактериологический; И.: bacteriological; Т.: bakteriyolojik) *с.*

Йоғошло ауырыу бактерияларын ҡулланыуға ҡоролған. □ Бактериологический. *Бактериологик лаборатория. Бактериологик тәжрибәләр.*

**БАКТЕРИОЛОГИЯ** [рус. < гр. *bakteria* 'таяҡса' + *logos* 'тәғлимәт'] (Р.: бактериология; И.: bacteriology; Т.: bakteriyoloji) *и.*

Бактериялар тураһындағы фән. □ Бактериология. *Бактериология фәнендәге асыштар.*

**БАКТЕРИОФАГ** [рус. < гр. *bakteria* 'таяҡса' + *phagos* 'йотоусы'] (Р.: бактериофаг; И.: bacteriophagus; Т.: bakteriyofaj) *и.*

Бактерияларҙы юҡ итеүгә һәләтле матдә. □ Бактериофаг. *Дизентерия бактериофагы. Бактериофаг ҡулланыу.*

**БАКТЕРИЯ** [рус. < гр. *bakteria* 'таяҡса'] (Р.: бактерия; И.: bacterium; Т.: bakteri) *и.*

Бер күҙәнәкле микроскопик организм; микроб. □ Бактерия. / Бактерийный. *Бактерия препараттары.* ■ *Ҡарағай һеркәһе шешеүгә, бактерияларға ҡаршы көслө йоғонто яһай алырлыҡ төрлө ферменттарға, витаминдарға, минераль тоҙҙарға бай.* «Йәшлек», 24 март 2007.

**БАКТЕРИЯЛАНЫУ (бактериялан-)** (Р.: быть бактеризованным; И.: possessing bacteria; Т.: bakterilenmek) *ҡ.*

Бактериялы булыу *(һөткә, тупраҡҡа ҡарата).* □ Быть бактеризованным *(например, о молоке, почве). Бактерияланған тупраҡ. Бактерияланған һөт.*

**БАКТЕРИЯЛАУ (бактерияла-)** (Р.: бактеризовать; И.: introduce bacteria; Т.: bakterilemek) *ҡ.*

Бактериялы итеү *(һөттө, тупраҡты).* □ Бактеризовать *(молоко, почву). Тупраҡты бактериялау. Һөттө бактериялау.*

**БАКУЙ** [рус. *покос*] *и. ҡар.* **ҡайырым.** ■ *Төшкө аштан һуң елкәләренә һәнәк һәм тырма күтәргән ауылдаштары кипкән бакуйҙы йыйып бесән күбәләргә киттеләр.* Я. Хамматов. *Йәшерәк ҡыҙҙарҙы, олораҡ йәштәге ҡатындарҙы элекке сабылған бакуйҙы йыйып, күбә һалырға ҡуйҙылар.* Ғ. Ибраһимов.

**БАКУС** [рус. *покос*] *и. ҡар.* **ҡайырым.** ■ *Беҙ хушбуй аңҡытҡан бакус өҫтөнә ултырҙыҡ.* С. Кулибай.

**БАҠ I (бағы)** (Р.: счастье; И.: happiness; Т.: mutluluk) *и. иҫк.*

Бәхет. □ Счастье. ● *Баҙарға барып, бағыңды һына.* Әйтем.

**БАҠ II (бағы)** *и. диал. ҡар.* **баҡа III.** *Тирмән бағы.*

**БАҠ III** (Р.: чистый; И.: sacred; Т.: pak) *с.*

Таҙа, аҡ, изге; пак. □ Чистый, белый, священный. ■ *Баҡ әйбергә ураған, бәхете булһын тимәгән.* Халыҡ йырынан.

**БАҠ IV** (Р.: ква-ква; И.: imitation of a croaking; Т.: vakvak) *оҡш.*

**1.** Тәлмәрйендең баҡылдауына оҡшатыу һүҙе. □ Ква-ква *(подражание кваканью ля-*

*гушки). Тәлмәрйен баҡ тип кенә ҡалды ла һыуға сумды.*

**2.** *ҡар.* **бажҡ.**

**БАҠА I** [дөйөм төрки *бака* ‘тәлмәрйен’, боронғо төрки *баҡҡа* ‘ҡырмыҫҡа’] (Р.: лягушка; И.: frog; Т.: kurbağa) *и. зоол.*

**1.** Ырғып йөрөгән тарбаҡ аяҡлы ер-һыу йәнлеге; тәлмәрйен. □ Лягушка. / Лягушачий, лягушечий (лат. *Anura). Һаҙ баҡаһы. Баҡа балаһы. Баҡа бото. Баҡа баҡылдауы. Баҡа ыуылдырығы.* ■ *Баҡалар май айында, яҙғы һыуҙар тартылып, көндәр йылынып, донъялар йәшәргән ваҡытта сурылдай.* Р. Солтангәрәев. ● *Баҡа, йылан бер күлдә, икеһе лә бер телдә.* Әйтем. *Ат дағалағанда, баҡа ботон ҡыҫтырған.* Әйтем. *Аулаҡ күлгә баҡа хужа.* Әйтем. *Балыҡ ағынды, баҡа тоноҡто ярата.* Әйтем.

**2.** *диал.* Ҡабырсаҡлы моллюск. □ Моллюск с раковиной. *Күлдә баҡалар күп.*

**3.** *миф.* Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, йылан кеүек мифик зат. □ Жаба, лягушка; мифологизированное хтоническое животное, родственное змее и другим гадам. ■ *Баҡа – ырымлы мәхлүк. Баҡаға тейергә ярамай.* Экспедиция материалдарынан.

**БАҠА II** *и. диал. ҡар.* **айыссыҡ.** *Йүгән баҡаһы.*

**БАҠА III** (Р.: верхняя крестовина мельничной оси; И.: mill axis crosspiece; Т.: değirmen eksenin başı) *и. диал.*

Тирмән үҙәгенең башы. □ Верхняя крестовина мельничной оси, на которой вращается жернов. *Тирмән баҡаһы.*

**БАҠА IV** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Сәңкем-ҡыпсаҡ ырыуы аймағы. □ Бака *(название родового подразделения башкир рода сэнкем-кыпчак).*

♦ **Баҡа тамаҡ** туймаҫ тамаҡ. □ Обжора. *Баҡа тамаҡ та инде был малай.* **Баҡа һыуы** ҡолаҡҡа ингән һыу. □ Вода, попавшая в ухо. *Баҡа һыуы ҡолағымда тик тора, сыҡмай.* **Баҡа һыуын сығарыу** һыу төшкәндә ҡолаҡҡа ингән һыуҙы һикереп сығарыу. □ Извлечение подпрыгиванием из уха воды, попавшей во время купания. *Баҡа һыуын сығарам тип. ҡыҙҙар бер аяғында һикерешә.*

**БАҠА АРҠАНЛАУ (баҡа арҡанла-)** (Р.: связывание жабы; И.: sort of Bashkir ethnographic rite; Т.: bir halk inancı) *ҡ. миф.*

Ямғыр яуыуын теләп, баҡаны бәйләү. □ Связывание жабы *(обряд вызывания дождя).* ■ *Баҡаны тотоп бәйләһәң, ямғыр яуа.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠАБАЛА** *и. диал. ҡар.* **сүмесбаш.** *Йылға ситендә баҡабалалар күп.*

**БАҠАБАШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуы аймағы. □ Бакабаш *(название родового подразделения башкир рода усерган). Баҡабаш аймағы.*

**БАҠА БАШЛЫ** (Р.: с округлой головкой; И.: having a round toe; Т.: değirmi başlı) *с.*

Түңәрәк башлы. □ С округлой головкой. *Баҡа башлы итек. Баҡа башлы ҡалуш.*

**БАҠАБУҠ (баҡабуғы)** *и. диал. ҡар.* **лай.** *Йылға төбө баҡабуҡ.*

**БАҠА ЕБӘГЕ I** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **ылымыҡ.** *Йылғаның төбөн баҡа ебәге баҫҡан.*

**2.** *ҡар.* **ләм.** *Баҡа ебәге баҫты.*

**3.** *ҡар.* **лай.** *Йомшаҡ ҡына баҡа ебәгенә баҫтым.*

**БАҠА ЕБӘГЕ II** *и. бот. диал. ҡар.* **юл япрағы.**

**БАҠА ЕБӘГЕ III** (Р.: ряска трёхдольная; И.: star duckweed; Т.: su mercimeği) *и. бот.*

Өс өлөштән торған тәлмәрйен тәңкәһе. □ Ряска трёхдольная (лат. *Lemna trisulca*).

**БАҠАЙ I** (Р.: речной проток; И.: channel; Т.: nehir kolu) *и.*

Йылғаның бәләкәй тармағы. □ Речной проток, речная протока. *Йылға баҡайында һине көтөп торам.*

**БАҠАЙ II** (Р.: бабка; И.: pastern mandrel; Т.: aşık) *и. диал.*

Йәкәл, бәкәлсәй. □ Бабка. *Баҡай һөйәге.*

**БАҠАЙ III** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуы аймағы. □ Бакай *(название родового подразделения башкир рода юрматы). Мин бакай аймағынан булам.*

**БАҠАЙЫУ (баҡай-, баҡая)** *ҡ. диал. ҡар.* **аҡайыу 2.** *Бакайып ҡарау.*

**БАҠА ҠАБЫҒЫ** (Р.: ракушка моллюска; И.: mollusc shell; Т.: yumuşakça kavkısı) *и. диал.*

Ҡабырсаҡ. □ Ракушка моллюска. *Йылғала баҡа ҡабығы күп.*

**БАҠА ҠАБЫРСАҒЫ** *и. диал. ҡар.* **ҡабырсаҡ.** *Баҡа ҡабырсағы табып алыу.*

**БАҠАҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **ҡабырсаҡ.** *Баҡаҡайҙар йыйыу.*

**БАҠА ҠАРШЫУАҺЫ** *и. диал. ҡар.* **ҡабырсаҡ.** *Баҡа ҡаршыуаһы эҙләү.*

**БАҠАЛСАЙ** *и. диал. ҡар.* **баҡай II.** *Баҡалсай һөйәге.*

**БАҠАН** (Р.: шест; И.: post, pole; Т.: sırık) *и.*

Бәйгелә ярышып буйлай торған оҙон шыма бағана; һырғауыл. □ Шест, столб *(на который взбираются на состязаниях). Баҡанға менеү.*

**БАҠАСАЙ** (Р.: улотрикс; И.: ulothrix; Т.: su yosunu) *и. бот.*

**1.** Һыуҙа мамыҡланып ятҡан йәшел үҫемлек; сай, тәлмәрйен ебәге. □ Улотрикс *(водоросль)* (лат. *Ulothrix).*

**2.** *ҡар.* **лай.**

**БАҠАСАП (баҡасабы)** (Р.: шёлк зелёного цвета; И.: silk of a green colour; Т.: yeşil ipek) *и. диал.*

Йәшел йомшаҡ ебәк. □ Шёлк зелёного цвета. *Баҡасаптан сапан кейеп алған.*

**БАҠА СИРЕ** (Р.: туберкулёз шейных желез; И.: tuberculosis of jugular glands; Т.: boyun bezi tüberkülozu) *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **баҡа яңаҡ.**

**2.** *миф.* Баҡа ярҙамында сихырлауҙан барлыҡҡа килгән ауырыу; баҡа яңаҡ. □ Туберкулёз шейных желез *(по поверьям, болезнь связана с порчей с помощью жабы).* ■ *Баҡа сиренең үҙенең ене бар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠАТАЛ** (Р.: ива ползучая; И.: creeping willow; Т.: söğüt) *и. бот. диал.*

Йүрмә тал. □ Ива ползучая (лат. *Salix reptans). Яр буйында баҡаталдар үҫә.*

**БАҠА ТЕЛЕ** (Р.: заговор жабы; И.: toad exorcism; Т.: kara kurbağa büyüsü) *и. миф.*

Баҡаны арбау һүҙҙәре. □ Заговор жабы. ■ *Баҡа менән йыландың үҙҙәренең телдәре бар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠА ТӘН** (Р.: фринодерма; И.: phrynoderma; Т.: kara kurbağa derisi) *и.*

**1.** *мед.* Организмда А витамины етмәүҙән барлыҡҡа килгән тире ауырыуы. □ Фринодерма *(жабья кожа).*

**2.** *миф.* Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, баҡаны үлтерһәң, уның ҡарғышы төшөп, кешенең тиреһе баҡа тиреһе кеүек булып китә икән. □ Жабья кожа *(по поверьям, нельзя убивать жабу, она может проклясть, и у человека будет жабья кожа).* ■ *Баҡаны үлтерергә ярамай. Ҡарғышы бар. Кешенең тәне баҡа тән була, ти. Хәйер биреп ғәфү алырға кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠА ТӘҢКӘҺЕ** *и. бот. диал.*

**1.** *ҡар.* **тәлмәрйен тәңкәһе.**

**2.** *ҡар.* **юл япрағы.** *Яраға баҡа тәңкәһе баҫыу.*

**БАҠА УЛТЫРТЫУ (баҡа ултырт-)** (Р.: сажание жабы; И.: placing a toad; Т.: büyü ile iyileştirme usulü) *ҡ. миф.*

Магик медицинаға бәйле дауалау сараһы. □ Сажание жабы *(связано с магической медициной).* ■ *Йылан саҡҡан ергә баҡа ултырталар. Ағыуҙы һурып ала ла, ятып үлә, ти.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠАУЫҘ** (Р.: технический ключ; И.: spanner; Т.: teknik anahtar) *и. диал.*

Ҡыҫҡыс, тәгәрмәскә ҡулса кейҙереү ҡоралы. □ Технический ключ. *Тәгәрмәскә баҡауыҙ менән ҡулса кейҙереү.*

**БАҠАУЫЛДЫҠ I (баҡауылдығы)** *и. диал. ҡар.* **ылымыҡ.** *Йылғала баҡауылдыҡтар үҫә.*

**БАҠАУЫЛДЫҠ II (бакауылдығы)** *и. диал. кар.* **сүмесбаш.** *Йылғала бакауылдыктар һөҙәбеҙ.*

**БАҠА ҮЛӘНЕ** *и. бот. диал.*

**1.** *кар.* **үгәй инә үләне.** *Бака үләне йыйып килдем әле.*

**2.** *кар.* **юл япрағы.** *Бака үләнен бәрелгән ергә лә бәйләйҙәр.*

**3.** *кар.* **ҡаҙ үләне.** *Урамда тушәлеп бака үләне үҫкән.*

**4.** *кар.* **ылымыҡ.** *Йылғала бака үләне үҫә.*

**БАҠАШЕШ** (Р.: свинка; И.: mumps; Т.: kabakulak) *и. мед.*

Ҡолаҡ арты биҙе шеше. □ Эпидемический паротит (свинка). *Ҡолағыма бакашеш сыҡҡан.*

**БАҠА ӘПСЕНЕ** (Р.: заклинание жабы; И.: toad exorcising; Т.: kara kurbağa büyüsü) *и. миф.*

Баҡа сирен арбау. □ Заговор, применяемый для избавления от туберкулёза шейных желез. *Бағымсы бака әпсене әйтеп шешегемде бөтөрҙө.*

**БАҠА ЯҢАҠ (яңағы)** (Р.: туберкулёз шейных желез; И.: jugular gland T. B.; Т.: boyun bezi tüberkülozu) *и. мед.*

Һйыҡлы яңаҡ. □ Туберкулёз шейных желез. *досл.* Жабья щека. *Бака яңактан дауаланыу.*

**БАҠА ЯПРАҒЫ** (Р.: неслия; И.: ball-mustard; Т.: toplu iğne hardalı) *и. бот.*

**1.** Ваҡ бөргәнәк. □ Неслия (лат. *Neslia*). *Бака япрағы — ҡый үләне.*

**2.** *кар.* **юл япрағы.** *Яраға бака япрағы ябыу.*

**3.** *кар.* **үгәй инә үләне.** *Бака япрағы төнәтмәһе.*

**4.** *кар.* **томбойоҡ.** *Һыу өҫтөндә бака япрактары күренә.*

**5.** *кар.* **əҙрәс гөл.** *Бака япрағы гөлө үҙе сәскә кеүек матур япраклы була.*

**БАҠБАБАЙ** *и. бот. диал. кар.* **бәпембә 1.** *Бағыр-бағыр бакбабай.*

**БАҠБАЙ** *и. диал. кар.* **бапаҡ I.** *Бакбай кеүек ҡурҡыныс.*

**БАҠБАҠ I (баҡбағы-)** *и. зоол. диал. кар.* **агуна.** *Бакбак — һыу ҡошо.*

**БАҠБАҠ II (баҡбағы-)** *и. бот. диал. кар.* **бәпембә 1.** *Бакбак сәскәһе.*

**БАҠ-БАҠ** (Р.: ква-ква; И.: quacking; Т.: vakvak) *окш.*

Ҡабат-ҡабат баҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Ква-ква; кря-кря (*многокр. от* **баҡ IV**). ■ *Тауыҡтар кет-кет көлә, өйрәктәр бак-бак килә.* Т. Арслан.

**БАҠ-БАҠ ИТЕҮ (баҡ-баҡ ит-)** *ҡ. кар.* **баҡылдау.** *Өйрәктәр бак-бак итеп ҡысҡырышалар.*

**БАҠ-БАҠ КИЛЕҮ (баҡ-баҡ кил-)** *ҡ. кар.* **баҡылдау.** *Күлдә бакалар бак-бак килә.*

**БАҠ ҠАПСЫҒЫ** *и. диал. кар.* **ләм.** *Бак капсығы булған йомшаҡ ер.*

**БАҠМА I** (Р.: инвалид, иждивенец; И.: disabled person; Т.: malul) *и.*

**1.** Зәғиф булыу сәбәпле ғүмер буйы ҡарауға мохтаж кеше; имгәк кеше. □ Человек, нуждающийся в попечении, уходе, инвалид, иждивенец. *Бакма булып ятыу.*

**2.** Сирләшкә, ауырыу. □ Больной, болезненный, нездоровый. *Бакма ғына иренән ни өмөт.*

**БАҠМА II** *с. диал.*

**1.** *кар.* **ауырыу.**

**2.** *кар.* **ялҡау.**

**БАҠМАСЫ I** *и. диал. кар.* **баҡма I.**

**БАҠМАСЫ II** *с. диал. кар.* **баҡма II.**

**БАҠМАСЫ БУЛЫУ (баҡмасы бул-)** (Р.: нуждаться в посторонней помощи; И.: need any help; Т.: bakıma ihtiyacı olmak) *ҡ. диал.*

Ауырыу, имгәк булып кеше ҡулына ҡалыу. □ Нуждаться в посторонней помощи. *Бакмасы булып ятыу.*

**БАҠМЫР** *и. диал. кар.* **ҡур I, 1.** *Бакмыр һалып ҡымыҙ әсетергә ҡуйыу.*

**БАҠМЫРЛАУ (баҡмырла-)** *ҡ. диал. кар.* **кәйегеү.** *Бакмырланым мин унан.*

**БАҠРА I** [төрки, фин-уғыр телдәрендә таралған һүҙ] (Р.: куколь; И.: corn cockle; Т.: karamuk) *и. бот.*

Көрән сәскәле, өс ҡырлы ғына ҡара орлоҡло ҡый үләне. □ Куколь (лат. *Agrostemma*).

■ *«Күңеленең күкрәп үҫкән бойҙай баҫыуында анда-һанда осраған бакра кеүек, тиҫкәре яҡтары бар», тип уйлай ине ул [Кеүәтов] Ишбулдин хаҡында.* Ә. Вәли.

**БАҠРА II** *и. диал. ҡар.* **баҡра гөлө.** *Баҡра үҫтереү.*

**БАҠРА БАЙРАМЫ** [рус. *Покров* ‘православие байрамының исеме’] (Р.: Покров день; И.: pagan feast; Т.: bayram) *и. диал.*

Суҡындырылған татар, башҡорттарҙа йорт ҡоштарының түллелеген теләп үткәрелгән байрам. □ Праздник Бакра *(направлен на проецирование плодовитости домашней птицы). Баҡра байрамы үткәреү.*

**БАҠРА ГӨЛӨ** (Р.: петуния; И.: petunia; Т.: petunya) *и. бот.*

Бик күп төрҙәре булған ҡуйы ботаҡлы, эре сәскәле декоратив үҫемлек. □ Петуния, петунья (лат. *Petunia*). *Баҡра гөлдәре шаулап сәскә ата.*

**БАҠРАЙЫУ (баҡрай-, баҡрая)** *ҡ. ҡар.* **аҡрайыу.** *Күҙен баҡрайтып ҡараны.*

**БАҠРАҠ I (баҡрағы)** (Р.: ревун; И.: kind of veterinary condition; Т.: hayvanların hastalık türü) *и. миф.*

Һыйыр малында хужалары билдәле бер тыйыуҙы үтәмәү арҡаһында барлыҡҡа килгән ауырыу. □ Ревун *(болезнь крупного рогатого скота, вызванная невыполнением хозяевами отдельных табу).* ■ *Һыйыр быҙаулаһа, баҡраҡ булмаһын тип, һөйләшмәй генә быҙауҙы өйгә индерәһең.* Ф. Хисамитдинова.

**БАҠРАҠ II (баҡрағы)** (Р.: горластый; И.: speaking loudly, vociferous; Т.: bağırtıcı) *с.*

**1.** Ҡысҡырып һөйләшкән. □ Горластый *(о человеке). Баҡраҡ ир.*

**2.** *ҡар.* **баҡыраҡ.** *Баҡраҡ һыйыр.*

**БАҠРАҠ БӨРКӨТ** (Р.: орёл-крикун; И.: greater spotted eagle; Т.: büyük orman kartalı) *и. зоол.*

Баҡылдап йөрөгән бөркөт төрө. □ Орёл-крикун, подорлик (лат. *Aquila clanga*). ■ *Таҙғара соҡоноп ғүмер уҙғара, баҡраҡ йөрөй баҡылдап, тау бөркөтө — ҡаяла, йәйрәп оса һауала.* Яр. Вәлиев.

**БАҠРАҠ МАЙМЫЛ** (Р.: обезьяны-ревуны; И.: howler monkey; Т.: uluyan maymun) *и. зоол.*

Көньяҡ Америкала йәшәгән оҙон ҡойроҡло, көслө тауышлы маймылдар. □ Обезьяны-ревуны, ревуны (лат. *Aloautta*). *Байраҡ маймылдар һикереша.*

**БАҠРАС** (Р.: половник; И.: ladle; Т.: kerçe) *и. диал.*

**1.** Ижау. □ Половник. ■ *Айғыр баҡрас башындай күҙҙәрен аҡайтып борола ла әлеге сүлмәктәй тояғы менән сапсырға тотона.* Әкиәттән.

**2.** Баҡыр табаҡ. □ Медный таз. *Баҡраска һыу ҡойоу.*

**БАҠРАУ** *и. ҡар.* **баҡра байрамы.** *Баҡрауҙы байрам итеү.*

**БАҠСА** [фарс. باغچه] (Р.: сад; И.: garden; Т.: bahçe) *и.*

**1.** Емеш, йәшелсә ултыртылған ер. □ Сад; огород. / Садовый; огородный. *Йәшелсә баҡсаһы. Картуф баҡсаһы. Сейә баҡсаһы. Баҡса үҫемлеге. Баҡса сәсеү. Баҡсала эшләү. Баҡсаға һыу ҡойоу.* ■ *[Харис — Мәҙинәгә:] Хәҙер баҡса үҫтерергә ер бирә башланылар, беҙ ҙә алырбыҙ.* Ш. Янбаев.

**2.** Ағаслы, сәскәле ял итеү урыны. □ Сад. *Баҡса ере. Ҡала баҡсаһы. Баҡсала ял итеү.* ■ *Дауахана майҙанында .. баҡсалар буласаҡ.* Н. Ғәбитов.

**3.** *диал.* Ишек алды. □ Двор. *Балалар баҡсала уйнай.*

**БАҠСАЛЫҠ (баҡсалығы)** (Р.: садовый участок; И.: garden plot; Т.: bahçelik) *и.*

Баҡса биләп торған урын. □ Садовый участок. *Урман аръяғындағы баҡсалыҡта мәктәп балалары эшләй.*

**БАҠСА СОРАТ** *и. диал. ҡар.* **ҡараҫҡы.** *Себештәрҙе ҡарға урламаһын тип, баҡса сорат ҡуйҙыҡ.*

**БАҠСАСЫ** (Р.: садовод; И.: gardener; Т.: bahçeci) *и.*

Емеш, йәшелсә үҫтереү менән шөғөлләнгән кеше. □ Садовод, садовник, огородник. *Баҡсасы булып эшләү. Баҡсасы ҡатын. Баҡсасылар йәмғиәте.* ■ *Кем булғандыр ергә тыуыр бала .. бәлки, булыр ине баҡсасы.* Ғ. Сәләм.

**БАҠСАСЫЛЫҠ (баҡсасылығы)** (Р.: садоводство; И.: gardening; Т.: bahçecilik) *и.*

**1.** Хужалыҡтың емеш-еләк, йәшелсә үҫтереү менән шөғөлләнгән тармағы. □ Садоводство, огородничество. / Садовнический, огороднический. *Баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеү.* ■ *Балыҡ тотоу, эшкәртеү заводтары, баҡсасылыҡ йылдам үҫешә.* М. Һаһуманова. *Ауылда баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн бөтә шарттар ҙа бар.* Ә. Мозафаров.

**2.** Емеш, йәшелсә үҫтереү ғилеме. □ Садоводство. *Баҡсасылыҡ курсы. Баҡсасылыҡ ғилеме.*

**БАҠСЫ** *и. ҡар.* **бағымсы I.** ■ *Шуға ла уның тирәһендә бер ниндәй торлаҡ та юҡ, ә баҡсыларҙы (шамандарҙы) иҫәпкә алмағанда, ябай свазиҙарҙың береһе лә ҡаяға яҡын бармай.* С. Ярмуллин. *Күрәҙәлек менән бер рәттән баҡсы арбау, им-том менән дә булышҡан.* Ф. Хисамитдинова.

**БАҠТА** [фарс. بته ‘өс йәки дүрт йәшлек һарыҡ’] (Р.: слинявшая шерсть животных; И.: vernal shedding of hair; Т.: tüy) *и.*

**1.** Малдың яҙ ҡойған йөнө. □ Слинявшая шерсть животных *(лошадей и коров). Һыйырҙар баҡтаһын ҡоя.* ■ *Йүгәнде кейҙереү менән тай бер һелкенгән дә бөтә баҡтаһын ҡойған.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Һарыҡтың яҙ ҡырҡылған йөнө. □ Овечья шерсть весенней стрижки. *Баҡтанан бейәләй бәйләү.*

**3.** *диал.* Шырт һарыҡ йөнө. □ Грубая овечья шерсть. *Бындай баҡта быймаға шәп инде ул.*

**4.** *мыҫҡ.* Кейемдең йыртыҡ-мыртығы; алама. □ Лохмотья. *Шул баҡтаһын йыуып та киймәй.*

**БАҠТАНСЫ** (Р.: охранник; И.: guard; Т.: bakman) *и. иҫк.*

**1.** *ҡар.* **ҡарауыс 1.** *Малды баҡтансылар ҡарай.* ● *Баҡтансыһы юҡ мал уңмаҫ, башлығы юҡ ил уңмаҫ.* Мәҡәл.

**2.** Һаҡлап торған кеше; һаҡсы. □ Охранник; часовой; надсмотрщик. *Ишек төбөндә баҡтансылар тора.* ● *Батырға баҡтансы кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**БАҠТИҺӘҢ** *мөн. ҡар.* **баҡһаң.** ■ *Баҡтиһәң, Зөфәр ҙә һалдатҡа саҡырылған, китергә әҙерләнеп тора икән.* Һ. Дәүләтшина. *Ә тормош, баҡтиһәң, уйынсыҡ та, күңел асыу урыны ғына ла түгел икән.* З. Биишева.

**БАҠТЫРТЫУ (баҡтырт-)** (Р.: очная ставка; И.: confrontation; Т.: yüzleşmek) *ҡ. диал.*

Күҙләштереп һорау алыу, күҙләштереү. □ Очная ставка. *Дөрөҫлөктө ике яҡты баҡтыртып ҡына белә алабыҙ.*

**БАҠТЫРЫУ I (баҡтыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бағыу I.** *понуд. от* **бағыу I.** *Артҡа баҡтырыу. Бала баҡтырыу. Бағымсынан баҡтырыу.*

**БАҠТЫРЫУ II (баҡтыр-)** (Р.: сказать прямо; И.: speak directly; Т.: doğrusunu söylemek) *ҡ. диал.*

**1.** Тураһын әйтеү. □ Сказать прямо. *Баҡтырғанса әйттем.*

**2.** Аптыратыу. □ Озадачить, удивить. *Мине баҡтырып китте әле ул ҡыҙ.*

♦ **Күҙ баҡтырып** күҙгә тура ҡарап *(әйтеү, алдау).* □ Глядя прямо в глаза *(сказать, обмануть). Күҙен баҡтырып әйтеү.* ■ *Күҙ баҡтырып, йәмһеҙ-йәмһеҙ хәбәр һөйләй.* К. Кинйәбулатова.

**БАҠТЫРЫУ III (баҡтыр-)** *ҡ. ҡар.* **бағындырыу 1.** *Батшаға баҡтырыу.*

**БАҠ ҮЛӘН** *и. бот. диал.*

**1.** *ҡар.* **ҡаҙ үләне.** *Ишек алды йәм-йәшел баҡ үлән.*

**2.** *ҡар.* **юл япрағы.** *Баҡ үлән йыйып киптереү.*

**БАҠҺАҢ** (Р.: оказывается; И.: it appears; Т.: meğer) *мөн.*

Көтөлмәгән бер нәмәне асыҡлағанда әйтелә. □ Оказывается. *Баҡһаң, ул киткән икән.* ■ *[Мәһиҙә:] Күпкә бармам, ахыры, бөгөн төшөмдә үлгән балаларымды күрҙем.. саҡырып торалар. Баҡһаң, теге донъяла ла әсәй кәрәк икән.* Ә. Үтәбаев. *Баҡһаң, был донъяла күлдәк һайлай белеү генә етмәй икән әле.* Яр. Вәлиев.

**БАҠШЫ** *и. ҡар.* **бағымсы I.** ■ *Мө-йылбикә, бакшы Барсын әбейҙән ҡаратып, әле килгән үҙе менән бер туған апаһына башына төшкән ауыр хәлен һөйләп ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**БАҠШЫЛЛАНЫУ (баҡшыллан-)** (Р.: гадать; И.: guess; Т.: fal açmak) *ҡ. диал.*

Алдан әйтеү, күрәҙәлек ҡылыу. □ Гадать. *Эй, ошо ҡарт баҡшылланып ҙа торор инде.*

**БАҠЫЙ** [ғәр. بَاقِي ‘вечный, длящийся, остающийся, остальной’] (Р.: вечный; И.: eternal; Т.: ebedi) *с.*

**1.** Мәңге, мәңгелек. □ Вечный. *Баҡый донъя.* ■ *Хәҙер инде баҡый донъяға киткән Ғәлләметдине менән ул даланы арҡыры-буй йөрөп сыҡты.* Х. Йосопова. *Аҙаҡ хакимдар донъяның фанийынан баҡыйына күскәс, теләһә ниндәй вандалдар ул һәйкәлдәрҙе ҡыйратҡан, мәсхәрә ҡылған.* Х. Ирғәлин.

**2.** Ҡалған. □ Оставшийся. *Баҡый ғүмер.*

♦ **Ғүмер баҡый** *ҡар.* **ғүмер.**

**БАҠЫЙ II** (Р.: спотыкающийся; И.: halting; Т.: tökezleyen) *с. диал.*

Абыныусан *(кешегә ҡарата).* □ Спотыкающийся *(о человеке).*

**БАҠЫЙ III** [ғәр. بَقَاء ‘длительность, вечность’] (Р.: вечность; И.: eternity; Т.: ebedilik) *и. иҫк. кит.*

Мәңгелек. □ Вечность.

**БАҠЫЙ IV** (Р.: престарелый человек; И.: old man; Т.: ihtiyar) *и. иҫк. кит.*

Ҡарт, ҡарый. □ Старик.

**БАҠЫЙЛЫҠ (баҡыйлығы)** (Р.: вечность; И.: eternity; Т.: ebedilik) *и.*

Мәңгелек. □ Вечность. ■ *Кеше менән кеше, бәндә менән Аллаһы Тәғәлә, баҡыйлыҡ менән фанилыҡ мөнәсәбәттәре һәр аңлы кешене уйландыра.* Т. Ғәниева.

**БАҠЫЛДАҠ I** (Р.: квакающий, крякающий; И.: croaking; Т.: vakvak eden) *с.*

Баҡ-баҡ иткән *(тәлмәрйен, өйрәккә ҡарата).* □ Квакающий *(о лягушке)*; крякающий *(об утке). Баҡылдаҡ тәлмәрйен. Баҡылдаҡ өйрәк.*

**БАҠЫЛДАҠ II (баҡылдағы)** (Р.: квакша; И.: frog species; Т.: ağaç kurbağası) *и. зоол.*

Күпселектә ағастарҙа йәшәй торған, күп илдәргә таралған тәлмәрйен. □ Квакша (лат. *Hylidae). Баҡылдаҡтар ер шарында киң таралған.*

**БАҠЫЛДАҠ ТӘЛМӘРЙЕН** *и. зоол. ҡар.* **баҡылдаҡ II.** *Баҡылдаҡ тәлмәрйен ағастарҙа йәшәй.*

**БАҠЫЛДАТЫУ (баҡылдат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҡылдау.** *понуд. от* **баҡылдау.** *Бәләкәй малай өйрәктәрҙе баҡылдатып туҙҙыра.*

**БАҠЫЛДАУ (баҡылда-)** (Р.: квакать; И.: croak; Т.: vakvak etmek) *ҡ.*

**1.** Баҡ-баҡ тип ҡысҡырыу, баҡ-баҡ итеү. □ Квакать. // Кваканье. *Баҡа баҡылдай.* ■ *Байтаҡ көттө, ситтәге һәр ҡыштырлауҙы һиҙгер тойоп тыңлап ятты, тик ара-тирә төнгө ҡоштар сырҡылдауы, күл буйындағы баҡалар баҡылдауынан башҡа шылт иткән дә тауыш ишетелмәне.* Р. Байымов. *Тәлмәрйендәр һаҙҙа баҡылдауҙан тау бөркөтө ҡурҡа буламы?* К. Кинйәбулатова.

**2.** Быжҡылдау; быжҡ-быжҡ итеү, быжҡ-быжҡ килеү *(өйрәккә ҡарата).* □ Крякать *(об утке).* // Кряканье. *Өйрәк баҡылдай.* ● *Ҡаҙ ҡаҡылдауын ҡуймаҫ, өйрәк баҡылдауын ҡуймаҫ.* Мәҡәл.

**БАҠЫЛДАШЫУ (баҡылдаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **баҡылдау.** *взаимн. от* **баҡылдау.** ■ *Түш күтәреп урам күлдәрендә баҡылдашҡан ҡаҙҙар, өйрәктәр.* Т. Арслан.

**БАҠЫЛДЫҒЫ СЫҒЫУ (баҡылдығы сыҡ-)** *ҡ. ҡар.* **баҡылдау.**

**БАҠЫЛҠА** (Р.: хладнокровие; И.: coolness; Т.: soğukkanlılık) *и.*

Һалҡын ҡанлылыҡ, тыныс тәбиғәтлелек. □ Хладнокровие. ■ *Баҡылҡаһы булмаһа — батыр яуҙа еңә алмай.* Ғ. Ибраһимов.

**БАҠЫМБАҠ (баҡымбағы)** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Баҡымбаҡ мамығы.*

**БАҠЫР I** [дөйөм төрки *баҡыр* ‘баҡыр’] (Р.: медь; И.: copper; Т.: bakır) *и.*

**1.** Ҡыҙғылт төҫтәге еңел сүкелә торған йомшаҡ металл. □ Медь. / Медный. *Баҡыр*

*сәнәғәте. Баҡыр сығарыу. Баҡыр яткылығы.* ● *Баҡырҙы күпме йыушһаң да, алтын булмаç.* Мәҡәл.

**2.** *һөйл.* Шул металдан һуғылған аҡса. □ Медная монета. *Атайым кеçәһенән баҡырҙар килтереп сығарҙы.* ■ *Кәләш менән кейәүҙе күперелеп торған мамыҡ яçтыҡҡа ултыртып елдерҙе Нурислам күсер Аҡъяҡупҡа. Унда яңыса «алдым-бирҙем» булып, боронғо биш тин баҡыр ҙурлығы түңәрәк мөһөр һуғылған никах ҡағыҙы алып ҡайттылар.* М. Кәрим.

**3.** *миф.* Им-томда, күрәҙәселектә ҡулланылған, магик көскә эйә булған металл. □ Медь; мифологизированный металл, применяемый в магической медицине, гаданиях. *Баҡыр име.*

**БАҠЫР II** *и. зоол. диал. ҡар.* **бағыр I.** *Күлдән баҡырҙар тотоу.*

**БАҠЫР III** (Р.: медный; И.: copper; Т.: bakır) *с.*

**1.** Баҡырҙан эшләнгән. □ Медный. *Баҡыр аҡса. Баҡыр балдаҡ. Баҡыр ҡомған.* ■ *Уралдағы яткылыҡтарҙың күбеһе баҡыр колчеданынан, йәғни халькопириттан, тора.* Д. Бураҡаев. *Оло инәйем усыма өс тин баҡыр аҡса һалды.* М. Кәрим. *Ярар, берәй баҡыр йөҙөк табырмын әле, — тип һөйләнде Уйылдан, вайымһыҙ күренергә тырышып.* Н. Мусин. *Мәскәй батыр егетте тауҙағы өс ҡорос йоҙаҡ менән бикләнгән баҡыр ишекле мәмерйә янына алып бара.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**2.** Ерән, ҡыҙғылт һары, еҙ. □ Медный *(о цвете).* ■ *Ҡояшҡа бешеп, баҡыр төçөнә ингән битенә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.* З. Биишева.

**БАҠЫРАҠ** (Р.: постоянно мычащий; И.: lowing constantly; Т.: böğüren) *с.*

Баҡырып, ҡысҡырып тороусан. □ Постоянно мычащий *(о корове)*; постоянно блеющий *(об овце, козе). Баҡыраҡ һарыҡ. Баҡыраҡ һыйыр. Баҡыраҡ кәзә бәрәсе.*

**БАҠЫРАС** (Р.: медный; И.: scoop; Т.: bakır) *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **баҡрас.** *Баҡырас менән аш һоçоу.*

**2.** *ҡар.* **баҡырса 1.** *Баҡырастан сәй яһап алыу.*

**3.** *ҡар.* **тимер күнәсек.**

**4.** Сүмес. □ Ковш, ковшик. *Баҡырас менән һыу алып эсеү.*

**БАҠЫРҒАС** *и. диал. ҡар.* **баҡрас 1.** *Баҡырғас менән аш һоçоу.*

**БАҠЫРҒАШ** *и. диал. ҡар.* **ҡабырсаҡ.**

**БАҠЫР ЙЫЛАН I** (Р.: медянка; И.: grass snake; Т.: taçlı yılan) *и.*

**1.** *зоол.* Йылтыр һары төçтәге бәләкәйерәк йылан *(сыбыҡ менән һуҡҡанда өҙөлөп тора)*; тос йылан, еҙ йылан. □ Медянка *(лат. Coronella). Тауҙа баҡыр йылан да осрай.*

**2.** *миф.* Аçҡы донъя, хәүеф-хәтәр менән бәйле мифик йылан. □ Медянка; хтоническое животное, связанное с нижним миром, опасностями. ■ *Баҡыр йылан саҡһа, ете йылан үлтерергә, ете һыйырҙың һөтөн, ете бейәнең ҡымыҙын эсер кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠЫР ЙЫЛАН II** *и. зоол. диал. ҡар.* **кеçәртке.** *Мин баҡыр йылан күрҙем.*

**БАҠЫР КЕÇӘРТКЕ** (Р.: веретеница; И.: blind worm; Т.: yılan kertenkelelerigiller) *и. зоол.*

Орсоҡ кеçәртке, аяҡһыҙ кеçәртке *(йылан һымаҡ аяҡһыҙ кеçәртке).* □ Веретеница, медяница (лат. *Anguidae). Баҡыр кеçәртке йыланға оҡшап тора.*

**БАҠЫР КҮРКӘ** (Р.: индейки бронзовые; И.: blind worm; Т.: hindi) *и. зоол.*

Рәсәйҙә сығарылған ялтырауыҡ ҡыҙылһары төçтәге йорт күркәләре тоҡомо. □ Индейки северокавказские бронзовые (лат. *Meleagris gallopavo). Баҡыр күркәләр үрсетеү.*

**БАҠЫР ҠУҢЫҘ** (Р.: бронзовка; И.: flower chafer; Т.: mayıs böceği) *и. зоол.*

Бөтә ер йөҙөнә таралған йәшкелт баҡыр төçөндәге ҡатҡос ҡуңыҙ. □ Бронзовка (лат. *Cetoniinae). Баҡыр ҡуңыҙҙар үрсегән.*

**БАҠЫРЛАНЫУ (баҡырлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **баҡырлау.** *страд. от* **баҡырлау.** *Баҡырланған һауыт. Баҡырланған ижау.*

**БАҠЫРЛАТЫУ (баҡырлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҡырлау.** *понуд. от* **баҡырлау.** *Сәйнүкте баҡырлатырға кәрәк.*

**БАҠЫРЛАУ (баҡырла-)** (Р.: покрывать медью; И.: coat with copper; Т.: bakırlamak) *ҡ.*

Баҡыр (I) ялатыу. □ Крыть, покрывать медью *что. Сәйнүкте баҡырлау. Ҡасты баҡырлау. Ижауҙы баҡырлау.*

**БАҠЫРМА БЕСӘН** *и. бот. диал. ҡар.* **кесерткән.** *Аяғымды баҡырма бесән саҡты.*

**БАҠЫРСА** (Р.: медный чайник; И.: copper teapot; Т.: çaydanlık) *и.*

**1.** Сәй ҡайната торған тотҡалы, моронло һауыт; сәйнүк. □ Медный чайник. *Баҡырса мороно.* ■ *Һәр ҡыуышта йәнлелек: кем йыһаздарын урынлаштыра, кем урындыҡ һала, кемдер баҡырсаһына һыу алып, сәй ҡайнатырға усаҡ яға ла башлай.* У. Мостафин.

**2.** *диал.* Ижау. □ Половник. *Баҡырса менән аш һалыу.*

**3.** *диал. ҡар.* **тимер күнәсек.**

**БАҠЫРСАҠ (баҡырсағы)** *и. диал. ҡар.* **һыбыҙғы.** *Баҡырсаҡ тауышы. Баҡырсаҡ уйнау. Баҡырсаҡ яһау.*

**БАҠЫРСЫ** (Р.: медник; И.: brazier; Т.: bakırcı) *и.*

Баҡыр (I) иретеү-ҡойоу, баҡыр әйберҙәр яһау эше менән шөғөлләнгән кеше. □ Медник, медеплавельщик, меднолитейщик, мастер по производству и ремонту медных изделий. *Баҡырсы хеҙмәтенән файҙаланыу.*

**БАҠЫР СӘСКӘ** (Р.: василистник жёлтый; И.: thalictrum flavum, grass species; Т.: çayır sedefi) *и. бот.*

Һары төҫтәге биҙгәк үләне. □ Василистник жёлтый (лат. *Thalictrum flavum*). *Яланда баҡыр сәскәләр күп үҫә.*

**БАҠЫР ТАШЫ** (Р.: медный камень; И.: copper stone; Т.: bakır taş) *и. мин.*

Баҡыр ҡатнаш тау тоҡомо. □ Медный камень. *Тауҙа баҡыр ташы күп.*

**БАҠЫРТҠЫС** *и. диал. ҡар.* **һыбыҙғы.** *Баҡыртҡыс уйнау. Баҡыртҡыс тауышы.*

**БАҠЫРТМА** *и. диал. ҡар.* **һыбыҙғы.** *Баҡыртма яһау. Баҡыртма уйнау.*

**БАҠЫРТЫУ (баҡырт-)** *ҡ.*

**1.** *йөкм. ҡар.* **баҡырыу 1.** *понуд. от* **баҡырыу 1.** *Шул һыйырҙы баҡыртып бикләп ҡуйҙығыҙ.*

**2.** *диал.* Ҡысҡырып тыйыу. □ Прикрикнуть. *Бер ҙә юҡҡа баҡыртма баланы.*

**БАҠЫР ТӘТӘЙ I** (Р.: василёк голубой; И.: cornflower; Т.: peygamber çiçeği) *и. бот. диал.*

Арыш араһында үҫкән күк сәскә; зәңгәрсүк. □ Василёк голубой (лат. *Centaurea cyanus*). *Баҡыр тәтәй гөлләмәһе. Баҡыр тәтәй сәскәләре йыйыу.*

**БАҠЫР ТӘТӘЙ II** *и. диал. ҡар.* **баҡра I.** *Баҡра баҫҡан ялан.*

**БАҠЫРЫНЫУ (баҡырын-)** (Р.: кричать; И.: yell; Т.: bağırmak) *ҡ.*

*Кемгәлер* асыуланып баҡырыу, ҡысҡырыныу. □ Кричать, орать *на кого. Был кеше асыуланып баҡырына башланы.*

**БАҠЫРЫУ (баҡыр-)** (Р.: блеять; И.: bleat; Т.: melemek) *ҡ.*

**1.** Ныҡ итеп ҡысҡырыу *(кәзә, һарыҡ, һыйыр малына ҡарата).* □ Блеять *(об овце, козе и т. п.);* громко мычать *(о корове и т. п.).* // Блеяние; громкое мычание. ■ *Кеше-фәлән күренмәй, ваҡыт-ваҡыт һыйыр мөңрәгәне, быҙау баҡырғаны, эт өргәне ишетелеп ҡала.* Ә. Әминев. *Әллә ниҙә бер эт өрә, һыйыр баҡыра, ат кешәнләп ебәрә, йә булмаһа арбаһы менән доңғорҙап ат үтеп китә.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *кусм.* Асыуланып яман ҡысҡырыу *(кешегә ҡарата);* аҡырыу. □ Громко кричать; орать. // Громкий крик. *Асыуланып баҡырыу.* ■ *Кемдер ҡулдарын болғап баҡыра.* И. Насыри. *Боҙомдо баҡырып, яман һүҙҙәр әйтеп эйәһенә кире ебәрәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҠЫРЫШЫУ (баҡырыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **баҡырыу 1.** *взаимн. от* **баҡырыу 1.** *Һыйырҙар, һарыҡ-кәзә баҡырышып көтөүҙән ҡайта башланы.*

**БАҠЫТ** (Р.: топляк; И.: sunken log(s); Т.: batık) *и.*

һыу һеңешкән ауыр ағас; утыпшы. □ Топляк *(древесина, пропитанная водой). Был баҡытты нимә эшләтербеҙ икән?*

**БАҠЫТЛАНЫУ (баҡытлан-)** (Р.: пропитываться водой; И.: soak; Т.: ıslanmak) *ҡ.*

Һыуҙа оҙаҡ ятып һыу һеңеү, шешенеү *(ағасҡа ҡарата).* □ Пропитываться водой, разбухать *(о древесине). Ағас баҡытланған.*

**БАҠЫЯС** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **беше 1.** *Баҡыяс ағас. Баҡыяс тауар. Баҡыяс кеше.*

**2.** Төтөмлө, беше. □ Ноский *(об одежде). Был салбар баҡыяс булып сыҡты әле, эшкә рәхәтләнеп кейәм.*

**БАҠ ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух счастья; И.: spirit of happiness; Т.: mutluluk ruhu) *и. миф.*

Бәхет эйәһе. □ Дух счастья. ■ *Баҡ эйәһенә ошо һамаҡты әйткәндәр: Баҡ, баҡ! Бәпәй килмәй бик оҙаҡ. Баҡ, баҡ! Итермен һине ҡунаҡ! Мәмәй көтә бер табаҡ.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛ I** (Р.: мёд; И.: honey; Т.: bal) *и.*

**1.** Бал ҡортоноң, иңкештең сәскә һутынан йыйып яһаған татлы ҡуйы матдәһе. □ Мёд. / Медовый. *Дегәнәк балы. Ҡарабойҙай балы. Ҡомоҡҡан бал. Сәскә балы еҫе. Йүкә балы менән сәй эсеү. Бал ҡыуғыс. Бал ҡүҙәнәге. Бал тәме. Бал табышы. Бал йыйыу. Бал ҡыуыу. Йәш бал. Йылы бал. Иңкеш балы ла тәмле була.* ■ *Аңлашыла: бал айыртырға, айырылған ҡүстәрҙе ситкә ебәрмәйенсә, икенсе ояға урынлаштырырға һәм башҡа ваҡ-төйәк эшкә өлгөрөргә кәрәк.* В. Хәбиров. ● *Бал татлы, балдан бала татлы.* Әйтем. *Барын-юғын белмәйҙер, бал теләйҙер тамағым.* Әйтем. *Күп ашаһаң, бал да әсе була.* Әйтем. *Ҡорт сакмайынса бал булмай.* Әйтем. *Бал тәмле тип бармаҡты тешләп булмай.* Әйтем.

**2.** *миф.* Муллыҡ, һаулыҡ, байлыҡ символы *(яңы тыуған балаға һәм туйҙа кейәү менән кәләшкә ҡаптыралар).* □ Символ изобилия, здоровья, богатства *(давали новорождённым, молодожёнам).* ■ *Бер ҡулың майҙа, бер ҡулың балда булһын.* Теләктән.

**БАЛ II** (Р.: брага; И.: mead; Т.: bal likörü) *и.*

Балдан йәки шәкәрҙән әсетелгән иҫерткес эсемлек. □ Брага, медовуха. *Шәкәр балы ҡойоу. Бал балы эсеү. Бал әсетеү. Әсегән бал еҫе. Бал ҡойоусы. Әсе бал.* ■ *Әсәй, — тине Ғәлим, Йосоп өҫтәл эргәһенә килеп ултырғас, — һинең һитәле балдан ғына балың бар ине түгелме?* Н. Мусин.

**БАЛ III** [рус. < фр. *bal*] (Р.: бал; И.: ball; Т.: balo) *и.*

Бейеү кисәһе. □ Бал. / Бальный. *Балға барыу. Бал бейеүе.*

**БАЛ IV** *и. диал. ҡар.* **сайыр 1.** *Ағас балы.*

**БАЛА I** [дөйөм төрки *бала* ‘сабый’] (Р.: ребёнок; И.: baby, infant, child; Т.: çocuk) *и.*

**1.** Йәше бәләкәй ҡыҙ йәки малай. □ Ребёнок, дитя; младенец; малыш. / Ребячий, детский, младенческий, малышовый. *Имсәк бала. Баш бала. Кинйә бала. Бөркәнсекле бала. Ҡыҙ бала. Ир бала. Игеҙ бала(лар). Сей бала. Етем бала. Ата балаһы. Бала ҡараусы. Балалар уйынсығы. Бала имеҙеү.* ■ *Алтын көҙҙөң тәүге көндәре балаларҙың шат, сағыу тауышына күмелеүсән.* «Башҡортостан», 4 сентябрь 2010. ● *Ата-әсәгә икеләге лә бала, иллеләге лә бала.* Әйтем. *Бала бар йортта сер ятмай.* Әйтем.

**2.** Кешенең улы йәки ҡыҙы. □ Сын или дочь *(независимо от возраста). Бала табыу. Бала ҡарау. Бала үҫтереү.* ■ *Бала мөхәббәте ата менән әсә араһында уртаҡ икәнен балаларығыҙға ғәмәлдәрегеҙ менән белдерегеҙ.* Р. Фәхретдинов.

**3.** *эйл. ф.* **балам.** Яратып, иркәләп әйтелә. □ Родненький, родимый, родной, милый, дорогой, дитя моё. *Әҙәм балаһы.* ■ *Сәрбиямал йәше етмешкә еткән әбей кеүек, «балам» тип һөйләргә ярата.* Д. Бүләков. *Йоҡла, балам, йом күҙең, йом-йом күҙең, күҙ нурым.* Бишек йырынан.

**4.** Тереклектәрҙең яңы тыуған бәләкәсе. □ Детёныш, плод, зародыш; личинка; расплод *(пчёл). Йылан балаһы. Ҡарға балаһы. Айыу балаһы. Сысҡан балаһы.* ■ *Ғәбиттең Торатауҙан бөркөт балаһы алып ҡайтып, һунар ҡошо итеү теләге менән көн дә бит-*

*ләүҙәге шырлыкҡа алып барып өйрәтеп йөрөүе оҙаҡламай бөтә ауылға мәғлүм булды.* Ә. Әминев.

**5.** Сығышы менән *ҡайҙа* йәки *нимәгәләр* ҡараған кеше. □ Человек, по происхождению принадлежащий *кому-то, чему-нибудь. Башҡорт балаһы. Ҡала балаһы.*

**6.** *күпл.* Бала-саға өсөн тәғәйенләнгән нәмәне белдергәндә ҡулланыла. □ Употребляется тогда, когда вещи, предметы, лица означают предназначение детворе. *Балалар велосипеды. Балалар табибы. Балалар уйынсығы.*

**7.** *диал.* Малай. □ Мальчик. *Бер ҡыҙҙар юҡ, гел балалар тыуа.* Экспедиция материалдарынан.

**8.** *миф.* Мифологияла ике донъя араһында торған, тәбиғәттән айырылып бөтмәгән, кеше статусына эйә булып өлгөрмәгән йән эйәһе. □ Ребёнок, дитя, пограничное по состоянию и статусу лицо. ● *Бала күп илаһа, кеше үлә.* Һынамыш.

♦ **Ата балаһы** берәүҙең ҡәҙерлеһе; әҙәм балаһы. □ Любимчик, любимое дитя. *Ул да бит ата балаһы.* **Бала йәнле** бала-саға өсөн өҙәлеп торған, бала яратҡан. □ Любящий детей душой *(о человеке). Бала йәнле ҡарт. Бала йәнле кеше.*

**БАЛА II** (Р.: маленький; И.: small; Т.: küçük) *с.*

**1.** Бәләкәй. □ Маленький, небольшой. *Бала мендәр. Бала шәл. Бала яулыҡ. Бала сана. Унда бала йылға ғына ағып ята.*

**2.** Йәш. □ Молодой. *Бала ҡайын. Бала йүкә.*

**3.** Йәше яғынан кесе, олоғайып етмәгән *(йәнлек. ҡош-ҡортҡа ҡарата).* □ Молодой *(о животных, птицах). Бала әтәс. Бала айыу. Бала бесәй. Бала ҡорт.*

**4.** Ваҡ. □ Мелкий. *Бала сәс.*

**БАЛА АЛДЫ** (Р.: околоплодная жидкость; И.: fetal fluid; Т.: amniyotik sıvı) *и. диал.*

Ялғыны уратып алған һыу. □ Околоплодная жидкость. *Бала алды килгән.*

**БАЛА АЛДЫРЫУ (бала алдыр-)** (Р.: аборт; И.: abortion, miscarriage; Т.: çocuk düşürme) *ҡ.*

Йөклөлөктән арыныу. □ Прерывание беременности; аборт. *Бала алдырыуҙың кире һөҙөмтәләре бик күп.*

**БАЛА АҢДЫУ (бала аңды-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бала һаҡлау.** ■ *Баланы ен-шайтандан ҡырҡ көнгә ҡәҙәр аңдыйҙар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА АРТЫ** *и. диал. ҡар.* **һуңғылыҡ.** *Бала арты сыҡҡас та, киндек инәһенең эше бөтмәй әле.*

**БАЛА АТЛАТЫУ (бала атлат-)** (Р.: обряд, направленный на вызывание и поощрение первых шагов ребёнка; И.: kind of ethnographic rite; Т.: bir tören türü) *ҡ. этн.*

Баланың тәүге аҙымдарын хуплау йолаһы. □ Обряд, направленный на вызывание и поощрение первых шагов ребёнка. *Бала атлатыу йолаһы.*

**БАЛА АУЫҘЛАНДЫРЫУ (бала ауыҙландыр-)** (Р.: обычай первого кормления новорождённого; И.: sort of ethnographic rite; Т.: bir tören türü) *ҡ. этн.*

Яңы тыуған балаға башлап ризыҡ *(бал, май)* ҡаптырыу. □ Обычай первого кормления новорождённого. ■ *Сабый донъяға килгәс тә, бала ауыҙландырыу йолаһы үткәргәндәр.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛА БАҒЫУ (бала баҡ-)** *ҡ. ҡар.* **бала ҡарау.**

**БАЛАБАН** [боронғо төрки *палуан* 'ауға өйрәтелгән ыласын'] (Р.: балобан; И.: saker falcon; Т.: ulu doğan) *и. зоол.*

**1.** Ҡарға ҙурлығындағы һырты һарғылт көрән, һәр ҡауырһынының сите һары, ҡыҫҡа ҡойроғонда һары төҫтәге арҡыры һыҙыҡтары булған, тар оҙон ҡанатлы ҡош. Ҡая ташлы урмандарҙа йәшәй, асыҡ урында һунар итә. □ Балобан (лат. *Falco cherrug).* ■ *Балабанды элек ауға йөрөү өсөн ҡулға эйәләштергәндәр.* Э. Ишбирҙин.

**2.** *диал. ҡар.* **балапан I.**

**БАЛА БАҪА ТОРҒАН ТАУЫҠ (тауығы)** (Р.: наседка; И.: clocking hen; Т.: gurk) *и. диал.*

Себеш баҫа торған тауыҡ. □ Наседка. *Бала баҫа торған тауыҡтарым күп минең.*

**БАЛАБИК (балабиге)** *и. ҡар.* **сепрәк балаҫ.** *Балабикте күп һуҡты инде инәйем.*

**БАЛА БӘҮЕЛЕ** (Р.: детская моча; И.: infant's urine; Т.: çocuk sidiği) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, түлләндереү, дауалау көсөнә эйә булған бәүел. □ Детская моча; по поверьям, имеет продуцирующую силу, вылечивает от болезней.

**БАЛАГАН** [фарс. بالاخانه 'юғары бүлмә'] (Р.: балаган; И.: booth; Т.: baraka) *и.*

Тамаша күрһәтер өсөн эшләнгән ваҡытлы бина, ҡоролма. □ Балаган *(временное здание, сооружение для представлений, зрелищ). Балаганда байрам сараһы ойошторола.*

**БАЛАГҮС** (Р.: молодой пчелиный рой; И.: young bee swarm; Т.: oğul) *и. диал.*

Яңы айырылған бал ҡорто күсе. □ Молодой пчелиный рой. *Балагүстәр күстән айырылып сыға.*

**БАЛАҒА АУЫРЫУ (балаға ауыры-)** *к. диал. ҡар.* **тулғаҡ.** *Ҡатын балаға ауырый башлағас, кендек инәһе саҡыралар.*

**БАЛАҒА ҠАЛЫУ (балаға ҡал-)** (Р.: забеременеть; И.: become pregnant; Т.: gebe kalmak) *к.*

Ауырға ҡалыу. □ Забеременеть. *Балаға ҡалған ҡатындар һаулығына айырыуса иғтибар булерға тейеш.*

**БАЛАҒАН** (Р.: шалаш; И.: booth; Т.: kulübe) *и. диал.*

**1.** Ҡыуыш. □ Шалаш. *Балағанда йоҡлап йөрөү.*

**2.** Таҡта аласыҡ. □ Дощатый домик. *Йәй көнө аш-һыуҙы балағанда әҙерләү.*

**3.** Бәләкәй генә насар өй. □ Маленький домик. *Балағанда йәшәп ятыу.*

**БАЛАҒАР** [рус. *балагур*] (Р.: балагур; И.: merry maker; Т.: şakacı) *и. һөйл.*

Шаяртырға яратыусы, күңелсәк кеше. □ Балагур. *Эй балағар ҙа инде.*

**БАЛАҒАС I** *и. диал. ҡар.* **солоҡ 1.** *Балағастан бал алыу.*

**БАЛАҒАС II** *с. диал. ҡар.* **бәләкәс.** *Балағас ҡына бер бала.*

**БАЛАҒА УҘЫУ (балаға уҙ-)** *к. ҡар.* **балаға ҡалыу.** *Балаға уҙғас та, табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.*

**БАЛАҒОС** *и. диал. ҡар.* **балагүс.**

**БАЛ АҒЫҘЫУ (бал ағыҙ-)** (Р.: выкачивать мёд; И.: pump honey; Т.: bal sağmak) *к. диал.*

Кәрәҙҙән бал алыу. □ Выкачивать мёд. *Ҡортсолар бал ағыҙырға йыйыналар.*

**БАЛА ИТӘК (итәге)** *и. ҡар.* **балитәк.** *Бала итәкле күлдәк тектереү.*

**БАЛА ИНӘҺЕ БУЛЫУ (бала инәһе бул-)** (Р.: стать матерью; И.: become a mother; Т.: anne olmak) *к. диал.*

Әсә булыу. □ Стать матерью. *Бала инәһе булғас, әбейҙәрҙе саҡырып алаһың.*

**БАЛА ЙӨНӨ** (Р.: пушок на теле ребёнка; И.: baby fluff; Т.: ince tüy) *и.*

**1.** Яңы тыуған баланың тәнен ҡаплап алған йөн. □ Зародышевый пушок, покрывающий тело ребёнка; щетинка.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, әгәр ауырлы ҡатын эткә йәки бесәйгә типһә, бала йөнлө булып тыуа. □ Волосы на теле ребёнка, щетинка *(по поверьям, если беременная женщина пнула кошку или собаку, ребёнок родится волосатым).*

**БАЛА ЙЫЛҒА** (Р.: ручеёк; И.: streamlet; Т.: derecik) *и. диал.*

**1.** Бәләкәй йылға. □ Ручеёк. *Бала йылғала туҡтап, һыу эсеп алдыҡ.*

**2.** Шишмә. □ Родник. *Бала йылға сыҡҡан ерҙә һыу бик һалҡын.*

**БАЛА КЕНДЕГЕ** (Р.: пупок новорождённого; И.: navel; Т.: göbek) *и.*

**1.** *ҡар.* **кендек.**

**2.** *миф.* Мифологияла хужаһын һаҡлау көсөнә эйә тип һаналған бала кендеге. □ В мифологии пупок, пуповина связаны с обережной и продуцирующей функцией. ■ *Китап эсендә йөрөттөм баламдың*

*кендеген. Һакланым, ул да баланы һаклай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА КИЛТЕРЕҮ (бала килтер-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бала табыу.** *Бала килтергән ҡатын.*

**БАЛА КҮҘӘНӘКТӘР** (Р.: клетки дочерние; И.: nascent cells; Т.: yavru hücreler) *и.*

Ҡатарланған сағында яңы ғына бүленеп сыҡҡан күҙәнәктәр. □ Клетки дочерние. *Бала күҙәнәктәр бүленеп сыҡҡан.*

**БАЛА КҮЛДӘГЕ** (Р.: рубашка новорождённого; И.: baby shirt; Т.: bebeğin gömleği) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, үҙенә һаҡсыл ҡараш талап иткән, яңы тыуған балаға тәғәйенләп тегелгән күлдәк. Мифологияла баланың тәүге күлдәге уның ғүмерен, яҙмышын билдәләүсе бер предмет итеп ҡабул ителә. □ По представлениям, рубашка новорождённого, требующая к себе бережливого отношения. ■ *Бала күлдәген әйләндереп йыуырға, төнгә урамға ҡалдырырға ярамай, юҡһа бала ауырый.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА КҮРЕНЕҮ (бала күрен-)** (Р.: родиться; И.: be born; Т.: doğmak) *и. һөйл.*

Бала донъяға килеү. □ Родиться. *Бала таңда күренде.*

**БАЛА КҮРЕҮ (бала күр-)** (Р.: обряд посещения новорождённого; И.: traditional baby feast; Т.: bebek ziyareti) *и. этн.*

Яңы тыуған баланы туғандарының, яҡындарының, күршеләренең ҡотларға килеүе менән бәйле йола. □ Обряд посещения родными, близкими, соседями новорождённого и роженицы с поздравлениями. *Туғандар бала күрергә килгән.*

**БАЛА КҮРПӘ** (Р.: шуба, сшитая из лоскутков лисьих шкур; И.: sort of a fur coat; Т.: kürk türü) *и. диал.*

Төлкө тиреһе босҡағынан тегелгән әбейҙәр туны. □ Шуба, сшитая из лоскутков лисьих шкур для старух. *Әбей бала күрпә кейеп алған.*

**БАЛАҠ (балағы)** [боронғо төрки *бағалаҡ* 'балтыр'] (Р.: штанина; И.: trouser leg; Т.: baldırak) *и.*

Салбар, ыштандың төбөнән түбәнге яғы. □ Штанина. *Салбар балағы. Киң балаҡ. Балаҡты төрөп ҡуйыу. Балаҡты ҡыҫҡартыу.* ■ *Ана Үмәр ҡарт өҫтөнә кәзәкей, бүрек кенә кейгән дә, аҡ ыштанының балаҡтарын өлтәңләтеп, ҡунаҡтарға ҡаршы сыҡты.* Һ. Дәүләтшина. *Кәкре танаулы балыҡсы, ыштан балағын һыҙғанып, ҡармағына тотондо.* Ә. Бикчәнтәев.

♦ **Балаҡ буйы** бик бәләкәй *(балаға ҡарата).* □ Очень маленького роста *(о ребёнке). Балаҡ буйы балаға кеше ат тотторамы?*

**БАЛА ҠАБЫ** *и. диал. ҡар.* **һуңғылыҡ.** ■ *Бала ҡабын киптереп, һандыҡ төбөнә һалып ҡуябыҙ.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛА ҠАҘАН** (Р.: котелок; И.: pot; Т.: pot) *и.*

Бәләкәй ҡаҙан. □ Котелок. *Бала ҡаҙанда аш бешереү.*

**БАЛАҠАЙ** *и. ирк. ҡар.* **бала 2.** *Кейәү балаҡай. Килен балаҡай.* ■ *[Тәнзилә әбей – Сәғиҙәгә:] Балаҡайым, берүк ураҡҡа тотонма, йә яҙатайым бармағыңды ҡырҡып ебәрерһең.* М. Тажи.

**БАЛА ҠАПСЫҒЫ** *и. диал. ҡар.* **һуңғылыҡ.** *Бала ҡапсығын киптереп һаҡлау.*

**БАЛА ҠАРАУ (бала ҡара-)** (Р.: ухаживать за ребёнком; И.: look (after); Т.: çocuğa bakmak) *ҡ.*

**1.** Балаға күҙ-ҡолаҡ булыу, тәрбиәләү-ашатыу. □ Присматривать, ухаживать за ребёнком. *Бала ҡарарға ҡәйнәм килде.*

**2.** Бала тәрбиәләү. □ Воспитывать ребёнка. ■ *Әле йәш ғаилә Өфөлә йәшәй, Нил эшләп йөрөй, Рәсимә өйҙә бала ҡарай.* «Юшатыр», 25 ғинуар 2011.

**БАЛА ҠАРАУСЫ** (Р.: няня; И.: nanny; Т.: dadı) *и.*

Билдәле хаҡҡа ялланып балаға күҙ-ҡолаҡ булып, уны тәрбиәләп, ашатып тороусы. □ Няня. *Бала ҡараусы булып эшләү.* ■ *Оҙаҡ ултырманылар, һаман табыш, килем хаҡында гәпләшә-гәпләшә, бала ҡараусы*

*менән хушлашырға ла онотоп, сығып киттеләр.* Н. Игеҙйәнова.

**БАЛА ҠАРШЫЛАУ (бала ҡаршыла-)** (Р.: ритуалы магической встречи новорождённого повитухой; И.: kind of ethnographic rite; Т.: bir etnografik tören) *ҡ. этн.*

Кендек инәһенең бала тыуҙырыу менән бәйле атҡарылған эш-хәрәкәте. □ Ритуально-магический сценарий родов новорождённого повитухой. ■ *Бала ҡаршылау йолаһы үҙе өс өлөштән тора.* Ф. Хисамитдинова.

**БАЛАҠАС I** *и. ирк. ҡар.* **бала 1.** ■ *[Зәлифә — Таһира еңгәһенә:] Әйҙә, Заһит ағайым ҡайтҡас, ҡартәсәйем уны уҡытһын әле балаҡасты.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЛАҠАС II** *и. диал. ҡар.* **йәлдәү.** *Мурҙаның балаҡасын имгәткәндәр.*

**БАЛА ҠАТАЙ** (Р.: название башкирского рода; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ырыуының бер өлөшө. □ Бала-катай *(название рода башкир катайцев). Бала ҡатай ырыуы башҡорттары.*

**БАЛА ҠОЙОНДОРОУ (бала ҡойондор-)** (Р.: обряд первого купания ребёнка; И.: kind of a traditional rite; Т.: bebeğin ilk banyosu) *ҡ. этн.*

Яңы тыуған баланы ҡойондороу йолаһы. □ Обряд первого купания ребёнка. *Баланы ҡойондороу йола буйынса башҡарылырға тейеш.*

**БАЛА ҠОРТ** (Р.: отроек; И.: swarm; Т.: oğul) *и.*

Йәш күс. □ Отроек. *Бала ҡорттар айырылып сыға башлай.*

**БАЛА ҠОТЛАУ (бала ҡотла-)** *ҡ. ҡар.* **бала күреү.** *Бала ҡотларға килеү.*

**БАЛА ҠОТО** (Р.: дух ребёнка; И.: spirits of children; Т.: çocuk ruhu) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, тағы ла балалар йәнен саҡырыусы, үҙенә тартыусы, йәшәү көсө биреүсе бала. Ошондай бала тыуғас, ғаиләлә балалар ишәйә. □ Ребёнок, приносящий, призывающий, притягивающий жизненную силу, души детей. После рождения такого ребёнка в семье появляются и другие дети. ■ *Өләсәйең һине бала ҡото тине, һинән һуң ағайыңдың да, беҙҙең дә балалар үлмәне.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛАЛАЙКА** [рус.] (Р.: балалайка; И.: balalaika; Т.: balalayka) *и.*

Рус халыҡ ҡыллы музыка ҡоралы. □ Балалайка. / Балалаечный. *Балалайкала уйнау.* ■ *Был йылдарҙа, ысынлап та, үҙендә йәшлек теремеклеге тойған Иҙрис ҡарт балалайкала бик килештереп уйнаны.* З. Биишева.

**БАЛАЛАЙКАСЫ** (Р.: балалаечник; И.: balalaika player; Т.: balalaykacı) *и.*

Балалайкала уйнаусы. □ Балалаечник. *Балалайкасы сәхнәгә сыҡты.*

**БАЛАЛАНЫУ (балалан-)** (Р.: вести себя как ребёнок; И.: fall into one's second childhood; Т.: çocuk gibi davranmak) *ҡ.*

Балаларса ҡыланыу, үҙеңде бала кеүек тотоу. □ Впадать в ребячество; вести себя как ребёнок. *Балаланып һикереп йөрөмә, һин бит хәҙер еткән ҡыҙ.*

**БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ** (Р.: детский сад; И.: kindergarten; Т.: çocuk yuvası) *и.*

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү, белем биреү учреждениеһы. □ Детский сад. *Ғаилә тибындағы балалар баҡсаһы.* ■ *Баланы балалар баҡсаһына биргәнгә тикләм бында эшләрһегеҙ.* Х. Тапаҡов.

**БАЛАЛАР БҮЛМӘҺЕ** (Р.: детская комната; И.: nursery; Т.: çocuklar odası) *и.*

**1.** Балаларға йоҡлар, уйнар өсөн тәғәйенләнгән бүлмә. □ Детская (комната). *Балалар бүлмәһенә йыһаз һатып алыу.*

**2.** Театр, сауҙа үҙәктәрендә баланы ваҡытлыса ҡалдырып тороу урыны. □ Детская комната *(в театрах, торговых центрах). Балалар бүлмәһендә уйнау.*

**3.** Полициялағы (элекке милициялағы) педагогик хеҙмәт күрһәтеү бүлеге. □ Детская комната полиции. *Балалар бүлмәһендә иҫәптә тороу.*

**БАЛАЛАР ЙОРТО** (Р.: детский дом; И.: children's home; Т.: yetiştirme yurdu) *и.*

Етем балаларҙы дәүләт ҡарамағына алып тәрбиәләү учреждениеһы. □ Детский дом. *Балалар йорто асыу. Балалар йортона*

*ярҙам күрһәтеү. Балалар йортонда сығыш яһау.*

**БАЛАЛАРСА** (Р.: по-детски; И.: as a child; Т.: çocuk gibi) *р.*

Балаларға хас. □ По-детски. *Балаларса ҡыланыш.* ■ *Шундай кеше йәнле ул Сибай Дауытов. эш үҙ тураһында булғанда. балаларса ярҙамһыҙ ҡала, бер нәмә лә эшләй алмай ине.* Б. Бикбай.

**БАЛАЛАТЫУ (балалат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **балалау.** *понуд. от* **балалау.** *Бесәйҙе балалатыу.*

**БАЛАЛАУ I (балала-)** (Р.: рожать; И.: kitten; Т.: eniklemek) *ҡ.*

**1.** Бала килтереү *(ҡайһы бер хайуандарға ҡарата).* □ Рожать; котиться *(о кошке, зайчихе)*; пороситься *(о свинье). Суҡа балалаған. Бесәй балаларға йөрөй.*

**2.** *диал. ҡар.* **бәрәсләү.** *Һарыҡ балалаған.*

**3.** *диал. ҡар.* **бала табыу.** *Балаларға йөрөү.*

**БАЛАЛАУ II (балала-)** (Р.: рассортировка зерна веялкой; И.: sorting (out) by a winnower; Т.: kalburdan geçirmek) *ҡ. диал.*

Елгәргестән үткән ашлыҡтың ҡолаҡҡа айырылыуы. □ Рассортировка зерна веялкой. *Ашлыҡ балалай.*

**БАЛАЛЫ** (Р.: имеющий детей; И.: having a baby; Т.: çocuklu) *с.*

Балаһы булған. □ Имеющий детей, ребёнка. *Балалы ҡатын. Күп балалы ғаилә.* ● *Балалы йорт — баҙар.* Әйтем.

**БАЛАЛЫҠ (балалығы)** (Р.: детство; И.: childhood; Т.: çocukluk) *и.*

**1.** Бала саҡ. □ Детство, младенчество. / Детский, младенческий. *Балалыҡ осоро. Балалыҡ йылдарын һағыныу.* ■ *Ағымдағы йылдың Ғаиләгә социаль ярҙам йылы тип иғлан ителеүе ошо юҫыҡта әҙмә-әҙлекле эш алып барылыуы, дәүләт ғаилә институтын, әсәлекте, балалыҡты ҡурсалауы хаҡында һөйләй.* Г. Балтабаева.

**2.** Балаларға хас холоҡ. □ Ребячество, детская наивность. *Балалыҡ күрһәтеү. Ташла шул балалығыңды. Балалыҡтан сыға алмау.* ■ *Ә балалыҡ менән белмәгәнмен мин һуғыштың уйын түгелен.* Ә. Атнабаев.

**3.** *диал. ҡар.* **һуңғылыҡ.** *Бала ауырымаһын тип, балалыҡты йыуып, киптереп һаҡлайҙар.*

**БАЛАЛЫҠҠА АЛЫУ (балалыҡҡа ал-)** *ҡ. ҡар.* **уллыҡҡа алыу.** *Балалыҡҡа алыу сере.*

**БАЛАЛЫ ӨЙРӘК (өйрәге)** *и. диал. ҡар.* **балан ирәк.**

**БАЛАМУТ** [монг. *balamut*] (Р.: баламут; И.: troublemaker; Т.: sorun çıkaran kimse) *и. диал.*

Донъя бутаусы, ҡотҡо һалыусы, ҡотҡосо. □ Баламут. *Холҡо шундай баламут инде.*

**БАЛАМУТЛАНЫУ (баламутлан-)** (Р.: баламутить; И.: troublmake; Т.: ortalığı karıştırmak) *ҡ.*

Баламут булып, донъя бутап, ҡотҡо һалып йөрөү. □ Баламутить.

**БАЛАН** [боронғо ҡыпсаҡ *балан* 'балан'] (Р.: калина; И.: arrowwood; Т.: kartopu) *и. бот.*

**1.** Аҡ сәскә атып, ваҡ ҡына әсе ҡыҙыл емеш бирә торған ҡыуаҡ. □ Калина. / Калиновый (лат. *Viburnum). Балан ҡыуағы. Балан сәскәһе.* ■ *Аҡ сәскә ата балан. ҡүмелгәс гөлгә ялан.* Р. Янбулатова. *Яҙғы урман. Өйкөм балан. Сәскәләре ап-аҡтан.* Г. Юнысова.

**2.** Шул ағастың емеше. □ Калина *(плод этого дерева). Балан ҡағы. Балан һуты. Балан ҡыуағы. Баландан бәлеш бешереү.* ■ *Бына тиҙҙән ҡуянтубыҡ сығыр, йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, көпшә шытыр, унан муйыл, ҡарағат, ҡымыҙлыҡ етешер, улар бөтөүгә бөрләгән, балан өлгөрөр.* З. Биишева.

**3.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, насар күҙтәрҙе, ауырыуҙарҙы ҡыуыу көсөнә эйә булған магик емеш. □ Калина *(мифологизированная ягода, применяемая в отгонной магии).* ■ *Тимрәү ҡалҡһа, балан менән һыҙғандар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛАНАН ҠАЛЫУ (баланан ҡал-)** *ҡ.*

**1.** *ҡар.* **бала төшөү.**

**2.** *ҡар.* **аҡ биҙәү.**

**3.** *кар.* **ырыуҙан ҡалыу.** ■ *Баланан ҡалғаныма ла күп ваҡыт үтте инде.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛАНАН ҠОТОЛОУ (баланан ҡотол-)** (Р.: родить; И.: give birth; Т.: doğurmak) *ҡ.*

**1.** Бала табыу. □ Родить, разрешиться от бремени. *Ҡатын баланан ауыр ҡотолдо.*

**2.** Баланан азат булыу. □ Избавиться от ребёнка. *Йәш әсә балаһынан нисек ҡотолорға белмәне, башына төрлө уйҙар килде.*

**БАЛАН БАРМАҠ (бармағы)** *и. диал. кар.* **балан ирәк.**

**БАЛАН ИРӘК (ирәге)** (Р.: название указательного пальца при игре в считалки на пальцах; И.: name of the index finger; Т.: işaret parmağı) *и.*

Һуҡ бармаҡтың бармаҡ һанап уйнағанда әйтелә торған исеме. □ Название указательного пальца при игре в считалки на пальцах.

**БАЛАН ЙӨРӘК (йөрәге)** *и. диал. кар.* **балан ирәк.**

**БАЛАНЛЫҠ (баланлығы)** (Р.: калинник; И.: arrowwood growth; Т.: kartopu) *и.*

Балан күп үҫкән урын. □ Заросли калины, калинник. *Баланлыҡҡа килеп сығыу.*

**БАЛАН ӨЙРӘК (өйрәге)** *и. диал. кар.* **балан ирәк.**

**БАЛАН ӨЙӘК (өйәге)** *и. диал. кар.* **балан ирәк.**

**БАЛАН ӨРӘК (өрәге)** *и. диал. кар.* **балан ирәк.**

**БАЛАНС I** [рус. < фр. *balance* 'үлсәү'] (Р.: баланс; И.: balance; Т.: denge) *и.*

**1.** Тигеҙлек, тигеҙләнеш. □ Баланс *(равновесие).* / Балансовый. *Баланс тотоу.*

**2.** *Нимәләрҙеңдер* бер-береһенә тулыһынса тап килеүе. □ Баланс *(количественное выражение отношений между сторонами, которые должны уравновешивать друг-друга). Һорау һәм тәкдимдең балансы. Тәбиғәт балансын һаҡлау.*

**3.** *икт.* Керем һәм сығымдың сағыштырма бирелеше. □ Баланс *(сравнительный итог прихода и расхода). Йыллыҡ баланс. Сауҙа балансы. Баланс сығарыу. Баланс сығарылыу.*

**4.** *Нимәнеңдер* етештерелеүе, кереме һәм ҡулланылыуы, сығымы араһындағы нисбәте, уларҙың сағыштырмаса һөҙөмтәһе. □ Баланс *(количественное выражение отношений, характеризующих какое-л. изменяющееся явление, процесс). Һыу, энергетика, йылылыҡ балансы.*

**5.** *Ниндәйҙер* предприятие, учреждение ҡарамағында, иҫәбендә булған аҡса, малмөлкәт. □ Баланс *(средства, находящиеся в распоряжении какого-л. предприятия, учреждения, на его счёте). Балансҡа алыу, яҙыу, ҡабул итеү. Баланстан сығарыу, алыу. Институттың балансында торған бина. Актив баланс.*

**БАЛАНС II** [рус.] (Р.: баланс; И.: kind of timber; Т.: kereste türü) *и. махс.*

Ҡағыҙ һәм целлюлоза етештереү өсөн ҡыҫҡа бүрәнә рәүешендә әҙерләнгән ағас материалы. □ Баланс *(брёвна определённых размеров, используемые для производства целлюлозы и бумаги).*

**БАЛАНСИР** [рус. < фр. *balancier* 'көйәнтә'] (Р.: балансир; И.: balancing piece; Т.: balansiye) *и.*

**1.** Арҡан буйлағанда тигеҙлекте һаҡлау өсөн ҡулланылған оҙон ҡолға. □ Балансир *(шест).* / Балансирный.

**2.** Машиналарҙа күсәр тирәләй бәүелмәле хәрәкәт яһап, көс, көсөргәнеш тыуҙырыу өсөн булған ике яҡлы һалмауыр. □ Балансир *(рычаг).*

**3.** Сәғәттә маятник хеҙмәтен үтәгән төп көйләгес. □ Балансир *(деталь часового механизма).*

**БАЛАН ЭЙӘК (эйәге)** *и. диал. кар.* **балан ирәк.**

**БАЛА ӨЛӨШӨ** (Р.: доля ребёнка; И.: child's share; Т.: çocuk payı) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, ауырлы ҡатынды һыйлағанда ҡарындағы балаға тип тәҡдим ителгән, яҙмышына тәьҫир итә торған өҫтәмә өлөш, юғиһә бала өлөшһөҙ, ҡотһоҙ була, ти. □ Доля ребёнка; по поверьям баш-

кир, когда угощаешь беременную женщину, надо дать и долю ребёнка, иначе он будет бездольным, обделённым, неудачливым. ■ *Бала өлөшөн бирмәһәң, бала өлөшһөҙ, ҡотһоҙ була.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛАПАН I** (Р.: птенец беркута, ястреба; И.: saker falcon's nestling; Т.: kaya kartalının yavrusu) *и. зоол.*

**1.** Бөркөт, ҡарсыға кеүек ҡоштарҙың иң ныҡлы, көслө балаһы. □ Птенец беркута, ястреба ***(самый сильный и крупный)*** (лат. *Aquila chrysaetos*).

**2.** *диал.* Йыуантыҡ кеше. □ Толстяк.

**3.** *миф.* Көс һәм бөйөклөк символы. □ Символ силы и могущества.

**БАЛАПАН II** (Р.: грудной ребёнок; И.: infant; Т.: bebek) *и. диал.*

**1.** Бәпес, имсәк бала. □ Грудной ребёнок.

**2.** Сабый. □ Младенец.

**БАЛАПАН III** (Р.: восьмушка; И.: the eighth part; Т.: sekizde bir) *и. диал.*

Әсмуха. □ Восьмушка. *Бер балапан сәй алдым.*

**БАЛАПАН IV** *с. диал. ҡар.* **тос.** *Балапан башаҡтар.*

**БАЛА-САҒА** (Р.: дети; И.: children; Т.: çocuklar) *и. йыйн.*

Күмәк балалар. □ Ребята, дети, детвора. *Бала-саға тауышы.* ■ *Шаулаша-көлөшә оҙаҡ итеп, кинәнеп һыу инделәр, бала-саға һымаҡ сумып уйнанылар...* Р. Байымов. *Миңлекәй анау бала-сағаны уҡытырға урынлаштырайым тип киткәндән ҡайтканы юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЛА-САҒАЛЫ** (Р.: многодетный; И.: having many children; Т.: çok çocuklu) *с.*

Бала-сағаһы күп булған. □ Многодетный, со многими детьми, с детворой. *Бала-сағалы ғаилә.*

**БАЛА САЙЫНДЫРЫУ (бала сайындыр-)** *к. диал. ҡар.* **бала ҡойондороу.**

**БАЛА САҠ (бала сағы)** (Р.: детство; И.: childhood; Т.: çocukluk (çağı) *и.*

Кеше ғүмеренең үҫмер йәшенә еткәнгә тиклемге осоро. Ғүмер циклдарының береһе. □ Детство. ■ *Ваҡыт машинаһы булһа ине, бала саҡҡа сәфәр ҡылһа ине.* М. Ямалетдинов.

**БАЛА СЕБЕШ** *и. диал. ҡар.* **себеш I.**

**БАЛА СЕПЕЙ** *и. диал. ҡар.* **себеш I.**

**БАЛА-СУЛА** *и. диал. ҡар.* **бала-сага.** *Бала-сула ҡайҙан килеп тулды әле?*

**БАЛА-СҮРӘ** *и. диал. ҡар.* **бала-сага.**

**БАЛА СЫҒАРЫУСЫ ҠОШТАР** (Р.: птицы птенцовые; И.: altricial birds; Т.: anne yardımına muhtaç yavru) *и. зоол.*

Балалары йөнһөҙ, зәғиф һәм һуҡыр тыуа, үҫеп еткәнсе ата-инәләре аҙыҡ ташып ашата торған ҡоштар. □ Птицы птенцовые (лат. *Nidicolae*).

**БАЛАҪ** [фарс. پلاس] (Р.: палас; И.: carpet; Т.: halı) *и.*

**1.** Йөндән йәки сепрәктән ҡалын итеп һуҡҡан урын-ер ҡаралдыһы. □ Палас; тканый ковёр. / Ковровый. *Йөн балаҫ. Сепрәк балаҫ. Аҫалы балаҫ. Буй(лы) балаҫ. Иҙән балаҫы. Балаҫ һуғыу. Балаҫ йәйеү. Балаҫ биҙәге.* ■ *Музыка яҙыуҙы мин келәм, балаҫ һуғыу эше менән дә сағыштырыр инем.* Л. Исмәғилева. *Хәҙер ауылда уның [Сәгүрә] шикелле оҫта итеп балаҫ, шаршау, таҫтамал, һөлгөләр һуғыусы башҡа берәү бармы?* З. Биишева. *Бер заман бөтә баҫыу, бик ҙур ҡыҙыл балаҫ йәйеп ҡуйған төҫлө, ҡып-ҡыҙыл сәскә булып торҙо.* Ә. Вәли.

**2.** *диал.* Сепрәк балаҫ. □ Тряпичный самотканый половик. ■ *Шулай уҡ һике өҫтөнә сепрәк балаҫ йәйелгән, бер-ике мендәр менән урын-ер нәмәләре лә күренә.* Б. Бикбай.

**БАЛА ТАБЫУ (бала тап-)** (Р.: рожать; И.: give birth (to); Т.: doğurmak) *к.*

Донъяға килтереү, тыуҙырыу. □ Рожать. // Роды. ■ *Ҡатыны бала тапҡанда, ир осло әйберҙәр — бысаҡ, ҡайсы, һәнәк — тоторға тейеш түгел.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА ТАБЫУ ЙОРТО** (Р.: родильный дом; И.: maternity hospital; Т.: doğumevi) *и.*

Ҡатындарға бала тыуҙырырға һәм бала тапҡандан һуң медицина ярҙамы күрһәтеүгә тәғәйенләнгән дауалау-профилактика йорто. □ Родильный дом. ■ *Бала табыу йортонда, янында табип, шәфҡәт туташта-*

*ры барҙа, ул [йәш әсә] бала ҡарауҙың бар ауырлығын тоймай әле.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 9, 2010. *Бала табыу йортоноң баш табибы уны кабинетына саҡыртты.* Х. Тапаҡов.

**БАЛА ТАБЫУСЫ** (Р.: роженица; И.: woman in labor; Т.: doğum yapacak kadın) *и.*

Бала тыуҙырыусы йәки яңы ғына тыуҙырған ҡатын. □ Роженица.

**БАЛАТАШ** (Р.: магический дождевой камень; И.: special ritual stone; Т.: sihirli taş) *и. миф.*

Ямғыр йәки ҡояш саҡырғанда ҡулланылған таш. □ Магический камень, с помощью которого вызывают дождь или солнце. ■ *Балаташҡа һуҡһаң, ямғыр яуа.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА ТАШЛАУ (бала ташла-)** *к. диал. ҡар.* **бала төшөү.**

**БАЛАТ БАШЫ** [рус. *полати*] (Р.: пространство между печкой и стеной; И.: the space between the stove and the wall; Т.: soba ile duvar arasında boşluk) *и. диал.*

Мейес менән стена араһына таҡта түшәлеп эшләнгән урын. □ Пространство между печкой и стеной, застиланное доской.

**БАЛА ТЕЛӘҮ (бала телә-)** (Р.: обряды, направленные на наделение бесплодной женщины ребёнком; И.: sort of ethnographic rite; Т.: bir etnografik tören) *к. этн.*

Түлһеҙ ҡатынға бала һорау йолаһы. □ Обряды, направленные на наделение бесплодной женщины ребёнком. ■ *Балаһыҙ ҡатынды күп бала тапҡан ҡатын ҡәбере тирәләй йөрөтөп бала теләтәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА ТЕШ** *и. диал. ҡар.* **бала теше.**

**БАЛА ТЕШЕ** (Р.: молочные зубы; И.: milk teeth; Т.: süt dişi) *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **имсәк теше.**

**2.** *миф.* Тәндең мифлаштырылған өлөшө; һөт теше, имсәк теше. □ Молочные зубы; мифологизированная часть тела. ■ *Бала теше төшһә, икмәккә төрөп этҡә бирәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА ТӨШ** (Р.: предобеденное время; И.: prelunch time; Т.: öğle yemeğinden önceki vakit) *и. диал.*

Төш алды. □ Предобеденное время. *Ҡояш тауҙан яҡиты уҡ күтәрелеп, бала төш етеп килә ине инде.*

**БАЛА ТӨШӨРӨҮ (бала төшөр-)** (Р.: прерывание беременности; И.: termination of pregnancy; Т.: çocuk düşürme) *к.*

Йөклөлөктән арыныу; бала алдырыу. □ Прерывать беременность. // Прерывание беременности. ■ *Ҡатын-ҡыҙ бала төшөргәндән һуң борсолмаһа ла, барыбер ул рухи йәрәхәт ала.* «Йәшлек», 24 июнь 2008.

**БАЛА ТӨШӨРТӨҮ (бала төшөрт-)** *к. ҡар.* **бала төшөрөү.**

**БАЛА ТӨШӨҮ (бала төш-)** (Р.: выкидыш; И.: miscarriage; Т.: çocuk düşürme) *к.*

Баланың яралғы хәлендә үлеүе. □ Выкидыш. ■ *Иң башта әсә гөманлылығына бәйле ҡатмарлы борсолоуҙар кисерә: бала төшөп ҡуймаһын, етлекмәй (ваҡытынан алда) йә ауырыу булып тыумаһын тип туҡтауһыҙ хафалана.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 9, 2010.

**БАЛАУЫҘ** [*бал* һәм дөйөм төрки *оғуз* 'ыуыҙ'] (Р.: воск; И.: wax; Т.: balmumu) *и.*

**1.** Умарта ҡортоноң балға кәрәҙ яһаған матдәһе. □ Воск. / Восковой. *Кәрәҙле балауыҙ. Табаҡлы балауыҙ. Тома балауыҙ. Балауыҙ шәм.* ■ *Бында шулай уҡ егерменсе йылдарҙа балауыҙ валиктарға яҙып алынған башҡорт халыҡ музыкаһы өлгөләрен күсереп яҙыу буйынса бик ентекле эш башҡарылды.* Р. Шәкүр.

**2.** Кәрәҙ. □ Вощина. *Балауыҙ сығарыу предприятиеһы.*

**БАЛАУЫҘ БИҘҘӘРЕ** (Р.: железы восковые; И.: wax producing glands; Т.: balmumu bezleri) *и.*

Күп кенә бөжәктәрҙә балауыҙ айырып сығара торған айырым биҙҙәр. □ Железы восковые. ■ *[Бал ҡорттары] ҡорһаҡтарындағы алты ҡырлы балауыҙ биҙҙәрен күршеләренекенә тап килтереп тигеҙләйҙәр.* Ф. Исәнғолов.

**БАЛАУЫҘҒАРЫН** *и. диал. кар.* **таҙғарын.**

**БАЛАУЫҘ ИРЕТКЕС** (Р.: приспособление для растапливания воска; И.: appliance for making wax; Т.: balmumunu eritmek için kullanılan cihaz) *и.*

Балауыҙҙы иретеү, һарҡытыу ҡулайламаһы. □ Приспособление для растапливания воска.

**БАЛАУЫҘ КӨЙӘҺЕ** (Р.: моль восковая; И.: moth species; Т.: bal mumu güvesi) *и. зоол.*

Бөтә ер йөҙөндә йәшәй торған, умартасылыҡ короткосо булған ваҡ күбәләк. □ Моль восковая, моль пчелиная (лат. *Galleria melonella*).

**БАЛАУЫҘ ҠАБАРТЫУ (балауыҙ ҡабарт-)** (Р.: подстраивать соты; И.: adjust the cell; Т.: hücre ayarlamak) *к.*

Кәрәҙ үреү. □ Подстраивать соты.

**БАЛАУЫҘ ҠОЙОУ (балауыҙ ҡой-)** (Р.: литьё воска; И.: kind of magic ceremony; Т.: balmumu dökme) *к. миф.*

Ҡурҡҡан кешене имләр өсөн балауыҙ менән ҡот ҡойоу йырымы. □ Литьё воска, магический способ лечения испуга. ■ *Кеше ҡурҡһа, балауыҙ ҡоялар, шуны янсыҡҡа һалып йөрәк янына тағып ҡуялар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛАУЫҘЛАНЫУ (балауыҙлан-)** (Р.: вощиться; И.: be waxed; Т.: mumlanmak) *к.*

**1.** Балауыҙға буялыу. □ Вощиться, быть вощённым.

**2.** Бешә, ҡата башлау *(ашлыҡҡа ҡарата).* □ Поспевать, достигать восковой спелости *(о злаковых). Арыш балауыҙлана башлаған.*

**БАЛАУЫҘЛАУ (балауыҙла-)** (Р.: вощить; И.: wax; Т.: mumlamak) *к.*

Балауыҙлы итеү, балауыҙ һөртөү. □ Вощить. *Ҡағыҙҙы балауыҙлау.*

**БАЛАУЫҘ ҺАРЫ** (Р.: масть лошади; И.: roan; Т.: sarı) *с.*

Йылҡы малының төҫө; тоноҡ һары. □ Палевый, жёлтый как воск *(масть лошади). Балауыҙ һары бейәһе бар.* ■ *Ҡарлуғас төҫлө ҡара ат юҡ, ти, балауыҙ төҫлө һары ат юҡ.* Халыҡ ижадынан.

**БАЛАУЫҘ ҺУҘЫУ (балауыҙ һуҙ-)** (Р.: адаптироваться; И.: adapt (to); Т.: alışmak) *к.*

Бер урында төпләнеп китеү, нығлап урынлашып алыу. □ Обосноваться, адаптироваться. ■ *Кинйәбикә етенсене бөткән Фәниәһен Дәүләкән педучилищеһына алып барҙы. Тик Фәниә бында балауыҙ һуҙа алманы: бөтә фәндәрҙән яҡшы уҡый, ә рус телен тарта алмай.* Н. Мусин. *Ситтә лә балауыҙ һуҙып китә алманы, ахырыһы, был малай. Ней үҙе ҡайтмай, ней киленде ҡайтып алып китмәй.* Ш. Янбаев.

**БАЛАУЫҘ ҺЫҒЫУ (балауыҙ һыҡ-)** (Р.: беззвучно плакать; И.: weep silently; Т.: sessiz ağlamak) *к.*

Йәш түгеү, илау. □ Беззвучно плакать. ■ *Аҙаҡтан ул, тамағыма аш бармай, тип барыһын да бер генә һүҙгә йомғакланы, хатта әҙ генә һүҙгә балауыҙ һығып та алды.* И. Аҡъюлов. *Шулай ҙа төндәрен ҡыҙҙарға белдермәй генә балауыҙ һығып алған саҡтар булғылай әле.* З. Биишева. *Әйҙә, идараға керәйек. Беҙ һалдаттар бит, уйлашайыҡ. Ниңә балауыҙ һығырға?* Х. Ғиләжев. *Ҡыҙыҡай иларға етешкән. Әгәр тартынмаһа, түйғансы балауыҙ һығыр ине.* Яр. Вәлиев.

**БАЛАУЫҘ ҺЫҠҠЫС** (Р.: механизм для получения воска из отходов сот; И.: press for making wax; Т.: balmumu yapımında kullanılan cihaz) *и.*

Ҙур умарталыҡта күп булып тупланған кәрәҙ ташландыҡтарын һығып, умарта балауыҙы алыу машинаһы. □ Механизм для получения воска из отходов сот.

**БАЛА ҮЛТЕРЕҮ (бала үлтер-)** (Р.: детоубийство; И.: infanticide; Т.: çocuk öldürme) *к. юр.*

Бала йәки балаларҙы үлтереү. □ Детоубийство *(убийство детей или ребёнка).*

**БАЛА ҮЛТЕРЕҮСЕ** (Р.: детоубийца; И.: filicide; Т.: çocuk katili) *и. юр.*

**1.** Үҙ балаһын үлтереүсе кеше. □ Детоубийца.

**2.** Баланың ғүмерен ҡыйыусы, үлтереүсе. □ Детоубийца.

**БАЛА ҮҪТЕРЕҮ (бала үҫтер-)** (Р.: воспитывать, растить детей; И.: educate children; Т.: çocuk yetiştirmek) *ҡ.*

Бала бағыу, тәрбиәләү, ҡарау. □ Воспитывать, растить детей.

**БАЛА ХАҠЫ** (Р.: доля ребёнка; И.: child's share; Т.: çocuk kısmeti) *и.*

Баланың һаулығы, сәләмәтлеге, именлеге. □ Доля ребёнка. ■ *Батуҡытҡан кешегә «бала хаҡы» тип йыл да бер күлдәк биреп торғандар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА ҺАҠЛАУ (бала һаҡла-)** (Р.: обряды, направленные на защиту ребёнка от злых сил и сглаза; И.: kind of popular ceremony; Т.: çocuğu koruma törenleri) *ҡ. этн.*

Ышаныуҙар буйынса, баланы яман көстәрҙән, күҙ тейеүҙән һаҡлау йолалары. □ Обряды, направленные на защиту ребёнка от злых сил и сглаза. ■ *Тыуғандан һуң ҡырҡ көнгә тиклем бала һаҡлайҙар. Ен-шайтан алмаштырмаһын, ҡағылмаһын тип уйлағандар.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛА ҺАТЫП АЛЫУ (бала һатып ал-)** *ҡ. этн. ҡар.* **бала һатыу.** ■ *Балалары үлеп торған кешеләр бала һатып алыу йолаһы үткәргәндәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛА ҺАТЫУ (бала һат-)** (Р.: обряд купли-продажи ребёнка; И.: sort of folklore ceremony; Т.: bir etnografik tören) *ҡ. этн.*

Балалары үлеп торған кешеләрҙең яңы тыуған сабыйҙарын һаҡлау маҡсатында үткәрелгән, үҙ балаһын *кемдәндер* «һатып алыу» йолаһы. □ Обряд купли-продажи ребёнка *(проводился в семьях, в которых постоянно умирали дети).*

**БАЛАҺЫҘ** (Р.: бездетный; И.: childless; Т.: çocuksuz) *с.*

Балаһы булмаған. □ Без детей, бездетный. *Балаһыҙ ҡатын. Балаһыҙ ғаилә. Балаһыҙ йорт. Балаһыҙ тормош.* ● *Балаһыҙ ғүмер — һүнгән күмер.* Әйтем. *Балаһыҙ бер илай, балалы ун илай.* Әйтем.

**БАЛАҺЫҘЛЫҠ (балаһыҙлығы)** (Р.: бездетность; И.: childlessness; Т.: çocuksuzluk) *и.*

Бала булмау. □ Бездетность, неимение детей. *Балаһыҙлыҡтан интегеү.* ■ *Әминә белмәйме: балаһыҙлыҡ — ҡатындарҙың ярты үлеме; балаһыҙлыҡ — яҙын сәскә атмау, япраҡ ярмау менән тигеҙ ул.* Ғ. Сәләм.

**БАЛАҺЫНЫУ (балаһын-)** (Р.: чувствовать себя ребёнком; И.: feel as a child; Т.: çocuksulamak) *ҡ.*

Үҙеңде балаға һанау, бала итеп күреү. □ Считать, чувствовать себя ребёнком.

**БАЛАҺЫТЫУ (балаһыт-)** (Р.: считать ребёнком; И.: deem smb a child; Т.: çocuk sanmak) *ҡ.*

Бала итеп ҡарау. □ Считать ребёнком *кого*, обращаться как с ребёнком *с кем. Балаһытып әҙәмгә һанамау.*

**БАЛ АШАМА** (Р.: ритуал чаепития с мёдом перед свадьбой; И.: national tea party ritual; Т.: düğün töreni) *и. этн.*

Туй алдынан ҡыҙҙың әхирәттәрен баллап сәй эсереү йолаһы. □ Ритуал чаепития невесты с подругами перед свадьбой. *Бал ашамаға саҡырыу. Бал ашама үткәрәү.*

**БАЛ АШАУ (бал аша-)** (Р.: ритуал отведывания мёда женихом и невестой; И.: wedding ritual; Т.: düğün töreni) *ҡ. этн.*

Туй йолаһында кәләш менән кейәүгә муллыҡ, байлыҡ, бәхет теләп бал ҡаптырыу. □ Ритуал отведывания мёда невестой и женихом, символизирующий благополучие, достаток, счастье *(в свадебном обряде).*

**БАЛ АШҠАҘАНЫ** (Р.: желудок медовый; И.: honey receptacle; Т.: bal konulan kap) *и. умарт.*

Бал ҡорттарының ҡыҙыл үңәсендә бал йыйыу өсөн хеҙмәт итә торған тоҡсай һымаҡ урын; бында йыйылған балды ул, умартаға ҡайтҡас, кәрәҙгә ҡоҫоп тултыра. □ Желудок медовый *(у пчёл).*

**БАЛА ШӘЛ** (Р.: маленький платок; И.: shawl; Т.: şal) *и.*

**1.** Бәләкәй шәл. □ Маленький пуховый платок.

**2.** *диал.* Яулыҡ. □ Платок.

**БАЛА ӘЖЕМЕГЕ** *и. диал. ҡар.* **һуңғылыҡ.**

**БАЛАЯН** (Р.: второй птенец орла, ястреба; И.: eagle's second nestling; Т.: kaya kartalı gibi kuşların ikinci yavrusu) *и. зоол.*

Бөркөт, ҡарсыға кеүек ҡоштарҙың уртансы балаһы. □ Второй птенец орла, ястреба.

**БАЛА ЯҪТЫҒЫ** *и. диал. ҡар.* **һуңғылыҡ.**

**БАЛАЯТҠЫ** (Р.: матка; И.: womb; Т. rahim) *и. анат.*

Ҡатын-ҡыҙҙың һәм тереләй тапҡан тереклектәрҙең бала ярала торған эске ағзаһы. □ Матка.

**БАЛА ЯТҠЫЛЫҒЫ** *и. ҡар.* **һуңғылыҡ.** ■ *Бала ятҡылығын киптереп бишеккә бәйләһәң, ен-шайтан килмәй.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛБАЛ** [боронғо төрки *балбал* 'һынташ'] (Р.: каменный истукан; И.: stone idol; Т.: put) *и.*

Боронғо төрки халыҡтар һ. б. ҡуйған кеше һынындағы таш. □ Балбал, каменная баба, каменный истукан. ■ *Бик боронғо балбал булып тора .. йәнһеҙ таш һындар.* Ф. Туғыҙбаева.

**БАЛ БАЛЫ** (Р.: медовуха; И.: mead; Т.: bal likörü) *и.*

Ҡорт балынан ҡойолған бал. □ Медовуха.

**БАЛ БОРОУ (бал бор-)** (Р.: выкачивать мёд; И.: pump honey; Т.: bal sağmak) *ҡ. диал.*

Балды кәрәҙҙән айыртыу. □ Выкачивать мёд.

**БАЛҒА** (Р.: кувалда; И.: sledgehammer; Т.: balyoz) *и.*

**1.** Ҙур ауыр сүкеш. □ Кувалда. *Балға һабы.*

**2.** *иҫк.* Айбалта. □ Секира; бердыш.

**3.** *диал.* Бағау. □ Топор с поперечным лезвием *(для выдалбливания колодочных ульев и бортей).*

**4.** *диал.* Сүкеш. □ Молот, молоток.

**5.** *диал.* Салғы сүкеше. □ Молоток для отбивания косы.

**6.** *миф.* Мифологияла һаҡлау көсөнә эйә булған предмет. □ Обережный предмет. ■ *Өй тынысһыҙ булһа, баш осона балға һалып йоҡлайҙар.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛҒАБАШ** (Р.: обыкновенный дубонос; И.: common grosbeak; Т.: bayağı kocabaş) *и. зоол.*

Сыйырсыҡ ҙурлығындағы һирәк осоусы ҡыҫҡа ҡойроҡло, йыуан ауыр кәүҙәле ҡош; ҡалынморон турғай, сүкешбаш. □ Обыкновенный дубонос (лат. *Coccothraustes coccothraustes).* ■ *Ата балғабаштың дөйөм төҫө алһыуыраҡ ерән, суҡыш төптәре, тамағы, ҡанат сиптәре, ҡойроғо ялтыр ҡара.* Э. Ишбирҙин.

**БАЛҒАЖЫ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Меңле ырыуы аймағы. □ Балгажи *(название родового подразделения башкир рода мин).*

**БАЛҒАЛАҠ (балғалағы)** (Р.: чайная ложка; И.: tea spoon; Т.: kaşık) *и.*

Бал, май һ. б. алып ҡаба торған бәләкәй ҡалаҡ. □ Чайная ложка, ложечка. *Көмөш балғалаҡ. Балғалаҡ менән болғатыу.* ■ *Кисен бер балғалаҡ бал һалып, йылы һөт йәки бер стакан үлән сәйе эсегеҙ.* «Йәшлек», 17 март 2009.

**БАЛҒАРАҠ (балғарағы)** (Р.: бражники; И.: the sphinxes (butterfly species); Т.: pul kanatlılar) *и. зоол.*

Һәр ерҙә осрай һәм эңер ваҡытында оса торған, күпселектә матур төҫлө, йыуан кәүҙәле зарарһыҙ эре күбәләктәр; эңер һылыуҡастары. □ Бражник, сфинкс (лат. *Sphingidae). Имән балғарағы. Ҡарағай балғарағы. Ҡуксин балғарағы.*

**БАЛҒАТҮШ** (Р.: наковальня для отбивки косы; И.: anvil; Т.: örs) *и. диал.*

**1.** Салғы сүкеүҙә ҡулланыла торған түш. □ Маленькая наковальня для отбивки косы.

**2.** Мифологияла тимер, ҡорос әйберҙәр төркөмөнә ҡараған бөтә предметтар кеүек, яман көстәрҙән һаҡлау көсөнә эйә. □ Наковальня *(мифологизированный предмет, имеющий обережную силу).*

**БАЛҒАШЫҠ (балғашығы)** *и. диал. кар.* **балғалаҡ.** ■ *Көмөш балғашыҡҡа һалып, һыуһыҙ йоторлоҡ сибәр ҡыҙ кәртә аша һикереп төштө.* И. Ғиззәтуллин.

**БАЛДАҠ I (балдағы)** [боронғо төрки *балдак* 'аяҡ беләҙеге'] (Р.: кольцо; И.: ring; Т.: halka) *и.*

**1.** Бармаҡҡа кейә торған дүңгәләк биҙәүес; йөҙөк. □ Кольцо, колечко. / Кольцевой. *Алтын балдаҡ. Көмөш балдаҡ. Сыңғалы балдаҡ. Һыҙма балдаҡ. Балдаҡ кейеү.* ■ *Икенселәй еңгә тип әйтмәҫһеңме, балдаҡ һорамаҫһыңмы, тип ныҡыша ла шунан, һорамайым, тиһәң генә, аяҡ-кулды сисә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡылыс, бысаҡ кеүек нәмәләрҙең алҡымына кейҙерелә торған ҡоршау. □ Кольцо на мечи и ножах.

**3.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, һаҡлау көсөнә эйә биҙәүес. □ Кольцо, колечко *(мифологизированный предмет, оберег от сглаза).* ■ *Балдаҡ, һырға таҡһаң, күҙ теймәй торғайны.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛДАҠ II (балдағы)** (Р.: голенище; И.: top (of a boot); Т.: çizme koncu) *и. диал.*

**1.** Ҡуныс. □ Голенище. *Был катаның балдағы ла бар.*

**2.** Бейәләй беләҙеге. □ Резинка варежек. *Бейәләйҙең балдағын ҡыҫҡа итмәҫкә кәрәк.*

**БАЛДАҠ АТЫШ** *и. этн. кар.* **йөҙөк атыш.** ■ *«Риүәйәттәр, легендалар» томында уһә Көнһылыу тыуған ауылда балдаҡ атыш уйыны, ат өҫтөнән тәңкәгә атыу ярыштары һәм унда егет менән ҡыҙҙың бер-бер артлы беренселекте алыуҙары бәйнә-бәйнә һөйләп бирелә.* Р. Шәкүр.

**БАЛДАҠ КЕЙҘЕРЕҮ (балдаҡ кейҙер-)** *ҡ. кар.* **балдаҡлау 2.**

**БАЛДАҠЛАНЫУ (балдаҡлан-)** *ҡ. төш. кар.* **балдаҡлау.** *страд. от* **балдаҡлау.** *Балдаҡланған ҡоштар.*

**БАЛДАҠЛАУ (балдаҡла-)** (Р.: снимать кору вокруг ствола дерева; И.: remove rind; Т.: ağacın kabuğunu soymak) *ҡ.*

**1.** Ағас буйға үҫмәһен өсөн ҡабығын түңәрәкләп әрсеү. □ Кольцевать, снимать кору со ствола дерева *(чтобы перестало расти).*

**2.** Ғилми маҡсатта ҡырағай ҡоштарға, балыҡтарға яҙыулы ҡалай кейҙереү. □ Кольцевать, окольцовывать *(птиц, рыб).* // Кольцевание, окольцовывание. *Ҡоштарҙы балдаҡлау. Балыҡтарҙы балдаҡлау.*

**БАЛДАҠЛЫ I** (Р.: с кольцом; И.: with ring; Т.: halkalı) *с.*

Балдағы (I) булған. □ С кольцом. *Балдаҡлы бармаҡ.*

**БАЛДАҠЛЫ II** (Р.: с голенищем; И.: with upper; Т.: üst ile) *с.*

Балдағы (II) булған. □ С голенищем, резинкой. *Балдаҡлы ката. Кейеҙ ката ҡыҫҡа балдаҡлы була. Балдаҡлы бейәләй.*

**БАЛДАҠСЫ I** (Р.: ювелир; И.: jeweller; Т.: kuyumcu) *и.*

Тәңкәнән сүкеп балдаҡ эшләүсе зәргәр. □ Ювелир, специализирующийся на изготовлении колец. *Әүәле һәр ауылда балдаҡсы булған.*

**БАЛДАҠСЫ II** (Р.: шелкопряд кольчатый; И.: butterfly species; Т.: ipekböceği kelebeği) *и. зоол.*

Европала һәм Азияла таралған, ҡарышлауығы ҡуҙы яһай торған төнгө күбәләктәр. □ Шелкопряд кольчатый (лат. *Malacosoma neustria).*

**БАЛДАҠСЫ КҮБӘЛӘК (күбәләге)** *и. зоол. кар.* **балдаҡсы II.**

**БАЛДАҠ ҺАЛЫШ** *и. кар.* **йөҙөк һалыш.**

**БАЛДЫҘ** [боронғо төрки *балтар* 'етлекмәгән нәмә'] (Р.: младшая свояченица; И.: junior sister-in-law; Т.: baldız) *и.*

**1.** Ҡатындың һеңлеһе. □ Младшая свояченица. *Балдыҙға бүләк биреү.* ■ *Балдыҙ тейешле ҡыҙҙар Хажисолтанды келәт тирәһенә ебәрмәнеләр.* Я. Хамматов.

**2.** *диал.* Ҡатындың энеһе (*иренә ҡарата*). □ Младший шурин.

**БАЛДЫҠАЙ** *и. бот. диал. кар.* **туҡранбаш.**

**БАЛДЫР** *и. диал. кар.* **балтыр.**

**БАЛДЫРҒАН** *и. бот. диал. кар.* **балтырған.**

**БАЛ ЕЛПЕТЕҮ (бал елпет-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛЕРИНА** [рус. < ит. *ballerina*] (Р.: балерина; И.: ballet dancer; Т.: balerin) *и.*

Балет артисткаһы. □ Балерина. *Балерина булыу.* ■ *Етмәһә, бер ҡыҙҙың ике туған һеңлеһе балерина ине.* З. Ураҡсин.

**БАЛЕТ** [рус. < фр. *ballett* < ит. *balletto* < *ballare* 'бейеү'] (Р.: балет; И.: ballet; Т.: bale) *и.*

**1.** Театраль бейеү сәнғәте. □ Балет *(вид музыкально-театрального искусства).* / Балетный. *Классик балет. Балет сәнғәте. Балет мәктәбе.*

**2.** Бейеүгә, матур тән хәрәкәттәренә ҡоролған музыкаль спектакль. □ Балет *(вид театрального представления). Балет музыкаһы. Балет ҡарау. «Сыңрау торна» балеты.* ■ *800 урынлыҡ концерт залында бик йыш төрлө мәҙәни саралар үткәрелә, йылына бер нисә тапҡыр балет, операға бушлай билеттар таратыла, күренекле артистар менән осрашыуҙар ойошторола.* Б. Ҡаһарманова.

**3.** Театрҙа ҡуйыу өсөн яҙылған музыкаль әҫәр. □ Балет *(вид музыкального произведения). Балет яҙыу.*

**БАЛЕТМЕЙСТЕР** [рус. < нем. *Ballettmeister*] (Р.: балетмейстер; И.: ballet master; Т.: koreograf) *и.*

Опера һәм опереттала балет, танса, хореография номерҙарының авторы һәм ҡуйыусыһы. □ Балетмейстер. *Балетмейстер булып эшләү.* ■ *Спектаклде ҡуйыу өсөн команда төҙөү ҙә еңелдән түгел: балетмейстер, рәссам, дирижёр һ. б. кәрәк.* Л. Исмәғилева. *Байтаҡ тәжрибә, белем туплаған балетмейстер өсөн дә был халыҡ байрамдары күтәрелмәгән сиҙәм була ала.* «Киске Өфө», № 18, 2008.

**БАЛЕТМЕЙСТЕРЛЫҠ (балетмейстерлығы)** (Р.: балетмейстерство; И.: balletmastership; Т.: koreograf işi) *и.*

Балетмейстер шөғөлө. □ Балетмейстерство. *Балетмейстерлыҡҡа бирелеү.*

**БАЛИҒ** [ғәр. بالغ] (Р.: совершеннолетний; И.: adult; Т.: bülüğ) *с.*

Үҫкән, йәше еткән. □ Совершеннолетний. *Балиғ егет. Балиғ ҡыҙ.* ■ *[Был] һәр балиғ әҙәм, үҙенә ваҡиғ була торған хәлдәрен күреп, фәһемләп, дауа ҡылымағы өсөн, сөнки «серен таңған үлер» тигән мәҡәл мәғлүмегеҙҙер.* М. Аҡмулла.

**БАЛИҒ БУЛЫУ (балиғ бул-)** (Р.: достичь совершеннолетия; И.: become adult; Т.: bülüğa ermek) *ҡ.*

Буй етеү, үҫеп етеү. □ Быть (стать) совершеннолетним, достичь совершеннолетия. // Совершеннолетие. ■ *Емеш балиғ булды. Уға ун өс йәш тулды хәҙер.* З. Биишева.

**БАЛИҒЛЫҠ (балиғлығы)** (Р.: совершеннолетие; И.: full age; Т.: erginlik) *и.*

Балиғ булыу. □ Совершеннолетие. *Балиғлыҡ йәшенә етеү.*

**БАЛИНӘҺЕ БУЛЫУ (балинәһе бул-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бала инәһе булыу.**

**БАЛИТӘК (балитәге)** (Р.: оборка; И.: frill; Т.: farbala) *и.*

Ҡатмар. □ Оборка. ■ *Итәк осондағы балитәктәрҙең бөрөләүе ҡаланыҡынса булмаһа ла, уйып киҫеп ҡуя торған ең төбө урынына башҡортса кештәк ҡуйылһа ла, күлдәк матур булып сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**БАЛИТӘКЛЕ** (Р.: с оборками; И.: frilled; Т.: farbalalı) *с.*

Ҡатмарлы. □ С оборками. *Балитәкле күлдәк.* ■ *Шул саҡ тәңкәле яға, камзул, йәшел төҫтә балитәкле күлдәк кейгән Васбиямал апай. биҙрә сиртеп. сәхнәгә күтәрелде.* «Башҡортостан», 10 ноябрь 2010. *Яулыҡ аҫтына ҡашмау ҡуйып, балитәкле күлдәге өҫтөнән бик матур итеп сигеп, мәрйендәр менән биҙәп эшләнгән түшелдерек кейеп алғас. бөгөн ул [Миңлегөл] бигерәк һылыу күренә.* Н. Мусин.

**БАЛИТӘКЛӘТЕҮ (балитәкләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **балитәкләү.** *понуд. от* **балитәкләү.**

**БАЛИТӘКЛӘҮ (балитәклә-)** (Р.: пришивать оборки; И.: sew frills up; Т.: farbala dikmek) *ҡ.*

Балитәк тегеү. □ Пришивать оборки. *Балитәкләп тегеү.*

**БАЛЙЫ** (Р.: топор с поперечным лезвием; И.: kind of an axe; Т.: balta) *и. диал.*

Бағау. □ Топор с поперечным лезвием *(для выдалбливания корыт, колодочных ульев и бортей).*

**БАЛ КИҪЕҮ (бал киҫ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛКОН** [рус. < ит. *balcone*] (Р.: балкон; И.: balcony; Т.: balkon) *и.*

**1.** Йорттоң өҫкө ҡаттарынан тышҡа сығарып эшләнгән майҙансыҡ. □ Балкон *(площадка, выступающая из наружной стены здания). Тәҙрәле балкон. Балкон ишеген асыу. Балконға сығып ял итеү.*

**2.** Театрҙың уртансы ҡатындағы тамаша урыны. □ Балкон *(зрительное место в среднем этаже театра). Концертты балкондан ҡарау.*

**БАЛКОНЛЫ** (Р.: с балконом; И.: having a balcony; Т.: balkonlu) *с.*

Балконы булған. □ С балконом, имеющий балкон. *Балконлы йорт. Балконлы бүлмә.*

**БАЛҠ (балҡ-балҡ)** (Р.: подражание вспышке яркого света; И.: imitation of sparkling; Т.: pırıl pırıl) *оҡш.*

Көслө яҡтылыҡты белдергән һүҙ. □ Подражание вспышке яркого света. *Балҡ-балҡ итеү. Балҡ итеү. Балҡ-балҡ килеү.*

**БАЛ ҠАЛАС** (Р.: сушки; И.: bread ring; Т.: kurutma) *и.*

Ваҡ керәндил. □ Сушки.

**БАЛ ҠАРАУ (бал ҡара-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛҠАР** (Р.: балкарцы; И.: Balkar; Т.: Balkar) *и.*

Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһында йәшәгән бер халыҡ һәм шул халыҡтың кешеһе *(төрки телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Балкарцы, балкарец. / Балкарский. *Балҡар ҡатыны (ҡыҙы). Балҡар халҡы.*

**БАЛҠАРСА** (Р.: по-балкарски; И.: in Balkar; Т.: Balkarca) *р.*

**1.** Балҡар телендә. □ По-балкарски. *Балҡарса һөйләшеү. Балҡарса йырлау.*

**2.** Балҡар халҡы ғәҙәтенсә. □ По обычаям балкар. *Балҡарса кейенеү.*

**БАЛҠ ИТЕҮ (балҡ ит-)** (Р.: сверкать; И.: sparkle; Т.: pırıl pırıl parlamak) *ҡ.*

Көслө ялтырау, балҡыу. □ Сверкать, сиять; светиться. // Сверкание, сияние. *Йәшен балҡ итеп ҡалды.*

**БАЛҠ КИЛЕҮ (балҡ кил-)** *ҡ. ҡар.* **балҡ итеү.**

**БАЛ ҠОЙОУ (бал ҡой-)** (Р.: ставить на брожение для получения браги; И.: leave for brewing; Т.: fermentasyon) *ҡ.*

Бал (II) әсетергә ҡуйыу. □ Ставить на брожение для получения браги, медовухи.

**БАЛ ҠОРТО** (Р.: пчела; И.: bee; Т.: arı) *и. зоол.*

**1.** Сәскә һутынан бал йыя торған ҡорт. □ Пчела (лат. *Anthophila). Кейек ҡорт. Эшсе ҡорт. Бала ҡорт. Һоро ҡорт. Ҡорт ҡуныу. Инә ҡорт. Ҡорт күсе. Ҡорт ҡаяуы.*

**2.** *миф.* Түллелекте, муллыҡты һынландырған бөжәк. □ Мифологизированное насекомое, символ плодовитости, изобилия. *Урман башҡорттары кейәүгә сыҡҡан ҡыҙға, түлле булһын тип, бер нисә бал ҡорто ояһын биргән булған.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛ ҠОРТО БҮРЕҺЕ** (Р.: волк пчелиный; И.: hornet species; Т.: Avrupa yabanarısı) *и. зоол.*

Бал ҡортон аулай торған һағыҙаҡ. □ Волк пчелиный (лат. *Philanthus triangulum).*

**БАЛҠЫЛДАУ (балҡылда-)** (Р.: сверкать; И.: sparkle; Т.: parlamak) *ҡ.*

Балҡ-балҡ итеү, балҡ-балҡ килеү. □ Сверкать, сиять; светиться. // Сверкание, сияние. *Алыҫта уттар балҡылдай.*

**БАЛҠЫТЫУ (балҡыт-)** (Р.: излучать; И.: radiate; Т.: parıldatmak) *ҡ.*

**1.** Көслө итеп яҡтыртыу, ныҡ ялтыратыу. □ Излучать, испускать свет. *Ҡояш нурын балҡытты.*

**2.** *күсм.* Шатлыҡ, ҡыуаныстан яҡтыртыу *(күҙҙе, йөҙҙө).* □ От радости стать приветливым, весёлым. *Йөҙөн балҡытты.*

**БАЛҠЫУ (балҡы-)** [төрки *балҡы-* ‘балҡыу, ялтырау’] (Р.: сиять; И.: shine; Т.: balkımak) *ҡ.*

**1.** Көслө яҡтырыу, ныҡ ялтырау; балҡ итеү. □ Сиять, блестеть, сверкать, искриться; блистать. // Сияние, сверкание. *Күктә йондоҙҙар балҡый. Йәшен балҡый. Ҡояш нуры балҡый.* ■ *Йондоҙом! Һин һүнмә, балҡы үрҙә.* Т. Ғәниева. *Зөләйха, һин ергә ингән хур ҡыҙы, күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо.* С. Юлаев.

**2.** *күсм.* Шатлыҡ, ҡыуаныстан яҡтырыу *(күҙгә, йөҙгә ҡарата).* □ Сиять, блестеть от радости *(о лице, глазах).* // Сияние, блеск. *Шатлыҡтан йөҙө балҡый. Күҙҙәрендә шатлыҡ балҡый.* ■ *Әммә күп тә үтмәй, уларҙың шатлыҡтан балҡыған йөҙҙәренә ҡараңғылыҡ шәүләһе ята.* М. Хужин.

**БАЛ ҠЫУҒЫС** (Р.: медогонка; И.: honey centrifuge; Т.: bal ekstraktörü) *и. умарт.*

Балды кәрәҙҙән һурҙыра торған ҡулайлама. □ Медогонка.

**БАЛҠЫШ I** (Р.: сияние; И.: radiance; Т.: balkır) *и.*

**1.** *Ниҙәндер* таралған, сағылған сағыу, көслө яҡтылыҡ. □ Сияние, блистание, сверкание, блеск. *Сағыу балҡыш. Ҡояш нуры балҡышы.* ■ *Бына бер сак сәхнә тулып китте. Ундағы балҡыштан, ундағы рәхмәттән, йылы һүҙҙәрҙән, күңел нурынан зал да тотош балҡый башлаған кеүек булды.* Г. Ғиззәтуллина.

**2.** Шатлыҡ, бәхеттән күҙҙең йылтырауы, сырайҙа шатлыҡ сағылышы. □ Сияние, блеск от радости (*о лице*). *Йөҙҙәге балҡыш.*

**3.** *күсм.* Ижади һәләттең юғары кимәле һәм уның сағылышы, талант. □ Гений. ■ *Ҙур талант эйәһе Рәшит Назаровтың шиғри балҡышы үткән быуаттың бер сағыу өнө һәм беҙгә булып яңы заманға күсте.* Ғ. Хөсәйенов.

**БАЛҠЫШ II** (Р.: вспышка; И.: flash; Т.: flaş) *и. техн.*

Фото, кино төшөрөүҙә, техникала ҡапыл яҡтыртыу лампаһы. □ Вспышка. *Балҡыш эшләмәне. Балҡышлы фотоаппарат.*

**БАЛЛ** [рус. < фр. *balle*] (Р.: балл; И.: point; Т.: kuvvet) *и.*

**1.** Берәй тәбиғәт күренешенең көсөн, ҡеүәтен үлсәү берәмеге. □ Балл. / Балловый, -балльный. *Штормдың көсө ун балға етте.*

**2.** Уҡыусының өлгәшеүен һәм тәртибен билдәләй торған цифрлы баһа; отметка. □ Оценка. *Үтә торған балл. Юғары балл. Балл системаһы. Егерме балл йыйыу. Иң юғары балдар суммаһын йыйыу.*

**БАЛЛАДА** [рус. < фр. *ballade* < лат. *ballo* ‘бейейем’] (Р.: баллада; И.: ballad; Т.: balad) *и.*

**1.** Хикәйәт йәки әкиәткә нигеҙләп яҙылған бәләкәй шиғри әҫәр. □ Баллада. / Балладный. *Баллада жанры. Баллада уҡыу.*

**2.** *муз.* Хикәйәләү стилендәге вокал әҫәр төрө. □ Баллада. ■ *Йырҙар, романстар, балладалар, хор, инструменталь һәм симфоник әҫәрҙәр, опера, балет, театр спектаклдәренә музыка — бына уның ижад диапазонын билдәләүсе жанрҙар.* Р. Шәкүр.

**БАЛЛАНДЫРЫУ (балландыр-)** (Р.: делать медовым; И.: make sugary; Т.: ballandırmak) *ҡ.*

Баллыға әйләндереү, баллы итеү. □ Подслащивать мёдом.

**БАЛЛАНЫУ (баллан-)** (Р.: делаться сладким; И.: become sugary; Т.: ballanmak) *ҡ.*

**1.** Баллыға әйләнеү, шәрбәтле булыу. □ Делаться сладким; набирать нектар. *Тәүге ҡырауҙан һуң миләш баллана төшә. Сәскә балланды.*

**2.** Балға буялыу. □ Перемазаться, измазаться мёдом. ● «*Бал, бал*». — *тип кенә ауыҙ балланмай.* Әйтем.

**БАЛЛАСЛЫ** (Р.: с балластом; И.: having ballast; Т.: balastlı) *с.*

Балласы булған. □ С балластом, имеющий балласт. *Балласлы карап.*

**БАЛЛАСТ** [рус. < ингл. *ballast*] (Р.: балласт; И.: ballast; Т.: balast) *и.*

**1.** Ауырлыҡ өсөн һалынған йөк (*карап ауналамаһын, аэростат ҡапыл күтәрелмәһен өсөн*). □ Балласт (*груз, помещаемый на судно, аэростат для регулирования подъёмной способности*). / Балластный, бал-

ластовый. *Балласт аҫыу. Караптың балласт системаһы.*

**2.** *т. юл.* Тимер юлдағы шпал аҫтына һалынған ҡырсын, ҡом. □ Балласт *(галька, песок, положенный под шпалой).*

**3.** *күсм.* Кәрәкһеҙ артыҡ нәмә, кеше. □ Балласт. *Балласт булып тороу.*

**БАЛЛАТЫУ (баллат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баллау.** *понуд. от* **баллау.**

**БАЛЛАУ (балла-)** (Р.: подслащивать мёдом; И.: sweeten with honey; Т.: ballamak) *ҡ.*

Бал ҡушыу, балға болғау. □ Подслащивать мёдом, смешивать с мёдом. *Баллап сәй эсеү. Сәксәкте баллау.* ■ *Бауырһаҡ татлы булыр баллағанда.* М. Аҡмулла.

**БАЛЛИСТИК (баллистигы) I** [рус.] (Р.: специалист по баллистике; И.: ballistics expert; Т.: balistik) *и.*

Баллистика буйынса белгес. □ Специалист по баллистике.

**БАЛЛИСТИК II** (Р.: баллистический; И.: ballistic; Т.: balistik) *с.*

Баллистикаға мөнәсәбәтле. □ Баллистический. *Баллистик тикшереү.*

**БАЛЛИСТИКА** [рус. < нем. *Ballistik* < гр. *balla* 'бәрәм'] (Р.: баллистика; И.: ballistics; Т.: balistik) *и.*

Артиллерия снаряды, пуля, мина, авиабомба, реактив снаряд, гарпун кеүек есемдәрҙең хәрәкәте тураһындағы фән. □ Баллистика. / Баллистический. *Тышҡы баллистика. Эске баллистика.*

**БАЛЛИСТИК РАКЕТА** (Р.: баллистическая ракета; И.: ballistic missile; Т.: balistik füze) *и.*

Осҡанда двигатель туҡтағандан һуң ирекле ырғытылған есем траекторияһы буйынса төшкән ракета. □ Баллистическая ракета.

**БАЛЛОН** [рус. < фр. *ballon*] (Р.: баллон; И.: container; Т.: tüp) *и.*

**1.** Шыйыҡлыҡ йәки газ өсөн булған ябыҡ *(быяла, металл, резина һ. б.)* һауыт. □ Баллон. / Баллонный. *Аэростат баллоны. Кислородлы баллон. Автомобилдең баллоны. Газ баллоны.*

**2.** Эсенә тын тултырылған тәгәрмәс шина. □ Баллон *(колёсная шина, наполненная воздухом).*

**3.** Аэростаттың газ тултырылған көбө. □ Баллон *(обивка аэростата, наполненная газом).*

**БАЛЛЫ I** (Р.: медовый; И.: sweetened; Т.: ballı) *с.*

**1.** Балы булған, бал ҡушылған, бал тәме килгән. □ Подслащённый мёдом, медовый. *Баллы торт. Баллы үлән.* ■ *Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән, йыуасаһы баллы икән.* Халыҡ йырынан.

**2.** *күсм.* Татлы, яғымлы *(һүҙгә, телгә ҡарата).* □ Сладкий, приветливый *(в отношении слова, языка).* ● *Баллы һүҙ баш әйләндерә.* Әйтем.

**БАЛЛЫ II** (Р.: балловый; И.: mark; Т.: dereceli) *с.*

Балл менән бәйле. □ Балловый; -балльный. *Ун баллы система.*

**БАЛЛЫ БАБАЙ** (Р.: яснотка; И.: day nettle; Т.: ballıbaba) *и. бот.*

Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған аҡ сәскәле күп йыллыҡ үлән. □ Яснотка (лат. *Lamium*).

**БАЛЛЫ БАУЫРСА** *и. диал. ҡар.* **сәксәк.**

**БАЛЛЫ БАУЫРҺАҠ (бауырһағы)** *и. диал. ҡар.* **сәксәк.**

**БАЛЛЫ БӘБӘНӘК (бәбәнәге)** (Р.: клевер; И.: clover; Т.: yonca) *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **туҡранбаш.**

**2.** *ҡар.* **күк һөтләгән.**

**БАЛЛЫ БӘШМӘК (бәшмәге)** (Р.: опёнок; И.: agaric honey; Т.: bal mantarı) *и. бот.*

Нәҙек һабаҡлы, һарғылт ҡалпаҡлы йоҡа бәшмәк *(көҙгөһөн ағас төбөндә үҫә).* □ Опёнок (лат. *Armillaria*). *Баллы бәшмәк сентябрҙең тәүге яртыһында үҫә.*

**БАЛЛЫ ЖАУ** (Р.: туфли; И.: shoes; Т.: ayakkabı) *и. диал.*

Аяҡ кейеме; туфли. □ Туфли.

**БАЛЛЫҠ (баллығы)** (Р.: нектарник; И.: nectary; Т.: ballık) *и.*

Сәскәле үҫемлектәрҙең тәмле һут бүлеп сығарыусы өлөшө. □ Нектарник.

**БАЛЛЫҠАЙ** (Р.: молочай; И.: spurge; Т.: sütleğen) *и. бот. диал.*

**1.** *ҡар.* **һөтлөгән.**

**2.** *ҡар.* **туҡранбаш.**

**БАЛЛЫ ТӘТӘЙ** (Р.: туфли; И.: shoes; Т.: ayakkabı) *и. диал.*

Аяҡ кейеме; туфли. □ Туфли. *Яңы алған баллы тәтәйҙәремде кейеп алдым.*

**БАЛ-МАЙ** (Р.: благополучие; И.: well-being; Т.: refahlılık) *и. йыйн.*

Именлек, етеш тормош символы. □ Символ материальной обеспеченности, достатка.

♦ **Бал-май** (*йәки* **бал да май**) **өҫтөндә йөҙөү** (*йәки* **бал да май эсендә йәшәү**) бер нәмәгә лә мохтаж булмайынса етеш тормошта йәшәү. □ *соотв.* Как (точно) сыр в масле. ■ *[Әсәһе – Илһөйәргә:] Бер нәмәгә лә ҡыйынлыҡ, тарлыҡ кисермәнең, бал-май өҫтөндә йөҙөп кенә ауырлыҡһыҙ институтты бөтөрҙөң.* Х. Тапаҡов. *Ҡәйүм ниңә бал да май эсендә йөҙә лә, Хәйрүш ниңә ғүмере буйы кеше типкеһендә?* Ғ. Лоҡманов.

**БАЛ-МАЙ ҠАПТЫРЫУ (бал-май ҡаптыр-)** (Р.: ритуальное угощение невесты и жениха мёдом и маслом во время свадьбы; И.: sort of folklore ceremony; Т.: düğün töreni) *ҡ. этн.*

**1.** Туй ваҡытында кейәү менән кәләшкә изге теләктәр теләп бал һәм май ҡаптырыу йолаһы. □ Ритуальное угощение невесты и жениха мёдом и маслом во время свадьбы, сопровождающееся благопожеланиями.

**2.** *диал. ҡар.* **ауыҙландырыу.**

**БАЛ МЕНЕҮ (бал мен-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛ ӨРҘӨРТӨҮ (бал өрҙөрт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛПАН** (Р.: солидный; И.: staid; Т.: ağırbaşlı) *и. диал.*

Олпатлы. □ Солидный, степенный. ● *Бай булһаң, балпан бул.* Мәҡәл.

**БАЛПАН-БАЛПАН** (Р.: вразвалку; И.: waddling; Т.: badi badi) *оҡш.*

Ауыш-тыуыш хәрәкәтте белдергән һүҙ, алпан-толпан. □ Вразвалку, вперевалку, переваливаясь.

**БАЛ ПЫШЫУ (бал пыш-)** (Р.: месить воск для выкачивания мёда; И.: knead the wax; Т.: balmumu yoğurmak) *ҡ. диал.*

Бал алыу өсөн кәрәҙ иҙеү. □ Месить воск для выкачивания мёда.

**БАЛСЫҠ (балсығы)** [дөйөм төрки *бал-чыҡ* 'һаҙлы урын'] (Р.: глина; И.: clay; Т.: balçık) *и.*

**1.** Һыуға иҙелеп, һылашып торған йомшаҡ тау тоҡомо. □ Глина. / Глиняный. *Аҡ балсыҡ. Ҡара балсыҡ. Һары балсыҡ. Энәде балсыҡ. Ҡыҙыл балсыҡ. Балсыҡ баҫыу. Балсыҡ менән һылау. Балсыҡ ҡаҙыу. Балсыҡ һауыт. Балсыҡ көршәк. Балсыҡ өй.*

**2.** *диал.* Тупраҡ. □ Почва, земля, грунт.

**3.** *миф.* Башҡорт мифологияһында тәүге кеше әүәләнгән нәмә. □ Глина (*мифологизированный предмет. По этиологическим мифам башкир, из неё создан человек*). ■ *Ҡайһы бер кеше балсыҡтан, икенселәре һыуҙан, өсөнсөләре уттан яралған.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛСЫҠ БАҘАР** (Р.: верхнее поперечное бревно дома; И.: upper cross beam; Т.: evin kirişi) *и. диал.*

Түшәм балсығын тотоп ята торған арҡыры бүрәнә. □ Верхнее поперечное бревно дома.

**БАЛСЫҠ ҠОРО** *и. диал. ҡар.* **балсыҡ өмәһе.**

**БАЛСЫҠЛАНЫУ (балсыҡлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **балсыҡлау.** *страд. от* **балсыҡлау.** *Балсыҡланған өй. Балсыҡланған бите менән ҡайҙа китеп бара икән?*

**БАЛСЫҠЛАТЫУ (балсыҡлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **балсыҡлау.** *понуд. от* **балсыҡлау.** *Килеңемдән мунсаны балсыҡлаттым әле.*

**БАЛСЫҠЛАУ (балсыҡла-)** (Р.: покрывать глиной; И.: smear with clay; Т.: balçıklamak) *ҡ.*

**1.** Балсыҡ һөртөү; һылау. □ Покрывать, покрыть, мазать глиной. *Өйҙө балсыҡлау.*

**2.** Балсыҡҡа буяу. □ Запачкать глиной. *Кейемеңде балсыҡлап бөткәнһең.*

**БАЛСЫҠЛЫ** (Р.: глинистый; И.: clayey; loamy; Т.: balçıklı) *с.*

**1.** Балсыҡ ҡатыш. □ Глинистый, с примесью глины. *Балсыҡлы биҙрә. Балсыҡлы һауыт.*

**2.** Балсыҡҡа буялған. □ Запачканный глиной. *Балсыҡлы итек. Балсыҡлы кейем.*

**БАЛСЫҠЛЫҠ (балсыҡлыҕы)** (Р.: глинистая местность; И.: clayey ground; Т.: killi yer) *и.*

Балсығы булған урын. □ Глинистая местность, глинище.

**БАЛСЫҠ ӨМӘҺЕ** (Р.: коллективная помощь; И.: callective help; Т.: bir âdet) *и.*

Өй йәки башҡа биналарға балсыҡ һылау өсөн күмәкләп башҡарылған эш, өмә. □ Коллективная помощь по обмазыванию дома или других построек. *Балсыҡ өмәһен уҙғарыу. Балсыҡ өмәһенә бөтөн урам йыйылды.*

**БАЛСЫҠТАШ** (Р.: суглинистый камень; И.: loamy stone; Т.: killi taş) *и.*

Ер ҡатламдары аҫтында баҫылып, балсыҡтан яһалған таш. □ Суглинистый камень.

**БАЛСЫҠ ҺАЛЫУ (балсыҡ һал-)** (Р.: обычай класть глину в изголовье покойника; И.: kind of ethnographic rite; Т.: etnografik tören) *ҡ. этн.*

Мәрхүмде ерләгәндә, уға тороп ултырып фәрештәләрҙең һорауына яуап биреү өсөн уңайлы булһын тип, баш осона балсыҡ һалыу йолаһы. □ Обычай класть глину в изголовье покойника, чтобы ему на том свете было удобно сесть и давать ответы на вопросы ангелов. ■ *Ләхет алғас, мәйеткә тороп ултырып яуап бирергә уңайлы булыр тип, яҫтыҡ һымаҡ итеп балсыҡ һалыу йолаһы бар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛСЫМАҠ** *с. диал. ҡар.* **бысый.**

**БАЛТА** [боронғо төрки *балту* ‘балта’] (Р.: топор; И.: axe; Т.: balta) *и.*

**1.** Сабып ҡырҡыу, юныу өсөн хеҙмәт иткән яҫы йөҙлө, ялпаҡ төйҙәле, оҙон һаплы ҡорос ҡорал. □ Топор. / Топорный. *Балта йөҙө. Балта мороно. Осло балта. Тараҡ балта. Балта оңғоһо. Балта ҡыны. Балта төйҙәһе. Балта һабы. Балта һағағы. Балта ҡыны. Балта менән сабыу. Балта менән ярыу.* ■ *Бына һеҙ үҙегеҙ тупар балта, һыныҡ тешле бысҡы тотоп эшкә килгән балта оҫтаһына, ватыҡ трактор менән баҫыуға сыҡҡан механизаторға нимә тиер инегеҙ?* Г. Ғиззәтуллина. ● *Балтаңа ҡарап ағас һайла.* Әйтем.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, яман көстәрҙән һаҡлаусы мифлаштырылған нәмә. □ Топор *(мифологизированный предмет; входит в ряд острых, колющих предметов-оберегов от злых сил). Ҡырҙа йоҡлағанда баш осона балта, көрәк, һәнәк, салғы йә ат ҡамыты, ыңғырсағы һалып йоҡлау йолаһы бар.*

♦ **Балта сабыу** үҙеңә йә башҡаларға зыянлы эш эшләү. □ Делать вред себе или другим. ■ *[Тәбит:] Үҙе ултырған ботаҡҡа балта саба әҙәм балаһы. Ул ҡасан да булһа яҙаһын аласаҡ, ахырызаман киләсәк.* Ә. Әминев. *Үҙ бәхетеңә үҙең балта сабаһың һин. Бар, ялын, кире алһындар.* Г. Ғүмәр. *Ауылдаштарының терәгенә балта сабыуҙа, йыртҡыслыҡта ҡыуаныс табыуы — Ныяҙғолдоң рухиәхлаҡи яҡтан тарҡалыуының бер баҫҡысы.* М. Минһажетдинов. *Үҙҙәренең бәхетле йәшлегенә, мөхәббәтенә, өмөтөнә балта сапҡан дошманға ҡаршы көрәшкә сыҡты улар.* Ф. Рәхимғолова. **Балта һабы ҡыҫҡа** бик ҡыҙыу, яндырай. □ Горячий, пылкий. **Балта һорағанға көрәк биреү** һүҙ айышын аңламай хәбәр һөйләү, яуап биреү. □ *соотв.* Тот про Фому, а он про Ерёму *(о неуместном ответе). букв.* Просящему топор — лопату. **Балтаға бысаҡ килеү** талаш-тартышҡа инеү, янъяллашыу. □ Скандалить, ссориться *с кем.* **Балтаһы үтмәү** көсө, барымы етмәү бер эшкә. □ Не осилить. ■ *[Рахмай:] Мәктәпкә бара алмай ул. Ундай ергә балтаһы үтмәй Алағанаттың.* К. Кинйәбулатова. **Балта менән һумлау** килбәтһеҙ эшләү. □ Делать грубо. *Бынығы балта менән һумлағандай насар эшләнгән.* **Балтаһы һыуға китеү** етем ҡалыу. □ Остаться сиротой. **Балтаһы һыуға төшкән** кәйефе юғалып, күңелһеҙләнеп торған кешегә ҡарата әйтелә. □ Повесил

нос, приуныл. *букв.* Его топор упал в воду. ■ *Тыйнаҡмын да, ҡолтан тинеләр, ауыҙ йырып торған мәлдәремдә һыуға төшкән балтаң, тинеләр.* Т. Йосопов. **Һапһыҙ ҡара балта** башын баҫып туҡтауһыҙ эшләп йөрөгән йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. □ Безропотный, покорный человек. *букв.* Чёрный топор без топорища.

**БАЛТА БОРСАҠ** *и. бот. диал. ҡар.* **бохар селеге.**

**БАЛТАҒОЛ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и.*

Табындарҙың аймаҡ исеме. □ Балтагул *(название родового подразделения башкир-табынцев).*

**БАЛТА ДҮДӘ** (Р.: обух топора; И.: axe head; Т.: balta tersi) *и. диал.*

Балта төйҙәһе. □ Обух топора.

**БАЛТА ИМЕ** (Р.: заговаривание топором; И.: exorcizing with an axe; Т.: balta büyüsü) *и. миф.*

Тимрәүҙе имләү сараһы. □ Заговаривание топором *(магическое средство избавления от лишая).* ■ *Тимрәү булһа, тал сыбығы һуты менән тутыҡҡан балтаны түңәрәк яһап майлайҙар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛТА ИМСӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **балта һағағы.** *Балта имсәге ҡағыу.*

**БАЛТАЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ун башҡорттарының аймаҡ-нәҫел исеме. □ Балтай *(название родового подразделения башкир-унларцев). Улар балтай нәҫеленән.*

**БАЛТА ҠАБЫ** (Р.: чехол для топора; И.: axe sheath; Т.: balta kılıfı) *и. диал.*

Балта ҡыны. □ Чехол для топора (*носимый на поясе*). *Балта ҡынын билемә тағып алдым.*

**БАЛТАҠАН** (Р.: болтун; И.: fond of saying repeatedly the same thing; Т.: aynı şeyi defalarca tekrarlayan) *с. диал.*

Бер һүҙҙе ҡабат-ҡабат һөйләүсе. □ Любящий много раз говорить одно и то же. *Был балтаҡан егет әллә нәмәләр һөйләй.*

**БАЛТА ҠОЛАҒЫ** *и. диал. ҡар.* **балта һағағы.** *Балта ҡолағы ҡағыу.*

**БАЛТА ОҪТАҺЫ** (Р.: плотник; И.: carpenter; Т.: dülger) *и.*

Ағастан йорт-ҡура һалыу менән шөғөлләнгән оҫта; балтасы. □ Плотник. / Плотничий. *Балта оҫтаһы булып китеү.* ■ *Бер балта оҫтаһының ҡатыны сирләгән. Ул ҡатынына имсе саҡырған.* Хикәйәттән.

**БАЛТАС** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и.*

Меңле ырыуы аймағы. □ Балтас *(название родового подразделения башкир рода мин). Улар балтас нәҫеленән.*

**БАЛТАСЫ** (Р.: плотник; И.: carpenter; Т.: dülger) *и.*

Ағастан йорт, ҡура һалыу менән шөғөлләнгән оҫта. □ Плотник. / Плотничий. *Балтасылар бригадаһы.*

**БАЛТАСЫЛЫҠ (балтасылығы)** (Р.: плотничество; И.: carpentry; Т.: dülgerlik) *и.*

Балта эше менән шөғөлләнеү. □ Плотничество. *Балтасылыҡ менән шөғөлләнеү. Балтасылыҡ һөнәре.*

**БАЛТА ҺАҒАҒЫ** (Р.: бородка топора; И.: ax bit; Т.: balta deliği) *и.*

Балта оңғоһоноң артындағы сөй. □ Бородка топора. *Балта һағағы ҡағыу.*

**БАЛТАҺАҠАЛ** *и. диал. ҡар.* **балта һағағы.** *Балтаһаҡал ҡағыу.*

**БАЛТА ҺАҠАЛЫ** *и. диал. ҡар.* **балта һағағы.** *Балта һаҡалы сөйләү.*

**БАЛТА ҺАЛЫУ (балта һал-)** (Р.: обычай подкладывания топора; И.: sort of folk ceremony; Т.: bir gelenek) *ҡ. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, мендәр аҫтына балта һалып йоҡлаһаң, тыуасаҡ балаң малай була икән. □ Подкладывание топора *(обычай класть топор под подушку, чтобы зачать сына).* ■ *Ҡатын гел ҡыҙ тапһа, ир*

*бала тыуһын тип, мендәр аҫтына балта һалып йоҡлай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛТА ӘПСЕНЕ** (Р.: заговор топора; И.: axe exorcism; Т.: balta büyüsü) *и. миф.*

Балта тотҡанда уҡыла торған әпсен. □ Заговор топора. ■ *Балта әпсене: бәрәм-бәрәм, икәм-китәм, өсәм-сәсәм, дүртәм-төртәм, бишәм-бешәм, алтам-ватам, етәм-этәм, ауыр балтам, алтын балтам.* Экспедиция материалдарынан.

**БАЛТЛАУ (балтла-)** (Р.: сиять; И.: shine; Т.: balkımak) *ҡ. диал.*

Балҡыу. □ Сиять, светить; светиться; сверкать. *Урамда уттар балтлай.*

**БАЛТҮТӘЙ** (Р.: тётя; И.: aunt; Т.: teyze) *и. диал.*

Үҙеңдән өлкән туған тейешле ҡатын-ҡыҙға иркәләп өндәшеү һүҙе. □ Тётя *(форма ласкового обращения к старшей родственнице). Балтүтәйем ҡайтҡан.*

**БАЛТЫР** [боронғо төрки *бақал-тыр* ‘бәкәл һөйәге’] (Р.: голень; И.: shin; Т.: baldır) *и. анат.*

**1.** Аяҡ енсегенең йыуан ере; бурбай. □ Голень. *Балтыр ите. Балтыр һөйәге.*

**2.** *диал.* Бот ите. □ Ляжка. *Балтырҙары ябыҡ.*

**БАЛТЫРҒАН** [боронғо төрки *бал-тар* ‘йәш үлән’] (Р.: борщевик; И.: hogweed; Т.: maydanoz türü bir bitki) *и.*

**1.** *бот.* Көпшә һабаҡлы, киң киртләс япраҡлы, сатыр сәскәле күп йыллыҡ үлән *(йәш сағында япрағын, көпшәһен ашайҙар).* □ Борщевик, борщевник (лат. *Heracleum). Балтырған ашы.* ■ *Икәүләшеп бесән сапҡан урҙә, сәй ҡайнатҡан талдар төбөндә. Балтырғандар бәбәктәрен һуҙып. еҫ аңҡытып торған ҡулдарҙа.* Р. Ғарипов. *Яҙын һәм йәйен балтырған менән есерткәндән аш бешергәндәр.* «Ағиҙел», № 5, 2011.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, һаҡлаусы, һаулыҡ һәм көс биреүсе үҫемлек. □ Борщевик *(мифологизированное растение — оберег, символ жизни, здоровья и силы).* ■ *Балтырған ашын өс тапҡыр ашаған йыл буйы ауырымаҫ.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛТЫР ТАРАУ (балтыр тара-)** (Р.: обычай угощения соседей, родных после проводов гостей; И.: treat neighbors after a party; Т.: partiden sonra yemek ikram etmek) *ҡ. этн.*

Ҡунаҡтан ҡалған аш-һыу менән күршетирәне, туған-тыумасаны һыйлау йолаһы. □ Обычай угощения соседей, родных после отъезда гостей. *Күршеләрҙе балтыр тарарға саҡырҙым.*

**БАЛУАН** *и. диал. ҡар.* **бәһлеүән.** *Балуан егет.*

**БАЛ ҮҪЕМЛЕГЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **күк һөтлөгән.**

**БАЛ ҺИПТЕРЕҮ (бал һиптер-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛ ҺЫҒЫУ (бал һыҡ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛ ҺЫҠТЫРЫУ (бал һыҡтыр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бал бороу.**

**БАЛ ҺЫУҺАРҘАРЫ** (Р.: медоеды; И.: honey badgers; Т.: bal porsuğu) *и. зоол.*

Африкала һәм Азияның көньяғында йәшәй торған, тышҡы ҡиәфәте бурһыҡҡа оҡшаған йыртҡыс йәнлектәр. □ Медоеды (лат. *Mellivora capensis).*

**БАЛЫҒЫУ (балыҡ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бығыу I.**

**БАЛЫҠ (балығы)** [дөйөм төрки *балыҡ* ‘балыҡ’ < *бал(а)* ‘еүешлек’] (Р.: рыба; И.: fish; Т.: balık) *и.*

**1.** *зоол.* Айғолаҡлы, йөҙгөс ҡойроҡло, һалҡын ҡанлы, умыртҡалы һыу тереклеге. □ Рыба. / Рыбный, рыбий (лат. *Pisces). Аҡ балыҡ. Балыҡ ите. Балыҡ майы. Балыҡ һурпаһы. Балыҡ тәңкәһе. Балыҡ ыуылдырығы. Балыҡ тотоу. Балыҡ үрсетеү. Балыҡ ыҫлау. Көмрө балыҡ. Ҡыҙыл балыҡ. Аквариум балығы. Балыҡ ағы. Балыҡ ҡанаты. Балыҡ ыуылдырығы. Балыҡ ыҫлатҡыс.* ● *Балыҡ бирһәң бәйләп бир, башын-күҙен сәйнәп бир.* Мәҡәл. *Балыҡ майлы ер эҙләй, әҙәм яйлы ер эҙләй.* Мәҡәл. *Балыҡ тотһаң, башынан тот.* Әйтем.

**2.** *(баш хәреф менән) астр.* Зодиактың береһе *(Һыуғояр һәм Ҡуҙы йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).* □ Рыба *(один из зодиаков, находящийся в центре созвездий Водолея и Овна).*

**3.** *миф.* Һыу стихияһы, аҫҡы донъя менән бәйле мифологик тереклек. □ Рыба *(мифологизированное животное, связанное с водной стихией, нижним миром).* ■ *Балыҡ магик медицинала ла ҡулланыла. Мәҫәлән, һары менән ауырыған кеше еҙ таҫҡа ҡорбан балыҡ һалып, шуға ҡарап ултырырға тейеш.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Балыҡ башынан серей** боҙоҡлоҡ өҫтән (етәкселектән) башлана мәғәнәһендә. □ *соотв.* Рыба гниёт с головы. **Балыҡ кеүек** йылҡылдап торған көр малға ҡарата әйтелә. □ Словно (как) рыба *(говорится по отношению к упитанному скоту, который лоснится).* **Бер балыҡ башын сәйнәү** әйләнгән һайын бер нәмәне һөйләү. □ Повторять одно и то же. *соотв.* Жевать жвачку.

**БАЛЫҠ АҒЫ** (Р.: молоки; И.: soft roe; Т.: balik yumurtası) *и.*

Ата балыҡтарҙың орлоҡ биҙҙәре һәм шул биҙҙәр яһап сығара торған шыйыҡлыҡ, инә балыҡтар ыуылдырыҡ һалғанда ата балыҡтар ошо шыйыҡлыҡтарын уға һибә. □ Молоки.

**БАЛЫҠ АУЫ** (Р.: невод, трал; И.: seine; Т.: sürtme ağı) *и.*

Балыҡ тотоу яйланмаһы. □ Невод, трал. *Балыҡ ауы һалыу.*

**БАЛЫҠ АШЫ** *и. ҡар.* **балыҡ һурпаһы.**

**БАЛЫҠБАЛА** (Р.: мальки рыб; И.: fry; Т.: balık yavrusu) *и. диал.*

Селбәрә. □ Мальки рыб. *Балыҡбалалар һөҙөп алыу.*

**БАЛЫҠ ИШКӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **йөҙгөс.**

**БАЛЫҠ ҠАБАҒЫ** *и. диал. ҡар.* **балыҡ тәңкәһе.** *Балыҡ ҡабағы таҙартыу.*

**БАЛЫҠ ҠАНАТЫ** *и. ҡар.* **йөҙгөс.**

**БАЛЫҠ ҠАПСЫҒЫ** *и. диал. ҡар.* **балыҡ тәңкәһе.** *Балыҡ ҡапсығы таҙартыу.*

**БАЛЫҠЛЫ** (Р.: рыбный; И.: abounding in fish; Т.: balıklı) *с.*

Балығы булған. □ Рыбный. *Балыҡлы күл. Балыҡлы урын. Балыҡлы сеүәтә.*

**БАЛЫҠЛЫҠ (балыҡлығы)** (Р.: рыбная местность; И.: place rich in fish; Т.: balıklava) *и.*

Балыҡ күп урын. □ Рыбная местность. *Балыҡлыҡҡа барып сыҡтым.*

**БАЛЫҠ ӨЙӘҘЕТЕҮ (балыҡ өйәҙет-)** (Р.: магический способ лечения желтухи; И.: sort of magical ceremony; Т.: büyü ile tedavi usulü) *ҡ. миф.*

Һары ауырыуын дауалау име. □ Магический способ лечения желтухи с помощью рыбы. ■ *Һары ауырыуы булһа, балыҡ өйәҙетәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАЛЫҠ СИРАҠЛАУ (балыҡ сираҡла-)** (Р.: ловить рыбу с помощью копья; И.: spear fish; Т.: mızrakla balık tutmak) *ҡ.*

Һөңгө менән балыҡ тотоу. □ Ловить рыбу с помощью копья. *Балыҡ сираҡларға киттек.*

**БАЛЫҠСЫ I** (Р.: рыбак; И.: fisherman; Т.: balıkçı) *и.*

Балыҡ тотоу менән шөғөлләнгән кеше. □ Рыбак, рыболов. / Рыбачий, рыбацкий. *Балыҡсы ҡатын (ҡыҙ). Балыҡсылар артеле.* ■ *Ысын балыҡсы ырымы буйынса, бындай ульянан һуң, беҙ урынды алмаштырырға, түбәнгәрәк күсергә тейешбеҙ.* Д. Шәрәфетдинов.

**БАЛЫҠСЫ II** (Р.: название башкирского рода; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и.*

Бер башҡорт ырыуы. □ Балыкчи, балыкчинцы *(название башкирского рода в составе северных башкир).*

**БАЛЫҠСЫ ҠАРСЫҒА** (Р.: скопа; И.: osprey; Т.: balıkkartalı) *и. зоол.*

Балыҡ менән туҡлана торған йыртҡыс ҡош. □ Скопа (лат. *Pandion haliaetus*). *Күл өҫтөндә балыҡсы ҡарсығалар оса.*

**БАЛЫҠСЫЛАУ (балыҡсыла-)** (Р.: заниматься рыболовством; И.: go in for fishing; Т.: balıkçılık yapmak) *ҡ.*

Балыҡ тотоу менән шөғөлләнеү. □ Заниматься рыболовством. *Ағайым балыҡсылап йөрөй.*

**БАЛЫҠСЫЛЫҠ (балыҡсылығы)** (Р.: рыболовство; И.: fishing; fishery; Т.: balıkçılık) *и.*

Хужалыҡтың балыҡ үрсетеү, тотоу менән шөғөлләнгән тармағы. □ Рыболовство. / Рыболовный, рыболовецкий. *Балыҡсылыҡ хужалығы. Балыҡсылыҡ шөғөлө. Балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү.* ■ *Ата-бабаларыбыҙҙың борон тиҫтәләгән генә түгел, йөҙәрләгән, меңәрләгән баш мал-тыуар аҫрауы, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ һәм башҡа күп төрлө кәсеп менән шөғөлләнеүе бар донъяға билдәле.* «Ватандаш», № 8, 2011.

**БАЛЫҠСЫ ӨЙРӘК (балыҡсы өйрәге)** (Р.: крохаль; И.: mergus; Т.: testeregagalı ördek) *и. зоол.*

Сыйылдап оса торған ҡыҙғылт башлы күгелйем өйрәк; беле өйрәк. □ Крохаль (лат. *Mergus*).

**БАЛЫҠСЫ ТУРҒАЙ** (Р.: зимородок; И.: halcyon; Т.: bayağı yalıçapkını) *и. зоол.*

Сыйырсыҡтан бәләкәйерәк, ҡыҫҡа ғына ҡойроҡло, оҙон суҡышлы, арҡаһы, ҡойроғо ялтырауыҡлы ҡуйы зәңгәр, кәүҙәһенең аҫ яғы ҡыҙғылт ерән айғолаҡтары менән тын алыусы һыу ҡошо; тәтәй ҡош, ожмах ҡошо. □ Зимородок (лат. *Alcedo atthis*). ■ *Балыҡсы турғай, ғәҙәттә, ҡоро ботаҡта, тамырҙа йәки таш өҫтөндә тауыш-тынһыҙ ғына балыҡ һағалап ултыра.* Э. Ишбирҙин.

**БАЛЫҠ ТОТОУ (балыҡ тот-)** (Р.: рыбачить; И.: fish (for); Т.: balık tutmak) *ҡ.*

Ҡармаҡ, ау һәм башҡа ысулдар менән балыҡ эләктереү. □ Рыбачить. // Рыбалка. ■ *Тау-урман башҡорттарының йәнлек тиреһе менән яһаҡ түләгәнлектән, һунарға йөрөү, йәнлек аулау, балыҡ тотоу, ҡорт аҫрау төп кәсептәре булған.* М. Өмөтбаев.

**БАЛЫҠ ТӘҢКӘҺЕ** (Р.: чешуя; И.: scale; Т.: balık pulu) *и.*

Балыҡтың тәнен ҡаплаған түңәрәк ваҡ ҡабырсаҡтар рәүешендәге йылтыр йоҡа мөгөҙ матдә. □ Чешуя. *Балыҡ тәңкәһе таҙартыу.*

**БАЛЫҠ ҮРСЕТЕҮ (балыҡ үрсет-)** (Р.: рыбоводство; И.: fish breeding; Т.: balıkçılık) *ҡ.*

Йылғаларҙа, күлдәрҙә, быуаларҙа мөһим төр балыҡтарҙы яһалма рәүештә үрсетеү һөнәре һәм хужалығы. □ Рыбоводство. *Балыҡ үрсетеү менән шөғөлләнеү.*

**БАЛЫҠ ҮРСЕТЕҮСЕ** (Р.: рыбовод; И.: fish breeder; Т.: balıkçı) *и.*

Балыҡ үрсетеү менән шөғөлләнгән кеше. □ Рыбовод. *Балыҡ үрсетеүселәр күлгә көн дә килә.*

**БАЛЫҠ ҺӨТӨ** *и. ҡар.* **балыҡ ағы.**

**БАЛЫҠ ҺУРПАҺЫ** (Р.: уха; И.: fish soup; Т.: balık çorbası) *и.*

Балыҡ һалып бешерелгән аш. □ Уха. *Балыҡ һурпаһы бешереү. Балыҡ һурпаһы ашау.*

**БАЛЫҠ ҺУРПАҺЫ ЭСЕҮ** (Р.: голодать; И.: stavve; Т.: açlık çekmek) *ҡ. диал.*

Асығыу. □ Голодать. *Балыҡ һурпаһын эсерә был тормош.*

**БАЛЫҠ ЫҪЛАТҠЫС** (Р.: рыбокоптильня; И.: smoking shed for smoking fish; Т.: kandil) *и.*

Балыҡ ыҫлау урыны. □ Рыбокоптильня. *Балыҡ ыҫлатҡыста эшләү.*

**БАЛЫҠ ЯҢАҒЫ** *и. диал. ҡар.* **айғолаҡ.**

**БАЛЫУАН I** *и. диал. ҡар.* **бәһлеүән.** *Балыуан бер егет.*

**БАЛЫУАН II** *и. диал. ҡар.* **тыйғыса.** *Борғосаны балыуан менән нығытып ҡуйыу.*

**БАЛЬЗАМ** [рус. < лат. *balsamum* < гр. *balsamon* < ғәр. *balasan*] *и. ҡар.* **бәлзәм.**

**БАЛЬЗАМЛАУ (бальзамла-)** *ҡ. ҡар.* **бәлзәмләү.**

**БАЛЬЗАМЛЫ** *с. ҡар.* **бәлзәмле.**

**БАЛЬНЕОЛОГ** [рус.] (Р.: бальнеолог; И.: balneologist; Т.: balneolog) *и.*

Бальнеология буйынса белгес. □ Бальнеолог.

**БАЛЬНЕОЛОГИК** (Р.: бальнеологический; И.: balneological; Т.: balneoloji) *с.*

Бальнеологияға ҡараған. □ Бальнеологический. *Бальнеологик тикшеренеүҙәр.*

**БАЛЬНЕОЛОГИЯ** [рус. < лат. *balneum* ‘мунса’ + гр. *logos* ‘тәғлимәт’] (Р.: бальнеология; И.: balneology; Т.: balneoloji) *и.*

Минераль һыуҙың физик һәм химик сифатын, шифаһын өйрәнә торған медицина тармағы. □ Бальнеология.

**БАЛЮСТРАДА** [рус. < фр. *balustrade*] (Р.: балюстрада; И.: balustrade; Т.: tırabzan) *и.*

Балкондарҙағы, баҫкыстарҙағы рәшәткә, тирәс. □ Балюстрада.

**БАМБУК (бамбугы)** [рус. < фр. *bambou*] (Р.: бамбук; И.: bamboo; Т.: bambu) *и. бот.*

Ағас һымаҡ бейек булып үҫә торған быуын-быуын ҡыуыш һабаҡлы, ҡыяҡ япраҡлы йылы яҡ үҫемлеге. □ Бамбук. / Бамбуковый (лат. *Bambusa). Бамбук ҡыуаҡлығы. Бамбук һабағы.*

**БАМБУК АЙЫУЫ** (Р.: медведь бамбуковый; И.: giant panda; Т.: dev panda) *и. зоол.*

Тибетта һәм Ҡытайҙа йәшәй торған ваҡ айыу. □ Медведь бамбуковый (лат. *Ailuropoda melanoleuca).*

**БАМБУКЛЫҠ (бамбуклығы)** (Р.: место, изобилующее бамбуками; И.: place rich in bamboo; Т.: bambulu yer) *и.*

Бамбук күп үҫкән урын. □ Место, изобилующее бамбуками. *Бамбуклыҡҡа барыу.*

**БАМБУКСЫЛЫҠ (бамбуксылығы)** (Р.: заниматься разведением бамбука; И.: bamboo growing trade; Т.: bambu) *и.*

Бамбук үҫтереү шөғөлө. □ Заниматься разведением бамбука. *Бамбуксылыҡ шөғөлө.*

**БАМПЕР** [рус. < ингл. *bumper*] (Р.: бампер; И.: bumper; Т.: tampon) *и.*

Автомобилдәрҙә бәрелеү көсөн кәметә торған махсус ҡулайлама. □ Бампер. *Алғы бампер. Артҡы бампер. Бампер йәмшәйгән.*

**БАНАЛЬ** [рус. < фр. *banal* ] (Р.: банальный; И.: banal; Т.: basmakalıp) *с.*

Күп һөйләнгән, тапалған, иҫкергән. □ Банальный. *Баналь фекер. Баналь сюжет. Баналь һүҙҙәр һөйләү.*

**БАНАН** [рус. < исп. *banana*] (Р.: банан; И.: banana; Т.: muz) *и. бот.*

**1.** Тропикта үҫә торған эре япраҡлы, эре сәскәле бейек үҫемлек (*емеше һәм сүсе өсөн үҫтерелә*). □ Банан. / Банановый (лат. *Musa). Банан урманы.*

**2.** Шул үҫемлектең ҡалын йомшаҡ ҡабыҡлы оҙонса емеше. □ Банан *(плод этого растения). Банан ашау. Маймыл банан ярата.* ■ *Быжыр ҡабыҡлы йәмһеҙ ҡыяр янында һап-һары шыма банан төшөрөлгән.* Г. Ғиззәтуллина.

**БАНАН ҠОШО** (Р.: бананоед; И.: louries; Т.: muzculgiler) *и. зоол.*

Тропик Африка урмандарында йәшәй торған ҡош. □ Бананоед *(птица)* (лат. *Musophagidae).*

**БАНАНЛЫҠ (бананлығы)** (Р.: место, изобилующее бананами; И.: place rich in bananas; Т.: muzlu yer) *и.*

Банан күп үҫкән урын. □ Место, изобилующее бананами. *Бананлыҡҡа килеп сығыу.*

**БАНАН РЕСПУБЛИКАҺЫ** (Р.: банановая республика; И.: Banana republic; Т.: ekonomisi meyve ihracatına dayalı küçük ülke). *и. кәмһ.*

Иҡтисади яҡтан артта ҡалған илдәр тураһында. □ Банановая республика.

**БАНАР** *и. диал. кар.* **монар.** *Картуфты банар һуккан.*

**БАНДА** [рус. < ит. *banda*] (Р.: банда; И.: gang; Т.: çete) *и.*

Енәйәтселәр, үлтереүселәр төркөмө. □ Банда. *Юлбаҫарҙар бандаһы. Енәйәтселәр бандаһы. Ҡораллы банда.*

**БАНДАЖ** [рус. < фр. *bandage*] (Р.: бандаж; И.: surgical corset; Т.: bandaj) *и.*

**1.** Эсте күтәртеү, бүҫерҙе һ. б. ҡыҫып быуыу өсөн ҡулланылған билғау. □ Бандаж *(специальный пояс для укрепления пресса).* / Бандажный. *Бандаж кейеү.*

**2.** *тех.* Машинаның төрлө өлөшөнә кейҙерелә торған тимер ҡоршау. □ Бандаж *(металлический обод, надеваемый на детали машины). Бандаж кейҙереү.*

**БАНДАНА** [рус. < ингл. *band* ‘бәйләмес’] (Р.: бандана; И.: bandana; Т.: baş örtüsü) *и.*

Артҡа ҡайырып бәйләп йөрөмәле яулыҡ. □ Бандана. *Бандана ябыныу.*

**БАНДЕРОЛЬ** [рус. < фр. *banderole*] (Р.: бандероль; И.: parcel; Т.: küçük paket) *и.*

**1.** Почта аша ебәрелгән ҙур булмаған әйберҙәр. □ Бандероль *(небольшое почтовое отправление). Бандероль ебәреү.*

**2.** Почта аша ебәрелгән нәмәләрҙе төргән ҡағыҙ. □ Бандероль *(бумажная лента для упаковки книг).* / Бандерольный. *Бандероль менән хат ебәреү.*

**3.** Пошлина түләнгәнлеген күрһәтеү өсөн тауарға йәбештерелгән ҡағыҙ. □ Бандероль *(наклейка на товаре, подлежащем пошлине как свидетельство их уплаты).* ■ *[Салих] һары ҡағыҙҙан бер әсмуха тәмәке һыйырлыҡ ҡап яһай, уға тәмәке тултыра ла бандероль йәбештерә.* Х. Мохтар.

**БАНДИТ** [рус. < ит. *bandito*] (Р.: бандит; И.: gangster; Т.: eşkıya) *и.*

Бандала йөрөгән кеше; талаусы кеше, башкиҫәр, юлбаҫар. □ Бандит. / Бандитский. *Бандиттар өйөрө. Бандиттарса һөжүм.* ■ *Эш былай: милицияның оператив төркөмө бандиттарҙы әлеге ҡалаға яҡын дачала барып ҡулға алды.* Д. Бүләков.

**БАНДИТЛЫҠ (бандитлығы)** (Р.: бандитизм; И.: gangsterism; Т.: eşkıyalık) *и.*

Башкиҫәрлек. □ Бандитизм. *Бандитлыҡта йөрөү. Бандитлыҡ ҡылыу. Бандитлыҡ менән шөғөлләнеү.*

**БАНДУРА** [рус. < пол. < боронғо грек. *bandura*] (Р.: бандура; И.: bandura; Т.: bandura) *и.*

Украиндарҙың күп ҡыллы, киң грифлы сиртмә музыка ҡоралы. □ Бандура. *Бандурала уйнау.*

**БАНДУРАСЫ** (Р.: бандурист; И.: bandura player; Т.: banduracı) *и.*

Бандурасы. □ Бандурист. *Бандурасылар капеллаһы.*

**БАНИ** [ғәр. بانٍ] (Р.: строитель; И.: builder; Т.: inşaatçı) *и. иҫк.*

Төҙөүсе. □ Строитель, конструктор. *Бани булып эшләү.*

**БАНК** [рус. < фр. *banque*] (Р.: банк; И.: bank; Т.: banka) *и.*

**1.** Эре финанс учреждениеһы. □ Банк *(финансовое учреждение).* / Банковский, банковый. *Дәүләт банкыһы. Һаҡлыҡ банкыһы. Коммуналь банк. Банк хеҙмәткәре. Тышҡы сауҙа банкыһы. Банкыға аҡса һалыу. Банк системаһы. Интернет-банк.* ■ *Был ваҡытта инде Ҡолғәле Британия банкыһында һәйбәт кенә аҡса туплағайны.* Ғ. Хисамов.

**2.** Ҡайһы бер кәрт уйынында коңға һалынған билдәле аҡса суммаһы. □ Банк *(денежная сумма в карточной игре). Банк отоу. Банк сөйөү.* ■ *[Индрил] ҙурыраҡ банк отһа: «Очко!» — тип ҡыскырып ебәрә, кәрттәрен ырғыта һалып, аҡсаларҙы үҙенә тартып ала.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Ниндәй ҙә булһа мәғлүмәттәр тупланмаһы. □ Банк *(данные, собранные для каких-л. целей). Компьютерға һалынған мәғлүмәт банкыһы.*

**БАНКА** [рус. < пол. *banka*] (Р.: банка; И.: jar; Т.: kavanoz) *и.*

**1.** Ғәҙәттә, цилиндр рәүешендәге быяла, ҡалай һауыт. □ Банка *(посуда).* / Баночный. *Ҡайнатма банкаһы.*

**2.** *мед.* Дауалау өсөн тәнгә ултыртыла торған бәләкәй генә быяла һауыт. □ Банки *(стеклянный сосуд). Банка ҡуйыу.*

**БАНКЕТ** [рус. < фр. *banquette*] (Р.: банкет; И.: banquet; Т.: ziyafet) *и.*

Берәй тантана хөрмәтенә ойошторолған һый. □ Банкет. / Банкетный. *Эшлекле банкет. Банкет ойоштороу. Банкетҡа саҡырыу ҡағыҙы алыу.*

**БАНКЕТ-КОКТЕЙЛЬ** [рус. < фр. *banquette* + ингл. *coctail*] (Р.: банкет-коктейль; И.: cocktail party; Т.: kokteyl) *и.*

Банкет залында өҫтәл ҡуйылмай, эсемлек һәм һый батмустарҙа таратыла торған банкет. □ Банкет-коктейль. *Банкет-коктейль ойоштороу.*

**БАНКИВ ТАУЫҒЫ** (Р.: курица красная кустарная; И.: red junflefowln (hen); Т.: bankiva tavuğu) *и. зоол.*

Һиндостанда йәшәгән ҡырағай тауыҡ. □ Петух банкивский *(птица рода диких кур)*, курица красная кустарная (лат. *Gallus gallus)*. *Йорт тауыҡтары банкив тауығынан таралған.*

**БАНКИВ ӘТӘСЕ** *и. ҡар.* **банкив тауығы.**

**БАНКИР** [рус. < нем. *Banqier* < фр. *banquier*] (Р.: банкир; И.: banker; Т.: bankacı) *и.*

Банк хужаһы йәки банкының эре акционеры. □ Банкир. / Банкирский. *Банкир булып китеү. Банкир контораһы.*

**БАНКНОТ** [рус. < ингл. *bank-note*] (Р.: банкнот; И.: bank note; Т.: banknot) *и.*

Әйләнештә йөрөгән ҡағыҙ аҡса. □ Банкнот. *Милли валюта банкноттары. Яңы банкнот.*

**БАНКНОТА** [рус. < ингл. *bank-note*] *и. ҡар.* **банкнот.**

**БАНКОМАТ** [рус. < фр. *banque* 'банк' + гр. *automatos* 'үҙ аллы хәрәкәт итеүсе'] (Р.: банкомат; И.: cash machine; Т.: bankamatik) *и.*

Банк картаһы ярҙамында ҡулаҡса алыу аппараты. □ Банкомат. *Банкоматтан аҡса алыу.*

**БАНКРОТ** [рус. < нем. *Bankrott*] (Р.: банкрот; И.: bankrupt; Т.: müflis) *и.*

Бурысҡа батып бөлгән кеше йәки ойошма. □ Банкрот. *Банкротҡа сығыу. Банкрот ойошма.* ■ *Мәҫәлән, ваҡытында сәнәғәт предприятиеларын банкрот хәленә еткереп, арзан хаҡҡа һатып алдылар ҙа, уларҙы яңынан юғары хаҡҡа һаттылар.* Р. Аҙнабаев.

**БАНКРОТЛАНЫУ (банкротлан-)** (Р.: обанкротиться; И.: go broke; Т.: iflas etmek) *ҡ.*

Банкрот булыу, банкротҡа әйләнеү. □ Обанкротиться. *Банкротланған ойошмалар.*

**БАНКРОТЛЫҠ (банкротлығы)** (Р.: банкротство; И.: bankruptcy; Т.: iflas) *и.*

Бурысҡа батҡан, бөлгән хәл. □ Банкротство. *Сәйәси банкротлыҡ. Банкротлыҡҡа төшөү.* ■ *Әгәр ошо изге төшөнсәләребеҙҙән дә яҙһаҡ, дәүләт тип аталған иң юғары идара итеү корпорацияһы үҙе лә, уның армияһы ла банкротлыҡҡа дусар буласаҡ.* В. Бәҙретдинов.

**БАНК ТЕРМИНАЛЫ** [рус.] (Р.: банковский терминал; И.: paycard appliance; Т.: banka terminali) *и.*

Сауҙа нөктәләрендә банк картаһы менән түләү аппараты. □ Банковский терминал. *Сауҙа үҙәгенә банк терминалы ҡуйылған.*

**БАННЕР** [рус. < ингл. *banner* 'байраҡ'] (Р.: баннер; И.: banner; Т.: aftiş) *и.*

Реклама маҡсатындағы текст йәки һүрәт. □ Баннер. *Баннерҙар әҙерләү.*

**БАНТ** [рус. < нем. *Band* 'таҫма'] (Р.: бант; И.: bow; Т.: fiyonk) *и.*

Элмәкләп бәйләнгән таҫма. □ Бант. *Ҡыҙыл бант. Зәңгәр бант. Бант бәйләү.*

**БАНТИК (бантигы)** [рус.] (Р.: бантик; И.: small bow; Т.: fiyonk) *и.*

Бәләкәй генә бант. □ Бантик. *Ҡыҙыҡай башына ал бантик таҡҡан.*

**БАНЫУ** [фарс. بانو ] (Р.: дама; И.: lady; Т.: hanım) *и. иҫк.*

Бикә, ханым. □ Дама, госпожа. *Банылуҙар булмәһе.*

**БАОБАБ** *и.* [рус. < эф. *baobab*] (Р.: баобаб; И.: baobab; Т.: baobap) *и. бот.*

Бик йыуан олонло, тарбаҡ сатырлы тропик ағас. □ Баобаб (лат. *Adansonia digitata)*. *Баобаб олоно.*

**БАП I (бабы)** *и. ҡар.* **баб.**

**БАП II (бабы)** [ғәр.-фарс. باب 'яраҡлы, урынлы'] (Р.: присмотр; И.: care; Т.: terbiye) *и. иҫк.*

Тәрбиә, ҡәҙер. □ Присмотр; попечение, уход. *Баплы бала.* ■ *Бапһыҙ булған аҡ толпар сапһа ла быуынын яҙа алмаҫ.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**БАП III (бабы)** [ғәр.-фарс. باب 'яраҡлы, лайыҡлы, урынлы'] (Р.: мастерство; И.: mastery; Т.: ustalık) *и. диал.*

Оҫталыҡ. □ Мастерство. *Ул аш-һыу тирәһенә төплө баплы. Төрлө эшкә баплы ғына инде ул.*

**БАП IV (бабы)** [ғәр.-фарс. باب ‘яраҡлы’] *и. диал. ҡар.* **тәм I, 1.** *Ҡабып ҡара, баплымы? Бапһыҙ булһа, ашама.*

**БАПАҒҮЛӘН** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1**. *Бапағүлән бағүлән.*

**БАПАЙ** *и. диал. ҡар.* **бапаҡ.**

**БАПАҠ I (бапағы)** (Р.: бука; И.: bogyman; Т.: umacı) *и. миф.*

**1.** Балаларҙы ҡурҡыта торған мифик зат. □ Бука *(существо, которым пугают детей). Бапаҡ менән ҡурҡытыу.*

**2.** *күсм.* Ҡурҡыныс, йәмһеҙ кеше. □ Бука *(о страшном, некрасивом человеке).* ■ *[Гөльямал:] Өҫ-башымды ла ҡарап торманым. Ҡәйнешем күрһә, танымаҫ әле. Ниндәй бапаҡ килгән тиер.* Я. Хамматов.

**3.** *бал.* Бөжәк. □ Насекомое. *Бапаҡ килә.*

**БАПАҠ II** (Р.: неуютный; И.: bogyman; Т.: rahatsız) *с. диал.*

Яман, ҡотһоҙ. □ Неуютный. *Өй, саңланып, бапаҡ булып бөткән.*

**БАПЛАУ (бапла-)** (Р.: ухаживать; И.: tender ; Т.: bakmak) *ҡ.*

**1.** Ҡәҙерләп тәрбиәләү. □ Ухаживать, присматривать за *кем-л.* // Уход, присмотр. *Баланы баплап үҫтереү. Атты баплау.*

**2.** Яратып, күңел һалып еренә еткереү. □ Делать *что-то* с большим удовольствием; охотно; с душой.

**3.** *диал.* Оҫталарса, оҫталыҡ менән эшләү. □ Делать *что-то* мастерски. *Ашты баплап бешерә инде ул.* ■ *Оҫолло еңгәнең һыйлы итеп әсеткән, баплап һыуытҡан яҡшы ҡымыҙын бер-ике алдыр эсеү менән үк башҡа сыға.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *диал.* Ентекләп эшләү. □ Делать *что-то* детально. *Ул хәбәрҙе баплап һөйләй инде. Баплап эшләү.*

**БАПЫМБАШ** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1**.

**БАР I** [дөйөм төрки *баар,* бар булыу ‘есть, имеется’] (Р.: есть; И.: there is/are; Т.: var) *мөн.*

**1.** *Кемдеңдер* йәки *ниҙеңдер* ғәмәлдә булғанлығын белдерә; *киреһе* — юҡ. □ Есть, имеется. ■ *Атым бар — йүгәнем юҡ, дәртем бар — һөйгәнем юҡ.* Халыҡ йырынан. *Беҙҙең утыҙ өс күбә бар ине, Йәноҙаҡ бабайыңдарҙыҡы — егерме бер.* Н. Мусин. *Ләкин ошо күп яҡлы, күп төрлө хәтирәләрҙе үҙгәнә йыйған бер ваҡиға бар — ул әлек булған һәм бөгөн йәнә ҡабатланған бәйге тантанаһы.* Ә. Хәкимов. ● *Бары менән байрам.* Әйтем. *Барҙың барлығы тейер, юҡтың тарлығы тейер.* Мәҡәл. *Бар сағында бүреләй, юҡ сағында сүреләй.* Әйтем. *Бар янына бар һыя.* Әйтем. *Бар яраштырыр, юҡ талаштырыр.* Мәҡәл.

**2.** Хәбәр функцияһында килеп, *ниҙеңдер* булыу ихтималлығын йәки тейешлеген белдерә. □ Быть, есть. ■ *Нуриханов исемендәге колхоздың игенселекте тағы ла алға ебәреүҙә бөтә мөмкинлектәре бар.* Д. Бүләков. *Ҡуйсы әле, ниндәй кеше икәнен дә белмәйһең, изге кеше булыуы бар, үҙеңә насар булып ҡуймаһын.* Әкиәттән.

**3.** Сифат ҡылымдың *-аһы/-әһе* формаһы менән килеп, эш-хәрәкәттең үтәлергә тейешлеген, кәрәклеген белдерә. □ С прич. на *-аһы/-әһе* выражает долженствование, необходимость. *Бирәһе бар. Бараһы бар.* ■ *Уның кире әйләнәһе, эшелонды ҡыуып етәһе бар.* Ә. Хәкимов. *«Күрмә килендән күренеш алаһы бар әле һиңә», — тине.* Ж. Кейекбаев.

**4.** Сифат ҡылымдың *-ған/-гән* формаһы менән килеп, *нимәнелер* раҫлауҙы белдерә. □ С формой прич. на *-ған/-гән* выражает подтверждение *чего-л. Күргән бар инде. Уҡыған бар инде.* ■ *Әхәткә менгәшеп булһа ла, Йәноҙаҡ бабайҙың атын тышарға, эсерергә йөрөгән бар бит инде.* Н. Мусин.

♦ **Бар тип тә белмәү** *нимәнелер* иҫәпкә алмау, ҡайғыртмау. □ *соотв.* И ухом (глазом, бровью, усом) не ведёт. **Юҡтан бар итеү** ҙур булдыҡлылыҡ күрһәтеү. □ Сделать *что-то* из ничего. **Юҡты бар итеү** алдау. □ Обманывать. ■ *Тыумыштан борғолап һөйләргә ярамаған башҡорт егете дөрөҫлөктө йәшереп, юҡты бар тип һөйләргә баҙнат итмәй.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**БАР II** [дөйөм төрки *баар* < *бу* ‘булыу’] (Р.: весь; И.: all; Т.: bütün) *билд. а.*

Бөтә булған; һәммә. □ Весь, вся, всё; все. *Бар халыҡ. Бар ил.* ■ *Аҡмулла бар булмышы менән халыҡ шағиры булды.* Ә. Вилданов. *Ул күк күкрәгән һымаҡ тауыш менән тау түбәләрен, бар тирә-яҡтарҙы дер тетрәтеп, ошо һүҙҙәрен әйтә.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

♦ **Бар донъя** бөтә кеше, бар халыҡ, бөтә кешелек. □ Весь народ, человечество. ■ *Бар донъя ҡараңғылыҡ даръяһына сумды.* Р. Камал. *Радик бар донъяға яр һалып ҡайтып ингәндә, Ғәшүрә урам тулып йөрөгән һимеҙ өйрәктәрен һыуға ҡыуалап маташа ине.* Р. Ҡол-Дәүләт.

**БАР III** (рус. < ингл. *bar*) (Р.: бар; И.: bar; Т.: bar) *и.*

**1.** Бәләкәй ресторан йәки уның бер өлөшө. □ Бар *(маленький ресторан или его часть).*

**2.** Шарап һ. б. эсемлек ҡуя торған шкаф йә уның бер өлөшө. □ Бар *(предмет мебели).*

**БАРА** (Р.: страница Корана; И.: Quran's page ; Т.: Kur'an sayfası) *и. диал.*

Ҡөрьән бите. □ Страница Корана. *Ҡөрьәндән бер нисә генә бара ҡалған.*

**БАРАБА I** (Р.: сойка; И.: jay; Т.: bayağı alakarga) *и. зоол.*

Ҡыҙғылт супай башлы, күк аралаш ҡанатлы эре буҙ турғай; урман һайыҫҡаны, суҡтурғай. □ Сойка (лат. *Garrulus glandarius).* ■ *Бараба ҡарағай һәм шыршы орлоҡтары, сәтләүек, бөжәктәр, ваҡ ҡоштарҙың балаларын ашай.* Э. Ишбирҙин.

**БАРАБА II** *с. диал. ҡар.* **аумаҡай.**

**БАРАБАН** [рус.] (Р.: барабан; И.: drum; Т.: davul) *и.*

**1.** *муз.* Ике яҡлап тире менән тарттырып эшләнгән ҡыуыш цилиндр формалы, дөңгөрләтеп һуға торған музыка ҡоралы. □ Барабан. *Оркестр барабаны. Пионер барабаны.* ■ *Ҡурҡыштан Батырҙың йөрәге барабан һуҡҡан кеүек тибергә тотондо.* Н. Ғәйетбаев. *Күршеһе, алты йәшлек Сәлимгәрәй, оло барабанды ҡойма бағанаһына элеп ҡуйған да суҡмар башлы таяҡ менән һуға: бум-бум, бум-бум, бум-бум!* Ф. Янышев. *Былар ҙың янында бер мөһабәт кеше барабан һуғып тора.* М. Өмөтбаев.

**2.** Төрлө машина һәм механизмдың цилиндр кеүек детале. □ Барабан. *Алтатар барабаны.* ■ *Барабан тос көлтәләрҙе йотоп ебәрә лә, геү-ү, гөрһ иттереп һаламын атып ташлай.* Ф. Иҫәнғолов. *Ниһайәт, иркен тын тартып, иҫенә килгәс, [Ирназар] наган барабанын әйләндерергә кереште.* Ә. Хәкимов. *Ҡанатҡа эләктерелгән кәрзинкәгә Сәйфетдин бер аяғын баҫҡас та, сар һабы кеүек тимергә тотонған ике кеше әкрен генә барабанды үҙенә ҡарай борҙо.* Я. Хамматов. *Малайҙарҙың кеҫәһенән төшөп ҡалған әйбер — уйынсыҡ пистолет ине. Ысынға оҡшап тора, әйләнмәле барабаны ла бар.* Д. Бүләков.

**3.** *архит.* Бинаның көмбәҙен тотҡан иң өҫкө өлөшө. □ Барабан. *Мәсет барабаны. Сиркәү барабаны.*

**4.** *ҡар.* **дөңгөр.**

♦ **Ярыҡ барабан** ауыҙында һүҙ тормаған кешегә ҡарата әйтелә. □ Пустозвон, болтун. ■ *Мараттың: «Киттеме теге ярыҡ барабан? Ниңә саҡыраһыңдыр шуны», — тип Фазлыевты илтифатһыҙ ғына телгә алыуын атаһы оҡшатманы.* Ә. Хәкимов.

**БАРАБАНСЫ** (Р.: барабанщик; И.: drummer; Т.: davulcu) *и.*

**1.** Барабан ҡағыусы. □ Барабанщик. *Барабансы малай сәхнәгә сыҡты.*

**2.** Барабан янында тороусы комбайнсы ярҙамсыһы. □ Помощник комбайнёра. ■ *Бына бөгөн мин һине барабансыға помощник итеп назначать итәм. Эҫкерт башынан ташланған игенде биреп торорһоң.* Р. Өмөтбаев.

**БАРАБАР** (Р.: одинаково; И.: equally; Т.: aynı biçimde) *р.*

Бәрәбәр. □ Одинаково, одинаковый; тождественно, тождественный. *Минең менән барабар эшләй ул.*

**БАРАК (барағы)** [рус. < фр. *baraque*] (Р.: барак; И.: barracks; Т.: baraka) *и.*

Ваҡытлыса йәшәү өсөн ағас йәки таҡтанан эшләнгән йорт. □ Барак. *Эшселәр барағы. Баракта тороу.* ■ *Тәҙрә урынына таҡта ҡапланған ташландыҡ һыуыҡ баракта Сәйфетдин менән Хисмәтулла оҙаҡ ултырып сыҙай алманы.* Я. Хамматов.

**БАРАҠ** [боронғо төркиә *барак* ] (Р.: волосатый; И.: hairy; Т.: kıllı) *с.*

**1.** Оҙон йөнлө, йөнтәҫ. □ Волосатый; мохнатый; лохматый; косматый. ■ *Барак ауыҙлы ялбыр ҡара эт .. ҡапыл уға [Айбулатҡа] ташланды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Эттең төрө. □ Порода собак.

**БАРАМАН** (Р.: близкий человек; И.: close person; Т.: tanıdık) *и. иҫк.*

Таныш кеше; белеш. □ Знакомый человек; друг. *Бараманын осратыу. Бараманы менән һөйләшеү.* ● *Бараманың бар булһа, барып айран эсерһең.* Мәҡәл.

**БАРАМАТ** (Р.: человек, шатающийся по деревне; И.: person knocking about the village; Т.: aylak aylak dolaşan kimse) *и. диал.*

Ауылсы. □ Человек, шатающийся по деревне. *Барамат булып йөрөү.*

**БАРАНКА** [рус.] (Р.: баранка; И.: steering wheel; Т.: direksiyon) *и. һөйл.*

Автомобилдең дүңгәләк рәүешендәге руле. □ Баранка, руль. ■ *[Сөләймән] баранканы бер туҡтауһыҙ борғолаған шофёрҙың хәрәкәтен күҙәтте.* Я. Хамматов. *Ҡолоевтың баранканы тартып алырға өлгөшкән саҡтары була торғайны.* Р. Солтангәрәев.

**БАРА-ТОРА** (Р.: постепенно; И.: gradually; Т.: yavaş yavaş) *р.*

*Күпмелер* ваҡыттан һуң; аҡрынлап, тора-бара. □ Постепенно, со временем. ■ *Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә көн бөткән.* З. Биишева. *Бик борондан булғанмы, Йәнбирҙе үҙе ҡылғанмы, баратора шул ерҙә йола булып киткәнме.* «Урал батыр».

**БАРАУАЙҺЫҘ** (Р.: беззастенчивый; И.: unblushing; Т.: küstah) *с. диал.*

Тупаҫ, мәғәнәһеҙ. □ Беззастенчивый, бесцеремонный. *Бигерәк бараyайһыҙ инде ул.*

**БАРБАРИС** [рус. < лат. *berberis*] (Р.: барбарис; И.: barberries; Т.: kadıntuzluğu) *и.*

**1.** *бот.* Ҡарағусҡыл ҡыҙыл төҫтәге ваҡ ҡына әсе емеш биргән сәнскәкле көньяҡ ҡыуағы. □ Барбарис (лат. *ber beris*). *Ябай барбарис. Барбарис ҡыуағы.*

**2.** Шул ағастың емеше. □ Барбарис. *Барбарис ҡайнатмаһы.*

**3.** Карамель төрө. □ Сорт кисло-сладкой карамели.

**БАРҒЫЛАУ (барғыла-)** (Р.: захаживать; И.: drop in; Т.: uğramak) *ҡ.*

Һирәк-һаяҡ барыу. □ Захаживать. // Захаживание. *Барғылап йөрөү.* ■ *Ҡәҙермәт барғылап сыҡҡан саҡтарҙа: «Нимә кәрәк, ағай? Ситтә көн иткән кешегә табырға тырышырбыҙ», — тип яҡты йөҙ менән ҡаршы ала.* Н. Мусин.

**БАРД** [рус. < кельт. *bardos*] (Р.: бард; И.: bard; Т.: şair) *и.*

Үҙ әҫәрен башҡарған музыкант. □ Бард.

**БАРЕЛЬЕФ** [рус. < фр. *bas-relief*] (Р.: барельеф; И.: bas-relief; Т.: barelyef) *и.*

Яҫылыҡ өҫтөндә ҡабартып, яртылаш ҡалҡытып, әүәләп эшләнгән биҙәк йәки һүрәт, скульптураның бер төрө. □ Барельеф. *Барельеф ҡуйыу. Барельеф һүрәт.*

**БАРЖА** [рус. < фр. *barge*] (Р.: баржа; И.: barge; Т.: mavna) *и.*

Бункер йәки эткес ярҙамында йөрөтөлә торған яҫы төплө ҙур йөк кәмәһе. □ Баржа. *Баржаға иген тейәү.*

**БАРИ** [ғәр. باري ‘бар ҡылыусы, яратыусы’] (Р.: создатель; И.: creator; Т.: yaratıcı) *и. иҫк.*

Бар ҡылыусы, яратыусы. □ Создатель, созидатель. *Бар ғаләмде бари яратҡан.*

**БАРИД I** [ғәр. برد ‘һыуыҡ, һалҡын’] (Р.: холод; И.: cool; Т.: serinlik) *и. иҫк. кит.*

Һыуыҡ, һалҡын. □ Холод, прохлада. ■ *Мулла Ғәлимйән барид шул, йәнгә бик һалҡын бата. Булмаһа һалҡын яғы, булмаҫмы ине алтын ата?* Ш. Бабич.

**БАРИД II** [ғәр. بارد ‘һыуыҡ’] (Р.: холодный; И.: cool; Т.: soğuk) *с.*

Һыуыҡ. □ Холодный, прохладный. *Көҙгө барид ел.*

**БАРИД III** [рус. < лат. *baris*] (Р.: барид; И.: bug species; Т.: baris) *и.*

Ҡороткос ҡуңыҙ. □ Барид (лат. *Baris*). *Кәбеҫтә бариды. Йәшел барид. Рапс бариды.*

**БАРИЙ** [рус. < гр. *barys* 'ауыр'] (Р.: барий; И.: barium; Т.: baryum) *и. хим.*

Химик элемент, аҡ төҫтәге йомшаҡ металл. □ Барий. *Барий сығарыу. Барий етештереү.*

**БАРИТКА** (Р.: баретки; И.: shoes; Т.: ayakkabı) *и. диал.*

Беше йоҡа туҡыманан тегелгән еңел аяҡ кейеме. □ Баретки. *Баритка кейеү. Баритка һатып алыу.*

**БАРИТОН** [рус. < ит. *baritono* < гр. *barytonos* 'түбән тауышлы'] (Р.: баритон; И.: baritone; Т.: bariton) *и.*

**1.** Бас менән тенор араһындағы ирҙәр тауышы. □ Баритон. *Баритон менән йырлау. Баритон тауыш.*

**2.** Шундай тауыш менән йырлаған кеше. □ Баритон. *Баритон йырлай.* ■ *«Булмай, — тине Хоҙаяров. — Аккомпанемент юҡ. Минең бит лирик тенор. Ә был тонға йә баритон, йә бас ҡына бара».* Р. Солтангәрәев.

**3.** Торбанан бер октаваға түбән тауыш сығарған тынлы музыка ҡоралы. □ Баритон. *Баритон партияһы.*

**БАРКАС** [рус. < нидерл. *barkas*] (Р.: баркас; И.: launch; Т.: şalupa) *и.*

**1.** Күп ишкәкле ҙур кәмә. □ Баркас. ■ *[Перовский:] Флотилияға капитан-лейтенант Бутанов менән лейтенант Эрдели яуаплы. Һырдарьялағы пароходтар менән баркастар ҙа уларға беркетелә...* Я. Хамматов.

**2.** Портта йөк ташый торған үҙе йөрөмәле кәмә. □ Баркас. *Балыҡсылар баркасы.*

**БАРҠ-БАРҠ, барҡ та барҡ** (Р.: подражание голосам некоторых птиц; И.: imitation of birds' sounds; Т.: vak vak) *оҡш.*

Ҡош тауышын белдергән һүҙ. □ Подражание голосам некоторых птиц (например, *крику дрозда*). *Барҡ-барҡ итеү. Өйрәктәр барҡ-барҡ килә.*

**БАРҠЫЛДАҠ I (барҡылдағы)** (Р.: дрозд; И.: thrush; Т.: karatavuk) *и. зоол.*

Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған сыбар буҙ төҫтәге урман ҡошо. □ Дрозд (лат. *Turdus merula*). *Барҡылдаҡ ояһы. Сыбар барҡылдаҡ. Муйыл барҡылдағы. Барҡылдаҡтар ағас емештәре менән туҡлана.*

**БАРҠЫЛДАҠ II (барҡылдағы)** (Р.: вид утки; И.: duck species; Т.: ördek türü) *и. зоол.*

Өйрәк төрө. □ Вид утки. *Барҡылдаҡтар күп ашай.*

**БАРҠЫЛДАҠ III** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. диал.*

Әйле башҡорттарына ҡараған бер аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир-айлинцев. ■ *Был юлы «барҡылдаҡ»тар араһы кешеләре үҙ нәҫел-нәсәп тамырҙары менән таныштырҙы.* «Инйәр», 29 октябрь 2009.

**БАРҠЫЛДАҠТАР** *и. зоол. ҡар.* **барҡылдаҡ һымаҡтар.**

**БАРҠЫЛДАҠ ҺЫМАҠТАР** (Р.: семейство птиц, относящиеся к отряду воробьиных; И.: birds of the sparrow family; Т.: ötücü kuşlar) *и. зоол.*

Турғайҙар отрядына ҡараған ҡоштар ғаиләһе (*барҡылдаҡ, һандуғас һ.б. ҡарай*). □ Семейство птиц, относящиеся к отряду воробьиных (лат. *Passeriformes*). ■ *Яңыраҡ Американың Бииби тигән төбәгендә — ҡара барҡылдаҡтарҙың, Швецияның Фальчепингында — һайыҫҡан һәм ҡарғаларҙың, Италияның Фаэнцаһында һәм Канаданың Сент-Огюстен-де-Деморе тигән төбәгендә — күгәрсендәрҙең, Төркиәнең Бурса ҡалаһында сыйырсыҡтарҙың ҡырылыуы йәмғиәтте хайран итте.* «Башҡортостан», 15 ғинуар 2011.

**БАРҠЫЛДАҠ ҺЫУЫҒЫ** (Р.: время весеннего холода, когда прилетают дрозды; И.: spring cold spell; Т.: bahar soğuğu) *и. диал.*

Барҡылдаҡтар килгән ваҡытта була торған яҙғы һыуыҡ. □ Время весеннего холода, когда прилетают дрозды. *Барҡылдаҡ һыуығы етте.*

**БАРҠЫЛДАУ (барҡылда-)** (Р.: издавать звук, похожий на крик дрозда;

И.: produce a barking sound; Т.: vak vak etmek) *ҡ.*

Барҡ-барҡ итеп ҡысҡырыу, барҡ-барҡ килеү. □ Издавать звук, похожий на крик дрозда. *Өйрәктәр барҡылдаша.*

**БАРҠЫЛДЫҒЫ СЫҒЫУ (барҡылдығы сыҡ-)** *ҡ. ҡар.* **барҡылдау.**

**БАРЛАНЫУ (барлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **барлау.** *страд. от* **барлау.**

**БАРЛАУ I (барла-)** (Р.: считать; И.: count; Т.: saymak) *ҡ.*

Тикшереп, теүәлме-түгелме тип иҫәпләү. □ Считать, подсчитывать. / Счёт. ■ *Уйылдан күтәүсегә өйөрҙө барлау өсөн бөгөн һырттағы йәйге кәртәгә алып ҡайтып ябырға, бүреләр тамаҡлап өлгөргән өс ҡолондо соҡор ҡаҙып күмергә ҡушты.* Н. Мусин. *Бына Ғәбит ағай исемлек буйынса уҡыусыларҙы барлап сыҡты.* З. Биишева. *[Зөфәр] аттарын барлай. Барлап сыҡҡас, Йондоҙғашҡа юҡлығын белә лә .. эҙләргә китә.* Әкиәттән. *Владимир Иванович юлға кистән үк әҙерләнеп ҡуйҙы: кәрәкле ҡағыҙҙарын барланы. алмаш кейем-һалымын рәткә килтерҙе.* З. Ураҡсин.

**БАРЛАУ II** (Р.: перекличка; И.: count; Т.: yoklama) *и.*

Кеше һанын тикшереү, иҫәпләү. □ Перекличка. *Киске барлау. Барлауға һыңлау.* ■ *Ҡайһы саҡта бөтөн тотҡондар ҙа тышҡа һөрөп сығарылмай, һайлап ҡына бер-ике вагон барлауҙан үткәрелә.* Ә. Хәкимов.

**БАРЛАШЫУ (барлаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **барлау.** *взаимн. от* **барлау.**

**БАРЛЫ** (Р.: богатый; И.: rich; Т.: zengin) *с.*

Етеш, мул тормошло; хәлле. □ Богатый, состоятельный, имущий, зажиточный, обеспеченный. *Барлы кеше. Барлы тормош.* ■ *[Әбей:] Был ил, балам, барлы ғына булырға оҡшай. Насип булһа, бер аҙ тороп китербеҙ.* К. Мәргән. *[Ҡарсыҡ:] Ҡарт, йәй утын әҙерләмәнем, тип һис ҡайғырма. Бына, бар бит, барлы йорттан бар сыға бит ул.* Әкиәттән.

**БАРЛЫҒЫ** (Р.: всего лишь; И.: just; Т.: sadece) *билд. а.*

**1.** Бөтә булғаны, ни бары. □ Всего лишь. *Барлығы ике баш һуған ғына кәрәк. Барлығы бер нисә һум ғына етмәне.*

**2.** Бөтәһе, һәммәһе. □ Всего, итого. ■ *Бында барлығы ике мең туғыҙ йөҙ һөңгө, алты йөҙ илле ҡылыс һәм дүрт орудие.* Я. Хамматов. *Беҙҙең ротала барлығы ун биш кеше.* Д. Юлтый.

**БАРЛЫ-КӨРЛӨ** (Р.: зажиточный; И.: well-to-do; Т.: varlıkh) *с. диал.*

Етеш, бай. □ Зажиточный. *Ғүмер буйы барлы-көрлө йәшәне. Барлы-көрлө кешегә кейәүгә барған.*

**БАРЛЫҠ I (барлығы)** [боронғо төрки *барлыҡ* ‘булмыш’] (Р.: наличие; И.: availability; Т.: varlık) *и.*

Бар булған хәл; тәбиғәт, булмыш. □ Наличие, существование; всё, что есть. ■ *Ғәләйҙәм бөтә барлығы менән шиғри тәбиғәтле, тәрән тойғоло ине.* Һ. Дәүләтшина. *Тик капитан, ахырыһы, уның ер йөҙөндә барлығын онотҡайны инде.* Ә. Хәкимов. *Унан йылғаға һуҙылған һуҡмаҡтың таҡыр үк булыуынан был ҡырын битләүгә өңөп эшләнгән балаганда йән эйәһе барлығы аңлашыла.* Н. Мусин.

**БАРЛЫҠ II** (Р.: достаток; И.: prosperity; Т.: varlık) *и.*

Тормоштағы етешлек; муллыҡ. □ Достаток, богатство. *Барлыҡта йәшәү.* ■ *Хәйер, Ихсанбай бер ҡасан да юҡтан бар итеүҙе белмәне. Атаһы һалған әҙер донъяла, әсәһе әҙерләгән әҙер һыйҙа — барлыҡта-байманлыҡта йәшәне.* Т. Ғарипова.

**БАРЛЫҠ III (барлығы)** (Р.: весь; И.: all; Т.: bütün) *билд. а.*

Бөтә булған; һәммә. □ Весь, вся, всё; все. ■ *Македонский илдәр яулаған, алдындағы барлыҡ мәмләкәттәрҙе, эйе, ер менән тигеҙләй барған.* Р. Камал. *Яҙ яратып, ҡышты уға игеҙ ҡылды, үлемде барлыҡ йәнгә тигеҙ ҡылды.* М. Аҡмулла. *Атаһы үлгәс, барлыҡ байлыҡ Ғарифҡа тороп ҡалған.* Ж. Кейекбаев.

**БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮ (барлыҡҡа кил-)** (Р.: возникать; И.: appear; Т.: oluşmak) *ҡ.*

Юҡтан барға әйләнеү; ғәмәлгә килеү. □ Возникать, образовываться, зарождаться, появляться. // Возникновение, образование, зарождение, появление. ■ *Әлеге күлдәрҙең барлыкҡа килеүе тураһында ошондай әңгәмә йөрөй.* М. Кәрим.

**БАРЛЫҠЛЫ** (Р.: богатый; И.: affluent; Т.: varlıklı) *с.*

Етеш тормошло, етешле. □ Богатый, состоятельный. *Барлыҡлы кеше.* ■ *Стена янына ҡуйылған ағас һандыҡ өҫтөнә барлыҡлы ҡаралдылар өйөлгән.* Я. Хамматов.

**БАРЛЫ-ЮҠЛЫ** (Р.: незначительный; И.: insignificant; Т.: küçük) *с.*

Булыр-булмаç, әҙ-мәҙ. □ Незначительный, ничтожно малый. ■ *Келәтһеҙ кешеләр барлы-юҡлы игенен аласыҡтағы көбө, алап эсенә тултырған.* Ж. Кейекбаев. *Әй улым, ҡарға күҙен ҡарға суҡыймы? Юҡҡа әтләнеп, барлы-юҡлы аҡсаңды тәләфләп йөрөмә.* Н. Мусин.

**БАРМАҠ (бармағы)** [боронғо төрки *баринаҡ* 'тоткос' < *бари* 'тотоу'] (Р.: палец; И.: finger; Т.: parmak) *и.*

**1.** Ҡул, аяҡ осондағы быуынтыҡлы хәрәкәтсән ағза. □ Палец. *Йыуан бармаҡ. Оҙон бармаҡ. Баш бармаҡ. Сығанаҡ бармаҡ. Урта бармаҡ. Һуҡ бармаҡ. Сәтәкәй бармаҡ. Бармаҡ башы. Бармаҡ осо. Бармаҡ төбө. Бармаҡ һөйәге.* ■ *Гармунсы .. бармаҡтарын гармун теле буйлап йүгертте.* Я. Хамматов. *Беҙҙең яҡта изге һаналған нәмәгә бармаҡ түгел, эйәк менән ымлап күрһәтәләр.* М. Кәрим. *Тәнде мамыҡ өйөмө менән баҫтырып ҡуйғандар төҫлө, бармаҡты ла ҡыбырҙатаһы килмәй.* Н. Мусин. ● *Бармаҡ араһына ит үрмәй.* Мәҡәл. *Бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта.* Мәҡәл.

**2.** Үлсәү берәмеге. □ Мера длины. *Бармаҡ йыуанлығы һалма киҫеү.*

♦ **Бармағы үҙенә кәкре** 1) үҙен генә ҡайғыртҡан кеше тураһында әйтелә. □ Своя рубашка ближе к телу. *Йәшерен-батырын түгел, әҙәм балаһының бармағы үҙенә ҡарай кәкре;* 2) урлашыуға бара алған кеше хаҡында әйтелә. □ Нечист на руку. **Бармағынан бал тама** оҫта кешегә ҡарата әйтелә. □ Мастер на все руки. **Бармаҡ аша <араһынан> ҡарау** вайымһыҙ булыу. □ Смотреть (глядеть) сквозь пальцы. ■ *Ҡайһы бер иптәштәр .. әсә телен ғәмәлгә ҡуйыуға һаман да ышаныслы күҙ менән ҡарамай, бармаҡ араһынан ғына ҡарап йөрөгәнлектәрен күрәбеҙ.* Ш. Хоҙайбирҙин. **Бармаҡ башындай** 1) ҙур нәмәне бәләкәй итеп күрһәткәндә әйтелә. □ Маленький, с кончик пальца. *Бармаҡ башындай ғына май.* ■ *Фёдор ҙур кәүҙәле булһа ла, бармаҡ башындай балаларҙан тукмалып, яланғас тәнен йырттырып сыҡты шул.* Т. Хәйбуллин; 2) бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәткәндә әйтелә. □ Большой, с кончик пальца. *Бармаҡ башындай миң.* **Бармаҡ буйы** кешенең буйын бәләкәсәйтеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. □ Маленький, с ноготок *(о росте человека).* ■ *Мин ошо кейәүем менән ҡыҙыма килгәндә, бынау Мәрйәмем ни бармаҡ буйы ғына ине бит әле. Хәҙер бына ул уҫлаптай ҡыҙ булып китте.* Һ. Дәүләтшина. **Бармаҡ менән генә һанарлыҡ** бик әҙ. □ Очень мало. ■ *Ул саҡта ауылдан уҡыусыны бөтөп сығыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ ине. Шуға күрә Ҡәйүмов уны [Миҙхәтте] ҡайтыу менән колхозға хисапсы итеп алды.* Н. Мусин. **Бармаҡ менән дә сиртмәү** кешегә ҡарата бер ниндәй ҙә зыян килтермәү. □ Пальцем не тронуть *(о безвредном человеке).* **Бармаҡ осондай (йәки остоғондай)** *нимәләр* бәләкәйлеген күрһәтергә теләгәндә әйтелә. □ Маленький, с кончик пальца. *Ул бәндәнең бер генә лә, бармаҡ осондай ҙа мәрхәмәте юҡ.* **Бармаҡты тешләрҙәй булыу** бик ныҡ үкенеү. □ Очень сожалеть. *соотв.* Кусать локти. *Бармаҡты тешләрҙәй булһаң да һуң инде.* **Биш бармаҡ кеүек белеү** бик яҡшы белеү. □ Знать как свои пять пальцев. **Урта бармаҡ кеүек** бик шәп *(кешегә ҡарата).* Очень хорош *(по отношению к человеку).* ■ *Урта бармаҡ кеүек егеттәр .. һуғышҡа китә.* Ж. Кейекбаев.

**БАРМАҠ БИТЕ** (Р.: подушечка пальца; И.: finger-cushion; Т.: parmaucu) *и.*

Бармаҡтың йомро булып ҡабарып торған өлөшө. □ Подушечка пальца. *Бармаҡ биттәре ҡыҙарғансы мандолина сиртте.*

♦ **Бармаҡ битендәй** *нимәнеңдер* ҙурлығын күрһәткәндә сағыштырып ҡулланыла. □ Величиной подушечки пальца. ■ *Сәлмәндең башында бармаҡ битендәй генә ике ялтыр урын бар.* Әкиәттән. *Ҡот оскос ине был яра: баш бармаҡ битендәй булып өңрәйгән урынды йоҡа ғына тире шекәрәһе япҡан һәм уның аҫтындағы мейенең, мөлкөлдәп эшләүе һиҙелеп тора.* Н. Мусин.

**БАРМАҠСЫ(Н)** *и. диал. ҡар.* **уймаҡ.** ■ *Мысырҙа эшләнгән йөн буяуҙары, теген һәм бәйләм энәләре, бармаҡсындары һәм ҡайсылары үтемле була.* Н. Мусин.

**БАРМАҠСЫН** (Р.: палец *(у перчатки)*; И.: finger; Т.: parmak) *и.*

**1.** Бирсәткә бармағы. □ Палец *(у перчатки)*. ■ *Аҡ бирсәткәң бармы әллә, бармаҡсыны тармы әллә.* Халыҡ йырынан.

**2.** Бармаҡҡа кейҙерә торған күн йәки резина ҡап. □ Напальчник. *Дарыухананан бармаҡсындар алырға кәрәк.*

**3.** *диал.* Һалҡында эшләгәндә бармаҡтарға тиренән тегелгән ҡулайлама. □ Специально сшитые для пальцев меховые чехлы, используемые во время работы в холодную погоду. *Бармаҡсыным йыртылған.*

**4.** *диал. ҡар.* **бирсәткә.**

**БАРМАҠТАМЫР** (Р.: пальчатокоренник; И.: orchid species; Т.: salep) *и. бот.*

Орхидеяның бер төрө *(тамырҙары төпкә табан бармаҡтар һымаҡ айырылып китеүенә ҡарата аталған)*. □ Пальчатокоренник (лат. *Dactylorhiza*). *Бармаҡтамыр сәскә атҡан. Бармаҡтамыр — күп йыллыҡ үҫемлек.*

**БАРМАҠ ХӘЙЕРЕ** (Р.: подаяние для избавления от болезней пальцев; И.: alms for medicinal purposes; Т.: sadaka) *и. миф.*

Бармаҡ ауырыуҙарынан арынып өсөн бирелгән хәйер. □ Подаяние для избавления от болезней пальцев. ■ *Бармағым шешкән ине, күрше әбей бармаҡ хәйерҙәре бирергә ҡушты. Табаҡҡа он һалырға, шул онға ун бармаҡты төшөрөргә, шул ондо кешегә хәйер итеп бирергә кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАРМАҠ ЭҘЕ** (Р.: отпечатки пальцев; И.: finger prints; Т.: parmak izi) *и.*

Һәр кешенең үҙенә генә хас булған бармаҡ йөҙөндәге биҙәктәр. □ Отпечатки пальцев. *Һәр кешенең үҙенә генә хас бармаҡ эҙҙәре була.* ■ *[Ғата] әллә ни арала шешәне асыуы булды, нисәмә табындашының бармаҡ эҙе сыбарлап бөтөргән ике стаканға хәмерҙе субырҙатып ҡойоп та ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

**БАРМАҠ ЭҘҘӘРЕН ТӨШӨРӨҮ (бармаҡ эҙҙәрен төшөр-)** (Р.: дактилоскопирование; И.: finger printing; Т.: daktiloskopi) *к.*

Бармаҡ эҙҙәре буйынса тере кешеләрҙең һәм мәйеттәрҙең шәхесен билдәләү маҡсатында үткәрелгән ғәмәл. □ Снимать отпечатки пальцев. // Дактилоскопирование. *Енәйәтселәрҙең бармаҡ эҙҙәрен төшөрөп алыу.* ■ *[Әхмәтхан:] Кисә мине прокуратураға саҡырттылар... Улар бөтәһен дә белә, ҡыҙым, хатта бармаҡ эҙҙәрен [төшөрөп] алдылар...* Р. Камал.

**БАРМАН I** *и. диал. ҡар.* **байлыҡ.** ● *Барҙыҡы барман менән, юҡтыҡы дарман менән.* Әйтем.

**БАРМАН II** *и. диал. ҡар.* **фарман.** *Барман биреү.*

**БАРМЕН** [рус. < ингл. *bar* 'бар' + *man* 'кеше'] (Р.: бармен; И.: barman; Т.: barmen) *и.*

**1.** Барҙың хужаһы йәки идара итеүсеһе. □ Бармен.

**2.** Барҙа эсемлектәр һәм ашамлыҡтар һатыусы хеҙмәткәр. □ Бармен.

**БАРНАҒЫЛ** *и. ҡар.* **барнау I.** ■ *[Ҡорбан:] Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем эшләйһең, ә эш хаҡы атлыға көнөнә — 3 барнағыл, йәйәүлегә — 2 барнағыл.* А. Таһиров.

**БАРНАҠ (барнағы)** *и. диал. ҡар.* **бармаҡ.**

**БАРНАУ I** (Р.: трёхкопеечная медная монета; И.: penny; Т.: üç kuruşluk para) *и. иҫк.*

**1.** Боронғо өс тинлек баҡыр аҡса. □ Трёхкопеечная медная монета. ■ *Эй ҡоҙаның бүләге, ошомо икән күргәне, етмешлек тип*

*көткән булһаҡ, һуҡыр барнау биргәне.* Туй йырынан. ● *Бер барнау юҡ кеҫәлә, ике күҙе бисәлә.* Мәҡәл.

**2.** Аҡса һанау берәмеге. □ Денежная единица измерения.

**БАРНАУ II** (Р.: дорогой; И.: dear; Т.: değerli) *с. иҫк.*

Ҡәҙере булған, ҡәҙерле. □ Дорогой. ■ *Малын түгел, йәнен алырбыҙ, Мәжит илгә барнау ир түгел.* Халыҡ йырынан.

**БАРНИК (барнигы)** [рус.] (Р.: парник; И.: teapot; Т.: çaydanlık) *и. диал.*

Сәйгүн. □ Парник, чайник. *Барникка сәй һалыу. Барникта сәй ҡайнатыу.*

**БАРРЕЛЬ** [рус. < ингл. *barrel*] (Р.: баррель; И.: barrel; Т.: barel) *и. махс.*

Бөртөклө һәм шыйыҡ матдәләрҙе үлсәү берәмеге. □ Баррель. *Инглиз барреле 163,65 литрға, АҠШ-та шарап барреле 119,24 литрға, нефть барреле 159 литрға тигеҙ. Йөҙ баррель нефть.*

**БАРОКАМЕРА** [рус. < гр. *baros* 'ауырлыҡ' + *камера*] (Р.: барокамера; И.: pressure chamber; Т.: barometrik hücre) *и.*

Герметик ябыла торған юғары йәки түбән баҫымлы камера. □ Барокамера.

**БАРОККО** [рус. < ит. *barocco* 'сәйер, ғәжәп, хикмәтле'] (Р.: барокко; И.: baroque; Т.: barok) *и. архит.*

XVI–XVIII быуаттарҙағы Көнбайыш Европа архитектураһы һәм скульптураһында булған ныҡ биҙәкле стиль. □ Барокко. *Барокко стилендә.*

**БАРОМЕТР** [рус. < гр. *barok* 'ауырлыҡ' + *metreo* 'үлсәйем'] (Р.: барометр; И.: barometer; Т.: barometre) *и.*

**1.** Атмосфера баҫымын үлсәй торған прибор. □ Барометр. *Терегөмөшлө барометр.* ■ *Әхмәтов өс көндән бирле барометр менән маташа. Көн дә ҡыҙыл мөйөшкә инә лә, барометрҙың быялаһына сиртеп ҡарай.* С. Агиш.

**2.** *күсм.* Эш-хәлдең барышын сағылдырған күрһәткес. □ Барометр. ■ *Өйҙәренә фырт ҡына кейенгән оҙон буйлы, һарғылт сәсле егет килеп ингәс, [Гәлиәнең] кәйеф ҡылдары йәшенде күрһәтеүсе барометр стрелкаһы кеүек ҡалтыранып та ҡуйҙы.* Р. Солтангәрәев.

**БАРОН** [рус. < фр. *baron* 'кеше, ир'] (Р.: барон; И.: baron; Т.: baron) *и.*

Көнбайыш Европала: графтан түбәнге дворянлыҡ титулы һәм шул титулдағы кеше. □ Барон.

**БАРРИКАДА** [рус. < фр. *barricade* 'мискәләр өйөмө'] (Р.: баррикада; И.: barricade; Т.: berikat) *и.*

Урам һуғышында: һәр төрлө нәмәнән өйөлгән нығытма. □ Баррикада. *Баррикада ҡороу. Баррикаданы нығытыу.*

**БАРС** *и. ҡар.* **барыс.**

**БАРСА I** [фарс. پارچه 'туҡыма] (Р.: парча; И.: brocade; Т.: sırma kumaş) *и. туҡ.*

**1.** Уҡалы ебәк туҡыма. □ Парча. *Барса күлдәк. Ҡытай барсаһы.*

**2.** *диал.* Туҡымалағы эре биҙәк. □ Крупный узор на ткани. ■ *Аҡлы ситса, алма барса иң яратып кейгәнем.* Халыҡ йырынан. *Французҡай яулыҡ. ай. барсаһы башҡа яулыҡтарҙа булһасы, һеҙҙең генә кеүек уңған ирҙәр барса илдәрҙә лә булһасы.* Халыҡ йырынан.

**БАРСА II** [боронғо төрки *барча* 'бар, барлыҡ'] (Р.: весь; И.: all; Т.: bütün) *билд. а.*

Бөтә булған; тотош, һәммә. □ Весь, вся, всё; все. ■ *Әйтерһең, тауҙар, урмандар, йылғалар, барса тереклек шетелер-шетелмәҫ кенә тауыш менән уға ҡушыла.* Н. Мусин.

**БАРСАЛАУ (барсала-)** *ҡ. диал. ҡар.* **биҙәкләү 1.** *Барсалап тороп тегәбеҙ.*

**БАРСАЛЫ** (Р.: узорчатый; И.: patterned; Т.: bezekli) *с. диал.*

Биҙәкле. □ Узорчатый. *Барсалы тауар.* ■ *Уға бик елле барсалы шәл алып ҡайтҡайны ул.* Ә. Хәкимов.

**БАРСАҺЫ** (Р.: все; И.: everybody; Т.: hepsi) *а. диал.*

Бөтәһе. □ Все. *Барсаһына күп-күп сәләм.* ■ *Ҡәрҙәштәрем, барсағыҙға күп-күп сәләм, һеҙҙәргә бәғд әс-сәләм ғибрәт кәләм.* М. Аҡмулла.

**БАРСЫЛЛЫҠ (барсыллығы)** *и. диал. ҡар.* **барлыҡ II.** *Барсыллыҡта йәшәү.*

**БАРСЫН** [боронғо төрки *барчын* ‘бәрхәт’] (Р.: шёлковая ткань; И.: silk texture; Т.: ipek) *и.*

Ебәк туҡыма. □ Шёлковая ткань. *Барсын шәл. Барсын күлдәк.*

**БАРҪ** *с. диал. ҡар.* **барыҫ.**

**БАРТАБАН** (Р.: сюда; И.: this way; Т.: buraya) *р. диал.*

Бирьяҡҡа. □ Сюда, в эту сторону. *Бартабан килә, инеүе бар.*

**БАРТАЛ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-минцев.

**БАРТАН** (Р.: обидчивый; И.: touchy; Т.: alıngan) *с. диал.*

Үсексән. □ Обидчивый. *Бигерәк бартан инде үҙе. Бартан булырға ярамай.*

**БАРТАН ИТЕҮ (бартан ит-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бартанлау**.

**БАРТАНЛАУ (бартанла-)** (Р.: таить злобу; И.: harbour a grudge; Т.: kırılmak) *ҡ. диал.*

Үсегеү, үпкәләү. □ Таить злобу, обижаться. / Злоба, обида. *Бартанлай ҙа йөрөй, бер һүҙ күтәрмәй.* ■ *Аллағолдоң ҡаҙаҡ нәҫеленә ҡатнашҡаны ла еткән, ҡыҙымды илһеҙ-ерһеҙ берәҙәккә бирмәйем, тип атаһы ғына бартанлап китмәһә...* Н. Мусин.

**БАРТАНСЫЛ** (Р.: обидчивый; И.: touchy; Т.: kırılgan) *с. диал.*

Үсексән, кенәле. □ Обидчивый, вредный. *Бигерәк бартансыл инде үҙе.*

**БАРТЕР** [рус. < ингл. *barter*] (Р.: бартер; И.: barter; Т.: barter) *и.*

Аҡса иҫәбенән тауарҙар алмашынып сауҙа итеү. □ Товарообмен, меновая торговля.

**БАРХАН** (Р.: бархан; И.: sand dune; Т.: barkanlar) *и.*

Сүлдә һәм далала үҫемлек менән ныҡытылмаған ташылдыҡ ҡом убаһы. □ Бархан. *Бархан ҡомдары. Бархан тауҙары.*

**БАРЫ I** [боронғо төрки *бары* ‘бөтә’] (Р.: все; И.: all, every; Т.: hepsi) *билд. а.*

Һан, күләм йәһәтенән тулылыҡты белдерә; барлыҡ, бөтә, һәммә. □ Все. ■ *Беҙгә команда булды. Барыбыҙ ҙа, блиндаждан сығып, окоп буйҙарына таралдыҡ.* Д. Юлтый. *Килен төшкәс, уның бөтә алтын-көмөшлө һандыҡтарын, ебәк күлдәктәрен, уҡалы камзулдарын, сафьян ситектәрен, талир тәңкә ҡашмауҙарын — барын да аҡ келәткә тултырҙылар, ти.* Әкиәттән. *Тыуып үҫкән Дим буйҡайы йәнгә яҡын барынан.* Халыҡ йырынан.

**БАРЫ II** (Р.: только; И.: just; Т.: ancak) *киҫ.*

Һан, күләм йәһәтенән сикләй; тик. □ Только, лишь, всего лишь, всего. ■ *Бары тик аслыҡтан хәлһеҙләнгән биш-алты сырхау әсирҙе лагерҙан алып сыҡтылар.* Ә. Хәкимов. *Ул бары шунда ғына Айҙар ҡулындағы сепрәктәрҙең ҡайҙан йолҡоп алынғанын төшөндө.* М. Кәрим.

♦ **Ни бары** бөтә булғаны, барлығы. □ Всего лишь, всего-навсего. *Ҡыш буйына ни бары бер ай эшләгән.* ■ *Гөлмәҙинәһенә ни бары егерме биш йәш.* Я. Хамматов. *[Гөлбаныу:] Ни бары һинең йомшаҡлығыңдан. Артыҡ буйлатһаң теге, үҙеңә төкөрөп, икенсе бирәүгә лә сығып китер.* Н. Мусин.

**БАРЫБЕР (бары ла бер)** (Р.: всё равно; И.: it is all the same; Т.: nasıl olsa) *р.*

**1.** Нисек кенә булмаһын, ни булһа ла. □ Всё равно, как бы там ни было. ■ *Йәғни Ирназар үҙе һөттән аҡ, һыуҙан пак, ә мәрхүм атаһы барыбер ғәйепле булып ҡала түгелме ни?* Ә. Хәкимов. *Сығып һуғышһам, шул күренеште боҙор инем. Мин барыбер телгә ярлы.* Д. Шәрәфетдинов. *Урамдарҙа, ысынлап та, ел ул ҡәҙәре көслө түгел, ә Флүрә барыбер ҙә һис йылына алманы.* Ш. Хажиәхмәтов.

**2.** Айырмаһы, әһәмиәте юҡ, бер тигеҙ; берҙәй. □ Всё равно, без разницы. *Кем булһа*

*ла миңә барыбер.* ■ *Нурания, миңә барыбер, — Ғилемхан ҡырт киҫте.* Р. Камал.

**БАРЫЛЫУ (барыл-)** *ҡ. эйһ. ҡар.* **барыу 1.** *Өфөгә һуңғы арала йыш барыла.*

**БАРЫМ** (Р.: стремление; И.: aspiration; Т.: heves) *и.*

**1.** Ысын теләк; ихласлыҡ. □ Стремление, тяга. ■ *[Зифа:] Һеҙ һуғышҡа китеп бөткәс, артелгә председатель итеп ҡуйғайнылар уны, шул саҡта халыҡтың теңкәһенә тейҙе, үҙәктәренә үтте, шуны онота алмайҙар. Әле нисек һуң, эшкә барымы бармы?* Н. Мусин.

**2.** Булдыҡлылыҡ, һәләтлек. □ Способность. ■ *Һүрәтте һәйбәт төшөрә тиһәләр ҙә, Хөсәйендең ул яҡтан әллә ни барымы юҡ кеүек: аттары ғына шәп килеп сыға.* Т. Ғарипова. *Күҙе рәтләп күрмәгәнгәме, Шәһиттең балыҡ мәскәүләргә барымы юҡ ине.* Н. Мусин. *Ғилемгә барымы булмаһа ла, Ғата бәләкәйҙән һәр төрлө тимер-томорға, машинаға әүәҫ ине.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Көс, хәл. □ Сила. *Ауыр эшкә барымың юҡ шул, ҡустым. Барымым бөтөп китте.*

**4.** *Ниҙеңдер* алға, ыңғайға китеше. □ Развитие, прогресс. *Эш барымы. Сауҙа барымы арыу ғына.*

**БАРЫМЛЫ** (Р.: способный; И.: capable; Т.: yetenekli) *с.*

**1.** Булдыҡлы, һәләтле. □ Способный, умелый. *Уҡыуға барымлы. Йырға барымлы ғына.*

**2.** Эшкә, уҡыуға шәп. □ Старательный, работящий. ■ *[Сәйет] йомош-юлға етеҙ, эшкә барымлы булған.* Ә. Вахитов.

**3.** Көслө, хәлле. □ Сильный, мощный. *Барымлы ат. Барымлы кейәү.*

**4.** Алға киткән, үҫешкән. □ Развитый, прогрессивный. *Барымлы шөғөл. Барымлы кәсеп.*

**БАРЫМСЫҠ (барымсығы)** (Р.: жених; И.: bridegroom; Т.: nişanlı) *и. иҫк.*

**1.** Ҡыҙҙың кейәүгә бара торған кешеһе. □ Жених. ■ *Барсын ырғып төшөп: «Барымсығым ошо минең», — тип Алпамышаға ҡарты йүгерә.* «Алпамыша».

**2.** Кейәүләп йөрөүсе егет. □ Навещающий невесту в отчем доме до приведения её в свой дом.

**БАРЫМТА** [дөйөм төрки *барым* 'мөлкәт' < монг. *баримта* 'тотоу'] (Р.: набег; И.: raid; Т.: baranta) *и.*

**1.** *тар.* Мал-мөлкәтен, ҡатын-ҡыҙҙы талап алыу өсөн сит ырыуға яһалған һөжүм. □ Баранта *(набег на соседние племена с целью угона скота, похищения женщин и грабежа имущества),* набег. ■ *Хан был ырыуҙарҙан үсте икенсе төрлө алыу юлына баҫты, эске ырыуҙарҙы уларҙың биләмәләренә барымта яһарға ҡоторттo, әленән-әле малдарын, мөлкәтен талатты.* З. Ураҡсин. ● *Барымтаға — барымта, ҡарымтаға — ҡарымта.* Әйтем. *Барымтанан ҡурҡҡан мал йыймаҫ.* Мәҡәл.

**2.** *диал.* Ҡаршы саҡырыу. □ Ответное приглашение в гости. *Барымтаһын ҡайтарыу.*

**БАРЫМТАЛ** (Р.: ходкий; И.: fast; Т.: hızlı) *с. диал.*

Тиҙ йөрөшлө. □ Ходкий, быстроходный. *Барымтал ат.*

**БАРЫМТАЛАУ (барымтала-)** (Р.: совершать баранту; И.: raid; Т.: saldırmak) *ҡ. тар.*

Барымта яһау. □ Совершать баранту, набег. // Баранта, набег. ■ *Бер саҡ шулай йәйләүҙә ятҡанда быға [Айбағышҡа] хәбәр килтерәләр: «Бөтә йылҡы малын барымталап ҡыуып алып киттеләр».* Риүәйәттән. *Һис уйламағанда-көтмәгәндә барымталанылар [ҡаҙаҡтар].* Ф. Аҡбулатова.

**БАРЫМТАЛАШЫУ (барымталаш-)** (Р.: совершать ответную баранту; И.: reciprocal raid; Т.: cevap baranta) *ҡ. тар.*

Ҡара-ҡаршы барымта яһау. □ Совершать ответную баранту, набег. // Баранта, набег. ■ *Кире иленә ҡайтҡан башҡорт ир-аты, ҡоралланып, ҡаҙаҡтарға һөжүм итә. Бына шулай барымталашыу, ҡарымталашыуҙар башлана.* Ә. Сөләймәнов. *[Василий Петрович:] Башҡорттар ҙа, ҡайсаҡтар ҙа тыныс ҡына ятмай, бер-береһенә барымта-*

*лашыуҙары етмәгән, дәүләт кешеләренә лә ҡағылғылайҙар.* З. Ураҡсин.

**БАРЫМТАСЫ** (Р.: барантач; И.: raider; Т.: barantacı) *и. тар.*

Барымтала ҡатнашҡан кеше. □ Барантач *(делающий набег с целью захвата чужого скота и имущества).* ■ *Башлыҡтарын, бер нисә кешеһен юғалтҡан барымтасылар йылҡы көтөүен ҡалдырып ҡасырға мәжбүр була.* «Ҡарас менән Аҡша». *Байгилдененң этлеккә атланыуын һуңлап булһа ла белгәс, Боғара, ҡыйралышҡа юл ҡуймау өсөн, иллеләп һыбайлы яугирын эйәртеп, барымтасыларҙың эҙенән сапты.* Я. Хамматов.

**БАРЫМҺЫҘ I** (Р.: неспособный; И.: incapable; Т.: yeteneksiz) *с.*

**1.** Булдыҡһыҙ, һәләтһеҙ. □ Неспособный, неумеющий. ■ *Быны университетыбыҙҙың тел тикшереүсе абруйлы ғалимдары йәки сит телдәр өйрәнгән, елкәһен ҡашый-ҡашый һәр өн-хәрефтең ҡайһы ерҙән килеп сығыуын юллаған кеше түгел, хатта Шамиловтың иң барымһыҙ шәкерте лә аңлар!* Р. Солтангәрәев.

**2.** Эшкә, уҡыуға артыҡ теләге булмаған. □ Ленивый, не желающий работать, учиться. *Артыҡ эшләмәй, барымһыҙ ул.*

**3.** Көсһеҙ, хәлһеҙ. □ Слабый, немощный. *Барымһыҙ ат.*

**4.** Үҫешһеҙ. □ Не развитый, не прогрессирующий. *Эш барымһыҙ булып китте.*

**БАРЫНСА** (Р.: сколько есть; И.: as far as possible; Т.: mümkün derecede) *р.*

Мөмкин тиклем, хәлдән килгәнсә. □ Сколько есть, сколько имеется; по возможности; по силе возможности. *Барынса ашау. Барынса ҡулланыу.* ■ *Барынса ризыҡ хәстәрләрбеҙ, йәрәхәтеңде иртән ҡарармын.* Ә. Хәкимов. ● *Бар — барынса, юҡ — хәленсә.* Мәҡәл.

**БАРЫП СЫҒЫУ (барып сыҡ-)** (Р.: заглянуть; И.: glance; Т.: uğramak) *ҡ.*

**1.** *Кемгәлер* аҙ ваҡытҡа килеү, инеп сығыу. □ Зайти, заглянуть *(в гости). Ҡунаҡҡа барып сыҡ.*

**2.** Тормошҡа, бойомға ашыу. □ Претворяться в жизнь, исполняться. ■ *Эш Юламан ҡарт уйлағанса барып сыҡмай.* З. Биишева.

**БАРЫС** [фарс. پارس] (Р.: барс; И.: ounce; Т.: pars) *и.*

**1.** *зоол.* Бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡара сыбар һары төҫлө эре йыртҡыс һөтимәр йәнлек. □ Барс *(вид леопарда)* (лат. *Panthera pardus*). *Барыс бейек ҡарлы тауҙарҙа йәшәй.*

**2.** Ун ике мөсәлдең береһе. □ Барс *(один из двенадцати годов).*

**3.** Торки халыҡтарының тотемы, изге йәнлеге. □ Барс *(тотем).*

**БАРЫС ЙЫЛЫ** (Р.: год тигра; И.: year of the Tiger; Т.: Kaplan yılı) *и.*

Ун ике йыллыҡ мөсәлдең өсөнсө йылы. □ Год тигра. *Барыс йылы яҡшы килде.* ● *Барыс йылында барын сәс, һис булмаһа тары сәс.* Әйтем. *Эт йылында мал үҫер, барыс йылында бары үҫер.* Әйтем.

**БАРЫҪ** (Р.: плотный; И.: thickset; Т.: sağlam yapılı) *с. диал.*

Тулы, тығыҙ, йомшаҡ итле. □ Плотный *(о теле). Барыҫ итле ат. Барыҫ тәнле.*

**БАРЫН-ТАБЫН** (Р.: название башкирского рода; И.: Bashkir clan name; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табындарҙың бер ырыуы. □ Род в составе племени башкир-табынцев. ■ *Мырҙаларҙың ерҙәренең барын-табындар ауылы Түңғатарҙа, шулай уҡ Яйыҡтың үрге ағымында булыуы хаҡында легенда бар.* «Йәшлек», 10 июнь 2010. *Златоуст, Миәс, Һатҡы, Йүрүҙән-Ивановский һәм башҡа заводтар тарафынан аҫаба ерҙәре тартып алынған ҡара һәм барын-табын, һыҙғы, әйле һәм ҡыуаҡанлыларҙың бер өлөшө припущенниктар хәлендә ҡала.* Ә. Әсфәндиәров.

**БАРЫУ (бар-)** [дөйөм төрки *бар-* < *баар-* 'барыу', *барғу* 'йөрөү'] (Р.: идти; И.: go; Т.: gitmek) *ҡ.*

**1.** Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү. □ Идти, двигаться. // Ход, движение. *Йәйәү барыу. Поезд менән барыу. Шәп барыу.* ■ *Пароходтар бара, пристандәр байраҡ болғап оҙатып ҡалалар.* Ғ. Сәләм. *Бына ул бөгөн дә шулай бо-*

*шонон, ниндәйҙер күңелһеҙ уйҙарға бирелеп, эйәр ҡашағаһына таҡылған ҡымыҙ турһығы шикелле, мәйелһеҙ һалпаңлап бара.* З. Биишева. *Ауыл Әй аръяғында шул. район үҙәге Шиҙәлегә барайым тиһәң, йән сыға: йылға кисергә кәрәк.* Р. Камал. *Эшелон, йөрөшөн бер тиҙләтеп, бер әкренәйтеп, үҙ юҫығы менән туҡтауһыҙ бара ла бара.* Ә. Хәкимов.

**2.** *Ниндәйҙер* маҡсат менән ҡайҙалыр йүнәлеү. □ Идти, направляться *(с какой-то целью). Ауға барыу. Баҙарға барыу.* ■ *Федотов ҡына ҡиәфәтен үҙгәртмәне, ҡымшанмай алға ҡарап барыуында булды.* Ә. Хәкимов. *Улар бит мал аҙбарына бармайҙар, больницаға баралар, һәр нәмәнең үҙ рәте була.* М. Кәрим. *Шундай йомоштар арҡаһында бер-ике көн мин хеҙмәткә бара алманым.* Д. Юлтый.

**3.** Тәғәйенләнгән ергә етеү *(хат һ. б. нәмәгә ҡарата).* □ Дойти до определённого места назначения. ■ *Хат яҙғас, бер аҙ йөрәк баҫыла, күңел тынысланa: бәлки хат барыр, бәлки алып уҡырҙар.* Д. Юлтый.

**4.** *Ниндәйҙер* йүнәлештә булыу *(һүҙ, уй, ниәт кеүек нәмәгә ҡарата).* □ Быть *в каком-то* направлении *(о слове, мысли, намерении).* ■ *Ғәлләметдин шаян Сөләйҙең тел төбө ҡайҙа барғанын аңламайыраҡ ҡалды, күрәһең.* Ш. Насыров.

**5.** Дауам итеү, булыу *(эш, әңгәмә һ. б. ҡарата).* □ Идти, продолжаться *(о работе, разговоре и др.). Ҡыҙыу бәхәс бара. Һүҙ уның тураһында бара.* ■ *Имештер, гел «отлично»ға уҡыған малайһың, аңларға тейешһең, илдә ҡаты синфи көрәш бара.* Ә. Хәкимов. *[Егет — Алпамышаға:] Тиҙерәк ҡайт, унда бәйге бара. Һуңлап ҡалма.* «Алпамыша».

**6.** Билдәле бер йәште ҡыуыу. □ Идти *(о возрасте, сроке).* ■ *Ҡыҫҡыраҡ күҙле, өс йәше менән барған малай шым ғына тора.* Ә. Вәли. *Көлөп эс ҡатып бөткәйне, ул заманда Әсмәнең эсе көптәй ине бит, һигеҙенсе айы менән бара ине. Әле малай үҫтереп яталар.* Д. Буләков.

**7.** *Ниндәйҙер* ғәмәлдә кисереү; ғәмәлләшеү. □ Идти *(о каких-то делах). Һатыу насар бара. Эштәр яҡшы бара.*

**8.** Кейәүгә сығыу. □ Выходить замуж. // Замужество. ■ *[Зәйнәп:] Ғарифтың нисә ҡыҙ алып айырғанын бик яҡшы беләм. Мин уға үлһәм дә барасағым юҡ.* М. Ғафури.

**9.** *күсм.* Берәй йүнәлештә үҫеш алыу. □ Идти, развиваться в определённом направлении; направляться. // Ход, развитие. *Иҡтисади үҫеш алға бара.*

**10.** *күсм. Ниндәйҙер* эш, ҡылыҡҡа аҙым яһау. □ Идти, поступать *каким-л.* образом. *Түбәнлеккә барыу. Уҫаллығыңа бараһың.* ■ *Үҙ теләге менән шундай эшкә барыр инеме ни ул?* З. Биишева.

**11.** *күсм.* Ярарлыҡ булыу; ярау. □ Идти, подходить, использоваться. *Уҫаҡ балта һабына бармай. Йәшелгә йәшел бара.* ■ *Ҡустым, былай ҡара әле, бынау нәмә тушәк тышына барырлыҡ түгелме?* С. Агиш.

**12.** Тәҙ булыу; килешеү. □ Подходить, быть к лицу. *Был күлдәгең үҙеңә бигерәк бара.*

**13.** *күсм.* Үтемле булыу, үтеү. □ Употребляться, идти *(о еде). Тамаҡҡа аш бармай. Аҙыҡ бөтөнләй бармай бөгөн.*

**14.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, башҡа ҡылымдар менән ҡушма ҡылымдар яһай һәм эш-хәрәкәттең даими булыуын йәки һөҙөмтәгә яҡынлашыуын белдерә. □ В форме деепр. на *-п* основного глагола выступает в роли вспом. гл. и выражает регулярность действия или приближение его к конечному результату. *Барып ҡыҫылыу. Барып ҡушылыу. Барып тотаһыу. Барып ултырыу. Барып һуғылыу. Барып әйтеү. Барып етеү. Барып инеү. Барып ҡайтыу. Барып йөрөү.* ■ *Баярға һатылған ерҙән күрше ауылдыҡылар ике төп ҡарағай йыҡҡан, шуларҙы юллатып барып йөрөгәйне.* Н. Мусин.

**15.** *-п/-а* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең даимилыҡ йәки дауамлылыҡ мәғәнәһен белдерә. □ С деепр. на *-п/-а* основного гл. выступает в роли вспом. гл. Выражает постоянство или продолжительность действия. *Ҡайтып барыу. Уйлап ба-*

*рыу. Яҙып барыу.* ■ *Шуға күрә улар яр башындағы тар һуҡмаҡ буйлап каса-боҫа үтеп барыусы күлдәкһеҙ малайға иғтибар ҙа итмәнеләр.* М. Кәрим.

**16.** *-п/-а* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең *нимәгәлер* йүнәлеш алыуын белдерә. □ Выражает развитие действия. *Кәмей барыу. Бөтөп барыу. Көсәйә барыу. Ағара барыу. Ҙурая барыу.* ■ *Бына кәбән осланып та бара инде.* Н. Мусин. *Гөльямал нәҙек тауышы менән ҡәйнешенә ҡушылды: «...Үтеп кенә бара ғүмерем заяға».* Я. Хамматов.

**17.** Ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, *нимәгәлер* тиҙ генә ыңғайлауҙы белдерә. □ Выражает склонность *к чему-л. Ярһып барыу. Илап барыу.*

♦ **Ана бара юлың** *ҡар.* **ана 1. Ҡул барыу** *ҡар.* **ҡул. Уҙа барһа** күп булһа, күп тигәндә. □ Где-то, по крайней мере. ■ *Станция менән посёлка араһы уҙа барһа бер километр булыр.* Ж. Кейекбаев.

**БАРЫП СЫҠҠАН** (Р.: очень плохой; И.: wicked; Т.: fena) *с. диал.*

Үтә насар *(холоҡ тураһында).* □ Очень плохой *(о характере). Барып сыҡҡан алдаҡсы бит ул.*

**БАРЫҺЫ I** (Р.: все; И.: all; Т.: hepsi) *билд. а.*

Һан, күләм йәһәтенән тулылыҡты белдерә; бар булғаны, бөтә булғаны, бары. □ Все, все без исключения. ■ *Көндәлек эш менән буталып йөрөгәндә был турала уйланып та, баш ватып та маташҡандары юҡ, барыһы ла тейешенсә эшләнгән һымаҡ.* Р. Солтангәрәев. *Барыһы ла әле туҙан да ултырып өлгөрмәгән ерләм юлға текәлде.* Д. Бүләков.

**БАРЫҺЫ II** *күҫ. ҡар.* **бары II.** ■ *Ашығырға кәрәк ине, сөнки уға ни барыһы өс көн ваҡыт бирелде.* Ә. Хәкимов.

**БАРЫШ I** [боронғо төрки *барыш* 'йөрөү, йөрөш'] (Р.: ход; И.: motion; Т.: yürüyüş) *и.*

**1.** Бер йүнәлеш буйынса булған хәрәкәт. □ Ход. ■ *Аттың барышы менән .. Аҡназар ҡалғып, һуңғараҡ ойоп китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Бер *нәмәнең* үҫеше, дауам ителеше. □ Ход, развитие, процесс. *Ваҡиғалар барышы. Эш барышы.* ■ *Париждағы концерттарҙың барышын, ғәҙәттә, ундағы матбуғат ентекләп гәзит биттәрендә яҡтыртып барған һәм ул материалдар ҙа тулыраҡ өйрәнеүҙе көтәләр.* Р. Шәкүр. *[Аҙнаев:] Колхоздар эшкә теләһә кемде ебәрәләр, ә председателдәр эштең барышы менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай, береһе-бер үҙ кешеләре янына килеп әйләнгәне юҡ.* Н. Мусин.

**БАРЫШ II** (Р.: прибыль; И.: profit; Т.: kâr) *и.*

Табыш, матди файҙа. □ Барыш *(прибыль, материальная выгода). Ҙур барыш менән һатып ебәреү. Барышы юҡ.*

**БАРЫШ-ЙӨРӨШ** (Р.: передвижение; И.: movement; Т.: dolaşma) *и.*

Йөрөү, хәрәкәт. □ Передвижение. *Барыш-йөрөш ирекле. Барыш-йөрөшө менән айырылып тора.*

**БАРЫШЛАЙ** (Р.: по пути; И.: in passing; Т.: geçerken) *р.*

Барған ыңғайҙа. □ По пути, мимоходом, попутно; проездом. *Китеп барышлай. Үтеп барышлай.* ■ *Гәрәй .. ҡапҡанан сығып барышлай аңғармаҫтан башын арҡыры ағаска бәреп алды.* Б. Бикбай. *Ҡулға йүнәлтмә тотоп Баймаҡҡа китеп барышлай, уға тиклем йыйылып өлгөргән хәтирәләр төйөнсөгөн бер аҙ еңеләйтеп алыуҙы хуп күрҙем.* М. Ямалетдинов.

**БАРЫШЛАНДЫРЫУ (барышландыр-)** (Р.: барышничать; И.: sell with profit; Т.: alış veriş etmek) *ҡ. диал.*

Һатыу итеү. □ Барышничать. *Барышландырып ҡайтыу.*

**БАРЫШЫУ (барыш-)** (Р.: ходить друг к другу *(в гости)*; И.: visit each other; Т.: bir birini ziyaret etmek) *ҡ.*

Бер-береңә барыу. □ Ходить друг к другу *(в гости).* ■ *Улар [Күсәр менән Күсмәҫ] икеһе бик дуҫ булып, ҡунаҡҡа барышып, .. һунарға йөрөшөр булған, ти.* Әкиәттән.

**БАРЬЕР** [рус. < фр. *barrieres*] (Р.: барьер; И.: barrier; Т.: bariyer) *и.*

**1.** Спортта, циркта ырғып сығыу өсөн ҡуйылған кәртә. □ Барьер. *Барьер аша һикереү.*

**2.** *Ниндәйҙер* урынды бүлеп торған тәпәшәк кәртә. □ Барьер. *Балкон барьеры.* ■ *Мин үлсәгән тауарҙарҙы контролёрға, барьер артындағы кешегә, илтә торам.* С. Агиш.

**3.** *күсм. Ниндәйҙер* ҡаршылыҡ. □ Барьер. *Ижадтағы барьер. Төрлө барьерҙар эшкә ҡамасаулай.*

**БАС** [рус. < ит. *basso* 'түбән'] (Р.: бас; И.: bass; Т.: basso) *и. муз.*

**1.** Иң ҡалын ирҙәр тауышы. □ Бас. *Бас менән йырлау.* ■ *Ҡарттың буйы оҙон, кәүҙәһе ҡалын, .. тауышы ҡалын. Ысын бас. Күкрәп тора.* Ҡ. Даян. *[Индрил:] Әйҙә күтәрегеҙ, күтәрегеҙ! — Үҙе бас менән һуҙа башлай. Беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡушылабыҙ.* Д. Юлтый. *Сәнғәт әһелдәре уны [Илдар Абдразаҡовты] донъя кимәлендә иң шәп бас тауышлы опера йырсыһы тип баһалай.* «Ағиҙел», № 2, 2010.

**2.** Шундай тауыш менән йырлаусы. □ Бас *(человек поющий басом). Танылған бас.*

**3.** Музыка ҡорамалдарының бас баҫмағы. □ Басовая клавиша *(гармони и пр.). Басҡа баҫыу.*

**4.** Түбән регистрҙағы ҡыллы йәки тынлы музыка ҡоралы. □ Бас. *Бас ҡылы. Баста уйнау.*

**БАСА** (Р.: шкурки лисьих и куньих лап; И.: fox and marten furs; Т.: tilki derisi parçaları) *и.*

**1.** Төлкө, һыуһар кеүек йәнлектең сираҡ тиреһе. □ Шкурки лисьих и куньих лап. *Басаларҙы айырым тунарға кәрәк.*

**2.** *с. мәғ.* Шул тиренән тегелгән. □ Сшитый из шкурок лисьих и куньих лап. ■ *[Ханнан:] Йәмәғәт, ике ырыуҙың уртаҡ түйын башҡарыусы Байдәүләт ҡоҙаға минән бер ат, ҡоҙағыйҙарға баса тун.* М. Буранғолов. *Дәүләтшаның өйөндә эленеп тора баса тун. Аҡмулланы үлтергәс, Дәүләтшалар ҡаса шул.* Бәйеттән. ● *Ҡыҙы барҙың наҙы бар, баса күрпәһе лә бар.* Мәҡәл.

**БАСИРӘТ** [ғәр. بصيرة 'аң'] (Р.: сознание; И.: consciousness; Т.: bilinç) *и. иҫк.*

Аң, аңлылыҡ. □ Сознание; ум, разум. ■ *Тәсанифе басирәтте ярыҡ ҡылған, нәфес хәсис араһын фәрҡ ҡылған.* М. Аҡмулла.

**БАСИСА** (Р.: высший сорт кудели; И.: tow extra class; Т.: kıtık) *и. диал.*

Шырттан тартылған иң юғары сортлы етен. □ Высший сорт льна. *Басисанан күлдәк тегеү.*

**БАСКЕТБОЛ** [рус. < ингл. *basket-ball*] (Р.: баскетбол; И.: basketball; Т.: basketbol) *и.*

Ике команда ярышып, ике яҡ бағаналағы сеткалы кәрзиндәргә туп ырғытыша торған спорт уйыны. □ Баскетбол. *Баскетбол ярышы. Баскетбол уйнау.*

**БАСКЕТБОЛСЫ** (Р.: баскетболист; И.: basketball player; Т.: basketbolcu) *и.*

Баскетбол уйнаған кеше. □ Баскетболист, игрок в баскетболе. *Баскетболсыларҙың еңеүе. Баскетболсы ҡыҙ.* ■ *Моғайын, спортсмендыр... — тип уйланы Рая. — Штангисмы, әллә самбисмы икән? Ә, бәлки, баскетболсылыр.* Р. Солтангәрәев.

**БАСКЕТБОЛ УЙЫНСЫҺЫ** *и. ҡар.* **баскетболсы.** ■ *Батырҙың был уйы Хәлиткә лә оҡшаны. Бына улар баскетбол уйынсыһы һымаҡ арҡандың бер осон өрлөк өҫтөндәге тишеккә тоҫҡап ырғыта башланылар.* Н. Ғәйетбаев.

**БАСҠАҠ (басҡағы)** [дөйөм ҡыпсаҡ *баскак* ] (Р.: баскак; И.: tribute collector; Т.: baskak) *и. тар.*

Бойондороҡло ил халҡынан яһаҡ йыйыусылар башлығы. □ Баскак *(представитель ханской власти и сборщик дани). Һәр бер кенәзлеккә айырым басҡаҡ тәғәйенләнә.*

**БАСЛЫҠ (баслығы-)** *и. диал. ҡар.* **баҫҡыс.**

**БАСМА I** [фарс. باسمهاي 'ситса'] (Р.: ситец; И.: calico; Т.: basma) *и. диал.*

Ситса. □ Ситец. *Басма тауар. Басма күлдәк.*

**БАСМА II** (Р.: басма; И.: black hair dye; Т.: basma) *и.*

Индигофера япрағы онтағы *(сәс буяу өсөн).* □ Басма *(порошок из листов индигоферы для окрашивания волос). Басма менән сәс буяу.*

**БАСНЯ** [рус.] *и. ҡар.* **мәҫәл.**

**БАССЕЙН** [рус. < фр. *bassin* ] (Р.: бассейн; И.: swimming pool; Т.: havuz) *и.*

**1.** *спорт.* Йөҙөү, һыу инеү өсөн йәки төрлө һынау үткәреү өсөн хеҙмәт иткән махсус яһалма күл һәм шундай яһалма күле булған ҡоролма. □ Бассейн. *Бассейнға йөрөү.* ■ *Һәр кемгә лә йыл әйләнәһенә йылғакүлдәрҙә йөҙөү мөмкинлеге юҡ, шуның өсөн дә күпселек халыҡҡа бассейнға йөрөргә тура килә.* «Ашҡаҙар», 11 декабрь 2010. *Өс төрлө бассейн: береһендә — һалҡын, икенсеһендә — йылымса, өсөнсөһөндә ҡайнарыраҡ һыу.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

**2.** *геогр.* Йылға һәм уның ҡушылдыҡтары биләгән майҙан. □ Бассейн. *Йылға бассейны.* ■ *Беҙҙең икенсе төп бурысыбыҙ — йылғаларҙың бассейндарын һаҡлаусы шарттар тыуҙырыу.* Н. Мусин. *Һәләүек бассейны — өс ҡаланың: Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауаттың үпкәһе.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**3.** *геол.* Билдәле бер ҡаҙылма байлыҡтар ятҡан өлкә. □ Бассейн. *Күмер бассейны. Тоҙ ятҡылығы бассейны. Тимер рудаһы бассейны.*

**4.** *астр.* Эре метеорит бәрелеүе арҡаһында планеталар йөҙөндә барлыҡҡа килгән ҡулса формаһындағы батынҡы урын. □ Бассейн. *Марстағы бассейндар.*

**БАСТИОН** [рус. < фр. *bastion*] (Р.: бастион; И.: bastion; Т.: tabya) *и. хәрби.*

Биш мөйөшләп эшләнгән хәрби нығытма. □ Бастион. ■ *Ҡояш ҡып-ҡыҙыл шар булып офоҡ ситенә ҡалҡыуға, ҡалғанның беренсе бастионындағы иң ҙур туптан форштат яғына ҡараған көслө атыу тауышы яңғыраны.* З. Ураҡсин.

**БАСТИТ** (Р.: пирожки мясные; И.: meat patty; Т.: etli börek) *и. диал.*

Итле ваҡ бәлеш. □ Пирожки мясные. *Ҡамырға ит ҡыҫтырып бастит бешереп алам.*

**БАСТРУК (баструғы)** [рус. *острог*] (Р.: острог; И.: prison; Т.: hapis) *и. иҫк.*

Төрмә. □ Острог, тюрьма. ■ *Юлай ҙа улы батыр Салауат баструкта ултыра — өйҙә юҡ.* Халыҡ йырынан. *Самсон бабай, әйт әле, Егор Николаевич теге ваҡытта ауҙарған өсөн минән шулай үс алдымы икән? Ниңә үҙемде баструкка оҙатманы икән?* З. Ураҡсин. *Алдар батыр ҙа Себер ҡалғаларында, баструктарында әллә күпме драгундар хеҙмәт итеүен онотмай.* Н. Мусин.

**БАСУДНИК** [рус.] (Р.: полка для посуды; И.: shelf for tableware; Т.: dolap) *и. диал.*

Һауыт-һаба кәштәһе. □ Полка для посуды. *Басудник яһап бир әле.*

**БАСЫМ** *с. диал. ҡар.* **йыуаш.** *Басым кешегә баҡа баш.*

**БАСЫНЫУ (басын-)** (Р.: вышивать; И.: embroider; Т.: nakışla süslemek) *ҡ. диал.*

Әйбер сигеү. □ Вышивать. *Басынып ултыра.*

**БАСТЫРЫҠ (бастырығы)** *и. диал. ҡар.* **баструк.**

**БАСЫР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Дыуан ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-дуванцев.

**БАСЫУ** (Р.: молотьба; И.: threshing; Т.: harman) *и. диал.*

Ашлыҡ һуғыу. □ Молотьба. *Басыу эше башланды.*

**БАСЫУ БАУЫ** *и. диал. ҡар.* **ишек бауы.**

**БАҪА I** [ҡыт.] (Р.: посконь; И.: mail cannabis; Т.: esrar) *и. бот.*

**1.** Яҡшы сүс бирә торған нәҙек һабаҡлы ата киндер. □ Посконь, замашка. *Баҫа йолҡоу. Баҫа талҡыу.*

**2.** Шул үҫемлектән алынған сүс. □ Посконина. *Баҫа еп. Баҫа күлдәк.* ■ *Түңәрәккәй күлгә баҫа һалдым, булғандыр инде баҫаһы, инәкәй. Баҫаларын иләп һуға алмам, һылауыңдан инде һыу алмам.* Сеңләүҙән.

**БАҪА II** *и. диал. ҡар.* **баҫмаҡ I.** *Гармун баҫалары эшләмәй.*

**БАҪАҠАЙ** (Р.: ступенька; И.: step; Т.: basamak) *и. диал.*

Баҫҡыс. □ Ступенька. *Ағас баҫаҡай. Таш баҫаҡай. Баҫаҡайҙы йыуып алдым.*

**БАҪАЛҠА** (Р.: спокойный характер; И.: reserved; Т.: sakin) *и.*

Тыныс, һалҡын тәбиғәт, ҡылыҡ, характер. □ Спокойный, уравновешенный, сдержанный, скромный характер. ■ *Баҫалҡаһы булмаһа, батыр яуҙа еңә алмай.* Ҡобайырҙан.

**БАҪАЛҠАЛЫ** *с. ҡар.* **баҫалҡы.** *Баҫалҡалы кеше.*

**БАҪАЛҠЫ** (Р.: спокойный; И.: quiet; Т.: sakin) *с.*

**1.** Тыныс, һалҡын тәбиғәтле; баҫалҡылы. □ Спокойный, уравновешенный; сдержанный. *Баҫалҡы ғына холоҡло.* ■ *Конкрет һүрәтләнгән ошондай ваҡиғалар үҙҙәре үк төп герой Йәғәфәрҙең ер кешеһенә хас баҫалҡы, шул уҡ ваҡытта олпат һәм ныҡышмалы характерын ярайһы уҡ асып һала.* Р. Байымов. *Әсәйем баҫалҡы ғына яуап бирә: «Оҡшатмай әллә. Бынамын тигәнсе. Егет кеше лә инде ул».* Н. Мусин.

**2.** Тыйнаҡ, инсафлы. □ Скромный, пристойный. *Баҫалҡы ҡыҙ. Баҫалҡы булыр кәрәк.* ■ *Тормошта зарлана белмәгән, хәйләһеҙ, баҫалҡы, гүзәл Хәйретдин тыныс ҡына мәңгелек йоҡоға китте.* Я. Хамматов. *Бибиөммөгөл, ысынлап та, ғәжәп баҫалҡы, ягымлы, сабыр, эшһөйәр кеше ине.* Д. Бүләков.

**3.** Шым, әкрен. □ Тихий. ■ *Һыуҙан ҡайтһа, биҙрәләрен иҙәнгә дыңғылдатып ултырта, ҡурала эш бөтөрөп йөрөгәндә, ҡыҙ баҫалҡы тауыш менән моңло итеп йырлай, сәбәпһеҙҙән көлөп ебәрә.* Ә. Хәкимов.

**БАҪАЛҠЫЛАНЫУ** **(баҫалҡылан-)** (Р.: становиться тихим; И.: become quiet; Т.: yavaş olmak) *ҡ.*

Баҫалҡыға әйләнеү. □ Становиться тихим, спокойным. // Спокойствие. *Холҡо баҫалҡыланған. Бигерәк баҫалҡыланып киткән.* ■ *Зифа иһә ҡапыл ғына йыуашайып, баҫалҡыланып ҡалғайны: күҙҙәрендәге шаталаҡ ут һүнгән, йөҙө ағарып, уйсанланып киткән, әйтерһең, әле генә бында ул түгел, бөтөнләй икенсе бер еңел холоҡло ҡатын торған.* Н. Мусин. *Сажидә ҡапыл баҫалҡыланды, йыуашайҙы, сөм-ҡара күҙҙәрендәге шаталаҡ осҡондар һүнде, нәҙек ҡыйғас ҡашы тағы ла ныҡыраҡ дуғаланып, ҡарағусҡыл биттәрендә уйсанлыҡ һыҙаттары хасил булды.* Д. Бүләков.

**БАҪАЛҠЫЛЫҠ (баҫалҡылығы)** (Р.: сдержанность; И.: composure; Т.: ölçülülük) *и.*

**1.** Баҫалҡы булыу сифаты, тыныслыҡ, тыйнаҡлыҡ. □ Сдержанность, уравновешенность. *Баҫалҡылыҡ менән яуап биреү.* ■ *Тәүҙәге алабарман сабырһыҙлығы баҫыла бирҙе, һуғыш тураһында бер ҡатлыраҡ, еңел-елперәк уйҙары юғалды. Һалҡын ҡанлылыҡ, баҫалҡылыҡ сифаттары һыҙатлана башланы.* Ә. Хәкимов.

**2.** Тыйнаҡлыҡ, инсафлыҡ. □ Скромность; пристойность. *Баҫалҡылыҡ кешене матурлай.* ■ *Тик үҙ тойғоңдо яп-яланғас ҡалдырып, шалтырауыҡлы һүҙҙәр менән асып һалыуҙы Юлдаштың яратмауын, баҫалҡылыҡты ғына хуплауын хәтерләп, аттестатты һүҙһеҙ генә йөрәгенә баҫты [Зарифа].* З. Биишева.

**БАҪА ТОРҒАН ТАУЫҠ (тауығы)** *и. ҡар.* **баҫҡан тауыҡ.** *Себеш баҫа торған тауыҡ һатып алдыҡ.*

**БАҪҠАҠ (баҫҡағы)** *и. ҡар.* **басҡаҡ.** ■ *Суртмаҡ баҫҡаҡ шикелле ҡайһы бер уҫалыраҡтары күпләп тә умыра, хатта кеше аяғы баҫмаҫтай ышығыраҡ урынға хан исеме аҫтында үҙ малын туплай башлай.* К. Мәргән.

**БАҪҠАН ТАУЫҠ (тауығы)** (Р.: наседка; И.: sitting hen; Т.: kuluçka) *и.*

Себеш баҫып ултырған йәки себештәре булған тауыҡ. □ Наседка.

**БАҪҠЫН** (Р.: нападение; И.: attack; Т.: baskın) *и.*

Баҫып алыу, талау ниәте менән яһаған ҡоралллы һөжүм. □ Нападение; налёт, набег. *Баҫҡын яһау.* ■ *Ҡасаҡтар баҫҡын урынына яҡынлашыу менән Иҙелбай ҡыҙ кейемендә уларға ҡаршы килеп сығырға ла, ҡурҡҡан*

*булып, ҡыуаҡлыҡҡа ташланырға тейеш.* М. Ямалетдинов.

**БАҪҠЫНСЫ** (Р.: грабитель; И.: robber; Т.: soyguncu) *и.*

Баҫҡында ҡатнашыусы, баҫып алыусы. □ Грабитель, налётчик; разбойник. ■ *«Туҡта, ҡәбәхәт!» — тип артынан ташланған Ғөбәйгә ҡыркма мылтыҡтан ике тапҡыр ут сәсте лә баҫҡынсы, ҡараңғыға инеп юғалды.* Ә. Хәкимов. *[Хан:] Беҙгә баҫҡынсыларҙан һаҡланыу өсөн ҡорал кәрәк.* Н. Мусин.

**БАҪҠЫНСЫЛЫҠ (баҫҡынсылығы)** (Р.: грабёж; И.: robbery; Т.: soygunculuk) *и.*

**1.** Баҫып алыу, талау. □ Грабёж, ограбление, грабительство. *Баҫҡынсылыҡ менән шөғөлләнеү. Баҫҡынсылыҡҡа төшөрөү.*

**2.** Баҫып алыу сәйәсәте. □ Захватничество, агрессия. ■ *Талауға, баҫҡынсылыҡҡа нигеҙләнгән сәйәсәт бер ерҙә отһа, биш ерҙә отола.* Ә. Хәкимов.

**БАҪҠЫС I** (Р.: лестница; И.: stairs; Т.: merdiven) *и.*

**1.** Менеү, төшөү өсөн араталы йәки киртләсле итеп эшләнгән ҡоролма. □ Лестница; стремянка. *Ағас баҫҡыс. Матур баҫҡыс. Яр баҫҡысы.* ■ *Емештең иғтибарын бигерәк тә күтәрмәнең түбәнге баҫҡысында иҫ киткес матур таш ҡурсаҡты ебәк юрғанға төрөп, бәпес итеп уйнатып ултырған Алтынбикә үҙенә ылыҡтыра.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* *Ниҙеңдер* үҫешендәге билдәле бер кимәл. □ Степень, ступень, стадия; период; разряд; фаза. *Тормош баҫҡыстары.* ■ *Ысынлап та, повеста был образдың артабан фәлсәфәүи ҡарашына баҫым яһала: ғүмергә ҡауышмаҫ ике ярҙы тоташтырыусы ла, өҙөлөр юлды ялғаусы ла — күпер; моратыңа еткергән йәки арҡыры төшкән дә — шул уҡ күпер, йәғни күпер — ул һикәлтәле яҙмыш, тормош баҫҡыстары, ҡайһы саҡ романтик, хатта трагик боролоштар!..* Р. Байымов. *Халыҡ ижадының ошолай яңы баҫҡысҡа күтәрелеүе, киң ҡолас алыуы, уға иғтибарҙың көсәйеүе менән бер рәттән, шул уҡ дәрәжәлә уның профессиональ йәһәттән дә юғары кимәлдә тороуына өлгәшеү хәстәрлеген көсәйтеү мәсьәләһен килтереп тыуҙыра.* З. Нурғәлин.

**3.** *Ниҙеңдер* ҡоролош тәртибендәге бер кимәл. □ *С порядк. числ. (определённой)* ступени. *Икенсе баҫҡыс мәктәп.* ■ *Бындағы лавканың һатыусыһы, беренсе баҫҡыс мәктәп мөдире һәм дә минең күрше ветеринар — ситтән килеп ултыраҡлаған заттар.* Ә. Хәкимов.

**4.** *күсм.* Музыкалағы тауыш рәтенең, гамманың бер өнө. □ Нота. *Юғары баҫҡыс алыу. Ҡурайҙа етенсе баҫҡыс тауыш [си] бар икәне иҫбат ителгән.*

**БАҪҠЫС II** (Р.: заглушка; И.: plug; Т.: semaver kapağı) *и. диал.*

Түбәсәй. □ Заглушка *(у самовара). Самауыр баҫҡысы.*

**БАҪҠЫС-БАҪҠЫС** (Р.: ступенчатый; И.: stepped; Т.: basamaklı) *с.*

Баҫҡыслы. □ Ступенчатый; расположенный уступами, ступеньками. *Баҫҡыс-баҫҡыс булып тауҙар күренә.*

**БАҪҠЫСЛАНЫУ (баҫҡыслан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **баҫҡыслау 1.** *страд. от* **баҫҡыслау 1.** *Баҫҡысланған күтәрмә.* ■ *Ҡара һөрөнкө йөҙлө, ҡара күҙле, йәш булыуына ҡарамаҫтан, бик етди ҡараш менән йөрөүсе Ғәли яҡшы тун, һоро бүйма, ҡолаҡлы бүрек кейгән ине һәм ҡултыҡ аҫтына ситендә ҡара хәрефтәр баҫҡысланып төшкән дәфтәр ҡыҫтырғайны, ҡулына резина башлы ҡыҙыл ҡәләм тотҡайны.* Ғ. Хәйри.

**БАҪҠЫСЛАУ (баҫҡысла-)** (Р.: снабдить ступенькой; И.: make stepped; Т.: merdiven yapmak) *ҡ.*

**1.** Баҫҡыслы (1) итеү. □ Снабдить ступенькой или лестницей; сделать ступени, уступы. *Таҡта аласыҡ бейек итеп эшләнгән, ишеге баҫҡыслап ҡуйылған.* ■ *Бура ауыҙында — ҙур ғына таш. Ул баҫҡыслап эшләнгән.* Ә. Вахитов.

**2.** Баҫҡыслап эшләү. □ Делать (сделать) ступенчатым. *Баҫҡыслап сигеү.*

**БАҪҠЫСЛЫ** (Р.: с лестницей; И.: with steps; Т.: merdivenli) *с.*

**1.** Баҫҡысы булған. □ С лестницей, со стремянкой; снабжённый стремянкой. *Баҫҡыслы веранда. Бейек баҫҡыслы йорт.*

**2.** Киртләс. □ Ступенчатый. *Баҫҡыслы пирамида. Баҫҡыслы ҡаялар.*

**3.** *Ниндәйҙер* кимәлле, дәрәжәле. □ Ступенный. ■ *Уҡытырға кәрәк малайҙы. Тәжрибәле уҡытыусылар ҡулында. Икенсе баҫҡыслы һәйбәт мәктәптә.* Ә. Хәкимов.

**БАҪЛЫҒЫУ (баҫлыҡ-)** (Р.: испытывать во сне удушье; И.: have nightmares; Т.: boğulmak) *ҡ.*

**1.** Йоҡлағанда тын ҡыҫылыу, ҡурҡыныс төш күреү. □ Испытывать во сне удушье, увидев страшный сон. // Удушье. ■ *Биксән ағай .. торам тине — тора алманы. Өндәшергә итте — һүҙен әйтә алманы. Ул баҫлығып ятҡанын аңлай, уяна алмай ине.* Р. Солтангәрәев. *Һуңғы осорҙа йоҡоһо болара нишләптер: ятһа, һаташа, баҫлыға башлай.* Х. Тапаҡов. *Үҙ тауышына үҙе уянып китҡәс тә, баҫлығыуын аңлағас та зиһененән йыя алмай хитланды Ғәлимә.* Т. Ғарипова.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса йоҡлағанда албаҫтының күкрәккә баҫыуынан тын ала алмау. □ Испытывать удушье во сне от действий злого духа Албасты. ■ *Төндә күкрәккә албаҫты баҫһа, кеше баҫлыға.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҪЛЫҠТЫРҒЫС** (Р.: удушливый; И.: suffocating; Т.: boğucu) *с.*

Тынды ҡыҫа торған, тынсыу. □ Удушливый. ■ *Шунда уҡ, баҫлыҡтырғыс тынлыҡты боҙоп, автомат шатырҙап ҡуя.* Ә. Хәкимов.

**БАҪЛЫҠТЫРЫУ (баҫлыҡтыр-)** *ҡ.*

**1.** *йөкм. ҡар.* **баҫлығыу.** *понуд. от* **баҫлығыу.**

**2.** *эйһ. ҡар.* **баҫлығыу.** *Йоҡоға китһәм, баҫлыҡтыра.*

**БАҪМА I** (Р.: ступень; И.: foot bridge ; Т.: basamak) *и.*

**1.** Баҫҡыстың бер өлөшө. □ Ступень, ступенька *(крыльца).* *Болдор баҫмаһы. Баҫҡыс баҫмаһы.*

**2.** Йылға, соҡор аша йәйәүле кеше өсөн эшләнгән тар ҡоролма. □ Мостик, мостки через реку, ручей, овраг и т. п. *Баҫманан сығыу.* ■ *Һыу арҡыры баҫма һалдым талтирәктәр буйынан.* Халыҡ йырынан. *Рая әйткәнсә эшләнеләр: оҙон тимер торбалар алып, йылғаның тарыраҡ урынынан аша баҫма һалдылар ҙа, шунан сыҡтылар.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Кеше юлына буйлатып һалынған таҡта. □ Мостик, мостки. *Өйҙәр алдында ағас баҫма һалынған.* ■ *Тротуар урынына ике яҡлап таҡтанан баҫма һалынған.* Яр. Вәлиев.

**4.** Һыу ситенә кер сайҡау, кәмә туҡтау һ. б. өсөн бейек итеп ағастан эшләнгән майҙансыҡ. □ Мостки на берегу реки или озера; дебаркадер. *Баҫма буйлап кәмәгә төшөү.* ■ *[Васильев] арҡаһына ауыр тоҡ күтәреп, һығылмалы баҫма өҫтөндә сайҡала-сайҡала пароходҡа менеп барыусы кеше һынына әүерелә.* Ә. Хәкимов. *Баҫмаларға баҫып һыуҙар алдың сылтырап та аҡҡан һыуҙарҙан.* Халыҡ йырынан.

**5.** Таҡта майҙансыҡ. □ Помост. ■ *Ике көн үтеүгә, ҡунаҡтар хан һарайы алдында ҡоролған бейек баҫмаға саҡырылды.* Ә. Хәкимов.

**6.** Төҙөлөш эше өсөн стена буйлатып таҡтанан эшләнгән һикәлтә. □ Помост, стеллаж на строительстве. *Төҙөлөш баҫмалары.*

**7.** *миф.* Мифлаштырылған предмет *(башҡорт халҡының ышаныуҙары буйынса, һыу эйәләре баҫмаларға сыға. Уларҙы борсомаҫ өсөн алдан иҫкәртеп ым-ишара яһарға кәрәк).* □ Мостик; мифологизированный предмет *(по представлениям башкир, духи воды выходят на мостики, берега рек, чтобы их не потревожить, надо давать предупредительные знаки).* ■ *Баҫманан сыҡҡанда өс тапҡыр тамаҡ ҡырырға кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАҪМА II** (Р.: печатный; И.: print; Т.: basım) *с.*

Типографик ысул менән яҙылған; ташҡа баҫҡан. □ Печатный. *Баҫма хәреф.* ■ *Башта уҡ яугир һөйләгәндәрҙе баҫма әҙәбиәттә сыҡҡан мәғлүмәттәр менән сағыштырып*

*ҡараным, уларҙың ысынбарлыҡҡа тап килгәненә тамам инандым.* З. Ураҡсин.

**БАҪМА III** (Р.: издание; И.: print; Т.: basım) *и.*

**1.** Нәшриәттән сыҡҡан әҫәр. □ Издание. *Академик баҫма. Китаптың икенсе баҫмаһы. Әҙәби баҫма.* ■ *Фәрит дуҫым менән беҙ бындай оригиналь баҫмаларҙы дауам итергә хыяллана инек.* Р. Шәкүр. *Ғәрәпсә баҫмаларҙы еңел уҡығанлыҡтан, ул [Азат] иҫке төрки телендәге байтаҡ китаптарҙы уҡыны, «Ҡөрьән һәм уның тәпсирҙәре»н ҡараштырҙы, хатта улар араһында иҫке төрки теленә тәржемә ителгән «Ҡөрьән-Кәримде», «Тарихул-әнбиә»не тапты.* Т. Ғарипова.

**2.** Баҫыу процесы. □ Печатание, печать; тиснение; издание книги, издательство (*как процесс*). *Баҫмаға биреү. Баҫмаға алдылар.*

**БАҪМА IV** (Р.: печать; И.: seal; Т.: mühür) *и. тар.*

Татар-монгол иҙеүе дәүерендә урҙа ханының һүрәте баҫылып, ышаныс билдәһе булып йөрөгән металл пластинка йәки мисәт. □ Металлическая пластинка или печать с изображением хана Золотой орды. *Хан баҫмаһы.*

**БАҪМА V** (Р.: пасмо; И.: lea; Т.: çile) *и.*

Киндер һуҡҡанда еп үлсәү берәмеге (*утыҙ һабаҡтан тора*). □ Пасмо; пасма. ■ *Ҡоҙағыйҙың күлдәгенә һигеҙ баҫма еп киткән.* Туй йырынан.

**БАҪМА VI** *и. ҡар.* **басма II.** *Сәсте баҫма менән буяу.*

**БАҪМА VII** (Р.: пятно; И.: blot; Т.: leke) *и.*

Төрткө. □ Пятно. *Әйбере баҫма-баҫма ғына сыбар. Баҫма сыбар ҡолон.*

**БАҪМА БИҘӘК (биҙәге)** (Р.: набойка; И.: printed cloth; Т.: basma) *и.*

Туҡымаға баҫым ысулы менән төшөрөлгән биҙәк. □ Набойка (*узор на ткани, нанесённый тиснением*). *Баҫма биҙәкле күлдәк.*

**БАҪМАҠ I (баҫмағы)** (Р.: клавиша; И.: key; Т.: tuş) *и.*

**1.** *муз.* Музыка ҡоралының бармаҡ менән баҫып тауыш сығара торған пластинкаһы. □ Клавиша. *Рояль баҫмағы.* ■ *Гармунсы етеҙ бармаҡтары менән .. гармунының баҫмаҡтарын барлап сыҡты.* К. Мәргән.

**2.** Төрлө механизмдың (*яҙыу машинкаһының, телефон аппаратының һ. б.*) бармаҡ менән баҫып эшләтә торған рычаг башы. □ Клавиша. *Компьютер баҫмағы. Телефон баҫмағы.*

**БАҪМАҠ II (баҫмағы)** (Р.: лестница; И.: steps; Т.: merdiven) *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **баҫма I, 1,2.** *Йылға аша баҫмаҡ һалғандар.*

**2.** Баҫҡыс. □ Лестница. *Баҫмаҡҡа күтәрелеү.*

**3.** Күтәрмә. □ Крыльцо. *Өйөгөҙҙөң баҫмағы бигерәк бейек.*

**БАҪМАҠ III (баҫмағы)** *и. ҡар.* **баҫҡыс II.**

**БАҪМАҠ IV (баҫмағы)** (Р.: западня; И.: bird snare; Т.: tuzak) *и. диал.*

Тоҙаҡ. □ Западня. *Януар баҫмаҡҡа эләкте.*

**БАҪМАҠ V (баҫмағы)** *и. ҡар.* **баҫмасы I.**

**БАҪМАҠЛАУ (баҫмаҡла-)** (Р.: утомлять; И.: tire; Т.: yormak) *ҡ.*

**1.** Кешенең теңкәһенә тейеп, йыш-йыш килеү. □ Утомлять, надоедать. // Утомление. *Курше беҙҙе баҫмаҡлап тик йөрөй.*

**2.** *диал. ҡар.* **баҫмалатыу III.** ■ *Ҡасып барған аҡтарҙы баҫмаҡлап, ауылға ҡыҙылдар килеп инде.* Н. Мусин. *Иҙеүкәй ҡарап тормайса, баҫмалатып ҡалмайса, һис бер ниҙән ҡурҡмай.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**БАҪМАЛАТЫП** (Р.: следом; И.: immediately (after); Т.: arkasından) *р.*

Артынса. □ Следом. *Мин уға ашыҡмай аҙағыраҡ килергә ҡушҡайным, ә ул баҫмалатып килеп тә еткән.* ■ *Күк Ҡорт егеттәре дошманды баҫмалатып ҡыуалай, күптәрен йә һуйыл менән һуғып, йә ҡыл арҡан менән ҡороҡлап, аттарынан бәреп төшөрә.* Ә. Хәкимов. *Заман дауылы уларҙы дала ҡамғаҡтары кеүек баҫмалатып ҡыуа, аяуһыҙ әҙәрләкләй.* Ә. Хәкимов.

**БАҪМАЛАТЫУ I (баҫмалат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҫмалау I.** *понуд. от* **баҫмалау I.**

**БАҪМАЛАТЫУ II (баҫмалат-)** *к. йөкм. кар.* **баҫмалау II.** *понуд. от* **баҫмалау II.**

**БАҪМАЛАТЫУ III (баҫмалат-)** (Р.: преследовать; И.: pursue; Т.: kovalamak) *к.*

**1.** Арттан ҡалмай ҡыҫырыҡлау. □ Преследовать. ● *Баҫымсаҡты баҫмалатҡан күп булыр.* Мәҡәл.

**2.** *диал. кар.* **баҫымсаҡлау.**

**БАҪМАЛАУ I (баҫмала-)** (Р.: делить; И.: divide into leas; Т.: basmaya ayırmak) *к.*

**1.** Епте баҫмаға һалыу. □ Делить, разделять на пасмы *(моток пряжи). Епте баҫмалап ҡуйыу.*

**2.** Туҡымаға биҙәк баҫыу. □ Набивать *(узор на ткани).* // Набойка. *Келәмгә биҙәк баҫмалау.*

**БАҪМАЛАУ II (баҫмала-)** (Р.: идти следом; И.: follow close(ly); Т.: arkasından yürümek) *к. диал.*

Артынан килеү. □ Идти следом. // Ход. *Ҡыҙыҡ бит, бала-саға шуға баҫмалай.*

**БАҪМАЛЫ I** *с. кар.* **баҫҡыслы.**

**БАҪМАЛЫ II** (Р.: мглистый; И.: hazy; Т.: sisli) *с. диал.*

Күкһелләнеп торған *(һауаға ҡарата).* □ Мглистый. *Көн баҫмалы булып китһә, көн монары төшкән тиҙәр.*

**БАҪМАЛЫ ЕП (ебе)** (Р.: пасмовая пряжа; И.: kind of yarn; Т.: ip türü) *и.*

Ун әйтемдән *(терһәккә йәки тубыкка 30—40 урауҙан)* торған аяҡлы еп. □ Пасмовая пряжа. ■ *Әсәһе [Нәфисәгә] бер баҫма еп менән ике бишәр тинлек баҡыр акса бирҙе.* И. Көҫәпҡол.

**БАҪМАНСЫЛЫҠҠА БАРЫУ (баҫмансылыҡҡа бар-)** (Р.: стремиться оккупировать; И.: strive to seize; Т.: işgal etmeye çalışmak) *к. диал.*

Баҫып алырға ынтылыу. □ Стремиться оккупировать. *Ҡаҙаҡтар башҡорттарға ҡарата баҫмансылыҡҡа барғандар.*

**БАҪМАСЫ I** (Р.: басмач; И.: basmatch; Т.: basmacı) *и. тар.*

Урта Азияла совет власына ҡаршы күтәрелгән милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусы. □ Басмач. *Баҫмасы төркөмдәре.* ■ *Үҙ-ара талашыу, ҡапма-ҡаршылыҡтар арҡаһында Урта Азияла баҫмасылар хәрәкәте юҡҡа сыға.* «Башҡортостан панорамаһы», № 3, 2010.

**БАҪМАСЫ II** (Р.: печатник; И.: printer; Т.: basmacı) *и.*

Китап баҫыу һөнәрен үҙләштергән белгес. □ Печатник. *Баҫмасы булып эшләү. Баҫмасыға уҡыу.*

**БАҪМА ТАБАҠ (табағы)** (Р.: печатный лист; И.: printer's sheet; Т.: kâğıt tabakası) *и.*

Китаптың күләмен үлсәү берәмеге. □ Печатный лист. *Ун баҫма табаҡ күләмендә тапшырырға кәрәк.*

**БАҪМАХАНА** (Р.: типография; И.: print shop; Т.: basımevi) *и.*

Китап, гәзит-журнал баҫҡан ойошма. □ Типография. *Баҫмахана эштәре.* ■ *Заманында баҫмахана һәм китаптар аҙ булғанлыҡтан, китаптар булдырыу өсөн күп ижтиһад һәм малдар сарыф итте, тиҙәр.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**БАҪМА ХӘРЕФ** (Р.: печатная буква; И.: block letter; Т.: büyük matbaa harfleri) *и.*

Компьютер йәки баҫыу машинаһында баҫылған хәреф. □ Печатная буква. *Баҫма хәрефтәр менән яҙылған.* ■ *Унда [ҡағыҙҙа] эре баҫма хәрефтәр менән «йоҡо сүлмәге» тип яҙылғайны.* Ә. Хәкимов.

**БАҪМА ЯМҒЫР** (Р.: продолжительный дождь; И.: drizzling rain; Т.: çiseleyen yağmur) *и. диал.*

Оҙаҡ һибәләп яуған ямғыр. □ Продолжительный, моросящий дождь. *Көнө буйы яуған баҫма ямғыр киҫкә табан тынып ҡалды.*

**БАҪТЫҒЫУ (баҫтыҡ-)** *к. диал. кар.* **баҫлығыу.**

**БАҪТЫРҒЫС I** [фарс. گیر + بست 'тоташтырыусы'] (Р.: клин-закрепитель; И.: fixing wedge; Т.: tırpan fiksatörü) *и. диал.*

Салғы шынаһы. □ Клин-закрепитель *(у косы). Ағас баҫтырғыс. Тимер баҫтырғыс.*

**БАҪТЫРҒЫС II** *и. диал. кар.* **түбәсәй.**

**БАҪТЫРМА I** (Р.: гнёт из нескольких ветвей для стога; И.: weight for haystack; Т.: baskı) *и. диал.*

Кәбән башына саталап бәйләп һалына торған сыбыҡ, ағас. □ Гнёт из нескольких ветвей для стога. *Бесән башын баҫтырма менән нығытып ҡуйҙылар.*

**БАҪТЫРМА II** (Р.: место под сено; И.: place to store hay; Т.: saman yeri) *и. диал.*

Бесән урыны. □ Место под сено. *Баҫтырма әҙерләү.*

**БАҪТЫРМА III** (Р.: бастурма; И.: basturma (a kind of cured meat); Т.: yemek türü) *и.*

Баҫып киптереп эшкәртелгән ит. □ Бастурма *(вяленая вырезка из говяжьего мяса).*

**БАҪТЫРТЫУ (баҫтырт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **баҫтырыу I, II.** *понуд. от* **баҫтырыу I, II.**

**БАҪТЫРЫҠ (баҫтырығы)** *и. диал. ҡар.* **башаҡас 1.** ■ *Сөләймән ҡарт арҡанды сискәс, Фатима һөйән баҫтырыҡты алып ергә ырғытты.* Ғ. Хәйри. *Шунан Хәсән батыр ҡарттың баҫтырыҡтай һаҡалын иңбашына һалып, үҙен бәләкәй балалай ҡулынан етәкләп, ишимәнең башын табырға алып китте, ти.* Әкиәттән. ● *Ер баҫтырығы — тау, тау баҫтырығы — таш. ил баҫтырығы — баш.* Мәҡәл.

**БАҪТЫРЫҠЛАУ I (баҫтырыҡла-)** (Р.: ходить по пятам; И.: follow on smb's heels; Т.: birini adım adım izlemek) *ҡ. диал.*

**1.** Артынан йөрөү. □ Ходить по пятам. *Баҫтырыҡлап йөрөү.*

**2.** Тегеләй былай ҡыуып баҫтырыу. □ Гнать. // Гонение. *Һыйырҙы баҫтырыҡлап ҡыуыу.*

**БАҪТЫРЫҠЛАУ II (баҫтырыҡла-)** *ҡ. диал.*

**1.** *ҡар.* **башаҡаслау.**

**2.** *ҡар.* **баҫыраулау.**

**БАҪТЫРЫҠЛАУ III** (Р.: одобрять; И.: approve; Т.: takdir etmek) *ҡ. диал.*

Йөпләү, нығытыу *(хәбәрҙе).* □ Одобрять. // Одобрение. ■ *Һин хәҙер граждан-ҡала түгел, бынан былай бисәләрсә самаһыҙ хәбәр һөйләү ғәҙәтеңде ташла, — тине майор, урынынан тороп һәм, тауышын күтәрә төшөп, үҙ һүҙенең дөрөҫлөгөн тағы бер тапҡыр баҫтырыҡлап ҡуйҙы: «Һалдат икәнеңде онотма, иптәш һалдат! Ултыр!»* Н. Мусин.

**БАҪТЫРЫЛЫУ (баҫтырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **баҫтырыу I.** *страд. от* **баҫтырыу I, II.** ■ *Ихтилал баҫтырылғас, күпме халыҡты ҡырып, күпме ауылдарҙы яндырып, урынына үлән дә үҫмәҫлек итеп тоҙ һибеп киткәндәр батша ғәскәрҙәре.* Р. Солтангәрәев.

**БАҪТЫРЫУ I (баҫтыр-)** *ҡ.*

**1.** *йөкм. ҡар.* **баҫыу I.** *понуд. от* **баҫыу I.** *Мәҡәлә баҫтырыу. Мисәт баҫтырыу.* ■ *Отставкаға сыҡҡандан бирле мин йәшәү сығанағын үҙемдең тәржемәләремде, проза һәм шиғри әҫәрҙәремде баҫтырыу юлы менән табам.* М. Өмөтбаев. *Бындай кешене, нисек кенә итһә лә, Зөләйха яңғыҙы дөрөҫ юлға баҫтыра алмаясаҡ.* Н. Мусин. *Баяғы әбей ҙә урынынан торҙо. Төйөнсөктәре араһынан өр-яңы бейма тартып сығарҙы. — Киленемә тип баҫтырғайным, кейһен.* Р. Солтангәрәев. ● *Астан ҡаҙан аҫтырма, туҡтан туҡмас баҫтырма.* Мәҡәл.

**2.** Аяҡ өҫтө ҡуйыу, аяҡ үрә торғоҙоу. □ Поставить на ноги. *Иҙәнгә баҫтырыу. Мендереп баҫтырыу.* ■ *Малай менән ҡыҙ йәнә роботты ҡул-аяғынан эләктереп коридорға сығарҙы, аяғына баҫтырҙы.* Н. Ғәйетбаев. *Хәмит уны бала кеүек итеп күтәреп алып өй түпһаларына илтеп баҫтырҙы.* З. Биишева. *Типкеләп аяғүрә баҫтырғас, немецтарҙың береһе уның күкрәгенә автоматын төҫкағайны инде.* Ә. Хәкимов.

**3.** Тояҡлы нәмәне тояғына, оҙонса һәм башҡа нәмәне вертикаль хәлгә ҡуйыу. □ Ставить, поставить на ножки. *Бағананы баҫтырып ҡуйыу.* ■ *Бер тәрәүе серек булып сыҡҡан «Өс таған»ды аяҡҡа баҫтырырға кәрәк ине.* М. Кәрим.

**4.** *Ниндәйҙер* бер урынға ҡуйыу; урынлаштырыу. □ Ставить, поставить на определённое место. *Сиратҡа баҫтырыу.* ■ *Ауылдаштары, геү килеп, ҡул сабып, Ирназарҙың әсәһен, тәү күргәндәй, сәхнәгә мендереп*

*баҫтырғандар, военком уның ҡулын ҡыҫҡан.* Ә. Хәкимов. *Иртәнсәк, эш башланмаҫ элек үк, тоҙ тауы итәгендәге торлаҡтарҙа ығы-зығы ҡупты, штрафсыларҙы ла, көнләксәләрҙе лә сығарып баҫтырҙылар, исемдәрҙе барлау башланды.* З. Ураҡсин. *Мәскәй, йылмая биреп, Ҡуҙыйкүрпәсте йөҙө менән таҡтаға ҡарата баҫтырып ҡуя, шунан уның алдына баҡыр табаҡҡа таҙа һыу тултырып ултырта, үҙе өс тапҡыр тирәләй әйләнә һәм, ҡулдарын юғары күтәреп, ниндәйҙер аңлайышһыҙ һүҙҙәр әйтә.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**5.** Көс, ҡорал ярҙамында туҡтатыу *(күмәк хәрәкәтте).* □ Подавлять, усмирять. *Боланы баҫтырыу. Инҡилабты баҫтырыу.*

♦ **Ҡойроҡҡа баҫтырыу** *кар.* **ҡойроҡ.**

**БАҪТЫРЫУ II (баҫтыр-)** (Р.: гнаться; И.: pursue; Т.: kovalamak) *ҡ.*

Арттан ҡыуыу, эҙәрләү (*кешене, йәнлекте*). □ Гнаться, преследовать; травить. // Гонение, преследование. *Баҫтырып барыу. Баҫтырып тотоу.* ■ *Аҡ ҡуянҡайҙарҙы, ай, ҡасырҙым, аҡбуҙ атҡай менән баҫтырҙым.* Халыҡ йырынан.

**БАҪТЫРЫУ III (баҫтыр-)** (Р.: посадить домашних птиц насиживать птенцов; И.: put fowl to hatch; Т.: kuluçkaya oturmak) *ҡ. диал.*

Йорт ҡоштарын себеш (бәпкә) сығарырға ултыртыу. □ Посадить домашних птиц насиживать птенцов. *Яҙ көнө тауыҡтарҙы себеш баҫтырырға ултырталар.*

**БАҪТЫРЫШ** (Р.: догонялки; И.: tag; Т.: el bende) *и.*

Әбәк уйыны. □ Салки, догонялки (*игра*). ■ *Шунда, йылғаға һыймаҫтай булып, шар ҙа шор килгән тиңдәштәрең менән бер-береңә һыу сәсрәтешеп, баҫтырыш уйнап, теге түбәнге ос Кәлей ағай кеүек моряк булам тип «дер» ҡалтырағансы йөҙ ине...* «Йәшлек», 15 июнь 2010.

**БАҪТЫРЫШЫУ (баҫтырыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **баҫтырыу II.** *взаимн. от* **баҫтырыу II.** *Баҫтырышып уйнау.*

**БАҪЫҠ** *с. диал. ҡар.* **баҫалҡы.**

**БАҪЫЛЫУ I (баҫыл-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **баҫыу I.** *страд. от* **баҫыу I.** *Баҫылған китап.* ■ *Гәзиттә баҫылып та сыҡҡан мәҡәләнең уға ҡаршы кампания башланыуҙың тәүге сәләме икәнлекте яҡшы аңлай Арынбаҫаров.* Д. Бүләков. ● *Хәсрәт үҙе баҫылһа ла, моңо ҡалыр.* Мәҡәл.

**2.** Осоп, туҙып тормаҫлыҡ хәлгә килеү. □ Оседать. *Саң баҫылды. Баҫылған ҡар.*

**3.** *Ниҙеңдер* көс, хәрәкәте кәмеү, әҙәйеү. □ Затихать, стихать, утихать. *Тауыш баҫылды. Һуғыш баҫылды. Буран баҫылды.* ■ *Фронт яҡынлығын хәбәр итеп, һауала дошман самолёттары геүләй, ара-тирә аҙашҡан снарядтар төшөп шартлай, аяуһыҙ атыш тауышы бер баҫыла бирә, бер тағы көсәйеп китә.* Ә. Хәкимов. *Ана, бәләкәй посёлокта тауыш-тын да баҫылған төҫлө. Тик арғы яҡта нефтепарктың ҙур факелы ғына ялпылдай.* Р. Солтангәрәев. *Буран баҫылды, иренеп кенә һирәк-мирәк ҡар бөртөктәре төшкөләй.* Н. Мусин. *Аҙаҡ, бола баҫылғас, шул эштәре өсөн ауыл халҡын урынынан ҡыуып ебәрәләр.* Р. Солтангәрәев. *[Синцов:] Шау-шыу баҫылғансы, Иҙел башы яғындағы мәмерйәлә йәшәмәйекме?* Д. Бүләков.

**4.** Тыныс хәлгә килеү; тынысланыу. □ Успокаиваться. // Спокойствие. *Күңел баҫылды.* ■ *Аҙна үтеүгә йәрәхәте бөтәшеүгә ыңғайлап, һыҙлауы баҫылһа ла, миктәгән тәне һаман ялға туймай.* Ә. Хәкимов. *Далдең бөтә хафалары таралып киткәндәй булды, куҡрәгенә йылы инеп, йөрәк сәнсеүҙәре баҫылды.* З. Ураҡсин. *Бөҙрә Фәтҡулланың йомоҡлоғона, дорфа ҡылығына һаман асыуы баҫылмағайны уның.* Р. Солтангәрәев. ● *Йыр йырламай күңел баҫылмай.* Әйтем.

**5.** *диал. ҡар.* **ауырайыу 4.** *Баҫылып торам, ямғыр яуыр, ахыры.*

**БАҪЫЛЫУ II (баҫыл-)** *ҡ. ҡар.* **баҫлығыу.** *Баҫылып йоҡлап ятыу.*

**БАҪЫМ I** (Р.: давление; И.: pressure; Т.: basınç) *и.*

**1.** *физ.* Газ һәм шыйыҡлыҡтың баҫыу һәм ян-яҡҡа этеү көсө. □ Давление. *Атмосфера баҫымы. Газ баҫымы. Һауа баҫымы. Һыу баҫымы.* ■ *[Рая:] Күрәһең, баҫым ныҡ*

*арткан, ә арматура ысынлап та ярылған, алмаштырырға кәрәк.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *лингв.* Һүҙҙәге бер ижектең тауыш менән айырылыуы һәм шулай уҡ, шундай айырылыуҙы күрһәтеп, хәреф өҫтөнә ҡуйылған билдә. □ Ударение. *Баҫым ҡуйыу. Һәр ижеккә баҫым яһап уҡыу.* ■ *[Бибинур] йәнә, һәр ижеккә баҫым яһап, ҡабатланы: «Ә һин бә-хет-ле бул!.. Кем һиңә ҡа-ма-сау-лай?..»* Д. Бүләков.

**3.** Логик әһәмиәтлеген айырып әйтеү маҡсатында һөйләмдәге бер һүҙҙең тауыш көсө менән айырылыуы. □ Логическое ударение. *Ритмик баҫым. Фраза баҫымы.*

**4.** *күсм.* Кешенең көсөн, ихтыярын баҫыу өсөн яһалған тышҡы тәьҫир; ҡыҫым. □ Давление, нажим. ■ *Аҡтыҡҡы һулышына тиклем һуғыша [Йәрмәт], ахырҙа күмәк көстөң баҫымы аҫтында ҡарыуы ҡайтып ергә йығыла.* Хикәйәттән. *Бөгөнгө төндөң ғәҙәттән тыш кисерештәре, ҡатмарлы уйҙары баҫымында етди һәм үтә баҫалҡы кеше булып өлгөргән Байрас, ирҙәрсә сабыр, ауыр атлап, түргә уҙҙы.* З. Биишева.

**БАҪЫМ II** (Р.: порция; И.: portion; Т.: porsiyon) *и.*

Бер тапҡыр баҫырлыҡ күләм (балсыҡ, он һ. б.). □ Порция. *Бер баҫым балсыҡ.* ■ *Атайым, Дәүләтгәрәйҙең атаһына ике баҫым тиҙәк һуғырға булып, миңә ҡыҙыл бәҙҙән бишмәт тектерҙе.* Ғ. Ғүмәр.

**БАҪЫМ III: ҠАН БАҪЫМЫ** (Р.: давление крови; И.: blood pressure; Т.: kan basıncı) *и. мед.*

Ҡандың ҡан тамырына яһаған баҫым көсө. □ Давление крови. *Ҡан баҫымы юғары булыу. Ҡан баҫымы күтәрелгән.*

**БАҪЫМЛАП ЯУЫУ (баҫымлап яу-)** (Р.: идти продолжительное время; И.: be raining; Т.: yağmur yağmak) *ҡ.*

Оҙаҡ яуыу *(ямғырға ҡарата).* □ Идти продолжительное время *(о дожде). Бөгөн ямғыр баҫымлап яуып тик тора.*

**БАҪЫМСАҠ I** (Р.: смирный; И.: meek; Т.: uslu) *с.*

Өнһөҙ, ҡыйыуһыҙ; йыуаш. □ Смирный, кроткий, безответный, безропотный; забитый. ■ *Бәхетенә, крәҫтиән хеҙмәтен якшы белгән, баҫымсаҡ холоҡло, тос беләкле батрағы бар.* Ә. Хәкимов. *Йәнә бер нәмәһен табырҙар, баҫымсаҡҡа бака ла айғыр тигәндәй, һиңә булһа, көстәре етә торған.* З. Ураҡсин. ● *Баҫымсаҡты баҫалар.* Әйтем.

**БАҪЫМСАҠ II (баҫымсағы)** (Р.: пчела-воровка; И.: robber bee; Т.: hırsız arı) *и. диал.*

Бур ҡорт. □ Пчела-воровка. *Баҫымсаҡтар әҙер балға йыйылған. Баҫымсаҡтарҙы ҡыуырға кәрәк.*

**БАҪЫМСАҠЛАУ (баҫымсаҡла-)** (Р.: притеснять; И.: harass; Т.: incitmek) *ҡ.*

Баҫымсаҡ итеп ҡыйырһытыу, ситләтеү. □ Обижать *кого-то,* распоряжаться, помыкать *кем-то.* // Распоряжение, помыкание. ■ *Был эшкә йорт вәкилдәренән дә бер нисә кешене йәлеп иттеләр, приказчик Жирников та үҙ кешеләре менән бергә саҡыртылды, хатта баярҙың да киләсәге хаҡында һүҙ таратып ебәрҙе, ул да үҙенә күрә баҫымсаҡлау сараһы ине.* З. Ураҡсин.

**БАҪЫМТА** (Р.: ответный набег; И.: reciprocal raid; Т.: baskın) *и. тар.*

**1.** Барымтаға яуап итеп яһалған сапҡын; ҡарымта. □ Ответный набег. ■ *Ирмен тигән ир кеше барымтаға баҫымтаны төбөн белмәй башламаҫ.* Ҡобайырҙан.

**2.** *ҡар.* **барымта.**

**БАҪЫМҺЫҘ** (Р.: безударный; И.: unstressed; Т.: vurgusuz) *с. лингв.*

Баҫым төшмәгән, баҫымы булмаған һуҙынҡы өндәр йәки ижек. □ Безударный. *Баҫымһыҙ һуҙынҡы. Баҫымһыҙ ижек.*

**БАҪЫМ ЯҺАУ (баҫым яһа-)** (Р.: делать ударение; И.: to accent ; Т.: vurgulamak) *ҡ.*

*Ниндәйҙер* һүҙҙе, фекерҙе айырым интонация менән әйтеү. □ Делать ударение, акцент; акцентировать. // Ударение, акцент. ■ *Бай шәкерттәрҙән көлә-көлә, Дим буйы башҡорттары һымаҡ [ç] өнөнә ныҡлы баҫым яһап, үҙе сығарған шиғырҙы һамаҡланы.* Я. Хамматов. *Батырши да шул яҡҡа баҫым яһаны бюрола.* Д. Бүләков.

*Малайҙың сыҙамлығын һынарға теләгән һымаҡ, директор ҡабаланманы, һыңар аяғына аҡһай-аҡһай иҙән уртаһына сығып баҫҡас, ашыҡмай, һәр һүҙгә ныҡлы баҫым яһап, әйтте.* Я. Хамматов.

**БАҪЫНҠЫ** [боронғо төрки *басын-* ‘буйһондороу, йәберләү’] (Р.: тихий; И.: quiet; Т.: sakin) *с.*

**1.** Шау-шыуһыҙ, ҡысҡырыуһыҙ; әкрен; *киреһе* — күтәренке. □ Тихий, негромкий; слабый. ■ *Тик башын бесәнгә терәп өлгөрмәне, капитан Соколовтың ҡырыҫыраҡ баҫынҡы тауышы: «Йоҡламаҫҡа! Күҙәтеүҙе дауам итергә!» — тип киҫәтте.* Ә. Хәкимов. *Генерал, әллә был «ҡырағай» башҡорттоң ҡайын ҡуҙы шикелле сағыу баҙлап янған сөмҡара күҙҙәренең унан һис тә кәм түгел асыу, нәфрәт һәм ҡуралмау менән үҙенә төбәлеүен аңлап, .. баҫынҡырак тауышҡа күсте.* З. Биишева.

**2.** *диал. ҡар.* **баҫымсаҡ I.** ■ *Баҫынҡыны тапалап китергә йөрөүселәр күп була ул.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *диал.* Баҫалҡы. □ Спокойный *(о человеке).* ■ *Баҫынҡы, сабыр итәр булһам, «Тәкәбберлек итә», тиерҙәр.* Ғ. Кейеков.

**БАҪЫНҠЫЛЫҠ (баҫынҡылығы)** (Р.: кротость; И.: meekness; Т.: hilim) *и.*

Кешегә хас булған йыуаш холоҡ, һыҙат. □ Кротость, покорность; смирение. *Башҡорт ҡыҙҙарына баҫынҡылыҡ хас.*

**БАҪЫП АЛЫУ (баҫып ал-)** (Р.: захватывать; И.: seize; Т.: zaptetmek) *ҡ.*

**1.** Башҡа дәүләтте, ерҙе ирекһеҙләп үҙеңә ҡушыу. □ Захватывать, захватить; оккупировать, аннексировать. // Захват, аннексия. ■ *Ҡайҙа инде бында атлаған һайын хәүефле мажаралар, сыуалсыҡ төйөндәр, ҡойон кеүек ябырылып, дошманды көтмәгәндә баҫып алыуҙар!* Ә. Хәкимов. *Иң ҡурҡынысы шунда: Бәкер үҙенең бандаһы менән Ер аҫтындағы станцияны баҫып алырға маташаса̇к.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** *күсм.* Яулап алыу. □ Завладеть. *Күңелде баҫып алыу. Йөрәкте баҫып алыу.*

**БАҪЫП АЛЫУСЫ** (Р.: захватчик; И.: invader; Т.: istilacı) *и.*

Сит территорияны яулап алыусы йәки баҫып алыу буйынса сәйәсәт алып барыусы. □ Захватчик, оккупант, аннексионист. ■ *Отряд 1943 йыл аҙағында, совет ғәскәрҙәре был төбәкте немец баҫып алыусыларынан азат иткәс, регуляр армияға ҡушыла.* М. Ямалетдинов.

**БАҪЫП АЛЫУ СӘЙӘСӘТЕ** (Р.: аннексионистская политика; И.: annexionist policy; Т.: ilhak siyaset) *и.*

Сит территорияны баҫып алыу буйынса алып барылған сәйәсәт. □ Аннексионистская (аннексионная) политика. *Баҫып алыу сәйәсәте изгелеккә илтмәй.*

**БАҪЫП БИРЕҮ (баҫып бир-)** (Р.: отдать насильно замуж; И.: make strike wedlock; Т.: zorla evlendirmek) *ҡ. диал.*

Көсләп биреү. □ Отдать насильно замуж. *Ҡыҙҙы кейәүгә баҫып биреү.*

**БАҪЫП ИНЕҮ (баҫып ин-)** (Р.: вторгаться; И.: invade; Т.: istila etmek ) *ҡ.*

Ҡоралы көс менән сит территорияны баҫып алыу. □ Вторгаться, вторгнуться; оккупировать. // Вторжение, оккупация. ■ *Атыш туҡтаны, немец был тарафҡа уҡ баҫып инде.* Ә. Хәкимов. *[Азамат:] Наполеон Рәсәйгә баҫып ингәс, илде һаҡларға башҡорттар ҙа үҙ ғәскәрҙәрен ебәрергә ҡарар итә.* Р. Солтангәрәев.

**БАҪЫРАУ** [дөйөм ҡыпсаҡ *баҫ-*] (Р.: слега; И.: haystack tow; Т.: baskı taş) *и.*

**1.** Бесән, һалам йөгөн өҫтән баҫтырып тарттыра торған һайғау. □ Слега. ■ *[Фатих] тейәгән бесәнен баҫырау менән ҡыҫып тартты ла, туның йөк өҫтөнә ырғытып, күк бейәне етәкләп, оло юлға китте.* Б. Ишемғол. *Ялп-йолп иткән йыртҡыс ҡолап китте, түбәнләскә табан тәгәрәп барып, баҫырау йыуанлығы ағасты һындырҙы.* Н. Мусин.

**2.** *диал. ҡар.* **урҙа 1.**

**БАҪЫРАУЛАУ (баҫыраула-)** (Р.: стягивать; И.: appliance to tighten haystacks; Т.: sıkmak) *ҡ.*

Баҫырау менән баҫтырып нығытыу. □ Стягивать, придавливать слегой (*сено, солому*). // Стягивание, придавливание. *Һаламды баҫыраулау.* ■ *Беренсе йөктө тейәп баҫырауланыҡ.* Ғ. Шәрипов.

**БАҪЫРМА** *и. диал. ҡар.* **башағас I.**

**БАҪЫРМА БУҘА** *и. диал. ҡар.* **баһырма буҙа.**

**БАҪЫРЫЛЫУ (баҫырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **баҫырыу.** *страд. от* **баҫырыу.** *Эш баҫырылып ҡалды.* ■ *Улар [әбейҙәр] был сараларҙы бик шифалы, тип дәғүә иттеләр: фәлән кеше ауырыған икән дә, кәзә тиреһенә уранып, баҫырылып йоҡлағас, яҙылған, имеш, тип һөйләп ултырҙылар.* Ж. Кейекбаев. *[Мәҙинә] эҫе сәй эсеп, йылыла баҫырылып ятып ял иткәс, бер ни тиклем тынысланды, башы ла ебәрҙе.* Ә. Хәкимов. *Әсмә ошо арауыҡта кәбәркәлә һуплырак булып ҡыҙарып бешеп ятһын өсөн, турпыша менән ҡаплап баҫырылған баланды баулай, оло мейестә муйыл киптерә, бәшмәк тоҙлай, сәтләүек таҙарта — урмандағы кейектәр шикелле, кышкылыкка сырса хәстәрләй.* Г. Яҡупова.

**БАҪЫРЫУ (баҫыр-)** (Р.: придавливать; И.: press with a heavy object; Т.: sıkıştırmak) *ҡ.*

**1.** Өйөп, өҫтән ауыр нәмә менән баҫтырыу. □ Придавливать, прижимать (*чем-л. тяжёлым*). // Придавливание, прижимание. *Япраҡ баҫырыу. Силос баҫырыу.* ■ *Уны [ҡоротто], тоҡҡа тултырып, бер нисә көнгә аҫып ҡуялар. Һуңынан был ҡоротло тоҡто алып, иҙәнгә һалалар һәм ауыр әйбер менән баҫырып ҡуялар.* М. Өмөтбаев.

**2.** Өҫтән нык итеп ҡаплау. □ Плотно накрывать; прикрывать. *Бешкән бәрәңгене баҫырып ултыртыу. Юрған ябып, баҫырып һалыу. Икмәк әсетеп, баҫырып ултыртыу.*

**3.** Баш кейемен маңлайға төшөрөп кейеү. □ Натянуть; надвигать низко на лоб, нахлобучивать (*головной убор*). // Натягивание, нахлобучивание. ■ *Ғәжәп нәмәләрҙе белә ҡарсыҡ: .. эҫелә күләгә эҙләмә, түбәтәйеңде баҫырыбыраҡ кей ҙә рәхәтләнеп тирләп йөрө — тир менән тәндәге сир сыға.* Ә. Хәкимов. *Башыңа ла кейгән, ай, бүркеңде баҫыра ла кейһәң, тирләтер.* Халыҡ йырынан.

**4.** Күҙҙән йәшереп, өҫтән ҡаплау. □ Заметать, замести. ■ *Әхмәт йөрөгән ҡара урмандарҙа япраҡ менән баҫырып эҙҙәрен.* Ғ. Сәләм.

**5.** *күсм.* Кешенән йәшереү, белдермәү. □ *перен.* Утаивать, скрывать; заминать. // Утаивание, скрывание; заминание. *Ғәйепте баҫырыу. Уйҙы баҫырыу.* ■ *[Әсмәбикә:] Малайығыҙ бик зирәк, һәләтле музыкант сығыуы ихтимал. Баҫырып ҡалдыра күрмәгеҙ.* Ф. Иҫәнғолов. *Роман конфискацияланған булырға тейеш. Әгәр ҙә утҡа ырғытылмаһа, берәй архив төпкөлөндә баҫырылып ятасыр ул ҡульяҙма.* Ә. Хәкимов. *Күкһылыу эсендәген баҫырыу һәләтенә эйә лә бит, ләкин ул да Сәйф малайҙарын күрә алмай.* Т. Ғарипова.

**БАҪЫУ I (баҫ-)** [дөйөм төрки *бас-*] (Р.: становиться; И.: stand up; tread; Т.: basmak) *ҡ.*

**1.** Аяҡты ҡуйыу. □ Становиться, вставать, ступать, наступать. // Вступление, наступление. *Ергә баҫыу. Өҙәңгегә баҫыу. Иҙәнгә баҫыу.* ■ *Ҡарға баҫыуы булды, ул [Амантаев] үҙен үҙе тота алмайынса һарҡыуға табан йүгереп китте.* Р. Солтангәрәев. ● *Ат баҫмайым тигән еренә өс баҫа.* Мәҡәл. *Эт аяғына эт баҫмаҫ.* Мәҡәл.

**2.** Аяҡ үрә тороу йәки ҡайҙалыр урын алыу. □ Вставать. *Баҫып ҡалыу. Баҫып ҡарау. Менеп баҫыу. Сығып баҫыу.* ■ *[Алпамыша] һикереп тороп баҫҡайны, ти, аяғындағы бығауы өҙөлөп китте, ти.* «Алпамыша». *Был ерҙә йылға тымыҡ, тәрән, арьяҡ ярға барып етмәйенсә уның төбөн табыу, аяҡҡа баҫыу мөмкин түгел.* З. Биишева. *Барыйҙың урамға сыҡҡанын аңдып, Шәрғиә шау-гөр килеп аҡтар-ҡыҙылдар булып уйнаған малайҙар янына барып баҫты.* Ә. Хәкимов.

**3.** Аяҡ атлау, барыу. □ Шагать, наступать, ступать. // Шаг. *Аҡрын баҫыу. Алпан-толпан баҫыу. Арҡыры баҫыу. Аяҡ ослап баҫыу. Ваҡ-ваҡ баҫыу. Йәһәт баҫыу. Ҡупшы баҫыу. Лап-лоп баҫыу.* ■ *Урал арҡаһынан уя баҫып, елә-саба киткән малдарым.* Халыҡ йырынан. *Ошоларҙы кешмир шәленең ситен*

*сайпылтып сабыр ғына юғарынан күҙәтеп торған ай апайыбыҙ, үпкәләүенән бигерәк ғәрләнеп шикелле, бында миңә урын ҡалманы тигәндәй, күҙҙәренән йәше тәгәрләп, тыртаң-тыртаң баҫып, күк көмбәҙенән сығып үк китте.* Д. Бүләков.

**4.** *күсм.* Эш-хәлгә аҙым яһау. □ Вступать. // Вступление. *Үҙ аллы тормош юлына баҫыу.* ■ *Ишетмәгәндең ошо минутта Тимербайҙы ярһытҡан оло бер теләкте аңларға ла, белергә лә уйламауы өсөн дә, Закирҙың шундай аҡылһыҙ юлға баҫыуы өсөн дә эсе бошто, күрәһең.* З. Биишева. *Улар эшелондың үҙ ауылдарына яҡын станцияла тороуын нисектер белгәндәр ҙә, шунан файҙаланып, енәйәт юлына баҫҡандар.* Ә. Хәкимов.

**5.** *күсм.* *Күпмелер* йәшкә инеү. □ Достигать, доживать. // Достижение. ■ *Аҡыллы булған кеше уның кеүек хәтәр хәбәрҙе ишетһә лә, ишетмәмешкә һалыша, алтмышҡа аяҡ баҫҡанда, миңә хәҙер шул йыйған малымды ашап ҡына, аллаға шөкөр итеп, муллаға фытыр илтеп кенә йәшәргә ҡалды.* З. Ураҡсин. *Үсмерлектән егет корона аяҡ баҫҡанда Ирназар бер кем менән дә кәңәшләшергә, фекер алышырға ярамаған сетерекле нәмәләр тураһында уйлана башланы.* Ә. Хәкимов.

**6.** Бейегәндә тыпырлау. □ Выбивать дробь ногами. // Приглашение. ■ *Бик матур итеп баҫалар был көйгә.* Р. Шәкүр. *Әйҙә баҫайыҡ әле, әшебеҙҙе алдан бөттөк, күңел асайыҡ әле.* Халыҡ йырынан.

**7.** Берәй эшкә керешеү, *ниҙелер* башҡара башлау. □ Вступать *(в дело)*, заступать, приступать. // Вступление, приступление. *Ҡарауылға баҫыу. Һаҡҡа баҫыу. Станок янына баҫыу.* ■ *Бик күп совет яугирҙарын һуғыш яланынан алып сыҡты башҡорт ҡыҙы. Улар, яңынан сафҡа баҫып, аҙаҡ әллә күпме ҡаһарманлыҡтар күрһәтте.* Д. Бүләков.

**8.** *Күпмелер* күләм, һанға етеү. □ Достигать. // Достижение. *Бойҙай хаҡы быйыл күпмегә барып баҫыр икән?* ■ *Арыш быйыл, гектар башына һалғанда, нисә ботҡа баҫыр икән?* М. Тажи.

**9.** Өҫтән көс төшөрөү, ауырлыҡ һалыу. □ Нажимать, сжимать. // Нажатие, сжатие. *Баҫмаҡҡа баҫыу. Күреккә баҫыу.* ■ *Әсәһе эҫе ҡурмасты услап алып бирмәксе булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс уның усына ҡуша баҫты.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Бармаҡтар, гармун төймәләренә баҫҡандағылай, ҡыбырҙай башланы.* Д. Бүләков.

**10.** Өҫтән ауыр булып ятыу; өҫкә төшөү. □ Давить, задавить. // Давление. *Көпө янбашты баҫа.* ■ *Ауырая тән, һәр минутта ауырая, нык баҫа албаҫтылы епшек һауа.* Ш. Бабич. ● *Яман ағасҡа аҫылынғансы, яҡшы ағас үҙеңде баҫһын.* Мәҡәл.

**11.** *күсм.* Ауыр, дарманһыҙ хәлгә килтереү, киңгәтеү, ауырытыу. □ Давить, задавливать. // Давление. *Етемлек баҫты. Донъя баҫты. Ҡайғы-хәсрәт баҫты. Тел-теш баҫты. Ҡартлыҡ баҫты. Ҡайғы баҫа. Эш баҫа.* ■ *Салауат та бахыр илдән киткәс, йөрәктәрҙе баҫты зар-һағыш.* Халыҡ йырынан. *Күңелде һөрөм баҫтымы, күлдәге бер ҡотһоҙ йән эйәһе шикелле, йәнә килә лә ҡалҡа.* Р. Солтангәрәев. *Тел-теш баҫһа, ауырыта, һыҙлата.* Башҡорт мифологияһынан.

**12.** Ҡыйырһытыу, ҡыҫырыҡлау. □ Давить на *кого-то*. // Давление. ● *Баҫалҡы булһаң баҫырҙар, уҫал булһаң аҫырҙар.* Мәҡәл.

**13.** Ауырлыҡ менән аҫҡа еңеү. □ Перевешивать. // Перевешивание. *Үлсәүҙең бер табағы баҫты.*

**14.** Түбәнгә эйеү, төшөрөү. □ Опустить. ■ *Илғужа баш баҫып ҡаҙыуын белде. Гөлшан да ҡарап-ҡарап торҙо ла, биҙрә алып, эшкә кереште, һыңар ҡул менән дә апаруҡ сүпләп була икән.* Д. Бүләков.

**15.** Нык аҫҡа төшөрөү; сумырыу (*баш кейемен*). □ Нахлобучивать. *Түбәтәйҙе баҫып кейеү.* ■ *Дүрт юлаусының иң йәше, түңәрәк көләкәс йөҙлө, мыҡты кәүҙәле башҡорт егете Ирғәлин Рамаҙан, татлы иҫнәп, шинелен ҡаушыра бирҙе, пилоткаһын баҫып кейҙе.* Ә. Хәкимов.

**16.** Осоп, туҙып тормаҫлыҡ хәлгә килтереү. □ Оседать. // Оседание. *Саң баҫырлыҡ ҡына ямғыр һибәләп алды.*

**17.** Аҫҡа төшөрөп кәметеү. □ Тушить, потушить. // Тушение. *Шәмде баҫыу. Усаҡты баҫыу.* ● *Ут ғәйрәтен һыу баҫыр.* Әйтем.

**18.** Һүндереү. □ Выключать. // Выключение. *Утты баҫыу. Радионың тауышын баҫ.*

**19.** Тыныс хәлгә килтереү; тынысландырыу. □ Успокаивать. // Успокаивание. *Күңелде баҫыу. Йөрәкте баҫыу.* ■ *Мәһәренә бирелгән малды кире ҡайтарып алыу ғына күңелен баҫманы.* Ә. Хәкимов.

**20.** Өҫтән һалыу. □ Приложить, накрыть. // Накрывание. *Ус менән маңлайға баҫыу. Тәнгә йылы баҫыу.* ■ *Юлиә .. яраға йода һөртә, мамыҡ баҫа.* Һ. Дәүләтшина.

**21.** Өҫтән ҡуйып, һүрәт, яҙма төшөрөү. □ Ставить (например, *печать*). *Мисәт баҫыу.* ■ *Егет балдаҡты ҡамырға баҫа. Балдаҡта ҡыҙҙың исеме яҙылған була. Исем ҡамырға сыға.* Әкиәттән.

**22.** Әйбер өҫтөнә һалып тегеү, тағыу. □ Шить, нашивать. *Күлдәк итәгенә таҫма баҫыу. Тунға төймә баҫыу.* ■ *Шул уҡ көндө иптәштәренә, туғандарына хәбәр итерҙәр, машина килер. Уның ҡараға ҡыҙыл баҫҡан туҡыма менән уратып ҡуйырҙар.* Р. Солтангәрәев.

**23.** Өҫтән ҡаплау. □ Накрывать, прикрывать, закрывать. // Накрывание, прикрывание, закрывание. *Ус менән баҫыу. Самауырҙы баҫыу.* ■ *Аҡ Хәмиҙә күҙен яулыҡ осо менән баҫты, тире тунын ямап ултырған Сабирйән дә телһеҙ ҡалды; бары Әлфирә генә һаман ниҙер көткән һымаҡ торҙо.* Р. Камал. *Ҡыҙыҡай серле генә итеп үҙ алдына көлөп алды ишекелле, усы менән егеттең ауыҙын баҫты.* Д. Бүләков.

**24.** *күсм.* Кешенән йәшереп, белгертмәй үткәреү. □ Затаить, утаить. // Затаение, утаение. *Ҡайғыһын баҫып ҡалдырҙы. Уйхистәрҙе баҫыу.*

**25.** Түшәлеп, йәйелеп ҡаплау. □ Заметать; затоплять, заливать. // Заметание, затопление, заливание. *Үҙәндәрҙе һыу баҫҡан. Юлды ҡар баҫҡан.* ■ *Егор Николаевич, бүлмәгә инеү менән, стеналағы Николай батшаның, яурындарына алтын уҡалы погондар һалған бер нисә генералдың саң баҫыуҙан тоноҡланған һүрәттәренә, ҡаралтыларҙың уңа төшкән бәрхәт япмаларына күҙ йөрөтөп сыҡты.* З. Ураҡсин. *Өс көн, өс төн яуған ҡар. Кәртә-ҡураны, тирмәне баҫып киткән.* Әкиәттән. *Сөләймән уның һүҙен ҡолағына алманы, үҙ алдына: «Һарай ҡапҡаһын йәнә ҡар баҫыр инде, кәһәрең», — тип кенә ҡуйҙы.* З. Ураҡсин.

**26.** Таралып өҫтән ҡаплау. □ Покрывать, зарастать. // Покрывание, зарастание. *Йөҙҙө һипкел баҫыу. Битте һаҡал-мыйыҡ баҫыу. Күҙҙе ҡан баҫыу.* ■ *Ырымбурға барып ингәнсе үҙәндәрен вағ ҡыуаҡ баҫып алған ҡырҙар, ә тиреҫ яғында — ҡуйы урмандар, бейек тауҙар ҡалҡан кеүек күкрәк киреп тора, әйтерһең, юлға кәртә булмаҡсылар.* З. Ураҡсин. *Йыйырсыҡ баҫҡан йөҙөнән һағыш һырҡырап торған ҡарсыҡ һәүетемсә генә иҫәнләште лә, уталасыҡҡа ла үтмәйенсә, шундағы бүрәнәгә ултырҙы.* Р. Солтангәрәев. *Дүрт-биш аҙымда ғына, ҡан баҫҡан күҙҙәрен йылтыратып, дер-дер ҡалтырап, ниндәйҙер януар ята.* Ә. Хәкимов. ● *Насар һөрөлгән ерҙе сүп баҫыр.* Мәҡәл.

**27.** Тотош солғап томалау. □ Накрывать, покрывать; заволакивать, затягивать. // Накрывание, покрывание, заволакивание, затягивание. *Томан баҫыу. Төтөн баҫыу. Күк йөҙөн болот баҫҡан.* ■ *Йәсиғ уҙған, төн уртаһы яҡынлашҡан; тирә-яҡты ҡараңғылыҡ тамам баҫҡан.* Ш. Бабич. ● *Көндән яҡты нәмә юҡ, ҡара болот баҫмаһа.* Мәҡәл.

**28.** *күсм.* Тотош биләү. □ Накрывать, покрывать; заволакивать, затягивать. // Накрывание, покрывание, заволакивание, затягивание. *Өй эсен тынлыҡ баҫа. Моң баҫа. Йоҡо баҫа.* ● *Эшлеклене иген баҫыр, эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр.* Мәҡәл.

**29.** Бала сығарыу өсөн йомортҡа өҫтөндә ултырыу (*кошка ҡарата*). □ Насиживать (*птенцов*). // Насиживание. *Өя баҫыу. Йо-*

*мортҡа баҫыу.* ● *Өйрәк йомортҡаһын тауыҡ баҫыр, бәпкәһе һыуға ҡасыр.* Мәҡәл.

**30.** Игенде башаҡтан төшөрөү, һуғыу. □ Молотить. // Молотьба. *Арыш баҫыу. Борсаҡ баҫыу. Тары баҫыу. Комбайндар иген баҫмай, ямғыр булды бит.*

**31.** Эшкәртеү. □ Возделывать. // Возделывание. *Ерҙе баҫыу.*

**32.** Иҙеп йомшартыу. □ Месить, мять. *Балсыҡ баҫыу. Ҡорот баҫыу. Туҡмас баҫыу. Май баҫыу.* ■ *Ҡамыр баҫҡан ҡоҙағыйҙың ҡулы йәбешә микән?* Туй йырынан. *Ҡайһы берҙә тоҙға баҫҡан ҡорот, эремсек йомарлағы ла килтерәләр.* З. Ураҡсин.

**33.** Әүәләп ойоштороу; кейеҙләндереү. □ Валять, катать. // Валяние, катание. *Бейма баҫыу. Кейеҙ баҫыу. Тула баҫыу.*

**34.** *Ниҙеңдер* көс, тәьҫирен кәметеү. □ Заглушать; успокаивать, утолять. // Заглушение, успокаивание, утоление. *Асыуҙы баҫыу. Ҡайғыны баҫыу. Тауышты баҫыу. Һағышты баҫыу. Һыҙлауҙы баҫыу. Һыуһынды баҫыу. Шау-шыуҙы баҫыу.* ■ *Тыуған яҡтарын һағынған Зәки Вәлиди башҡорт йырҙарын, бигерәк тә «Илсе Ғайса»ны йырлап һағышын баҫҡанын беләбеҙ.* М. Бураҡаева. *Үс алыу ләззәте тәндәге һыҙланыуҙы ла баҫа. күрәһең, әле генә илап торған малайҙарҙың йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу балҡый.* Р. Солтангәрәев. *Ул [Йомағол ҡарт] күңел ярһыуын һаман баҫа алмай ине шикелле.* Д. Бүләков.

**35.** Махсус йәйланмалар, машиналар ярҙамында типографик йыйыуҙан, клишенан оттиск алып, *нимәгәлер ниндәйҙер* тамғалар, хәрефтәр, цифрҙар, рәсемдәр һ. б. төшөрөү. □ Печатать. // Печатание. *Гәзит баҫыу. Музыкаль ноталар баҫыу.* ■ *[Гилман] портфеленән Нәфисә яҙыу машинаһында хаталы ғына итеп баҫып биргән ҡағыҙҙарын тартып сығарҙы.* Д. Бүләков.

**36.** Нәшриәт, матбуғаттан сығарыу. □ Издавать. // Издание. *Китап баҫыу. Журналда хикәйә баҫыу. Ташҡа баҫыу. Типографик ысул менән баҫыу.* ■ *Уны район гәзиттәрендә баҫып сығарыу менән бер һүҙһеҙ техникумға ҡабул ителәһең.* Ә. Хәкимов.

**37.** Көс, ҡорал менән туҡтатыу. □ Подавлять, усмирять. // Подавление, усмирение. *Күтәрелеште баҫыу.*

**38.** Ябырылып һөжүм итеү. □ Наступать, нападать. // Наступление, нападение. *Яу баҫыу.* ■ *Табындарҙың беҙгә күрше йәшәгән ике ырыуын бер ят ҡәүем баҫҡан.* З. Ураҡсин. ● *Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ.* Мәҡәл. *Илде яу баҫһа, йортоңдо ҡар баҫыр.* Мәҡәл. *Яман атты ял баҫыр, яман илде яу баҫыр.* Мәҡәл.

**39.** Күмәк булып килеп тулыу. □ Заполнять, переполнять. // Заполнение, переполнение. *Илде килмешәктәр баҫты. Ихатаны кешеләр баҫты. Кәртәне һарыҡтар баҫты.* ■ *Һыйыр-башмаҡ мөңрәп, йортоң баҫһын, киленсәк.* Туй йырынан. ● *Байҙы мал баҫыр, ярлыны бала баҫыр.* Мәҡәл.

**40.** *диал.* Риза булыу, ризалашыу. □ Соглашаться. *Ҡыҙыҡай ҙа баҫмай, ҡайтмайым ти ҙә ҡуя.*

**41.** Хәл ҡылымдың *-а* формаһында килеп, ныҡ көс төшөрөү мәғәнәһендә эш-хәрәкәттең рәүешен белдерә. □ В форме деепричастия на *-а* выражает способ действия с сильным воздействием. *Баҫа кейеү. Баҫа тегеү.* ■ *[Тай] ҡонан түгел, дүнәнгә әйләнгәс тә баҫа егерлек ат булмай бит әле.* З. Биишева.

♦ **Баҫҡан ерҙән ут сығарыу** дәртле, ғәйрәтле, етеҙ, эшлекле кеше хаҡында әйтелә. □ Быть энергичным. **Баҫып яуыу** тотош ҡаплап яуыу *(ямғырға ҡарата).* □ Идти обложно, лить *(о дожде).*

**БАҪЫУ II** [боронғо төрки *пасу* 'һөрөлгән ер'] (Р.: поле; И.: ploughed field; Т.: tarla) *и.*

**1.** Ашлыҡ сәскән ер. □ Поле, пашня. *Бойҙай баҫыуы. Ҡарабойҙай баҫыуы. Көнбағыш баҫыуы.* ■ *Юл таҫмаһы тулҡынып ултырған баҫыуҙар аша алға тартыла, ике яҡлап һуҙылған урман һыҙаты кәмендә өс саҡрым ҡырҙа.* Ә. Хәкимов. *Баштан-аяҡ хыялға сумған Әптеләхәт баҫыу юлынан ауылға ашыҡты, ауылға килеп ингәс тә туп-тура Мәҙинәләргә атланы.* Т. Ғарипова. *Райондың Таулыҡай булып ата-*

*лып йөрөтөлөүе лә буштка түгел. Был якта, йәйрәп яткан ялан-баҫыуҙарҙы күрмәҫһең.* Д. Бүләков.

**2.** *диал.* Кәртәләп алған сабынлыҡ. □ Ограждённый покос, место косьбы. *Бесән баҫыуын кәртәләү. Баҫыуыбыҙҙа үлән күтәрелгән.*

**БАҪЫУ III (баҫ-)** [*баҫ-* ҡылымынан] (Р.: натереть; И.: chafe; Т.: vurmak) *ҡ.*

Өйкәү. □ Натереть *что (повредить трением). //* Натирание. *Ат арҡаһын эйәрҙән баҫтырған.*

**БАҪЫУ IV (баҫ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **сигеү.** *Таҫтамал баҫыу.*

**БАҪЫУ КЛЕВЕРЫ** (Р.: клевер полевой; И.: field clover; Т.: yonca) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тумалаҡ сәскәле мал ашай торған үлән; туҡранбаш. □ Клевер полевой (лат. *Trifolium campestre). Баҫыу клеверын тупраҡтың уңдырышлылығын арттырыу өсөн ашлама итеп ҡулланырға була.*

**БАҪЫУ КӨЙГӘНӘГЕ** (Р.: полевой лунь; И.: harrier; Т.: gökçe tuygun) *и. зоол.*

Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған урта ҙурлыҡтағы төрлө төҫтәге йыртҡыс ҡош. □ Полевой лунь *(птица)* (лат. *Circus cyaneus).* ■ *Баҫыу көйгәнәге яланда, баҫыуҙарҙа йәшәй. Ваҡ кимереүселәр менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**БАҪЫУ КҮСТЕРӘҺЕ** (Р.: костер; И.: brome; Т.: brom) *и. бот.*

Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ваҡ ҡына ялпаҡ башаҡлы, ҡыяҡ япраҡлы үлән *(бесән өсөн сәселә).* □ Костер (лат. *Bromus). Баҫыу күстерәһе быйыл бик уңған.*

**БАҪЫУ КӘРЕШКӘҺЕ** (Р.: посевная вика; И.: vetch; Т.: fiğ) *и. бот.*

Теҙмә япраҡлы, сырмалып торған мыйыҡлы, ваҡ ҡына ирен сәскәле ҡуҙаҡлы үлән. □ Посевная вика (лат. *Vicia).* ■ *Йүкә сәскә атҡанын да, арыш баш ҡоҫҡанын да, кәрешкә сәскәләнгәнен дә тоям, моң аша һиҙәм.* М. Бураҡаева.

**БАҪЫУ ҠАНДАЛАҺЫ I** (Р.: клоп полевой; И.: field bug; Т.: lekeli bitki böceği) *и. зоол. диал.*

Ҡыр ҡандалаһы. □ Клоп полевой (лат. *Lygus pratensis). Баҫыу ҡандалаһы йәшелсәләргә зыян килтерә.*

**БАҪЫУ ҠАНДАЛАҺЫ II** *и. зоол. диал. ҡар.* **еңгәсәй.**

**БАҪЫУ ҠАПҠАҺЫ** (Р.: ворота в деревню; И.: gate to the village; Т.: köyün kapıları) *и. диал.*

**1.** *иҫк.* Ауылға инә торған ҡапҡа; ауыл ҡапҡаһы. □ Ворота в деревню. ■ *Баҫыу ҡапҡаһына барып көтөү ҡаршыланыҡ. Ауыл осондағы баҫыу ҡапҡаһынан ҡапыл өс һыбай күренеп, ҡапҡаны сыҡҡас, өс яҡҡа айырылған юл буйынса саптыра башланылар.* Ә. Хәкимов. *Бер сәғәттән һуң инде баҫыу ҡапҡаһынан өҫтөнә Фатима ултырған көлтә йөгө күренде.* Ғ. Хәйри. *Ауылдың баҫыу ҡапҡаһы эргәһендә ҡар бөтмәгән икән.* А. Таһиров. *Ауылына ҡайтып етеп, баҫыу ҡапҡаһына ингәс тә Етегәнгә бер шәүлә осрай.* Әкиәттән.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, ауылды төрлө бәлә-ҡазанан, ауырыу эйәләренән ҡурсалаусы сик. □ Ворота в деревню *(по представлениям башкир, пограничье, граница освоенной территории).* ■ *Ямғыр яумаһа, баҫыу ҡапҡаһына һыу һибә инек.* Ф. Хисамитдинова.

**БАҪЫУСЫЛЫҠ (баҫыусылығы)** [боронғо төрки *пасу*] (Р.: полеводство; И.: field crop cultivation; Т.: tarla tarımı) *и.*

Ауыл хужалығының баҫыу эше менән шөғөлләнгән тармағы. □ Полеводство. *Баҫыусылыҡ бригадаһы.* ■ *Баҫыусылыҡ менән шөғөлләнергә хужалыҡтың техникаһы етерлек.* Л. Такаева. *Өләсәйем малсылыҡ, баҫыусылыҡ тармаҡтарында эшләй.* «Башҡортостан», 9 август 2011.

**БАҪЫУ СЫСҠАНЫ** (Р.: мышь полевая; И.: meadow mouse ; Т.: sırtı çizgili orman faresi) *и. зоол.*

Ҡыр сыҫҡаны. □ Мышь полевая (лат. *Apodemus agrarius*). *Баҫыу сыҫҡаны — киң таралған кимереүсе. Баҫыу сыҫҡаны зыян итеүсе кимереүселәр рәтенә ҡарай.*

**БАҪЫУ ТОТОУ (баҫыу тот-)** (Р.: оградить покос; И.: enclose haymaking ground; Т.: biçmeyi kormak) *ҡ.*

Баҫыуҙы кәртәләү. □ Оградить покос. // Ограждение. *Баҫыуҙы төрлө мал-тыуарҙан һаҡлар өсөн тоталар.*

**БАҪЫУ ТУРҒАЙЫ** (Р.: жаворонок полевой; И.: meadow lark; Т.: tarla kuşu) *и. зоол.*

Һабан турғайы; буҙ турғай, турғай, ялпылдаҡ, сырлауыҡ, ашлыҡ турғайы, иген турғайы. □ Жаворонок полевой (лат. *Alauda arvensis*). *Баҫыу турғайы ябай турғайҙан саҡ ҡына ҙурыраҡ була.*

**БАҪЫУ ШЫРШЫ ҮЛӘНЕ** (Р.: хвощ полевой; И.: horsetail; Т.: atkuyruğu) *и. бот.*

Буйы 50 см тиклем булған, шыршылар ғаиләһенә ҡараған, күп йыллыҡ үҫемлек. □ Хвощ полевой (лат. *Equisetum arvense*). *Баҫыу шыршы үләнен борондан дауалау маҡсатында ҡулланғандар.*

**БАҪЫШЫУ (баҫыш-)** (Р.: нападать; И.: break in; Т.: basmak) *ҡ. диал.*

**1.** Кеше өйөнә, милкенә баҫып инеү, һөжүм яһау. □ Нападать *(на чужое имущество)*. // Нападение. *Йорт баҫышыу язаһыҙ ҡалмаҫ.*

**2.** Йорт хайуандарына төрлө йәнлек-ҡоштарҙың ташланыуы, ябырылыуы. □ Нападение хищников на домашних животных. // Нападение. *Ҡорт күсе аттарға баҫыша.* ■ *Һайлап ҡуйған баштар ҙа ямана-тын сығармаҫ, үҙен түрҙә ултырған түрәгә һанамаҫ, бары тик килгән афәттән илде ҡурсалар: яу килгәндә, яу ҡайтарышыр. мал-тыуарға ҡош-ҡорт баҫышһа, януар менән алышыр, ен-пәрейҙәр йөҙәтһә, улары менән дә көс һынашыр батырҙар булыр ине.* «Зөһрә менән Алдар».

**БАТА** [ғәр. عطاء ‘бүләк’] (Р.: благословение; И.: benediction; Т.: icazet) *и.*

**1.** Фатиха. □ Благословение. ■ *Атаң ҡуйған атың менән аталырһың, хеҙмәтеңә ҡарай илеңдән бата алырһың.* М. Аҡмулла. *Дөрөҫ, Боғара үҙе лә — тәңре балаһы. Шуның изге батаһы менән ырыуының көс-ҡеүәте быуындан быуынға үрсеп килә.* Ә. Хәкимов. ● *Баталы ҡол арымаҫ, батаһыҙ ҡол йәлсемәҫ.* Мәҡәл.

**2.** *этн.* Никах туйы алдынан ҡыҙҙы биргәндә ата-әсәнән алынған ризалыҡ. □ Молитва-напутствие, благословение родителей просватанной девушки. *Бата уҡытыу. Бата биреү.* ■ *Шағәле килһә лә, килмәһә лә, хәҙер инде Миңлебикәнең хәле үҙгәрмәйәсәк. Эш бөткән: бата бирелгән, туй көнө тәғәйенләнгән.* К. Мәргән.

**3.** Доға. □ Молитва. ■ *Күк йөҙөндә йөҙгән болоттоң күләгәһе төшөр битеңә. Яҡшылыҡ та менән бата ҡыл, һағынғанда төшһәм иҫеңә.* Халыҡ йыры. ● *Атаһы башҡаның батаһы башҡа.* Мәҡәл.

**4.** Рөхсәт. □ Разрешение. ■ *Иртә намаҙ ваҡытында ята бирмә, харам нәмә алыуға бата бирмә.* М. Аҡмулла. *[Мифтахетдин:] Сырхаумын, тәҡсир. Башым сәңкеп һыҙлай. Миңә һабаҡты уҡымаҫҡа бата-рөхсәт ҡыл, тәҡсир.* Я. Хамматов.

**5.** *диал.* Никах. □ Мусульманский обряд бракосочетания. *Бата үткәреү.*

**БАТАЛЬОН** [рус. < фр. *bataillon*] (Р.: батальон; И.: battalion; Т.: tabur) *и.*

Бер нисә ротанан торған ғәскәри берәмек. □ Батальон. ■ *Сәйфулла менән старшина батальон штабынан ҡайтыуға уҡыу лагерында бер кем дә юҡ ине: шау-гөр килеп торған ҡарағай урманы дәрестән һуң бушанып ҡалған мәктәп ихатаһы һымаҡ тып-тын.* Ә. Әминев. *Колчакка ҡаршы арыҫландай һуғышып дан ҡаҙанған «тимер батальондар» бар ине.* З. Биишева. *Кис, отбой алдынан, Хөснөтдиновты батальон штабына саҡырттылар.* Я. Хамматов. *Бынан ун биш көн самаһы элек кенә әле, Әхмәтшин уны батальон штабына йомош менән ебәргәйне.* Н. Мусин.

**БАТАРЕЯ I** [рус. < фр. *batterie*] (Р.: батарея; И.: battery; Т.: batarya) *и. хәрби.*

Бер нисә орудиенан торған ғәскәри берәмек. □ Батарея. *Зенит батареяһы. Миномет батареяһы.* ■ *Беренсе атыштан аҙаҡ, туғыҙынсы июлдең төнөндә, айырым рус батареялары крепоска яҡыныраҡ шылдырып урынлаштырылды.* Я. Хамматов. *Редуттарға ҡуйылған ике батарея дошман яғына туптан ата башланы.* Н. Мусин. *Ҡарт: «Яңы һөжүмгә күскәнсе, туп тартыуҙы аттарығыҙҙы һөлөк кеүек итәм, тик ҡалдырығыҙ ғына үҙемде», — тип осраған бер командирҙы өгөтләй торғас, уны бер батареяға беркетеп ҡуялар.* Ә. Хәкимов.

**БАТАРЕЯ II** [рус. < фр. *batterie*] (Р.: батарея; И.: battery; Т.: pil) *и.*

**1.** Бергә хәрәкәтләнеү өсөн бер нисә типлы приборҙың, аппарат ҡоролманың бөтөн бер системаға йәки установкаға тоташтырылыуы. □ Батарея. *Анод батареяһы. Электр батареяһы. Аккумулятор батареяһы.*

**2.** Бер иштән бер нисә өлөш ялғанған ҡоролма. □ Батарея. *Йылылыҡ батареяһы. Өйгә батарея үткәртеү. Пар менән йылытыу батареяһы.*

**3.** Көсөргәнеште арттырыу йәки энергия биреү өсөн тәғәйенләнгән бәләкәй аккумулятор. □ Батарейка. ■ *Машиналағы батареяның көсө тик бер тәүлеккә етә.* Р. Камал. *[Фонарҙың] эсенә дүрт батарея һалаһың, машина фараһы кеүек яҡтырта илә.* Д. Бүләков.

**БАТАРЕЯСЫ** (Р.: батареец; И.: gunner; Т.: topçu) *и.*

Артиллерияла хеҙмәт иткән кеше. □ Батареец. *Батареясылар отряды.*

**БАТА-СУМА** (Р.: утопая; И.: sink; Т.: bata çıka) *р.*

Бата яҙып. □ Утопая, погружаясь *(в грязь или в воду).* ■ *Күпме ыҙалап, һалҡын һыуға бата-сума, интегеп тотҡан балыҡты тәктән тоттороп ебәрсәле.* Р. Ҡол-Дәүләт. *[Атаһы:] Яҙғы йомшаҡ ҡарҙа бата-сума йөрөү ҙә бер ғазап бит, арығандыр шул...* Н. Мусин.

**БАТА ТЕЛӘК (теләге)** (Р.: напутствие родителей просватанной девушке; И.: parting wishes for the bride; Т.: iyi dilek) *и. этн.*

Никахлағанда һәм оҙатҡанда ҡыҙға ҡарап әйтелә торған өгөт. □ Напутствие родителей просватанной девушке. *Ата-әсәһе ҡыҙға бата теләк әйтеп ҡалдылар.*

**БАТА ҺҮҘ** *и. ҡар.* **бата теләк.**

**БАТАҺЫН УҠЫУ (батаһын уҡы-)** (Р.: завершить большую работу; И.: complete a large piece of work; Т.: büyük işi tamamlamak) *ҡ. диал.*

Ҙур эште тамамлау. □ Завершить большую работу. // Завершение. *Мәсетте төҙөп бөтөп батаһын уҡыттылар.*

**БАТАҺЫҘ** (Р.: неприкаянный; И.: miserable; Т.: huzursuz) *с.*

Фатихаһыҙ. □ Неприкаянный, лишённый благословения. *Батаһыҙ бала.*

**БАТИК (батигы)** [рус. > индонез. *batigue*] (Р.: батик; И.: batik; Т.: batik) *и.*

Төрлө төҫтәге шыйыҡ анилин буяуҙар менән эшләнгән биҙәкле туҡыма, ҡорама, шаршау, ашъяулыҡ, өҫ кейеме йәки тәҙрә ҡорғандары. □ Батик. *Азия илдәрендә батик милли кейем булып ҡалала.*

**БАТИН** [ғәр. باطن 'эске, урта'] (Р.: внутренний; И.: inner; Т.: iç) *с. арх.*

**1.** Эске. □ Внутренний. *Батин донъяһы гүзәл уның.*

**2.** Йәшерен, серле. □ Тайный, секретный. *Батин хәбәр. Батин эш.*

**БАТИНАН** [ғәр. باطنا] (Р.: про себя; И.: to oneself; Т.: gizlice) *р. иҫк.*

Эстән, йәшерен. □ Про себя, тайно, секретно. *Хатты батинан уҡып сыҡты.*

**БАТИСАҠ (батисағы)** *и. диал. ҡар.* **батист.**

**БАТИСКАФ** [рус. < гр. *bathys* 'тәрән' + *skaphos* 'кәрап'] (Р.: батискаф; И.: bathyscaph; Т.: batiskaf) *и.*

Тәрән һыу аҫтана төшөп, тикшеренеү эше алып барыу өсөн махсус рәүештә йыһазландырылған үҙе йөрөмәле камера. □ Батискаф.

**БАТИСТ** [рус. < фр. *batiste*] (Р.: батист; И.: cambric; Т.: patiska) *и.*

Бик йоҡа нәфис мамыҡ йәки етен туҡыма. □ Батист. *Батист күлдәк.* ■ *Сәхибә. стена буйында, өҫтәл йәнәшәһендәге аяҡлы тегеү машинаһында батист яулыҡтың ситтәрен бөгөп бөткәндән һуң, урынынан торҙо.* Ғ. Хәйри. *[Мәҙинә] өҫтөнә шулай ҙа элекке аламаһын кейгеһе килмәне, атаһы алып ҡайтҡан батистан күршеһе теген биргән күлдәген кейҙе, аяғына яңы ҡаталарын эләктерҙе.* Т. Ғарипова. *Айһылыу кеҫәһенән сигелгән аҡ батист яулыҡ алып, Хамматтың тирле маңлайын, биттәрен һөртөп алды.* З. Биишева.

**БАТҠАҠ (батҡағы)** (Р.: слякоть; И.: mud; Т.: çamur) *и.*

**1.** Һыуға ебеп, иҙелеп ятҡан балсыҡ, тупраҡ. □ Вязкая, топкая почва, земля; грязь, слякоть. *Батҡаҡ ер. Батҡаҡ урам.* ■ *Юл батҡаҡ вә лайла, ҡул-аяҡ бығауҙа, ҡыймылдап булмай ҙа!* Ш. Бабич.

**2.** *мед.* Файҙалы матдәләргә бай булған, дауалау маҡсатында ҡулланылған күл төбөндәге ләм. □ Лечебная грязь. *Күл батҡағы. Диңгеҙ батҡағы.*

**3.** *диал. кар.* **бысраҡ I, 2.**

**БАТҠАҠЛАНЫУ (батҡаҡлан-)** (Р.: разжижаться; И.: mudden; Т.: çamurlaşmak) *ҡ.*

**1.** Батҡаҡҡа әйләнеү. □ Разжижаться, превратиться в слякоть, грязь, топкую массу. // Грязь, топь. *Батҡаҡланған юл. Батҡаҡланған урам.*

**2.** *диал.* Бысрау. □ Грязниться, пачкаться, мараться. // Грязь. *Аяҡ кейеме батҡаҡланған. Ҡалай батҡаҡланып бөткәнһең.*

**БАТҠАҠЛАУ (батҡаҡла-)** (Р.: превращать в грязь, слякоть; И.: turn into mud; Т.: çamurlatmak) *ҡ.*

**1.** Батҡаҡҡа әйләндереү. □ Превращать в грязь, слякоть. *Ҡойоп яуған ямғыр юлды батҡаҡланы.*

**2.** *диал.* Бысратыу. □ Грязнить, пачкать, марать. // Грязь. *Салбарыңды батҡаҡлап ҡайҙа йөрөнөң?*

**БАТҠАҠЛЫ** (Р.: грязный, слякотный; И.: muddy; Т.: çamurlu) *с.*

Батҡағы булған, батҡаҡҡа әйләнгән. □ Грязный, слякотный. *Батҡаҡлы ер. Батҡаҡлы урын.* ■ *Ошо матурлыҡҡа ғашиҡ булып, хатта ялан эсенә аяҡ баҫырға ла баҙнат итмәйһең. Әгәр шунда инеп китһәң, үҙеңде затлы келәм өҫтөнән батҡаҡлы аяҡ кейеме менән үткәндәй хис итәһең.* Н. Мусин. *Үҙе бахыр [Борис] бөтөнләй бысранып бөткән, бите лә, ҡулы ла мәтегә буялған, кейеменән батҡаҡлы һыу аға.* Р. Солтангәрәев. *Ошо мәлде көткәндәй, лысма һыу һәм батҡаҡлы кейемдә Байрамғол ҡайтты.* Ф. Янышев.

**БАТҠАҠЛЫҠ (батҡаҡлығы)** (Р.: топкое, болотистое место; топь; И.: marsh; Т.: çamurluk) *и.*

**1.** Батҡаҡ ер. □ Топкое, болотистое место; топь. *Һаҙлыҡ батҡаҡлығы.* ■ *Ҡараңғы төн. аяҡ аҫтындағы батҡаҡлыҡ, һәр минут көтөлгән үлем ҡурҡыныcы беҙҙең күкрәктәрҙе тағы ла ҡыҫа, һулыштарҙы быуа.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Ауыр, ҡотолғоһоҙ хәл. □ Тяжёлое, безвыходное положение. *Сир батҡаҡлығы.* ■ *Әммә бер мәл аңланым батҡаҡлыҡҡа батҡаным: «йәшел йылан» өңөнә әсирлеккә ҡапҡаным.* Р. Дауыт.

**БАТҠАҠ СЫҒАНАҒЫ** (Р.: грязевой источник; И.: mud spring; Т.: çamur kaynağı) *и.*

Һаҙ ултырмаларында, һыу ятҡылығы ҡалдыҡтарында һәм башҡа тәбиғи ҡатламдарҙа барлыҡҡа килгән һыу менән минераль һәм төрлө органик матдәләр ҡушылмаһы. □ Грязевой источник *(пелоиды)*. *Батҡаҡ сығанағынан дауалау батҡағын алалар. Башҡортостанда төрлө батҡаҡ сығанаҡтары күп.*

**БАТҠАҠ СӘЙЕ** (Р.: ритуальное весеннее чаепитие, направленное на проецирование хорошего года; И.: ritual tea party; Т.: bir gelenek) *и. миф.*

Яҡшы йыл теләп, яҙғы сәй эсеү йолаһы. □ Ритуальное весеннее чаепитие, направленное на проецирование хорошего года. *досл.* Чай слякоти. ■ *Хәйерлегә ҡара ергә*

*баҫтыҡ, тип яҙғы юлһыҙ мәлдә батҡаҡ сәйе эсәбеҙ, өйҙән өйгә йөрөп, йыл имен килһен, тип.* Экспедиция материалдарынан.

**БАТҠЫЛ I** (Р.: топкий; И.: boggy; Т.: batak) *с.*

**1.** Бата торған. □ Топкий, трясинный, зыбучий. ■ *[Таня:] Тырышам-тырмашам. Ҡаяға үрмәләйем, батҡыл упҡын (сир) тырнағынан ҡотолорға маташам.* Р. Камал. *Күкбүре йылға башында сауҡалыҡта йәшәгән ҡарт инә мышыны күптән күҙәтеп, ауларға тәғәйенләп, ҡарҙың батҡыл сағын көтәүелләп йөрөй ине – тегеләр уны тып баҫтырмай тотоп ашаны.* Т. Ғарипова. *Үҙҙәрен батҡыл һаҙлыҡ һурғанға ҡарыш торған кеүек, һалдаттар, үҙ иректәренән тыш буйһоноп, яй ғына теҙелделәр.* Д. Юлтый. *Алайғыр исемле был кескәй генә йомро күл ауыл артында, тәрән соҡор төбөндә ята. Төбө бик йомшаҡ, батҡыл.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал. ҡар.* **батынҡы.**

**БАТҠЫЛ II** (Р.: топь; И.: swamp; Т.: batak) *и.*

Бата торған ер. □ Топь. ■ *[Шофёр,] машинаһын ҡыҙҙыра төшөп, беҙҙән алда елдереп китеп, бер батҡылға барып төкәлгән алдағы газикты ҡыуып етте.* Р. Ғарипов.

**БАТҠЫЛЛЫҠ** *с. диал.* **батҡыл I, 1.**

**БАТҠЫЛЫҠ (батҡылығы)** *и. диал.* **батҡыл I, 2.**

**БАТМАН I** [дөйөм ҡыпсаҡ *батман*] (Р.: небольшая кадка; И.: vat; Т.: fıçı) *и. этн.*

**1.** Тәпәндән бейегерәк ағас һауыт. □ Небольшая кадка, служащая для хранения мёда, масла и т. д. ■ *Бер батманда ярмам бар, бер батманда һалмам бар.* Әкиәттән. *Рамғун ебәргән кешеләренә үҙ кәүеменең уғын, батман менән бал, иләнгән кеш тиреһе биреп ебәрҙе.* З. Ураҡсин. *Ҡурыстан ишелгән ҡирәмен, бағауын, башына ҡабыҡ кәпләмә кейҙерелгән солоҡ балтаһын, ерҙән солоҡ башына әйбер баулап күтәрә торған арҡатауын, бәләкәйерәк батманын арбаға сығарып һалды.* Н. Мусин. *Сәйҙән һуң Гөльямал, сынаяҡтарҙы йыуып һаркытырға ҡуйғас, ике көн йыйған ҡаймағын батманға һалып бешеп, күбек майы яһаны.* Я. Хамматов.

**2.** *ҡар.* **көбө 1.**

**3.** Батман һауытына тиң үлсәү берәмеге. □ Старинная мера веса. *Бер батман май. Ике батман ярма.* ■ *Дейеү пәрейе дер ҡалтырай ҡылыс менән һуғыуҙан, алты батман сукмары төшөп китә ҡулынан. Ҡурпәстең дә ҡылысы киҫәктәргә ыуалған.* «Ҡуҙыйкүрпәс». *Тимер пайтәхетенә, ике мең баш йылҡы, егерме биш батман бал, өс йөҙ дана ҡиммәтле йәнлек тиреһе оҙатылды.* Я. Хамматов. *Латыш һаман аҙһынып ыңғырлағас, Әхмәди өҫтәүенә биш батман ҡайын дегете килтерергә вәғәҙә итте.* Ж. Кейекбаев.

**БАТМАН II** [ҡыпсаҡ осоро һүҙе] (Р.: колчан; И.: quiver; Т.: okluk) *и. диал.*

Һаҙаҡ. □ Колчан. *Батманында бер генә уғы ҡалған.*

**БАТМАН III** (Р.: погреб; И.: cellar; Т.: mahzen) *и. диал.*

Мөгәрәп. □ Погреб. *Ҡаймаҡ ана шунда батманда.*

**БАТМАН IV** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-тамьянцев.

**БАТМАН V** [рус. < фр. *battement* 'тибеү, һуғыу'] (Р.: батман; И.: battement; Т.: battement) *и.*

**1.** Балетта хәрәкәт төрө. □ Батман *(отведение и преведение ноги в классическом танце). Балерина батмандарын ҡабатлай.*

**2.** Фехтованиела һуғыу төрө. □ Батман *(в фехтовании удар по клинку противника).*

**БАТМАН БАШ** (Р.: человек с большой головой; И.: person with a large head; Т.: büyük başlı kimse) *с.*

Ҙур башлы кеше. □ Человек с большой головой. *Бигерәк батман башһың инде, бер баш кейеме ярамай.*

**БАТМАНСЫҠ I (батмансығы)** (Р.: водяной орех; И.: water caltrop; Т.: su kestanesi) *и. бот.*

Бер йыллыҡ ябай һыу үҫемлеге. □ Водяной орех (лат. *Trapa natans). Батмансыҡ – «Ҡыҙыл китап»ҡа ингән һыу үҫемлеге.*

**БАТМАНСЫҠ II (батмансығы)** (Р.: небольшой сосуд, сделанный из полого ствола дерева; И.: kind of a small vessel; Т.: küçük kap) *и.*

Күнәсек. □ Небольшой сосуд, сделанный из полого ствола дерева. *Батмансығын тотоп һыуға китте.*

**БАТМУС** [рус. *поднос* ] (Р.: поднос; И.: tray; Т.: tepsi) *и.*

Сынаяҡ, һауыт ташыу, ашамлыҡты өҫтәлгә ҡуйыу һ. б. өсөн ситтәре өҫкә ҡайтарып эшләнгән махсус таҡта, тимер, пластмасса табаҡ. □ Поднос. ■ *Бибеш урындыҡҡа .. ашъяулыҡ түшәне. Батмус менән сәйгүн, сынаяҡ, икмәк, һөт алып килде.* З. Биишева. *Өмә ҡыҙҙы, күҙгә күренеп эш ыраны: батмустар, табаҡтар өҫтөнә һары май киҫәгеләй ҡаҙ түшкәләре өйөлдө.* Р. Камал.

**БАТОН** [рус. < фр. *bâton* 'таяҡ'] (Р.: батон; И.: long loaf; Т.: uzun ekmek) *и.*

**1.** Оҙонса аҡ икмәк. □ Батон. *Бер батон икмәк һатып алдым.*

**2.** Оҙонса формалағы башҡа аҙыҡ-түлек. □ Батон. *Шоколад батоны.*

**3.** Ҙур булмаған оҙонса йә йомро формалағы юл сумкаһы, һандығы. □ Сумка батон. *Юлда йөрөү өсөн батон сумка һатып алдым.*

**БАТРАК (батрагы)** [рус.] (Р.: батрак; И.: farm labourer; Т.: rençper) *и.*

Байға ялланып эшләгән кеше; ялсы. □ Батрак. ■ *Утарҙың ике һыйыры, танаторпоһо, ике ҡарт алашаһы, биш-алты баш сусҡаһы, иҫәпһеҙ ҡош-ҡорто – барыһы батрак өҫтөндә.* Ә. Хәкимов. *Лоҡмандың махсус уҡыу йорто тамамлау тураһындағы ҡағыҙы булмаһа ла, батрактан сыҡҡан зыялы белгес булараҡ, үрләткәндән үрләттеләр.* Т. Ғарипова.

**БАТРАКЛЫҠ (батраклығы)** (Р.: батрачество; И.: working as a farm labourer; Т.: rençperlik) *и.*

Батрак эше. □ Батрачество. *Батраклыҡҡа барыу. Батраклыҡта йөрөү.* ■ *Атаһының ғүмер буйы кемтерләп йыйған барлы-юҡлы малын, бер йылға еткермәй, туҙҙырып бөттө, унан башын Ғәрәй байға батраклыҡҡа һалды Ғамир.* Б. Бикбай. *Баварияны американдар биләп алғанға тиклем өс йыл ярым ғүмерен батраклыҡта уҙғарҙы.* Ә. Хәкимов.

**БАТТЕРФЛЯЙ** [рус. < ингл. *batterfly* 'күбәләк'] (Р.: баттерфляй; И.: batterfly stroke; Т.: kelebek stili yüzme) *и.*

Йөҙөү төрө. □ Баттерфляй *(стиль спортивного плавания). Йөҙөүсе баттерфляйға күсте.*

**БАТУҠЫТЫУ** (Р.: обычай; И.: kind of Bashkir folklore rite; Т.: bir töre) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, ен-зәхмәтте һәм кеше йәнен алыусы фәрештәне алдар өсөн яңы тыуған баланы күмәк балалы кешегә биреү йолаһы. □ Обычай безвозмездной передачи новорождённого многодетному человеку с целью обмануть нечистую силу и духа смерти. ■ *Күмәк балалы кешегә яңы тыуған сабыйҙы батуҡытыу йолаһы булған.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАТУЛ** (Р.: тряпичный самотканый половик; И.: doormat made of rugs; Т.: yol halısı) *и. диал.*

Сепрәк балаҫ. □ Тряпичный самотканый половик. *Ҡатыны эшкә шәп икән, әллә күпме батул һуҡҡан.*

**БАТУН** (Р.: лук-батун; И.: welsh onion; Т.: gal soğanı) *и. бот. диал.*

Йыллаған һуған. □ Лук-батун (лат. *Allium fistulosum). Батун һуғанды ҡыш һуғаны тип тә атайҙар, сөнки ул ҡышҡы һыуыҡтарға бирешмәй.*

**БАТУТ** [рус. < фр. *batoude* < ит. *battuta* 'бәрелеү'] (Р.: батут; И.: trampoline; Т.: trambolin) *и.*

Циркта, спортта горизонталь хәлдә нығытып ҡуйылған капрон йәки металл

сетка. □ Батут. *Балалар батутта һикерергә ярата.*

**БАТША** [фарс. پادشاه] (Р.: царь; И.: monarch; Т.: padişah) *и.*

**1.** Дәүләт башындағы сикләнмәгән хоҡуҡлы юғары хаким. □ Царь, государь, повелитель. *Рәсәй батшаһы. Батша заманы.* ■ *Боронғолар ҡыҙ хаҡына дан ат биргән, өйөр-өйөр малын йәлләмәгән, ә батшалар — батшалығын...* Р. Камал. *[Сафа мулла:] Әсир булған һалдаттарҙы япон батшаһы бөтөнләй ҡайтармай, коллоҡҡа алып ҡала, имеш, тигән хәбәрҙәр таралғайны.* Ж. Кейекбаев. ● *Күңел — батша, тел — вәзир.* Мәҡәл.

**2.** *миф.* Тәбиғәт, йәнлек эйәһе, хужаһы. □ Царь, хозяин, дух природных объектов. *Ер батшаһы. Күл батшаһы. Һыу батшаһы. Ут батшаһы. Урман батшаһы.* ■ *Беҙҙең яҡта Кирәмәтте, тауҙар батшаһы, тиҙәр.* М. Кәрим.

**3.** *миф.* Мифологияла изге, сакраль, тәңреләш, терелгән зат; бәхет, байлыҡ символы. □ Мифологизированное лицо.

**4.** *күсм.* Йәнлек, ҡоштарҙың иң көслөһө. □ Царь природы. *Йыландар батшаһы.* ■ *Ығласынданбейек оса торған ҡош батшаһы ҡыйғыр бөркөт бар.* С. Юлаев. *Ҡыҙрас ҡара урмандағы бөтә ҡоштоң батшаһы булып йәшәгән йөҙ ҙә бер йәшлек ябалаҡты .. тотоп ала.* Әкиәттән. ● *Йылҡы — малдың батшаһы.* Мәҡәл.

**5.** *күсм. Ниндәйҙер* эш, һөнәрҙең иң ҙур оҫтаһы *(кире мәғәнәлә лә була ала).* □ Царь, король *(может употребляться и в отрицательном значении). Йыр батшаһы. Мода батшаһы. Уйын батшаһы.* ■ *[Олатайымды] айыу батшаһы тип кенә йөрөтәләр. Ул үҙ ғүмерендә алтмышҡа яҡын айыу атып алған.* З. Хисмәтуллин. *Ул һыра батшаһына әйтегеҙ! — Мансур ағайҙың шулай тигәнен асыҡ ишетә Хәлит. — Мин уға бер ниндәй ҙә урынды күрһәтмәйем!* Н. Ғәйетбаев.

**БАТШАБИКӘ** (Р.: царица; И.: tsarina, empress; Т.: çariçe) *и.*

Дәүләт башындағы сикләнмәгән хоҡуҡлы юғары хакимә. □ Царица, государыня, повелительница. ■ *1755 йылдың 25 ғинуарында — Изге Татьяна көнөндә батшабикә Елизавета Петровна тарафынан илебеҙҙең беренсе ҙур уҡыу йорто — Мәскәү университетына нигеҙ һалына.* «Йәйғор», 3 ғинуар, 2011.

**БАТШАЙ I** (Р.: среднеазиатская шёлковая ткань; И.: silk stuff from Central Asia; Т.: ipek) *и.*

Урта Азияла нык таралған йоҡа ебәк туҡыма. □ Среднеазиатская шёлковая ткань. *Батшай күлдәк. Батшай сапан. Батшай камзул.*

**БАТШАЙ II** *и. диал. кар.* **ҡырпыу 1.**

**БАТШАЙ КАМЗУЛ** (Р.: камзол без рукавов; И.: sleeveless tunic; Т.: kolsuz tunik) *и.*

Еңһеҙ камзул. □ Камзол без рукавов. *Батшай камзул тектереү.*

**БАТШАЛЫҠ (батшалығы)** (Р.: царство; И.: tsarism; Т.: çarlık) *и.*

**1.** Башында батша торған дәүләт. □ Царство, царизм, держава. ■ *Башҡорт телкәйҙәрен киҫте инде торғонлоҡ та тигән батшалыҡ.* Т. Йосопов. *Батшалыҡты дыу килтергән элекке Яйыҡ казаҡтары ла ваҡланды, бәрәүҙәре утә байып, байлығын үҙ казаҡтарынан һаҡларға тырыша, утә ярлыһының тамаҡ ҡайғыртыуҙан башы сыҡмай.* З. Ураҡсин.

**2.** *биол.* Ер йөҙөндә тереклек иткән барлыҡ организмдарҙың дөйөм берләшмәһе. □ Царство. *Ер-һыу хайуандары батшалығы. Бөжәктәр батшалығы.*

**БАТШАЛЫҠ ИТЕҮ (батшалыҡ ит-)** (Р.: царствовать; И.: reign; Т.: hüküm sürmek) *ҡ.*

Батшаның дәүләт менән идара итеүе. □ Царствовать. // Царствование. ■ *[Рамғун батша:] Ҡәҙерле аҡһаҡалдарым, ҡәүемебеҙ менән ун мәртәбә ҡыш булып, йәй алмашынған арала батшалыҡ иттем.* З. Ураҡсин. *Боронғонан батшалыҡ иткән Дауыттың был донъяға даны еткән.* М. Аҡмулла. *Өс йөҙ йылдан ашыу Рәсәйгә идара иткән Романовтар тоҡомо батшалыҡ итеүгә сик ҡуйыла.* М. Хужин.

**БАТШАЛЫҠ ИТЕҮСЕ** *и. ҡар.* **батша 1, 2.** ■ *Урта Донъяла ғиҙғәнендә Шүлгән затлы Көн-апабыҙ күктән ергә лә төшөп, изге Бүре ҡиәфәтендә башҡорттарҙың юлбашсыһы (сәйәхәттәрҙә юл башлаусыһы) һәм батшалыҡ итеүсе Ҡояш тоҡомло кешеләрҙе .. тыуҙырыусы булып та йөрөгән.* Й. Солтанов.

**БАТШАЛЫҠТЫ ҠОЛАТЫУ (батшалыҡты ҡолат-)** (Р.: свергнуть царизм; И.: overthrow of tsarism; Т.: çarlık rejimini devirmek) *к.*

Башында бер генә монарх торған идара итеү системаһын юҡҡа сығарыу. □ Свергнуть царизм. // Свержение царизма. *1917 йылда Рәсәйҙә батшалыҡ ҡолатыла.*

**БАТША РЕЖИМЫ** (Р.: царский режим; И.: tsarist rule; Т.: çarlık rejimi) *и.*

Юғары власть батша ҡарамағында булған хаҡимлыҡ итеү формаһы. □ Царский режим. ■ *Беренсе донъя һуғышы Рәсәйҙә батша режимының баштан-аяҡ серегәнлеген, илдең үҫешенә ҡамасаулаусы булыуын тағы ла бер раҫланы.* М. Хужин.

**БАТША САМОДЕРЖАВИЕҺЫ** (Р.: царское самодержавие; И.: tsarist autocracy; Т.: çarlık rejimi) *и.*

Власы сикләнмәгән монарх етәкселегендә дәүләт менән идара итеү системаһы. □ Царское самодержавие. ■ *Батша самодержавиеһы хакимлыҡ иткән осорҙа балаларҙы үҙ телендә уҡытыу һәм шул көндөң тормошо менән таныштырыу тураһындағы тәҡдим тормошҡа ашмаҫтай ҡоро хыял һымаҡ булып тойолдо.* Я. Хамматов.

**БАТША ХӨКҮМӘТЕ** (Р.: царское правительство; И.: tsarist government; Т.: çar hükumeti) *и.*

Башында батша торған хөкүмәт. □ Царское правительство. ■ *[Андрей:] Беҙҙең маҡсат – батша хөкүмәтен бәреп төшөрөп, завод-фабрикаларҙы эшселәргә, ер-һыуҙы крәҫтиәндәргә биреү.* Ә. Хәкимов. *Батша хөкүмәте урынлаштырған ғәҙәт буйынса, XIX быуаттың урталарында һәм аҙағында башҡорт ерҙәре ике тапҡыр ҡайтанан бүленә.* М. Хужин.

**БАТЫҠ** *с. диал. ҡар.* **батынҡы.**

**БАТЫҠАЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ирәкте ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-ирэктинцев.

**БАТЫЛ I** [ғәр. باطل ‘ялған’] (Р.: ложный; И.: false; Т.: yalan) *с. иҫк. кит.*

**1.** Ялған. □ Ложный, неверный. *Дәғүәһе батыл. Батыл тәғлимәт.* ■ *Нисә яһил кешеләр мөрит була, шәйех тәслим булып ялған тәүбә ҡыла, тәүбәһе юҡ, яҡшы булып гонаһ ҡыла, яҡшы булыу дәғүәләре батыл имде.* Бәйеттән.

**2.** Файҙаһыҙ, буш. □ Бесполезный, тщетный, напрасный. *Батыл эш. Батыл көн булды бөгөн.*

**БАТЫЛ II** [ғәр. بطلان ‘булдыҡһыҙлыҡ’] (Р.: невежа; И.: boor; Т.: kaba saba herif) *и.*

Йүнһеҙ кеше. □ Невежа. ■ *Биргәненә дәхи сабыр итмәк кәрәк, сабырһыҙлыҡ батылдарҙан булыр имде.* Бәйеттән.

**БАТЫЛ БУЛЫУ (батыл бул-)** (Р.: исчезать; И.: be missing; Т.: yok olmak) *к. диал.*

Хәбәр-хәтерһеҙ юҡ булыу; ғәйеп булыу. □ Исчезать, пропадать без вести. // Исчезновение. ■ *[Рубцов менән Үтәғолов] һаман өндәшмәй. Киттеләр ҙә батыл булдылар.* Ж. Кейекбаев.

**БАТЫН I** [ғәр. بطن] (Р.: живот; И.: stomach; Т.: karın) *и. иҫк.*

Эс, ҡарын. □ Живот, желудок. *Батыны тулы.*

**БАТЫН II** [ғәр. باطن] *с. ҡар.* **батин.** ■ *Ни өсөн тигәндә, көллө батын ниәттәр, болары орлоҡтары ҡараңғы ваҡытта шытым биреүсән.* Ә. Хәкимов.

**БАТЫНҠЫ** [дөйөм төрки *батыҡ*- ‘түбән’, ‘тәрән’] (Р.: углублённый; И.: sunken; Т.: derin) *с.*

**1.** Эскә ҡарай уйынҡы; *кереһе* – ҡабарынҡы. □ Углублённый, впалый. *Батынҡы яңаҡтар. Батынҡы урын. Батынҡы ер.* ■ *[Ҡыуандыҡ] юҡ, яңылышмай: ул бер ба-*

*тынҡы, бер ҡалҡыуыраҡ һуҡмаҡта кемдеңдер аяҡ эҙендә баҫып тора ине.* Ә. Хәкимов.

**2.** Соҡорайған, йәмшәйтелгән, бөгөлгән. □ Вогнутый. *Батынҡы көҙгө. Батынҡы быяла.*

**БАТЫНҠЫЛАНЫУ (батынҡылан-)** (Р.: вваливаться; И.: become hollow; Т.: çökmek) *ҡ.*

Эскә батыу, өңөлөү, өңрәйеү, соҡорайыу. □ Вваливаться, западать. *Сикәһе батынҡыланған. Күҙҙәре батынҡыланған.*

**БАТЫНЫУ (батын-)** (Р.: осмеливаться; И.: dare; Т.: cüret etmek) *ҡ. диал.*

Баҙнат итеү. □ Осмеливаться. // Смелость. *Миңә батына алмай ул бик — бөжләй.*

**БАТЫР I** [алтай осоро һүҙе] (Р.: храбрый; И.: gallant; Т.: cesur) *с.*

Ҡурҡыу белмәҫ; ҡыйыу. □ Храбрый, смелый, отважный. *Батыр егет. Батыр халыҡ.* ■ *[Баҙарғол:] Килеш-килбәтенә ҡарағанда, батырға оҡшай. Ҡайһы ырыуҙан булыр икән?* М. Буранғолов. *Ил намыҫын һаҡлап, яуға сығыу — батыр егеттәрҙең бурысы.* Халыҡ йырынан. *Вәзирҙең ғәҙәттән тыш батыр ҡиәфәтен башта күргән Ғабдулла ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.* М. Кәрим. ● *Берәүҙең үҙе батыр, берәүҙең һүҙе батыр.* Әйтем. *Ебәк бил-бау — бил күрке, батыр егет — ил күрке.* Әйтем. *Күҙ — ҡурҡаҡ, ҡул — батыр.* Әйтем.

**БАТЫР II** (Р.: богатырь; И.: man of courage; Т.: bahadır) *и.*

**1.** Ҡыйыулығы, көсө менән танылған кеше, башлыҡ. □ Богатырь, храбрец, герой. *Яу батыры.* ■ *Айбарланған батырҙарҙың төйәге булған Урал тау.* Ҡобайырҙан. *[Аҡъял:] Батырға ҡурҡыныс нәмә юҡ. Батыр үлемдән ҡурҡмаҫ булыр.* Әкиәттән. *Һармыттар тантана итә, үҙ батырҙары Ранурҙы ҡуҡҡа сөйә ине.* З. Ураҡсин. *Тулыр илгә батырҙар, аҡ шоңҡарҙан аҡындар, арыҫландай айҙарҙар әйләнеп үк ҡайтырҙар.* Ш. Бабич. ● *Батырға ла ял кәрәк.* Әйтем.

**2.** *тар.* Яуҙа дан алған кешегә халыҡ биргән исем. □ Батыр (*предводитель, прославившийся своей храбростью или военным искусством*). *Салауат батыр. Алдар батыр. Ырыу батыры. Һәр сәсән үҙ ырыуы батырын данлар һәм ғәҙел итеп күрһәтер булған.* ● *Батыр яуҙа һыналыр.* Әйтем.

**3.** Бәйгелә көрәшкән кеше. □ Батыр, борец. *Майҙан батыры.* ■ *Көрәш ҙурайып китте. Йәш батырҙар исемле батырҙарҙы сакырырға тотондо.* Ш. Шәһәр.

**4.** Фиҙаҡәр хеҙмәте менән танылған кеше. □ Герой. *Баҫыу батыры. Хеҙмәт батыры.* ■ *Батырҙарҙың һүнгән ғүмерҙәре үлмәҫ хеҙмәт илгә ҡалдырҙы.* Р. Назаров.

**5.** *миф.* Донъяны булдырыусы, уны яманлыҡтан азат итеүсе, демиург. □ Создатель Вселенной, демиург, культурный герой. *Урал батыр. Урман батыр, Тау батыр.*

**6.** Башҡорт әкиәт һәм эпос геройы. □ Батыр *(герой сказок и эпосов)*.

**БАТЫР III** (Р.: храбро; И.: bravely; Т.: cesaretle) *р.*

Эш, тормошта тәүәккәл; ҡыйыу. □ Храбро, смело, отважно. *Эшкә батыр тотоноу. Үҙеңде батыр тотоу.* ■ *[Ырыҫкол:] Ғүбернатор әфәнде, һеҙҙең мәрхәмәтегеҙҙең сиге юҡ. Мин уны бына ошо тәрене түшемә үҙ ҡулығыҙ менән ҡаҙағанда уҡ һиҙҙем. Һеҙ батыр һуғышҡан һәр һалдатҡа ғәҙел булдығыҙ.* З. Ураҡсин.

**БАТЫР IV** (Р.: гвоздодёр; И.: claw hammer; Т.: kazayağı) *и. диал.*

Сой һурғыс. □ Гвоздодёр. *Батырымды әллә ҡайҙа ҡуйғанмын.*

**БАТЫР V** (Р.: подорожник; И.: lesser plantain; Т.: sinirli ot) *и. бот. диал.*

**1.** Юл япрағы. □ Подорожник (лат. *Plantago*). *Япраһына батыр бәйләне. Батыр йыйып алдым.*

**2.** Юл япрағының сәскәһе. □ Цветок подорожника. *Батыр япраҡ.*

**БАТЫРАЙТЫУ (батырайт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **батырайыу.** *понуд. от* **батырайыу.**

**БАТЫРАЙЫУ (батырай-, батырая)** (Р.: храбреть; И.: grow bolder; Т.: yüreklenmek) *ҡ.*

Батырға әйләнеү, ҡурҡыу белмәҫ булыу. □ Храбреть, смелеть; храбриться. // Храбрость, смелость. ■ *Ирғәлиндең ҡылын тартып ҡарағайны, ул да, эт арыуын белдермәҫ, бүрегә һыртын ҡабартыр тигәндәй,*

*батырайған була, йуләр.* Ә. Хәкимов. *Батырайып, алға ҡуҙғалдым, үҙем, тамаҡ ҡырып, тауыш биреп маташам.* Н. Мусин.

**БАТЫРҒЫС I** (Р.: грузило; И.: plummet; Т.: kurşun) *и.*

Ауҙы йәки ҡармаҡты һыуға батырыу өсөн тағылған ауырлыҡ. □ Грузило. *Ҡармаҡ батырғысы. Һөҙгө батырғысы.* ■ *Ҡайыҡтар ағын тау йылғаһы буйлап тыныс аҡһын өсөн, уларҙың ҡойроғона туҡһан—йөҙ егерме ботлоҡ сүйын батырғыстар аҫып ҡуйыр булғандар.* Легенданан.

**БАТЫРҒЫС II** (Р.: кнопка; И.: press stud; Т.: çıtçıt) *и. диал.*

Сыртлаҡ. □ Кнопка (*для одежды*). *Кейемемнең батырғысын эләктерҙе.*

**БАТЫРҘАРСА I** (Р.: героический; И.: heroically; Т.: kahramanca) *с.*

Батырҙарға хас булған. □ Героический. ■ *Егеттең оҙон буйлы, киң күкрәкле батырҙарса һыны ҡыҙға [Маянһылыуға] бик оҡшай.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**БАТЫРҘАРСА II** (Р.: героически; И.: heroically; Т.: kahramanca) *р.*

Батырҙарға хас булғанса. □ Героически. *Батырҙарса алышыу. Батырҙарса һәләк булыу.* ■ *Дошман һалдаттары менән яңғыҙы батырҙарса алышҡан Бейеш Ишкинин һәләк булғандан һуң, уның яуҙаштары өсөнсө мәртәбә сигенеп, өсөнсө мәртәбә атакаға күтәрелде.* Я. Хамматов.

**БАТЫРЛАНДЫРЫУ (батырландыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **батырланыу.** *понуд. от* **батырланыу.**

**БАТЫРЛАНЫУ (батырлан-)** (Р.: становиться храбрым; И.: become brave; Т.: yüreklenmek) *ҡ.*

Батырға әйләнеү; батырайыу. □ Становиться храбрым, смелым. // Храбрость, смелость. ■ *Бер көндө был ҡарт, батырланып, тышҡа кис менән үҙе генә сығып киткән.* Әкиәттән. *Ғәйзулла батырланыбыраҡ урындыҡтан шыуышып төштө.* Я. Хамматов.

**БАТЫРЛЫҠ (батырлығы)** (Р.: храбрость; И.: courage; Т.: yiğitlik) *и.*

**1.** Ҡурҡыуһыҙлыҡ, тәүәккәллек сифаты, ҡыйыулыҡ. □ Храбрость, смелость, мужество. ■ *Перовский ҡуҙғала биреп ҡуйҙы, шулай ҙа Ырыҫҡолдоң һүҙҙәрен шикке алманы, киреһенсә, ошо батырлыҡ хаҡындағы иҫтәлек уға оҡшай биреп ҡуйҙы, тимәк, был бәндә яҡшылыҡты онота торғандарҙан түгел, алда ла тоғро буласаҡ.* З. Ураҡсин. ● *Батырлыҡ телдә түгел.* Әйтем. *Батырлыҡ — ярты бәхет.* Әйтем. *Батырлыҡ яуҙа беленер, мәргәнлек ауҙа беленер.* Әйтем.

**2.** Хеҙмәттәге фиҙаҡәрлек. □ Трудовой героизм, геройство; подвиг. ■ *Башҡорт фольклорының 18 томлығы — уны төҙөүҙә һәм әҙерләүҙә ҡатнашыусыларҙың һәр береһе өсөн асылда тормош һәм ғилми хеҙмәт батырлығы, уларҙың үҙ ғүмерҙәренең яҡты һәм ҡәҙерле өлөшө.* Р. Шәкүр. *Ошондай ҙур маҡсаты булған өсөн дә ул [Фәйзрахман ағай] ғәрип көйөнсә ысын хеҙмәт батырлығы күрһәтә.* Н. Мусин.

**БАТЫРМАҠ (батырмағы)** *и. диал. ҡар.* **батырғыс I.**

**БАТЫРМАҪ** *и. диал. ҡар.* **сыртлаҡ.**

**БАТЫРСЫЛЫҠ (батырсылығы)** (Р.: смелость; И.: boldness; Т.: cesaret) *и.*

Кеше алдындағы ҡыйыулыҡ; баҙнат. □ Смелость, решительность. ■ *Дейеүҙе эҙләп табырға, уға ҡаршы һуғыш асырға бер кемдең дә батырсылығы етмәгән.* Әкиәттән.

**БАТЫРСЫЛЫҠ ИТЕҮ (батырсылыҡ ит-)** (Р.: осмеливаться; И.: venture; Т.: cesaret etmek) *ҡ.*

Ҡыйыуланыу; баҙнатсылыҡ итеү. □ Осмеливаться, отважиться, решаться *на что-л.* // Смелость, отвага, решимость. ■ *Хатта «яратам» тип тып-тура әйтергә батырсылыҡ итә!..* З. Биишева. *Минең кеүек бәләкәйерәк малайҙар ятыу уртаһына уҡ йөҙөргә батырсылыҡ итмәй, һыу муйынға етер тирәгәсә белер-белмәҫ көйө атынып, ауыҙға тулған һыуҙы бөркә-бөркә йөҙөп хитланабыҙ ҙа туҡтап ҡалабыҙ.* Н. Мусин.

**БАТЫРҺЫНЫУ (батырһын-)** (Р.: осмеливаться; И.: resolve; Т.: cüret etmek) *ҡ.*

Үҙеңде батырға һанау, батыр итеп тойоу. □ Осмеливаться, отваживаться, решаться. // Смелость, отвага, решимость. ■ *Батырһынған егетте яу килгәндә күрербеҙ.* Ҡобайырҙан.

**БАТЫРЫЛЫУ (батырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **батырыу 1—4.** *страд. от* **батырыу 1—4.**

**БАТЫРЫП** (Р.: от души, вдоволь; И.: whole-heartedly; Т.: bol bol) *р. диал.*

Ихлас, еренә еткереп, бар көсөнә. □ От души, вдоволь; во всю мощь, в упор. *Батырып ашау. Батырып эшләү. Батырып ҡарау. Батырып әйтеү.*

**БАТЫРЫУ (батыр-)** (Р.: погружать; И.: sink; Т.: daldırmak) *ҡ.*

**1.** Шыйыҡ, бөртөклө һәм башҡа нәмә эсенә индереү, тығыу, күмелдереү. □ Погружать, окунать. *Көрткә батырыу.* ■ *Шулай ҙа етәксе тыныс, малайҙарҙың көрәкте нисегерәк ергә батырыуына тиклем ҡарай, ашыҡмаҫҡа ҡуша.* З. Ураҡсин. *[Аттың] тупраҡҡа батырған морононан боҫланып ҡара ҡан һарҡый.* Д. Бүләков.

**2.** Һыу төбөнә ебәреп, һәләк итеү. □ Топить, потоплять. // Потопление. *Кәмәләрҙе йылғаға батырғандар.* ■ *Германдарҙы ҡасырҙыҡ. ҡалғандарын батырҙыҡ.* Бәйеттән.

**3.** Һыу эсенә төшөрөп һалыу (*шешендереү, ебетеү, серетеү өсөн*). □ Погружать, окунать в воду *что-л.* (*чтобы разбухло, размочилось и др.*). // Погружение. *Мискәне һыуға батырыу. Һалабаш батырыу.*

**4.** Сәнсеп, ҡаҙап индереү. □ Впивать, впиваться. *Теш-тырнаҡ батырыу.* ■ *Аңра! — тип екерҙе фашист әйәрсене. Бармаҡтарын бының яурынына батырып, Суминовты тотҡондарға табан борҙо.* Ә. Хәкимов. *Гөлшан уның муйынына оҙон тырнаҡтарын ярайһы ғына батырып өлгөргәйне.* Д. Бүләков.

**5.** Тотош, баштан-аяҡ буяу, мансыу. □ Погрузить. // Погружение. *Быспаҡҡа батырыу. Тиргә батырыу. Йәшкә батырыу. Кергә батырыу. Саңға батырыу.* ■ *Хәбибуллин айғырын аҡ күбеккә батыра, үҙе лә арманһыҙ булып ҡайтып йығыла.* Р. Камал. *Ни күрәм: ресторан алдында биш егет берберенһен ҡанға батырып һуғыша, ә теге резина таяҡ тотҡан ике егетегеҙ уларға йылмайып ҡарап торҙо-торҙо ла китеп барҙы.* Д. Бүләков.

**6.** *күсм.* Баштан-аяҡ бер хәлгә төшөрөү. □ Погрузить, погрузиться. // Погружение. *Ауыр уйҙарға батырыу.*

**7.** Ныҡ итеп төшөрөү (*баш кейемен*); баҫыу. □ Надвигать низко на лоб, нахлобучивать (*головной убор*). // Нахлобучивание. ■ *Аяғын кирә баҫып торған Сафуан Ҡорбанов старателдең бүркен маңлайына батыра кейҙереп елкәһенән тотош һелкте.* Я. Хамматов. *«Китергә уйлайҙармы?» — тигән уй Илгужаның эсен йылытты, ләкин күгәрсен тауышлы машина эсенән фуражка алып батырып кейҙе лә яҡын килде.* Д. Бүләков.

**8.** *күсм.* Ғәйеп табып, бәләгә ҡалдырыу. □ Топить. *Эштә батырырға тырышыу.*

**БАТЫРЫШЫУ (батырыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **батырыу 1–5, 8.** *взаимн. от* **батырыу 1–5, 8.** *Һалабаш батырышыу. Шаярып, ҡарға батырышыу.*

**БАТЫУ (бат-)** [дөйөм төрки *бат-*] (Р.: тонуть; И.: sink; Т.: batmak) *ҡ.*

**1.** Баҫҡан ауырлыҡты тоймай убылыу. □ Тонуть, утонуть, завязнуть, погружаться, увязнуть. // Потопление, погружение. *Ҡар бата. Ҡарға батыу. Ҡомға батыу.* ■ *Уҡытыусы ла, класташтар ҙа хафаға төштө: Тәүфиҡ ҡайҙа, әллә көрткә батып ятып ҡалдымы?* Р. Камал. ■ *Аҡбуҙ Уралды йәнә сойорғотоп ебәрҙе, ти. Был юлы Урал ергә тубыҡтан батты, ти.* «Урал батыр».

**2.** Соҡорайып төшөү (*күҙгә, яңаҡҡа ҡарата*). □ Западать, впадать, вваливаться. ■ *Ҡара Йомағолдоң ҡурҡынған күҙҙәре тағы ҡабаҡтары аҫтына инеп бата.* М. Кәрим. *Ғимран бабай кеткелдәп көлә, төпкә батҡан сағыр күҙҙәрен алмаш-тилмәш беҙгә йөрөтөп сыға.* Н. Мусин.

**3.** Һыу аҫтына китеү. □ Тонуть, утонуть. // Потопление, утопление. *Күлгә батыу.* ■ *[Пенелопа:] Утта янмаҫ, һыуҙа*

*батмаҫ аҫыл йәремде оҙаҡ йылдар өмөт өҙмәй көтәм, тоғро көтәм.* Г. Яҡупова. *Был сығанаҡтың исеме — Беркамыт. Имеш, элекке ваҡыттарҙа берәү ошо күлгә аты, арбаһы менән батып юғалған.* М. Хужин.

**4.** *күсм. Нимәгәлер* тотош бирелеү; сумыу. □ Погружаться, погрузиться; тонуть, утонуть. // Погружение. *Төрлө уйҙарға батыу. Ҡайғыға батыу. Бурысҡа батыу.* ■ *Минең ана шулай онотолоп, хыялға бата торған ғәҙәтем бар.* М. Кәрим. *Беҙгә килгән ҡыҙҙар таш төҫлө бата ла ҡуя ул. Һәр береһенә иш табыла Ишемъярҙа.* Р. Камал.

**5.** *күсм.* Эш, тормошта күтәрелә алмай баҫылыу. □ Тонуть. ■ *Рыя, нифаҡ, вәхшәт һаҙлығында бик күп йылдар батып ятасаҡ.* Ш. Бабич. *[Аллаһ:] Бәндәләр гонаһҡа батты, инде лә аңдарына килмәҫме, хаталарын аңламаҫмы, тигән өмөттәмен — ер йөҙөнә туфан һыуы ҡалҡытыуымдың сәбәп-маҡсаты ла ошо.* Ә. Әминев.

**6.** Офоҡ артына инеү (*күк есемдәренә ҡарата*); байыу. □ Заходить, закатываться (*о небесных светилах*). // Закат. *Ай батты. Сулпан батты.* ■ *Ҡояш батып, шул ваҡыт кис булды, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**7.** Сәнселеп, ҡаҙалып инеү. □ Впиться, впиваться. *Осло тимер уҫҡа батты. Тырнағы тәнгә батты.* ■ *Атҡан уҡтың ярты һынан күбеһе күкрәгенә был йыртҡыстың батты шунда.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**8.** *күсм. һөйл.* Юҡ булыу, ғәйеп булыу (*китеп*). □ Пропадать; запропаститься, сгинуть. *Эшенә китә лә бата.* ■ *[Колош — Әскәпкә:] Шул фермаңа барһаң, батаһың да ҡуяһың, әллә тоҙло һыу һипкәндәр инде.* Б. Бикбай.

**9.** Ярашлы, килешле булыу; ярау. □ Подходить, годиться; идти, соответствовать. // Соответствование. ■ *Мәгәр миркәһен бер үттеме, күпме эсһәң дә бата ул, — тигән ҡарт, самаһыҙ өсөнсөгә яңыртылғас.* Әкиәттән.

**10.** *күсм.* Тотош буялыу. □ Пачкаться *в чем-л. Бысраҡҡа батыу. Кергә батыу. Саңға батыу. Ҡоромға батыу.* ■ *Ауылға ул [Әхмәди], атын аҡ күбеккә батырып, ятырҙа ғына ҡайтып төштө.* Ж. Кейекбаев. *Шашып-шашып бейеүҙән иҙәндәр һығыла, ә үҙҙәре [егеттәр] манма тиргә бата торғайны.* С. Поварисов. *Ҡара тиргә батҡан, хәлдән тайған йәштәр бөтәһе бер юлы орсоҡтай өйөрөлә, ҡулдарын болғай, яурындарын уйнатып, сәстәрен туҙғытып, һындарын йыландай борғосландыра.* Д. Бүләков.

**11.** *миф.* Ай, Ҡояштың аҫҡы донъяға, диңгеҙгә төшөүе, батыуы. □ Закат луны, солнца в нижнее царство.

♦ **Бурысҡа батыу** бурыслы булыу. □ Залезть в долги. **Теш батыу** булдыра алыу, белеү. □ Смочь, уметь. ■ *Фатиманың да теше батмаған мәсьәләләр килеп сыҡҡылай.* Б. Бикбай. **Уйға батыу** тәрән уйҙарға бирелеү. □ Задуматься. ■ *Күсер аттарҙы үҙ яйына ебәрҙе, дилбегәне кузла башына ураны ла, оҙон ҡулдарын тубығына ҡуйып, уйға батты.* З. Ураҡсин.

**БАУ** [дөйөм төрки *баау* 'бау; төргәк'] (Р.: верёвка; И.: cord; Т.: bağ) *и.*

**1.** Ҡуша беркетеп, уратып бәйләү өсөн ишеп йәки бороп эшләнгән оҙон нәмә; бәй. □ Верёвка, бечёвка, канат, аркан; шнур, завязка. *Ишек бауы. Итек бауы.* ■ *Алтынбай ыңғырсаҡ-камыттарҙы төҙәткеләп йөрөй, ә ике күҙе .. аҡ сарафан кейгән, сәс толомдарын билендәге бауға ҡыҫтырған ҡыҙҙа.* З. Ураҡсин. *Ул арала Төлкөсура атынан һикереп төштө, теҙгенен саукаға бәйләне, сукмарын тап осондағы бауынан бәләгенә элгән килеш әкрен атлап һеләүһен эргәһенә килде.* Н. Мусин. *[Батыр] ишекте асты ла бауҙа эленеп торған трико менән курткаңы йолҡоп алды.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** Һан менән килгәндә: теҙеп бәйләп ҡуя торған нәмәләрҙең сама үлсәме. □ Вязка, связка, охапка, низка. *Бер бау утын. Ике бау балан. Өс бау һуған.*

**3.** Еп үлсәү берәмеге. □ Единица измерения пряжи. *Нисә бау еп алырға?*

**4.** *миф.* Башҡорт халҡының ышаныуҙары буйынса, юлды, яҙмышты, ғүмерҙе һ. б. символлаштырған әйбер (*кире мәғә-*

*нәлә лә була ала*). □ Мифологизированный предмет, символизирующий дорогу, путь, судьбу, непрерывность жизни, долголетие (*в отрицательном значении: путы. оковы, завязку, привязь, узы*). ■ *Йәш килен балаларға суклы бау тарата ине*. Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Бау һуҡмаған мал** иркендә йөрөгән мал. □ Привольно пасущийся скот.

**БАУ АУЫРЫУЫ** (Р.: суставной ревматизм; И.: acute rheumatism; Т.: oynak romatizması) *и. диал.*

Ыуа. □ Суставной ревматизм. *Бау ауырыуынан ыҙалана.*

**БАУҘАЛЫП ЯТЫУ (бауҙалып ят-)** (Р.: быть в бессознательном состоянии; И.: be unconscious; Т.: bayılmak) *ҡ. диал.*

Иҫһеҙ-хушһыҙ ятыу. □ Быть в бессознательном состоянии. *Ҡалҡмай ҙа, бауҙалып тик ята.*

**БАУҠАНЙЫҠ (бауҡанйығы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле башҡорттарының аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир-айлинцев.

**БАУЛАНДЫРЫУ I (бауландыр-)** (Р.: свешивать; И.: let hang; Т.: sarkıtmak) *ҡ.*

Бауын һалындырыу. □ Свешивать бечёвку, шнур. // Свешивание. ■ *Эҫкол бауландырып бәйләп ҡуйған ҡулдәк яғаларын тартып йыртты*. Т. Хәйбуллин.

**БАУЛАНДЫРЫУ II (бауландыр-)** (Р.: чувствовать тяжесть; И.: feel ache; Т.: kırıklık hissetmek) *ҡ. диал.*

Ауырыҡһындырыу. □ Чувствовать тяжесть, ломоту в теле. // Тяжесть, ломота. *Бауландырып тора бөгөн.*

**БАУЛАНЫУ (баулан-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **баулау 1.** *страд. от* **баулау 1.** *Бауланған һуған. Бауланған миндек.*

**2.** Епкә, бауға эләгеп аҫылыныу. □ Висеть, виснуть. ■ *Аяғынан өҙәңгегә аҫылынған казак берсә юл ситендәге ҡая ташҡа, берсә йөҙйәшәр ҡарағай ботаҡтарына бәреләһуғыла аттың ҡабырғаһында бауланып йөрөй торғас, бер бөгөлдәге тарбаҡ имәнгә эләгеп, аҙыры, өҙәңгенән ысҡынып, ергә ауып ҡалды*. З. Биишева.

**3.** Аҫылыныу. □ Повиснуть. ■ *Ҡулдары бушағас, Сабир ҡыҙға ҡосағын йәйҙе, ә уныһы егеттең муйынына бауланды*. Г. Яҡупова.

**4.** Бер-бер артлы тағылыу. □ Привязываться. ■ *Был сәйер һөйләшеү ҙә, ҡуйынында йылынып йоҡлап киткән бесәй балаһының ҡыбырлап ҡуйыуы ла, үҙенең бер нисә минут элек кенә белмәгән дә, күрмәгән дә кешегә бауыр баҫып бауланғандай артынан эйәргәне лә Дилбәргә киноләғы кеүек тойола.* Т. Ғарипова.

**5.** *диал.* Уҡмашыу, бер-береһенә аҫылыныу. □ Свисать верёвкой, цепляясь друг за друга. *Ҡорттар бауланып тора.*

**БАУЛАУ (баула-)** [боронғо төрки *ба-* ‘бәйләү’] (Р.: нанизывать; И.: string; Т.: bağlamak) *ҡ.*

**1.** Бауға теҙеү; бауға аҫыу. □ Собирать, нанизывать на нитку, верёвку. // Собирание, нанизывание. *Балан баулау. Һуған баулау. Балыҡтарҙы киптерергә тип баулап ҡуйҙым.*

**2.** Бауға тағыу; бәйләү. □ Завязать. // Завязывание. *Башҡа яулыҡ баулау. Билгә билбау баулау.* ■ *Ғәйсәр ҡапҡаға табан атланы. Табанына, әйтерһең, ҡурғаш баулағандар, атлағыһы ла килмәй.* Н. Мусин.

**БАУЛЫ** (Р.: с верёвкой; И.: tied; Т.: bağlı) *с.*

**1.** Бауы булған. □ С верёвкой, имеющий верёвку. ■ *[Морат] ҡышҡы каникулға ҡайтҡанда инде өҫтөнә ҡыҫҡа тун (яһалма тиренән булһа ла), аяғына ҡалын табанлы сит ил ботинкаһы, иңбашына оҙон баулы ят сумка аҫҡан егет булды.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Бауға тағылған, бау менән бәйләнгән; бәйле. □ Нанизанный; связанный, завязанный. ■ *Һиндә ебәк баулы тутыйғош бар, миндә ҡайыш баулы ҡарсыға бар.* Халыҡ йырынан. *Баш ябыуҙары иҫкергән ҡайһы бер өйҙәрҙең ҡабыҡтары һалынып төшөп, ел иҫкән ыңғайға шапылдап һыулыҡҡа бәре-*

*ләләр, өй ҡабырғаһына һайғау менән аҫып ҡуйылған баулы баландар, миндектәр бәүеләләр.* Ж. Кейекбаев. *[Миңлегөлдөң] өҫтөндә — ҡыҙыл сатин күлдәк, башында — өр-яңы шәльяулыҡ, уның аҫтындағы ҡашмауының мәрйен баулы тәңкәләре нәфис маңлайына һалынып төшкән.* Н. Мусин.

**3.** Бауҙан эшләнгән. □ Верёвочный. *Баулы баҫҡыс.*

**БАУЛЫ ЯУЛЫҠ (яулығы)** *и. диал. ҡар.* **ҡушъяулыҡ.**

**БАУҺЫҘ** (Р.: без верёвки; И.: unlinked; Т.: bağsız) *с.*

**1.** Бауы булмаған. □ Без верёвки. ● *Ирле бисә — сирле бисә, ирһеҙ бисә — бауһыҙ уймаҡ.* Әйтем.

**2.** Бауға тағылмаған. □ Несвязанный, незавязанный. *Өҫтәлдә бауһыҙ һарымһаҡтар ята.*

**3.** *күсм.* Кәүҙәне тота алмаҫлыҡ хәлһеҙ; быуынһыҙ. □ Слабый, бессильный. *Бауһыҙ булып ятыу.* ■ *Мин әле генә бауһыҙ йығылған Илһам хәсрәтенән һәм тәнолонома балта сабылған һайын тәрәнәйә барған ярам һыҙлауына түҙә алмайынса үкһейем.* Н. Мусин.

**БАУЫЛЛАУ (бауыла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **баулау.**

**БАУЫЛДАҠ** (Р.: плаксивый; И.: whining; Т.: ağlamah) *с.*

Бауылдап гел илаған; илаҡ. □ Плаксивый, слезливый. *Бауылдаҡ бала. Бауылдаҡ булыу.*

**БАУЫЛДАУ (бауылда-)** (Р.: реветь; И.: roar; Т.: böğürmek) *ҡ.*

**1.** Илағанда яман тауыш менән ҡысҡырыу. □ Реветь. // Рёв. *Бауылдап илау.*

**2.** *диал.* Яман тауыш сығарыу, аҡырыу. □ Кричать дурным голосом, орать. // Крик, ор. *Кәзәң бауылдай түгелме?*

**БАУЫЛЫУ (бауыл-)** *ҡ. диал. ҡар.* **мауығыу 1.** *Малдарға бауылып тик торам.*

**БАУЫР I** [боронғо төрки *бағыр* 'бауыр, ҡорһаҡ'] (Р.: печень; И.: liver; Т.: karaciğer) *и. анат.*

**1.** Кеше һәм хайуан организмында үт эшләп сығара торған эске ағза. □ Печень. *Бауыр юлы. Бауыр ауырыуы.* ■ *Миңә араҡы ғүмүмән ярамай. Бауыр насар.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Кешенең хис-тойғо тупланған урыны; йөрәк. □ Душа, сердце. *Бауырға инеү. Ҡаты бауыр.* ■ *Шул тиклем дә бөтмөр, асыҡ зиһенле балаһының артабан уҡыуҙан өмөтө киҫелеүе бауырын телә әсәнең.* Ә. Хәкимов.

**3.** *эйл. ф.* **бауырым.** Яратып әйтеү һүҙе; бәгерем. □ Ласкательное слово. *Һөйөклөм, бауырҡайым минең.*

**4.** Йәнлек, хайуандың ҡорһағы, сандыры. □ Живот, брюхо. *Мал бауырына тиклем көрт баҫҡан.* ■ *Яйыҡай ҙа һыуҙы аша сыҡтым аҡ бауырлы ҡара ат менән.* Халыҡ йырынан.

**5.** *Нәмәнең* бөгөлгән эске яғы. □ Внутренний изгиб предмета. ■ *Әҙернә лә яндың бауыры йоҡа, аҡ ебәктәр кәрәк керешкә.* Халыҡ йырынан.

**6.** *күсм.* Ер-һыуҙың буйы, эргәһе. □ Означает прилегающую *к чему-л.* местность. *Күл бауыры. Тау бауыры.*

**7.** *күсм.* Миҙгел һуҙымы, миҙгел дауамы. □ Период, сезон. *Йәй бауыры ҡыҫҡа.* ■ *Урмандар, тауҙар, йылғалар ҡыш бауырын үткәреп, йәнә беҙгә, бөтә ергә йәм һибергә, беҙҙе туйындырырға, ҡыуандырырға әҙерләнә.* Н. Мусин.

**8.** *күсм.* Нәҫел, тоҡом, зат. □ Потомство, род. ■ *Ике балаһы, бауырҙары, яныл үлгән ерҙән китергә мәжбүр итәһеңдер...* Ә. Хәкимов. *[Лидия Николаевна:] Йырҙа һыҡтаған ҡыҙ — Зөлхизә — минән мең тапҡыр бәхетлерәк. Ул ят бауыр түгел. Үҙ халҡының, үҙ еренең ҡыҙы.* Т. Ғарипова. *Атаҡайым мине һатып бирҙе, бауырҡайы башҡа булһын, тип.* Сеңләүҙән.

**9.** *миф.* Башҡорт халҡы ышаныуҙары буйынса, кешенең йәне урынлашҡан, туғанлыҡты белдергән, мөхәббәт хистәрен йөрөткән тән ағзаһы. □ В представлениях башкир: мифологизированная часть тела, в котором сосредоточена душа, орган кровного родства и любви.

♦ **Бауыр алышыу** сит, ят булып китеү. □ Становиться чужим, неродным. *досл.* Поменять печень. ■ *Ете атаға еткәс, ҡыҙ бауыры алышыр.* Башҡорт мифологияһынан. **Бауыр баҫыу** 1) һыйынып, йыуаныс табыу. □ Находить утешение *в чём-л. Балаға бауыр баҫыу.* ■ *Үҙе белгәндән алып, Юлия ағаһы Григорийға бауыр баҫҡан, гел уның менән бергә йәшәгән.* Һ. Дәүләтшина. 2) *диал.* эйәләшеү. □ Привыкать. **Бауыр бәйләү** бәйләп, тотоп тороу. □ Связывать, удерживать. ■ *Ысынлап та, Һибәтулланың ауылда бауыр бәйләгән бер кеме лә, бер нәмәһе лә юҡ.* Ш. Янбаев. **Бауыр ите** бик ҡәҙерле, ғәзиз кешегә ҡарата әйтелә. □ Дорогой; родной, близкий. ● *Бала — бауыр ите.* Әйтем. **Бауыр күтәреү** нығынып, донъя көтөрлөк хәлгә килеү; аяҡҡа баҫыу. □ Встать на ноги, окрепнуть (*о здоровье, о хозяйстве и т. п.*). *Бауыр күтәреп, арыу ғына йәшәй башлағанда һуғыш сығып китте.* **Бауыр ҡалҡыу** үҫеп, эшкә ярарлыҡ булыу. □ Подрастать, взрослеть. ■ *Бауыр ҡалҡа төшкәс, малайҙарын Тимерйән тимерсегә бирә.* Әкиәттән. **Бауыр ҡатыу** 1) ҡаты күңеллегә әйләнеү. □ Стать жестоким, ожесточиться. 2) *диал.* быуын ҡатыу. □ Стать взрослым, самостоятельным. *Бауыры ҡатмаған йәш балалар.* **Бауыр өҙөлөү** ныҡ яфаланыу йәки әсенеү. □ Страдать. ■ *Һалҡын елдәрҙән өҙөлә бауырҙар.* М. Илбаев. **Бауыр түшәп ятыу** һуҙылып, йөҙ түбән ятыу. □ Лежать ничком. **Бауыр һөйрәү** тормошта аяҡҡа баҫа алмай йонсоу. □ Утомляться, изнуряться, мучиться; испытывать недостаток, нужду. ■ *[Сурағол:] Тәненә ит үрмәй, йөрәгенә май ҡунмай, бауыр һөйрәп, ыҙа сиккән Ҡусәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* Т. Хәйбуллин. **Бауырға инеү** кешенең күңеленә, эс-серҙәренә үтеп инергә тырышыу. □ *соотв.* Лезть в душу. *Бауырға инеп бара.* **Бауырға таш булып ятыу** ауыр хәл, ҡайғы кисереү. □ *соотв.* Лечь камнем на сердце. **Бүре бауыр** рәхимһеҙ, ҡанһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Жестокий, злой, зловредный. ■ *[Фатима:] Фәғилә бахырҙы бүре бауыр Сакай ни ҡара көнгә еткерҙе.* Б. Бикбай. **Ҡара бауыр** ҡара эсле, яуыз кешегә ҡарата әйтелә. □ Злой, зловредный, жестокий. ■ *Хәмзә бутай донъяны. Кешене бер-береһенә һөсләтә, .. ҡара бауыр.* Яр. Вәлиев. **Таш бауыр** ҡаты күңелле, рәхимһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Жестокосердный, безжалостный, бессердечный. ■ *Атаҡайым минең ай таш бауыр, мин илаған саҡта иламай.* Сеңләүҙән. **Ят** (*йәки* **сит**) **бауыр** сит, ят кешегә ҡарата әйтелә. □ Неродной, чужой (*о человеке*). *Араға ят бауырҙар инде.* ■ *Төшөнә кереп һаташтырған бәйге ваҡытында Ирназар ауылда үҙенең ят бауыр булыуын тамам аңлағайны.* Ә. Хәкимов.

**БАУЫР II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тамьянцев.

**БАУЫР III** (Р.: часть ткацкого станка; И.: detail of a loom; Т.: dokuma tezgahının bir kısmı) *и. диал.*

Туҡыу станогының бер өлөшө. □ Часть ткацкого станка.

**БАУЫР АҒАСЫ** *и. диал. кар.* **борғоса 1.**

**БАУЫР АҪТЫ** (Р.: пах; И.: groin; Т.: kasık) *и. анат. диал.*

Кеше, хайуан һәм ҡоштарҙың ҡорһаҡ аҫты. □ Пах. *Ямғырҙан һуң тәрән кисеүҙең һыуы аттың бауыр аҫтынан булды.*

♦ **Бауыр аҫтынан ел үтеү** үҫә төшөү. □ Подрасти.

**БАУЫРҒАЛЫҠ** (**бауырғалығы**) *и. диал. кар.* **бауырлыҡ 1.** ■ *[Бүкәнбай:] Атыңды бына шунда бәйлә, — тип дөйәһенең бауырғалығына ымланы.* Н. Мусин.

**БАУЫР ЕЛБӘГӘЙЕ** (Р.: ветреница печёночная; И.: liverwort; Т.: kızılyaprak) *и. бот.*

Лютиктар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ тамыр һабаҡлы үҫемлектәрҙең бер төрө.

□ Ветреница печёночная (лат. *Hepatica*). *Бауыр елбәгәйенең тыуған ере — Төньяҡ Америка. Бауыр елбәгәйенең сәскәләре аҡ йәки зәңгәр төҫтә була.*

**БАУЫРҘАУ (бауырҙа-)** (Р.: пикелевать; И.: skin treatment; Т.: asitle temizlemek) *ҡ. диал.*

Тирене һоло иҙелмәһендә екетеү. □ Пикелевать шкуры в овсяном растворе. // Пикелевание. *Һыйыр тиреһен бауырҙау.*

**БАУЫРҘАШ** [боронғо төрки *бағыр* 'бауыр. ҡорһаҡ'] (Р.: кровный; И.: blood relation; Т.: kandaşlık) *с.*

Ҡан ҡәрҙәш. □ Кровный, родственный. *Бауырҙаш ағай. Бауырҙаш кеше.*

**БАУЫР ҠАЛҠЫУ (бауыр ҡалҡ-)** (Р.: вырасти; И.: grow up; Т.: büyümek) *ҡ. диал.*

Үҫеп етеү. □ Вырасти. *Улымдың бауыры ҡалҡһа, бирешмәм дә.* ■ *Белә хәҙер Күкбүре: танһыҡһырап тапҡан көсөктәренең бауыры ҡалҡһа, ул ана шул урманға эйәртеп китәсәк уларҙы.* Т. Ғарипова.

**БАУЫРЛАНЫУ (бауырлан-)** (Р.: свёртываться; И.: curdle; coagulate; Т.: kıvrılmak) *ҡ.*

Ҡуйы, ҡатҡыл хәлгә килеү (*ҡан, ҡатыҡ кеүек нәмәгә ҡарата*). □ Свёртываться; сгущаться. // Свёртывание, сгущение. *Ҡатығы яҡшы ойоған, бауырланып тора.*

**БАУЫРЛАУ (бауырла-)** (Р.: проходить; И.: pass along; Т.: geçmek) *ҡ.*

**1.** Ер-һыуҙы буйлау. □ Проходить, проезжать вдоль *чего-л. Тау бауырлау.* ■ *Күк ыласын оса күл бауырлап, тибер микән күгәл өйрәкте.* Халыҡ йырынан.

**2.** Ҡыҙырып йөрөү; гиҙеү. □ Исходить, изъездить, исколесить. *Ил бауырлау.* ■ *Егет кенә бахыр ер бауырлай, күкрәк көсө менән мал табып.* Халыҡ йырынан.

**3.** Эсенә ятыу; йөҙ түбән ятыу. □ Ложиться на живот; ложиться лицом вниз, ложиться ничком. ■ *Сарсап килеп, ярға бауырлап, һыу эсә шай минең улҡайым.* К. Кинйәбулатова.

**БАУЫРЛЫҠ (бауырлығы)** (Р.: подбрюшник; И.: bellyband; Т.: karın kuşağı) *и.*

**1.** Аттың бауыры аҫтынан үткәреп ике тәртәгә бәйләгән бау (*һаркыу тотоу өсөн*). □ Подбрюшник. ■ *[Бай] юрғаға бауырлыҡ ҡуймай егеп, тау төшкәндә алып ҡасты.* Т. Хәйбуллин. *Йөк атымын, бауырлығым ҡыҫып бәйләнгән. Тәртәләрҙән сығыу ауыр, һыртлыҡ сейәлгән.* Ф. Бүләков.

**2.** Һыуыҡта йәш малдың бауыры аҫтына бәйләй торған кейеҙ. □ Кошма, подвязываемая под брюхо мелкому скоту для тепла. ■ *Елле-ямғырлы көндәр башланғас, колондарға бауырлыҡ бәйләргә булдылар, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Ваҡытһыҙ бәрәсләү булмаһын өсөн тәкәләрҙең бауыр аҫтын бәйләп ебәрә торған кейеҙ. □ Кошма, подвязываемая под брюхо барану или козлу, чтобы не допустить несезонной случки. *Бауырлыҡ бәйләү.*

**БАУЫРМАЛ I** (Р.: подаренный родителями скот; И.: gift cattle for newlyweds; Т.: yeni evlilere hediye edilmiş hayvanlar) *и. этн.*

**1.** Яңы өйләнгән йәштәргә ата-әсәләре бүләк иткән мал. □ Скот, подаренный родителями молодожёнам. *Бауырмал итеп бер тана бүләк иттеләр.*

**2.** Изгеләштерелгән мал, байлыҡ, муллыҡ, бәхет символы. □ Скот, символ богатства, достатка, счастья.

**БАУЫРМАЛ II** (Р.: душевный; И.: responsive; Т.: ruhsal) *с.*

Кеше йәнле, рәхимле. □ Душевный, отзывчивый, чуткий, сердечный. *Бигерәк бауырмал кеше.* ● *Бауырмалға дуҫ күп.* Әйтем.

**БАУЫР МҮКТӘРЕ** (Р.: печёночники; И.: lichen species; Т.: ciğer otları) *и. бот.*

Мүктәрҙең бер төрө. □ Печёночники, печёночные мхи (лат. *Marchantiophyta, Hepatophyta*). *Бауыр мүктәре — бөтә Ер шарында таралған үҫемлектәр.*

**БАУЫР ҮЛӘНЕ** (Р.: хвощ полевой; И.: scoring rush; Т.: atkuyruğu) *и. диал. бот.*

Шыршы үләне. □ Хвощ полевой (лат. *Equisétum arvénse*). *Бауыр үләне — дарыу үләне булып һанала.*

**БАУЫРҺАҠ I (бауырһағы)** [боронғо төрки *бағарсуқ*] (Р.: баурсак; И.: boortsog; Т.: baursak) *и.*

**1.** Йоморткаға баҫҡан ҡамырҙан ваҡ-ваҡ ҡына йомро йәки ромб формаһында ҡырҡҡылап, майға ҡайнатып бешергән ашамлыҡ. □ Баурсак (*сваренные в масле кусочки теста*). ■ *[Гәзимә:] Бауырһаҡты арыулап, һары майға ғына бешерегеҙ. Түң май бауырһаҡтың тәмен ала ул.* Һ. Дәүләтшина. *Хәҙер [Юлдаш] күҙҙе ҡыҙҙырып ятҡан бауырһаҡтарҙың бер генә бөртөгөн дә алып ҡаба алмай ине.* З. Биишева.

**2.** Йола, байрам ашы; түллек, муллыҡ символы. □ Обрядовое, праздничное угощение; символ достатка, плодородия.

**БАУЫРҺАҠ II** *с. диал. ҡар.* **бауырмал II.**

**БАУЫРҺАҠ БАШЫ** (Р.: верхушка чак-чака; И.: chak-chak top; Т.: çak çak) *и. диал.*

Сәксәк башы. □ Верхушка чак-чака. ■ *Бауырһаҡ башын, иң башындағыһын ашаған кеше бәхетле була.* Экспедиция материалдарынан.

**БАХ-БАХ-БАХ!** (Р.: слово подзыва лошади; И.: interjection for calling horses; Т.: atlara seslenme ünlemi) *саҡ. диал.*

Атты саҡырыу һүҙе. □ Слово подзыва лошади.

**БАХИЛ, БАХИЛА** [рус. *бахилы* < төрки] (Р.: бахилы; И.: shoe covers; Т.: galoş) *и. диал.*

**1.** Гигиеник маҡсатта аяҡ кейеме өҫтөнән кейә торған чехолдар (*полиэтилендан, йомшаҡ туҡыманан*). □ Бахилы. *Дауаханаға бахилаһыҙ индермәйҙәр.*

**2.** *диал.* Һунар итеге. □ Охотничьи сапоги. ■ *Абыҙыйымдың бахилы була торғайны аусыларға йөрөргә.* Экспедиция материалдарынан.

**3.** *диал.* Тәрән итеп үрелгән бауһыҙ сабата, ҡата. □ Глубокие лапти-галоши без оборы. *Бахилы тишелгән.*

**4.** *ҡар.* **бышым 1.** *Тула бахил.*

**5.** *диал.* Оҙон ҡуныслы аяҡ кейеме. □ Обувь с высоким голенищем.

**БАХМИС** (Р.: рысак; И.: trotter; Т.: tırısa alıştırılmış at) *и. диал.*

Арғымаҡ. □ Рысак. *Бахмисты эйәрләү.*

**БАХЫР I** [ғәр. فقیر ‘фәҡир’] (Р.: бедный; И.: poor; Т.: zavallı) *с.*

Ҡыҙғаныс, аяныс хәлдәге; меҫкен. □ Бедный, несчастный, жалкий. ■ *Ҡалай уҫал икәнмен дә баһа мин,— тип аптырап та, үкенеп тә уйланды Емеш.— Өйгә ҡайтҡансы түҙып бөтә бит инде, бахыр...* З. Биишева.

**БАХЫР II** (Р.: кол; И.: sort of a post for stopping rafts; Т.: kazık) *и. диал.*

Һалды туҡтатыр өсөн йылға уртаһына ҡағылған ағас. □ Кол, вбиваемый в середину реки для остановки плота. *Йылғаның ана шул тәңгәленә бахыр ҡағылғайны.*

**БАХЫРҠАЙ** (Р.: бедняжка; И.: poor thing; Т.: zavallı) *и.*

Бахыр һүҙенең иркәләү-кесерәйтеү формаһы. □ Бедняжка, бедненький. ■ *[Гәлимә апай:] Сәмиғуллин ағай (үҙенән ололар ҙа уға шулай өндәшә), зинһар, төрмәлә серемәһен инде бахырҡайымдың башҡайы!..* Г. Яҡупова. *[Рауза:] И-и, бахырҡайым, етемдең үлгәс тә кәҙере юҡ, баһымсаҡҡа баҡа ла айғыр тигәндәй, башҡа берәүҙең кәберен түгел, һинекен борҡота һыйыры ла...* Т. Ғарипова. *Илгужаны бау менән сырмап бәйләгәндәр. Ҡыймылдар ғына ла әмәле юҡ икән бахырҡайҙың.* Д. Бүләков.

**БАХЫРЛЫҠ (бахырлығы)** (Р.: прибеднённость; И.: shabbiness; Т.: sefalet) *и.*

Меҫкенлек. □ Жалкое состояние, прибеднённость, убогость. ■ *Ана шулай бәндә бәндәне ҡурҡытып тота инде ул, шулай яуызлыҡ ҡыла, енәйәт эшләй, беҙҙең бахырлыҡтан, ҡурҡаҡлыҡтан файҙаланалар! — Әнүәр тотош лекция уҡып ташланы.* Р. Камал.

**БАХЫРНИСА** *и. диал. ҡар.* **тәлмәрйен.**

**БАҺА I** [фарс. بها] (Р.: цена; И.: cost; Т.: fiyat) *и.*

**1.** Аҡсалата хаҡ. □ Цена, стоимость; расценка. *Әйбергә баһа биреү. Баһа ҡуйыу.* ■ *Урал тауҙарының аҫыл ташы, баһалары — оло мал башы.* Халыҡ йырынан.

**2.** *Ниҙеңдер* сифатын, әһәмиәтен билдәләгән фекер. □ Оценка, отзыв. *Китапҡа баһа биреү.* ■ *Был тәҡдим Шәмсигә көтөлмәгәндә башына кирбес менән һуғыу кеүек тәьҫир итте. Шуға күрә лә ул яһалған тәҡдимгә яуап та, баһа ла бирә алманы.* Ғ. Хәйри. *Ассоциатив образдар, тойғолар аша әхлаҡи һығымталарҙың, баһа-критерийҙарҙың бөгөндән үткәнгә, үткәндән бөгөнгә үрелә барыуы, заман күренештәрен баһалауҙа заманалар теҙмәһе тәжрибәһенә мөрәжәғәт итеү Әхиәр Хәкимов әҫәрҙәренә хас.* Р. Байымов.

**3.** *Кемдең* йәки *ниҙеңдер* тотҡан әһәмиәте, урыны; ҡәҙер. □ Цена, ценность, значимость. *Үҙеңдең баһаңды, ҡәҙереңде белеү.* ■ *Шаяра-көлә һөйләнеп, май бөрөштөргән күҙҙәрен уйнатып, Ҡотлоғужа бай тәүге аяҡты үҙе йөрөтөп сыҡты. Был егеттәргә баһаны белә ине ул.* Н. Мусин. *Ҡаҙнабаевты бында һәр кем белә: клиниканың персоналы, ауырыуҙар, хатта уларҙың туғантыумасаһы ла. Шуға үҙ баһаһын белеп кенә, сөм-ҡара сәстәрен һирәк-һаяҡ ҡына һыпырғылап атланы.* Д. Бүләков. ● *Уҡ баһаһы — атылғандан һуң, һүҙ баһаһы — әйтелгәндән һуң.* Мәҡәл.

**БАҺА II** [боронғо төрки *баса* 'һәм, тағы, һуң']: **да баһа (дә баһа), ҙа баһа (ҙә баһа), ла баһа (лә баһа), та баһа (тә баһа)** (Р.: же, ведь; И.: indeed; Т.: işte) *киҫ.*

Әйтелгән фекерҙе нығыта. □ *част. усил.* (употребляется с частицами *да, ла*) же, ведь. *Ҡайтты ла баһа. Килде лә баһа.* ■ *[Тимаш баяр] яҡшылабыраҡ ҡараһа, ҡылған түгел, ҡара айғырҙың ялы икән дә баһа.* З. Ураҡсин. *[Малыбай] Бәй, Фәғилә ҡоҙағый, һин икәнһең дә баһа! Һаумы!* М. Буранғолов.

**БАҺА БИЛДӘЛӘҮСЕ** *и. ҡар.* **баһалаусы.**

**БАҺАДИР I** [фарс. بهادر 'батыр'] (Р.: богатырь; И.: powerful man; Т.: bahadır) *и.*

Көслө, ғәйрәтле, йөрәкле кеше; батыр. □ Богатырь. ■ *Шулай ҙа «юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир» иптәштәренә ҡушылып көлмәне.* М. Кәрим. *[Петрик] койоп ҡуйған баһадир! Тәнендәге һәр һыҙаты, һәр мускулы үҙенә килешле, гүзәл!* Р. Камал. *Сатыр тәҙрәһенән тышҡа, тулҡын-тулҡын һөҙәк кенә йәшел убалар сыбарлаған киң далаға, һирпелеп үтте лә Еҙүкәй баһадирҙың ҡарашы, офоҡ ситендәге ниндәйҙер нөктәгә ҡаҡлығып, салт аяҙ күккә үрләне.* Ә. Хәкимов.

**БАҺАДИР II** (Р.: богатырский; И.: brave; Т.: kahramanca) *с.*

Ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ, йөрәкле. □ Богатырский, геройский. *Баһадир ҡанлы. Баһадир йөрәкле.* ■ *Әхтәм, уларҙың өндәшмәүенә ҡыуанып, һүҙҙе бүтән яҡҡа борорға тип ауыҙ асҡайны инде, аранан береһе — баһадир һынлы сибәр егет — телгә килеп, руссаны вата-һындыра һөйләй башланы.* Ә. Хәкимов. *Өр-яңы хәбәр ишеткәс, халыҡ ҡапыл тынысланды, атының билен һындырырҙай булып әйәрҙә ултырған баһадир кәүҙәле кешегә төбәлделәр ҙә, ауыҙ асып өнһөҙ ҡалдылар.* Н. Мусин.

**БАҺАЛАМА** (Р.: отзыв; И.: comment; Т.: mütalaa) *и. ҡар.*

*Ниҙеңдер* әһәмиәтен, сифатын билдәләгән фекер. □ Отзыв. *Монографияға баһалама яҙыу. Диссертацияға баһалама биреү.*

**БАҺАЛАНЫУ (баһалан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **баһалау.** *страд. от.* **баһалау.**

**БАҺАЛАУ (баһала-)** (Р.: ценить; И.: value; Т.: değer biçmek) *ҡ.*

**1.** *Кемделер* йәки *нимәнелер* сифаты, әһәмиәте яғынан билдәләү. □ Ценить, оценивать. // Цена, оценка. *Тауарҙы баһалау.* ■ *Әллә иҫәр инде. Ҡыҙҙы Батыр шулай баһаланы.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** *Кемделер* ҡәҙерләү йәки хөрмәт итеү, *кемдең* йәки *нимәнеңдер* ҡәҙерен белеү. □ Дорожить *кем-чем,* ценить *кого-что. Кешенең хеҙмәтен баһалау.* ■ *Ә. Хәкимов әҫәрҙәрендәге ошондайыраҡ ижади эҙләнеүҙәрҙе юғары баһаламай булмай.* Р. Байымов. *Яҡшымын тип, күкрәк киреп сыҡма, халыҡ үҙе күрер, баһалар.* З. Биишева.

**БАҺАЛАУ ҠИММӘТЕ** (Р.: оценочная стоимость; И.: assessed value; Т.: vergi değeri) *и.*

Һатыуға ҡуйылған нәмәнең иң түбәнге хаҡы. □ Оценочная стоимость. *Машинаның*

*баһалау ҡимməтe. Кейемдең баһалау ҡимməтe.*

**БАҺАЛАУСЫ I** (Р.: оценщик; И.: valuer; Т.: muhammin) *и.*

**1.** Теге йәки был әйбергә хаҡ ҡуйыусы. □ Оценщик. *Профессиональ баһалаусы. Баһалаусы саҡырыу.*

**2.** *Кемдеңдер* йәки *нимәнеңдер* сифатын, әһәмиәтен билдәләүсе. □ Ценитель. *Китап баһалаусы. Сәнғәт әҫәрҙәрен баһалаусы.*

**БАҺАЛАУСЫ II** (Р.: определительный; И.: indicating; Т.: gösteren) *с.*

Билдәләүсе. □ Определительный. ■ *Беҙҙең мәктәптәрҙең эшен баһалаусы күрһәткестәр йылдан йылға күтәрелде.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**БАҺАЛЫ** (Р.: ценный; И.: valuable; Т.: kıymetli) *с.*

**1.** Хаҡы ҡуйылған, ҡиммәтле. □ Ценный, дорогой. *Баһалы тауар. Баһалы әйбер.*

**2.** Әһәмиәтле, ҡәҙерле. □ Ценный, значимый. *Баһалы эш. Баһалы хеҙмәт. Баһалы мәҡәлә.* ■ *Үҙ халҡыңдың әҙәбиәтен, тарихын яҡшылап белмәй тороп, тулы баһалы кеше булып буламы ни?.. — ти.* З. Биишева.

**БАҺАУ** *и. диал. ҡар.* **бағау.**

**БАҺАУЕТДИН ХУЖА** *и. диал. миф. ҡар.* **юл эйәһе.** *Юлға сыҡҡанда Баһауетдин хужаға «риза бул» тип хәйер бирергә кәрәк.*

**БАҺРАУ** (Р.: воспалившееся место; И.: veterinary condition; Т.: hayvanların ayak hastalığı) *и. диал.*

Малдарҙың, ҡоштарҙың аяғында була торған ауырыу. □ Воспалившееся место на ногах животных, птиц. *Быҙауыма баһрау сыҡҡан.*

**БАҺРАУ ҺӨЙӘГЕ** (Р.: ключица; И.: collarbone; Т.: köprücük kemiği) *и. анат. диал.*

Умрау, умрау һөйәге. □ Ключица. *Баҫҡыстан осоп төшөп, баһрау һөйәге һынған.*

**БАҺЫМ I** *р. диал. ҡар.* **тиҙ 1.** *Әйҙә, баһым булайыҡ.*

**БАҺЫМ II** (Р.: гумно; И.: threshing-floor; Т.: harman (yeri) *и. диал.*

Ырҙын. □ Гумно. *Киҫкә саҡлы баһымда эшләнек.*

**БАҺЫМДАУ (баһымда-)** (Р.: приближаться; И.: approach (about one's age); Т.: yaklaşmak) *ҡ. диал.*

Яҡынлау *(йәш буйынса).* □ Приближаться *(по возрасту). Йәше утыҙға баһымдай инде, һаман кейәүгә бармай.*

**БАҺЫРМА БУҘА** (Р.: буза; И.: buza; Т.: boza) *и. диал.*

Ныҡ әсегән буҙа. □ Перебродившая (кислая) буза *(традиционный напиток башкир, изготовляемый из овса).*

**БАҺЫРЫҠ (баһырығы)** (Р.: слега; И.: kind of a press log; Т.: baskı türü) *и. диал.*

Ҡыйыҡ тырансаларын баҫырып яткан ағас. □ Слега для придавливания дранок на крыше. *Ағас баһырыҡ. Ҡыйыҡ баһырығы серегән.*

**БАҺЫУ** (Р.: огород; И.: vegetable garden; Т.: bahçe) *и. диал.*

Йәшелсә баҡсаһы. □ Огород. *Ҡыҙҙар баһыуға сыҡты.*

**БАШ I** [боронғо төрки *баш*] (Р.: голова; И.: head; Т.: baş) *и.*

**1.** Кеше йәки башҡа йән эйәләренең баш мейеһе урынлашҡан өлөшө. □ Голова. ■ *Хисбулла мәҙрәсәнән тап-таҡыр итеп ҡырылған баш, килешһеҙ оҙон елән, килбәтһеҙ суфый ҡыланышынан башҡа бер нәмә лә алып сыҡманы.* З. Биишева. *Мәлҡә башын эйеп атлаған ыңғайға, ниҙәндер һиҫкәнеп, артҡа ҡараны ла шып туҡтаны.* Ә. Хәкимов.

**2.** *күсм.* Айырым йәки күмәк шәхес. □ Отдельная личность или коллектив. *Аҡыллы баш.* ■ *Ҡарсығалар кеүек ирҙәр барҙа бәлә килмәҫ илдең башына.* Халыҡ йырынан. *Ялтас баш, эште шуның менән бөткәнгә һанап, алдында ятҡан ҡағыҙға эйелгәйне, Аҙнаев шәпшәп атлап килеп, уның ҡаршыһына баҫты.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Аҡыл, зиһен. □ Ум, разум, сообразительность, смекалка. *Башы бар. Башы эшләй.*

**4.** Аяҡтың, аяҡ кейеменең осо. □ Носок. *Ойоҡ башы. Итек башы. Быйма башы.* ■ *Ғәлимә әбей ойоҡҡа баш һабып бирҙе.* М. Ғафури.

**5.** Оҙон йәки һабаҡлы нәмәләрҙең тупалсыҡланып торған осо. □ Кончик, головка. *Бармаҡ башы. Көнбағыш башы. Сөй башы. Шырпы башы. Һуған башы.*

**6.** *Нигеҙҙер* өҫкө осо, өҫкө яғы. □ Верх, верхушка; вершина, макушка. ■ *Яр башына ятып ҡыҙынабыҙ, һыңар аяҡта һикерәңләп йә таш саҡылдатып, ҡолаҡтарға тулған һыуҙы «түгәбеҙ».* Н. Мусин. *Күкрәктау башына менеп ҡараһаң, күк сите әллә ҡайҙа алыҫҡа күсеп китә.* М. Кәрим. *[Илтуған:] Бер башмағым юғалды. Шуны күҙләргә тип, анау тирәк башына менгәйнем, һине күрҙем.* Я. Хамматов.

**7.** *Нигеҙҙер* өҫтәге айырым өлөшө. □ Отдельняя верхняя часть *чего-л. Ишек башы. Ҡапҡа башы. Өй башы.* ■ *Һунарсыларҙың олорағы, ҡара мыйыҡлы, бөркөт танаулыһы, йәп-йәшел күҙҙәре мыҙлап янған күк бүрене һырты йылҡылдап торған ҡара айғырҙың эйәр башына арҡыры һалып алған, башҡалары билдәренә икешәр-өсәр төлкө, тағы ла ниндәйҙер ваҡ йәнлек тиреләре аҫҡандар.* З. Ураҡсин. *Таһир, тәҙрә башына селтәр элергә ҡаҙаҡ ҡағып бир әле, — тине Мөнәүәрә.* Н. Мусин.

**8.** Ике осо булған нәмәнең бер яғы. □ Конец, кончик, один из двух концов *чего-л. Таяҡ башы. Тәртә башы. Таҫтамал башы.* ■ *Салауаткай тартҡан ҡурайҙың ике башҡынаһы ҡурғашлы.* Халыҡ йырынан. *[Карт] эргәбеҙгә килеп еткәс, алға кәксәйгән һаҡалын таяғы башына терәп, аҙ ғына һүҙһеҙ тора.* Н. Мусин. *[Телефондың икенсе башында ниндәйҙер тулҡынланған ир тауышы:] Һаумыһығыҙ, Фәйрүзә Хәсәновна! — тип ҡысҡырҙы.* Д. Бүләков.

**9.** *Нигеҙҙер* осона кейҙерә торған айырым нәмә. □ Наконечник. *Ҡәләм башы. Ручка башы.* ■ *Йөн иләп ултырғанда беребенең орсоҡ башы төшөп китте, ти.* Әкиәттән.

**10.** Оҙонсараҡ майҙандың осо. □ Край, конец. *Ер башы. Күпер башы. Өҫтәл башы.* ■ *Ерҙең бер башынан икенсе башына сыҡҡансы, бураҙна әллә нисәгә кәкрәйә.* Ғ. Хәйри.

**11.** Хәрәкәттә булған төркөмдөң алды. □ Голова, передняя часть *чего-л. Ылау башы.* ■ *[Мулла:] Төшкө намаҙҙан һуң юлға сығырбыҙ. Каруан башына һине үҙем юлыҡтырырмын, — тип һабрауға ымланы.* Я. Хамматов.

**12.** Йылға, юл кеүектең башланған ере. □ Начало, исток, верховье. *Шишмә башы. Ағиҙел башы. Юл башы.* ■ *Яйыҡ башы — Бөйөртау, Иҙел башы — Ирәмәлтау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**13.** Берәй нәмәнең, эш-хәрәкәт, хәл, ваҡиға йәки миҙгелдең башланған мәле. □ Начало, начальный этап. *Ай башы. Йәй башы. Эш башы. Әҫәр башы. Йыр башы.* ■ *Яҙ башы менән үҙйөрөшлө моторлы бесән сапҡыс алып ҡайтырға уйлағайнылар, кәрәкмәҫ, шул аҡсағыҙҙы үҙегеҙҙең кәрәк-яраҡҡа тотоноғоҙ, тип кәңәш биргәйне [Баймөрат ҡарт].* Ф. Янышев.

**14.** Әҫәр, яҙманың алға ҡуйылған исеме. □ Заголовок, заглавие. *Мәҡәлә башы. Хикәйә башы.*

**15.** Әсетке итеп ҡалдырылған әсе ҡамыр киҫәге; икмәк башы. □ Закваска для хлеба. *Ҡамыр башы. Башы иҫке булды ахыры, икмәгем уңманы.*

**16.** Кешеләрҙе иҫәпләү берәмеге. □ Голова, нос (*в знач. человек, каждый, всякий*). *Кеше башынан. Һалдат башынан. Уҡыусы башынан.*

**17.** Йән эйәһенең йәки айырым нәмәләрҙең иҫәп берәмеге. □ Голова, головка; штука. *Ике баш мал. Өс баш һарыҡ. Бер баш ҡорот. Бер баш һуған.* ■ *Боғара .. йөҙ илле — ике йөҙ баш һайҙаҡ йылҡы оҙатмаммы, шуның бәрәбәренә ҡорал, кейем-һалым, ҡышлыҡ он, ярма, тоҙ ҡайтартмаммы, тип ниәт ҡороп ҡуйғайны.* Я. Хамматов. *Назаровтың ярҙамы менән леспромхозға бер трактор, биш баш ат һатып алырлыҡ аҡса бирҙеләр биреүен, тик барыбер бүрәнәләрҙе ташып өлгөрөп булмай.* Н. Мусин.

**18.** Етәксе урын, етәкселек. □ Верховодство, руководство, предводительство, главенство. *Ил башында тороу. Экспедиция башында булыу. Эш башына ҡуйылған.*

■ *[Хан:] Эйе, мәмләкәт башында тороу еңел түгел, йырау, — тип әңгәмәне һүҙҙы. — Һинең башҡорттарың гел тиҫкәре ҡарай.* Я. Хамматов.

**19.** Етәкселек итеүсе; башлыҡ. □ Глава, начальник, руководитель; главарь, вожак, предводитель. *Хөкүмәт башы. Ғәскәр башы. Баш булыу.* ■ *[Солтанов:] Шул ОРС магазинын ябабыҙ, Хызырҙы казёнкалағы бөтә аҙыҡ-түлеккә, бүтән тауарҙарға баш итеп ебәрәбеҙ, ә уның ҡатыны Камиләне аш бешереүсе итеп тәғәйенләйбеҙ.* Н. Мусин.

**20.** *миф.* Өҫкө донъя, ғүмер башы, аҡыл, хакимлыҡ символы. □ Символ верхнего мира, начала жизни, ума, власти.

♦ **Атаң башы!** *ҡар.* **ата I. Ауыртмаҫ** (*йәки* **ауыртмаған) башҡа тимер таяҡ** *ҡар.* **ауыртыу. Баш алмай** (*йәки* **күтәрмәй, ҡалҡытмай) эшләү** тырышып туҡтамай эшләү. □ Не поднимая головы, не покладая рук. **Баш аша атлау** кем менәндер иҫәпләшмәй эш итеү. □ Действовать, минуя *кого-л. досл.* Перешагивать через голову. ■ *Улай үҙ бригадирығыҙҙың башынан аша атлап йөрөмәгеҙ, тәүҙә уның менән һөйләшегеҙ.* Б. Бикбай. **Баш баҫып <эшләү>** алһыҙ-ялһыҙ эшләү. □ Не покладая рук. **Баш бирмәү** бирешмәү, буйһонмау. □ Не поддаваться, не подчиняться. ■ *Тайының, өркөп, ҡарышып, баш бирмәй маташыуы уға [Төлкөсураға] бүрене һуғырға уңайлыраҡ яҡынлашыуға ҡамасаулай.* Н. Мусин. **Баш биреү** буйһоноу, яйға килеү. □ Подчиниться, сдаться. *Баш бирерлек бала түгел. Ат баш бирмәй ҡасты.* **Баш бөттө** ниндәйҙер ауыр хәлдә ҡалыу. □ Пиши пропало. *досл.* Пропала голова. ■ *И-их, бөттө минең баш, бөттө, туғанҡай.* Д. Юлтый. **Баш булыу** 1) етәксе булыу, буйһондороу. □ Подчинять, управлять, стать главой; 2) тыйылыу. □ Сдерживаться, удерживаться. *Нәфсеңә баш бул.* ■ *Барлыҡ эштәрҙән элек баш бул, туған, үҙ иркеңә...* М. Ғафури. ● *Ҡойроғоң баш булһа, башың таш була.* Әйтем. **Баш ватыу** ҡыйын бер мәсьәләне ныҡ уйлау. □ Ломать голову. ■ *Беҙҙең иптәштәр хәҙергә һуғыш тураһында баш ватмай. Ашау, эсеү, шуны әҙерләү тураһында уйлай.* Д. Юлтый. **Баш ебәреү** башаҡҡа ултырыу (*игенгә ҡарата*). □ Колоситься. **Баш етеү** уйлап табыу (еткереү, сығарыу). □ Додуматься, догадаться. ■ *Азат, ҡапҡаға барып терәлгәс тә, йүгереп кереп китмәй, артына әйләнеп ҡарарға башы етте.* Ә. Бикчәнтәев. **Баш китеү** 1) һөргөнгә китеү. □ Идти на ссылку, быть сосланным; 2) ситкә китеп олағыу, юғалыу. □ Пропасть, попасть в беду. ■ *Башы китте, ҡайтмаҫ, ти буғай.* Халыҡ йырынан. **Баш күккә тейеү** бик ныҡ шатланыу, һөйөнөү. □ Быть на седьмом небе. **Баш күтәреү** 1) *кемгәлер* ҡаршы ҡуҙғалыу, ҡаршы сығыу. □ Восставать, бунтовать; 2) арыуланыу, хәлләнеү. □ Встать на ноги; улучшать своё положение. ■ *Был ғауғанан бер аҙ баш күтәрелгәс, түбый ҡашмауҙы ҡыҙ башына элгәс, ваҡыт еткәс уға йортҡа күсергә, шул ҡыҙҙар йыйыла ғәмен эсергә.* М. Өмөтбаев. **Баш ҡайнатыу** *ниндәйҙер* мәсьәләне хәл итә алмай ныҡ уйлау. □ Ломать голову *над чем-л. Эш тураһында баш ҡайнатыу.* **Баш ҡалҡытмай <эшләү>** алһыҙ-ялһыҙ эшләү. □ Не покладая рук. **Баш ҡалҡытыу** 1) шытыу. □ Всходить. ■ *Һәр яҙҙы, үлән баш ҡалҡыта башлау менән, «Бүләктау» колхозының һауын һыйырҙары .. йәйләүгә сығарыла.* Д. Исламов. *Яр буйында ҡырпаҡ ҡар аҫтынан баш ҡалҡытып ҡараған сал сәсле тилбеүлән, алабута баштарында боҙ тамсылары утлы ынйы булып емелдәшә.* З. Биишева; 2) арыуланыу. □ Подняться. ■ *Ашарҙарына юҡ, ауырыуҙан баш ҡалҡыта алмайҙар.* Һ. Дәүләтшина; 3) көс йыйып, күтәрелеү. □ Подниматься. ■ *Ҡыҙыл Армия .. яуыз дошманды баш ҡалҡыта алмаҫлыҡ итеп тар-мар итте.* Б. Хәсән; 4) *ниндәйҙер* көскә ҡаршы күтәрелеү. □ Восставать. ■ *Илбаҫарҙарға ҡаршы бөтә ил баш ҡалҡытты.* **Баш ҡатыу** күп уйлап ауара булыу, аптырау. □ Отупеть, одуреть (*от множества забот, мыслей, впечатлений*). ■ *[Рыҫҡол:] Кемгә бараһың да кемгә баш ора беләһең? Баш ҡатты инде.* Б. Бикбай. **Баш**

**ҡушыу** 1) берҙәмлеккә килеү, берләшеү. □ Объединяться, присоединяться. ■ *[Кормой:] Ыласын үҙ ыласынын тапмайынса, ҡауҙы менән баш ҡушамы ни?* Б. Бикбай; 2) ылығыу, эйәләшеү. □ Привыкать, приручиться; примыкать. ■ *[Нигмәт:] Анау өскүҙ Сафаның һыйыры ҡасып, йөҙәтеп бөттө. Яңы алынған һыйыр, бер ҙә баш ҡушмай.* Н. Ҡәрип. **Баш менән сумыу** ниндәйҙер эшкә тотошлай бирелеү, бирелеп китеп эшләү. □ С головой уйти (*окунуться*). *Эшкә баш менән сумыу.* **Баш менән яуап биреү** *кемдер* йәки *нимәлер* өсөн яуап биреү, яуапҡа тарттырылыу. □ Отвечать головой. *Десятник үҙенең ҡасағы өсөн башы менән яуап бирә.* **Баш ороу** 1) түбәнселек менән мөрәжәғәт итеү. □ Обращаться с просьбой о помощи. *Түрәгә баш ороу;* 2) *диал.* ошаҡлау. □ Доносить. **Баш өҫтө** *иҫк.* йомош ҡушҡан түрәгә ҡуштанлыҡ күрһәтеп әйтелә. □ К вашим услугам. **Баш сыҡмау** *ниндәйҙер* хәлдән ҡотола алмау. □ Никак не вырваться (*из какого-л. положения*). *Бурыстан баш сыҡмай.* **Баш ташлап** ярһып китеп. □ Разгорячась. **Баш ташлау** башты һелтәү, баш сөйөү (*атҡа ҡарата*). □ Откидывать. ■ *Ат дилбегә ҡаҡҡанды ла көтмәй, баш ташлап юрта.* С. Агиш. **Баш томаланыу** асыҡ, аныҡ эш итеү һәләтен юғалтыу. □ Ум за разум заходит (зашёл). **Баш түбән йөрөү** шаярыу, ҡотороу. □ Ходить на голове. *Баш түбән ҡолау.* **Баш тығыу** 1) берәй эш-хәлгә ҡыҫылыу, ҡатнашыу. □ Участвовать, принимать участие; вмешиваться, соваться. *Мәшәҡәтле эшкә баш тығыу;* 2) барып, урын, ярҙам табыу. □ Найти приют, помощь. ■ *Ҡайҙа барып баш тығырға? Тамаҡ туйҙырырлыҡ ҡына булһа ла ниндәй эш табырға?* Ж. Кейекбаев. **Баш тыҡҡыһыҙ** буш урын булмаған ергә ҡарата әйтелә. □ Битком набито, ногой ступить негде, голову не просунешь. **Баш һалыу** 1) ҡорбан булыу. □ Сложить голову. ■ *Аҫыл ирҙәр яуҙа баш һала.* Халыҡ йырынан; 2) ризалыҡ белдереп, буйһоноу. □ Смириться, подчиниться. ■ *Ихтыяран батшаға баш һалдығыҙ һеҙ [башҡорттар], рәхәтлектә, тыныслыҡта ҡалдығыҙ һеҙ.* С. Яҡшығолов; 3) *диал. ҡар.* **мәһәр һалыу. Баш һелкеү** раҫлауҙы йәки кире ҡағыуҙы белдереп баш һелкетеү. □ Качать головой. ■ *Йәш егет үҙһүҙләнеп баш һелкте: — Мин йәшенмәйем.* З. Биишева. **Баш һуҡҡан яҡҡа китеү** теләгән яҡҡа китеү, теләһә ҡайҙа китеү. □ Уходить куда глаза глядят. ■ *Көтөүҙе тау буйына алып барып һала ла [көтөүсе], үҙе баш һуҡҡан яҡҡа сыға ла китә.* М. Тажи. **Баш юғалтыу** онотолоп китеү; аңынан яҙыу, иғтибарлығын юғалтыу. □ Терять голову. ■ *Беҙҙе бары һунар дәрте генә биләп алғайны. Был ваҡытта, мәғлүм инде, Бибиков башын юғалтырға ла әҙер.* Д. Юлтый. **Баш эйеү** буйһоноу, табыныу. □ Подчиняться. ■ *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫ, аяҡ-ҡулына бығау һалһаң да.* Халыҡ йырынан. **Баш әйләнеү** баш буталыу; юғалып, аптырап ҡалыу. □ Голова идёт кругом. **Башҡа бәлә** (*йәки* **алыу, төшөү**) ҡайғы-хәсрәт күреү. □ Нажить беду. *досл.* Получить беду на голову. **Башҡа етеү** 1) харап итеү, һәләк итеү. □ Погубить. *Кешенең башына етеү;* 2) юҡ итеү, бөтөрөү. □ Уничтожать, истреблять, ликвидировать, сводить на нет. *Малдың башына етеү.* **Башҡа килеү** уй, фекер тыуыу. □ Приходить на ум. *Бер яҡшы ғына уй башҡа килде.* **Башҡа инеп тә сыҡмау** уйлап та бирмәү. □ И в голову не приходит. **Башҡа менеү** (*йәки* **менеп ултырыу**) кемгәлер һалыныу. □ Садиться на голову. **Башҡа сығыу** башты томалау, иҫертеү. □ Ударить в голову (*например, об алкоголе*). *Ҡымыҙ башҡа сыҡты ла ҡуйҙы.* **Башҡа тай типмәгән** (*йәки* **типкәнме ни**) кәрәкһеҙ, файҙаһыҙ бер эшкә тотонмаҫты белдергәндә әйтелә. □ Не дурак (*об осторожном человеке*). ■ *[Әлхәмов:] Бөтә булған бәлә-каза өсөн штраф түләп торорға башыма тай типмәгән.* С. Кулибай. **Башҡа төшөү** яҙмышҡа, өлөшкә тейеү. □ Выпасть на долю. *Башҡа төшкәс нимә эшләмәк кәрәк.* **Башҡа һеңдереү** тылҡыу, башҡа (мейегә) һеңдереү. □ Вбивать (забивать) в голову. *Яңы ҡағиҙәне башыңа һеңдереп ҡуй.* **Башҡа һуғыу** ниндәйҙер хәл өсөн яуап биреү, яуапҡа тартты-

рылыу. □ Дать по шапке. *Бер-бер хәл була ҡалһа, башҡа һуғырҙар.* **Башҡа һыймаҫлыҡ (***йәки* **һыйырлыҡ түгел)** иҫ киткес хәл тураһында әйтелә. □ Уму непостижимо. ■ *Көпә-көндөҙ ҡаш менән күҙ араһында дәүләт милкен юғалт, имеш! Башҡа һыйырлыҡ түгел!* Й. Солтанов. **Башҡа һыймау** ышанырға теләмәү. □ Не укладываться в голове (в сознании). ■ *[Вәлиулла] яратҡан шәҡирҙының үлемен башына һыйҙыра алмай, бер нисә көн аңҡы-тиңке йөрөгәйне.* Ф. Иҫәнғолов. **Башта тотоу** хәтерҙә тотоу, иҫтә тотоу. □ Держать в уме *кого-л., что-л.* **Баштан ашыу** бик күп булыу; саманан артыу. □ Слишком много; вполне достаточно. ■ *Ҡәмәр әбейҙең ҡыуанысы башынан ашҡан.* Ғ. Дәүләтшин. *[Барсынһылыу:] Батырлығың баштан ашҡан, матурлығың һыуҙай ташҡан.* «Алпамыша». **Баштан көлөү** хыянат итеү. □ Изменять, супружеская измена. **Баштан себен осороу** ғәйепһеҙ булырға тырышып аҡланыу. □ Оправдываться. ■ *[Шымбай — мулла хаҡында:] Мәсетте һибә итте лә башынан себен осорҙо, йәнәһе.* З. Биишева. **Баштан сығарып ташлау** бөтөнләй онотоу. □ Выбрасывать, выкинуть из головы. *Был уйыңды бөтөнләй башыңдан сығарып ташла.* **Баштан сығыу** онотоу. □ Вылететь из головы. ■ *Китмәһә баштан был болғансыҡ томан, аһ дуҫ-иштәр, мин була алмайым әҙәм.* Ш. Бабич. **Баштан сыҡмау** онотмау. □ Засесть гвоздём в голове. *досл.* Не выходить из головы. *Әйткән һүҙҙәре баштан сыҡмай.* **Баштан үтеү** кисереү, баштан үткәреү, татыу. □ Пережить, испытать. **Баштан үткәреү** хәтергә төшөрөү, иҫкә килтереү. □ Перебирать в уме (в памяти, в мыслях, в голове). **Баштан һыйпамау** *кемделер* яуапҡа тарттырыу, язаһыҙ ҡалдырмау. □ По головке не погладят. ■ *Әсәһе лә шундай эш өсөн баштан һыйпамаҫ.* Ғ. Ибраһимов. *Беҙҙең ерҙәрҙе немец батшаһы баҫып алһа, уныһы башыбыҙҙан һыйпар тип беләһегеҙме ни?* Д. Юлтый. *[Тәүфиҡә — Мөхтәрәгә:] Кемде ҡанат аҫтына алғаныңды беләм. Бының өсөн башыңдан һыйпамаҫтар.* С. Кулибай. **Баштан һыйпау** яҡшы күреү, маҡтау. □ Одобрять, потакать, потворствовать. *досл.* Гладить по голове. **Баштан һыпырыу** насар ҡылыҡтары өсөн хөкөмгә тарттырмау, йомшаҡ ҡарау. □ Не подвергнуть наказанию. *Беҙҙе был ҡылыҡ өсөн баштан һыпырмаҫтар.* **Башты ашау** һәләк итеү, харап итеү. □ Губить, погубить. ■ *Хас дошмандар нахаҡ бәлә ябып, ашаны-лар ғәзиз башымды.* Халыҡ йырынан. **Башты алйотҡа (***йәки* **тилегә) һалыу** юрамал ҡыланыу, һалышыу. □ Прикидываться дурачком. ■ *[Юнир:] Инде, туғанҡай, етте: башыңды алйотҡа һалып маташма.* Ш. Бикҡол. **Башты баҫыу** баш күтәрмәү, өндәшмәү. □ Делать *что-л.* молча, терпеливо. *Башты баҫып эшләү.* ■ *Хәҙер баш[ты] баҫып уҡырға ла уҡырға.* Ж. Кейекбаев. **Башты бутау** башты әйләндереү, ҡатырыу. □ Морочить голову. ■ *Юҡ инде, туған, башты бутама.* М. Кәрим. **Башты ҡатырыу** аптыратыу, йөҙәтеү. □ Морочить голову; изводить, изматывать, мучить, изнурять. *Башты ҡатырып тик йөрөй.* **Башты ҡырҡмаға биреү** ниҙелер ысын тип раҫлағанда әйтелә. □ Давать голову на отсечение. **Башты ташҡа бәреп булмау** сараһыҙлыҡты белдереү өсөн әйтелә. □ Выражает безысходность положения. ■ *[Уҡытыусы:] Ҡыҙғаныс та бит, ни эшләйһең инде, башты ташҡа бәреп булмай.* З. Биишева. **Башты әйеү (***йәки* **баҫыу)** күңел төшөү. □ Падать духом. **Башты һалыу** вафат булыу. □ Умереть. *Һөжүм иткәндә башты һалырға тура килмәһен.* **Башы бар** аҡылы етерлек дәрәжәлә булыу. □ Голова за плечами. **Башы булыу** *ҡар.* **башы бар**. ■ *[Мөхәмәтулла бабай:] Йә инде, кем ҡулына ҡалдыҡ бит... Төкөрҙөм мин уның көсҡеүәтенә, башы булмағас...* Ә. Вахитов. **Башы ике түгел** *йәки* **башы икеме ни** бәләле бер эшкә бармаҫты белдергәндә әйтелә. □ Не две головы (*достаточно ума, чтобы совершать это действие*). ■ *Ундай хәбәр һөйләргә башым икелер шул... Уны-быны айырырлыҡ зиһенем бар әле.* М. Тажи. **Башы йәш әле** йәш, тәжрибәһеҙ кеше тураһында әйтелә.

□ *соотв.* Мало каши ел. *Башы йәш әле өйләнергә.* **Башы йомро** аҡыллы кеше хаҡында әйтелә. □ *прост.* Котелок варит. ■ *Теге кешенең башы йомро. Тигенгә һорамайҙыр.* Я. Хамматов. **Башы ҡаты** теҙгенгә буйһонмаған малға ҡарата әйтелә. □ Необузданный; дикий. ■ *Миңә ат бирҙеләр, һары юрға... Тик башы ҡаты, ҡайһы саҡта буй бирмәҫкә итә.* С. Әлибаев. **Башы ла, ҡойроғо ла юҡ** аңламаҫлыҡ, буталсыҡ эшкә йәки һүҙгә әйтелә. □ Нет ни начала, ни конца. ■ *Әңгәмәнең башы ла, ҡойроғо ла булманы, береһе башлана, икенсеһе ташлана барҙы.* Ғ. Хәйри. **Башы эшләй** *ҡар.* **башы йомро.** ■ *«Алдаҡсы булһа ла, башы эшләй был Борһандың», — тип уйланы көнсөл Ҡорбан.* С. Кулибай. **Башын аҙҙырыу** насар юлға баҫтырыу (төшөрөү). □ Сбить с пути, совратить. **Башын әйләндереү** башын бутау, аҙҙырыу. □ Вскружить голову. ■ *Тоттом да Ташкент баҙарында ит сабып тороусы Чистай татарының башын әйләндерҙем.* Д. Исламов. **Башын юйыу** һәләк итеү, үлтереү. □ Погубить, убить. ■ *Дошман башын юймайсы, инде килмәм ҡарышыңа.* Халыҡ йырынан. **Башынан аҙағына тиклем** тулыһынса, бөткәнсе. □ От альфы до омеги; от корки до корки. *Башынан аҙағына тиклем уҡып сығыу.* **Башында ел уйнай** донъяға еңел ҡарашлы кеше хаҡында. □ Ветер в голове. **Иҫерек баш** башы эскенән сыҡмаған кешегә ҡарата әйтелә. □ Пьяница, алкоголик. **Ҡара баш** япа-яңғыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Одинокий, несчастный (*о человеке*). *Ҡара башы тороп ҡалды.* **Ҡара башыңа булғыр!** ҡарғағанда әйтелә. □ Пропади ты пропадом. **Ҡыу баш** 1) йылҡының кибеп бөткән баш һөйәге. □ Высохший конский череп. ■ *Йылҡы малы күп ауырыһа, оҙаҡ ямғыр яумаһа, ҡыу башты ситәнгә, ҡапҡаға элеп ҡуяһың.* Ырымдан; 2) *күсм.* Япа-яңғыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Одинокий. ■ *[Һәүбән:] Тәмле һүҙгә алданып, ҡыу баш ҡалдым донъяла.* «Аҡбуҙат». **Ҡыуыҡ баш** аҡылға еңел кешегә ҡарата әйтелә. □ Дурак, глупец. **Үҙе баш, үҙе түш** 1) бер кем менән дә иҫәпләшмәй, һәр нәмәне үҙе генә хәл итә торған кешегә ҡарата әйтелә. □ Сам себе голова. *Үҙе баш, үҙе түш булып тик йөрөй;* 2) үҙе генә хужа. □ Сам, один хозяин. **Серек баш** башы эшләмәгән, иҫһеҙ. □ Дурак, глупец. **Сепрәк** (*йәки* **сүбәк) баш** уйлай белмәгән, аҡылһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Дурак, глупец. **Тауыҡ баш** аҡылы етмәгән, уйлай белмәгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Дурак, глупец. **Иң башта** иң беренсе булып. □ С самого начала.

**БАШ II** [боронғо төрки *баш*] (Р.: первый; И.: the first; Т.: ilk) *с.*

**1.** Беренсе, тәүге. □ Первый; головной, начальный. *Баш бала. Баш отряд. Баш канал. Төнгө көтөү яҡипы булһа, баш һауындарҙа һөт мул сыға.*

**2.** Урыны, вазифаһы буйынса оло. □ Главный; генеральный. *Баш инженер. Баш ҡоҙа. Баш роль. Баш бухгалтер. Баш һөйләм.* ■ *Шунан дуҫым, «Аманат» журналының баш мөхәррире, яҙыусы Динис Бүләковтың һорауы буйынса, балалар тормошо тураһында «Беҙҙең баҡса». «Һуңғы уйын» тигән повестар яҙҙым.* Н. Ғәйетбай. *Республиканың хирургия үҙәге иң ҙур клиникаларҙан иҫәпләнә. Ә шул ҙур клиниканың баш врачы кем инде? Ҡаҙнабаев, фән докторы.* Д. Бүләков.

**БАШ III** (Р.: закваска; И.: ferment; Т.: maya) *и. диал.*

Сүпрә. □ Закваска. *Ҡымыҙға баш яһау. Ҡатыҡ башы.*

**БАШ IV** (Р.: выкуп; И.: ransom; Т.: başlık) *и. диал.*

Мәһәр. □ Выкуп за невесту. *Ҡыҙ өсөн баш бирҙеләр.*

**БАШ V** (Р.: родовое подразделение башкир; И.: Bashkir tribal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ, бөрйән ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Родовые подразделения башкир-кипчаков, бурзянцев.

**БАША** (Р.: наконечник; И.: arrow head; Т.: temren) *и. диал.*

Уҡ башағы. □ Наконечник стрелы. *Тимер баша. Боронғо дәүерҙән ҡалған башалар.*

**БАШАҒАС I** (Р.: слега; И.: pressing log; Т.: baskı) *и.*

Ҡыйыҡ, кәбән башына баҫтырып һалған ағас. □ Слега. *Өй башағасы. Әҫкерт башағасы.*

**БАШАҒАС II** *и. диал. ҡар.* **башландырыҡ.**

**БАШАҒАСЛАУ (башағасла-)** (Р.: стягивать; И.: press with a log; Т.: sıkmak) *ҡ.*

Башағас һалып баҫтырыу. □ Стягивать, придавливать слегой. // Стягивание, придавливание. *Кәбәнде башағаслау.*

**БАШАЙ I** (Р.: колос; И.: ear; Т.: başak) *и. диал.*

Башаҡ. □ Колос. ■ *Башай туҡманылар һуғыш ваҡытында. Һуғыш ваҡытында башайға күп йөрөлдө инде ул.* Экспедиция материалдарынан.

**БАШАЙ II** (Р.: шерстяные носки; И.: woolen hand made socks; Т.: yünden çorap) *и. диал.*

**1.** Башалтай. □ Шерстяные носки ручной вязки. *Йөн башай. Башай бәйләү. Башайым тишелгән.*

**2.** Туланан баш һабып тегелгән ҡунысл ы аяҡ кейеме. □ Обувь с суконными голенищами. *Башайым туҙған. Яңы башай.*

**БАШАЙ III** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of a Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тамьянцев.

**БАШАҠ I (башағы)** [боронғо төрки *башаҡ* 'үҫемлек башы'] (Р.: колос; И.: ear; Т.: başak) *и.*

Ҡыяҡлы үҫемлектең емле башы. □ Колос. *Тос башаҡ. Арыш башағы. Башаҡ ебәреү. Башаҡ урыу. Башаҡ йыйыу.* ■ *Юл ситендә йөктән төшөп ҡалған бойҙай көлтәһе табып, Ирназар, башаҡтарҙы ыуып, кәбәген өрөп осороп, тос орлоҡтарҙы услап-услап ауыҙына оҙатты.* Ә. Хәкимов. *Батша Риуан төш күрә. Ете бешкән бойҙай башағы, ете йәшел бойҙай күрә.* «Йософ вә Зөләйхә».

**БАШАҠ II (башағы)** (Р.: наконечник; И.: arrow head; Т.: temren) *и.*

**1.** Уҡ, һөңгө башына ҡуйылған үткер ос. □ Наконечник (стрелы). *Еҙ башаҡ. Мөгөҙ башаҡ. Ҡорос башаҡ.* ■ *[Алып] йыуан-йыуан һырғый имән йығып, уҡ яһаған. Ул уҡҡа башаҡ осо итеп үткер алмас таш ҡуйған.* «Алып батыр». *Бер ерҙә уҡ-һаҙаҡ, һөңгө башаҡтары, ҡылыс-хәнйәр сүкелә, икенсеһендә эйәр-эпсен, арба, тирмә кирәгәләре, ағастан һауыт-һаба яһайҙар.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ен-шайтанды ҡыуыуҙа ҡатнашҡан сакраль предмет. □ Наконечник стрелы *(мифологизированный предмет).*

**БАШАҠ III (башағы)** (Р.: стручок; И.: pod; Т.: badıç) *и. диал.*

Ҡуҙаҡ. □ Стручок. *Борсаҡты башағы менән йыялар.*

**БАШАҠ IV (башағы)** (Р.: месиво для скота; И.: mash; Т.: kitle) *и. диал.*

Малға көрпә менән һалам ваҡлап бутап һалынған аҙыҡ. □ Месиво для скота из измельченной соломы и отрубей. *Малға башаҡ бирәһе бар.*

**БАШАҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **башалтай.** *Башаҡайым тишелгән. Башаҡай бәйләү.*

**БАШАҠ КЛЕВЕР** (Р.: клевер красный колосовидный; И.: red clover; Т.: kırmızı yonca) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. □ Клевер красный колосовидный (лат. *Trifolium rubens*). *Башаҡ клевер баҫыу-яландарҙа үҫә.*

**БАШАҠЛАНЫУ (башаҡлан-)** (Р.: колоситься; И.: be in the ear; Т.: başaklanmak) *ҡ.*

Башаҡ ебәреү, башаҡҡа ултырыу. □ Колоситься, выбрасывать колос; выколоситься. // Колос. ■ *Бойҙай уңманы. Ул башаҡланып һөтләнә генә башланы ла эҫегә ҡурылып ҡатты.* Я. Хамматов.

**БАШАҠЛАУ I (башаҡла-)** (Р.: жать по колоску; И.: reap by the ear; Т.: biçmek) *ҡ.*

Ашлыҡ башын сүпләп урыу. □ Жать по колоску. // Жатва. *Арыш башаҡлау. Бойҙай башаҡтарға баҫыуға сыҡтылар.*

**БАШАҠЛАУ II (башаҡла-)** (Р.: надевать наконечники; И.: put arrow heads on; Т.: temren takmak) *ҡ.*

Башаҡлы итеү, башаҡ ҡуйыу (*уҡҡа, һөңгөгә*). □ Надевать наконечники. ■ *Башҡорттарға аттарының тояғын Парижҙан тыуған илгә ҡайтышлай ғына, йәғни уҡты башаҡлау мохтажлығы бөткәс кенә дағалау форсаты тейә.* «Киске Өфө», 19 март 2011.

**БАШАҠЛАУ III (башаҡла-)** (Р.: готовить месиво для скота; И.: prepare mash; Т.: hayvan yemi hazırlamak) *ҡ. диал.*

Малға аҙыҡ бутау. □ Готовить месиво для скота. *Һыйырҙарға көрпәне башаҡлап бирергә кәрәк.*

**БАШАҠЛЫ I** (Р.: колосистый; И.: eared; Т.: başaklı) *с. бот.*

**1.** Башағы булған (*үҫемлектәрҙең*). □ Колосистый. ■ *Ҡояш яҡтыһында ялтырап күренгән ҙур башаҡлы бер һаламды ауыҙына тешләп, шаярыңҡырап килеүсе Фатима, инлек төбөнә еткәс, атын туҡтатты.* Ғ. Хәйри. *Бойҙай үҫә туҡ башаҡлы, арыш үҫә аҡ сал сәсле, елдә улар тирбәләләр, әйтерһең дә, кинәнәләр.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Башаҡлы сәскәлеге булған. □ Колосовой. *Башаҡлы культуралар. Башаҡлы үҫемлектәр. Башаҡлы мал аҙығы.*

**БАШАҠЛЫ II** (Р.: с наконечником; И.: with a tip; Т.: temrenli) *с.*

Башағы булған (*ҡоралдарҙың*). □ С наконечником. ■ *Уның ҡарауы, башаҡлы уҡ, һөңгө кеүек иң кәрәкле ҡоралы байтаҡ уның хәҙер.* К. Мәргән.

**БАШАҠЛЫ БОРСАҠ (борсағы)** (Р.: леспедеца головчатая; И.: leguminous plant species; Т.: baklagillerden bitki türü) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлектәрҙең бер төрө. □ Леспедеца головчатая, сибирский чай (лат. *lespedeza capitata*). *Башаҡлы борсаҡ йылға һәм урман буйҙарында, яландарҙа үҫә.*

**БАШАҠЛЫЛАР** (Р.: колосовые; И.: gramineae; Т.: buğdaygiller) *и. бот.*

Башаҡ рәүешендәге сәскәлеге булған ҡыяҡлы үҫемлектәр. □ Колосовые (лат. *Gramineae*). *Район хужалыҡтары башаҡлылар үҫтереүгә ҙур иғтибар бүлә.*

**БАШАҠЛЫ ТАРЫ** (Р.: просо колосистое; И.: millet species; Т.: darı) *и. бот.*

Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған бер йыллыҡ үҫемлек. □ Просо колосистое, просо гребенчатое (лат. *Panicum*). *Башаҡлы тары аҙыҡ өсөн ҡулланыла. Башаҡлы тарынан ярма етештерәләр.*

**БАШАҠЛЫ ЮШАН** (Р.: вероника колосистая; И.: veronica; Т.: Yavşan otu) *и. бот.*

Сираждар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлектәрҙең бер төрө. □ Вероника колосистая (лат. *Veronica spicata*). *Башаҡлы юшан зәңгәр, күк, алһыу төҫтә сәскә ата.*

**БАШАҠСЫ** (Р.: собиратель колосьев; И.: gleaner; Т.: başakçı) *и.*

Башаҡ йыйыусы. □ Собиратель колосьев (*на поле*). ■ *Әммә [Хамбал] бында булашҡан арала, башаҡсылар, усмаларын ҡосаҡлап, ауылға етеп бара ине инде.* Р. Солтангәрәев.

**БАШАЛАЙ** *и. диал. ҡар.* **башалтай.**

**БАШ АЛМАҺЫ** (Р.: родничок; И.: fontanella; Т.: bıngıldak) *и. диал.*

Лепкә. □ Родничок (*у новорождённых*). *Баш алмаһы ябылмаған килеш тыуҙы.*

**БАШАЛТАЙ** (Р.: шерстяные носки без поголенка; И.: kind of woolen socks; Т.: yünlü çorap) *и.*

**1.** Ҡыҫҡа ҡуныслы йөн ойоҡ. □ Шерстяные носки без поголенка. *Йөн башалтай. Башалтай бәйләү.* ■ *[Зифа] ҡабаланып, үҙ аяғындағы башалтайын сисергә тотондо.* Н. Мусин.

**2.** *миф.* Бүҫер имләүҙә ҡулланылған предмет. □ Предмет, используемый в лечении грыжи.

**БАШАН I** *и. диал. ҡар.* **яҫтыҡ 1.** *Арбаға менгәс, башан һалып ултырҙы.*

**БАШАН II** (Р.: неуправляемый; И.: uncontrollable; Т.: güdümlü olmayan) *с. диал.*

Башы ҡайҙа һуҡһа, шунда йөрөгән *(кеше)*. □ Неуправляемый *(о человеке). Башан булып йөрөү.*

**БАШАН III** *и. диал. ҡар.* **күкрәк ағасы.** *Оҙон башанлы арба.*

**БАШАНТАЙ** *и. диал. ҡар.* **башалтай.**

**БАШАУ I (баша-)** *ҡ. диал. ҡар.* **башаҡлау I.**

**БАШАУ II** (Р.: непокорный; И.: recalcitrant; Т.: itaatsiz) *с.*

Баш бирмәҫ. □ Непокорный *(о человеке, животном). Быҙауым башау булып тик йөрөй.*

**БАШАУ III** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of a Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Әйле ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-айлинцев. *Башауҙар шәжәрә байрамына йыйылған.*

**БАШАУ МАЛ** (Р.: скотина, подержанная много лет; И.: aged cattle; Т.: geçkin hayvanlar) *и. диал.*

Оҙаҡ аҫралған мал. □ Скотина, не подвергнутая закалыванию много лет. *Башау мал итеп аҫрау.*

**БАШ АУЫРЫУЫ** (Р.: головная боль; И.: headache; Т.: baş ağrısı) *и. мед.*

**1.** Төрлө ауырыуҙарҙың симптомы булараҡ баш һөйәге өлкәһендә тойолған ауыртыу. □ Головная боль. *Баш ауырыуынан биҙәү.*

**2.** *күсм.* Берәй мөһим мәсьәлә. □ Головная боль. ■ *Әйткәндәй, күпер мәсьәләһе өмөтбайҙар өсөн күптән баш ауырыуы булып ҡала.* «Урал», 3 март 2011.

**БАШ АУЫУ (баш ау-)** *ҡ. диал. ҡар.* **мейе төшөү.**

**БАШ-АЯҒЫ** (Р.: всего-навсего; И.: only; Т.: sadece) *р.*

Бары тик. □ Всего-навсего, всего-то. *Баш-аяғы ун һум бирҙе.*

**БАШ-АЯҠ I (баш-аяғы)** (Р.: всё тело; И.: head and limbs; Т.: vücut) *и. йыйн.*

**1.** Баш менән аяҡ; бөтә кәүҙә. □ Всё тело. *Баш-аяғы һау булһын.*

**2.** Малдың баш һәм аяғы. □ Голова и конечности; гольё. *Баш-аяғын өтөү. Баш-аяғын бешереү.*

**3.** *эйл. ф.* **баш-аяғы.** Бөтә булғаны; бөтәһе, барлығы. □ Всего; в целом. *Баш-аяғы бер һандығы бар.*

**БАШ-АЯҠ II** (Р.: совсем; И.: completely; Т.: büsbütün) *р. диал.*

Бөтөнләй. □ Совсем, полностью, совершенно. *Баш-аяҡ сығып китте. Баш-аяҡ ризалашыу.*

♦ **Баш-аяғы менән** тотош. □ Полностью, целиком. *Баш-аяғы менән эшкә сумған. Баш-аяғы менән ғашиҡ булған.* **Бәләнән баш-аяҡ** бәләнән алыҫ булған яҡшы, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ От греха подальше. ■ *[Сәйҙеямал — улына:] Әй, балам, беруҡ үҙеңде һаҡла инде. Бәләнән баш-аяҡ.* Я. Хамматов.

**БАШАЯҠЛЫЛАР** (Р.: головоногие; И.: cephalopod; Т.: kafadan bacaklılar) *с. зоол.*

Баш тирәһендә һәрмәүестәре булған, арҡа һөйәкһеҙ моллюскылар класы. □ Головоногие (*класс животных*) (лат. *Cephalopoda*). *Башаяҡлы моллюскылар, ғәҙәттә, йылы һыулы диңгеҙҙәрҙә йәшәй.*

**БАШ БАҒЫУ (баш баҡ-)** (Р.: гадание; И.: divination; Т.: fala bakma) *и. этн.*

Яңы йыл төнөндә *(төнгө ун ике булғас)* мәкенән алған һыуға ҡарап күрәҙәлек итеү йолаһы. □ Гадание по воде, взятой из проруби под Новый год. *Ҡыҙҙар баш баға.*

**БАШБАЙРАМ** (Р.: поминки по предкам; И.: wake; Т.: anma yemeği) *и. диал.*

**1.** Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу табыны. □ Поминки по предкам. ■ *Нөгөш буйы башҡорттарында башбайрам тигән йола бар.* Башҡорт мифологияһынан.

**2.** Баш бешереп саҡырыу йолаһы. □ Поминки по предкам с приготовлением блюд из мяса головы жиовтных. *Башбайрамға саҡырыу.*

**БАШ БАЛА** (Р.: первенец; И.: firstborn; Т.: ilk evlat) *и.*

**1.** Тәүге бала. □ Первенец. *Баш балалары малай булды.* ● *Баш бала — йән аҙығы, кинйә бала — йорт ҡаҙығы.* Мәҡәл.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, боҙ яуыуҙы туҡтатыуҙа, төрлө ауырыуҙарҙы имләүҙә ҡатнашыусы кеше. □ Первенец (*мифологизированное лицо, участвующее в обрядах остановки града, лечения различных болезней*). ■ *Биртекте бер баш бала, бер кинйә бала имйә.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАШ БАРМАҠ (бармағы)** (Р.: большой палец; И.: trumb; Т.: büyük parmak) *и.*

**1.** Ҡулдың йәки аяҡтың башҡа бармаҡтарҙан ситтәрәк урынлашҡан ике быуынлы йыуан ҡыҫҡа бармағы. □ Большой палец. ■ *Ҡаҙнабаевтың үҙе өсөн, баш врач! Ул бына тигән кеше! Шамратов, ҡыҙып китеп, баш бармағын күрһәтеп ташланы.* Д. Бүләков. *Синцов ҡына урынынан ҡуҙғалманы. Ни тураһындалыр уйланып ятты-ятты ла сауҡалар араһында үҫкән баш бармаҡ йыуанлығындағы төп-төҙ, шып-шыма көпшәне киҫеп алып, яр буйындағы Бейеш эргәһенә барҙы.* Я. Хамматов.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, дауалау көсөнә эйә булған бармаҡ. □ Большой палец (*мифологизированная часть тела*). ■ *Өсйәнде баш бармаҡ менән генә төртөп имләйҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАШБАТА** (Р.: надмогильный камень;И.: stela; Т.: mezarlık) *и.*

Ҡәбер ташы. □ Стела, надмогильный камень *(с надписью). Башбата ҡуйыу. Башбата тергеҙеү.*

**БАШБАУ** (Р.: верёвка на передке телег и саней; И.: kind of a cord; Т.: ip türü) *и. диал.*

Арба һәм сананың алдында баҫрауға эләктерелә торған бау. □ Верёвка на передке телег и саней для закрепления слеги. *Арбаның башбауы өҙөлөп сыҡты. Башбауын яңыртыр кәрәк.*

**БАШ-БАШ** (Р.: множество головок; И.: numerous; Т.: baş baş) *с.*

Башлы нәмәләрҙең күп булыуы. □ Множество головок, кочанов. *Баш-баш кәбеҫтә.*

**БАШ-БАШҠА** (Р.: по отдельности; И.: separately; Т.: ayrı ayrı) *р. диал.*

Башҡа-башҡа. □ По отдельности. *Бесәнде баш-башҡа һалыу. Әйберҙәрҙе баш-башҡа урынлаштырыу.*

**БАШБАШТАҠ** (Р.: своевольный; И.: self-willed; Т.: harın) *с.*

Кешене иҫәпкә алмайынса, үҙенсә эш итеүсән; үҙ белдекле. □ Своевольный, самовольный, самоуправный. ■ *[Мөхәммәтсәлим:] Уларҙың һүҙҙәре өҫтөн ҡалғанда ла, башбаштаҡ ҡыланыштарын белә тороп, шымып ҡалыу килешмәҫ.* Я. Хамматов.

**БАШБАШТАҠЛАНЫУ (башбаштаҡлан-)** (Р.: самовольничать; И.: take liberties (with); Т.: özgür davranmak) *ҡ.*

Башбаштаҡлыҡ итеү. □ Вольничать; самовольничать, самоуправствовать, своевольничать; поступать самовольно. // Самовольство, самоуправство. ■ *Аптырағас, Азамат, башбаштаҡланып, штуцерҙы алмаштырырға, диаметрын тарайтырға ҡуша, әммә идаралыҡта шунда уҡ белеп алалар, нефтте ниңә кәметәһегеҙ, тип ҡысҡырырға тотоналар.* Р. Солтангәрәев. *Әлфирҙең кәйеф шәптән түгел. Ҡатынының башбаштаҡланып йөрөүе етмәгән, эшләгән заводында ла хәлдәр хөрт икән.* Н. Мусин.

**БАШБАШТАҠЛЫҠ (башбаштаҡлығы)** (Р.: произвол; И.: arbitrary rule; Т.: keyfince davranma) *и.*

Үҙ белдеклегенә, ихтыярына нигеҙләнгән ҡыланыш, тәртип. □ Произвол, самоуправство; своеволие. ■ *Хан, быларҙың башбаштаҡлығын белгәс, асыуынан шартларҙай булды, ләкин рәсми аҙым яһаманы, үҙе электән һөйһөнөп етмәгән бер-ике ырыу башын саҡыртып алды ла ярандары алдында ҡамсы менән ярып ҡайтарҙы.* З. Ураҡсин. *Ярһыуы ни тиклем көслө булмаһын, уйлаған ниәтенең сейле-бешле икәнен, аҙаҡ Федотовтың да рәхмәт әйтмәҫен аңлай ине Рамазан. Алабарманлыҡ, башбаштаҡлыҡ тип шелтәләйәсәк.* Ә. Хәкимов.

**БАШ-БАШЫ** (Р.: два конца; И.: two ends of an object; Т.: iki ucu) *и. йыйн.*

*Ниҙеңдер* ике яҡ осо. □ Два конца *у чего-л. Баш-башы сигелгән таҫтамал. Баш-башын бергә бәйләү.* ■ *[Бакуйҙарҙың] яландың урта ерендәгеләре кипһә лә, уларҙың урман ситендәге баш-баштарының аҫты шәмәреп, йәшел ята ине әле.* Н. Мусин.

**БАШ БЕТЕҮЕ** (Р.: оберег; И.: amulet; Т.: muska) *и. миф.*

Башты һаҡлау өсөн йөрөтөлгән бетеү. □ Оберег, амулет для головы. ■ *Баш ауырыһа, үрмескә баш бетеүе таҒалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАШБҮРЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Baskurt soyunun adi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-усерган.

**БАШБӘЙҘӘМЕС** (Р.: повязка под платок; И.: band; Т.: çatkı) *и. диал.*

Яулыҡ эсенән бәйләй торған туҡыма киҫәге. □ Повязка под платок. *Биҙәкле башбәйҙәмес. Башбәйҙәмес тегеү.*

**БАШБӘЙРӘМ** *и. диал. ҡар.* **башҡа саҡырыу.**

**БАШВАТҠЫС I** (Р.: головоломный; И.: puzzling; Т.: çözümü güç) *с.*

Ҡатмарлы. □ Головоломный. *Башватҡыс мәсьәлә. Башватҡыс хәл.*

**БАШВАТҠЫС II** (Р.: головоломка; И.: puzzle; Т.: bilmece) *и.*

Зирәклекте талап итеүсе, еңел булмаған мәсьәлә. □ Головоломка; ребус, шарада и т. п. *Башватҡыс сисеү.*

**БАШ ЕП I (ебе)** *и. диал. ҡар.* **башбау.**

**БАШ ЕП II (ебе)** (Р.: тряпка, прикреплённая к пришве; И.: rag; Т.: bez) *и. туҡ.*

Башландырыҡ йәнәшенә ҡуйылған сепрәк. □ Тряпка, поставленная рядом с палочкой, при помощи которой основа прикрепляется к пришве *(в домашнем ткачестве).*

**БАШ ИМЛӘҮ (баш имлә-)** (Р.: заговаривание головной боли; И.: exorcism; Т.: baş ağrısını büyü ile iyi etmek) *к. миф.*

Баш ауыртһа, башты йүкә менән бәйләп ҡолаҡ тураһынан һыҙып имләү. □ Заговаривать головную боль. ■ *Баш ауыртһа, әпсен әйтеп баш имләйҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

**БАШ ИТЕНӘ САҠЫРЫУ (баш итенә саҡыр-)** (Р.: обряд коллективного угощения блюдом из мяса головы; И.: one of Bashkir ethnographic rites; Т.: âdet türü) *и. этн.*

Икенсе йылда яҡшы үрсем булһын өсөн һуйылған малдың баш итен бешереп, күрше-күлән, туған-тыумаса менән бергәләп һыйланыу йолаһы. □ Обряд коллективного угощения блюдом из мяса головы, направленный на проецирование хорошего приплода на следующий год. ■ *Көҙ мал һуйғас, баш итенә саҡырышабыҙ.* Экспедиция материалдарынан.

**БАШ КЕЙЕМЕ** (Р.: головной убор; И.: headgear; Т.: başlık) *и.*

**1.** Башҡа кейеп йөрөй торған әйбер. □ Головной убор. *Баш кейемен һалып инеү. Баш кейемһеҙ йөрөү.*

**2.** Сакраль, һаҡлау көсөнә эйә предмет. □ Головной убор *(имеет сокральное значение).*

**БАШКИҘЕҮ** (Р.: женское нагрудное украшение из монет; И.: female coin decoration; Т.: kadınların süs eşyası) *и. диал.*

Хәситә. □ Женское нагрудное украшение из монет. *Башкиҙеү кейеү. Башкиҙеү бер ике килограмм була.*

**БАШКИҪӘР** (Р.: палач; И.: hangman; Т.: cellat) *и.*

**1.** *тар.* Язалаусы, палач. □ Палач. *Башкиҫәрҙәр башлыҡ хөкөмөн тормошҡа ашырғандар.*

**2.** Талап, үлтереп йөрөгән кеше. □ Бандит, грабитель, разбойник; головорез. ■ *Тик, яҫҡынышып, тура килгән бер ерҙә тамаҡ хәстәрләргә күнеккән башкиҫәр ярандарын еңә алманы.* Ә. Хәкимов. *Әммә иренә хыянат иткәнде ғорур Александр ҙа ярлыҡамаған — күңеле ытырғанып, башкиҫәр-бикәне, йыртҡыстарға улъя итеп, ҡола далаға олаҡтыртҡан.* Й. Солтанов.

**БАШКӨЛЛӨ** (Р.: навсегда; И.: forever; Т.: ebediyen) *р. диал.*

Бөтөнләйгә, тотош. □ Навсегда, совсем, насовсем. ■ *Ғиззәт башкөллө эшкә сумып, бигерәк тә ҡайта һалыу менән Гөләйфәгә бутлып яманаты сыҡҡандан аҙаҡ яңынан нисек итеп донъя көтөп алып китеү, ғаилә ҡороу хаҡында төплө генә итеп уйламай ҙа йөрөй ине.* Н. Мусин.

**БАШКӨЛЛӘЙ** *р. диал. ҡар.* **башкөллө.**

**БАШКӨН** (Р.: понедельник; И.: Monday; Т.: Pazartesi) *и. диал.*

Дүшәмбе. □ Понедельник. *Башкөн эшкә сығабыҙ. Башкөн ҡайтып төштө.*

**БАШ-КҮҘ** (Р.: вся голова; И.: head; Т.: baş) *и. йыйн.*

Бөтөн баш. □ Вся голова. *букв.* Голова и глаза. ■ *[Раяның] ашхана ҡыҙҙарына ғына асыуы килә: ситтән бер яңы кеше күрендеме, баш-күҙҙәре алара ла китә тегеләрҙең.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Баш-күҙ алыу** ауыр хәлдән арынып, арыуланыу. □ Становиться на ноги, приходить в себя (*после каких-л. трудностей*). ■ *[Ирназар:] Улай ҙа төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ, әҙерәк баш-күҙ алғас та, күргән-кисергәнемде бәйнә-бәйнә яҙып ебәрермен.* Ә. Хәкимов. *[Алтынбай] Ташлыға етеп, баш-күҙ алыу менән үҙенең әллә ҡасандан бирле әйтә алмай күңел төбөндә генә йөрөткән үтенесен хужаһына асып һалырға теләне.* З. Ураҡсин. **Баш-күҙ тоноу** 1) аптырау, иҫәңгерәү. □ Обалдеть, ошеломляться; 2) ныҡ асыуланыу, ярһыу. □ Терять голову (*от ярости, гнева*); обезуметь. **Башын-күҙен әйләндереү** ғашиҡ итеү. □ Сильно увлечь *кого-л.*, вскружить голову *кому-л.*

**БАШ-КҮҘ БУЛЫУ (баш-күҙ бул-)** *к. ҡар.* **күҙ-ҡолаҡ булыу.** *Мал-тыуарға баш-күҙ булып тороғоҙ.*

**БАШ-КҮҘЛЕ БУЛЫУ (баш-күҙле бул-)** *к. диал. ҡар.* **башлы-күҙле булыу.** *Улдары баш-күҙле булды.*

**БАШКҮНӘК (башкүнәге)** (Р.: сосуд, изготовленный из кожи; И.: vessel made of cattle's skin; Т.: kap) *и.*

Йылҡының баш тиреһенән яһалған һауыт. □ Сосуд, изготовленный из кожи головы или шеи лошади, коровы. ■ *Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ, башкүнәкәйҙәрҙе ҡулға алып.* Халыҡ йырынан.

**БАШҠА I** [дөйөм көнбайыш төрки *башҡ* 'башҡа, бүтән'] (Р.: другой; И.: separately; Т.: başka) *с.*

Икенсе бер нәмәнән айырмалы; бүтән. □ Другой, иной, прочий. *Башҡа ваҡыт. Башҡа ер. Башҡа урын. Башҡа эш.* ■ *Мәҙинәнең, әлбиттә, һыйыр быҙаулағанын күргәне бар, тик унда, фермала, әсәһе, башҡа өлкән кешеләр була.* Т. Ғарипова. *Илгужаға баш ҡағыуҙан башҡа сара ҡалманы.* Д. Бүләков.

♦ **Башынан башҡа булыу** бала табып, ауырҙан ҡотолоу. □ Родить. ■ *Ярай инде, иҫән-һау башынан башҡа булды.* Һ. Дәүләтшина. **Үҙенә башҡа** 1) үҙе бер яры, айырым. □ Отдельный. ■ *Приказчик Жирников үҙе йүгереп йөрөп ағас айыртты: ҡайынын бер яҡҡа, уҫаҡтарын икенсе өйөмгә, имәндәрен үҙенә башҡа өйҙөрҙө; һаллығын оҙонораҡ быстырҙы, туғын-тәгәрмәслектәрен, дегет ҡайната, һелте яһай торғандарын шунда уҡ турата барҙы.* З. Ураҡсин. *[Әсирҙәр] үлемесле ҡоллоҡ ғазабынан ҡотолоуҙарына ышаныр-ышанмаҫ, бүтәндәргә бигүк ҡушылып бармай, үҙҙәренә башҡараҡ төркөмдәргә тупланып, айырыуса нығ миктәгән иптәштәренә ярҙам итергә тырыша.* Ә. Хәкимов; 2) үҙенә бер. □ Особенный. ■ *Шамилов иһә — үҙенә башҡа кеше.* Д. Бүләков.

**БАШҠА II** [дөйөм көнбайыш төрки *башҡ* 'башҡа, бүтән'] (Р.: другой; И.: separately; Т.: ayrı) *р.*

**1.** Үҙенә бер яры; айырым. □ Врозь, порознь, отдельно. *Башҡа күсеү. Башҡа ашау. Башҡа тороу.* ■ *Аҡ һары, ҡыҙыл һары, ҡара һары тары бөртөктәрен һәр ҡайһыһын үҙенә башҡа айырып һалған, Иштуған килгәс, ул ҡабаланмай ғына тарыларҙың һәр төрөн үҙенә башҡа кескәй генә тоҡсайҙарға һала башланы.* З. Биишева.

**2.** Бынан ары; бүтән. □ Больше. *Башҡа килмәне. Башҡа эшләмәне.* ■ *[Егор Николае-*

*вич] ошонан башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алманы.* З. Ураҡсин.

**БАШҠА III** (Р.: кроме; И.: besides; Т.: başka) *бәйл.*

**1.** Бүтән, тыш. □ Кроме, помимо. ■ *Унда кәҙә һукмағынан башҡа юл юҡ.* Ә. Хәкимов. *Ағайыңдан башҡа кем ярҙам итһен һиңә?* Д. Бүләков.

**2.** Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, *кемһеҙ, нимәһеҙ* мәғәнәһен бирә. □ Без *кого, чего.* ■ *Таңһылыу: «Ул мине ярата, мин дә унан башҡа йәшәй алмайым», — тип өҙә һуға.* Р. Камал. *[Секретарь:] Ярҙам һорарға килдеңме? Йөрөмә буталып, һинән башҡа ла теләнселәр бөтмәгән, — тине.* Н. Мусин.

**БАШ ҠАҒЫУ (баш ҡаҡ-)** (Р.: кивать; И.: nod; Т.: başı sallamak) *ҡ.*

**1.** Ризалыҡты йәки ризаһыҙлыҡты белдереп баш һелкеү. □ Кивать, кивнуть головой. ■ *Был һүҙҙәрҙе писарь ҙа йөпләп, баш ҡағып торҙо.* З. Ураҡсин. *Эйе, — тип баш ҡаҡты Вәзир.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Баш тартыу. □ Отрекаться, отречься *от кого-чего.* // Отречение. *Эштән баш ҡағыу.*

**БАШ ҠАҘАҒЫ** (Р.: первый гвоздь, к которому привязывается начало нити при сновании; И.: sort of appliance used in warping; Т.: ilk kazık) *и.*

Туҡыма һуғыу эшендә ептең башы беркетелгән тәүге ҡаҙаҡ. □ Первый гвоздь, к которому привязывается начало нити при сновании. *Баш ҡаҙаҡҡа епте беркетеү.*

**БАШҠАҘЫҠ (башҡаҙығы)** (Р.: кол у изголовья могилы; И.: tomb wedge; Т.: mezar başındaki kazık) *и.*

Ҡәберҙә баш осона ҡуйылған ҡаҙыҡ, бүрәнә киҫәге. □ Кол у изголовья могилы. *Башҡаҙыҡ ултыртыу.*

**БАШ ҠАЛА** (Р.: столица; И.: capital; Т.: başkent) *и.*

Дәүләттең административ-сәйәси үҙәге. □ Столица. ■ *Ә Батыр, ни тиһәң дә, баш ҡалала бер йыл йәшәне.* Н. Ғәйетбаев. *Йәләлетдиндең эйәрсендәре, баш ҡаланың аҫтын-өҫкә килтереп, шағирҙы эҙләргә, көмлөгән асыҡларға керешә.* Я. Хамматов.

**БАШҠАЛАНЫУ I (башҡалан-)** (Р.: выделяться; И.: be notable (for); Т.: ayrılmak) *ҡ.*

Төп өйҙән бүленеп сығыу. □ Выделяться, отделяться. *Йәш ғаилә башҡаланды.* ■ *[Иҫәкәй:] Бала-сағаларың күренмәй, мин әйтәм, башҡаланып бөтмәгәндәрҙер бит?* Н. Мусин.

**БАШҠАЛАНЫУ II (башҡалан-)** (Р.: изменяться; И.: change; Т.: değişmek) *ҡ.*

**1.** Икенсе төрлөгә әйләнеү, башҡа төҫкә инеү; үҙгәреү. □ Изменяться, стать другим. // Изменение. *Донъя башҡаланды. Был бала бөтөнләй башҡаланып китте.* ■ *Боҙолған сәскә еҫе — башҡаланған... Үлерһең, былай барһа, мәсхәрәңдән!..* Ш. Бабич.

**2.** *диал. ҡар.* **алмашаланыу.**

**БАШҠАЛАР** (Р.: другие; И.: others; Т.: başkalar) *и.*

Бүтән бер, икенсе бер кешеләр хаҡында әйтелә. □ Другие. ■ *Кейеҙбай, башҡаларға һиҙҙермәй ағаһының бөйөрөнә төртөп, аяғына баҫып ала.* Әкиәттән. *Повестарҙың ыңғай геройҙары көслө, ныҡыш кешеләр, уларҙа үҙ шәхесенән бигерәк башҡалар өсөн яуаплылыҡ ҙур.* Р. Байымов.

♦ **Һәм башҡалар** (*һ. б.* тип ҡыҫҡартып яҙыла) исемләп һанап сыҡҡас, 'тағы дауам итә' тигәнде белдерә. □ И другие, и так далее, и тому подобное.

**БАШҠАЛЫҠ (башҡалығы)** (Р.: отличие; И.: difference; Т.: fark) *и.*

**1.** Айырма, үҙенсәлек. □ Отличие, различие; отличительные свойства. *Фекерҙәр башҡалығы. Эш башҡалығы.* ■ *[Юха йыландың] өс урында башҡалығы барҙыр.* Әкиәттән.

**2.** Айырымлыҡ. □ Отдельность, обособленность. *Милли башҡалыҡ. Хужалыҡ башҡалығы.*

**БАШҠАПСЫҠ I (башҡапсығы)** *и. диал. ҡар.* **башҡунәк.**

**БАШҠАПСЫҠ II (башҡапсығы)** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған бер башҡорт араһының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-кипчаков.

**БАШҠАРАМА** (Р.: передние вязки саней; И.: detail of sledge gear; Т.: kızağın önü) *и. диал.*

Сана табандарының алғы яҡтағы кәкре баштарын тоташтырып торған ҡарама. □ Передние вязки саней. *Сананың башҡарамаһы һынып сыҡты.*

**БАШҠАРҒЫҺЫҘ** (Р.: неисполнимый; И.: impracticable; Т.: yapılamaz) *с.*

Үтә алмаҫлыҡ. □ Неисполнимый. *Башҡарғыһыҙ йөкләмә. Башҡарғыһыҙ эш бирҙеләр.*

**БАШҠАРМА I** [боронғо төрки *башғур* 'өйрәтеү'] (Р.: исполнительный; И.: executive; Т.: yönetim) *с.*

Ҡарарҙарҙы үтәү, туранан-тура етәкселек итеү эшен тормошҡа ашырған *(ойошмаға ҡарата).* □ Исполнительный. *Башҡарма комитет. Башҡарма орган. Башҡарма власть.* ■ *[Алёша:] Беҙҙекеләр башҡарма йортона аҡтарҙы яҡын ебәрмәй «максимка»нан атып яталар... — тип ҡабаланып теҙеп китте.* З. Биишева. *[Әмир Дамирович:] Ошо ситуацияла башҡарма комитет та һыуҙан ҡоро сығырға теләй.* Д. Бүләков.

**БАШҠАРМА II** (Р.: исполнительный орган; И.: executive body; Т.: yönetim kurulu) *и.*

Ҡарарҙарҙы үтәү, туранан-тура етәкселек итеү эшен тормошҡа ашырған ойошма, учреждение. □ Исполнительный орган. ■ *Бына минең ҡулда кантон башҡармаһының ҡарары.* З. Ураҡсин.

**БАШҠАРЫЛЫУ I (башҡарыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **башҡарыу I.** *страд. от* **башҡарыу I.** ■ *Бөтөн эш ҡул көсө менән башҡарыла.* Ә. Хәкимов. *Дивизияны аттар, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү ҙә тулыһынса райондар, колхоз-совхоздар, предприятиелар, айырым кешеләр иҫәбенә башҡарыла.* З. Ураҡсин.

**БАШҠАРЫЛЫУ II** (Р.: управление; И.: government; Т.: yöneltme) *и. лингв.*

Эйәртеүсе һүҙ эйәреүсе һүҙҙең билдәле бер килештә тороуын талап иткән синтаксик бәйләнеш. □ Управление. *Был һүҙбәйләнеш башҡарылыу бәйләнешенә ҡарай.*

**БАШҠАРЫЛЫУСЫ** (Р.: управляемое; И.: determinant; Т.: tamlayan) *с. лингв.*

Эйәреүсе. □ Управляемое. *Башҡарылыусы һүҙ. Был һүҙбәйләнештә башҡарыусы һүҙ менән башҡарылыусы һүҙҙе табығыҙ.*

**БАШҠАРЫП СЫҒЫУ (башҡарып сыҡ-)** (Р.: довести (*дело*) до конца; И.: execute; Т.: başarmak) *ҡ.*

Эште урын-еренә еткереп башҡарыу, атҡарыу. □ Довести (*дело*) до конца; совершить, выполнить. ■ *Генерал-губернатор Перовский Рәсәй императоры ҡуйған бурысты башҡарып сығырға йәне-тәне менән тырышты.* З. Ураҡсин. *[Яубаҫаров:] Әгәр ошо эштәрҙе бөтә ил күләмендә башҡарып сыҡһаҡ, беләһегеҙме ниндәй байлыҡ киләсәк!..* Д. Бүләков.

**БАШҠАРЫУ I (башҡар-)** (Р.: осуществлять; И.: carry out; Т.: gerçekleştirmek) *ҡ.*

**1.** Бойомға ашырыу, үтәү. □ Осуществлять, выполнять. // Осуществление, выполнение. *Бурысты башҡарыу.* ■ *Өйрәнсек үҙ эшен сәғәт теүәллегендә башҡара.* З. Биишева. *Ул малай аҡтығы һине ҡарап, әпәүләп кенә йөрөргә тейеш, ниңә үҙ бурысын башҡармай? — тип үҙен һаман ситкә һөйрәгән ҡыҙыҡайҙы туҡтатты Арслан.* Д. Шәрәфетдинов. *Күрәҙәсе, ҙур эш башҡарған кеше һымаҡ, түр башындағы урындыҡҡа барып ултырҙы.* Я. Хамматов.

**2.** Тамаша өсөн сәнғәт әҫәрен үтәү. □ Исполнять. *Йыр башҡарыу. Роль башҡарыу.* ■ *Полина Сергеевна моңһоу ғына рус романсы башҡарҙы.* Р. Камал.

**БАШҠАРЫУ II (башҡар-)** *ҡ. диал. ҡар.* **башҡаланыу II, 1.** *Ҡалай башҡарып киткәнһең.*

**БАШҠАРЫУСЫ I** (Р.: исполняющий; И.: performer; Т.: yapan) *с.*

**1.** Атҡарыусы, эшләүсе. □ Исполняющий. ■ *Төрлө ваҡ-төйәк эштәрҙе башҡарыусы роботтарҙы иҫәпкә алмағанда, станция-*

*ла Әмиләнең атаһы — станцияның етәксеһе Лайон һәм транспорт карабын йөрөтөүселәр Дукаш менән Баро ғына ҡалған.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** *лингв.* Төп һүҙ. □ Управляющий. *Башҡарыусы һүҙ.*

**БАШҠАРЫУСЫ II** (Р.: исполнитель; И.: performer; Т.: sanatçı) *и.*

Сәнғәт әҫәрен үтәүсе. □ Исполнитель. ■ *Мәҙинәнең йыры, башҡарыусыһының сафлығы, һылыулығы башына киткән Әптеләхәткә хәҙер гармун ғына етмәй.* Т. Ғарипова.

**БАШҠАРЫШЫУ (башҡарыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **башҡарыу**. *взаимн. от* **башҡарыу**. *Өйгә бирелгән эшен башҡарышыу.*

**БАШҠАСА I** (Р.: по-другому; И.: differently; Т.: başka türlü) *р.*

**1.** Башҡа төрлө, икенсе бер төрлө; бүтәнсә. □ По-другому, по-иному, иначе. *Башҡаса йәшәү. Башҡаса йөрөү.* ■ *Хәҙер генә биналар бөтөнләй башҡаса төҙөлә.* Н. Ғәйетбаев. *«Саҡ ҡына сабыр итегеҙ, балаҡайҙарым. Барыһы ла башҡаса буласаҡ», — тип ҡабатлай хәҙер Дилбәр.* Г. Ғиззәтуллина.

**2.** Бынан ары; бүтән. □ Больше. ■ *Зарифа башҡаса ҡабарынманы, шулай ҙа: «Әлләсе...» — тип үҙен яклап ҡалырға тырышты.* Т. Ғарипова. *Шамратов, ирекһеҙҙән генә Ҡәмәрҙе күреп алып, таң ҡалды, башҡаса ҡараштарын да айыра алманы.* Д. Бүләков. *Ауылда башҡаса бындай зат булмаҫ, Хамбал киткәс, бер кем дә иленә, еренә хаслыҡ ҡылып йәшәмәҫ.* Р. Солтангәрәев.

**БАШҠАСА II** *с. ҡар.* **башҡа I.** ■ *Бөтөнләй башҡаса булған ғөрөф-ғәҙәтле яңы кешеләр менән аралашыу башҡорттар араһында донъя көтөүҙең яңы төрҙәре, яңы ғәҙәттәр барлыҡҡа килеүенә килтерә.* М. Өмөтбаев.

**БАШҠА САҠЫРЫУ (башҡа саҡыр-)** (Р.: ежегодное весеннее поминовение предков; И.: annual remembrance (of the dead) in prayer; Т.: her yıl baharda babaları anma töreni) *к. миф.*

Йыл һайын яҙ мәлендә ата-бабаларҙы иҫкә алыу йолаһы. □ Ежегодное весеннее поминовение предков. *досл.* Приглашение на голову. ■ *Әсәйем йыл да башҡа саҡыра торғайны.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАШҠА СЫҒЫУ (башҡа сыҡ-)** *ҡ. этн. ҡар.* **башҡаланыу I.** *Йәш ғаилә башҡа сығып китте.* ■ *Өйләнеп, башҡа сығып, харап байығып киткән Стахан да ҡустыһын ҡабаланмаҫҡа, төшөмлөрәк, абруйлыраҡ хеҙмәт һайларға өгөтләне.* Д. Бүләков.

**БАШ ҠАТЫРҒЫС** *с.*

**1.** *ҡар.* **башватҡыс I.** *Баш ҡатырғыс уйҙар. Баш ҡатырғыс хәл.* ■ *Әллә арыулыҡ алып өлгөрҙөм, әллә юҡ, [Мират] тағы баш ҡатырғыс һорауҙарын яуҙыра башланы.* «Һәнәк», 29 ноябрь 2010.

**2.** Маҙаға тейеүсе, ялыҡтырғыс *(кеше хаҡында).* □ Назойливый, надоедливый, настырный *(о человеке). Баш ҡатырғыс бала.*

**БАШҠОҘА** (Р.: сват; И.: matchmaker; Т.: dünür) *и. этн.*

**1.** Килен әйттерергә барыусы. □ Сват, сваха. *Ҡыҙыбыҙҙы һоратырға башҡоҙалар килеп төштө.* ■ *Их һеҙ, бешмәгән башҡоҙалар! — тигән быға ҡарт, баяғы әйткәс тә белә торған егеттең атаһы.* М. Кәрим.

**2.** Төп ҡоҙа. □ Главный сват *(отец жениха или невесты на свадьбе или старший брат, заменяющий его). Башҡоҙалар ҡунаҡҡа саҡырҙы.*

**БАШҠОР** (Р.: шерстяная тканевая тесьма для закрытия остова юрты; И.: kind of tape for jurt tackle; Т.: çadırın başını örtmek için kullanılan yünlü kumaş bant) *и.*

Тирмәнең сығарағын нығытып бәйләү өсөн бау. □ Шерстяная тканевая тесьма для закрытия остова юрты. *Биҙәү башҡоро. Нығытыу башҡоро.*

**БАШҠОРТ I** [боронғо төрки *башғырт*] (Р.: башкир; И.: Bashkir; Т.: Başkurt) *и.*

Башҡортостандың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе (*төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә*). □ Башкир. *Башҡорт ҡыҙы. Башҡорт теле. Башҡорт аштары. Башҡорт балы. Башҡорт ҡымыҙы. Башҡорт бейеүҙәре. Башҡорт тел ғилеме.*

■ *Өсөнсө класта уҡығанда уҡ, үҙе аш-һыу менән шөғөлләнгән арала, әсәйем башҡорт китаптарын ҡысҡырып уҡыуымды һорай торғайны.* Н. Ғәйетбаев. *Бабич, башҡорт ғаиләһенән сығып, башҡорттар араһында үҫеп, башҡорт халҡының моң, зарын йырлаған һәм шул милләттең хәрәкәтенә ҡатнашып, шул илдә үлгән башҡорт шағиры.* И. Насыри.

**БАШҠОРТ II** (Р.: родовое подразделение башкир; И.: Bashkir tribal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Әй, ирәкте, гәрәй ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Родовые подразделения башкир-айлинцев, ирэктинцев, гарейцев.

**БАШҠОРТ АТЫ** (Р.: башкирская лошадь; И.: Bashkir breed of horses; Т.: Başkurt atı) *и.*

Башҡортостан территорияһында таралған ат төрө (*боронғо осорҙа Азиянан килтерелгән һәм төньяҡ урман ат төрҙәренең ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән*). □ Башкирская лошадь. ■ *Уның Ташлыға килеп йөрөүенең бер оло маҡсаты шул башҡорт аттарын Европаның оҙон ториҡло тоҡомо менән ҡушыуҙа ине бит.* З. Ураҡсин.

**БАШҠОРТ БАЛЫ** (Р.: башкирский мёд; И.: Bashkir honey; Т.: Başkurt balı) *и.*

Башҡортостанда етештерелгән бал. □ Башкирский мёд. ■ *Башҡорт балы Америкала, Японияла һәм Европа илдәрендә бик популяр.* «Башҡортостан», 6 февраль 2010.

**БАШҠОРТЛАШЫУ (башҡортлаш-)** (Р.: обашкириться; И.: turn Bashkir; Т.: Başkurtça konuşmaya başlamak) *ҡ.*

Теле менән башҡортҡа әйләнеү. □ Обашкириться. ■ *Ырыу башлығы Мәмбәт — сығышы менән ҡаҙаҡ. Әммә ул кесе йәштән үк башҡорттар араһында йәшәй һәм уның нәҫел-нәсәбе тулыһынса башҡортлашып, кеүәтле үҫәргән ырыуының бер өлөшөнә әүерелә.* Риүәйәттән.

**БАШҠОРТЛОҠ (башҡортлоғо)** (Р.: башкирский дух; И.: Bashkir essence; Т.: Başkurt olmak durumu) *и.*

Милләте һәм рухы менән башҡорт булыу. □ Башкирский дух. ■ *[Хөкөм эйәһе:] Һин ситтә күп йөрөп, башҡортлоҡ хоҡуғыңды юғалтҡанһың, шуның менән бергә үҙеңә тәғәйен ергә булған хаҡыңды ла юйғанһың.* З. Ураҡсин. *Ситтәр тарафынан үҙҙәренең ҡыҫыла башланыуына түҙеме ҡалмаған урындағы халыҡ, борондан ҡалған ғәҙәт буйынса, башҡортлоғомдо онотмағанмын әле, тип сәмләнеп, илемде ат ҡороғо менән булһа ла ҡурсалармын тип, яуға сыҡты.* Р. Насыров.

**БАШҠОРТ ОСО** (Р.: название родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан, көнсығыш Татарстан ауылдарында таралған башҡорт сығышлы ара-нәҫелдәр исеме. □ Названия родовых подразделений северо-западных башкир и башкир восточного Татарстана.

**БАШҠОРТСА** (Р.: по-башкирски; И.: in Bashkir; Т.: Başkurtça) *р.*

**1.** Башҡорт телендә. □ По-башкирски (*касательно языка*). *Башҡортса белеү. Башҡортса уҡыу. Башҡортса һөйләү. Башҡортса йырлау.* ■ *Тәне эҫеле-һыуыҡлы булып, Ирназар ҡысҡырып ебәрә яҙҙы: тыштағы тимер юлсылар башҡортса һөйләшәләр ҙә баһа!* Ә. Хәкимов.

**2.** Башҡорттар кеүек, башҡорт халҡына хас. □ По-башкирски. *Башҡортса бейеү. Башҡортса кейенеү.* ■ *Бары башҡортса ғына гөжләй төҫлө ул иңкештәре, башҡортса ғына моңлана ҡоштары, үләндәре лә шул ерҙә генә үҫә, башҡортса ғына бәүелә.* Р. Камал. *Йә, Алтын, быларға башҡортса күрәшергә өйрәт әле! — тиер ине бер төрлө әрелек менән.* З. Ураҡсин.

**БАШҠОРТСАЛАП** (Р.: по-башкирски; И.: in Bashkir; Т.: Başkurtça) *р.*

Башҡортса. □ По-башкирски (*об ответе, разговоре, речи*). *Башҡортсалап яуап биреү. Башҡортсалап уҡыу.*

**БАШҠОРТСАЛАТЫП** (Р.: по-башкирски; И.: in Bashkir on purpose; Т.: Başkurtça) *р.*

Башҡортсаға әйләндереп *(әйтеү, яуап биреү).* □ По-башкирски (*об ответе*). *Башҡорсалатып әйткән булды.*

**БАШҠОРТСАЛАШТЫРЫУ (башҡортсалаштыр-)** (Р.: переводить на башкирский язык; И.: translate into Bashkir; Т.: Başkurtçaya çevirmek) *к.*

Башҡорт теленә әйләндереү. □ Переводить на башкирский язык. *Рус фильмын башҡортсалаштырыу. Башҡортсалаштырып әйтеү.*

**БАШҠОРТ СЕЙӘҺЕ** (Р.: сорт, башкирский подвид степной вишни; И.: wild Bashkir cherry; Т.: Başkurt vişnesi) *и. бот.*

Яланда үҫкән сейә сорты. □ Сорт, башкирский подвид степной вишни. *Башҡорт сейәһен йыйыу. Башҡорт сейәһен ҡайнатыу.*

**БАШҠОРТ СОЛОҠ ҠОРТО** (Р.: башкирская бортевая пчела; И.: original bashkir bee species; Т.: Başkurt arıları) *и.*

Башҡортостанда йәшәгән ҡырағай бал ҡорттары тоҡомо. □ Башкирская бортевая пчела. *Башҡорт солоҡ ҡортон үрсетеү эше менән Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының Ағиҙел филиалы шөғөлләнә.*

**БАШҠОРТ ТӨБӘГЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adi) *и. этн.*

Ҡаңны ырыуына ҡараған бер башҡорт араһының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-канглинцев.

**БАШҠОРТ ТӨЛКӨҺӨ** (Р.: лиса с тёмной брюшиной; И.: Bashkir fox species; Т.: tilki türü) *и. зоол.*

Ҡара бауыр төлкө. □ Лиса с тёмной брюшиной.

**БАШҠОРТ УРАМЫ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған бер башҡорт араһының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-кипчаков.

**БАШ ҠОҪОУ (баш ҡоҫ-)** (Р.: колоситься; И.: be in the ear; Т.: başak bağlamak) *к.*

Башаҡ ебәреү *(игенгә ҡарата).* □ Колоситься, давать колос. *Бойҙай баш ҡоҫто. Әсәйем игендәр баш ҡоҫҡан саҡта кейәүгә барған.*

**БАШҠУЛЛАЙ** *р. диал. ҡар.* **бөтөнләйгә.**

**БАШЛАМ** *и. ҡар.* **башланыш.**

**БАШЛАНҒЫС I** [боронғо яҙма төрки *башла-*] (Р.: начало; И.: beginning; Т.: başlangıç) *и.*

**1.** *Ниҙелер* башлап ебәргән нәмә. □ Начало, исток. *Тормош башланғысы. Фән башланғыстары.* ■ *Һәр файҙалы эште яҡларға, бәләкәйме, ҙурмы, һәр яңылыҡтың башланғысын тоя белергә кәрәк.* М. Тажи.

**2.** *Ниндәйҙер* өлкәлә башланған яңы эш. □ Начинание, почин. *Бәрәкәтле башланғыстар. Завод эшселәренең башланғысын өйрәнеү. Башланғысты күтәреп алыу.*

**БАШЛАНҒЫС II** [боронғо яҙма төрки *башлау*] (Р.: начальный; И.: initial; Т.: baş) *с.*

*Ниҙеңдер* башы, беренсе баҫҡысы булған. □ Начальный, первоначальный. *Башланғыс белем. Башланғыс мәктәп.*

**БАШЛАНДЫРЫҠ (башландырығы)** (Р.: палочка, при помощи которой основа нити прикрепляется к пришве; И.: kind of stick used in weaving; Т.: dokumacılıkta kullanılan değnek türü) *и. туҡ.*

Киндер башлағанда, буйлыҡ ептәрҙең осон элеп, борғосаға беркетеп тора торған таяҡ. □ Палочка, при помощи которой основа нити прикрепляется к пришве *(в домашнем ткачестве).*

**БАШЛАНСЫҒАҒАС** *и. туҡ. диал. ҡар.* **башландырыҡ.**

**БАШЛАНЫУ (башлан-)** (Р.: начинаться; И.: begin; Т.: başlanmak) *к.*

**1.** Ғәмәлләшә башлау. □ Начинаться, наступить, наставать. // Начало. *Бәйге башланды. Буран башланды. Ҡыш башланды. Эш башланды.* ■ *Күҙен томалаусы дүңгәләктәр әкренләп юғала, ҡарашы яҡтыра башланы, быуындарына көс ҡайтҡандай булды.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ғәмәл алыу. □ Начинаться, брать начало. // Начало. *Ағиҙел Уралдан башла-*

*на.* ■ *[Алып менән Барсындың] ете улынан ете башҡорт ырыуы башланып киткән, ти.* Әкиәттән.

**3.** Тотона башлау. □ Начать пользоваться. *Башланған икмәк. Башланған май. Башланған дәфтәр.* ■ *Ул [Яҡуп] башланған эшен бер ни тиклем ослап ҡуйырға булды.* М. Кәрим. ● *Башланған эш — бөткән эш.* Мәҡәл.

**БАШЛАНЫШ** (Р.: начало; И.: origin, beginning; Т.: başlangıç) *и.*

**1.** *ҡар.* **башланғыс I, 1.** ■ *Уйлана, аңламай Искәндәр, бармы был донъяның сығанағы, башланышы?* Ә. Хәкимов.

**2.** *әҙ.* Халыҡ ижады һәм әҙәби әҫәрҙә инеш өлөшө, башы. □ Зачин. *Йыр башланышы. Бәйет башланышы.* ■ *«Мукәй кантон» әҫәрендә бәйеттәргә хас .. традицион башланыш бөтөнләй юҡ.* Ғ. Ҡунафин.

**БАШЛАП I** (Р.: сперва; И.: at first; Т.: başlangıçta) *р.*

**1.** Беренсе булып, иң элек; тәүҙә. □ Сперва, сначала. ■ *[Таңһылыу:] Тәүҙә үҙҙәре башлап ҡастылар ҙа, хәҙер көләләр.* М. Буранғолов. *Икәүҙән-икәү шул ерҙә башлап ғүмер иткән, ти.* «Урал батыр».

**2.** Беренсе ҡат, тәүге тапҡыр. □ Первый раз. *Башлап осрашыу.* ■ *Моратов менән Саюшев — байтаҡтан бирле таныштар. Ләкин улар хәҙер нисек башлап танышыуҙары тураһында һүҙ ҡуҙғатмай.* Н. Мусин.

**БАШЛАП II** (Р.: от; И.: from; Т.: ...dan) *бәйл.*

Сығанаҡ килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, *ниҙеңдер* башланғыс сиген белдерә. □ От, с. *Иртәнән башлап кискәсә.* ■ *[Зифа:] Рәхмәт һиңә, партизан!.. Мин — бөгөндән башлап үҙемдең яратҡан эшемдә!* Н. Мусин. *[Әхмәтгәрәйҙең] атаһы, атаһының атаһы, тағы нисәмә быуын олаталары, Балапан исемле боронғо бабаларынан башлап, илдә риүәйәт итеп һөйләрлек данлыҡлы мәргән булғандар.* Ә. Хәкимов.

**БАШЛАП БАРЫУСЫ I** (Р.: направляющий; И.: guiding; Т.: yol gösteren) *с.*

Алдан барыусы, үҙ артынан әйҙәүсе, эйәртеүсе. □ Направляющий. ■ *Полк 1942 йылдың 12 апрелендә фронтҡа китә. Күп хәл иткес алыштарҙа ҡатнаша һәм һәр ваҡыт маршта башлап барыусы отряд итеп тәғәйенләнә.* «Йәншишмә», 10 декабрь 2010.

**БАШЛАП БАРЫУСЫ II** (Р.: направляющий; И.: guide, directing; Т.: yol gösterici) *и.*

**1.** *хәрб.* Хәрби төркөмдөң алдында барыусы һалдат. □ Направляющий. *досл.* Тот, кто идёт впереди, начинает. *Отрядтың башлап барыусыһы билдәләнелде.*

**2.** *Ниндәйҙер* төркөмдөң башында тороусы, сәйәси, ижтимағи, сәнғәт һ. б. ағымдарҙы башлап ебәреүсе, етәкләүсе кеше йәки төркөм. □ Предводитель, лидер. ■ *«Башҡорт» этнонимының этимологик йөкмәткеһен, мәғәнәһен Ә. Бейешев «башлап барыусы» тип аңлата.* М. Зәйнуллин.

**БАШЛАТЫУ (башлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **башлау.** *понуд. от* **башлау.** *Эш башлатыу. Башҡорттарҙа йәш килендән һыу башлатыу йолаһы бар.*

**БАШЛАУ I (башла-)** [боронғо төрки *башла-*] (Р.: начинать; И.: start; Т.: başlamak) *ҡ.*

**1.** Эш-хәлгә билдәле бер урындан, билдәле бер ваҡытта тотоноу; керешеү. □ Начинать, приступать. // Начало. *Эш башлау. Яңынан башлау.* ■ *Харис уға шундай яратып, айырым бер наҙ менән ҡарап ултыра: «Башлап китер өсөн мин һиңә аҡса бирермен. Барып урынлашыу менән, банкта иҫәп асырһың да шунда күсерермен».* Г. Ғиззәтуллина. *Ер-һыу кибә башлау менән Бохара, Хиуа яҡтарынан каруандар киләсәк, уларҙың тауарына складтарҙы бушатып, үҙҙәренә алмашҡа тейәтергә ағас-таҡта, он, бойҙай, ярма кеүек нәмә әҙерләтергә кәрәк.* З. Ураҡсин.

**2.** Эш-хәрәкәтте ғәмәлләштерергә керешеү. □ Начинать, начать. // Начало. *Йыйылышты башлау. Мәҡәләне башлау. Йыр башлау.* ■ *Миша укшый башланы, бөтөн ағзаларын тартышыу тетрәтте. Ике-өс минут уҙҙымы, юҡмы, аяҡтары һуҙылды, йөҙөндәге һыҙланыу билдәһе юғалып, сырайы яҡтырып киткәндәй булды.* Ә. Хәкимов.

**3.** Аҙыҡ-түлекте, көнкүреш тауарҙарын һ. б. тотонорға, ҡулланырға керешеү. □ Приступать к употреблению, к использованию *чего.* // Употребление, использование. *Тоҡтағы шәкәрҙе башлау. Тәпәндәге балды башлау. Ондо башлау.*

**4.** Хәл ҡылымдың *-а/-й* формаһындағы һүҙ менән килеп, эш-хәрәкәттең башын белдерә. □ С деепр. на *-а/-й* основного гл. выступает в роли вспомогательного гл. и означает начало действия. *Тора башлау. Уйлай башлау. Килә башлау. Ала башлау. Яҡтыра башлау. Һораша башлау.* ● *Ҡоштар берҙәм осоп китә башлаһа, ҡыш ҡаты килә.* Һынамыш.

**5.** *инф.* Файлды, документты һ. б. асыу, компьютерҙа ниндәйҙер программаның эшләүен тәьмин итеү. □ Открыть, запустить. // Открытие, запуск.

**БАШЛАУ II (башла-)** (Р.: пришивать голенище сапог к головкам; И.: sew top of a boot up; T.: çizme başına konç dikmek) *ҡ. диал.*

Итектең ҡунысын баш яғына тегеү, баш һабыу. □ Пришивать голенище сапог к головкам. *Итек башлау.*

**БАШЛАУ III** (Р.: исток; И.: river head; T.: kaynak) *и. диал.*

Йылға башы. □ Исток *(реки). Йылға башлауында ҡоҙоҡ бар.*

**БАШЛАУСЫ** (Р.: начинающий; И.: beginner; T.: acemi) *и.*

*Ниндәйҙер* эшкә башлап тотоноусы кеше. □ Начинающий *(дело),* начинатель. ■ *Сатырға йөҙ – йөҙ илле аҙым ҡалғанда, оҙон буйлы, алыптай кәүҙәле һағауылдар илселәрҙе йәһәт кенә теҙтеп сыҡты, ә теге юл башлаусы, сак телгә килеп. Аҡһаҡ Тимергә ҡайһылай мөрәжәғәт итергә, нисек хөрмәт күрһәтергә кәрәклеген аңлатырға керешә.* Ә. Хәкимов. ● *Башлаусыһы булһа, кеүәтләүсеһе табыла.* Мәҡәл.

**БАШЛАУҺЫҘ** (Р.: неначатый; И.: not begun; T.: başlanmamış) *р. диал.*

Башланмаған. □ Неначатый. *Бейәләй бәйләргә кәрәк, һаман башлауһыҙ ята.*

**БАШЛАШ I** (Р.: смежный; И.: contigent; T.: bitişik) *с.*

**1.** Эргәләш. □ Смежный *с чем-л.* ■ *Урманға башлаш бойҙайым ҡыуаҡ менән бер тигеҙ.* Таҡмаҡтан.

**2.** Бер сығанаҡлы *(йылғаға ҡарата).* □ С общим источником *(о реке). Нәмәҙ Инйәр менән башлаш.*

**БАШЛАШ II** (Р.: соприкасаясь головами; И.: nearby; T.: başlarıyla dokunarak) *р. диал.*

Йәнәш, башын башҡа ҡуйып. □ Рядом, соприкасаясь головами, в одну сторону. *Башлаш йоҡланыҡ. Башлаш күккә ҡарап яттыҡ.*

**БАШЛАШЫУ (башла-)** *ҡ. урт. ҡар.* **башлау.** *взаимн. от* **башлау.**

**БАШЛЫ** [боронғо төрки *башлыҡ* 'башы булған'] (Р.: имеющий голову; И.: possessing a head; T.: başlı) *с.*

**1.** Башы (1–6) булған. □ Имеющий голову, головку, с головкой. *Ике башлы таяҡ. Башлы һуған.* ■ *Илле йәштәр тирәһендәге, тәбәнәк буйлы, ҙур башлы, ҡаланың һатыу итеү селтәрҙәре директоры Бәкерҙе асыулы ҡаршыланы.* Н. Ғәйетбаев. *Бөтәһе лә үҙ урынында һымаҡ, тик ишек төбөндәге ялтыр башлы тимер караҙат, ҙур булмаған этажерка һәм ундағы китаптар ғына йорт эсен боҙоп торған төҫлө ине.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Түбәле, ҡыйыҡлы. □ С крышей. *Ҡыҙыл башлы йорт.* ■ *Күк көмбәҙе кеүек түңәрәк түбәле башҡорт тирмәләренән ары осло башлы ҡаҙаҡ тирмәләре ҡалҡып сыҡҡан.* З. Ураҡсин. *Тимер башлы был мөһабәт биналар торлаҡтарҙан ярайһы алыҫта урынлашҡ[ан].* Г. Яҡупова.

**3.** *күсм.* Аҡылға бай; аҡыллы. □ Умный, сообразительный; башковитый. *Башлы бала. Башлы кеше.*

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ** (Р.: женатый; И.: married; T.: evli) *с.*

Өйләнгән. □ Женатый, семейный; имеющий семью. *Улым башлы-күҙле инде.*

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ БУЛЫУ (башлы-күҙле бул-)** (Р.: обзавестись семьёй; И.: settle down to married life; Т.: evlenmek) *к.*

Ғаиләле булыу, өйләнеү. □ Обзавестись семьёй; жениться, выйти замуж. // Женитьба, замужество. ■ *Башлы-күҙле булғанһыңдыр инде, ҡәйнеш, был йәшеңә саҡлы яңғыҙ-ярты йөрөмәйһеңдер.* З. Ураҡсин. *Азамат артынан уның ҡусты-һеңлеләре донъяға килер. Тупылдашып үҫерҙәр, ваҡыттары еткәс, башлы-күҙле булырҙар.* Ә. Хәкимов.

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ ИТЕҮ (башлы-күҙле ит-)** (Р.: женить; И.: marry off; wed; Т.: evlendirmek) *к.*

Ғаиләле итеү. □ Женить, выдать замуж. ■ *[Әсәһе — Әхмәткә:] Барын да өйләндерҙем, инде һине башлы-күҙле итһәк, түйыңды күрһәк, .. бик шатланыр инек.* Ғ. Хәйри.

**БАШЛЫҠ I (башлығы)** [боронғо төрки *башчы* ‘түрә, башлыҡ’] (Р.: начальник; И.: chief; Т.: başlık) *и.*

Берәй төркөмгә, хужалыҡҡа етәкселек итеүсе; етәксе. □ Начальник; предводитель, глава; старший; руководитель. ■ *Салауаттың өс ыҫпай һыбайлыһы, байраҡ елберләтеп, Пугачёв армияһы ҡаршыһына юрттырып килде, башлыҡтары Салауат Юлаевтың хөрмәтле батшаны көтөүен, ғәскәрҙе уға ҡушыуын хәбәр итте.* Ғ. Хөсәйенов. *Әпшәндә уҡыған кешенең ҡәҙере юҡ шул. Колхоз башлығы үҙе килмешәк булғас...* Р. Камал. *Тау уйыны ваҡытында бикбауҙыҡылар бында башлыҡ булып йөрөй.* Р. Солтангәрәев. *Әсмән: Йәнгилде бөрйән ырыуы башлығы булғас, Үтәғол ағай толка тапмай йөрөп ята әле.* М. Буранғолов. ● *Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул.* Мәҡәл.

**БАШЛЫҠ II (башлығы)** (Р.: шапка; И.: cap; Т.: şapka) *и.*

**1.** Еңел баш кейеме. □ Шапка. *Бұҫтау башлыҡ. Бәйләнгән башлыҡ. Йөн башлыҡ. Башлығыңды һалып ин.* ■ *Ҡыҙҙарыма башлыҡ бәйләргә булдым әле, — тип ябай ғына хәбәр итте [Людмила].* М. Кәрим.

**2.** Өҫ кейеменә ҡуша тегелгән баш кейеме. □ Капюшон. *Пальто башлығы. Плащ башлығы.* ■ *Ямғыр ныҡлап яуа башлаған. Бабай башлыҡлы плащын кейергә булған. Башлығын кейә алмай икән.* Көләмәстән.

**БАШЛЫҠ III (башлығы)** (Р.: сетка пчеловода; И.: anti bee mesh; Т.: arıcı maskesi) *и. диал.*

Ҡортсоларҙың башын һәм муйынын бал ҡорттарынан һаҡлаусы эшләпә менән селтәрҙән торған битлек, күҙлек. □ Сетка пчеловода *(для защиты от пчёл). Күрше бабай, башлыҡ кейеп, ҡус айырырға сыҡты.*

**БАШЛЫҠ IV (башлығы)** (Р.: застёжка ремешка; И.: belt buckle; Т.: kemer tokası) *и. диал.*

Ҡайыш осон беркетеп ҡуя торған сыңға. □ Металлическая застёжка ремешка. *Ҡайыш башлығы. Тимер башлыҡ.*

**БАШЛЫҠ V (башлығы)** *и. диал. ҡар.* **башкүнәк.**

**БАШЛЫҠ ИТЕҮ (башлыҡ ит-)** (Р.: избрать начальником; И.: elect the chief; Т.: baş seçmek) *к.*

Берәй төркөмгә етәксе, башлыҡ итеп һайлау. □ Избрать начальником, предводителем, главой, руководителем. ■ *Полиция идараһына башлыҡ итеп ҡуйғандар, — тине лә Нефёдыч, Рамаҙанға өндәште: «Ҡана, эйәрсендәренең ҡағыҙҙарын күрһәт командирға».* Ә. Хәкимов.

**БАШЛЫСА I** [төрки] (Р.: преимущественно; И.: mainly; Т.: başlıca) *р.*

Күпселек осраҡта, нигеҙҙә. □ Преимущественно, большей частью, в основном. ■ *[Һабрау:] Һеҙҙең шағирҙар иһә башлыса ғишыҡ-мөхәббәт, гөл дә былбыл тураһында көйләй.* Я. Хамматов.

**БАШЛЫСА II** (Р.: главным образом; И.: mainly; Т.: başlıca) *мөн.*

Күбеһенсә, нигеҙҙә. □ Главным образом, в основном. ■ *Элек-электән Йөҙиишмә райондың ғорурлығы була килде. Сөнки район, башлыса, урмансылыҡ, ҡортсолоҡ һәм малсылыҡ менән шөғөлләнә.* Д. Бүләков.

**БАШЛЫ ҺУҒАН** (Р.: репчатый лук; И.: onions; Т.: soğan) *и.*

Баҡсала үҫтерелгән ябай һуғандың баш өлөшө. □ Репчатый лук. *Башлы һуғанды ашҡа тураны. Турамаға башлы һуған турау.*

**БАШЛЫ ШӘКӘР** (Р.: сахар комовой; И.: large piece sugar; Т.: iri şeker) *и. диал.*

Эре киҫәкле шәкәр. □ Сахар комовой. *Баҙарҙан башлы шәкәр һатып алдылар.*

**БАШМА-БАШ** (Р.: баш на баш; И.: on equal terms; Т.: başabaş) *р.*

Бер-беренә бәрәбәр, өҫтәүһеҙ, түләүһеҙ. □ Баш на баш, штука за штуку. *Башма-баш алмашыу. Башма-баш биреү.*

**БАШМАҠ I (башмағы)** [боронғо ҡыпсаҡ *башмак* 'баш мал итеп ҡаралған быҙау'] (Р.: бычок; И.: heifer, calf; Т.: dana) *и.*

Ярты йәштән алып йәш ярымға тиклемге һыйыр малы. □ Бычок или тёлка *(от полугода до полутора лет).* ■ *Көтөүсе башмаҡтарын Оҙонталға ҡыуаланы.* Р. Камал. *Шунан һуң, ҙур ағас табаҡҡа һалып тыштан индергән башмаҡтан ҡалған үпкәбауыр, ҡарыны эргәһенә теҙләнеп, [күрәҙәсе] ниҙер уҡып өшкөрҙө.* Я. Хамматов.

**БАШМАҠ II (башмағы)** [көнбайыш төрки *башмак* 'аяҡ кейеме'] (Р.: башмак; И.: shoe; Т.: pabuç) *и.*

Ҡунысһыҙ күн аяҡ кейеме. □ Башмак *(обувь). Башмаҡ кейеү.* ■ *Әсхәпъямал, нурың арта сәскап менән, ынйы теҙгән кесерәк кенә ҡалпаҡ менән, һин окшайһың күлдә йөҙгән аҡкоштарға, йөрөгәндә аҡ күлдәк, аҡ башмак менән.* Ш. Бабич.

♦ **Башмағы аҫтында** ҡул аҫтында (*тотоу*). □ Под башмаком *кого (в полном подчинении). Башмағы аҫтында тотоу.*

**БАШМАҠ III (башмағы)** (Р.: родовое подразделение башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Тамъян, ҡумрыҡ-табын, ҡаңлы, ямаш ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Родовые подразделения башкир племён тамьян, кумрык-табын, канглы, ямаш.

**БАШМАҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **башмаҡ I.**

**БАШМАҠ ҠАТА** (Р.: неглубокие галоши; И.: kind of rubbers for everyday use; Т.: derin olmayan galoş) *и. диал.*

Әрһеҙгә кейә торған тәпәшәк калуш. □ Неглубокие галоши для повседневной носки. ■ *Һәүеҙә, иренең ят кеше алып килеүен күреп, яланғас аяғына башмаҡ ҡатаһын эләктерҙе.* Я. Хамматов.

**БАШМАҠ МАЙЫ** (Р.: масло от повторного топления накипи масла; И.: sort of butter; Т.: yağ türü) *и. диал.*

Майҙың туртаһын йыйып, ҡабаттан иретеп алған май. □ Масло от повторного топления накипи масла. *Башмаҡ майына бешереү.*

**БАШМАҠ САБАТА** (Р.: лапти; И.: bast shoe; Т.: köylü pabucu) *и. диал.*

Йомро башлы сабата. □ Лапти с округлённой головкой. *Башмаҡ сабата үреү.* ■ *Башмаҡ сабатаһын кейеп бейейҙәр инде.* Экспедиция материалдарынан.

**БАШМАҠ САРМА** (Р.: мешок из телячьей шкуры; И.: sack made of calf skin; Т.: buzağı derisinden torba) *и.*

Быҙау тиреһенән тегелгән тоҡ. □ Мешок из телячьей шкуры шерстью наружу. *Башмаҡ сарма тегеү. Башмаҡ сармаһы тишелгән. Башмаҡ сармаһын яурынына аҫҡан.*

**БАШМАҠСЫ** (Р.: башмачник; И.: shoemaker; Т.: ayakkabıcı) *и.*

Башмаҡ тегеүсе. □ Башмачник. ■ *Маҡтаныуҙың ир-егет асылын биҙәмәүлеген белмәйме ни ул. Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың, ти.* С. Поварисов.

**БАШМАҠ ТАНА** *и. диал. ҡар.* **башмаҡ I.**

**БАШМАҠ ҺЫЙЫР** (Р.: тёлка, отелившаяся до трёх лет; И.: heifer under three years of age; Т.: düve) *и.*

Өс йәше тулмаҫ борон быҙаулаған һыйыр малы. □ Тёлка, отелившаяся не достигнув трёхлетнего возраста. *Күрше әбей башмаҡ һыйырын юғалтҡан.*

**БАШМАН** (Р.: большая деревянная чаша; И.: large wooden bowl; Т.: büyük ağaç kase) *и. диал.*

Ағас һауыт. □ Большая деревянная чаша. *Бал ҡарау өсөн башман йөрөтәбеҙ.*

**БАШ МЕЙЕҺЕ** (Р.: головной мозг; И.: brain; Т.: beyin) *и.*

Баш һөйәге ҡыуышлығында урынлашҡан үҙәк нервы системаһы ағзаһы. □ Головной мозг. *Баш мейеһе һелкенгән. Баш мейеһен тикшерҙеләр.* ■ *Барабандың ҡарт ҡоҙғон кеүек ғоңғолдауы, күңелде сирҡандырып, үтмәҫ бырау менән баш мейеһен быраулай...* Ф. Яңышев. *Әүхәт ағай әйтеүенсә, ысын икән: йөрәк — бер йоҙроҡ, ә баш мейеһе ике йоҙроҡ ҙурлыҡта, ти.* Г. Яҡупова.

**БАШ МӘҠӘЛӘ** (Р.: передовая статья; И.: leading article; Т.: baş makale) *и.*

Гәзәтә-журналдың йәки китаптың алдында бирелгән төп мәҡәлә. □ Передовая статья, передовица. *Баш мәҡәләне уҡып сыҡтым. Баш мәҡәлә яҙырға ҡуштылар.*

**БАШНЯ** [рус.] (Р.: башня; И.: tower; Т.: kule) *и.*

**1.** Айырым итеп йәки йортҡа ҡушып һалынған бейек тар ҡоролма. □ Башня. *Кремль башняһы. Телевизион башня.*

**2.** Караптың, танкының түп ултыртылған әйләнмәле ҡалпағы. □ Башня. *Танк башняһы.*

**БАШОЙОҠ (башойоғо)** *и. диал. ҡар.* **башай II, 1.** *Башойоҡҡа йөн иләү. Башойоҡ башлау.*

**БАШ ОСО** (Р.: изголовье; И.: head of the bed; Т.: başucu) *и.*

Кешенең башы эргәһендәге урын. □ Изголовье. *Баш осонда тороу.* ■ *Әллә, мин әйтәм, әсәйемдең баш осона берәй ҡайын ҡилтереп ултыртабыҙмы?* Н. Мусин. *Бына шундай атайҙың баш осона таш ултыртып, ҡәберен кәртәләп ҡуйырға ла ваҡыт тапҡан юҡ бит .. Һуғыш та һуғыш.* З. Биишева. *Баш осомда минең ултыртҡандар ҡайғыһы аҡ булған аҡ ҡайын.* Р. Ғарипов.

**БАШ ӨТӨҮ (баш өт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыҙ ҡушыу.**

**БАШ САЙҠАУ (баш сайҡа-)** (Р.: качать головой; И.: nod one's head; shake one's head; Т.: baş sallamak) *ҡ.*

Ыңғай йәки кире мәғәнәне белдереп баш һелкеү. □ Качать головой. ■ *Көтмәгәндә башына килгән был татлы хыялдан көлөмһөрәп, Хаммат баш сайҡап ҡуйҙы.* З. Биишева. *«Ҡасырһың былардан», — ти бер әсир, ҡайғылы төҫтә баш сайҡап.* Ә. Хәкимов.

**БАШ СҮМЕСЕ** (Р.: бугорок затылочной кости; И.: cervical bone promunence; Т.: oksipital kemik) *и. диал.*

Соңҡа. □ Бугорок затылочной кости. *Баш сүмесе менән ишек яңағына бәрелде. Баш сүмесе һыҙлап тора.*

**БАШСЫ** *и. ҡар.* **юлбашсы.** ■ *Ҡыҙғаныусан йәш йөрәк үйыңа башсы булһын.* «Урал батыр».

**БАШТА** (Р.: сначала; И.: at first; Т.: öncelikle) *р.*

Иң элек, тәүҙә. □ Сначала, сперва, вначале; раньше, прежде. ■ *[Солтан:] Мин дә бит башта, отрядҡа ҡыҙҙарҙы алмайыҡ, улар имгәк кенә булырҙар, тинем.* Ш. Бикҡол. *Кейеҙбай башта, ярты юлды үткәнсе, артта ҡалыбырак барҙы, шунан бөтәһен дә уҙып китеп, майҙанға беренсе булып килеп инде.* Әкиәттән.

**БАШТАҒЫ I** (Р.: находящийся в голове; И.: present in one's head; Т.: baştaki) *с.*

Башта булған. □ Находящийся в, на голове. *Баштағы уйҙар.* ■ *Туп атҡанда, аттар башын эйәләр. Беҙҙең баштағы ҡасҡаға пулялар килеп тейәләр.* Бәйеттән.

**БАШТАҒЫ II** (Р.: начальный; И.: initial; Т.: ilk) *с.*

Беренсе, тәүге, алдағы. □ Начальный, первый, первоначальный. *Баштағы осор.* ■ *Иҙел күрмәй — итек сисмә, ҡыҙым, — Фәүзиә инде баштағы уҫаллығын ҡуйғайны. — Туғыҙ ай буйы йөрәгең аҫтында йөрөгән сабый үҙенәнүҙе яратты ра ул.* Т. Ғарипова.

**БАШТАЙ БАРМАҠ (баштай бармағы)** *и. диал. ҡар.* **баш бармаҡ.**

**БАШТАҠ I** *с. диал. ҡар.* **башбаштаҡ.** *Баштаҡ булыу.*

**БАШТАҠ (баштағы) II** (Р.: балагур; И.: joker; Т.: baştak) *и. диал.*

**1.** Шаян кеше. □ Балагур. *Баштаҡ малай. Баштаҡ кейәү.*

**2.** Уйында ла, эштә лә алда йөрөүсе кеше. □ Инициатор, зачинщик, подстрекатель. *Ул һәр ваҡыт баштаҡ булды.*

**БАШТАҠЛАНЫУ (баштаҡлан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **тәртипһеҙләнеү.**

**БАШТАН** (Р.: сначала; И.: initially; Т.: baştan) *р.*

**1.** Башынан, иң әүәлдән, иң тәүҙән. □ Сначала. ■ *Фатима хәлде баштан төшөп һөйләргә кереште.* Б. Бикбай. *Тимаш баяр менән низағта булған ауылдар баштан уҡ кирегә һуға башланы.* З. Ураҡсин.

**2.** *Нимәгәлер* тиклем, алдан. □ Предварительно, заранее. *Баштан әйтеп ҡуйырға кәрәк ине.*

**БАШТАН-АҘАҠ** *р. ҡар.* **баштан-аяҡ 3.**

**БАШТАН-АХЫР** *р. ҡар.* **баштан-аяҡ 3.**

**БАШТАН-АЯҠ** (Р.: с ног до головы; И.: from head to foot; Т.: tepeden tırnağa kadar) *р.*

**1.** Баштан аяҡҡа тиклем; тотош. □ С ног до головы. *Баштан-аяҡ бысраныу.* ■ *Тегеләр майлы күҙҙәрен йылтыратып, ҡатынды баштан-аяҡ ҡарап сыҡтылар.* З. Биишева. *Башлыҡ Якупты тағы бер ҡат баштан-аяҡ һынап, тикшереп сыҡты.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Бөтә булмышы менән; бөтөнләй. □ С головой. *Баштан-аяҡ эшкә сумыу.*

**3.** Баштан аҙаҡҡа тиклем; тотош. □ От начала до конца; целиком, полностью. *Мәҡәләне баштан-аяҡ күҙҙән үткәреү. Хәбәрҙе баштан-аяҡ һөйләү. Тәҡдимгә баштан-аяҡ риза булыу.* ■ *Хасбулат олатайҙың хикәйәтен баштан-аяҡ уйлап сығам.* З. Биишева.

♦ **Баштан-аяҡ ҡоралланыу** бик ныҡ ҡоралланыу. □ Вооружаться с ног до головы.

**БАШТАН БАШЛАП** (Р.: сначала; И.: firstly; Т.: baştan) *р.*

Баштан. □ Сначала. *Баштан башлап шулай ине.*

**БАШТАН-ТАБАН** *р. диал. ҡар.* **баштан-аяҡ.** *Баштан-табан кейендереп ҡайтарҙы.*

**БАШТАНЫУ (баштан-)** (Р.: образовывать головку; И.: formation of an onion; Т.: başlanmak) *ҡ. диал.*

Баш яһалыу *(кәбеҫтә, һуғанға ҡарата).* □ Завязываться, завязаться, образовывать головку *(о луке, капусте). Кәбеҫтә баштана. Баштанған һуған.*

**БАШТАҢҠЫУ (баштаңҡы-)** (Р.: организовать посиделки; И.: arrange a village gathering; Т.: parti yapmak) *ҡ. диал.*

Аулаҡ өй ойоштороу. □ Организовать посиделки. // Посиделки. *Әйҙә, беҙҙә баштаңҡып алайыҡ әле. Баштаңҡып ултыралар.*

**БАШТАҢЫУ (баштаңы-)** (Р.: чаепитие после проводов; И.: tea drinking after seeing off; Т.: birisini uzun yola geçirdikten sonra çay içme ritüeli) *ҡ. диал.*

*Кемде* булһа ла оҙон юлға оҙатҡандан һуң, уға хәйерле юл теләп, йыйылып сәй эсеү. □ Чаепитие после проводов *кого-н.* в долгую дорогу. *Ҡәҙерле ҡунаҡтар ҡайтҡандан һуң оҙатыусылар баштаңып ҡалды.*

**БАШ ТАРАҒЫ** *и. ҡар.* **тараҡ.** ■ *[Ҡатыны:] Ҡальяныңда минең баш тарағым ята!* Әкиәттән. *[Ҡырҡтартмасының] бар булған нәмәһе — өс-дүрт төрлө үтемһеҙ генә буяу, сулпы, беләҙектәр, теген энәһе лә баш тарағы.* Н. Мусин.

**БАШ ТАРАУ (баш тара-)** (Р.: обряд причёсывания волос невесты; И.: kind of wedding ritual; Т.: düğün âdeti) *ҡ. этн.*

Еңгәнең туй мәлендә килен сәсен тарап, тәңкә биреүе. □ Обряд причёсывания волос невесты во время свадьбы. *Баш тарау йолаһын үткәреү.*

**БАШ ТАРТЫУ (баш тарт-)** (Р.: отказываться; И.: disobey, refuse; Т.: reddetmek) *ҡ.*

Ҡабул итергә теләмәү, үтәргә ризаһыҙлыҡ белдереү; кире ҡағыу. □ Отказываться *от кого* или *чего-л.*; не повиноваться. // Отказ, неповиновение. *Бурыстан баш тартыу.* ■ *Атыу өсөн приказ булһа ла улар [һалдаттар] үтәмәне, баш тартты.* Д. Юлтый. *Ат эләктереп тайыу уйынан баш тартты ул [Насир], ат менән тиҙерәк эләгеп ҡуйыуың бар, уны йәшереүе ҡыйын, былай, кәбәндәге энә кеүек, юғалдың ҡуйҙың.* З. Ураҡсин.

**БАШ-ТИРЕ МЕНӘН** (Р.: всесторонне; И.: thoroughly; Т.: kapsamlı) *р. диал.*

Бөтә яҡлап. □ Всесторонне. *Баш-тире менән уйлағанда эшләп була.*

**БАШ-ТОЯҠ (баш-тояғы)** (Р.: голова и ножки; И.: head and limbs; Т.: baş ve ayaklar) *и. йыйн.*

**1.** Түшкәнең башы менән тояҡтары. □ Голова и ножки *(мясной туши). Һарыҡтың баш-тояғын бешереү. Баш-тояҡ өтөү. Баҙарҙа баш-тояҡ һатып алыу.*

**2.** *р. диал.* Тулыһынса, тотош. □ Целиком, полностью. *Баш-тояғы китеп юғалды.*

**БАШ ТӨҘӘТЕҮ (баш төҙәт-)** (Р.: правление головы; И.: set an infant's head; Т.: başını düzeltmek) *к.*

**1.** Яңы тыуған баланың башына дөрөҫ форма биреү. □ Правление головы новорождённого. ■ *Кендек әбей менән имсе әбей сабыйҙың башын төҙәтә.* Экспедиция материалдарынан.

**2.** *күсм.* Айнығас, баш ауыртҡанын бөтөрөү өсөн эсеү. □ Опохмелиться. ■ *Сибәғәт, ҡайтыр яҡҡа юлланмайынса, Зарифалар тыҡрығына төштө. Элек булһа, ул бында баш төҙәтергә, янып барған йөрәген хәмергә бушатырға барыр ине.* Т. Ғарипова.

**БАШ ТҮБӘН I** (Р.: вниз головой; И.: head down; Т.: tepetaklak) *р.*

**1.** Баш менән аҫҡа. □ Вниз головой. *Баш түбән тороу.* ■ *Заһит ҡапыл ҡаушаны .. Өйөлөшөп торған кешеләр, тирә-яҡтағы өйҙәр һәм күктәләр баш түбән әйләнә башлаған һымаҡ булып тойолдо.* Я. Хамматов.

**2.** Аҫҡа ҡарай. □ Вниз. ■ *Яҙ көндәре Үҙәште ярҙан ярға таша, баш түбән аға, әрәмә араларынан уйламаған ерҙән ҡылылар, йырындар яһай һәм ҡолаҡтарға айырылып китә.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Баш түбән китеү** 1) башы менән әйләнеү. □ Пойти вверх дном *(тормашками).* ■ *Рәшиҙә тағы ла мендәренә ҡаплана .. Өй эсе ҡотһоҙ, донъяһы баш түбән киткән.* Р. Камал; 2) юҡҡа сығыу. □ Провалиться в тартарары, сгинуть. *Баш түбән китеп олаҡты.*

**БАШ ТҮБӘН II** (Р.: уклон; И.: downslope; Т.: eğim) *и. диал.*

Тау түбәне. □ Уклон. *Ат баш түбәнгә шәп барыр ул.*

**БАШ ТҮНЕҮ (баш түн-)** (Р.: сотрясение мозга; И.: concussion of the brain; Т.: beyin sarsıntısı) *к. диал.*

Мейе һелкенеү. □ Сотрясение мозга. *Башы түнеп ҡуйған.*

**БАШТЫ БӘЙЛӘҮ (башты бәйлә-)** (Р.: жениться; И.: marry; Т.: evlenmek) *к. диал.*

Йәмәғәтле булыу. □ Жениться, выйти замуж. // Женитьба, замужество. *Бер башты бәйләгәс, торалар инде.*

**БАШТЫҠ (баштығы)** (Р.: недоуздок для жеребёнка; И.: colt halter; Т.: yular) *и. диал.*

Ҡолон нуҡтаһы. □ Недоуздок для жеребёнка. *Ҡайыш баштыҡ.*

**БАШТЫ ТАҪТАМАЛ** (Р.: полотенце с вышивкой на концах; И.: embroidered towel; Т.: nakışlı havlu) *и. диал.*

**1.** Һөлгө. □ Полотенце с вышивкой на концах. *Ҡоҙалар башты таҫтамал бүләк итте. Башты таҫтамалын яурынына һалып, йылға буйына йыуыныға төштө.*

**2.** *миф.* Йола таҫтамалы. □ Обрядовое, ритуальное полотенце.

**БАШУҠ** (Р.: полностью; И.: fully, completely; Т.: tamamen) *р. диал.*

Тулыһынса. □ Полностью. *Башуҡ эшләп ҡуйыу.*

**БАШУЛ** (Р.: мальчик-первенец; И.: first-born boy; Т.: ilk oğlan çocuğu) *и. диал.*

**1.** Тәүге ир бала. □ Мальчик-первенец. *Башуллы булдыҡ бөгөн. Башулына кем тип ҡушҡандар?*

**2.** Тормош-көнкүреш йолаларында мотлаҡ ҡатнаша торған бала. □ Ребёнок, обязательно участвующий в обрядах.

**БАШ ХӘРЕФ** (Р.: заглавная буква; И.: capital letter; Т.: büyük harf) *и.*

Орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләренә ярашлы рәүештә, ғәҙәттәге бәләкәй хәрефтән ҙурлығы йәки яҙылыш рәүеше менән айырылып торған хәреф; ҙур хәреф. □ Заглавная буква, большая буква, прописная буква. *Һөйләмде баш хәреф менән башлайҙар.* ■ *Буралар ҙа, һәр кемдең үҙ исем-фамилияһының баш хәрефтәре яҙылған*

*таяҡтар ҙа Ғимран бабайҙың ихатаһында — ҡойма буйында ғына һаҡлана.* Н. Мусин.

**БАШ ҺАРҠЫУЫ** (Р.: уклон; И.: inclination; Т.: eğim) *и. диал.*

**1.** Тау түбән. □ Уклон. *Тауҙы менеп баш һарҡыуына төшкәс, ял итеп алырбыҙ.*

2. *ҡар.* **мейе төшөү.**

**БАШ ҺАУЛЫҒЫ** (Р.: вид подаяния; И.: alms; Т.: sadaka) *и. миф.*

Йәшәү өсөн, ғүмер өсөн хәйер биреү. □ Подаяние за жизнь. ■ *Баш һаулығына тип хәйер бирәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАШ ҺЕЛКЕҮ (баш һелк-)** *ҡ. ҡар.* **баш ҡағыу 1.** ■ *Йәш егет үҙһүҙләнеп баш һелкте: «Мин йәшенмәйем...»* З. Биишева. *Фойела осраған таныш кешеләр Арынбаҫаров менән баш һелкеп, ҡайһы берҙәре хатта ҡул биреп иҫәнләшеп үтте.* Д. Бүләков.

**БАШ ҺӨЙЛӘМ** (Р.: главное предложение; И.: principal clause; Т.: baş cümle) *и. грамм.*

Мәғәнә һәм грамматик яҡтан билдәле дәрәжәлә үҙ аллы булған, эйәртеүле ҡушма һөйләм составындағы һөйләм. □ Главное предложение. *Баш һөйләмдән сығып эйәрсән һөйләмгә һорау бирәләр.*

**БАШ ҺӨЙӘГЕ** (Р.: череп; И.: cranium; Т.: kafatası) *и. анат.*

Умыртҡалы хайуандарҙың һәм кешенең баш һөлдәһе. □ Череп. *Баш һөйәгенең бит өлөшө. Оҙонса баш һөйәге.* ■ *Бына ҡарағыҙ: был яугирҙың баш һөйәгенең түбә сабылған, ҡылыс эҙе был.* З. Ураҡсин.

**БАШҺЫҘ** (Р.: безголовый; И.: muddle-headed; Т.: başsız) *с.*

**1.** Башы булмаған. □ Безголовый; без головы. ■ *Баштарын күтәреп ҡарағандарҙың кәүҙәһен башһыҙ иттеләр.* З. Ураҡсин.

**2.** Башлығы, етәксеһе булмаған. □ Без главаря, главного начальника. *Башһыҙ ғәскәр. Башһыҙ мәктәп.* ■ *Әгәр күл булһа ағасһыҙ, шулай ил ҡала башһыҙ.* М. Өмөтбаев. *Ер ташһыҙ, ил башһыҙ булмаҫ, ти халыҡ.* Ә. Хәкимов.

**3.** Исеме, башы булмаған. □ Без заглавия. *Башһыҙ мәҡәлә. Башһыҙ китап.*

**4.** *күсм.* Артыҡ сая, дыуамал. □ Отчаянно смелый, бесшабашный, предерзкий. *Малайҙар бала саҡта бигерәк башһыҙ булалар.*

**5.** *күсм.* Аҡылға һай; аҡылһыҙ. □ Очень глупый, бестолковый, безмозглый. *Башһыҙ кеше. Башһыҙ булыу.* ■ *Сенатта ла башһыҙ кешеләр ултырмай.* З. Ураҡсин. *«Тукта әле, башһыҙ ҡыҙ шикелле, нимә илап ятам әле. Нәфисәне күреп китеүҙән Хисмәтулланың бер ере лә кәмемәгәндер ҙә баһа», — тип Гөльямал үҙен-үҙе йыуатты.* Я. Хамматов.

**БАШҺЫҘ АТ** *и. ҡар.* **тим ағасы.**

**БАШҺЫҘЛАНЫУ (башһыҙлан-)** (Р.: вести себя глупо; И.: grow stupid; Т.: aptallaşmak) *ҡ.*

**1.** Аҡылһыҙ ҡыланыу; аҡылһыҙланыу. □ Глупеть, вести себя глупо. *Башһыҙлана ла йөрөй инде.*

**2.** Саялыҡ, дыуамаллыҡ күрһәтеү. □ Проявлять отчаянную смелость, становиться чересчур храбрым. // Смелость, храбрость.

**БАШҺЫҘЛЫҠ (башһыҙлығы)** (Р.: дерзость; И.: folly; Т.: küstahlık) *и.*

**1.** Артыҡ, кәрәкмәгән ҡыйыулыҡ, саялыҡ. □ Дерзость, отчаянность. *Башһыҙлыҡтан файҙа юҡ.*

**2.** Аҡылһыҙлыҡ, алйотлоҡ. □ Глупость, бестолковость. *Башһыҙлыҡ ҡылыу. Был минең генә башһыҙлыҡ.* ■ *[Талип ағай:] Боҙ ҡырҡҡыска, әйтегеҙ, ҡорос әрәм итмәһендәр. Башһыҙлыҡ булыр.* М. Кәрим.

**БАШ ҺЫЙПАУ (баш һыйпа-)** (Р.: часть свадебного обряда; И.: kind of ethnographic rite; Т.: düğün töreni) *ҡ. этн.*

Туй йолаһында ҡәйнәнең тәңкә биреп, һамаҡлап, килененең башын һыйпауы. □ Обряд принятия невесты, посвящения невесты в женщину рода.

**БАШ ҺЫЛАУ (баш һыла-)** (Р.: магический способ лечения головной боли; И.: sort of a magical rite; Т.: büyü ile iyileştirmek) *ҡ. миф.*

Баш ауырыуын дауалауҙа магик ысул. □ Магический способ лечения голов-

ной боли. ■ *Сирләгән кешенең башын, сикәләрен һылағандар.* Башҡорттарҙың им-том китабы.

**БАШҺЫНЫУ (башһын-)** (Р.: одобрять; И.: approve; Т.: onaylamak) *ҡ.*

**1.** Хуп, лайыҡ күреү; хупһыныу. □ Одобрять, оценивать положительно. // Одобрение, оценка. *Һыйҙы башһынмау.*

**2.** Яйға килеү, табыныу; буйһоноу. □ Подчиняться, покоряться. // Подчинение, покорение. ■ *Иишморат тигән кеше шул урынға күсеп ултырырға уйлаған. Башһынмай йөрөй тип, уға йөҙ ҡамсы һуҡтырғандар.* Хикәйәттән.

**БАШҺӘНӘК (башһәнәге)** (Р.: вилы для завершения стогов; И.: sort of pitchfork; Т.: diren türü) *и. диал.*

Ос һәнәге. □ Вилы для завершения стогов. *Башһәнәк әҙерләр кәрәк.*

**БАШЫ МЕНӘН** (Р.: совсем; И.: entirely; Т.: büsbütün) *р. диал.*

Бөтөнләй. □ Совсем. *Башы менән бөттө, юҡ тием бит! Башы менән белмәйем!*

**БАШЫНА-БАШ** *р. диал. ҡар.* **башма-баш.**

**БАШЫРЫУ (башыр-)** (Р.: доносить; И.: report; Т.: ihbar etmek) *ҡ. диал.*

Ялыу итеү, еткереү, ошаҡлау. □ Доносить. // Донос. *Плендағы кешеләр бер-беренән башырҙылар. Малайын башырып йөрөгән.*

**БАШЫ-ТОЯҒЫ МЕНӘН** (Р.: целиком и полностью; И.: completely; Т.: tamamen) *р.*

Тулыһынса, тотош. □ Целиком и полностью. *Башы-тояғы менән алып китеү. Башы-тояғы менән биреп ебәрҙеләр.*

**БАШ ӘПСЕНЕ** (Р.: заговор от головной боли; И.: headache exorcism; Т.: baş ağrısı büyüsü) *и. миф.*

Баш ауырыуынан им-том. □ Заговор от головной боли. ■ *Баш ауыртһа, баш әпсене яҙып елкәгә тағып ҡуялар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БАШ ЯҪТЫҠ (яҫтығы)** *и. диал. ҡар.* **яҫтыҡ 1.** *Бейек итеп баш яҫтыҡ һалып, арбаға менеп ултырҙы.*

**БАЯ** (Р.: не так давно; И.: recently; Т.: az önce) *р.*

Бынан бер аҙ элек, күптән түгел; яңыраҡ. □ Не так давно, недавно. ■ *[Алтынбай:] Ағай, бая исемеңде яңылыш әйтеп ебәрҙем шикелле, үпкәләмә инде.* З. Ураҡсин. *Яҡуп керештә ысҡындырҙы. Таш үҙ юлына осоп китте, ҡапыл ысҡынған кереш бая ғына киҫелгән баш бармаҡҡа килтереп һуҡты.* М. Кәрим.

**БАЯҒЫ** [боронғо төрки *баяҡы* ‘алда телгә алынған’] (Р.: недавний; И.: recent; Т.: yeni) *с.*

**1.** Бынан бер аҙ элекке. □ Недавний; давешний. ■ *[Күсәрбай:] Баяғы көйҙө тарт әле, былар йырлаһындар.* М. Буранғолов. *Тирә-йүнде баяғынан да хәтәр ҡараңғылыҡ солғаны.* Н. Мусин. *Колоев баяғы һөйләшеүҙе күптән инде оноҡҡан, уйы менән һаман скважиналары тирәһендә бутала ине.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *(йәки* **элеге лә баяғы)** *инш.* Һаман да шул, әлеге шул. □ Опять то же; опять о том же, всё о том же; опять с тем же. ■ *Баш осонда, әлеге лә баяғы, һары һайыҫҡандар осоп йөрөй.* Н. Ғәйетбаев. *Иртәгеһен [Баймораҭ ҡартты], әлеге лә баяғы, шаман барабаны тауышы уятты: бум-бум. бум-бум. бум-бум.* Ф. Янышев.

**БАЯҒЫСА** (Р.: как прежде; И.: as before; Т.: önce olduğu gibi) *р.*

**1.** Баяғы кеүек. □ Как прежде. ■ *Емеш, нигеҙ буйында һаман баяғыса иламһырап ултырған ҡоҙағыйҙары яғына ҡарамаҫҡа тырышып. әкрен генә тағы урамға сыҡты, ҡойма буйындағы йәшел үләнгә һуҙылып, күккә ҡарап ятты.* З. Биишева.

**2.** Һәр ваҡыттағыса, ғәҙәттәгесә. □ Как всегда, как обычно. ■ *Һыртлан, баяғыса, бер уңдан, бер һул ҡулдан кәлтәнләне.* Ә. Хәкимов.

**БАЯДЕРКА** [рус. < порт. *bailadeira* ‘бейеүсе’] (Р.: баядерка; И.: bagadere; Т.: bayadere) *и.*

Һиндостанда бейеүсе, йырсы. □ Баядерка. *Баядерка бейеүе. Профессиональ баядерка.*

**БАЯЛА** *и. диал. ҡар.* **кәләп ағасы.**

**БАЯЛА ҺАЛЫУ (баяла һал-)** (Р.: намотать нить на мотушку; И.: reel; Т.: makaraya sarmak) *к.*

**1.** Епте баялаға урау. □ Намотать нить на мотушку. *Баяла һалып ултыра.*

**2.** *күсм.* Эшһеҙ буш йөрөү. □ Ходить без работы, бездельничать. // Безработица, безделье. *Баяла һалып йөрөй шунда эшкә урынлашмай.*

**БАЯН I** [ғәр. بيان 'аңлатыу, тел матурлығы, доклад һ. б.'] (Р.: рассказ; И.: narration, story; Т.: öykü) *и.*

*Ниҙер* хаҡында хәбәр итеп һөйләгән һүҙ. □ Рассказ, повествование.

**БАЯН II** [рус.] (Р.: баян; И.: button accordion; Т.: akordeon) *и.*

Күп телле ҙур гармун. □ Баян. *Баянда уйнау. Баянға бейеү.* ■ *Полина апай пианинола уйнай, Таңһылыу баянда һыҙҙыра, мандолина сиртә.* Р. Камал. *[Фәриә:] Шәмсиә әйтә, әллә үҙенә, әллә баянда шул тиклем өҙҙөрөп уйнауына ғашиҡ булдым да ҡуйҙым, ти.* Н. Мусин.

**БАЯН ИТЕҮ (баян ит-)** (Р.: рассказывать; И.: speak; Т.: anlatmak) *к. иҫк.*

Хәбәр итеп һөйләү; бәйән итеү. □ Рассказывать, повествовать. ■ *Әбей Күсәк батырҙың ҡайһы ырыуҙан икәнен баян ҡылған.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *[Ғатаулла ҡарт] кешеләрҙең ғүмер буйына ергә туймай, зар-интизар йәшәүҙәре, аҙаҡ нисек итеп бәхетле тормош ҡороп ебәреүҙәре тураһында баян итә.* Р. Солтангәрәев.

**БАЯН ҠОШ** (Р.: кедровка; И.: nutcracker; Т.: göknar kargası) *и. зоол.*

Күгәрсендән бәләкәйерәк, парлашып йөрөүсе, түбәһе, елкәһе, ҡанаттары һәм ҡойроғо ҡара, кәүҙәһенең ҡалған өлөшө аҡ төртөктәр менән сыбарланған ҡуңыр-көрән ҡош; сыбар һайыҫҡан, шыршы һайыҫҡаны. □ Кедровка, ореховка (лат. *Nucifraga caryocatactes*). ■ *Баян ҡош башлыса шыршы һәм ҡарағай орлоктары менән туклана. Йылы яҡҡа китмәй, бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөй.* Э. Ишбирҙин.

**БАЯН ҠЫЛЫУ (баян ҡыл-)** *к. ҡар.* **баян итеү.**

**БАЯНСЫ** (Р.: баянист; И.: button accordion player; Т.: akordeoncu) *и.*

Баянда уйнаған музыкант. □ Баянист. *Баянсылар ансамбле. Баянсылар сығышы.* ■ *Еңелерәк бейеү көйөн! — тип заказ бирҙе [Николай] баянсыға.* Н. Мусин.

**БАЯН ТАЛАҠ (талағы)** [ғәр. طلاق البائن 'кире алыу мөмкинлеге булмаған талаҡ'] (Р.: развод; И.: kind of Moslem divorce; Т.: talakı selase) *и. иҫк. дини.*

Кире алыу мөмкинлеге булмаған талаҡ *(бөтөнләй айырылышыу).* □ Развод, расторжение брака со стороны мужа без возможности обратно возобновить брак. *Баян талаҡ ҡылыу.*

**БАЯР** (Р.: боярин; И.: boyar; Т.: boyar) *и. тар.*

**1.** Мәскәү Русендә (*башта бүләк, аҙағыраҡ мираҫ итеп бирелә торған*) юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. □ Боярин.

**2.** Боронғо Рустә һәм Мәскәү дәүләтендә эре ер биләүсе, юғары ҡатлам феодалдарҙың вәкиле; алпауыт. □ Боярин, крепостник. ■ *Бошмаҫ һыуы. ҡыпсаҡ иленекебеҙ, баяр әфәнде, Аллағолданбыҙ.* З. Ураҡсин. *Унан ары, улым, яҙға табан үртәү өсөн, анау Өфө баяры килеп эш башламаҫ элгәре ошо урмандан тағы биш-алты йөк имәнде ауылға яҡынлатып ҡуйыу ҙа зыян итмәҫ ине.* Н. Мусин.

**БАЯРЛАУ (баярла-)** (Р.: предназначать; И.: destine; Т.: belirlemek) *к. диал.*

Бағышлау, тәғәйенләү, арнау. □ Предназначать, определять. // Предназначение, определение. *Баярлап аҫрау. Балаларға күптән мал баярлап ҡуйылған.*

**БЕГЕМОТ** *и. зоол. ҡар.* **һыу һыйыры, һыу үгеҙе.**

**БЕҘ I (беҙҙең, беҙгә, беҙҙе, беҙҙән, беҙҙә)** (Р.: мы; И.: we; Т.: biz) *зат а.*

Һөйләүсе һәм уның менән бергә булған бер нисә шәхесте белдерә. □ Мы. ■ *[Казактар атаманы:] Яраиыҡ беҙ уларҙы. Тиҙ һыуынырҙар, — тине.* З. Ураҡсин. *Беҙ уҡып*

*барыбер мулла булмабыҙ, — тине Хаммат. — Мин эшләрмен, һиңә донъя көтөргә булышырмын.* З. Биишева. *Атайымдың беҙ ике ҡыҙы булып, апайым Һылыубикә исемле ине.* «Зөһрә менән Алдар».

**БЕҘ II** [боронғо төрки *бегир* 'үткер ос'] (Р.: шило; И.: awl; Т.: biz) *и.*

**1.** Сәнсеп тишә торған эш ҡоралы. □ Шило. ■ *[Эшселәр] күңелһеҙ хәбәрҙе халыҡҡа ишеттермәйерәк торорға уйлағайнылар ҙа, беҙ ҡапсыҡта ятмай тигәндәй, һүҙ таралып та өлгөргән.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ҡырҡа торған ҡоралдарҙың үткер яғы; йөҙ. □ Остриё. *Балта беҙе. Бысаҡ беҙе. Ҡылыс беҙе. Салғының беҙе ҡайтҡан.*

**3.** *миф.* Ен-шайтанды ҡыуыу көсөнә эйә булған предмет. □ Шило *(мифологизированный предмет).*

**БЕҘ АҒАСЫ** (Р.: боярышник; И.: hawthorn; Т.: akdiken) *и. бот. диал.*

Энәлек. □ Боярышник (лат. *Crataegus*). *Беҙ ағасы сәскә атҡан. Беҙ ағасы емеш биргән.*

**БЕҘГӘЛӘК (беҙгәләге)** *и. зоол. ҡар.* **биҙгәләк I.**

**БЕҘГӘСӘ** (Р.: до нас; И.: before us; Т.: bize kadar) *р.*

Беҙгә тиклем. □ До нас. *Беҙгәсә килеп еткән ҡомартҡылар.*

**БЕҘҒОЙРОҠ (беҙғойроғо)** *и. зоол. ҡар.* **ҡылғойроҡ.**

**БЕҘЕ ҠАТЫУ (беҙе ҡат-)** (Р.: затупляться; И.: become blunt; Т.: körelmek) *ҡ. диал.*

Үтмәҫләнеү. □ Затупляться. *Бысаҡтың беҙе ҡатҡан.*

**БЕҘЕНКӘЙ** (Р.: Большая Медведица; И.: the Great Bear; Т.: Büyükayı takımyıldızı) *и. иҫк. астр.*

Етегән йондоҙ. □ Большая Медведица. ■ *Беҙенкәй етәү. Өлкәр нисәү? Һары ат менән буҙ ат тик икәү.* Халыҡ йырынан.

**БЕҘЛӘҮ (беҙлә-)** (Р.: мерцать; И.: twinkle; Т.: pırıldamak) *ҡ.*

Бәләкәй генә булып, беленер-беленмәҫ кенә яҡтырыу. □ Мерцать, бликать. ■ *Бик-тимер урманға кереп китә. Эскәрәк үткәс, беҙләп кенә янған бер ут күренә.* Әкиәттән. *Ғәләмәнурҙың алыҫта булһа ла емелдәп, саҡырып торған матурлыҡҡа, яҡшылыҡҡа ышаныс шәмдәре күҙ алдында беҙләп янып торҙо ла, ҡапыл һүнеп ҡуйҙы.* Г. Юнысова.

**БЕҘМОРОН** (Р.: шило-нос; И.: evil spirit in Bashkir mythology; Т.: bir ruh) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, беҙморон ҙур кәүҙәле, үксәһе алға ҡарап торған мифик зат. □ В башкирской мифологии злой дух. *досл.* Шило-нос. ■ *Беҙморондар кеше кеүек ике енестән була. Беҙҙә борон беҙморондар булған, тиҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕҘСУҠЫШ КӨЙӨЛДӨ** (Р.: шилоклювка; И.: pied avocet; Т.: bayağı kılıçgaga) *и. зоол.*

Ялан һәм далаларҙағы ҙур һыу, диңгеҙ буйҙарында йәшәүсе суҡышы өҫкә ҡарай бөгөлгән ала төҫтәге ҡош; ала сәпсеү, оҙонаяҡ сәпсеү, кәкресуҡыш. □ Шилоклювка (лат. *Recurvirostra avosetta*). ■ *Беҙсуҡыштың түбәһе, муйынының аҫ яғы, ҡанаттарындағы арҡыры һыҙыҡтар ҡара, кәүҙәһенең ҡалған өлөшө аҡ.* Э. Ишбирҙин.

**БЕҘҺАП (беҙһабы)** (Р.: щурёнок; И.: young pike, pickerel; Т.: turnabalığı) *и. зоол. диал.*

Суртан балаһы. □ Щурёнок. *Малайҙар йылғанан беҙһаптар тотоп ҡайтҡандар.*

**БЕҘЬЯПРАҠ (беҙьяпрағы)** (Р.: шильник; И.: alisma; Т.: çoban düdüğü) *и. бот.*

Әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. □ Шильник (лат. *Alisma*). *Беҙьяпраҡ ғәҙәттә. һыулы урында үҫә.*

**БЕҘӘЛЕК (беҙәлеге)** *и. диал. ҡар.* **беләҙек.** ■ *Һаҡсы Ибниәминдең йөгөнә бик ҡиммәтле алтын беҙәлек таға хәйлә менән. «Шаулама, мин һине урлап, алып ҡалырмын», — ти.* «Йософ вә Зөләйха тарихы».

**БЕҘӘЛЕКЛЕК (беҙәлеклеге)** *и. диал. ҡар.* **беләҙек һөйәге.** *Беҙәлеклек һөйәге. Еңе беҙәлеклегенә тиклем етеп тора.*

**БЕҘӘЛӘҮ (беҙәлә-)** *ҡ. ҡар.* **беҙәү I.** ■ *Күсәк бей Ҡарағөлөмбәттең танауын беҙәләп, үгеҙ кеүек итеп алып китте.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**БЕҘӘНӘК (беҙәнәге)** *и. диал. ҡар.* **безгәләк I.**

**БЕҘӘҮ I (беҙә-)** (Р.: вонзать; И.: stick; Т.: sokmak) *ҡ.*

Осло *нәмәне* нимәгәлер сәнсеү, осло нәмә менән тишеү; ҡаҙау. □ Вонзать; всаживать; втыкать. ■ *Ҡалдырҙым да бысағымды ергә беҙәп, күл яғына киттем уҡты эҙләп.* «Ерәнсә сәсән».

**БЕҘӘҮ II** (Р.: слово для отгона телёнка; И.: repel; Т.: buzağıları kovmak için kullanılan ünlem) *саҡ. диал.*

Быҙау ҡыуыу һүҙе. □ Слово для отгона телёнка.

**БЕЖЕК (бежеге)** (Р.: утиный клюв; И.: duck's beak; Т.: ördek gagası) *и. диал.*

Өйрәк суҡышы. □ Утиный клюв. *Сыбар бежекле өйрәгем юғалды.*

**БЕЗ, БЕЗЗ** (Р.: бзз; И.: buzz; Т.: vız) *оҡш.*

Серәкәй кеүек ваҡ бөжәк тауышын белдергән һүҙ. □ Подражание жужжанию летающих насекомых. *Безз итеү. Без килеү.* ■ *«Безз-безз итер,ситәнгә ҡуныр, дыу-дыу итер, дуғаға ҡуныр, алтын ҡашлы, алама башлы, уны белгән — йөҙ йәмле» (күгәүен).* Йомаҡ.

**БЕЗ-БЕЗ** (Р.: бзз-бзз; И.: buzzing; Т.: vız vız) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат *без* иткәнде белдергән һүҙ. □ Бзз-бзз *(подражание жужжанию летающих насекомых). Серәкәйҙәр без-без килә.*

**БЕЗГӘКЛӘҮ (безгәклә-)** (Р.: метаться; И.: rush about; Т.: koşuşturmak) *ҡ. диал.*

Себенләү. □ Метаться от укусов мух *(о животных).* ■ *Безгәкләп ҡайтып китә һыйырҙары.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕЗГӘЛӘК I (безгәләге)** *и. зоол. ҡар.* **энәғараҡ.**

**БЕЗГӘЛӘК II (безгәләге)** (Р.: непоседа; И.: fidget; Т.: kıpır kıpır eden kimse) *и. диал.*

Тик тормаҫ кеше. □ Непоседа. *Бигерәк безгәләк бала.*

**БЕЗДӘННӘҮ (бездәннә-)** (Р.: бездельничать; И.: loaf; Т.: tembellenmek) *ҡ. диал.*

Эшһеҙ йөрөү, тик йөрөү. □ Бездельничать. // Безделье. *Бездәннәп йөрөгәнсе, эш тапһаңсы.*

**БЕЗДӘҢНӘҮ (бездәңнә-)** (Р.: вести себя беспокойно; И.: be uneasy; Т.: kıpır kıpır hareket etmek) *ҡ. диал.*

Ултырып сыҙамау. □ Вести себя беспокойно. // Беспокойство. *Бездәңнәп тик йорой, бар сығып тор.*

**БЕЗЕ** [рус. < фр. *baiser* 'үбеү, үбеш'] [Р.: безе; И.: mesingue; Т.: beze] *и.*

Туҡылған йомортҡа ағынан һәм шәкәрҙән эшләнгән татлы ризыҡ. □ Безе. *Безе торты.*

**БЕЗЕЛДӘК I (безелдәге)** (Р.: жужжащий; И.: buzzing; Т.: vızlayan) *с.*

**1.** Без-без иткән, без-без килгән. □ Жужжащий. *Безелдәк серәкәй. Безелдәк себен.*

**2.** *күсм.* Тыз да мыз итеп торған; тызылдаҡ. □ Плаксивый, хныкающий. *Безелдәк бала.*

**БЕЗЕЛДӘК II (безелдәге)** *и.*

**1.** *ҡар.* **сүрәкә.**

**2.** *диал.* Өй сиңерткәһе. □ Домовый сверчок. *Безелдәк, төнө буйы безелдәп, йоҡо бирмәне.* ■ *Өй эйәһе ҡайһы бер көн безелдәк булып тауыш бирә.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕЗЕЛДӘК III (безелдәге)** (Р.: рогоз; И.: reed mace; Т.: hasır otu) *и. диал. бот.*

Екән. □ Рогоз (лат. *Typha*). *Күл безелдәге.*

**БЕЗЕЛДӘК IV (безелдәге)** (Р.: обыкновенный сверчок; И.: marsh-warbler; Т.: çekirge kamışçını) *и. зоол.*

Турғайҙан бәләкәйерәк, ҡуйы шырлыҡтарҙа түбәндән генә осоп йөрөүсе бик һаҡ ҡош; сиңерткә турғай. □ Обыкновенный сверчок, камышовка (лат. *Locustella naevia*). ■ *Безелдәк ҡыуаҡлыҡта, бейек үлән араһында йәшәй. Төрлө ваҡ бөжәктәр, үлән орлоҡтары менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**БЕЗЕЛДӘК ҠАМЫШ** *и. бот. ҡар.* **ҡоланҡойроҡ.**

**БЕЗЕЛДӘҮ I (безелдә-)** (Р.: жужжать; И.: buzz; Т.: vızlamak) *ҡ.*

**1.** Без-без итеү, без-без килеү. □ Жужжать. // Жужжание. ■ *Улар [ҡорттар] бүҫкәләренә бал тейәгән, безелдәп кәрәҙҙәргә үрмәләй.* Ф. Иҫәнғолов. *Үлән ашап йөрөгән аттар, бөгәләктәр безелдәүгә сыҙай алмайынса, төтөнлөк һалған урынға һәм кешеләр тирәһенәрәк килделәр.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Сыр-сыу килеп сыйылдау *(күберәк бала-сағаға ҡарата).* □ Пищать. // Писк. *Бала-саға безелдәй ҙә йөрөй.*

**БЕЗЕЛДӘҮ II (безелдә-)** (Р.: пробежать на одном дыхании; И.: run without a pause; Т.: çok çabuk koşmak) *ҡ.*

**1.** Еңгән яҡ күрһәткән араны тын алмай йүгереп үтеү. □ Пробежать на одном дыхании расстояние, назначенное побеждающей стороной (*в детской игре*). // Бег. *Бер тында анау ер саманы безелдәп үттеләр.*

**2.** *күсм.* Ҡойроҡ сәнсеп, уҡранан ҡасыу (*һыйыр малына ҡарата*). □ Метаться, убегать от укуса оводов (*о крупном рогатом скоте*). // Метание, бегство. *Көтөүҙән ҡайтып килгән тана-торпо безелдәп үтеп китте.*

**БЕЗЕЛДӘҮ III** (Р.: жужжание; И.: buzzing; Т.: vızıldama) *и.*

Бөжәктәрҙең без-без иткән тауышы. □ Жужжание. ■ *Туғай-болондарҙа әллә нисәмә төҫлө сәскәләр, әллә нисәмә төрлө бөжәктәр, әллә ниндәй ауаздар... Иңкештәр гөжләүе, бал ҡорттары безелдәүе, ҡоштар моңо...* Р. Камал. *Фазылдың ҡашы ла ҡыбырламаны. Бының ише әр-хур — серәкәй безелдәүе уға. Бер ҡолағынан керә, икенсеһенән сыға.* Ә. Хәкимов.

**БЕЗЕЛДӘШЕҮ (безелдәш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **безелдәү I, II.** *взаимн. от* **безелдәү I, II.** ■ *Күк ябып осҡан егәрле ҡорттар безелдәшкәнен тыңлап ята торғас, бал еҫенә иҫерәһең, урыныңдан торҙоңмо — ағастарҙы ҡосаҡлағы, йырлағы, хәтфә үләндәргә ятып аунағы килә.* Н. Мусин. *Күрәһең, яҡында берәй солоҡ умарта барҙыр — сәскәнән сәскәгә ҡунып бал ҡорттары безелдәшә, ҡоштар йәмле йәй йырын йырлай.* З. Биишева.

**БЕЗЕРЕКЛӘҮ (безереклә-)** (Р.: идти иноходью; И.: amble; Т.: yavaş yavaş dolaşmak) *ҡ. диал.*

Юрғалау. □ Идти иноходью (*о лошади*). // Иноходь. *Безереклəп юртып бара аты.*

**БЕЗЛӘК (безләге)** (Р.: коптилка; И.: wick lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. *Өй эсен безләк кенә яҡтыртып тора.* ■ *Күңелһеҙ ҙә, дуҫҡай, утың һүнеп, безләк менән алйып ултырыу.* Р. Назаров.

**БЕЗЛӘК ЛАМПА** *и. диал. ҡар.* **безләк.**

**БЕЗЛӘҮ (безлә-)** *ҡ.*

**1.** *ҡар.* **безелдәү I, 1.** *Серәкәй безләй.*

**2.** *диал. ҡар.* **сәнскәкләү.**

**БЕЗНИК, БЕҘНӘК (безниге, беҙнәге)** (Р.: паслён чёрный; И.: nightshade; Т.: köpek üzümü) *и. бот. диал.*

Эт ҡарағаты. □ Паслён чёрный, воронянжка, базник, поздника (лат. *Solanum nigrum*). *Безник емеше ҡара ҡарағат емешенә оҡшаған. Беҙнәк ағыулы була.*

**БЕЗНӘКӘҮ** (Р.: коробейник; И.: pedlar; Т.: seyyar satıcı) *и. диал.*

Ҡырҡтартмасы. □ Коробейник. *Төрлө ваҡ-төйәк кәрәк-ярак һатыусы безнәкәү ауыл буйлап йөрөп үтте.*

**БЕЗӘ-БЕЗӘ** (Р.: слово для подзывания телёнка; И.: sound for calling calves up; Т.: buzağıları çağırma ünlemi) *сак.*

Быҙау саҡыра торған һүҙ. □ Слово для подзывания телёнка. *Безә-безә, ҡайт, безәүкәй.*

**БЕЗӘҮКӘЙ I** (Р.: телёнок; И.: calf; Т.: buzağı) *и.*

**1.** *бал.* Быҙау. □ Телёнок. ■ *Әйҙә, безәүкәй, әйҙә, йәшел болонға йүгерҙек. Хуш еҫле ысыҡлы үлән һеҙҙе көтә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», № 4, 2010.

**2.** *диал. ирк.* Быҙауҡай. □ Телёночек. *Безәүкәйем минең.*

**БЕЗӘҮКӘЙ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тамьянцев.

**БЕЗӘҮЛӘҮ (безәүлә-)** (Р.: звать телёнка; И.: call a calf up; Т.: buzağı çağırmak) *ҡ. диал.*

Быҙау саҡырыу. □ Звать телёнка. *Һыйырҙар безәүләп ҡураға ҡайтып инделәр.*

**БЕЙ** [төрки телдәренән] (Р.: бей; И.: bey; Т.: bey) *и.*

**1.** *тар.* Ырыуҙың затлы кешеһе. □ Бей (*титул мелких феодалов*). ■ *[Боғараның ҡоҙаһы Байгилде:] Бүрең олой, ҡоҙа. Ҡотлояр мырҙанан ишеттем, нуғайҙар һине ҡыпсаҡ, үҫәргән, бөрйән, тамъян илдәренә бей яһап ултыртмаҡсы, – ти[не].* Я. Хамматов.

**2.** Баш кеше; башлыҡ, түрә. □ Бей (*глава, начальник*). ■ *Китте Иблис бей булып, әмир булып, остаз булып.* Ш. Бабич. *Мәсем хан, .. Ҡарағөлөмбәт эшен раҫҡа һанап, уң ике бей өҫтөнән бей ҡылмаҡ була.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Ирҙәргә хөрмәт менән өндәшә торған ололау һүҙе. □ Бей (*вежливое обращение к мужчине*). *Ҡолман бей. Айҙар бей. Буранғол бей.*

**4.** *диал. ҡар.* **ҡайны.**

**БЕЙ АҒА** (Р.: старший брат мужа; И.: husdand's elder brother; Т.: dayı) *и. диал.*

Ҡайнаға. □ Старший брат мужа. *Беҙҙең яҡта ҡайнағаны бей аға тиҙәр.*

**БЕЙ АНА, БЕЙ АНАЙ** (Р.: свекровь; И.: mother-in-law; Т.: kaynana) *и. диал.*

Ҡәйнә. □ Свекровь. *Киленем ике бей анай менән торҙо.*

**БЕЙ АНДЫҘ** (Р.: девясил-одногодник; И.: one-year-old elecampane; Т.: inula) *и. бот. диал.*

Бер йыллыҡ андыҙ. □ Девясил-одногодник (лат. *İnula*). *Бей андыҙҙың дауалау көсө бар.*

**БЕЙ АТА** (Р.: свёкор; И.: father-in-law; Т.: kayınpeder) *и. диал.*

Ҡайны. □ Свёкор. *Бей ата, бейек ҡата, тип бейеп китәр ине.*

**БЕЙ АТАЙ** *и. диал. ҡар.* **бей ата.**

**БЕЙБАШТАҠ** (Р.: своевольный; И.: self-willed; Т.: inatçı) *с. диал.*

Башбаштаҡ. □ Своевольный. *Бейбаштаҡ бала булдың инде. Бигерәк бейбаштаҡһың.*

**БЕЙБАШТАҠЛАНЫУ (бейбаштаҡлан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **башбаштаҡланыу.**

**БЕЙЕГӘЙЕҮ (бейегәй-)** (Р.: становиться более высоким; И.: become taller; Т.: daha yüksek olmak) *ҡ.*

Берәй *нәмәнең* бейеклеге артыу, бейек булыу. □ Становиться более высоким; становиться выше. *Бейегәйеп китеү. Кәбән бейегәйгән. Сүплек бейегәйә төшкән.* ■ *Офоҡтар киңәйҙе, һауа көмбәҙҙәре бейегәйҙе.* Р. Камал. *[Атайым] кәбән бейегәйә башлағас, күбә һәнәгенән ҡуйып, күкрәк һәнәгенән алды.* Н. Мусин.

**БЕЙЕГӘЙТЕҮ (бейегәйт-)** (Р.: делать выше; И.: make taller; Т.: yükseltmek) *ҡ.*

Берәй *нәмәнең* бейеклеген арттырыу, бейек итеү. □ Делать более высоким; делать выше. *Бесәнселәр кәбәнде бейегәйткәндәр.* ■ *Ерҙән арыш ярымдар самаһы бейегәйтеп, яңы ышырыш таҡталарҙан баҫҡыс эшләнгән.* Ғ. Хәйри. *Мәликә комодта ултырған «Красная Москва» хушбуйын йәһәт кенә һөртөштөрөп, ҡабарынҡы сәстәрен маңлай тирәһендә бейегәйтә бирҙе.* Т. Ғарипова.

**БЕЙЕК I** (Р.: высокий; И.: high, tall; Т.: yüksek) *с.*

**1.** Түбәндән юғарыға үлсәме ҙур; *киреһе* – тәпәшәк. □ Высокий. *Бейек ағас. Бейек өй. Бейек өҫтәл. Бейек тау.* ■ *[Раяның] аяҡтарында баяғы ҡара лаклы туфлиҙар.. Улары ла шул тиклем килешә, тик үксәһе генә үтә бейек, атлап булмай ҙа ҡуя.* Р. Солтангәрәев. *Николай Григорьевичтарҙың йорто ҡаланыҡынан һис кәм түгел. Түшәмдәре бейек, тәҙрәләре киң.* Р. Камал.

**2.** *Ҡайһылыр* бер кимәлдән нык юғары. □ Высотный. *Бейек бина.* ■ *Томанһыу йылы иртә. Ҡаршылағы бейек-бейек һөмөрө йорттар артынан ҡала өҫтөнә киң яҡтылыҡ йәйелә башлаған.* Ә. Хәкимов.

**БЕЙЕК II** (Р.: высоко; И.: high, tall; Т.: yüksek) *р.*

Юғары. □ Высоко. *Бейек осоу. Бейек күтәрелеү.* ■ *Шар аяҙ күк шул тиклем бейек, әикенсе ҡараһаң, ул шыйлан оҙон ҡарағайҙарға эләгеп торған кеүек.* Н. Мусин.

**БЕЙЕК АРТЫШ** (Р.: можжевельник высокий; И.: juniper; Т.: boylu ardıç) *и. бот.*

Кипаристар ғаиләһенә ҡараған ылыҫлы ағас. □ Можжевельник высокий (лат. *Juniperus excelsa*). *Бейек артыш — мәңге йәшел ылыҫлы ағас. Беҙҙең яҡта бейек артыштар үҫә.*

**БЕЙЕК ҠАНАТ** (Р.: розвальни; И.: low wide sledge; Т.: kızak) *и. диал.*

Ләжәнкә сана. □ Розвальни. *Бейек ҡанатҡа ултырып саптылар.*

**БЕЙЕКЛЕК (бейеклеге)** (Р.: высота; И.: height; Т.: yükseklik) *и.*

**1.** Аҫтан өҫкә тиклем ике араһағы алыҫлыҡ. □ Высота, вышина. ■ *Ул саҡта Иҫәкәй үҙе лә айыу тотоп менер ир ине. Сажин бейеклек кәүҙә, киң күкрәк, текә яурындар, имәнде төбө-тамыры менән йолҡорҙай көс.* Н. Мусин. *Бер ярым метр бейеклектәге аҡбаш тулҡындар, ел өргән һайын, үкереп, шаулап ярҙарға килеп бәрелә.* З. Биишева.

**2.** Ер өҫтөнән нығ юғарыла булған арауыҡ. □ Вышина, высь. *Күктең бейеклеге. Ҡарағоштар алты-ете мең метр бейеклеккә тиклем оса.*

**3.** *күсм.* Юғарылыҡ, юғары кимәл. □ Высота. ■ *Аҫҡа тартыусылар булмаһа, Ғәлимә, тимәк, тағы ла шәберәк китәсәк. Ауланған бейеклек — ул кисәге көн.* Т. Ғарипова. *Алик, әлбиттә, үҙ хәленән, үҙ бейеклегенән тороп фекер йөрөтә.* Ә. Хәкимов.

**4.** *ҡар.* **ҡалҡыулыҡ.**

**БЕЙЕКЛЕК ҮЛСӘГЕС** (Р.: высотомер; И.: altimeter; Т.: yükseklik ölçer) *и. геогр.*

Бейеклекте үлсәй торған ҡорамал. □ Высотомер. *Лабораторияға бейеклек үлсәгес һатып алдылар.*

**БЕЙЕКЛӘҮ (бейеклә-)** *ҡ. ҡар.* **бейегәйтеү.**

**БЕЙЕК МУНДАЛЫ АТ** (Р.: лошадь с высокой холкой; И.: horse with tall withers; Т.: yüksek omuz başlı at) *и.*

Мундаһы бейек булған ат. □ Лошадь с высокой холкой. ■ *Береһе — оҙон торҡло, бейек мундалы ерән ҡашҡа ат, икенсеһе — шул Толпар.* М. Ямалетдинов.

**БЕЙЕК ҺОЛО ҮЛӘН** (Р.: овсяница высокая; И.: meadow fescue; Т.: orman yumağı) *и. бот.*

Болондарҙа, урмандарҙа үҫкән, ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. □ Овсяница высокая (лат. *Festuca altissima*). *Бейек һоло үлән мал аҙығы итеп ҡулланыла.*

**БЕЙЕМ** (Р.: свекровь; И.: mother-in-law; Т.: kaynana) *и. диал.*

Ҡәйнә. □ Свекровь. ■ *Тағы япа-яңғыҙ ҡалыуына эсе боша ине Зөлхизә әбейҙең. «Оҙаҡҡа түгел бит, бейем, Айрат ни ҡунаҡҡа килгеләп торор әле», — тип йыуатты уны килене.* Н. Мусин.

**БЕЙЕРЛЕ БИШМӘТ** (Р.: расклешённый к низу бешмет; И.: kind of men's quilted jacket; Т.: ceket) *и. диал.*

Киң итәкле бишмәт. □ Расклешённый к низу бешмет. *Бейерле бишмәт тектерҙем.*

**БЕЙЕТЕҮ (бейет-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бейеү I.** *понуд. от* **бейеү I.** ■ *Дәүләтхан бабайың тирә-яҡта дан бай булған, барыһын усында бейетеп тотҡан.* Р. Камал.

**БЕЙЕҮ I (бейе-)** (Р.: плясать; И.: dance; Т.: dans etmek) *ҡ.*

**1.** Көй ыңғайына кәүҙә, аяҡ-ҡулдар менән матур, нәфис хәрәкәттәр яһау. □ Плясать, танцевать. ■ *Рая хорға йөрөнө, кәйефе булғанда бейей ҙә торғайны.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Бер урында тороп сыҙамай, тыпырсыныу. □ Вести себя неспокойно, не стоять на месте, танцевать, бить копытом. ■ *Тәпәшерәк торҡло, киң тояҡлы аттары бер ҙә сабышҡыға оҡшамай. Шулай ҙа уларҙың түҙемһеҙләнеп бейеп тороуынан .. уҙышҡа әҙер булыуҙары күренеп тора.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Йыш-йыш итеп бер урынға төшөү. □ Танцевать. *Ямғыр тамсылары бейей.* ■ *Күҙ алдында бейешкән күкле-йәшелле, һарғылт-ҡыҙыл дүңгәләктәр араһында текә маңлайлы ике көсөк тә һикерешеп уй-*

*най ине...* Ә. Хәкимов. *Ғәлимәнең күҙенә күктә секрәйешеп янған йондоҙҙар бейегән, унан бергә укмашкан һымаҡ булды ла ҡапыл байыған ҡояштай ҡыҙарып тоныорағы...* Т. Ғарипова.

4. *миф.* Ритмлы хәрәкәткә ҡоролған яман көстәрҙе ҡурҡытыу, ҡот-ырыҫты саҡырыу өсөн башҡарылған боронғо арбау төрө. □ Пляска, танец *(древняя форма заклинания, связанная с обрядами, ритуалами, направленная на защиту от злых духов и пожелание изобилия, плодовитости и др.). Сыңрау торна бейеүе.* ■ *Туйҙа йыуаса бейеүен бейейҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Бейеп тороу** (*йәки* **йөрөү**) ярарға йәки һәр әйткәнде үтәргә тырышып, һикереп төшөп тороу. □ Заискивать перед *кем-то;* стараться услужить. ■ *[Солтанов:] Һеҙгә бит баш инженер түгел, алдығыҙҙа бейеп тороусы, ни әйтһәгеҙ — шуны бер һүҙһеҙ үтәүсе кеше генә кәрәк булған.* Н. Мусин. **Ҡурайына бейеү** *ҡар.* **ҡурай.**

**БЕЙЕҮ II** (Р.: пляска; И.: dancing; Т.: dans) *и.*

Көй ыңғайына башҡарылған матур, нәфис хәрәкәт *(ғәҙәттә, берәй эш процесын, уй, тойғоно, күренеш һ. б. сағылдыра).* □ Пляска, танец. *Халыҡ бейеүе. Күмәк бейеү. Танго бейеүе.* ■ *Ат сабыштырыу тамамланғас, бейеү башланды.* Т. Ғарипова.

**БЕЙЕҮСЕ** (Р.: танцор; И.: dancer; Т.: dansçı) *и.*

Бейей белгән кеше; бейеү оҫтаһы. □ Танцор; танцорка. ■ *Бына бер ваҡыт аккордеон тынып ҡалды. Бейеүселәр әйләнеүҙән туҡтаны.* С. Поварисов. *Бер кисте Алтынғужин, күҙен ҡыҫа биреп, бейеүселәрҙе шым ғына күҙәтеп торҙо ла, тилбә тотҡандай ҡотороп иҙән типкән Ғатаны, еңенән тотоп, туҡтарға мәжбүр итте.* Ә. Хәкимов.

**БЕЙЕҮСЕ КӨЙГӘНӘК (көйгәнәге)** *и. зоол. ҡар.* **торомтай.**

**БЕЙЕҮСЕ ТАШТУРҒАЙ** (Р.: каменка-плясунья; И.: wheater; Т.: boz kuyrukkakan) *и. зоол.*

Турғай ҙурлығындағы, оҙон аяҡлы, ерҙә йәки таш өҫтөндә йөрөүсе ҡош; таш турғайы, шаҡылдаҡ. □ Каменка-плясунья (лат. *Oenanthe isabellina).* ■ *Бейеүсе таштурғай ҡоро асыҡ урындарҙа, тау битләүҙәрендә, ташлы ҡабаҡтарҙа йәшәй.* Э. Ишбирҙин.

**БЕЙЕҮ СӘНҒӘТЕ** (Р.: искусство танца; И.: art of dancing; Т.: dans sanatı) *и.*

Ым-ишара һәм хәрәкәттәр аша әҙәм балаһының күңел кисерештәрен, хис-тойғоларын сағылдырыусы үҙенсәлекле ижад төрө. □ Искусство танца. *Бейеү сәнғәте йондоҙо. Бейеү сәнғәте — иң сағыу сәнғәттәрҙең береһе.* ■ *Киң үҫеш юлы үткән бейеү сәнғәте бөгөн иң ҡатмарлы ижад төрө иҫәпләнә.* Г. Ҡаһарманова.

**БЕЙЕШЕҮ (бейеш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бейеү I.** *взаимн. от* **бейеү I.** ■ *Гөлйөҙөм менән Яланбикә үҙҙәре таҡмаҡ әйтеп, үҙҙәре бейеште.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЙЛЕК (бейлеге)** (Р.: титул и звание бея; И.: bey's zeighn; Т.: beylik) *и.*

Бей булыу дәрәжәһе. □ Титул и звание бея. ■ *Сабира: Йә, Фәгилә, бейлегең юйылдымы? Үсегеп торған һыныңмы? Атаһы ла, әсәһе лә һин, юйма бейлегеңде!* М. Буранғолов. *Һаҡмар, Йайыҡ далаһында, Урал тауҙың көньяҡ өлөшөндә бейлектә Боғара ултырһа ла, асылда был ерҙәр Алтын урҙа биләмәһе һанала.* Я. Хамматов.

**БЕЙСБОЛ** [рус. < ингл. *base ball*] (Р.: бейсбол; И.: baseball; Т.: beysbol) *и.*

Туп һәм һуҡҡыс ярҙамында башҡарылған спорт командаһы уйыны. □ Бейсбол. *Бейсбол тубы. Бейсбол командаһы. Бейсбол уйнау.*

**БЕЙСБОЛКА** [рус. < ингл. *base ball*] (Р.: бейсболка; И.: basseball cap; Т.: kasket) *и.*

Алдында козырёгы булған спорт баш кейеме. □ Бейсболка. *Бейсболка кейеү. Бейсболка йөрөтөү.*

**БЕЙСБОЛСЫ** (Р.: бейсболист; И.: baseball player; Т.: ballplayer) *и.*

Бейсбол командаһында уйнаған спортсы. □ Бейсболист. *Яҡшы бейсболсы. Бейсболсы булыу.*

**БЕЙСБОЛ УЙЫНСЫҺЫ** *и. ҡар.* **бейсболсы.**

**БЕЙҮЛӘН** (Р.: кресс водяной; И.: watercress; Т.: su teresi) *и. бот.*

Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. □ Кресс водяной, жеруха лекарственная (лат. *Nasturtium officinale*). *Бейүлән дымлы урындарҙы ярата. Бейүлән дауалауҙа ҡулланыла.*

**БЕЙӘ** [боронғо төрки *би*] (Р.: кобыла; И.: mare; Т.: kısrak) *и. зоол.*

Инә йылҡы малы. □ Кобыла, кобылица после первого плодоношения. *Һауын бейә. Быуаҙ бейә. Ҡолонло бейә. Тыу бейә. Бейә һөтө.* ■ *Һәр фәндең бер һайланған ирҙәре бар — эйәһе серен белә бейәһенең.* М. Аҡмулла. *Биләнсек башы биш тирәк, билге ҡуйҙың, Мораҙым, биш бейәгә бер ҡолон һин теләнең, Мораҙым.* М. Өмөтбаев.

♦ **Бейә тәртәгә тибеү** эштә, тормошта уңышһыҙлыҡҡа осрау. □ Сталкиваться с проблемами. ■ *Нимә көтә беҙҙе иртәгә? Кемдер өҫтәр үҙенә мәртәбә. Тик йышыраҡ тибә башламаҫмы тормош тигән бейә тәртәгә?* Б. Рафиҡов.

**БЕЙӘ АҒЫТЫУ (бейә ағыт-)** (Р.: пускать кобылиц с жеребятами на волю; И.: let mares graze in the wild; Т.: tayları kısraklarla serbest bırakmak) *ҡ. диал.*

Бейәләрҙе ҡолондары менән иркенгә сығарыу. □ Пускать кобылиц с жеребятами на волю *(после дойки).* ■ *Бейәләрҙе кисен ҡолондарына ҡушып ҡырға ҡыуалар. Ҡолондар шунда рәхәтләнеп төн буйына әсәләрен имеп йөрөйҙәр. Бына шуны «бейә ағытыу» тиҙәр.* З. Биишева.

**БЕЙӘ БӘЙЛӘҮ (бейә бәйлә-)** (Р.: доение кобылиц; И.: keep mares (for making koumiss); Т.: kısrakları bağlamak) *ҡ.*

Бейә һөтөн һауып ҡымыҙ эшләү. □ Доение и изготовление кумыса. *Бейә бәйләү ваҡыты етте. Бейә бәйләү урыны.* ■ *Шишмә арьяғындағы урман ситендә — бейә бәйләү урыны.* Н. Мусин.

**БЕЙӘ КҮНӘГЕ (ГҮНӘГЕ)** *и. диал. ҡар.* **башкүнәк.**

**БЕЙӘ ҠОЛОН** (Р.: жеребёнок-самка; И.: female foal; Т.: dişi tay) *и.*

Орғасы ҡолон. □ Жеребёнок-самка. ■ *Йәйләүҙә өс көн торғас та, буҙ бейә үҙе төҫлө матур бер бейә ҡолон ҡолонлаған.* Әкиәттән.

**БЕЙӘ ҠОНАН** (Р.: кобыла от двух до трёх лет; И.: mare between two and three years old; Т.: 2—3 yaşındaki kısrak) *и. диал.*

Ҡонажын. □ Кобыла от двух до трёх лет. *Бейә ҡонанын эҙләп китте. Бейә ҡонаны ҡолонлаған.*

**БЕЙӘЛӘЙ I** (Р.: рукавицы; И.: mittens; Т.: eldiven) *и.*

Баш бармағы ғына айырым сығарып тегелгән йәки бәйләнгән ҡул кейеме. □ Рукавицы, варежки. *Йөн бейәләй. Күн бейәләй. Бейәләй бәйләү. Бейәләй тегеү.* ■ *Ихсанбай иплән кенә тәҙрә янына килде: .. әсәһе түр башында, ойоҡмо, бейәләйме бәйләй.* Т. Ғарипова.

**БЕЙӘЛӘЙ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-тамьянцев.

**БЕЙӘНЕҮ (бейән-)** (Р.: верить; И.: believe; Т.: inanmak) *ҡ. диал.*

Инаныу. □ Верить. *Ул шул хәбәргә бейәнде.*

**БЕЙӘ СИЛӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **башкүнәк.**

**БЕЙӘТ** (Р.: подоснова нагрудного украшения; И.: breast decoration base; Т.: göğüs süslemesinin alt temeli) *и.*

Күкрәк биҙәүесенең арты. □ Подоснова нагрудного украшения.

**БЕЙӘҺӨТ** (Р.: молочай хрящеватый; И.: spurge; Т.: sarı sütleğen) *и. диал. бот.*

**1.** Һөтлөгән үләненең бер төрө. □ Молочай хрящеватый (волжский) (лат. *Euphorbia Volgensis*).

**2.** *ҡар.* **кәзә һаҡалы.**

**БЕЙӘ ҺӨТЛӨГӘНЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **бейәһөт.**

**БЕЙӘ ҺӨТӨ** (Р.: бадьян с жёлтым соцветием; И.: floroes species; Т.: çin yıldız anasonu) *и. диал. бот.*

Һары сәскәле баҙыян. □ Бадьян, анис звёздчатый с жёлтым соцветием (лат. *Illicium*).

**БЕЛ** *и. диал. ҡар.* **беле.**

**БЕЛГЕР** *с. диал. ҡар.* **белдекле.**

**БЕЛГЕРТЕҮ I (белгерт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **әшкәртеү.** *Аллаһы Тәғәлә алдан белгертә ул, әшкәртә ул бер-бер хәл булырын.*

**БЕЛГЕРТЕҮ II (белгерт-)** [боронғо төрки *бәлгүрт-*] *ҡ. ҡар.* **белдереү.**

**БЕЛГЕС** [боронғо төрки *бил-* 'белеү'] (Р.: специалист; И.: expert; Т.: uzman) *и.*

Фән йәки техниканың бер тармағы буйынса махсус белемгә эйә булған кеше. □ Специалист; мастер. *Квалификациялы белгес. Ауыл хужалығы белгесе.* ■ *Сәйҙел уҡып бөтә, төҙөлөштәргә яңы белгес булып китер ул.* Ғ. Сәләм.

**БЕЛДЕК: ҮҘ БЕЛДЕГЕ** (Р.: самовольно; И.: wilfully; Т.: kendi isteğince) *р.*

Үҙе белгәнсә, үҙе теләгәнсә. □ Самовольно; без разрешения; отсебятина. *Үҙ белдегең менән йөрөү.* ■ *Хәҙер урман да йылдан-йыл һирәгәйә, йәнлек-ҡош та кәмей, һәр кем, башбаштаҡлыҡ ҡылып, үҙ белдеге менән ағас ҡырҡа, үрт һалып урманды яндыра.* М. Тажи.

**БЕЛДЕКЛЕ** (Р.: понятливый; И.: quick-witted; Т.: anlayışlı) *с.*

**1.** Аңлап эшләй белгән, әйткәнде ала белгән. □ Понятливый, толковый, понимающий; сообразительный, догадливый. *Белдекле кеше. Белдекле бала.* ● *Белдеклегә бер һүҙ ҙә күп, белдекһеҙгә сукмар ҙа суп.* Әйтем. *Белдеклегә бер әйтһәң дә йөрәгенең эсендә, белдекһеҙгә мең әйтһәң дә ҡолағының тышында.* Әйтем.

**2.** *мыҫҡ.* Үҙен бик белгән итеп күрһәтергә тырышҡан кешегә шелтә менән әйтелә; белерйән. □ Всезнайка. *Белдекле булып ҡыланыу.* ■ *Етмәһә, тағы белдекле ҡыланған булып һүҙ ҡуша: «Шмайсер алып яҡшы иткәнһең. Шәп нәмәҫтә!»* Ә. Хәкимов.

**БЕЛДЕКЛЕЛЕК (белдеклелеге)** (Р.: понятливость; И.: quickneu of mind; Т.: bilik) *и.*

Белгәнлек, компетентлыҡ. □ Понятливость, сознательность, толковость, сообразительность. *Белдеклелек күрһәтеү.*

**БЕЛДЕКҺЕҘ** (Р.: непонятливый; И.: slow on the uptake; Т.: anlamaz) *с.*

Аңлап эшләй белмәгән, әйткәнде ала белмәгән. □ Непонятливый, бестолковый; несообразительный, недогадливый. *Белдекһеҙ кеше.* ■ *Хәтерһеҙ йәки белдекһеҙ бәндә генә тырмаға ҡат-ҡат баҫа.* «Ашҡаҙар», 11 декабрь 2010.

**БЕЛДЕКҺЕҘЛЕК (белдекһеҙлеге)** (Р.: непонятливость; И.: dullness; Т.: gabavet) *и.*

Аңһыҙлыҡ, маҡаулыҡ. □ Непонятливость, несообразительность, недогадливость. *Белдекһеҙлеге арҡаһында бәлә күрә.*

**БЕЛДЕМ БАШ** (Р.: всезнайка; И.: know-all; Т.: bilgiç) *и.*

Үҙен бик белгәнгә һанаған кешегә ҡарата әйтелә. □ Всезнайка. ■ *Ҡарт сәпсек әтәстең былай артыҡ белдем баш булып һөйләүенә бик хурланды.* Ғ. Бағданов.

**БЕЛДЕРЕЛЕҮ (белдерел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **белдереү 1.** *страд. от* **белдереү 1.**

**БЕЛДЕРЕҮ I (белдер-)** (Р.: извещать; И.: inform; Т.: bildirmek) *ҡ.*

**1.** *Кемгәлер* бер нәмәне хәбәр итеү; еткереү. □ Извещать, сообщать, оповещать; уведомлять. // Извещение, сообщение, оповещение, уведомление. *Хат аша белдереү. Алдан белдереү.* ■ *Булар хандың сапҡындары хәлде бөтә тирә-яҡҡа белдереп ҡайтты.* ти. «Алпамыша». *Сәлмән ағай: «Зөләйхә туташ, таныштығыҙ, беҙҙең пекарь Самсон», — тип, минең титулды ла белдереп ҡуйҙы.* Т. Йәнәби. *Старостаның ҡурҡыныслы, ауыр айырылыу минуттарын белдергән тауышы бөтәһен дә туҡтатты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй төрлө ҡараш, мөнәсәбәтте мәғлүм итеү. □ Заявлять, объявлять, оглашать. // Заявление, объявление, огласка. *Протест белдереү.* ■ *Йәнәһе, ул протест белдерә: көпә-көндөҙ, түрә данын һатып, кешене милиция ала, ҡайҙа бында законлылыҡ?* Р. Камал.

**3.** *Кемгәлер* бер нәмәне һиҙҙереү; белгертеү. □ Давать знать, давать (*дать*) почувствовать. ■ *Зөлхизә был уйын бер кемгә лә белдермәй.* З. Биишева. *Үҙенә белдермәй генә [Йәнтимерҙең] артынан эйәрҙем.* С. Агиш. *Гөлбостан еңгәнең был кыуанысты әллә кемдәргә белдереп уртаклашкыһы килде.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *Ниҙәлер* еткереү, әйтеү. □ Изъявить, выражать. // Изъявление, выражение. *Ризалык белдереү. Теләк белдереү. Үпкә белдереү. Ышаныс белдереү.*

**БЕЛДЕРЕҮ II** (Р.: объявление; И.: announcement; Т.: ilan) *и.*

**1.** *Ниҙер* хаҡында мәғлүм итеп эленгән яҙма; иғлан. □ Объявление. *Белдереү яҙыу. Белдереү элеү. Белдереү уҡыу.*

**2.** Ҡәтғи рәүештә мәғлүм ителгән рәсми хәбәр. □ Заявление; сообщение (*официальное, письменное или устное*), извещение, уведомление, оповещение, осведомление, информирование. *Хөкүмәт белдереүе. Белдереү яһау.*

**БЕЛДЕРЕҮСЕ** (Р.: информатор; И.: herald; Т.: bildirici) *и.*

Хәбәрсе, хәбәр биреүсе (*итеүсе, килтереүсе*). □ Информатор, конферансье, глашатай. *Белдереүсе сәхнәгә сығып, концерт башланыуын хәбәр итте.*

**БЕЛДЕРМӘ** (Р.: известие; И.: tidings; Т.: bildiri) *и.*

*Ниҙер* тураһындағы хәбәр; мәғлүмәт. □ Известие, сообщение, сведение. *Кәрәкле белдермәләр алыу.* ■ *Бандиттар бында ҡуна ҡалһа, Сусак тауҙың төньяҡ һаркыуына ут яғырға. Өҫтәмә белдермәләрҙе Истебай таң менән һыйыр көтөүен йыйырға килгәндә алып килә.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЛДЕРТЕҮ** (**белдерт-**) *к. йөкм. ҡар.* **белдереү 1.** *понуд. от* **белдереү 1.**

**БЕЛЕ** (Р.: большой крохаль; И.: common merganser; Т.: büyük tarakdiş) *и. зоол.*

Балыҡлы йылғаларҙа, күлдәрҙә йәшәүсе оҙон тар суҡышлы ҙур өйрәк. □ Большой крохаль (лат. *Mergus merganser*). ■ *Беле — ҡусмә ҡош, һирәк осрай. Ояһы ерҙә, ҡайһы ваҡыт ағас ҡыуыштарында була.* Э. Ишбирҙин.

**БЕЛЕК I** (**белеге**) *и.*

**1.** *иҫк. ҡар.* **белем 1, 2.**

**2.** Үҙ аңың менән белеп, аңлап эш итеү һәләте. □ Понятливость; сообразительность. *Белеге булған эшләр.*

**БЕЛЕК II** (**белеге**) (Р.: достоинство; И.: merit; Т.: haysiyet) *и. диал.*

Бәҫ. □ Достоинство. *Белеге бар уның. Белеге булмағас ней.* ● *Биртенгәндән белек китер.* Мәҡәл.

**БЕЛЕКЛЕ** (Р.: имеющий знание; И.: educated, literate; Т.: bilgi sahibi) *с.*

**1.** *иҫк.* Белемгә эйә; белемле, уҡымышлы. □ Имеющий знание, грамотный, образованный. ■ *Ҡараһаҡал .. заманаһының иң белекле муллаларының береһе булған.* Ғ. Фәхретдинов.

**2.** Аңлап эшләй белгән, әйткәнде ала белгән; белдекле. □ Понятливый, сознательный, сообразительный, толковый. *Белекле бала.* ● *Белеклегә бер әйт, белекһеҙгә мең әйт.* Мәҡәл.

**3.** *диал.* Имсе, бағымсы. □ Знахарь, целитель. *Белекле кешенән имләтеү.*

**БЕЛЕКЛЕЛЕК** (**белеклелеге**) *и. ҡар.* **белемлелек.** ■ *Нәҫелдән килгән белеклелек, һәр саҡ яңы үрҙәргә ынтылыу сифаты башҡорт халыҡ ижадын, тарихын йыйыуға көсөн биргән аҡыл эйәһе, Әсмә инәйҙең картатаһынан күскәндер...* Р. Солтангәрәева.

**БЕЛЕКТЕРЕҮ** (**белектер-**) (Р.: разъяснять; И.: explain; Т.: açıklamak) *к. диал.*

Төшөндөрөү. □ Разъяснять. *Баланы туҡмап белектереп булмай.*

**БЕЛЕКҺЕҘ** [боронғо төрки *билигсиз* 'наҙан'] (Р.: неграмотный; И.: illiterate; Т.: cahil) *с.*

**1.** *иҫк.* Белемгә эйә түгел; белемһеҙ, уҡымышһыҙ. □ Неграмотный, необразованный. ■ *Аҡыллылыр күп белеп аҙ һөйләгән, белекһеҙҙер аҙ белеп сүк һөйләгән.* М. Өмөтбаев.

**2.** Аңлап эшләй белмәгән, әйткәнде ала белмәгән; белдекһеҙ. □ Непонятливый, не-

соо́бразительный, бестолковый. ■ *Ишекте бикләп йөрө тип күпме әйтәһең, колағына ла элмәй, белекһеҙ.* Н. Мусин. ● *Күҙһеҙҙең күҙе һуҡыр, белекһеҙҙең күңеле һуҡыр.* Әйтем.

**БЕЛЕМ** (Р.: образование; И.: education; Т.: eğitim) *и.*

**1.** Уҡыу йәки тәжрибә нигеҙендә тупланған мәғлүмәт. □ Знание. ■ *Һәр тарафҡа нескә уйҙар ташҡынын ағыҙған белеме таштыр уның.* М. Аҡмулла. ● *Белгән белеменә ышаныр, белмәгән беләгенә ышаныр.* Әйтем.

**2.** Төрлө баҫҡыслы уҡыу йорттарында тупланған мәғлүмәт. □ Образование. *Дөйөм белем. Политехник белем. Урта белем. Юғары белем. Белем алыу.* ■ *[Нигмәтулла] үҙ фамилияһын яҙырлыҡ та белеме булмаған көйө ҡулына ҡәләм алды.* Я. Хамматов.

**3.** Тәбиғәт, йәмғиәт тураһында кешелек тарафынан быуындан быуынға тупланған мәғлүмәт. □ Знание, познание; наука. *Йәмғиәт белеме. Тәбиғәт белеме.* ■ *Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта, эй китап, бәкһәм һиңә; сын асыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә!* Ш. Бабич.

♦ **Белем тоҡсайы** күпте белгән, белемле кешегә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Ходячая энциклопедия. *Белем тоҡсайы булып йөрөй шунда.*

**БЕЛЕМЛЕ** (Р.: образованный; И.: literate; Т.: bilgili) *с.*

**1.** Ҙур белемгә, мәғлүмәткә эйә; уҡымышлы, ғилемле. □ Грамотный, образованный, сведущий, знающий. *Белемле кеше.* ● *Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ.* Мәҡәл. *Тубылғы ҙур булмаҫ, белемле хур булмаҫ.* Мәҡәл.

**2.** *Ниндәйҙер* махсус белемгә эйә булған *(урта, юғары).* □ С образованием *(высшим и т.д.). Юғары белемле белгес. Урта белемле һөнәр эйәләре.*

**БЕЛЕМЛЕКЛЕ** *с. диал. ҡар.* **белемле.** ■ *Беҙҙә белемлекле кешеләр булған ул.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕЛЕМЛЕЛЕК (белемлелеге)** (Р.: учёность; И.: competence; Т.: bilgiçlik) *и.*

Мәғлүмәтлелек, уҡымышлылыҡ, белем дәрәжәһе. □ Учёность, образованность. *Белемлелеккә баһа биреү.*

**БЕЛЕМСЕ** (Р.: знаток; И.: expert; Т.: bilirkişi) *и. диал.*

**1.** Белем эйәһе. □ Знаток, образованный человек. ■ *Хәҙер халыҡ бик белемсе, — сырайына белемсе ҡиәфәте сығарған Фазыл уйлағанын ҡыҫҡырып әйтте, — хаҡ әйттегеҙ, командирҙарыбыҙ аҙ ғына зыялыраҡ булып, етеҙерәк эш иткәндә, әллә ҡасан уҡ дөмбәҫләп ташлаған булыр инек үҙен.* И. Ноғоманов.

**2.** Бағымсы, имсе. □ Знахарь, знахарка. ■ *Белемсе ҡарсыҡ бүҫерҙе имләне.* Экспедиция материалдарынан.

**3.** Күрәҙәсе; сихырсы. □ Ворожея, гадалка; предсказатель(ница), колдун(ья) и др. ■ *Яҙыуҙы алғас, Әхмәт тегенең өйрәткән белемсеһенә (йәғни сихырсыға) китә.* Әкиәттән.

**4.** Белгес. □ Специалист. *Бик белемсе һунарсы булып һөйләй.*

**БЕЛЕМҺЕҘ** (Р.: безграмотный; И.: illiterate; Т.: bilimsiz) *и.*

Мәғлүмәткә, белемгә эйә булмаған. □ Безграмотный, необразованный, не знающий. ■ *Йәмһеҙ ҙә, белемһеҙ ҙә ҡыҙ түгел дә баһа! — тип бошөндо Шәмсиә апай ҙа.* З. Биишева.

**БЕЛЕМҺЕҘЛЕК (белемһеҙлеге)** (Р.: необразованность; И.: illiteracy; Т.: bilgisizlik) *и.*

**1.** Бөтөнләй белеме булмау; наҙанлыҡ. □ Необразованность, неграмотность, непросвещённость, невежество. *Белемһеҙлек ҡоршауҙары.* ■ *XX быуаттың егерменсе йылдарына тиклем динһеҙлек — белемһеҙлек, наҙанлыҡ синонимы тип ҡабул ителгәнлеге «Ҡара (йәғни уҡымаған) халыҡ — ҡара һарыҡ» тигән мәҡәлдән дә асыҡ күренә.* Г. Ситдиҡова.

**2.** Аҙ белемле булыу; компетентһыҙлыҡ; мәғлүмәтһеҙлек. □ Необразованность, малограмотность, незнание, некомпетентность. *Инженерҙың белемһеҙлеге.* ■ *Халыҡтың йәшәү шарттарының насарайыуы,*

.. *ҡасаҡтар, йәшәү урыны билдәле булмағандар; кешеләр араһында тормошҡа ҡуллайлаша алмаусыларҙың һаны артыуы, халыҡтың белемһеҙлеге туберкулёз менән сирләүҙең төп сәбәптәренән һанала.* «Аш-ҡаҙар», № 99, 2009.

**БЕЛЕН** [рус. *блин*] (Р.: блин; И.: pancake; Т.: gözleme) *и. диал.*

Әсе ҡамырҙан йоҡа ғына итеп бешерелгән ҡоймаҡ. □ Блин, блины. *Тәмле итеп белен бешергән.* ● *Белеш килһә, белен бөтә.* Мәҡәл.

**БЕЛЕНДЕРЕҮ (белендер-)** *ҡ. ҡар.* **белгертеү**. ■ *[Таңһылыу] юлға һарынан яңы сарафан тегеп өлгөргән. Өҫкө яғы тар ғына, кәүҙәһенә һылашып тора — былай ҙа йыуан икәнен нығыраҡ белендерә.* Р. Камал.

**БЕЛЕНДЕРТЕҮ (белендерт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **белендереү**. *понуд. от* **белендереү**.

**БЕЛЕНЕР-БЕЛЕНМӘҪ I** (Р.: чуть заметный; И.: barely feasible; Т.: belirli belirsiz) *с.*

Асыҡ булмаған, күренмәгән, һиҙелер-һиҙелмәҫ, тоноҡ. □ Чуть заметный, еле заметный, малозаметный, неясный. *Беленер-беленмәҫ яҙыу. Беленер-беленмәҫ һыҙыҡтар.* ■ *Рамазан, Урал ҡуйынында, тау-таш, урман араһында үҫкән кеше, картаға бер тапҡыр ҡарау менән, ҡалғанын беленер-беленмәҫ һуҡмаҡтың нисек бормаланыуынан, ағастарҙың ҡайһылайыраҡ сираплашыуынан аңлай.* Ә. Хәкимов.

**БЕЛЕНЕР-БЕЛЕНМӘҪ II** (Р.: чуть заметно; И.: barely noticeable; Т.: az çok belli) *р.*

Яртылаш билдәле, бик беленмәгән хәлдә. □ Чуть заметно, еле заметно, еле-еле видно. *Беленер-беленмәҫ илау.* ■ *Менәүәрә маңлайын беленер-беленмәҫ кенә сыйып үткән анау тәүге һыр йорарттары шул сакта пәйҙә булғайны ла инде.* Н. Мусин. *Беленер-беленмәҫ иҫкән йылы ел, ҡылған баштарын һыйпап, үҙ юлы менән артабан яңғыҙ сағыл итәгенә төшөп китә.* М. Хужин.

**БЕЛЕНЕРЛЕК I** (Р.: ощутимый; И.: feasible; Т.: belirgin) *с.*

Һиҙелеп, күренеп торған; һиҙелерлек. □ Ощутимый, заметный, явный. *Беленерлек ямау. Беленерлек йөй.*

**БЕЛЕНЕРЛЕК II** (Р.: ощутимо; И.: feasible; Т.: bariz) *р.*

Һиҙелерлек дәрәжәлә, хәтһеҙ. □ Ощутимо, заметно, явно. ■ *Шәнгәрәй, теге ҡазанан һуң беленерлек һылтаҡлап, ләкин таяҡһыҙ көйөнсә ферма юлы буйлап өҫкә күтәрелде.* Т. Ғарипова.

**БЕЛЕНЕҮ (белен-)** (Р.: быть заметным; И.: be perceptible; Т.: bilinmek) *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **белеү 1, 2.** *страд. от* **белеү 1, 2.**

**2.** Һиҙелеү, һиҙелеп, күренеп тороу; күренеү, тойолоу. □ Чувствоваться, ощущаться, нащупываться, быть заметным. *Ҡыш килеүе беленә.* ■ *Ул [ҡыҙ] итекселәргә .. йөйө лә беленмәгән бер һыңар ҡата тегергә ҡушып китте, ти.* Әкиәттән. *Иҙән ер кеүек, таҡтаһы ла беленмәй.* Р. Солтангәрәев. ● *Йыртыҡты ямаһаң да беленә, ҡаплаһаң да күренә.* Мәҡәл.

**3.** Төҫмөрләнеү, күренә башлау. □ Обозначиться. *Таң беленеү. Йөҙөндә йыйыр-сыҡтар беленде.* ■ *Көнө буйы ҡунаҡхана керҙәрен. ҡашығаяҡ йыуыуҙан тишелгән бармаҡтары сәңкеп һыҙлауын баҫа алмайынса йоҡоға китеп өлгөрмәй — таң беленә.* Т. Ғарипова.

**4.** Эш-хәлдең төп мәғәнәһе, асылы билдәләнеү; асыҡланыу, аныҡланыу, мәғлүм булыу. □ Становиться известным, выясниться; познаваться, узнаваться. *Күпер юҡлығы беленде.* ■ *Әсир сарбаздың да, илгиҙәр теләнселәрҙең дә, асылда, Тимерҙең ысын ниәтенән күҙ яҙҙырыу маҡсатында Урҙаға ебәрелгән шымсылар булыуы аҙаҡ беленде-беленеүен, ләкин эш уҙғайны инде.* Ә. Хәкимов. ● *Батыр яуҙа беленер, сәсән дауҙа беленер.* Әйтем. *Ҡырын эш ҡырҡ йылдан да беленә.* Мәҡәл. *Дуҫтың дуҫ икәне бәлә килгәндә беленә.* Мәҡәл.

**БЕЛЕҢКЕРӘҮ (белеңкерә-)** (Р.: знать недостаточно; И.: know insufficiently; Т.: yeterince bilmemek) *ҡ.*

**1.** Аҙыраҡ белеү, етерлек кимәлдә белмәү. □ Знать недостаточно. *Был теманы белеңкерәмәйһең шул. Ҡыҙым тарихты белеңкерәй.*

**2.** *диал.* Һаташыу. □ Бредить. // Бред. ■ *Нык йығылып бер зат ҡағылған булһа, белеңкерәһә, йығылған кешенең иҙеүенә тоҙло һыу ҡояһың, ергә һыу төшкәнсе.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕЛЕР-БЕЛМӘҪ I** (Р.: не знающий толком; И.: not cognizant enough; Т.: bilir bilmez) *с.*

Яҡшылап белмәгән. □ Не знающий толком; недоучившийся. *Белер-белмәҫ башым менән.*

**БЕЛЕР-БЕЛМӘҪ II** (Р.: не зная толком; И.: not cognizant enough; Т.: bilir bilmez) *р.*

Яҡшылап белмәгән көйөнсә. □ Не зная толком; недоучившись; не умеючи. *Белер-белмәҫ көйө эшләү. Белер-белмәҫ килеш йырлау.* ■ *Башы әйләнеүҙән, йөрәге дарҫлап тибеүҙән ни эшләгәнен белер-белмәҫ, Көмөш Тамсы ишеккә ташланды.* Ә. Хәкимов.

**БЕЛЕРЙӘН** (Р.: всезнайка; И.: know-all; Т.: ukala) *и.*

**1.** Белеме булмаһа ла, белемле булып күренергә тырышҡан кеше. □ Всезнайка. *Бигерәк белерйән булып ҡыланаһың инде.*

**2.** Әкиәт геройының исеме. □ Знайка. *Белерйән менән Белмәҫйән. Белерйән бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа килгән. Белерйән ролен кем башҡара?*

**БЕЛЕРМӘН** (Р.: знаток; И.: expert; Т.: bilirkişi) *и.*

Күпте белгән, *ниндәйҙер* өлкәлә махсус белемгә эйә булған кеше; белгес. □ Знаток. ■ *Ул [Вадим Кулеша] төрлө технологиялар буйынса белермән генә түгел, ә оҫта механик, электротехник та ине.* «Урал», 15 апрель 2011. *Алина менән Альбина туған тел, физика буйынса белермән булһа, дәрестән тыш ҡыҙҙарыбыҙ музыка, хореография мәктәптәрендә шөғөлләнә.* «Йошатыр», 3 февраль 2011.

**БЕЛЕҮ (бел-)** [дөйөм төрки *бил* 'белеү, аңлау'] (Р.: знать; И.: know; Т.: bilmek) *ҡ.*

**1.** *Кем* йәки *ниҙер* хаҡында мәғлүмәтле йәки хәбәрҙар булыу. □ Знать. // Знание. *Исемде белеү. Уйҙы белеү. Хәлде белеү.* ■ *Артабан уҡып торманы Мәҙинә: атаһының һуғышҡа тиклем ниндәй булғанын унһыҙ ҙа белә ул...* Т. Ғарипова. *Барсынһылыуҙың һөйгәнен белеп йөрөгән Алпамыша.* «Алпамыша».

**2.** Үҙләштереп, аң-зиһендә тотоу; мәғлүмәтле булыу, *ниҙеңдер* асылына төшөү; аңлау, төшөнөү. □ Знать, понимать. // Знание, понимание. *Телде белеү. Тормошто белеү. Эште белеү.* ● *Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп.* Мәҡәл.

**3.** *Ниҙеңдер* асылына төшөү; аңлау, төшөнөү. □ Понимать, ведать. // Понимание. ■ *Ҡайҙа алып киттеләр, ни эшләргә баралар — белмәй Нурулла.* Ш. Янбаев. *Ҡыҙ уның Ҡамыр батыр икәнен белеп ҡалған.* Әкиәттән. *Һалдаттарҙың тынын яҡшыраҡ белеү ниәте менән һөйләшеүгә ҡолаҡ һалып торған Закир һүҙҙең дауамын көткәйне.* З. Биишева. ● *«Уҡыным» тимә, «белдем» тиң.* Мәҡәл. *Үҙе белгән хур булмаҫ.* Мәҡәл. *Ашаған белмәй, тураған белә.* Мәҡәл.

**4.** Күреп таныу, таныш булыу. □ Знать, узнавать. // Знание, узнавание. *Мин был егетте беләм.* ■ *Мин әле һеҙҙе, ғәфү ит, белмәйем, һеҙ кем, туташ?* Ш. Бабич.

**5.** *күбр. юкл.* Тормошта кисереү, күреү. □ *в отриц. ч.* Не знать, не иметь *что-л.*, не располагать *чем-л.* // Незнание, неимение. *Ауырыу белмә. Ҡурҡыу белмә. Арыу белмә.* ■ *Тирә-яҡта дан тотҡан был [Аҡназар] һунарсы, йәнлеккә яҙа атыуҙы, өйөнә буш ҡайтыуҙы белмәгән.* Әкиәттән.

**6.** Хәл ҡылымдың *-а/-й* формаһындағы һүҙ менән ярҙамлыҡ сифатында килеп, *ниҙелер* булдыра алыуҙы белдерә. □ В сочет. с деепр. на *-а/-й* основного гл. выступает в роли вспомогательного гл. со знач. «уметь». *Ҡурайҙа уйнай белеү. Ҡаранан аҡты айыра белеү. Йөҙә белеү.* ■ *Китапты уны һата белеү өсөн, иң элек уҡый белергә, ә уҡый белер өсөн, китапты яратырға кәрәк.* З. Биишева. ● *Бейей белгән кеше бейеүенән*

*кинәнер*. Мәҡәл. *Өрә белмәгән эт өйөнә бүре килтерә*. Әйтем.

♦ **Бар тип тә белмәү** *нимәнелер* иҫәпкә алмау, ҡайғыртмау. □ *соотв.* И бровью не ведёт, хоть бы хны. ■ *Федотов [шофёрҙың] асыуын бар тип тә белмәне, эшлекле төҫтә машина кузовына менеп китте*. Ә. Хәкимов. **Белһәң ине** инеш һөйләм функцияһын үтәй. □ Если б ты знал. *Белһәң ине, миңә шул хәтле ҡыйын*. ■ *[Тәғзимә:] Белһәң ине, бәгерем, мин һине һағындым, үтә һағындым!* Я. Хамматов.

**БЕЛЕШ** [боронғо төрки *билиш* 'танышлыҡ, таныш'] (Р.: знакомый; И.: familiar acquaintance; Т.: tanıdık) *и.*

Белгән-күргән, бер ни тиклем таныш кеше. □ Знакомый, знакомец. ■ *Баһап ҡарт тарыны быйыл белешенән сәстерҙе. Евстафий сәскән тары .. яр кеүек булып уңды*. Ж. Кейекбаев. *Дуҫтың күбеһен, уйлаһаң, ҡыйын, тиһең, белеш булдым, тиһеңдер, шаруаға*. М. Аҡмулла. ● *Бер күргән – белеш, ике күргән – таныш, күп күргән – дуҫ*. Мәҡәл. *Бәлеш булһа, белеш табыла*. Мәҡәл.

**БЕЛЕШЕҮ (белеш-)** [боронғо төрки *билиш-*] (Р.: справляться; И.: learn; Т.: öğrenmek) *ҡ.*

*Кем* йәки *нимә* хаҡында һорашып, мәғлүмәт алыу; һорашыу. □ Справляться, наводить справки, узнавать. // Справка. *Хәл белешеү. Эш белешеү*. ■ *Атайым, Хәмит ағай эргәһенә барып, ҡайһы ылауға ултырырға икәнен белешкәс, тоғон арбаға илтеп һалды*. Н. Мусин.

**БЕЛЕШЛЕК (белешлеге)** (Р.: знакомство; И.: friendship; Т.: tanışıklık) *и.*

Танышлыҡ, дуҫлыҡ, әхирәтлек. □ Знакомство; дружба, приятельские отношения. *Белешлек аша эш итеү. Белешлек ҡылыу*.

**БЕЛЕШМӘ** (Р.: справка; И.: information; Т.: bilgi) *и.*

**1.** *Кем* йәки *нимә* хаҡындағы мәғлүмәт. □ Справка; сведения. *Белешмә алыу. Белешмә бүлеге*. ■ *[Генерал-губернатор:] Отрядтар хаҡында белешмә бирегеҙ*. Я. Хамматов. *[Таңһылыу:] Мин уға көн дә һөт буйынса белешмә тултырам*. Р. Камал.

**2.** Эш-хәл хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биргән әсбап. □ Справочник. / Справочный. *Белешмә әҙәбиәт. Белешмә материалдар*. ■ *Даль, өйөнә ҡайтҡас, яңы ишеткән исемде кенәгәһенә теркәне, тиҙ-тиҙ генә һүрәтен дә яһап ҡуйҙы, төрлө белешмәләрҙән был балыҡтың фәнни атамаһын эҙләп ҡараны, шунан ғына «Ырымбур казактары теленән» тигән яҙыуҙы өҫтәне*. З. Ураҡсин. *Үткәндә Батыр аңлатҡас, Әмилә белешмәнән тапты: баҡһаң, Урҙа ла ҡасандыр тоҙ булған*. Н. Ғәйетбаев.

**БЕЛЕШМӘЛӘР БЮРОҺЫ** (Р.: справочное бюро; И.: inquiry office; Т.: danışma bürosu) *и.*

Мәғлүмәт биреүсе бюро. □ Справочное бюро. *Вокзалда белешмәләр бюроһы тәүлек әйләнәһенә эшләй*.

**БЕЛЕШМӘ ҺҮҘЛЕК (һүҙлеге)** (Р.: словарь-справочник; И.: handbook; Т.: kılavuz) *и.*

Белешмә биреүсе һүҙлек. □ Словарь-справочник. *Көнкүреш хеҙмәте өлкәһендә эшләүселәр өсөн русса-башҡортса белешмә һүҙлек*. ■ *Ислам дине тураһындағы белешмә һүҙлек башҡорт телендә тәүге тапҡыр баҫыла*. «Башҡортостан», 8 декабрь 2010.

**БЕЛЛЕТРИСТ** [рус.] (Р.: беллетрист; И.: writer of fiction; Т.: yazar) *и.*

Беллетристик әҫәрҙең авторы. □ Беллетрист. *Яҡшы беллетрист. Беллетрист булыу*.

**БЕЛЛЕТРИСТИК** (Р.: беллетристический; И.: fiction; Т.: yazar ile ilgili) *с.*

Беллетристикаға мөнәсәбәтле. □ Беллетристический. *Беллетристик стиль. Беллетристик әҫәр*. ■ *Ошо тарих төрлө хәтирәләр, хикәйәттәр һәм легендалар рәүешендә ойошоп, ҡатмарлы структуралы, эпик характерҙағы беллетристик полотноны хасил иткән*. М. Нәҙерғолов.

**БЕЛЛЕТРИСТИКА** [рус. < фр. *belles lettres* 'художестволы әҙәбиәт'] (Р.: беллетристика; И.: fiction; Т.: edebiyat) *и.*

Проза менән яҙылған әҙәбиәт. □ Беллетристика. *Беллетристика уҡыу. Белле-*

*тристика менән мауығыу. Беллетристика күренеше.*

**БЕЛМӘМЕШ БУЛЫУ (белмәмеш бул-)** (Р.: притворяться незнающим; И.: feign ignorance; Т.: bilmezlenmek) *ҡ.*

Белмәгән кеше булып ҡыланыу. □ Притворяться незнающим, делать вид, что не знаешь. // Незнание. ■ *[Ихсанбай — әсәһенә:] Белмәмеш булма: барып сыҡмаҫ! Үҙемә тейер өлөштө генә һорайым. Бир — и вәссәләм — мин юҡ булам!* Т. Ғарипова.

**БЕЛМӘМЕШКӘ ҺАЛЫШЫУ (белмәмешкә һалыш-)** *ҡ. ҡар.* **белмәмеш булыу.** ■ *Рая бер ни белмәмешкә һалышып: «Йә, ни эшләргә уйлайһың, Ҡолой кантон?» — тигән булды.* Р. Солтангәрәев.

**БЕЛМӘҪЙӘН** (Р.: незнайка; И.: know-nothing; Т.: cahil) *и.*

Әкиәттәрҙә бер нәмә лә белмәгән бала, персонаж. □ Незнайка. ■ *Әкиәт геройы Белмәҫйән беҙгә юл йөрөү ҡағиҙәләрен өйрәтһә, Светофор төрлө һорауҙар биреп уйландырҙы.* «Йәншишмә», 10 декабрь 2010.

**БЕЛОРУС** (Р.: белорус; И.: Byelorussian; Т.: Belarus) *и.*

Белоруссияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе *(славян телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Белорус. *Белорус ҡатыны. Белорус теле.*

**БЕЛОРУССА** (Р.: по-белорусски; И.: in Byelorussian; Т.: Belarusça) *р.*

**1.** Белорус телендә. □ По-белорусски *(о языке). Белорусса белеү. Белорус телен өйрәнеү.*

**2.** Белорустар кеүек, белорус халҡына хас. □ По-белорусски. *Белорусса кейенеү. Белорусса бейеү.*

**БЕЛТӘЙЕҮ (белтәй-)** (Р.: важничать; И.: put on airs; Т.: hava atmak) *ҡ. диал.*

Маһайыу. □ Важничать, зазнаваться. // Зазнайство. *Ҡалай белтәйгән була.*

**БЕЛЬВЕДЕР** [рус. < ит. *belvedere* 'матур күренеш'] (Р.: бельведер; И.: belvedere; Т.: belvedere) *и. архит.*

Бина өҫтөндәге өҫҡорма *(ғәҙәттә, түңәрәк формала).* □ Бельведер.

**БЕЛЬГИЙ** (Р.: бельгиец; И.: Belgian; Т.: Belçikalı) *и.*

Бельгияның төп халҡы һәм шул халыҡ кешеһе. □ Бельгиец. *Бельгий халҡы. Бельгий телендә.*

**БЕЛЬЭТАЖ** [рус. < фр. *bel* 'матур' + *etage* 'ҡат'] (Р.: бельэтаж; И.: mezzanine; Т.: birinci balkon) *и.*

Бинала (ғәҙәттә, театр бинаһы) партер менән балкон араһындағы ҡат. □ Бельэтаж. *Бельэтажда ултырыу.*

**БЕЛӘ БЕЛЕҮ (белә бел-)** (Р.: знать; И.: know, be in the know; Т.: bilmek) *ҡ. диал.*

Белеү. □ Знать. // Знание. *Белә белһәң, мин уны әллә ҡасан ишеттем.* ■ *Заһиҙә әбей улар белә белгәндән бирле ауылда бер үҙе генә ошо газетаны алдырып уҡый.* Н. Мусин. *[Рәмзил:] Үләм, тип ҡысҡырһаң да, ҡолағына элеүсе булмаҫ. Бында тайга, джунгли, белә белһәң.* Д. Бүләков.

**БЕЛӘҘЕК I (беләҙеге)** [боронғо төрки *билезук* 'беләҙек'] (Р.: браслет; И.: bracelet; Т.: bilezik) *и.*

**1.** Ҡатын-ҡыҙҙың беләккә кейә торған биҙәүесе. □ Браслет. *Алтын беләҙек. Көмөш беләҙек. Ҡашлы беләҙек. Суҡлы беләҙек. Ҡауырһын беләҙек. Сулпылы беләҙек. Ишмә беләҙек. Борма беләҙек.* ■ *Алтын алҡа ҡолаҡта, ҡуш беләҙек беләктә.* Халыҡ йырынан. *Алтын-көмөш беләҙекле, ҡолаҡтарына алҡалар тағып, үтә ҡупшы кейенгән бай ҡатындары ҡүмәк ярлы-ябаға алдында үҙҙәрен ғорур һәм эре тоттто.* Я. Хамматов.

**2.** Күлдәктең ең осондағы тар өлөшө. □ Манжет, манжета. *Төймәле беләҙек. Ҡайтармалы беләҙек.*

**3.** *диал. ҡар.* **ҡушҡар 1.** *Беләҙек һөйәге. Беләҙек быуыны.*

**4.** *диал.* Бейәләйҙең һырланып бәйләнгән ҡуныcы. □ Резинка варежки. *Беләҙеген бәйләп бөттөм. Бейәләй беләҙеге тар булған.*

**5.** *диал.* Арба күкрәген нығыта торған ҡулсалар. □ Кольца для крепления телеги. *Арба беләҙеге һынған.*

**6.** *миф.* Башҡорт халҡының ышаныуҙары буйынса, күҙ тейеүҙән һаҡлар өсөн йөрөтөлгән, беләккә кейә торған биҙәүес. □ Браслет. ■ *Беләҙек күҙҙән һаҡлай.* Башҡорттарҙың им-том китабы.

**БЕЛӘҘЕК II (беләҙеге)** *и. кар.* **быҒау.** ■ *Ҡайҙандыр атылып килеп сыҡҡан әзмәүерҙәй өс кеше, күҙ асып йомған арала [Маратты] уратып алып, ҡулдарын һындыра яҙып артҡа шаҡарҙы, шунда уҡ ҡорос беләҙек сыртлап бикләнде.* Ә. Хәкимов.

**БЕЛӘҘЕК III (беләҙеге)** (Р.: кушанье в виде раскатанных и свёрнутых в трубку кусков сдобного теста, обжаренных в масле; И.: sort of national pastry meal; Т.: yemek türü) *и. диал.*

Урама (*сөсө ҡамырҙан йәйелеп төрөлгән, майҙа ҡыҙҙырылған ашамлыҡ*). □ Кушанье в виде раскатанных и свёрнутых в трубку кусков сдобного теста, обжаренных в масле. *Беләҙек бешереү. Беләҙек ашау.*

**БЕЛӘҘЕКЛЕК (беләҙеклеге)** *и. диал. кар.* **беләҙек һөйәге.**

**БЕЛӘҘЕК ҺӨЙӘГЕ** (Р.: кости запястья; И.: wrist bones; Т.: bilek kemiği) *и. анат.*

Кешеләрҙең беләк һөйәге менән ус һөйәктәре араһындағы ваҡ һөйәк, шаушаҡ һөйәге. □ Кости запястья. *Артыҡ ябыҡ булғанлыҡтан уның беләҙек һөйәктәре ослайып күренеп торалар.*

**БЕЛӘК (беләге)** [дөйөм төрки *биләк* ‘ҡул осо' < *бел* ‘бил'] (Р.: рука; И.: arm; Т.: bilek) *и.*

**1.** Ҡулдың иңбаштан ҡушҡарға тиклемге өлөшө. □ Рука *(от кисти до плеча);* предплечье. ■ *Аҡлы ситса ҡулдәгемдең еңе тар беләгемә.* Халыҡ йырынан. *Хоҙайға илап, теләйем теләк: беләккә — ҡеуәт, йөрәккә — йөрьәт.* Ш. Бабич.

**2.** Төрлө ҡорамалдарҙың әйләндереп хәрәкәтләндерә торған тотҡаһы. □ Ручка, рукоятка. *Ит үткәргес беләге. Елгәргес беләге. Сепаратор беләге.*

**3.** Ҡапҡандың яҫы ҡоростан бөгөп ҡуйған сиртмәһе. □ Пружина капкана. *Ҡапҡан беләге. Тимер беләк.*

**4.** Арбаның тимер үҙәге. □ Железная ось телеги. *Арба беләген ныҒытыу.*

♦ **Тын беләк** эшкә өйрәнгән көслө кешегә ҡарата әйтелә. □ Работоспособный, сильный. *Эй, тын беләк тә инде үҙе, эшләмәгән эше юҡ.*

**БЕЛӘК АҒАСЫ** (Р.: стержень дуплянки; И.: kind of pivot for spinning; Т.: iplik rotunu) *и. туҡ. диал.*

Тырпыса үҙәге *(өйортоу өсөн).* □ Стержень дуплянки. *Беләк ағасы һынып сыҡты.*

**БЕЛӘК БӘКӘЙЕ** *и. диал. кар.* **беләҙек һөйәге.** *Ҡулдәк еңен беләк бәкәйенә тиклем төшөрөп кейеү.*

**БЕЛӘК КӨСӨ** (Р.: физическая сила; И.: physical strength; Т.: bilek kuvveti) *и.*

Мускул эшмәкәрлегенә бәйле көс, физик көс. □ Физическая сила. ■ *Бер ярд самаһы сығарғас, беләк көсө менән түгел, бөтөн кәүҙә мускулдарын егеп, ҡармаҡ бауын әле уң, әле һул ҡулы менән һөйрәне.* Т. Ҡарамышева.

**БЕЛӘКЛЕ** (Р.: плечистый; И.: burly, sturdy; Т.: bilekli) *с.*

**1.** Беләге булған. □ С руками. ■ *Йомро беләкле. Көслө беләкле.*

**2.** *күсм.* Көслө, ғәйрәтле. □ Плечистый, сильнорукий, сильный. ■ *Типһә тимер өҙөрҙәй, Салауаттай беләкле, яуға барған нөгәрҙең батырҙары күп булһын.* Ҡобайырҙан.

**БЕЛӘКЛӘНЕҮ (беләклән-)** (Р.: поправиться; И.: grow fat; Т.: şişmanlamak) *ҡ.*

Йыуан һәм йомро булыу. □ Поправиться, набирать вес, жиреть. // Ожирение. ■ *Кузьмин баяр ..елкәһендәге беләкләнеп ятҡан майы бөкләнмәһен тигән кеүек, муйынын бормай, тотош, кәүҙәһе менән борола.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕЛӘКСӘ I** *и. диал.*

**1.** *кар.* **еңсә 1.** ■ *Беҙҙең Сәлимә бик еңел ҡуллы, ул башлаһын, ти әсәйем, үҙе беләгенә беләксә кейә.* М. Ғафури.

**2.** *кар.* **ҡушҡар 1.**

**3.** Ҡул суғы. □ Кисть руки. *Бейәләй киймәгәнлектән беләксәләрем өшөнө.*

**БЕЛӘКСӘ II** (Р.: подлокотник; И.: armrest; Т.: dirseklik) *и.*

Таянсыҡ. □ Подлокотник. ■ *Стена буйҙарында йомшаҡ креслолар, һөйәнгес һәм беләксәләренә арыҫлан баштары эшләнгән, ялт итеп торған дивандар.* Н. Мусин.

**БЕЛӘ-КҮРӘ** (Р.: зная; И.: knowing; Т.: bile bile) *р.*

Белә тороп, белгән көйө. □ Зная, ведая. ■ *[Карамырҙа:] Бер ярлыға биреп, үҙ кыҙыңды белә-күрә харап итмәҫһең.* Х. Ғәбитов.

**БЕЛӘК ҺӨЙӘГЕ** (Р.: кость лучевая; И.: radius; Т.: önkol kemiği) *и. анат.*

Беләктең оҙон парлы һөйәге. □ Кость лучевая. *Беләк һөйәген һындырған.*

**БЕЛӘН** *бәйл. диал. кар.* **менән.** *Кем белән килдең?*

**БЕЛӘНЕҮ (белән-)** *ҡ. диал. кар.* **шытыу.** *Келәттәге бойҙай беләнгән.*

**БЕЛӘНЛЕК (беләнлеге)** *и. диал. ҡар.* **намаҙлыҡ.** *Алдына беләнлеген һалып, өйлә намаҙын уҡырға ниәт ҡылды.*

**БЕЛӘҮ I (белә-)** (Р.: точить; И.: whet; Т.: bilemek) *ҡ.*

Ҡайрап үткерләү. □ Точить (*бритву и т. д.*). *Сәс бәкеһен беләү. Бысаҡты беләү.* ● *Үтмәҫте беләмә, булмаҫты һөйләмә.* Әйтем.

**БЕЛӘҮ II** [боронғо төрки *биләгү* 'ҡайраҡ'] (Р.: точильный брус; И.: whet stone; Т.: bileği) *и. диал.*

**1.** Бәке, бысаҡ һ. б. кеүек әйберҙәрҙең йөҙөн үткерләй торған йомшаҡ ҡайраҡ. □ Точильный брус, брусок; оселок (*для бритвы*). ■ *Мейес артында беләү, уны белмәгән — һеләү (таба).* Йомаҡ. *Сағылдарҙың яҫмыҡ сақма ташын беләү итеп ҡылыс ҡайраръһың. Ир-егетмен тиһәң, бир ҡулыңды, ғәзиз башым ғазаптан йоларһың.* Риүәйәттән.

**2.** *күсм.* Кейемдәге керләнеп торған урын. □ Засаленное, залоснившееся место (*на одежде*). ■ *Ҡара әле бынауҙы, минән ғәйеп тапкан була, үҙенең яғаһы беләү, ҡатып бөткән! — тип ҡыскырып ебәргән ҡатыны.* Көләмәстән.

**3.** *миф.* Мифологияла ен-шайтандан һаҡлау көсөнә эйә булған предмет. □ Оселок (мифологизированный предмет, обладающий защитной функцией).

**БЕЛӘҮ III** (Р.: лопаточка; И.: small trowel; Т.: küçük mala) *и. диал.*

Мәләү. □ Лопаточка (*употребляемая для выкапывания корнеплодов*). *Беләү менән ҡаҙыу. Беләү менән һуған сокоу.*

**БЕЛӘҮ IV** (Р.: неудавшийся хлеб; И.: poorly baked bread; Т.: pişmemiş ekmek) *и. диал.*

Уңмаған икмәк. □ Неудавшийся хлеб. *Беләү булған икмәгем, баҫылған.*

**БЕЛӘҮҒОЙРОҠ (беләүғойроғо)** (Р.: оселок для бритвы; И.: touchstone; Т.: mihenk taşı) *и. диал.*

Бәләкәй беләү. □ Оселок для бритвы. *Бәкем үтмәҫләнгән, беләүғойроҡ алыр кәрәк.*

**БЕЛӘҮЛЕК (беләүлеге)** (Р.: брусчатка; И.: sett, cobblestone; Т.: denektaşı) *и.*

Беләү яһай торған таш. □ Брусчатка; материал (камень) для изготовления оселка. *Арканзас беләүлеге — донъялағы иң яҡшы беләү таштарҙан һанала.*

**БЕЛӘҮЛӘНЕҮ (беләүлән-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **беләүләү.** *страд. от* **беләүләү.** *Беләүләнгән бәке.*

**2.** *күсм.* Ҡайышланып ялтырау. □ Лосниться (*о засаленной одежде*). *Беләүләнеп бөткән керле кейем.* ■ *Ялан, ҡағын урындарҙа [юл] таҡыр, беләүләнеп бөткән һорғолт таҫма булып һуҙыла.* Н. Мусин.

**БЕЛӘҮЛӘТЕҮ (беләүләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **беләүләү.** *понуд. от* **беләүләү.** *Бысаҡ беләүләтеү.*

**БЕЛӘҮЛӘҮ (беләүлә-)** (Р.: точить; И.: whet; Т.: bilemek) *ҡ.*

Беләү менән үткерләү. □ Точить, затачивать. // Затачивание. ■ *Ғатаулла .. бәке йөҙөн бармаҡ бите менән сыйыртып ҡарағас, тырышып беләүләргә, ҡайышка яныурға тотондо.* Й. Солтанов.

**БЕЛӘҮ ТАШ** *и. диал. ҡар.* **беләү II.** ■ *Төбөнә йомро, шыма беләү таштар түшәлгәнлектән, ул, күпме кеше һыу инһә лә, һис ҡасан буйрамай, ағымы ла ҡаты түгел, өҫкә ҡарай ҙа, арҡыры-буйға ла рәхәтләнеп йөҙөп йөрөйһөң.* Н. Мусин.

**БЕЛӘҮ ЯРА** *и. диал. кар.* **шешек.** *Ҡулыма беләү яра сыҡкан.*

**БЕМОЛЬ** [рус. < фр. *bémol*] (Р.: бемоль; И.: bemol; Т.: bemol) *и. муз.*

Тауышты ярты тонға кәметеүҙе белдергән нота билдәһе. □ Бемоль.

**БЕНГАЛ** [бенг.] (Р.: бенгалец; И.: Bengali; Т.: Bengal) *и.*

Бангладеш һәм Һиндостан халҡының бер өлөшөн тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе. □ Бенгалец. *Бенгал халҡы. Бенгал кешеһе.*

**БЕНГАЛ УТЫ** (Р.: бенгальский огонь; И.: Bengal light; Т.: maytap) *и.*

Сағыу аҡ йәки төрлө төҫ менән янған пиротехник состав һәм фейерверк уты. □ Бенгальский огонь. *Яңы йыл кисәһендә бенгал уттарын яндырҙылар.*

**БЕНЕФИС** [рус. < фр. *benefice*] (Р.: бенефис; И.: benefit performance; Т.: gösteri) *и.*

Артистың талантын хөрмәтләү йөҙөнән уның исеменә арналған тамаша. □ Бенефис. *Бенефис-спектакль. Бенефис ҡуйыу. Бенефис үткәреү.*

**БЕНЗИН** [рус. < ит. *benzina* < урта лат. *benzoe*] (Р.: бензин; И.: gasoline; Т.: benzin) *и.*

Нефттән ҡыуып алынған төҫһеҙ шыйыҡ яғыулыҡ. □ Бензин. *Авиация бензины. Этил бензины. Бензинға хаҡ артҡан.*

**БЕНЗОЛ** [рус. < лат. *benzoe* 'еҫле шыйыҡлыҡ' + *oleum* 'май'] (Р.: бензол; И.: benzol; Т.: benzol) *и. хим.*

Үҙенсәлекле еҫле, төҫһеҙ, һыуҙа насар ирегән, яныусан ағыулы шыйыҡлыҡ *(буяу, лак, шартлатҡыс матдәләр һ. б. яһағанда ҡулланыла).* □ Бензол. *Бензол еҫе. Бензол менән ағыуланыу.* ■ *2005 йылдың 13 ноябрендә Амурға ҡойған Сунгари йылғаһына 100 тоннанан ашыу бензол түгелгәйне.* «Йәшлек», 7 июнь 2008.

**БЕНУАР** [рус. < фр. *baignoire*] (Р.: бенуар; И.: lower boxes; Т.: benuar) *и. театр.*

Театрҙа сәхнә кимәлендә йәки бер аҙ түбәнерәк, партерҙың ике яғынан урынлашҡан ложалар. □ Бенуар. *Бенуарҙа ултырыу. Бенуарға ғына билет ҡалған.*

**БЕР I** [дөйөм төрки *бир* 'бер'] (Р.: один; И.: one; Т.: bir) *төп һ.*

**1.** Иҫәпләгәндә тәүге һан, 1, I цифрҙарының исеме . □ Один, одна, одно; один, раз. *Бергә бишне ҡушыу. Бергә берҙе ҡушһаң, ике була.*

**2.** *Кемдең* йәки *нәмәнең* 1-гә тиң иҫәбе. □ Мера счёта: один, одна, одно. *Бер китап. Бер йомғаҡ. Бер өҫтәл. Бер ултырғыс.* ■ *Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут, берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут.* Ш. Бабич. *Дорогобуж ҡалаһына тиклем сигенгән ошо бер айҙан артығыраҡ ҡәһәрле осорҙа дошмандың холоҡ-фиғелен әҙерәк сырамытып өлгөргәйне инде Рамазан.* Ә. Хәкимов. ● *Бер аҡыл — ярты аҡыл, ике аҡыл — бер аҡыл. Мәҡәл.*

**3.** Нумератив һүҙҙәр менән *нәмәләрҙең* миҡдарын йәки күләмен белдерә. □ Один, одна, одно. *Бер һыныҡ икмәк. Бер йотом һыу. Бер табаҡ йыуаса.* ■ *Егор Николаевич ҡаршыһында өйкөлөп кенә ултырған ҡылғанға ҡарап торҙо-торҙо ла, ҡапыл әйелде һәм бер услам ҡылғанды йолҡоп ал[ды].* З. Ураҡсин. *[Емеш] бөгөн иртәнсәк бер һыныҡ икмәк менән бер сынаяҡ һөтлө сәй генә эскәйне шул ул.* З. Биишева.

**4.** Күп эсендәге яңғыҙға айырым баҫым яһағанда ҡулланыла. □ Один, одна. ■ *Таянып әйәккә, күҙ төбәп йыраҡҡа, ултырам уйланып бер үҙем бер яҡта.* Ш. Бабич. *Тик Зәйнулла ғына бошмаҫ ҡиәфәт менән: «Бер Бикбау ғына бөтәме ни! Хәҙер заманы шулай», — тине.* Р. Солтангәрәев. ● *Бер төкөрһә, ни итер, күп төкөрһә, күл итер.* Әйтем.

**5.** Башҡаларҙан айырылып торған, берҙән-бер. □ Единственный. ■ *Салауат батыр ир ине, менгән аты кир ине. Дошман менән алышҡанда, ил эсендә бер ине.* Халыҡ йырынан.

**6.** *әйл. ф.* **бергенәм.** Яратып, иркәләп әйтелә. □ Единственный, единственная *(ласкательное слово)*. ■ *Ҡайҙа минең иргенәм, йәнем һөйгән бергенәм?* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**7.** *Ниҙеңдер* күмәк өсөн уртаҡ булғанлығын, дөйөмлөгөн белдерә. □ Общий, единый. *Бер вагонда барыу.* ■ *Арынбаҫаровтың, кыҫкаһы, ниндәйҙер бер уртаҡ фекергә килергә башы етмәне.* Д. Буләков.

**8.** Сифат йәһәтенән *ниҙеңдер* икенсе *нәмә* менән тиң икәнен белдерә. □ Одинаковый. *Икеһе лә бер ул. Урлыҡ менән алдаҡ бер ул: икеһе лә насар ғәҙәт. Ул хәҙер минең менән бер ул.* ■ *[Әхмәтҡол:] Бурылды егегеҙ. Алпамыша менән бер ул. Нәҡ һабан аты.* Ш. Шәһәр.

**9.** *миф.* Бөтөнлөк, теүәллек символы; һәр нәмәнең башы менән бәйле. □ Один *(в мифологии символ начала, целостности).* ■ *Бер тигәндә ни яман?* Ҡобайырҙан.

♦ **Бер аҙым да алға бармау** (*йәки* **китмәү**) урындан әҙ генә лә ҡуҙғалмау. □ Ни шагу вперёд. ■ *Тарихһыҙ бер аҙым да алға китеп булмай бында.* Н. Мусин. **Бер аҙым да** (*йәки* **ҡалмау, сикмәү**) арттан ҡалмай йонсотоу. □ Ни шагу (*не отставать, не уступать*). ■ *Бынан ары ул һинең яныңдан бер аҙым да ситкә китмәйәсәк! — тип белдерҙе.* З. Биишева. *Камалдың үҙенән бер аҙым да ситкә китмәй йөрөй торған саптар аты менән ерән бурҙайы була.* Риүәйәттән. **Бер алдына, бер артына сығыу** (*йәки* **төшөү**) кемгәлер ярарға тырышып төрлөсә ҡыланыу. □ Рассыпаться мелким бесом. ■ *Йә, ярар, Сәйфулла, ҡуй! Етәр! Майҙы батманы менән кире бирә күр инде, — тип, ыуалана-ыуалана тегенең бер алдына, бер артына сыға, ти [бай].* Көләмәстән. *Атай, нишләтәбеҙ, алып ҡайтабыҙмы? — Искәндәр атаһының бер алдына, бер артына сыҡты. — Ҡайҙа ҡуябыҙ, өйгәме, лапаҫҡамы?* М. Ямалетдинов. **Бер алдына, биш артына сығыу** (*йәки* **төшөү**) *ҡар.* **бер алдына, бер артына төшөү.** ■ *Шуға Малбай үҙе өсөн бик ҡурҡыныс та, сиртер ҡылын тапһаң, файҙалы ла күршеһен үҙ янынан ысҡындырмаҫҡа, бер алдына, биш артына сығып, көйләп-сөйләп торорға мәжбүр булған.* Ф. Иҫәнғолов. **Бер ауыҙ һүҙ** әҙ генә хәбәр. □ Полслова, ни словечка. *Бер ауыҙ һүҙ әйтмәү. Бер ауыҙ һүҙҙе йәлләү.* ■ *Юҡ, юҡ! — тине Бәкер. — Ант-шинт. Бер кемгә, бер ауыҙ һүҙ ысҡындырмайбыҙ. Малайҙар, ишеттегеҙме?* Н. Ғәйетбаев. *Басиров һөйләгәндә, мин бер ауыҙ һүҙ ҙә ҡыҫтырманым.* Д. Юлтый. *Һеҙгә бер ауыҙ һүҙем дә юҡ, ә хужаларығыҙҙы аҙ ғына тәртипкә күнектереп алаһы бар.* Н. Мусин. **Бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә** саҡ-саҡ йәшәй, үлер сиккә еткән (*олоғайып хәлһеҙләнгән кешегә ҡарата әйтелә*). □ Еле-еле душа в теле. ■ *Бикмырҙа иһә тәүҙә сығырынан сығып: «Мин хәйерсе саҡта кем ярҙам итте? Межа ярғанда хатта, бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә, тип әсәйемде иҫәпкә индермәнеләр», — тине.* Ә. Хәкимов. **Бер аяғын атлағансы икенсеһен эт ашай** бик әкрен ҡуҙғала торған, бызмыр. □ Медлительный. ■ *Тик, әлеге лә баяғы, эшкә бик һалҡын, бер аяғын алғансы икенсе аяғын эт ашай тигәндәй...* С. Агиш. **Бер балыҡ башы** бер үк хәл. □ Тянуть одну и ту же песню. ■ *[Шатморат:] Шулай, инде, нисә тапҡыр һөйләһәң дә, бер балыҡ башы.* Б. Бикбай. **Бер баҫаһы урынға биш баҫа** бик дәртле, осоп-төшөп тора. □ Делать *что-л.* с радостью, быстро. *Бер баҫаһы урынға биш баҫып, ҡыуанысынан килеп тә еткән.* **Бер башҡа юғары** *кемдеңдер* байтаҡҡа артыҡ булыуын белдерә. □ Выше на голову. ■ *Ҡарабаш Күкбүренең үҙенән бер башҡа юғары булыуын — урман кейеге икәнен дә иҫенән сығармай.* Т. Ғарипова. **Бер бите ай, бер бите көн** иҫ киткес матур ҡатын-ҡыҙҙар хаҡында әйтелә. □ Красавица неописуемая. ■ *Бер бите ай, бер бите көн кеүек һылыу был (йәш) ҡатындан ул тыуған.* Әкиәттән. **Бер бот тоҙ ашау** бергә ауырлыҡтар кисереү. □ Съесть пуд соли. ■ *Һалдаттың хөрмәтен яулар өсөн бергәләп ут-һыу кисергә, бер бот тоҙ ашарға кәрәк икән шул.* Ә. Хәкимов. **Берҙе биш итеү** бәләкәй генә нәмәне ҙур итеп ҡабартыу. □ Делать из мухи слона. ■ *Ташбаткан ауылының берҙе биш итергә торған бисәләренә Әхсәндең хәбәре етә ҡалды.* Ж. Кейекбаев. **Бер ҙә булмаһа** ахыр сиктә, бик тә булмаһа. □ На худой конец. *Бер ҙә*

*булмаһа, ала һыйырҙы һуйып, һиңә акса йүнәтербеҙ.* **Бер булыу** 1) уртаҡ уй, ҡарашлы булыу, берләшеү. □ Единяться, соединяться. ■ *Киҫкә тиклем был донъяла беҙ өсөбөҙ бер булып йәшәнек — Акйондоҙ, Мәрәһим, мин.* М. Кәрим; 2) аптырап бөтөү, дыу килеү. □ Теряться, удивляться. ■ *Марфа әбей әллә ниндәй өгөттәрен тылкый, әллә ниндәй хәтирәләрен иҫләй. Төргәктәрен кыштырлата, сәбәләнә, бушамай, өлгөрә алмай бер була.* Р. Камал. **Бер ҙә** һис тә. □ Нисколько, совершенно, вовсе. *Бер ҙә белмәйем. Бер ҙә күргәнем юк. Бер ҙә окшамай. Бер ҙә уйламаған ерҙән.* ■ *Һин әллә бер ҙә йокламаның инде?* Ә. Хәкимов. **Бер ҙә юктан** буштан-бушка, ғәйепһеҙгә, һис сәбәпһеҙ. □ Безвинно, беспричинно. ■ *[Ғәлимәне] бер ҙә юктан харап иттеләр.* М. Ғафури. **Бер епкә теҙеү** барыһын бер төрлө һанау. □ Стричь под одну гребёнку, подгонять под один ковёр, ставить на одну доску. ■ *[Зөбәйҙә:] Һеҙ бисәләрҙең бөтәһен дә бер епкә теҙергә ашыкмағыҙ әле.* Г. Әхмәтшин. **Бер итеп <йөрөү>** ҡуҙғатыу, хәрәкәткә килтереү; эҙләү. □ Всё растормошив (*ходить, искать*). ■ *Эх, якшы аттар егеп, Ҡуштирәк урамдарын бер итеп йөрөйһөләр бар әле!..* Ә. Хәкимов. **Бер йотом** аҙ ғына. □ Немного. *Бер йотом һыу ҙа капмаған.* **Бер йәндән (**_йәки_ **тәндән)** дуҫ, татыу йәшәгән кешеләр хаҡында әйтелә. □ Душа в душу. **Бер йәшлектә, бер ҡартлыкта** йәш саҡта ҡылғанды олоғайғас ҡабатлағанда, шаяртыбыраҡ әйтелә. □ Была не была. ■ *Бикбауҙар, әллә аптыраштан, әллә күңелдәрен баҫыр өсөн генә геүләшеп алды: «Бер йәшлектә, бер ҡартлыкта, ти, Әхмәҙиә ағай, күрһәт әле шуға Ҡуғанаҡ тауының ҡатылығын*!» Р. Солтангәрәев. **Бер калыпка һуғыу** *кар.* **бер епкә теҙеү**. **Бер калыптан <һуғылған, яһалған>** окшаш һыҙаттары булған кешеләр хаҡында әйтелә (*гәҙәттә, кире мәғәнәлә*). □ Одним миром мазаны, одним лыком шиты, из одного и того же теста сделаны, одного поля ягоды. ■ *Ысынын әйткәндә, егеттәр, — тине Мәхмүт, — башкорт байы ла, рус байы ла бер калыптан.* Ж. Кейекбаев. **Бер ҡалаҡтан (**_йәки_ **табактан) ашау** үтә нык дуҫ булыу. □ Жить душа в душу, на дружеской (*короткой*) ноге *с кем-л.* ■ *[Шәмсикамал:] Кейәүең менән бер ҡалаҡтан ашаған кешеһең бит әле, етмәһә.* Яр. Вәлиев. **Бер ҡалаҡ (**_йәки_ **кашык) һыуға (**_йәки_ **калакка) һалып йоторлоҡ** матур ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. □ Антик с гвоздикой (с мармеладом). ■ *Исемен-атын, ырыуы-затын һорап та торма. Килмәгән ере юк. Үҙен бер кашык һыуға һал да йот.* М. Кәрим. **Бер катлы** хәйләһеҙ, эскерһеҙ. □ Наивный, простодушный. *соотв.* Душа нараспашку. ■ *Ҡот оскос оло вакиғалар араһында буталып ҡалған Фазлый бик бер ҡатлы ине был сакта.* Б. Бикбай. **Бер колағынан инә, икенсеһенән сыға** әйткән һүҙҙе, кәңәште, йомошто иғтибарһыҙ тыңлау йәки тиҙ онотоу. □ В одно ухо влетает, из другого вылетает. ■ *Рәхимәнең аҙаккы бойороктары ла Айбулаттың бер колағынан инеп, икенсе колағынан сыкты.* Һ. Дәүләтшина. **Бер ҡырҡылған икмәк берекмәй** айырылышҡан ир менән ҡатын кире ҡушыла алмай. □ Разбитую чашу не склеить. **Бер ни тормау** бик еңел башҡарыу. □ Ничего не стоит. ■ *Әҙәм кәмһетеү уға бер ни тормай, холкон беләбеҙ.* М. Кәрим. **Бер нигә карамай** һис бер сәбәпте иҫәпкә алмай, иғтибар итеп тормай. □ Несмотря ни на что. ■ *Әгәр ҙә һуңғы мәлдә тормошоноң аҫтын өҫкә әйләндергән хәлдәр килеп тыумаһа [Марат], бер нигә карамай, укыуын да дауам итер, бүтән кыйынлыктарҙы ла еңеп сығыр ине.* Ә. Хәкимов. **Бер сама** 1) күпмелер кимәлдә. □ Определённое количество. *Бер сама булыу. Бер сама эшләү;* 2) әллә ни шәп түгел, уртасараҡ. □ Так себе. ■ *Кем һуң ул Хисаметдин, арыу кешеме? — Арыу тип ни, бер сама инде.* К. Мәргән. **Бер сыбыктан кыуылған** холоҡ-фиғеле окшаш кешеләр хаҡында әйтелә. □ Одного поля ягоды. ■ *Корниловтың олоһо ла, бәләкәйе лә — бер сыбыктан ҡыуылған инде.* В. Исхаҡов. **Бер табандан** бергәләшеп, бер булып; бер төптән. □ Дружно, единодушно. ■ *Ҡатил серен*

*бирмәгән, бер табандан уҡталып, дүрт батырға ымлаған.* «Урал батыр». **Бер тамсы ҡан ҡалғансы <көрәшеү, һуғышыу>** үҙеңде аямай, бар мөмкинлегеңә. □ До последней капли крови (*бороться, биться и т. п.*). **Бер тамсы ла** бер ҙә, һис тә. □ Ни капли, нисколько. ■ *Мыйыл .. бер тамсы ла тирләмәне.* Һ. Дәүләтшина. **Бер тауыштан (***йәки* **ауыҙҙан)** бер фекерҙә булыу. □ В один голос. *Бер тауыштан һайланылар.* **Бер тигән** бик шәп, ғәжәп һәйбәт. □ Самый лучший, на редкость хороший. ■ *Адвокаттың бөтә губернала бер тигәнен яллағанмын.* Һ. Дәүләтшина. *Иллә-мәгәр мин үҙем илдә бер тигән ҡыҙҙар менән йөрөгән кешемен.* М. Кәрим. *...Тирә-яҡта бер тигән сибәр ҙә, аҡыллы ла, сәсән дә булып үҫеп еткән [Көнһылыу].* Ф. Иҫәнғолов. **Бер тип тә** бер һүҙ ҙә. □ Ни единого слова. *Бер тип тә өндәшмәү.* **Бер тингә лә һанамау** һанламау. □ Ни в медный грош не ставит, ни во что не ставит. **Бер тотам <ҡалмау>** *ҡар.* **бер аҙым ҡалмау.** ■ *Әсә ат етәкләп ошо ергә килә. Әлбиттә, Биктимер ҙә әсәһенең артынан бер тотам да ҡалмай.* Ә.Вахитов. **Бер тотош** бергә, беркетелгән. □ В целом, соединённый. **Бер төптән** берҙәм, бергәләп, татыу. □ Все вместе, дружно. ■ *Барыбыҙ бер төптән тороп, килешеп, артабан һуғышыуҙан баш тартырға кәрәк! — ти һалдаттарҙың береһе.* Д. Юлтый. **Бер төрлөрәк (***кешегә ҡарата***)** иҫәр, алйот. □ Со странностями (*о человеке*), не все дома. ■ *Аҡса кемгә лә кәрәк, — тине йәне көйөп киткән Инсаф. Был ҡатын ысынлап та бер төрлөрәк, ахыры, тигән шиге көсәйҙе.* Г. Ғиззәтуллина. **Бер урында тапаныу** эштә, тормошта һ. б. алға бармай, бер кимәлдә ҡалыу. □ Топтаться на одном месте. **Бер үк балыҡ башы** һөҙөмтәһеҙ ҡабат-ҡабат һөйләнгән хәбәр. □ Одно и то же. ■ *Күпме генә сәйнәһәң дә, бер үк балыҡ башы, тигәндәй, унан ғына бер ни ҙә артмаясаҡ та, кәмемәйәсәк тә.* Н. Асанбаев. **Бер һүҙ менән әйткәндә** ҡыҫҡаса әйткәндә. □ Одним словом. ■ *Ватыҡ-емеректе төҙәтергә, хужалыҡты ипкә-һапҡа килтерергә, бер һүҙ менән әйткәндә, тормошто ҡәҙимге тәбиғи көйгә һалырға кәрәк буласаҡ.* Ә. Хәкимов. **Бер шөрөбө етешмәй** иҫәр, алйот. □ *соотв.* Винтиков не хватает, не все дома.

**БЕР II** [дөйөм төрки *бир* ‘бер’] (Р.: один; И.: one; Т.: bir) *билдһ. а.*

**1.** Исемгә билдәһеҙлек, конкретһыҙлыҡ мәғәнәһе бирә. □ *В сочет. с им. сущ.* выступает в роли неопределённого артикля. *Бер урын. Бер ҡыҙ.* ■ *Тап шул урында Шаҡман ҡапыл тертләп китте: бөтөнләй ят бер егеткә үҙенең күптәнге уй-фекерҙәрен һөйләп ташланы ла баһа!* К. Мәргән. *Балыҡтарҙы бер яман кеше һәләк иткән.* М. Кәрим. *Ҡыпсаҡ яғында мәрйә ҡыҙына өйләнгән бер егетте ана сход йыйып ауылдан ҡыуғандар хатта.* Н. Мусин.

**2.** Ҡайһы бер сифат һәм рәүештәр менән килеп, саманы, конкретһыҙлыҡты белдерә. □ В сочет. с некоторыми прил. и нареч. выражает неконкретность. *Бер аҙ. Бер аулаҡ. Бер ни тиклем. Бер ҡәҙәр.* ■ *Халыҡ күп ине, Әхмәтхан бер арала улы Ғилемханға зыярат күрһәтеп китте.* Р. Камал.

**3.** Бар булған кешеләрҙең йәки нәмәләрҙең һәр ҡайһыһына баҫым яһағанда ҡулланыла. □ Каждый, любой. *Осраған бер кешегә ышанырға ярамай.* ■ *Уралып ятҡан Уралда теләгән бер януар бар.* Ҡобайырҙан.

**БЕР III** [дөйөм төрки *бир* ‘бер’] (Р.: один; И.: one; Т.: bir) *р.*

Юҡлыҡ формаһындағы хәбәр менән килеп, көсәйтеү мәғәнәһен белдерә; һис. □ *В сочет. с гл. отриц. формы* выражает усиление действия; ни, никак; нисколько. *Бер һөйләргә ирек бирмәй. Бер тыңламайһың.* ■ *Ә ниңә һуң Ирназарҙың ятҡан урыны бер туҡтауһыҙ һелкенә, бәүелә?* Ә. Хәкимов. *Ҡарайһың-ҡарайһың, бер ни абайлап булмай.* Р. Солтангәрәев.

**БЕР IV (бер ..., бер ...)** [дөйөм төрки *бир* ‘бер’] (Р.: один; И.: one; Т.: bir) *терк.*

Аллы-артлы теҙеп биргәндә йәки ҡаршы ҡуйғанда ҡулланыла. □ *Союз. разд.* то ..., то ... ■ *Эшелон, йөрөшөн бер тиҙләтеп, бер әкренәйтеп, үҙ юҫығы менән туҡтауһыҙ бара ла бара.* Ә. Хәкимов. *Жандармдар*

*телһеҙ кала: бер торалар, бер ултыралар, күҙҙәрен бер ҙур асалар, бер кире йомалар; бер-береһенә карашкан булалар, тағы аймылышалар.* Р. Камал.

**БЕР V** [дөйөм төрки *бир* 'бер'] *кар.* **берле II.** *Бер кыйыу. Бер алыу.*

**БЕР АҘ** (Р.: немного; И.: a little; Т.: biraz) *р.*

Кыҫка ваҡыт эсендә. □ Немного. *Бер аҙ ял иткәс.* ■ *Кот оскос шартлауҙан машина, кырға янтайып, бер аҙ барҙы ла туктап калды, сытырлап яна башланы.* Ә. Хәкимов. *Әңгәмә, ошо урынға еткәс, бер аҙ тукталып калды.* К. Мәргән.

**БЕР АҘҒА** (Р.: ненадолго; И.: not for long; Т.: kısaca) *р.*

Оҙакҡа түгел. □ Ненадолго, на некоторое время. *Бер аҙға туктап торайык. Бер аҙға онотайык.* ■ *Тома һукыр әгәр көтмәгәндә күҙен асһа аҙға, бик аҙға, ул шул минут якты көнгә карап, һуҙһеҙ калыр ине бер аҙға.* Р. Шаммас.

**БЕР АҘҘАН** (Р.: через некоторое время; И.: after a while; Т.: birazdan) *р.*

Аҙырак ваҡыт үткәс. □ Через некоторое время, некоторое время спустя. ■ *Тимербулат бер өйгә барып ингән. Тәүҙә унда бер кем дә булмаған. Бер аҙҙан бер карт килеп сыккан.* Әкиәттән. *Бер аҙҙан теге һылыу катын, инде кулында батмус уйнатмай ғына, улар янына килде.* З. Биишева.

**БЕР АРА** (Р.: одно время; И.: some time; Т.: bir vakit) *р.*

Бер ваҡыт. □ Одно время, некоторое время, когда-нибудь; как-нибудь. *Бер ара миңә инеп сык. Бер ара бурандар булып торҙо.* ■ *Әйүп көсәнеп күҙен йомдо. Кайһылыр бер арала кабактары элендә, күҙ алмалары йокоға ойоғандай итте.* Т. Ғарипова. *Инеүсе капыл ғына өй ишегенә потонманы, бер араға аяк тауышы тынып торҙо.* Н. Мусин.

**БЕР АУЫҘҘАН** (Р.: единогласно; И.: unanimously; Т.: oybirliğiyle) *р.*

Бер тауыштан, берҙәм. □ Единогласно, дружно; без возражения, безоговорочно. *Бер ауыҙҙан кабул ителде.* ■ *Новиковтың был һүҙен һәр бер һалдат айырым тынлык менән тыңлай, ул һөйләп бөткәс, бөтәһе лә бер ауыҙҙан: «Шулай инде ул, дөрөҫ һүҙгә ни әйтәһең?» — тиҙәр.* Д. Юлтый.

**БЕР АУЫМ** *р. диал. кар.* **бер аҙ.** *Бер ауым йоклап алыу. Саматтың йөрәге елкенеп куйҙы, хатта бер ауым үҙенең бында ниңә килгәнен онота биреп ултырҙы.*

**БЕР-БЕР I** (Р.: какой-либо; И.: some; Т.: bir) *с.*

Ниндәй ҙә булһа бер; берәй. □ Какой-либо, такой-то. *Бер-бер кеше. Бер-бер хәбәр. Бер-бер эш.* ■ *Инәйем ут эсендә, бер-бер хәл булһа...* Р. Камал.

**БЕР-БЕР II** (Р.: некоторый; И.: some; Т.: bazı) *а. диал.*

**1.** Кайһы бер. □ Некоторый. *Бер-бер малда ла булды бит ул ауырыу.* ■ *Туғандарым иҫемә, ай, төшкәндә, бер-бер төндәр була йыл кеүек.* Халык йырынан.

**2.** Бөтөнләй. □ Совсем, совершенно, полностью. *Бер-бер һөйләй күрмә. Бер-бер ашай күрмә.*

**БЕР-БЕР АРТЛЫ** (Р.: один за другим; И.: one after another; Т.: ardı ardına) *р.*

Бер туктауһыҙ, береһе артынан икенсеһе. □ Один за другим, вереницей; гуськом, чередой. *Бер-бер артлы һорау биреү.* ■ *Йондоҙҙар бер-бер артлы һүнеп, байып барған, уйһыу ерҙәргә ап-ак томан эркелеп яткан илаһи мәл.* Ә. Хәкимов. *Ваҡиғалар булманы түгел, бер-бер артлы тыуып торҙолар.* К. Мәргән.

**БЕР-БЕРЕ, бер-береһе** (Р.: друг друга; И.: each other; Т.: birbiri) *билд. а.*

Ике аралағы мөнәсәбәтте белдерә; үҙ-ара. □ Друг друга. *Бер-берендә уйлау. Бер-берендә көтөү.* ■ *Булмә эсе ниңәлер ғәҙәттәгесә түгел, халык йыйылған, һөйләшмәйҙәр, бер-береһенә шыбыр-шыбыр ғына өндәшәләр.* З. Ураксин. *Оҙак бергә йәшәгәндәр бер-береһенә эйәләшә, бер-береһенә эйәрә, тиҙәр.* Р. Камал.

**БЕР-БЕРӘҮ** (Р.: кто-нибудь; И.: somebody; Т.: birisi) *и.*

Берәй кеше. □ Кто-нибудь, кто-то. *Бер-берәү белеп ҡалмаһын.* ■ *Иҙеүкәй фирасәтле кеше булғанлыҡтан, уға бер-берәүҙән йәберләнгән халыҡтар хөкөмгә килә башлайҙар.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**БЕР БӨТӨН** (Р.: целостный; И.: integral, whole; Т.: bütün) *с.*

Бөтөн, теүәл, тулы. □ Целостный. *Бер бөтөн күҙаллау.* ■ *Сәйфтең үҙ әҫәре, яңынан-яңы ботаҡтар ебәргән, бөрөгә тумалып ултырған ағас кеүек, тармаҡлана, шул уҡ ваҡытта бер бөтөн булып ойоша барҙы.* Ә. Хәкимов. *Ана, Аҡйондоҙ менән Мәрәһим ике яртынан бер бөтөн булырға тейеш йән эйәләре...* М. Кәрим.

**БЕР БӨТӨНЛӨК (бөтөнлөгө)** (Р.: целостность; И.: integrity; Т.: bütünlük) *и.*

Бөтөнлөк, теүәллек, тулылыҡ. □ Целостность. ■ *Шиғриәт — ул иң юғары әхлаҡ, халыҡ мәнфәғәтенә тоғролоҡ. Шәйехзада Бабич менән Рәми Ғариповтың, мәҫәлән, халыҡ намыҫына әүерелеүе уларҙың шәхес һәм ижадының бер бөтөнлөгөнән килә.* Ф. Туғыҙбаева.

**БЕРБЫУЫН** (Р.: одночлен; И.: monomial; Т.: birterimli) *и. мат.*

Ҡабатлау һәм дәрәжәгә күтәреү ғәмәлдәрен генә эсенә алған алгебраик аңлатма. □ Одночлен. *Бербыуынды дәрәжәгә күтәреү.*

**БЕРБЫУЫНЛЫ** (Р.: одночленный; И.: monomial; Т.: birterimli) *с. мат.*

Бер быуын булып тороусы. □ Являющийся одночленом. *Бербыуынлы формула. Бербыуынлы тигеҙләмә.*

**БЕР ВАҠЫТ** (Р.: однажды; И.: once; Т.: bir vakit) *р.*

**1.** Бер тапҡыр, бер мәл. □ Однажды, в одно время, как-то, когда-то, некогда, раз. *Бер ваҡыт мин уға хат яҙғайным.* ■ *Барыһы ла бында бер ваҡыт ҡуйы урман булғанын әйтеп торалар.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Ҡасандыр, киләсәктә. □ Со временем, рано или поздно, когда-нибудь. *Бер ваҡыт беҙ ҙә байырбыҙ.* ■ *Бер ваҡыт аңларҙар, үкенерҙәр ҙә, һуң булыр.* Р. Солтангәрәев.

**БЕРГАМОТ** [рус. < ит. *bergamotto* < төрк. *веу* ʻкенәзʼ + *armud* ʻгрушаʼ] (Р.: бергамот; И.: bergamot; Т.: bergamot) *и.*

**1.** Грушаның төрө. □ Бергамот (лат. *Citrus bergamia). Бергамотты сәйгә ҡушып эсеү.*

**2.** Цитрустарға ҡараған бик еҫле ағас. □ Бергамот.

**БЕРГӨЙЛӨ** (Р.: придурковатый; И.: doltish; Т.: budala) *с. диал.*

Аҡылға еңел. □ Придурковатый. *Бергөйлө бала булып тыуҙы.*

**БЕРГҮТӘРӘМ** (Р.: тяжёлый; И.: heavy; Т.: ağır) *с. диал.*

Ауыр. □ Тяжёлый. *Бергүтәрәм күнәк. Бергүтәрәм итеп һалып бирҙе.*

**БЕРГӘ** (Р.: вместе; И.: together; Т.: birlikte) *р.*

**1.** Үҙ-ара берлектә, ҡатнашлыҡта; айырым түгел. □ Вместе, совместно. *Бергә йәшәү. Бергә йөрөү. Бергә уҡыу.* ■ *Гел ситкә тибәрелеп йөрөгән малайҙың [Яҡуптың] үҙ тиҫтерҙәре араһында булғыһы, бергә уйнағыһы, шаярғыһы килде.* М. Кәрим. ● *Яҡшы менән бергә булһаң — үңдың, яман менән бергә булһаң — туңдың.* Әйтем.

**2.** Бер үк ваҡытта, бер юлы. □ В одно время, одновременно. *Бергә килеү. Бергә ҡайтыу.* ■ *Ғилман уны белә — [Хәлитов] һәйбәт кеше, институтты Моратов менән бергә бөткән, байтаҡ йылдар бергә эшләгәндәр.* Н. Мусин. *Йәбешер нәмә таба алмай ел ыңғайына килә торғас, ҡылған һабағына һырыша, уны тамырынан йолҡоп, үҙе менән бергә алып китергә теләгәндәй, бөгөлдөрөп, һығылдырып ҡарай.* З. Ураҡсин.

♦ **Шуның менән бергә** шул уҡ ваҡытта. □ В то же время, одновременно. ■ *Ҡулдар ҡалтырай, шуның менән бергә дөп-дөп һуҡҡан йөрәк тауышы минең ҡолаҡҡа ишетелә.* Д. Юлтый.

**БЕРГӘ-БЕР** (Р.: один на один; И.: tete a tete; Т.: başbaşa) *р.*

Икәүҙән-икәү, аулаҡта. □ Один на один, наедине. *Бергә-бер килеп һөйләшеү.*

**БЕРГӘ-БЕРГӘ** (Р.: совместно; И.: jointly; Т.: birlikte) *р.*

Бергәләшеп. □ Совместно, сообща. *Бергә-бергә йәшәү.* ■ *Төлсөм менән Нурия, иртәнге тамаҡҡа әҙерләп, усаҡ тирәһендә ҡайнашты. Алсаҡ ҡыҙ менән илгәҙәк ҡатын, күптән үк бергә-бергә татыу йәшәгән кешеләр кеүек, дуҫлашып та алғайнылар.* Н. Мусин.

**БЕРГӘЙ** *а. диал. ҡар.* **берәй.**

**БЕРГӘЙЛӘШЕҮ (бергәйләш-)** *ҡ. диал. ҡар.* **башлы-күҙле булыу.**

**БЕРГӘ ҠУШЫЛЫУ (бергә ҡушыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бергә ҡушыу 1.** *страд. от* **бергә ҡушыу 1.** ■ *Йәйге еңел, саф һауа юҡ инде хәҙер, серегән үлән, бурһыған ағас, кәрттәләрҙәге тиҙәк, дым, нилектәндер юғары күтәрелмәй мөрйәләргә уралған төтөн еҫтәре — бөтәһе бергә ҡушылып, ошо мәлгә генә хас еҫ аңҡыта.* Н. Мусин. *Ер өҫтөндә шатлыҡ менән ҡайғы тойғолары бергә ҡушылып урғыла, ажғыра, ҡайнай, сөнки һуғыш ҡорбанһыҙ булмай, һәр көн почта кемгә лә булһа яҡынының яраланыуы йәки һәләк булыуы тураһында хәбәр килтерә.* З. Биишева.

**БЕРГӘ ҠУШЫУ (бергә ҡуш-)** (Р.: соединить; И.: unite, unifly; Т.: birleştirmek) *ҡ.*

**1.** Берләштереү. □ Соединить. // Соединение. ■ *Ниндәйҙер ҡоштар гармун, скрипка, гитара, мандолина, ҡыҫҡаһы, донъялағы барлыҡ музыканы бергә ҡушҡан шикелле, шундай моңло, шундай тәьҫирле һайрайҙар.* Ғ. Хәйри. *Халыҡ, гөж килеп, ике-өс ҡырандасҡа юл бирҙе. Мәликәнең әсәһе, ҡыуанысы менән ҡайғыһын бергә ҡушып, сеңләп илай башланы, уға йәш еңгәләрҙең, ҡыҙҡырҡындың һамағы өҫтәлде.* Ә. Хәкимов.

**2.** Бер үк ваҡытта алып барыу, үтәү. □ Совместить. // Совмещение. *Ике эште бергә ҡушып башҡарыу. Эш менән ялды бергә ҡуша белергә кәрәк.*

**БЕРГӘЛЕК (бергәлеге)** (Р.: общность; И.: unity, community; Т.: birlik) *и.*

**1.** Берҙәмлек, уртаҡлыҡ. □ Общность, единство; совместность. *Тел бергәлеге. Мәҙәниәт бергәлеге.*

**2.** Дуҫлыҡ, татыулыҡ, берҙәмлек. □ Дружба, единодушие, согласие; сплочённость. *Ике халыҡ бергәлеге. Сиктәш республикалар бергәлеге.* ■ *Рәсәй менән бергәлек — башҡорт халҡының яҙмышында артабанғы тупланыу һәм үҫеш өсөн нигеҙ булып хеҙмәт иткән мөһим боролош.* М. Хужин.

**3.** Бәйләнеш, берләшмә. □ Тесная связь, союз. *Туғандаш халыҡтар бергәлеге.* ■ *Һәүкәштәр алдан елә, күрәһең, тыуған, кендек ҡаны тамған ерҙе мал заттары әҙәмдән нығыраҡ һиҙә, уларҙа тәбиғәт менән бергәлек, берҙәмлек хисе, ахыры, көслөрәктер.* Т. Ғарипова.

**БЕРГӘЛӘП** (Р.: вместе; И.: jointly; Т.: beraber) *р.*

Үҙ-ара берлектә; бергә. □ Вместе, совместно, сообща. *Бергәләп эшләү.* ■ *Бына бит, бергәләп ҡыуанышып сәхәр ашап ултырабыҙ.* З. Биишева. *Егор ҡарттың ҡатыны оло улы Николайға бергәләп һатыу итергә, лавканы асып ебәрергә тәҡдим итеп ҡараны, тауар алып килеү өсөн аҡса бирмәксе булды, ләкин эш барып сыҡманы.* Ж. Кейекбаев.

**БЕРГӘЛӘШЕП** (Р.: совместно; И.: in common; Т.: beraber) *р.*

Үҙ-ара бер булып; бергә-бергә. □ Совместно, сообща. ■ *Ете батыр бергәләшеп артабан киткән.* Әкиәттән. *Колхозды бит [Мәҙинәнең] әләсәһе, әсәһе һәм үҙе менән бергә төҙөнөләр, бергәләшеп аяҡҡа баҫтырҙылар.* Т. Ғарипова. *[Азамат:] Беҙ барыһын да бергәләшеп эшләргә, табырға тейешбеҙ!* Р. Солтангәрәев.

**БЕРҒАҘАН** (Р.: пеликан; И.: pelican; Т.: pelikan) *и. зоол.*

Ауырлығы 12—14 килограмға еткән, дөйөм төҫө аҡ, баш һәм елкә ҡауырһындары бөҙрәләнеп торған ҙур ҡош; ҡотан, пеликан. □ Пеликан (лат. *Pelecanus*). ■ *Берғаҙан һай күлдәрҙә, йылғаларҙа йәшәй. Башлыса балыҡ, һирәкләп тәлмәрйендәр менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**БЕР ҒАРА** (Р.: длина четырёх мотушек; И.: length of four skeins; Т.: iplik) *и. диал.*

Дүрт кәләп буйы еп. □ Длина четырёх мотушек. *Бөгөн бары бер ғара йөн иләнем. Бер ғара еп өҙөп алды.*

**БЕРҒАРЫШ** (Р.: жаба; И.: toad; Т.: karakurbağası) *и. зоол. диал.*

Баҡа, тәлмәрйен. □ Жаба, лягушка (лат. *Bufonidac, Kana). Ямғырҙан һуң берғарыштар күпләп күренделәр.*

**БЕРҒАУЫМ** *р. ҡар.* **бер аҙ.** *Берғауым эшләп алыу.*

**БЕРҘӘЙ** (Р.: одинаково; И.: equally; Т.: aynı derecede) *р.*

**1.** Бер тигеҙ, бер төрлө. □ Одинаково, равно, наравне. ■ *Сәлимов ыңғай һәм ҡаршы һөйләүселәрҙе берҙәй ихлас тыңланы.* З. Биишева. *Шакира Хисамовна бармаҡтарына ҡараны. – Бына улар... бишеһе биш башҡа тора, ләкин уларҙың ҡайһыһын тешләһәң дә .. берҙәй ауырта.*Т. Ғарипова.

**2.** *һөйл.* Бик яҡшы, бик шәп, һәйбәт. □ Отличный, замечательный. *Ул берҙәй кеше. Берҙәй эшләп йөрөй.*

**БЕРҘӘЙЛЕК (берҙәйлеге)** (Р.: тождественность; И.: identity; Т.: benzerlik) *и.*

Тиңлек, оҡшашлыҡ. □ Тождественность, тождество; полное сходство. *Ҡараштарҙың берҙәйлеге. Фекерҙәр берҙәйлеге.*

**БЕРҘӘМ** (Р.: единый; И.: integrated; Т.: bütün) *с.*

**1.** Бер бөтөн. □ Единый. *Уҡытыу менән тәрбиә эше берҙәм процесс итеп ҡарала.*

**2.** Бер уй, ниәт менән береккән. □ Дружный, согласованный, единогласный; сплочённый, слаженный. *Берҙәм эш. Берҙәм булыу. Берҙәм тотоноу. Берҙәм ҡуҙғалыу.* ■ *Малайҙар берҙәм ҡул күтәрҙе.* М. Кәрим. *Йыр бөткәс, уғата дәртләнеп киткән ҡунаҡтар берҙәм ғауғалашып-гөрләшеп алды.* Н. Мусин.

**3.** Уртаҡ. □ Совместный. *Берҙәм ижад емеше.*

**БЕРҘӘМЛЕК (берҙәмлеге)** (Р.: единство; И.: unity, accord;Т.: birlik) *и.*

**1.** Дуҫлыҡ, береккәнлек, бер бөтөнлөк. □ Дружба, единство, единодушие, сплочённость, слаженность, спаянность, согласованность. ■ *[Боғара кет-кет көлөп ҡуйҙы:] Мәгәр, әйткәнеңсә, ил берҙәмлеге, татыулыҡ тип йән атһаң, минән айырыла алмайһың.* Ә. Хәкимов. *Аслыҡтан, тән яҙаһынан яфа сигеп, һабрау әлеккенән яман Урҙаның тетмәһен тетә, башҡорттарҙы берҙәмлеккә өндәй, Еҙүкәйгә ҡаршы ҡуя.* Я. Хамматов.

**2.** Уртаҡлыҡ. □ Общность, единство, совместность. *Тел берҙәмлеге. Хеҙмәт берҙәмлеге. Ҡараштар берҙәмлеге.*

**БЕРҘӘН I** (Р.: в один приём; И.: at one go; Т.: birden) *р.*

Бер юлы, бер ыңғайҙан. □ В один приём, сразу, зараз, разом. ■ *Новиков мәсьәләгә берҙән төшөндө.* Д. Юлтый.

**БЕРҘӘН II** *инш. ҡар.* **беренсенән.** ■ *Рая уның клубты ташлап киткеһе килмәгәнлеген белә ине. Берҙән, бында әле бик күңелле, икенсенән, буфет асылғанын күреп ҡалдымы, әрһеҙ егеттәр йәнә килеп туласаҡ...* Р. Солтангәрәев. *Ҡуҙыйкүрпәстең, берҙән, йәтим булып, икенсенән, шулай үҙ һүҙле, шуҡ булып үҫеүе Күсәр ханға оҡшамай ине, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**БЕРҘӘН-БЕР** (Р.: единственный; И.: sole, unique; Т.: biricik) *с.*

**1.** Бер генә бөртөк, яңғыҙ, бер. □ Единственный, один-единственный; единичный. ■ *Ырыҫ, дәүләт ишимәһен асам тиһәң, ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр.* М. Аҡмулла. *Наҡыҫ ҡына булһа ла түй яһап, Мәликәһен килен итеп төшөрөп, өйҙән сығып китеүенә ун биш көн тигәндә, берҙән-бер хат ебәрҙе лә дүрт йыл инде бүтән хәбәре юҡ Хәйбулланың.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ваҡытты асыҡ итеп атамағанда ҡулланыла. □ Как-то раз, когда-то; однажды. *Берҙән-бер ваҡыт.* ■ *Танауым төшөбөрәк йөрөгәндә һиҙептер инде, берҙән-бер көндө әсәйем: «Улым, ниңә улай бошонеп йөрөйһөң?» – тип һораны.* Н. Мусин.

**БЕРЕ** *а. ҡар.* **береһе.** *Ун ике бәпкәнең бере юҡ.*

**БЕРЕГЕҮ (берек-)** (Р.: срастаться; И.: accrete; Т.: birikmek) *ҡ.*

**1.** Бергә тоташыу, йәбешеү. □ Срастаться, соединяться, скрепляться. // Соединение, скрепление. *Бүрәнәләр береккән.* ■ *[Рая:] Кендегең берекмәгәндер бит. Һин төшөңдә лә мине эҙләйһеңме икән?* Р. Солтангәрәев.

**2.** Бергә тупланыу; берләшеү. □ Соединяться, сплачиваться, объединяться. // Сплочение, объединение. ■ *Әхтәм, үҙ уйы менән булып, иптәштәренә берекмәне.* Ә. Хәкимов.

**3.** Бер нөктәгә, берҙәмлеккә килеү. □ Сходиться, сойтись (*во мнениях*), сговариваться. // Схождение, сговариванье. *Фекер берегеү. Караштар берегеү.* ■ *Бей менән [Котлоярҙың] һүҙе береккәнгә окшай окшауын.* Я. Хамматов.

**4.** Нығыныу. □ Закрепляться, упрочиться, утвердиться. // Закрепление, упрочение, утверждение. *Ике һүҙ берегеп кушма һүҙ яһай. Етәксе урынына нык береккән.*

♦ **Кәңәшегеҙ берекһен** һөйләшеп ултырған кешеләрҙе сәләмләү һүҙе. □ Совет да согласие вам! ■ *[Сәхипгәрәй Әхтиәров:] Кәңәшегеҙ берекһен, ағай-эне! — тип иҫәнләште лә ауылдаштары араһына барып ултырҙы. — Йә, кәйефтәр нисек?* Я. Хамматов.

**БЕРЕГЕШЕҮ (берегеш-)** *к. урт. кар.* **берегеү 2, 3.** *взаимн. от* **берегеү 2, 3.**

**БЕРЕККӘН** (Р.: спаянный; И.: unitied; Т.: birleştirilmiş) *с.*

**1.** Тоташкан, йәбешкән. □ Спаянный, соединённый, скреплённый, склеенный. ■ *[Гәйникамал абыстай:] Бер көн шулай, бергә береккән ике энәгарағын тотоп, шуны киптерҙем.* Г. Хәйри.

**2.** Берләшкән. □ Сплочённый, объединённый. ● *Айырылған ир аҙыр, береккән ир уҙыр.* Әйтем. *Береккән көтөүҙе бүре алмай.* Әйтем. *Береккән һыу Иҙел булған, таралған һыу тамсы булған.* Әйтем. *Береккәндән яу өркә*н. Әйтем.

**3.** Берҙәм фекергә, һүҙгә һ. б. килгән. □ Согласованный. *Береккән һүҙ.*

**4.** Нығынған. □ Закреплённый. *Хәтергә береккән вакиға. Умартасылык — башкорт канына береккән шөғөл.*

**БЕРЕККӘНЛЕК (береккәнлеге)** (Р.: сплочённость; И.: unity; Т.: birlik) *и.*

Берҙәмлек, тупланғанлык, ойошканлык. □ Сплочённость, спаянность. *Күңел береккәнлеге. Фекерҙәр береккәнлеге.*

**БЕРЕКМӘ** (Р.: объединение; И.: association; Т.: birleşme) *и.*

Бер төрҙәге эш тармактарынан торған эре ойошма; берләшмә. □ Объединение, союз, содружество, сообщество. *«Башнефть» берекмәһе. Методик берекмә.* ■ *Сарай калаһынан, Урҙаның төрлө тарафындағы ғәскәр берекмәләренән килгән сабармандар ғына түгел, хатта юғары мансаблы әмирҙәр, һанаттар ҙа тимер коршаулы капка төбөндә ук туктатыла.* Я. Хамматов. *[Гәйнияр Ғәйнуллович] юрый «Химпром» берекмәһе начальнигы Хоменконы якшы белгәнлеген һыҙык өҫтөнә алды.* Д. Бүләков.

**БЕРЕКТЕРЕҮ (беректер-)** (Р.: соединять; И.: join; Т.: biriktirmek) *к.*

**1.** Бергә тоташтырыу. □ Соединять. // Соединение. *Сымдарҙы беректереү. Деталдәрҙе беректереү.* ■ *[Мөғлифә:] Болот купкан инде, улым. Килә ята инде ул кара болот. Күк менән Ерҙе беректереп, һыуҙан — һул, һулдән сул яһап китергә килә болот...*Т. Ғарипова. *Таратайканы — беҙ, малайҙар, үҙебеҙ яһап алабыҙ. Ике-өс такта кағаһың, коньки беректерәһең дә эше лә бөттө.* З. Биишева.

**2.** Бергә туплау; берләштереү. □ Объединять, сплачивать. // Объединение, сплочение. *Халыкты беректереү. Йәштәрҙе беректереү.* ■ *Кинйәһолтан аталарының өлкән катыны ғына түгел, сабыр акылы, кәрәк сакта каты кулы менән ҙур ғаиләне беректереп торған ил инәһе лә ине.* Н. Мусин.

**3.** Берҙәмлеккә килтереү (*һүҙҙе, фекерҙе*); беркетеү, һүҙ беректереү. □ Прийти к соглашению, договориться. // Соглашение, договор. *Хакимиәт башлыктары һүҙ беректерҙе.* ■ *[Юлыш:] Хуп күрһәгеҙ, сәсән*

*бөгөн үк Ынйыташ менән осрашып һөйләшһен. Сер беректерә алһалар, тағы ике аҙнанан яусыларҙы каршы алырбыҙ.* Я. Хамматов.

**4.** Нығытыу. □ Закрепить *(в памяти).* // Закрепление. *Яңы теманы беректереү. Шиғырҙы хәтерҙә беректереү.*

**БЕРЕМЕС** (Р.: ба!; И.: oh!; Т.: a!) *ымл. диал.*

Бәй *(ғәжәпләнеү һүҙе).* □ Ба! *(слово, выражающее удивление). Беремес, кулымды бешерҙем.*

**БЕРЕН-БЕРЕ, БЕРЕҺЕН-БЕРЕҺЕ** (Р.: друг друга; И.: each other; Т.: birin biri) *билд. а.*

Эш, хәрәкәттең кара-каршы мөнәсәбәтлеген белдерә. □ Друг друга. *Берен-бере һағалап тора. Береһен-береһе якын күрә.*

**БЕР ЕНЕСЛЕ СӘСКӘ** (Р.: однополый цветок; И.: unisexual flower; Т.: tek cinsli çiçek) *и. бот.*

Тик емешлеге йәки тик һеркәлеге генә булған сәскә төрө. □ Однополый цветок (лат. *Flos dielinus*). *Бер енесле сәскәләр бер үк йәки икеһе ике үҫемлектә була алалар.*

**БЕРЕНСЕ I** (Р.: первый; И.: the first; Т.: birinci) *рәт һ.*

**1.** Урын тәртибе 1 менән билдәләнгән. □ *числ. порядк.* Первый. *Беренсе йорт. Беренсе класс.* ■ *Март айында ғына хәрби хеҙмәткә алынған, ә уғаса ауыл хужалығы институтының беренсе курсында укып йөрөгән йәп-йәш егетең генә түгел, тормошта байтак тәжрибә туплап өлгөргән уҙаман ирҙәрең дә капылда аптырауға төшөрлөк ғазаплы көндәр ине был.* Ә. Хәкимов.

**2.** Бер нисәү эсенән тәүге. □ Первый, первоначальный, первичный. ■ *Беренсе никах шуның менән бөттө.* К. Мәргән. *Кибеттә һатыусы булып эшләй башлағас, үҙенә беренсе бурыс итеп, Рауза атлауын үҙгәртеүҙе күйҙы.* Т. Ғарипова.

**БЕРЕНСЕ II** (Р.: первый; И.: number one, first rate; Т.: birinci) *с. күсм.*

Иң шәп, иң алдынғы. □ Первый, самый лучший, отличный. ■ *Азаматтың йәне көйҙө. Институтта беренсе егеттәрҙән һаналып йөрө лә, бында һиңә бер аштаксы кыҙ инәлтеп маташһынсы.* Р. Солтангәрәев.

**БЕРЕНСЕ III** (Р.: первое; И.: the first course; Т.: ilk) *и.*

Бер-бер артлы ашала торған өс төрлө аштың тәүгеһе *(ғәҙәттә, һурпалы аш).* □ Первое *(обычно суп, борщ и т. п).* ■ *Беренсеһенә һуған кыҙҙырып кыҙартылған кыҫыр һурпа, икенсеһенә помидор соусы менән койондоролған картуф котлеты ине.* С. Кудаш.

**БЕРЕНСЕЛ** (Р.: первичный; И.: primary; Т.: birincil) *с.*

*Ниҙеңдер* үҫешендә тәүге, беренсе баҫкыс булған, башланғыс булған. □ Первичный; изначальный. *Беренсел файҙаланыу.* ■ *Әҙәбиәт дөйөм кешелек киммәттәрен бар итеүсе образ төшөнсәһен булдырыуҙа беренсел булып тора, ни тиһәң дә, иң тәүҙә һүҙ булған бит.* Д. Шәрәфетдинов.

**БЕРЕНСЕЛЕК (беренселеге)** (Р.: главенство; И.: supremacy; Т.: birincilik) *и.*

**1.** Берәй *нәмәләге* өҫтөнлөк, беренсе урын. □ Главенство. ■ *Кыпсак аралары үҙҙәрен ауылдың аҫаба башкорттары һанай. .. Ләкин шакмандар ҙа уларға беренселекте бирергә теләмәй.* Б. Бикбай.

**2.** Ярыштағы алдынғы урын. □ Первенство. ■ *Бикбауҙыкылар йылдың-йылы беренселекте бирмәй килде, тик бына һуңғы вакыт кына рәттәре китеп барған һымак.* Р. Солтангәрәев. *Йырҙа ла беренселекте ала инең, — тип күйҙы Хәсән бабай, дәртләнеп. — Ул сакта был тирәлә һинән шәп йырсы юк ине бит әле.* З. Биишева.

**БЕРЕНСЕЛ ОҘОН ҺУҘЫНКЫЛАР** (Р.: первичные долгие гласные; И.: primary long vowels; Т.: birincil uzun ünlüler) *и. лингв.*

Төрки телдәрендә килеп сығышы билдәһеҙ булған оҙон әйтелешле һуҙынкылар. □ Первичные долгие гласные. *Төркмән һәм якут телдәрендә беренсел оҙон һәм тар һуҙынкылар билдәләнелә.*

**БЕРЕНСЕНӘН** (Р.: во-первых; И.: firstly; Т.: birincisi) *инш.*

Әйтер фекерҙәрҙе бер-бер артлы һанағанда ҡулланыла. □ Во-первых. ■ *Башҡорт һәм ҡаҙаҡ мәҡәлдәре араһындағы уртаҡлыҡтың күплеге шулай уҡ тәбиғи. Сөнки, беренсенән, ҡаҙаҡтар менән башҡорттар быуаттар буйы бик яҡын күрше булып, үҙ-ара аралашып йәшәнеләр; икенсенән, үҙенең лексик составы яғынан башҡорт теле, ҡаҙаҡ теле һымаҡ, төрки телдәренең көнсығыш тармағына тартым.* Ф. Нәҙершина.

**БЕРЕТ** [рус. < фр. *beret*] (Р.: берет; И.: beret; Т.: bere) *и.*

**1.** Тирәсһеҙ түңәрәк ләпәш баш кейеме. □ Берет. *Берет кейеү. Берет бәйләү.*

**2.** Католик руханиҙарының баш кейеме. □ Берет.

**БЕРЕТКА** [рус.] *и. ҡар.* **берет.** ■ *Ғилман туктаны ла үҙенең яғына ҡабаланмай ғына атлап килеүсегә иғтибар менәнерәк күҙ һалды: өҫтөнә йоҡа ҡара тауарҙан тегелгән комбинезон, аяғына брезент туфли кейгән. Башында — беретка.* Н. Мусин.

**БЕРЕҺЕ** (Р.: один; И.: one, a, an; Т.: biri) *а.*

**1.** Берәүһе. □ Один, одна, одно; одни. ■ *[Мәстүрә] береһе — дүрт, икенсеһе ике йәшлек кенә малайҙарын, Сафуан менән Суфиянды, үҫтереп аяҡҡа баҫтырғансы күпме яфалар күрәсә[к].* Ә. Хәкимов. *Риүәйәт буйынса, тап шул ҡаяла Юлиәләй йәш, матур ҡыҙҙың ғүмере өҙөлгән, донъя тулып йөрөгән иҫәр егеттәрҙең береһенә лә тәтемәгән йәне зәңгәр киңлектәргә осоп киткән...* Г. Ғиззәтуллина.

**2.** Кемдер, бер кем. □ Кто-то, кто-нибудь, некто. *Береһе килмәнеме? Береһе ишетеп ҡалмаһын.*

**БЕРЕҺЕГӨН** *р. диал. ҡар.* **берһегөн.** *Береһегөн ҡайтып китә. Береһегөнгә һөйләшкән инек.*

**БЕР ЗАМАН** *р. ҡар.* **бер ваҡыт.** *Бер заман булды был хәл. Бер заман беҙ ҙә булмабыҙ.*

**БЕРИ-БЕРИ** [рус. < синг. *beri-beri* 'һуңғы сиктәге хәлһеҙлек'] (Р.: бери-бери; И.: beri-beri disease; Т.: beriberi) *и.*

$B_1$ витамины етешмәгәнлектән килгән ауырыу; авитаминоз. □ Бери-бери. ■ *Бери-бери менән ауырығанда нервылар ҡаҡшай, йөрәк йыш тибә, аппетит юғала.* В. Ғүмәров.

**БЕР ИЛЕ** (Р.: шириной в один палец; И.: one finger breadth; Т.: bir parmak) *с.*

Бер бармаҡ ҡалынлығы ара *(үлсәү берәмеге).* □ Толщиной, шириной в один палец. *Бер иле майы булған. Бер иле ҡалынлығы итеп киҫ.* ■ *Батҡаҡ бер иле ҡалынлығындай булып ҡатҡан һәм тапала-тапала йәйге таҡыр юл шикелле нығынған.* Р. Солтангәрәев. *Ниҙер һиҙенгән төҫлө, ҡарсыҡ, сәй урынын йыйыштырып бөтөр-бөтмәҫ, ҡабат Хәнифә янына ашыҡты, йүгерә-атлай барып инһә, өйҙөң ишеге шар асыҡ, иҙәнен бер иле ҡар һырыған, ҡаҙанлыҡ яҡта һауыт-һаба елгә зыңғылдай.* Ә. Хәкимов.

**БЕР ИМСӘКТӘШ** *с. ҡар.* **имсәктәш.** ■ *Йөрәген дошман бүлгәне; сер һөйләгән дуҫтарың, түшәктәге һөйгәнең, бер имсәктәш туғаның ситкә серең биргәне.* Ҡобайырҙан.

**БЕРИҪӘП** *р. диал. ҡар.* **бер аҙ.** *Бериҫәп йоҡлап алырға кәрәк. Бериҫәп эшләп алдыҡ.*

**БЕР ИШ** (Р.: одинаковые; И.: identical, similar; Т.: aynı) *с.*

Бер төрлө, бер үк, оҡшаш. □ Похожие, подобные, сходные, однотипные, одинаковые. *Бер иш кейенгәндәр. Бер иш йорттар.* ■ *[Юлдыбай:] Эйе, беҙ икебеҙ ҙә бер иш икән.* М. Буранғолов. *Бер иш төҫһөҙ әҫәрҙәр үрсеп китеүҙәнме — әҙәби мираҫ мәсьәләһе һанланмай башланы.* Ә. Хәкимов.

**БЕР ЙОҺОҠ** (Р.: попутно; И.: on one's way; Т.: geçerken) *р. диал.*

Бер ыңғайҙа. □ Попутно. *Бер йоһоҡ беҙгә лә инеп сыҡ.*

**БЕР КЕМ I** *билдһ. а. ҡар.* **береһе 2.** *Бер кем килер әле. Бер кем беләме?*

**БЕР КЕМ II** (Р.: никто; И.: nobody, no one; Т.: hiç kimse) *юкл. а.*

Берәү ҙә, һис кем. □ Никто. ■ *Мөхәббәт — ул, әйтерһең дә, утлы йәшен, һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен.* Р. Наза-

ров. *Шунықы хөрт: бында хәҙер бер кем дә ҡалмаған тиерлек.* Н. Ғәйетбаев.

**БЕРКЕТЕЛЕҮ (беркетел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **беркетеү.** *страд. от* **беркетеү.** *Эшкә беркетелеү.* ■ *Һауынсыларға беркетелгән һәр һыйырҙың быҙаулағандан һыуалғанға тиклем һөт бирее миҡдары билдәләнгән.* Т. Ғарипова.

**БЕРКЕТЕҮ (беркет-)** (Р.: прикреплять; И.: fix; Т.: yapıştırmak) *ҡ.*

**1.** Ҡуша йәбештереү, тоташтырыу. □ Прикреплять; закреплять. // Прикрепление, закрепление. ■ *Аҡ мәрмәр өҫтөнә теге көршәктәрҙең берәһен ҡупмаҫлыҡ итеп беркетеп ултыртҡандар.* З. Биишева.

**2.** Ҡаҙаҡлау, бәйләү, бороу һ. б. юлы менән ныҡытып ҡуйыу; элеү. □ Прикреплять, закреплять. // Прикрепление, закрепление. ■ *Бүре тиреһен бөгөн иртәнсәк кирегә ҡаҙаҡлап, түбәләк башына беркетеп ҡуйҙы Төлкөсура.* Н. Мусин. *[Ғабдулла] стенаға беркетеп ҡуйылған түтлы көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты.* М. Кәрим. *Унда граната ҡабырғаһына нәҙек сым менән сырмап беркеткән пакет.* Ә. Хәкимов.

**3.** *күсм.* Эшкә, урынға тәғәйенләү. □ Закреплять. // Закрепление.

**4.** Яҙып теркәп ҡуйыу. □ Записывать, записать, зафиксировать. // Запись, фиксация. *Онотмаҫ өсөн кәрәкле фекерҙе дәфтәргә беркетеп ҡуйыу.*

**5.** *күсм.* *Кемдеңдер* йәки *ниҙеңдер* исеменә, милкенә теркәү. □ Закреплять за *кого-что* за *кем-чем.* // Закрепление. *Һәр ир башына ер беркетәләр.*

**6.** *күсм.* Бер нөктәгә, берҙәмлеккә килтереү, ныҡытыу *(һүҙҙе, фекерҙе).* □ Договориться. // Договор. *Үҙ-ара һүҙ беркетеү.* ■ *Сәфәренән ҡәнәғәт булып ҡайтты Бикмырҙа. Юлы уңған, кемдәр менәндер отошло килешеү төйнәгән, тел беркеткән, тирмән эшен тағы ла киңәйтеү өсөн крупорушка тигән ярма һурҙырғыс һатып алған.* Ә. Хәкимов. *[Ике ағай] кәңәш беркетә лә кустыларының утынын үртәп китергә була.* Әкиәттән.

**7.** *күсм.* Ныҡытыу. □ Закрепить. // Закрепление. ■ *Һолтанбай тәүге тапҡыр әйтте был һүҙҙе һәм уны күңеленә ныҡ итеп беркетеп ҡуйҙы: «Минең балаларым араһынан да ғилем эйәһе булырға тейеш».* Н. Мусин.

**БЕРКЕТЕШЕҮ (беркетеш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **беркетеү.** *взаимн.* от **беркетеү.** ■ *Урманбаевтар .. эстән көйөп, абайламаҫтан ҡылған хатаны нисек тә төҙәтергә, Фәсхетдин Фәтхетдинович әйткәнсә, балансты тигеҙләргә һүҙ беркетешә.* Ә. Хәкимов.

**БЕРКЕТКЕС** (Р.: скрепа; И.: clamp; Т.: kıskaç) *и. тех.*

Айырым өлөш, киҫәктәрҙе бергә беркетә торған ҡулайлама. □ Скрепа, крепёж. *Баҡыр беркеткес. Саңғы беркеткес.*

**БЕРКЕТМӘ I** (Р.: протокол; И.: report; Т.: rapor) *и.*

Ултырыш (кәңәшмә) барышындағы яҙыуҙар нигеҙендә төҙөлгән документ. □ Протокол. *Беркетмәгә ҡул ҡуйыу. Беркетмәгә төҙәтмәләр индереү.*

**БЕРКЕТМӘ II** (Р.: текст; И.: text; Т.: metin) *и.*

Текст. □ Текст. ■ *Иҙеүкәй менән Мораҙым күсерегенең бер нисә беркетмәһе (тексы) ҡарал[ды].* Ә. Сөләймәнов.

**БЕРКЕҮ (берк-)** *ҡ. диал. ҡар.* **берегеү.** *Беркеп йәшәнек.*

**БЕР КИЛКЕ** *р. ҡар.* **бер аҙ.** *Бер килке ҡарап торҙо. Бер килке шаулап торҙо.* ■ *Хатта, тиҙерәк артҡа сигенергә йә ағасҡа ышыҡланырға кәрәклеген онотоп, сихырланған кеше һымаҡ, бер килке ҡатып торҙо.* Ә. Хәкимов.

**БЕР КӨЙӨ** (Р.: одинаково; И.: identically, alike; Т.: aynı) *р.*

**1.** Бер төрлө, ғәҙәттәгесә. □ Одинаково, как обычно. ■ *[Карсыҡ:] Шулай, донъялар бер көйө генә тормай — үҙгәрә, алмашына. Ана, һеҙҙән һуң миндә лә күпме ҡыҙ йәшәне.* Р. Камал.

**2.** Йайлап, арыу ғына. □ Потихоньку, ничего, так себе, неплохо. ■ *[Бер ҡатын:] Инсаф ҡустым, әсәң ни хәлдә? — тип һораны. —*

*Шул бер көйө инде, — тине егет һүрәнке тауыш менән.* Г. Ғиззәтуллина.

**3.** *күсм.* Ҡыҙмаса. □ Подвыпивший, навеселе. *Бер көйө булып алыу.*

**БЕР КӨН** *р. ҡар.* **бер ваҡыт.** ■ *Берҙән-бер көндө Алпамыша вәзирҙәренә: «Һумала ҡайнатығыҙ!» тип әмер бирә. Һумала ҡайнағас, Ҡарабатырҙы зиндандан сығарта.* «Алпамыша батыр». *[Һандуғас:] Анау бер көн Көмөш еңгәләр менән килгәндә лә шулай ултырҙы.* М. Буранғолов.

**БЕР КҮҘӘНӘКЛЕЛӘР** (Р.: одноклеточные; И.: Protozoa, single cell;Т.: tek hücreli) *и. биол.*

Тәндәре бер күҙәнәктән генә торған тере организмдар. □ Одноклеточные (лат. *Protozoa*). ■ *Бер күҙәнәкле тереклек өлгөләре Ер шарттарында ғына түгел, йыһанда ла йәшәй алған, тип иҫәпләй белгестәр.* «Башҡортостан», 25 август 2011.

**БЕРКӘТӘҮ** *и. диал. ҡар.* **бөрләтәү.**

**БЕР ҠӘҘӘР** (Р.: немного; И.: some; Т.: biraz) *р.*

Бер аҙ, бер ни тиклем. □ Немного. ■ *Беҙҙең ҡара һыйыр ҡайтыу менән, уны әсәй һарай алдына сығара һәм уға бер ҡәҙәре он һалып, апара итеп һыйырға эсерә ине.* Ғ. Хәйри.

**БЕР ҠӘҮЕМ** (Р.: доля; И.: lot; Т.: pay) *и. диал.*

Өлөш. □ Доля. *Һәр кешенең бер ҡәүеме бар.*

**БЕРЛЕ I** (Р.: первый; И.: first (size); Т.: ilk (boyut) *с.*

Үлсәме бер берәмеккә тиң. □ Первый (*о размере*). *Берле калуш.*

**БЕРЛЕ II** (Р.: единица; И.: one; Т.: en düşük not) *и.*

Биш баллы баһа системаһындағы иң түбән билдә. □ Единица, кол (отметка, оценка). *Берле билдәһе. Берле алыу.*

**БЕРЛЕК I (берлеге)** [боронғо төрки *бирлик* 'берҙәмлек'] (Р.: единство; И.: unity; Т.: birlik) *и.*

**1.** Бер бөтөнлөк, берҙәмлек. □ Единство, единение. *Диалектик берлек.*

**2.** Дөйөмлөккә, оҡшашлыҡҡа, тормоштағы уй, ниәт уртаҡлығына нигеҙләнгән үҙ-ара тығыҙ мөнәсәбәт, бәйләнеш; берҙәмлек. □ Общность, единство, содружество; солидарность, единодушие. *Күңел берлеге. Ҡараштар берлеге. Теория менән практиканың берлеге.* ● *Байлыҡ байлыҡ түгел, берлек — байлыҡ.* Мәҡәл. *Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт.* Мәҡәл. *Күңел берлеге булған ерҙә кейем төрлөлөгө күренмәй.* Мәҡәл.

**3.** Фекерҙәштәр ойошмаһы. □ Союз, объединение, сообщество. *Йәштәр берлеге. Яҡташтар берлеге. Интернет-берлек. Бизнес-берлек.* ■ *Сибай ҡалаһының мосолман йәштәре берлеге Төйәләҫ ҡасабаһында хажиҙар менән осрашыу уҙғарҙы.* «Йәшлек», 13 ғинуар 2011. *Ошо бигүк оҙон булмаған ваҡыт арауығында башҡорт милли ойошмалары берлеге халҡыбыҙҙың үҙаңын тергеҙеү, телебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереү, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәләрен юғарыраҡ кимәлгә күтәреү һәм, ғөмүмән, милли яңырыу юлындағы башҡа бихисап мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса байтаҡ эштәр башҡарҙы.* «Йәшлек», 23 декабрь 2010.

**БЕРЛЕК II (берлеге)** (Р.: единица; И.: one; Т.: bir) *и.*

**1.** *мат. ҡар.* **бер I, 1.** Ун иҫәбе эсендәге иң бәләкәй һәм беренсе һан. □ Единица.

**2.** Бер һумлыҡ аҡса. □ Рубль; рублёвка. *Эш хаҡын берлектәрҙән генә бирҙеләр.*

**3.** *грам.* Һүҙ бер генә кеше йәки нәмә хаҡында барғанда ҡулланыла торған килеш һәм зат, заман, һан менән үҙгәреү формалары. □ Единственное число. *Берлек һандағы исем.*

**БЕРЛЕК III** (Р.: понимание; И.: understanding; Т.: anlayiş) *и. диал.*

Белек. □ Понимание. *Үҙ берлегемә йөрөнөм.*

**БЕРЛЕКЛЕ** (Р.: верный своему слову; И.: true; Т.: sadık) *с. диал.*

Бер һүҙле. □ Верный своему слову. *Берлекле кеше менән эш итһәң дә була.*

**БЕРЛЕКЛӘШЕҮ (берлекләш-)** (Р.: объединяться; И.: unite; Т.: birleşmek) *к.*

Бергә ойошоу; берләшеү, берҙәмләшеү, бергә төркөмләшеү. □ Объединяться, сплачиваться. *Берлекләшеп эшләү. Хужалыктар берлекләшеүе.* ■ *Игенде үҙең урып бөтә алһаң, мин тапамаға ҡайтып өлгөрә алмаһам, кешеләр менән берлекләшеп, берәй нәмә эшләрһең.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕРЛЕКЛӘШЕП** (Р.: сообща; И.: together; Т.: birlikte) *р. диал.*

Бергәләшеп. □ Сообща. *Берлекләшеп сәсеп алып киттеләр игенде.*

**БЕРЛЕКСӘГӘ** (Р.: на этот раз; И.: this time; Т.: bu sefer) *р. диал.*

Бер юлға. □ На этот раз. *Берлексәгә ғәфү итеү.*

**БЕРЛЕКТӘ** (Р.: вместе; И.: jointly; Т.: birlikte) *р.*

Бергәләп, бергә. □ Вместе, совместно. *Ата-әсәләр менән берлектә булыу.* ■ *Ф. А. Нәҙершина — башҡа фольклорсы ғалимдар менән берлектә 36 томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» серияһы томдарын баҫтырыуға әҙерләүҙә ҙур өлөш индергән донъя күләмендәге күренекле ғалимә.* Г. Хөсәйенова.

**БЕРЛЕКТӘГЕ** (Р.: совместный; И.: joint; Т.: ortak) *с.*

Бергә башҡарылған, бергә эш иткән. □ Совместный. *Берлектәге ултырыш. Берлектәге комиссия.*

**БЕРЛИКЕ** (Р.: немножко; И.: a little; Т.: biraz) *р. диал.*

Бер килке. □ Немножко. *Әсмә лә берлике нәмә алды.*

**БЕРЛӘМ I** [боронғо төрки *биртәм* ] (Р.: единодушно; И.: unanimously; Т.: oybirliğiyle) *р. диал.*

Берҙәм. □ Единодушно. *Берләм эшләйҙәр улар.*

**БЕРЛӘМ II** (Р.: одинокий; И.: lonely; Т.: yalnız) *с. диал.*

**1.** Яңғыҙ, бер. □ Одинокий. *Берләм кеше.*

**2.** Бөтөн. □ Целый, цельный, из целого. *Берләм нәмә.*

**БЕРЛӘМ ЮЛ** (Р.: тропинка; И.: path; Т.: patika) *и.*

Йәйәү кеше юлы; һуҡмаҡ. □ Тропинка, тропа. ■ *Ашҡаҙар йылғаһы үҙәненә төшкәс, беҙҙең берләм юлыбыҙ тағы тарая төштө.* Р. Шаммас. *Егет кенә йылкы, ай, ҡыуалыр тау буйына берләм юл менән.* Халыҡ йырынан.

**БЕРЛӘНТИН** *и. ҡар.* **бөрләнтин.**

**БЕРЛӘС** (Р.: одинокий; И.: lonely; Т.: yalnız) *с. диал.*

Яңғыҙ, бер. □ Одинокий. *Быйыл һарыҡтың берләс кенә бәрәсе булды.* ■ *Ошо (Ҡуштау, Йөрәктау, Торатау) берләс тауҙар Ағиҙелде яландар буйына оҙата килгән Урал илселәре һымаҡ тойолалар.* Ғ. Хөсәйенов. ● *Берләс бәрәстән үрсем көтмә.* Мәҡәл.

**БЕРЛӘТӘ** (Р.: однажды; И.: one day; Т.: bir gün) *һ. диал.*

**1.** Берҙән-бер көн. □ Однажды. ■ *Зиннур ғаиләлә бер генә ул ине, берләтә үлеп ҡалды йәшләй.* Ф. Ғүмәров.

**2.** *диал.* Бер тапҡыр. □ Один раз. *Берләтә генә барып кил әле һыуға.* ■ *Аҙнаев тышҡы ишеккә ҡарай атланы һәм үҙенең берләтә килеп, бер йомошон ғына булһа ла йомошлай алыуына шатланған һымаҡ итеп ҡуйҙы.* Н. Мусин.

**БЕРЛӘҮСЕ** (Р.: одинокий; И.: single; Т.: yalnız) *с. диал.*

Яңғыҙ. □ Одинокий. *Берләүсе торғандары ике һыйыр тотҡан.*

**БЕРЛӘШЕП** (Р.: сообща; И.: together; Т.: birlikte) *р.*

Бергәләшеп, үҙ-ара бер булып. □ Сообща, вместе. *Берләшеп эшләү.* ■ *Берләшеп эшләһәң генә эш уңа ул, туған.* Н. Мусин. *Йылайыр, Баймаҡ, Бөрйән райондарындағы ябай эшҡыуарҙар араһында ла берләшеп, яңы завод асыу маҡсаты менән яныусылар бар.* «Башҡортостан», 6 октябрь 2011.

**БЕРЛӘШЕҮ (берләш-)** (Р.: объединяться; И.: unite; Т.: birleşmek) *к.*

Бергә төркөмләшеү, бергә ойошоу. □ Объединяться, сплачиваться. *Берләшкән*

*Милләттәр Ойошмаһы. Хужалыктар берләшеүе.*

**БЕРЛӘШМӘ** (Р.: объединение; И.: association; Т.: birlik) *и.*

**1.** Ойошҡан төркөм; ойошма. □ Объединение, союз, ассоциация. *Әҙәби берләшмә. Профсоюздар берләшмәһе.* ■ *«Башҡортостандың төньяҡ ҡапҡаһы» иҫәпләнгән Яңауылда ҡырҡ йылға яҡын «Замандаш» әҙәби берләшмәһе эшләп килә. Бында төрлө райондарҙан йәш һәм башлап яҙыусылар йыйылған.* «Ағиҙел», № 7, 2010.

**2.** *хим.* Молекулаһы бер нисә элементтың атомдарынан торған матдә. □ Соединение *(вещество),* состоящее из нескольких разных атомов. *Азотлы берләшмәләр. Органик берләшмәләр. Химик берләшмә.*

**3.** *ҡар.* **берекмә.** ■ *Өфө эшҡыуарҙар берләшмәһенең йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә бушлай консультациялар үткәрелә башланы.* «Башҡортостан», 12 август 2011.

**БЕРЛӘШТЕРЕЛЕҮ (берләштерел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **берләштереү.** *страд. от* **берләштереү.** *Урмандар берләштерелеп, хөкүмәт фондына индерелде.*

**БЕРЛӘШТЕРЕҮ (берләштер-)** (Р.: объединять; И.: unite; Т.: birleştirmek) *ҡ.*

**1.** Бергә төркөмләштереү; ойоштороу. □ Объединять, соединять *кого-чего. Тыныслыҡ яҡлыларҙы берләштереү. Төрлө төшөнсәләрҙе берләштереү.* ■ *Республикабыҙҙа дини йүнәлештә төрлө саралар даими ойоштолора, уларҙың һәр береһе халыҡтарҙы берләштереүгә һәм айырылмаҫ көс итеүгә тос өлөш индерә.* «Башҡортостан», 5 октябрь 2011.

**2.** *ҡар.* **тоташтырыу.** *Ике яҡты берләштергән күпер.*

**3.** *этн.* Ирле-ҡатынлы итеү; кейәү йәки ҡыҙ ҡуйынына һалыу; ҡауыштырыу. □ Сводить, свести *(невесту с женихом). Еңгәләр егет менән ҡыҙҙы берләштерҙе.*

**БЕРЛӘШТЕРЕҮСЕ** (Р.: объединяющий; И.: uniting; Т.: birleştirici) *с.*

Бергә йыйыусы, туплаусы. □ Объединяющий. *Берләштереүсе көшө.* ■ *Ғаиләне берләштереүсе, туплаусы көшө әсә була.* З. Биишева.

**БЕРМЕКЛӘҮ (бермеклә-)** (Р.: отделять по одному; И.: single out; Т.: ayırmak) *ҡ. диал.*

Берәмекләү. □ Отделять по одному. *Себештәрҙе бермекләп айырыу.*

**БЕРМУД** [рус. < фр. < нем. *Bermudas* ‘Бермуд утрауҙары’ | (Р.: бермуды; И.: Bermuda shorts; Т.: bermuda şort) *и.*

Киң ҡыҫҡа салбар. □ Бермуды (шорты) *Бермудтар хәҙер модала.*

**БЕРМӘ** (Р.: за один раз; И.: at once; Т.: derhal) *р.*

Бер юлы, бер ыңғай. □ За один раз, зараз, сразу, заодно. *Орлоҡто ашлама һиптергес менән һибәләп, һуңынан дисҡылап ҡуйһаң, сәсеү ҙә тиҙләтелә, бермә сифаты ла яҡшыра.*

**БЕРМӘ-БЕР** (Р.: вдвое; И.: twice; Т.: iki kat) *р.*

**1.** Ике тапҡырға; икеләтә *(артыу йәки кәмеү тураһында).* □ Вдвое. *Картуфтың уңышы бермә-бер артты.* ■ *Йәйләүгә күсеп, һыйырҙарҙы тәүлек әйләнәһенә көтә башлағас, һауым бермә-бер артты.* Р. Ураҙғолов.

**2.** Һиҙелерлек дәрәжәлә, хәтһеҙ, байтаҡ. □ Заметно, значительно. *Килем бермә-бер артты.* ■ *Ул [атайым] ҡайтҡас, беҙҙең өй бермә-бер яҡтырып, уның эсендә ҡот артҡан һымаҡ булып китте.* Н. Мусин.

**3.** Тап, тас, нәҡ. □ Точь-в-точь. *Бермә-бер булды.*

**4.** Дөп-дөрөҫ, һүҙмә-һүҙ. □ Точь-в-точь. *Ул бөтәһен дә бермә-бер һөйләп бирҙе.* ■ *Ташбулатовтың бөтә гонаһтары, эшләгән бысраҡлыҡтары, түккән аҡсалары бермә-бер күрһәтелгән мәҡәләнең аҫтында вагонда танышҡан репортёрҙың имзаһы ярылып ята ине.* И. Насыри.

**5.** Шул ыңғай, ҡапыл. □ Сразу, немедленно. *Дарыу бермә-бер килеште.* ■ *Киске һигеҙгә табан тағы һыуыҡ көсәйҙе. Шыйыҡ күкһел томан бермә-бер ҡуйырҙы.* Н. Мусин.

**6.** Барған һайын, әленән-әле, тиҙ. □ Всё время, постоянно, быстро. ■ *Егеттең батырлығын күргәндән һуң ҡыҙҙың мөхәббәте бермә-бер артҡан.* Ф. Исхаҡова.

**БЕР МӘЛ** (Р.: однажды; И.: one day; Т.: bir gün) *р.*

Бер ваҡыт, бер көн. □ Однажды. ■ *Бер мәл ҡояш йылдың дүрт миҙгелен — көҙҙө, ҡышты, яҙҙы һәм йәйҙе үҙенә саҡырып алған.* Әкиәттән.

**БЕР НИГЕҘ** (Р.: венец; И.: crown; Т.: taç) *и. диал.*

Нигрә. □ Венец. *Сәғәт ярымда саҡ бер нигеҙ бураныйлар.*

**БЕРНӘСӘ** *р. диал. ҡар.* **бермә-бер.** ■ *Көҙгө байлыҡта бернәсә туҡ булыуҙан хушланған ауыл, тәмле төштәр күреп, иҙрәп йоҡлай.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЕРРӘТ** (Р.: однажды; И.: once; Т.: bir kere) *р. диал.*

Бер ваҡыт. □ Однажды.

**БЕР ОСТОҠ** (Р.: капельку; И.: drop; Т.: damla) *р. диал.*

Саҡ ҡына. □ Капельку; немного. *Бер остоҡ ҡына картуф алып сығып бир был яҡҡа.*

**БЕРС** (Р.: брысь; И.: scat; Т.: pist) *саҡ.*

Бесәйҙе ҡыуа торған һүҙ. □ Брысь (*возглас, которым отгоняют кошку*). ■ *Өләсәйем: «Берс! Бар сыҡкан тот!» — тип, бесәйҙе урамға сығарып ебәрҙе.* Г. Ғәлина.

**БЕР САМА I** (Р.: одинаковый; И.: identical; Т.: aynı) *с.*

Бер төрлө. □ Одинаковый. ■ *Вәлетдин өтәләнеп үк китте, һә тигәнсе ул ҡыҙыл сепрәк өҫтөнә бер сама тигеҙ генә бүленгән ете киҫәк икмәкте теҙеп тә ҡуйҙы.* М. Кәрим. *Ҡышын да, йәйен дә [Тәңребирҙе ишимәнең] һалҡынлығы бер сама була: туңмай ҙа, йылымай ҙа.* Т. Ғарипова.

**БЕР САМА II** (Р.: немного; И.: some; Т.: biraz) *р.*

**1.** Күпмелер күләмдә, бар аҙ. □ Некоторое количество, немного. *Бер сама эшләп алыу. Бер сама йоҡлап алыу.* ■ *[Юламан] ике ай буйы хәлле генә ҡаҙаҡтың ун йәшлек малайына дәрес биреп ятты, шул ыңғайҙа үҙе лә бер сама ҡаҙаҡса өйрәнеп өлгөрҙө.* Ә. Хәкимов.

**2.** *күсм.* Әллә ни шәп түгел, уртасараҡ. □ Так себе, не очень. *Хәлем бер сама.* ■ *Шәп инженер, гәҙел кеше, тик бына ҡылыҡ ҡынаһы бер сама шул.* Р. Солтангәрәев.

**БЕРСӘ I** (Р.: в тот же момент; И.: at once; Т.: hemen) *р.*

Ҡапыл, тиҙ генә. □ Внезапно, сразу. *Берсә һыуытты ла ебәрҙе.* ■ *Ерең буйлап ғәмһеҙ атлай инем, күктәреңә ҡарап аҙаштым, ике күҙем берсә ҡамашты.* М. Кәрим.

**БЕРСӘ II берсә..., берсә...** (Р.: то ..., то; И.: now ... now; Т.: bir ... bir) *терк.*

Бер-бер артлы һанап әйткәндә ҡулланыла. □ *Союз разд.* то ..., то. *Берсә ямғыр, берсә ҡар.* ■ *Минең күкрәгемде берсә күҙгә күренмәгән ниндәйҙер йылы нурҙар бәрелеп рәхәтләндерә, берсә утлы уҡтар үтеп тишкеләй.* М. Кәрим. *Диңгеҙ берсә утлы өйөрмә булып күккә үрелгән, берсә тамуҡ утындай урғылған, тәрән йоҡоға талған.* З. Биишева.

**БЕРСӘК-ҺӘРСӘК** (Р.: лоскутный; И.: scrappy; Т.: bölük pörçük) *с.*

Киҫәк-миҫәк ҡырҡылған, өҙөлгән-йолҡолған; бәрсәк-һәрсәк. □ Лоскутный, в клочьях. *Берсәк-һәрсәк тире.* ■ *Асыуланды Күсәк батыр. .. барын да балаларың ҡыйрата, ти, тотоп алып, өҙгөләп берсәк-һәрсәк.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**БЕР ТАЛАЙ** (Р.: немного; И.: a little; Т.: biraz) *р.*

Бер ни тиклем, әҙерәк. □ Немного, несколько. ■ *Шул ҡурайҙы алып, бер тартты ниһәң, ҡайғы-хәсрәт баҫыла бер талай.* Халыҡ йырынан.

**БЕР ТАУЫШЛЫ** (Р.: одноголосный; И.: one-voice; Т.: tek sesli) *с. муз.*

**1.** Бер тауыштан торған. □ Одноголосный (*характеризующийся одноголосием*). *Бер тауышлы стиль.*

**2.** Бер тауыш йәки бер инструмент башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән. □ Одноголосный (*предназначенный для исполнения одним голосом или инструментом*). *Бер тауышлы музыкаль әҫәр.*

**БЕР ТАУЫШТАН** (Р.: единогласно; И.: unanimously; Т.: oybirliğiyle) *р.*

Бер фекерҙән. □ Единогласно. ■ *Ғалимдар яман шештән генетик йәһәттән бөтөнләй ҡотолоп булыуын бер тауыштан раҫлай.* «Башҡортостан», 22 июль 2011.

**БЕР ТИГӘС I** (Р.: мигом; И.: in aflash; Т.: bir anda) *р. диал.*

Бик тиҙ. □ Мигом. *Бер тигәс икебеҙгә лә етәр, тиер ине. Шунан ни, бер тигәс ҡурҡыуым, бер тигәс ғәрләнеүем булды.*

**БЕР ТИГӘС II** (Р.: во-первых; И.: firstly; Т.: önce) *инш. диал.*

Беренсенән. □ Во-первых. ■ — *Бер тигәс тә, ни яман? — Беҙҙең өсөн бей яман.* Ҡобайырҙан.

**БЕР ТИП ТӘ** (Р.: никак; И.: in no way; Т.: hiçbir şekilde) *р. диал.*

Бер нисек тә. □ Никак. *Бер тип тә әйтә алманым.*

**БЕР ТИРӘ** (Р.: ровесник; И.: contemporary; Т.: çağdaş) *и. диал.*

Ҡорҙаш. □ Ровесник. *Икебеҙ ҙә бер тирә, 66 йәштәбеҙ.*

**БЕРТОЛЕТ ТОҘО** (Р.: бертолетова соль; И.: potassium chlorate; Т.: potasyum klorat) *и.*

Органик матдәләр менән берлектә шартлағыс ҡатышма барлыҡҡа килтерә торған аҡ төҫтәге кристаллик матдә. □ Бертолетова соль. *Бертолет тоҙон ҡушыу.*

**БЕР ТӨРҘӨ** (Р.: какой-то; И.: some; Т.: bazi) *а. диал.*

**1.** Әллә ниндәй. □ Какой-то. *Бер төрҙө киәфәтһеҙ кеше ул Сәлих.*

**2.** Аҡылға еңел. □ Придурковатый. *Бер төрҙө булғас бер эш эшләмәй тик ята.*

**БЕРТЫМ-БЕРТЫМ** *р. ҡар.* **бер аҙ.** *Бертым-бертым эшләп алыу.*

**БЕР ТЫН** *р. ҡар.* **бер аҙ.** *Бер тын күҙәтеү.*

**БЕР ТЫНА** (Р.: единожды; И.: once; Т.: bir kere) *р. диал.*

**1.** Бер тапҡыр. □ Единожды. *Бер тына килеү.*

**2.** Бер аҙ. □ Немного. *Бер тына эшләп алдыҡ.*

**БЕР УҢАЙ** (Р.: заодно; И.: at the same time; aynı zamanda) *р. диал.*

Бер ыңғайҙа. □ Заодно. *Тунап ырғыта баралар бер уңай.*

**БЕРҮК** [боронғо төрки *бирүк*] (Р.: пожалуйста; И.: if you please; Т.: lütfen) *инш.*

Низер үтенгәндә ҡулланыла; зинһар. □ Пожалуйста. *Берүк һуңға ҡалмағыҙ.* ■ *Берүк сереңде яҙма рәүештә һаҡлап, кешегә уҡытма. Һине яңылыш аңлауҙары бар йәки хатың бағышланған кешенең һин уйлағанса һәйбәт күңелле булмауы ихтимал.* М. Бураҡаева.

**БЕР ХӘТӘР** (Р.: испытание; И.: test; Т.: sınav) *и. миф.*

Һәр кемгә юғарынан һынау өсөн ебәрелгән бер ҡурҡыныс бәлә. □ Неожиданная опасность, ниспосланная свыше как испытание. ■ *Һәр кемдең ғүмерендә бер хәтәре бар.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕРҺЕГӨН** (Р.: послезавтра; И.: the day after tomorrow; Т.: öbürgün) *р.*

Иртәнән һуңғы көндө. □ Послезавтра. ■ *Юлға сығыу берһегөнгә билдәләнде.* М. Кәрим.

**БЕРҺЕГӨНГӨ** (Р.: послезавтрашний; И.: the day after tomorrow; Т.: öbürgün) *с.*

Иртәнән һуңғы көндәге. □ Послезавтрашний. *Берһегөнгө осрашыу.*

**БЕРҺЕГӨНГӘ** *р. ҡар.* **берһегөн.** ■ *Һау булынһа, иртәгәгә атты яҙ иттереп. берһегөнгә Ҡолбаҡтыға утын төшөрөргә кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**БЕР-ҺЕР КИЛТЕРЕҮ (бер-һер килтер-)** *к. диал. ҡар.* **пыран-заран килтереү.**

**БЕР ҺҮҘҘӘН** (Р.: быстро; И.: quickly; Т.: çabuk) *р.*

Тиҙ, еңел. □ Быстро. *Бер һүҙҙән аңланы.* ■ *Аҡыллы кешеләр менән һөйләшеүҙәре*

*үҙе бер бәхет. Бер һүҙҙән аңлап тора.* Н. Ғәйетбаев.

**БЕРШӘП** (Р.: немного; И.: a little; Т.: biraz) *р. диал.*

Бер аҙ. □ Немного. *Бершәп барғас та ауыл булыр.*

**БЕР ШӘПТӘ** *р. диал. кар.* **тиҙ арала.** *Бер шәптә эшләп ҡуйыу.*

**БЕР ЫҢҒАЙ** *р. ҡар.* **бер юлы.** *Бер ыңғай барып ҡайтыу.* ■ *Егет уянғас та, үҙ тирмәһенә саҡыртып алып, әнәһенән ебенә тиклем һорашты. Бер ыңғай Иҫәнғолдоң көсө тураһында ла хәбәр алмай ҡалманы.* К. Мәргән.

**БЕРӘГӘЙ** (Р.: стóящий; И.: worth; Т.: layık) *с.*

**1.** Бер үҙе күпкә торошло; бер тигән. □ Стóящий, настоящий, достойный. ■ *Атанан алтау тыуғансы, берәү ҙә берәгәй тыуһа ине, ил ағаһы булһа ине, ил башында торһа ине.* Ҡобайырҙан.

**2.** *күсм.* Тапҡыр, үткер. □ Меткий, веский. *Берәгәй кеше.*

**БЕРӘГӘЙЛЕ I** (Р.: исключительно хороший; И.: exceptionally good; Т.: son derece iyi) *с.*

**1.** Берәгәй, бик яҡшы. □ Исключительно хороший. ■ *Урал-Волга төбәгендә Болғар осоро яҙма әҙәбиәте һәм мәҙәниәте тарихында иң мөһим урынды тотҡан, шиғриәтебеҙҙең шишмә башын хасил иткән берәгәйле поэтик ҡомартҡы бар.* Р. Шәкүр.

**2.** *күсм.* Тапҡыр, үткер. □ Веский, меткий. ■ *Һүҙлеккә индерелгән 30 мең һүҙҙең аңлатмаһы берәгәйле һәм бер урында ла ҡабатланмай.* «Йәшлек», 27 ғинуар 2010.

**БЕРӘГӘЙЛЕ II** (Р.: сильно; И.: properly; Т.: kuvvetle) *р.*

**1.** Ныҡ көслө, яҡшы; тейешенсә. □ Сильно; как следует. ■ *Кешеләр малды әллә ни күп булмаһа ла, берәгәйле итеп аҫрарға тырыша.* «Йәшлек», 12 февраль 2011. ● *Бер әйт — берәгәйле әйт.* Әйтем. *Бер эшлә — берәгәйле эшлә.* Әйтем.

**2.** Иң яҡшы рәүештә. □ Наилучшим образом. ■ *[Айһылыу:] Эй-йе... һиңә берҙе булһа ла берәгәйле итеп характерыңды күрһәтеп алырға кәрәк булған да бит.* Т. Ғарипова. ● *Бер булһын — берәгәйле булһын.* Әйтем.

**БЕР ӘҘЕРӘК** (Р.: немного; И.: alittle; Т.: biraz) *р. диал.*

Бер аҙ. □ Немного. *Бер әҙерәк көтөү көтөп ҡайттым әле.*

**БЕРӘҘӘК I (берәҙәге)** [рус. *бродяга*] (Р.: бродяга; И.: vagabond; Т.: evsiz barksız) *и.*

**1.** Билдәле тәғәйен йәшәү урыны булмаған кеше, асарбаҡ. □ Бродяга, бомж. ■ *Берәҙәктәр — баш ҡалабыҙҙың ҙур проблемаһы. Уларҙың күбеһе — ауылдарҙан килеп ҡағылып-һуғылып йөрөүселәр һәм эшләргә теләмәүселәр.* «Башҡортостан», 12 апрель 2011.

**2.** *диал.* Ҡыҙырас, Мысыр хәйерсеһе, илһеҙ-ерһеҙ кеше. □ Бродяга. *Берәҙәк тормошо.* ■ *Үҙ илеңдә берәҙәк хәлендә йәшәүҙән дә аянысы юҡтыр ул.* Т. Ишкинин.

**БЕРӘҘӘК II** (Р.: не имеющий постоянного места жительства; И.: homeless; Т.: evsiz barksız) *с.*

**1.** Билдәле тәғәйен йәшәү урыны булмаған. □ Не имеющий постоянного места жительства, бездомный. *Берәҙәк эттәр. Берәҙәк мал.* ■ *Бынан теүәл 90 йыл элек, 1921 йылғы хәтәр аслыҡта Рәсәйҙә 7 миллион самаһы берәҙәк бала донъя ҡыҙырып йөрөгән.* «Йәшлек», 5 март 2011.

**2.** Яңғыҙ. □ Одинокий. ■ *Зөбәйер, юҡ-юҡ, тип башын һелкте, нисектер уға ошо берәҙәк ир менән икмәк бүлешеүе ғәрлек һымаҡ ине, ә үҙе һаман күҙҙәрен икмәк һынығынан ала алманы.* Ә. Яхина.

**БЕРӘҘӘКЛЕК (берәҙәклеге)** (Р.: бродяжничество; И.: vagrancy; Т.: serserilik) *и.*

Берәҙәк, асарбаҡ булып йөрөү (*билдәле даими йәшәү урыны булмаған кешенең көн итеү рәүеше*). □ Бродяжничество. ■ *Атайың, икәүебеҙҙе лә етем ҡалдырып, берәҙәклеккә олаҡты, хәүефләнмә, улым, иҫән-һау саҡта, һине кәм-хур итмәм, тигәндер Тәскирә.* Д. Исламов.

**БЕРӘҘӘКЛӘНЕҮ (берәҙәклән-)** (Р.: бродяжничать; И.: tramp; Т.: serserilik etmek) *ҡ.*

Берәҙәк булып йөрөү. □ Бродяжничать. ■ *Ата-әсәйем хоккей менән ҡыҙыҡһыныуымды хупланы, урам буйлап берәҙәкләнеп йөрөгәнсе, һаулығы нығыныр, тигәндәрҙер.* «Йәшлек», 11 сентябрь 2010.

**БЕРӘЙ** (Р.: какой-нибудь; И.: some; Т.: herhangi bir) *билдһ. а.*

Ниндәйҙер бер, билдәһеҙ бер. □ Какой-нибудь, какой-либо. *Берәй кеше. Берәй ваҡыт. Берәй файҙа.* ■ *Урман-тауҙар гиҙеүҙән, сәмләнеп-ҡомарланып йөрөп берәй кейек алыуҙан ул [Һолтанбай] йәненә рәхәтлек таба.* Н. Мусин.

**БЕРӘЙҺЕ** (Р.: кто-то; И.: some; Т.: birisi) *билдһ. а.*

Берәй кеше, бер-берәү. □ Кто-то, кто-нибудь, кто-либо. *Берәйһе килер.* ■ *Бөгөн ул хикәйәтте мин һиңә һөйләйем. Бәлки, бер саҡ һин дә берәйһенә һөйләрһең.* З. Биишева.

**БЕРӘЙ ЯРЫ** (Р.: куда-нибудь; И.: somewhere; Т.: bir yere) *р. диал.*

Ҡайҙа ла булһа берәй яҡҡа. □ Куда-нибудь. *Берәй яры китеп тороу.*

**БЕРӘМ-БЕРӘМ** [боронғо төрки *берләм*] (Р.: поодиночке; И.: one by one; Т.: birer birer) *р.*

**1.** Һәр береһе үҙенә башҡа; айырым-айырым. □ Поодиночке, в одиночку, порознь. *Берәм-берәм йөрөү.* ■ *Походта саҡта төндә берәм-берәм йөрөү тыйыла.* Д. Бүләков.

**2.** Береһе артынан икенсеһе, бер-бер артлы. □ Друг за другом. *Балалар берәм-берәм йоҡоға киттеләр.*

**3.** Берәрләп. □ По одному. ■ *Һунарсы... асыуынан теге тумәрҙәрҙе күтәреп, берәм-берәм ситкә ташлай башланы, ти.* Әкиәттән. *Зәкиҙең маҡтаулы һүҙҙәренә тағы ла бер иле күтәрелеп ҡуйған комиссар берәм-берәм үҙенең һөнәрҙәрен күрһәтеп сыҡты.* И. Насыри.

**БЕРӘМЕК I (берәмеге)** (Р.: единица; И.: unit; Т.: birim) *и.*

**1.** Үлсәм итеп билдәләнгән күләм, дәүмәл. □ Единица *(величина, которой измеряются однородные величины). Аҡса берәмеге. Ауырлыҡ берәмеге. Күләм берәмеге. Лексик берәмек.* ■ *Фәндең һәм фәлсәфәнең үҙенсәлекле төп берәмеге — төшөнсә, ә әҙәбиәттеке — образ.* К. Әхмәтйәнов. *Был ҡот осҡос күренеш әллә бер нисә минут эсендә булып үтте, әллә сәғәттәр буйы барҙы, уны ваҡыт берәмеге менән үлсәү мөмкин түгел ине.* Н. Мусин.

**2.** Бер бөтөн нәмәнең үҙ аллы бер өлөшө. □ Отдельная часть в составе целого. *Хужалыҡ берәмеге. Ғәскәри берәмек.* ■ *Хәҙер ҡайҙа күпме бүлеү — муниципаль берәмектәр ҡулында, һәммә нәмәгә үҙҙәре хужа улар.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 2010.

**БЕРӘМЕК II** (Р.: единичный; И.: separate; Т.: ayrı) *с.*

Айырым, ҡайһы бер, берәм-берәм; яңғыҙ. □ Единичный, отдельный. *Берәмек йәшәү.* ■ *Берәмек ғүмер – һүнгән күмер инде ул.* М. Бураҡаева. *Берәмек бүреләр соҡсоноп йөрөй башланылар.* Ә. Бикчәнтәев.

**БЕРӘМЕК АУЫРЫУ** (Р.: одиночная, незаразная болезнь; И.: disease; Т.: hastalik) *и. диал.*

Йоғошһоҙ ауырыу. □ Одиночная, незаразная болезнь. *Берәмек ауырыу булғас, ҡурҡыныс түгел шул.*

**БЕРӘМЕКЛӘП** *р. ҡар.* **берәмләп.** *Берәмекләп ҡарау.*

**БЕРӘМЕКЛӘҮ (берәмеклә-)** (Р.: отделять; И.: separate; Т.: ayırmak) *ҡ.*

Берәм-берәм айырыу. □ Отделять, перебирать по одному. *Орлоҡтарҙы берәмекләп айырыу. Себештәрҙе берәмекләп иҫәпләү.* ■ *Ул әбей ҙә берәмекләп үҙ хәлдәрен һөйләне, ти.* Әкиәттән.

**БЕРӘМЛӘП** (Р.: поодиночке; И.: one by one; Т.: teker teker) *р.*

Берәм-берәм итеп йәки берәм-берәм булып. □ Поодиночке, поштучно, в отдельности. *Берәмләп өләшеү. Берәмләп ултыртыу. Берәмләп сағыурыу.* ■ *Килене берәмләп йыуасаһын ырғыта бара, Мәскәй әбей йота бара, ти.* Әкиәттән.

**БЕРӘМТЕКЛӘҮ I (берәмтеклә-)** *ҡ. ҡар.* **берәмекләү.** ■ *Сәхибә улынан берәмтекләп,*

*ентекләп һорашыуҙан геләп туктаплы, ғөмүмән, бер һүҙҙең дә төбөнә тоҙ койманы.* Ф. Мансуров.

**БЕРӘМТЕКЛӘҮ II (берәмтеклә-)** (Р.: воспитывать с большим трудом; И.: hard; Т.: zor büyütmek) *к. диал.*

**1.** Ҡәҙерләп, нығлап ҡарау, үҫтереү. □ Воспитывать с большим трудом. *Берәмтекләп ҡараным балаларҙы.*

**2.** Берәмләп йыйыу, һанау. □ Собирать, считать по одному.

**БЕРӘМ-ҺӘРӘМ** (Р.: по одному; И.: one by one; Т.: teker teker) *р.*

**1.** Айырым-айырым. □ По одному, поодиночке. *Берәм-һәрәм таралышыу. Берәм-һәрәм ҡайтыу.* ■ *Йыйылыш оҙаҡҡа барманы. Артистар берәм-һәрәм өйҙәренә таралды.* Ш. Рәхмәтуллин.

**2.** Унда-һанда берәү; һирәк-мирәк. □ Поодиночке, изредка. *Берәм-һәрәм ултырған өйҙәр.* ■ *Балан бөткән инде, берәм-һәрәм генә осрай.* Н. Игеҙйәнова.

**БЕРӘР** [боронғо төрки *бирәр* ‘айырым’] (Р.: по одному; И.: one by one; Т.: birer) *бүл.һ.*

**1.** Һәр береһе берҙән торған, бергә тиң. □ По одному. *Берәр китап. Берәр ҡәләм. Көнөнә берәр сәғәт уҡыу.* ■ *Ҡыҙырас менән Юлдаш берәр кәрзинкә ҡарағат тиргәнсе, ҡыҙҙар арбалағы йәшниктәрҙе тултырҙылар.* З. Биишева.

**2.** *а. диал. ҡар.* **берәй.** *Берәр ваҡыт барыу.*

**БЕРӘРЛЕК (берәрлеге)** (Р.: рубль; И.: one rouble note; Т.: bir ruble) *и.*

Бер һумлыҡ аҡса. □ Рубль, рублёвка. *Кеҫәмдә берәрлектәр йыйылып киткән.*

**БЕРӘРЛӘП** (Р.: по одному; И.: one by one; Т.: birer) *р.*

Берәр итеп. □ По одному, по одной штуке. *Алманы кеше башына берәрләп өләшеү.* ■ *Берәрләп булһа ла, йылҡы малы йә һыйыр малы ҡулығыҙға төшөр.* К. Мәргән.

**БЕРӘҪ** (Р.: старательный; И.: industrious; Т.: çalışkan) *с. диал.*

Тырыш. □ Старательный. *Берәҫ кеше булып сыҡты.*

**БЕРӘҮ I** (Р.: один; И.: once; Т.: bir) *иый. һ.*

Бер кеше йәки нәмә. □ Один, одна, одно, одни. *Берәүҙе бүлеү. Балаһы берәү.* ■ *Бер көндө бөтә ауылды карателдәр баҫты. Айым Һәләүекте. Буранбикәне йәшерҙе. Юғиһә, берәүһе киленсәк булып, берәүһе малай ғына башы менән һөңгөгә йәбештеләр.* Ғ. Ибраһимов. ● *Берәү таба, бишәү ҡаба.* Әйтем.

**БЕРӘҮ II** (Р.: некто; И.: somebody; Т.: biri) *билдһ. а.*

Билдәһеҙ кеше, бер кеше. □ Некто, кто-то, какой-то, некий. *Берәү ишек туҡылдата. Берәүгә лә кәрәкмәй. Берәүҙе лә тыңламай. Берәүҙә лә юҡ.* ■ *Берәүгә берәү кәрәк, ҡыйышҡа терәү кәрәк, тигәндәй, Фәриҙә менән минең ише ҡыйыштар бер-береһенә терәү булырға тейеш.* М. Кәрим. *Һыр йылғаһы буйында берәү йырлай, эскәйҙәре тулы һағышҡа.* Халыҡ йырынан. ● *Берәүҙәр ҡайғынан һарғая, берәүҙәр — тәмәкенән.* Әйтем. *Берәүҙә баш ҡайғыһы, берәүҙә бүрек ҡайғыһы.* Әйтем.

**БЕРӘҮ ҘӘ** (Р.: никто; И.: no one; Т.: hiç kimse) *юкл. а.*

Һис кем, һис бер кем. □ Никто. *Берәү ҙә ҡайтырға ҡабаланмай.* ■ *Тәүге таш выжлап осоп китте, ләкин ҡайҙа барып тейгәнен берәү ҙә күрмәне.* М. Кәрим. ● *Берәү ҙә мөгөҙлө булып тыумай.* Әйтем.

**БЕРӘШКӘ АТЫ** *и. диал. ҡар.* **мисәү аты.** *Берәшкә аты һайлау.*

**БЕРӘШКӘЛӘҮ (берәшкәлә-)** *к. диал. ҡар.* **мисәүләү.** □ Запрячь в пристяжку. *Аттарҙы берәшкәләп егеү. Берәшкәләп тороп ат егеп сығып китерҙәр ине әүәле.*

**БЕР ЮЛЫ** (Р.: одновременно; И.: simultaneously; Т.: aynı anda) *р.*

**1.** Бер үк ваҡытта, бер мәлдә. □ Одновременно. ■ *Тыуасаҡ балаларыбыҙ игеҙәк булырын белгәс, йөрәкте шатлыҡ та, ҡурҡыу ҙа бер юлы биләне.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 4, 2010.

**2.** Юл ыңғайы. □ По пути, мимоходом. *Бер юлы инеп сығыу.*

**БЕР ЯҠЛЫ I** (Р.: односторонний; И.: one-sided; Т.: tek taraflı) *с.*

**1.** Уңы һәм һулы булмаған *(туҡымаға ҡарата)*. □ Односторонний *(о ткани). Бер яҡлы туҡыма.*

**2.** Бер генә йүнәлешле. □ Односторонний. *Бер яҡлы хәрәкәт.*

**БЕР ЯҠЛЫ II** (Р.: односторонне; И.: unilateral; Т.: tek taraflı) *р.*

Бөтәһен дә эсенә алмай, бер төрлө генә *(төрлө эш-хәл, мәсьәләнең ҡаралыуына ҡарата)*. □ Односторонне. *Бер яҡлы ғына хәл итеү.* ■ *Йыртып ташланған «биттәрҙең» сала-сарпы һаҡланған нөсхәләрен табып уҡыған һайын, күҙҙәребеҙ асылып, зиһенебеҙ яҡтырып, тарихыбыҙҙың бығаса утә бер яҡлы итеп, ә күп осраҡта боҙоп күрһәтелеүен нығырак аңлайбыҙ.* Ә. Хәкимов.

**БЕС-БЕС** (Р.: кис-кис; И.: kitty, kitty; Т.: pisi pisi) *саҡ.*

Бесәйҙе саҡыра торған һүҙ. □ Кис-кис. *«Бесәйкәй, бес-бес!» — тип әбей бесәйҙе саҡыра башланы.*

**БЕСБЕСЕЙ** (Р.: московка; И.: coal tit; Т.: çam baştankarası) *и. зоол.*

Турғайҙан бәләкәйерәк, түбәһе ҡара, сикәләре аҡ, арҡаһы күкһел һоро, ҡанаттары һәм ҡойроғо күкһел көрән ҡош. □ Московка, чёрная синица (лат. *Periparus ater*). ■ *Бесбесей аралаш һәм ылыҫлы урмандарҙа йәшәй.* Э. Ишбирҙин.

**БЕСБЕТЕҮ** *и. диал. ҡар.* **һабан турғайы.**

**БЕСБЕТӘҮ** *и. диал. ҡар.* **бестәтәү.**

**БЕСЕДКА** [рус.] (Р.: беседка; И.: arbor; Т.: kameriye) *и.*

**1.** Паркта, баҡсала, өй эргәһендә ял итеп ултырыр өсөн яһалған түбәһе ябыулы еңел ҡоролма. □ Беседка. ■ *Ғиндулла ағайҙарҙың баҡса уртаһына беседка ҡуйғандар, эргә-тирәһендә үрмәле гөлдәр үҫтерелгән.* М.Ҡунафин.

**2.** *махс.* Бейек биналарҙы буяған саҡта эшселәр баҫып йәки ултырып эшләү өсөн яһалған аҫылмалы баҫҡыс-күтәрмә. □ Висячая лестница-подъёмник, которая используется при покраске стен высотных домов. *Беседкаға баҫып эшләү.* ■ *Бер ағай фонарь яҡтыртҡан төнгө беседкаға ултырып алған да, япа-яңғыҙ моңлана шулай.* Д. Шәрәфетдинов.

**БЕСЕЙ КҮМӘСЕ** *и. диал. ҡар.* **бесәй табаны.**

**БЕСЕЙ ҠОЙРОҒО** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **аҡ алабута.**

**2.** *ҡар.* **бесәйҡойроҡ.**

**БЕСЕЙ ЖИЛЕГЕ** *и. диал. ҡар.* **йөлөн.**

**БЕСЕЙ КӨПШӘҪЕ** *и. диал. ҡар.* **шыма көпшә.**

**БЕСЕК** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **ебегән.** *Бесек икмәк.*

**2.** Ебегән. □ Недотёпа.

**3.** *ҡар.* **үсексән.** *Бесек ҡыҙ.*

**БЕСЕКТӘНЕҮ (бесектән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **көйһөҙләнеү.** *Ҡунаҡ килһә, бала бесектәнеп китә ул.*

**БЕСЕК ҺАҒЫҘ** (Р.: навязчивый; И.: obsessive; Т.: saplantılı) *с. диал.*

Кешегә һырыҡыусан. □ Навязчивый.

**БЕСЕЛДӘҮ (беселдә-)** *ҡ. ҡар.* **бысылдау.** *Икмәк беселдәгән.*

**БЕСЕЛЕҮ I (бесел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бесеү I.** *страд. от* **бесеү I.** ● *Кәңәш менән беселгән тунда кәмселек булмаҫ.* Әйтем.

**БЕСЕЛЕҮ II (бесел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бесеү II.** *страд. от* **бесеү II.** *Беселгән һарыҡ тәкәһе.*

**БЕСЕМ I** *и. диал. ҡар.* **бышым.**

**БЕСЕМ II** (Р.: кусок ткани; И.: a piece of cloth; Т.: bez parçası) *и. диал.*

Ҡырҡып алынған тауар өлөшө. □ Кусок ткани. *Ике бесем ситса.*

**БЕСЕМҒАТА** (Р.: женская обувь без каблука с кожаной головкой и холщовым голенищем с разноцветной каймой; И.: a kind of female footwear; Т.: deri başlı ve tuval bacaklı topuksuz bayan ayakkabıları) *и. этн.*

Төрлө төҫ менән ҡайылып тегелгән киндер ҡуныслы, күн башлы, үксәһеҙ ҡатынҡыҙ аяҡ кейеме. □ Женская обувь без каблука с кожаной головкой и холщовым голенищем с разноцветной каймой. *Бесемғата кейеп атлау.* ■ *Һуңғы ваҡытта бесемғатаны һүрәттәрҙә генә түгел, музейҙарҙа ла күреп була, сөнки музейҙар — халыҡтың тере хәтере.* З. Ураҡсин.

**БЕСЕМЕЙ** *с. диал. ҡар.* **мыштыр.** *Шул бесемейгә эш ҡушамы?*

**БЕСЕМЛӘҮ (бесемлә-)** (Р.: пришивать к обуви верх из холста; И.: sew up; Т.: ayakkabılarına tuval bacaklar dikmek) *ҡ. диал.*

Ҡатаға киндер ҡуныс һаплау. □ Пришивать к обуви верх из холста. *Ҡата бесемләү.*

**БЕСЕМНЕ** *и. диал. ҡар.* **бесемғата.**

**БЕСЕҮ I (бес-)** [боронғо төрки *быч-* 'киҫеү'] (Р.: кроить; И.: cut; Т.: biçmek) *ҡ.*

Кейем тегеү өсөн тауарҙы үлсәп ҡырҡыу, киҫеү. □ Кроить, скроить, закраивать. *Күлдәк бесеү.* ■ *Ҡыҫҡа ғына ваҡытта ҡыҙҙар күлдәк бесеүҙең бөтә нескәлектәренә төшөнөп алдылар.* Ф. Чанышева. ● *Атанан күргән үк юныр, инәнән күргән тун бесер.* Әйтем.

♦ **Хаҡ бесеү** һатыулашып, хаҡ килешеү. □ Установить цену (*сторговаться*). ■ *Баҙарҙа алыусылар ҙа, һатыусылар ҙа етерлек. Кемдер ала, кемдер һата, хаҡ бесәләр, һатыулашалар, дыу киләләр.* Д. Шәрәфетдинов.

**БЕСЕҮ II (бес-)** (Р.: холостить; И.: castrate; Т.: iğdiş etmek) *ҡ.*

Аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыу; һылыулау. □ Холостить, кастрировать. *Айғыр бесеү. Мал бесеү.* ■ *Һеҙ, .. бескән ҡыҙыл әтәстәр, урынһыҙға тоҡанып бараһығыҙ. Ярамай, был яҡшы түгел.* Б. Бикбай.

**БЕСЕҮСЕ I** (Р.: закройщик; И.: tailor's cutter; Т.: makastar) *и.*

Кейем тегеү өсөн тауарҙы үлсәп ҡырҡыусы. □ Закройщик. *Бесеүсе булып эшләү.* ■ *Күлдәге лә килешеп тора, кейем бесеүсе тауарҙы оҫта бескән.* З. Муллағәлиева.

**БЕСЕҮСЕ II** (Р.: тот, кто занимается кастрацией; И.: one who castrates; Т.: hadım eden kişi) *и. вет.*

Аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыусы. □ Тот, кто занимается кастрацией. ■ *Ат бесеүсе ветврач Вера апайҙы тирә-яҡта белмәгән кеше юҡ ине.* Р. Сабитов.

**БЕСЕШЕҮ (бесеш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бесеү I.** *взаимн. от* **бесеү I.** *Кейем бесешеү.*

**БЕСКЕЛДӘҮ (бескелдә-)** (Р.: слезиться; И.: tear; Т.: yaşarmak) *ҡ. диал.*

**1.** Йәшләнеү (*күҙҙәргә ҡарата*). □ Слезиться. *Күҙ бескелдәй.*

**2.** Һыуланыу. □ Мокнуть.

**БЕСКӘКЛӘҮ (бескәклә-)** (Р.: носиться; И.: scamper; Т.: şuraya buraya koşmak) *ҡ. диал.*

Сәнскәкләү. □ Носиться (*от укуса овода*). *Һыйырҙар бескәкләй.*

**БЕСЛӘК I** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **бысый 1.** *Бесләк икмәк.*

**2.** Һыуланып, сейләнеп торған (*күҙ*). □ Слезящийся от воспаления (*глаза*). *Бесләк күҙ.*

**БЕСЛӘК II** (Р.: коптилка; И.: oil lamp; Т.: kandil) *и.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. *Бесләк яндырыу.*

**БЕСЛӘКЛӘНЕҮ (бесләклән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бысыйланыу.** *Икмәк бесләкләнгән.*

**БЕСНӘК I (беснәге)** (Р.: пазник крапчатый; И.: a kind of bird; Т.: alacalı kuş) *и. зоол.*

Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған ҡара түбәле, һары түшле һайраусы турғай, ҡарабаш турғай. □ Пазник крапчатый (лат. *Cryptocephalus aureolus*). ■ *Сыйырсыҡ, балаһына аҙыҡ ташый-ташый, көнөнә етмеш — һикһән сакрым юл утә, оло беснәк йөҙ, яр ҡарлуғасы меңәр сакрым оса икән.* Я. Хамматов.

**БЕСНӘК II (беснәге)** *и. зоол. диал. ҡар.* **бесбесей.** *Беснәктәр оса.*

**БЕСНӘК III (беснәге)** *и. диал. ҡар.* **һаңғырау бәшмәк.**

**БЕСНӘК IV (беснәге)** (Р.: мокрый снег; И.: sleet; Т.: sulusepken kar) *и. диал.*

Епшек ҡар. □ Мокрый снег.

**БЕСПЕК (беспеге)** (Р.: коптилка; И.: oil lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка.

**БЕСПЕК КҮҘ** *и. диал. ҡар.* **бесләк I, 2.** *Беспек күҙле ҡыҙын күргәнең бармы?*

**БЕССА** [рус. < фр. *baisse* 'төшеү'] (Р.: бесса; И.: decline in quotation; Т.: düşmek) *и. иҡт.*

Ҡиммәтле ҡағыҙ йәки тауарҙарҙың биржала хаҡы төшөүе. □ Бесса.

**БЕСТЕК** (Р.: маленький; И.: little; Т.: küçük) *с. диал.*

Бәләкәй. □ Маленький. *Бестек кенә.*

**БЕСТЕРЕЛЕҮ I (бестерел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бестереү I.** *страд. от* **бестереү I.** *Яңыса бестерелгән ҡулдәк.*

**БЕСТЕРЕЛЕҮ II (бестерел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бестереү II.** *страд. от* **бестереү II.** *Бестерелгән үгеҙ.*

**БЕСТЕРЕҮ I (бестер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бесеү I.** *понуд. от* **бесеү I.** *Ҡулдәк бестереү.*

**БЕСТЕРЕҮ II (бестер-)** (Р.: обрезать; И.: circumcision; Т.: sünnet etmek) *ҡ.*

1. *йөкм. ҡар.* **бесеү II.** *понуд. от* **бесеү II.** *Тәкә бестереү. Бестерелгән һарыҡ тәкәһе.*

2. *диал.* Сөннәтләү. □ Подвергать обрезанию.

**БЕСТЕРТЕҮ I (бестерт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бесеү I.** *понуд. от* **бесеү I.** *Ҡулдәк бестертеү.*

**БЕСТЕРТЕҮ II (бестерт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бесеү II.** *понуд. от* **бесеү II.** *Тәкә бестертеү.*

**БЕСТЕРӘҮ** (Р.: заплечная сума, вьюк; И.: pack; Т.: torba) *и. диал.*

Артмаҡ (*арҡаға аҫа торған юл тоҡо*). □ Заплечная сума, вьюк. *Бестерәү аҫыу.* ■ *Шуныһы: малайҙар бестерәүҙәренә һалып алып килтергән икмәктәрен тәүге дәрестә үк ашап бөтөрә лә, ҡайтыр юлға сыҡҡас, ашағылары килә.* И. Нурғәлиев.

**БЕСТЕРӘҮЛӘҮ (бестерәүлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **артмаҡлау.** ■ *Сәлих урынынан торҙо. Төйөнсөгөн арҡаһына бестерәүләп йәтешләп аҫты.* С. Агиш.

**БЕСТСЕЛЛЕР** [рус. < ингл. *bestseller*] (Р.: бестселлер; И.: bestseller; Т.: çoksatar) *и.*

Күп тираж менән сыҡҡан һәм уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан китап. □ Бестселлер. *Был китап бестселлерға әйләнде.*

**БЕСТӘТӘҮ** (Р.: без штанов; И.: without pants; Т.: pantolonsuz) *с. диал.*

Ыштанһыҙ (*ир балаға ҡарата*). □ Без штанов. *Бестәтәү йөрөгән малай.*

**БЕСӘЙ** (Р.: кошка; И.: cat; Т.: kedi) *и. зоол.*

1. Сысҡан тота торған йыртҡыс ҡылыҡлы йорт йәнлеге. □ Кошка (лат. *Felis silvestris catus*). *Ата бесәй. Инә бесәй.* ■ *Бесәй балаһы көнө буйы арып-талып уйнап, мырр-мырр итеп иркәләнеп килеп, Лилиәгә һыйынды, рәхәтләнеп йоҡларға ятты.* Т. Ишкинин. ● *Бесәй юҡ ерҙә сысҡан түрә була.* Мәҡәл.

2. *күсм.* Өнө, тыны сыҡмаған йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. □ Кроткий (*о кротком, безропотном, смирном человеке*). *Бесәй һымаҡ баҫып йөрөү.*

3. *миф.* Кеше килеүен, көн үҙгәреүен алдан белеү һәләтенә эйә булған мифлаштырылған йәнлек. □ Кошка. ■ *Бесәй яман ул, теге донъяла ҡойроғо менән ут ташыр, ти.* Экспедиция материалдарынан.

♦ **Бесәй төкөрөгө** бик әҙ, бәләкәй нәмәгә әйтелә. ■ *Ҡулға килеп ингән аҡса — бесәй төкөрөгө.* Ғ. Лоҡманов. **Утҡа** (*йәки* **ҡуҙға**) **баҫҡан бесәй кеүек** сыҙамай, өтәләнеп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Как ужалённый. ■ *Һикеренеп, екеренеп, утҡа баҫҡан бесәй кеүек, донъя ҡыйратырға тотондо Мәжит.* И. Тимерханов. **Эт менән бесәй кеүек** үҙ-ара талашып, ыҙғышып торған кешеләргә ҡарата әйтелә. □ Жить как кошка с собакой. ■ *Эт менән бесәй кеүек һәр ваҡыт ырылдашып-мырылдашып ҡына тормағыҙ, һеҙ ағалы-һеңлеле туғандар бит.* А. Вахитова.

**БЕСӘЙ АЯҒЫ** *и. диал. ҡар.* **бесәй борсағы.**

**БЕСӘЙБАШ** *и. диал. ҡар.* **һыпай.**

**БЕСӘЙБАШ ЯБАЛАҠ (ябалағы)** (Р.: филин; И.: owl; Т.: puhu kuşu) *и. зоол.*

Аҡ һәм ҡара таптар менән сыбарланған ерәнһыу һоро төҫлө, күҙҙәре һары, башында ҡалҡып торған ҡауырһындарҙан ҡолаҡтары булған, киң оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло урман ҡошо. □ Филин (лат. *Bubo bubo*).

**БЕСӘЙ БОРСАҒЫ** (Р.: просвирник; И.: mallow; Т.: ebegümeci) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, аҡ йәки ҡыҙғылт сәскәле, һиҙәп орлоҡло бер йәки күп йыллыҡ үҫемлек. □ Просвирник, маль-

ва (лат. *Malva*). *Бөҙрә бесәй борсағы. Урман бесәй борсағы.* ■ *Мостай беҙҙе тирә-яғына яҙ — сыскан тармаһы, көҙ — бесәй борсағы тип аталған үлән әйләндереп алған урынға ҡоролған ҡыуышҡа инеп ултырырға тәҡдим итте.* С. Кулибай.

**БЕСӘЙ БӨТНӨГӨ** (Р.: котовник кошачий; И.: catnip; Т.: kedi nanesi) *и. бот.*

Тәме әскелт, еҫе көслө булғаны өсөн бесәйҙәр ашарға яратҡан күп йыллыҡ үлән. □ Котовник кошачий, кошачья мята (лат. *Nepeta cataria*). *Бесәй бөтнөгөнөң еҫен бесәй йыраҡтан һиҙә.*

**БЕСӘЙ БӘРӘМӘСЕ** *и. бот. ҡар.* **бесәйтабан.**

**БЕСӘЙГҮҘ** *и. диал. ҡар.* **ябалаҡ.** ■*Бесәйгүҙгә тейергә ярамай, өйөңә ҡайғы килә.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕСӘЙҒОЙРОҠ (бесәйғойроғо)** (Р.: житняк; И.: wheatgrass; Т.: buğday otu) *и. бот.*

Башағы бесәй ҡойроғона оҡшаған, ваҡ ҡына йылтыр ҡара орлоҡло ҡыяҡлы үлән. □ Житняк, щетинник сизый (лат. *Agropyron*). *Бесәйғойроҡ йыйыу.* ■ *Баҡсаны бесәйғойроҡ баҫҡан бит, балам, – тип, өләсәйем әҙерәк шелтәләп алды.* И. Нурғәлиев.

**БЕСӘЙҘӘР, БЕСӘЙ ҺЫМАҠТАР** (Р.: семейство кошачьих; И.: feline; Т.: kedigiller) *и. зоол.*

Йорт бесәйе, арыҫлан, юлбарыҫ һ. б. шундай имеҙеүсе йыртҡыс йәнлектәр ғаиләһе. □ Семейство кошачьих (лат. *Felidae*).

**БЕСӘЙ ЕЛЕК (елеге)** *и. диал. ҡар.* **йөлөн.**

**БЕСӘЙ ИКМӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **бесәй борсағы.**

**БЕСӘЙ КҮҘЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **күгәрсен күҙе.**

**БЕСӘЙ КҮМӘСЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **бесәйтабан.** *Бәләкәй сакта бесәй күмәсен беҙ ҙә ашай торғайныҡ.*

**БЕСӘЙ КӘБЕҪТӘҺЕ** *и. бот. ҡар.* **тырнағут.**

**БЕСӘЙ ҠАРҒЫШЫ** (Р.: вид проклятия; И.: cat's curse; Т.: kedi laneti) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, ас тотҡанда, һуҡҡанда бесәйҙең ҡарғышы төшөү. □ Проклятие кошки. ■ *Бесәйҙе ас тоторға ярамай. Бесәй ҡарғышы төшә.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕСӘЙ ҠОЙРОҒО I** *и. бот. ҡар.* **бесәйғойроҡ.**

**БЕСӘЙ ҠОЙРОҒО II** (Р.: хвост кошки; И.: tail of cat; Т.: kedi kuyruğu) *и. миф.*

Эренле шеш, күперткене дауалағанда ҡулланыла. □ Хвост кошки. ■ *Һум шеште бесәй ҡойроғо төртөп имләйҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕСӘЙ ҠУҘҒАЛАҒЫ** *и. бот. ҡар.* **аҡ алабута.** *Бесәй ҡуҙғалағы йыйыу.*

**БЕСӘЙ МАҢҠАҺЫ** *и. диал. ҡар.* **йөлөн.**

**БЕСӘЙ-СЫСҠАН** (Р.: детская игра «Кошки-мышки»; И.: tag; Т.: «Kedi ve Fare» oyunu) *и.*

Балалар уйыны (*тотоношоп, түңәрәккә баҫалар; аранан икәү «бесәй» менән «сыскан» булып баҫтырыша; түңәрәктәгеләр «сыскан» үткән ергә «бесәйҙе» үткәрмәҫкә тырыша; «бесәй» «сысканды» тотҡан тәңгәлдә түңәрәктән икәү сығып, тағы баҫтырыша*). □ Детская игра «Кошки-мышки».

**БЕСӘЙТАБАН** (Р.: кошачьи лапки; И.: Mountain Everlasting; Т.: kediayağı) *и. бот.*

Түңәрәк япраҡлы, һиҙәп орлоҡло күп йыллыҡ һары сәскәле үлән. □ Кошачьи лапки (*трава*) (лат. *Helichrysum arenarium*). *Бесәйтабан үләне баҫып алыу.*

**БЕСӘЙ ТАБАНЫ** *и. бот. ҡар.* **бесәйтабан.**

**БЕСӘЙ ТАРМАҺЫ** (Р.: будра; И.: Glechoma; Т.: yer sarmaşığı) *и. бот.*

Яланда, үҙәндә, һыуһыл ерҙә үҫеүсе, һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған тарбаҡай ботаҡлы бейек күп йыллыҡ үлән, мәшкәк. □ Будра (лат. *Glechoma*).

**БЕСӘЙ ТАРЫҺЫ** (Р.: щирица метельчатая; И.: amaranth; Т.: amaranthus) *и. бот.*

Ваҡ ҡына сәскәле, тығыҙ һепертке башаҡлы, оҙонса япраҡлы ҡый үләне; ҡара алабута. □ Щирица метельчатая; лебеда чёр-

ная (лат. *Amaranthus*). ■ *Бесәй тарыһынан да икмәк ашаған булды.* И. Нурғәлиев.

**БЕСӘЙ ТЫРНАҒЫ** (Р.: алтей; И.: althaea; Т.: hatmi) *и. бот.*

Күкһел көрән йәки алһыу төҫтәге эре сәскәле, бейек һабаҡлы дарыу үләне; һиҙәп үләне. □ Алтей (лат. *Althaea*). ■ *Йүтәлде ингаляция, үрмә гөл, бесәй тырнағы, юл япрағы кеүек дарыу үләндәре ярҙамында ла дауалайҙар.* «Йәшлек», 6 февраль 2010.

**БЕСӘЙ УСЫ** *и. диал. ҡар.* **бесәй борсағы.**

**БЕСӘЙ ҮЛӘНЕ** (Р.: валериана; И.: valerian; Т.: kedi otu) *и. бот.*

Һыу буйҙарында, дымлы ерҙә үҫеүсе, оҙон һабаҡлы, ҡара-ҡаршы япраҡлы, ваҡ суҡ алһыу миләүшә төҫлө сәскәле күп йыллыҡ дарыу үләне. □ Валериана (лат. *Valeriana*). ■ *Ҡан баҫымы юғары ваҡытта пион, бесәй үләне төнәтмәләре ҡотҡарыр.* «Йәшлек», 12 ғинуар 2010.

**БЕСӘЙ ҺӘҘӘБЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **бесәй борсағы.**

**БЕСӘЙ ЯБАЛАҒЫ** *и. зоол. диал. ҡар.* **бесәйбаш ябалаҡ.** *Бесәй ябалағын кисә генә күргәйнек тә.*

**БЕСӘН** (Р.: сено; И.: hay; Т.: kuru ot) *и.*

**1.** Малға ашатыу өсөн сабылған үлән. □ Сено. *Урман бесәне. Ялан бесәне. Бесән вағы. Бесән йыйыу.* ■ *Талха ялпылдап арбаһы янына барҙы ла бесән аҫтындағы салғыһын тартып сығара башланы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Үлән. □ Трава. *Күл бесәне.*

♦ **Дуға менән бесән сабыу** килешмәгән, мәғәнәһеҙ эш эшләү. □ Дугой сено косить. *соотв.* Попасть пальцем в небо.

**БЕСӘН ВАҠЫТЫ** *и. ҡар.* **бесән өҫтө.**

**БЕСӘНГӘ ТӨШӨҮ (бесәнгә төш-)** (Р.: приступить к сенокосу; И.: start mowing; Т.: ot biçmek) *ҡ.*

Бесән сабыу осорон башлау. □ Приступить к сенокосу. ■ *Бесәнгә төшөр алда, Ғариф, Табын йәрминкәһенә барып, еңелгә егеп йөрөү өсөн, бер саптар юрға һатып алды.* Ж. Кейекбаев.

**БЕСӘНЛЕК (бесәнлеге)** (Р.: сенокос; И.: hayfield; Т.: otlar biçilen çayır) *и.*

**1.** Сабынлыҡ. □ Сенокос *(место косьбы).* ■ *Хәҙер ул яҡтағы бесәнлектәргә беҙ былай тау аша түгел, ә урап һалынған таш юлдан арба менән йөрөйбөҙ.* Д. Шәрәфетдинов.

**2.** Йорт янындағы бесән ҡуйылған урын. □ Сеновал, сенник. ■ *Әмир хуш еҫле ҡайын миндеге менән мунса керҙе лә тирләп-бешеп сәй эсеп, аҙбар башына бесәнлеккә менеп китте.* Х. Ғиләжев.

**3.** *диал. ҡар.* **утлыҡса.**

**БЕСӘН ӨҪТӨ** (Р.: сенокосная пора; И.: reaping; Т.: ot biçme zamanı) *и. а.х.*

Бесән эшләү ваҡыты. □ Сенокосная пора, косовица. *Бесән өҫтө етә.* ■ *Бесән өҫтө етһә — ҡышты һағынабыҙ, ҡыш етһә — йәйҙе көтәбеҙ.* Р. Бикбаев.

**БЕСӘН САБЫУ (бесән сап-)** (Р.: косить сено; И.: make hay; Т.: ot biçmek) *ҡ.*

Ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләү. □ Косить сено. ■ *Берәүҙәр бесән саба, икенселәр уны йыя, өсөнсөләр күбәләй, дүртенселәр кәбән ҡоя. Эш гөрләп тора.* С. Әлибаев.

**БЕСӘН САПҠЫС** (Р.: косилка; И.: mower; Т.: orak makinesi) *и.*

Бесән саба торған агрегат. □ Косилка. *Үҙйөрөшлө бесән сапҡыс.* ■ *Һуңғы йылдарҙа шәхси хужалыҡтар бесәнде күбәрәгән техника ярҙамында эшләй, һәр йортта тиерлек бесән сапҡыс, йыйғыс, тракторҙар ҙа етерлек.* «Урал», 28 июль 2010.

**БЕСӘНСЕ** (Р.: работающий на сенокосе; И.: mower; Т.: biçici) *и.*

Бесән эшендәге кеше. □ Работающий на сенокосе; косарь, косец. *Бесәнселәр ярыша.* ■ *Бесәнселәргә бер юлы өс ерҙә кәбән һалырға тура килде.* М. Кәрим.

**БЕСӘН ТАЯҠСАҺЫ** (Р.: палочка сенная; И.: bacillus subtilis; Т.: bacillus subtilis) *и. бот.*

Тупраҡ бактерияһы. □ Палочка сенная. *Бесән таяҡсаһының таралыуы.*

**БЕТ** [дөйөм төрки *биит* 'бет'] (Р.: вошь; И.: louse; Т.: bit) *и. зоол.*

**1.** Кеше, ҡош, йәнлек тәнендә ҡан һурып йәшәгән бәләкәй генә ҡанатһыҙ бөжәк. □ Вошь (лат. *Louse*). *Баш бете. Кейем бете. Ҡаҙ бете. Һарыҡ бете.* ■ *Бетқә үсегеп, тунын утҡа яҡҡан, тигәндәй килеп сыға, ахыры.* Ш. Насыров.

**2.** Үҫемлектең һутын һурып ҡорота торған йәшел төҫтәге ваҡ ҡына ҡанатһыҙ бөжәк; кеблә. □ Тля, растительная вошь (лат. *Aphididae*). *Алма бете. Ҡарағат бете.*

**БЕТА-КИҪӘКСӘ** (Р.: бета-частица; И.: beta particle; Т.: beta parçacığı) *и. физ.*

Бета-тарҡалыш ваҡытында хасил булған электрон һәм позитрон. □ Бета-частица.

**БЕТА-НУРҘАР** (Р.: бета-лучи; И.: beta rays; Т.: beta-ışınları) *и. физ.*

Радиоактив матдәләр тарҡалғанда, атом ядроһынан айырылып сыҡҡан электрондар йәки позитрондар ағымы. □ Бета-лучи.

**БЕТА-ТАРҠАЛЫШ** (Р.: бета-распад; И.: beta decay; Т.: beta dezentegrasyonu) *и. физ.*

Атом ядроларының радиоактив әүерелештәре, был процеста ядролар, электрондар һәм антинейтрино йәки позитрондар һәм нейтрино айырылып сыға. □ Бета-распад.

**БЕТАТРОН** [рус. < ингл. *betatron*] (Р.: бетатрон; И.: betatron; Т.: betatron) *и. тех.*

Электрондарҙы тиҙләтеү приборы. □ Бетатрон. *Бетатрон ҡулланыу.*

**БЕТЕЙ** *и. диал. кар.* **түш.** ■ *Албаҫтының ике бетейе лә оҙон була.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕТЕП** *р. диал. кар.* **бөтөнләй.** *Бетеп беҙнең тормош инде ул китапта.*

**БЕТЕҮ I** [боронғо төрки *бути-, бити-, пити-* 'яҙыу'] (Р.: документ; И.: paper; Т.: belge) *и.*

**1.** *иҫк.* Яҙыу, документ. □ Документ (*подтверждающий что-л.*). *Тарханлыҡ бетеүе.* ■ *Тарханлыҡ бетеүе алған кеше генә хан яһағынан ҡотола алған.* К. Мәргән.

**2.** *этн.* Кешеләрҙең төрлө бәхетһеҙлектәрҙән, ауырыуҙарҙан һаҡланыу өсөн доға яҙып, күн менән өскөлләп көпләп, муйынға йәки кейемгә тағып йөрөй торған доғалығы. □ Амулет, оберег, талисман (*молитвенник в виде треугольника, обшитый кожей*). *Бетеү яҙыу.* ■ *Бетеүҙе сәңгелдәктең дүрт мөйөшөнә элеп ҡуйғандар әүәле.* Ф. Хисамитдинова. *Мулла менән мәзин яҙған бетеүҙәрҙе һуғышҡа киткән кешеләрҙең муйынына, түшенә таҡтылар.* Ж. Кейекбаев.

**БЕТЕҮ II** *и. диал.*

**1.** *кар.* **бетеүсә I, 2.**

**2.** Ҡораманан тегелгән стена ҡорғаны. □ Занавес для стены, сшитый из треугольных лоскутков.

**БЕТЕҮ БИҘӘК (биҙәге)** (Р.: узор; И.: pattern; Т.: bezek) *и. диал.*

Өсмөйөшлө биҙәк. □ Узор-аппликация в форме треугольников.

**БЕТЕҮ КҮЛДӘК (күлдәге)** (Р.: обережная рубашка новорождённого; И.: amulet shirt; Т.: koruma elbise) *и. миф.*

Өсмөйөш ҡорамаларҙан тегелгән, һаҡлау көсөнә эйә булған бала күлдәге. □ Обережная рубашка новорождённого, сшитая повитухой из треугольных лоскутков. *Бетеү күлдәк кейеү.* ■ *Кендек инәһе ҡораманан теккән күлдәкте бетеү күлдәк, тиҙәр.* Ф. Хисамитдинова.

**БЕТЕҮЛЕК (бетеүлеге)** (Р.: оберег; И.: amulet; Т.: muska) *и.*

Эсенә бетеү һалып күндән тегелгән амулет. □ Оберег.

**БЕТЕҮЛӘҮ (бетеүлә-)** (Р.: сшивать лоскутки; И.: sew patches; Т.: bez parçalarını dikmek) *ҡ.*

Өскөлләп ҡорама ҡорау. □ Пришивать лоскутки.

**БЕТЕҮСӘ I** (Р.: узор; И.: kind of magic pattern; Т.: küçük üçgenler şeklinde muska) *и.*

**1.** Ваҡ ҡына өсмөйөш рәүешендәге биҙәк. □ Узор в форме маленьких треугольников. По верованиям башкир, такой узор обладает обережной силой. *Бетеүсә биҙәк. Балаға, ауырыу кешегә бетеүсәле юрған япҡандар.*

**2.** Өсмөйөшлө ҡорама. □ Одеяло или покрывало, сшитое из клинышков ткани в форме треугольников. *Бетеүсә япма.*

**БЕТЕҮСӘ II** (Р.: хворост; И.: kind of cookie; Т.: tatlı türü) *и. диал. кул.*

Ҡош теле *(йоморҡаға ғына сөсө ҡамыр баҫып, йоҡа итеп йәйеп, ҡыйыҡлап ҡырҡып, майҙа ҡайнатып бешерелгән йола ашамлығы).* □ Хворост *(печенье в форме треугольников, сваренное в кипящем масле). Бетеүсә бешереү.* ■ *Туйға беҙҙә бетеүсә, бауырһаҡ бешерәләр.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕТЕҮ ЮРҒАН** (Р.: детское лоскутное одеяло; И.: kind of children's blanket; Т.: koruyucu bebek battaniyesi) *и. миф.*

Өсмөйөшлө ҡорамаларҙан тегелгән һаҡлау көсөнә эйә булған бала юрғаны. □ Детское одеяло, сшитое из треугольных лоскутков, имеющее, по поверьям, обережную силу. *Бетеү юрған әҙерләү.* ■ *Оло инәй образы аша М. Кәрим бүләк таратыуҙы өлөш, яҙмыш таратыу хәленә күтәрә. Әйберҙәр араһында һаҡлау көсөнә эйә булған бетеү юрғаны ла бар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕТ ИМЕ** (Р.: заговаривание желтухи с помощью вши; И.: charmed by lice; Т.: bit büyüsü) *и. миф.*

Һары ауырыуын дауалау ысулы. □ Заговаривание желтухи с помощью вши. ■ *Һары булһа, аш-һыуға ҡушып бет ашаталар. Шуны бет име тиҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕТЛЕ** (Р.: вшивый; И.: lousy; Т.: bitli) *с.*

Бетләгән, бет баҫҡан. □ Вшивый. *Бетле баш.* ■ *Уға [Наиләгә] бағышлап шиғырҙар яҙҙым, үҙенә лә ебәрҙем, әлбиттә, яуап алманым, сөнки мин тома етем, буйға бәләкәс, йәмһеҙ, бетле, ул миңә «карабай» тип ҡушамат та таҡты.* «Башҡортостан», 6 октябрь 2011.

**БЕТЛЕКӘЙ I** (Р.: лук линейный; И.: kind of onion; Т.: soğan) *и. бот. диал.*

Әтмәкәй. □ Лук линейный (лат. *Allium lineare).*

**БЕТЛЕКӘЙ II** (Р.: пастушья сумка; И.: lady's purse; Т.: çobançantası) *и. бот. диал.*

Көтөүсе муҡсаһы. □ Пастушья сумка (лат. *Capsella bursa pastoris). Көтөүсе муҡсаһын йыйып киптереү.*

**БЕТЛЕКӘЙ III** (Р.: чижик; И.: child's play; Т.: çocuklar oyunu) *и. диал.*

Сүрәкә *(балалар уйыны).* □ Чижик *(детская игра). Бетлекәй таяғы.*

**БЕТЛӘҮ (бетлә-)** (Р.: вшиветь; И.: to get lousy; Т.: bitlenmek) *ҡ.*

**1.** Бетлегә әйләнеү, бетле булыу. □ Вшиветь. *Бетләп бөтөү.* ■ *[Шәмсиә:] Бысраҡ йөрөп, бетләп китмәһендәр балалар. Керҙәрен йыуып, үҙҙәрен мунса индерергә кәрәк.* М. Бураҡаева.

**2.** *ҡусм.* Уйындан ялҡып йә үсегеп сығып китеү; ҡортлау, хәрәмләшеү, алдашыу. □ Выходить из игры (*до её окончания*), хлюзить. *Күпме бетләшергә булалыр инде?*

**БЕТМЕР** (Р.: расторопный в работе; И.: hardworking; Т.: hamarat) *с. диал.*

Уңған. □ Расторопный в работе. *Бетмер кеше.*

**БЕТОН** [рус. < фр. *beton* < лат. *bitumen* 'тау һағыҙы'] (Р.: бетон; И.: concrete; Т.: beton) *и.*

Цементҡа ҡом, ҡырсын ҡушып яһалған төҙөлөш материалы. □ Бетон. *Бетон һалыу. Бетон стена. Бетон заводы.* ■ *Баш ҡалаға алып сығыусы берҙән-бер аэродром, уныһына ла бетон түшәлмәгән, йыш ҡына көн боҙоҡта буш тора.* Д. Бүләков.

**БЕТОН ИҘГЕС** (Р.: бетономешалка; И.: concrete mixer; Т.: beton karıştırıcı) *и.*

Бетон иҙеү машинаһы. □ Бетономешалка.

**БЕТОНИТ** [рус. < фр. *beton*] (Р.: бетонит; И.: concrete block; Т.: beton taç) *и.*

Төҙөлөш материалы. □ Бетонит.

**БЕТОНЛАНЫУ (бетонлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бетонлау.** *страд. от* **бетонлау.** *Юл бетонланды.*

**БЕТОНЛАТЫУ (бетонлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бетонлау.** *понуд. от* **бетонлау.** *Ишек алдын бетонлаттыҡ.*

**БЕТОНЛАУ (бетонла-)** (Р.: бетонировать; И.: lay concrete; Т.: betonlamak) *ҡ.*

Бетон һалып эшләү. □ Бетонировать, бетонирование. *Өй нигеҙен бетонлау.*

**БЕТОНСЫ** (Р.: бетонщик; И.: concrete worker; Т.: beton işçisi) *и.*

Бетон эшендәге эшсе. □ Бетонщик. *Бетонсы булып эшләү.* ■ *Ҡыҙ ҙа бында бетонсы булып эшләй икән.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 3, 2010.

**БЕТСӘ** (Р.: клещ чесоточный; И.: itch mite; Т.: uyuz böceği) *и. зоол.*

**1.** Ҡысынма ҡорто, бетсә талпаны. □ Клещ чесоточный, чесоточный зудень (лат. *Sarcoptes scabiei*). *Бетсә йоҡтороу.*

**2.** *күсм.* Түбән, меҫкен кеше. □ Несчастный, убогий человек. ■ *[Фәрит:] Ҡуркма! Һинең кеүек бетсәгә һуғып бысрана торған ҡул түгел.* Ғ. Әхмәтшин.

**3.** *диал.* Һытҡы. □ Прыщ. *Тәнгә бетсә сыҡҡан.*

**4.** *диал.* Ҡорсаңғы, ҡысынма. □ Чесотка. ■ *Фурункулёз, тире сабыртыу, бетсә сығыу матдәләр алмашыныуы боҙолоуынан килә.* «Башҡортостан», 2 август 2011.

**5.** *миф.* Ауырыу эйәһе. □ Дух болезни.

**БЕТСӘ ИМЛӘҮ** (Р.: заговаривание чесотки; И.: charmed scabies; Т.: uyuz büyüsü) *и. миф.*

Бетсәне (4) өшкөрөп дауалау. □ Заговаривание чесотки. ■ *Бетсә имләгәндә бер өн дә сығарырға ярамай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕТСӘЛӘҮ (бетсәлә-)** (Р.: заболеть чесоткой; И.: ill with scabies; Т.: uyuz ile hastalanmak) *ҡ. диал.*

**1.** Ҡысынмалау. □ Заболеть чесоткой.

**2.** Эҫенән тәнгә ваҡ ҡына ҡыҙыл бөрсөк сығыу. □ Появление потницы на теле. *Тәне бетсәләгән.*

**БЕТСӘ ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух чесотки; И.: spirit of scabies; Т.: uyuz hastalığının hocası) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, ҡысынма ауырыуы эйәһе. □ Дух чесотки. Его изгоняют способом окуривания или перенесения духа *на какой-н.* предмет. ■ *Бетсә булһа, тары ярмаһын сепрәккә төрөп ағын һыуға ағыҙалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЕТТЕКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **йыуа.** *Беттекәй эҙләп сығып китә торғайныҡ.*

**БЕТҺЕҮ (бетһе-)** (Р.: быстро встать на ноги; И.: quickly get on their feet; Т.: hızlı bir şekilde ayaklanmak) *ҡ. диал.*

Тиҙ генә аяҡҡа баҫыу. □ Быстро встать на ноги.

**БЕТӘҮ I** (Р.: овчарня; И.: fold; Т.: ağıl) *и. диал.*

**1.** Ваҡ мал ояһы. □ Овчарня.

**2.** Кетәк. □ Курятник.

**БЕТӘҮ II** *с. диал. ҡар.* **бөтәү I.**

**БЕТӘҮ III** *и. диал. ҡар.* **бетеү.**

**БЕТӘҮҘӘЙ** (Р.: в цельном виде; И.: in solid form; Т.: tüm halde) *р. диал.*

Бөтәү көйө. □ В цельном виде. ■ *Тирмәнде тешәмәгәндәр әллә ни, бойҙай бетәүҙәй төшөп тик тора.* Экспедиция материалдарынан.

**БЕТӘҮ ЭЙӘҺЕ** *и. диал. ҡар.* **аҙбар эйәһе.**

**БЕТӘҮ ЯРА** *и. диал. ҡар.* **шешек.** *Бетәү яра тәнде баҫып алыу.*

**БЕҮӘ** *и. диал. ҡар.* **быуа.**

**БЕЧЛӘК (бечләге)** *и. диал. ҡар.* **беснәк.**

**БЕШБЕЛДЕК** *с. диал. ҡар.* **бысый 2.**

**БЕШЕ I** (Р.: прочный; И.: dense; Т.: sağlam) *с.*

**1.** Тығыҙ, ныҡ. □ Прочный, плотный, крепкий. *Беше ағас. Беше тауар. Беше булыу. Беше итеү.* ■ *Ат яба торған септәне бешерәк итеп һуғырға тырышырға кәрәк.* Н. Мусин. *Ләкин беше имән кеүек Ғабдулла тиҙ генә әлһерәп төшә торғандарҙан түгел ине.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Эшкә ныҡ, бирешмәй торған; түҙемле. □ Крепкий, здоровый; выносливый. *Беше кеше.* ■ *Спорт менән шөғөлләнгәндәр беше була ул.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Әйткәнгә ыжламаҫ; ышаһыҙ, кеҙе. □ Крайне неуступчивый, упрямый, непокладистый. *Беше бала.*

**БЕШЕ II** (Р.: плотно связанная вещь; И.: dense thing; Т.: sıkı örülen bir şey) *и. диал.*

Тығыҙ бәйләнгән әйбер. □ Плотно связанная вещь.

**БЕШЕ БАШ** (Р.: умная голова; И.: nerd; Т.: zeki) *с. күсм.*

Аҡыллы, үҙ фекерле кешегә ҡарата әйтелә. □ Умная голова. *Беше баш малай.* ■ *Алмас беше баш булып үҫте.* Р. Шаммас.

**БЕШЕ-БЕШЕ** (Р.: слово-заклинание; И.: kind of benediction; Т.: güle güle giy) *и. миф.*

Ҡотлау, изге теләк теләү һүҙе. □ Слово-заклинание; благопожелание из ритуала поздравления человека с приобретением новой одежды. *Беше булһын.* ■ *Беше-беше, ҡотло булһын, беше-беше, йылы тәнеңдә туҙһын!* Экспедиция материалдарынан.

**БЕШЕГЕҮ I (бешек-)** (Р.: преть; И.: rot; Т.: terlemek) *ҡ.*

Эҫеләп тирләү. □ Преть, упариться. *Эҫенән бешегеү. Эҫенән баланың тәне бешегә.*

**БЕШЕГЕҮ II (бешек-)** (Р.: уплотняться; И.: become dense; Т.: yoğunlaşmak) *ҡ.*

**1.** Бешегә (1) әйләнеү. □ Уплотняться. *Йыуа-йыуа киндер бешегә.*

**2.** *күсм.* Көскә нығыу; сынығыу. □ Становиться крепким, выносливым. *Походтарҙа йөрөп бешегеү. Бешеккән тән юҡ-барға сырхап бармай.* ■ *Вулкандарҙы аттың, тауҙар булып ҡалҡтың – берсә яндың, берсә өшөнөң, әсылда, киттең бешегеп.* К. Кинйәбулатова.

**3.** *күсм.* Ыжламаҫ, кеҙе кешегә әйләнеү. □ Не реагировать *на что,* не воспринимать *что. Бала әргә бешегеп киткән.*

**БЕШЕКЛӘНЕҮ (бешеклән-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бешекләү.** *страд. от* **бешекләү.**

**БЕШЕКЛӘҮ I (бешеклә-)** (Р.: ошпаривать; И.: scald; Т.: haşlamak) *ҡ.*

**1.** Сей нәмәне әҙ генә ҡайнатып алыу. □ Ошпаривать, обварить. *Эсәк-ҡарынды бешекләү.*

**2.** Ҡайнар һыуҙа йомшартыу, парға бешереү. □ Запарить. *Миндек бешекләү. Мал аҙығын бешекләү.*

**3.** Ҡайнар һыу менән сайҡау, ҡайнар һыу менән эшкәртеү. □ Обдавать кипятком, ошпаривать. *Тауыҡты ҡайнар һыу менән бешекләү.* ■ *Марат кухняла кәстрүлен ҡайнар һыу менән бешекләп йыуып тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *тех.* Пар менән бешекләү. □ Запаривать. *Туҡыманы пар менән бешекләү.*

**БЕШЕКЛӘҮ II (бешеклә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бешегеү I.**

**БЕШЕКЛӘҮЕС** (Р.: запарник; И.: kind of greenhouse; Т.: yem karıştırıcı) *и. а. х.*

Мал аҙығын бешекләй, парлай торған ҡорамал. □ Запарник. *Аҙыҡ бешекләүес.*

**БЕШЕКСЕ** *и. иҫк. ҡар.* **ашнаҡсы.** ■ *Бешексе Сәлимә .. һауыт менән аш индереп ултыртты.* Һ. Дәүләтшина. *Ауылда уларҙы һунарсылар, бешекселәр, музыканттар ҡыуып етергә тейеш ине.* Б. Рафиҡов.

**БЕШЕКТЕРЕҮ (бешектер-)** (Р.: уплотнять; И.: make dense; Т.: yoğunlaştırmak) *ҡ.*

Беше (1), тығыҙ хәлгә килтереү; беше итеү. □ Уплотнять (*например,* ткань). *Бешектереп алыу.*

**БЕШЕЛЕК (бешелеге)** (Р.: плотность; И.: density; Т.: sıklık) *и.*

Тығыҙлыҡ. □ Плотность. *Туҡыманың бешелеге.*

**БЕШЕЛЕҮ (бешел-)** *ҡ. төш.ҡар.* **бешеү II.** *страд. от* **бешеү II.**

**БЕШЕЛӘНЕҮ (бешелән-)** (Р.: делаться прочным; И.: become dense; Т.: yoğunlaşmak) *ҡ.*

**1.** Беше, тығыҙ хәлгә килеү; бешегеү. □ Делаться прочным, крепким, плотным. ■ *Йүкә бүртеп, бешеләнеп киткән.* Б. Бикбай.

**2.** *ҡар.* **бешегеү II, 2.**

**БЕШЕНЕҮ (бешен-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бешегеү I.** *Аяҡ бешенә. Бармаҡ араһы бешенә.*

**БЕШЕРЕЛЕҮ (бешерел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бешереү I, II.** *страд. от* **бешереү I, II.** ■ *Тары онланды, май бешелде, бауырһаҡ бешерелде.* Ф. Рәхимғолова. *Әсәйем ейәнсәре алдына майҙа ҡыҙҙырылған йомортҡа, бөтәүләй бешерелгән бәрәңге ҡуя.* «Ағиҙел», № 3, 2010.

**БЕШЕРЕМ** (Р.: достаточный для одной варки; И.: sufficient for a cooking; Т.: bir yemek için yeterli) *и.*

Бешереүгә етерлек миҡдар. □ Достаточный для одной варки, на один раз. *Бер бешерем картуф. Ике бешерем ит.* ■ *Ниәт әйтеп ҡорбан салдырыусы кеше күрше-тирәһенә, туған-тыумасаһына берәр бешерем өлөш таратып сыҡты.* М. Ғафури.

♦ **Ауыҙы бер** (*йәки* **биш**) **бешерем** *ҡар.* **ауыҙ.**

**БЕШЕРЕНЕҮ (бешерен-)** (Р.: готовить; И.: cook; Т.: pişirmek) *ҡ.*

Аш-һыу менән мәшғүл булыу. □ Готовить, стряпать. ■ *Айбулат ҡайтҡанда еңгәһе .. нимәлер бешеренеп йөрөй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**БЕШЕРЕНЕҮ-ТӨШӨРӨНӨҮ (бешерен-төшөрөн-)** (Р.: готовить; И.: cook; Т.: yemek pişirmek) *ҡ.*

Аш-һыу әҙерләү. □ Готовить, стряпать (*разные блюда*). *Бешеренеү-төшөрөнөүгә оҫта кеше.* ■ *Минең әсәйем бешеренеү-төшөрөнөүгә бик оҫта кеше ине.* Ж. Кейекбаев.

**БЕШЕРЕҮ I (бешер-)** [боронғо төрки] (Р.: печь; И.: cook; Т.: pişirmek) *ҡ.*

**1.** Ҡайнатып йәки юғары эҫелектә тотоп, ашамлыҡ-эсемлек әҙерләү. □ Варить; готовить; стряпать; печь, выпекать. // Варка; готовка; стряпка; выпекание. *Бишбармаҡ бешереү. Ашарға бешереү. Аш бешереү. Икмәк бешереү.* ■ *Сәлмән ҡайтып ингәс, әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешереп ебәргән, ти.* Әкиәттән.

**2.** Ҡайнап сыҡҡанса утта тотоу; ҡайнатыу. □ Кипятить. // Кипячение. *Һөт бешереү.*

**3.** Ҡайнатып йәки ҡайнар һыуға һалып, тәмен, шифаһын сығарыу. □ Заварить. // Заваривание, заварка. *Андыҙ бешереү. Мәтрүшкә бешереү. Сәй бешереү.* ■ *Сәйҙе бешергәс тә эсеү яҡшы, иҫке сәйҙә витаминдарҙың һәм микроэлементтарҙың яртыһы юҡҡа сыға.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

**4.** Ҡайнатып, эҫелә тотоп, йомшартыу. □ Обваривать, ошпаривать. // Ошпаривание. *Туғын бешереү.* ■ *[Хөсәйен:] Бешермәһәң, тал һына бит ул. Ә бешерһәң, ҡамыр кеүек була.* Р. Ғабдрахманов.

**5.** Утҡа, ҡайнар нәмәгә зарарлау (*тәнде*), яндырыу. □ Обжигать, обварить. // Обжиг. *Эҫе сәйгә ауыҙҙы бешереү.* ■ *Көмөш кенә ҡашыҡ, һабы нәҙек, тотмаһаңа — ҡулың бешерер.* Халыҡ йырынан. *Усаҡ бешерә, эҫеһе йөрәккә үтә, уның үҙен дә ялҡын ялманы, ул ут эсендә ҡалды!* Т. Ғарипова.

**6.** Бик ныҡ эҫетеү; ҡыҙҙырыу (*көнгә ҡарата*). □ Палить, жарить (*о солнце*). *Тышта ныҡ бешерә.* ■ *Икенсе көндө битте ҡояш бешергәнгә уянып китһәм, аптырап киттем. Төш етеп килә.* Ф. Әсәнов.

**7.** Ҡыҙҙырыу. □ Калить. *Тимер бешереү.*

♦ **Ауыҙ эсендә бутҡа бешереү** *ҡар.* **ауыҙ. Һүҙ бутҡаһы бешереү.** *ҡар.* **һүҙ. Борсаҡ бешереү** *ҡар.* **борсаҡ I. Эш бешереү** *ҡар.* **эш.**

**БЕШЕРЕҮ II (бешер-)** (Р.: взбивать; И.: whip up; Т.: yaymak) *ҡ.*

**1.** Көбөгә һалып, аҫҡа-өҫкә табан болғатыу (*ҡымыҙ, май яһау өсөн*). □ Взбивать, сбивать (*кумыс, масло в пахталке*).

**2.** *күсм.* Пыр туҙҙырып әрләү; ҡыҙҙырыу. □ Ругать, распекать, прорабатывать *кого. Бешереп алыу.* ■ *Председателгә үҙен саҡыртып, кәрәген биргәнсе бешерергә лә, шуның менән эште тамамларға кәрәк.* З. Хисмәтуллин.

**3.** *күсм.* Ҡыҙып туҡмау, дөмбәҫләү. □ Бить по *кому-чему. Дошманды бешереү.* ■ *Ҡайҙалыр яҡында ғына ер һелкетеп снаряд ярылды. Фашистарҙы бешерәләр генә.* Д. Буләков.

**БЕШЕРЕҮСЕ** (Р.: повар; И.: cook; Т.: aşçı) *и.*

Ниҙер бешереү эшендәге кеше. □ Повар, стряпуха, кулинар, пекарь, кашевар. *Аш бешереүсе. Икмәк бешереүсе.* ■ *Ҡыуыш янында аш бешереүселәрҙе генә ҡалдырып, кешеләр ялан ға ағылды.* Н. Мусин.

**БЕШЕРЕШЕҮ (бешереш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бешереү I, II.** *взаимн. от* **бешереү I, II.**

**БЕШЕРЕШТЕРЕҮ (бешерештер-)** (Р.: изредка готовить; И.: cook from time to time; Т.: ara sıra yemek pişirmek) *ҡ.*

Һирәк-һаяҡ ашарға бешереү. □ Изредка готовить *(еду)*.

**БЕШЕРТЕҮ (бешерт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бешереү I, II.** *понуд. от* **бешереү I, II.**

**БЕШЕРТТЕРЕҮ (бешерттер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бешереү I, II.** *понуд. от* **бешереү I, II.**

**БЕШЕҮ I (беш-)** [боронғо төрки *биш* ‘өлгөрөү’] (Р.: вариться; И.: stew; Т.: pişmek) *ҡ.*

**1.** Ҡайнап йәки юғары эҫелектә тороп, ашау-эсеү өсөн әҙер булыу. □ Вариться; выпекаться. // Варка, выпекание. *Аш бешкән. Икмәк бешкән.* ■ *Күсәр хан .. ут яҡҡан ергә барып ҡараһа, ҡаҙан тулы ҡош ите бешеп ултыра, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Ҡайнап сығыу. □ Вскипеть. // Кипение. *Бешкән һөт.*

**3.** Ҡайнап йәки ҡайнар һыуҙа ебеп, тәме, шифаһы сығыу. □ Завариваться. // Заваривание, заварка. *Сәй бешкән.*

**4.** Һыуҙа йәки эҫелә йомшарыу. □ Размокнуть в воде или от жары. *Йүкә ағасын һалабашка бешергә һалғандар.* ■ *Йүкә ағасы яҙ көнө ашкаяҡ була, шул саҡта ҡабығын һыҙырып, аҡмай торған һыуға (күлгә) йомшарырға, бешергә һалалар. 4—5 аҙнанан һуң, йүкә ҡабыҡтан ҡубыр хәлгә еткәс, һыуҙан сығарып, йүкәһен урҙаларға эләләр.* М. Бураҡаева.

**5.** Утҡа, ҡайнар нәмәгә тейеп, зарарланыу *(тәнгә ҡарата)*. □ Обвариваться, ошпариваться; обжигаться. *Ҡул беште.* ■ *[Ҡыҙҙар] бирешмәҫкә тырыша. Әъәм, ҡалай эҫе, — ти ҙә, бешкән аяҡтарын һыуыҡ балсыҡҡа тыға.* Һ. Дәүләтшина. ● *Ауыҙы бешкән өрөп эсер.* Әйтем.

**6.** *күсм.* Эҫеләп, тиргә батыу, ҡыҙарыу. □ Сильно потеть; преть, краснеть. *Тирләп бешеү.* ■ *Фәриҙә янды, беште. Манма һыуға төшөп тирләне. Мәхмүтенә барып етерлек хәле ҡалманы.* Г. Ғиззәтуллина.

**7.** Үҫеп, ашарлыҡ, файҙаланырлыҡ хәлгә етешеү; өлгөрөү. □ Зреть, созревать, поспевать, наливаться. // Созревание, поспевание, наливание. *Баҫыуҙа иң элек арыш бешә. Көнбағыш бешкән. Емеш-еләк бешкән. Бешкән алма.* ■ *Уралым, һин ирәм бағы, йәнә ерҙең кендеге, .. һиндә ағас, һиндә ниғмәт, һәр емеш ҡыҙарып-бешеп күбәймеш.* Ш.Әминев-Тамъяни. *Мәһинур тайсаһында баш ҡуҫып ултырған игендәргә, аунап-тәгәрәп бешеп ятҡан ҡарбуз-ҡауындарға .. ҡарай ҙа, ауыр көүҙәһен һәмгелдәтә-һәмгелдәтә, бөгөләһығыла илай.* Т. Ғарипова.

**8.** *күсм.* Буйға үҫеп етеү; өлгөрөү. □ Созревать. // Созревание. ■ *[Егет — батшаға:] Кесе ҡыҙыңдың алма кеүек бешкән сағы, шуға күрә үҙе кеүек бешкән ҡыҙыл алма бирҙем.* Әкиәттән.

♦ **Ауыҙ бешеү** уңайһыҙ хәлдә ҡалыу. □ Попасть впросак. **Беште ни ҙә төштө ни** барыбер булыу. □ Хоть трава не расти; хоть бы что *кому.* **Бешкән дә төшкән** бер нәмәне анһат ҡына күреп, һораған йәки һорашҡан кешегә әйтелә. □ Легко сказать; просто так. **Бит бешеү** *ҡар.* **бит I. Борсаҡ бешеү** *ҡар.* **борсаҡ I. Эш бешеү** *ҡар.* **эш.**

**БЕШЕҮ II (беш-)** (Р.: взбивать; И.: churn; Т.: çırpıp köpürtmek) *ҡ.*

Көбөгә һалып, аҫҡа-өҫкә табан болғатыу *(ҡымыҙ, май яһау өсөн)*. □ Взбивать, сбивать *(кумыс, масло в пахталке)*. *Май бешеү. Ҡымыҙ бешеү.* ■ *[Әсә:] Кисә һауҙым мин бейә һәм дә ҙур дөйә; шул һөттәрҙе бешәйек, ҡымыҙ итеп эсәйек.* Й. Солтанов. *Бешәләр, бешәләр ҙә аҙаҡ ҡойоп эсәләр (ҡымыҙ).* Йомаҡ.

**БЕШЕҮ III (беш-)** *ҡ.*

**1.** *күсм.* Ныҡ әрләү; бешереү. □ Распекать, прорабатывать, ругать. ■ *[Бабай] Бигерәк тә комбайнёрҙарҙы бешә: урылған ерҙә бер генә башаҡ күреп ҡалһа ла, тегеләрҙең йәнен ала.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Туҡмау. □ Бить, избивать, набить *кого.* ■ *[Ғәйзулла:] Ниңә илайһың? Әллә малайҙар бештеме?* Я. Хамматов.

**БЕШЕҮ IV (беш-)** *ҡ.*

**1.** *диал. ҡар.* **тунау.** □ Освежевать шкуру кулаком *(обдирать, сдирать, драть шкуру)*.

**2.** Сәнсеү. □ Истыкать, воткнуть.

**БЕШЕҮ V (беш-)** *ҡ. диал. кар.* **ҡыҙарыу.** *Болот бешеңкерәп йәшкәҙәй.*

**БЕШЕҮҘЕ** *с. диал. кар.* **бешкән.** *Бешеүҙе икмәк алығыҙ.*

**БЕШКӘК I (бешкәге)** (Р.: мутовка; И.: whip; Т.: çırpacak) *и. этн.*

**1.** Көбөлә ҡымыҙ, май бешә торған оҙон һаплы, йомро башлы ағас ҡорал. □ Мутовка, пахталка. *Бешкәк менән бешеү.* ■ *Улар [Юлдаш менән Ҡыҙырас], оҙон бешкәк ҡуйып, өҫтө ябыулы итеп эшләнгән ҙур-ҙур ағас көбөләр янынан үттеләр.* З. Биишева. ● *Ҡымыҙға бешкәк кәрәк, ишәккә күҫәк кәрәк.* Мәҡәл.

**2.** *миф.* Сакраль предмет. □ Мутовка *(старую мутовку нельзя бросать под ноги, её надо повесить куда-н. наверх). Иҫкергән бешкәкте аяҡ аҫтына ташламаҫҡа, уны юғарыға элеп ҡуйырға кәрәк.*

**БЕШКӘК II (бешкәге)** *и. диал. кар.* **гөмбөр II.** *Бешкәгемә һап ҡуйып алырға кәрәк ине.*

**БЕШКӘК III (бешкәге)** *и. вет. диал. кар.* **бешмә.**

**БЕШКӘКЛӘҮ (бешкәклә-)** (Р.: взбивать; И.: churn; Т.: çırpıp köpürtmek) *ҡ.*

Туҡығыс таяҡ менән көбөлә ҡымыҙ, май бешеү. □ Взбивать, взбить. *Ҡымыҙ бешкәкләү.*

**БЕШКӘКТӘР** (Р.: название родового подразделения; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Бэшкэктэр *(родовое подразделение башкир племени тамьян).*

**БЕШКӘН I** (Р.: кипячёное молоко; И.: boiled milk; Т.: kaynamış süt) *и.*

Ҡайнатып алынған һөт. □ Кипячёное молоко.

**БЕШКӘН II** (Р.: сваренный; И.: welded; Т.: pişmiş) *с. диал.*

**1.** Бешеп, ҡайнап әҙер булған. □ Сваренный, испёкшийся. *Бешкән икмәк.*

**2.** Бешеккән. □ Плотный, крепкий *(о дереве).*

**3.** Һелтелә ҡайнатылған. □ Отбеленное в щёлочи. *Бешкән еп.*

**БЕШКӘН ҠАЙМАҠ (ҡаймағы)** (Р.: взбитая сметана; И.: whipped cream; Т.: çırpılmış kaymak) *и. диал.*

Туғылған ҡаймаҡ. □ Взбитая сметана.

**БЕШМӘ** (Р.: ящур; И.: foot and mouth desease; Т.: aft humması) *и. вет.*

Айыры тояҡлы малдың ауыҙы, тояҡ аралары иҙелеп ауырый торған йоғошло ауырыу. □ Ящур. *Бешмә ауырыуы.* ■ *Был яҡтарҙа ла ҡасандыр малдарҙың бешмә менән ауырыу осраҡтары теркәлә.* «Башҡортостан», 12 апрель 2011.

**БЕШМӘГӘН** (Р.: сырой; И.: crude; Т.: ham) *с.*

**1.** Бешеп өлгөрмәгән, сей. □ Сырой. *Бешмәгән ит. Бешмәгән икмәк.*

**2.** Өлгөрмәгән, бешеп етмәгән. □ Неспелый, незрелый. *Бешмәгән алма. Бешмәгән еләк.* ■ *Үтә ныҡ бешмәгән помидорҙы, ҡыярҙы, редисканы һ. б. ентекләп башта һалҡын, унан ҡайнатып һыуытылған һыуҙа йыуырға һәм киптерергә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 11, 2010.

**3.** *күсм.* Ҡулынан эш килмәгән; булдыҡһыҙ, ебегән. □ Растяпа. ■ *Әй бешмәгән, түбән оста йәшәүсе Ғәффә ни ере менән һиңә ярамайҙыр, әллә яусылайыҡмы шуны?* Д. Бүләков.

**БЕШМӘК** (Р.: узкоглазый; И.: narrow-eyed; Т.: dar gözlü) *с. диал.*

Ҡыҫыҡ күҙ. □ Узкоглазый. *Бешмәк күҙ.*

**БЕШӘ** [фарс. بیشه] (Р.: молодые заросли хвойных деревьев; И.: young pine growth; Т.: çamlık) *и. бот.*

Йәш ҡарағай үҫентеләре. □ Молодые заросли сосны, ели или лиственницы. ■ *Яҡында ғына сатаһы бер-ике ҡарағай үҫә. Дәү имән йығылғанда бешә генә булғандарҙыр, күрәһең.* А. Ғарифуллина.

**БЕШӘКЛӘҮ (бешәклә-)** *ҡ. диал. кар.* **бешекләү.**

**БЕШӘЛЕК (бешәлеге)** (Р.: молодой сосняк; И.: pinewood; Т.: çamlık) *и.*

**1.** Бешә үҫкән урын, ваҡ ҡарағайлыҡ. □ Ельник. ■ *Тау баштарындағы өйөм-өйөм булып тегендә-бында үҫкән ҡарағай, шыршы ағастары, бешәлектәр генә алыҫтан йәшәреп күренә.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Бик ҡуйы урман. □ Дремучий лес.

**БЕШӘЛКӘҺЕҘ** (Р.: растяпа; И.: good for nothing; Т.: beceriksiz) *с.*

**1.** Ҡулынан йүнле эш килмәгән; бешмәгән, ебегән. □ Растяпа, слабый, неспособный. *Бешәлкәһеҙ кеше. Бешәлкәһеҙ булыу.* ■ *[Колмырҙа старшина:] Санағыҙҙың тәртә төптәрен абайлап, нығытып егегеҙ, юлда туғарылып ҡамасау яһап тормаһын. Һеҙ бешәлкәһеҙ була торғанһығыҙ.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Тотоуға ипһеҙ, ҡулайһыҙ; көсһөҙ *(ҡулға ҡарата).* □ Неудобный, неприспособленный; бессильный *(о руке).* ■ *Күпме ятҡандыр Ирназар. Иҫенә килеп, ыңғырашып ҡуйҙы. Көллө тәне һеңгәҙәп ауырта, күҙенән йәш ҡойола. Ҡулы бешәлкәһеҙ булып ҡалырмы икән.* Ә. Хәкимов.

**БЕШӘЛӘНЕҮ (бешәлән-)** (Р.: преть; И.: become damp; Т.: terlemek) *ҡ. һөйл.*

Эҫегә яныу, эҫеләү. □ Преть, распариваться *(от жары).* ■ *Сәлиха аласыҡта төтөнгә бешәләнеп, аш-һыу әҙерләп йөрөй ине.* Ж. Кейекбаев.

**БЕШӘЛӘҮ (бешәлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бешекләү I.** ■ *Зифа аласыҡтан миндек барып килтерҙе. Таҫка эҫе һыу һалып бешәләне лә, таш өҫтөнә шаҡлатып һыу һибеп. шунда миндеген бешерҙе.* Н. Мусин.

**БЕШӘРЕҮ (бешәр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **йәшәреү I.** *Йәшендән һуң ағастар бешәреп китә.*

**БЖАН** (Р.: шмель; И.: bumblebee; Т.: yaban arısı) *и. диал.*

Иңкеш. □ Шмель.

**БИАҒАЙ** (Р.: старший брат мужа; И.: brother; Т.: kocanln ağabeyi) *и. диал.*

Ҡайнаға. □ Старший брат мужа.

**БИАҠ (биағы)** *и. диал. ҡар.* **буяу.**

**БИАНА** (Р.: свекровь; И.: mother in law; Т.: kaynana) *и. диал.*

Ҡәйнә *(иренең әсәһе).* □ Свекровь.

**БИАТА** *и. диал. ҡар.* **ҡайны.**

**БИАТЛОН** [рус. < лат. *bis* ‘икеләтә’ + *atlon* ‘көрәш’] (Р.: биатлон; И.: biathlon; Т.: biatlon) *и. спорт.*

Саңғыла ярышыуҙан һәм винтовка менән сәпкә атыуҙан торған ҡышҡы ярыш төрө. □ Биатлон. ■ *Районда биатлон, атыу, авиамодель спорты киң үҫеш алған.* «Башҡортостан», 6 июль 2011.

**БИАТЛОНСЫ** (Р.: биатлонист; И.: biathlete; Т.: biatloncu) *и. спорт.*

Биатлон менән шөғөлләнеүсе. □ Биатлонист, биатлонистка. *Биатлонсылар ярышы.* ■ *Биатлонсыларҙың донъя кубогы ярыштарында Максим Чудов уңышлы сығыш яһай.* «Йәшлек», 15 февраль 2010.

**БИБАШТАҠ** (Р.: чрезмерно непослушный; И.: headstrong; Т.: söz dinlemez) *с.*

Үтә үҙ һүҙле, баш бирмәҫ. □ Своевольный. ■ *Әсәһе уны [Маратты] тағы орошто: «Ынтылма, бибаштаҡ. Атайың алып бирер!»* Һ. Дәүләтшина.

**БИБАШТАҠЛАНЫУ (бибаштаҡлан-)** (Р.: своевольничать; И.: disobey; Т.: uymamak) *ҡ.*

Үҙһүҙләнеү, баш бирмәү. □ Своевольничать, не подчиняться.

**БИБАШТАҠЛЫҠ (бибаштаҡлығы)** (Р.: своеволие; И.: stubbornness; Т.: inatçılık) *и.*

Үҙһүҙлелек. □ Своеволие, упрямство. *Бибаштаҡлыҡ күрһәтеү.*

**БИБЕЙ** *и. диал. ҡар.* **бәпкә I.**

**БИБЕК (бибеге)** (Р.: чибис; И.: lapwing; Т.: bayağı kız kuşu) *и. зоол. диал.*

Тәгәрләк. □ Чибис, пигалица (лат. *Vanellus vanellus*). ■ *Аҡ ыласын менән күк ыласын ҡыуалатып тота бибекте.* Халыҡ йырынан.

**БИБЕШ** *и. диал. ҡар.* **себеш I, 1.**

**БИБИ** [фарс. بی بی ‘ханым; апай’] (Р.: хозяйка; И.: housewife; Т.: ev hanımı) *и.*

Бикә, хужа ҡатын. □ Хозяйка. *Биби ҡайтты.*

**БИБИСАРА ӘБЕЙ** (Р.: дух-хозяйка; И.: housewife; Т.: arıların ve kuş kanatlarının hocası) *и. диал. миф.*

Көнбайыш башҡорттарҙа: бал ҡорто һәм ҡош ҡанаттары эйәһе. □ Бибисара-аби (*хозяйка пчёл и птичьих крыльев у западных башкир*). ■ *Бал ҡорто, ҡош-ҡорт ҡанаттарының хужаһы Бибисара әбейгә тип йома көнө акса, сәй бирәләр хәйергә.* Экспедиция материалдарынан.

**БИБЛИОГРАФ** [рус.] (Р.: библиограф; И.: bibliographer; Т.: bibliyograf) *и.*

Библиография буйынса белгес. □ Библиограф. *Библиограф булып эшләү.*

**БИБЛИОГРАФИК** (Р.: библиографический; И.: bibliographic; Т.: kaynakçasal) *с.*

Библиографияға мөнәсәбәтле. □ Библиографический. *Библиографик белешмә. Журналдың библиографик бүлеге. Библиографик мәғлүмәттәр базаһы. Библиографик һүҙлек.* ■ *Беҙҙең маҡсат алыҫта йәшәгән милләттәштәребеҙгә китаптарҙы күҙмә-күҙ күрһәтеү, уның йөкмәткеһен асыу һәм библиографик күрһәткестәрен таратыу ине.* «Башҡортостан», 1 февраль 2010.

**БИБЛИОГРАФИЯ** [рус. < гр. *biblia*< *biblion* 'китап' + *grafia* 'яҙыу'] (Р.: библиография; И.: bibliography; Т.: kaynakça) *и.*

**1.** Китап һәм башҡа баҫма нәмәләр тураһындағы систематик белешмә. □ Библиография. *Башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса библиография. Библиография ғилеме.* ■ *Хәрби врач, подполковник ғаиләһендә Һарытауҙа тыуған, Ҡазан мәҙәниәт институтының библиография факультетын ҡыҙыл дипломға тамамлаған Әлфиә юллама буйынса Өфөгә, .. китапханаға эшкә килә.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

**2.** Библиографик мәғлүмәтте әҙерләү, ҡулланыу һәм таратыуҙы тәьмин итеүсе структура. □ Библиография.

**3.** Айырым бер мәсьәләгә ҡараған хеҙмәттәр исемлеге. □ Библиография.

**4.** Рәсемле журнал. □ Библиография.

**БИБЛИОФИЛ** [рус. < *biblion* 'китап' + *philio* 'яратам'] (Р.: любитель и собиратель книг; И.: bibliophile; Т.: kitapsever) *и.*

Китап һөйөүсе һәм йыйыусы. □ Любитель и собиратель книг.

**БИБЛИЯ** [рус. < гр. *biblia* < *biblion* 'китап'] (Р.: Библия; И.: Bible; Т.: İncil) *и.*

Йәһүд һәм христиандарҙың дини китабы, Тәүрат. □ Библия. *Библия уҡыу.* ■ *Библияға ярашлы, теләһә ҡайҙа, кәрәккән-кәрәкмәгәндә изге исемдәрҙе телгә алыу ярамаған.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**БИВАК (бивагы)** [рус. < нем. < фр. *bivouac*] (Р.: привал; И.: bivouac; Т.: mola yeri) *и.*

Ғәскәрҙең походта, экспедицияла йәки сәйәхәттә һ. б. ҡатнашыусыларҙың халыҡ йәшәгән ерҙән тыш ҡуныу йәки ял өсөн туҡтаған урыны. □ Привал, расположение войск вне населённого пункта.

**БИГЕЛЕЙ** [рус. *беглый*] *и. диал. ҡар.* **ҡасҡын.**

**БИГЕРӘК, бигерәк тә** [боронғо төрки *бәк* 'нык, көслө'] (Р.: слишком; И.: much; Т.: fazla) *р.*

**1.** Саманан тыш, кәрәктән артыҡ, артыҡ дәрәжәлә. □ Слишком, чересчур. *Бигерәк матур. Бигерәк күп.* ■ *Балыҡ мул икән, беҙ янына килеп баҫҡас ҡына 5—6 ажау балығын ҡаптырҙы ағай, улары бигерәк матур: ялтыр, ҡып-ҡыҙғылт ҡанаттары менән ысынлап та алтын балыҡты хәтерләтәләр.* «Йүрүҙән», 8 февраль 2011.

**2.** Беренсе нәүбәттә, иң элек. □ В первую очередь. ■ *Уның һуңғы һүҙҙәре ҡолаҡ төбөндә әле булһа яңғырай, бигерәк тә айырылыу һағышы менән һөрөмләнгән йәш тулы сөм-ҡара күҙҙәре һаман миңә төбәлеп торған кеүек...* З. Биишева. *Бигерәк тә өс йәшлек Айгизәне үҙ итте.* Г. Ситдиҡова.

**3.** Бер хәл, күренеште йәки *нәмәне* икенсеһенә сағыштырып, көсәйтеп әйткәндә ҡулланыла. □ Особенно, в особенности (*в сравнении*), преимущественно. *Ул бигерәк тә бәләкәй ҡыҙын ярата.*

**БИГЕТЕҮ (бигет-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бикләү.**

**БИГУДИ** [рус. < фр. *bigoudi* ] (Р.: бигуди; И.: curler; Т.: bigudi) *и.*

Бөҙрәләтеү өсөн сәсте урай торған ҡыҫҡа көпшә рәүешендәге нәмә. □ Бигуди. *Сәскә бигуди ҡуйыу.*

**БИГУДИЛАУ (бигудила-)** (Р.: ставить бигуди; И.: apply curlers; Т.: bigudi koymak) *ҡ.*

Сәсте бигудиға урау. □ Ставить бигуди.

**БИГҮК** [боронғо төрки *б(ә)к* ‘көслө’] (Р.: не очень; И.: not so much; Т.: o kadar) *р.*

Ул ҡәҙәр, ул тиклем. □ Не очень, не особенно. *Көн бигүк матур булманы.* ■ *Бәрәңге утауҙы, күмеүҙе мин бигүк ҡыйын эшкә һанаманым.* И. Нурғәлиев.

**БИГӘЛИННӘР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуы араһы. □ Бигәлиннәр *(родовое подразделение башкир племени усерган).*

**БИҒЕЛЕЙ** (Р.: ненормальный; И.: abnormal; Т.: anormal) *с. диал.*

Килделе-киттеле. □ Ненормальный. *Биғелей бай менән ғүмер үтте ки.*

**БИҒЫЛ** *и. диал. ҡар.* **ҡаҫҡын.**

**БИҒЫЛЫЙ** [рус.] (Р.: беглый; И.: fugitive; Т.: kaçak) *с. диал.*

Бер урында йәшәп сыҙамаған, төрлө ерҙә йөрөгән кеше; ҡаҫҡын. □ Беглый. *Биғылый кеше.*

**БИҒӘЙБӘ** [фарс.-ғәр. بي عيبة ‘камил, кәмселекһеҙ’] (Р.: невинный; И.: guiltiless; Т.: suçsuz) *с.*

**1.** Ғәйеп итмәҫлек, ғәйепһеҙ. □ Невинный, без вины. *Биғәйбә ҡыланыш.*

**2.** *иҫк.* Ғәйеп итмәгеҙ, ғәйепләштән булмаһын, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Простите, извините *(в обращении).* ■ *[Наилә:] Ярай, биғәйбә, Абдулхаҡ Хөснөлхаҡович, әллә ниҙәр һөйләп ташланым. Һеҙҙе лә, үҙемде лә уңайһыҙ хәлгә ҡуймаҫҡа тырышырмын.* М. Ишбулатов.

**БИҒӘЙНИ** [ғәр. بعين ‘реаллек, ысынбарлыҡ’] (Р.: точно так; И.: exactly; Т.: gerçekten) *р. иҫк. кит.*

Нәҡ шулай. □ Точно так, именно так, действительно так. ■ *Йәшәнем фәҡир хәлдә ҡырҡтан ары, биғәйни, үҙең күргәндәге рәүештә ғүмер иттем бары.* Ш.Әминев-Тамъяни.

**БИҒӘЙӘТ** [фарс.-ғәр. بي غاية ‘сикһеҙлек’] (Р.: весьма; И.: very; Т.: gayet) *киҫ. иҫк. кит.*

Сиктән тыш, сикһеҙ, бик. □ Весьма, очень. *Биғәйәт ҡыҙыҡ китап.* ■ *Мең михнәттәр күрһәткән һуғыш йылдарын үткән тәүге уҡытыусыбыҙ Мостафа Зәйнәғәбдиновтың «Үҫерһегеҙ, биғәйәт ҙур кешеләр булырһығыҙ», — тип юраған әле лә иҫтә.* Т. Ғәйнуллина.

**БИҒӘЛӘШ I** [фарс. بي غل وغش ‘эскерһеҙ’] (Р.: чудак; И.: crank; Т.: tuhaf adam) *и.*

Иҫәр, ахмаҡ, һармаҡ *(еңелсә әрләп әйтелә).* □ Чудак. ■ *[Карт:] Нимә уйлап таптың, карсыҡ? Изге ғәмәл, Аллаһ ризалығы тураһында бара һүҙ. Хыялландыңмы әллә, биғәләш?* Ф. Бүләков.

**БИҒӘЛӘШ II** (Р.: глупый; И.: silly; Т.: aptal) *с.*

Аҡылға шыйыҡ; йүләр. □ Глупый, бестолковый. *Биғәләш кеше.* ■ *[Морат:] «Кулдарығыҙҙы күтәрегеҙ, биғәләштәр», — тип бойорҙо.* Ш. Хажиәхмәтов.

**БИҒӘЛӘШЛЕК (биғәләшлеге)** (Р.: глупость; И.: folly; Т.: aptallık) *и. һөйл.*

Йүләрлек. □ Глупость.

**БИҒӘЛӘШЛӘНЕҮ (биғәләшлән-)** (Р.: чудачить; И.: be eccentric; Т.: aptal olmak) *ҡ.*

Биғәләшкә әйләнеү, биғәләш булыу; йүләрләнеү. □ Чудачить. *Биғәләшләнеп теләһә нимә һөйләп йөрөмә.*

**БИД** [рус. < ингл. *bid*] (Р.: бид; И.: bid; Т.: teklif) *и. икт.*

Билдәле хаҡҡа тауар һатып алыу йөкләмәһе. □ Бид. *Бид төҙөү.*

**БИДҒӘТ I** [ғәр. بدعة ‘мөртәтлек’] (Р.: противник религии; И.: unbeliever; Т.: kâfir) *и. иҫк.*

Шәриғәт закондарын боҙоусы, динде һанламаусы. □ Противник религии *(что-то или кто-то). Бидғәт эш.* ■ *Кафыр һин, дәһри*

*һин, бидғәт сығарҙың, төбөнә кит дозахтың, бар, ғазап тарт!* Ш. Бабич.

**БИДҒӘТ II** (Р.: необычное; И.: odd; Т.: olumsuz) *с.*

Ғәҙәти булмаған, ғәйепләнә торған (эш). □ Необычное, непривычное, неодобрительное (*дело*). ■ *Шул сакта баксаға бер һыйыр кергән, баксала яуыз бидғәт уйын күргән: бер күбәләк ҡыҙыл гөлдә ултырғанда янына умарта ҡорто килеп ҡунған.* Ш. Бабич.

**БИДЕ** [рус. < фр. *bidet*] (Р.: биде; И.: bidet; Т.: bide) *и.*

Бәҙрәфтә билдән түбән тән ағзаларын йыуа торған кранлы унитаз. □ Биде. *Биде ҡуйыу.*

**БИДЕРӘ** *и. диал. ҡар.* **биҙрә.**

**БИДОН** [рус. < фр. *bidon*] (Р.: бидон; И.: can; Т.: bidon) *и.*

Шыйыҡ нәмә һаҡлай торған цилиндр формаһындағы ҡапҡаслы ҡалай йәки пластмасса һауыт. □ Бидон. *Кәрәсинле бидон. Һөт бидоны.* ■ *Ҡоҙоҡ яғынан бәләкәс арба менән бидонға тултырылған һыу һөйрәтеп, ҡаҡса кәүҙәле, башына кепка кейгән, күҙлекле ир килә.* «Башҡортостан», 21 февраль 2010.

**БИҘ** [дөйөм төрки *берч* <*бәр*<*бәз* ‘оро, шеш’] (Р.: железа; И.: gland; Т.: bez) *и. анат.*

**1.** Тереклектәрҙең эске эшмәкәрлегә өсөн кәрәкле матдәләр эшләп сығара торған махсус ағза. □ Железа. *Ашҡаҙан аҫты биҙе. Йәш биҙе. Ҡоймос биҙе. Ағыу биҙе.* ■ *Сара уңайынан республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы 1—29 октябрҙә һөт биҙе шеше сирен иҫкәртеү буйынса акция үткәреүҙе планлаштыра.* «Башҡортостан», 20 сентябрь 2011.

**2.** Ауыртҡан ергә ҡалҡып сыҡҡан төйөр. □ Лимфатический узел. *Биҙ ҡалҡыу.*

**3.** *диал. ҡар.* **оро I, 1.**

**4.** *диал. ҡар.* **күмәгәй.**

**БИҘА I** [рус. *беда*] (Р.: беда; И.: misfortune; Т.: bela) *и. һөйл.*

**1.** Башҡа төшкән ауыр хәл. □ Беда. *Биҙаға ҡалыу.* ■ *Әхмәт ғүмере Сәлмән байҙа үткән, айнымаған башы биҙанан.* Ғ. Сәләм.

**2.** Мәшәҡәтле, насар нәмә. □ Хлопотливый, обременительный. *Бесән эше бер биҙа инде ул.* ■ *Ҡайтҡас та, атайым әсәйемә былай тигән: «Фатима, мин хәҙер элекке кеүек бәһлеүәндәй ир түгелмен, әгәр минән баш тартһаң, ғәйепләмәм, аңлармын, һиңә биҙа булғым килмәй».* «Башҡортостан», 27 апрель 2011.

♦ **Биҙа түгел** бер ни түгел, анһат. □ Не беда (*очень легко*). *Был эш беҙгә биҙа түгел.* **Биҙа һалыу** юҡ-барҙы бәлә итеп ғауғалау; бәлә һалыу. □ Взывать о помощи, притворяясь попавшим в беду.

**БИҘА II** (Р.: очень; И.: very; Т.: gayet) *киҫ.*

**1.** Ҡайһы бер сифат һәм рәүеш менән килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә. □ Очень. *Биҙа күп. Биҙа һәйбәт.* ■ *Яурыны аша фотоаппарат таҡҡан һәм ҡулына магнитофон тотҡан был оло ғына кеше биҙа илгәҙәк булып сыҡты.* В. Нафиҡов.

**2.** *ирон.* Кәмһетеү, мыҫҡыллау рәүешендә әйтелә. □ Тоже мне! *Харап инде! Биҙа икән!*

**БИҘА III** *р. диал. ҡар.* **һәләк.**

**БИҘА ҠОРОУ (биҙа ҡор-)** (Р.: скандалить; И.: brawl; Т.: kavga etmek) *ҡ. диал.*

Бәләләү. □ Скандалить. *Ҡайҙа ла бәлә һалып тик йөрөй.*

**БИҘАЛАНЫУ (биҙалан-)** (Р.: капризничать; И.: be capricious; Т.: kapris yapmak) *ҡ. һөйл.*

Ғауға һалып мыжыу, бәлә һалыу. □ Капризничать. *Бала биҙалана.* ■ *Ауырыйым, тип биҙаланып йөрөнөң ни, йөрөмәнең ни, диспансер тормошона ла, дөрөҫөрәге, йылдар дауамында ҡануналашҡан тәртиптәренә лә күнәһең икән.* С. Шәрипов.

**БИҘАЛАШЫУ (биҙалаш-)** *ҡ. ҡар.* **бәлә һалыу.**

**БИҘАСЫЛ** (Р.: ноющий по пустякам; И.: capricious; Т.: mızmız) *с. һөйл.*

Юҡҡа-барға бәлә һалыусан; бәләсел. □ Ноющий по пустякам, капризный. *Биҙасыл кеше.*

**БИҘ АУЫРЫУЫ** *и. диал. ҡар.* **силсә.**

**БИҘБОЛОТ** (Р.: туча; И.: cloud; Т.: kara bulut) *и. диал.*

Йомроланып торған ҡуйы ҡара болот. □ Густая тёмная туча.

**БИҘГЕЛДӘҮ (биҙгелдә-)** (Р.: плакать; И.: weep; Т.: ağlamak) *ҡ. диал.*

**1.** Һамаҡлап илау. □ Плакать, приговаривая жалобным голосом. ■ *Тик һин генә, һин төшөнә алдың минең биҙгелдәүем серенә.* Р. Йәнбәк.

**2.** Ҡайғылы тауыш менән йәлләткес итеп йырлау. □ Петь песни уныло, жалобным голосом. *Биҙгелдәп йырлау.*

**БИҘГӘК (биҙгәге)** [боронғо төрки *без 'тетрәү, ҡалтырау'*] (Р.: лихорадка; И.: fever; Т.: nöbet) *и.*

**1.** *мед.* Бер ҡалтыратып өшөтә, бер яндыра, ҡыҙҙыра торған йоғошло ауырыу. □ Лихорадка, малярия. *Биҙгәк тотоу.* ■ *Сайранов янына биҙгәк тотҡан кешеләй барып керҙем.* Х.Ғиләжев.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, бер өшөтөп, бер яндырып ауырытҡан йоғошло ауырыуҙың эйәһе. □ По поверьям дух, хозяин лихорадки.

**3.** *күсм.* Ҡомарлы, шашҡын тойғо. □ Навязчивое, назойливое чувство. *Алтын биҙгәге.* ■ *Миңә шунда яҙғы сир эләкте — юҡ, дарыу юҡ һөйөү биҙгәгенә.* М. Кәримов.

**4.** *диал. ҡар.* **тапма.**

**БИҘГӘК ИМЛӘҮ (биҙгәк имлә-)** (Р.: заговаривание лихорадки; И.: cast a spell (of fever); Т.: büyü ile iyileştirmek) *ҡ. миф.*

Биҙгәк ауырыуын өшкөрөп дауалау. □ Заговаривание лихорадки. ■ *Биҙгәк имләгәндә балыҡ эсенән сыҡҡан балыҡты бетеү итеп тағалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БИҘГӘК КӨН** (Р.: пасмурный; И.: cloudy; Т.: bulutlu gün) *и. диал.*

Йонсоу көн. □ Пасмурный день.

**БИҘГӘК ҠАСЫРЫУ (биҙгәк ҡасыр-)** (Р.: способ лечения лихорадки; И.: way to treat fever; Т.: nöbeti iyileştirmek usulü) *ҡ. миф.*

Биҙгәк ауырыуын магик дауалау ысулы. □ Способ магического лечения лихорадки. ■ *Биҙгәкте мылтыҡ атып ҡасыралар.* Экспедиция материалдарынан.

**БИҘГӘК ҠУРҠЫТЫУ (биҙгәк ҡурҡыт-)** *ҡ. миф. ҡар.* **биҙгәк ҡасырыу.** ■ *Биҙгәкте ҡурҡытып имләү таралған. Бының өсөн биҙгәктең көсәйгән сағында мылтыҡ атыла.* Экспедиция материалдарынан.

**БИҘГӘКЛЕ** (Р.: малярийный; И.: malarial; Т.: malarya) *с.*

Биҙгәк ауырыулы. □ Малярийный. *Биҙгәкле урын.*

**БИҘГӘКЛӘҮ (биҙгәклә-)** (Р.: лихорадить; И.: cause fever; Т.: nöbeti olmak) *ҡ.*

Биҙгәк тотоп ауырыу. □ Лихорадить. ■ *Юлда бик арып, йонсоп килгән ауырыу Тукай, поезға ултырғас, тәүҙә йылы таба алмайынса өшөп, гәҙәтенсә, бер аҙ биҙгәкләп алған.* С.Ҡудаш.

**БИҘГӘК СЕРӘКӘЙЕ** (Р.: малярийный комар; И.: malarial gnat; Т.: malarya sivrisineği) *и. зоол.*

Биҙгәк ауырыуын таратҡан серәкәй. □ Малярийный комар (лат. *Anopheles maculipennis*). ■ *Ялҡаулыҡ шәрәмәте уның [командирҙың] ҡанына биҙгәк серәкәйе булып һеңгән.* «Ағиҙел», № 5, 2010.

**БИҘГӘК СИРЕ** *и. ҡар.* **биҙгәк.**

**БИҘГӘК СӘСӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **сырхыуат.**

**БИҘГӘК ТЕЛЕ** *и. ҡар.* **биҙгәк әпсене.**

**БИҘГӘК ТОТОУ (биҙгәк тот-)** (Р.: заболеть лихорадкой; И.: fever; Т.: ateşlenmek) *и. миф.*

Биҙгәк менән ауырыу. □ Заболеть лихорадкой. ■ *Биҙгәк тотһа, кеше ҡалтырана башлай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БИҘГӘК ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух лихорадки; И.: spirit of fever; Т.: malarya hastalığının ruhu) *и. миф.*

Биҙгәк ауырыуы эйәһе. □ Дух лихорадки. ■ *Биҙгәк булһа, матур ҡурсаҡ эшләп, ауырыу янына һалып ҡуйып, юл сатына алып барып ташлағандар.* Экспедиция материалдарынан.

**БИҘГӘК ӘПСЕНЕ** (Р.: заговор; И.: exhorcism of fever; Т.: ateşi büyü ile iyileştirmek) *и. миф.*

Биҙгәк ауырыуы һамағы. □ Заговор, заклинание лихорадки. ■ *Биҙгәк әпсене, биҙгәк теле тигән әпсен менән имләйҙәр биҙгәкте.* Экспедиция материалдарынан.

**БИҘГӘК ЯҒЫУ (биҙгәк яҡ-)** (Р.: способ лечения лихорадки; И.: exhorcism of fever; Т.: ateşi büyü ile iyileştirmek) *ҡ. миф.*

Биҙгәкте магик дауалау ысулы. □ Способ магического лечения лихорадки. ■ *Биҙгәк тотһа, ауырыуҙы: «Мейескә ташлайым, мейескә яғам!» — тип мейес алдына килтерһәң, биҙгәк ҡаса икән.* Экспедиция материалдарынан.

**БИҘГӘЛӘК I (биҙгәләге)** (Р.: стрепет; И.: little bustard; Т.: mezgeldek) *и. зоол.*

Ҙурлығы тауыҡ хәтле, арҡаһы һоро сыбар, ҡорһағы аҡ, аяғы оҙон йүгерек дала ҡошо; ҡарһаҡ туғаҙаҡ. □ Стрепет (лат. *Tetrax tetrax*). ■ *Биҙгәләк бәләкәй генә бер ырҙын яһап ала ла һәр ваҡыт шунда әйрәләп бейей. Бейегән ырҙыны ҡатып, ялтырап китә.* Һ. Дәүләтшина.

**БИҘГӘЛӘК II** (Р.: не прирученный; И.: wild; Т.: vahşi) *с.*

Ҡулға ылыҡмаҫ, ҡырағай (*малға ҡарата*). □ Не прирученный, дикий. *Биҙгәләк дөйә.* ■ *[Айбулат:] Ул шайтан шикелле дөйәләр балаларға түгел, Сәйетҡол ағайҙың үҙенә лә баш бирмәй китә әле. Бигерәк тә анау Нар дөйә, Моҡаш, Күк дөйә биҙгәләк.* Һ. Дәүләтшина.

**БИҘҘЕРГЕС I** (Р.: надоедливый; И.: irksome; Т.: bezdirici) *с.*

Йәнгә тейерлек; ялҡытҡыс. □ Надоедливый, отталкивающий, нудный. *Биҙҙергес кеше. Биҙҙергес көҙгө ямғыр.* ■ *Көҙгө ямғыр бигерәк биҙҙергес булды быйыл. булған ғына уңышты ла йүнләп йыйып ала алманылар.* М. Ишбулатов. *Биҙҙергес Сидор Айтуғанович ҡыҫылмаған бер генә ваҡиға ла юҡ.* Ә. Бикчәнтәев.

**БИҘҘЕРГЕС II** (Р.: магическое действо; И.: magic; Т.: büyü) *и.*

Ир менән ҡатынды бер-береһенән һыуындырыу ысулы. □ Магический способ для охлаждения мужа и жены. *Биҙҙергес яҙып эсереү.*

**БИҘҘЕРЕҮ (биҙҙер-)** (Р.: надоедать; И.: bore; Т.: bezdirmek) *ҡ.*

**1.** Бик ныҡ ялҡытып, ҡабат әйләнеп ҡарамаҫтай итеү. □ Надоедать, приедаться, отталкивать. *Доньянан биҙҙереү. Өйҙән биҙҙереү. Дуҫтарҙы биҙҙереү. Бер төрлө аш биҙҙерә.* ■ *Әллә һине доньяларҙан биҙҙерҙеме ғазаптарың? Әллә зәһәр ут ҡаҙалып, ҡайырылдымы ҡанаттарың?* А. Игебаев. *Ул, бүтәндәр кеүек, үҙебеҙ уҡымағанға күрә балаларыбыҙ уҡыһын тип, бала үҙе теләймеюҡмы, булдыра аламы-алмаймы, димләп, көсләп, хатта әллә ниндәй таныш-белештәренә инәлеп, уларҙы биҙҙереп, балаларын институттарҙа уҡытырға тырышып йөрөмәне.* Н. Мусин. ● *Һөйҙөргән дә ҡыҙыл тел, биҙҙергән дә ҡыҙыл тел.* Әйтем.

**2.** Һыуындырыу. □ Отталкивать *кого. Кешенән биҙҙереү.* ■ *[Ҡатынға — Мәскәй:] Үҙеңде үлтереп, өлкән вәзиренең ҡатыны менән тормаһын тиһәң, батшаңды ул вәзирҙән тамам биҙҙерергә кәрәк.* Әкиәттән.

**3.** Теләктән ҡайтарыу; бүктереү. □ Отучать *кого от чего. Тәмәке тартыуҙан биҙҙереү.*

**БИҘҘЕРТЕҮ (биҙҙерт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биҙҙереү.** *понуд. от* **биҙҙереү.**

**БИҘЕЛ** (Р.: выселок; И.: new village; Т.: yeni semt) *и. диал.*

Төп ауылдан айырылып күсеп ултырған яңы ауыл. □ Выселок (*или* выселки).

**БИҘЕР I** *и. диал. ҡар.* **бүҫер.**

**БИҘЕР II** (Р.: просека; И.: vista; Т.: manzara) *и. диал.*

Асыҡлыҡ. □ Просека.

**БИҘЕРГӘН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле ырыуы араһы. □ Бидергән (*родовое подразделение башкир-айлинцев*).

**БИҘЕРКӘ** (Р.: ведёрко; И.: pail: Т.: kova) *и. диал.*

Бәләкәй биҙрә. □ Ведёрко.

**БИҘЕРӘҮ (биҙерә-)** (Р.: тяготиться; И.: be disappointed; Т.: bıkmak) *ҡ. диал.*

**1.** Ялҡыу. □ Тяготиться.

**2.** Ҡурҡыу. □ Опасаться.

**БИҘЕҮ (биҙ-)** [дөйөм төрки *бэз,* саҕ., эвен. *бэр-* 'үҙгәреү'] (Р.: тяготиться; И.: be disappointed; Т.: bıkmak) *ҡ.*

**1.** Бик ныҡ ялҡыу, ҡабат әйләнеп ҡарамаҫтай булыу. □ Окончательно разочароваться *в ком, в чем*; тяготиться.

**2.** Һыуыныу. □ Охладеть, остыть. *Кешенән биҙеү.* ■ *Ҡапыл ауылдан да, кешеләрҙән дә биҙҙем.* Р. Камал.

**3.** Теләк ҡайтыу. □ Приедаться. ■ *Ауырыу бер саҡ ашауҙан биҙҙе лә ҡуйҙы.* Г. Ғиззәтуллина.

**БИҘЛЕ I** (Р.: имеющий железы; И.: having glands; Т.: bezli) *с.*

Биҙе булған. □ Имеющий железы.

**БИҘЛЕ II** (Р.: пасмурный; И.: overcast; Т.: yağmurlu) *с. диал.*

Ҡарлы-ямғырлы, һыуыҡ елле (*көнгә ҡарата*). □ Пасмурный. ■ *Һалҡынсараҡ, биҙлерәк көн булыуға ҡарамаҫтан, Һарайҫанан күңелем тулы яҡты хистәр менән киттем мин.* Р. Шәкүр.

**БИҘЛЕ АЛАБУТА** *и. бот. ҡар.* **алабута.**

**БИҘЛӘТЕҮ (биҙләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биҙләү.** *понуд. от* **биҙләү.** *Һыҙғырып көндө биҙләтеү.*

**БИҘЛӘҮ (биҙлә-)** (Р.: становиться пасмурным; И.: become overcast; Т.: kapanık olmak) *ҡ.*

**1.** *диал.* Ҡарлы, ямғырлы һыуыҡҡа әйләнеү; йонсоуланыу. □ Становиться пасмурным. *Көн биҙләп тора.*

**2.** *күсм.* Кәйефһеҙләнеп, сырай һытыу. □ Быть хмурым. ■ *Тимерғәле Килмөхәмәтовтың бай йөкмәткеле тормош юлын байҡағанда йыш ҡына уның холҡондағы бер үҙенсәлеккә юлығаһың. Был — тәүәккәллек. Биҙләп-буҙлап ултырыу ят уға.* И. Кинйәбулатов. *Көн ниндәй, тау ҙа шулай: аяҙ мәлдә көлә, йонсоуҙа биҙләп тора ул.* А. Игебаев.

**БИҘЛӘҮЕК** *с. ҡар.* **биҙле II.** *Биҙләүек көн.* ■ *Бая уҡ тамырлана башлаған болоттар, бергә уҡмашып, тотош күкте ҡаплап алды. Көн биҙләүеккә әйләнде.* Б. Бикбай.

**БИҘРӘ** [рус. *ведро*] (Р.: ведро; И.: pail; Т.: kova) *и.*

Һыу йәки бүтән *нәмә* ташый торған ҡылыслы һауыт; күнәк. □ Ведро. *Эмаль биҙрә. Һөт биҙрәһе.* ■ *Көйәнтә, биҙрәләрен алып, йәш киләште һыу юлына алып киттеләр.* М. Хисмәтуллина. *Ҡоймала эленеп торған һөт биҙрәһенең ситенә мул ғына ҡаймаҡ яғып, һыйыр янына сүгәләнем.* Г. Ғиззәтуллина.

**БИҘРӘ ҠЫЛЫСЫ** (Р.: ведёрная дужка; И.: bail; Т.: kova kulağı) *и. диал.*

Биҙрә тотҡаһы. □ Ведёрная дужка. ■ *Хатта һыу килтергәс, биҙрәләрҙең ҡылысын, тауыш сыҡмаһын тип, әкрен генә ыҫҡындырыр булды.* З. Биишева.

**БИҘРӘСЕ** (Р.: ведёрочник; И.: pailer; Т.: kovacı) *и.*

**1.** Биҙрә эшләүсе. □ Изготовитель вёдер, ведёрочник. *Ҡарт биҙрәсе.*

**2.** Байрамдарҙа биҙрә сиртеүсе. □ Человек, который «играет» на ведре *(на праздниках). Биҙрәселәр биҙрә һуға.*

**БИҘРӘТЕҮ (биҙрәт-)** (Р.: надоедать; И.: nag; Т.: bezdirmek) *ҡ.*

Теңкәне ҡоротоп, йонсотоу; йөҙәтеү. □ Надоедать, донимать. *Күҙгә һыуыҡ биҙрәтә.* ■ *Торҙом. Ләкин атҡа менге килмәй, биҙрәткән.* Н. Мусин.

**БИҘРӘҮ (биҙрә-)** (Р.: надоедать; И.: nag; Т.: bezmek) *ҡ.*

Теңкә ҡороп, йонсоу; йөҙәү. □ Надоедать, мучиться, измучиться. *Буранда урамға сығырға биҙрәп тороу. Юҡлыҡтан биҙрәү.* ■ *Киткең килһә, кит һуң, ирекһеҙләп тотмам, биҙрәп бөткәс ярлы тормоштан.* Р. Йәнбәк.

**БИҘРӘШЕҮ (биҙрәш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **биҙрәү.** *взаимн. от* **биҙрәү.**

**БИҘУН** *и. диал. ҡар.* **бәләсел.**

**БИҘӘК (биҙәге)** [боронғо төрки *бәдизәк*] (Р.: узор; И.: pattern; Т.: bezek) *и.*

**1.** Матурлыҡ өсөн төшөрөлгән төрлө-төрлө һүрәт. □ Узор, рисунок, набойка. *Алма биҙәк. Сәскә биҙәк. Биҙәк төшөрөү. Эре биҙәк.* ■ *Ҡулымдағы көмөш балдағымдың ай менән күк йондоҙ биҙәге.* Халыҡ йырынан.

**2.** *күсм.* Йәм, матурлыҡ биргән нәмә. □ Украшение. ■ *Ер-күктең бар биҙәктәрен йыйып, бейек шыршы тора уртала.* М. Кәрим. ● *Ир бала — йортҡа терәк, ҡыҙ бала — йортҡа биҙәк.* Мәҡәл.

**БИҘӘКЛЕ** (Р.: разноцветный; И.: motley; Т.: desenli) *с.*

Биҙәге бар, биҙәк төшкән. □ Разноцветный, узорчатый, разрисованный, расписанный. *Биҙәкле сынаяҡ.* ■ *Матур биҙәкле шәлдәр — бесәй табаны төшкәне, төрлө ҙурлыҡтағы телләһе, үҙенсәлекле сәсәкләһе, оҙон суҡлыһы, тиңе булмаған селтәрләһе, киртләсләп һырланғаны, шулай уҡ бүтәндәр ҙә тәүҙәрәк урҙала эленеп тороп, өйөбөҙгә йәм өҫтәй ине.* «Башҡортостан», 7 июнь 2011.

**БИҘӘКЛЕ БӘШМӘК (бәшмәге)** *и. ҡар.* **ерән бәшмәк.**

**БИҘӘКЛӘНДЕРЕҮ (биҙәкләндер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биҙәкләү.** *понуд. от* **биҙәкләү.**

**БИҘӘКЛӘНЕҮ (биҙәклән-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **биҙәкләү 1.** *страд. от* **биҙәкләү 1.** ■ *Сәғәттең тышы таштар менән биҙәкләнгән.* Д. Юлтый. *Биҙәкләнгән тәҙрәләрҙең өлгөһө, был — доньяның яҙҙы һағыныу билдәһе.* М. Кәрим.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **биҙәкләү 2.** *возвр. от* **биҙәкләү 2.** *Биҙәкләнеп тунған.*

**БИҘӘКЛӘТЕҮ (биҙәкләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биҙәкләү.** *понуд. от* **биҙәкләү.**

**БИҘӘКЛӘҮ (биҙәклә-)** (Р.: разрисовывать; И.: ornament; Т.: bezeklemek) *ҡ.*

**1.** Биҙәкле итеү. □ Разрисовывать, украшать узорами, отделывать, орнаментировать. *Биҙәкләп сигеү. Биҙәкләп буяу.* ■ *Ҡыш бабай тәҙрәләрҙе әллә ниндәй матур биҙәктәр менән биҙәкләп бөткән.* Л. Абдуллина.

**2.** *күсм.* Йәмле, матур итеү; биҙәү. □ Украшать. ■ *Доньябыҙҙы нурлап, тыуған еребеҙҙе биҙәкләп, гөрләп үҫә гүзәл миләүшә.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**БИҘӘКСЕ** (Р.: мастер, художник; И.: carver; Т.: oymacı) *и.*

Биҙәк төшөрөүсе, биҙәк эшләүсе. □ Специалист по разрисовке, украшению; резчик, мастер по художественной резьбе.

**БИҘӘЛ** *и. иҫк. ҡар.* **абруй 1.** ■ *Эй һары бал, һары бал, һары балды кем эсер? Битендә биҙәл уйнаған ир-азамат — шул эсер.* Ҡобайырҙан.

**БИҘӘЛЕҮ (биҙәл-)** *ҡ. төш.* **биҙәү.** *страд. от* **биҙәү.** *Сәскә менән биҙәлгән.*

**БИҘӘЛЕШ** (Р.: оформление; И.: design; Т.: dekor) *и.*

*Ниҙеңдер* биҙәлеү йәһәтенән тышҡы күренеше. □ Оформление, украшение. *Китаптың биҙәлеше.* ■ *Йыл һайын үткәрелә торған август кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар мәктәп, балалар баҡсаларында булды, уларҙың яңы уҡыу йылына әҙерлеген һәм биҙәлешен ҡараны.* «Йәшлек», 17 август 2011.

**БИҘӘМЕС** *и. ҡар.* **биҙәүес.** *Биҙәмес бүләк итеү.*

**БИҘӘМӘ** *и. диал. ҡар.* **биҙәк.**

**БИҘӘНДЕРЕҮ (биҙәндер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биҙәнеү.** *понуд. от* **биҙәнеү.** ■ *Биҙәндерҙе көмөш ҡырау менән мүкле тауҙың төклө биттәрен; нағышланы, боҙ селтәре сигеп, Аҡманай һәм Димдең ситтәрен.* С.Ҡудаш.

**БИҘӘНЕҮ (биҙән-)** [боронғо төрки *бәзән* 'матур төҫ алыу'] (Р.: накраситься; И.: make up; Т.: bezenmek) *ҡ.*

**1.** Күҙгә, биткә буяҡ, кершән яғып, матурланыу. □ Накраситься, наряжаться. ■ *Миләүшә иң матур, иң яратҡан күлдәген кейеп, көҙгө алдында оҙон-оҙаҡ биҙәнде, Марсты көтә-көтә театрға барырға әҙерләнде.* С. Шәрипов.

**2.** Биҙәүестәр тағып, кейенеп-һыланып, матурланыу. □ Наряжаться, прихорашиваться. ■ *Ҡыҙҙар ҡолаҡтарына алҡалар, ҡулдарына матур беләҙектәр кейгән, әллә ниндәй ялтыр-йолтор биҙәүестәрен түштәренә тағып алғандар. Малайҙар*

*үҙҙәренсә биҙәнгән. Бөтәһе лә Яңы йыл кисәһенә әҙерләнгән.* Ф. Ғөбәйҙуллина. *Ҡыҙ балалай биҙәнгән төлкөһө күп Уралтау.* Ҡобайырҙан.

**3.** *күсм.* Матурлыҡҡа сумыу, матур төҫ алыу. □ Наряжаться, приукрашиваться. *Яҙ етеү менән урамдарҙа ағастар йәшелгә биҙәнә башлай.*

♦ **Телгә биҙәнеү** *диал.* Телгә һалышыу. □ Предаваться болтовне, пустословить.

**БИҘӘНЕҮ-ТӨҘӘНЕҮ (биҙән-төҙән-)** *ҡ. ҡар.* **биҙәнеү.** *Биҙәнеп-төҙәнеп сығып китеү.*

**БИҘӘНЕҮ-ЯҺАНЫУ (биҙән-яһан-)** *ҡ. ҡар.* **биҙәнеү.**

**БИҘӘНЕШЕҮ (биҙәнеш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **биҙәнеү.** *взаимн. от* **биҙәнеү.** ■ *Биҙәнешкән мәскәүлеләр күпер аша үтәләр. Ашыға улар баҡсаға күңелле ял итергә.* Ғ. Әмири.

**БИҘӘНСЕК I** (Р.: ухоженная; И.: well-groomed; Т.: bakımlı) *с. диал.*

Үҙен ҡарап, биҙәнеп-төҙәнеп йөрөгән ҡатын-ҡыҙ. □ Ухоженная, нарядная женщина. *Биҙәнсек ҡатын.* ■ *Ғәлиә үҙе белмәһә лә, һәр саҡ үҙен ҡарап, биҙәнеп-төҙәнеп йөрөгән биҙәнсек ҡатын-ҡыҙҙар иҫәбенә инә торғайны.* М. Күсмәева.

**БИҘӘНСЕК II (биҙәнсеге)** *и. диал. ҡар.* **ташбаш.**

**БИҘӘР I** (Р.: узор; И.: design; Т.: bezek) *и.*

Биҙәкле-биҙәкле семәр; биҙәк. □ Узор, отделка. *Сынаяҡ биҙәре.* ■ *Өҫтөндә — салбар ҙа фуфайка, аяғында — биҙәр табанлы оло һалдат ботинкаһы, башында — бүрек.* Н. Мусин.

**БИҘӘР II** (Р.: красивый; И.: nice; Т.: güzel) *с. күсм.*

Төҫкә, башҡа матур; сибәр. □ Красивый, приятный на вид. *Биҙәр кеше.*

**БИҘӘР-БИҘӘР** (Р.: броский; И.: catchy; Т.: açık) *с.*

Күҙҙең яуын алып, земберләп торған *(биҙәк йәки семәргә ҡарата).* □ Броский, очень яркий *(об узоре).* ■ *Аҡ сынаяҡ биҙәр-биҙәр, ҡыҙамын биҙәгенә.* Халыҡ йырынан. *Ҡамсы һабы биҙәр-биҙәр ун икенән үргәнгә.* Халыҡ йырынан.

**БИҘӘР БУЛЫУ (биҙәр бул-)** (Р.: надоедать; И.: nag; Т.: bıkmak) *ҡ.*

**1.** Бик ныҡ биҙеү; биҙрәү. □ Надоедать, опротиветь. *Йәйәү йөрөүҙән биҙәр булыу.* ■ *Кешеләрҙе тиң күреп, ишле дуҫтар менән аралашып йәшәүҙе мәртәбәгә һанап, күңелле ғүмер иткән ғаилә ҡыҙы бына шулай тормошҡа сығып бер-ике йыл үтеүгә, кешегә һаулыҡ ҡушырға, өндәшергә биҙәр булып торған ҡырҡаҡ ҡатынға әйләнде.* Г. Ғиззәтуллина.

**2.** Интегеү. □ Мучиться, измучиться. *Биҙәр булып йәшәү.*

**БИҘӘРЕҮ (биҙәр-)** (Р.: окончательно разочароваться; И.: be disappointed; Т.: bezmek) *ҡ. диал.*

Биҙеү. □ Окончательно разочароваться, надоесть.

**БИҘӘРЛЕ I** (Р.: узорчатый; И.: patterned; Т.: bezekli) *с.*

Төрлө-төрлө биҙәкле. □ Узорчатый, расписной. *Биҙәрле һауыт. Биҙәрле тауар.* ■ *Ҡарттың ой ҡыйығы зәңгәр ҡалай, тәҙрә ҡапҡастары биҙәрле, өйҙөң тирә-яғын, төҙөлөшөн дача йорттарына тиңләрлек.* С. Кулибай.

**БИҘӘРЛЕ II** (Р.: буклированный; И.: boucle; Т.: bukleli) *с. диал.*

Урыны-урыны менән түңәрәк булып, ҡалҡып торған биҙәкле. □ Буклированный.

**БИҘӘРЛӘНЕҮ (биҙәрлән-)** *ҡ. төш.* **биҙәрләү I.** *страд. от* **биҙәрләү I.** ■ *Биҙәрләнгән бай сәсәк ҡурай ҙа булыр һулыған һуң.* Ҡобайырҙан.

**БИҘӘРЛӘҮ I (биҙәрлә-)** (Р.: украшать узорами; И.: ornament; Т.: bezemek) *ҡ.*

**1.** Биҙәкле итеү; биҙәкләү. □ Украшать узорами, орнаментировать. ■ *Тыуған ауылымдың биҙәрләп эшләнгән ҡапҡаларын күреүем булды — һәр өйҙәге яҙмыш, үҙәгемде өҙөп, иҫ киткес уйҙарға һалды.* Н. Әминева.

**2.** *күсм.* Йәмгә, матурлыҡҡа күмеү; биҙәү. □ Украсить. ■ *Яҙ килә, матур ай килә, биҙәрләп ерҙең өҫтөн.* А. Игебаев.

**БИҘӘРЛӘҮ II (биҙәрлә-)** (Р.: мучиться; И.: be tormented; Т.: ıstırap çekmek) *ҡ. диал.*

Биҙрәү, интегеү. □ Мучиться. ■ *Ауыл тып-тын: һәр йән эйәһе, туңыуҙан биҙәрләп, үҙенең йылы мөйөшөнә һыйынған.* Й. Солтанов.

**БИҘӘҮ I (биҙә-)** [боронғо төрки *биҙә* 'биҙәү'] (Р.: наряжать; И.: dress up; Т.: bezemek) *ҡ.*

**1.** Буяҡ, кершән һөртөп, күҙҙе, битте матурлау. □ Наряжать, накрасить. *Күҙ буяп, ҡаш сығарма.* ● *Битеңде биҙәмә, аҡылыңды биҙә.* Әйтем.

**2.** Төҫ, йәм бирерлек нәмәләр менән матурлау; матур итеү. □ Украшать, раскрашивать, разукрасить. *Шыршыны уйынсыҡтар менән биҙәү.* ■ *Бына, егет, шәл ябырһың, буйың биҙәп торһон тип.* Туй йырынан.

**3.** *күсм.* Яҡшы сифат өҫтәп матурлау. □ Украсить. *Матур тел романды биҙәй. Декорация спектаклде биҙәй.* ■ *Авторҙың тасуирлы, үҙенсәлекле теле повесты тағы ла биҙәй төшә.* Ш. Бикҡол. ● *Атҡа менгән ил гиҙәр, батыр егет ил биҙәр.* Әйтем.

**БИҘӘҮ II** (Р.: бесплодный; И.: sterile; Т.: kısır) *с.*

**1.** Бала таба алмаған йәки бала булдыра алмаған. □ Бесплодный. *Биҙәү ир. Биҙәү ҡатын. Биҙәү булыу.* ■ *Яңғыҙ булыр егеткә биҙәү ҡатын тап булыр.* Ҡобайырҙан. *[Шәмсинур — Ҡотлозаманға:] Бер һиңә бала кәрәкмәне, һәр саҡ буйҙаҡ йәшәгең килде, һине тыңлап, мәңгегә биҙәү ҡалдым.* Ғ. Вәлиев.

**2.** Үрсем бирмәгән (*мал, үҫемлеккә ҡарата*). □ Бесплодный, яловый. *Биҙәү бейә. Биҙәү сәскә.* ■ *[Әбләй:] Толпарҙан тыуған ҡолон һин, һөйгән атым минең һин, татлы йоҡомдо ҡалдырып, биҙәү киткән атым һин.* Халыҡ йырынан.

♦ **Аҡ биҙәү** бер бала табып туҡтаған ҡатынға ҡарата әйтелә. □ Женщина, не рожавшая после первого ребёнка.

**БИҘӘҮЕС** (Р.: украшение; И.: decoration; Т.: dekor) *и.*

**1.** *Кемде* йәки *нимәне лә* булһа биҙәү, уға йәм биреү өсөн хеҙмәт иткән затлы йәки матур нәмә. □ Украшение. *Шыршы биҙәүестәре.* ■ *Ябай ғына биҙәүес алып, мин бәхетлемен тип, бәләкәй генә шатлыҡты ҙур итә белеү ҙә кәрәк ҡайһы ваҡытта.* «Башҡортостан», 5 март 2011.

**2.** *миф.* Күҙҙән һаҡлау өсөн ҡулланылған әйберҙәр. □ Вещи от сглаза.

**БИҘӘҮ СӘСКӘ** (Р.: пустоцвет; И.: barren flower; Т.: kısır çiçek) *и. диал.*

Ҡыҫыр сәскә. □ Пустоцвет.

**БИҘӘҮ ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ** (Р.: декоративные растения; И.: ornamental plant; Т.: süs bitkileri) *и. бот.*

Йорт тирәһен биҙәр өсөн ултыртылған үҫемлектәр. □ Декоративные растения.

**БИЖУТЕРИЯ** (Р.: бижутерия; И.: bijouterie; Т.: bijuteri) *и.*

Быяла, пластмассанан яһалған биҙәнеү әйберҙәре. □ Бижутерия.

**БИЗАРУР I** [фарс.-ғәр. بی ضرورة 'кәрәкһеҙлек'] (Р.: зря; И.: for nothing; Т.: boşuna) *р.*

Кәрәкһеҙгә, юҡҡа. □ Зря, понапрасну. *Бизарур көйөү.*

**БИЗАРУР II** [фарс.-ғәр. بی ضرورة 'кәрәкһеҙлек'] (Р.: зря; И.: for nothing; Т.: boşuna) *с.*

Кәрәкһеҙ. □ Ненужный. *Бизарур әйбер.*

**БИЗДЫЯЛА** [рус. *без дела*] (Р.: зря; И.: for nothing; Т.: boçuna) *и. диал.*

Юҡҡа, бушҡа. □ Зря, понапрасну. *Биздыяла рәнйетәһең һин уны.*

**БИЗЕК (бизеге)** (Р.: единица; И.: unit of measure; Т.: birim) *и.*

Бәкәлсәй (ашыҡ) уйнағанда отошто билдәләй торған бер аяҡ баҫымы хәтле үлсәү берәмеге. □ Единица измерения, равная длине ступни, которая учитывается во время игры в бабки для решения вопроса о выигрыше.

**БИЗЕР** [ғәр. بذر 'сәсеү'] (Р.: зерно; И.: grain; Т.: tahıl) *и.*

Иген, иген орлоғо. □ Зерно.

**БИЗЛӘҮ (бизлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **һыуытыу.**

**БИЗМӘН** [ғәр. ميزان] (Р.: безмен; И.: spring balance; Т.: el kantarı) *и.*

Һалмауырлы йәки пружиналы, ҡулға тотмалы бер табаҡлы үлсәүес. □ Безмен (весы). *Бизмән менән үлсәү.* ■ *Үткән ғүмер-*

*ҙәрҙе үлсәп булмай, герем дә юк минең, бизмәнем дә.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Бизмәнгә һалыу** һәр төрлө нәмәне уйлап эшләү, үлсәп ҡарау. □ Всесторонне обдумывать, оценить. ■ *Һалып маташтым мин яҙмышымды бәхет бизмәненә.* М. Кәримов. **Бизмәнгә ултыртыу** кәм үлсәү. □ Недовесить. **Үҙ бизмәнең менән үлсәү** кешегә үҙеңдән сығып баһа биреү. □ Мерить на свой аршин. ■ *Үҙ бизмәнең менән үлсәмә, улар заты менән һағырак булыуың хәйерле.* Р. Камал.

**БИЗМӘНДӘР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тиләү ырыуы аймағы. □ Бизмэндэр *(родовое подразделение башкир рода тиляу).*

**БИЗМӘНЛӘҮ (бизмәнлә-)** (Р.: взвешивать на безмене; И.: weigh; Т.: tartmak) *к.*

**1.** Бизмән менән үлсәү. □ Взвешивать на безмене. *Бизмәнләп һатыу.*

**2.** *күсм.* Аушан-таушан сайҡалыу. □ Покачиваясь, качаясь, шатаясь. ■ *Яшык аттар һабанды тарта алмай бизмәнләп тик тора.* Ж. Кейекбаев.

**БИЗМӘНЛӘШЕҮ (бизмәнләш-)** (Р.: быть мелочным; И.: be fastidious; Т.: pazarlaşmak) *к.*

**1.** *урт. ҡар.* **бизмәнләү.** *взаимн.* от **бизмәнләү.**

**2.** Ваҡлашып һатыулашыу. □ Быть мелочным, мелочиться. *Ике тинлек нәмәне бизмәнләшә.*

**БИЗНЕС** [рус. < ингл. *business* 'эш, шөғөл'] (Р.: бизнес; И.: business; Т.: iş) *и.*

Табыш, шәхси байлыҡ туплауға нигеҙләнгән ҙур табышлы эш, кәсеп. □ Прибыльная работа, бизнес, предпринимательство. *Бәләкәй бизнес. Уйын бизнесы.* ■ *Юл бар икән — тимәк, тормош та бар, бизнес, иҡтисади әүҙемлек үҫешә; булмаһа — бөтә нәмә бер урында тик тора.* «Торатау», 21 июль 2011.

**БИЗНЕС-ВУМЕН** [рус. < ингл. *businesswoman* 'эшҡыуар ҡатын-ҡыҙ'] (Р.: бизнес-вумен; И.: businesswoman; Т.: iş kadını) *и.*

Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙ. □ Бизнес-вумен. *Бизнес-вумен булып китеү.*

**БИЗНЕСМЕН** [рус. < ингл. *business man* 'эшҡыуар'] *и. ҡар.* **эшҡыуар.**

**БИЗНЕС-КЛАСС I** [рус.] (Р.: бизнес-класс; И.: business class; Т.: business class) *и.*

Уҡыу программаһында бухгалтер иҫәбе, маркетинг һ. б. булған финанс-иҡтисад йүнәлешендәге махсус класс. □ Специальный класс финансово-экономической ориентации, в программу обучения которого входят маркетинг, бухгалтерский учёт и т. д.

**БИЗНЕС-КЛАСС II** [рус.] (Р.: бизнес-класс; И.: business class; Т.: business class) *и.*

Юғары класлы урындар *(самолётта, поезда һ. б.).* □ Места высшего класса *(в самолёте, поезде и т. д.).*

**БИЗНЕС-ЛЕДИ** [рус. < ингл. *business-lady* 'эшҡыуар ҡатын-ҡыҙ'] (Р.: бизнес-леди; И.: businesslady; Т.: iş kadını) *и.*

Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙ. □ Бизнес-леди.

**БИЗНЕС-МӘКТӘП** (Р.: бизнес-школа; И.: school of business; Т.: iş okulu) *и.*

Эшҡыуарлыҡҡа өйрәтеүсе мәктәп. □ Бизнес-школа. *Бизнес-мәктәп тамамлау.*

**БИЗНЕС-ПЛАН** (Р.: бизнес-план; И.: business plan; Т.: iş planı) *и.*

Эшҡыуарлыҡты артабан үҫтереү планы. □ План предпринимательской деятельности с указанием перспективы развития.

**БИЗНӘКӘҮ I** *и. диал. ҡар.* **ҡырҡтартмасы.**

**БИЗНӘКӘҮ II** (Р.: обидчивый; И.: touchy; Т.: alıngan) *с. диал.*

Үсексән. □ Обидчивый, недотрога. *Бизнәкәүгә бизнәк, биленә имгәк.*

**БИЗНӘКӘҮ III** (Р.: скандалист; И.: brawler; Т.: kavgacı) *и.*

Юҡҡа шаулап йөрөгән кеше. □ Скандалист. *Бизнәкәүгә бизнәк, биленә имгәк.*

**БИЗОН** [рус. < лат. *bison*] (Р.: бизон; И.: bison; Т.: bizon) *и. зоол.*

Төньяҡ Америкалағы зубрға оҡшаған ҡырағай үгеҙ. □ Бизон (лат. *Bison).*

**БИЗӘКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **биҙәк.**

**БИЗӘКӘЙЛӘҮ (бизәкәйлә-)** *и. диал. ҡар.* **биҙәү.**

**БИЖАН** *и. диал. ҡар.* **иңкеш.**

**БИЙӘНЕҮ (бийән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **инаныу.**

**БИК I (биге)** [боронғо төрки *бек, бәк/бөк 'ныҡлы'*] (Р.: запор; И.: bolt; Т.: tırkaz) *и.*

Ишек, ҡапҡаны, ҡапҡасты эләктереп ҡуя торған, бикләү өсөн ҡулайлама. □ Запор, засов, защёлка; щеколда. *Ишек биге. Ишеккә бик ҡуйыу. Ҡапҡаға бик һалыу.* ■ *[Әбей:] Ҡыҙым, өй түбәһендә .. һары һандыҡ булыр. Шуны алып ҡайт. Ҡайтып өйгә инмәйенсә, биген асма.* Әкиәттән.

**БИК II** [боронғо төрки *бәклик* 'ныҡ'] (Р.: очень; И.: very; Т.: pek) *ҡиҫ.*

Сиктән тыш, саманан тыш дәрәжәлә; үтә, ғәйәт. □ Очень, крайне, слишком. *Бик тиҙ. Бик мөһим. Бик көслө.* ■ *Ниңә бик-бик матур була икән сәскә атҡан саҡта сирендәр.* Ғ. Сәләм.

**БИКЕР (БИКР)** [ғәр. بكر 'ғиффәтле'] (Р.: целомудренный, девственный; И.: very; Т.: bakir) *с.*

Таҙа, ғиффәтле *(ҡыҙ).* □ Целомудренный, девственный. *Бикер ҡыҙ.*

**БИКЕРӘ** (Р.: ёрш; И.: raff; Т.: trakya levreği) *и. диал.*

Шырт балыҡ. □ Ёрш (лат. *Acerina cernua).*

**БИКИНИ** [рус. < ингл. *bikini*] (Р.: бикини; И.: bikini; Т.: bikini) *и.*

Бик тар ғына бюстгальтерҙан һәм трусиктан торған ҡатын-ҡыҙҙарҙың һыу инеү кейеме. □ Бикини.

**БИККЕС** *и. диал. ҡар.* **бик I.**

**БИКЕТКЕС** (Р.: дверной крючок; И.: door hook; Т.: kapı kancası) *и. диал.*

Келә. □ Дверной крючок. *Ишектең бикеткесе һурылып сыҡҡан.*

**БИКЛЕ** [боронғо төрки *б(ә)клиг* 'бикләнгән'] (Р.: запертый; И.: bolted; Т.: kapalı) *с.*

Бикләнгән, йоҙаҡ һалынған. □ Запертый. *Бикле өй.* ■ *Ауылда өйҙәрҙең күбеһе бикле йәки буш торалар.* Д. Юлтый. *Лавка бикле, тимер селтәр менән ҡапланған тәҙрә быялаларын саң баҫҡан.* Һ. Дәүләтшина.

**БИКЛӘНЕҮ I (биклән-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бикләү I–III.** *страд. от* **бикләү I–III.** *Ишек бикләнде. Мал аҙбарға бикләнгән. Ятҡа бикләнгән шиғыр.* ■ *Бикләнделәр тимер ҡапҡалар, асылырлыҡ түгел ҡаҡһалар.* М. Кәрим.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **бикләү I.** *возвр. от* **бикләү I.** *Бүлмәгә инеп бикләнеү. Бикләнеп ултырыу. Ишектәге йоҙаҡ үҙенән-үҙе бикләнде.*

**БИКЛӘНЕҮ II (биклән-)** (Р.: привязаться; И.: be carried away with work; Т.: bağlanmak) *ҡ. ҡусм.*

**1.** Бер урынға йәки эшкә бәйләнеп, мауығып, шунан китә алмау. □ Привязаться к месту или увлечься работой и замыкаться. *Өйгә бикләнеп ятыу. Ауылға бикләнеп йәшәү.* ■ *Театр үҙ ҡабығында ғына бикләнеп ятмай.* «Йәшлек», 21 апрель 2010.

**2.** *Ниндәй ҙә* булһа сәбәптәр арҡаһында уй-хистәреңде бер *кем* менән дә бүлешмәйенсә, үҙеңдә һаҡлап, үҙең генә эстән кисереп йәшәү. □ Уйти в себя *(по какой-то причине со своими мыслями, думами ни с кем не делиться, хранить всё в себе). Үҙ-үҙеңә бикләнеү.* ■ *Ҡайғыларға бирешмәҫкә күңелем йоҙаҡ менән бикләнә.* М. Хисмәтуллина.

**БИКЛӘТЕҮ I (бикләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бикләү I.** *понуд. от* **бикләү I.** *Ҡапҡаны бикләтеү.*

**БИКЛӘТЕҮ II (бикләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бикләү II.** *понуд. от* **бикләү II.** *Шиғырҙы бикләтеү.*

**БИКЛӘҮ I (биклә-)** [боронғо төрки *бәклә-* 'бик һалыу'] (Р.: запирать; И.: bolt; Т.: kilitlemek) *ҡ.*

**1.** Ябып бик һалыу. □ Запирать, закрывать. *Ишекте бикләү. Йоҙаҡ менән бикләү.* ■ *Әсәйем беҙҙе көтөп ҡапҡаны ла, соланды ла бикләмәгән.* Т. Дәүләтбирҙина.

**2.** *Кемде* йәки *ниҙелер* бик һалып, тыштан ябыу. □ Запереть на замок *кого, что. Бикләп алыу. Бикләп ҡуйыу. Бикләп тотоу.* ■ *Алпамышаның үҙен ер аҫтына, зинданға,*

*атын ете ҡат тимер ҡапҡалы һарайға бикләп ҡуйҙылар, ти.* «Алпамыша» эпосынан. *Биш айҙан өйҙәрен бикләп, улар тыуған ауылдарынан ҡуҙғалырға мәжбүр булды.* З. Йәнбирҙина.

**3.** Нимәнелер быуыу, ҡаплау. □ Закрывать, загораживать. / Загораживание. *Бухтанан сығыу юлын бикләү. Дамбаны бикләү. Көслө ағым каналға үтеү юлын бикләй.*

**БИКЛӘҮ II (биклә-)** (Р.: заучивать; И.: learn by rote; Т.: ezberlemek) *ҡ. диал.*

Ятлау. □ Заучивать, выучивать. *Шиғырҙы ятҡа бикләү. Хәтергә ҡабатлау таблицаһын бикләү.*

**БИКЛӘҮ III (биклә-)** (Р.: закрыть; И.: shut; Т.: kapamak) *ҡ.*

Ваҡытлыса йәки бөтөнләйгә эшмәкәрлеген туҡтатыу (*учреждение, предприятие һ. б. тураһында*), ябыу. □ Закрыть.

**БИКЛӘҮЕК (бикләүеге)** (Р.: помост для сушки курута; И.: platform; Т.: raf) *и. этн.*

Ҡорот киптереү өсөн йәш талдан үреп, дүрт ҡаҙыҡ өҫтөнә ҡуйылған ылаш. □ Помост для сушки курута. *Ҡоротто бикләүектә киптереү.*

**БИКЛӘҮЕС** *и. диал. ҡар.* **ылаш.**

**БИКЛӘШЕҮ (бикләш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бикләү I.** *взаимн. от* **бикләү I.**

**БИКРЕ** [дөйөм төрки *бекире* 'мәрсен'] (Р.: осётр; И.: sturgeon; Т.: mersin) *и. зоол.*

Ҡыҫҡа моронло, ҡабырсаҡ тәңкәле балыҡ; мәрсен. □ Осётр (лат. *Acipenser*). *Бикре ите.* ■ *Башҡорттар борон-борондан балыҡсылыҡ менән шөғөлләнгән. Беҙҙең һыуҙарҙа ниндәй генә балыҡ юҡ! Бәрҙе, бағыр, ҡыҙыл балыҡ, ала балыҡ һәм бикре кеүек ҡиммәтле балыҡтар ҙа бар хатта.* И. Бураҡаев, Ш. Нафиҡов.

**БИКРЕ ҺЫМАҠТАР** *и. зоол. ҡар.* **бикре.**

**БИКРӘ** (Р.: белуга; И.: beluga; Т.: mersin balığı) *и. зоол. диал.*

Ҡырпа *(балыҡ).* □ Белуга (лат. *Huso huso).*

**БИКС** [рус. < нем. *bixen* 'үҙең менән алыу'] (Р.: бикс; И.: steam sterilizer; Т.: sterilize kutusu) *и. мед.*

Стерилизациялау өсөн махсус һауыт. □ Бикс (*специальная посуда для стерилизации*).

**БИКСЕРЕҮ (биксер-)** (Р.: сдавать; И.: become weak; Т.: zayıflamak) *ҡ. диал.*

Көс-ҡеүәт кәмеү, йомшарыу. □ Сдавать, слабеть (*о пожилых людях*). *Ҡартайып биксереү.*

**БИКТАШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Кәлсер-тамаҡ ырыуы араһы. □ Бикташ (*родовое подразделение башкир рода кальсер-тамак*).

**БИКӘ** (Р.: госпожа; И.: dame; Т.: bayan) *и.*

**1.** *иҫк.* Бай бисә, хужа ҡатын. □ Госпожа, барыня. ■ *Баярҙар бикәләре менән ҡунаҡҡа йөрөргә яратҡандар.* Д. Никольский.

**2.** *диал.* Ирҙең туғаны. □ Родственница мужа. *Бикәне ҡаршы алыу.*

**3.** *диал.* Ирҙең апаһы. □ Золовка.

**4.** Ҡатын-ҡыҙға ололап өндәшеү һүҙе. □ Употребляется при обращении к женщине.

**5.** *диал. ҡар.* **абыстай.**

**6.** *диал. ҡар.* **кәләш.**

**БИКӘБАШ** (Р.: посконник полевой; И.: boneset; Т.: koyun pıtrağı) *и. бот.*

Ҡара-ҡаршы телмә япраҡлы, ал суҡ сәскәле ҡый үләне. □ Посконник полевой (лат. *Eupatorium*). *Бикәбаш баҫып алыу.*

**БИКӘЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ырыуы араһы. □ Бикәй (*родовое подразделение башкир племени тамьян*).

**БИКӘМ** (Р.: тётя; И.: husband's sister; Т.: abla) *и.*

Ҡатынға ирҙең апаһы; ҡәйенбикә. □ Тётя (*сестра мужа*). ■ *[Муйылбикә Мәғфүрәгә:] Һәйбәт йырлайһың, бикәм, тының да иркен әле.* Һ. Дәүләтшина.

**БИКӘН** (Р.: бутон борщевика; И.: cow parsnip; Т.: maydanoz türü bir bitki) *и. диал.*

Балтырған бәбәге. □ Бутон борщевика.

**БИКӘН КӨПШӘҺЕ** (Р.: борщевик; И.: cow parsnip; Т.: maydanoz türü bir bitki) *и. бот. диал.*

Балтырған. □ Борщевик (лат. *Herachum).*

**БИКӘНСӘ** (Р.: вика; И.: vetch; Т.: burçak) *и. бот.*

Сәсеп үҫтерелгән кәрешкә. □ Окультуренная вика.

**БИКӘНӘ** *и. диал. ҡар.* **бөйән I.**

**БИКӘР I** [фарс. بيكار] (Р.: напрасный; И.: vain; Т.: beyhude) *с. иҫк.*

Файҙаһыҙ, буш, мәғәнәһеҙ. □ Напрасный, бесполезный, тщетный. *Бикәр һүҙ.* ■ *Ғүмерем үтте бикәрерәк, буш ел ҡыуҙым да ҡыуҙым.* Ш. Бабич. ● *Ирҙең йәше ике илле: береһе — шәкәр, береһе — бикәр.* Мәҡәл. *Бикәр эш битһеҙ булыр.* Мәҡәл.

**БИКӘР II** (Р.: напрасно; И.: in vain; Т.: boşuna) *р.*

Юҡҡа, бушҡа. □ Напрасно, попусту. *Күҙ йәшен бикәр түгеү.* ■ *Маҡтаһалар хаҡлы маҡтаһындар, бикәр маҡталыуҙан һин һаҡлан!* Б. Хәлитов.

**БИКӘР III** (Р.: кроме; И.: but for; Т.: hariç) *бәйл.*

Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән *башҡа, тыш* мәғәнәһен бирә. □ В роли послелога с исх. п. *кроме. Һинән бикәр кешем юҡ.* ■ *Мәрәһимгә лә, Аҡйондоҙға ла бер-береһенән бикәр йәшәр әмәл юҡ төҫлө тойолдо.* М. Кәрим.

**БИКӘР IV** *р. диал. ҡар.* **бөтөнләй.**

**БИКӘРГӘ** (Р.: зря; И.: in vain; Т.: boşuna) *р.*

Бушҡа, юҡҡа. □ Зря, напрасно, впустую. *Бикәргә әрләү. Бикәргә йөрөү.* ■ *Инде атын бикәргә рәнйеткәненә батыр бик үкенә, сөнки уны бөтә мөлкәтенән артыҡ күреп ярата, иң тоғро юлдашы һанай ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**БИКӘС** (Р.: золовка; И.: sister-in-law; Т.: görümce) *и.*

**1.** Ҡатынына ҡарата ирҙең һеңлеһе; ҡәйенһеңле. □ Золовка. ■ — *Еңгә, еңгә, ишек ас! — Төндә йөрөр бикәсем юҡ, бикәсем ситтә, кейәүҙә.* Әкиәттән.

**2.** *иҫк.* Йәш бикә. □ Молодая госпожа, дочь бая. ■ *[Юрға:] Өҫтөмдәге бикәсем дә үҙемә генә тиң икән.* Халыҡ йырынан.

**3.** *диал. ҡар.* **кәләш 2.**

**БИКӘ СЫЙЫРЫ** *и. миф. ҡар.* **ҡамҡа II.**

**БИКӘ ҮЛӘНЕ** (Р.: княженика; И.: Arctic raspberry; Т.: kuzey ahududu) *и. бот.*

Раузалар төркөмөнә ҡараған алһыу сәскәле, ҡуйы ҡыҙыл емешле күп йыллыҡ үлән. □ Княженика (лат. *Rubus arcticus).*

**БИҠАЛӘ** [ғәр. بقالة ‘бакалея сауҙаһы’; دكان البقالة ‘бакалея’] (Р.: торговля продуктами питания; И.: trade; Т.: bakkaliye) *и.*

Аҙыҡ-түлек сауҙаһы, йәшелсә сауҙаһы. □ Торговля продуктами питания, овощами. *Биҡалә менән шөғөлләнеү.*

**БИҠАСАП (биҡасабы)** (Р.: бекасам; И.: kind of Oriental texture; Т.: kumaş) *и.*

Буй-буй итеп һуғылған тар иңле ҡалын ебәк туҡыма. □ Бекасам (*разновидность полушёлковой восточной ткани*). *Камзуллыҡ биҡасап һатып алыу. Биҡасап сапан. Биҡасап күлдәк.* ■ *[Ишбикә инәй] күлдәк өҫтөнән йәшел биҡасап камзул, аяғына аҡ туланан сигеп эшләнгән сарыҡ кейеп алды.* З. Биишева.

**БИЛ** [дөйөм төрки *бел, бәл* ‘бил’] (Р.: поясница; И.: waist; Т.: bel) *и. анат.*

**1.** Кәүҙәнең арҡа менән янбаш араһындағы нәҙек өлөшө. □ Поясница, талия, пояс. *Бил ауырта. Билдән алыу. Билдән яҙыу. Билде биртендереү. Билдән бөгөлөү. Билдән яҙыла алмау.* ■ *«Ир намыҫы бил ҡайышы түгел, береһен һалдырып алһалар, икенсеһен быуып булмай», — тип төрттөрөп алды тегегә кемдер.* М. Кәрим. *Ҡыҫып та ғына ҡыҫып һөйөр инем, ҡыҙғанам шул нәҙек билкәйең.* Халыҡ йырынан.

**2.** Кейемдең шул тәңгәлдәге өлөшө. □ В талию. *Билһеҙ пальто. Оҙон билле күлдәк.* ■ *[Сәнсәк Исабәктең] өҫтөндә билле ҡара елән икән, .. башында бөҙрә йөнлө түңәрәк ҡара бүрек икән, аяғында үксәһеҙ ҡара итек икән.* М. Кәрим.

**3.** Нимәнеңдер уйылыңҡырап йәки нәҙегәйеңкерәп торған урта өлөшө. □ Седловина, середина (суженный посередине). *Тауҙың биле. Танау биле. Билле пәрәник. Ҡырандастың биле.* ■ *Билле пәрәник ашарға түгел, икмәк ашарға бара торғайныҡ Ишембайға.* И. Нурғәлиев.

**4.** *диал. ҡар.* **билтер.**

♦ **Билдән алыу** көрәштә билдән алыу. □ Схватить за пояс *(в борьбе).* **Бил биреү** көрәштә еңелеү. □ Проиграть *(в борьбе).* **Бил бөгөү** 1) бик тырышып, көс түгеп эшләү. □ Трудиться; 2) кемгә булһа ла хеҙмәт итеү. □ Гнуть спину. ■ *Билде бөкмәй, күкрәк көсөн түкмәй, бер кемгә лә килмәй бер тин дә.* Д. Юлтый. **Билгә һуғыу** ҡыйынлыҡ килтереү, тоткарлыҡ яһау. □ Препятствовать, воспрепятствовать *чему*, тормозить *что.* ■ *Бигерәк тә Әхмәҙиҙең китеүе билгә һуҡты. Совет эшен яҡшы алып бара ине ул.* Һ. Дәүләтшина. **Билде биштән быуып** ҙур ихласлыҡ, дәрт һалып. □ Взяться за *что-л.* с большим желанием. ■ *[Сабира:] Беҙ билде биштән быуып ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы һыйларбыҙ.* Һ. Дәүләтшина. **Билде быуыу** 1) ҙур теләк менән берәй эшкә әҙерләнеү. □ Взяться *за что-л.* с большим желанием; 2) хәл ҡылымдың *-п* формаһы менән килгәндә, эшкә ихласлыҡ, дәрт менән тотоноу мәғәнәһен бирә. □ Взяться *за что-л.* с большим желанием, душевным подъёмом. ■ *[Йәнбикә — иренә:] Кешеләрҙең irҙәре бил быуып, ер һелкетеп эшләп йөрөй.* Ҡ. Даян. **Биле ер күрмәгән** көрәштә һис еңелмәгән, көслө, батыр. □ Непобедимый, сильный, богатырь. ■ *Сәлмән батыр биле ер күрмәгән, Бәхтейәрҙе кеше уҙмаған, .. шөһрәт алған ике уҙаман.* Ҡ. Даян. **Биле ныҡ** көслө, мыҡты. □ Сильный, крепкий. **Бил яҙмай** туҡтай белмәй, ял итмәй *(ниҙер эшләү).* □ Работать, не разгибая спины. ■ *Көйҙөрөп барған ҡояш нурҙары аҫтында ураҡсылар бил яҙмай арыш ура.* Б. Хәсән. **Биш билле** биш ҡыйыҡ ҡуйып тегелгән. □ Пятиклинка. ■ *Таиба ҡоҙағый [Емешкә] биш билле ҡыҙыл соға камзул тегеп кейҙерҙе.* З. Биишева.

**БИЛАБИАЛЬ** [рус. < лат. *би* 'ике' + *labialis* 'иренле'] *с. лингв. ҡар.* **ике ирен.**

**БИЛАҒАЙ** (Р.: болтун; И.: babbler; Т.: geveze) *с. диал.*

Күп һөйләүсе. □ Болтун. *Билағай кеше.*

**БИЛАЙ** *и. диал. ҡар.* **сәйгүн.**

**БИЛАЛА** (Р.: луговой лунь; И.: harrier; Т.: bozkır delicesi) *и. зоол.*

**1.** Ҡарға ҙурлыҡ, киң оҙон ҡанатлы, тар оҙон ҡойроҡло, ҡорһағы буй өҙөк һыҙыҡлы йыртҡыс ҡош *(түбәндән оса).* □ Луговой лунь. (лат. *Circus pugargus).*

**2.** *диал. ҡар.* **көйгәнәк 1.**

**3.** *диал. ҡар.* **мүктәрге.**

**БИЛАЛЛАР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡарый-ҡыпсаҡ ырыуы араһы. □ Билаллар *(родовое подразделение башкир рода карый-кыпчак).*

**БИЛАЛЫЙ** *и. зоол. диал. ҡар.* **билала 1.** *Бер урында ҡанат ҡағып, табыш күҙләй билалый.*

**БИЛ АРҠАНЫ** (Р.: толстая верёвка; И.: thick rope; Т.: kalın ip) *и.*

Тирмәнең урта тапҡырынан уратып тарттырып ҡуя торған бау; биллек. □ Толстая верёвка для перетягивания средней части юрты.

**БИЛАТЕРАЛЬ** [рус. < лат. *би* 'ике' + *lateralis* 'ҡабырғалағы, ситтәге'] (Р.: билатеральный; И.: bilateral; Т.: iki kenarlı) *с.*

**1.** Ике яҡлы. □ Билатеральный. *Билатераль симметрия. Билатераль килешеү.*

**2.** *лингв.* Йомшаҡ аңҡауға күтәрелгән телдең ике яғынан һауа ағымы ярҙамында яһалған *(тартынҡы өн).* □ Билатеральный. *Билатераль тартынҡы.*

**БИЛ АУЫРТЫУ (бил ауырт-)** (Р.: поясничная боль; И.: back pain; Т.: bel ağrısı) *к.*

Арҡа мейеһе эшмәкәрлегенең боҙолоуына бәйле бил тәңгәлендәге ауыртыу. □ Поясничная боль. ■ *Бил ауыртһа, игеҙ баланан йәки игеҙ тапҡан әсәнән өс тапҡыр типтерәләр.* Экспедиция материалдарынан.

**БИЛБАУ I** (Р.: ремень; И.: belt; Т.: kemer) *и.*

**1.** *ҡар.* **билғау.** ■ *Билбау аҫты бушағас, ҡарап тороу юҡ, картуф та тук эҫәк һымаҡ тойола.* Б. Бикбай.

**2.** *миф.* Яман ауырыуҙарҙан, зәхмәттәрҙән һаҡлау көсөнә эйә булған бил быуа торған әйбер; йәшәү, мәңгелек, ныҡлыҡ билдәһе. □ Ремень *(мифологизированный предмет, оберег от злых духов, болезней; символ жизни, вечности, вместилище жизненного потенциала).* ■ *Кейәү йортона оҙатҡанда, киленден биленә билбау быуалар.* Экспедиция материалдарынан.

**БИЛБАУ II** (Р.: пояс-верёвка или полоска ткани для перевязывания покойника в трёх местах после облачения в саван; И.: kind of belt; Т.: kemer türü) *и. этн.*

Кәфендең бер өлөшө: мәйетте кәфенгә урағандан һуң өс урындан (*башынан, биленән, аяғынан*) бәйләп ҡуйылған бау йәки тауар киҫәге. □ Пояс-верёвка или полоска ткани для перевязывания покойника в трёх местах после облачения в саван.

**БИЛБАУ III** (Р.: узкая дощечка, опоясывающая карниз печи; И.: detail of a stove; Т.: sobanın çubuğu) *и. диал.*

Мейес кәрнизен ураткан тар ғына таҡта. □ Узкая дощечка, опоясывающая карниз печи.

**БИЛБЫУАРҘАН** (Р.: по пояс; И.: up to the waist; Т.: beline kadar) *р.*

Билгә тиклем. □ По пояс. *Бесән билбыуарҙан үҫкән.* ■ *Шулай ҙа, билбыуарҙан ағын һыу кискәндәй булып, бер-беребеҙгә йәбешеп, яй ғына барабыҙ ҙа барабыҙ, барабыҙ ҙа барабыҙ.* Ә.Сөләймәнов.

**БИЛ БЫУАРЫНАН** (Р.: по пояс; И.: up to the waist; Т.: beline kadar) *р. диал.*

Бил тәңгәленән. □ По пояс.

**БИЛ БЫУЫУ (бил быу-)** (Р.: обычай ритуального подпоясывания невесты вышитым кушаком при проводах её в дом жениха; И.: ethnographic rite; Т.: geline kurdele takmak) *ҡ. этн.*

Оҙатып алып киткәндә еңгәләре килендең билен билбау менән быуыу йолаһы. □ Обычай подпоясывания невесты вышитым кушаком при проводах её в дом жениха. *Бил быуыу йолаһы.* ■ *Килгәс, бикәстәре уның билен быуып, һыуға башланылар.* З. Биишева.

**БИЛГЕ I** [боронғо төрки *б(ә)лгү* 'билдә'] (Р.: метка; И.: tag; Т.: belgi) *и.*

**1.** Айырып күрһәтеү өсөн ҡуйылған тамға; билдә. □ Метка, пометка, знак. *Китап ситенә билге ҡуйыу.* ■ *Ҡашына арыҫландың килә батыр, үлгәнен аныҡлап белә батыр, быға инде бер билге һалайым тип, арыҫландың шунда телен телә батыр.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Билге лә генә сәнстем, ай биләнгә, Шәүрә килен киләм дә тигәнгә.* Халыҡ йырынан.

**2.** *Ниҙәндер* һуң ҡалған эҙ. □ След. *Тотҡан, тейгән бер нәмәлә бармаҡтың билгеһе ҡала.*

**3.** *Ниҙәлер* ҡылыҡһырлап күрһәткән һыҙат; ишарат, билдә. □ Признак, примета. *Ауырыу билгеһе.* ■ *Иҫеңдәме, һөйөү билгеһе тип, алтын балдаҡ бүләк иткәйнең.* З. Биишева.

**4.** Хәбәр биреү, белдереү өсөн яһалған ишарат. □ Знак. ■ *Фольгнер Ҡолтубәне ым менән билге биреп, янына саҡырҙы.* Б. Бикбай.

**5.** *миф.* Нимәләр тураһында алдан белгертеү билдәһе. □ Метка, знак, особая отметка, связанная с судьбой, состоянием природы; божественное предопределение. ■ *Баланың миңен айырым яҙмыш, бәхет билгеһе, тинеләр.* М. Кәрим.

**6.** *диал. ҡар.* **инәү II.**

**БИЛГЕ II** *и. диал. ҡар.* **вәғәҙә бүләге.**

**БИЛГЕ III** *и. диал. ҡар.* **бағана I, 4.**

Үҫмер ир балалар уйыны (*эсле-тышлы ике түңәрәк һыҙылып, уртаға ҡолға ҡаҙала; тышҡы түңәрәктәге кешеләр шул ҡолғаға ҡул тейҙерергә тырыша; эске түңәрәктәгеләр яҡын ебәрмәй, уларҙың аяғына тибеп «ҡатыра»; тышҡы түңәрәктән берәү ҡулын тейҙерһә, ике төркөм урын алмаша*). □ Игра в «Знамя» (*игра подростков*). *Билге таяғы. Билге тибеү. Билге уйнау.* ■ *Яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас, йәй башында гөл-*

*сәскәле матур яланда һабантуй байрамы үткәрелә. «Бәйге», «Теш менән тейен алыу», «Бала һикертеү», «Ике кеше — бер кеше», «Әүһәләй» уйындары менән «Билге уйыны» ла һабантуйҙа балалар ятып уйнаған уйын.* Ф.Ғөбәйҙуллина.

**БИЛГЕЛЕ I** [боронғо төрки *б(ә)лгүлүг* ‘асыҡ’] (Р.: известный; И.: familiar; Т.: belli) *с.*

**1.** Ни һәм ниндәй икәне мәғлүм, таныш; билдәле. □ Известный, знакомый. *Билгеле хәбәр. Билгеле кеше.* ■ *Төлкө әҙе бик билгеле яңы яуған ҡарҙарҙа.* Халыҡ йырынан.

**2.** *ҡар.* **билдәле I, 2.**

**БИЛГЕЛЕ II** (Р.: известно; И.: certainly; Т.: belli) *инш.*

Эш-хәлдең асыҡлығын белдергәндә әйтелә; билдәле. □ Известно, очевидно, понятно, разумеется, конечно. ■ *Билгеле, елдәй етеҙ ҡола бейә, бүтән аттарҙы байтаҡ артта ҡалдырып, бәйге тотҡалары янынан үҙып киткәйне инде.* Ә. Хәкимов.

**БИЛГЕЛЕ III** (Р.: заметно; И.: noticeably; Т.: gözle görünür biçimde) *р.*

Билдәле, күренеп тора. □ Заметно. ● *Май сүлмәге тышынан билгеле.* Мәҡәл.

**БИЛГЕЛӘНЕҮ (билгеләң-)** *ҡ. төш. ҡар.* **билгеләү.** *страд. от* **билгеләү.** *Билгеләнгән ағас.* ■ *Айыуҙың ғәҙәт-ҡылыҡтарын яҡшы белә Һолтанбай. Анау бер йыл урманда ҡуна ятып билгеләнгән ағастарҙан бура бурағанда нисегерәк ҡыланғайны бит, дуңғыҙ.* Н. Мусин.

**БИЛГЕЛӘҮ (билгелә-)** (Р.: метить; И.: mark; Т.: bolgilemek) *ҡ.*

**1.** Билге, тамға һалыу. □ Метить, размечать. ■ *Батшаның уртансы ҡыҙы үҙе һайлап, билгеләп ҡуйған алмаһын ашаған.* Әкиәттән.

**2.** Алдан уйлап тәғәйенләү; билдәләү. □ Определять, устанавливать, назначать. *Туй көнөн билгеләү. Һәр бригадаға эш билгеләү.*

**3.** Тәғәйенләп эшкә, урынға ҡуйыу; тәғәйенләү. □ Назначать, ставить *кого кем. Бригадир итеп билгеләү.*

**БИЛГЕ УЙЫНЫ** (Р.: игра в «Знамя»; И.: kind of national game; Т.: delikanlılar oyunu) *и. этн.*

**БИЛГЕ ҺАЛЫУ (билге һал-)** *ҡ. ҡар.* **билгеләү.**

**БИЛГӘЛЕ** *с. диал. ҡар.* **билдәле I.**

**БИЛГӘЛӘҮ (билгәлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **билдәләү 4.**

**БИЛГӘҮ** *и. диал. ҡар.* **билғау.**

**БИЛҒАУ** (Р.: пояс; И.: belt; Т.: kemer) *и.*

Кейемде бил тапҡырынан ҡыҫып быуа торған оҙон тауар йәки бау киҫәге. □ Пояс, кушак, которым подпоясывали верхнюю одежду. *Ебәк билғау. Билғауҙы сисеү.* ■ *Димдең дә иң бейек ярында, һыу баҫмаҫ урында, ергә сүгәләгән ишкәксе ҡарт та ҡыҙыл билғау менән быуған ҡара буҫтау көпөһөн сисеп ташлаған.* Ғ. Хисамов.

♦ **Билғау аҫтында бер ҡорһаҡ** яңғыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Один как перст. **Билғау аҫты бушау** асығыу. □ Проголодаться. ■ *Солтан ишкәксене баштан-аяҡ күҙҙән кисерә, сәсен ҡырҙырып алған башына һәләмә бүрек, киндер күлдәк, мең ямаулы киндер ыштан – ишкәксенең өҫтө кейемгә генә түгел, тамағы ла ашҡа туйып бөтмәүе, билғау аҫтының күбеһенсә буш булыуы тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләп тора.* Ғ. Хисамов.

**БИЛҒАУЛАНЫУ (билғаулан-)** (Р.: опоясаться; И.: belt; Т.: kuşanmak) *ҡ.*

Билғау быуыу. □ Опоясаться.

**БИЛҒАУЛАУ (билғаула-)** (Р.: опоясать; И.: surround; Т.: kuşatmak) *ҡ.*

Урап алыу. □ Опоясать. ■ *Битләүҙә ҡорораҡ, ер һарҡыу, ғәҙәттәгесә, битләүҙе, тау битләүен билғаулап аҡ томан һырыған.* Ә. Әминев.

**БИЛДЕК (билдеге)** (Р.: полка на задней части оси телеги; И.: shelf at the back of cart; Т.: arabanin arkasindaki raf) *и. диал.*

**1.** Арбаның артҡы күсәрендәге кәштә. □ Полка на задней части оси телеги.

**2.** Арбаның алғы һәм артҡы күсәрҙәрен тоташтырып торған бер иш ике ағас. □ Два продольных бруса, соединяющих переднюю ось телеги с задней.

**3.** *ҡар.* **күкрәк.** *Кәбән билдеге.*

**БИЛДӘ** (Р.: метка; И.: sign; Т.: beldek) *и.*

**1.** Айырып күрһәтеү өсөн ҡуйылған тамға, ин; билге. □ Метка, пометка, знак.

*Билдә ҡуйыу. Билдә һалыу. Билдәгә ҡарап табыу.* ■ *Ҡорбан малына һалынған билдә кешеләргә үҙ малдарын тиҙерәк табырға ярҙам итәсәк.* М. Бураҡаева.

**2.** *Ниҙәндер* һуң ҡалған эҙ. □ След, примета. ■ *[Байрамбикә] тирә-яғына ҡарай, .. күрәшеү билдәһе булған күлдәк йыртыҡтарын күрә.* Хикәйәттән.

**3.** Шартлы рәүештә бер мәғәнә менән алынған тамға. □ Знак. *Ҡушыу билдәһе. Математик билдә. Нота билдәләре. Өндәү билдәһе. Тигеҙлек билдәһе. Тыныш билдәләре. Һорау билдәһе.*

**4.** *Ниҙәлер* ҡылыҡһырлап күрһәткән һыҙат; ишарат; билге. □ Признак (*физическая или поведенческая особенность, присущая организму с рождения*), примета. *Кешелеклелек билдәһе. Шатлыҡ билдәһе.* ■ *Донъяға йөрәк һәм аҡыл менән бағыу — рухи күреү билдәһе.* М. Ғәли. *Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе, кеселәрҙе кеселәү — кешелеклелек билдәһе.* Ҡобайырҙан.

**5.** *миф.* Нимәлер тураһында алдан белгертеү билдәһе. □ Знак, особая отметка. ■ *Йөҙлөк — бәхет билдәһе, тиҙәр.* Ф. Хисамитдинова.

**6.** Хәбәр биреү, белдереү өсөн яһалған ишара. □ Знак. ■ *Теге яҡтан бер быҙлаған ут «аңлашылды» тигән билдә булған.* С. Кулибай.

**7.** *диал. ҡар.* **бакен.**

**8.** Уҡыусының белем кимәлен һәм тәртибен күрһәткән баһа. □ Отметка, оценка. *Яҡшы билдә алыу. «Биш» билдәһе ҡуйыу.*

**БИЛДӘК I (билдәге)** (Р.: метка; И.: label; Т.: beldek) *и. диал.*

Айырылып торған билдә, тамға. □ Отметина. ■ *Яҙғыһын малға билдәк һалалар. Малды таныр өсөн үҙ тамғаларын һалалар.* Экспедиция материалдарынан.

**БИЛДӘК II (билдәге)** (Р.: поперечные ремни шлеи; И.: endless belt; Т.: koçum takımı) *и. диал.*

Биллек. □ Поперечные ремни шлеи.

**БИЛДӘ ҠУЙЫУ (билдә ҡуй-)** (Р.: маркировка; И.: labeling; Т.: damgalamak) *ҡ.*

Тауарға билдә һалыу. □ Маркировка. *Тауарға билдә ҡуйыу.*

**БИЛДӘЛЕ I** (Р.: известный; И.: known; Т.: belirli) *с.*

**1.** *Ни* һәм *ниндәй* икәне мәғлүм, таныш; билгеле. □ Известный. *Билдәле сәбәп.*

**2.** Эше, хеҙмәте менән танылған. □ Известный, популярный. *Билдәле ғалим. Билдәле яҙыусы.* ■ *Сәсән — ул халыҡ шағиры һәм йырсыһы, фәлсәфәсеһе һәм уҡытыусыһы, ырыу-ҡәбилә, халыҡ тормошонда күренекле роль уйнаған йәмғәт эшмәкәре, үткәндәр хаҡында һөйләүсе тарихсы, йәмғиәттә ҙур абруй һәм ихтирам ҡаҙанған билдәле шәхес, аҡһаҡал.* С. Галин.

**3.** Ниндәй ҙә булһа үҙенсәлекле; тейешле, билдәле булғанса. □ Установленный, определённый. *Билдәле бер көн.*

**БИЛДӘЛЕ II** (Р.: очевидно; И.: evidently; Т.: belli) *инш.*

Эш-хәлдең бәхәсһеҙлеген, асыҡлығын белдергәндә әйтелә; билгеле. □ Очевидно, ясно. *Билдәле, бөгөн ул ҡайтмай.* ■ *Сәрби еңгәм генә .. бер аҙ ашарға тапҡан була. Өс кешегә уның тапҡаны ғына, билдәле, етмәй.* Д. Юлтый.

**БИЛДӘЛЕ III** (Р.: известно; И.: it is known; Т.: bilinen) *р.*

Мәғлүм. □ Известно. ■ *Билдәле булыуынса, ҡануниәт эш хаҡы түләүгә башҡа бөтә сығымдарға ҡарағанда ла ҙурыраҡ өҫтөнлөк бирә.* «Башҡортостан», 7 октябрь 2011.

**БИЛДӘЛЕЛЕК (билдәлелеге)** (Р.: известность; И.: fame; Т.: ün) *и.*

**1.** Дан, шөһрәт, танылыу; күренеклелек, атаҡлылыҡ. □ Известность, слава, популярность, знаменитость. *Билдәлелек яулай. Билдәлелек алыу.*

**2.** *лингв.* Билдәлелек (*категория*). □ Определённость. *Билдәлелек категорияһы.*

**БИЛДӘЛЕ ҺАН** (Р.: определённое число; И.: definite; Т.: belirli sayı) *и. мат.*

Бирелгән һан. □ Определённое число.

**БИЛДӘЛӘГЕС** (Р.: определитель; И.: determinant; Т.: belirten) *и.*

Билдәләүсе. □ Определитель.

**БИЛДӘЛӘМӘ** (Р.: определение; И.: definition; Т.: belirteç) *и.*

*Ниҙеңдер* йөкмәткеһен, асылын билдәләгән аңлатма. □ Определение, формулировка. *Билдәләмә биреү. Фәнни билдәләмә.*

**БИЛДӘЛӘНГӘН ХАҠ** (Р.: расценка; И.: rate; Т.: değer) *и.*

Тауарға ҡуйылған хаҡ. □ Расценка. *Эш башынан билдәләнгән хаҡ.*

**БИЛДӘЛӘНЕҮ (билдәлән-)** *ҡ. төш. ҡар.* **билдәләү.** *страд. от* **билдәләү**. *Билдәләнгән хаҡ.*

**БИЛДӘЛӘНЕШ I (билдәлән-)** (Р.: значение; И.: value; Т.: mana) *и.*

Мәғәнә, әһәмиәт; *ниҙеңдер* төп функцияһы, алдан билгеләп ҡуйылышы. □ Значение, назначение, функция. ■ *Шуныһы: республика халҡы, күрше төбәктәрҙә ятып уҡылған аҡһаҡал гәзитебеҙ ил кисергән төрлө ҡырҡыу сәйәси елдәргә лә бирешмәне, үҙ төҫөн, әхлаҡи йөҙөн, билдәләнешен һаҡлап ҡалды.* «Башҡортостан», 10 июнь 2010.

**БИЛДӘЛӘНЕШ II** (Р.: назначение; И.: destination; Т.: tayın) *и.*

*Нимәнелер, кемделер* билдәләп ҡуйыу, тәғәйенләү. □ Назначение. *Яңы эшкә билдәләнеш.*

**БИЛДӘЛӘТЕҮ (билдәләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **билдәләү.** *понуд.* от **билдәләү.** ■ *Беҙ йыйылышып, өй беренсә йөрөп, һәр бер йорттан үрткә ҡарыу тороу өсөн берәй ҡорамал билдәләттек.* Ғ. Дәүләтшин.

**БИЛДӘЛӘҮ (билдәлә-)** (Р.: ставить метку; И.: mark; Т.: belgilemek) *ҡ.*

**1.** Билдә ҡуйыу, билдә һалыу. □ Ставить метку, отмечать, помечать. *Ҡырҡылырға тейешле ағастарҙы билдәләп сығыу.*

**2.** *Ниндәйҙер* билдәгә ҡарап асыҡлау. □ Определять, установить. *Ваҡыт билдәләү.* ■ *Миңлеғәле, атыш йүнәлешенә ҡарап, беҙгә ут яуҙырған дзоттың амбразураһын билдәләне.* З. Рафиҡов.

**3.** Ниҙелер айырып телгә алыу, барлыҡ-юҡлығын айырып әйтеү. □ Отметить. *Әҫәрҙең ыңғай яҡтарын билдәләү.* ■ *Уҡытыусыларҙың үҙҙәре белем биргән уҡыусыларының бәләкәй генә уңыштарын да күреп, имтихан биреү өсөн генә түгел, белем өсөн уҡырға бурыслы икәнен төшөндөрөп, маҡсатҡа йүнәлтә белеүен дә айырым билдәләп үтергә кәрәк.* Ф. Күзбәков.

**4.** *Кем* йәки *ниҙер* хөрмәтенә тантана ойоштороу. □ Отмечать. *Танылған яҙыусының юбилейын билдәләү.*

**5.** Алдан уйлап тәғәйенләү, аныҡлау. □ Назначать, определять, устанавливать. *Никах көнөн билдәләү. Эш билдәләү. Хаҡ билдәләү.* ■ *Батша йүгереш урынын билдәләгән.* Әкиәттән.

**6.** Тәғәйенләп эшкә, урынға ҡуйыу; тәғәйенләү. □ Назначать, ставить *кого кем.* ■ *Ғиндулла Шириядан улы Шәйәхмәтов 1974 йылдың 26 октябрендә Ғафури районының Сәйетбаба ауылындағы Ж. Ғ. Кейекбаев музейы директоры итеп билдәләнә.* Ю. Үтәгәнов.

**7.** *миф.* Үҙенсәлекле махсус исем менән баланың бәхетен, ырыҫын билдәләү. □ Предопределять. ■ *Йөҙләкбай, Йөҙләкбикә тигән исемдәр менән әлек баланың бәхетле икәнен күрһәтеп билдәләп ҡуйғандар.* Т. Кусимова.

**БИЛДӘЛӘҮСЕ** (Р.: тот, кто определяет; И.: determinant; Т.: belirten) *и.*

**1.** Билдәләй торған кеше. □ Тот, кто определяет. ■ *Ҡасандыр Шәһит Хоҙайбирҙин етәкселегендәге башҡорт әҙәби теленең формаһын билдәләүсе төркөм интуитив рәүештә дөрөҫ юлда торған.* «Йәшлек», 2 сентябрь 2011.

**2.** *мат.* Билдәләүсе. □ Определитель.

**БИЛДӘЛӘШЕҮ (билдәләш-)** *ҡ. урт.* **билдәләү.** *взаимн. от* **билдәләү.**

**БИЛДӘМСӘ** (Р.: стёганка; И.: padded jacket; Т.: karitone ceket) *и. диал.*

Һырма күкрәксә. □ Стёганка. *Билдәмсәң ҡыҫҡараҡ булған икән.*

**БИЛДӘМӘ I** *и. диал. ҡар.* **билләмә 1.**

**БИЛДӘМӘ II** *и. диал. ҡар.* **билбау.** *Билдәмә быуыу.*

**БИЛДӘМӘ III** (Р.: средняя кольцеобразная часть сваренной картофелины; И.: part of the potatoes; Т.: patatesin orta kismi) *и. диал.*

Бешерелгән картуфтың арҡырыға ҡырҡып алынған урта өлөшө. □ Средняя

кольцеобразно нарезанная часть сваренной картофелины.

**БИЛДӘМӘ IV** (Р.: узоры на посуде; И.: patterns on the dishes; Т.: sofra takımı üzerindeki desen) *и. диал.*

Һауыт-һабаға төшерелгән биҙәк. □ Узоры на посуде.

**БИЛДӘН УРАТЫУ (билдән урат-)** (Р.: магический способ избавления от болезней; И.: magical way of getting rid of diseases; Т.: büyü ile iyileşmek usulü) *ҡ. миф.*

Ауырыуҙарҙан магик ҡотолоу ысулы. □ Магический способ избавления от болезней. *Кеше оҙаҡ ауырыһа, биленән уратып бирәйһенә яулыҡ бирергә кәрәк.*

**БИЛДӘҮ** *и. диал. ҡар.* **бил.**

**БИЛДӘ ҺАЛЫУ (билдә һал-)** *ҡ. ҡар.* **билдәләү 1.**

**БИЛДӘҺЕҘ I** (Р.: без метки; И.: tagless; Т.: damgasız) *с.*

**1.** Билдәһе, ине булмаған *(мал-тыуар хаҡында).* □ Без метки *(о скоте). Билдәһеҙ мал. Билдәһеҙ солоҡ.*

**2.** Таныш түгел; ят. □ Неизвестный, неведомый. *Билдәһеҙ кеше.* ■ *Эш барышында буталсыҡтар ҙа күп булды: ҡайһы ҡоштоң исеме бар – үҙе билдәһеҙ, йәки, киреһенсә, ҡоштоң үҙен күрһәтәһең – исемен белеүсе юҡ.* Э. Ишбирҙин.

**3.** Билдәле түгел, аныҡ түгел. □ Неопределённый, неизвестный. *Билдәһеҙ сәбәп. Билдәһеҙ осоусы объект.*

**4.** *мат.* Билдәле түгел. □ Неизвестный. *Билдәһеҙ быуын. Билдәһеҙ дәүмәл.*

**БИЛДӘҺЕҘ II** (Р.: неопределённо; И.: it is not known; Т.: belli değil) *р.*

Билдәле булмаған. □ Неопределённо, неизвестно. ■ *Хаттың ҡасан яҙылыуы билдәһеҙ.* Б. Бикбай. *Ҡалын урманды йырып ингән юл, бөгөл һайын осо төкөлөп бөткән һымаҡ булһа ла, уның осона сығыу билдәһеҙ.* Т. Хәйбуллин.

**БИЛДӘҺЕҘЛЕК (билдәһеҙлеге)** (Р.: неизвестность; И.: uncertainty; Т.: bilinmezlik) *и.*

**1.** Асыҡланмаған, билдәле булмаған хәл. □ Неизвестность, безызвестность, невыясненность. *Билдәһеҙлек борсой кешене.* ■ *Эйе, ауыр ине, алда өмөтлө-өмөтһеҙ билдәһеҙлек кенә йәшәй, әйләнә-тирәлә бөтәһе лә яңы, аңлайышһыҙ һымаҡ ине әле.* З. Биишева.

**2.** *лингв.* Фәнни терминологияла: нәмәләрҙең төрө йәки уртаҡ үҙенсәлеге билдәле булмағанлығын белдергән төшөнсә. □ Неопределённость. *Билдәһеҙлек категорияһы. Билдәһеҙлек алмашы.*

**БИЛДӘҺЕҘ ҺАН** (Р.: неизвестное число; И.: indeterminant; Т.: bilinmiyen) *и. мат.*

Эҙләгән һан. □ Неизвестное число. *Билдәһеҙ һанды табыу.*

**БИЛДӘШ** (Р.: с белой полоской шерсти на боку; И.: kind of animal colour; Т.: hayvanların bir rengi) *с.*

Билдән арҡыры аҡ һыҙатлы *(һыйыр, кәзәгә ҡарата).* □ С белой полоской шерсти на боку *(о масти коровы и козы). Билдәш кәзә. Билдәш һыйыр.* ■ *Туя ашаткас, билдәш һыйырыбыҙ ҙа һөттө етерлек бирҙе.* Н. Мусин. *Билдәш кәзә – биле ала, тауға сыҡһа, бүре ала.* Халыҡ йырынан.

**БИЛЕН АЛЫУ (билен ал-)** (Р.: вдруг сильно испугаться; И.: become frightened suddenly; Т.: ürkmek) *ҡ.*

Ҡапыл ҡурҡыу, өркөү. □ Вдруг сильно испугаться, испытать внезапный страх *(о животных).*

**БИЛЕНДӘК** [боронғо төрки *бәлиңдәк* 'ҡурҡып тотлоғоу ауырыуы'] (Р.: пугливый; И.: irksome; Т.: ürkek) *с. диал.*

Ҡурҡып тертләп бара торған, өркәк *(мал).* □ Пугливый. *Билендәк ат.*

**БИЛЕНДӘҮ (билендә-)** (Р.: колоть; И.: prick; Т.: sancımak) *ҡ. миф. диал.*

Сәнсеү. □ Колоть, болеть, ныть. ■ *Өс көн тәнем билендәп яттым.* Экспедиция материалдарынан.

**БИЛЕНЛӘТЕҮ (биленләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биленләү 1.** *понуд. от* **биленләү 1.** ■ *[Хәйрулла – Әнисәгә:] Нишләп шул тиклем ҡысҡыраһың? Һыйырҙарҙы биленләтәһең бит.* З. Хисмәтуллин.

**БИЛЕНЛӘҮ (биленлә-)** (Р.: вдруг сильно испугаться; И.: dash aside; Т.: ürkmek) *ҡ.*

**1.** Ҡапыл ҡурҡыу *(малға ҡарата);* өркөү. □ Вдруг сильно испугаться, шарахнуться *(о животных).* ■ *Урманды үтеп, Ҡотош эргәһендәге үйһыулыҡҡа төшкәс, Рәхмәйҙең аты биленләп, юлдың әле уң яғына, әле һул яғына сыҡты.* Т. Килмөхәмәтов. *Ә күгәле ҡуҡҡа осоп китә лә баш осонда биленләп йөрөй башлай.* Риүәйәттән.

**2.** Ҡапыл ҡурҡып ҡысҡырыу *(кешегә ҡарата).* □ Вскрикнуть от внезапного сильного испуга *(о человеке).* ■ *Шул ваҡыт юғарынан Күсәрбайҙың елкәһенә ҡайҙандыр бер аҙ тупраҡ менән бик бәләкәй генә таш киҫәге төштө. Ләкин уға ла биленләмәне, һаман да үй өҫтөндә булды.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *диал. ҡар.* **өҙләгөү.**

**БИЛЕНСЕЛ** *с. диал. ҡар.* **ҡурҡаҡ.**

**БИЛЕТ** [рус. < фр. *billet*] (Р.: билет; И.: ticket; Т.: bilet) *и.*

**1.** Нимәнәндер файҙаланыу хоҡуғы өсөн түләп алған документ. □ Билет (*документ, удостоверяющий право пользования чем-н. за плату*). *Билет кассаһы. Кино билеты. Поезд билеты. Трамвай билеты.* ■ *«Мосфильм» киностудияһы режиссёры Василий Никитич Журавлёв башҡорт легендалары нигеҙендә һәм башлыса башҡорт артистары ҡатнашлығында төшөргән «Алтын атлы һыбайлы» исемле кинофильмы иң күп билет һатылған фильмдар исемлегендә булды.* И. Бураҡаев, М. Бураҡаева, М. Юлмөхәмәтов.

**2.** Берәй ойошмала, партияла ағзалыҡты, вазифаға мөнәсәбәтлекте күрһәткән документ. □ Билет *(документ, удостоверяющий принадлежность к какой-н. организации, партии, отношение к каким-н. обязанностям). Комсомол билеты. Партия билеты. Профсоюз билеты. Студент билеты. Хәрби билет.* ■ *Хисбулланың уң күҙе күрәгарау булыу арҡаһында аҡ билетлы булып, һуғышҡа китмәй ҡалды.* З. Биишева.

**3.** Имтихандағы һорауҙар яҙылған ҡағыҙ. □ Экзаменационный билет. *Билеттағы һорауҙарға яуап биреү. Билет тартыу.*

**БИЛЕТ ТИКШЕРЕҮСЕ** (Р.: билетёр; И.: usher; Т.: biletçi) *и.*

Билетты ҡарап индереүсе; контролёр. □ Билетёр, контролёр. *Билет тикшереүсе булып эшкә урынлашыу.*

**БИЛИНГВИЗМ** [рус. < лат. *bi* ‘ике’ + *lingua* ‘тел’] *и. линг. ҡар.* **ике теллелек.**

**БИЛИНГВИСТИК** (Р.: билингвистический; И.: bilingual; Т.: iki dilli) *с. линг.*

Ике телле. □ Билингвистический. *Билингвистик текст.*

**БИЛИТТИФАҠ** [ғәр. بالاتفاق] (Р.: вместе; И.: together; Т.: beraber) *р.*

Ойошҡан рәүештә, берлектә. □ Вместе, совместно. *Билиттифаҡ эшләү.*

**БИЛКӘ** *и. диал. ҡар.* **билән I.**

**БИЛЛЕК (биллеге)** (Р.: пояс; И.: gurdle; Т.: bel) *и.*

**1.** Билде быуа торған бау, ҡайыш. □ Пояс, ремень. *Күлдәк биллеге. Плащ биллеге.*

**2.** Өҫ кейеменең биленә арттан тар ғына итеп ҡуйылған туҡыма киҫәге. □ Хлястик. *Пальтоның биллеге.*

**3.** Ышлыяның бил тәңгәленән һыртлығы менән буйлығын тоташтырып торған ҡайышы. □ Поперечник, поперечный ремень (*у шлеи*).

**4.** *диал. ҡар.* **күкрәк.** *Кәбән биллеге.*

**5.** *этн.* Тирмәнең уртаһын тарттыра торған йыуан бау. □ Толстая верёвка для перетягивания средней части юрты.

**БИЛЛЕ ТУН** (Р.: шуба, сшитая в талию; И.: kind of furcoat; Т.: manto türü) *и.*

Биле нәҙек итеп тегелгән тун. □ Шуба, сшитая в талию.

♦ **Һигеҙ билле тун (бишмәт)** оҫта тегелмәгән тун. □ Неумело сшитый бешмет. *досл.* Бешмет в восемь талий.

**БИЛЛИНГ** [рус. < ингл. *billing*] (Р.: биллинг; И.: billing; Т.: fatura) *и.*

Хеҙмәтләндереү өлкәһендәге хаҡтарҙы билдәләү процесы. □ Биллинг. *Биллинг системаһы. Биллинг үҙәге.*

**БИЛЛЬ** [рус. < ингл. *bill* < лат. *libellus*] (Р.: законопроект; И.: bill; Т.: tasarı) *и.*

Англо-саксон илдәрендә закон сығарыусы органдың ҡарауына тапшырылған закон проекты. □ Билль, законопроект. *Хоҡуҡтар тураһындағы билль.*

**БИЛЛЬ-БРОКЕР** [рус. < ингл. *bill* + *broker*] (Р.: билль-брокер; И.: bill-broker; Т.: simsar) *и. икт.*

Ҡиммәтле ҡағыҙҙар һатыу-алыу эше менән шөғөлләнеүсе брокер. □ Билль-брокер, вексельный брокер. *Билль-брокер булып эшләү.*

**БИЛЛӘМӘ** (Р.: филе; И.: filet; Т.: fileto) *и.*

**1.** Түшкәнең янбаш менән ҡабырға араһынан билдән аша ҡырҡып алынған өлөшө. □ Филе (*мясо средней части хребта туши*). ■ *[Ғәзелбаныу:] Һай, Кинйәбикә, әллә һин билләмәне ҡаҙанға сумырып та өлгөрҙөңмө? Беләһең бит инде Биктимер ҡартты. Билләмәне кешегә бирмәйҙәр, ти. Нишләйем икән, билләмәне алып ҡайтырға ҡушты.* И. Нурғәлиев.

**2.** *диал. ҡар.* **биллек 3.**

**БИЛЛӘС** (Р.: вогнутый; И.: concave; Т.: içbükey) *с. диал.*

Бөгөлөп торған. □ Вогнутый. *Ҙур көҙгөнөң уртаһы билләс булып тора.*

**БИЛЛӘҺИ** [ғәр. بالله] (Р.: ей-богу; И.: by Jove; Т.: billahi) *ымл.*

*Ниҙеңдер* дөрөҫлөгөнә ышандырыр өсөн ант итеп әйтелә. □ Ей-богу! Клянусь Аллахом! ■ *Билләһи! Хәҙер инде был сер минеке генә түгел, Оло инәйем менән икебеҙҙеке генә.* М. Кәрим.

**БИЛЛӘШЕҮ (билләш-)** (Р.: бороться, схватив друг друга за пояс; И.: wrestle; Т.: güreşmek) *ҡ.*

Билдән алышыу, билдән тотоп көрәшеү. □ Бороться, схватив друг друга за пояс. ■ *Майҙанда Хөсәйен ҡалғайны, уның менән көрәшергә Мәғәфүр сыҡты. Улар бик ҡыҙыу билләшә башланы.* Ж. Кейекбаев.

**БИЛМАУ** *и. диал. ҡар.* **билғау.**

**БИЛМӘН** [фин-уғыр *пельмень*] (Р.: пельмени; И.: dumpling; Т.: pelmeni) *и.*

Үткәрелгән иткә тәмләткестәр һалып, сөсө ҡамырға бөгөп, һыуҙа бешерелгән аш. □ Пельмени. *Билмән яһау. Билмән бешереү.* ■ *Хәҙер ул [Марат] һатыусы янына барып йөрөмәне, ҡулын болғап ҡына саҡырып, билмән килтерергә ҡушты.* М. Ильясов.

**БИЛ МЕЙЕҺЕ** (Р.: спинной мозг; И.: spinal cord; Т.: omurilik) *и. диал.*

Арҡа мейеһе. □ Спинной мозг.

**БИЛ СИСЕҮ (бил сис-)** (Р.: ритуал развязывания младшими золовками пояса невесты в доме жениха; И.: sort of ethnographic rite; T.: düğün töreni) *ҡ. этн.*

Килен төшкәс тә уның билбауын ҡәйенһеңлеләре сисеп алыу йолаһы. □ Ритуал развязывания младшими золовками пояса невесты в доме жениха.

**БИЛСӘ** *и. диал. ҡар.* **бөйөрсә.**

**БИЛСӘЙЕҮ (билсәй-)** *ҡ. ҡар.* **бирсәйеү.**

**БИЛСӘН** [алтай телдәре] (Р.: осот; И.: pastor's lettuce; Т.: deve dikeni) *и. бот.*

**1.** Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк япраҡлы ҡый үләне. □ Осот (лат. *Sonchus*). ■ *Билсән генә ҡулдарҙы һыҙырып яфалай.*

**2.** *диал.* Бөргәк. □ Липучка.

**3.** *диал.* Дегәнәк. □ Репейник.

**4.** *диал.* Мунсала япрағы. □ Веник.

**5.** *миф.* Ен ояланған үлән; шайтан таяғы. □ Чертополох *(мифологизированное растение, связанное с нечистой силой).*

**БИЛСӘНЛЕК (билсәнлеге)** (Р.: поле, поросшее осотом; И.: field grown with pastor's lettuce; Т.: deve dikeni alanı) *и.*

Билсән үҫкән урын. □ Поле, поросшее осотом.

**БИЛТЕР** [дөйөм төрки *бәлтир* < *бил*] (Р.: свод стопы; И.: instep; Т.: ağım) *и.*

**1.** Аяҡтың йөҙлөк тәңгәленән аҫҡы нәҙегерәк өлөшө. □ Свод стопы. *Билтер ауыртып тора.*

**2.** Аяҡ кейеменең шул тәңгәлдәге өлөшө. □ Подъём у обуви. *Бейек билтерле аяҡ кейеме.* ■ *[Әсәһе — Ирнатка:] Аяҡ кейемеңдә бер размерға олораҡты һора. Башта кейеп ҡара: билтере ҡыҫмаһын.* Ш. Биҡҡол.

**3.** *диал. ҡар.* **билән I.** ■ *Бейек кенә тауҙың билтеренә ҡарҙы ғына бурап килтерҙе.* Халыҡ йырынан.

**БИЛТЕР БАШЫ** (Р.: носок обуви; И.: toe; Т.: ayakkabının ucu) *и.*

Аяҡ кейеменең билтеренән алып мороно-на тиклемге өлөшө. □ Носок обуви. ■ *Зөһрә*

*теккән ҡара итек билтер башын тар итеп.* Халыҡ йырынан.

**БИЛТӘК** (Р.: тонкий; И.: thin; Т.: ince) *с.*

Әйләнәһе быуған һымаҡ нәҙек билгә ҡарата. □ Перехват *(суженное место вокруг чего-л.)*; тонкий (*о талии*). *Биле билтәк.* ■ *Билтәк билен ҡыҫып быуған икән, үҙе бик уңған икән. Әллә ҡайҙан күренеп тора, һалдатта булған икән.* Халыҡ йырынан.

**БИЛХАҠ** [ғәр. بالحق] (Р.: действительно; И.: really; Т.: gerçekten) *р.*

Ысынлап та. □ На самом деле, действительно. *Билхаҡ, ул килгән икән.*

**БИЛҺЕҘ** (Р.: без талии; И.: waistless; Т.: beli geniş) *с.*

**1.** Кейемдең бил тәңгәлендәге өлөшө киң, иркен тегелгән. □ Без талии, свободный в талии. *Билһеҙ бишмәт.*

**2.** Биртенгән билле. □ Страдающий поясничной болью *(радикулитом)*. *Билһеҙ ҡалыу.* ■ *Быңдағы һуңғы яу ваҡытында мин билһеҙ яттым.* Б. Рафиҡов.

**БИЛЬБОКЕ** [рус. < фр. *bilboquet*] (Р.: бильбок; И.: cup and ball; Т.: hacıyatmaz) *и.*

Таяҡсаға бәләкәй шар беркетелгән уйынсыҡ. □ Бильбоке.

**БИЛЬЯРД** [рус. < фр. *billard*] (Р.: бильярд; И.: billiards; Т.: bilardo) *и.*

Өҫтәл уйыны. □ Бильярд. *Бильярд бүлмәһе. Бильярд шары. Бильярд уйнау.* ■ *[Егеттәр] домино һуғалар, бильярд төртәләр, туйғансы тәмәке төтәтәләр ҙә таралышалар.* Р. Солтангәрәев.

**БИЛӘМ I** (Р.: участок земли, обрабатываемый до следующей передышки; И.: allotment; Т.: aralık) *и.*

**1.** Эшләгәндә биләп алырлыҡ бер буй ер. □ Участок земли, обрабатываемый до следующей передышки. ■ *Ана, дуҫтар ҡалмай минең арттан, кәмей бара биләм араһы.* С. Әлибаев.

**2.** *иҫк.* Буйы ҡырҡ, иңе туғыҙ сажинлы ер. □ Участок земли площадью сорок девять саженей. ■ *Йәш, йылғыр өйөр башы яйлыраҡ яңы биләмдәр, туплаумдар, һыулауҙар тапҡан.* Ғ. Хөсәйенов.

**БИЛӘМ II** (Р.: промежуток времени от одной передышки до другой; И.: interspace; Т.: bir süre) *и. диал.*

Бер тына. □ Промежуток времени от одной передышки до другой. ■ *Бер биләм эшләгәс, малайҙар көндөҙгө аш ашау өсөн ауылға ҡайтып киттеләр.* Р. Сабитов.

**БИЛӘМ III** (Р.: спицы чулочные; И.: knitting needles; Т.: örgü şişleri) *и. диал.*

Ойоҡ энәһе. □ Спицы чулочные. *Биләм һатып алыу.*

**БИЛӘМ IV** (Р.: развлечения; И.: entertainment; Т.: eğlence) *и. диал.*

Уйын-көлкө. □ Развлечения. *Көн дә биләм булмай.*

**БИЛӘМ V** *и. ҡар.* **биләмә.**

**БИЛӘМ VI** (Р.: пчелиный рой; И.: swarm; Т.: oğul) *и. диал.*

Бал ҡорто күсе. □ Пчелиный рой.

**БИЛӘМ VII** (Р.: месторасположение деревни; И.: location of the village; Т.: köy yeri) *и. диал.*

Ауыл ултырған урын. □ Место расположения деревни.

**БИЛӘМ VIII** (Р.: склон горы; И.: hillside; Т.: yamaç) *и. диал.*

Тау итәге. □ Склон горы.

**БИЛӘМДӘ ЙӨРӨҮ (биләмдә йөрө-)** (Р.: пустое времяпрепровождение; И.: futile pastime; Т.: vakti boş geçirmek) *ҡ. һөйл.*

Өйҙән өйгә кереп, бер эшһеҙ, ваҡытты бушҡа уҙғарып йөрөү, һөйләшеп ултырыу. □ Пустое времяпрепровождение (*праздно шататься по чужим домам*). *Ауылда эш булмағанлыҡтан, биләмдә йөроүсе ҡатын-ҡыҙҙар күбәйеп китте.*

**БИЛӘМЕС** (Р.: свивальник; И.: swaddling bands; Т.: bağıldak) *и. диал.*

Биләүес. □ Свивальник.

**БИЛӘМЛӘҮ (биләмлә-)** (Р.: занимать участок, делянку; И.: occupy a lot; Т.: yer tutmak) *ҡ.*

Сиктәрен билдәләп, урын, ер биләү. □ Занимать участок, делянку. *Ер биләмләү.*

**БИЛӘМСЕ I** (Р.: человек, любящий много ходить по деревне; И.: good for nothing person; Т.: aylak) *и. диал.*

Ауылсы. □ Человек, любящий много ходить по деревне; бездельник. ■ *[Өммиә:] Ҡайттыңмы, һылыу биләмсе?* Ғ. Әхмәтшин. ● *Биләмсе ҡатын өйөнә еткәс йүгерә.* Әйтем.

**БИЛӘМСЕ II** (Р.: пчелиный рой, подыскивающий новое гнездо; И.: kind of swarm; Т.: oğul) *и. диал.*

Яңы оя эҙләүсе ҡорт күсе. □ Пчелиный рой, подыскивающий новое гнездо.

**БИЛӘМӘ** (Р.: владение; И.: estate; Т.: yerleşim) *и.*

*Кем* йәки *нимәр* биләп торған ер; биләм. Ауыл ултырған урын. □ Владение, поселение. *Ауыл биләмәһе.* ■ *Ауыл биләмәләренә, ҡурсаулыҡтарға, умарталыҡтарға һ. б. шундай йәшәү өсөн мөһим урындарға яҡын ерҙәрҙә ағыулы химикаттар ҡулланыуҙы туҡтатырға.* В. Ғүмәров. *Шул арала солоҡ янына урманда биләмәһен ҡарап йөрөгән бер кеше килеп сыҡҡан.* Ж. Кейекбаев.

**БИЛӘН I** (Р.: седловина; И.: saddle; Т.: bel) *и. геогр.*

Ике тау араһындағы тәпәшәгерәк ер. □ Седловина. *Тау биләне.* ■ *Ҡуштауҙың Стәрлегә ҡараған яғында Хажы биләне тип исемләнгән матур урыны бар.* Я. Ҡолмой. *Тәпәшәк кенә билән, әй, ҡалҡыу ер, туғайына төшһәң, һалҡын ел.* Б. Вәлид.

**БИЛӘН II** (Р.: с тонкой талией; И.: narrow waisted; Т.: ince belli) *с.*

Нәҙек билле, биле нәҙек. □ С тонкой талией.

**БИЛӘН III** *и. диал. кар.* **бирән.**

**БИЛӘН БУЛЫУ (билән бул-)** (Р.: надломить поясницу; И.: harm one's waist; Т.: bel fıtığı) *ҡ.*

Биртенеү; бил тайыу. □ Надломить поясницу.

**БИЛӘНЕҮ I (билән-)** *ҡ. төш.* **биләү I.** *страд. от* **биләү I.** *Биләнгән ерҙәр.* ■ *Инде матур ерҙәр .. бай тарафынан биләнгән.* Т. Хәйбуллин.

**БИЛӘНЕҮ II (билән-)** *ҡ. төш.* **биләү II.** *страд. от* **биләү II.** *Биләнгән бала. Сабый бала ҡат-ҡат биләнгән.* ■ *Берҙән-бер көндө хандың йылҡы көтөүселәре кеше аяғы баҫмаған ҡола далала биләүгә биләнгән бер ир бала табып алып ҡайта.* Әкиәттән.

**БИЛӘНКЕ I** (Р.: страдающий поясничной болью; И.: suffering from radiculitis; Т.: bel ağrısı) *с.*

Биртенгән билле; билһеҙ. □ Страдающий поясничной болью (*радикулитом*). *Биләнке бил.*

**БИЛӘНКЕ II** *и. диал. кар.* **аҡ бәшмәк.**

**БИЛӘНКЕ БУЛЫУ (биләнке бул-)** (Р.: осложнение после родов; И.: complication; Т.: komplikasyon) *ҡ. диал.*

**1.** Бала тапҡан ҡатындың өҙлөгөүе. □ Осложнение после родов.

**2.** Өҙлөгөү (*билһеҙ булып ауырығандан һуң, терелеп етмәҫтән яңынан ауырып китеү*). □ Заболеть повторно, не поправившись после первой болезни.

**БИЛӘННӘҮ (биләннә-)** *ҡ. диал. кар.* **биленләү.**

**БИЛӘҢКЕ I** (Р.: белянка; И.: kind of mushroom; Т.: mantar türü) *и. диал.*

**1.** Аҡ бәшмәк. □ Белянка (*гриб,* лат. *Lactarius pubescens*). *Биләңке йыйыу.*

**2.** Ҡыҙыл төҫтәге кәпәсбаш бәшмәк. □ Груздь красный (лат. *Lactarius volemus*). *Биләңке бәлеше.*

**БИЛӘҢКЕ II** (Р.: человек, страдающий недержанием мочи; И.: person suffering from enuresis; Т.: idrarını tutamayan kimse) *и. диал.*

**1.** Бәүелен тота алмай ауырыған кеше (*һыҡра*). □ Человек, страдающий недержанием мочи. ■ *Биләңке менән ауырығас, уны һалдатҡа алманылар.* Экспедиция материалдарынан.

**2.** *миф.* Һейҙек ҡыуығы ауырыуы эйәһе. □ Дух болезни мочевого пузыря.

**БИЛӘТЕҮ (биләт-)** *ҡ. йөкм. кар.* **биләү.** *понуд. от* **биләү.** ■ *Һин ямманды тыуҙырып, ҡалҡай ҡамҡа түшәттем, ҡалҡай ҡамҡа ҡапы тип, ҡара кишкә биләттем.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**БИЛӘҮ I (билә-)** [дөйөм ҡыпсаҡ *бийлә-* 'биләү'] (Р.: владеть *чем;* И.: own; Т.: sahip olmak) *ҡ.*

**1.** *Ниҙелер* үҙ милкендә, үҙ ҡарамағында тотоу. □ Владеть *чем*, занимать, завладеть. *Ер биләү. Өс бүлмәле фатир биләү.*

**2.** *күсм.* Кешенең уй, күңелен үҙенә йәлеп итеү. □ Завладеть *чьим-то* сердцем. *Күңелде биләү.* ■ *Оҙон буйлы, бүректәй күтәрелеп торған сөм ҡара сәсле, һыҙылып торған ҡара мыйыҡлы был йәш офицер бик тиҙ арала Даниәнең күңелен, йөрәген биләп алды.* Ф. Мырҙаҡаев.

**3.** *Күпмелер* майҙанды үҙ эсенә алыу. *Күпмелер* урынды солғап алыу. □ Владение, обладание определённой площадью. *Быуа ҙур майҙанды биләй.* ■ *Улар айырым өҫтәл биләп ултырҙы.* Д. Исламов.

**БИЛӘҮ II (билә-)** (Р.: запеленать; И.: swaddle; Т.: belemek) *ҡ.*

Йәш баланы йүргәккә урап бәйләү. □ Запеленать, спеленать *(ребёнка).* ■ *[Мүйылбикә] Мәғфүрә менән икәүләп баланы йыуындырып, .. биләп һалдылар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ҡул биләү** *ҡар.* **ҡул I.**

**БИЛӘҮ III** (Р.: пелёнка и свивальник; И.: diaper; Т.: kundak bezi) *и.*

**1.** Йәш баланы ураған йүргәк менән биләүес. □ Пелёнка и свивальник. *Баланы биләүгә төрөү.* ■ *Сафия баланы биләүенән ысҡындырып, вагон һикеһенә һалды.* Т. Ғиниәтуллин. ● *Булыр бала биләүҙән.* Мәҡәл.

**БИЛӘҮЕС** (Р.: свивальник; И.: swaddling bands; Т.: bağıldak) *и. диал.*

Йәш баланы, аяҡ-ҡулын йыйып, йүргәк тышынан бәйләй торған оҙон сепрәк. □ Свивальник. *Баланы биләүес менән бәйләү.*

**БИЛӘҮСЕ** (Р.: владелец; И.: owner; Т.: sahip) *и.*

*Кемгә* йәки *нимәгәлер* эйә булған кеше. □ Владелец. *Ер биләүсе.* ■ *Әгәр ҙә мин үҙ-үҙемде тыймаһам, күңелемде көндән-көн нығыраҡ биләүсе тойғоно йүгәнләмәһәм, ғәфү итмәҫлек хата ҡылған булыр инем.* Ә. Хәкимов. *Ер биләүсе менән ер боҙоусының бер ваҡытта ла дуҫ булыуы мөмкин түгел.* Р. Солтангәрәев.

**БИЛӘҮСӘ** *и. диал. ҡар.* **биләүес.** ■ *Әсәй һалған биләүсәне сисеп, тыуған ергә төшкәс бишектән, атай ырған түпһаны кисеп, һин сығаһың икән ишектән.* С. Ҡудаш.

**БИЛӘШЕҮ (биләш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **биләү.** *взаимн. от* **биләү.**

**БИМА** *и. диал. ҡар.* **быйма.**

**БИМАЗА** [фарс. < ғәр. بي مزه] (Р.: беспокойство; И.: uneasiness; Т.: endişe) *и.*

Тынғыһыҙлаған, ҡамасаулаған нәмә; мәшәҡәт, ҡамасау. □ Беспокойство. *Бимаза яһау.* ■ *Ҡайһы яманы шулай бимаза яһап йөрөй икән?* Ш. Насыров. *Өйҙә бимазаһын бөтөргәс тә халыҡ салғы, ураҡ ҡулға* алды. Ғ. Амантай.

**БИМАЗАЛАУ (бимазала-)** (Р.: беспокоить *кого,* надоедать *кому;* И.: bother; Т.: endişelendirmek) *ҡ.*

Тынғы бирмәй ҡамасаулау; маҙаһыҙлау, мәшәҡәтләү, борсоу. □ Беспокоить *кого,* надоедать *кому.* ■ *Йөрөйһөң бимазалап! Иртәгә килһәң, булмаймы?* Х. Мохтар. *Йөрөмәсе янымда, йәнемде бимазалап. Минән ары ос әле, сәскәләрҙе ҡос әле.* Ф. Ғөбәйҙуллина.

**БИМАЛ** [фарс.-ғәр. بي مال] (Р.: бедный; И.: poor; Т.: yoksul) *с.*

Аҡсаһыҙ, малһыҙ; ярлы. □ Бедный, несостоятельный. *Бимал ир.*

**БИН** *и. ҡар.* **бине.**

**БИНА** [ғәр. بناء] (Р.: здание; И.: building; Т.: bina) *и.*

*Ниндәйҙер* йәмәғәт ойошмаһы һ. б. урынлашҡан ҙур йорт, архитектура ҡоролмаһы. □ Здание, помещение. *Китапхана бинаһы. Мәктәп бинаһы. Клуб бинаһы.* ■ *Ауылды танырлыҡ та түгел. Мөһабәт клуб, арыраҡ дауахана, яңы мәктәп бинаһары үҫеп сыҡҡан.* Ф. Сәлимова.

**БИНА ҠЫЛЫУ (бина ҡыл-)** [боронғо төрки *бина ҡыл* 'нигеҙләү'] (Р.: строить; И.: build; Т.: bina etmek) *ҡ. иҫк.*

Ҡороу, төҙөү. □ Строить. ■ *Башҡорт ерҙәренә ҡалалар бина ҡылына башланы.* М. Һаҙыев.

**БИНАР** [рус. < лат. *binarius*] (Р.: бинарный; И.: binary; Т.: ikili) *с.*

Икәүле, ике өлөштән, компоненттан торған. □ Бинарный. *Бинар код. Бинар файл. Бинар номенклатура.*

**БИНАХАҠ** [фарс.< ғәр. بی نا حق] (Р.: несправедливо; И.: unjustly; Т.: haksıza) *р. һөйл.*

Ғәйепһеҙгә, хаҡһыҙға. □ Безвинно, несправедливо. *Бинахаҡтан әрләү.* ■ *[Юрик:] Бинахаҡҡа рәнйетмәгеҙ кешене. Ғәйеп миндә, Айрат Фазылович.* М. Рамазанов. *Бинахаҡтан Себер ебәрәләр арыҫлан егеттәрҙең баштарын.* З. Биишева.

**БИНАХАҠҠА** *р. ҡар.* **бинахаҡ.**

**БИНАӘН** [ғәр. بناء] (Р.: соответственно *чему*, в соответствии *с чем*; И.: correspondingly; Т.: uygun olarak) *р. иҫк. кит.*

Нигеҙендә, нигеҙләнеп, ярашлы рәүештә. □ Соответственно *чему*, в соответствии с *чем*. ■ *[Сәхипгәрәй — Кәлигә:] Хәл-ваҡиғаларға бинаән тактиканы үҙгәртә белергә кәрәк.* И. Ғиззәтуллин.

**БИНГО** [рус. < ингл. *bingo*] (Р.: бинго; И.: bingo; Т.: bingo oyunu) *и.*

Осраҡлы рәнештә сыҡҡан һандарҙы беренсе булып карточкаға тултырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған отош уйыны, лотерея төрө. □ Бинго. *Бинго уйнау.*

**БИНЕ** [ғәр. ابن ؛بن] (Р.: чей-то сын; И.: someone's son; Т.: oğlu) *и. иҫк. кит.*

'Кемдеңдер улы' мәғәнәһендә кеше исеменә ҡушыла; ибне. □ В знач. 'чей-то сын'. ■ *Ә һүрәттең аҫтына ошондай ғына яҙыу яҙылған: «Аты — Бәҙиғольямал бине Шаһбал, мәкамы — Ирәм бағы», йәғни «Был ҡыҙҙың исеме — Бәҙиғольямал, атаһы — Шаһбал батша, ә йәшәгән ере — Ирәм бағы тигән ҡала», — тип яҙылған. Башҡа бер һүҙ ҙә юк.* «Сәйфелмөлөк».

**БИНЗӘҮ (бинзә-)** [төрк.] (Р.: быть похожим; И.: be alike; Т.: benzemek) *ҡ. иҫк. кит.*

Оҡшаш булыу, оҡшау. □ Быть похожим. ■ *[Ендәр — Иблискә:] Төҫкә, биткә беҙгә байтаҡ бинзәйһең, әллә юкһа, юлдан яҙған енмеһең?* Ш. Бабич.

**БИНИҺАЯ** [фарс.< ғәр. بی نهایة 'сикһеҙ'] (Р.: чересчур; И.: exceedingly; Т.: aşırı) *р. иҫк. кит.*

Уғата (*бик күп, иҫәпһеҙ, хисапһыҙ*). □ Чересчур (*бесконечный, беспредельный, безграничный*). *Биниһая күп халыҡ.*

**БИННИСБӘ** [ғәр. بالنسبه] (Р.: сравнительно; И.: relatively; Т.: nispeten) *р. иҫк. кит.*

Сағыштырмаса, сағыштырғанда. □ Сравнительно, относительно. *Биннисбә уңышлы үтте.*

**БИННӘТИЖӘ** [ғәр. بالنتيجه] (Р.: в результате; И.: as a result; Т.: sonuçta) *р. иҫк. кит.*

Һөҙөмтәлә, һөҙөмтәһендә. □ В результате.

**БИНОКЛЬ** [рус.< фр. *binocle* < лат. *bini* 'ике' + *oculus* 'күҙ'] (Р.: бинокль; И.: binoculars; Т.: dürbün) *и.*

Алыҫтағын яҡынайтып күрһәтә торған ике параллель торбалы оптик прибор. □ Бинокль. *Театр биноклe. Хәрби бинокль. Биноклдән ҡарау.* ■ *Ситән төбөнә ятып, дошманың бинокль аша тикшерә торған Вәғизов, Бикбайҙы күреү менән, урынынан ырғып торҙо.* И. Насыри.

**БИНОКУЛЯР КҮРЕҮ** [рус. < фр. *binoculaire* < *bini* 'ике' + *oculus* 'күҙ'] (Р.: бинокулярное зрение; И.: binocular vision; Т.: binöküler görme) *и.*

Ике күҙҙең дә берҙәй күреүе. □ Бинокулярное зрение.

**БИНОКУЛЯР МИКРОСКОП (микроскобы)** (Р.: бинокулярный микроскоп; И.: binocular microscope; Т.: binoküler mikroskop) *и.*

Ике окулярлы микроскоп. □ Микроскоп бинокулярный. *Бинокуляр микроскоп аша ҡарау.*

**БИНОМ** [рус. < лат. < гр. *bini* 'ике' +*nome* 'өлөш'] (Р.: бином; И.: binome; Т.: ikiterimli) *и. мат.*

Ике бербыуындың суммаһы йәки айырмаһы булып торған алгебраик аңлатма. □ Бином *(алгебраическое выражение). Ньютон биномы.*

**БИНТ** [рус. < нем. *Binte*] (Р.: бинт; И.: bandage; Т.: sargı bezi) *и.*

Ауыртҡан, яраланған ерҙе бәйләй торған марля; бәйләүес. □ Бинт. ■ *Ҡыҙҙар бәләкәй сумкаларынан тиҙ генә бинт алып, егеттең уң беләгендәге яраһын бәйләнеләр.* М. Ильясов.

**БИНТЛАУ (бинтла-)** (Р.: бинтовать; И.: bandage; Т.: sargı örtmek) *к.*

Бинт менән бәйләү. □ Бинтовать, забинтовать. *Яраны бинтлау.*

**БИО-** [рус. < гр. *bios* 'тереклек, тормош'] (Р.: первая часть сложных слов; И.: bio-; Т.: biyo-)

Ҡушма һүҙҙәрҙең 'тормошҡа ҡараған', 'биология' мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө. □ Первая часть сложных слов, терминов различных наук, обозначающая отношение к органической жизни, к биологии. *Биофизика. Биомеханика. Биоритм.*

**БИОГЕНЕТИК ЗАКОН** (Р.: закон биогенетический; И.: biogenetic law; Т.: türlerin oluşumu yasası) *и.*

Организмдың онтогенез осоронда филогенез этаптарын ҡыҫҡартылған йәки үҙгәртелгән килеш ҡабатлауы. □ Биогенетический закон.

**БИОГЕНЛЫҠ (биогенлығы)** (Р.: биогенность; И.: biogenesis; Т.: toprağin mikroorganismalar açisindan zengin olma durumu) *и.*

Тупраҡтың микроорганизмдарға бай булыуы. □ Биогенность.

**БИОГЕОГРАФИЯ** [рус. < гр.] (Р.: биогеография; И.: biogeography; Т.: biyocoğrafya) *и.*

Ер шарының айырым төбәктәренең үҫемлектәрен һәм хайуандарын өйрәнеүсе фән. □ Биогеография. *Биогеография менән ҡыҙыҡһыныу.*

**БИОГЕОХИМИЯ** [рус. < гр.] (Р.: биогеохимия; И.: biochemistry; Т.: biyojeokimya) *и.*

Тере организмдарҙың химик составын һәм тау тоҡомдарының, минералдарҙың емерелеүен, ер йөҙөндә таралыуын бергә бәйләп өйрәнеүсе фән. □ Биогеохимия.

**БИОГРАФ** [рус.] (Р.: биограф; И.: biograph; Т.: biyografi yazari) *и.*

Кемдеңдер биографияһын төҙөүсе. □ Составитель биографии. *А. С. Пушкиндың биографы.* ■ *Килене – йырсының тәүге биографы ла: Мәғәфүр ағайҙың тапҡыр һүҙҙәрен, таҡмаҡтарын, хәтирәләрен даими теркәп барыу уның ғәҙәтенә әйләнгәйне.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**БИОГРАФИК** (Р.: биографический; И.: biographic; Т.: bioyografik) *с.*

Биографияға мөнәсәбәтле. □ Биографический. *Биографик әҫәр.*

**БИОГРАФИЯ** [рус. < гр. *bios* 'тормош' + *grapho* 'һүрәтләйем'] (Р.: биография; И.: biography; Т.: yaşam öyküsü) *и.*

*Кемдеңдер* тормош юлын һүрәтләгән яҙма. □ Биография. *Яҙыусының биографияһы. Биографияны һөйләү.* ■ *Светлана Кинйәбай ҡыҙының биографияһы уҡыу йортоноң ярты быуатлыҡ тарихынан айырылғыһыҙ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010.

**БИОИНДИКАТОР** [рус. < гр.] (Р.: биоиндикатор; И.: bioindicator; Т.: biyoindikatör) *и. бот.*

Тере индикатор. □ Биоиндикатор. *Биоиндикатор ҡулланыу.*

**БИОКОЛЛОИД** [рус. < гр.] (Р.: биоколлоид; И.: biocolloids; Т.: hayvani veya nebati dokufan çikarilan bir koloid) *и. бот.*

Тере организмдағы коллоид эретмә. □ Биоколлоид. *Туҡыма биоколлоиды.*

**БИОҠЫР** [рус. < гр. *bios* 'тормош, тереклек' + *ҡыр*] (Р.: биополе; И.: aura; Т.: ayla) *и.*

Парапсихологияла: теге йәки был тере йәнде уратып алған яҡтылыҡ көмбәҙе, аура. □ Биополе. *Кеше биоҡыры.*

**БИОЛОГ** [рус.] (Р.: биолог; И.: biologist; Т.: biyolog) *и.*

Биология буйынса белгес. □ Биолог; специалист по биологии. *Биолог булып эшләү.*

**БИОЛОГИК** (Р.: биологический; И.: biological; Т.: biyolojik) *с.*

Биологияға мөнәсәбәтле. □ Биологический. *Биологик закон. Биологик көрәнеш. Биологик үҙенсәлек.* ■ *Замана ғалимдары һәм врачтар аҡыл менән тән араһында биологик бәйләнеш барлығына шикләнмәй.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 3, 2010.

**БИОЛОГИЯ** [рус. < гр. *bio* 'тормош, тереклек' + *logos* 'тәғлимәт'] (Р.: биология; И.: biology; Т.: biyoloji) *и.*

Йәнле тәбиғәтте, органик донъяны өйрәнә торған фән. □ Биология *(наука о живой природе, о закономерностях органической жизни). Биология укытыусыһы.* ■ *Ул [Бәширов] мине башланғыс класта, ә һуңынан ете йыллык мәктәптә математика, биология фәндәренән укытты.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010.

**БИОМЕТЕОРОЛОГИЯ** (Р.: биометеорология; И.: biometeorology; Т.: biyometeoroloji) *и.*

Атмосферала барған физик һәм химик процестарҙың, климат һәм һауа торошоноң кешегә, хайуандарға, үҫемлектәргә тәьҫирен өйрәнеүсе фән. □ Биометеорология.

**БИОМЕТРИЯ** [рус. < гр. *bios* ‘тормош’+ *metron* ‘үлсәү’] (Р.: биометрия; И.: biometrics; Т.: biyometri) *и.*

Тере организмдарҙың билдәләрен, уларҙың үҙгәрешен статистик ысул менән өйрәнеү. □ Биометрия. *Биометрия ысулын ҡулланыу. Күҙ биометрияһы.*

**БИОМЕХАНИКА** [рус. < гр.] (Р.: биомеханика; И.: biomechanics; Т.: biyomekanik) *и.*

Хайуандарҙың һәм кешеләрҙең хәрәкәте тураһындағы фән. □ Биомеханика. *Биомеханика фәне.*

**БИОМОРФОЛОГИЯ** (Р.: биоморфология; И.: biomorphology; Т.: biyomorfoloji) *и.*

Үҫемлектәрҙең морфологик билдәләрен өйрәнеүсе фән. □ Биоморфология.

**БИОНИКА** [рус. < гр.] (Р.: бионика; И.: bionics; Т.: biyonik) *и.*

Кибернетиканың инженерлыҡ мәсьәләләрен сисеүҙә биологик процестарҙы файҙаланыуҙы өйрәнә торған бүлеге. □ Бионика. *Биониканың ҡаҙаныштары йәнле организмдарҙың төҙөлешен нығыраҡ аңларға, тағы ла камиллыраҡ, һиҙгерерәк приборҙар яһарға ярҙам итәсәк.*

**БИОНТИЗАЦИЯ** [рус.] (Р.: бионтизация; И.: stimulation; Т.: stimülasyon) *и.*

Шытыуҙы тиҙләтеү өсөн орлоҡтарға физик һәм химик тәьҫир итеү. □ Бионтизация, стимулирование. *Бионтизация үткәреү.*

**БИОПРЕПАРАТ** [рус.] (Р.: биопрепарат; И.: biological product; Т.: biyolojik ürünler) *и. биол. мед.*

Төрлө йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы прививка яһай торған препарат. □ Биопрепарат. *Биопрепарат ҡулланыу.* ■ *Сәсеүлектәрҙе тик гербицидтар менән генә түгел, ә экологик яҡтан таҙа Гуми, Фитоспорин биопрепараттары ҡушып эшкәртһәң, үҫемлектәр быны еңелерәк үткәрә, көсө лә тиҙерәк туплай.* «Башҡортостан», 9 июнь 2011.

**БИОРИТМ** [рус. < гр. *bios* + лат. *rhythmus*] (Р.: биоритм; И.: biorhythm; Т.: bioritim) *и.*

*Ниндәй ҙә* булһа биологик, физиологик процестарҙың билдәле ваҡытта ҡабатланыуы. □ Биоритм. *Кеше биоритмдары.*

**БИОСФЕРА** [рус. < гр. *bios+sphare*] (Р.: биосфера; И.: biosphere; Т.: biyosfer) *и.*

Ер шарының төп үҙенсәлектәре тереклектәрҙең үткәндәге йәки хәҙерге эшмәкәрлеге менән сикләнгән ҡатламы. □ Биосфера. *Биосфераны өйрәнеү. Биосфера экологияһы.* ■ *Тимәк, кешенең биосфераға кире йоғонтоһон кәметеү өсөн саралар күреү зарур.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**БИОТЕХНОЛОГИЯ** [рус.] (Р.: биотехнология; И.: bioengineering; Т.: biyoteknoloji) *и.*

Биологик процестарҙы һәм системаларҙы файҙалы продукт етештереү өсөн файҙаланыу. □ Биотехнология.

**БИОТИК ФАКТОРҘАР** (Р.: биотические факторы; И.: biotic factors; Т.: biyotik faktörler) *и.*

Үҫемлеккә кешенең, хайуандарҙың һәм башҡа үҫемлектәрҙең тәьҫире. □ Биотические факторы. *Биотик факторҙарҙың йоғонтоһо.*

**БИОТИН** [рус. < гр.] (Р.: биотин; И.: biotin; Т.: biyotin) *и.*

Н витамины. □ Биотин. *Биотин молекулалары.*

**БИОТОК (биотоғы)** [рус.] (Р.: биоток; И.: biological current; Т.: biyoakım) *и.*

Кешенең һәм юғары төҙөлөшлө хайуандарҙың мейеһендә барлыҡҡа килә торған

электр магниттары тирбәлештәре. □ Биоток (*электромагнитные колебания, возникающие в мозге человека и высших животных*).

**БИОТОП (биотобы)** [рус. < гр. *topos* ‘урын’] (Р.: биотоп; И.: biotope; Т.: biyotop) *и.*

Теге йәки был организмдың үҙенә бер төрлө йәшәү урыны. □ Биотоп (*участок среды обитания, заселённый тем или иным сообществом растений и животных*).

**БИОТУПЛАНЫУ** (Р.: биоконцентрация; И.: bioconcentration; Т.: biyokonsantrasyon) *и.*

Тышҡы мөхиттән үпкә, тире, аш юлы аша үтеп ингән матдәләрҙең организмда тупланыуы. □ Биоконцентрация. *Биотупланыу кимәле.*

**БИОФИЗИК I (биофизигы)** [рус.] (Р.: специалист по биофизике; И.: biophysicist; Т.: biyofizikçi) *и.*

Биофизика буйынса белгес. □ Биофизик.

**БИОФИЗИК II** (Р.: биофизический; И.: biophysical; Т.: biyofiziksel) *с.*

Биофизикаға мөнәсәбәтле. □ Биофизический. *Биофизик процестар. Биофизик тәжрибә.*

**БИОФИЗИКА** [рус. < *гр. bios* ‘тереклек’ + *physis* ‘тәбиғәт’] (Р.: биофизика; И.: biophysics; Т.: biyofizik) *и.*

Биологияның тере организмдарҙағы физик һәм химик закондарҙы өйрәнә торған бүлеге. □ Биофизика.

**БИОФИЛЬТР** [рус.] (Р.: биофильтр; И.: biofilter; Т.: biyofiltre) *и.*

Ташландыҡ һыуҙарҙы, газдарҙы, бысраҡ һауаны биологик таҙартыу ҡорамалы. □ Биофильтр. *Биофильтр ҡулланыу.*

**БИОХИМИК I (биохимигы)** [рус.] (Р.: биохимик; И.: biochemist; Т.: biyoşimi) *и.*

Биохимия буйынса белгес. □ Биохимик. *Биохимик булып эшләү.*

**БИОХИМИК II** (Р.: биохимический; И.: biochemical; Т.: biyokimyasal) *с.*

Биохимияға мөнәсәбәтле. □ Биохимический. *Биохимик анализ.*

**БИОХИМИЯ** [рус.] (Р.: биохимия; И.: biochemistry; Т.: biyokimya) *и.*

Тере материяға хас булған химик процестарҙы өйрәнә торған фән. □ Биохимия. *Биохимия закондары.*

**БИОЦЕНОЗ** [рус. < гр. *bios* ‘тереклек’ + *koinos* ‘дөйөм’] (Р.: биоценоз; И.: biocoenosis; Т.: biyosenoz) *и.*

Ер шарының ниндәйҙер бер өлөшөндә (*биотопта*) йәшәүсе бөтә тере организмдар. □ Биоценоз (*совокупность населяющих биотоп организмов, связанных друг с другом взаимной зависимостью и взаимным влиянием*).

**БИОЭНЕРГЕТИКА** [рус. < *гр.* bios ‘тереклек’ + *energia* ‘эшмәкәрлек’] (Р.: биоэнергетика; И.: bioenergetics; Т.: biyoenerji bilimi) *и.*

Молекуляр биологияла, биофизикала организмдың йәшәү эшмәкәрлеге барышындағы энергияны икенсегә әүерелдереү механизмдарын өйрәнә торған тармаҡ. □ Биоэнергетика.

**БИП (БИП-БИП)** (Р.: подражание отрывистому, короткому звуку бип-бип; И.: beep-beep!; Т.: düt düt) *оҡш.*

Өҙөк кенә нәҙек тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание отрывистому, короткому звуку; бип-бип. *Машина бип итеп ҡысҡыртып ебәрҙе. Бип-бип итеү. Бип тә бип килеү.* ■ *Мин был, ауҙым үлән араһына. Бип-бип итеп, ҡаҙ бәпкәһе килеп етте яндарыма.* Н. Әминева.

**БИПАПА** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.**

**БИП-БИП ИТЕҮ (бип-бип ит-)** *ҡ. ҡар.* **бипелдәү.**

**БИПЕЙ I** (Р.: цыплёнок; И.: chick; Т.: civciv) *и.*

**1.** *диал.* Себеш. □ Цыплёнок.

**2.** *диал. ҡар.* **бәпкә I.** *Өйрәк бипейе сыкҡан.*

**3.** *диал.* Иркәләү һүҙе (*балаға ҡарата*). □ Уменьшительно-ласкательное слово (*по отношению к ребёнку*). *Бипейем.*

**БИПЕЙ II** (Р.: бутон; И.: knop; Т.: gonca) *и. диал. бот.*

Сәскә төймәлеге. □ Бутон.

**БИПЕЛДӘҮ (бипелдә-)** (Р.: издавать писк; И.: cheep; Т.: cıvıldamak) *ҡ.*

Ҡабат-ҡабат өҙөк кенә нәҙек тауыш сығарыу. □ Издавать писк, пищать. *Бипелдеге сығыу. Оялағы бәпкәләрҙең бипелдеге сыға.*

**БИПЕЛДӘШЕҮ (бипелдәш-)** (Р.: пищать; И.: squeak; Т.: cıvıldaşmak) *ҡ.*

Бип-бип итеп ҡысҡырышыу. □ Пищать (*о гусятах и утятах*). *Үләндә ҡаҙ бәпкәләре бипелдәшеп йөрөй.*

**БИПКЕЙ** (Р.: перья; И.: feather; Т.: kuş tüyü) *и. диал.*

Ҡош ҡанаты өҫтөндәге ваҡ ҡауырһын. □ Маленькие прямые перья на крыльях птиц.

**БИПКӘ** (Р.: цыпки; И.: red spots; Т.: yara) *и. диал.*

Ялан аяҡ бысраҡ һыу кисеп йөрөгән бала-сағаның аяҡ йөҙлөктәре боҙолоп ярылыуы. □ Цыпки, появляющиеся на ногах у детей от долгого хождения босиком по грязной воде. *Бипкә сығыу.*

**БИПЛАН** [рус. < фр. *biplan*] (Р.: самолёт с двумя плоскостями крыльев; И.: biplane; Т.: biplan) *и.*

Ҡушар ҡанатлы самолёт. □ Самолёт с двумя плоскостями крыльев, расположенными одна под другой. □ Биплан. *Бипланда осоу.*

**БИР** *и. диал. ҡар.* **биртек I.**

**БИРА** *и. диал. ҡар.* **оят.**

**БИРАҘЛАНЫУ (бираҙлан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **асыуланыу.**

**БИРАН-ТАРАН КИЛТЕРЕҮ (биран-таран килтер-)** *ҡ. диал. ҡар.* **пыран-заран итеү.** ■ *Һинең иҫеңдәлер, Петроградты Юденичтан ҡорғаған мәлдәрҙә, башҡорт бригадаһындағы ҡыҙылгвардеецтар, буржуйҙарҙың өйҙәренә йөрөп, биран-таран килтергән ваҡыттар?* Һ. Дәүләтшина.

**БИРАХАТ ИТЕҮ (бирахат ит-)** *ҡ. диал.* **юҡҡа сығарыу.**

**БИРГЕ** [боронғо төрки *биру* 'был яҡта'] (Р.: находящийся ближе; И.: close by; Т.: daha yakın) *с.*

**1.** Сағыштырмаса яҡыныраҡтағы, был табандағы; *киреһе* – ары. □ Находящийся ближе, поближе (*другого такого же предмета или места*), близлежащий. *Бирге тау. Бирге өй. Ана, бирге соҡорҙа бер кеше ята, ул да мине күрәләр.*

**2.** *Ниҙеңдер* был яҡтағы урыны. □ Этот, эта, это, эти. *Бирге яр.* ■ *Арғы яҡтан бирге яҡҡа баҫма һалдым ҡамыштан.* Халыҡ йырынан.

**БИРГЕ АҒАСЫ** (Р.: шест; И.: pole; Т. direk) *и. диал.*

Һабантуйҙа бүләктәр элгән бейек бағана. □ Шест.

**БИРҘЕРЕҮ (бирҙер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биреү I.** *понуд. от* **биреү I.** ■ *Айбулат шул балдаҡты, ҡыҙыл сатин яулыҡҡа урап, еҫле һабын ҡушып, Исхаҡтан Гөлйөҙөмгә бирҙерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**БИРҘЕРТЕҮ (бирҙерт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биреү I.** *понуд. от* **биреү I.**

**БИРҘЕРТТЕРЕҮ (бирҙерттер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **биреү I.** *понуд. от* **биреү I.**

**БИРЕ I** [дөйөм төрки *бәри, бири* 'был яҡҡа, бире'] (Р.: сюда; И.: hither; Т.: buraya) *р.*

Был яҡҡа яҡыныраҡ, былай табан; *киреһе* – ары. □ Сюда. ■ *[Урманцева:] Аҡыллым, кил әле бире!* С. Агиш.

**БИРЕ II** [боронғо төрки *бири* 'бында'] (Р.: тут; И.: here; Т.: burada) *и.*

Был яҡтағы урын. □ Тут, здесь. ■ *[Ғәлиә:] Әйҙүк, Булат, бына биренән ултырып кит.* К. Кинйәбулатова.

**БИРЕ III** (Р.: от; И.: from; Т.: beri) *бәйл.*

Сығанаҡ килештән йәки эйәлек ялғаулы *-ған* формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәт, хәл-ваҡиғаның башланғыс мәленән килгән дауамын белдерә. □ От, с, вот уже (*послелог с исх. и осн. п., а также с ф. прич. на -ған с аффиксом принадл. 3-го л*). *Киткәне бире. Куптән бире. Шунан бире. Кисәнән бире. Байтаҡтан бире.* ■ *[Юламан ҡарттың] күптәнән бире йөҙәтеп килгән бил ауыртыуы ҡуҙғып киткәндәй булды.* З. Биишева.

**БИРЕ IV** *и. диал. миф. ҡар.* **бәрей.** ■ *Түрмән бире ҡыҙы менән оҙаҡ ҡына ғүмер итә.* Халыҡ ижадынан.

**БИРЕ V** (Р.: название рода; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ башҡорттарының ырыу исеме. □ Бире *(этноним башкир-кыпчаков).*

**БИРЕ АЛМАШТЫРЫУ (бире алмаштыр-)** (Р.: подмена чёртом; И.: substitute by the devil; Т.: perilerin kimseleri değiştirmesi) *к. миф.*

Ен, бәрей алмаштырыу. □ Подмена чёртом. *Бире алмаштырған бала.*

**БИРЕГЕ** *с. диал. ҡар.* **һуңғы I.**

**БИРЕГЕҮ (бирек-)** (Р.: становиться крепким; И.: become strong; Т.: sağlamlaşmak) *к.*

Көс, тәьҫиргә бирешмәҫлек булыу; нығыныу. □ Становиться крепким, выносливым, набираться сил, становиться сильным. ■ *Күп яуҙарҙа биреккән ил талыҡмай буламы?* Ҡобайырҙан.

**БИРЕГҮҘ** (Р.: дурной глаз; И.: evil eye; Т.: kem göz) *и. миф.*

Күҙе насар, күҙе тейеүсән кеше. □ Дурной глаз, способный сглазить, вселить болезни. ■ *Балама күҙе тейҙе Хәтимәнең, бирегүҙҙең.* Экспедиция материалдарынан.

**БИРЕГҮМӘЛӘК (бирегүмәләге)** (Р.: ночная (*бесовская*) бабочка; И.: devil's butterfly; Т.: pervane) *и. диал.*

1. *зоол. ҡар.* **шайтан күбәләге.** *Бирегүмәләк оса.*

2. *миф.* Ен (*шайтан*) күбәләге. □ Ночная (*бесовская*) бабочка. ■ *Төндә өйгә бирегүмәләк инһә, яман була.* Ф. Хисамитдинова.

**БИРЕГӘ** [боронғо төрки *бири* 'бында' + -гә] (Р.: сюда; И.: here; Т.: buraya) *р.*

Ошо урынға, ошо ергә; бында. □ Сюда. *Бирегә килеп ултырыу. Нәмәне бирегә ҡуйыу.*

**БИРЕК** (Р.: крепкий; И.: healthy; Т.: sağlam) *с.*

Ныҡлы, ныҡ. □ Крепкий, выносливый. *Бирек ат.* ■ *[Туймуйрыҡ:] Ҡалай һуң ул, Хоҙайҙың рәхмәте менән микән ни — шулай көслө беләкле, бирек кеше булып үҫә алды әле?* Ғ. Ибраһимов. ● *Бирек бил биртенмәҫ.* Әйтем.

**БИРЕ ҠЫУЫУ (бире ҡыу-)** (Р.: изгнание бесов; И.: exorcism of devils; Т.: cinleri kovmak) *к. миф.*

Ауырыуҙы магик дауалау сараһы. □ Магический способ лечения, избавления от болезней, источником которых являлась нечистая сила. *Биреләр өйгә эйәләһә, уны мылтыҡ атып ҡыуалар.*

**БИРЕЛГӘНЛЕК (бирелгәнлеге)** (Р.: преданность делу; И.: devotion; Т.: özveri) *и.*

1. Мөкиббән китеп (*бирелеп*) эшләү. □ Преданность делу. *Эшкә бирелгәнлек.* ■ *[Булат:] Етмәһә, уға ғына хас бирелгәнлек, ҡыйыулыҡ менән һунарға йөрөргә тотона.* Ә. Вахитов.

2. *ҡар.* **ихласлыҡ.** *Бирелгәнлек күрһәтеү.*

**БИРЕЛЕ** (Р.: взбешенный; И.: devilish; Т.: kızgın) *с. диал.*

1. Ҡыҙмалы. □ Взбешенный. *Биреле ат.*

2. *миф.* Биреле, ен эйәләгән. □ Чертовский.

**БИРЕЛЕП** (Р.: усердно; И.: hard; Т.: gayretli) *р.*

Бик ныҡ мауығып. □ Усердно, ревностно. *Бирелеп эшләү.* ■ *Уҡытыусы — алдынғы ҡарашлы, башҡаларҙы үҙ артынан эйәртә алған, ҡайҙа ғына эшләһә лә, эшкә бирелгәнлеге менән айырылып торған шәхес ул.* Ф. Күзбәков.

**БИРЕЛЕҮ (бирел-)** [боронғо төрки *бирил-*] *к.*

1. *төш. ҡар.* **биреү I.** *страд. от* **биреү I.**

2. Ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе туҡтатыу. □ Сдаваться, сдаться. *Бер аҙ көрәшкәндән һуң көс һынашыусылар әллә ысын, әллә буш бирәм-бирәм бирелергә булдылар.*

3. Үҙләштереүгә, аңлауға һ. б. еңел, анһат йәки ауыр булыу; аңлашылыу. □ Даваться. ■ *[Ишғәле:] Миңә химия бик ауыр бирелде.* И. Нурғәлиев.

4. Ҙур ҡыҙыҡһыныу менән, ихлас күңелдән керешеү, бик ныҡ мауығыу. □ Увлечься, отдаваться. *Бирелеп эшләү. Һүҙгә бирелеү.*

5. *Ниҙеңдер* шауҡымына эйәреү. □ Поддаваться. *Ҡотҡоға бирелеү.*

6. *Ниҙеңдер* тәьҫиренә әсир булыу. □ Предаваться *чему. Моңға бирелеү. Өмөтһөҙлөккә бирелеү. Тойғоға бирелеү. Уйға бирелеү. Хыялға бирелеү.*

**БИРЕЛЕШ** (Р.: подача; И.: giving; Т.: verme) *и.*

*Нимәнеңдер* бирелеү формаһы. □ Подача, преподнесение. *Материалдың бирелеш формаһы уңышлы.*

**БИРЕЛӘНЕҮ (бирелән-)** (Р.: раздражаться; И.: become irritated; Т.: sinirlenmek) *ҡ.*

Туҙып, ҡыҙып китеү; енләнеү. □ Раздражаться; бесноваться; беситься. *Юҡҡа ғына биреләнеп барыу.*

**БИРЕМ** [боронғо төрки *бирим* ] (Р.: задание; И.: task; Т.: ödev) *и.*

**1.** *Ниндәйҙер* эш. □ Задание. *Күнегеүҙең бireме.* ■ *Һәр кем үҙенә бирелгән биремде үтәү хәстәрен күрә башланы.* И. Көҫәпҡол.

**2.** Бирер нәмә. □ То, что можно отдать. *Биремде тапшырыу.* ● *Муллала бирем, ярлыла керем булмаҫ.* Әйтем.

**3.** *диал. ҡар.* **бирнә 1.**

**4.** *этн.* Оҙатылған ҡыҙ яғынан түләнгән ҡалым хаҡы. □ Цена калыма со стороны невесты.

**5.** *диал. ҡар.* **һалым I.**

**6.** *диал. ҡар.* **ришүәт.**

**БИРЕМ АЙЫ** *и. диал. ҡар.* **көҙ.** *Йыл миҙгелдәренең исеме: алым айы, йыйын айы, бирем айы, ҡуян айы.*

**БИРЕМЛЕ** (Р.: с заданиями; И.: with tasks; Т.: ödevli) *с.*

Биремдәре булған. □ С заданиями. *Биремле күнегеү.*

**БИРЕНЕҮ** (Р.: взятка; И.: bribe; Т.: rüşvet) *и.*

Ришүәт. □ Взятка. ■ *Советҡа һайлау алдындағы ҡунаҡҡа саҡырыуҙар, сәсеү мәлендә бирергә вәғәҙә ителгән орлоҡтар, ваҡтөйәк биренеуҙәр бөттөләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**БИРЕС I** (Р.: кап; И.: burl; Т.: ur) *и. бот.*

Ағастағы сурайып сыҡҡан оро. □ Кап, выплывок, наплыв (*на стволе дерева*).

**БИРЕС II** (Р.: каповый; И.: burl; Т.: ur) *с.*

Оронан яһалған. □ Каповый. *Бирес һауыт.*

**БИРЕС III** (Р.: рубец от раны; И.: scar from the wound; Т.: yara izi) *и. диал.*

Уңалған яра урыны. □ Рубец от раны.

**БИРЕҮ I (бир-)** [дөйөм төрки *бир-/ бәр- 'биреү'* ] (Р.: давать в руки; И.: hand; Т.: vermek) *ҡ.*

**1.** Ҡулдан ҡулға тапшырыу, ҡул менән һоноп тоттороу. □ Давать в руки, отдавать, передать из рук в руки. *Икмәк биреү. Китап биреү. Юлға аҡса биреү.* ■ *Бүләккә китап биреү матур йолаға әйләнә бара.* Ф. Күзбәков. ● *Биргәндең битенә ҡарама.* Мәҡәл. *Бирһәң — алырһың, сәсһәң — урырһың.* Мәҡәл.

**2.** Килтереп алға ҡуйыу, һалыу. □ Приносить, подавать. *Аш биреү.* ■ *Ҡырағай саптар семтекләп булһа ла биргән бесәнде һәрмәштерә башлай, ҡар ашай.* Г. Хөсәйенов. *Әйҙә, йәһәт бул, ҡоҙаларға һурпа бирә һалырға кәрәк! — тине [Әхмәҙи].* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Берәйһенең ҡарамағына, файҙаланыуына тапшырыу. □ Давать, предоставлять. // Предоставление. *Ярҙамсы биреү. Ғәскәри кейем биреү.* ■ *Фатир хужаһы беҙгә таҡта менән бүленгән бер бүлмә, ятыр-торор өсөн ағас карауат бирҙе.* Ф. Яхина. *Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа ерен бирәм, тигән ул [Пугачев]; һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа һыуын бирәм, тигән ул.* С. Юлаев. *Сәйетбаба ауыллы республикабыҙға әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә эшләүсе бик күп билдәле шәхестәр биргән.* Ғ. Шәйәхмәтов.

**4.** Мәғлүм итеү, хәбәр итеү. □ Давать, сообщать. // Сообщение. *Адрес биреү. Телефон номерын биреү.* ■ *Үҙебеҙҙең адресыбыҙҙы бирҙек.* Д. Юлтый.

**5.** Тәҡдим итеү. □ Предлагать, уступать (*место, дорогу и др.*). *Урын биреү.* ■ *[Сафия:] Милиция!.. Иптәштәр, һеҙ кемгә ышанаһығыҙ, .. ситкәрәк китеп тороғоҙ, башҡаларға юл бирегеҙ!* Т. Ғиниәтуллин.

**6.** *диал.* Күпмелер хаҡ түләү, аҡса таратыу, өләшеү. □ Давать, отдавать, выдавать. // Выдача, отдача. *Аҡса биреү.* ■ *Бына йөҙ һум биреп алған ошо күҙгөнән башҡа бер әйбер ҙә тапманым, — тип, теге егет кеҫәһенән бер көҙгө сығарып күрһәтте, ти.* Әкиәттән.

**7.** *диал.* Күпмелер хаҡ менән һатыу, һатып биреү. □ Продать. ■ *Алам тиһәң,*

*магазинда бер нәмәне лә арзан хаҡ менән бирмәйҙәр.* И. Ғиззәтуллин.

**8.** Ҡайһы бер абстракт мәғәнәле исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәгә эйә итеүҙе белдерә. □ В сочет. с сущ. образует сложные гл. и выражает действие, связанное со знач. имени. *Мөмкинлек биреү. Махсус белем биреү. Уҡырға мөмкинлек биреү. Хоҡуҡ биреү.* ■ *Балаларға фатиха биреп, аҡ бәхеттәр теләп, яңы тормош юлына оҙатыу — һәр ата-әсәнең изге бурысы.* М. Бураҡаева. *Алла инде һиңә бәхетте күрәп-күрәп, итәк тултырып биргән.* Т. Хәйбуллин. *Хоҙай бирер йәннәттең туғайы — һылыу Уралтау.* Ҡобайырҙан.

**9.** Исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған үҙенсәлеккә, сифатҡа эйә итеү. □ Придать, придавать, прибавлять. *Дәрт биреү. Йәм биреү. Илһам биреү. Ләззәт биреү. Рух биреү. Рәхәтлек биреү. Сабырлыҡ биреү. Таяныс биреү.* ■ *Бала бит ул әшкә көс бирә, тормош йәме күберәк күренә.* Ғ. Сәләм.

**10.** *Ниҙелер* бүләк, награда һ. б. итеп тапшырыу. □ Преподнести, наградить, даровать. *Бүләк биреү. Орден биреү. Халыҡ артисы исемен биреү.* ■ *Уҡытыу-тәрбиә эшендә ҙур уңыштарға өлгәшкән, ижади эшләүсе, фиҙакәрлек өлгөһө күрһәтеүсе танылған уҡытыусы-новаторҙарға Башҡортостан Республикаһының Халыҡ уҡытыусыһы тигән исем биреү — Дәүләт кимәлендә уҡытыусы хеҙмәтенә иң юғары баһа ул.* З. Аллаяров. *«Ҡустым, һөйөнсө, ни бирәһең?» — тине ул [Ғариф], нимәлер тотҡан һыңар ҡулын артына йәшереп.* Б. Бикбай.

**11.** Башҡарыу, үтәү өсөн ниҙер билдәләү, тәғәйенләү. □ Давать задание, план. *Ауыр эш биреү. План биреү.* ■ *Күпер эшләргә, окоп ҡаҙырға йөрөгән ваҡытта .. икенсе бер наряд бирәләр.* Д. Юлтый.

**12.** *диал. Кемдеңдер* йәшен билдәләү. □ Определение возраста. ■ *Ҡакса, еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештәренә ҡараһаң, уға [Хасбулат олатайға] хатта алты тиҫтәне лә биреүе ҡыйын.* З. Биишева.

**13.** *юкл. ф.* Билдәле бер абстракт исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған төшөнсәнең булыуына ҡамасау иткәндә белдерә. □ Придавать, дать. *Әһәмиәт бирмәү. Һөйләшергә ирек бирмәү.* ■ *[Нәкиә ҡыҙына:] Туҡта әле, туҡта! Тын-тәҡәт бирмәй,ниңә әле былай дөрөп алып бараһың?* И. Ғиззәтуллин.

**14.** Ғәҙәттә, төбәү килештәге исемдәр менән килеп, көс менән ныҡ итеп һуҡҡанды белдерә. □ Задать. *Елкәгә биреү. Атҡа ҡамсы менән биреү. Сикәгә биреү. Яңаҡҡа биреү.*

**15.** Халыҡ алдында концерт, спектакль һ. б. менән сығыш яһау. □ Выступать. *Концерт биреү.* ■ *Түңәрәккә йөрөүсе уҡыусылар мәктәп сәхнәһендә генә түгел, ҡала театры бинаһында ла спектаклдәр бирә.* Ф. Ғөбәйҙуллина.

**16.** Ғәмәлдә бар итеү, етештереү, булдырыу *(уңыш, емеш һ. б. ҡарата)*; файҙа килтереү. □ Производить. *Күп килем биреү. Яҡшы уңыш биреү.* ■ *Киң Уралда ҡара урмандар шаулап ултыра. Унда йүкә тәмле балын бирә, һынын бирә һылыу шыршылар.* Р. Ниғмәти.

**17.** Берәй эш-хәлдең һ. б. һөҙөмтәһе булараҡ күрһәтеү, белдереү. □ Дать результат. ■ *Ҡолморҙа .. мылтығын алды ла Сурағолға тоҫҡап сағылдырҙы, ләкин мылтыҡ ут бирмәне.* Т. Хәйбуллин.

**18.** Исемдәр менән килеп, шул исем төшөнсәһендәге эште башҡарыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. □ В сочет. с сущ. образует сложные гл. и выражает действия, связанные со значением имени. *Аңлатма биреү. Баһа биреү. Бойороҡ биреү. Заказ биреү. Команда биреү. Күрһәтмә биреү. Наказ биреү.* ■ *Ризалыҡ биреү — хыял иткән нәмә мотлаҡ тормошҡа ашырыласаҡ, тигәнде аңлатмай.* Ф. Әсәнов.

**19.** Тауышты белдергән исемдәр менән килеп, тауышлы сигналды белдерә. □ В сочет. с сущ., обозначающими звуковой сигнал, образует сложные гл. и выражает действия, связанные со значением звука. *Залп биреү. Звонок биреү. Сигнал биреү.*

**20.** Телдән әйтеп еткереү. □ Поучать, советовать. *Аҡыл биреү. Кәңәш биреү.* ■ *Мулла .. вәғәз, нәсихәт бирҙе: «Бына, ил аҙамattары, беҙ әүәл Аллаға, шунан батшаға буйһонғанбыҙ».* Һ. Дәүләтшина.

**21.** Телдән әйтеп белдереү. □ Обещать; давать, дать слово. *Ант биреү. Вәғәҙә биреү.* ■ *Йәш сағым, алтын сағым, ялҡын сағым булһын фиҙа халҡым алдында минең биргән таҙа антым өсөн.* Ш. Бабич. *Вәғәҙә бирҙеңме — үтә! Вәғәҙә — иман,* ти *халыҡ мәҡәле.* Ә. Вахитова.

**22.** Эшкә, хеҙмәткә һ. б. тапшырыу. □ Отдавать, выдать. *Уҡырға биреү. Һалдатҡа биреү.*

**23.** Кейәүгә биреү. □ Выдавать замуж. *Ҡыҙ биреү.* ■ *Атаҡайым мине йәшләй бирҙе, көтөр мәлкәйҙәре юҡмы икән?* Сеңләүҙән.

**24.** Тотоп, кемдеңдер ҡулына тапшырыу. □ Выдавать.

**25.** Ҡаршы тора алмай, еңелеп, дошманға ҡалдырыу. □ Уступать, оставить, отдать. ■ *Бирмәйем, тип, Уралды, яуға киткән егетем, тыңла, Урал ни тиер.* Р. Ниғмәти.

**26.** Ҡулдан ысҡындырыу. □ Уступать. *Өҫтөнлөктө биреү.* ■ *Йөҙөү ярышында беренселекте һис бирмәйбеҙ.* Ғ. Сәләм.

**27.** *Ҡайҙалыр* берәй маҡсат менән тапшырыу. □ Отдать *с какой-то* целью. *Ботинканы ремонтҡа биреү. Пальтоны таҙартырға биреү.* ■ *Яулыҡ бирҙем сигергә ҡара ҡашлы сибәргә.* Халыҡ йырынан.

**28.** *күсм. Кемгә* йәки *нимәгәлер* арнау; бағышлау. □ Посвящать. ■ *Их, алда ла йөрәк һуҙҙәремде бирәһе ине илгә, бирәһе.* Ғ. Ғүмәр.

**29.** *күсм.* Кем йәки нимә өсөндөр ҡорбан итеү. □ Пожертвовать. ■ *Ватанды яҡларбыҙ, кәрәк икән ғүмеребеҙҙе бирергә лә әҙербеҙ.* М. Тажи.

**30.** Яҙма рәүештә йәки телдән *ниҙер* тапшырыу. □ Дача, подача *чего-то. Ғариза биреү. Отчёт биреү. Рапорт биреү. Ялыу биреү.* ■ *2010 йылда бирҙәм дәүләт имтиханы бирмәгән бер генә уҡыусы ла ҡалманы.* В. Бәҙретдинов. *Вузда хәҙер зачёт биреү мәле.* Г. Ғәлина.

**31.** Билдәле бер хәлгә килтереү. □ Привести в определённое состояние. ■ *Гармунсы гармунының ҡыңғырауын зыңғырлатып алды ла уға ҡой бирҙе.* М. Тажи.

**32.** *Ниндәйҙер* сифатҡа, үҙенсәлеккә килтереү. □ Придать свойство *(вкус, вид, и т. д.). Ашҡа әсе тәм биреү. Кейемгә яңы төҫ биреү. Өйгә йәм биреү. Төҫкә күркәмлек биреү. Һынға олпатлыҡ биреү.* ■ *Кейәүгә сығыу Мәхмүзәгә төҫ биргәндер, ахыры, матурланыбыраҡ .. киткән кеүек күренә.* Д. Исламов.

**33.** *күсм.* Уйҙы, күңелде һалыу. □ Предаваться всей душой *кому-чему*; вложить душу *в кого-что. Иғтибар биреү. Күңел биреү.* ■ *Күңел биреп эшләнгән эш кенә уңышҡа илтә.* Ф. Сәлимова.

**34.** *-п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең *кемгәлер* төбәлеүен, тәғәйенләнеүен белдергән ҡушма ҡылым яһай. □ С деепричастием на *-п* основного гл. выступает в роли вспомогательного гл. и означает действие, совершаемое для *кого-л. Алып биреү. Аңлатып биреү. Өйрәтеп биреү. Уҡып биреү. Һөйләп биреү. Әйтеп биреү.* ■ *Индриль .. беҙгә аш бешереп бирә лә, ҡармаҡтарын тотоп, Висла буйына балыҡ тоторға китә.* Д. Юлтый. *[Тулыбай] ондо Вәлимә еңгәйгә килтереп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**35.** *-а/-й* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең йәнә бер аҙ дауам итеүен белдергән ҡушма ҡылым яһай. □ С деепричастием на *-а/-ә* основного гл. выступает в роли вспомогательного гл. и означает продолжение действия. *Уҡый биреү. Йәшәй биреү. Тора биреү. Уйнай биреү. Ултыра биреү. Эшләй биреү.* ■ *Зөлхизә .. Аҙнағолон көтөп, диңгеҙҙән күҙен алмай, моңайып йырлап йөрөй бирә.* З. Биишева. *Баш күтәрмәй эшләгә, шул эшең менән дыу килтереп донъя көткән ауылдаштарыңды ҡыуандырып йәшәй бирге килә.* Н. Мусин.

**36.** *миф.* Ритуаллаштырылған күренеш. □ Магическое действие, связанное с верова-

ниями в возможность передачи блага вместе с передаваемыми предметами. *Хәйер биреү. Ҡояш байыған, һөт бирергә ярамай.*

♦ **Арҡа биреү** 1) арт менән боролоу. □ Повернуться спиной; 2) *күсм.* Артҡа боролоп ҡасыу. □ Побежать назад. **Йән биреү** 1) яратыу. □ Сильно любить; 2) *күсм.* донъянан китеү, үлеү. □ Умирать. **Кәрәген биреү** 1) тейешле язаһын күрһәтеү. □ Проучить *кого;* 2) ҡоһорон ҡайтарыу. □ Месть, возмездие, отмщение. **Тауыш биреү** 1) өндәшеү, яуап биреү. □ Подавать голос, откликаться; 2) һайлау ваҡытында ҡаралған мәсьәлә буйынса фекер белдереү. □ Голосовать (*на выборах*). **Төҫ биреү** *ҡар.* **төҫ. Фатиха биреү** ризалыҡ биреү, рөхсәт биреү. □ Благословлять. **Һүҙ биреү** 1) нимәлер хаҡында вәғәҙәләшеү. □ Давать слово, обещать; 2) һөйләү, сығыш яһау өсөн рөхсәт итеү. □ Предоставлять слово. **Юл биреү** 1) үтергә мөмкинлек биреү. □ Уступать дорогу; 2) нимәлер эшләргә мөмкинлек биреү. □ Давать возможность *что-л.* сделать. **Яза биреү** ҡылған енәйәт, ғәйеп өсөн ниндәй ҙә булһа сара ҡулланыу. □ Наказывать, карать *кого,* наложить взыскание на *кого.*

**БИРЕҮ II** *и. диал. ҡар.* **һалым I.**

**БИРЕҮСЕ** (Р.: податель; И.: petitioner; Т.: verici) *и.*

Нимәнелер биреүсе. □ Податель (*тот, кто подаёт*). ■ *Варшаванан алып сыҡҡан яҡшы кейемдәрҙе тәҡдим итәбеҙ. Кейем алыусы, аҙыҡ биреүсе юҡ.* Д. Юлтый. ● *Биреүсегә бишәү ҙә күп, алыусыға алтау ҙа аҙ.* Әйтем.

**БИРЕШЕРЛЕК** (Р.: поддающийся; И.: amenable; Т.: uysal) *с.*

Берәй шауҡымға эйәреп китерлек. □ Поддающийся. *Был егет бирешерлек түгел.* ■ *[Ҡаһымбай:] Яңы машина .. Ништәтһәң дә бирешерлек түгел.* И. Ғиззәтуллин.

**БИРЕШЕҮ I (биреш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **биреү I.** *взаимн. от* **биреү I.** *Ҡул бирешеү. Тауыш бирешеү. Бүләк бирешеү.*

**БИРЕШЕҮ II (биреш-)** (Р.: поддаваться *кому-чему;* И.: yield to; Т.: kapılmak) *ҡ.*

**1.** Берәй эштә, алышта, һүҙҙә ҡаршы тора алмай еңелеү. □ Поддаваться *кому-чему;* пасовать перед *кем-чем.* ■ *Йоҡас олатай! Ни эшләп һин бөгөн былайтып таң йоҡоһона бирешеп тораһың әле?* Ғ. Дәүләтшин. *Салауаттай батыр, данлы ирҙәр баҫып килгән яуға бирешмәй.* Халыҡ йырынан.

**2.** Сыҙай алмай, ҡаҡшау. □ Сдаваться, поддаваться. *Ҡайғыға бирешеү. Ҡыйынлыҡтарға бирешеү. Эшкә бирешеү. Ҡоролоҡҡа бирешеү, һыуыҡҡа бирешеү.* ■ *Биреште Шамун ҡарт һуңғы йылдарҙа, нык биреште. Ә бит бар ине уның да шәп саҡтары.* Д. Исламов.

**БИРЕШЕҮСӘН** (Р.: легко поддающийся обработке; И.: pliable; Т.: kullanımı kolay) *с.*

**1.** Эшкәртеүгә еңел (*металл һ. б.*). □ Легко поддающийся обработке.

**2.** Тиҙ ыңғайға килгән (*кеше тураһында*). □ Уступчивый, сговорчивый, податливый.

**БИРЕШЕҮСӘНЛЕК (бирешеүсәнлеге)** (Р.: лёгкость в обработке; И.: pliable; Т.: uygunluk) *и.*

**1.** Эшкәртеүгә еңел булыу. □ Лёгкость в обработке.

**2.** Тиҙ генә бирешеү, ыңғайға килеү. □ Уступчивость, сговорчивость, податливость.

**БИРЕШМӘҮ (бирешмә-)** (Р.: устоять против *кого-чего;* И.: withstand; Т.: dayanmak) *ҡ.*

*Нимәгәлер* ҡаршы тора алыу; ныҡлылыҡ күрһәтеү. □ Устоять против *кого-чего;* выдерживать *что,* не поддаваться.

**БИРЕШМӘҮСӘН** (Р.: устойчивый; И.: steady; Т.: oturakh) *с.*

Ныҡлы, ҡаршы тора алған. □ Устойчивый, не поддающийся *кому-чему.*

**БИРЕШТЕРЕҮ (бирештер-)** (Р.: заставить отступить; И.: turn away; Т.: geri çevirmek) *ҡ.*

Сигендереү. □ Заставить отступить. ■ *Әйтеүҙәренсә, шулай барҙы был һуғыш: Тимер-гурхандың уң ҡанат ғәскәре көн һайын Туҡтамыш-хандың һул ҡанат ғәскәрен бирештерҙе.* Й. Солтанов.

**БИРЕШТӘ** *и. диал. ҡар.* **фәрештә.**

**БИРЕ ЭЙӘЛӘҮ (бире эйәлә-)** (Р.: вселение чёрта; И.: devil infused; Т.: cin tutmak) *ҡ. миф.*

Ен эйәләү. □ Вселение чёрта. ■ *Яңғыҙ иргә, яңғыҙ ҡатынға бире эйәләй, тиҙәр.* Р. Һаҙыева.

**БИРҘЕМБӘТ** (Р.: название родового подразделения; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ырыуы аймағы. □ Бирдембэт (*родовое подразделение башкир племени катай*).

**БИРЖА** [рус. < нем. *Börse* 'янсыҡ'] (Р.: биржа; И.: exchange; Т.: borsa) *и. иҡт.*

Сауҙа һәм финанс эштәре буйынса килешеүҙәр төҙөү учреждениеһы. □ Биржа. *Хеҙмәт биржаһы. Иген биржаһы.* ■ *Бөгөн хеҙмәт биржаһы аша эшкә билдәләндем.* Ш. Шәһәр.

**БИРЖАСЫ** (Р.: биржевик; И.: stock-exchange operator; Т.: borsa simsarı) *и.*

Биржа хеҙмәткәре. □ Биржевик.

**БИРЖА УЙЫНЫ** (Р.: биржевая игра; И.: agiotage; Т.: borsa oyunu) *и.*

Табыш алыу маҡсатында ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙы һатыу йәки һатып алыу. □ Биржевая игра.

**БИРКА** [рус. < нем. *Birke* 'ҡайын' ] (Р.: бирка; И.: tag; Т.: etiket) *и.*

Багаж, тауар һ. б. тағылып, ауырлығын, тәғәйенләнешен, эшкәртелеүен, ҡулланылышын, эйәһен белдергән номерлы ағас, ҡатырға, тире, металл киҫәге. □ Бирка. ■ *Тимербулаттың ҡулдарына бығау һалдылар һәм хайуандарға таға торған бирка ҡаҡтылар.* Ә. Атнабаев.

**БИРКАЛАУ (биркала-)** (Р.: повесить бирку; И.: tag; Т.: etiketlemek) *ҡ.*

Бирка тағыу. □ Повесить бирку. *Сумаҙандарҙы биркалау.*

**БИРКАЛЫ** (Р.: с биркой; И.: tagged; Т.: etiketli) *с.*

Бирка тағылған. □ С биркой. *Бирка тағылған сумаҙан.*

**БИРЛЕ I** (Р.: вспыльчивый; И.: irritable; Т.: asabi) *с. һөйл.*

Ҡыҙыу ҡанлы. □ Вспыльчивый, раздражительный. *Бирле булыу.*

**БИРЛЕ II** *бәйл. ҡар.* **бире III.** ■ *Ул арала баянан бирле килеп етмәйсә әбейҙең эсен бошороп торған ейәнсәре Зәлифә килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**БИРЛЕГЕҮ (бирлек-)** *ҡ. диал. ҡар.* **киңгәү.**

**БИРЛӘНЕҮ (бирлән-)** *ҡ. һөйл. ҡар.* **биреләнеү.**

**БИРМАН** (Р.: бирманец; И.: Burmese; Т.: Birmanyalı) *и.*

Бирманың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе (*ҡытай-тибет телдәренең береһендә һөйләшә*). □ Бирманец. *Бирман халҡы. Бирман ҡатыны.*

**БИРМӘ** [боронғо төрки *бир-* 'биреү' + *-мә ялғауы*] (Р.: взятка; И.: bribe; Т.: rüşvet) *и.*

Вазифалы кешегә бер эште яйлау өсөн йәшерен бирелгән аҡса йәки нәмә; ришүәт. □ Взятка. *Бирмә биреү. Бирмә алыу.*

**БИРНӘ** (Р.: приданое; И.: bride's gifts; Т.: çeyiz) *и. этн.*

**1.** Кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙың үҙе менән алып килгән мал-мөлкәте, йыһаздары. □ Приданое невесты. ■ *[Хәсби:] Бирнәмә генә килгән самауырымды ҡомлап ҡат-ҡат таҙарта торғас, һемәгеп төшөрҙөм.* Б. Бикбай.

**2.** Ҡыҙ яғынан егеткә, ата-әсәһенә бирелгән бүләк. □ Подарки невесты жениху, его родителям и родственникам. ■ *Был яҡтарҙа ҡыҙ бирнәһендәге төп әйбер ҙә — аҫалы балаҫ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2010.

**3.** Кейәүҙең ҡайны-ҡәйнәһенә күренер алдынан биргән бүләге. □ Подарок жениха родителям невесты. ■ *Бына Моратша бай: «Бирелгән бөтә мәһәр аҡсаһын, башҡа бирнәләрҙе бөгөн үк кире ҡайтарһын да, бер сәғәт тә тормай ҡайтып китәм, ә ҡалғанын ҡайҙа барып һөйләшергә үҙем белермен, минең старшина икәнде онотмаһын!» — тип ҡыҙа.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Кендек әбейенә, бабаға биргән бүләк. □ Подарок повитухе либо мужчине, совершающему обряд обрезания. *Кендек әбейенә әҙерләнгән бирнә.*

**5.** Һабантуйҙа йыйылған бүләк. □ Подарки, собранные на сабантуе. *Йыйылған бирнә.*

**БИРНӘ КҮРҺӘТЕҮ (бирнә күрһәт-)** (Р.: свадебный обряд, посвящённый показу гостям собранных подарков; И.: wedding rite; Т.: bir düğün töreni) *к. этн.*

Бирнәне, йыйылған бүләктәрҙе батмусҡа һалып күрһәтеү йолаһы. □ Свадебный обряд показа гостям собранных подарков.

**БИРНӘЛЕ** (Р.: с приданым; И.: with a dowry; Т.: çeyizli) *с.*

Бирнәһе булған. □ С приданым. *Бирнәле килен.* ● *Белемле ҡыҙ — бирнәле ҡыҙ.* Мәҡәл.

**БИРНӘЛЕК (бирнәлеге)** (Р.: приданое; И.: dowry; Т.: çeyizlik) *и.*

Бирнәгә әҙерләнгән кәрәк-яраҡ. □ Приданое. ■ *Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә, сиккәндәре, беләм, — бирнәлек.* М. Кәрим.

**БИРСӘ** [боронғо төрки *бәр* ‘биҙ’ ] (Р.: шрам; И.: scar; Т.: yara izi) *и.*

Яранан йәки һынғандан һуң төҙәлгән урында барлыҡҡа килгән эҙ. □ Шрам, рубец. *Биттәге бирсә.* ■ *[Ғарифтың] ауыҙ ситенән һул ҡолағының төбөнә тиклем бирсә һуҙылған.* Х. Мохтар.

**БИРСӘЙЕҮ (бирсәй-)** (Р.: рубцеваться; И.: cicatrize; Т.: et bağlamak) *к. диал.*

Йөйлө булыу; йөйләнеү; ҡалҡып тороу. □ Рубцеваться, зарубцеваться; выступать (*о костях*). *Бирсәйеп уңалыу. Яраның урыны бирсәйеп уңалды.*

**БИРСӘЛӘНЕҮ (бирсәлән-)** *к. ҡар.* **бирсәйеү.**

**БИРСӘТКӘ** [рус.] (Р.: перчатка; И.: glove; Т.: eldiven) *и.*

Биш бармаҡлы ҡул кейеме. □ Перчатка. *Йөн бирсәткә. Күн бирсәткә. Бирсәткә бәйләү.* ■ *Ҡорьәндәре лә беҙҙәге кеүек кәштәлә түгел, ебәк эскәтер өҫтөндә тора, уны бирсәткә менән генә асып ҡарайҙар.* Д. Юлтый.

**БИРТ** [боронғо төрки *бәр* ‘биҙ’] (Р.: закрытый перелом; И.: fracture; Т.: kırık) *и.*

Яртылаш һынған урын. □ Закрытый перелом, трещина. ■ *[Урал батыр] балтыр ите һулыған, бирте уңалған ағастай, елек башы сурайған бер ҡарсыҡҡа һырышҡан.* «Урал батыр».

**БИРТЕК I (биртеге)** (Р.: повреждение; И.: harm to one’s waist; Т.: bel ağrısı) *и.*

Биртенгән урын. □ Повреждение (*в пояснице*). *Биртек булыу.*

**БИРТЕК II (биртеге)** (Р.: продукты; И.: kind of ethnographic rite; Т.: bel ağrısı için 40 evden toplanan yemek) *и. этн.*

Биле биртенгән кешене имләр өсөн ҡырҡ өйҙән йөрөп йыйған ашамлыҡ. □ Продукты, собираемые с сорока домов для магического лечения больного с повреждённым позвоночником. *Биртек ашы. Биртек йыйыу.* ■ *Сәмиғулланың ун ике йәшлек ҡыҙы Мәстүрә .. өй беренсә инеп, түҫтағын ишектән һоноп, һамаҡлап, биртек һорап йөрөнө.* Ж. Кейекбаев.

**БИРТЕК III** (Р.: угнетённый; И.: depressed; Т.: bunalımlı) *с. диал.*

Китек күңелле. □ Угнетённый, подавленный, обиженный. *Биртек кеше.*

**БИРТЕК АҘЫҒЫ** (Р.: ритуальная пища; И.: ritual food; Т.: bel ağrısı için 40 evden toplanan yemek) *и. миф.*

Биртек (II) ашы. □ Ритуальная пища биртек (II). ■ *Ете өйҙән биртек аҙығы йыялар.* Ф. Хисамитдинова.

**БИРТЕК ЙЫЙЫУ (биртек йый-)** (Р.: сбор ритуальной еды для больного; И.: collecting food for the sick; Т.: bel ağrısı için yiyecek toplama) *к. миф.*

Биле биртенгән ауырыуға аҙыҡ йыйыу. □ Сбор ритуальной еды для больного с повреждённым позвоночником. ■ *Биртек йыйғанда ишекте ҡыҫып ҡына артың менән тороп, һамаҡлап һорайһың.* Экспедиция материалдарынан.

**БИРТЕКЛӘНЕҮ (биртклән-)** *к. диал. ҡар.* **төшөнкөлөккә бирелеү.**

**БИРТЕК САБЫУ (биртек сап-)** (Р.: магический способ лечения поясницы; И.: sort of magical healing; Т.: büyü ile iyileştirme usulü) *к. миф.*

Билде магик дауалау ысулы. □ Магический способ лечения поясницы. ■ *Биртек*

*булып бил ауыртһа, уға балта менән тейеп алаң, шуны биртек сабыу тиҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

**БИРТЕК ТОТОУ (биртек тот-)** (Р.: повреждаться *(о пояснице)*; И.: harm to one's waist; T.: bel ağrısı) *ҡ. миф.*

Бил ауыртыу. □ Повреждаться *(о пояснице).* ■ *Шәрәфетдиндең билен биртек тотҡан тип биртек ашы йыйып йөрөйҙәр.* Н. Ғәлина.

**БИРТЕЛЕҮ (биртел-)** *ҡ. төш. ҡар.* **биртеү.** *страд. от* **биртеү.** *Быуыны биртелгән.* ● *Биртенгәнгә биртелмә.* Әйтем.

**БИРТЕНДЕРЕҮ (биртендер-)** (Р.: повреждать; И.: injure; T.: berelemek) *ҡ.*

Ауырлыҡ төшөрөп, һуғып, шаҡарып имгәтеү. □ Повреждать, подвернуть. *Билде биртендереү.* ■ *Туры айғыр сананы кәйелтеп йығып, Нәғимдең ҡулын биртендерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**БИРТЕНЕҮ (биртен-)** (Р.: повреждаться; И.: overstrain; T.: zedelemek) *ҡ.*

Ауырлыҡ төшөп, һуғылып, шаҡарылып имгәнеү. □ Повреждаться (*о пояснице*), надорваться. ■ *Биле биртенеп, ҡуҙғала алмай ятҡан Юламан ҡарттың күңеленә хафалы уйҙар килә.* З. Биишева.

**БИРТЕҮ (бирт-)** (Р.: ушибать; И.: hurt; T.: berelemek) *ҡ.*

**1.** Биртендереү. □ Ушибать, повреждать. *Биртә тибеү.* ● *Бейә ҡолонон типһә лә биртә типмәҫ.* Әйтем.

**2.** Имгәтеү. □ Калечить.

**БИРХАТ ИТЕП** (Р.: хорошо, замечательно; И.: well; T.: çok iyi) *р. диал.*

Шәп итеп, яҡшы итеп. □ Хорошо, замечательно. *Бирхат итеп ҡунаҡ һыйлағандар.*

**БИРХАУАЙ ИТЕ** (Р.: обычай угощения сватов односельчанами невесты во время свадьбы; И.: sort of ethnographic ritual; T.: düğün âdeti) *и. этн.*

Туйҙа ҡоҙаларҙы өс-дүрт өй бер булып һыйлау йолаһы. □ Обычай угощения сватов односельчанами невесты во время свадьбы. *Бирхауай итенә саҡырыу.*

**БИРЬЯҠ (бирьяғы)** (Р.: эта сторона (*по отношению к говорящему*); И.: this side; T.: bu yana) *и.*

Һыу, соҡор, үҙәк һ. б. ерҙең бирге яғы; *киреһе* — арьяҡ. □ Эта сторона (*по отношению к говорящему*). *Бирьяҡҡа сығыу. Бирьяҡ урам. Бирьяҡ яр.* ■ *Кисеүҙән бик күп һыбайлы бирьяҡҡа сыға.* И. Көҫәпҡол.

**БИРЬЯҠЛАП** (Р.: по эту сторону; И.: on this side; T.: bu yandan) *р.*

Бирге яҡтан. □ По эту сторону. *Бирьяҡлап килеү.*

**БИРЬЯҠЛАТЫП** *р. ҡар.* **бирьяҡлап.**

**БИРӘН** [дөйөм төрки] (Р.: водянка; И.: dropsy; T.: ödem) *и.*

**1.** *мед.* Тире аҫтына һары һыу йыйылып яман шешендерә торған ауырыу. □ Водянка. *Бирән менән ауырыу.*

**2.** *күсм.* Туймай күп ашаған кеше; мәскәй. □ Обжора, прожорливый. *Бирән булыу.* ● *Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ.* Әйтем.

**3.** Байлыҡҡа туймаған кеше; ҡомһоҙ. □ Ненасытный.

**4.** *диал. ҡар.* **өсйән.**

**Бирән ҡорһаҡ** күп ашай торған, туймай торған. □ Обжора.

**БИРӘН ЗӘХМӘТЕ** (Р.: дух болезни водянки; И.: spirit of dropsy; T.: ödem hastalığının ruhu) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында бирән ауырыуы эйәһе. □ Дух болезни водянки. *Бирән зәхмәте үлегә лә ҡуна икән.*

**БИРӘНЛЕК (бирәнлеге)** (Р.: обжорство; И.: gluttony; T.: oburluk) *и. диал.*

Туймайынса күп ашау. □ Обжорство, ненасытность, чревоугодие. *Бирәнлек күрһәтеү.*

**БИРӘНЛӘНЕҮ (бирәнлән-)** (Р.: объедаться; И.: overeat; T.: fazla yemek) *ҡ. диал.*

Туймаҫ тамаҡҡа, бирәнгә әйләнеү. □ Объедаться; обжираться. ■ *[Сәлимә Ғарифҡа:] Әйҙә, тиҙерәк, бирәнләнеп торма.* Н. Мусин.

**БИРӘН ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух болезни водянки; И.: spirit of dropsy; T.: istiska hastalığının ruhu) *и. миф.*

Бирән ауырыуы эйәһе. □ Дух, хозяин болезни водянки.

**БИРӘСӘК (бирәсәге )** [боронғо төрки *бир-* ‘биреү’+*-әсәк*] (Р.: долг; И.: debt; Т.: borç) *и.*

Бурыҫҡа алынып, кире бирелергә тейешле булған аҡса йәки бүтән нәмә. □ Долг, задолженность. *Бирәсәкте биреү. Бирәсәкте алыу. Бирәсәк аҡса.* ● *Байҙың алаcағы, ярлының бирәсәге күп.* Әйтем.

**БИРӘҺЕ** *и. ҡар.* **бирәсәк.** *Бирәһе аҡса.*

**БИС** [рус. < лат. *bis* ‘ике тапҡыр’] (Р.: возглас; И.: encore!; Т.: bis!) *ымл.*

Артист әле генә башҡарған номерҙы ҡабат һорап саҡырыу. □ Возглас *(в театре, на концерте)*, требующий повторения *чего-то. Бис ҡысҡырыу. Биска башҡарыу.*

**БИСАРА** [фарс. بیچاره] (Р.: бедный; И.: poor; Т.: biçare) *с.*

**1.** Ҡыйын, ҡыҙғаныс хәлдәге; бахыр. □ Бедный, несчастный, жалкий, беспомощный. *Бисара бала. Бисара ҡатын.* ■ *Бисара һалдатҡа түбән да үҙенә һөйрәргә, икмәген дә үҙенә күтәрергә тура килә.* Д. Исламов.

**2.** Йәлләгәндә әйтелә. □ Бедняжка, горемыка. ■ *Тик бер кәкүк кенә юл ситендә емдәр эҙләп йөрөй, бисараң.* М. Кәрим.

**БИСАРАЛЫҠ (бисаралығы)** (Р.: жалкое состояние; И.: feebleness; Т.: biçarelik) *и.*

Меҫкенлек. □ Жалкое состояние. *Бисаралыҡ хәлендә.*

**БИСЕР I** (Р.: бисер; И.: glass beads; Т.: küçücük boncuk) *и.*

Бик ваҡ быяла мәрйен, сәйлән. □ Бисер. *Аҡ бисер. Бисер менән биҙәү.*

**БИСЕР II** [рус. *писарь*] (Р.: писарь; И.: clerk; Т.: kâtip) *и. һөйл. иҫк.*

Эш ҡағыҙҙары, яҙыу эштәре менән булышыусы. □ Писарь. ■ *Диләкәй инәлтмәне. Тиҙ генә яҙып бирҙе лә: «Адресын бисергә алып барып яҙҙыртырһың», — тине.* Һ. Дәүләтшина.

**БИСКВИТ** [рус. < ит. *biscotte* ‘ике тапҡыр бешерелгән’] (Р.: бисквит; И.: sponge cake; Т.: bisküvi) *и.*

**1.** Йомортҡа, һөт-май, шәкәр ҡушып бешерелгән йомшаҡ, татлы печенье төрө. □ Бисквит.

**2.** Ялтырауыҡ менән ҡапланмаған фарфор. □ Бисквит.

**БИСМИЛЛА (БИСМИЛЛӘҺ)** [ғәр. بسم الله *bi-ismi* + *illa* ‘алла’ = *Алла исеме менән*] (Р.: во имя Аллаха *(возглас, произносимый мусульманами перед началом чего-л.)*; И.: in God’s name; Т.: bismillah) *и. дин.*

**1.** Мосолмандарҙың эш башлар алдынан әйтелә торған һүҙе. □ Во имя Аллаха *(слово, произносимое мусульманами перед началом чего-л.).* ■ *[Үмәр] бисмилла тип икмәк һындырҙы ла балғалаҡ менән май һоғона-һоғона сәй эсергә кереште.* Һ. Дәүләтшина. ● *Бисмиллаһыҙ аштың тәме юҡ.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Эш-хәрәкәттең, хәл-ваҡиғаның башы. □ Начало *чего-то.* ■ *Сәйҙә инәй ғүмере буйына һәр эштең бисмиллаһы нимә икәнен белеп йәшәне.* З. Яубаҫарова.

**3.** *миф.* Яман заттарҙы, тел-теште ҡурҡыта торған магик һүҙ. □ Магическое слово, отпугивающее злых духов.

♦ **Бисмиллаһын уҡыттырыу** өйрәтеү, аҡылға ултыртыу. □ Проучить, наказать.

**БИССЕКТРИСА** [рус. < фр. *bissectrice* < лат.] (Р.: биссектриса; И.: bisector; Т.: açıortay) *и. мат.*

Мөйөштө ҡап урталай бүлгән һыҙыҡ. □ Биссектриса. *Биссектриса үткәреү.*

**БИССӘҮИӘ** [ғәр. بالسوية] (Р.: одинаковый; И.: identical; Т.: aynı) *с.*

Бер тигеҙ, бер тиң. □ Одинаковый.

**БИСТАРКА** [рус. *бестарка*] (Р.: бестарка; И.: wagon; Т.: araba) *и. диал.*

Иген ташыу өсөн ҡулланылған махсус арба. □ Бестарка *(специальная повозка для перевозки зерна без тары).* ■ *Ҡамыт-дуғаларҙы нығытып яңыртырға, орлоҡ ташырға бүленгән бистаркаларҙы ремонтларға кәрәк буласаҡ.* З. Ғәлимов.

**БИСТЕР** [рус. *бестарка*] (Р.: дорожный сундук; И.: travel box; Т.: yol sandığı) *и. диал.*

Йүкәнән эшләнгән юл һандығы. □ Дорожный сундук из липы. *Бистер үреү.*

**БИСТЕРКӘ** (Р.: корзинка, плетёная из ивы; И.: willow basket; Т.: söğüt sepet) *и. диал.*

Талдан үрелгән кәрзин. □ Корзинка, плетёная из ивы.

**БИСТРО** [рус. < фр. *bistrot*] (Р.: бистро; И.: bistro; Т.: bistro) *и.*

Тәғәмхана, бәләкәй кафе. □ Бистро. *Бистрола тамаҡ ялғау.*

**БИСТУПАР** (Р.: название родового подразделения; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ырыуы аймағы. □ Биступар (*родовое подразделение башкир племени катай*).

**БИСУРА** [боронғо төрки *биччура* 'маймыл балаһы'] (Р.: кикимора (*мифическое существо — нечистая сила в женском образе*); И.: kikimora; Т.: cadı) *и. миф.*

**1.** Ялбыр һары сәсле ҡурҡыныс ҡатын-ҡыҙ һүрәтендәге мифик зат. □ Кикимора (*мифическое существо, нечистая сила в женском образе*). ● *Бисура менән бүре дуҫ.* Әйтем.

**2.** *диал.* Бөхтә булмаған, әрпеш, һәпрә ҡатын-ҡыҙ. □ Неопрятная, неаккуратно одетая женщина. *Бисураға әйләнеү.*

**БИСУРАЛАЙ** (Р.: как кикимора; И.: as a kikimora; Т.: cadı gibi) *р.*

Бисура кеүек. □ Как кикимора. ■ *[Карсыҡ:] Йә, ни тағы бисуралай тупһа төбөндә тораһың. Өҫ-башыңды һал да түргә үт.* Х. Ғиләжев.

**БИСУРАЛАНЫУ (бисуралан-)** (Р.: быть неопрятным; И.: act as a kikimora; Т.: cadılaşmak) *ҡ.*

Әрпешләнеү. □ Быть неопрятным. *Бисураланып бөтөү.*

**БИСӘ** [дөйөм төрки *бег, бәг* 'эйә, хужа'] (Р.: жена; И.: wife; Т.: karı) *и. һөйл.*

**1.** Ирҙең ғаилә иптәше; ҡатын, йәмәғәт, иш. □ Жена, супруга. *Бисә алыу. Бисәләр эше.* ■ *Теге ҡыҙ мине бында ел ташланы, тигән. Тимербулат уға ғашиҡ булып та өлгөргән. Оҙаҡ уйлап тормай бисә итеп алып. бергә тора ла башлаған.* Әкиәттән.

**2.** Иргә барған, ире булған ҡатын-ҡыҙ; ҡатын. □ Замужняя женщина. *Бисә кеше.*

**БИСӘКӘЙ** (Р.: женщина; И.: unfamiliar woman; Т.: kadın) *и.*

**1.** *ирк. ҡар.* **бисә.** ■ *Юламан ҡарттың да сағыу ҡарашлы бисәкәйе бар ине.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Таныш булмаған бисәгә ҡарата әйтелә. □ Незнакомая женщина. *Бер бисәкәй килә.*

**3.** *мыҫҡ.* Бисәләр эшенә ҡыҫылған ирҙәргә әйтелә. □ Баба (*о мужчине, вмешивающемся в женские дела*).

**БИСӘКӘЙЛӘНЕҮ (бисәкәйлән-)** (Р.: стать женоподобным; И.: be effiminate; Т.: kadın gibi olmak) *ҡ. мыҫҡ.*

Ҡатын-ҡыҙға хас холоҡло булыу. □ Стать женоподобным. *Бисәкәйләнеп йөрөү.*

**БИСӘЛЕ-АБЫШҠАЛЫ** *с. диал. ҡар.* **ирле-ҡатынлы.**

**БИСӘЛЕККӘ АЛЫУ (бисәлеккә ал-)** (Р.: жениться; И.: marry; Т.: evlenmek) *ҡ.*

Өйләнеү. □ Жениться, брать в жёны. ■ *Ҡапҡан һалдым Ҡараташҡа, ҡуҡ бүрене алам тип, яусылаттым ҡоҙасаны бисәлеккә алам тип.* Халыҡ йырынан.

**БИСӘ-СӘСӘ** (Р.: женщины; И.: women; Т.: kadınlar) *и. йыйн.*

Бисәләр. □ Женщины. *Бисә-сәсә йыйылған.* ■ *Бөтәһе лә һуғышта .. тик ҡарт-ҡоро, бала-саға, бисә-сәсә генә ҡалған.* Д. Юлтый.

**БИҪТАУ ҮЛӘНЕ** *и. бот. ҡар.* **баллыҡай.**

**БИҪТӘ I** [фарсы *баст* 'йорт'] (Р.: пригород; И.: suburb; Т.: banliyö) *и.*

**1.** Ҡала сите. □ Пригород, предместье, слобода. ■ *Өфөнөң айырым биҫтәләре .. Ағиҙелдең уйпат һул яҡ ярын биләйҙәр.* М. Хисмәтов.

**2.** Район бүленешендә бәләкәй бер өлөш. □ Микрорайон. *«Ҡояшлы» биҫтәһе. «Көньяҡ» биҫтәһе.* ■ *Киләһе йылда Өфөлә яңы биҫтә барлыҡҡа киләсәк — ҡаланың Дим районы эргәһендәге ике күл араһында күркәм урында торлаҡ комплексы төҙөү күҙаллана.* «Йәшлек», 5 июнь 2010.

**БИҪТӘ II: тел биҫтәһе** (Р.: болтун; И.: chatterer; Т.: geveze) *и.*

Телгә бөткән, күп һөйләгән кеше. □ Болтун, болтунья, говорунья. *Тел биҫтәһе килгән.*

■ *Гөмүмән, Азамат тел биҫтәһе түгел. Ул сер һаҡлай торған малай.* Ә. Бикчәнтәев.

**БИҪТӘ III** *и. диал. ҡар.* **киҫкә.**

**БИТ I** [боронғо төрки *бет, бәт* 'бит, йөҙ'] (Р.: лицо; И.: face; Т.: yüz) *и.*

**1.** Кеше башының алғы яғы; йөҙ. □ Лицо./ Лицевой. *Киң бит. Оҙонса бит. Түңәрәк бит.* ■ *Башына аҡ селтәр шәл бөркәнгән, йөҙөн-битен ҡаплаған бер ҡыҙ килеп сыҡты.* Т. Йосопов. *Бикбулат, итектәренә ҡарап, биттәр ҙә туҙанланғандыр, тип уйланы һәм йыуынып алмаҡсы булды.* С. Агиш.

**2.** Йөҙҙөң яңаҡ өлөшө, яңаҡ. □ Щека. *Уң бит.* ■ *Пар алма уның биттәре, ирендәре ер еләге, күҙҙәре яҡты йондоҙҙар, леп-леп тибә йөрәге.* Р. Ниғмәти.

**3.** Тау, ҡалҡыулыҡтың һ. б. һарҡыу өлөшө. □ Склон, скат. *Тау бите.* ■ *Биттәреңдә, Уралтау, ҡамыштай ҡарағай урманың; итәгеңдә, Уралтау, балаҫтай болон, ҡырҙарың.* С. Юлаев.

**4.** *Ниҙеңдер* йәйелеп күренеп ятҡан майҙаны; йөҙ. □ Поверхность. *Ер бите. Күл бите. Күк бите.* ■ *Эре һорғолт ҡара болоттар бер-береһенә ҡушылып күк битен ҡаплап алды.* М. Ғафури.

**5.** *күсм.* Намыҫ. □ Совесть, стыд.

♦ **Биттән алыу** кеше алдында әрләү. □ Оскорблять, позорить. **Бит бешеү** ныҡ оятҡа ҡалыу. □ Краснеть *за что-то.* **Битендә ҡаны юҡ** оятһыҙ, намыҫһыҙ. □ Бесстыдный, бесстыжий, бессовестный, нахальный. **Бит йыртыу** намыҫты рәнйетеү. □ Стыдиться. ■ *[Сәмиғулла:] Бит йыртып шунан [байҙан] йомош һорай буламмы?* Ж. Кейекбаев. **Битен йыумаған** ояла белмәгән, оятһыҙ. □ Бесстыжий. ■ *Уның ҡулына барып эләкһәң, .. сәкелдәтеп ҡуйыуы бар. Ул бит битен йыумаған.* И. Насыри. **Биткә ҡара яғыу** *шул уҡ* **йөҙгә ҡара яғыу** *ҡар.* **йөҙ I.** **Бит һыйпау** *ниҙәндер* яҙыу, *нимәнәндер* буш ҡалыу, ҡолаҡ ҡағыу. □ Остаться с носом. **Бит һыуын түгеү** *кемдеңдер* алдында кәмһенеп үтенеү. □ Унижаться. **Биткә төкөрөү** кеше алдында бик оятлы итеү, хурлау. □ Позорить. **Көн бите** *ҡар.* **көн II, 2.** **Күн** *(йәки* **ер)** **бит** оятһыҙ, намыҫһыҙ. □ Бессовестный. ■ *Был Имайҙың ғына эше булыр. Бер тин тиһәң, иманын һата, йөҙө ҡара, күн бит!* Һ. Дәүләтшина. **Ҡара бит** *шул уҡ* **ҡара йөҙ** *ҡар.* **йөҙ I.** **Ҡояш бите** *шул уҡ* **көн бите**. **Ниндәй бит менән** берәй әҙәпһеҙ эшләнгән эштән, рәнйетеүҙән һ. б. һуң күренергә оялып, уңайһыҙланып ҡалғанда әйтелә. □ С какой совестью. **Табаҡ бит** киң түңәрәк бит. □ Широкое круглое лицо. **Төн битендә** *ҡар.* **төн 1.**

**БИТ II** (Р.: страница; И.: page; Т.: sayfa) *и.*

**1.** Китаптағы, дәфтәрҙәге һ. б. ҡағыҙҙың бер яғы. □ Страница. *Дәфтәр бите. Китап бите.* ■ *Гәзитәның дүртенсе битенән мин уҡырға тейеш ерҙе бармаҡ менән төртөп күрһәттеләр.* С. Агиш. *Һәр бер бите, хатта һәр бер юлы уйҙарымдай таныш китаптың.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Китаптағы, дәфтәрҙәге һ. б. билдәле бер үлсәм менән ҡырҡылған ҡағыҙ. □ Лист. *Бер бит ҡағыҙ. Титул бите. Блокноттың битен йыртып алыу.*

**3.** *полигр.* Бит. □ Полоса. *Гәзитәның тәүге бите.*

**4.** *күсм. Ниҙеңдер* үҫешендәге бер осор, этап; сәхифә. □ Этап, определённый отрезок времени. *Тарихтың бер бите.*

♦ **Яңы бит асыу** яңы осор, яңылыҡ башлау. □ Открывать новую страницу *чего, в чём.* ■ *Тормош яңы битен, серен асҡан, һәр яңыға үҫмер шатланған.* М. Хәй.

**БИТ III** [рус. < ингл. *bit*] (Р.: бит; И.: bit; Т.: bit) *и. инф.*

Мәғлүмәт миҡдары берәмеге. □ Бит. *Идара итеү биты.*

**БИТ IV** [рус. *ведь*] (Р.: ведь, же; И.: indeed; Т.: ki) *киҫ.*

Әйткән фекерҙе раҫлап, көсәйтә. □ Ведь, же *(утвердительная част.). Ул кисә ҡайтты бит.* ■ *Йәш күңел бит инде, миңә тәү башлап ҡалаға барыу ҙа ҡыҙыҡ булып тойолдо.* Т. Йәнәби. *Бурылҡайым, мин бит яҡшы инем, эш эшләнем, түктем тиремде.* Ғ. Сәләм.

**БИТ АЛМАҺЫ** (Р.: скула; И.: cheekbones; Т.: elmacık) *и. анат.*

Биттең тупайып торған өлөшө. □ Скула. ■ *Ҡалынса күпереп торған бәләкәй ирендәре наҙлы йылмаялар ҙа ҡыҙарып янып торған бит алмаларына уйҡыл һалалар.* Һ. Дәүләтшина.

**БИТ АСЫУ (бит ас-)** (Р.: показ невесты родственникам жениха; И.: kind of ethnographic rite; Т.: yüz görümlüğü) *к. этн.*

Килен төшкәс, уны кейәүҙең ата-әсәһенә, туғандарына күрһәтеү йолаһы. □ Показ невесты родственникам жениха (*обряд открывания лица невесты родителями, родственниками жениха, одаривая её подарками*).

**БИТАРАФ** [фарс. < ғәр. بي طرف ‘сит түгел, ситке түгел’] (Р.: нейтральный; И.: neutral; Т.: tarafsız) *с. кит.*

Бер яҡҡа ла ҡатнашмаған, бер яҡлы ла түгел. □ Нейтральный, воздержавшийся (*при голосовании*). *Битараф кеше. Битараф булыу.* ■ *Бер тауыштан, – тип ҡуйҙы йыйылышта председателлек иткән Әхмәҙуллин ҡарт, дәррәү күтәрелгән ҡулдарҙы күреп. Юҡ, бер битараф бар, Гәрәй ҡарт битараф.* Д. Исламов. *Милләт яҙмышына битараф булмағандарҙың ышәйеүе тураһындағы хыял менән аяҡ баҫам үҙем һәр Яңы йылға.* Г. Янбаева.

**БИТАРАФЛАШЫУ (битарафлаш-)** (Р.: стать нейтральным; И.: be neutral; Т.: tarafsız olmak) *ҡ.*

Битараф хәлгә килеү. □ Стать нейтральным.

**БИТАРАФЛЫҠ (битарафлығы)** (Р.: нейтральность; И.: neutrality; Т.: tarafsızlık) *и. кит.*

Битараф мөнәсәбәт. □ Нейтральность. *Битарафлыҡ һаҡлау.* ■ *Ул [Ғибаҙулла] ҡыйыу ғына өйөнә инеп китте. Әмин ни, битарафлыҡ һаҡларға тейеш кеше булғас, йортҡа ла инеп тормайынса, үҙ яйым менән генә Ағиҙел буйына ҡарай ҡуҙғалдым.* Д. Исламов.

**БИТЖАУЛЫҠ (битжаулығы)** *и. диал. ҡар.* **таҫтамал.** *Битжаулыҡҡа һөртөү.*

**БИТ ЯУЛЫҠ (яулығы)** *и. диал. ҡар.* **таҫтамал.** *Бит яулыҡ йыуыу.*

**БИТЛА** (Р.: шарниры от сундука; И.: hinge; Т.: menteşe) *и. диал.*

Һандыҡ күгәне. □ Шарниры от сундука.

**БИТЛЕК I (битлеге)** (Р.: маска; И.: mask; Т.: maske) *и.*

**1.** Биткә кейә торған япма. □ Маска. *Марля битлек.* ■ *Битлек бәйләгән Фәтхиә операция бүлмәһендә һуңғы әҙерлек эштәрен алып бара ине.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Умарта ҡарағанда биткә кейә торған селтәр. □ Сетка (*для предохранения лица от укусов пчёл*). ■ *Ғариф умартанан бал алғанда кейә торған битлеген алды.* Ғ. Хәйри.

**3.** Тирене йәшәртеү, йомшартыу, таҙартыу өсөн һыланған май; йәшелсә, емеш-еләк иҙмәһе. □ Маска. *Битлек һөртөү.*

**4.** *күсм. Кемдеңдер* ысын йөҙөн йәшереп торған хәйлә, алдыҡ. □ Лицемерие. ■ *Итәғәтле кеше битлеген бөтә халыҡ алдында һыпыра тартып алырға кәрәк.* Н. Мусин.

♦ **Битлек кейеү** ысын йөҙҙө йәшереү. □ Лицемерить. *досл.* Надеть маску. **Битлеген һалдырыу** *кемдеңдер* йөҙөн асыу, алдығын фашлау. □ Снимать маску, разоблачать, срывать маску *с кого.*

**БИТЛЕК II (битлеге)** (Р.: налобная повязка пожилых женщин; И.: kind of fillet; Т.: çatkı) *и. этн.*

**1.** Өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың яулыҡ йәки ҡалпаҡ өҫтөнән маңлайға бәйләп ҡуя торған баш бәйләмесе (*ука таҫма*). □ Налобная повязка пожилых женщин (*лента с позументом, которая повязывалась на лоб поверх платка*).

**2.** *архит.* Өй ҡыйығының маңлайына ҡағылған таҡта. □ Причелина. *Семәрле битлек.*

**БИТЛЕК III (битлеге)** (Р.: оболочка плода в утробе (*рубашка*); И.: decidual membrane; Т.: döl kesesi) *и. диал.*

Ҡарындағы баланы уратып алған яры, йөҙлөк. □ Оболочка плода в утробе (*рубашка*). ■ *Битлек менән тыуған бала бәхетле була тиҙәр.* Л. Абдуллина.

**БИТЛӘК I (битләге)** *и. диал. ҡар.* **битләү I.**

**БИТЛӘК II (битләге)** (Р.: заика; И.: stutterer; Т.: kekeme) *и. диал.*

Тотлоҡма. □ Заика.

**БИТЛӘС** (Р.: косогор; И.: hillside; Т.: yamaç) *и. диал.*

Тау битләүе. □ Косогор. ■ *Ташбатҡан ауылы үркәсле-үркәсле бейек тауҙар итәгенә, бер битләстә, тау ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған.* Ж. Кейекбаев.

**БИТЛӘТЕҮ (битләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **битләү II.** *понуд. от* **битләү II.**

**БИТЛӘҮ I** (Р.: склон; И.: sloping; Т.: yamaç) *и.*

Тау битенең түбәндәге һөҙәгерәк өлөшө. □ Отлогий, широкий склон горы. ■ *Ҡаҙыш ауылынан төньяҡтараҡ Мырҙағол тауы бар. Уның ике яҡ битләүе лә һөҙәк.* Хикәйәттән.

**БИТЛӘҮ II (битлә-)** (Р.: проходить по склону; И.: walk by a hillside; Т.: yamaçtan geçmek) *ҡ.*

Тау, һырт битен буйлау. □ Проходить по склону. ■ *Ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған.* З. Биишева.

**БИТЛӘҮ III (битлә-)** (Р.: укорять; И.: reproach; Т.: yüzüne vurmak) *ҡ.*

**1.** Ғәйепләп әйтеү; битәрләү. □ Укорять, упрекать.

**2.** Кеше алдында яманлап әрләү. □ Ругать в лицо, бранить в глаза. ■ *Унан тағы ни өсөн инде мине Әхмәҙи алдында битләп ултыраһың?* Һ. Дәүләтшина.

**БИТЛӘҮ IV (битлә-)** (Р.: перелистывать; И.: turn over pages; Т.: sayfaları çevirmek) *ҡ.*

Китап, дәфтәрҙең битен асыу. □ Перелистывать. ■ *Ул [Шәмси] ҡулындағы китапты битләп ултырҙы ла уҡый башланы.* Ғ. Хәйри.

**БИТСАЯ** *с. диал. ҡар.* **битһеҙ II.**

**БИТ-ТӘН** (Р.: тело; И.: body; Т.: vücut) *и. йыйн.*

Тотош тән. □ Тело. *Бит-тәнгә ит-ҡан йүгертеп.*

**БИТУМ** [рус. < лат. *bitumen* 'тау ыҫмалаһы'] (Р.: битум; И.: bitumen; Т.: bitüm, yer sakızı) *и.*

Ыҫмалаланып торған углеводородлы йәбешкәк (*тәбиғи һәм яһалма*) матдәләрҙең дөйөм исеме; кипкән нефть йәки нефть ҡалдыҡтарынан алынған төҙөлөш материалы. □ Битум. *Битум плита. Битум ҡоролмалары.* ■ *Ҡайһы бер илдәрҙә нефть битумдары төҙөлөш эшендә ҡулланылған.* Д. Бураҡаев.

**БИТУМЛАУ (битумла-)** (Р.: битумизировать; И.: treat with bitumen; Т.: bitümlemek) *ҡ.*

Битум һалыу. □ Битумизировать.

**БИТУМЛЫ** (Р.: битумный; И.: bituminous; Т.: bitümlü) *с.*

Битум менән. □ Битумный. *Битумлы нефть.*

**БИТҺЕҘ I** (Р.: без страниц; И.: without pages; Т.: sayfasız) *с.*

Биттәре булмаған. □ Без страниц, листов. *Битһеҙ альбом.*

**БИТҺЕҘ II** (Р.: бесстыдный; И.: brazen; Т.: utanmaz) *с.*

Оялыу, тартыныуҙы белмәгән намыҫһыҙ; оятһыҙ. □ Беззастенчивый, бесстыдный, наглый, нахальный, бессовестный, бесчестный. *Битһеҙ кеше. Битһеҙ булыу.* ■ *Башҡорт намыҫына быҫраҡ ташлай юрый ҡайбер битһеҙ, иманһыҙ.* Ш. Бабич. ● *Битһеҙ бүркен баҫмаҫ.* Мәҡәл.

**БИТҺЕҘЛЕК (битһеҙлеге)** (Р.: бесстыдство; И.: cheek; Т.: utanmazlık) *и.*

Намыҫһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ. □ Бесстыдство, нахальство, наглость.

**БИТҺЕҘЛӘНЕҮ (битһеҙлән-)** (Р.: становиться бесстыдным; И.: be brazen; Т.: küstahlaşmak) *ҡ.*

Оят, намыҫты юғалтыу, оятһыҙлыҡ күрһәтеү. □ Становиться бесстыдным, бесчестным, бессовестным; наглеть, обнаглеть. *Ир көндән-көн битһеҙләнде.*

**БИТӘ** (Р.: лыжные крепления в виде широкого ремня; И.: ski binding; Т.: kayak kemeri) *и.*

Саңғының аяҡ башын кейҙерә торған яҫы бауы. □ Лыжные крепления в виде широкого ремня. *Саңғы битәһе.*

**БИТӘЛ** [рус. *фитиль*] (Р.: рыболовная снасть из частой сетки (*вентерь, мережа*); И.: trammel; Т.: olta takımı) *и. бал. ҡ.*

**1.** Ептән үргән ҡанатлы мурҙа. □ Рыболовная снасть из частой сетки (*вентерь, мережа*).

**2.** *диал.* Бәләкәй ау. □ Маленькая сеть.

**БИТӘР I** (Р.: укор; И.: reproach; Т.: sitem) *и.*

**1.** Йөҙ йыртып әйтелгән һүҙ. □ Укор, упрёк. ■ *Харистың тауышында битәр менән бергә янау ҙа ишетелде.* Г. Ғиззәтуллина.

**2.** Әрләш. □ Ругань, брань. *Битәр һүҙ.* ■ *Бей битәрен ишеткән, йәнен бейҙән өшөткән ил күрмәйенсә, кем күрер.* Ҡобайырҙан.

**БИТӘР II** [фарс. بتّر ‘иң насар (*яман*); насарыраҡ (*яманыраҡ*)’] (Р.: особенно; И.: particularly; Т.: özellikle) *р.*

Артыҡ, бигерәк, ныҡыраҡ. □ В особенности. ■ *[Хәмиҙә:] Шатландыҡ. Минән битәр килен шатланды.* С. Ҡудаш. *Беҙ үҙебеҙҙән битәр аттарҙы йәлләй торғайныҡ.* С. Агиш.

**БИТӘР III** (Р.: кроме; И.: except; Т.: başka) *бәйл.*

Башҡа, бүтән мәғәнәһендә. □ Кроме. *Һинән битәр яҡын кешем юҡ.*

**БИТӘР IV** [фарс. بتّر ‘әҙәпһеҙ; әшәке’] *р. ҡар.* **бикәр II.**

**БИТӘРЛӘНЕҮ (битәрлән-)** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **битәрләү.** *возвр. от* **битәрләү.** *Битәрләнеп йәшәү. Битәрләнеп үҫкән бала.*

**БИТӘРЛӘШЕҮ (битәрләш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **битәрләү.** *взаимн. от* **битәрләү.**

**БИТӘРЛӘҮ (битәрлә-)** (Р.: ругать в лицо; И.: scold; Т.: sövmek) *ҡ.*

Ғәйепләп, йөҙ йыртып әйтеү; әрләү. □ Ругать в лицо, бранить в глаза. ■ *Атаһы керһә лә, сыҡһа ла, бер сәбәп тапҡан булып, Зәйнәпте битәрләй.* М. Ғафури.

**БИФШТЕКС** [рус. < ингл. *beef steak* ‘һыйыр ите киҫәктәре’] (Р.: бифштекс; И.: beef steak; Т.: biftek) *и.*

Түшкәнең урта өлөшөн киҫәкләй ҡырҡып ҡурылған һыйыр ите. □ Бифштекс. *Бифштекс бешереү.*

**БИХАҠ** [фарс. < ғәр. بیحق] (Р.: не имеющий прав; И.: unjust; Т.: haksız) *с. иҫк. кит.*

Хаҡһыҙ. □ Не имеющий права на *что*, незаконный. *Бихаҡ кеше.*

**БИХАЯ** [фарс. < ғәр. بی حیاء] (Р.: бесстыдный; И.: shameless; Т.: utanmaz) *с. иҫк. кит.*

Оятһыҙ, намыҫһыҙ. □ Бесстыдный, наглый. *Бихая ҡылыҡ.*

**БИХИСАП** [фарс. < ғәр. بی حساب] (Р.: бесчётный; И.: countless; Т.: sayısız) *с. кит.*

Иҫәпһеҙ, һанһыҙ. □ Бессчётный, бесчисленный. ■ *Бүгәсәү батыр янына ғәскәр килгән бихисап: әйәрләп атҡа менгән дә, биленә ҡылыс элгән дә.* С. Юлаев. *Ни тиһәң дә, тормош көн дә беҙҙе бихисап һынауҙар алдына ҡуя.* Г. Янбаева.

**БИХОЗУР** [фарс. < ғәр. بی حضور] (Р.: невесёлый; И.: distressed; Т.: üzüntülü) *с. иҫк. кит.*

Күңелһеҙ, кәйефһеҙ. □ Невесёлый, печальный. *Бихозур булыу.*

**БИХӘБӘР** [фарс. < ғәр. بی خبر] (Р.: неосведомлённый; И.: ignorant; Т.: habersiz) *с. иҫк.*

Хәбәрһеҙ, мәғлүмәтһеҙ. □ Неосведомлённый, несведующий. *Хәрби эштән бихәбәр булыу.*

**БИЦЕПС** [рус. < лат. *biceps* ‘ике башлы’] (Р.: бицепс; И.: biceps; Т.: pazı) *и.*

Беләк йәки бот мускулы. □ Бицепс.

**БИҺЕР** *и. диал. ҡар.* **бүҫер.**

**БИҺУШ** [фарс. بیهوش] (Р.: бесчувственный; И.: insensible; Т.: baygın) *с. иҫк.*

Һушһыҙ, иҫһеҙ. □ Бесчувственный, упавший в обморок. *Биһуш булыу.*

**БИЧ I** *и. диал. ҡар.* **мейес.**

**БИЧ II** [рус.] (Р.: бродяга; И.: tramp; Т.: serseri) *и.*

Йолҡош, меҫкен кеше. □ Бич, бродяга.

**БИШ I** [боронғо төрки *бәл/биш* 'биш'] (Р.: пять; И.: five; Т.: beş) *төп һ.*

**1.** Дүрттән һуң килгән һан; 5, V цифрҙарының исеме. □ Пять. *Биш бишең егерме биш.*

**2.** *Кемдеңдер* йәки *нәмәнеңдер* 5-кә тиң иҫәбе. □ Пять. *Биш кеше. Биш алма. Биш көн.* ■ *Аталарын дүрт күҙ менән көтөп торған биш бала өнһөҙ, шау-шыуһыҙ ҡаршы алды.* Ғ. Дәүләтшин. *Командир ҙа булған Ҡаһым түрә командаһын көнөнә биш урай.* Халыҡ йырынан.

**3.** *миф.* Күплек символы. □ Символ множества. *Ниңә миңә биш тапҡыр тәкрарлайһың?*

♦ **Биш артыҡ** берәй *нәмәнең* икенсе *нәмәнән* өҫтөн икәнлеген күрһәткәндә әйтелә. □ Во много раз лучше. **Биш бармағы кеүек белеү** бик яҡшы, ныҡ белеү. □ Знать очень хорошо, на отлично. ■ *Пушкаһын да, пулемётын да, мылтығын да биш бармағым кеүек беләм.* Б. Бикбай. **Бергә биште ҡушыу** *йәки* **берҙе биш итеү** берәй *нәмәне* арттырып һөйләү; шапыртыу. □ Преувеличивать (*в разговоре*). ■ *Яңы ваҡиғалар тураһында һөйләйҙәр, ялғанлайҙар, бергә биште ҡушалар.* И. Насыри. **Биш былтыр** әллә ҡасан, бик күптән. □ Давным-давно. **Биш былтырғы** әллә ҡасанғы, бик күптәнге. □ Давнишний. **Биш ҡат тиреһен тунау** (*йәки* **һыҙырыу**) ныҡ, хәлдән тайғансы (*эшләтеү, туҡмау*). □ Спустить шкуру *с кого. букв.* Содрать пять шкур с него. ■ *[Көтлояр — Айбулатҡа:] Ныязғол һиңә ярҙам иткән хәлдә лә, ул уның өсөн биш ҡат тиреңде һуйып түләтәсәк. Күр ҙә тор, – тине.* Һ. Дәүләтшина. **Бишкә бөгөлөү** ярамһаҡланып, өлтөрәп тороу. □ Угодничать. *Түрә алдында бишкә бөгөлөү.* **Үҙ бише биш** үҙ һүҙле, ныҡышмал кешегә ҡарата әйтелә. □ Неотступный, упорный, напористый, неуступчивый, настойчивый. **Бишкә төрләнеү** төрлөсәгә үҙгәреү. □ Меняться, видоизменяться. ■ *Биш бармаҡтай беҙ биш малай үҫтек, бишебеҙ ҙә бишкә төрләнеп.* В. Әхмәҙиев. **Бишкә ярылырҙай булыу** эште, мәшәҡәтте бөтөрә алмай яфаланыу. □ Не успевать, чуть не лопнуть. ■ *Һин саҡ ҡына ҡул арама керер инең. Юғиһә, бер үҙем бишкә ярылырҙай булып йөрөйөм.* М. Кәрим.

**БИШ II** (Р.: пятёрка; И.: a five; Т.: beşen yüksek not) *и.*

Биш баллы баһа системаһындағы иң юғары «бик яҡшы» билдәһе. □ Пятёрка (оценка). *Биш алыу. Бишкә генә уҡыу.*

**БИШБАРМАҠ I (бишбармағы)** [боронғо төрки *биш + пармак*] (Р.: бишбармак; И.: kind of Bashkir meal; Т.: milli yemek türü) *и. этн.*

**1.** Башҡорт халҡының милли ашы: ваҡлап туралған ит һәм шаҡмаҡлап киҫелгән эре һалманы бешереп, һуғанлап, борослап, тоҙлоҡло һурпа менән бирелә торған ашамлыҡ. □ Бишбармак (*национальное блюдо, приготовляемое из мяса и лапши, нарезанной квадратиками, приправленное жирным бульоном, луком и перцем*). *Бишбармаҡ бешереү.* ■ *[Фазлый] үҙен киң сахралағы кейеҙ тирмәлә, ҡурай моңдары аҫтында ҡымыҙ эсеп, бишбармаҡ ашап ултыра һымаҡ тойҙо.* И. Насыри.

**2.** *диал.* Йола ашы. □ Обрядовое блюдо.

**БИШБАРМАҠ II (бишбармағы)** (Р.: кисть руки; И.: hand; Т.: el) *и. диал.*

Ҡул суғы. □ Кисть руки.

**БИШБАРМАҠ III (бишбармағы)** *и. диал. ҡар.* **бирсәткә.**

**БИШБАРМАҠ IV (бишбармағы)** (Р.: башкирский женский танец; И.: sort of female national dance; Т.: Başkurt halk oyunu) *и.*

Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бейеүе. □ Башкирский женский танец. ■ *Фирүзә сәхнәгә сығып, бишбармаҡты бейене.* К. Мәргән.

**БИШБАРМАҠ V (бишбармағы)** *и. диал. ҡар.* **бишташ.**

**БИШБАШ (бишкөлтә)** (Р.: суслон; И.: bundle of five sheaves; Т.: ekin demeti) *и. диал.*

Биш көлтәнән торған һоҫлан. □ Суслон (*из пяти снопов*).

**БИШБИЛ** (Р.: казакин ниже колен; И.: sort of a waistcoat; Т.: kazakin) *и. этн.*

Билгә һылашып торорлоҡ итеп, итәккә табан киңәйтеп, сабыулап тегелгән, тубыҡтан түбән төшөп торған кәзәкей. □ Казакин ниже колен, с длинными рукавами, узкий в талии, расширенный к низу.

**БИШЕК (бишеге)** [боронғо төрки *бәлчик/бишик* 'бишек'] (Р.: колыбель; И.: cradle; Т.: beşik) *и.*

**1.** *ҡар.* **сәңгелдәк.** ■ *Бишектә үкһеҙ имсәк балаһы илап ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов. ● *Үҙ илең — алтын бишек, башҡа илдең төбө тишек.* Мәҡәл.

**2.** *күсм. Кемде* йәки *ниҙелер* тыуҙырған, үҫтергән ер. □ Колыбель. ■ *Тыуған, үҫкән илем — ал бишек, алғыһатыр инде ҡайтырға.* Халыҡ йырынан.

**3.** *миф.* Баланы һаҡлай, ҡурсалай торған предмет. □ Колыбель; обережное пространство ребёнка . ■ *Буш бишекте бәүетмәйҙәр.* Башҡорт мифологияһынын.

**БИШЕК ЙЫРЫ** (Р.: колыбельная; И.: lullaby; Т.: ninni) *и.*

**1.** Балаларҙы йоҡлатҡанда йырланған йыр. □ Колыбельная. ■ *Төн баҫыуға бишек йырын йырлай, өнһөҙ йыры моң да наҙ ғына.* Р. Назаров.

**2.** *миф.* Баланың киләсәген билдәләй, баланы һаҡлай, ҡурсалай торған йыр. □ Колыбельная песня, имеющая проецирующий и обережный характер.

**БИШЕКТУЙ** *и. этн. ҡар.* **бишек туйы.** *Бишектуй үткәреү.*

**БИШЕК ТУЙЫ** (Р.: колыбельная свадьба; И.: sort of national ethnographic rite; Т.: beşik düğünü) *и. этн.*

Бала тыуғас үткәрелгән йола байрамы. □ Колыбельная свадьба *(праздник в честь рождения ребёнка).*

**БИШЕНСЕ** [боронғо төрки *бишинч* 'бишенсе'] (Р.: пятый; И.: the fifth; Т.: beşinci) *рәт һ.*

Урын тәртибе 5 менән билдәләнгән. □ Пятый. *Бишенсе йыл. Бишенсе көн. Бишенсе цех.* ■ *Пассажир поезы киткән, тик бишенсе юлда ғына паровозһыҙ тауар составы тора.* Б. Бикбай. *Көнбикә бер-бер артлы дүрт ул тапты, хәҙер бишенсеһен [көтә].* Н. Мусин.

**БИШ ИЛЕ** (Р.: толщиной в пять пальцев; И.: thickness of the five fingers; Т.: beş parmak kalınlığı) *р. диал.*

Биш бармаҡ ҡалынлығында. □ Толщиной в пять пальцев. *Биш иле ҡалдырыу.*

**БИШҠУНАҠ (бишҡунағы)** (Р.: апрельский буран; И.: last blizzards in April; Т.: Nisanda kar fırtınası) *и.*

Апрель айында була торған биш көнлөк буран. □ Апрельский буран. ■ *Ҡыштың һуңғы буранын бишҡунаҡ тиҙәр.* Халыҡ ижадынан.

**БИШЛЕ** (Р.: пятый; И.: size five; Т.: beşinci) *с.*

**1.** Үлсәме биш берәмеккә тиң. □ Пятый *(по размеру). Бишле калуш. Бишле шәм.* ■ *Тоноҡ ҡына яҡтыртҡан бишле шәм яҡтыһында йылҡы ите һалып бешерелгән һалманы ашап туйғас, Мәликә һауыт-һаба йыуырға кереште.* Я. Хамматов.

**2.** *диал. ҡар.* **биш II.** ■ *Гел «бишле»гә, һирәктән-һирәк «дүртле» билдәһенә уҡыған ғәзиз балаһын Бибинур Ғүмәрөвна, көсө етһә, күтәреп кенә йөрөтөргә риза ине.* Ә. Хәкимов.

**БИШЛЕК (бишлеге)** (Р.: пятёрка; И.: five-rouble note; Т.: beşlik) *и.*

Биш һумлыҡ аҡса. □ Пятёрка, пятирублёвка. ■ *Уның [йомғаҡтың] эсенән тағы бер егерме бишлек, бер бишлек килеп сыҡты.* М. Кәрим.

**БИШЛӘП** (Р.: около пяти; И.: about five; Т.: beşe kadar) *сама һ.*

Биш тирәһе, бишкә яҡын. □ Около пяти, до пяти. *Бишләп кеше.*

**БИШЛӘТӘ** (Р.: в пять раз; И.: five times as big; Т.: beş defa) *р.*

Биш тапҡыр. □ В пять раз. *Бишләтә артыҡ.* ■ *Бәхет яулағанға бәхет бишләтә килһен!* Б. Бикбай.

**БИШМЫЙЫҠ (бишмыйығы)** *и. диал. ҡар.* **бапаҡ I.** *Бапаҡтан ҡурҡыу.*

**БИШМӘТ** [фарсы *пешпанд* 'камзул'] (Р.: бешмет; И.: padded jacket; Т.: hırka) *и.*

**1.** Мамыҡты, йөндө һырып тегелгән оҙон итәкле, оҙон еңле йылы өҫ кейеме. □ Бешмет, стёганка *(зимняя верхняя одежда на подкладе).* ■ *Тышын ҡыҙыл кергәзиндән, эсен ҡара бәҙдән ҡуйып, мамыҡ менән һырып, бишмәт тектерҙеләр.* М. Ғафури. *Бишмәтеңдә һинең биш төймә, ишул бишмәткәйеңде күп киймә.* Халыҡ йырынан.

**2.** *диал. ҡар.* **камзул.** *Бишмәт тегеү.*

**БИШНӘК I (бишнәге)** (Р.: водный путь; И.: trough; Т.: su yolu) *и. диал.*

**1.** Тар итеп йырып, сит-ситен көпләп ағыҙған һыу юлы. □ Водный путь.

**2.** *Берәй нимәне* ырып, соҡоп эшләнгән, һыу ағыр өсөн тәғәйен ҡулайлама. □ Жёлоб для стока воды *(на дощатой крыше).* ■ *Кәмә тирмән бишнәгенән һыу үренә күтәрелде.* Г. Хәйри.

**БИШНӘК II (бишнәге)** [рус. *вечняк*] (Р.: бессрочное пользование; И.: eternal ownership; Т.: sınırsız kullanım) *и. тар.*

**1.** Мәңгелек, ғүмерлек ҡулланыу *(һатылған ергә ҡарата).* □ Вечное, бессрочное пользование *(купленной землёй). Ерҙе бишнәккә һатыу.*

**2.** Ерен мәңгелеккә һатҡан кеше. □ Вечняк *(продавший землю на вечное пользование).* ■ *Ураҡсыларҙың күбеһе — ерҙәрен һатып, ерһеҙ ҡалып, бер нисә йылдан бирле бишнәк исеме күтәреп йөрөгән башҡорттар.* Һ. Дәүләтшина.

**БИШӨЙЛӨЛӘР** (Р.: название родового подразделения; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуы аймағы. □ Бишәйләләр *(родовое подразделение башкир племени юрматы).*

**БИШТАШ** (Р.: детская игра в камешки; И.: kind of children's game; Т.: beştaş oyunu) *и.*

Балалар уйыны *(йомро ғына биш ташты һикертеп, бармаҡ араһынан төрлөсә үткәреп уйнайҙар).* □ Детская игра в камешки *(«пять камушков»).* ■ *Зөлхизә тәҙрә янындағы ултырғыста ҡулындағы ике винтты һикертеп, шаярыбыраҡ ултыра ине. — Нәмә, бишташ уйнайһыңмы әллә? — тине Ташбулат.* С. Агиш.

**БИШТАШ ҺАЛЫУ (бишташ һал-)** (Р.: гадание на пяти камушках; И.: sort of guesswork; Т.: taş falına bakmak) *ҡ. миф.*

Биш таш менән күрәҙәлек итеү. □ Гадание на пяти камушках, которые бросают вверх к божеству неба (Күк тәңре) для его умилостивления. По расположению камней предсказывают судьбу.

**БИШТЕК** *с. диал. ҡар.* **тиктормаҫ.**

**БИШТИНДЕК (биштиндеге)** (Р.: нары; И.: plank bed; Т.: tahta yatak) *и. диал.*

Ишек төбөндәге урындыҡ. □ Маленькие нары возле дверей.

**БИШТӘР** [рус. *бестарка* < фарс. *бистәр*] *и. диал. ҡар.* **артмаҡ 3.** ■ *Сафтар һирәгәйҙе .. юҡ сумаҙан, биштәр, юҡ әүәлге хисе дуҫтарҙың.* Х. Ғиләжев.

**БИШТӘРЛӘҮ (биштәрлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **артмаҡлау.** ■ *Юл ситендә арҡаларына биштәрләп тоҡ аҫҡан ике малай тора икән.* Г. Ибраһимов.

**БИШУЛ** (Р.: бишул; И.: Bashkir tribal name; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһенә ҡараған бер башҡорт ырыуының исеме. □ Бишул *(название одного из башкирских родов племени табын).*

**БИШӘЙ** (Р.: бишей; И.: Bashkir tribal name; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Үҫәргән ҡәбиләһенә ҡараған бер башҡорт ырыуының исеме. □ Бишей *(название одного из башкирских родов племени усерган).*

**БИШӘМ** (Р.: копна из пяти снопов; И.: bundle of five sheaves; Т.: ekin demeti) *и. диал.*

Биш көлтәнән торған өйөм. □ Копна из пяти снопов.

**БИШӘМБӘК (бишәмбәге)** *и. диал. ҡар.* **бишташ.** *Бишәмбәк уйнау.*

**БИШӘР** (Р.: по пяти; И.: five each; Т.: beşer) *бүл. һ.*

Һәр бере биштән торған, бишкә тиң. □ По пяти. *Бишәрҙән бүлеү. Кеше башына бишәр алма.* ■ *Әгәр тәңребеҙҙең амин тигән сағына тура килеп, табыш менән ҡайтһаҡ, берегеҙ ҙә буш ҡалмаҫһығыҙ, һарыҡ малынан һәр берегеҙгә кәмендә бишәр баш әләгер.* К. Мәргән.

**БИШӘРЛӘП** (Р.: пятёрками; И.: by fives; Т.: beşer) *р.*

Бишәр итеп, биш иҫәбенән. □ Пятёрками. ■ *«Мәскәү — Брест» юлын һаҡлаусы ҡыҙҙар бишәрләп землянкаларҙа йәшәйҙәр.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 4, 2010.

**БИШӘҮ** (Р.: пятеро; И.: five; Т.: beş) *йыйн. һ.*

Биш кеше йәки нәмә. □ Пятеро. ■ *Беҙ бер итәктә бишәү үҫтек, бер ҙә генә талашмай торғайныҡ!* С. Агиш. *Унан һуң мин яңғыҙ ҙа түгел әле. Беҙ бишәү.* К. Мәргән. ● *Алғанға алтау ҙа аҙ, биргәнгә бишәү ҙә күп.* Мәҡәл.

**БИШӘҮЛӘП** (Р.: впятером; И.: five together; Т.: beş kişi) *р.*

Биш кеше бергә. □ Впятером. ■ *Мин Аҡъял батыр булам. Ә былар юлдаштарым. Бишәүләп донъя ҡыҙырып йөрөп ятабыҙ.* Әкиәттән. *Бишәүләп өр-яңы ҡәбер тупрағы тирәләй оҙаҡ өндәшмәй ултырҙыҡ.* Д. Юлтый.

**БИШӘҮЛӘШЕП** (Р.: впятером; И.: five together; Т.: beş kişi) *р.*

Биш кеше бергәләшеп. □ Впятером. *Бишәүләшеп эшләү.* ■ *Капитан Силин ҡулы аҫтында бишәүләшеп дошман тылына сыҡтыҡ.* А. Мағазов.

**БИӘСӘЙ** *и. диал. ҡар.* **ҡәйнә.**

**БИӘТӘ** *и. диал. ҡар.* **ҡайны.**

**БЛАНК** [рус. < фр. *blanque* 'аҡ'] (Р.: бланк; И.: printed form; Т.: form) *и.*

Тейешле урынын тултырып яҙыу өсөн ерлеге әҙерләнгән ҡағыҙ. □ Бланк. *Бланк ҡағыҙы. Телеграф бланкыһы. Иҫәп бланкыһы. Бланк тултырыу.* ■ *Халыҡ иҫәбен алыу көндәрендә өйҙә булмаясаҡ кешеләр менән алдан һөйләшеп махсус бланк тултыра инек.* К. Ғәйфуллина.

**БЛАНТ** *и. диал. ҡар.* **ишек алды.**

**БЛАТ** *и. һөйл.*

**1.** *ҡар.* **таныш-тоношлоҡ.** *Блат менән алыу.* ■ *Уның шунда блаты бар: беҙгә тәтемәгән Һиндостан сәйҙәрен артмаҡлап ҡайта ауылға — ҡарт-ҡоро шуның аша алдырта.* Й. Солтанов.

**2.** Йәшерен (шартлы) тел. □ Воровской жаргон.

**БЛАТЛЫ** (Р.: блатной; И.: having apul; Т.: pistonlu) *с. һөйл.*

Блаты булған. □ Блатной. *Блатлы һаналыу. Блатлы булыу.* ■ *Бер рус ҡатынына операция эшләргә тура килде. Ҡаланың Күмерселәр һарайында билет һатыусы булып сыҡты ул. Үҙем дә уйламағанда блатлы булдым, кил, мин һине бушҡа индерермен, ти торғайны.* «Йәшлек», 3 март 2009.

**БЛЕЙЗЕР** [рус. < ингл. *blazer*] (Р.: блейзер; И.: blazer; Т.: blazer ceket) *и.*

Кеҫәле киң пинжәк. □ Блейзер. *Блейзер кейгән ир.*

**БЛЕФ** [рус. < ингл. *bluff*] (Р.: блеф; И.: bluff; Т.: blöf) *и.*

Уйҙырма, ялған, буш ҡыуыҡ. □ Блеф.

**БЛИЗАРД** [рус. < ингл. *blizzard* 'буран'] (Р.: близард; И.: blizzard; Т.: makine türü) *и.*

Мал аҙығы эшкәртеү машинаһы. □ Близард. *Близард һатып алыу.*

**БЛИЗЗАРД** [рус. < ингл. *blizzard* 'буран'] (Р.: близзард; И.: blizzard; Т.: blizzard) *и.*

Компьютер уйындары уйлап табыусы, сығарыусы компания. □ Близзард *(компания, выпускающая компьютерные игры).*

**БЛИНДАЖ** [рус. < фр. *blindage*] (Р.: блиндаж; И.: shelter; Т.: blindaj) *и. хәрб.*

Туптан һаҡланыу өсөн ергә ҡаҙып, өҫтән нығыҡ итеп ябып эшләгән ҡоролма. □ Блиндаж. ■ *Окоптар тәрән ҡаҙылған, блиндаждар нығыҡ эшләнгән.* Д. Юлтый.

**БЛИНТ** [рус. < нем. *blind*] (Р.: блинт; И.: blind; Т.: blind) *и. полигр.*

Китап тыштарына буяуһыҙ баҫыу ысулы. □ Блинт. *Блинт ысулын ҡулланыу.*

**БЛИСА** *и. диал. ҡар.* **һоҫҡо.**

**БЛИЦ I** [рус. < нем. *Blitz* 'йәшен'] (Р.: блиц; И.: flashlight; Т.: flaş) *и.*

**1.** Фото төшөргәндә ҡапыл ғына көслө яҡтылыҡ бирә торған лампа, ҡыуыҡса. □ Блиц.

**2.** Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уйналған шахмат партияһы. □ Блиц.

**БЛИЦ II** [рус. < нем. *Blitz* 'йәшен тиҙлегендә'] (Р.: блиц; И.: on the spot; Т.: flaş) *с.*

Ҡушма һүҙҙәрҙең 'ҡапыл', 'тиҙ' мәғәнәләрен биреүсе тәүге өлөшө. □ Блиц. *Блиц-анкета. Блиц-интервью. Блиц-конкурс. Блиц-турнир. Блиц-яуап.*

**БЛОГ** [рус. < ингл. *blog*] (Р.: блог; И.: blog; Т.: ağ günlüğü) *и.*

Текст, һүрәттәр, мультимедиалы яҙыуҙарҙы даими яңыртып барған интернет-көндәлек. □ Блог. ■ *Үҙенең блогында ул [президент] даими рәүештә теге йәки был тема буйынса республика яҙмышына битараф булмаусыларҙың фекерен белешә, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға тырыша. Уның блогына сығарған сираттағы тема — заманса һәм матур ҡала, ауыл, район үҙәктәре.* «Киске Өфө», № 6, 2011.

**БЛОГГЕР** [рус. < ингл. *blogger*] (Р.: блоггер; И.: blogger; Т.: blogcu) *и.*

Интернет селтәрендә блог асып, көндәлек алып барыусы кеше. □ Блоггер. ■ *Блоггерҙар ниндәй генә темаларҙы күтәрмәгән — белем биреүҙең аңлайышлы, әһәмиәтле, хәүефһеҙ һәм сифатлы булыуынан алып баҙар ихтыяжына тура килеү-килмәүенә тиклем ҡыҙыҡһынғандар, фекерҙәрен әйткәндәр, һораүҙар биргәндәр.* «Башҡортостан», 17 август 2010.

**БЛОК I (блогы)** [рус. < нем. *Block* 'күтәреү механизмы'] *и. ҡар.* **сығыр 1.**

**БЛОК II (блогы)** [рус. < фр. *block* 'берләшмә'] (Р.: блок; И.: block; Т.: blok) *и.*

**1.** Бер төрлө өлөштәрҙән торған, функциялары бер булған механизм, конструкция, комплект. □ Блок *(механизм, конструкция, комплект чего-л. и т. п., состоящие из нескольких однородных частей). Цилиндрҙар блогы. Компьютер блогы.*

**2.** *Ниндәйҙер* маҡсатта төҙөлгән көнкүреш, сәнәғәт һ. б. комплекстың бер өлөшө булған бүлмәләр йәки ҡоролма. □ Блок, секция. *Операциялар эшләү блогы. Быйыл сафҡа индереләсәк объекттарҙың иң мөһиме — катализатор блогы.* ■ *Мине лагерь ҡапҡаһынан комиссар Васильев етәкләп алып инде. Шулай итмәһә, бәлки, мине тура-нан-тура үлем блогына — крематорийға оҙатыла торған әсирҙәр блогына ябырҙар ине.* Н. Мусин.

**3.** *төҙ.* Төҙөлөштә бинаның әҙер өлөшө булараҡ ҡулланылған йыйылма элемент. □ Блок *(конструктивный элемент здания как готовая его часть). Ишек блогы. Стена блогы.* ■ *20 тоннаға яҡын ҡорамалдар урынлаша торған үҙәк блокты ике метрға күтәреп ултыртыуы, 20 тонналыҡ лебедканы шул блок өҫтөнә мендереүе еңелдән булманы.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**4.** Бөтөн бер ҙур тәбиғи йәки яһалма таш. □ Блок *(каменный монолит). Мәрмәр блоктар. Тимерле бетон блок.*

**5.** Билдәле бер техник маҡсатты атҡарырға тәғәйенләнгән, күп төрлө элементтарҙан торған берәй техник ҡоролманың өлөшө. □ Блок *(часть технического устройства, прибора и т. п., состоящая из множества элементов и предназначенная для выполнения определённой технической задачи).*

**БЛОК III (блогы)** [рус. < фр. *block* 'берләшмә'] (Р.: блок; И.: block; Т.: güçbirliği) *и.*

**1.** Бер төрлө әйберҙәрҙең комплекты, ҡап. □ Блок. *Тәмәке блогы. Видеосюжеттар блогы.* ■ *Бер ваҡыт сигарет бирә башланылар. Бер блокта — йөҙ бөртөк.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

**2.** *сәйәс.* Бер нисә дәүләт, партия йәки ойошманың бергә эш итеү маҡсатындағы берекмәһе. □ Блок *(объединение государств, партий, организаций и т. п. для совместных действий). Һуғышҡа ҡаршы блок. Блокка инеү. НАТО блогы.* ■ *Шуныһы ла хаҡ: Рәсәй хәҙер бер кемдән бер нәмә һорап бармай. Бер ниндәй дәүләт йә блоктар алдында ла һыр*

*бирмәҫкә тырыша.* «Башҡортостан», 19 август 2011.

**БЛОКАДА** [рус.< ингл. *blockade*] (Р.: блокада; И.: blockade; Т.: abluka) *и.*

**1.** *Ниҙеңдер* ғәскәр менән уратып, бикләп алыныуы; ҡамау. □ Блокада. *Блокада көндәре. Блокадала ҡалыу.* ■ *Ленинград блокадаһынан сығарылған әсәле-ҡыҙлы Рудневтарҙы хәтерләйем.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

**2.** *күсм.* Дәүләттең бөтә булған сит бәйләнештән мәхрүм ителеүе. □ Блокада. *Сәйәси блокада. Иҡтисади блокада.*

**БЛОКАДАЛАНЫУ (блокадалан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **блокадалау.** *страд. от* **блокадалау.**

**БЛОКАДАЛАУ (блокадала-)** (Р.: блокировать; И.: blockade; Т.: abluka altına almak) *ҡ.*

Блокадаға алыу, блокадала тотоу. □ Блокировать, подвергать блокаде. *Ҡаланы блокадалау.*

**БЛОКБАСТЕР** [рус. < фр. *blockbuster*] (Р.: блокбастер; И.: blockbuster:; Т.: hasilat rekoru kıran) *и.*

Тамашасыларҙа ҙур популярлыҡ яулаған фильм. □ Блокбастер. *Блокбастер ҡарау.*

**БЛОКГАУЗ** [рус. < нем. *Blockhaus*] (Р.: блокгауз; И.: blockhouse; Т.: beton sığınak) *и. хәрб.*

Хәрби оборона нығытмаһы. □ Блокгауз.

**БЛОКИРАТОР** [рус.] (Р.: блокиратор; И.: wheel clamp; Т.: tekerlek kelepçesi) *и.*

Теге йәки был механизмдың йәки уның өлөштәренең хәрәкәтләнеүен тотҡарлаған ҡайланма. □ Блокиратор. *Руль блокираторы. Быяла ишек блокираторы.*

**БЛОКНОТ** [рус. < фр. *bloc-notes*] (Р.: блокнот; И.: notebook; Т.: defter) *и.*

Йыртып алынмалы биттәрҙән торған бәләкәй яҙыу дәфтәре; ҡуйын дәфтәре. □ Блокнот. ■ *Ике-өс сәғәт буйы блокнотына түкмәй-сәсмәй яҙып ултырып та беренсе секретарға бер-ике генә замечание алып ҡайтып еткереүселәр ҙә осрай торғайны.* Д. Бүләков.

**БЛОКПОСТ** [рус. < нем. *Block* + фр. *poste*] (Р.: блокпост; И.: guard post; Т.: sancak) *и.*

**1.** Дәүләт сиктәрендә контроль үткәреү пункты. □ Блокпост.

**2.** Ғәскәр тарафынан яулап алынған территорияла юлдарҙа, торлаҡ пункттарға инеү урындарында ҡуйылған ҡоралды һаҡсылар торған контроль үткәреү пункты. □ Блокпост. ■ *Башҡортостан милиционерҙары Чечняның Ножай-Юрт һәм Урус-Мартан районҙарындағы блокпостарҙа хеҙмәт итә.* «Башҡортостан», 4 февраль 2011.

**БЛОТТЕР** [рус. < ингл. *blotter*] (Р.: блоттер; И.: blotter; Т.: kayıt defteri) *и.*

Фонд биржаһындағы килешмәләрҙең көндәлек теҙмәһе. □ Блоттер. *Блоттер төҙөү.*

**БЛУЗА** [рус. < фр. *blouse*] (Р.: блуза; И.: smock; Т.: iş gömleği) *и.*

**1.** Билен быумай кейә торған киң ирҙәр күлдәге. □ Блуза. *Эш блузаһы.*

**2.** Йоҡа тауарҙан иркен итеп тегеп, юбка өҫтөнән төшөрөп кейә торған ҡатын-ҡыҙ кофтаһы. □ Блуза. *Матур блуза.*

**БЛУЗКА** *и. ҡар.* **блуза.** ■ *Ғәҙилә ингәс тә диивандың бер мөйөшөндәге асыҡ ҡыҙыл блузка менән ҡара ебәк юбкаға иғтибар иткәйне.* «Ватандаш», № 8, 2010.

**БОБАЙ** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.**

**БОБИНА** [рус. < фр. *bobine* 'кәтүк'] (Р.: бобина; И.: bobbin; Т.: bobin) *и.*

Ҙур кәтүк, барабан йәки валик. □ Бобина.

**БОБРИК** [рус.] (Р.: сукно со стоячим ворсом; И.: kind of cloth; beaver; Т.: çuha türü) *и.*

**1.** Тырпайып торған өбөрөлө буҫтау. □ Сукно со стоячим ворсом. *Бобрик пальто.* ■ *Ул [шофёр] байрамса кейенгән: өҫтөндә — өр-яңы бобрик пальто, башында — йылтырап торған күн ҡолаҡсын бүрек, аяғында — кимерсәктәй ҡара быйма.* Яр. Вәлиев.

**2.** Ирҙәрҙең тырпайтып, ҡыҫҡа итеп алдырылған сәсе. □ Бобрик *(мужская стрижка).*

**БОБСЛЕЙ** [рус. < ингл. *bobsleigh*] (Р.: скоростной спуск с гор на санях с рулевым

управлением; И.: bobsleigh; Т.: bobsley) *и. спорт.*

Руль ярҙамында идара итмәле санала тауҙан шәп төшөү ысулы. □ Скоростной спуск с горы на санях с рулевым управлением. *Мәләүез сана-бобслей трассаһы.*

**БОБСЛЕЙСЫ** (Р.: бобслеист; И.: bobsledder; Т.: bobsledder) *и. спорт.*

Бобслей менән шөғөлләнеүсе спортсы. □ Бобслеист.

**БОГЕМА** [рус. < фр. *boheme*] (Р.: богема; И.: bohemia; Т.: bohem) *и.*

**1.** Матди яҡтан тәьмин ителмәгән, ғәмһеҙ тормош алып барған ирекле һөнәр кешеләре. □ Богема. *Әҙәби богема. Музыкаль богема.*

**2.** Богемасылыҡ, уларҙың тәртипһеҙ тормошо. □ Богема.

**БОҒА** [дөйөм төрки *буға, бука* 'үгеҙ'] (Р.: племенной бык; И.: pedigree ox; Т.: damızlık boğa) *и.*

Тоҡом үгеҙе. □ Племенной бык.

**БОҒАҘ** [дөйөм төрки *буғаз, боғаз/ боғуз* 'тамаҡ, боғаҙ'] (Р.: горло; И.: throat; Т.: boğaz) *и.*

**1.** *анат.* Муйындың ҡыҙыл үңәсте һәм боғарлаҡты эсенә алған алғы өлөшө. □ Горло, глотка, гортань. *Боғаҙҙы быуыу. Боғаҙға йәбешеү.* ■ *Нәфисә үҙендә көс, бөтмәҫ-төкәнмәҫ үс тойҙо. Бына-бына уның бармаҡтары һеләүһендең осло тырнаҡтарына әйләнер ҙә ҡаршыла тороусының юхалыҡтан ысын йөҙөнә ҡайта барған битен аҡтарып төшөрөр, ә ҡыҫылған тештәре боғаҙына йәбешер һымаҡ.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

**2.** *геогр.* Ике күл йәки диңгеҙҙе берберсһенә тоташтырып торған тар һыу. □ Пролив. *Беринг боғаҙы.* ■ *Мин һеҙгә бер хажи әкиәтен иҫегеҙгә төшөрәм. Унан: «Һеҙ Төркиәлә булғанһығыҙ. Дарданелл боғаҙын күрҙегеҙме?» — тип һорағандар.* С. Агиш.

♦ **Боғаҙҙан алыу** ҡыҫмаҡҡа алыу, ауыр хәлгә ҡуйыу. □ Брать за горло *кого-л. Акса һорап боғаҙҙан ала.* ■ *[Атайым:] Бөгөн булмаһа, иртәгә боғаҙығыҙҙан алырбыҙ,— тип кемдәргәлер янай.* Д. Юлтый. **Боғаҙға арҡыры килеү** файҙаға ашмау, ярамау. □ Стоять поперёк горла *(у кого).* **Боғаҙға-боғаҙ килеү** ҡара-ҡаршы тороп, йәнтәслим алышыу. □ Столкнуться лицом к лицу в схватке. **Буш боғаҙ** бушҡа шау-шыу күтәреп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Пустослов, пустозвон.

**БОҒАҘҘАУ I** *и. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.**

**БОҒАҘ ЙЫРТЫУ (боғаҙ йырт-)** (Р.: прикрикнуть; И.: shout(at); Т.: bağırtmak) *ҡ. һөйл.*

Ныҡ ҡысҡырыу, аҡырыу. □ Горланить. *Боғаҙ йыртылғансы ҡысҡырыу.*

**БОҒАҘЛАУ (боғаҙла-)** [боронғо төрки *боғузлан-* 'салынған булыу'] (Р.: резать; И.: kill (cattle); Т.: kesmek) *ҡ.*

**1.** Боғаҙҙан салыу. □ Резать, колоть, забивать *(скот).* ■ *Боғаҙламай эсер [хан] ҡаныңды, үлтермәй алыр йәнеңде.* Ҡобайырҙан. *Ана бара, әҙе юҡ, боғаҙлаһаң, ҡаны юҡ (яуабы: балыҡ).* Йомаҡ.

**2.** Боғаҙын сәйнәү *(йыртҡысҡа ҡарата).* □ Терзать, задирать. *Бүре һарыҡты боғаҙлап киткән.*

**3.** *диал.* Алҡымдан алыу *(нык ирекһеҙләү).* □ Брать за горло *(не давать покоя).*

**БОҒАҘЛАУ ТӨЙӨНӨ** (Р.: шейный позвонок; И.: cervical vertebra; Т.: boyun omuru) *и. диал.*

Салыу һөйәге. □ Шейный позвонок *(в том месте, где производится закалывание скота).*

**БОҒАҘЛАУЫҠ (боғаҙлауығы)** *и. диал. ҡар.* **боғаҙлау төйөнө.**

**БОҒАҘЛАШЫУ (боғаҙлаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **боғаҙлау.** *взаимн. от* **боғаҙлау.**

**БОҒАҘ ТӨЙӨНӨ** (Р.: адамово яблоко; И.: Adam's apple; Т.: gırtlak çıkıntısı) *и. анат.*

Күмәгәй. □ Адамово яблоко (кадык).

**БОҒАЗ** *и. һөйл. ҡар.* **боғаҙ 1.**

**БОҒАЗЛАУ** *и. анат. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.**

**БОҒАҠ (боғағы)** [дөйөм төрки *боғаз* 'боғаҙ'] (Р.: зоб; И.: crop; Т.: kursak) *и. анат.*

**1.** Ҡош ашҡаҙанының тәүге бүлеге, бөрләтәү. □ Зоб *(у птицы)*.

**2.** Эре малдың үңәс аҫтында һалынып торған тиреһе. □ Свисающая часть шкуры в нижней части шеи быка, коровы.

**3.** *диал. ҡар.* **куштамаҡ.**

**БОҒАҠ БИҘЕ** (Р.: вилочковая железа; И.: thymus; Т.: timüs) *и. анат.*

Умыртҡалыларҙың күкрәк башында урынлашҡан бер биҙ. □ Вилочковая железа, зобная железа, тимус.

**БОҒАҠ ШЕШЕ** *и. ҡар.* **куштамаҡ.**

**БОҒАЛ** (Р.: аркан; И.: lasso; Т.: kement) *и.*

Аҫау йылҡыны муйынына ташлап тота торған тоҡанлы оҙон арҡан. □ Аркан, лассо. *Боғал ташлау. Боғал һалыу. Боғал менән тотоу.* ■ *Ҡола-Ҡашҡа үҙ янына сит кешене яҡын ебәрмәүенә ышанһаҡ та, таһыллырак кешенең боғал һалып булһа ла тотоуҙары һәм уларҙың, старшинаның да бер-бер эшлек эшләүе бик ихтимал ине.* С. Кулибай.

**БОҒАЛА** *и. диал. ҡар.* **боғал.**

**БОҒАЛАҠ I (боғалағы)** *и.*

**1.** *ҡар.* **боғал.** *Боғалаҡ һалыу.* ■ *Ҡайҙа яҙа баҫты Әхмәтхан, буштан-бушка, абайламай башын боғалаҡҡа тыҡтымы?* Р. Камал. *Боғалаҡты һиҙеп ҡалыуы булды, Йондоҙ, ҡармаҡҡа эләккән сыртан һымаҡ, дулай башланы.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *ҡар.* **мәскәү I.** ■ *Балыҡсылар һалдарын яр буйына сығарып ҡуйҙылар ҙа, ҡулдарына нәҙек кенә йомшаҡ сымдан яһалған боғалаҡ алып, балыҡты мәскәүләп тоторға керештеләр.* Ғ. Ибраһимов.

**БОҒАЛАҠ II (боғалағы)** *и. зоол. диал. ҡар.* **бөгәләк.**

**БОҒАЛАҠЛАУ (боғалаҡла-)** *ҡ. ҡар.* **боғаллау.** *Боғалаҡлап тотоу. Боғалаҡлап бәйләп ҡуйыу.* ■ *[Байрас:] Мин һине боғалаҡлап булһа ла алып ҡайтасаҡмын, көт тә тор! Ишетүгән ағайым да шулай ҡушты.* З. Биишева.

**БОҒАЛЛАУ (боғалла-)** (Р.: ловить при помощи лассо; И.: lasso; Т.: kementle yakalamak) *ҡ.*

Боғал һалыу. □ Ловить при помощи лассо, заарканить. *Айғырҙы боғаллап тотоу.*

**БОҒАН** (Р.: гоголь; И.: goldeneye; Т.: altıngöz) *и. зоол.*

Атаһы йәшел, инәһе көрән башлы һуна өйрәктән бәләкәйерәк ҡош. □ Гоголь (лат. *Bucephala*). ■ *Боған ағас ҡыуыштарында оялай. 5—11 бөртөк йәшкелт-зәңгәр йомортҡаһы була.* Э. Ишбирҙин.

**БОҒАНА** *и. диал. ҡар.* **бығым.**

**БОҒАРА** [фарс. بهار 'яҙ'] (Р.: богара; И.: dry-farming land; Т.: yağmurla beslenen) *и. а. х.*

Урта Азиялағы һуғарылмай торған баҫыу һәм шул ерҙәге сәсеүлек. □ Богара *(неорошаемое поле в Средней Азии)*. *Боғара игенселеге.*

**БОҒАРҘАҠ ОРОҺО** *и. диал. ҡар.* **күмәгәй.**

**БОҒАРЛАҠ (боғарлағы)** [дөйөм төрки *боғаз* 'тамаҡ'] (Р.: трахея; И.: trachea; Т.: trakea) *и. анат.*

Тын юлының боғаҙҙан артабанғы өлөшө. □ Трахея. *Тын алыу системаһы тамаҡтан, боғарлаҡтан, ҡурылдайҙан һәм үпкәләрҙән тора.*

**БОҒАРСА I** *и. анат. диал. ҡар.* **бөгәр I, 1.**

**БОҒАРСА II** *и. зоол. диал. ҡар.* **бөгәрсәй.**

**БОҒОР-БОҒОР** (Р.: бульк-бульк; И.: onomatopaeic sound; Т.: fokur fokur) *оҡш.*

Атлығып ҡайнағандағы йәки урғылғандағы тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку, возникающему при кипении кашеобразной массы, бульк-бульк. *Боғор-боғор бутҡа бешә.*

**БОҒОРЛАУ (боғорла-)** (Р.: булькать; И.: gurgle; Т.: cumbuldamak) *ҡ.*

Боғор-боғор итеү, боғор-боғор килеү. □ Булькать. *Боғорлай башлау. Боғорлап ҡайнау. Бутҡа боғорлап бешә.* ■ *Төшөнәм мин Индрилдың күңелендәген — уның, боғорлап ултырған котелокка ҡарап, донъяһын онотоп тораһы, шунан ах та ух килеп тын ала-ала, арҡаһынан атылып тирҙәре сыҡҡансы, тәмле сәй һемергеһе килә.* Д. Юлтый.

**БОҒОУ (боҡ-)** *и. диал. ҡар.* **боҡайыу 1.**

**БОҘ** [дөйөм төрки *буз (муз)< пурчь* ‘боҙ’] (Р.: лёд; И.: ice; Т.: buz) *и.*

**1.** Туңған һыу. □ Лёд. *Боҙ катламы. Йоҡа боҙ. Көҙгө боҙ. Мәңгелек боҙҙар. Боҙ китеү. Боҙ каплау.* ■ *Йәйрәп яткан ялтыр һыу өҫтөнә көҙгө кеүек ялтыр боҙ туңған.* Ғ. Амантай.

**2.** *кар.* **һырғалаҡ.** *Яһалма боҙ. Боҙҙа шыуыу.* ■ *Теләге булған һәр кем зәңгәр боҙҙа конькиҙа шыуыу мөмкинлегенә эйә.* «Атайсал», 18 декабрь 2009.

**3.** *миф.* Аллаһы тәғәлә тарафынан гонаһтар өсөн яза рәүешендә ебәрелгән тәбиғәт күренеше. □ Мифологизированное явление, посланное Всевышним в качестве наказания за грехи.

**4.** *кар.* **борсаҡ II.** *Боҙ катыш ямғыр яуа. Бойҙайҙы боҙ һуккан.* ■ *Күбәләклән яуған карға башта борсактай боҙ, аҙак сәнскеле ямғыр бөртөктәре кушылды.* Т. Ғарипова.

♦ **Боҙға яҙған** булмаҫтай, тормошҡа ашмаҫтай, ышанысһыҙ. □ Вилами на воде писано. ■ *[Камилә:] Етәксе һүҙенә ышанаһың! Боҙға яҙған вәғәҙә бит ул.* Р. Төхвәтуллин. **Боҙ ҡуҙғалды** эш икенсе йүнәлеш алды. □ Лёд тронулся. **Боҙҙо ҡуҙғатыу** башлау, беренсе аҙымды яһау. □ Положить начало, сделать первый шаг.

**БОҘАЙ I** *и. диал. кар.* **бойҙай.**

**БОҘАЙ II** *и. анат. диал. кар.* **күмәгәй.**

**БОҘАУ ҠОЛАҒЫ** *и. диал. кар.* **бәрхәт гөл.**

**БОҘ БАЛТАҺЫ** (Р.: ледоруб; И.: ice axe; Т.: buz kazması) *и.*

Боҙлауыҡҡа менгәндә ҡулланылған балта. □ Ледоруб. *Боҙ балтаһы менән тумырыу.*

**БОҘБАРМАҠ (боҙбармағы)** (Р.: сосулька; И.: icicle; Т.: saçak buzu) *и.*

Һыу тамыуҙан барлыҡҡа килгән осло оҙонса боҙло үҙәк, тамсы боҙо. □ Сосулька. *Боҙбармак төшөү. Йорт кыйыктарындағы боҙбармактар оло хәүеф тыуҙыра.* ■ *Нескә тәлгәштәре боҙбармактар менән осланған карт өйәңке мине таный.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 10, 2010.

**БОҘВАТҠЫС I** (Р.: ледокол; И.: icebreaker; Т.: buz kıran mahmuz) *и.*

**1.** Боҙ вата торған карап. □ Ледокол. *Боҙватҡыс командаһы.*

**2.** Йылғала төҙөлгән боҙҙо вата торған ҡоролма. □ Ледорез.

**БОҘВАТҠЫС II** (Р.: ледокольный; И.: icebreaker; Т.: buzkıran) *с.*

Боҙ вата торған. □ Ледокольный. *Боҙватҡыс флот.*

**БОҘҒАЛАҠ (боҙғалағы)** *и. диал. кар.* **борсаҡ II.**

**БОҘҒАЛАҠЛАНЫУ (боҙғалаҡлан-)** (Р.: становиться скользким; И.: become slippery; Т.: kaypaklanmak) *ҡ. диал.*

Боҙлауыҡланыу. □ Становиться скользким. *Юл боҙғалакланды.*

**БОҘҒОЛАУ (боҙғола-)** (Р.: портить; И.: spoil; Т.: bozmak) *ҡ.*

Төрлө ерҙән боҙоу, тотош боҙоу. □ *многокр.* Портить, ломать. *Боҙғолап ташлау.*

**БОҘҘАЙ** (Р.: ледяной; И.: icy; as ice; Т.: buz gibi) *с.*

Боҙ кеүек һалҡын. □ Ледяной. ■ *Алағарай-апрелдә тауҙарҙың көнтөшмәҫ битләү-үҙәктәрендә, йылға ярҙарында, калын урмандар эсендә, кала газондарында һәм тротуарҙарҙа өҫтө боҙҙай каткылға әүерелгән кар өйөмдәре ятыусан.* «Киске Өфө», № 23, 2011.

**БОҘҘОРОУ (боҙҙор-)** *ҡ. йөкм. кар.* **боҙоу.** *понуд. от* **боҙоу.** *Итте боҙҙороу.*

**БОҘҘОРТОУ (боҙҙорт-)** *ҡ. йөкм. кар.* **боҙоу.** *понуд. от* **боҙоу.**

**БОҘ КИТЕҮ (боҙ кит-)** (Р.: ледоход; И.: drifting of ice; Т.: buz çözümü) *ҡ.*

**1.** Йылға ағымы буйлап боҙ күсеүе. □ Ледоход. ■ *Яҙ етеп, йылғала боҙ киткәс, каторжандарҙы пароход менән килтерә башланылар.* Т. Ғарипова.

**2.** *миф.* Мифологияла ҡайғыларҙы, ауырыуҙарҙы ебәреү ысулы; боҙ өҫтөндә туҙ яндырһаң, боҙ менән ауырыу китә. □ Магический способ отгона, избавления от болезней и бед.

**БОҘ ҠАТЫУ (боҙ ҡат-)** (Р.: замерзать; И.: freeze over; Т.: donmak) *ҡ. диал.*

Боҙ менән ҡапланыу, туңыу. □ Замерзать. *Йылғала боҙ ҡатты.*

**БОҘЛАНДЫРЫУ (боҙландыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **боҙланыу.** *понуд. от* **боҙланыу.**

**БОҘЛАНЫУ (боҙлан-)** (Р.: леденеть; И.: ice over; Т.: donmak) *ҡ.*

Боҙ менән ҡапланыу. □ Леденеть, обледенеть, заледенеть, обмёрзнуть. *Боҙланған баҫҡыс. Боҙланған мыйыҡтар.* ■ *Ек-ектәре боҙланған .. ишек асылып китте.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡышҡы селлә, әсе һыуыҡ битте семетеп ала. Боҙлана һаҡал, мыйыҡтар, ҡашкерпектәр боҙлана.* Т. Арслан.

**БОҘЛАУЫҠ (боҙлауығы)** (Р.: гололедица; И.: black ice; Т.: buzcük) *и.*

**1.** Ерҙе ҡаплап туңған боҙ. □ Гололедица. ■ *Ишек алды боҙлауыҡ. Йәүҙәттең өләсәһе, боҙлауыҡҡа йығылып, бер юлы ике ҡабырғаһын һындырҙы.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** *диал. ҡар.* **борсаҡ II.** *Игенде боҙлауыҡ һуҡҡан.* ■ *1917 йылдың ҡар ҡатыш ямғыр, боҙлауыҡ яуып торған ырашҡылы яҙ көнө ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *диал. ҡар.* **бәҫ.**

**БОҘЛАУЫҠЛАНЫУ (боҙлауыҡлан-)** (Р.: заледенеть; И.: ice; Т.: donmak) *ҡ.*

Йоҡа ғына боҙ менән ҡапланып туңыу. □ Заледенеть. ■ *Һышынан яҙған убырҙы тышҡа алып сығалар ҙа боҙлауыҡланған ергә һалып ҡанға батырғансы туҡмайҙар.* С. Ҡудаш.

**БОҘЛО** (Р.: ледяной; И.: icy; Т.: buzlu) *с.*

**1.** Боҙ ҡатнаш, боҙо булған. □ Ледяной, обледенелый. *Боҙло һыу. Боҙло ҡар. Боҙло ямғыр. Боҙло мәмерйә.* ■ *Тормош булғас, булыр барыһы ла: боҙло ямғыры ла, ҡары ла.* Р. Ғарипов.

**2.** Боҙ кеүек һалҡын. □ Леденящий. ■ *Күңел әрней, әрней, боҙло һалҡын, бураплы ел мине һуҡҡанға.* Ш. Бабич.

**3.** Боҙ менән ҡапланған. □ Ледяной. *Боҙло трасса.* ■ *Сибайҙа боҙло һырғалаҡ төҙө [лә].* «Башҡортостан», 26 ноябрь 2009.

**4.** Тайғаҡ. □ Скользкий, обледенелый. *Боҙло юл.* ■ *Боҙло юл йәйәүлеләр өсөн дә, транспорт өсөн дә бик хәүефле. Тайғаҡ мәлдә урамда төрлө йәрәхәт алыусылар күбәйә.* «Башҡортостан», 15 декабрь 2010. *Айбикә, тиҙ генә йүгереп ой башына менеп, мөрйә өҫтөндәге өлкән ташты, уның аҫтындағы өлкән көл тоҡсайын алып, мөрйә янына ҡуя ла, йышылып бөткән боҙло баҫҡыстан шыуып төшөп, өйгә инә.* Һ. Дәүләтшина.

**БОҘЛОҠ I (боҙлоғо)** (Р.: ледник; И.: glacier; Т.: buzluk) *и.*

**1.** Мәңгелек боҙ менән ҡапланған ер. □ Ледник. *Тау боҙлоғо.* ■ *Бөтә донъялағы боҙлоҡтарҙың майҙаны Европа еренән байтаҡ артыҡ.* «Башҡортостан», 25 февраль 2010. *16 февралдә БСТ-ла тәбиғәткә арналған бик ҡыҙыҡлы, фәһемле тапшырыу булды. Һүҙ боҙлоҡтарҙың бөгөнгө торошо һәм тиҙләп иреүе хаҡында барҙы.* «Киске Өфө», № 9, 2011.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡар баҙы.**

**БОҘЛОҠ II** (Р.: ледниковый; И.: glacier; Т.: buzluk) *с.*

Боҙҙан торған. □ Ледниковый. *Боҙлоҡ күлдәре.*

**БОҘЛОҠ ДӘҮЕРЕ** (Р.: ледниковый период; И.: ice Age; Т.: buzul çağı) *и. геол.*

Ер өҫтөнөң боҙ менән ҡапланған дәүере. □ Ледниковый период. ■ *Боҙ составы үҙгәреүе буйынса шул билдәләнә: беҙҙең планета 100-әр мең йылдарға һуҙылған бер нисә боҙлоҡ дәүерен кисергән.* «Йәшлек», 3 декабрь 2009.

**БОҘЛОҠ ОСОРО** *и. диал. ҡар.* **боҙлоҡ дәүере.**

**БОҘЛО ЯМҒЫР** *и. диал. ҡар.* **борсаҡ II.**

**БОҘ ОҘАТЫУ (боҙ оҙат-)** (Р.: проводы ледохода; И.: a Bashkir ethnographic custom; Т.: buz gitmesini seyretmek) *ҡ. миф.*

Ауырыу, бәлә-ҡазаны оҙатыу йолаһы. □ Ритуальные проводы ледохода. ■ *Боҙ киткәндә, ярға сығып: «Ҡайғыларҙы алып кит!» — тип боҙ оҙата инек.* Башҡорт мифологияһынан.

**БОҘОҠ** [боронғо төрки *буз* ‘боҙоу’ + *оҡ* ялғауы] (Р.: испорченный; И.: faulty; Т.: bozuk) *с.*

**1.** Бер механизмы боҙолоп, яраҡһыҙға әйләнгән. □ Испорченный, неисправный, брак. *Боҙоҡ машина. Боҙоҡ сәғәт.* ■ *Бар мөлкәте батареялы иҫке приёмник менән боҙоҡ барометрҙан ғибәрәт һыуыҡ клубта өҫтәренә бишмәт, тун кейгән егеттәр менән ҡыҙҙар партаға саҡ һыйып ултыралар.* А. Абдуллин.

**2.** Сир тейгән; сирле. □ Больной. *Боҙоҡ теш.* ■ *Ғәйшә, — тинем мин, — күҙҙәре матур ҡыҙҙарҙың ашҡаҙаны боҙоҡ буламы ни?* С. Агиш.

**3.** Зарарланып, сифатһыҙға әйләнгән. □ Испорченный, гнилой. *Боҙоҡ алма. Боҙоҡ картуф.* ● *Юл боҙоғо аяҡҡа көс.* Мәҡәл.

**4.** Ямғырлы, һыуыҡ; йонсоу. □ Пасмурный, ненастный, сумрачный. *Боҙоҡ көн.* ■ *Тик ҡояшты болот ҡаплап китә көндәр боҙоҡ, йонсоу заманда.* М. Кәрим.

**5.** *күсм.* Күңелһеҙ, асыулы. □ Хмурый, угрюмый. *Боҙоҡ кәйеф. Боҙоҡ сырай.* ● *Төҫө боҙоҡтоң эсе боҙоҡ.* Мәҡәл.

**6.** *күсм.* Аҙғын, йөрөксән, яман, насар, холоҡһоҙ; кенәсел, мәкерле. □ Беспутный, развратный, порочный, распущенный, распутный; злопамятный, коварный. *Боҙоҡ кеше. Боҙоҡ уй.*

**7.** Көйһөҙләнгән *(музыкаль инструменттар тураһында).* □ Расстроенный *(о музыкальных инструментах). Боҙоҡ пианино.*

**БОҘОҠЛАШЫУ (боҙоҡлаш-)** *ҡ. диал. ҡар.* **уҫаллашыу.**

**БОҘОҠЛОҠ (боҙоҡлоғо)** (Р.: порок; И.: vice; Т.: bozukluk) *и.*

**1.** Насар, яман ҡылыҡ; яманлыҡ. □ Порок, распущенность, безнравственность. *Боҙоҡлоҡ эшләү.* ● *Эш һөйгәндең дәрәжәһе артыр, эшлекһеҙлек боҙоҡлоҡҡа тартыр.* Мәҡәл.

**2.** Уҫаллыҡ. □ Злодейство. ■ *Боҙоҡлоҡ ҡылыуҙа сауҙагәре лә, түрәһе лә мужиктарҙан арттырғанын Билал миҫалдар килтереп һөйләне.* А. Таһиров.

**3.** Сихыр. □ Порча, колдовство. *Боҙоҡлоҡ эшләү. Әкәй боҙоҡлоғо ҡағылған.*

**БОҘОЛҒАН** (Р.: сбившийся с пути; И.: wayward; Т.: bozuk) *с. диал.*

**1.** Юлдан яҙған. □ Сбившийся с пути.

**2.** Сихырланған. □ Заколдованный.

**БОҘОЛОУ (боҙол-)** [боронғо төрки *бузул-* ‘боҙолған булыу’] (Р.: портиться; И.: get spoilt, worsen; Т.: bozulmak) *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **боҙоу I.** *страд. от* **боҙоу I.**

**2.** Төҙөк түгел хәлгә килеү, эшлектән сығыу *(ватылыу, һыныу).* □ Портиться, ломаться. *Телефон боҙолған. Машина боҙолған. Сәғәт боҙолған.*

**3.** Булған сифаты юҡ булып яраҡһыҙланыу. □ Нарушаться. // Нарушение *(снижение качества или потребительской ценности). Тупраҡтың боҙолоуы. Баҫыу боҙолған. Сабынлыҡ боҙолған. Алма боҙолған.* ■ *Аяҡ саҡ ҡына яҙа баҫһа, көршәк ялп итеп ергә осоп төшә. Ватыла. Етмәһә, ябай балсыҡтан арлы-бирле һыпалап яһалған көршәктәрҙә һыу тиҙ ҙә боҙола, үҙенең шишмәләге сафлығын, татлылығын да юғалта икән.* З. Биишева.

**4.** Зарарланып ауырыу, зәғиф булыу. □ Испортиться, искалечиться. *Күҙ боҙолоу. Сәләмәтлек боҙолоу.* ■ *Кем белә, бәлки, уның күҙҙәре ысынлап та матур түгелдер, тик ашҡаҙаны боҙолғанға күрә генә шулай күренә торғандыр.* С. Агиш.

**5.** Булған йүнәлештән сығып, боларыу; боларып, юҡҡа сығыу. □ Нарушаться *(о порядке),* расстраиваться. // Расстройство. *Уйын боҙолоу.* ■ *[Мөнирә:] Мине ауылға яңы һауған һөт эсергә ҡайтарҙылар, — ти ул, уйындың боҙолоуына иҫе лә китмәй.* Ш. Янбаев.

**6.** Булған уңай хәл юҡҡа сығыу йәки ҡаршылыҡлы хәлгә килеү. □ Испортиться *(об отношениях). Тынлыҡ боҙолоу. Ара боҙолоу. Мөнәсәбәт боҙолоу.*

**7.** Мотлаҡ нәмә үтәлеүҙән тайшаныу. □ Нарушать. *Ант боҙолоу. Вәғәҙә боҙолоу. Закон боҙолоу. Йола боҙолоу.* ■ *Ситек сисеп*

*һыйпаһаң, мәсих боҙола инде, яңынан аяк йыуып кейергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Насар яҡҡа үҙгәреү. □ Портиться. *Көн боҙолоу. Кәйеф боҙолоу. Сырай боҙолоу. Холоҡ боҙолоу.* ■ *Әле генә тып-тын торған һауа ҡапыл боҙолоп, ҡара болот сыкты, ел ҡуҙғалды.* М. Тажи. *[Йыһанша] оҙаҡ эшләне. Колхозды аяҡҡа баҫтырҙы. Тик һуңға табан, ҡартая килә, боҙолдо. Маҡтау күп тейҙе шул үҙенә.* Р. Солтангәрәев.

**9.** *ҡар.* **сихырланыу.**

**БОҘОЛОШ** (Р.: разлад; И.: disorder; Т.: geçimsizlik) *и.*

**1.** Килешмәүсәнлек, көйһөҙлөк. □ Разлад, нелады. *Эштәге боҙолош.*

**2.** Ыҙғыш, аңлашылмаусанлыҡ, талаш-тартыш. □ Раздор. *Ғаиләлә юҡ нәмә өсөн боҙолош килеп сыкты.*

**БОҘОЛОШОУ** (**боҙолош-**) (Р.: сеять взаимные раздоры; И.: go into strife; Т.: bozulmak) *к.*

**1.** *урт. ҡар.* **боҙолоу.** *взаимн. от* **боҙолоу.**

**2.** Үҙ-ара мөнәсәбәтте боҙоу. □ Сеять взаимные раздоры, распри. ■ *[Каныш:] Берүк боҙолошмағыҙ, татыулыҡ менән башҡарығыҙ изге эштең изге ыҙанын.* Х. Ғәбитов.

**БОҘОМ I** [боронғо төрки *буз, бузулмак* ‘боҙом’] (Р.: порча; И.: damage; Т.: zarar) *и. диал.*

Сихыр. □ Порча, вредоносное воздействие с помощью мифологизированных предметов. ■ *Боҙом бар ул. Хоҙай күрһәтмәһен.* Башҡорт мифологияһынан.

**БОҘОМ II** (Р.: местность; И.: land; Т.: yer) *и. диал.*

Урман, ер, урын. □ Местность.

**БОҘОМ ЕБӘРЕҮ** (**боҙом ебәр-**) *к. ҡар.* **сихырлау.**

**БОҘОМ ҠАЙТАРЫУ** (**боҙом ҡайтар-**) (Р.: расколдовывать; И.: repair evil; Т.: büyü bozmak) *к. миф.*

Сихыр ҡайтарыу. □ Расколдовывать. *Боҙомдо эйәһенә ҡайтарыу.*

**БОҘОР** *и. диал. ҡар.* **бозор.**

**БОҘОРА I** *и. диал. ҡар.* **бөҙрә II.**

**БОҘОРА II** *с. диал. ҡар.* **борош II.**

**БОҘОРА III** *и. диал. ҡар.* **сыңға.**

**БОҘОРОҠ** (**боҙорого**) *и. диал. ҡар.* **быжыр I.**

**БОҘОУ I** (**боҙ-**) [дөйөм төрки *буз-* ‘эшлектән сығарыу’] (Р.: ломать; И.: break; Т.: bozmak) *к.*

**1.** Йыйып ҡоролған нәмәне кире тара-тыу, тағатыу, ватыу, емереү. □ Ломать, разрушать. *Мейесте боҙоу. Өйҙө боҙоп яңынан һалыу.*

**2.** Тотош бер бөтөн нәмәне киҫәк-киҫәккә бүлгеләү. □ Разрубить, разделить. ■ *Аҡназар таң менән тороп ит боҙҙо.* Ғ. Дәүләтшин. *Берәй иҫке-моҫконо боҙғанда, шуларҙан әүмәләштереп, Хәмәйгә ҡулдаҡ һымаҡ нәмә тегеп кейҙерә торғайнылар.* Д. Юлтый.

**3.** Төҙөк түгел хәлгә килтереү, эшлектән сығарыу. □ Ломать, сломать. *Арбаны боҙоу. Машинаны боҙоу. Сәғәтте боҙоу.*

**4.** Файҙалана алмаҫлыҡ, яраҡһыҙ хәлгә килтереү; яраҡһыҙландырыу. □ Испортить, портить. *Машина йөрөп, сабынлыҡты боҙған.*

**5.** Зарарлап ауырыу, зәғиф итеү. □ Испортить, искалечить. *Күҙҙе боҙоу. Сәләмәтлекте боҙоу.* ■ *Шәүәли .. ниндәйҙер дарыу һалып ҡолағын боҙған.* Б. Бикбай.

**6.** Зарарлап насар, сифатһыҙ итеү. □ Испортить (*порча*). *Алманы боҙоу. Ямғырға ҡалдырып, картуфты боҙҙолар.*

**7.** Булған уңай хәлде юҡҡа сығарыу. □ Нарушать порядок, покой. *Тынлыҡты боҙоу.* ■ *Насиров та, Сибәғәтуллина ла бер нәмә өндәшә алмай, әлеге һөйләгәндәрҙе һеңдереп, тынлыҡты боҙорға ҡурҡып, онотолғандар.* Д. Бүләков.

**8.** Булған ыңғай хәлдән ҡаршылыҡлы хәлгә килтереү. □ Испортить отношения. Разлад. *Араны боҙоу. Мөнәсәбәтте боҙоу.*

**9.** Мотлаҡ нәмәне үтәүҙән тайшаныу. □ Нарушать. // Нарушение. *Антты боҙоу.*

*Вәғәҙәне боҙоу. Законды боҙоу. Йоланы боҙоу.* ■ *Ләкин законды сак ҡына боҙоп ҡара әле, хатта боҙма ла, сак ҡына ситкә тайшан!* Д. Бүләков. *Диңгеҙбикә ҡорбан һорай! Күрәһеңме, аңлайһыңмы, изге йоланы боҙған өсөн, ул беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һәләк итергә йыйына!* З. Биишева.

**10.** Билдәләнгән нәмәне иҫәпкә алмай, аша баҫыу. □ Нарушать. *Дәүләт сиген боҙоу.*

**11.** Насар яҡҡа үҙгәртеү. □ Испортить, портить. *Кәйефте боҙоу. Холоҡто боҙоу. Төньяҡтан ел иҫеп, көндө боҙҙо.* ■ *[Күсәк:] Илама һин боҙоп төҫөң, бөтә ырыуың ҡыйралғанда берәү өсөн.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Түрә насар түгел ине. Боҙҙоҡ. Кемуҙарҙан шаулап маҡтаныҡ.* Ҡ. Даян.

**12.** Ҡаҡшатыу, насарайтыу. □ Расстроить, нарушать. *Нервы боҙоу. Йоҡоно боҙоу.*

**13.** Көйһеҙләү. □ Расстроить. *Мандолинаны боҙоу.*

**14.** Ысынбарлыҡты үҙгәртеү. □ Исказить, извратить. *Хәҡиҡәтте боҙоу. Һүҙҙең мәғәнәһен боҙоу. Фекерҙе боҙоу. Телде боҙоу.*

**15.** Килешелгән һүҙҙән тайпылыу. □ Расторгать, расторжение. *Килешеүҙе боҙоу.*

♦ **Ҡанды боҙоу** асыуландырыу. □ Портить кровь.

● *Йөрөй белмәгән юл боҙор, әйтә белмәгән һүҙ боҙор.* Мәҡәл. *Ҡарщы кеше уйын боҙор, тиҫкәре кеше йыйын боҙор.* Мәҡәл. *Ярҙы һыу боҙа, әҙәмде һүҙ боҙа.* Мәҡәл.

**БОҘОУ II** (Р.: порча; И.: evil curse; Т.: büyü) *и.*

Боҙом, сихыр. □ Порча, колдовство.

**БОҘОШОУ (боҙош-)** *ҡ. урт. ҡар.* **боҙоу I.** *взаимн. от* **боҙоу I.** *Өйҙө боҙошоу.*

**БОҘ ТАУЫ** (Р.: айсберг; И.: iceberg; Т.: buzdağı) *и.*

Диңгеҙ-океандарҙа йөҙөп йөрөгән эре-эре боҙ тауы. □ Айсберг. ■ *[Сергей:] Диңгеҙҙә боҙ тауҙары төбө иреһә, түңкәрелә, ти... Кеше лә шулай.* А. Абдуллин.

**БОҘТИШКЕС** *и. зоол. диал. ҡар.* **аҡ сәпсек.**

**БОҘ ТОТОУ (боҙ тот-)** (Р.: ледостав; И.: freezing-over; Т.: donma) *ҡ. диал.*

Боҙ туңыу. □ Ледостав.

**БОҘ ТУҢЫУ (боҙ туң-)** (Р.: ледостав; И.: freezing-over; Т.: donma) *ҡ.*

Йылғаның, күлдең һ. б. тотош боҙ менән ҡапланыуы. □ Ледостав. ■ *Китеп барғанда бер күлгә тап булдыҡ, ул яҡта күлдәр яман күп. Урап үтһәң, оҙаҡ, әллә ҡайҙа, сиге лә күренмәй, ошоноң шикелле боҙ туңған, һөрәпнитеп тормай, тураға төш тә кит.* Р. Солтангәрәев.

**БОҘТУРҒАЙ** *и. зоол. диал. ҡар.* **аҡ сәпсек.**

**БОҘ ҮТКӘРГЕС** (Р.: ледоспуск; И.: device for passing ice through; Т.: buz giderme yapımı) *и. гидротех.*

Быуалағы боҙҙан таҙарта торған махсус ҡоролма. □ Ледоспуск.

**БОҘЪЯРҒЫС** *и. ҡар.* **боҙватҡыс I.**

**БОЕВИК I (боевигы)** [рус.] (Р.: боевик; И.: thriller; Т.: triler) *и.*

Киҫкен сюжетлы фильм. □ Боевик. *Боевик ҡарау.*

**БОЕВИК II (боевигы)** [рус.] (боевик; И.: guerilla fighter, soldier; Т.: savaşçı) *и.*

Террористик ойошмаға инеүсе ҡоралды төркөм ағзаһы. □ Боевик. *Боевиктарҙы тотоу.* ■ *Якупов һалдаттарҙың һәм казактарҙың һөжүмен кире ҡағыу өсөн револьвер һәм бомбалар менән ҡоралландырылған боевиктар наряды тәғәйенләй.* З. Рафиҡов.

**БОЖАЛ** *и. диал. ҡар.* **ваҡыт.**

**БОЖАЛҒА БАРЫУ (божалға бар-)** (Р.: обряд сватовства после взаимного согласия молодых; И.: matchmaking; Т.: düğün adet) *ҡ. этн.*

Егет менән ҡыҙ үҙ-ара өйләнешергә килешкәндән һуң, егет яғынан ҡыҙ яғына туй тураһында һөйләшергә барыу. □ Обряд сватовства после взаимного согласия молодых.

**БОЖАН** *и. диал. ҡар.* **иңкеш.**

**БОЖОР I** [боронғо төрки *бужур* 'сыбар'] *и. диал. ҡар.* **сел.** ■ *Муйыллыҡта ҡасып ятҡан бер өйөр божор, нимәнәндер ҡурҡып,*

*күтәрелде лә бойҙай камылы өҫтөнә осоп китте.* С. Ҡудаш.

**БОЖОР II** *с. диал. ҡар.* **төпөш I.**

**БОЖОРА I** *и. диал. ҡар.* **сыңға.**

**БОЖОРА II** *с. диал. ҡар.* **бөҙрә I.** *Божора тулкындар.*

**БОЖОР СӘПСӘҮ** (Р.: фифи; И.: wood sandpiper; Т.: orman düdükçünü) *и. зоол.*

Сыйырсыҡ ҙурлыҡ оҙон аяҡлы, оҙон суҡышлы һаҙ ҡошо. □ Фифи (лат. *Tringa glareola*). ■ *Божор сәпсәүенең тауышы көйлө һәм тонок ҡына.* Э. Ишбирҙин.

**БОЖРА** *и. диал. ҡар.* **дүңгәләк I.** *Тимер божра.* ■ *Уҫал балыҡтар, йылға өҫтөндә божра яһап, бер-бер артлы өҫкә ҡалҡалар.* Н. Асанбаев.

**БОЖОУ (божо-)** *ҡ. диал. ҡар.* **быжыу I.** *Кишер божоған.*

**БОЗОҠ (бозоғо)***и. диал. ҡар.* **сихыр 1.**

**БОЗОР I** *и. ҡар.* **бөрөз 3.** ■ *Халыҡ ғәмен кем йыйыр? Урманда уҡ һайлаған, дошманға бозор ҡайраған — шул йыйыр ау, шул йыйыр.* Ҡобайырҙан.

**БОЗОР II** *и. диал. ҡар.* **быжыр I.**

**БОЗОР III** *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **ағуна.**

**2.** *диал. ҡар.* **сел.**

**БОЗОРА I** *и. диал. ҡар.* **елбәҙәк II, 1.** *Тәңкәнән бозора яһай торғайнылар.*

**БОЗОРА II** *и. диал. ҡар.* **зәңге.** *Бозора менән ауырыу.*

**БОЗОРА III** *и. диал. ҡар.* **шәм селтәре.**

**БОЗОРТМАҠ** (Р.: рябой; И.: pitted; Т.: pürüzlü) *с. диал.*

Быжыртмаҡ. □ Рябой. *Бозортмаҡ битле.* ■ *Өйҙөң коридоры һарылы-ҡыҙыллы-йәшелле бозортмаҡ быяла ҡорамаһынан яһалған.* Ғ. Дәүләтшин.

**БОЗОРТМАҠЛАНЫУ (бозортмаҡлан-)** (Р.: быть шероховатым; И.: be rough; Т.: pürtüklü olmak) *ҡ. диал.*

Суғыртмаҡланыу. □ Быть шероховатым *(о коре). Ҡарт ҡайындың ҡабығы бозортмаҡланып тора.*

**БОЙҘА** (Р.: большой нож; И.: dagger; Т.: hançer) *и. иҫк.*

Ҙур бысаҡ; хәнйәр. □ Большой нож, кинжал.

**БОЙҘАЙ** [боронғо төрки *буғдай, будгай* ‘бойҙай’] (Р.: пшеница; И.: wheat; Т.: buğday) *и.*

**1.** Орлоғонан аҡ икмәк һәм башҡа икмәк нәмәләре бешереү өсөн он әҙерләй торған башаҡлы үҫемлек. □ Пшеница (лат. *Triticum*). *Ҡылсыҡлы бойҙай. Ужым бойҙайы. Яҙғы бойҙай.* ■ *[Гәйни:] Яланға барып, ашлыҡтарҙы ҡарап ҡайтырға уйлап торам әле. Бойҙайҙың ҡыйы булһа, уташтырырбыҙ.* Т. Йәнәби.

**2.** Шул башаҡлы үҫемлектең орлоғо. □ Пшеница. *Бер бот бойҙай. Бойҙай оно.* ■ *Ток менән әллә нисәмә ҡарауай бойҙай икмәген күтәреп алып ҡайтып, уларҙы урындыҡҡа теҙеп һалып ҡуйһам, әсәйем ҡайһылай шатланасаҡ!* Н. Мусин.

♦ **Бойҙай араһындағы һоло** башҡаларҙан айырылып торған. □ Отличающийся от других. **Тукал бойҙай** ҡылсыҡһыҙ бойҙай. □ Безостая пшеница.

**БОЙҘАЙ ИКМӘГЕ** (Р.: пшеничный хлеб; И.: white bread; Т.: beyaz ekmek) *и.*

Бойҙай ононан бешерелгән аҡ икмәк. □ Пшеничный хлеб.

**БОЙҘАЙОҠ (бойҙайоғо)** *и. диал. ҡар.* **аҡтамыр.**

**БОЙКОТ** [рус. < ингл. *boycott*] (Р.: бойкот; И.: boycott; Т.: dereniş) *и.*

Дәүләт, ойошма йәки айырым кеше менән бөтә төр бәйләнеште өҙөүҙән ғибәрәт булған көрәш ысулы. □ Бойкот. *Бойкот белдереү.* ■ *Донъяның был сиктән уҙған дәһшәте. — билгеле, Иблескә бойкот-нәфрәте!* Ш. Бабич.

**БОЙКОТСЫ** (Р.: тот, кто бойкотирует; И.: boycotter; Т.: derenişçi) *и.*

Бойкот иғлан итеүсе. □ Тот, кто бойкотирует.

**БОЙЛЕР** [рус. < ингл. *boiler*] (Р.: бойлер; И.: boiler; Т.: su ısıtıcısı) *и.*

Һыу йылытыу системаһындағы яйланма. □ Бойлер. *Йылытыу бойлеры. Ҡоростан ҡойолған бойлер.*

**БОЙЛОҠҺОҘ** (Р.: страдающий недержанием мочи; И.: suffering from enuresis; Т.: sidiğini tutamayan) *с.*

**1.** Бәүелен тота алмаған *(кешегә ҡарата).* □ Страдающий недержанием мочи. *Бойлоҡһоҙ бала. Бойлоҡһоҙ булыу.*

**2.** Туҡтамаған. □ Беспрестанный. ■ *Ямғыр бойлоҡһоҙ ҡоя ла ҡоя.* Б. Бикбай.

**3.** Туҡтай алмай ярһыған. □ Разъярённый. ■ *Батша менән батша ҡатыны илай торғас, бойлоҡһоҙ булып бөттө, ти.* Әкиәттән.

**4.** *күсм.* Көсһөҙ, хәлһеҙ *(аяғында тора алмаған).* □ Бессильный, слабый *(не в состоянии держаться на ногах). Бойлоҡһоҙ кеше.*

**БОЙОҒОУ** (**бойоҡ-**) (Р.: унывать; И.: lose heart; Т.: hüzünlenmek) *ҡ.*

Бойоҡ булыу, бойоҡҡа әйләнеү. □ Унывать, впадать в уныние. ■ *Заятүләк .. тыуған ерен һағынып бойоға. моңая башлай. Башына төрлө уй килә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**БОЙОҠ** (Р.: унылый; И.: blue; Т.: hüzünlü) *с.*

**1.** Күңелһеҙ, төшөнкө уй-тойғоло. □ Унылый, печальный, грустный. *Бойоҡ кеше.* ■ *Ә шулай ҙа ниңә һуң мин бойоҡ? Ниңә күңелем кемделер, нимәнелер юҡһынып, һыҡтап ҡына тора?* З. Биишева.

**2.** Күңелһеҙлек, төшөнкөлөк сағылған. □ Печальный, унылый вид. *Бойоҡ төҫ.*

**БОЙОҠЛОҠ** (**бойоҡлоғо**) (Р.: грусть; И.: (the) blues; Т.: hüzün) *и.*

Күңелһеҙ, төшөнкө уй-тойғо, хәл. □ Грусть.

**БОЙОҠТОРОУ** (**бойоҡтор-**) *ҡ. йөкм. ҡар.* **бойоғоу.** *понуд. от* **бойоғоу.**

**БОЙОМ** [дөйөм төрки *буйур* < *буй-* 'йөкмәү'] (Р.: необходимые вещи; И.: goods and chattels; Т.: mal mülk) *и. иҫк.*

**1.** Донъя кәрәк-ярағы, нәмә. □ Необходимые вещи, скарб. ■ *Йортондағы бойомдан, уйында бойомдан кемде айырмаҫ был үлем?* «Буҙйегет».

**2.** *күсм.* Булмыш, ғәмәл. □ Действительность. *Бойомға ашыу.*

**БОЙОМҒА АТҠАРЫУ** (**бойомға атҡар-**) *ҡ. ҡар.* **тормошҡа аткарыу.** *Хыялдарҙы бойомға атҡарыу.*

**БОЙОМҒА АШЫРЫУ** (**бойомға ашыр-**) *ҡ. ҡар.* **тормошҡа аткарыу** ■ *Шул мәлдә, әлеге үлтерелгән Дейеү пәрейенең Ҡарабайҙы һәләк итеп, ус алырға уйлап ҡына йөрөгән ҡустыһы, уның ошондай ҡурҡыныс урындарҙан сабып килеүен күреп, бик уңай тура килде бит әле тип, үҙенең мәкерле уйын бойомға ашырмаҡсы булған.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**БОЙОМҒА АШЫУ** (**бойомға аш-**) *ҡ. ҡар.* **тормошҡа ашыу.**

**БОЙОНДОРОҠ** (**бойондороғо**) [дөйөм төрки *буйундуруҡ* 'үгеҙ ҡамыты'] (Р.: зависимость; И.: dependence; Т.: bağımlılık) *и.*

*Кемдеңдер* етәкселеге, ҡулы аҫтында, *кемгәлер* буйһоноуҙа булған, эш-хәрәкәттә, фекерләүҙә башҡаның ихтыярына, йоғонтоһона бәйле булған хәл. □ Зависимость. *Бойондороҡта булыу. Бойондороҡта йәшәү. Бойондороҡҡа төшөү.*

**БОЙОНДОРОҠЛО** (Р.: зависимый; И.: dependent; Т.: bağımlı) *с.*

Бойондороҡта булған. □ Зависимый, подвластный, подчинённый. *Бойондороҡло хәл.* ■ *Атһыҙҙар йәки эшсе-зимагорҙар тип йөрөтөлгән, шулай уҡ бойондороҡло хәлдә булған крәҫтиәндәрҙең ихтыярҙарынан тыш, аҙ ерле кешеләр еренең* $^1/_3$ *өлөшө тип әйтерлек көтөүлек аҫтында ҡала.* М. Өмөтбаев.

**БОЙОНДОРОҠЛОЛОҠ** (**бойондороҡлолоғо**) *и. ҡар.* **бойондороҡ.**

**БОЙОНДОРОҠҺОҘ** (Р.: независимый; И.: independent; Т.: bağımsız) *с.*

*Кемдеңдер* етәкселеге, ҡулы аҫтында, *кемгәлер* буйһоноуҙа булмаған, эш-хәрәкәттә, фекерләүҙә башҡаның ихтыярына, йоғонтоһона бәйле булмаған. □ Независимый. *Бойондороҡһоҙ журналист. Бойондороҡһоҙ ил. Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе.*

**БОЙОНДОРОҠҺОҘЛОҠ (бойондороҡһоҙлоғо)** (Р.: независимость; И.: independence; Т.: bağımsızlık) *и.*

Бойондороҡһоҙ хәл. □ Независимость. *Сәйәси бойондороҡһоҙлоҡ.* ■ *Бөртөклө ашлыҡ етештереүҙе ҡырҡа арттырыу юлы менән аҙыҡ-түлек проблемаһын хәл иткән һәм илдең бойондороҡһоҙлоғон тәьмин иткән тарихи сиҙәм эпопеяһы ана шулай башланды.* «Ағиҙел», № 8, 2011.

**БОЙОРОҠ (бойороғо)** [дөйөм төрки *буйуруҡ* < *буйур* 'бойороу' ] (Р.: приказ; И.: order; Т.: buyruk) *и.*

*Ниҙелер* эшләргә, башҡарырға ҡушҡан ҡәтғи күрһәтмә; әмер. □ Приказ, распоряжение, предписание. *Бойороҡ биреү. Бойороҡто үтәү.* ■ *Беҙгә лә тимер сыбыҡ кәртәләре аша үтергә бойороҡ булды. Бойороҡҡа буйһоноп, һалдаттар алға ташланды.* Д. Юлтый.

**БОЙОРОҠ ҠЫЛЫМ** *и. грам. ҡар.* **бойороҡ һөйкәлеше.**

**БОЙОРОҠ ҺӨЙКӘЛЕШЕ** (Р.: повелительное наклонение; И.: imperative mood; Т.: emir kipi) *и. грам.*

Ҡылымдың берәй эш-хәрәкәтте үтәргә бойороуҙы, ҡушыуҙы белдергән категорияһы. □ Повелительное наклонение.

**БОЙОРОҠ ҺӨЙЛӘМ** (Р.: повелительное предложение; И.: imperative sentence; Т.: emir cümlesi) *и. грам.*

Хәбәре эште эшләргә бойороуҙы, үтенеүҙе, теләкте, кәңәште белдергән һөйләм. □ Повелительное предложение. *Бойороҡ һөйләм төҙөү.*

**БОЙОРОУ (бойор-)** [боронғо төрки *буйур-* 'әмер биреү'] (Р.: приказывать; И.: order; Т.: buyurmak) *ҡ.*

*Ниҙелер* эшләргә, башҡарырға ҡәтғи рәүештә ҡушыу; әмер биреү. □ Приказывать, предписывать, повелевать. ■ *Зилский.. Өмөтбайҙы ҡайтарырға бойорҙо.* Ғ. Дәүләтшин. *Бай Ҡыҙраҫҡа ошо ишәкте йөҙҙөрөп, ерҙә аунатмайынса алып ҡайтырға бойорған.* Әкиәттән.

♦ **Алла бойорһа** *ҡар.* **Алла. Бойороғоҙ** рәхим итегеҙ. □ Пожалуйте. ■ *[Әткол:] Йә, ҡунаҡтарым, аштан бойороғоҙ.* Т. Хәйбуллин.

**БОЙРА** (Р.: мерлушка; И.: lambskin; Т.: kuzu derisi) *и. диал.*

Йәш бәрәс тиреһе, илтер. □ Мерлушка. *Бойраны иләү.*

**БОЙСКАУТ** [рус. < ингл. *boy scout*] (Р.: бойскаут; И.: boyscout; Т.: izci) *и.*

Балаларҙың, үҫмерҙәрҙең хәрби-сәйәси характерҙағы ойошмаһы ағзаһы. □ Бойскаут. *Бойскаутҡа алыу.*

**БОЙФРЕНД** [рус. < ингл. *boy-friend*] (Р.: возлюбленный; И.: boyfriend; Т.: erkek arkadaş) *и.*

Ҡыҙҙың дуҫлашып йөрөгән егете. □ Бойфренд, возлюбленный. *Һинең бойфрендың бармы?*

**БОКАЛ** [рус. < фр. *bocal*] (Р.: бокал; И.: tumbler; Т.: kadeh) *и.*

Эсемлек эсә торған махсус һауыт. □ Бокал. ■ *Ҡара-ҡаршы әйтелгән изге теләк-юрауҙарға ҡушылып, бокалдар сыңланы.* Ә. Хәкимов. ● *Бер бокал шарап – булдың харап.* Әйтем.

**БОКС I** [рус. < ингл. *box* 'йоҙроҡ менән һуғыу'] (Р.: бокс; И.: boxing; Т.: boks) *и. спорт.*

Махсус ҡағиҙә буйынса йоҙроҡ менән һуғыша торған спорт төрө. □ Бокс. *Бокс менән шөғөлләнеү.*

**БОКС II** [рус. < ингл. *box* 'ҡумта'] (Р.: коробка; И.: box; Т.: kutu) *и.*

Күп мөйөш формаһында эшләнелгән ҡап, һауыт. □ Коробка, ящик. *Боксҡа һалыу. Боксты тотоу. Боксты һаҡлау.*

**БОКС III** [рус. < ингл. *box* 'ҡумта'] (Р.: бокс; И.: insulation ward; Т.: boks) *и.*

**1.** Дауалау учреждениеларында сирлеләрҙе айырып тотоу (изоляциялау) бүлмәһе. □ Отдельная комната для инфекционных больных (изолятор). *Ауырыуҙы боксҡа һалыу.*

**2.** *Ниндәйҙер* маҡсатта файҙаланылған махсус бүлмә, бүлек. □ Бокс. ■ *Билдәләнгән көндө Сибайға машинамды газға күсертергә*

*алып барҙым. «Тимер ат»ымды бокска индереп ҡуйҙылар, тирә башланылар.* «Йәшлек», 22 апрель 2010. *Быҙауҙарҙы тыуғас та һыйырҙан айыралар һәм махсус бокска урынлаштыралар.* «Башинформ» агентлығы сайты, 19 ноябрь 2009.

**БОКС IV** [рус.] (Р.: стричься под бокс; И.: boxer cut; Т.: saç kesimi şekli) *и.*

Ирҙәрҙең түбәлә генә ҡалдырып сәс алдырыу ысулы. □ Стричься под бокс. *Сәсте бокс итеп алдырыу.*

**БОКСЁР** [рус. < ингл. *boxer*] (Р.: боксёр; И.: boxer; Т.: boksör) *и.*

Бокс менән шөғөлләнгән спортсы. □ Боксёр. *Боксёрҙар ярышы.* ■ *Унан Ҡыҙырас, артабан ысынлап һуғышырға әҙерләнеп, ҡапыл ғына артҡа һикерҙе лә, ике йоҙроғон боксёрҙарса төйнәп, һул аяғын артҡа терәп, уң түбығын бөгөбөрәк алға баҫты, һул йоҙроғо менән ҡукрәгенҡаплап, уңын алға һуҙҙы.* З. Биишева.

**БОКСИТ** [рус. < фр. *bauxite*] (Р.: боксит; И.: bauxite; Т.: boksit) *и. мин.*

Ултырма тау тоҡомонан торған иң яҡшы алюмин рудаһы. □ Горная порода, содержащая глинозём, алюминиевая руда. *Боксит ятҡылығы.* ■ *Ул [Касим] бит бокситты юл ыңғайында ук таба һалып, тиҙерәк Өфөгә — теге ҡурсаҡ кеүек ҡыҙы эргәһенә һыҙырға самалай.* Н. Мусин.

**БОҠАЙ** (Р.: бука; И.: bogyman; Т.: umacı) *и. миф. диал.*

Балаларҙы ҡурҡыта торған мифик зат. □ Бука *(мифическое существо, которым пугают детей). Бапаҡ, боҡай менән ҡурҡытып үҫтерҙеләр беҙҙе.*

**БОҠАЙЫУ (боҡай-, боҡая)** (Р.: съёживаться; И.: shrivel; Т.: büzülmek) *ҡ. диал.*

1. Йомарланып ҡына сүгеү. □ Съёживаться. *Боҡайып ултырыу.*

2. *диал. ҡар.* **боҫоу 1.**

**БОҠТАЙЫУ (боҡтай-)** *ҡ. диал. ҡар.* **боҡайыу.**

**БОҠҺОУ I (боҡһо-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡаҡһыу I.** *Ҡорот боҡһоған.*

**БОҠҺОУ II** *с. диал. ҡар.* **ҡаҡһыу II.** *Боҡһоу эркет.*

**БОЛ I** [фарс. پول] (Р.: деньги; И.: money; Т.: para) *и. иҫк.*

1. Аҡса. □ Деньги. *Бол алыу.*

2. Матди мөмкинлек; байлыҡ, мал. □ Богатство, имущество. *Бол йыйыу.* ■ *[Нурғәли:] Иген сәсерлек бол булһа, мин дә бында утын тартып йөрөмәҫ инем.* С. Кулибай. *Бисә алыр өсөн дә мал кәрәк, бол кәрәк, сослоҡ кәрәк.* Р. Камал.

3. Ҡулға төшөргән мал; табыш, файҙа. □ Барыш, нажива. *Бол эҙләү.* ■ *Яу килгәндә өнһөҙ булһаң, хандың боло булырһың.* Ҡобайырҙан.

4. *ҡусм.* Файҙа, килем. □ Прибыль. *Бол табыу.*

**БОЛ II** (Р.: дорогой; И.: expensive; Т.: pahalı) *с.*

Ҡиммәтле, затлы. □ Дорогой. ■ *Менгән дә атым ҡола дүнән, кейгән дә туным бол елән.* Халыҡ йырынан.

**БОЛА I** [дөйөм төрки *бул-ға-* 'болғау, бутау'] (Р.: беспорядок; И.: disorder; Т.: karışıklık) *и.*

1. Бөтә нәмәһе теләһә нисек туҙҙырылған, йыйнаҡһыҙ хәл. □ Беспорядок. *Өй эсен болаға әйләндереү.*

2. Талаш, һуғышлы ғауға. □ Скандал, дебош. *Бола сығарыу.* ■ *Сепаратор ултыртҡан яҡ умарта ҡорто һымаҡ, гөж килеп тора һәм төш етмәйенсә бола, ығы-зығы, сыр-сыу баҫылмай.* Ж. Кейекбаев.

**БОЛА II** [боронғо төрки *булғаҡ* 'бола, фетнә'] (Р.: бунт; И.: riot; Т.: isyan) *и.*

Баҫым, ҡыҫымға ҡаршы ҡуҙғалған хәрәкәт. □ Беспорядок, бунт. *Бола ҡутәреләү.* ■ *[Был һалдаттар] ер сигендәге һуғыш өсөн түгел, эске болаларҙы баҫтырыу өсөн һаҡлана.* С. Агиш. *Ҡаланы бер аҡтар, бер ҡыҙылдар алып торған бола ваҡытта Әхмәровтың хыялынан бер нәмә лә барып сыҡманы.* Б. Бикбай.

**БОЛА III** (Р.: неубранный; И.: untidy; Т.: toplanmamış) *с.*

**1.** Йыйыштырылмаған. □ Неубранный. *Бола өй.* ■ *Бүлмәһе минеке кеүек бола: паяльник, отвёртка кеүек тимер-томор туҙышып ята.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Тәртипһеҙ. □ Безалаберный, неаккуратный. *Бола кеше.*

**БОЛАҠ (болағы)** [боронғо төрки *булак*] (Р.: маленькая речка; И.: brook, creek; Т.: dere) *и.*

Бәләкәй йылға. □ Маленькая речка, речушка, ручей. ■ *Баҙар ғимараттары, Иҙел болағындағы караптар тукталышы әҙер икән инде.* Ә. Хәкимов. ● *Һыуҙың башы болаҡтан.* Әйтем.

**БОЛАЛАНЫУ (болалан-)** (Р.: бузить; И.: kick up a rumpus; Т.: isyan etmek) *ҡ. диал.*

Боларыу. □ Бузить. *Ҡатыны менән болаланыу.*

**БОЛАЛЫ** (Р.: смутный; И.: troubled; Т.: karışık) *с.*

Бөтә халыҡты ҡуҙғатҡан ығы-зығылы; ғауғалы. □ Смутный. *Болалы заман.* ■ *Заманаһы шулай болалы булғас, ни ҡылаһың.* Ә. Хәкимов.

**БОЛАМА I** *и. диал. ҡар.* **бола II.** ■ *Бохарҙа бар болама.* М. Аҡмулла.

**БОЛАМА II** *с. диал. ҡар.* **буталсыҡ.**

**БОЛАМА III** *р. диал. ҡар.* **аралаш II.**

**БОЛАМА ИТЕҮ (болама ит-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бутау I.**

**БОЛАМСАЙ** *и. диал. ҡар.* **боламыҡ I.**

**БОЛАМЫҠ I (боламығы)** [дөйөм төрки *буламак* < *булға-мак* ‘боламыҡ’] (Р.: болтушка; И.: kind of broth; Т.: lapa) *и. этн. кул.*

**1.** Ондо, борсаҡ онон һыуға йәки һөткә болғатып бешерелгән шыйыҡ бутҡа. □ Болтушка *(вид мучной каши из пшеничной или из гороховой муки). Боламыҡ әһау.* ■ *Ашау өсөн иң шәбе – боламыҡ, сөнки уны сәйнәү мәжбүри түгел.* Р. Ғабдрахманов. *Тирмән тартҡанда осҡан ондан (туҙан тиһәң дә була инде) боламыҡ бешерә. Әле булһа ла ул аштың тәме тел осонда, сөнки был һирәк эләгә торған татлы ризыҡ ине.* «Башҡортостан», 4 май 2011.

**2.** Тәмһеҙ итеп әҙерләнгән аш йәки эсемлек. □ Бурда. *Аш боламыҡ булған.*

**3.** *йәки* **арыш боламығы.** *күсм.* Үтә йомшаҡ холоҡло, йыуаш, булдыҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. □ Мямля, размазня. ■ *Ротмистр ҡатып торған казактарға: «Боламыҡтар!» – тип аҡырҙы.* Я. Хамматов.

**4.** Болғансыҡ, юҡ-бар, буталсыҡ. □ Мешанина. ■ *Ул, ысынлап та.. мөһәбәт кеше ине. Мейеһе боламыҡ булмаһа, ни әйттең дә бит.* Ә. Хәкимов.

**БОЛАМЫҠ II** *с. ҡар.* **болғаҡ III.**

**БОЛАМЫҠЛАНЫУ (боламыҡлан-)** *ҡ. ҡар.* **болғансыҡланыу.**

**БОЛАМЫҠЛАУ (боламыҡла-)** *ҡ. ҡар.* **болғансыҡлау.**

**БОЛАН** [дөйөм төрки *булан* ‘мышы’] (Р.: олень; И.: deer; Т.: geyik) *и. зоол.*

**1.** Айыры тояҡлы, тармаҡ-тармаҡ мөгөҙлө, көйөшлө эре хайуан. □ Олень *(лат. Cervidae). Болан балаһы. Болан ите. Болан мөгөҙө. Йорт боланы. Ҡырағай болан.* ■ *Урта ишек башында – тарбағай болан мөгөҙө, койка эргәһендә – күҙ яуын алмалы матур келәм, ә урындыҡтан төшкән ергә айыу тиреһе йәйелгән.* Н. Мусин.

**2.** *диал. ҡар.* **мышы.**

**3.** Тотем, табыныу йәнлеге. □ Олень *(тотемное животное).*

**БОЛАН КӨПШӘҺЕ** (Р.: дягиль; И.: angelica; Т.: melekotu) *и. бот. диал.*

Шыма көпшә (айыу ҡурайы). □ Дягиль *(лат. Angelica).*

**БОЛАН КҮГӘҮЕНЕ** *и. зоол. ҡар.* **күгәүен.**

**БОЛАН ҠУНЫҘ** *и. зоол. ҡар.* **ҡуныҙ.**

**БОЛАН МӨГӨҘӨ I** (Р.: оленьи рога; И.: antlers; Т.: geyik boynuzlu) *и.*

**1.** Болан маңлайындағы һөйәк матдәһенән торған ҡаты үҫенде. □ Оленьи рога.

**2.** *миф.* Мифлаштырылған предмет, түллелек символы. □ Оленьи рога *(мифологизированный предмет, символ плодовитости, счастья, благополучия).*

**БОЛАН МӨГӨҘӨ II** (Р.: оленьи рога; И.: antler; Т.: geyik boynuzlu) *и. этн.*

Үрсемле, түлле булыуға йүнәлтелгән, ҡатын-ҡыҙ кейемендәге биҙәк. □ Оленьи рога *(узор женского костюма, направлен на проецирование плодовитости. Имеет обережную силу).*

**БОЛАН МҮГЕ** (Р.: ягель; И.: cup moss; Т.: ren geyiği yosunu) *и. бот.*

Кейеҙләнеп еүеш ергә түшәлеп үҫә торған тамырһыҙ һәм сәскәһеҙ һеркәле үҫемлек. □ Ягель; олений мох (лат. *Cladonia rangiferina).*

**БОЛАНСЫ** (Р.: оленевод; И.: reindeer breeder; Т.: ren geyiği çobanı) *и.*

Болансылыҡ менән шөғөлләнгән кеше. □ Оленевод.

**БОЛАНСЫЛЫҠ (болансылығы)** (Р.: оленеводство; И.: reindeer breeding; Т.: geyik yetiştiricilik) *и.*

Болан аҫрау хужалығы. □ Оленеводство. *Болансылыҡ совхозы.* ■ *Болансылыҡ совхозы, балыҡсылыҡ артеле бик яҡшы эшләй.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**БОЛАНУТ** (Р.: кипрей; И.: epilobium; Т.: yakı otu) *и. бот.*

**1.** Оҙон һабаҡлы, ҡуҫҡыл ҡыҙыл йәки ал төҫтәге һепертке сәскәле урман үләне. □ Кипрей, иван-чай (лат. *Epilobium).* ■ *Таулы урман зонаһында балдың төп йыйымы боланут менән шыма көпшәнән була.* Ғ. Байбурин.

**2.** Бәбәге ике өлөшлө үҫемлектәр ғаиләһе *(боланут, фуксия һ. б.).* □ Кипрейные (лат. *Onagraceae). Боланутҭар. Боланут һымаҡтар.*

**БОЛАҢҒЫР** *с. диал. ҡар.* **тоноҡ.** *Болаңғыр ут.*

**БОЛАРТЫУ (боларт-)** (Р.: приводить в беспорядочное состояние; И.: set into disorder; Т.: bozmak) *ҡ.*

**1.** Туҙҙырыу; тәртипһеҙ, йыйнаҡһыҙ хәлгә килтереү; тәртибен юҡҡа сығарыу. □ Приводить в беспорядочное состояние. *Өй эсен болартыу. Сәсте болартыу.* ■ *Ел туғайҙағы ҙураттарға уҡтыртылған, ҡырлыҡҡа баҫылған ашлыҡтарҙың көлтәләрен осороп төшөрә һәм туҙаҡайын туҙҙырып боларта.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Тыныҫһыҙ хәлгә килтереү. □ Приводить в неспокойное состояние. *Араны болартыу.* ■ *[Нигмәтйән:] Беҙҙең волоска килгән кеше, үҙенең тейешле документтары менән ҡайд ителергә тейешле. Уҙған килеүеңдә лә донъяны болартып киттең.* Ғ. Хәйри.

♦ **Донъяны (араны) болартыу** *кемдәрҙеңдер* араһын бутау. □ Внести разлад *в чьи-то* отношения.

**БОЛАРЫНҠЫ** *с. ҡар.* **болалы.** ■ *Боларынҡы ине шул заманалар, һәр ҡайҙа алдап-йолдап, завод тип, башҡорттарҙың ерҙәрен һалдырып алалар.* Ғ. Хөсәйенов.

**БОЛАРЫУ (болар-)** (Р.: приходить в беспорядочное состояние); И.: get into disorder; Т.: kavga etmek) *ҡ.*

**1.** Тәртипһеҙ, йыйнаҡһыҙ хәлгә килеү; туҙыу. □ Приходить в беспорядочное состояние. *Өй эсе боларған.* ■ *Боларған шырт сәстәрен һыпыра-һыпыра бүлмәгә бер егет килеп инде.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ығы-зығы килеү; сыуалыу. □ Суетиться. ■ *Өй тирәһендә үҙ йомоштары менән боларып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар күренә.* Д. Юлтый.

**3.** Шау-шыу, тауыш ҡуптарыу. □ Скандалить, дебоширить, бузить. ■ *Табын күңелле үтте. Харис менән Фәхри ҙә артығын эсмәне, боларманы.* Б. Бикбай.

**4.** Талаш-һуғышлы, тыныҫһыҙ хәлгә килеү. □ Быть в неспокойном состоянии. *Ара боларыу.* ■ *[Хаммат:] Донъялар боларып тора.* З. Биишева.

**5.** *диал.* Ярһыу. □ Разгорячиться. ■ *[Ғәйнулла:] Күңелем боларғанда әйтеп ҡалам, башҡа саҡта баҙнат итә алмам.* М. Кәрим.

♦ **Төш боларыу** насар төш күреү. □ Видеть плохой сон.

**БОЛАРЫШЫУ (боларыш-)** *ҡ. урт. от* **боларыу.** *взаимн. от* **боларыу.**

**БОЛАСЫ I** (Р.: бунтовщик; И.: rioter; Т.: isyancı) *и.*

Баҫым, ҡыҫымға ҡаршы ҡуҙғалған хәрәкәттә ҡатнашыусы. □ Участник волнений, беспорядков; бунтовщик. ■ *Атайымдың төрмәгә ябылыуы беҙгә бик ҙур ауырлыҡ килтерҙе. «Боласы бисәһен тотмайым!»—тип, теген мастерскойының хужаһы .. әсәйемде лә эштән ҡыуып сығарған.* Ф. Иҫәнғолов.

**БОЛАСЫ II** (Р.: скандалист; И.: brawler; Т.: kavgacı) *и.*

Шау-шыу, янъял күтәреүсе. □ Скандалист, дебошир.

**БОЛАСЫЛ** (Р.: склонный к бузотёрству; И.: prone to scandal, scandalous; Т.: kavgacı) *с.*

Бола (I, II) ҡуптарыусан. □ Склонный к бузотёрству, скандальный. *Боласыл халыҡ. Боласыл кеше.*

**БОЛАУ (бола-)** *ҡ. ҡар.* **боларыу 1.** *Болап оҫҡан ҡуҫ.*

**БОЛАШ** (Р.: часть свадебного обряда; И.: sort of ethnographic rite; Т.: düğün töreni) *и. этн.*

Туй йолаһында ҡотто тотоу, һаҡлау йолаһы. □ Часть свадебного обряда; обряд направлен на поимку и сохранение жизненной силы, счастья, удачи, благополучия невесты. ■ *Ҡоҙалар килеп еткәс, ҡотҡа болаш башлана.* Башҡорт мифологияһынан.

**БОЛАШЫУ (болаш-)** (Р.: дёргать; И.: quarrel; Т.: çekmek) *ҡ. диал.*

1. *ҡар.* **булышыу 2.**

2. *диал.* Тартҡылашыу, талашыу. □ Дёргать, ссориться. *Уйынсыҡҡа болашыу.*

**БОЛГАР** [боронғо төрки *булғар*] (Р.: болгарин; И.: Bulgarian; Т.: Bulgar) *и.*

Болгарияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең кешеһе *(славян телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Болгарин. *Болгар халҡы. Болгар ҡатыны. Болгар теле.* ■ *Поручик Богданов, штаб офицеры булараҡ, казармала түгел, болгарҙар йортонда айырым бүлмәлә йәшәне.* Ә. Хәкимов.

**БОЛГАРКА** [рус.] (Р.: болгарка; И.: hind of a saw; Т.: alet) *и.*

Тимер, таш киҫә торған инструмент. □ Болгарка. *Болгарка менән эшләү.*

**БОЛГАРСА** (Р.: по-болгарски; И.: in Bulgarian; Т.: Bulgarca) *р.*

1. Болгар телендә. □ По-болгарски. *Болгарса һөйләшеү.* ■ *Болгарса өйрәнә төшөп, эш араһында газетаға күҙ һала башлағас, Зөфәр бындағы сетерекле хәлдәргә иғтибар итмәй ҡалманы, әлбиттә.* Ә. Хәкимов.

2. Болгарҙарға хас рәүештә. □ Как болгары, по-болгарски. *Болгарса бейеү. Болгарса кейенеү.*

**БОЛҒАҒЫС** (Р.: мешалка; И.: mixer; Т.: karıştırıcı) *и.*

Болғатҡыс. □ Мешалка. *Болғағыс менән болғатыу.*

**БОЛҒАЙ-БОЛҒАЙ** (Р.: махая; И.: waving; Т.: sallayarak) *р.*

Тегеләй-былай сайҡап. □ Махая. *Болғай-болғай йүгереү.*

**БОЛҒАҠ I** [боронғо төрки *булғаҡ* 'бола'] (Р.: вносящий разлад; И.: intrigant; Т.: entrikacı) *с.*

Ара бутап йөрөүсән. □ Вносящий разлад, занимающийся интригами (интриган). *Болғаҡ кеше.*

**БОЛҒАҠ II** (Р.: подстрекатель; И.: instigator; Т.: baştak) *и.*

Боласыл кеше. □ Подстрекатель.

**БОЛҒАҠ III** (Р.: мутный; И.: turbid; Т.: bulanık) *с.*

Болғансыҡ. □ Мутный *(о воде). Болғаҡ һыу.*

**БОЛҒАЛАНЫУ (болғалан-)** (Р.: качаться; И.: sway; Т.: sallanmak) *ҡ.*

Тегеләй-былай болғаныу. □ Качаться, шататься *(при ходьбе).* ■ *Болғаланып, ерҙе мансып йәшкә, юлдарыма томан сылана.* Б. Вәлит.

**БОЛҒАНДЫРЫУ (болғандыр-)** (Р.: мешать; И.: mix; Т.: karıştırmak) *ҡ.*

1. Әйләндереп-әйләндереп, аҫтын-өҫкә килтереү; болғау. □ Мешать, размешивать. ■ *Ал биҙ(е)рә, гөл биҙ(е)рә һыуҙарҙы болғандыра.* Халыҡ йырынан.

2. Болғансыҡҡа әйләндереү; болғансыҡлау. □ Делать мутным, мутить. *Тау һырт-*

*тарынан ағып төшкән йырғанактар йылғаны болғандыра.*

♦ **Күңелде болғандырыу** ҡоҫҡоно килтереү, күңелгә тейеү. □ Тошнить.

**БОЛҒАНЛАҠ I (болғанлағы)** (Р.: балагур; И.: joker; Т.: şakacı) *и. диал.*

**1.** Шаян кеше. □ Балагур.

**2.** Ҡылансыҡ (ҡыҙ). □ Кокетка.

**БОЛҒАНЛАҠ II** (Р.: кокетливый; И.: coquettish; Т.: cilveli) *с.*

Ҡылансыҡ. □ Кокетливый. *Болғанлаҡ ҡыҙ.*

**БОЛҒАНЛАУ (болғанла-)** (Р.: качаться; И.: sway; Т.: sallanmak) *ҡ.*

Тегеләй-былай сайҡалыу. □ Качаться, шататься. *Болғанлап атлау.* ■ *Һыу уртаһында ултырған бакендар шәп ағымға уңлы-һуллы әкрен генә болғанлай.* Ж. Кейекбаев.

**БОЛҒАНСЫҠ** (Р.: мутный; И.: turbid; Т.: bulanık) *с.*

**1.** Ләм, бысраҡ ҡатыш; буръяҡ. □ Мутный, грязный. *Болғансыҡ йылға.* ■ *Уның [аттың] өҫтөнән болғансыҡ һыу шыбырҙап ҡойолдо.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Тәртипһеҙ, сиратһыҙ, әҙмә-әҙләкһеҙ; буталсыҡ. □ Запутанный, сложный. *Башта шатлыҡлы ла, тәманлы ла төрлө болғансыҡ уйҙар бутала.*

**3.** *күсм.* Ығы-зығылы, тыныcһыҙ. □ Суматошный. ■ *Уларҙы [кешеләрҙе]. юнышҡылай әйрәлтеп, тарих дарьяһының болғансыҡ ағымы ялмап аласаҡ.* Ә. Хәкимов.

♦ **Болғансыҡ (буръяҡ) һыуҙа балыҡ тотоу** буталсыҡ хәлдән файҙаланып ҡалырға тырышыу. □ *соотв.* Ловить рыбу в мутной воде. ■ *[Шовинистар] болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотҡан кеүек. моменттан файҙаланып, партияның ваҡ милләттәр тураһындағы тотҡан юлын кире ҡаға.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**БОЛҒАНСЫҠЛАНДЫРЫУ (болғансыҡландыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **болғансыҡланыу.** *понуд. от* **болғансыҡланыу.**

**БОЛҒАНСЫҠЛАНЫУ (болғансыҡлан-)** (Р.: становиться мутным; И.: grow turbid; Т.: bulanmak) *ҡ.*

Болғансыҡҡа әйләнеү. □ Становиться мутным, мутнеть. ■ *Һыу болғансыҡланып аға ла аға.* К. Кинйәбулатова.

**БОЛҒАНСЫҠЛАТЫУ (болғансыҡлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **болғансыҡланыу.** *понуд. от* **болғансыҡланыу.**

**БОЛҒАНСЫҠЛАУ (болғансыҡла-)** (Р.: делать мутным; И.: make turbid; Т.: bulanık hale getirmek) *ҡ.*

Болғансыҡҡа әйләндереү; болғандырыу. □ Делать мутным, мутить. *Һыуҙы болғансыҡлау.*

**БОЛҒАНЫУ (болған-)** (Р.: вертеться; И.: turn (round); Т.: dönmek) *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **болғау I, 2, 3.** *страд. от* **болғау I, 2, 3.**

**2.** *күсм.* Бер тирәлә уралыу; сыуалыу, буталыу. □ Вертеться, крутиться *(на одном месте).* ■ *Бер урында сауҙагәрҙәр турпыша ҡороп торор. арлы-бирле болғанып. шунда халыҡ йөрөп торор.* Ш. Бабич.

**3.** Болғансыҡҡа (1) әйләнеү. □ Бурно течь, бурлить. ■ *Болғанып ятҡан һыуға таш кеүек атылдым.* К. Кинйәбулатова.

**4.** *Ни* менәндер аралашыу; буталыу. □ Помешаться. ■ *Утлыҡсанан ҡойолған бесәндәр һары һыу ҡатыш тиҙәккә болғанып бөткән.* М. Тажи. *Әллә ни тиклем кәүҙәләр тупраҡҡа болғанып, ҡан эсендә ята.* Д. Юлтый.

♦ **Йөрәк болғаныу** ҡоҫҡо килеү, күңелгә тейеү. □ Тошнить.

**БОЛҒАНЫШЫУ (болғаныш-)** *ҡ. урт.* **болғаныу 2.** *взаимн. от* **болғаныу 2.** ■ *Таш келәттән өс кеше килеп сыҡты. Уларҙы көрәү менән халыҡ тағы болғанышып китте.* М. Тажи.

**БОЛҒАР** [боронғо төрки *булғар*] (Р.: булгар; И.: Bulghar; Т.: Bulgar) *и. тар.*

Төрки телдәренең береһендә һөйләшкән боронғо ҡәбилә (Урта Волгала йәшәгән) һәм шул ҡәбиләнең кешеһе. □ Булгар, булгары. *Болғар ханлығы. Болғар ҡомартҡылары.*

*Болғар теле. Болғар халҡы.* ■ *Йортто болғар булһа булһын, йортто болғар булмаһын.* М. Аҡмулла. *Улар, биләр, ғәйнә, йәнәй, юрматы, юрмый ырыуҙарының барлыҡҡа килеүендә болғарҙар ғына түгел, уғырҙар һәм боронғо башҡорттар ҙа ҡатнаша.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 2, 2010.

**БОЛҒАРИ** (Р.: родом из булгар; И.: Bulghar-born; Т.: Bulgari) *с.*

Болғар нәҫеле. □ Родом из булгар. *Болғари.*

**БОЛҒАР ИТЕК (итеге)** (Р.: булгарские сапоги; И.: kind of high shoes; Т.: çizme) *и.*

Йомшаҡ күндән семәрләп тегелгән итек. □ Булгарские сапоги.

**БОЛҒАР КҮН(Е)** (Р.: мягкая красная кожа; И.: sort of soft leather; Т.: deri çeşidi) *и.*

Йомшаҡ ҡыҙыл күн. □ Мягкая красная кожа.

**БОЛҒАТМА** *и. диал. ҡар.* **болғау II.** *Болғатма ашатыу.*

**БОЛҒАТЫЛЫУ (болғатыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **болғатыу 1, 2.** *страд. от* **болғатыу 1, 2.** *Болғатылған бесән.*

**БОЛҒАТЫУ (болғат-)** (Р.: мешать; И.: mix; Т.: karıştırmak) *ҡ.*

**1.** Бер нәмә менән әйләндереп, аҫтын-өҫкә килтереү; бутау. □ Мешать, размешивать, перемешивать; болтать, взбалтывать. *Ашты болғатыу. Бутҡаны болғатыу.* ■ *[Ат — егеткә:] Балды эсер алдынан ғына бармағың менән бер ҡат болғат.* Әкиәттән.

**2.** Бер нәмә менән араһынан йөрөтөп ҡуҙғатыу; болғау. □ Помешать. // Помешивание. *Утты болғатыу.* ■ *Сейәбикә .. кистән күмеп ҡалдырған ҡуҙын болғатып, өрә-өрә сыуалға ут ҡабыҙып ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Бергә ҡушып аралаштырыу; болғап ҡатнаштырыу; болғау. □ Помешать, перемешивать. // Помешивание, перемешивание. ■ *[Һунарсы:] Мин был ҡуянды ла атам, өйрәк менән ҡуян итен бергә бешерәм, болғатам.* Ш. Бабич. *[Ғамир] аттарға .. бесәнде ҡоро көйө түгел, тураң, болғатып бирә башланы.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Тыныслыҡ хәлгә килтереү; болартыу. □ Вызывать волнение, беспокоить, будоражить, устраивать переполох, портить отношения. *Араны болғатыу.* ■ *Генерал Кар Петербургҡа, башҡорт старшинаһы Кинйә Арыҫланов бөтә Башҡортостанға хат ебәреп, халыҡты бик ныҡ болғатты, тип яҙа.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Күңелде болғатыу** ҡоҫҡоно килтереү. □ Вызывать тошноту.

**БОЛҒАТЫУСЫ** (Р.: смутьян; И.: troublemaker; Т.: fitneci) *и. һөйл.*

Ара бутаусы. □ Смутьян. *Донъя болғатыусы.*

**БОЛҒАУ I (болға-)** [дөйөм төрки *булға*-'болғау, бутау'] (Р.: махать; И.: wave; Т.: sallamak) *ҡ.*

**1.** Һауала тегеләй-былай һелтәү. □ Махать, размахивать. *Ҡул болғау. Сыбыртҡыны болғау. Яулыҡ болғау.* ■ *Ел тирмәне елдеү елдәргә ҡанаттарын болғап әйләнә.* Ғ. Амантай.

**2.** Бер нәмә менән әйләндереп, аҫтын-өҫкә килтереү; болғатыу, бутау. □ Перемешивать. ■ *Ҡуҙыйкүрпәскә балды ҡойоп биреп торалар, ул бармағы менән болғап ала ла эсеп бөтөрөп тора, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Бергә ҡушып аралаштырыу; болғатыу. □ Перемешивать. *Болғап ашатыу.*

♦ **Ҡойроҡ болғау** *ҡар.* **ҡойроҡ.**

**БОЛҒАУ II (болға-)** (Р.: мешанина; И.: medley; Т.: bulanık) *и.*

Он, көрпә ҡушып болғатҡан бесән йәки һалам; бутау. □ Мешанина, месиво. *Яҙғы һабан алдынан аттарға болғау бирә торғайныҡ.*

**БОЛҒАУЫР** (Р.: тревожный; И.: anxious; Т.: huzursuz) *с.*

**1.** Тынысһыҙ, болғансыҡ. □ Тревожный, смутный. ■ *Юл ауыр, юл болғауыр булһа ла, милләт, әйҙә әле: алда рәхәт ҡәҙерен белмәккә михнәт файҙалы.* Ш. Бабич.

**2.** *һөйл. ҡар.* **болғаҡ I.** *Болғауыр кеше.*

**БОЛҒАУЫС** (Р.: кочерга; И.: poker; Т.: ocak demiri) *и.*

**1.** Мейесте болғата торған кәкре башлы тимер; тәртешкә. □ Кочерга. *Ҡуҙҙы болғауыс менән бутау.*

**2.** *диал.* Төрлө нәмәне болғата торған яҫы ҡалаҡ. □ Лопаточка, шпатель. *Болғауыс менән болғау.*

**БОЛҒАШЫУ (болғаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **болғау I.** *взаимн. от* **болғау I.** ■ *Оҙатыусылар менән пароходтағылар яулыҡ болғаша.* Ғ. Хәйри.

**БОЛДАЛАУ I (болдала-)** *ҡ.*

**1.** *диал. ҡар.* **ботарлау.** *Итте болдалау.*

**2.** *күсм.* Тәләфләү, туҙҙырыу. □ Расходовать чрезмерно. ■ *Аҡсаны болдалап бөтөү.*

**БОЛДАЛАУ II (болдала-)** (Р.: делать кое-как; И.: do so-so; Т.: bürümeden iş görmek) *ҡ. диал.*

Арлы-бирле эшләү. □ Делать кое-как. *Бер эште лә еренә еткереп эшләмәҫ, йөрөй инде шунда болдалап.*

**БОЛДОР I** [фарсы *пули-дар* 'ишек алды'] *и. диал. ҡар.* **күтәрмә II.** ■ *Хәйретдин бабай, өйҙә урын тапмай, болдорға сығып ултырҙы.* Ф. Иҫәнғолов. *Ғилман ағаһының йорто янына барып туҡтауға, ике ҙур фляга болдорҙа тора ине инде.* Д. Бүләков.

**БОЛДОР II** (Р.: подражание звуку; И.: onomatopaeic sound; Т.: fır) *оҡш.*

Өйрәк, һуйыр кеүек ҡош осоп киткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку, возникающему при взлёте птиц. *Болдор итеп күтәрелеү.*

**БОЛДОРАУ (болдора-)** (Р.: шумно порхать; И.: flutter; Т.: gürültügle uçmak) *ҡ.*

Болдор (II) итеү. □ Шумно порхать.

**БОЛЕРО** [рус. < исп. *bolero*] (Р.: болеро; И.: bolero; Т.: bolero) *и.*

**1.** Испандарҙың милли бейеүе һәм музыкаһы. □ Болеро *(испанский национальный танец и музыка). Болеро бейеү.*

**2.** Еңһеҙ кейем. □ Болеро. *Болеро кейеү.*

**БОЛИД I** [рус. < фр. *bolide*] (Р.: болид; И.: fireball; Т.: havataşı) *и. астр.*

Бик ҙур һәм яҡты метеор. □ Болид. *Болид ҡойроғо.*

**БОЛИД II** [рус. < фр. *bolide*] (Р.: болид; И.: bolide; Т.: yarış arabası) *и.*

Уҙышыу автомобиле. □ Болид, гоночный автомобиль. *Болидтар ярышы.*

**БОЛЙОУ (болйо-)** (Р.: грустить; И.: be blue; Т.: üzülmek) *ҡ. диал.*

Бошоноу. □ Грустить, печалиться. *Болйоп китеү.*

**БОЛҠ-БОЛҠ** (Р.: буль-буль; И.: gurgle; Т.: lıkır-lıkır) *оҡш.*

Тар муйынлы һауыттан тығылып-тығылып шыйыҡлыҡ аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку, возникающему при выливании жидкости из бутылки; буль-буль, бульк-бульк.

**БОЛҠОЛДАУ (болҡолда-)** (Р.: булькать; И.: gurgle; Т.: lıkırdamak) *ҡ.*

Болҡ-болҡ итеү, болҡ-болҡ килеү. □ Булькать. *Болҡолдоғо сығыу.*

**БОЛЛАНЫУ (боллан-)** (Р.: обогатиться; И.: enrich oneself; Т.: zenginleşmek) *ҡ. иҫк.*

*Ниммәгәлер* тейенеү, байыҡыу. □ Обогатиться, быть при деньгах. ● *Болланһаң — болондо, юлланһаң — юлыңды, уйлаһаң — уйыңды йәшер.* Мәҡәл.

**БОЛЛО** (Р.: денежный; И.: money; Т.: paralı) *с. иҫк.*

Аҡсалы. □ Денежный. *Болло кеше.* ● *Болло кеше бол табыр, уллы кеше ял табыр.* Мәҡәл.

**БОЛОҒОУ (болоҡ-)** (Р.: грустить; И.: be sad; Т.: hüzünlenmek) *ҡ. диал.*

Бойоғоу, бошоноу. □ Грустить. *Һағынып болоғоу.*

**БОЛОҠҺОТҠОС** *с. диал. ҡар.* **болоҡһоу II.** *Болоҡһотҡос хәл.*

**БОЛОҠҺОТОУ (болоҡһот-)** (Р.: тревожить; И.: trouble; Т.: endişelendirmek) *ҡ.*

**1.** Борсоп, тынысһыҙлыҡты алыу. □ Тревожить, волновать, беспокоить. *Күңелде болоҡһотоу.* ■ *Китер юлға тамған күҙ йәштәре*

*яугирҙың күңелен болоҡһота, ихтыярын ҡаҡшата.* М. Кәрим.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **болоҡһоу I.** *Болоҡһотоп ебәрҙе.* ■ *Башта һағышлы ла, борсоулы ла уй-тойғолар ҡайнаша, һуғыш бит — ирекһеҙҙән болоҡһотоп та ебәрә шулай ҡайһы саҡта.* С. Әлибаев.

**БОЛОҠҺОУ I (болоҡһо-)** (Р.: сильно тревожиться; И.: be troubled much; Т.: endişelenmek) *ҡ.*

**1.** Борсолоп, тыныслыҡты юғалтыу. □ Сильно тревожиться, волноваться, беспокоиться. *Йөрәк болоҡһой.* ■ *Хәтәр йылды иҫкә төшөрөп, йөрәгемде өтөп, бешереп, болоҡһой ҙа тора был күңел: тыныс түгел донъя, һис түгел!* Ә. Әхмәт-Хужа.

**2.** *күсм.* Боҙолорға итеү *(көнгә ҡарата).* □ Хмуриться *(о погоде).* ■ *[Зарифа:] Ҡуй йөрөмәгеҙ, көн болоҡһоп тора, ямғыр-маҙар аҫтына ҡалыуығыҙ бар.* Б. Бикбай.

**БОЛОҠҺОУ II** (Р.: тревожный; И.: anxious; Т.: endişeli) *с.*

**1.** Борсоулы, тыныcһыҙ. □ Тревожный, беспокойный, неспокойный. *Болоҡһоу кеше. Болоҡһоу күңел. Болоҡһоу булыу. Болоҡһоу ҡиәфәт.* ■ *Мин Әхмәҙулла бабайҙы борсомаҫҡа тырыштым. Болоҡһоу ҙа, уйсан да ине ул.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Боҙолорға торған. □ Пасмурный, хмурый. *Болоҡһоу көн.*

**БОЛОН I** [боронғо төрки *булун* ‘йылға бөгөлөшө, туғай’] (Р.: луг; И.: meadow; Т.: çayır) *и.*

Үлән менән ҡапланған иркен ер. □ Луг. *Хәтфә болон. Болон бесәне. Болон сәскәһе.* ■ *Арҡа ерҙең үләне болондарҙа үҫкән гөл кеуек.* Халыҡ йырынан. *Йәйғор ҡанатлы күбәләк осоп йөрөй болонда.* Г. Юнысова. ● *Болондағы ҡипкән бесән дымланһа — ямғыр яуасаҡ.* Һынамыш.

**БОЛОН II** [төрки] (Р.: плен; И.: captivity; Т.: tutsaklık) *и. диал.*

**1.** Хәрби тотҡонлоҡ; әсирлек. □ Неволя, плен. *Болон төшөү.* ■ *[Юлдыҡай:] Алығыҙ Ҡарамырҙаны болонға! Биклəп ҡуйығыҙ .. бер йылға!* Х. Ғәбитов.

**2.** *иҫк.* Хәрби тотҡондағы кеше; әсир. □ Пленный, пленник. *Болон булыу. Болон итеү.*

**БОЛОН БӨТНӨГӨ** (Р.: мята луговая; И.: field mint; Т.: tarla nanesi) *и.*

Болондарҙа үҫкән хуш еҫле үлән. □ Мята луговая (лат. *Mentha arvensis). Болон бөтнөгөн йыйыу.*

**БОЛОНЛОҠ (болонлоғо)** (Р.: луг; И.: meadowland; Т.: çayırlık) *и.*

Үләнле иркен ер; болон. □ Луг; местность, покрытая лугами. ■ *Шулай итеп, бынан 20—30 йылдар элек бер ситенән икенсе ситe күренмәй торған яландар, болонлоҡ вә һыу буйҙары — барыһы ла немец, хохол халыҡтары менән ҡоршалап алынғандар.* М. Буранғолов.

**БОЛОН МИЛӘҮШӘҺЕ** (Р.: фиалка полевая; И.: daisy; Т.: menekşe) *и. бот.*

Ҡыҫҡа һабаҡлы, ялтыр яҫы япраҡлы, көрән, аҡ йәки төрлө төҫтәге сәскәле үсемлек. □ Фиалка полевая (лат. *Viola arvensis). Болон миләүшәһе сәскәһе.*

**БОЛОНСОЛОҠ (болонсолоғо)** (Р.: луговодство; И.: meadows; Т.: çayır tarımı) *и. а. х.*

**1.** Туғай көтөүлеге хужалығын алып барыу системаһы. □ Луговодство.

**2.** Ошо өлкәне өйрәнеүсе фән. □ Луговодство *(отрасль науки).*

**БОЛОН СЫРМАЛСЫҒЫ** (Р.: вьюнок полевой; И.: bindweed; Т.: çit sarmaşığı) *и. бот.*

Сырмалып үҫкән оҙон һабаҡлы үлән. □ Вьюнок полевой (лат. *Convolvulus arvensis).*

**БОЛОН СӘЙЕ** *и. бот. ҡар.* **талдут.**

**БОЛОТ I** [боронғо төрки *булыт* ‘болот’] (Р.: облако; И.: cloud; Т.: bulut) *и.*

**1.** Һауала ваҡ һыу тамсыларының йәки боҙ кристалдарының тупланыуы. □ Облако, туча. *Аҡ болот. Ҡара болот. Өйкөм болоттар. Ямғыр болото. Ҡар болото.* ■ *Ҡояш*

*байышынан йүгереп сыҡҡан күк болоттар, талғын ғына килеп, .. ауыл өҫтөнә йылы, йомшаҡ ямғыр бөртөктәре һибәләп үтте.* Т. Йәнәби.

**2.** Берәй нәмәнең ваҡ ҡына булып осоп, туҙып күтәрелгән өлөштәре. □ Мелкие частицы *чего-л. Саң болото. Төтөн болото.*

**3.** *күсм.* Солғап алған ауыр хис, тойғо шәүләһе. □ Отблеск, призрак тяжёлых мыслей, горя. *Ҡайғы болото.* ■ *Ысын кешенең йөҙөнә һис кенә лә болот сыҡмаҫ .. булырмы? Кеше һис кенә лә ҡыҙмаҫ, янмаҫ, көймәҫ булырмы?* З. Биишева.

**БОЛОТ II** (Р.: губка; И.: sponge; Т.: sünger) *и.*

**1.** *зоол.* Диңгеҙҙә йәшәгән күп күҙәнәкле хайуандарҙың түбән тибы. □ Губка, низшее многоклеточное неподвижное морское животное (лат. *Porifera*).

**2.** Шул хайуандарҙың ҡауы, һөлдәһе. □ Мягкий, ноздреватый остов этого животного.

**3.** Шуға оҡшатып резинанан, поролондан эшләнгән, йыуғыс итеп файҙаланылған йомшаҡ, көпшәк, һығылмалы йыуғыс. □ Губка. *Болот менән йыуыныу.*

**БОЛОТЛАНЫУ** (**болотлан-**) *ҡ. төш. ҡар.* **болотлау.** *страд. от* **болотлау.**

**БОЛОТЛАУ** (**болотла-**) (Р.: заволакиваться; И.: overcloud; Т.: bulutla kaplanmak) *ҡ.*

Болотлоға әйләнеү, болотло булыу. □ Заволакиваться, обволакиваться тучами. *Көн болотлап тора. Кисен ҡапыл болотлап ебәрҙе.* ■ *Июлдең иң һуңғы шәмбеһендә көн болотлап, ана илайым, бына түгеләм, тип инәлтеп торғандан һуң, таң менән йәшенле ямғырын ҡойҙо ла, шуның менән мөрхәтһенеп, асылып китте.* «Йәшлек», 2 август 2010.

**БОЛОТЛО** (Р.: облачный; И.: cloudy; Т.: bulutlu) *с.*

Болот баҫҡан, болот менән ҡапланған (*көнгә ҡарата*). □ Облачный, пасмурный. *Болотло көн.* ■ *Көн болотло, ай яҡтыһы бик тоноҡ ҡына төшә.* Һ. Дәүләтшина. *Мартта көндәр болотло, йонсоу торһа, майҙа һауа торошоноң яҡшы булыуы көтөлә.* М. Өмөтбаев.

**БОЛОТЛОЛОҠ** (**болотлолоғо**) (Р.: облачность; И.: cloudiness; Т.: bulutluluk) *и.*

Болот менән ҡапланғанлыҡ. □ Облачность.

**БОЛОТҺОҘ** (Р.: безоблачный; И.: cloudless; Т.: bulutsuz) *с.*

Болот ҡапламаған; аяҙ. □ Безоблачный, ясный. *Болотһоҙ көн.* ■ *Бөгөн көн сыуаҡ, болотһоҙ күктән ҡояш сағыу ҡыҙҙыра.* Д. Юлтый. ● *Болотһоҙ ямғыр булмаҫ.* Мәҡәл.

**БОЛОТҺОҘЛОҠ** (**болотһоҙлоғо**) (Р.: безоблачность; И.: cloudlessness; Т.: bulutsuzluk) *и.*

Болот баҫмаған, болот менән ҡапланмағанлыҡ. □ Безоблачность.

**БОЛ ӨЙРӘК** (**өйрәге**) (Р.: крохаль; И.: merganser; Т.: testeregagalı ördek) *и. зоол.*

Башҡа өйрәктәрҙән ҙурлығы менән айырылып торған, алыҫтан аҡ төҫтә, ҙур ҡара башлы булып күренгән, түше, ҡабырғалары алһыу аҡ, суҡышы, аяҡтары ҡыҙыл, һирәк осрай торған ҡош; беле. □ Крохаль (лат. *Mergus merganser*). ■ *Бол, бол өйрәк, бол өйрәк, болдорап осор күлдән һуң.* Ҡобайырҙан.

**БОЛТ** [рус. < ингл. *bolt*] (Р.: болт; И.: bolt; Т.: cıvata) *и.*

Бер осо ҡалпаҡлы, икенсеһе гайка бороп индерә торған һырлы металл стержень. □ Болт. *Болт менән нығытыу.* ■ *Болттарҙы, гайкаларҙы һәрмәп һүтергә тура килде.* «Ағиҙел», №11, 2010.

**БОЛТЛАУ** (**болтла-**) (Р.: скреплять болтом; И.: to bolt; Т.: cıvata ile kenetlemek) *ҡ.*

Болт менән нығытыу, беркетеү. □ Скреплять болтом.

**БОЛТЛЫ** (Р.: с болтом; И.: with a bolt; Т.: cıvatalı) *с.*

Болты булған. □ С болтом.

**БОЛЬНИЦА** [рус.] *и. ҡар.* **хәстәхана.** ■ *«Өс таған»дың башлығы ғазап сигеп больницала ята, ә былар, һис нәмә булмағандай, шаярып йөрөй.* М. Кәрим.

**БОЛЬШЕВИЗМ** [рус.] (Р.: большевизм; И.: Bolshevism; Т.: bolşeviklik) *и. тар.*

Халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтендә XX быуат башында Рәсәйҙә барлыҡҡа килгән марксистик-революцион ағым. □ Большевизм. ■ *Әгәр большевизм оҙаҡ һаҡланмаһа, беҙ большевизмды файҙаланып ҡалабыҙ; һәм, киреһенсә, әгәр ул ныҡынһа һәм оҙаҡ йәшәһә, быныӊ менән бигерәк тә ризалашырға тура килер.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**БОЛЬШЕВИК** [рус.] (Р.: большевик; И.: Bolshevik; Т.: bolşevik) *и. тар.*

Большевистик партия ағзаһы, большевизм юлындағы кеше; коммунист. □ Большевик. *Большевиктар партияһы.* ■ *Беҙ большевиктар ҙа, меньшевиктар ҙа түгел, беҙ башҡорттар ғына.* З. Вәлиди.

**БОЛЬШЕВИСТИК** (Р.: большевистский; И.: Bolshevist; Т.: bolşevik) *с.*

Большевизмға нигеҙле, большевикка хас. □ Большевистский. *Большевистик тактика.*

**БОЛЪЯЛ** (Р.: назначенный срок; И.: set date; Т.: kararlaştırılmış tarih) *и. иҫк.*

Тәғәйенле, билдәләнгән көн. □ Установленный, назначенный срок. ■ *[Сурағол:] Бындай кешенән ҡыҙ йәлме ни? Әйҙә, хәҙер миӊә барайыҡ беҙ. Ҡымыҙ ҙа бар. Шунда һөйләшербеҙ. Болъял ҡуйышырбыҙ.* Ҡ. Даян. *Һиҙмәй ҙә ҡалдым үткәнен өс көнлөк кенә болъялым.* Сеӊләүҙән. *Болъял да көнөм тулды инде, тор тиһәгеҙ ҙә тормайым.* Сеӊләүҙән.

**БОЛЪЯУ (болъя-)** (Р.: назначать; И.: set a date; Т.: tarihini kararlaştırmak) *ҡ. иҫк.*

Ваҡытын, көнөн алдан тәғәйенләү. □ Назначать, устанавливать срок. *Осрашыуҙы болъяп ҡуйыу.*

**БОМБА** [рус. < фр. *bombe*] (Р.: бомба; И.: bomb; Т.: bomba) *и.*

Һауанан ташлап шартлата торған туп. □ Бомба. *Атом бомбаһы. Фугас бомбаһы. Бомба ташлау. Бомба шартлау. Бомбаға тотоу.* ■ *Өҙлөкһөҙ шартлау башланды, һәр бомба ярылған һайын, тупраҡҡа һеӊә барам, һеӊә барам.* М. Кәрим.

**БОМБАРДИР** [рус. < нем. *Bombardier*] (Р.: бомбардир; И.: bombardier; Т.: golcü) *и. иҫк.*

**1.** Рәсәй армияһында һәм флотында тупсы һалдат. □ Бомбардир *(в царской армии: солдат в артиллерии).*

**2.** *һөйл.* Һөжүм итеүсе, уйынсы *(футболда, хоккейҙа һ. б.)* □ Бомбардир *(игрок нападения в футболе, хоккее).*

**БОМБАРДИРОВКА** [рус.] (Р.: бомбардировка; И.: bombing; Т.: bombalama) *и.*

Дошман ғәскәренә бомба ташлау, бомбаға тотоу. □ Бомбардировка. *Бомбардировка авиацияһы.*

**БОМБАРДИРОВЩИК (бомбардировщигы)** [рус.] (Р.: бомбардировщик; И.: bomber; Т.: bombardıman) *и.*

**1.** Дошмандыӊ ерҙәге һәм диӊгеҙҙәге ғәскәренә, ҡорал-ҡорамалдарына бомба ташлау өсөн тәғәйенләнгән хәрби самолёт. □ Бомбардировщик. *Бомбардировщикта осоу.* ■ *Килгән көндөӊ иртәгеһенә фашистарҙыӊ ҙур бомбардировщиктары Сухиничи станцияһын һәм уныӊ тирәһендәге объекттарҙы, урман эсендәге базаларҙы бомбаға тота.* «Башҡортостан», 19 ғинуар 2011.

**2.** Шул самолёттыӊ осоусыһы. □ Лётчик бомбардировщика. *Бомбардировщик кейеме.*

**БОМБОУБЕЖИЩЕ** [рус.] (Р.: бомбоубежище; И.: bomb shelter; Т.: sığınak) *и.*

Бомбанан һаҡланыу урыны. □ Бомбоубежище. *Бомбоубежищела йәшенеү.*

**БОМОНД** [рус. < фр. *beau monde*] (Р.: бомонд; И.: beau monde; Т.: yüksek sosyete) *и.*

Юғары аристократик, административ һәм интеллектуаль даирә ҡатламы. □ Бомонд. *Сәйәси бомонд.*

**БОН I** [рус. < фр. *bon* ] (Р.: бон; И.: cheques, checks; Т.: bon) *и. фин.*

Ваҡыты билдәләнгән кредит алыу ҡағыҙы. □ Бон.

**БОН II** [рус. < гол. *boom* ‘бүрәнә’] (Р.: бон причальный; И.: boom; Т.: deniz mâniası) *и.*

Йөҙмә ҡойма *(ағас тотоу йәки караптарҙы үткәрмәү өсөн йөҙөп йөрөүсе кәртә).*

□ Бон причальный. *Бурама һал боны. Һал туҡтатыу боны.*

**БОНАПАРТИЗМ** [рус. < фр. *Bonaparte*] *и. ҡар.* **бонапартсылыҡ.**

**БОНАПАРТСЫЛЫҠ (бонапартсылығы)** (Р.: бонапартизм; И.: Bonapartism; Т.: Bonapartizm) *и.*

Бонапартсылыҡ (*хәрби көскә һәм бюрократияға таяныуға ҡоролған ике йөҙлө дәүләт сәйәсәте*). □ Бонапартизм.

**БОНД** [рус. < ингл. *bond*] (Р.: бонд; И.: bond; Т.: antrepoya koyma) *и. икт.*

Таможня пошлинаһы түләнмәгән тауар. □ Бонд. *Бондты түләп алыу.*

**БОНИСТИКА** [рус. < фр. *bonistique*] (Р.: бонистика; И.: notaphily; Т.: bloknot koleksiyonculuğu yapma) *и. икт.*

Ҡағыҙ аҡса һәм бондарҙы өйрәнә торған тарих фәненең ярҙамсы тармағы. □ Бонистика. *Бонистика фәне.*

**БОНИТЕТ** [рус. < лат. *bonitas*] (Р.: бонитет; И.: bondability; Т.: bondability) *и. а. х., урм.*

Тупраҡтың, урмандың сифатына һәм продуктлылығына ҡарата махсус күрһәткес. □ Бонитет. *Урман бонитеты.*

**БОНИТЁР** [рус.] (Р.: бонитёр; И.: appraiser; Т.: değer biçen kimse) *и. вет.*

Малдарҙы билдәле төркөмдәргә айырыусы белгес. □ Бонитёр. *Бонитёр булып урынлашыу.*

**БОНИТИРОВКА** [рус.] (Р.: бонитировка; И.: appraisal; Т.: kalite değerlendirmesi) *и.*

Сифат яғынан баһалау. □ Бонитировка *(оценка качества). Бонитировка үткәреү.*

**БОНИФИКАЦИЯ** [рус. < фр. *bonification*] (Р.: бонификация; И.: bonus allowance; Т.: prim) *и. икт.*

Сифаты өсөн тауарға хаҡ өҫтәү. □ Бонификация. *Бонификация үткәреү.*

**БОНУС** [рус. < лат. *bonus* 'яҡшы'] (Р.: бонус; И.: bonus; Т.: bonus) *и.*

Комиссион хеҙмәт өсөн түләү. □ Бонус.

**БОР I** [рус. < лат. *borax*] (Р.: бор; И.: boron; Т.: bor) *и. хим.*

Төрлө минерал составына ингән химик элемент. □ Бор *(химический элемент). Бор кислотаһы.*

**БОР II** [рус. < нем. *Bohr* 'бырау'] (Р.: бор; И.: dental drill; Т.: burgu makinesi) *и. махс.*

Ҡорос, алмаҫ баш беркетелгән, теш дауалауҙа ҡулланылған бик бәләкәй бырау. □ Бор. *Борҙы хәрәкәткә килтерә торған теш дауалау аппараты бормашина тип атала.*

**БОРА I** [боронғо төрки *бор* 'шарап'] (Р.: закваска из полбы; И.: kind of ferment; Т.: maya) *и. диал.*

**1.** Бал әсетеү өсөн игендән яһалған әсеткә; ҡур. □ Закваска из полбы. *Бора балы.*

**2.** *ҡар.* **төпрә 1.**

**БОРА II** (Р.: опилки; И.: sawdust; Т.: bıçkı talaşı) *и. диал.*

Бысҡы табы. □ Опилки. *Бора һепереү.*

**БОРАЙ** (Р.: полба; И.: spelt; Т.: kavuzlu buğday) *и. бот.*

**1.** Бойҙай төрөнән булған бөртөклө ашлыҡ. □ Полба (лат. *Triticum spelta*). *Борай сәсеү.*

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. □ Семена полбы. *Борай ярмаһы. Борай бутҡаһы.* ● *Борай бутҡаһы ҡаҙ өмәһендә тәмле.* Мәҡәл.

**БОРАҠ (борағы)** [ғәр. براق] (Р.: бурак; И.: mythic horse; Т.: Burak) *и. миф.*

Ожмах аты (*тау менгәндә арт аяғы, төшкәндә ал аяғы, йәнәһе, оҙонайып тора, менеп йөрөүгә уңайлы*). □ Бурак (*райский конь, на котором пророк Мухаммед якобы вознёсся на небо*). *Таң былбылым ҡанат та ҡаҡмаған, атланмаған хурым бораҡҡа.* Д. Юлтый. *Бораҡты мосолмандар аҡ төҫтәге кеше сырайлы, ҡанатлы ат йәки ишәк итеп күҙ алдына килтерә.* Башҡорт мифологияһынан.

**БОРАЛҠЫ I** (Р.: девочка-сирота; И.: orphan girl; Т.: yetime) *и. диал.*

**1.** Атаһынан йәтим ҡалып, әсәһе менән икенсе ауылға күскән (йәки кейәүҙән айырылып ҡайтҡан) ҡыҙ. □ Девочка-сирота, пе-

реехавшая с матерью в другую деревню (или разведённая девушка).

**2.** Ситтән килгән нәҫел-ырыуһыҙ кеше; килмешәк. □ Пришелец. ■ *[Имай:] Ни нәмәһе шул Сәлимә боралҡының, әте менән һөйләшеп тораһың, атай, ҡыу ҙа сығар!* Һ. Дәүләтшина. ● *Боралҡы килһә, боронғоға урын юҡ.* Мәҡәл. *Боралҡы ҡайтһа, илгә бола килтерер.* Мәҡәл.

**БОРАЛҠЫ II** (Р.: неубранный; И.: untidy; Т.: toplanmamış) *с. диал.*

**1.** Йыйыштырылмаған, йыйнаҡһыҙ. □ Неубранный. *Боралҡы өй.*

**2.** Әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ. □ Безалаберный. ■ *[Таһыл:] Атай, ҡуйсәле! Боралҡы һүҙ һөйләп, соҡонғолап, әллә ни нәмәләр аҡтарма!* Х. Ғәбитов.

**БОРАЛТЫУ (боралт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **боҙоу I.** *Матур ғына доньяларын болартып ҡуйғандар.*

**БОРАЛЫУ (борал-)** *ҡ. диал. ҡар.* **болағыу.**

**БОРАМ** [рус. *паром*] (Р.: паром; И.: ferry; Т.: feribot) *и.*

Һыу аша кеше, ылау сығарыу өсөн өҫтөнә таҡта түшәп яһалған ҙур махсус кәмә йәки һал. □ Паром. *Борам йөрөтөүсе. Борам менән сығыу.* ■ *Һыу ташҡан, борам әле төшмәгән. Нисек итеп сығырға һуң был һыуҙы?* Ҡ. Ибәтуллин.

**БОРАМСЫ** (Р.: паромщик; И.: ferry operator; Т.: feribot kullanan kimse) *и.*

Борам йөрөткән кеше. □ Паромщик. *Борамсы булып эшләү.* ■ *Борамсы, арҡан тартыуынан туҡтап, полковникка сәйер күҙ ташлап алды.* Й. Солтанов. *Төхвәт ағай .. ғүмер буйы намыҫ менән бакенсы һәм борамсы хеҙмәтен башҡарҙы. Бөтә балыҡсылар, һунарсылар уның тирәһенә йыйылыр ине.* «Йәшлек», 20 сентябрь 2008.

**БОРАНДАҠ (борандағы)** *с. диал. ҡар.* **ҡылансыҡ.** *Борандаҡ ҡыҙ.*

**БОРАНДАУ (боранда-)** *ҡ. диал. ҡар.* **борғоланыу.** *Борандап йөрөү.*

**БОРҒАҠ I (борғағы)** (Р.: воронка; И.: funnel; Т.: huni) *и.*

Шыйыҡлыҡты тар муйынлы һауытҡа ҡойоу өсөн ҡулланылған киң ауыҙлы, тар төплө ҡулайлама. □ Воронка. *Борғаҡ менән ҡойоу.* ■ *Үҙҙәре ауыр хәлдә булһа ла, араҡы табып борғаҡ аша ағыуҙы тура ашҡаҙандарына ебәреүселәр ҙә осраны.* «Шоңҡар», № 12, 2010.

**БОРҒАҠ II (борғағы)** *и. диал. ҡар.* **морондоҡ I.** *Борғаҡ кейҙереү.*

♦ **Борғаҡ кейеү** асыуланып һөйләшмәй ултырыу. □ Надевать намордник *(обижаться).*

**БОРҒАҠ III (борғағы)** (Р.: мелкая снежная крупа; И.: sleet; Т.: ebe bulguru) *и. диал.*

Боҙлауыҡ; ваҡ йомро ҡар. □ Мелкая снежная крупа. *Түбән яҡта борғаҡ яуған икән.*

**БОРҒАҠ IV** (Р.: вспыльчивый; И.: hot-tempered; Т.: sinirli) *с. диал.*

Ҡыҙыу, ҡыҙмалы. □ Вспыльчивый. *Ул бик борғаҡ кеше.*

**БОРҒАҠ V** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of Bashkir clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Күбәләк ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-кубаляков.

**БОРҒАҠЛАП-БОРҒАҠЛАП** (Р.: поворачивая; И.: turning; Т.: döndürerek) *р.*

Бер тегеләй, бер былай боролоп. □ Поворачивая, повернув то в одну, то в другую сторону. *Урман эсендә юл борғаҡлап-борғаҡлап китә.* ■ *Шәкетау итәгенә етәрәк, йыш-йыш итеп, эстә борғаҡлап-борғаҡлап тар ғына һуҡмаҡ ҡалдырып, бағаналар ҡатып, аҙаштырғыс ҡороп, шунда ҡапҡандар һалып, арыраҡ бер мөйөштә ҡәҙә бәрәсен бәйләп, бүреләрҙе әүрәтәләр.* Г. Яҡупова.

**БОРҒАҠЛАУ (борғаҡла-)** *ҡ.*

**1.** *диал. ҡар.* **морондоҡлау.** *Бәрәсте борғаҡлап ҡуйыу. Бүрене борғаҡлап эләктереү.*

**2.** *этн.* Туйҙан һуң ҡоҙаларҙы һыйлап оҙатыу. □ Угощать сватов на прощание. *Ҡоҙаларҙы борғаҡлап ебәреү.*

**БОРҒАҠЛАУ АШЫ** (Р.: прощальное угощение сватов; И.: farewell entertainment for matchmakers; Т.: düğünde veda yemeği) *и. этн.*

Ҡоҙаларҙы оҙатыу һыйы, хуш аяғы. □ Прощальное угощение сватов. *Ҡоҙалар борғаҡлау ашына ултырҙылар.*

**БОРҒАҠ СӘСКӘ** (Р.: цветок воронковидный; И.: funnelshaped flower; Т.: çiçek türü) *и. бот.*

Борғаҡ рәүешле сәскә төрө (*мәҫәлән, зәңгәр сәскә*). □ Цветок воронковидный (*например, василёк*).

**БОРҒАЛАНА-ҺЫРҒАЛАНА** *р. ҡар.* **борғоланып-һырғаланып.** *Борғалана-һырғалана һөйләшеү.*

**БОРҒАЛАНЫП-ҺЫРҒАЛАНЫП** *р. ҡар.* **борғоланып-һырғаланып.** *Борғаланып-һырғаланып аҡҡан йылға.* ■ *Ҡатын урынынан торған, матур-матур кейемдәрен кейеп, сулпыларын тағып алған да. ти. бармаҡтарын шартлатып, борғаланып-һырғаланып бейей.* Риүәйәттән.

**БОРҒАЛАНЫУ (борғалан-)** *ҡ. ҡар.* **борғоланыу.** *Бер туҡтауһыҙ борғаланыу. Борғаланып ятыу.* ■ *Бала ла тынсып йоҡлап китте, Мәҙинә лә тигеҙ тын алған кеүек. Хашим ғына йоҡлай алмай түшәгендә борғаланды.* Т. Ғарипова.

**БОРҒАНАҠ (борғанағы)** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **борсаҡ II.** *Борғанаҡ ҡатыш ямғыр яуа.* ■ *Көн яртыһы берсә ҡар, берсә борғанаҡ менән болғанып тора, иртә менән ябалаҡлап яуған ҡарҙы әле ямғыр йыуа.* «Ағиҙел», №1, 2010.

**2.** Ваҡ йомро ҡар. □ Мелкая снежная крупа. *Борғанаҡ яуа.* ■ *Ай араһы булғанғамы, йонсоуға тартып, ҡомһарған күктән ваҡ ҡына күҙәнәкле борғанаҡ һибәләп торған көн ине.* М. Ямалетдинов.

**3.** *ҡар.* **боҙлауыҡ 1.** *Ишек алды борғанаҡ.*

**БОРҒАНДАҠ (борғандағы)** (Р.: вертишейка; И.: wryneck; Т.: bayağı boyunburan) *и. зоол.*

Ҡара һәм көрән таптар менән сыбарланған һарғылт көрән төҫтәге турғайҙан ҙурыраҡ урман ҡошо. □ Вертишейка (лат. *Jynx torquilla*). *Ағаста борғандаҡ килеп ҡунды.* ■ *[Борғандаҡ] өҙләкһеҙ муйынын бер һуҙып, бер эскәрәк тартып, ян-яҡҡа борғолай, ҡайһы ваҡыт бөтә кәүҙәһен ҡалтырата.* Э. Ишбирҙин.

**БОРҒАНДАҠ ТУРҒАЙ** *и. диал. ҡар.* **борғандаҡ.** *Ағастар араһында борғандаҡ турғайҙар оса.*

**БОРҒАНЛАҠ** (Р.: кокетливый; И.: coquet(tish) ; Т.: flört) *с.*

Борғанлап, ҡыланып тороусан. □ Кокетливый. *Борғанлаҡ ҡыҙыҡай. Борғанлаҡ булыу. Был бәләкәй бала бигерәк борғанлаҡ инде.*

**БОРҒАНЛАУ (борғанла-)** (Р.: кривляться; И.: grimace, give oneself airs; Т.: yaramazlık yapmak) *ҡ.*

**1.** Ҡалай булырға белмәй, төрлөсә ҡыланыу; борғоланыу. □ Кривляться, паясничать, ломаться. *Егет сәхнәгә сыҡҡас, ни эшләргә белмәй тегеләй-былай борғанланы.*

**2.** Күҙҙе-башты уйнатып төрлөсә ҡыланыу, ҡыйшанлау; борғоланыу. □ Кокетничать. *Был ҡыҙ егеттәр алдында борғанларға ярата.*

**БОРҒО I** (Р.: горн; И.: bugle; Т.: borazan) *и.*

**1.** *муз.* Көслө, сағыу тауышлы, баҫмаҡһыҙ тынлы музыка ҡоралы. □ Горн. *Борғо уйнау.* ■ *Ғәзиз Йософ бар ғәскәрен теҙеп ҡуйҙы, атаһын ҡаршыларға үҙе барҙы, борғо, нәғәрә тауыштары яңғырап торҙо, бәйге аттары ярһып кешнәр имде.* «Йософ ҡиссаһы».

**2.** *этн.* Яуҙа, һунарҙа ҡулланылған өндәү, саҡырыу, тауыш биреү ҡоралы. □ Сигнальный инструмент призыва (*к чему-л.*), используемый в бою, на охоте. *Борғо тауышы. Борғо саҡыра.* ■ *[Хасбулат:] Салауат батыр үҙенең ғәскәрен һуғышҡа саҡырған саҡта ошо борғоно ҡысҡырттыра торған булған.* З. Биишева. *Һыуҙы сыҡҡас,*

*борғо ла ҡысҡыртып торманылар, барабан да ҡағыусы булманы, ғәскәр ҡуҙғалды.* К. Мәргән. *Алыҫтан борғо тауыштары ишетелә.* М. Буранғолов. *Бөтә донъя мәңгелек йоҡоға талған һымаҡ. Һәм шул саҡ ҡапыл, ошо тынлыҡты боҙоп, борғо тауышы ишетелә.* Н. Мусин.

**БОРҒО II** *и. диал. ҡар.* **быраү.** *Борғо менән тишеү.*

**БОРҒОЛАНА-ҺЫРҒАЛАНА** *р. ҡар.* **борғоланып-һырғаланып.**

**БОРҒОЛАНЫП-ҺЫРҒАЛАНЫП** (Р.: извиваясь; И.: wriggling ; Т.: kıvranarak) *р.*

**1.** Бер тегеләй, бер былай боролоп. □ Извиваясь. *Борғоланып-һырғаланып аҡҡан йылға.* ■ *Әллә ҡайҙарҙан көмөш таҫма кеүек һуҙылып килгән Ағиҙел борғоланып-һырғаланып ялтырай.* «Ек Мәргән».

**2.** Күҙҙе-башты уйнатып, ҡыланып, ҡыйшанлап. □ Кокетливо. *Борғоланып-һырғаланып һөйләшә.*

**3.** *Кемдеңдер* эргәһенән китмәй ярарға тырышып. □ Крутясь, вертясь возле *кого-чего. Бесәй борғоланып-һырғаланып аяҡ аҫтында буталып йөрөй.* ■ *Мария Ивановнаның Луиза ҡаршыһында борғоланып-һырғаланып тороуын күреп, ул [Недосеко] ишек алдында туҡтап ҡалды.* Н. Мусин.

**БОРҒОЛАНЫУ (борғолан-)** (Р.: извиваться; И.: wind; Т.: kıvranmak) *ҡ.*

**1.** Тегеләй-былай әйләнеү, төрлө яҡҡа боролоу. □ Извиваться *(о дороге, реке и т. п.). Борғолана-борғолана ағыу.* ■ *Йыш ҡына Мәүсилә үҙҙәренең йыландай борғоланып берсә һалдат ҡайышындай юлындағы таш ҡаяларҙы биленән ҡымтып, берсә, аҙ ғына булған тигеҙлектәргә сығыу менән, уҡтай алға атылып .. яҡтылыҡҡа ырғылып сығыусы Аҡнөгөшөн — тыуған йылғаһын .. күҙ алдына килтерә.* Д. Бүләков. *Фани донъя — ҡыйыш юл ул борғоланған, ҡыйыш булһын, ҡыйын булһын — юлсы барған.* М. Аҡмулла. *Өршәкбаш буйлап һуҙылған таҡыр һуҡмаҡ, кесерткән, алабута араһынан борғоланып килә-килә лә, баҡса тәңгәлендә ҡапыл һулға боролоп, текә яр ситенән урғылып аҡҡан һалҡын шишмә тәңгәлендә туҡтала.* Я. Хамматов.

**2.** Теге-был яҡҡа әйләнеп-тулғаныу. □ Вертеться, крутиться то в одну, то в другую сторону. ■ *[Ирназарҙың] тамағы ярылып бара, башы ут ҡапҡандай ҡыҙа, ҡабырғаһындағы йәрәхәт йөйө һулҡылдап һыҙлай. Әйтерһең, унда бәләкәс кенә уҫал янъар кереп ултырған да, йәтешләп ята алмайынса, улай-былай борғолана.* Ә. Хәкимов. *Хисмәтулла урынында борғоланды-борғоланды ла тәрән йоҡоға китте.* Я. Хамматов. *Оморҙаковтың ауыҙы йырыҡ ине. Ул йыш-йыш Нурихановҡа ҡараш ташланы, ултырған урынында борғоланды.* Д. Бүләков. *Кәмә борғоланды, Юлдаштың ҡулынан ысҡынып китергә тырышты.* З. Биишева.

**3.** Аҡланырға йәки хәйләләргә тырышып, төрлөсә ҡыланыу; борғанлау. □ Паясничать, кривляться, ломаться. *Борғоланып ултырыу. Борғоланма, дөрөҫөн һөйлә.* ■ *Шунда уҡ ултырған Ховрин, һөйләшеүҙең ҡырҡыу төҫ алғанын күреп, тегеләй-былай борғоланды, тамағын ҡырҙы.* Н. Мусин. *Ҡолсобай эргәһендә ултырған мыҡты кәүҙәле кеше лә, төрлөсә борғоланып, Сафуан әйткәнгә ҡушылды.* Я. Хамматов. *Вазифа арлы-бирле борғоланды, йырғыланды, нимәләрҙер һөйләп ҡарш төшөргә итеп ҡараны ла, аҙаҡ, булдыра алманы, хужаларын уятып, самауыр ҡуйырға ҡушты.* К. Мәргән. *Болғанды, тулғанды ерән бейә. Эйәрҙе һалдыртмаҫҡа төрлөсә борғоланды.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**4.** Күҙҙе-башты уйнатып, төрлөсә ҡыланыу, ҡыйшанлау; борғанлау. □ Кокетничать. ■ *Гөлнурҙың түбәһе күккә тейгән. Ул бер уңға, бер һулға борғолана, күлдәгенең матур төймәләрен тотоп ҡарай, эйелеп-эйелеп, балитәктәрен һыйпап ала.* М. Кәрим. *Үҙенә иғтибар итеүҙе теләп борғоланған Хәкимде күрмәмешкә һалышҡан Гөльямал һөйләүен белде.* Я. Хамматов. *Ошо көндә һин тәү тапҡыр наҙлы көлдөң, борғоландың, һикертеп ҡыйғас ҡашҡайыңды, йөрәктәрҙе*

*утка һалдың, бик ҡәнәғәт булып ҡалдың.* Р. Назаров.

**БОРҒОЛАУ (борғола-)** (Р.: повёртывать; И.: twist; Т.: döndürmek) *к.*

**1.** Ҡабат-ҡабат, тегеләй-былай бороу. □ Повёртывать, крутить. *Мыйыҡты борғолау. Шөрөптәрҙе борғолау. Асҡысты борғолау.* ■ *Әхмәҙулла бер-ике һунар мажараһы һөйләп алды, Мырҙаш та унан ҡалышмаҫҡа тырышты, терпе мыйығын борғолап, аҫтан ғына йылмайып ултырҙы ла һүҙҙе ялғап алырға ашыҡты.* З. Ураҡсин. *Ғәбит .. муйынын борғоланы, ихатаһын, аҙбар-лапаҫын күҙенән үткәрҙе.* Ә. Әминев. *[Аҡназар] төтөн ҡатыш ялҡынлы телен елпелдәтеп, иренеп кенә янған һуҡыр шәмдең филтәһен таҙартып борғоланы ла өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙҙарҙы аҡтарырға тотондо.* Я. Хамматов. *Һүҙенең ошо урынына еткәс, Хәсән бабай, тыңлаусыларҙың уның был әшенә нисек ҡарауҙарын белергә теләгән һымаҡ, яҡ-яҡҡа ҡаранып, ҡалын ҡара мыйығын борғолап, тын ғына ултырҙы.* З. Биишева. *Зөфәр тек ә генә бер тауҙы артылғансы өндәшмәй генә руль тәгәрмәсен борғолап килде лә, тигеҙлеккә сыҡҡас, «йылт» итеп хужаһына ҡарап алды.* Д. Бүләков.

**2.** *күсм.* Төрлө юҫыҡҡа күсереү *(һүҙҙе, мәсьәләне).* □ Оборачивать, обёртывать *(разговор, вопрос). Борғолап һөйләү.* ■ *Тыумыштан борғолап һөйләргә яратмаған башҡорт егете дөрөҫлөктө йәшереп, юҡты бар тип һөйләргә баҙнат итмәй.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**БОРҒОС** (Р.: завод *(у часов)*, ключ; колок *(у скрипки)*; И.: winding mechanism, clockwork; Т.: kurgu) *и.*

**1.** Механизмды бороп хәрәкәткә килтерә торған ҡулайлама. □ Завод *(у часов)*, ключ; колок *(у скрипки). Сәғәт борғосо. Уйынсыҡтың борғосо.*

**2.** Бормалы ҡапҡас. □ Завинчивающаяся крышка. *Һауыттың борғосон ябыу. Борғосто асыу.*

**3.** *диал. ҡар.* **борғоса 1.**

**БОРҒОСА** (Р.: пришва; И.: front shaft; Т.: makara) *и.*

**1.** *туҡ.* Һуҡҡан киндер, балаҫты урай бара торған ағас таяҡ. □ Пришва *(передний вал ткацкого станка, на которую наматывается вытканный материал). Борғоса таяғы.*

**2.** Йөктөң арҡанын бороп нығыта торған таяҡ. □ Палка для закручивания и закрепления верёвки груза. *Бесән арбаға тейәлде, арҡаны борғоса менән нығытылды.*

**3.** *Нимәнелер* бороу өсөн ҡулайлама. □ Закрутка *(приспособление для закручивания чего-л.). Борғоса менән бороу.*

**4.** *диал. ҡар.* **ҡалтырса I, 1.**

**БОРҒОСЛАУ (борғосла-)** (Р.: многократно вращать; И.: revolve repeatedly; Т.: döndürmek) *к.*

Ҡабат-ҡабат, тегеләй-былай бороу; борғолау. □ Многократно вращать, крутить то в одну, то в другую сторону. *Шөрөптө борғослау. Башты борғослау. Мыйыҡты борғослау.* ■ *Батыр, башын борғослап тирәяғына ҡаранды, ярыҡтың осо күренмәй.* Н. Ғәйетбаев. *Ҡарт үсеккәндәй итте, ситкә боролоп, мыйыҡ осон борғослап ҡуйҙы.* Н. Мусин. *[Арғынбаев] үҙе, тулы кәүҙәле булыуға ҡарамаҫтан, хәрәкәтсән, етеҙ әйәге, башын борғослағанда, әллә ике, әллә өс үркәсле булып китә ине.* Д. Бүләков.

**БОРҒОСЛО** (Р.: заводной; И.: wind-up; Т.: kurgulu) *с.*

Борғос ярҙамында хәрәкәткә килтерелә торған, борғосо (1) булған. □ Заводной. *Борғосло уйынсыҡ.* ■ *Балалар борғосло .. уйынсыҡтарҙы ярата.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», № 7, 2010.

**БОРҒОСЛО БЫРАУ** (Р.: коловорот; И.: brace; Т.: matkap kolu) *и. тех.*

Бырау кеүек ҡорамалдар ҡуйып, бороп тишеү өсөн тотҡалы ҡорамал. □ Коловорот. *Борғосло бырау менән тишеү. Борғосло бырауҙар һатып алыу.*

**БОРҒОСО** (Р.: горнист; И.: bugler; Т.: borazancı) *и.*

Борғо (I) уйнатыусы. □ Горнист. *Борғосо борғо ҡыҫҡырта.* ■ *Ҡыҙҙар сырылдашҡан ыңғайға гитараһы менән борғосо пәйҙә булды, баҙап ҡалған Рәхимйәнде, ике беләгенән матҡып, тышҡа һөйрәнеләр.* Й. Солтанов.

**БОРД I** [рус. < фр. *bord* 'сит'] (Р.: борд; И.: deliver goods at the seller's expense; Т.: kenar) *и. икт.*

Һатыусы иҫәбенән тауарҙы судноға килтереү. □ Борд.

**БОРД II** [рус. < ингл. *board* 'таҡта'] *и. ҡар.* **скейтборд.**

**БОРДЕЛЬ** [рус. < фр. *bordel*] *и. ҡар.* **фәхешхана.**

**БОРДЕРО** [рус. < фр. *bordereau*] (Р.: бордеро; И.: copy from bookkeeping accounts; Т.: bordro) *и. икт.*

Бухгалтерлыҡ документтарынан күсермә. □ Бордеро.

**БОРДО** [рус. < фр. *Bordeaux* 'ҡала исеме'] (Р.: бордо; И.: claret; Т.: Bordo) *и.*

Шарап төрө. □ Бордо. *Бордо шарабы эсеү. Өҫтәлдә бордо шешәһе.*

**БОРДЮР** [рус. < фр. *bordure* < *bord* 'сит'] (Р.: бордюр; И.: border; Т.: kenarlık) *и.*

*Ниҙе* лә булһа, ситтән һыҙып, кәртәләп ҡуйған тирәс. □ Бордюр. *Бордюр эшләү. Бордюр биҙәге.* ■ *Үткәндә магазиндан ҡайтып килһәм, бордюрҙа бер оло йәштәге бабай ултыра.* «Йәшлек», 20 сентябрь 2008. *Тротуар буйлап ағылыусы ағай-эне ҡубынып шул яҡҡа эркелде, бейек бордюрға морон төртөп тынып ҡалған «Волга»ны уратып алды.* Й. Солтанов.

**БОРЖОМ** [рус. < груз. *боржоми*] (Р.: боржоми; И.: Borzhomi; Т.: Borjomi) *и.*

Шифалы минераль һыуҙың исеме. □ Боржоми. *Боржом эсеү. Боржом сығанағы.*

**БОРҠ** (Р.: подражание завихрению клубами *чего-л.* лёгкого; И.: kind of sound imitation; Т.: fokur fokur) *оҡш.*

**1.** Ваҡ онтаҡ, мамыҡ кеүек еңел, йомшаҡ нәмәләрҙең ҡапыл бөркөлөп, туҙып китеүен белдергән һүҙ. □ Подражание завихрению клубами *чего-л.* мелкого, сыпучего, лёгкого, пушистого.

**2.** *ҡар.* **бығыр-бығыр.** ■ *Батшаның ярандары, егетте тотоп алып, борҡ-борҡ ҡайнап ултырған ҡаҙанға ташлаған икән. Икмәкбай, рәхәтләнеп йыуынып, ҡаҙандан көлә-көлә килеп сыҡты, ти.* Әкиәттән.

**БОРҠАҠ I (борҡағы)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Урамда һап-һары булып борҡаҡ сәскә атҡан.*

**БОРҠАҠ II** (Р.: очень мягкий, воздушный; И.: fluffy; Т.: yumuşacık) *с.*

Туҙып, осоп барыусан *(ваҡ онтаҡ, мамыҡ кеүек еңел, йомшаҡ нәмәләр тураһында).* □ Очень мягкий, воздушный *(о чём-л. мелком, сыпучем, лёгком, пушистом). Борҡаҡ ҡар. Борҡаҡ мамыҡ. Борҡаҡ йөн.*

**БОРҠАН I** [ғәр. بركان] (Р.: вулкан; И.: volcano; Т.: bürkân) *и. иҫк. кит.*

Түбәһендәге кратерынан ваҡыт-ваҡыт ирегән ҡайнар матдә, газ, тау тоҡомдары атылып торған осло тау; янартау. □ Вулкан.

**БОРҠАН II** [ғәр. برقان](Р.: будда; И.: Buddha; Т.: Buda) *и. иҫк. дини.*

Буддизмдағы иң юғары кимәлгә күтәрелгән бәндә; будда. □ Будда, буркан.

**БОРҠАНАҠ (борҡанағы)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Урамда борҡанаҡ мамыҡтары осоп йөрөй.*

**БОРҠ ИТЕҮ (борҡ ит-)** (Р.: клубиться; И.: swirl; Т.: girdap gibi dönmek) *ҡ.*

Ҡапыл бөркөлөп, туҙып китеү *(ваҡ онтаҡ, мамыҡ кеүек еңел, йомшаҡ нәмәләр тураһында).* □ Клубиться, вздыматься клубами *(о чём-л. мелком, сыпучем, лёгком, пушистом). Борҡ итеп саң күтәрелде.*

**БОРҠОЛДАҠ I (борҡолдағы)** *и. диал. ҡар.* **һаңғырау бәшмәк.**

**БОРҠОЛДАҠ II (борҡолдағы)** *и. диал. ҡар.* **гөмбөр II.**

**БОРҠОЛДАҠ III (борҡолдағы)** (Р.: порошок; И.:powder; Т.: toz) *и. диал.*

Онтаҡ. □ Порошок.

**БОРҠОЛДАТЫУ (борҡолдат-)** (Р.: клубить; И.: raise clouds of dust; Т.: girdap gibi döndürmek) *ҡ.*

**1.** Ваҡ онтаҡ, мамыҡ кеүек еңел, йомшаҡ нәмәне ҡапыл бөркөп ебәреү, туҙҙырыу; борҡотоу. □ Клубить, вздымать клубами *(что-либо мелкое, сыпучее, лёгкое, пушистое). Саң борҡолдатыу. Аттар саң борҡолдатып ауылға килеп тулды.* ■ *Был яҡҡа сыҡһам, буран һалған: ҡарҙы йыра-йыра, саҡ ҡайтып еттем, саңлы юлдан, борҡолдата баҫып.* Көләмәстән. *Папирос төтөнөн борҡолдата өргән Сабир Миңлеғәлегә теклән ҡараны.* Я. Хамматов.

**2.** *диал. ҡар.* **бороладатыу 2.**

**БОРҠОЛДАУ (борҡолда-)** (Р.: клубиться; И.: swirl; Т.: girdap gibi dönmek) *ҡ.*

**1.** Ҡапыл бөркөлөп, туҙып китеү; борҡолоу *(ваҡ онтаҡ, мамыҡ кеүек еңел, йомшаҡ нәмә тураһында).* □ Клубиться, вздыматься клубами *(о чём-л. мелком, сыпучем, лёгком, пушистом). Аяҡ аҫты борҡолдап торған туҙан.* ■ *Түбәтәй төшкән урында, нигеҙ буйында, борҡолдап туҙан күтәрелде.* М. Кәрим.

**2.** *ҡар.* **борлау 2.**

**БОРҠОЛОУ (борҡол-)** *ҡ. төш. ҡар.* **борҡоу.** *страд. от* **борҡоу.** *Саң борҡола. Он борҡола. Мөрйәләрҙән төтөн борҡола.* ■ *Тамғалы борамсының хәбәрҙәре .. күмелгән соҡор өҫтөндәге утын яныл, күҙға әйләнгәнсе, күҙы һүнеп, көлгә әйләнгәнсе һәм иттең өлгөрөүен хәбәр итеп, эҫе көл өҫтөнән тәмле еҫле быу борҡола башлағанға тиклем дауам итте.* К. Мәргән. *Аштан сыҡҡан боҫ ер өҫтөнә тарала һәм, юлда килә ятҡан ханға ҡаршы борҡолоп, танауҙы ҡытыҡлаған тәмле еҫе менән уны туй мәжлесенә саҡыра.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Уның [Муйнаҡтың] күҙҙәре атылып сығырҙай булып аҡайған, ауыҙынан ҡан ҡатыш күбеге борҡолоп, үҙе алҡымынан бурҙай алған ҡоторған бүре һымаҡ, тештәрен шығырҙатып ята ине.* «Зөһрә менән Алдар».

**БОРҠОН** (Р.: донник; И.: melilot, sweet clover; Т.: taş yoncası) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, мал аҙығы өсөн үҫтерелә торған, баллы ваҡ ҡына һары йәки аҡ сәскәле үлән. □ Донник (лат. *Melilotus). Аҡ борҡон. Һары борҡон. Борҡон еҫе.*

**БОРҠОРАТЫУ (борҡорат-)** (Р.: клубить; И.: swirl; Т.: buram buram çıkmak) *ҡ.*

Ҡуйы итеп бөркөү, туҙҙырыу; боҫратыу *(саң, төтөн, боҫ тураһында).* □ Клубить, вздымать клубами *(о пыли, дыме, паре). Боҫ борҡоратыу. Саң борҡоратыу. Борҡоратып самауыр ҡайнатыу.*

**БОРҠОРАУ (борҡора-)** (Р.: клубиться; И.: swirl; Т.: buram buram çıkmak) *ҡ.*

Ҡуйы булып бөркөлөү; боҫрау *(саң, төтөн, боҫ тураһында).* □ Клубиться, вздыматься клубами *(о пыли, дыме, паре). Борҡорап сәй ҡайнай. Юлдарҙа саң борҡорап ята.* ■ *Ерҙең өҫтө бәрхәт кеүек йылтырар, күктә — монар, ерҙән быуҙар борҡорар.* М. Аҡмулла. *Гөлйөҙөм боҫо борҡорап ҡайнаған һары самауырҙы күтәреп, өйгә алып инеп китте.* Һ. Дәүләтшина. *Өҫтәлгә килтереп ултыртҡан самауыр .. быуҙарын атып, эсеүсе көтөп, борҡорап ултыра бирҙе.* И. Насыри. *Аш тулы табаҡ һымаҡ, ерҙең боҫо күтәрелә борҡорап.* Р. Назаров. *[Хәмит] пары борҡорап торған сәйнүк тотоп ингән.* Д. Бүләков.

**БОРҠОТҠОС** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkırt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ҡәбиләһе аймағы. □ Буркуткус *(название родового подразделения башкир племени тунгаур). Борҡотҡос аймағы башҡорто.*

**БОРҠОТОУ (борҡот-)** (Р.: клубить; И.: swirl; Т.: girdap gibi döndürmek) *ҡ.*

**1.** Борҡ итеп осороу, туҙҙырыу, ҡуйы итеп бөркөү. □ Клубить, вздымать клубами, образовать клубы дыма, пыли и т. д. *Туҙан борҡотоу. Йөндө борҡотма.* ■ *Күҙ күреме ерҙә йәйрәп ятҡан арыш баҫыуы, ҡуйы*

*төтөн борҡотоп, геүләп яна.* Ә. Хәкимов. *Тәне ауыртыуға сыҙамаған хайуан артҡы аяҡтарына баҫып бер урында бейене лә, ҡар борҡотоп, ауыл яғына сапты.* Р. Байымов. *Күп тә үтмәне, йәш ҡарҙы борҡотоп, һауала ҡойон үйнатып эреле-ваҡлы таштар дәррәү дөмбөрҙәй башланы.* Ә. Әминев. *Ана, ашхана алдында егеттәр өйөлөшөп тәмәке борҡота.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Көслө итеп аңҡытыу, таратыу. □ Издавать, распространять *(какой-л. сильный запах). Тәмле еҫтәр борҡотоу. Сәскә еҫтәре борҡотоу.*

**3.** *күсм.* Бик ныҡ итеп әрләү, ҡыуып сығарып ебәреү. □ Обругать, выругать; разгонять. *Тауыҡтарҙы борҡотоп ҡыуып сығарыу.*

**БОРҠОУ (борҡо-)** (Р.: клубиться; И.: rise in puffs; Т.: girdap gibi dönmek) *ҡ.*

**1.** Борҡ итеп осоу, туҙыу; ҡуйы булып бөркөлөү. □ Клубиться, подниматься, вздыматься клубами. *Саң борҡой. Боҫ борҡоп тора.* ■ *Ул арала борҡоп ҡайнап торған ҙур еҙ самауырҙы еп-еңел күтәреп, аш өйөнән Бибеш килеп инде.* З. Биишева. *Мөрйәләрҙән төтөн борҡой, эттәр ләңкелдәп өрә, һыйыр мөңрәгән, кәзә-һарыҡ баҡырышҡан тауыштар ҡолаҡҡа килеп бәрелә.* Н. Мусин. *Нисәмә йыл ятып кипкән тупраҡ, һирпеп ебәрһәләр, көл шикелле борҡоп китә.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Бик ныҡ аңҡыу. □ Распространяться, сильно пахнуть. *Хуш еҫ борҡоу. Кейеменән хушбуй еҫе борҡоп тора.* ■ *Аласыҡтан яңы бешкән икмәк, тәмле аш еҫтәре борҡой.* «Йәншишмә», 11 март 2009. *Ашнаҡсылар-ҙы интектереп, оло ҡаҙанда оҙаҡ ҡына ҡайнаған һарыҡ ите сүмәләләй өйөлгән хәлдә, ләззәтле боҫ сығарып, тәмле еҫ борҡоп, табын уртаһына килеп ултырғас ҡына, ҡунаҡтарҙың күҙендә йәнләнеү күренде.* К. Мәргән.

**БОРЛАТЫУ (борлат-)** (Р.: клубить; И.: rise inwaifs; Т.: girdap gibi dönmek) *ҡ.*

Ҡуйы, күп итеп бөркөү; борҡотоу. □ Поднимать, вздымать клубами, образовать клубы дыма, пыли и т. д. *Саң борлатыу. Тәмәке борлатыу.* ■ *Ашағас тышҡа сыҡҡайны Дәүләт, ул торған йорттоң икенсе яртыһында йәшәүсе Хәйерзаман ҡарт тәмәке борлатып ултыра.* Н. Мусин.

**БОРЛАУ (борла-)** (Р.: клубиться; И.: rise in waifs; Т.: girdap gibi dönmek) *ҡ.*

**1.** Ҡуйы, күп булып бөркөлөү; борҡоу. □ Клубиться, подниматься, вздыматься клубами. *Саң борлай. Мунсанан төтөн борлай. Самауыр боҫо борлай.* ■ *Шул сағында Яйыҡ-ир аяҡ аҫтындағы ер һыу һымаҡ сайҡалғанын, тау-таштың шауралғанын, һыу борлап ҡайнағанын .. ҡарап-ҡарап торҙо ла шаҡ ҡатты, ти.* «Иҙел менән Яйыҡ». *Асыҡ ишектән ауыл мунсаһынан сыҡҡан шикелле төтөн борлай.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Урғылыу, сорлап ағыу. □ Хлынуть, течь струёй. *Танауҙан ҡан борлау.* ■ *Рәмилдең тос йоҙрого уның [Радиктың] йәмшек танауына бер-ике мәртәбә килеп ҡуныуы булды, борлап ҡан китте.* Р. Ҡол-Дәүләт. *Әсәйең башын күтәргәндә, ҡотом осто — танауынан борлап ҡан аға ине.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

**БОРЛОҒОУ (борлоҡ-)** (Р.: виться; И.: twine; Т.: kıvırmak) *ҡ. диал.*

**1.** Ишелеү, боролоу. □ Виться, свиваться. *Был ҡайын борлоғоп үҫкән.*

**2.** Кимәлйеү, имгәнеү; быуын сығыу. □ Надорваться, вывихнуться, подвернуться. *Билем борлоҡҡан. Аяғым борлоҡто.* ■ *[Фәрхизә әбей – Вазифаға:] Тик ауыр нәмә күтәреп, эсең борлоҡҡан. Белгән генә кешенән эсеңде һылат.* «Йәшлек», 8 ғинуар 2011.

**БОРЛОҠТОРОУ (борлоҡтор-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **борлоғоу 2.** *понуд. от* **борлоғоу 2.** *Аяғын борлоҡторған. Билен борлоҡторған.*

**БОРМА I** *и. ҡар.* **боролма.** *Йылға бормаһы. Юл бормаһы. Борманы үткәс, урман башлана.* ■ *Беҙҙең урам борма-борма, бормалары ҡайырма.* Йырҙан.

**БОРМА II** (Р.: извилистый; И.: winding; Т.: burma) *с.*

**1.** Боролоп киткән, бормалы. □ Извилистый. *Борма юлдан барыу. Борма һукмаҡ. Борма йылға ағып ята.* ■ *Бүре борма йылға буйлап ҡаса, ә атайым туранан алдағы бормаға барып күренмәй генә көтөп тора, шунан бүрене әҙерәк үткәреп «һайт» тип өркөтөп, киләһе бормаға барып етә.* «Башҡортостан», 15 март 2011.

**2.** Ишеп, бороп эшләнгән; ишелгән, боролған. □ Витой, кручёный; винтообразный. *Борма беләҙек. Борма йөҙөк. Борма мөгөҙ.*

**БОРМА-БОРМА** (Р.: извилистый; И.: sinuous; Т.: büksül) *с.*

Боролоп-боролоп киткән, бер нисә бормалы. □ Извилистый, с извилинами, извивами. *Борма-борма тауҙар. Борма-борма юлдар.* ■ *Ылау, Ҡарғалы биҫтәһенең борма-борма урамдарын үтеп, Һаҡмарҙың таҡта күперенә килеп инде.* З. Ураҡсин. *Борма-борма юллы оҙон тауҙарға артылғанда, Торомтай, битараф кешеләй, арткараҡ ҡалып, ҡулдарын биленә ҡуйып, бөксәйә төшөп, әкрен генә атлай.* Н. Мусин. *Ҡапҡанан сығып, борма-борма тыҡрыҡты уҙыуға, урман башлана, һукмаҡ тауға үрләй.* Ә. Хәкимов.

**БОРМАЛАҠ (бормалағы)** (Р.: вертлюг; И.: swivel; Т.: döner) *и. тех.*

Механизмдың ике өлөшөн һәр береһе үҙ аллы әйләнерлек итеп тоташтырыусы быуыны. □ Вертлюг. *Бормалағы һынып сыҡҡан. Бормалаҡ эшләү. Быраү бормалағы.*

**БОРМАЛАНЫУ (бормалан-)** (Р.: извиваться; И.: curve; Т.: bükselmek) *ҡ.*

Боролоп китеү, боролоп-боролоп китеү, бормалы булыу. □ Извиваться, виться, изгибаться. *Бормаланып ағыу. Бормаланып аҡҡан йылға.* ■ *Рамаҙан, Урал ҡуйынында, тау-таш, урман араһында үҫкән кеше, картаға бер тапҡыр ҡарау менән, ҡалғанын беленер-беленмәҫ һукмаҡтың нисек бормаланыуынан, ағастарҙың ҡайһылайыраҡ сираттәшыуынан аңлай.* Ә. Хәкимов. *Урамдарҙың күбеһе кәкре-бөкрө, уларҙан иҫәпһеҙ-һанһыҙ тар тыҡрыҡтар бормаланып-бормаланып бер ситкә үрмәләп китәләр.* Д. Юлтый. *Уң яҡтан, тау башынан, бормаланып һукмаҡ төшә.* М. Буранғолов. *Сәлимә йырлап бөттө, артына әйләнеп тау итәгендә ятҡан ауылға, таҫмалай бормаланып аҡҡан Ағиҙелгә, уның ярҙарында үҫкән бейек тирәктәргә күҙ йүгертте, йөҙөнә һағыш япты.* Ә. Әминев. *Алатауға менгән юл, ҡара йылан шикелле бормаланып, үргә табан һуҙыла.* Н. Мусин.

**БОРМАЛАУ (бормала-)** (Р.: делать извилины; И.: make bends; Т.: büküntü yapmak) *ҡ.*

Бормалар яһау. □ Делать, сделать извилины, изгибы. *Бормалап эшләнгән баҫҡыстан юғарыға күтәрелдем.*

**БОРМАЛЫ** (Р.: извилистый; И.: winding; Т.: burmalı) *с.*

**1.** Боролоп-боролоп киткән. □ Извилистый. *Бормалы юл. Бормалы йылға.* ■ *Бормалы, һикәлтәле тау юлы сыбар йылан шикелле һығыла-бөгөлә һаман үргә, көнсығышҡа үрмәләне.* З. Биишева. *Был саҡта беҙ Рауза менән етәкләшеп, бормалы һөҙәк һукмаҡтан һаҡ ҡына түбән төшөп килә инек.* М. Кәрим. *Бормалы йылға юлының ярҙары, һыуҙы тотҡарлап, тәрәнлек-киңлек мөнәсәбәтен һаҡлай, һыу матур булып йәйелеп, талғын ғына аға.* «Ағиҙел», № 5, 2010. *Бормалы тауҙар артында аҡ сәскә атҡан сейә.* Бәйеттән. *Шәм шикелле шыршылар араһынан бормалы-бормалы юл үтә.* Ғ. Хәйри.

**2.** Ишеп, бороп эшләнгән. □ Винтовой; витой, кручёный. *Бормалы йөҙөк. Бормалы баҫҡыс.* ■ *Өй йыйыштырыусы ҡатын .. бормалы баҫҡыс буйлап икенсе ҡатҡа менде.* Я. Хамматов.

**3.** Бороп ҡуймалы. □ Завинчивающийся. *Бормалы ҡапҡас.*

**4.** Борғосло, бора торған. □ Заводной. *Бормалы уйынсыҡ. Бормалы сәғәт.*

**БОРМАЛЫЛЫҠ (бормалылығы)** (Р.: извилистость; И.: convolution; Т.: burulma) *и.*

Бормалы булыу. □ Извилистость. *Тау юлдарының бормалылығына иҫең китер.*

**БОРМАС I** (Р.: штопор; И.: corkscrew; Т.: tirbuşon) *и.*

Шешә тығынын аса торған бормалы беҙ. □ Штопор. *Бормас менән асыу.*

**БОРМАС II** *с. ҡар.* **бормалы.** *Бормас юл. Бормас беләҙек. Бормас йөҙөк. Бормас-бормас булыу.*

**БОРМАСА** (Р.: деревянная посуда с завинчивающейся крышкой; И.: small wooden vessel with a screw-on cap; Т.: küçük bir ağaç kap) *и.*

Ағастан эшләнгән бороп ябыла торған ҡапҡаслы бәләкәй һауыт. □ Маленькая деревянная посуда с завинчивающейся крышкой. *Ағас бормаса. Бормаса ҡапҡасы. Бормасалағы май. Бормасаға шәкәр һалыу.* ■ *Ғәлиә ыҡсым итеп эшләнгән ағас бормасаны аса ла уның [Ғиззәттең] алдына ултырта.* Н. Мусин.

**БОРМАСЛАНЫУ (бормаслан-)** *к. ҡар.* **бормаланыу.** *Йылға бормасланып китә.* ■ *Артта әле генә үтелгән баш әйләндергес текә тау юлы бормасланып ята ине.* З. Биишева.

**БОРМАСЛЫ** (Р.: завинчивающийся; И.: screw-up; Т.: burmalı) *с.*

**1.** Бороп ябыла торған *(һауытҡа ҡарата).* □ Завинчивающийся *(о посуде). Бормаслы һауыт.*

**2.** Боролоп-боролоп киткән, бормалы. □ Извилистый. *Бормаслы юл. Бормаслы һуҡмаҡ.* ■ *Уйҙарҙың ҡайһылары уҡ шикелле төҙ, үткер, икенселәре тау юлынан да бормаслыраҡ, һикәлтәлерәк.* З. Биишева.

**БОРМАШИНА** [рус. < нем. *Bohrmaschine*] (Р.: бормашина; И.: (dentist's) drill; Т.: burgu) *и.*

Борҙы (II) хәрәкәткә килтерә торған теш дауалау аппараты. □ Бормашина. *Бормашинаны эшләтеү.*

**БОРОВИНКА** [рус.] (Р.: боровинка; И.: sort of apples; Т.: elma türü) *и.*

Алма сорты. □ Боровинка. *Боровинка ултыртыу.*

**БОРОЗ** *и. диал. ҡар.* **бөрөз.** *Бороз менән мәке уйыу.*

**БОРОЛДАТЫУ (боролдат-)** (Р.: поднимать клубами; И.: raise clouds of; Т.: fırıl fırıl döndürmek) *к.*

**1.** Атлыҡтырып күп итеп сығарыу *(саң, боҫ, төтөн кеүек нәмә тураһында).* □ Поднимать, вздымать клубами *(о пыли, паре, дыме). Саң боролдатыу. Төтөн боролдатыу. Тәмәке боролдатыу.*

**2.** *күсм.* Асыуланып пыр туҙҙырыу, бик ныҡ итеп әрләү, пыран-заран килтереү. □ Разнести в пух и в прах, сильно ругать, бранить. *Боролдатып сығарып ебәреү. Боролдатып әрләү.*

**3.** *диал.* Баш ҡоҫоу. □ Колоситься *(о хлебных злаках).*

**БОРОЛДАУ (боролда-)** (Р.: подниматься клубами; И.: rise in puffs; Т.: fırıl fırıl dönmek) *к.*

**1.** Атлығып күп булып сығыу *(саң, боҫ, төтөн кеүек нәмәгә ҡарата).* □ Подниматься, вздыматься клубами *(о пыли, паре, дыме). Саң боролдай. Төтөн боролдай.*

**2.** *күсм.* Асыуланып пыр туҙыу. □ Раскричаться, разбушеваться. *Бушҡа боролдау. Ҡапыл боролдап китеү.*

**БОРОЛМА** (Р.: извилина; И.: bend; Т.: burulma) *и.*

**1.** Һыуҙың, юлдың боролған урыны; бөгөл. □ Изгиб, извилина, поворот. *Йылға боролмаһы. Юл боролмаһы. Боролмаға тиклем барыу.* ■ *Киң ялан уртаһынан һыҙылған ҡарлы юлдан бер йәйәүле атлай. Ҡашлаҡтағы боролмаға еткәс, ул артына әйләнеп ҡараны.* Ғ. Лоҡманов. *Бер боролманы уҙғас та, алдыбыҙға йәнә аҡ тау башындағы ҡала килеп баҫты.* М. Кәрим. *Аҙнаев менән Солтанов ултырған алдағы сана боролмаға инеп күҙҙән юғалды.* Н. Мусин. *Был ҡая тәңгәлендә Ағиҙел киҫә боролоп китә лә, ошо боролманы үткәс, ап-аҡ булып ике ҙур таш бағана ҡалҡып сыға.* Риүәйәттән.

**2.** *күсм.* Үҙгәреш, икенсе йүнәлеш. □ Направление, оборот; поворот, перелом. *Тормош боролмалары.* ■ *Яҙмышының алдағы*

*билдәһеҙ боролмаһына әҙерләнде Мәҙинә.* Ә. Хәкимов.

**БОРОЛМАЛЫ** (Р.: извилистый; И.: winding; Т.: büksül) *с.*

**1.** Боролоп-боролоп киткән. □ Извилистый. *Боролмалы һукмаҡ. Боролмалы юл.* ■ *Боролмалы күл буйында сәскә ата бөрлөгән.* Йырҙан.

**2.** *күсм.* Ауыр, ҡатмарлы. □ Сложный, тяжёлый. *Боролмалы ғүмер юлдары.*

**БОРОЛМАЛЫ-БОРОЛМАЛЫ** (Р.: извилистый; И.: tortuous; Т.: büksül) *с.*

Бер нисә боролмалы. □ Извилистый. *Боролмалы-боролмалы юлдарҙан алып киттеләр.* ■ *Унда [тауҙарға] менһәм, ауылыма алып килә һәм артабан алып китә торған оло юлды ус төбөндәгеләй күрерҙәй булам. Юҡ, мин уны тауҙар аша ла күрәм. Ул — беҙ төҙөгән киң, тиҡыр, ләкин боролмалы-боролмалы мәңгелек юл!* Н. Мусин.

**БОРОЛМАЛЫ-ҺЫҒЫЛМАЛЫ** (Р.: вычурный; И.: fanciful; Т.: zarıf) *с.*

Ҡатмарлы, ғәҙәти булмаған *(телмәр, әҫәр теле тураһында).* □ Вычурный, излишне затейливый, необычный *(о речи, языке сочинений). Боролмалы-һығылмалы шиғыр юлдары. Алып барыусы боролмалы-һығылмалы телмәрен башлап ебәрҙе.*

**БОРОЛОУ (борол-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бороу I, 1.** *страд. от* **бороу I, 1.** *Шөрөп нык боролған. Йоҙаҡтың асҡысы боролған.*

**2.** Башты, кәүҙәне бороу; әйләнеү. □ Поворачиваться, повёртываться; оборачиваться. *Тәҙрәгә боролоу. Алға боролоу. Боролоп ултырыу. Боролоп ҡарау.* ■ *Рәхилә үҙенә ҡарап, ниндәйҙер уйға батып эргәһендә ултырған Бикморатҡа боролдо.* Н. Мусин. *Ҡыҙыҡай биҙрәләрҙе көйәнтәһенә эләктергәс, бер-ике аҙым ауыл яғына атлап ҡуйҙы ла егетҡә табан боролдо.* Д. Бүләков.

**3.** Йүнәлеште икенсе яҡҡа үҙгәртеү. □ Менять направление; поворачивать. *Ҡайтырға боролоу. Боролоп китеү.* ■ *[Юлдаш] Инйәр тамағына табан тартылған берләм юлдан аҫҡа төшә бирә лә йә уңға, йә һулға боролоп, үҙәндәрҙе тикшереп йөрөй.* З. Ураҡсин. *Хаммат, Оло Эйек кисеүен сыҡҡас, уңға, туғай эсенән уҙған берләм юлға боролоп инеп китте.* З. Биишева. *Ана шул һукмаҡ боролған ерҙә үҫә көйәнтәләнеп кәкрәйгән муйыл.* Д. Шәрәфетдинов.

**4.** *күсм.* Икенсе бер йүнәлеш, үҫеш алыу. □ Менять направление, развитие. *Йәмғиәт сәләмәт йәшәү рәүешенә боролдо.*

♦ **Боролорға ла ирек бирмәү** ҡабаландырыу, тынғыһыҙлау. □ Не давать покоя, торопить. *Апайым, боролорға ла ирек бирмәй, баҙарға алып сығып китте.* **Боролорға ла ваҡыт юҡ** эш менән мәшғүллек, бөтөнләй ваҡыт булмау. □ Дыхнуть некогда. *Йыл аҙағы, эш күп, боролорға ла ваҡыт юҡ.* **Боролорға ла урын юҡ** урын әҙ, тар. □ Повернуться негде. *Фатир шул тиклем йыһаз менән тыңҡыслап тултырылған, боролорға ла урын юҡ.*

**БОРОЛОШ I** (Р.: поворот; И.: turn, bend; Т.: dönüş) *и.*

**1.** Һыуҙың, юлдың боролған урыны; бөгөл. □ Поворот, изгиб, извилина. *Йылға боролошонда. Боролош күрһәткесе.* ■ *Аҫтараҡ кәйелтмәкле боролош барын Алтынбай белмәй ине әле.* З. Ураҡсин. *Һукмаҡтың тәүге боролошонда ук беҙҙе ҙур таш өҫтөндә Сабир менән Шамил көтөп ултыра ине.* Д. Шәрәфетдинов. *Хәлит йәшен тиҙлеге менән йәнә ике боролошто үтеп китте.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** Йүнәлеш. □ Направление, оборот. *Эш башҡаса боролош алды.* ■ *Уйы ошо рәүешле ҡырҡа боролош яһау менән, уратып-суратып ултырыуҙан бер мәғәнә лә сыҡмаҫын самалап. Ғөбәй тураҡ ярҙырырға булды.* Ә. Хәкимов.

**3.** *күсм.* *Ниҙеңдер* үҫешендәге тулы үҙгәреш; һынылыш. □ Поворот, перелом. / Поворотный, переломный. *Тарихи боролош. Боролош осоро.* ■ *Тап ошо көйөнсөлө мәлдә яҙмышы ҡырҡа боролош яһаны, ул [Ирназар] хәрби комиссариатҡа саҡырылды.* Ә. Хәкимов. *[Фазыл:] Ауыл хужалығында*

*бөйөк боролош көтөлә, ағай-эне.* Н. Мусин. *Мәҙинә ҡыҙының яҙмышы нисектер ҡапыл, көтөлмәгәндә киҫкен боролош алыуын кисереп бөтә алмайырак, ҡыуанырға ла, иларға ла белмәйерәк тора.* Т. Ғарипова.

**БОРОЛОШ II** *с. диал ҡар.* **арҡыры II.**

**БОРОЛОШЛО** (Р.: извилистый; И.: meandering; Т.: büksül) *с.*

**1.** Боролған урыны, бөгөлө булған. □ Извилистый. *Боролошло юл. Боролошло йылға. Боролошло һуҡмаҡтан китеп барам.*

**2.** *күсм.* Үҙгәрешле, һынылышлы. □ Переломный, сложный, тяжёлый. *Боролошло уйҙар. Боролошло яҙмыштар. Боролошло ғүмер юлдары. Тарихтағы боролошло мәл.*

**БОРОЛТА** *и. диал. ҡар.* **боролма 1.** *Юл боролтаһы.*

**БОРОМ** (Р.: четыре навоя; И.: four beams; Т.: dört kiriş) *и. туҡ. диал.*

Дүрт шөйтө күҙе. □ Четыре навоя *(в домашнем ткачестве).*

**БОРОМҠА** *и. диал. ҡар.* **моҙға.** *Боромҡаға бәшмәк йыйыу.*

**БОРОМТА** *и. диал. ҡар.* **боролма 1.** *Юлдың боромтаһына еткәс, туҡтап ял итерһең. Боромтала абай бул, ҡаршыңа машиналар килеп сыҡмаһын.*

**БОРОН I** [дөйөм төрки *бурун* 'элекке, элек булған'] (Р.: прежде; И.: in former times; Т.: eskilerden) *р.*

**1.** Бик элек; әүәле. □ В старину, давние времена, прежде. *Борон заманда.* ■ *Тимәк, борон ер өҫтөндә булған һыу әкренләп эзбиз тоҡомон йыуа-йыуа аҫҡа төшөп киткән.* З. Ураҡсин. *Борон, беҙ йәш саҡта, йәй көнө өйҙә ятҡан кеше булмай торғайны.* З. Биишева.

**2.** Беренсе башлап; алдан, элек. □ Первым, раньше. *Ул бөтәһенән борон торҙо. Мин йыйылышҡа борон килдем, халыҡ йыйылмағайны әле.* ● *Туйға барһаң, борон бар; борон барһаң, урын бар.* Әйтем.

**БОРОН II** (Р.: до, до того как; И.: before; Т.: evvel) *бәйл.*

Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр йәки *-маҫ* формалы сифат ҡылымдан һуң килеп, эш, хәрәкәттең *кемдән, нимәнән* йәки *ниндәйҙер* эш, хәлдән алда булғанын белдерә; элек. □ До, до того как, прежде чем *(послелог с исх. п.). Башламаҫ борон. Эшләмәҫ борон.* ■ *Сапҡын, атын аҡ күбеккә төшөрөп, көн ҡараңғыланмаҫ борон уҡ Ташлыға барып та инде.* З. Ураҡсин. *Асыуы ҡабарған Төлкөсура күҙе аларған, ярһыған, шуға өркөүен дә онотҡан тайын тешен шаҡылдатып бер мәлгә туҡтап ҡалған бүре өҫтөнә ҡыуаланы, йылҡ итеп эргәһенән үтергә уҡталған бүре тәңгәленә етмәҫ борон суҡмарын һелтәне.* Н. Мусин.

**БОРОН-БОРОНДАН** (Р.: издавна; И.: from the earliest times; Т.: çoktandır) *р.*

Элек-электән. □ Издавна, издревле, испокон веков. *Борон-борондан беҙҙең халыҡ йәйләүҙәргә йәшәгән.* ■ *Әйткәндәй, бала күреүҙән һуң бәпес буләге өләшеү борон-борондан ҡалған бер йола.* Ж. Кейекбаев. *Ҡыҙ күҙләү, кәләш әйттереү борон-борондан ҡалған йола.* Я. Хамматов.

**БОРОНҒО** (Р.: древний; И.: ancient; Т.: eski) *с.*

**1.** Бик күптән йәшәп килгән, борон замандан һаҡланған; әүәлге. □ Древний, старинный. *Боронғо китап. Боронғо йыр. Боронғо ғәҙәт.* ■ *Ҡалатау һыртындағы түбәләстәр менән бик ҡыҙыҡты был ағай, киләһе йәйҙә мотлаҡ бындағы боронғо ҡәберлектәрҙе ҡаҙырға киләсәктәре тураһында әйтте.* З. Ураҡсин. *Боронғо бай ауыл: таштан һалынған мөғәзәйе, ана, ҡалҡыуҙа түш кирә, ике ҡатлы йорттары ла бар.* Р. Камал. *Ҡыҙырас менән Гөлйөҙөм еңгә һаба ҡымыҙын маҡтап, ҡабатлап һалдырып эстеләр. Тик Юлдаштың ғына был сәйер, боронғо һауыттан эскеһе килмәне.* З. Биишева.

**2.** Борон булған, борон йәшәгән. □ Существующий искони, исконный. *Боронғо башҡорттар. Боронғо ерҙәр. Боронғо телдәр. Боронғо тарих.* ■ *Боронғо башҡорт ҡыҙҙары кейемендә килгән талсыбыҡтай нескә, ләкин*

*бик һомғол буйлы ҡыҙ урынынан ҡалкты.* Т. Ғарипова. *Боронғо һуғышсылар кешенең ҡайһы еренә сабырға, сәнсергә белгән: күберәк муйын һөйәге. бил. тубыҡ ҡапҡасын яралағандар.* З. Ураҡсин.

**БОРОНҒОЛАР** (Р.: древние люди; И.: forefathers; Т.: atalarımız) *и.*

Боронғо кешеләр, ата-баба. □ Предки, древние люди. *Боронғоларҙы хөрмәтләп иҫкә алыу.* ■ *[Әхмәтхан — Ғилемханға:] Улым, һин минең урынға ҡалаһы кеше, боронғолар, тереләрҙең ҡәҙерен, ә ата-бабаларҙың ҡәберен бел, тигән. Үҙем тере саҡта күрһәтеп ҡалайым.* Р. Камал. *Рәхмәттең ҡәҙерен белгәндәр боронғолар.* М. Кәрим. *Боронғолар аманат итеп ҡалдырған мөҡәддәс һүҙҙәр әле лә онотолорға тейеш түгел — иргә бил ныҡлығы кәрәк.* Ф. Аҡбулатова. *Әҙһәм ҡарт. һаман үҙенең һүҙен өҫкә сығарырға тырышып: «Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа, тигәндәр боронғолар!» — тине.* Ж. Кейекбаев. ● *Боронғолар әйткән һүҙ китаптың эсендә лә түгел. тышында ла түгел.* Әйтем.

**БОРОНҒОЛАРСА** (Р.: по-старинному; И.: peculiar to forefathers; Т.: atalar gibi) *р.*

Боронғо кешеләргә хас, ата-бабалар кеүек. □ По-старинному, как предки. *Боронғоларса эшләү.*

**БОРОНҒОЛАР ҺҮҘЕ** (Р.: изречения предков; И.: sage dictum; Т.: atasözü) *и.*

Борон йәшәгән кешеләрҙең аҡыллы, тапҡыр һүҙҙәре; мәҡәл, әйтем. □ Мудрые слова, изречения предков; пословицы, поговорки. *Боронғолар һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк.*

**БОРОНҒОЛОҠ (боронғолоғо)** (Р.: древность; И.: antiquity; Т.: antik) *и.*

Бик күптән йәшәп килгән, борон замандан һаҡланған күренеш. □ Древность, архаика. *Боронғолоҡ ҡалдыҡтары.* ■ *Өй эсендәге монаяттың боронғолоғона ла иҫе китте Фәүзиә-Барсынбикәнең.* Т. Ғарипова.

**БОРОНҒОСА** (Р.: по-старинному; И.: in an age-old way; Т.: eski zamanda gibi) *р.*

Боронғо замандағы кеүек, элеккесә, иҫке ғөрөф-ғәҙәт буйынса. □ По-старинному. *Боронғоса йәшәү. Боронғоса кейенеү. Боронғоса яҙыу.* ■ *[Халыҡ] ҡунаҡҡа тирмәнең эске биҙәлешен, боронғоса май бешеү, талҡан тартыу алымдарын күрһәтте.* «Йәшлек», 15 июнь 2010. *Зөфәр ҡапыл шомланды. Әллә үҙ ҡыуанысынан Ғилман ағаһы уны, ҡеңәшләшеп-нитеп тормайынса, боронғоса өйләндерер.* Д. Бүләков. *Өләсәһе менән Гөлйөҙөм еңгәһе .. ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы боронғоса, иң ҡәҙерле аш — һалма бешереп, туған-ырыу, күрше тирә-яҡты саҡырып һыйларға булдылар.* З. Биишева.

**БОРОНДАН** (Р.: издавна; И.: from time immemorial; Т.: eskiden) *р.*

Бик электән, әүәлдән. □ С давних пор, издавна, исстари, издревле. *Борондан килгән ғәҙәт.* ■ *Борондан уҡ башҡорт атты һөйгән. аты булған ғүмер юлдашы.* Ш. Бикҡол. *Кешеләр үҫемлектәрҙең тышҡы төҙөлөшөн бик борондан уҡ өйрәнә башлаған.* З. Биишева.

**БОРОНДОҠ (борондоғо)** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **ауыҙлыҡ I.** *Борондоҡ кейҙереү.*

**2.** *ҡар.* **морондоҡ III.** *Борондоҡ инәй.*

**БОРОНСОҠ (боронсоғо)** (Р.: кончик цветка шиповника; И.: tip of the dogrose flower; Т.: çiçek ucu) *и. диал.*

Гөлйемеш сәскәһенең осондағы мороно; моронсоҡ. □ Кончик цветка шиповника. *Гөлйемеште боронсоғонан таҙартыу.*

**БОРОС I** [рус. *перец* < гр. *peperi*] (Р.: перец; И.: pepper; Т.: biber) *и.*

**1.** *бот.* Тропик үҫемлек һәм шул үҫемлектең әсе орлоғо. □ Перец. / Перечный, перцовый (лат. *Piper*). *Ҡара борос. Ҡыҙыл борос. Борос онтағы. Төйөлгән борос. Бөтәү борос. Борос үҫтереү.*

**2.** *бот.* Ҡырҡыу тәмле йәшелсә һәм уның ҡуҙаҡлы орлоғо. □ Перец стручковый (лат. *Capsicum*). *Болгар боросо. Ҡыҙыл борос. Әсе борос. Йәшел борос. Борос ултыртыу. Бороска һыу һибеү. Борос турау.*

**3.** Шул үҫемлектәрҙең орлоғонан йәки ҡуҙағынан онталған аш тәмләткес. □ Перец *(молотый). Ашҡа борос һибеү. Борос еҫе. Борос тәме. Ҡара борос. Ҡыҙыл борос.*

■ *Иҙелгән әсе ҡорот менән ҡатыштырып, ҡара борос һалып ебәргән был һимеҙ ит һурпаһы Юлдашҡа тағы ла тәмлерәк тойолдо.* З. Биишева. ● *Борос әсе, әсе телде кеше унан да әсе.* Мәҡәл.

**БОРОС II** (Р.: косяк; И.: jamb; Т.: söve) *и. диал.*

Ишек яңағы. □ Косяк *(двери). Бороҫҡа һөйәлеү.*

**БОРОС III** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуы аймағы. □ Бурус *(название родового подразделения башкир-табынцев). Борос аймағы башҡорто.*

**БОРОСЛАНЫУ (борослан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **борослау.** *страд. от* **борослау.** *Һурпа нык боросланған.*

**БОРОСЛАТЫУ (борослат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **борослау.** *понуд. от* **борослау.** *Бала әсәһенән ашын борослатырға уйлағайны, әсе тип тыйҙылар.*

**БОРОСЛАУ (борosла-)** (Р.: перчить; И.: pepper; Т.: biberlemek) *ҡ.*

Борос һалыу, борослo итеү. □ Перчить. *Һурпаны борослау.* ■ *Һуғымдың төрлө еренән һалынған һимеҙ итте тыныс ҡына ашап, ҡоротлап, борослап туҫтаҡ менән һурпа эсеп алғас, ҡунаҡтар аяҡтарын һуҙып, киреләшеп ултырҙылар ҙа йәнә әңгәмәгә тотондолар.* З. Ураҡсин.

**БОРОСЛО** (Р.: перечный; И.: pepper; Т.: biberli) *с.*

Борос һалынған, боросо булған. □ Перечный, перчёный, перцовый; с перцем. *Борослo аш. Борослo соус.* ■ *[Бибинур] бирге бүлмәһендә буҙара бешеп, быу борҡотоп, борослo бишбармаҡ, .. баланлы бәлеш, бәрәңге билмәне бешерә.* «Киске Өфө», № 18, 2009.

**БОРОСТОҠ** (Р.: маленький; И.: small; Т.: küçük) *с. диал.*

Бәләкәй генә, әҙ генә. □ Маленький, крошечный. *Боростоҡ малай. Боростоҡ ҡына икмәк киҫәге.*

**БОРОС ТӨРӨКМӘН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуы аймағы. □ Бурус туркмен *(название родового подразделения башкир-кыпчаков). Борос төрөкмән аймағы башҡорто.*

**БОРОУ I (бор-)** [дөйөм төрки *бур-* ‘бороу, быраулау’] (Р.: поворачивать; И.: turn; Т.: burmak) *ҡ.*

**1.** Бер урында өйрөлтөү; әйләндереү. □ Поворачивать, повёртывать. // Поворачивание, повёртывание. *Һеңәкте бороу. Асҡысты бороу. Шөрөптө бороу. Бороп ҡуйыу.* ■ *Асҡысты борған ыңғайға һандыҡтың йоҙағы ике тапҡыр зыңлап ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Бер урында әйләндереп икенсе тарафҡа ҡаратыу. □ Вращать, вертеть, крутить. // Кручение. *Башты бороу. Ултырғысты бороп ултыртыу.* ■ *Байрас, үҙенең баҡырҙан юнып яһалған шикелле матур йөҙөн бошонҡо сирып, күҙен икенсе яҡҡа борҙо.* З. Биишева. *Солтан был һүҙҙәр алдында аҙ ғына ла кәйефен боҙманы .. көс ташып торған йөҙөн бер яҡҡа ла бормайынса, яңғырауыҡлы тауыш менән һөйләй башланы.* Ғ. Хәйри.

**3.** Барған йүнәлешен ҡырҡа үҙгәртеү. □ Повернуть. // Поворачивание. *Атын уңға борҙо. Машинаны бороп алып китте.* ■ *Далала ҡыу үләнгә ҡабынған уттан да яман нәмә юҡ, уны һүндерер әмәл дә, бороп ебәрер сара ла табыуы ҡыйын.* З. Ураҡсин. *Ҡаратауҙың иң текә бер артылышында юлға табан сыға биреп үҫкән йыуан, тарбағай имән бар. Шул тәңгәлдә атын бороп, эскә инде Бикморат.* Н. Мусин. *Ул арала булмай [Сура батыр] ҡаҙаҡтар урлаған мал-тыуарҙы был яҡҡа табан борҙо, үҫәргәндәрҙең бер төркөмө уны башҡорт еренә кире ҡыуҙы.* Ф. Аҡбулатова. *Мин тормамын, тормамын, атым башын бормамын.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**4.** *күсм. Ниҙе* лә булһа башҡа йүнәлешкә күсереү. □ Менять направление *чего-л.*

*Иғтибарҙы бороу. Һүҙҙе икенсегә бороу.* ■ *Әхмәтхан ҡайһылай теләй, шулай бора донъя тәртәһен, ә Мәүсифа бары ирҙең иркен үтәй: аш-һыу әҙерләү йүнәтә, кер йыуа, мал бағa — бөткәнме мәшәҡәте.* Р. Камал. *Мырҙағәле генә дөмһәрә биреп ҡуйҙы ла, юрауҙы уйынға борорға тырышты.* З. Ураҡсин. *Доньялар ауыр булһа ла, тормош үҙ ағышы менән бара, кешеләрҙең көн итергә тырышып ятҡан ере. Юҡ, бындай ағышты икенсе яҡҡа бороп ебәрергә кәрәк!* Н. Мусин. *Мәзинә атаһы тураһындағы һүҙҙе тиҙ генә икенсегә борорға тырышты.* Т. Ғарипова. *[Урал — Шүлгәнгә:] Яҡшыға юл борманың, атам һүҙен тотманың.* «Урал батыр». *[Мәрхәбә — Фәрүкшаға:] Һин алай мәрәкәгә борма әле. Ошолай буйҙаҡ булып тағы күпме йөрөргә итәһең?* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**5.** Өйрөлтөп ауырттырыу. □ Закрутить, скрутить. *Бармаҡты бороу. Малайҙың ҡолағынан борҙо. Ҡулымды борма, зинһар.* ■ *Һөйәрбикә ҡәйнеш тейеш кешеһе Ҡотлобайҙың беләк итен бороп семтеп алды.* З. Ураҡсин. ● *Кеше ҡолағын борғанда, үҙеңдеке ауыртмай.* Әйтем.

**6.** Эләктереп бер урында өйрөлтөп, тарттырыу. □ Заводить. // Завод. *Уйынсыҡты бороу.* ■ *Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай, сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.* М. Аҡмулла.

**7.** Оҙон, тарау нәмәне уралтыу; сиралтыу, ишеү. □ Крутить, закручивать. // Кручение. *Йөктөң арҡанын бороп ҡуй. Теге ирҙең һөйләшкәндә мыйығын бора торған ғәҙәте бар.*

**8.** *диал. кар.* **айыртыу 1.** *Әсәйем һөт бороп ултыра. Атайым бал борорға йыйына.* ■ *[Мәрйәм апай:] Бөгөн һөт борманым бит әле...* Р. Ҡол-Дәүләт. *Ярай әле, бал бора торған мәлдә, Ғәли ҡайтып, мәшәҡәттәрҙе бергәләп йырып сыҡтыҡ.* «Таң», 12 август 2011.

**9.** *диал.* Һығыу. □ Отжимать. *Кер бороу.*

**10.** *диал. кар.* **шылтыратыу.** *Бөрйәндәр кәрәҙле телефонды бора.*

♦ **Һүҙҙе кирегә бороу** хәбәрҙең мәғәнәһен ҡапма-ҡаршыға әйләндереп ебәреү. □ Переиначивать слово. *Эй, ошо Ғәлимде, һүҙҙе кирегә бора ла тора.*

**БОРОУ II** *с. диал. кар.* **урау.** *Бороу юлдан барыу.* ● *Бороу булһа ла юл яҡшы.* Әйтем.

**БОРОШ I** (Р.: подуст; И.: common nase; Т.: karaburun) *и. зоол.*

Түбән ауыҙлы, һорғолт һыртлы, асыҡ төҫтәге ҡабырғалы йылтыр йылға балығы. □ Подуст (лат. *Chondrostoma nasus*). *Ҡармаҡҡа борош эләкте. Борош ҡурыу.*

**БОРОШ II** (Р.: перевитый; И.: woven; Т.: bükülmüş) *с.*

**1.** Бер урында боролоп әйләнгән. □ Перевитый, перекрученный. *Борош билбау. Борош ҡайыш быуып алған.*

**2.** Боролоп, ишелеп үҫкән. □ Витой. *Борош ҡайын.*

**БОРОШ ҠАСАУ** (Р.: стамеска пчеловодная; И.: beekeeper's chisel; Т.: keski) *и.*

Умартасылыҡта ҡулланылған ҡасау. □ Стамеска пчеловодная. *Борош ҡасауҙар һатып алынды.*

**БОРОШОУ (борош-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **бороу I.** *взаимн. от* **бороу I.** *Бынау арҡанды борош әле.*

**2.** Борошҡа әйләнеү. □ Закручиваться, скручиваться, завиваться, перекручиваться. *Салбарың борошҡан.* ■ *Тулғаҡҡа: «Туҙҙай борош, ҡамыштай һуҙыл!» — тиҙәр.* Ф. Хисамитдинова.

**3.** *диал.* Бөтәрләнеү. □ Мяться. *Кейемең борошоп бөткән бит.*

**БОРСАЙЫУ (борсай-, борсая)** *ҡ. диал. ҡар.* **тексәйеү.** *Борсайып ҡарама. Ни эшләп борсайып бында тораһың?*

**БОРСАҠ I (борсағы)** [дөйөм төрки *бурчак* 'борсаҡ' < *буғурчак* 'кескәй шар'] (Р.: горох; И.: pea; Т.: burçak) *и. бот.*

**1.** Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, баҡсала йәки баҫыуҙа үҫтерелә торған, түңәрәк орлоҡло бер йыллыҡ үҫемлек. □ Горох. / Гороховый (лат. *Pisum*). *Борсаҡ ҡуҙағы. Сәсеү борсағы. Борсаҡ үҫтереү.* ■ *[Саяф] күпме*

*ер һөрөлгән, күпме бойҙай, арыш, һоло, арпа, борсаҡ сәселгән, һанап сыкты.* Т. Ғарипова.

**2.** Шул үҫемлектең ашай торған орлоғо. □ Горох. *Йәшел борсаҡ. Кипкән борсаҡ. Борсаҡ бөртөгө. Борсаҡ ашы. Борсаҡ бутҡаһы. Борсаҡ йыйыу. Борсаҡ ашау.* ■ *Әхмәт атҡа менгәйне, Заһира ҡарсыҡ быға ун биш бөртөк борсаҡ бирҙе.* Әкиәттән.

♦ **Борсаҡ атыу** *ҡар.* **борсаҡ шыттырыу. Борсаҡ бешереү** уртаҡ һүҙ табыу, килешеү. □ Найти с *кем-л.* общий язык. ■ *Эшем әйәләре менән борсаҡ бешереп булмаҫ, — тине Йосоп инәлмәгән ҡиәфәттә һәм ишекте шарт ябып сығып китте.* Н. Мусин. **Борсаҡ бешеү** һүҙ берегеү, килешеп эшләү, татыу йәшәү. □ Ладить с *кем-л.* ■ *[Хәтирә:] Зәһүрәкәй, беҙҙең бит Ләйлә менән уҡығанда уҡ борсаҡтар бик бешмәй ине.* Ф. Аҡбулатова. **Борсаҡ бүртеү** *ҡар.* **борсаҡ бешеү.** ■ *Егеттең Таңһылыу менән, Ҡуштирәксә әйткәндә, борсағы бүртеү ихтималын тойопмо, Алтынғужин да майҙан ситенә килеп баҫты.* Ә. Хәкимов. **Борсаҡ бүрттереү** *ҡар.* **борсаҡ ярыу.** ■ *Ҡыҙып борсаҡ бүрттерә тилбер телле атайҙар. Ситтән тороп, тын ҡалып, ала һабаҡ малайҙар.* Й. Солтанов. **Борсаҡ бығыу** *ҡар.* **борсаҡ бешеү. Борсаҡ сәсеү** *ҡар.* **борсаҡ шыттырыу.** ■ *Талха тегеләр мәрәкәләгән һайын һаман һауаланып, күтәрелеп китте һәм маҡтанып борсаҡ сәсеп ултырҙы.* Ж. Кейекбаев. *Рәйестең борсаҡ сәсә торған ғәҙәте барлыкты ла аңлай Сәлим.* «Ағиҙел», № 4, 2010. **Борсаҡ һиптереү** маҡтаныу, шапырыныу. □ Чрезмерно хвалиться. **Борсаҡ шыттырыу** бик маҡтанып, шапыртып, арттырып һөйләү. □ Приукрашивать, преувеличивать *(в разговоре).* ■ *Ҡәмәриә ханымдың һокланғыс сифаты хаҡында әйткәндә, борсаҡ шыттыра йәки шапырта был, тип уйлай күрмәгеҙ.* С. Кулибай. **Борсаҡ ярыу (борсаҡты эре ярыу)** маҡтаныу, шапырыныу. □ Похвалиться, чрезмерно хвалиться. ■ *Ат ярыштыра бирәүҙәр, бирәүҙәр һөйләй бүре, бирәүҙәр «күргәндәрем» тип, борсаҡты яра эре.* М. Кәрим. *[Тәфтизан] юҡҡа ирәймәне, ҡупырайманы, танау сөйөп, борсаҡ ярманы.* А. Игебаев. *Булдыра алһаң, бутҡа бешер, бирәм ярма, булмай икән, телең менән борсаҡ ярма.* Н. Иҙелбай. **Таш борсаҡ** үтә һаран кешегә ҡарата әйтелә. □ Скряга. *Был хәтлем дә таш борсаҡ булыр инде бынау Сәлим.*

**БОРСАҠ II (борсағы)** (Р.: град; И.: hail; Т.: dolu) *и.*

**1.** Бәләкәй генә йомро боҙ рәүешендә яуған яуын. □ Град. *Борсаҡ яуа. Борсаҡ ҡоя. Борсаҡ ҡатыш ямғыр.* ■ *Юлсыларҙың береһе .. Йосопто тотоп алып, тукмай-тукмай, кире ҡарауан янына алып килә. Шул саҡта ҡапыл йәшенле борсаҡ башлана.* Әкиәттән. *Былар ҙан тыш, тал бөрөһөнөң тылсымлы көсөнә ышанғандар: уны елгә ҡаршы ырғытһаң, дауыл туҡтала йәки борсаҡ яуыуҙан туҡтай.* «Йәшлек», 8 апрель 2009. ● *Өҙлөкһөҙ күк күкрәһә, борсаҡ яуыр.* Һынамыш.

**2.** *миф.* Гонаһтар өсөн Хоҙай тарафынан яза итеп ебәрелгән яуым-төшөм. □ Град; мифологизированное явление, посланное Всевышним в качестве наказания за грехи. ■ *Борсаҡ яуғанда, урамға торон сығарып ташлайҙар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БОРСАҠ III (борсағы)** (Р.: рисунок в горошек; И.: polka dot pattern; Т.: benekli bezek) *и.*

Түңәрәк формалағы биҙәк. □ Узор, рисунок в горошек. *Борсаҡ төшкән күлдәк.* ■ *Өҫтөнә ҡыҫҡа еңле, аҡ ерлеккә ҡыҙыл борсаҡ һибелгән күлдәк, аяҡтарына аҡ сандали кейгән ҡыҙ, уның тау уратып гиҙгән йомшаҡ елдә елберҙәгән һары сәстәре, һомғол ҡакса кәүҙәһе, көләс йөҙө тауышһыҙ кино кадрҙары һымаҡ [Ғәбиттең] күҙ алдында сихри тамаша ҡора, гүйә.* Ә. Әминев. *Әсәй миңә күлдәк текте — шау борсаҡ биҙәктәре.* Ф. Ғөбәйҙуллина.

**БОРСАҠ АҒАСЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **бохар селеге.** *Бында борсаҡ ағасы күп икән.*

**БОРСАҠ-БОРСАҠ** (Р.: крупный; И.: large; Т.: iri) *с.*

Эре-эре йомро бөртөклө. □ Крупный *(о каплях). Борсаҡ-борсаҡ күҙ йәше тәгәрәп төштө. Борсаҡ-борсаҡ тир сығыу.* ■ *Фәүзиәнең инде нисәмә йылдар йәш түгеүҙең нимә икәнен онотҡан күҙҙәренән борсаҡ-борсаҡ йәштәр атылдылар ҙа һарғайып ҡорғаҡһыған бите буйлап аҡтылар.* Т. Ғарипова. *Уның [Ҡыҙырастың] ваҡ һоро һипкелдәре араһынан хатта борсаҡ-борсаҡ тирҙәр атылып сыҡты.* З. Биишева.

**БОРСАҠЛЫ** (Р.: с горохом; И.: with peas; Т.: bezelye ile) *с.*

**1.** Борсағы булған. □ Имеющий горох, с горохом. *Борсаҡлы ток. Борсаҡлы күнәк.*

**2.** Борсаҡ ҡатыш. □ С градом. *Борсаҡлы ямғыр. Борсаҡлы яуын.*

**3.** Борсаҡ биҙәк төшкән. □ В горошек. *Борсаҡлы күлдәк. Борсаҡлы биҙәк.* ■ *Хашим, әсәһе теген биргән борсаҡлы бәз күлдәк-ыштандан, усына йомролай бешкән бер йомортҡа тотоп, урамға сыҡты.* Т. Ғарипова.

**4.** Борсаҡ формаһында. □ В горошек. *Борсаҡлы борос. Борсаҡлы кәнфиттәр.*

**БОРСАҠ ҺУҒЫУ (борсаҡ һуҡ-)** (Р.: градобитьё; И.: hail damage; Т.: dolu yağmak) *к.*

**1.** Борсаҡ яуып, үҫемлектәрҙе эштән сығарыу. □ Градобитьё. *Игенде быйыл борсаҡ һуҡты.*

**2.** *миф.* Гонаһтар өсөн яза итеп ебәрелгән ҙур күләмле яуым-төшөм яуыуы. □ Градобитьё; мифологизированное явление, воспринимаемое как наказание за грехи.

**БОРСАЛАНЫУ (борсалан-)** *к. диал. ҡар.* **борсолоу I.** *Борсаланып йоҡлай алмай.*

**БОРСОЛДОРОУ (борсолдор-)** (Р.: беспокоить; И.: perturb; Т.: rahatsız etmek) *к.*

**1.** Хафаға һалыу; тынысһыҙлау. □ Беспокоить. *Уйҙарым борсолдора. Төштәрем борсолдора.*

**2.** Мәшәҡәт һалыу; мәшәҡәтләү. □ Утруждать; причинять беспокойство. *Әсәне борсолдороу.*

**БОРСОЛОУ I (борсол-)** (Р.: беспокоиться; И.: worry; Т.: endişelenmek) *к.*

**1.** Тынысһыҙлыҡ күрһәтеү, тынысһыҙланыу; хәүефләнеү, хафаланыу. □ Беспокоиться, волноваться, тревожиться. // Беспокойство, волнение, тревога. *Балаларҙы уйлап борсолоу. Киләсәк быуын тураһында борсолоу.* ■ *Күпкә китһә иртәгә иртән ямғыр булаһын хәбәр итеп, көнбайышта болот ҡуйыра, ағас араһында ҡош-ҡорт сыр-сыулап борсола.* Ә. Хәкимов. *Аттар, үгеҙҙәр, дөйәләр борсола, эттәр ыңғыып сабыша башланы.* З. Ураҡсин. *Юлдаштары Йүгерек батырҙың һаман килеп етмәүенә борсола башлағандар.* Әкиәттән.

**2.** Мәшәҡәтләнеү. □ Заботиться, проявлять заботу, хлопотать. // Забота, хлопоты. *Оҙата сығып, борсолмағыҙ.* ■ *[Таиба әбей:] Закир, улым, тиҙҙән аш өлгөрә, һин яратҡан, ҡаҡлаған ҡаҙ бешә. Өйҙә тор, – тип, яратып һәм борсолоп өндәшә һалды.* З. Биишева.

**БОРСОЛОУ II** (Р.: беспокойство; И.: anxiety; Т.: endişe) *и.*

Тынысһыҙлыҡ, тынғыһыҙлыҡ; хәүеф. □ Беспокойство, волнение, тревога. *Әсәнең йөҙөндә борсолоу ярылып ята.* ■ *Мәҙинә борсолоу тулы ҡара күҙҙәрен тәҙрәгә әлдән-әле килеп һуғылған буранға төбәне.* Т. Ғарипова.

**БОРСОУ I (борсо-)** [боронғо төрки *бурчы-*] (Р.: беспокоить; И.: worry; Т.: rahatsız etmek) *к.*

**1.** Тынысһыҙланып уйларға мәжбүр итеү; хафаға һалыу. □ Беспокоить, тревожить, волновать. // Беспокойство, тревога, волнение. *Төрлө уйҙар борсой. Әсәне һорауҙар борсой.* ■ *Рамғун йәнә таңға тиклем йоҡлай алманы, уны билдәһеҙлек борсой ине.* З. Ураҡсин. *Әйе, Рамаҙандың әле яңы сынығып килеүсе талапсан аңы, аҡылы, намыҫсан күңеле быуаса һирәк-һаяҡ ҡына аҫтыртын килеп борсоған һорауҙарға яуап даулай башлағайны.* Ә. Хәкимов. *Яу уларҙың да [йәштәрҙең] күңелдәрен борсой.*

Ғ. Ибраһимов. *[Мират] юл ыңғайында әлегә тиклем күңелен борсоған уйҙарынан арынып, хәрәкәттән тәненә ҡан йүгерер; былай иркенләп, һәүетемсә генә хисләнеп, үҙ яйына донъя ҡыҙырыу йыш тәтемәй эш кешеһенә.* «Киске Өфө», № 37, 2011.

**2.** Мәшәҡәт һалып тынғыһыҙлау; маҙаһыҙлау. □ Утруждать, причинять беспокойство. *Төрлө һорауҙар менән борсоу. Йомош менән борсоу.* ■ *Ҡыҙ, тамағы кипһә лә, уянғанын белдереп кешеләрҙе борсоуҙан ҡурҡып, тик кенә ятты.* З. Биишева.

**БОРСОУ II** (Р.: беспокойство; И.: nervousness; Т.: endişe) *и.*

Тынысһыҙлыҡ, мәшәҡәт, хафа. □ Беспокойство, волнение, тревога. *Борсоу биләне. Борсоу тыуҙы.* ■ *[Федотовтың] күңелен билдәһеҙ борсоу биләне, бойоҡ уйсанлыҡҡа бирелде.* Ә. Хәкимов.

**БОРСОУЛЫ** (Р.: беспокойный; И.: uneasy; Т.: endişeli) *с.*

Тынысһыҙлыҡ һалған; тынысһыҙ, хафалы. □ Беспокойный, тревожный. *Борсоулы киәфәт. Борсоулы йөҙ. Борсоулы тауыш. Борсоулы хәбәр. Борсоулы ҡараш.* ■ *Ишетүсенең йөрәге өмөтлө-өмөтһөҙ борсоулы уйҙарҙан күкрәген ярып сыға яҙып дөпөлдәп китте.* З. Биишева. *Әсәйем иртәндән ниҙәлер борсоулы ине.* З. Ураҡсин.

**БОРТ** [рус. < фр. < нем. *Bord*] (Р.: борт; И.: board; Т.: borda) *и.*

**1.** Карап, кәмә, йөк машинаһы һәм йөк вагонының ҡабырғаһы. □ Борт. / Бортовой. *Пароходтың уң яҡ борты.* ■ *Тегендә буласаҡ эште бүлешмәгәнбеҙ, йәғни кем арҡанды ырғағы менән бортҡа эләктерә, кемдәр өҫкә менә, кем филтә тоҡандыра.* Б. Рафиҡов.

**2.** Судно ҡабырғаларының иң өҫкө өлөшө. □ Борт. *Алынмалы борт. Самолёт борты. Карап борты.*

**БОРТАҠ** [боронғо төрки *буртаг* 'бысраҡ, әшәке'] (Р.: грубый; И.: rough; Т.: kaba) *с. диал.*

Тупһыҙ, тупаҫ. □ Грубый. *Бортаҡ һүҙ. Бортаҡ ҡыҙ. Бортаҡ һатыусы.*

**БОРХ** *ожи. ҡар.* **борҡ.** ■ *Борх итеп күтәрелгән саң, уның [Вағизовтың] яңағынан аҡҡан ҡанға ҡунып, уға ҡараһыу ҡыҙғылт төҫ бирҙе.* И. Насыри.

**БОРХАН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkırt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡырғыҙ башҡорттарының нәҫел исеме. □ Бурхан *(название родового подразделения башкир-киргизцев). Борхан нәҫеле башҡорто.*

**БОРХАТ** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **теләк.** *Борхат ҡына булһын.*

**2.** *ҡар.* **мөмкинселек.** *Был борхатты файҙаланып ҡалырға кәрәк.*

**БОРХОЛДАТЫУ (борхолдат-)** *к. ҡар.* **борҡолдатыу.** *Тәмәке борхолдатыу. Төтөн борхолдатыу. Саң борхолдатыу.* ■ *Сәхипгәрәй тәмәке төрҙө. Ҡуйы аҡһыл төтөндәрҙе борхолдатып, үҙен үҙе йыуатты.* Я. Хамматов.

**БОРХОЛДАУ (борхолда-)** *к. ҡар.* **борҡолдау.** *Саң борхолдай. Ҡан борхолдай.* ■ *Мин бөгөлөп төштөм. Шунда уҡ һуғымды йыйып дошмандың танауына килтереп тондорҙом. Унан борхолдап ҡан бәреп сыҡты.* М. Кәрим.

**БОРХОТОУ (борхот-)** *к. ҡар.* **борҡотоу.** *Саң борхотоу. Тәмле еҫтәр борхотоу.* ■ *Был юлы түрә аттарын сыбаталап еғеп, әллә ҡайҙан уҡ ҡыңғырауы зыңғырлап, саң борхотоп килә ине.* З. Ураҡсин. *[Дәүләткол] усына өй башындағы тупраҡты алып ыуғыланы .. танауына терәп тигәндәй еҫкәне, алдына ырғытып, саң борхотто.* М. Ҡунафин. *Бына Ғәлиә .. татлы еҫ борхотоп, мәтрүшкә сәйе яһарға тотона.* Н. Мусин. *[Фәтҡулла] ҡулы ҡалтырауҙан тәмәкеһен тоҡандыра алмай байтаҡ булышҡас, ауыҙынан тубал ҙурлыҡ төтөн борхотоп, һүҙ асты.* Ә. Хәкимов.

**БОРХОУ (борхо-)** *к. ҡар.* **борҡоу.** *Төтөн борхой. Юлдарҙа саң борхой. Тәмле еҫтәр борхой.* ■ *Ана бит, улар арҡаһында әле лә Назаров алдында оятҡа ҡалманы: еңгәһе күкәй ҡыҙҙырып ултыртты, һалҡын ит турап ҡуйҙы, һәйбәт таҡта сәй еҫе борхоп торған сәйнүк үҙе генә лә өҫтәлде йәмләп

*ултырған төслө.* Н. Мусин. *Машина артынан карағускыл төтөн борхоп калғайны.* «Ағизел», № 5, 2010.

**БОРҺАЛАК (борһалағы)** (Р.: буран со снегом; И.: snowstorm; Т.: kar fırtınası) *и. диал.*

Карлы буран. □ Буран со снегом. *Көндәр борһалак булып китте.*

**БОРҺАЛАНЫУ (борһалан-)** (Р.: мяться; И.: rumple; Т.: buruşmak) *к.*

**1.** Теләһә нисек йөрөп, йомарланыу; таушалыу *(кейемгә карата).* □ Мяться *(об одежде). Борһаланып бөткән салбар. Күлдәгең борһаланған бит.* ■ *Күҙ алдымда — йәшел бер кулъяулык борһаланып ята, кескенә.* Р. Назаров. *Буранның Фазылдың борһаланып бөткән өҫ-башына, ике-өс көнлөк шырт баҫкан һурынҡы йөҙөнә һирпелеп баш сайканы.* Ә. Хәкимов.

**2.** Тегеләй-былай әйләнеп, *ни* эсендәлер буталыу. □ Валяться. *Санда борһаланыу. Карҙа борһаланыу.* ■ *Бер аҙҙан һуйырҙар бөтәһе лә парланышып ала ла, башлана туй: кауышыу шатлығынан бейейҙәр, йырлайҙар, карға ятып борһаланалар.* Н. Мусин. *Һирәкләнгән сан, араһында борһаланып, дошман һалдаттары һаман яҡынлашты, иң алдағылары асығырак төҫмөрләнде.* Я. Хамматов.

**3.** Борсолоп, теге-был якка әйләнеп-тулғаныу; боршаланыу. □ Беспокойно вертеться, крутиться то в одну, то в другую сторону. *Борһаланып оҙак ятты.* ■ *Төнө буйы йоклай алмай, борһаланып сыкты Мөнир.* «Йәшлек», 5 апрель 2008. *Шулай ҙа түшәгендә йоклай алмайынса оҙак борһаланып ятты Зәһүрә.* Ф. Акбулатова. *Алтынсәс кенә йоклай алмай борһалана.* Ә. Хәкимов. *Түҙемен юғалткан йәш Зарифа ултырған ерендә борһаланды, бер Ишмөхәмәткә, бер карсыкка сабырһыҙ караштарын ташланы.* Т. Ғарипова.

**БОРҺАЛАУ (борһала-)** (Р.: мять; И.: crumple; Т.: buruşturmak) *к.*

**1.** Теләһә нисек итеп йомарлау; таушалдырыу. □ Мять, трепать. *Ашъяулыкты борһалау. Борһаланып бөткән күлдәк.* ■ *Тора-бара юлаусылар башта бик кылансык күренгән был кыҙҙы ла үҙ иттеләр. Әлеге ағай уға өҫтөндәге толобон һалып бирҙе. Тегеһе. әллә ап-ак тунын борһалауҙан куркты, алмай маташты.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Тегеләй-былай әйләндереү, *ни* эсендәлер аунатыу. □ Валять *в чём-л.* // Валяние. *Кар өҫтөндә борһалау. Санда борһалау. Бесәндә борһалау.* ■ *[Һолтанбай] иртәнсәк сәй эскәс. айыу борһалаған ике күбәне рәтләп өйҙө, шунан, ысык кипкәс, калған бакуйын йыйып күбәләне лә, атын эйәрләп, кайтырға сыкты.* Н. Мусин.

**БОРҺАН** [ғәр. برهان] (Р.: факт; И.: fact; Т.: bürhan) *и.*

Иҫбатлар өсөн килтерелгән дәлил. □ Факт, доказательство. *Борһан килтереү.*

**БОРШАЙТЫУ (боршайт-)** (Р.: перекручивать; И.: twist; Т.: buruşturmak) *к.*

**1.** Борошка (II) әйләндереү. □ Перекручивать, закручивать, скручивать, завивать. *Кайышыңды боршайтып бөткәнһең.*

**2.** Кыйшайтыу. □ Кривить, скашивать. *Ауыҙыңды боршайтма.*

**БОРШАЙЫУ (боршай-, боршая)** (Р.: перекручиваться; И.: become twisted; Т.: buruşmak) *к. диал.*

**1.** Борошка (II) әйләнеү. □ Перекручиваться, закручиваться, скручиваться, завиваться. *Салбарың боршайған.*

**2.** Кыйшайыу *(ауыҙға карата).* □ Кривиться, скашиваться *(по отношению ко рту). Ауыҙы боршайып тора.*

**БОРШАЛАНЫУ (боршалан-)** *к. диал. кар.* **борсолоу I, 1.** *Боршаланып бөтөү.* ■ *Төн буйына боршаланып, уйланып рәтләп йоклай алмай сыкты Миңлегөл.* Н. Мусин.

**БОРШАНЛАТЫУ (боршанлат-)** (Р.: поворачивать; И.: twist around; Т.: döndürmek) *к.*

Тегеләй-былай борғолау *(кәүҙәне, башты).* □ Поворачивать из стороны в сторону *(голову, тело). Башты боршанлатыу.* ■ *Үҙенең бында төп хужа икәнен белдерергә теләгән кеүек, башлап Таһир урынынан куҙғалды, әле ит куныл етмәгән шыйык*

*кәүҙәһен боршанлатып атлап килеп, ҡулын һуҙҙы.* Н. Мусин.

**БОРШАНЛАУ (боршанла-)** (Р.: вертеться; И.: turn (round); Т.: döndürmek) *ҡ.*

**1.** Тегеләй-былай борғоланыу. □ Поворачиваться из стороны в сторону, вертеться. *Ат боршанлай.* ■ *Ат ҡапыл туҡтаны ла боршанлай, бышҡырына башланы, хужаның дилбегәне ҡаҡҡылауына ла ыжламаны, бер урында тапанды, кирегә тайшанып маташты.* Н. Мусин. *[Байғубәк] боршанлап, һис йоҡлай ҙа алманы.* М. Буранғолов. *Тегеләй-былай боршанлап, бер ерҙә ултырып сыҙамаған төҫлө ҡыланған Сираев уны [Филатовты] бүлдерҙе.* Н. Мусин.

**2.** Ҡыланып, кәүҙәне, башты ҡыйшанлатыу; борғанлау. □ Кокетничать. *Боршанлап һөйләшеү. Ҡыҙҙар кеүек боршанлау.*

**БОРШОЛДАТЫУ (боршолдат-)** *ҡ. диал. ҡар.* **мыршылдатыу.** *Танауҙы боршолдатыу.* ■ *Ярһыған аттар, бер урында тороп сыҙамайынса, шайыҡтарын ҡойоп, ауыҙлыҡтарын сәйнәй, тыпырсынып, артҡа сигенә йә алға ынтыла, танауҙарын боршолдата.* Н. Мусин.

**БОРШТАНГА** [рус. < нем. *Bohrstange*] (Р.: борштанга; И.: drill rod; Т.: delme borusu) *и.*

Ҡырыу станогында киҫкес ҡыҫҡысы. □ Борштанга.

**БОРЩ** [рус.] (Р.: борщ; И.: borscht; Т.: pancar çorbası) *и.*

Сөгөлдөр, кәбеҫтә һәм бүтән йәшелсә һалып бешергән аш. □ Борщ. *Борщҡа йәшелсәләр турау. Борщ ашау. Борщ еҫе. Борщ һалып биреү.*

**БОСКЕТ** [рус. < фр. < ит. *boschetto* 'әрәмә'] (Р.: боскет; И.: bosquet; Т.: ağaçlık) *и. архит.*

Остары тигеҙләп ҡырҡылған ағастар, ҡыуаҡ рәте. □ Боскет. *Юл ситендә боскеттар теҙелгән.*

**БОСҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **босҡаҡ.** *Тире босҡайы. Ҡағыҙ босҡайы.*

**БОСҠАҠ (босҡағы)** (Р.: шкура с лап зверя; И.: skin of the legs; Т.: hayvanların ayak derisi) *и.*

**1.** Малдың, хайуандарҙың аяҡ, енсек тиреһе. □ Шкура с лап зверя, животных. *Саңғыға босҡаҡ ҡуйыу.*

**2.** *Нимәнеңдер* бәләкәй киҫәге. □ Кусочек, лоскут, клочок. *Сепрәк босҡағы. Ҡағыҙ босҡағы.*

**БОСҠАҠ-БОСҠАҠ** (Р.: с маленькими кусочками; И.: patchy; Т.: küçük parçalı) *с.*

Бәләкәй-бәләкәй киҫәк рәүешендәге. □ С маленькими кусочками, лоскутами. *Босҡаҡ-босҡаҡ ҡағыҙ.*

**БОСҠАҠЛАУ (босҡаҡла-)** (Р.: прибивать шкурки; И.: nail fell to hunting skis; Т.: kayağa deri yapıştırmak) *ҡ.*

Босҡаҡлы итеү; босҡаҡ (1) ҡуйыу *(саңғыға).* □ Прибивать шкурки *(к лыжам). Саңғыны босҡаҡлап эшләү.*

**БОСМАҠ (босмағы)** (Р.: угол; И.: corner; Т.: köşe) *и. диал.*

Мөйөш. □ Угол. *Босмаҡта боҫоп тороу. Босмаҡҡа барып ултырыу.* ■ *Ҙурайып. егет ҡорона кереп барғанда, Талханың танауы еҫ һиҙә башланы: атайҙың донъяһы, бөтә байлығы уның бер үҙенә тороп ҡаласаҡ: таҡта менән ябылған һигеҙ босмаҡлы йорт, келәттәр, башҡа ҡаралты, аҙбар тулы мал, ер йөҙө умарта — барыһы ла.* Ж. Кейекбаев.

**БОСҠОР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй ырыуы аймағы. □ Бускур *(название родового подразделения башкир-айлинцев). Босҡор араһы.*

**БОСОҠ I (босоғо)** (Р.: проступок; И.: fault; Т.: suç) *и.*

Килешмәгән, ғәйеп эш, ҡылыҡ. □ Проступок, вина, провинность. *Был эштең босоғо юҡ.* ● *Үҙ босоғон күрмәй, кеше босоғон ҡуймай.* Мәҡәл.

**БОСОҠ II (босоғо)** (Р.: пахталка; И.: small tub; Т.: kova) *и.*

**1.** *этн.* Бәләкәй күнәсек; май күнәсеге. □ Пахталка; бадья. *Майлы босоҡ.*

**2.** *диал.* Эсе соҡолған ҡарағай. □ Сосна, у которой выдолблена сердцевина.

**БОСОҠ III (босоғо)** (Р.: низкорослый; И.: undersized; Т.: küçük) *с.*

**1.** Бәләкәй буйлы, тәпәш. □ Низкорослый, короткий. *Босоҡ ҡына ҡыҙ.*

**2.** Тырҗыҡ, йәмшек *(танауға ҡарата).* □ Курносый. *Босоҡ танау. Босоҡ танаулы ҡыҙ.*

**БОСОНОЖКА** [рус.] (Р.: босоножки; И.: open-toe sandals; Т.: sandalet) *и.*

Асыҡ-тишек тирәсле йәйге еңел аяҡ кейеме. □ Босоножка, босоножки. *Аҡ босоножка. Босоножка кейеп йөрөү. Босоножка һатып алыу.* ■ *[Фәриҙә] бөгөн урманға сыкмаҫ булғас, ҡупшы итеп кейенгән: итәге тубыҡ өҫ яғынан ғына ҡара юбка, еңһеҙ аҡ блузка, ялан аяғында — ап-аҡ босоножка.* Н. Мусин.

**БОСС** [рус. < ингл. *boss*] (Р.: босс; И.: boss; Т.: patron) *и.*

**1.** Хужа, етәксе, башлыҡ. □ Босс *(начальник).*

**2.** Эре предприятиеның, акционерҙар йәмғиәтенең етәксеһе, хужаһы. □ Босс *(хозяин, руководитель предприятия).*

**3.** АҠШ-тың профсоюз лидеры. □ Босс *(профсоюзный лидер в США).*

**БОСТАН** [фарс. بستان] (Р.: сад; И.: orchard; Т.: bostan) *и. кит.*

Баҡса. □ Сад. *Гөл бостаны. Еләк-емеш бостаны.* ■ *Һауаларҙа осҡан аҡҡош әйтә: ағас башы беҙгә бостан, тип.* Йырҙан. ● *Бостан байлыҡ, бер айлыҡ.* Мәҡәл.

**БОСТАНСЫЛЫҠ (бостансылығы)** (Р.: бахчеводство; И.: watermelon, melon and gourd growing; Т.: bostancılık) *и.*

Ҡауын-ҡарбуз баҡсасылығы. □ Бахчеводство. *Бостансылыҡ шөғөлө. Бостансылыҡ менән ҡыҙыҡһыныу.*

**БОСТОҠ (бостоғо)** *и. ҡар.* **осток I.** *Ҡағыҙ бостоғо. Бәләкәй генә ер бостоғо.*

**БОСТОН** [рус. < ингл. *Boston* 'ҡала исеме'] (Р.: бостон; И.: Boston; Т.: kumaş türü) *и.*

**1.** Юғары сифатлы йөн туҡыма. □ Бостон *(ткань).* / Бостоновый. *Бостон костюм.* ■ *Элек беҙ бит кейә инек еңһеҙ камзул һәм елән. Улар урынына хәҙер бостондан костюм кейәм.* Бәйеттән. *[Гаяз:] Яңы ғына һатып алған бостон костюмымды бында килгәс кейгәнем юҡ ине.* Н. Мусин.

**2.** Кәрт уйыны. □ Бостон *(карточная игра).*

**3.** Вальс бейеүенең төрө. □ Бостон *(танец).*

**БОСТОНКА** [рус.] (Р.: бостонка; И.: printshop machine; Т.: matbaa tezgâhı) *и. полигр.*

Типография станогы. □ Бостонка. *Бостонкала баҫып сығарыу.*

**БОҪ** (Р.: пар; И.: steam, vapour; Т.: buhar) *и.*

**1.** Газ хәленә килгән шыйыҡлыҡ; ҡайнар һыуҙан күтәрелгән аҡ томан; быу. □ Пар *(газообразная жидкость). Самауыр боҫо. Боҫо сығыу. Аш боҫо күтәрелә. Боҫ бөркөрәй. Сәйнүктең боҫо бөркөрәй.* ■ *Һыуына башлаған өй ҡаҙанда ҡайнаған боҫ болото менән тулды.* Т. Ғарипова. *Айбулат ҡаҙан быуы, самауыр боҫо менән йылынған өйөндә .. түрҙә аяҡ салып, ғаиләһе менән ыумас эсеп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Йылы һауа менән һыуыҡ һауа аралашҡанда барлыҡҡа килгән ҡуйы аҡ томан. □ Пар *(туман). Ишекте асыу менән өйгә боҫ тулды. Тәҙрә ектәренән боҫ сыға.* ■ *Ҡыҙҙар, йылы боҫо сығып ятҡан еүеш ҡомға ялан аяҡтары менән вак ҡына нәфис мөһөрҙәр баҫа-баҫа, кисеүгә табан йүгерҙеләр.* З. Биишева. *Боландары ла, тыңлаусан рәүештә баштарын түбән эйеп, тынып ҡалған, танауҙарынан төтөн шикелле боҫ бөркөлә.* Н. Мусин.

**БОҪАРЫУ (боҫар-)** *ҡ. диал. ҡар.* **боҫланыу.** *Тәҙрә боҫарып тора.* ■ *Таиба әбей тирләп боҫарған тәҙрә быялаһы аша ниҙәрҙер күрергә теләгән һымаҡ, бик оҙаҡ тышҡа ҡарап, тынып ултырҙы.* З. Биишева.

**БОҪКАҠ I (боҫкағы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй башҡорттары аймағы. □ Бускак *(название родового подразделения башкир-айлинцев). Боҫҡаҡ аймағы башҡорто.*

**БОҪҠАҠ II (боҫҡағы)** *и. диал. ҡар.* **босҡаҡ.** *Ҡағыҙ боҫҡағы.* ■ *Бынау урман боҫҡаҡтары араһына дошманға белдермәй нисек самолёт төшөрәһең дә, кескәй генә отряд уны нисек һаҡлай алһын.* Ә. Хәкимов.

**БОҪҠОН** (Р.: засада; И.: ambush; Т.: tuzak) *и.*

**1.** Йәшерен урынлашҡан һаҡ, йәшерен ҡарауыл. □ Засада. *Боҫҡонда ятыу. Боҫҡон ҡуйыу.* ■ *Айҙар менән Нияз, икеһе ике йылға башына аттарын бәйләп, алғараҡ килеп, мылтыҡ менән боҫҡонға ултырҙылар.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Ат уйнар ерҙе Аҡташ хан үҙе алып торҙо, кейәүҙәрен төрлө әтрафҡа ете йөҙ мең ғәскәр менән боҫҡонға ҡуйҙы.* М. Өмөтбаев.

**2.** Шул ҡарауылдағы кеше. □ Человек, находящийся в засаде. *Боҫҡондар ҡуйыу.* ■ *[Тимашев:] Әһин уларҙың ҡайҙалыр боҫҡоно торғанлығына ысынлап ышанаһыңмы?* И. Ноғоманов.

**БОҪҠОНСО** *и. ҡар.* **боҫҡон 2.** *Боҫҡонсолар ҡуйыу.* ■ *Тимашевтың ауыр туптарын һөйрәп, башҡа кәрәк-яраҡ тейәлгән ылауҙар менән боҫҡонсолар йәшеренеп торған ҡаяларҙан уҡ атымы алыҫлыҡтағы ана шул юл буйлап рәткә теҙелеп үтмәй сараһы юҡ.* И. Ноғоманов.

**БОҪҠОТОУ (боҫҡот-)** *ҡ. диал. ҡар.* **борҡотоу 1.** *Тәмәке боҫҡотоу.*

**БОҪҠОУ (боҫҡо-)** *ҡ. диал. ҡар.* **боҫрау 1.** *Самауыр боҫҡой.*

**БОҪЛАМА** (Р.: компресс; И.: compress; Т.: kompres) *и.*

Ауыртҡан, һыуыҡ тейгән ергә боҫлап, баҫырып һалған сепрәк. □ Компресс. *Тамаҡҡа боҫлама һалыу.*

**БОҪЛАНЫУ (боҫлан-)** (Р.: испаряться; И.: evaporate; Т.: buharlaşmak) *ҡ.*

**1.** Боҫҡа әүерелеү. □ Испаряться, превращаться в пар. *Һыу боҫланып ҡайнай. Боҫланып картуф бешә.*

**2.** Боҫлоға әйләнеү, боҫ менән ҡапланыу, боҫҡа солғаныу. □ Запотевать. *Тәҙрә боҫланыу. Күҙлек боҫланған.* ■ *Әйтерһең дә, ул [Зәбир ағай] ерҙе. ошо мамыҡтай йомшаҡ. боҫланып, ярмаланып торған тупраҡты ҡосаҡларға иткән.* Д. Буләков. *Әлеге һалдат минең ауыҙ-мороному көҙгөһөн ҡаплап, бер аҙ тотоп торған да, алып, тегеләргә күрһәткән. «Ҡарағыҙ, туғандар: көҙгө боҫланған бит!» — тигән.* Ш. Бикҡол. *[Төхфәт] бер аҙҙан тәҙрәгә өрҙө, тәҙрә боҫланды.* Ғ. Хәйри.

**БОҪЛО** (Р.: парной; И.: damp; Т.: buharlı) *с.*

Боҫланып торған, боҫо булған. □ Парной, с паром. *Боҫло аш. Боҫло һөт. Боҫло мунса. Боҫло баҫыу.* ● *Боҫло ашты бора баҫма.* Әйтем.

**БОҪЛОҠ (боҫлоғо)** (Р.: отверстие для выхода пара; И.: vapour outlet; Т.: buhar çıkarma deliği) *и.*

**1.** Самауыр, сәйгүн ҡапҡасындағы боҫ сыға торған тишек. □ Отверстие для выхода пара *(у самовара, чайника). Самауыр боҫлоғо. Сәйнүк боҫлоғо.*

**2.** *диал.* Мейестән йылы сығыу өсөн яһалған тишек. □ Отдушина в печи. *Мейес боҫлоғо.*

**БОҪОУ (боҫ-)** (Р.: таиться; И.: hide; Т.: gizlenmek) *ҡ.*

**1.** Башты, кәүҙәне аҫҡа баҫып, йәшенеү. □ Таиться. *Боҫоп ятыу. Мөйөшкә боҫоу. Мейес артына боҫоу.* ■ *Алтынбай ике төн атланы, көндөҙ ҡамыш. әрем араларында боҫоп ятты.* З. Ураҡсин. *Ҡамыштарен ҡамыш араһына йәшерҙеләр ҙә малайҙар, мурҙа тураһына килеп, күрән эсенә боҫтолар.* М. Кәрим. *Ҡыуаҡ төбөндә осрашҡан кешенән ҡотолғас. Аҡһаҡ Бүре балалары менән боҫоп ятҡан кәбәнде эҙләп китте.* Ә. Хәкимов. *Бөтә ерҙә тәбиғи булмағанса хафалы тынлыҡ хөкөм һөрә. Ситән башында сырсыу килеп йәнгә тейә торған турғайҙар ҙа ҡайҙалыр китеп боҫҡан.* З. Биишева. *Ҡасаһы кеше ҡасып, боҫаһы кеше боҫоп бөткәнсе сабыр иткән халҡынса ел, шифер түбәләрҙе ҡалтыратып, ҡалайҙарын дөңгөрләтеп, яу-*

*рындарын кереп бер ғәйрәтләнеп маташты ла тынды.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Шым булып, ситтә ҡалыу; ҡасыу. □ Таиться. *Боҫоп ҡалыу.* ■ *Башҡалар туфан ҡалҡып ил һаҡларға китте, ә Ихсанбай боҫто, боҫҡан һайын һаҙға, ҡумырыҡҡа нығырак сумды.* Т. Ғарипова. *Хас йомранса, өңдәренә кереп боҫто күпме дуҫтар.* М. Ғәли.

**БОҪРАТЫУ (боҫрат-)** (Р.: поднимать клубами; И.: raise vapour; Т.: buhar çıkartmak) *ҡ.*

Боҫ сығарыу, борҡоратыу. □ Поднимать клубами *(о паре). Боҫратып аш бешереү. Боҫратып сәй ҡайнатыу.* ■ *Уғаса Миңлегөл ашъяулыҡ түшәне, табаҡҡа һалынған ике ҡорҙо боҫратып килтереп ултыртты.* Н. Мусин.

**БОҪРАУ (боҫра-)** (Р.: подниматься клубами; И.: emit steam; Т.: buhar çıkarmak) *ҡ.*

**1.** Боҫ борҡоу, борҡорау. □ Подниматься клубами *(о паре). Боҫрап аш бешә. Самауыр боҫрап ҡайнай.* ■ *Ул [Торомтай] әйләнеп инеп, юл хәрездәрен ҡутарырға ла өлгөрмәне. ишектә боҫрап торған самауыр күтәргән берәү күренде.* Н. Мусин. *Бишбармаҡтар боҫрамағас, тирмәнең китте ҡото.* Т. Ғәниева.

**2.** *ҡар.* **боҫланыу 2.** *Тәҙрә боҫрай. Ишек боҫрай.*

**3.** *диал. ҡар.* **быуланыу 1.** ■ *Баяғы ҡалҡыулыҡ, ҡояш нурында боҫрап, төтәй башланы.* Д. Бүләков. *Боҫрап ятҡан дымлы ер еҫенән икмәк тултырғандай урттарым.* Р. Ғарипов. *Мәреү ҡарҙың күҙәнәктәре мөлдөрәй, ҡалҡыу урындарҙа асылған ҡап-ҡара ер боҫрап ята, йәнәшәләге өйҙөң һарайы алдында ҡолон инәһенә иркәләнә.* А. Абдуллин.

**БОҪТАШ БУЛЫУ (боҫташ бул-)** (Р.: пропадать; И.: disappear; Т.: kaybolmak) *ҡ. диал.*

Юғалыу, юҡҡа сығыу. □ Пропадать, исчезать. // Исчезновение. *Теге малай боҫташ булды.*

**БОҪТАШ ИТЕҮ (боҫташ ит-)** (Р.: навредить; И.: do harm; Т.: zarar vermek) *ҡ. диал.*

Зыян-зарар килтереү. □ Навредить. *Ҡара баланы, берәй нәмәне боҫташ итеп ҡуймаһын.*

**БОҪТОҠ** *р. ҡар.* **бөтөнләй 5.** *Боҫтоҡ та бошонмай.*

**БОҪТОРОУ (боҫтор-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **боҫоу.** *понуд. от* **боҫоу.** *Мин ҡустымды мейес аҫтына боҫторҙом.* ● *Аш хурлама — ҡоҫторор, ир хурлама — боҫторор.* Мәҡәл. *«Табамын» тип ашама, күп ашаһаң ҡоҫторор, «беләмен» тип һөйләмә, күп һөйләһәң боҫторор.* Мәҡәл.

**БОТ I** [дөйөм төрки *бут* ‘бот, аяҡ; бот араһы’] (Р.: бедро; И.: thigh; Т.: but) *и.*

**1.** *анат.* Аяҡтың тубыҡтан өҫкө өлөшө. □ Бедро. / Бедренный. *Бот һөйәге. Бот ауыртыу.* ■ *Зөһрә, әбейҙең һүҙен йыҡмау өсөн ихлас ҡына сыҡҡайны ла, лапаҫ эргәһенә һарыҡты йығып, уның ботон бәйләп маташҡан Ғәлимде күргәс, ҡапыл тәне ытырғанып туктаны.* Н. Мусин. *Сөләймән, бот төбөнән көрт йыра-йыра, ситән һарайҙың ҡабыҡтан ҡыҫып яһалған ҡапҡаһына барып еткәнсе тасын ҡаҡты.* З. Ураҡсин. *Бына күрше Хәсән ағай һыңар аяғын бот төбөнән үк ҡалдырып ҡайтты.* З. Биишева. *Трактор туҡтағас, Салауат һаҙ итегенең ҡуңысын бот төбөнә тиклем тартып кейҙе лә һыуға һикерҙе.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ҡош-ҡорттоң, хайуандарҙың бот өлөшөндәге ите. □ Ножка, окорок *(птицы, животных). Артҡы бот. Алғы бот. Һыйыр бото. Тауыҡ бото. Ҡаҙ бото.* ■ *Йомортҡа, картуф, ҡаймаҡ, алма һуты, ҡаҙ бото, икмәк сумкала.* Ф. Янышев.

**3.** *ҡар.* **аяҡ I, 2.** *Өҫтәлдең бото һынған. Ултырғыстың бото ҡыҫҡа. Был диванды тәгәрмәсле ботонан шылдырып йөрөтөп була.*

♦ **Ат дағалағанда баҡа (тәлмәрйен) ботон ҡыҫтырған** мөһим эш башҡарғанда ҡыҫылып маташҡан кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. □ Вмешиваться не в своё дело, назойливо стремиться принять участие в чём-либо. ■ *Ул [Ғәзиз ағай] аяҡ аҫтында*

*уралған йорт ҡарауылсыһы Дүрткүҙҙе: «Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған тигәндәй, кит бар ояңа, ҡамасаулама», — тип шелтәләп тә алды.* «Башҡортостан», 6 сентябрь 2009. **Бот буйы** бик бәләкәй кәүҙәле *(бала кешегә ҡарата әйтелә).* □ Ростом с ногу *(обычно о ребёнке). соотв.* От горшка два вершка. ■ *Ир затының көслөрәк икәнен бот буйы малай ҙа белә.* М. Кәрим. *Хәҙер Шәүрә — бот буйы Ирғәлегә кәләш, янып һөйгән кешеһенә — килен.* Б. Бикбай. *Беҙҙең ауыл аша телефон сыбығы һуҙҙылар. Минең кеүек бот буйы малайҙарҙың түбәһе күккә тейҙе.* И. Абдуллин. *Бот буйы бала үҙенән ҙур күнәк күтәргән дә йомран тоторға бара.* Ғ. Әмири. **Бот күтәреп ятыу** ваҡытты бушҡа уҙғарыу, бер ни ҙә эшләмәү. □ Лодырничать, бездельничать. ■ *[Мөксин:] Бына мин етмешкә булһам да, бер ҙә бот күтәреп өйҙә ятмайым.* «Йәшлек», 20 август 2011. *[Байрамғол:] Әммә ләкин еңел-елпе эш көтөп, йә хәҙер беҙҙең елкәнән ыҙа төштө тип, ҡулынан аҙмы-күпме эш килерҙәй кешегә бот күтәреп өйҙә ятырға иртәрәк әле, минеңсә.* Н. Мусин. **Бот сабып көлөү** 1) мыҫҡыл менән рәхәтләнеп көлөү. □ Валяться, кататься со смеху, смеяться с издёвкой. ■ *Бөтә донъя тик уға ҡарап, уны ғына күҙәтеп тора һымаҡ, әгәр саҡ ҡына яҙа баҫтыңмы, ярамағанды ҡыландыңмы, хәҙер бөтәһе бот сабып көлә башлар, шул көлөү менән уны тамам тапап-иҙеп ташлар кеүек тойоу арҡаһында тыуған был ҡылыҡ ысынлап та кескәй Емештең шатлығын быуып тора ине.* З. Биишева. *Был хәбәрҙәрҙе ишеткәс, Усман Әхмәҙиҙән бот сабып көлдө, уны үсән бөтә алманы.* Ж. Кейекбаев. *[Байгилде] бот сабып, һаһылдап көлөп ебәрҙе.* Ә. Хәкимов; 2) аптырау, иҫ китеү. □ Удивляться. ■ *Быға бөгөн ниндәй зәхмәт ҡағылған әле, — тип бот сапты бисәһе.* Н. Мусин. *Атаҡ, атаҡ, — Мәликә бот сапты, — эштең ғәрлеге барҙыр шул?* Я. Хамматов.

**БОТ II** [рус. *пуд*] (Р.: пуд; И.: pood; Т.: 16,38 kiloluk bir Rus ağırlık ölçüsü) *и.*

Ауырлығы 16,38 килограмға тигеҙ булған ауырлыҡ үлсәү берәмеге. □ Пуд. / Пудовый. *Бер бот картуф. Ике бот бойҙай.* ■ *[Күсәрбай:] Ҡоҙаға ауыр булһа ла, түйға өс бот бал булһа, бигерәк тә килешер ине.* М. Буранғолов. *[Һолтанбай] йәшәрен йәшәгән, егерме бот ит сыкмалы айыуҙы ҡуҫаҡлап көс-хәлгә тау түбәненә табан ауҙарып, икенсе яҡ ҡабырғаһын тунағанда бер нисә тапҡыр ултырып хәл йыйҙы, яурыны аша уралған ҡулдәкте ҡыҫыбыраҡ тартты.* Н. Мусин. *Һәләүектә беҙ атайым менән бер бот самаһы ауырлыҡтағы ҡыҙыл балыҡтар тота инек.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

♦ **Бото бер тин** баһаһы түбән, бер ни тормай. □ Дешёвый, малозначительный. *досл.* Пуд — копейка. *соотв.* Дешевле пареной репы, грош цена в базарный день. ■ *Хәрби хеҙмәткә тиклем, беҙҙең өсөн ҡыҙҙарҙың бото бер тин, тигән һымағыраҡ танау сөйөп йөрөгән егеттәр ҙә .. ҡыҙҙарға яҡыныраҡ булырға ымһынып, тансаға өйрәнәләр.* Н. Мусин.

**БОТ III** [фарс. بت] (Р.: идол; И.: idol; Т.: put) *и.*

Мәжүсиҙәр табына торған һын. □ Идол, истукан. *Ботҡа ҡарап табыныу. Өй мөйөшөндәге бот.*

**БОТ IV** [рус. < гол. *boot*] (Р.: бот; И.: boat; Т.: bot) *и.*

Бәләкәй судно. □ Бот.

**БОТА** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **бута I.**

**2.** *ҡар.* **билғау.**

**3.** Сигелгән оҙон билбау. □ Длинный вышитый кушак из ткани. *Билгә бота урау.* ■ *Аяғыңда йәшел ҡатаһы, билкәйеңдә ебәк ботаһы.* Халыҡ йырынан.

**БОТАҠ (ботағы)** [дөйөм төрки *бут-аҡ* 'ботаҡ'] (Р.: ветвь; И.: branch; Т.: budak) *и.*

**1.** Үҫемлек һабағынан сыҡҡан үҫенте. □ Ветвь, ветка; сук, сучок. *Ҡайын ботағы. Ҡороған ботаҡ. Ботаҡ ебәреү. Ботаҡ ҡырҡыу.*

■ *Тирә-як тып-тын, таң еле иҫеп үткәндә ағас ботаҡтары бер-береһенә тейеп, әкрен генә шыптырлашып ҡуя.* Н. Мусин. *Биш ырыу именлегенә бағышлап салынған биш үгеҙҙе шунда уҡ туранылар, эс-ҡарындарын ағас ботаҡтарына элеп, таш өҫтәренә һалып сыҡтылар.* З. Ураҡсин. *Йәйләүҙә елдең әҙе лә булмаһа ла, бер урында йәш ботаҡтар һығылғылап, тирбәлеп ҡуя ине.* З. Биишева. ● *Насар ағас ботаҡҡа үҫә.* Әйтем.

**2.** *диал. ҡар.* **тамыр 5.** *Ботаҡтарында шундай кешеләр бар.*

♦ **Күҙ тигәнең ботаҡ тишеге** ярһыуҙан йәки иғтибарһыҙлыҡтан бер ни күрмәгән, тапмаған кешегә ҡарата. □ Ничего не видеть *(о сильно разъярённом или увлёкшемся чем-л. человеке).* ■ *Их Ғилман, Ғилман, маңлайыңда күҙ түгел, ботаҡ тишеге һинең.* Д. Бүләков. **Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе — ботаҡ тишеге** күңелең менән тоймағас, күренеп торған нәмәгә иғтибар итмәү. □ Если не видят глаза души, то глаза на лбу видят не больше, чем дыры от сучков. ■ *[Әшрәф:] Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе — ботаҡ тишеге, тиҙәр. Ә ҡайһы төштәрәк икән ул күңел күҙе?* Г. Яҡупова.

**БОТАҠЛАНЫУ (ботаҡлан-)** (Р.: ветвиться; И.: arborize; Т.: budaklanmak) *ҡ.*

Ботаҡ ебәреү, тармаҡланыу. □ Ветвиться, разветвляться. // Ветвление, разветвление. *Ағас ботаҡланды. Алмағастар ботаҡланып үҫеп китте.* ■ *Баяғы таяҡ, үҫеп, .. ботаҡланып, япраҡланды.* Т. Ялсығол.

**БОТАҠЛЫ** (Р.: ветвистый; И.: branchy; Т.: budaklı) *с.*

Ботағы булған, ботаҡ ебәргән. □ Ветвистый; сучковатый, суковатый. *Ботаҡлы имән. Ботаҡлы таяҡ. Ботаҡлы бүрәнә.* ■ *Ялан ситендәге төптән уҡ ботаҡлы ҡарағай төбөнә барып ултырҙыҡ.* Н. Мусин. *Урман араһына индем, юғары ҡараным. Һирәк, ботаҡлы ҡарағайҙар төҙ һәм юғары күтәрелеп үҫкәндәр.* Д. Юлтый. *Тауҙың биленә еткәс, Сәлимә туҡтаны, тегендә-бында һибелеп ултырған селек, артыш ҡыуаҡтарын һайларға тотондо. Күрәһең, кеслерәк, йыуанырак ботаҡлыһын табырға тырышты.* Ә. Әминев. *Ишек алдындағы тарбағай ботаҡлы ҙур ҡарама, тамырынан ҡубып, ҡапҡаға арҡыры ауғайны.* Ә. Хәкимов.

**БОТАҠЛЫ-САТАҠЛЫ** (Р.: сучковатый; И.: snaggy; Т.: budaklı) *с.*

Ваҡ-ваҡ ботаҡлы, ботаҡлы. □ Сучковатый, суковатый. *Ботаҡлы-сатаҡлы ағас.* ■ *Ҡапҡа урынында ботаҡлы-сатаҡлы бер кәртә генә.* М. Кәрим.

**БОТАҠ-САТАҠ I (ботаҡ-сатағы)** (Р.: ветки и прутья; И.: branches and twigs; Т.: budaklar) *и. йыйн.*

Һынған, ҡырҡылған ваҡ ағас. □ Ветки и прутья. *Ботаҡ-сатаҡ йыйыу. Ботаҡ-сатаҡ ярыу. Ботаҡ-сатаҡ яғыу.* ■ *Ул [Һолтанбай] ҡоланы ҡайын төбөнә ҡыҫҡа ғына итеп арҡанланы ла көндөҙ сәй ҡайнатырға әрәмәнән йыйып килтергән ҡыу ботаҡ-сатаҡты һындырғылап өйөп, араһына ҡоро бесән тығып, ут төртөп ебәрҙе.* Н. Мусин.

**БОТАҠ-САТАҠ II** (Р.: изредка; И.: rarely; Т.: arada bir) *р.*

Һирәк-һаяҡ. □ Изредка. *Ботаҡ-сатаҡ күренеп ҡала.* ■ *Юҡ, ана, күк йөҙөн йыраҡ офоҡто телгеләп, йәнә ботаҡ-сатаҡ яләғай ялтланы.* Д. Бүләков.

**БОТАЛАУ (ботала-)** (Р.: способ украшения коромысла; И.: way to decorate a beam; Т.: süslemek) *ҡ.*

Көйәнтәне билдәле бер ысул менән биҙәү. □ Украшать коромысло *(определённым способом). Көйәнтәне боталап биҙәү.*

**БОТАЛЫУ (ботал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ботау I.** *страд. от* **ботау I.** *Боталған ағас.*

**БОТАМА** (Р.: лесная просека; И.: cutting; Т.: kesme) *и. урм.*

**1.** Урманда ағасы киҫелгән асыҡ урын. □ Лесная просека, подсека. *Ботамаға килеп сығыу.*

**2.** Ботағынан таҙартылған ағас. □ Дерево, очищенное от ветвей. *Ботама өйөү.*

**БОТАНДЫ** *и. диал. кар.* **ботама 1.** *Ботандыны һөрөү.*

**БОТАНИЗИРКА** [рус.] (Р.: ботанизирка; И.: box for collecting plants; Т.: otlar toplama sepeti) *и. а.х.*

Үҫемлектәр йыйыу тартмаһы. □ Ботанизирка. *Ботанизиркаға һалыу.*

**БОТАНИК I (ботаниғы)** [рус.] (Р.: ботаник; И.: botanist; Т.: botanikçi) *и.*

Ботаника өлкәһендә эшләгән белгес. □ Ботаник. *Ботаник булып китеү. Ботаник һөнәре.* ■ *Әшрәф иртүк Айыусы тарафына юлланғандыр, мин, Әлфиә апаның йәш ботаниктарына эйәреп, Ҡарауылтау үренә гербарий йыйырға барҙым.* Г. Яҡупова.

**БОТАНИК II** (Р.: ботанический; И.: botanical; Т.: botanik) *с.*

Ботаникаға мөнәсәбәтле. □ Ботанический. *Ботаник тәжрибәләр. Ботаник термин.*

**БОТАНИКА** [рус. < гр. *botanike* < *botane* ‘үлән, үҫемлек’] (Р.: ботаника.; И.: botany; Т.: botanik) *и.*

Үҫемлектәр тураһындағы фән. □ Ботаника. / Ботанический. *Ботаника дәреслеге. Ботаника дәресе. Ботаника кабинеты. Ботаника уҡытыусыһы. Ботаника баҡсаһы.* ■ *Ҡыш көндәрендә саңғыла йөрөргә яратам. Быйыл өсөн Ботаника баҡсаһы эргәһендәге урмандан да матур урын юҡтыр, моғайын.* «Ағиҙел», № 2, 2010. *Юлайҙы бынан бер нисә көн элек ботаника дәресендә булып үткән тәртипһеҙлек тә борсоно.* З. Биишева.

**БОТАРЛАНЫУ (ботарлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ботарлау.** *страд. от* **ботарлау.** *Ботарланған ағас.* ■ *Сарыбай, ярҙам итеп кенә ҡалманың, — ти дуҫы, — хәлдән тайған ерҙә мине ботарлап ташларға әҙер торған йыртҡыстың теше-тырнағынан тартып алдың.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Тирәк юҡ инде. Ул, олоно тураҡланып, йәнһеҙ бүрәнәләр хәленә килгән, бинийая ботаҡтары ботарланған, әйтерһең дә, тауҙа елеп йөрөгән боланды атып йыҡҡандар ҙа кәүҙәһен киҫкеләп ырғытҡандар.* Н. Мусин.

**БОТАРЛАУ (ботарла-)** [дөйөм төрки *бута-* ‘киҫкәләү’] (Р.: рубить; И.: tear asunder; Т.: parçalamak) *ҡ.*

**1.** Бот, ҡанатын, һөйәк-һаяғын айырғылау; өҙгөләү, йолҡҡолау. □ Рубить, разрубать; раздирать *(на части). Ҡош түшкәһен ботарлау. Быуын-быуынынан ботарлау.* ■ *Йола буйынса, күмәкләп, табын ҡороп дүртәүләп, бары йәнде ботарлап, былар ашҡа ултырған.* «Урал батыр». *Ҡуҙыйкүрпәс Йондоҙ ҡашҡаһын ашатырға тукталған саҡтарында, атып алған боландың, ҡоралайҙың йәки ҡуяндың тиреһен тунап ботарлай ҙа ите көймәһен өсөн тоҙлоҡ һибә-һибә шешкә ҡаҙап ҡура.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Арыҫлан, ҡорбанын ботарлап, түйғансы ашаған да китеп тә барған.* Т. Ғарипова. *Төлкөнөң ҡорҙо, бүренең һарыҡ бәрәсен йә йәш ҡоралайҙы нисек ботарлауын йөҙ тапҡыр күргәнмендер.* Ә. Хәкимов. *Малай, шул ыңғай яңынан барып йәбеште лә, ти, аждаһаның мең башын мең яҡҡа ботарлап ташланы, ти.* Әкиәттән.

**2.** Айырғылау, һындырғылау. □ Рубить, разрубать. // Рубка. *Ағасты ботарлау. Китапты ботарлау* ■ *Халыҡ быны аңлай, әлбиттә, шуға күрә Иштуған һыуһаклағыс төҙөлөшөнә теше-тырнағы менән ҡаршы торҙо, әлегә тиклем кеше ҡулы ботарламаған хозур тәбиғәт мөйөшөн һаҡлап ҡалырға тырышты.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Ҡаҙнабаев .. бер нәмәне иҫәнә төшөрә алманы: диссертацияның ике данаһын да алып киткәйне. Береһен ботарланы, ә ҡайҙа ботарланы?* Д. Бүләков. *Иптәштәрең йыҡҡан ағасты йәһәт кенә ботарлай һалып, сыбыҡ-сабығын тейешле урынға күсереп өлгөрмәнеңме, күр ҙә тор, бүрәнәләрҙе оло юлға сығарыусы кешеләрҙең ҡулын тотаһың.* Ә. Хәкимов. *Тирәк уле, ә ниндәйҙер ят ҡиәфәтле, ят кейемле, ҡояшҡа янған ялпаҡ битле әҙәмдәр, йығылған ҡорбанын талаған йыртҡыс шикелле, ағасты ботарлауын, турақлауын белә.* Н. Мусин. *Хәбибулла менән Миңлеғәле эш башланы. Улар, йыуан-йы-*

*уан бер нисә ҡайынды йығып, ботарлаған ботаҡтарын йыйып яндырғас ҡына, шешмә һыуынан ҡайнатылған сәйҙе эсергә ултырҙылар.* Я. Хамматов.

**БОТАТЫУ (ботат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ботау.** *понуд. от* **ботау.** *Ағас ботатыу.* ■ *Ә йәш хужа ана-а-а тегендә, яр буйында, әрәмә бота-та.* Н. Мусин.

**БОТАУ I (бота-)** (Р.: обрубать сучья; И.: lop off; Т.: budamak) *ҡ.*

**1.** Ҡырҡылған ағасты ботаҡтан таҙартыу. □ Обрубать сучья. // Обрубание сучьев. *Имән ағасын ботау.* ■ *Шунан һуң Сынтимер, бик йыуан керәштәрҙе бота-май-нитмәй арбаһына тейәне, ти.* Әкиәттән. *[Гәлиә] балтаһын ирҙәрсә ҡолас ташлап саба, ботаҡ төбөн шыма итеп, һалабаштың ҡуптарғанда әләкмәҫлек итеп ботай.* Н. Мусин. *Ағасты ботайҙар, осон, төбөн ҡырҡып ташлайҙар.* «Шоңҡар», № 9, 2010. *[Әсләмдең] атаһы ҡоро ағастарҙы бысып ауҙара. Ботаҡтарын ботай.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *урм.* Ағастан таҙартыу. □ Подсекать. // Подсекание, подсечь. *Урманды ботау.* ■ *Урманды ботап, сабынлыҡтар яһанылар.* «Урал», 3 февраль 2011. *Тора-бара Ситйылға яланы ҙурайҙы, ауыл тирәһе лә ялан булды. Ундағы ағастарҙы ботанылар.* Ж. Кейекбаев.

**БОТАУ II (бота-)** *ҡ. диал. ҡар.* **матау.** *Айғырҙы ботау. Арбаны ботау.*

**БОТИК (ботигы)** [рус.] (Р.: ботик; И.: Argonaut; Т.: deniz hayvanı) *и. зоол.*

Бөтә йылы диңгеҙҙәрҙә һәм урта диңгеҙҙә йәшәүсе һигеҙаяҡтар отрядына ҡараған хайуан; аргонавт, аргонавт-һигеҙаяҡ. □ Ботик (лат. *Argonauta*). *Ботик ҡабырсаҡтары. Диңгеҙҙәге ботиктар.*

**БОТИЛЬОН** [рус. < фр. *botte* 'итек'] (Р.: ботильон; И.: kind of shoes; Т.: ayakkabı) *и.*

Бәкәлде ҡаплап торған, туфлиҙан бейегерәк, үксәле ҡатын-ҡыҙ аяҡ кейеме. □ Ботильоны.

**БОТИНКА** [рус. *ботинки* < фр. *bottinel* < *botte* 'итек'] (Р.: ботинки; И.: boot; Т.: bot) *и.*

Ҡыҫҡа ҡуныслы, баулы, төймәле йәки молниялы аяҡ кейеме. □ Ботинок, ботинки. *Балалар ботинкаһы. Саңғы ботинкаһы. Ботинка кейеү. Ботинка һатып алыу.* ■ *Бына бәлә, рәйес һүҙен һис башлай алмай: танауын тарта, ботинка баштарын бер-береһенә ышҡый, әйтерһең дә, ауыл юҡлығына ул ғәйепле.* Ә. Әминев.

**БОТКҮНӘК (боткүнәге)** *и. диал. ҡар.* **ботлоҡ II.**

**БОТЛАН** [ғәр. بطلان] (Р.: ложный; И.: false; Т.: yalan) *с. иҫк.*

Ялған, яңылыш. □ Ложный, ошибочный. *Ботлан булыу.*

**БОТЛАП** (Р.: пудами; И.: by poods; Т.: 16,38 kiloluk bir Rus ağırlık ölçüsü) *р.*

Бото-бото менән. □ Пудами. *Ботлап таратыу. Ботлап һатып алыу.*

**БОТЛАУ I (ботла-)** (Р.: защищать; И.: defend; Т.: korumak) *ҡ.*

*Кемдеңдер* эш, ҡылығын кеше алдында яҡлау, аралау, ҡурсалау. □ Защищать *кого-л.*, заступаться. *Бәләкәйҙәрҙе ботлау. Ҡуркма, ботларбыҙ һине.*

**БОТЛАУ II (ботла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡатлау I.** *Еп ботлау.*

**БОТЛОҠ I (ботлоғо)** (Р.: пудовка; И.: vessel of one pood capacity; Т.: bir kap türü) *и.*

Бер бот (II) нәмә һыйышлы һауыт. □ Пудовка *(сосуд вместительностью в 1 пуд). Ботлоҡҡа һалыу.*

**БОТЛОҠ II (ботлоғо)** (Р.: сосуд; И.: vessel made from animal skin; Т.: kap türü) *и. этн.*

Малдың артҡы бот тиреһенән тегелгән күн һауыт. □ Сосуд, изготовленный из шкуры задних конечностей лошади или коровы. *Ботлоҡтар тегеү.*

**БОТЛОҠ III (ботлоғо)** (Р.: боковые ремни шлеи; И.: breast band straps; Т.: koşum takımında yan kayışlar) *и.*

Ышлыяның янбаштан ике яҡлап төшкән ҡайыштары. □ Боковые ремни шлеи. *Ботлоҡ шартлап өҙөлөп китте.*

**БОТЛОҠ IV (ботлоғо)** (Р.: специальное место у печки для вещей; И.: special place by

a hearth; T.: eşyalar için soba yanındaki bir yer) *и. диал.*

Мейес янында ваҡ-төйәк ҡуйыр өсөн эшләнгән ҡыуыш. □ Специальное место у печки для мелких вещей.

**БОТНЕТ** [рус. < ингл. *robot* 'робот' + *network* 'селтәр'] (Р.: ботнет; И.: botnet; T.: botnet) *и. инф.*

Үҙ аллы программалы бер нисә хосттан торған компьютерҙар селтәре. □ Ботнет.

**БОТОҠ** *р. диал. ҡар.* **бөтөнләй 1.** *Ботоҡ онотоп киткәнмен. Ботоҡ һөйләмәнемсе.*

**БОТОҠ ТЕРҺӘК (терһәге)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Терһәк ырыуы аймағы. □ Бутук терсяк *(название родового подразделения башкир рода терсяк). Ботоҡ терһәк аймағы башҡорто.*

**БОТСА** *и. диал. ҡар.* **ботлоҡ II.** *Ботса тегеү. Ботсаға һалыу. Ботсала йөрөтөү.*

**БОТ-САТ** (Р.: область ляжек и паха; И.: groin; T.: kemer pervazı) *и. йыйн.*

Бот (I) менән сат тирәһе. □ Область ляжек и паха. *Бот-сатыңды йыйып йөрө.*

**БОТ-САТ КИЛЕҮ (бот-сат кил-)** (Р.: раскорячиться; И.: crouch; T.: biçimsiz bir tarzda açmak) *ҡ.*

Аяҡ-ҡулды тарбанлатыу. □ Раскорячиться. ■ *Бот-сат килеп ҡолап китеү.*

**БОТУЛИЗМ** [рус. < лат. *botulismus*] (Р.: ботулизм; И.: botulism; T.: gıda zehirlenmesi) *и. мед.*

Ботулизм бактериялары токсины менән зарарланған ашамлыҡтан ағыуланыу. □ Ботулизм. *Табип ботулизм диагнозы ҡуйған.*

**БОТУЛОТОКСИНДАР** [рус.] (Р.: ботулотоксины; И.: botulism toxins; T.: botülizm toksinleri) *и. мед.*

Ботулизм бактериялары бүлгән токсин, ағыу. □ Ботулотоксины. *Ботулотоксиндар менән ағыуланыу.*

**БОТФОРТ** [рус. < фр. *bottes fortes*] (Р.: ботфорт; И.: jackboots; T.: ayakkabı) *и.*

Киң ҡуныслы бейек итек. □ Ботфорт.

**БОУЛИНГ** [рус. <ингл. *bowling*] (Р.: боулинг; И.: bowling; T.: bowling) *и.*

Теҙеп ултыртылған ҡыҫҡа таяҡтарҙы (кеглиҙарҙы) шар менән һуғып уйнай торған уйын. □ Боулинг.

**БОХАР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй, ҡатай ырыуҙары аймағы. □ Бухар *(название родового подразделения башкир племён ай, катай). Бохар аймағы башҡорто.*

**БОХАР БОРСАҒЫ** (Р.: фасоль; И.: haricot; T.: fasulye) *и. бот.*

Көньяҡта үҫтерелә торған оҙон һабаҡлы, аҡһыл һары йәки ҡыҙғылт күк сәскәле оҙонсараҡ орлоҡло үҫемлек. □ Фасоль (лат. *Phaseolus*). *Бохар борсағы сәсеү. Бохар борсағын ҡушып турама эшләү. Бохар борсағынан аш бешереү.*

**БОХАР ҠЫНАҺЫ** (Р.: бальзамин; И.: balsam; T.: kına çiçeği) *и. бот.*

Сит-сите саҡ ҡына киртләсләнеп торған оҙонсараҡ япраҡлы, быуынтыҡ-быуынтыҡ итләс ҡыҙыл һабаҡлы, ҡыҙыл сәскәле бүлмә гөлө; ҡына гөлө. □ Бальзамин (лат. *Impatiens*). *Бохар ҡынаһы үҫтереү. Бохар ҡынаһы сәскә атҡан.*

**БОХАР СЕЙӘҺЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **күгән II.** *Бохар сейәһе ҡыуағы. Бохар сейәһе емеше. Бохар сейәһе ҡайнатмаһы.*

**БОХАР СЕЛЕГЕ** (Р.: акация; И.: acacia; T.: akasya) *и. бот.*

Ҙур булып үҫә торған селеккә оҡшаш ағас; акация. □ Акация (лат. *Acacia*). *Бохар селеге япраҡтары. Бохар селеге ботағы. Баҡсала бохар селеге үҫә.*

**БОХАР ТАЛЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **селек.** *Бохар талы ҡыуағы. Бохар талынан һепертке эшләү.*

**БОХ-БОХ** (Р.: мох-мох; И.: word for beckoning horses; T.: atları çağırma ünlemi) *саҡ. диал.*

Ат саҡырғанда ҡулланылған һүҙ. □ Мох-мох *(возглас подзыва лошадей). Бох-бох тип ат саҡырыу.*

**БОХОЛДАТЫУ (бохолдат-)** *ҡ. диал. ҡар.* **һимертеү.**

**БОҺАЛАҠТАЙ** (Р.: крупный; И.: robust; Т.: kocaman) *с. диал.*

Ҙур кәүҙәле, уҫлаптай. □ Крупный, здоровенный, несуразно большой. *Боһалаҡтай малай. Боһалаҡтай ул үҫтерә.*

**БОҺОЛДАҠ (боһолдағы)** (Р.: дымарь; И.: smoker; Т.: körük) *и. диал.*

Төтәткес. □ Дымарь, окуриватель. *Бер аҙға ғына боһолдағыңды биреп тор әле.*

**БОҺОЛДАТЫУ (боһолдат-)** *ҡ. диал. ҡар.* **төтәҫләү 1.** *Солоҡ ҡорттарын боһолдатыу. Боһолдатып айыуҙы өңөнән сығарыу.*

**БОШАЛАНДЫРЫУ (бошаландыр-)** (Р.: беспокоить; И.: disquiet; Т.: endişelendirmek) *ҡ.*

**1.** Нык бошондороп, тынысһыҙлау. □ Беспокоить, тревожить. *Уйҙар бошаландыра. Был мәсьәлә мине бик бошаландыра.*

**2.** *эй. ф. ҡар.* **бошаланыу.** *Төндә бошаландыра. Тыуған яғымдан ситкә китһәм бошаландыра башлай.*

**БОШАЛАНЫУ (бошалан-)** (Р.: беспокоиться; И.: be anxious; Т.: endişelenmek) *ҡ.*

Нык бошоноп, тынысһыҙланыу; борсолоу. □ Беспокоиться, тревожиться. // Беспокойство, тревога. *Балаһы өсөн бошалана. Һаулығы өсөн бошалана.* ■ *Емеш ҡулдәгенә йәбешкән уландарҙе ҡаға-ҡаға тороп баҫты: «Уй алла, ҡалай эҫе булып китте... Мырҙам да бошаланып бөттө... Уға һөт эсереп, йоҡлатып сығайым әле».* З. Биишева.

**БОШАМАНЛАНЫУ (бошаманлан-)** *ҡ. ҡар.* **бошонҡоланыу.** *Бошаманланып йөрөү. Бошаманланып йоҡлай алмай ятыу.*

**БОШМАН I** *с. диал. ҡар.* **бошонко.** *Бошман хәлдә йөрөү. Бошман ҡиәфәт.*

**БОШМАН II** (Р.: название одного из родов башкир; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә ингән башҡорт ырыуының исеме. □ Бушман *(название башкирского рода). Мин бошман башҡорто булам.* ■ *Ырыҫкол үҙенең ышаныслы кешеләрен Эйек, Һүрәм, Себенле, Юшатыр буйҙарында йәшәгән үҫәргәндәргә, сәңкемдәргә, бошмандарға, түңгәүерҙәргә лә ебәреп ҡараны.* З. Ураҡсин.

**БОШМАҪ** (Р.: беспечный; И.: carefree; Т.: ihmalkar) *с.*

Бер нәмәгә лә иҫе китмәгән, көйә белмәгән, вайымһыҙ; моңһоҙ. □ Беспечный, беззаботный. *Бошмаҫ халыҡ.* ■ *[Шәүрә] гәҙәтенсә, бик белдекле кеше булып, әкиәт һөйләгәндәй еңел, бошмаҫ, аптырамаҫ тауыш менән һөйләп алып китте.* З. Биишева.

**БОШОҒОУ (бошоҡ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бошоноу.** *Бошоғоп йөрөү. Бошоғоп йоҡлай алмай ятыу.* ● *Һуҡырға тошоҡма, тошоҡһаң бошоҡма.* Мәҡәл.

**БОШОНДОРОУ (бошондор-)** (Р.: наводить уныние; И.: depress; Т.: içi kararmak) *ҡ.*

**1.** Күңелһеҙ уй-тойғоға төшөрөү. □ Наводить уныние, тоску. *Хәбәр әсәне бошондорҙо.*

**2.** *ҡар.* **борсоу I, 1.** ■ *[Зилбәрҙе] һөйгәненең үтә саялығы ғына бошондора, уны күргән һайын йөрәге дөп-дөп тибә, был көн иң бәхетле, иң шатлыҡлыһы була.* З. Ураҡсин. *Байрас та был ваҡытта, ағаһына тиҫерҙәй булып ҡарап, өләсәһе янында тора, ул да үҙенсә ошо минутта үҙен ҡаты бошондорған бер һорауға яуап эҙләй ине.* З. Биишева.

**БОШОНҠО** (Р.: грустный; И.: sad; Т.: üzgün) *с.*

Күңелһеҙ уй-тойғоло; бойоҡ. □ Грустный, унылый. *Бошонко ҡиәфәт. Бошонко булыу.* ■ *Гәҙәттә бер нимәгә лә иҫе китмәгән вайымһыҙ Шәүрә лә бөгөн бошонко, баҫалҡы күренә.* З. Биишева. *[Кәримә:] Ниңә улай бошонко күренәһең, ҡыҙым?* Н. Мусин.

**БОШОНҠОЛАНЫУ (бошонҡолан-)** (Р.: грустить; И.: be sad; Т.: üzülmek) *ҡ.*

Бошонко хәлгә төшөү. □ Грустить, унывать. *Бошонколанып йөрөү. Бошонколанып*

*китеү.* ■ *Закир бошонҡолаnып түргә уҙҙы.* З. Биишева.

**БОШОНҠОЛОҠ (бошонҡолоғо)** (Р.: грусть; И.: sadness; Т.: üzüntü) *и.*

Бошонҡо хәл. □ Грусть, уныние. *Күңел бошонҡолоғо. Бошонҡолоҡ баҫыу.* ■ *Ҡыҙҙың үҙ эргәhенә килеп, шулай төпсөнөп hораша башлауы Ғәлимдең күңел бошонҡолоғон ҡапыл таратты.* Н. Мусин. *[Шәүрә] унан үҙ ҡылығына hис тә хас булмаған бошонҡолоҡ менән ауыр итеп көрhөнөп ала.* З. Биишева.

**БОШОНОУ (бошон-)** (Р.: испытывать грусть; И.: feel sad; Т.: üzülmek) *ҡ.*

Күңелhеҙ уй-тойғоға бирелеү; күңелhеҙләнеү. □ Испытывать грусть, унывать. *Юҡбарға бошоноу. Бошоноп уйланыу.* ■ *Абыстай уйланып, аҙ ғына бошоноп ултырҙы ла тағы йәнләнеп hүҙгә кереште.* З. Биишева. *«Юҡты бушҡа бушатып ят инде», — тип бошоноп ҡуйҙы Якуп.* М. Кәрим.

**БОШОРҒОЛАНЫУ (бошорғолан-)** (Р.: беспокоиться; И.: be uneasy; Т.: endişelenmek) *ҡ.*

**1.** Тыныслыҡ тапмай, маҙаhыҙланыу; ныҡ бошоноу. □ Беспокоиться. *Бошорғоланып йоҡлай алмай ятыу.* ■ *Батша ни эшләргә лә белмәй, бик бошорғолана.* Әкиәттән.

**2.** Кәйефhеҙләнеү, көйhөҙләнеү. □ Быть не в настроении, хандрить; капризничать. *Бала бошорғоланып тора. Хужаның бошорғоланыуын күреп хеҙмәткәрҙәр ҙә тынып ҡалды.*

**БОШОРОУ (бошор-)** (Р.: наводить грусть; И.: depress; Т.: üzüntü vermek) *ҡ.*

Күңелhеҙ ауыр тойғоға төшөрөү; бошондороу. □ Наводить грусть, уныние. *Йонсоу көндә ауырыуҙы төрлө уйҙар бошора башлай.*

♦ **Эс(те) бошороу** 1) күңелhеҙ, ауыр тойғоға төшөрөү. □ Наводить уныние, грусть; угнетать, подавлять. *Көҙгө ямғыр эсте бошора. Төрлө уйҙар эсте бошора.* ■ *Һуңғы дәрестәр эс бошорғос яй үтә.* Яр. Вәлиев. *Сыуал артында сиңерткәнең өҙөп-өҙөп сырылдауы эс бошорғос тынлыҡты боҙа.* Н. Мусин; 2) асыуға тейеү, йәнде көйҙөрөү. □ Раздражать. ■ *Ләкин Тимер йоҡлай алманы. Берҙән, яңы дәрттәр ашҡындыра уны, икенсенән, Шәрәфтең ҡаты хырылдауы эсен бошора.* Б. Бикбай.

**БОШОУ (бош-)** (Р.: унывать; И.: lose heart; Т.: üzülmek) *ҡ.*

Күңелhеҙ, ауыр тойғоға төшөү; хәсрәтләнеү, ҡайғырыу. □ Унывать, горевать. // Уныние. *Бошоп та бирмәү.* ■ *Ҡустыңдың танау аҫтынан Морапшалар ҡыҙын тартып алып яталар, ә hин бер боҫтоҡ та бошмайhың.* Һ. Дәүләтшина. *Ул затлы тирене кейгән булмағас, ҡайғыра торғаны юҡ, байҙар бошhон инде, — тип hүҙгә ҡушылды Иштән ҡарт.* З. Ураҡсин. *Әгәр алдай икән тормош, асыуланма, бошма hин, ҡайғылы көн менән килеш, шат көн килер, ышан hин.* Б. Бикбай.

♦ **Эс бошоу** 1) күңелhеҙ, ауыр тойғоға төшөү; яманhыулау. □ Грустить, печалиться. *Һине күрмәй торhам, эсем боша.* ■ *Яҙғы йәшел ерҙең төҫө уңғанын, hыуыҡ hуғып, урмандарҙың туңғанын күреп күңелең, эсең бошор, hарғайып, япраҡтар төшөп ерҙә hулығанын.* М. Аҡмулла. *Байрас та инде, эсе бошоп, урамға hалмаҡ ҡына ябырылған ҡар күбәләктәренә ҡарап тынып ҡалды.* З. Биишева. *Миңлегөл иhә, ҡайhы саҡта, яңғыҙ ҡалдымы, эсе бошоп киткән мәлдәрҙә, үҙ hандығын аса ла йәшергән еренән Ромадның бүләген алып йөҙөктө кейә.* Н. Мусин; 2) асыу килеү, йән көйөү. □ Раздражаться, быть недовольным.

**БОЦМАН** [рус. < гол. *bootsman* < *boot* ‘кәмә’, *man* ‘кеше’] (Р.: боцман; И.: boatswain; Т.: başporsun) *и. хәрб.*

Диңгеҙ флотында кесе командирҙар составынан караптың хужалыҡ эштәре командаhына етәкселек иткән кеше. □ Боцман. / Боцманский. *Боцман булып хеҙмәт итеү.*

**БОЧКА** [рус.] *и.*

**1.** *ҡар.* **мискә.**

**2.** Юғары пилотаждың береhе. □ Бочка *(высший пилотаж).*

**БӨ** (Р.: му; И.: moo; Т.: böğrme) *оҡш.*

Һыйыр малы баҡырғанды белдергән һүҙ. □ Му *(подражание мычанию коровы). Бө, — тип баҡырыуыш һыйырҙар көтөүҙән ҡайта башланы.*

**БӨБӘЛӘК (бөбәләге)** *и. диал. ҡар.* **бөгәләк 1.** *Йылҡылар бөбәләк безелдәүенә сыҙай алмай тыпырсына.*

**БӨГЕЛЖӘ** *и. диал. ҡар.* **ырғаҡ I.**

**БӨГӨЛ I** (Р.: извилина; И.: bend; Т.: menderes) *и.*

Һыуҙың, юлдың боролған ере; боролма. □ Извилина, извив, изгиб, излучина, лука *(реки). Йылға бөгөлө.* ■ *Аҡтауҙың иң осонда, Иҙел бөгөлөндә торған һағауылдар аръяҡта, Күгиҙел тарафында бик ҙур саң күтәрелеүен хәбәр итте.* З. Ураҡсин. *Таштуғай ҙа буйы бөгөл-бөгөл, бөгөлдәре һайын аҡ өйрәк.* Халыҡ йырынан. *Баҫҡыстың бер бөгөлөн үткәс, Емеш ҡапыл ҡаршыла үҙенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған бер кескәй ҡыҙҙы күреп, ҡысҡырып ебәрә яҙҙы.* З. Биишева. *Йылға үҙенең буйрак тулҡындарында алыҫҡа. Ырымбур далаһының әрем еҫе томраһын быуландырып аҡҡан Һаҡмар ҡосағына ашыҡҡан бүрәнәләрҙе бөгөлө һайын ҡороға сығарып өйөп киткән.* Ш. Янбаев.

**БӨГӨЛ II** (Р.: изогнутый; И.: bent; Т.: eğri) *с.*

Бөгөлөп торған, бөгөлөп киткән. □ Изогнутый, извилистый. *Бөгөл һуҡмаҡ. Бөгөл керпектәр.* ■ *Ә инде был ап-аҡ һылыу йөҙ, йондоҙ кеүек балҡып торған аҡыллы ҙур ҡара күҙҙәр, ҡуйы бөгөл керпектәр, ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар, көслө ихтыярҙы, тәрән аҡылды һөйләп торған ныҡ ҡымтылған алһыу ирендәр.* З. Биишева.

**БӨГӨЛ III** *и. анат. диал. ҡар.* **бөгәр I, 1.**

**БӨГӨЛМӘ I** *и. диал. ҡар.* **бөгөл I.** *Юл бөгөлмәһе. Йылға бөгөлмәһе. Һуҡмаҡ бөгөлмәһе.* ■ *Яр буйындағы бөгөлмәлә кәмә күренде.* М. Тажи.

**БӨГӨЛМӘ II** *и. диал. ҡар.* **сөмгөл.** *Һыу бөгөлмәһе. Бөгөлмәлә һыу инеү.*

**БӨГӨЛМӘК (бөгөлмәге)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Урамда бөгөлмәктәр үҫә. Бөгөлмәк сәскә атҡан.*

**БӨГӨЛМӘЛЕ** (Р.: гибкий; И.: flexible; Т.: esnek) *с.*

**1.** Бөгөлә торған. □ Гибкий, гнущийся. *Бөгөлмәле бил. Бөгөлмәле тал сыбығы.* ■ *Ҡулдарыма алһам һине, билдәрең бөгөлмәле.* Н. Нәжми.

**2.** *ҡар.* **бөгөмлө.** *Бөгөлмәле вал. Бөгөлмәле торба.*

**БӨГӨЛМӘЛЕ-ҺЫҒЫЛМАЛЫ** (Р.: гибкий; И.: lissom; Т.: esnek) *с.*

**1.** Бөгөлөп-һығылып торған. □ Гибкий. *Бөгөлмәле-һығылмалы бил.*

**2.** Бөгөлөп торған. □ Коленчатый. *Бөгөлмәле-һығылмалы торба.*

**БӨГӨЛӨП-ҺЫҒЫЛЫП** (Р.: сгибаясь; И.: bending; Т.: büksülerek) *р.*

**1.** Бер тегеләй, бер былай бөгөлөп; эйелеп-бөгөлөп. □ Сгибаясь, пригибаясь. *Бөгөлөп-һығылып бейеү. Бөгөлөп-һығылып гармун уйнау.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне, икһеҙ-сикһеҙ булып йәйелеп ятҡан диңгеҙ аша бөгөлөп-һығылып торған быяла күпер ҡалынды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Нескә, оҙон тал сыбыҡтары уның [Айҙарҙың] бәләкәс бармаҡтарында, ебәк таҫма урынына, бөгөлөп-һығылып уйнай.* М. Кәрим. *Ҡолас ҡыҙҙар йылғаларҙан бөгөлөп-һығылып һыу ала.* Халыҡ йырынан.

**2.** *ҡусм. Кемдеңдер* алдында ярамһаҡлыҡ менән. □ Заискивая *перед кем-то,* льстя *кому. Хужалар алдында бөгөлөп-һығылып йөрөү.* ■ *Алтынбайҙың бөгөлөп-һығылып баш эйеүе нисектер бик йәпһеҙ килеп сыҡты.* З. Ураҡсин.

**БӨГӨЛӨҮ (бөгөл-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бөгөү 1—4.** *страд. от* **бөгөү 1—4.** *Сите бөгөлгән яулыҡ. Ҡайындан бөгөлгән сана табаны. Сите ҡайып бөгөлгән ҡульяулыҡ.* ■ *Алдар атаһының янына олаталарынан ҡала килгән, үҙен дә әжәлдәрҙән һаҡлап алып ҡалған булат ҡылысты, артыш-*

*тан бөгөлгән ян һәм еҙ айкыслы укты һалды.* Н. Мусин. *Сағандан бөгөлгән зәңгәр дуға ла, күн көплөгән ҡамыт та, еҙле ыңғырсаҡ та үҙәк өҙөп тороп ҡалды.* М. Кәрим.

**2.** Һығылып, ҡәкре хәлгә килеү; ҡәкрәйеү. □ Гнуться. *Елгә ағас бөгөлә.* ■ *Бөгөлөп кенә, һығылып ҡына үҫә икән һыу буйҡайҙарының талдары.* Бәйеттән.

**3.** Быуын тәңгәленән ҡуҙғалыу. □ Гнуться, сгибаться. *Ҡулдар бөгөлгән.*

**4.** Ос йәки баш яҡ менән аҫҡа табан иңкәйеү; эйелеү. □ Гнуться, сгибаться. □ *Бөгөлөп һыу алыу. Бөгөлөп түтәл утау.*

**5.** Тура йүнәлеште үҙгәртеү *(һыуға, юлға ҡарата).* □ Извиваться, изгибаться *(о реке, дороге и т. п.). Ҡыуаҡтар араһында юл бөгөлә.*

**6.** *күсм.* Ауыр тәьҫиргә сыҙамай бирешеү. □ Поддаваться, сдаваться, предаваться *чему. Ауырлыҡтарға бөгөлөү.*

♦ **Бишкә бөгөлөү** ярамһаҡланып, өлтөрәп тороу. □ Угодничать. *Хужа алдында бишкә бөгөлөү.* **Бөгөлөп төшөү** 1) ҡәкрәйеп төшөү. □ Наклоняться, нагибаться, гнуться. *Ҡартайып бөгөлөп төшөү.* ■ *Ир-егеткәйҙәрҙе, йәше үтһә, бөгөлөп тә төшмәҫ, тимәгеҙ.* Р. Ғарипов; 2) сараһыҙ булып бирешеү. □ Поддаваться, сдаваться. *Ауырлыҡтарҙан бөгөлөп төшөү.* ■ *Ә оҙон буйлы, ҡаҡса яңаҡлы Һөнәрсе тағы ла нәҙегәйеп, дуға кеүек бөгөлөп төшкән.* З. Биишева. *Бирешмәйем, тип йөрөп ҡарайһың да бөгөлөп төшәһең шул ҡай саҡта.* Р. Солтангәрәев.

**БӨГӨЛӨҮСӘН** (Р.: гибкий; И.: supple; Т.: esnek) *с.*

Бөгөлә торған, бөгөлмәле. □ Гибкий, гнущийся. *Бөгөлөүсән сыбыҡ.* ■ *Арҙаҡлы ҡурайсы ҡыш көнө саңғы менән урманға сығып китә, ләкин муйыл һымаҡ тиҙ бөгөлөүсән ағас таба алмай ҡайта.* «Башҡортостан», 20 ноябрь 2010.

**БӨГӨЛӨҮСӘНЛЕК (бөгөлөүсәнлеге)** (Р.: гибкость; И.: flexibility; Т.: esneklik) *и.*

Бөгөлөү һәләте. □ Гибкость. *Тимерҙең бөгөлөүсәнлеге. Металдың бөгөлөүсәнлеге.*

**БӨГӨЛӨШ** (Р.: колено в танце; И.: figure; Т.: figür) *и.*

**1.** Тегеләй-былай бөгөлгән хәрәкәт. □ Колено, коленце *(в танце, пляске). Бер нисә бөгөлөш яһау.*

**2.** *диал. ҡар.* **бөгөл I.** *Һыу бөгөлөшө. Юл бөгөлөшө. Һуҡмаҡ бөгөлөшө.*

**3.** *күсм.* Нескә боролоштар, үҙгәрештәр. □ Изгибы, тонкие оттенки; переходы. *Сәйәси бөгөлөштәр.*

**БӨГӨЛӘ-ҺЫҒЫЛА** *р. ҡар.* **бөгөлөп-һығылып.** *Бөгөлә-һығыла көлөү.* ■ *Ҡарсыҡ .. биленә тиклем бөгөлә-һығыла, беҙгә изге теләктәр теләп, оҙатып ҡала.* Д. Юлтый. *Маһинур тайсаһында баш ҡоҫоп ултырған игендәргә, аунап-тәгәрәп бешеп ятҡан ҡарбуз-ҡауындарға, тәлгәштәре ана түгеләм, бына түгеләм тип торған йөҙөмдәргә ҡарай ҙа, ауыр ҡәүҙәһен һәмгелдәтә-һәмгелдәтә, бөгөлә-һығыла илай.* Т. Ғарипова.

**БӨГӨМ** (Р.: изгиб; И.: bend; Т.: kıvrım) *и.*

**1.** Бөгөлөп торған урын. □ Колено, изгиб. *Торба бөгөмө.*

**2.** *ҡар.* **бөгөл I.** *Йылғаның бөгөмө. Юл бөгөмө.*

**3.** *диал. ҡар.* **бөкләм.**

**БӨГӨМЛӨ** (Р.: коленчатый; И.: cranked; Т.: kıvrımlı) *с.*

**1.** Бөгөмө (1) булған, бөгөлөп торған. □ Коленчатый. *Бөгөмлө вал. Бөгөмлө торба.*

**2.** *ҡар.* **бөкләмле.**

**БӨГӨН** (Р.: сегодня; И.: today; Т.: bugün) *р.*

**1.** Ошо, әлеге көн; был көн. □ Сегодня. *Бөгөн булған хәл. Бөгөн ҡайтам. Бөгөн эшләп ҡуям.* ■ *Сәрбиямал әбей бөгөн ғәҙәттән тыш күңелле, кәрәккән һәм кәрәкмәгән урында ла кеткелдәп, бөтә ҡаҡса кәүҙәһе менән һелкенеп көлә.* Н. Мусин. *Бөгөн көн иртәндән томра, һауа тын, япраҡ һелкенерҙәй ҙә ел юҡ.* З. Ураҡсин. *Оялманы Гөлбаныу, керпектәрен элеккеләй аҫҡа төшөрмәне: ул бит бөгөн ауылдың бөтә егеттәрен дә үҙенә ғашиҡ итергә килгән!* Т. Ғарипова. *Бөгөн иртән Ғәйзулла йылмайҙы, көн ҡояшлы килер әле, —*

*тип шаяртыусылар ҙа табылған, әлбиттә.* Д. Бүләков. ● *Бөгөн менән көн бөтмәй.* Әйтем.

**2.** Әлеге ваҡыт; хәҙер. □ Теперь, ныне, нынче. ■ *Киләһе көндәребеҙҙе асығыраҡ төҫмөрләргә теләһәң, тарихҡа күҙ һал, бөгөн һәр аҙымыңды уйлап баҫ, айыҡ баш менән килер йылдарҙы байҡа, әҙәм балаһы.* Н. Мусин.

♦ **Бер бөгөн түгел** гел генә, һәр ваҡыт. □ Не один раз, всегда, постоянно. ■ *Ә ел ысынлап ҡояш ҡалҡҡан яҡтан, ул шул тарафтан йыш иҫә, бер бөгөн түгел.* Б. Рафиков. **Бөгөн булһын** бөгөн дә, әле лә, һаман да. □ Всё ещё. *Ул хәлдәр бөгөн булһын иҫемдән сыҡмай.* **Бөгөн бында, иртәгә тегендә** бер урында ғына тороп сыҙамаған, йөрөп ятҡан *(еңел-елпе кеше тураһында).* □ Сегодня здесь, завтра там *(о легкомысленном, беззаботном человеке).* **Бөгөн килеп** ошо көнгә еткәс. □ Только что. *Бөгөн килеп ул минән ҡағыҙ таптыра.*

**БӨГӨНГӨ** (Р.: сегодняшний; И.: today's; Т.: bugünkü) *с.*

**1.** Был, ошо көнгө. □ Сегодняшний. *Бөгөнгө тапшырыу. Бөгөнгө кис.* ■ *Бөгөнгө төндөң ғәҙәттән тыш кисерештәре, ҡатмарлы уйҙары баҫымында етди һәм үтә баҫалҡы кеше булып өлгөргән Байрас ирҙәрсә сабыр, ауыр атлап түргә уҙҙы.* З. Биишева. «*Яҡшымы, насармы — бөгөнгө көнгә тиклем йәшәнек бит, артабан да йәшәрбеҙ*», — *тине быға тиклем өндәшмәй ултырған сөгөлдөрсө Нәғимә.* Ә. Әминев. ● *Бөгөнгө кәрәгеңде иртәгәгә кәрәгеңдән алда әҙерлә.* Мәҡәл. *Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма.* Мәҡәл.

**2.** Хәҙерге ваҡыттағы; хәҙерге. □ Сегодняшний, нынешний, теперешний, современный. *Бөгөнгө йәмғиәт. Бөгөнгө йәштәр.* ■ *Үҙебеҙҙең бөгөнгө яҙмышты уйлап, Новиковтар менән барасаҡ билдәһеҙ ауыр көндәрҙе иҫкә төшөрөп, күңел нескәрҙе.* Д. Юлтый. *Тал төбөнә ултырып, ҡарайым бөгөнгө донъяға.* Ш. Бабич. *Ҡая моронона тамырҙарын батырған меңйәшәр солоҡ, бөгөнгө хәлде асығыраҡ төҫмөрләү өсөн, тарихҡа күҙ һалырға кәңәш иткәйне бит.* Н. Мусин. ● *Бөгөнгө аҡыл иртәгәгә ярап та етмәй.* Мәҡәл.

**БӨГӨНГӨЛӨК** (Р.: достаточный на сегодня; И.: sufficient for today; Т.: bugünlük) *с.*

Бөгөнгә етерлек. □ Достаточный на сегодня. *Бөгөнгөлөк аҙыҡ.*

**БӨГӨНГӨЛӘЙ** (Р.: как сегодня; И.: like today; Т.: bugünkü gibi) *р.*

Бөгөнгө кеүек. □ Как сегодня. ■ *Быны бер саҡ, балыҡсылар ауылы янындағы тымыҡ ҡултыҡҡа, тап быны бөгөнгөләй, аҡ елкәнен елберҙәтеп, диңгеҙ ҡарабы килеп туҡтай.* З. Биишева.

**БӨГӨНГӘ** (Р.: на сегодня; И.: to date, at present; Т.: bugünlük) *р.*

Бөгөнгө көн үткәнсә. □ На сегодня, на сегодняшний день. *Бөгөнгә хуш булып тор. Бөгөнгә уҡырға китабыңды биреп тор әле.* ■ *[Насир:] Бынау осо күренгән таштарҙы соҡоп сығарайым әле, бөгөнгә шул етер ҙә, бәлки.* З. Ураҡсин.

**БӨГӨНГӘСӘ** (Р.: до сегодняшнего дня; И.: till today; Т.: bugüne kadar) *р.*

Бөгөнгә тиклем. □ До сегодняшнего дня. *Бөгөнгәсә бесәнгә төшмәгәндәр.*

**БӨГӨН-ИРТӘН** (Р.: на днях; И.: one of these days; Т.: bugün yarın) *р.*

Ошо көндәрҙә, яҡын арала. □ На днях. *Һыйыр бөгөн-иртән быҙауларға тора. Бөгөн-иртән ураҡҡа төшәбеҙ.*

**БӨГӨНЛӨ-ИРТӘЛЕ** *р. ҡар.* **бөгөн-иртән.** *Бөгөнлө-иртәле һалдатҡа алынырға торабыҙ.*

**БӨГӨНЛӨК** (Р.: достаточный на сегодня; И.: sufficient for today; Т.: bugünlük) *с.*

Бөгөнгә етерлек. □ Достаточный на сегодня. *Бөгөнлөк ризыҡ. Бөгөнлөк эш.*

**БӨГӨҢКӨРӘҮ (бөгөңкөрә-)** (Р.: слегка сгибать; И.: bend slightly; Т.: bükmek) *ҡ.*

Бөгә биреү, тағы бер аҙ бөгөү *(ҡар.* **бөгөү***).* □ Слегка сгибать, гнуть. *Йәйәңде бөгөңкөрәй бир. Көйәнтәһен бөгөңкөрәй бирҙе. Билен бөгөңкөрәп һыу ала.*

**БӨГӨҮ (бөк-)** [дөйөм төрки *бүк-* 'бөгөү'] (Р.: гнуть; И.: bend; Т.: bükmek) *ҡ.*

**1.** Төҙҙән кәкре хәлгә килтереү; кәкрәйтеү. □ Гнуть, сгибать, изгибать. // Сгибание, изгибание. *Карама бөгөү. Муйыл бөгөү. Сана бөгөү.* ■ *Туҙҙан тауҙа дегет ҡайнаттылар, күмер үртәнеләр, дуға бөктөләр.* Н. Мусин. *Һары талды ла бит ел-дауыл аяуһыҙ ҡағаһуға ергә бөгә.* З. Биишева. ● *Ағасты йәш сағында бөк.* Мәҡәл.

**2.** Быуын тәңгәленән ҡуҙғатыу. □ Сгибать. // Сгибание. *Бармаҡты бөгөү. Аяҡтарҙы бөгөп ултырыу. Тубыҡтарын бөгөп ултырғыска менеп ултырған.*

**3.** Ос йәки баш яҡты аҫҡа табан иңкәйтеү; эйеү. □ Гнуть, согнуть. *Кәүҙәне бөгөү.* ■ *Алған дөйәм муйынын да, тубығын да бөкмәй һыу эсә торған дөйә булып сыҡты.* Халыҡ ижадынан. *Ҡапҡа төбөндә тораһың, нескә билең бөгәһең, Хәтирәм.* Халыҡ йырынан.

**4.** Ситен ҡайтарып тегеү. □ Подшивать, подрубать. // Подшивка, подрубка. *Салбар балағын бөгөү. Кулъяулыҡтың ситен бөгөү.*

**5.** *күсм.* Ауыр тәьҫир, баҫым, ҡыҫым менән еңеү; бирештереү. □ Сгибать, ломать. *Ауыр эш бөгә. Ҡайғы бөгә. Ауырлыҡтар кешене бөгә.* ■ *Бер тәүлек үтер-үтмәҫтән, ауырыу уны [Емеште] кисәгенән дә ҡатыраҡ бөгөп һалды.* З. Биишева.

**6.** *күсм.* Арттырыу, шапыртыу. □ Перегибать, перестараться. *Шаяртыуҙа бөгөп ебәреү. Аҡса мәсьәләһендә бер аҙ бөгөп ебәрҙе.*

**7.** *күсм.* Үҙ яғына ауҙарыу. □ Склонять *(на чью-л. сторону). Күршеһен үҙ яғына бөктө.*

**8.** *күсм.* Баш күтәрмәй, ҡомһоҙланып ашау; һыпыртыу. □ Есть быстро и жадно; уплетать. *Юлсылар картуфты бөгә генә. Ҡунаҡтар бишбармаҡты бөгә генә.* ■ *[Рәфис] үҙе рәхәтләнеп ҡумәстәрҙе бөктө генә, әйтерһең, бер аҙна буйы бер нәмә лә ашамаған.* Р. Ҡаһир.

♦ **Баш(ты) бөгөү** буйһоноу, табыныу. □ Подчиняться, смириться. ■ *Ҡурҡыныс уйҙар килеп баҫҡас, ирекһеҙ баш бөгәм.* Ш. Бабич. **Бил бөгөү** көс түгеп эшләү. □ Гнуть спину *(выполнять тяжёлую работу, трудиться до изнеможения).* **Дуға бөгөү** 1) ныҡ өшөү. □ Сильно мёрзнуть; 2) ныҡ асығыу. □ Сильно проголодаться. **Ғәйепкә бөгөү** ғәйепләү, ғәйепле итеү. □ Винить, обвинять. ■ *«Ғәйепкә бөкмә, бай ағай... — тип йөпләне ишен Сибәғәт. — Хеҙмәт итербеҙ».* Р. Камал.

**БӨГӨШ** *и. диал. ҡар.* **керәндил.** *Бөгөш ашау.*

**БӨГӘ** [төрки *бөг/пөг* 'йомро, түңәрәк'] (Р.: спинка альчика; И.: upper position of a dice; Т.: zar oyununda zarın arka torafı) *и.*

Ашыҡ уйнағанда ашыҡтың уң ҡабырғаһы менән өҫкә ятыуы. □ Спинка альчика. *Был юлы бөгә төштө.*

**БӨГӘҘӘК (бөгәҙәге)** (Р.: кибитка; И.: kibitka; Т.: araba türü) *и.*

**1.** *иҫк.* Арба өҫтөнә ағастан бөгөп эшләгән ҡыуыш. □ Кибитка. *Бөгәҙәккә ултырып йөрөү. Бөгәҙәккә инеп йәшенеү. Бөгәҙәккә инеп ҡасыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **бөгәзе 1.** *Мурҙа бөгәҙәге. Салғы бөгәҙәге.*

**БӨГӘЖӘ** (Р.: крюк подвесной лампы; И.: pendent lamp's hook; Т.: kanca) *и. диал.*

**1.** Аҫма лампа элә торған ырғаҡ. □ Крюк подвесной лампы. *Бөгәжәгә лампа элеп ҡуйыу. Түбәлә бөгәжә тора.*

**2.** *ҡар.* **карама II.** *Бөгәжә бөгөү.*

**БӨГӘЗЕ** [дейөм төрки *боғ-, бөг-* 'бәйләү'] (Р.: обод; И.: rim; Т.: jant) *и.*

**1.** Төрлө кәрәк өсөн тал йәки муйыл ағасын, тимерҙе бөгөп йәки бауҙан дуға, дуңгәләк рәүешендә эшләнгән нәмә. □ Обод из согнутого ивового или черёмухового прута, железа, верёвки, применяемый как часть различных орудий труда *(ручки косы, распорки капкана, морды и т. д.). Салғыға бөгәзе бәйләү. Бөгәзеле мурҙа.* ■ *Салғыһын бик тәпсирләп тапаны, көйләне, бакса артындағы ҡыуаҡлыҡтан йәш кенә муйыл ағасы киҫеп алып салғыһына бөгәзе бәйләне.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал. ҡар.* **карама II.** *Бөгәзе бөгөү.*

**3.** *диал. ҡар.* **туғын.** *Тәгәрмәс бөгәзеһе.*

**БӨГӘЛ** *и. диал. ҡар.* **бөгөл.** *Йылға бөгәле. Һуҡмаҡ бөгәле.* ■ *Тирмән быуаһынан арыраҡ Шалтыран йылғаһы иҫ китес бөгәл яһап үткән.* А. Мағазов. *Йылан ғына ерҙән һыҙылып-һыҙылып, бөгәл яһап аға Төйәләҫ.* А. Игебаев.

**БӨГӘЛБӘП (бөгәлбәбе)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бөгәлбәптәр сәскә ата.*

**БӨГӘЛЖӘ I** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **бөгәзе 1.** *Салғы бөгәлжәһе.*

**2.** Алҡа, йоҙаҡтың дуғаһы. □ Дужка серёг, замка. *Алҡа бөгәлжәһе.*

**3.** Бишектең дуғаһы. □ Дужка люльки. *Бишек бөгәлжәһе.*

**БӨГӘЛЖӘ II** *и. зоол. диал. ҡар.* **күгәүен.** *Бөгәлжә ҡанаты.*

**БӨГӘЛЙӘ** *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **бөгәзе.** *Салғы бөгәлйәһе. Салғыға бөгәлйә бөгөү. Арба бөгәлйәһе.*

**2.** *зоол. диал. ҡар.* **бөгәләк 1.** *Һыйырҙар янында бөгәлйәләр бызылдай.*

**БӨГӘЛСӘН** *и. зоол. диал. ҡар.* **бөгәләк 1.** *Бөгәлсәндән яфаланған аттар төтөнгә киләләр.* ■ *Уны [Мәхмүтте] ҡайҙандыр килеп сыҡҡан бөгәлсән тешләп уятҡан икән.* Ф. Лоҡманов.

**БӨГӘЛӘК (бөгәләге)** (Р.: овод; И.: gadfly; Т.: at sineği) *и.*

**1.** *зоол.* Йылҡының ҡорһаҡ аҫтына йомортҡа һалып, эсен ҡортлата торған себен. □ Овод лошадиный (лат. *Gasterophilus intestinalis*). *Бөгәләктән сыҙай алмай аттар тыбырсына.* ■ *Иртәләрен, бөгәләк йә булмаһа эҫелек ҡамасауламаған саҡта, болондарҙа, яландарҙа, тауҙар итәгендә улар [аттар] тыныс ҡына йөрөйҙәр.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** *диал. ҡар.* **укра.** *Һыйырҙың арҡаһында ҙур бөгәләк.*

**3.** *бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Һауала бөгәләк мамыҡтары оса.*

**БӨГӘЛӘКЛӘҮ (бөгәләклә-)** (Р.: вести себя беспокойно, отмахиваясь от оводов, мух; И.: fan off; Т.: at sineğinden koşmak) *ҡ.*

Бөгәләк себене эйәләп, сыҙамай тыныҫһыҙланыу *(малға ҡарата).* □ Вести себя беспокойно, отмахиваясь от оводов, мух *(о скотине). Аттар бөгәләкләп сабышып йөрөйҙәр.*

**БӨГӘР I** (Р.: подколенная ямка; И.: popliteal space; Т.: dizardı) *и.*

**1.** *анат.* Тубыҡтың бөгөлгән аҫ яғы. □ Подколенная ямка. *Ойоҡто бөгәрҙән бәйләү. Бөгәргә төшөп торған сәс.* ■ *Ә Булаты, шуны ғына көткән кеүек, уның [Сафияттың] бөгәренә төшөп торған ике толомон артҡа ҡайырып имәнгә сырмай.* Ә. Вахитов. *Аттарҙың ҡойроғо бөгәренә тиклем ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған.* Б. Хәсән.

**2.** *анат. диал.* Терһәктең бөгөлгән эс яғы. □ Подлокотная ямка. *Еңен бөгәренә тиклем һыҙғанған.* ■ *[Мулла] ҡорбанының [Сәғүрәнең] ҡулынан тағы ла ҡатыраҡ ҡыҫып тотто ла беләк бөгәрендәге йыуан тамырға бәке менән сапты.* З. Биишева.

**3.** *бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Яланда һапһары бөгәр сәскәләре.*

♦ **Бөгәргә һуғыу** *шул уҡ* **бәкәлгә һуғыу** *ҡар.* **бәкәл I.** *Был мәсьәлә бөгәргә һуҡты бит, әй.*

**БӨГӘР II** *и. анат. диал. ҡар.* **тубыҡ I.** *Бөгәр ҡапҡасы.*

**БӨГӘРЛӘК (бөгәрләге)** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Ҡыҙҙар бөгәрләк сәскәһен ишеп баштарына кейәләр.*

**БӨГӘРЛӘНЕҮ (бөгәрлән-)** (Р.: сворачиваться; И.: curl up; Т.: bükülmek) *ҡ.*

**1.** Осо, сите эскә ҡайтарылып, төрөлөү. □ Сворачиваться. *Көҙгө һыуыҡта япраҡтар бөгәрләнгән.*

**2.** Теләһә нисек бөкләнеү, йомарланыу *(ҡағыҙға ҡарата).* □ Мяться *(о бумаге). Бөгәрләнгән ҡағыҙ биттәре. Гәзитте уҡырға ла өлгөрмәнем, бөгәрләнеп бөткән.*

**3.** Дүңгәләкләнеп уралыу; йомарланыу. □ Свёртываться. *Малайҙар бөгәрләнеп ятҡан терпегә яҡынлашты.* ■ *Ана бит, юл аша юрмалап үтеп барған терпене күргәйне, [Төлкөсура] малайҙарса тотанаҡһыҙланып, төштө лә йүгерҙе, тегеһе юл ситенә бөгәрләнеп ятҡайны, йәнә яҙылып китһен өсөн,*

*йылғанан усы менән ташып, уға һыу койоп маташа.* Н. Мусин.

**4.** Аяҡты, башты күкрәккә ҡыҫыу; йомарланыу. □ Свёртываться. *Бөгәрләнеп кенә ятып йоклау.* ■ *Үҙем һикелә бөгәрләнеп кенә ятырмын, ә ҡойроғомдо һике аҫтына тығырмын, — тигән, ти, төлкө.* Әкиәттән. *Бахыр ҡарсыҡ бик асы итеп: «Абау-у-у!» — тип ҡысҡырҙы һәм, арҡаһын тотоп, йомғаҡ кеүек бөгәрләнде.* Р. Ғабрахманов. *Үгеҙ, башын ҡапыл юғары күтәреп, Ғабдулланы сөйөп ырғытты. Ул кәртә буйында ятҡан ҡырлы таш өҫтөнә барып төштө. Ыһ тип бер генә һыҡтаны ла бөгәрләнеп ятты.* М. Кәрим.

**БӨГӘРЛӘҮ (бөгәрлә-)** (Р.: свернуть; И.: roll up; Т.: bükmek) *ҡ.*

**1.** Осон, ситен эскә ҡайтарып төрөү. □ Свернуть, сворачивать. *Ҡурғашты бөгәрләп кенә төрөп һалып ҡуйыу.*

**2.** Теләһә нисек ойпалау; йомарлау *(ҡағыҙҙы).* □ Мять *(бумагу). Гәзитте бөгәрләп бөтҡәнһең бит.*

**3.** Дүңгәләкләп урау; йомарлау. □ Свёртывать, образовывать круги.

**БӨГӘРСӘ** *и. зоол. ҡар.* **бөгәрсәй.** *Был йылғала бөгәрсәләр күп икән.*

**БӨГӘРСӘЙ** (Р.: елец; И.: dace; Т.: çamça) *и. зоол.*

Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған, таҙа, ағын һыу төбөндә йәшәгән бәләкәй балыҡ. □ Елец (лат. *Leuciscus leuciscus*). *Мырҙаға бөгәрсәйҙәр ҙә эләккән.*

**БӨГӘСӘ** (Р.: сегодня ночью; И.: to-night; Т.: bugün gece) *р.*

**1.** Бөгөн төндә. □ Сегодня ночью. *Бөгәсә ҡойма ямғыр яуҙы.* ■ *[Шакир:] Бынау бөгәсә күргән төшөң бөтә үткән юлыңды хәтереңә төшөрҙө.* Н. Мусин. *[Мырҙағәле:] Әйткәндәй, Иштән ағай, һин төш юрай торғайның түгелме һуң? Әкәмәт бер төш күрҙем бит әле мин бөгәсә, ни булыр икән ул?* З. Ураҡсин. *Әммә ни ғәләмәт, иртәнге сәй артында өләсәһе үҙенең бөгәсә күргән төшөн һөйләп [Тәбиттең] һушын алды.* Ә. Әминев.

**2.** *диал. ҡар.* **бөгөн 1.** *Бөгәсә генә һыуытып ебәрҙе.*

**БӨГӘТ** *и. диал. ҡар.* **быуа I.** *Бөгәттә һыу инеү. Бөгәттә өйрәктәр йөҙә. Һыйырҙар бөгәткә төшөп һыу эсә* ■ *Ырғыҙ буйҡайлары бөгәт-бөгәт, бөгәтендә лә уйнай бер өйрәк.* Халыҡ йырынан.

**БӨҘӨР** [боронғо төрки *бужур* ‘сыбар’] (Р.: рябь, зыбь; И.: ripple; Т.: dalgacık) *и.*

Һыу өҫтөндәге ваҡ тулҡын. □ Рябь, зыбь. *Һыу өҫтө бөҙөр менән ҡапланған.*

**БӨҘӨРКӘ** *с. диал. ҡар.* **бөҙрә I, 1.** *Бөҙөркә сәстәр.* ■ *Ҡарасәс инәй Емеште йырлай-көйләй маҡтарға керешеп китте: «Ул бөгөлөп торған оҙон керпектәр, һөрмәле түп-түңәрәк ҡара күҙҙәр, Оло Әйек тулҡындары шикелле дүңгәләкләнеп ятҡан бөҙөркә сәстәр...»* З. Биишева.

**БӨҘӨРЛӘНЕҮ (бөҙөрлән-)** (Р.: рябиться, зыбиться; И.: be ruffled; Т.: hafifçe dalgalanmak) *ҡ.*

Бөҙөр менән ҡапланыу. □ Рябиться, зыбиться. *Күл өҫтө талғын иҫкән елгә бөҙөрләнеп кенә ята.*

**БӨҘӨРЛӘҮ (бөҙөрлә-)** (Р.: рябить, зыбить; И.: ripple; Т.: dalgalandırmak) *ҡ.*

Бөҙөр менән ҡаплау. □ Рябить, зыбить. *Әкрен ел күл өҫтөндә тулҡындар уйнатып, уны бөҙөрләй.*

**БӨҘРӘ I** [боронғо төрки *будураҡ* ‘бөҙрә’] (Р.: кудрявый; И.: curly; Т.: kıvırcık) *с.*

**1.** Дүңгәләкләнеп төрөлөп-төрөлөп торған *(сәскә һ. б. ҡарата).* □ Кудрявый, курчавый. *Бөҙрә сәс. Бөҙрә сәсле ҡыҙ.* ■ *Сәскә ҡаҙап бөҙрә сәстәреңә, кис баҡсаға мине саҡырма.* Ғ. Хәйри. *Сәстәре муйыл кеүек сөм-ҡара, бөҙрә. мыйыҡтар күркә ҡойроғо һымаҡ ҡабарып тора.* З. Биишева. *Нуранияның бөҙрә сәсе елгә һибелгән, ҡара ҡаштары бергә тоташҡан: шул уны тағы ла һылыуыраҡ итә.* Р. Камал. *Ҡарат әле тыныс ҡына бәйле тора, бөҙрә ялдары ҡырҡылған, ялбыр ҡойроғо тоҡосланған.* З. Ураҡсин. *Бәхтиәр харап ҡупшы йөрөй торғайны, һүрәттә лә аяғында йылтыр итек, ҡырын һалып кейгән*

*пилотка ситенән ҡара бөҙрә сәсен сығарып ҡуйған.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ҡабарып, уралып торған. □ Заволакивающийся, обволакивающийся; волнистый, вьющийся. *Һыу өҫтөндә бөҙрә тулҡындар уйнай. Күктә бөҙрә болоттар ағыла. Өйҙәрҙән сыҡҡан бөҙрә төтөндәр күккә олғаша.* ■ *Пароходтар Иҙел буйлап бара, бөҙрә тулҡындарҙа тирбәлеп...* Ғ. Сәләм. *Сәлимә .. баш әйләндергес бейек ҡара ҡаяның иң осона менеп баҫты, сәстәрен бөҙрә болоттарға һирпелтеп, түбәнгә, Хамматҡа йылмайып ҡараны.* З. Биишева.

**3.** Ҡабарып торған ҡуйы япраҡлы *(ағасҡа ҡарата).* □ Кудрявый *(о деревьях). Бөҙрә тал. Бөҙрә ҡайын. Бөҙрә ерек.* ■ *Йәш ҡамышлы тәрән күл ситендә һыуға ятып бөҙрә тал үҫә.* Ҡ. Даян. *Оло Эйектең яҙ көнө иҫәпһеҙ-һанһыҙ һандуғастар сутылдашыуы менән тотош моңға сумып ойоп ултырған бөҙрә туғайҙары тынып ҡалған.* З. Биишева.

**БӨҘРӘ II** (Р.: кудри; И.: curls; Т.: pürçek) *и.*

Төрөлөп, уралып торған сәс һ. б. нәмә. □ Кудри, кудряшки. *Эре бөҙрә. Бөҙрәләре битенә төшөп тора.* ■ *Ысынлап та, бөҙрәләре шағир булмышын тағы ла һөйкөмлөрәк, матурыраҡ итә ине.* Т. Ғәниева.

**БӨҘРӘ АҠҠОШ** (Р.: лебедь-шипун; И.: swan species; Т.: sessiz kuğu) *и. зоол.*

Ярҙары ҡамышлы һәм бейек үләнле ҙур күлдәрҙә, йылғаларҙа йәшәүсе, һирәк осраусы, ҡаҙҙан ҙурыраҡ, аҡ ҡауырһынлы күсмә ҡош. □ Лебедь-шипун (лат. *Cygnus olor). Бөҙрә аҡҡоштар йылы яҡҡа осто.* ■ *[Бөҙрә аҡҡош] ҡаңғылдаҡ аҡҡоштан төҙөгөрәк кәүҙәһе һәм ҡанаттарын ҡалҡыта биреп йөҙөүе менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

**БӨҘРӘ БЕСӘЙ БОРСАҒЫ** (Р.: просвирняк курчавый; И.: mallow; Т.: ebegümeci) *и. бот.*

Алһыу йәки аҡ төҫтәге сәскә атыусы бер йыллыҡ үҫемлек. □ Просвирняк курчавый (лат. *Malva crispa). Бөҙрә бесәй борсағы сәскә атҡан.*

**БӨҘРӘЛЕК (бөҙрәлеге)** (Р.: кудрявость; И.: curliness; Т.: kıvırcıklık) *и.*

Бөҙрә булыу. □ Кудрявость, курчавость. *Сәсенең бөҙрәлегенә тиклем әсәһенә оҡшаған.*

**БӨҘРӘЛӘНЕҮ (бөҙрәлән-)** (Р.: кудрявиться; И.: curl; Т.: kıvrılmak) *ҡ.*

**1.** Бөҙрәгә әйләнеү, бөҙрә булыу. □ Кудрявиться, курчавиться. *Ҡыҙҙың һары сәстәре бөҙрәләнеп тора.* ■ *Колонсағыбыҙ бик матур, ҡыҙғылт төҫтә, тиреһе шыма ғына, ялдары бөҙрәләнеп һөҙөлөп төшкән.* «Йәншишмә», 23 сентябрь 2009.

**2.** Ҡабарып уралыу, төрөлөү. □ Виться, завиваться. *Өйҙәрҙән төтөн сыға ла бөҙрәләнеп күккә олғаша.*

**БӨҘРӘЛӘТЕҮ (бөҙрәләт-)** (Р.: завивать; И.: wave, curl; Т.: kıvırmak) *ҡ.*

Бөҙрә итеү; бөҙрәләр эшләү. □ Завивать, делать кудри. // Завивка. *Ҡыҙҙар сәстәрен бөҙрәләтеп уйынға йыйына.*

**БӨҘРӘЛӘҮ (бөҙрәлә-)** (Р.: завивать; И.: curl, frizzle; Т.: kıvırmak) *ҡ.*

Бөҙрә итеү. □ Завивать. // Завивка. *Апайым әхирәтенең сәсен бөҙрәләй.*

**БӨҘРӘХАНА** (Р.: парикмахерская; И.: barber's (shop); hairdresser's; Т.: berber) *и.*

Сәс ҡыҫтырыу, бөҙрәләү, буяу, тарау, һаҡал ҡырыу урыны. □ Парикмахерская. *Бөҙрәханаға барыу. Бөҙрәханала сәс ҡыҫтырыу.* ■ *Май сүлмәге тышынан билдәле тигәндәй, бөҙрәхананың тышҡы биҙәлеше үк үҙенә саҡырып тора.* «Башҡортостан», 21 декабрь 2010.

**БӨҘӘНДӘНЕҮ (бөҙәндән-)** (Р.: испортиться; И.: become worse; Т.: bozulmak) *ҡ. диал.*

Көн боҙолоу. □ Испортиться *(о погоде). Көндәр бөҙәндәнеп китте әле.*

**БӨҘӘҢКЕЛӘНЕҮ (бөҙәңкелән-)** (Р.: темнеть; И.: grow dark; Т.: kararmak) *ҡ. диал.*

Ҡараңғыланыу. □ Темнеть. *Беҙ ҡайтып етеүгә, көн бөҙәңкеләнеп тора ине.*

**БӨЖЛӘҮ (бөжлә-)** (Р.: трусить; И.: be frightened; Т.: korkmak) *ҡ. диал.*

Шөрләү, ҡурҡыу. □ Трусить, бояться. *Егет атаһынан бөжләй.* ■ *Иллә бөжләне малайың.* М. Ҡулаев.

**БӨЖМӘН** *с. диал. кар.* **ҡурҡаҡ.** *Бөжмән егет. Бөжмән кешеләр.*

**БӨЖӨМ** (Р.: боязнь; И.: fright; Т.: korkma) *и. диал.*

Ҡурҡыу хисе. □ Боязнь, страх. *Егет өйгә ниндәйҙер бөжөм менән ҡайтты. Ҡыҙҙың йөҙөн бөжөм ҡаплап алды.*

**БӨЖӨМЛӘҮ (бөжөмлә-)** (Р.: трусить; И.: be afraid (of); Т.: korkmak) *ҡ. диал.*

Ҡурҡыу, шөрләү. □ Трусить, бояться. *Ул атаһынан бөжөмләй ине.* ■ *Әлбиттә, ул [Рауза] Фәүзиә ҡарсыҡтың ҡарашынан бөжөмләй.* Т. Ғарипова.

**БӨЖӘК (бөжәге)** [боронғо төрки *бүжгәк* 'бөжәк'] (Р.: насекомое; И.: insect; Т.: böcek) *и. зоол.*

Быуынтыҡ аяҡлы, умыртҡаһыҙ ваҡ йән эйәһе (*маҫалан, себен, үрмәксе*). □ Насекомое (лат. *Insecta*). *Төрлө бөжәктәр оса. Бөжәктәр өйрәнеүсе.* ■ *Туғай-болондарҙа әллә нисәмә төҫлө сәскәләр, әллә нисәмә төрлө бөжәктәр, әллә ниндәй ауаздар.* Р. Камал.

**БӨЖӘК АШАУСЫЛАР** (Р.: насекомоядные; И.: insectivorous; Т.: böcek yiyen) *и. зоол.*

Бөжәктәр менән туҡланыусы йән эйәләре. □ Насекомоядные (лат. *Insectivora*).

**БӨЙЛӘ** (Р.: таким образом; И.: thus; Т.: böyle) *р. иҫк. кит.*

Шулай. □ Так, таким образом. *Бөйлә мин уҡырға инеп киттем.*

**БӨЙЛӘН** (Р.: шок; И.: shock; Т.: şok) *и.*

Бик ныҡ яраланғанда, һуғылғанда ауыртҡанды һиҙмәү хәле; шок. □ Шок. *Бөйләи һөҙөмтәһе.*

**БӨЙЛӘН БУЛЫУ (бөйлән бул-)** (Р.: быть в шоковом состоянии; И.: be shocked; Т.: şoke olmak) *ҡ.*

Ауыртҡанды һиҙмәү хәлендә булыу. □ Быть, находиться в шоковом состоянии. *Бөйлән булдым.*

**БӨЙӨ** (Р.: тарантул; И.: tarantula; Т.: tarantul) *и. зоол.*

Ерҙә тишеп оялай торған ағыулы эре үрмәксе. □ Тарантул (лат. *Lycosa*). *Бөйөләр үрсеп киткән әле.*

**БӨЙӨК** [төрки *бүйүк* 'ҙур, оло, бөйөк'] (Р.: великий; И.: great; Т.: büyük) *с.*

**1.** Әһәмиәте, тотҡан урыны бик ҙур; юғары, оло. □ Великий. *Бөйөк Ватан һуғышы. Бөйөк еңеү. Бөйөк дуҫлыҡ.* ■ *[Йәтимәк ауылы] Бөйөк Ватан һуғышына үҙенең утыҙ бишенсе кешеһен оҙата.* Д. Бүләков.

**2.** Дәрәжәһе юғары, тиңдәше булмаған; оло. □ Великий. *Бөйөк яҙыусы. Бөйөк рәссам. Бөйөк һынау.* ■ *Өйрәнсекте бөйөк һөнәрсе тип, ололап, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән яҡшы күңелле батша ла бер саҡ донъяны ҡалдырған.* З. Биишева. *Рамғун тыныс йәшәү теләген ҡат-ҡат белдереп ҡараһа ла, Бодархан быны һис ҡабул итмәне, үҙен хурлыҡҡа төшөрөлгән бөйөк хаким һымаҡ хис итте.* З. Ураҡсин.

**БӨЙӨКЛӨК (бөйөклөгө)** (Р.: величие; И.: greatness; Т.: büyüklük) *и.*

Әһәмиәте, тотҡан урыны бик ҙур хәл. □ Величие, величественность. *Батырҙың бөйөклөгө. Кешенең бөйөклөгө уның ябайлығында.*

**БӨЙӨЛДӨРӨК (бөйөлдөрөгө)** *и. диал. кар.* **бөйөрсә.** *Еләнгә бөйөлдөрөк тегелгән.*

**БӨЙӨМ** (Р.: добрый; И.: mild; Т.: iyi yürekli) *с. диал.*

Яҡшы тәбиғәтле, йомшаҡ. □ Добрый, мягкий (*по характеру*). *Бөйөм кеше. Әсәйем бөйөм кеше, беҙҙе бер ҙә орошмай.*

**БӨЙӨМҺӨҘ** *с. диал. кар.* **булдыҡһыҙ.** *Эй, ошо бөйөмһөҙ бесәйҙе, сысҡан да тотоп ашай белмәй.*

**БӨЙӨР** [боронғо төрки *бүгүр, богур* 'йомро нәмә'] (Р.: почка; И.: kidney; Т.: böbrek) *и. анат.*

**1.** Бәүел айырып сығара торған ҡуш ағза. □ Почка. / Почечный. *Бөйөр ауыртыу. Бөйөрҙө дауалау. Бөйөргә таш ултырыу.* ■ *[Әнүәр ағай:] Һул бөйөрҙө майҙа уҡ алды-*

*рып ташлаткайным, яраһы һаман бөтәшеп бөтмәгән.* З. Ураҡсин.

**2.** Кәүҙәнең, кейемдең шул ағза тәңгәлендәге урыны. □ Бок. *Бөйөргә таянып баҫып тора. Егет ҡыҙҙың бөйөрөнә төрттө. Еләндең бөйөрөнә өс рәт тәңкә баҫылған.* ■ *Бер ситтәрәк, бөйөргә таяна биреп, күкрәкте киреп торған, оҫкор күҙле, йәш, матур һалдат иң элек минең иғтибарымды үҙенә тарта.* З. Биишева.

♦ **Бөйөр эсендәге май кеүек** һый-ниғмәт, рәхәтлек эсендә йөҙөп йәшәү. □ В достатке *(жить).* ■ *Ҡарт ошо өс улын бөйөр эсендәге май кеүек һаҡлап, ҡарап, тәрбиәләп үҫтерә икән.* Әкиәттән.

**БӨЙӨРГӘН** (Р.: жеруха обыкновенная; И.: watercress; Т.: su teresi) *и. бот.*

Ваҡ киртләс япраҡлы, ваҡ сәскәле күп йыллыҡ һыу үләне. □ Жеруха обыкновенная, водяной кресс (лат. *Nasturtium officinale*). *Бөйөргәндәр үҫеп сыҡҡан.*

**БӨЙӨРЛӨК (бөйөрлөгө)** *и. ҡар.* **бөйөрсә.** *Еләнгә бөйөрлөк тағып сығыу.*

**БӨЙӨРӨК (бөйөрөгө)** [борондо төрки *пөйрәг* 'ашамлыҡ'] (Р.: жареные пирожки; И.: fried patties; Т.: börek) *и.*

**1.** Төрлө эслек һалып бешерелгән ҡамыр ашы. □ Пироги или пирожки с разными начинками. *Кәбеҫтә бөйөрөгө. Еләк бөйөрөгө. Тәмле бөйөрөктәр бешереү. Бөйөрөк ашау.*

**2.** *диал. ҡар.* **ваҡ бәлеш.** *Бөйөрөктәрҙе мейестә бешереп алыу. Бөйөрөк ашау.*

**БӨЙӨР ӨҪТӨ БИҘЕ** (Р.: надпочечник; И.: adrenal glands; Т.: böbrek üstü) *и. анат.*

Бөйөрҙөң өҫкө яғында урынлашҡан биҙҙәр. □ Надпочечник, железы надпочечные. ■ *Бөйөр өҫтө биҙҙәре ҡанға бик күп адреналин бүлеп сығара.* «Йәшлек», 15 ноябрь 2008.

**БӨЙӨРСӘ** (Р.: позумент с наборными кистями или монеты, нашитые по бокам зиляна; И.: galloon, braid; Т.: sırmalı şerit) *и. этн.*

Еләндең бөйөрөнә баҫылған тәңкәле, суҡлы уҡа. □ Позумент с наборными кистями или монеты, нашитые по бокам зиляна. *Еләнгә тәңкәнән бөйөрсәләр тағып ултырам.*

**БӨЙӨРТАШ** *и. диал. ҡар.* **һуйырташ.** *Юлға бөйөрташ түшәлгән. Йылғанан бөйөрташ сығарыу.*

**БӨЙӨР ТАШЫ** (Р.: почечный камень; И.: kidney stone; Т.: böbrek taşı) *и.*

Бөйөр эсендә барлыҡҡа килгән таш. □ Почечный камень. *Бөйөр ташын алдырыу.* ■ *Мин дә шул бөйөр ташы менән интегәм бит әле, ағай.* З. Ураҡсин.

**БӨЙӨРТӨН** (Р.: по бокам; И.: on each side; Т.: bir kenarda) *р.*

Бер яҡ ситтәрәк. □ По бокам, по краям. *Беҙҙең ауыл юлдан бөйөртөн урынлашҡан.*

**БӨЙРӘК I (бөйрәге)** *и. диал. ҡар.* **бөйөр.** *Бөйрәк шешеү. Бөйрәк ауырыуы менән яфаланыу.*

**БӨЙРӘК II (бөйрәге)** *и. диал. ҡар.* **йәлдәү.** *Мурҙа бөйрәге.*

**БӨЙРӘК III** (Р.: белобокий; И.: white-sided; Т.: beyaz böğürlü) *с.*

Бөйөрө аҡ тимгелле; бөйөрө аҡ *(һыйыр малына ҡарата).* □ Белобокий *(масть коровы с белой полосой в области поясницы). Бөйрәк быҙау. Бөйрәк мал.*

**БӨЙРӘКӘЙ I** *и. диал. ҡар.* **бөйөр.** *Бөйрәкәйем ыҙалата бит мине. Һыуыҡта бөйрәкәйем шешкән.*

**БӨЙРӘКӘЙ II** *с. ҡар.* **бөйрәк III.**

**БӨЙӘН I** (Р.: двенадцатипёрстная кишка; И.: duodenum; Т.: onikiparmak bağırsağı) *и.*

**1.** *анат.* Ашҡаҙандан сыҡҡан нәҙек эсәктең бер өлөшө. □ Двенадцатипёрстная кишка. *Бөйән сире.* ■ *Дисбактериозға .. ашҡаҙан, бөйән ауырыуҙары ла булышлыҡ итә.* «Ашҡаҙар», 15 июль 2009.

**2.** *диал. ҡар.* **тултырма.** *Бөйән тултырыу. Бөйән һалыу. Бөйән ашау.*

**БӨЙӘН II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, тамъян ырыуҙары аймағы. □ Буян *(название родового подразделения баш-*

*кир-бурзянцев, тамьянцев). Бөйән аймағы башҡорто.*

**БӨЙӘНЕҮ (бөйән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ышаныу.**

**БӨЙӘН ЭСӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **бөйән I.** ■ *Ашҡаҙандың сей яраһы һәм бөйән эсәге сирҙәренең аҙған мәлендә кәбеҫтә һутын эсергә ярамай.* «Йәшлек», 5 июль 2008.

**БӨЙӘНӘК (бөйәнәге)** *и. диал. ҡар.* **бөйөр.** *Бөйәнәгем ауырта. Был үлән бөйәнәккә файҙалы.*

**БӨЙӘТ** *и. диал. ҡар.* **тултырма.** *Бөйәт тултырыу. Бөйәт ашау. Бөйәт бешереү.*

**БӨКИЛ** (Р.: плохо; И.: poorly; Т.: fena) *р. диал.*

Насар, хөрт. □ Плохо. *Эштәр бөкил.*

**БӨККӨЛ** (Р.: весь; И.: all; Т.: büsbütün) *а. диал.*

Бөтә, һәммә. □ Весь. *Бөккөл ауылды йыйған.*

**БӨККӘН** (Р.: пирожок с начинкой; И.: pie with a filling; Т.: börek) *и.*

**1.** Эсенә берәй ризыҡ һалып бөгөп яһаған ваҡ бәлеш. □ Пирожок с начинкой. *Балан бөккәне. Кәбеҫтә бөккәне. Бөккән ҡамыры. Бөккән бешереү. Бөккән ашау. Тәмле бөккән. Бөккән яһау.* ■ *Ҡарсыҡ-ҡорсоҡ баҙарҙа тоҙло ҡыяр, кәбеҫтә, һарымһаҡ, кипкән өрөк, картуф бөккәне, эремсек, тағы бик күп нәмәләр һатып тора.* М. Кәрим. *Рәфис бигерәк тә еләк бөккәнен яратып ашаны.* Р. Ҡаһир.

**2.** *диал. ҡар.* **билмән.** *Бөккән яһау. Бөккәнгә ҡамыр баҫыу. Бөккән бешереү.*

**БӨКЛӘМ** (Р.: складка; И.: pleat; Т.: büklüm) *и.*

Кейемдең бөкләнеп тегелгән урыны. □ Складка, сгиб, изгиб *(на одежде). Күлдәктә бөкләм эҙҙәре.*

**БӨКЛӘМ-БӨКЛӘМ** (Р.: весь в складках; И.: much pleated; Т.: büklüm büklüm) *с.*

Күп бөкләме булған. □ Весь в складках, в сгибах. *Бөкләм-бөкләм күлдәк кейеп алған.*

**БӨКЛӘМЛЕ** (Р.: со складкой; И.: pleated; Т.: büklümlü) *с.*

Бөкләме булған. □ Со складкой. *Киң бөкләмле итәк.*

**БӨКЛӘНЕҮ (бөклән-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бөкләү.** *страд. от* **бөкләү.** *Дәфтәр бөкләнгән.* ■ *Вәзир ҡулында ҡат-ҡат бөкләнгән йәшкелт ҡағыҙ ғына тороп ҡалды.* М. Кәрим.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **бөкләү.** *возвр. от* **бөкләү.** *Бөкләнеп ятыу.* ■ *Тынысланып, әҙерәк серем итеп алырға уйлап, ой яғына атлағайны, ишек төбөндә бөкләнеп ятҡан Алабай, ҡапыл һикереп тороп, лауылдарға тотондо.* З. Ураҡсин.

**БӨКЛӘНМӘЛЕ** (Р.: сгибаемый; И.: pliable; Т.: bükülü) *с.*

Бөкләнә торған. □ Сгибаемый. *Бөкләнмәле таяҡ. Бөкләнмәле тимер.*

**БӨКЛӘҪ** *и. диал. ҡар.* **бөгөл I.** *Йылға бөкләҫе. Юл бөкләҫе.* ■ *Аҡ Нөгөшкәй буйы бөкләҫ-бөкләҫ, бөкләҫтәре китәр боҙ киткәс.* Йырҙан.

**БӨКЛӘТЕҮ (бөкләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бөкләү.** *понуд. от* **бөкләү.** *Малай атаһынан ҡағыҙҙы бөкләтеп төрлө уйынсыҡтар яһатты.*

**БӨКЛӘҮ (бөклә-)** (Р.: загибать; И.: bend; Т.: bükmek) *ҡ.*

**1.** Бөгөп, кирегә ҡайтарыу. □ Загибать, перегибать. *Китаптың битен бөкләү. Шәлде бөкләп ябыныу.*

**2.** Быуын тәңгәленән кәкрәйтеп, үҙеңә тартыу. □ Подгибать, поджимать. *Аяҡты бөкләп ултырыу.* ■ *Ашыға торғас, хәл бөтә, туҡтап тора, хәл йыйып, рәхәт аяҡ бөкләп тора.* Ш. Бабич. *Урындыҡ ситендә Иштән ҡарт, бер аяғын бөкләп, икенсеһен сәнсеп, тубығын ҡосаҡлаған да хужа менән гәпләшә.* З. Ураҡсин. *Сағиҙулланың атаһы аяҡ бөкләп ултырып ҡулағаҙанда сәй ҡайната.* З. Биишева.

**3.** *диал. ҡар.* **тәңкләү.** *Кейемдәрҙе бөкләп һалыу.*

**4.** *полигр.* Ҡағыҙҙарҙы махсус ҡулайлама ярҙамында тигеҙ итеп бөкләү. □ Фальцевать.

**5.** *күсм.* Ауыр тәьҫир, баҫым, ҡыҫым менән еңеү; бирештереү. □ Сгибать, ломать. *Ауырлыҡтар бөкләй.* ■ *Ирҙәр ауҙы, әҙмәүерҙәй ирҙәр, егермәнсе быуат бөкләне.* Р. Назаров.

**БӨКМӘ** *и. диал. ҡар.* **бөккән.** *Бөкмә бешереү.*

**БӨКМӘ ҠАШЫҠ (ҡашығы)** *и. диал. ҡар.* **һөҙгөс I.**

**БӨКӨ** [төрки сығанаҡлы *бөк-*] (Р.: пробка; И.: plug; Т.: tıkaç) *и.*

**1.** Тығын. □ Пробка, затычка; втулка. *Мискә бөкөһө. Бөкө тығыу. Бөкөһөн алыу. Термостың бөкөһөн асҡас, танауға ҡайнар сәйҙең хуш еҫе бәрелде.* ■ *Уҡты үҙенең яртыһы оҙонлоғондағы ағастан эшләнгән сәп көпшәһенән тура үткәреп, артындағы еңелсә генә тығылған бөкөһөн төрттөрөп төшөрөргә кәрәк.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал.* Йомортҡа, май ҡушып, иҙеп, ваҡ-ваҡ йоморса итеп бешерелгән ҡамыр ашы. □ Сдобные булочки. *Бөкө бешереү. Тәмле бөкөләр. Бөкө ашау.*

**БӨКӨРӨЙ** (Р.: творожные вареники; И.: curd dumpling; Т.: peynirli börek) *и. диал.*

**1.** Эремсек билмәне; сүсбәрә. □ Творожные вареники. *Бөкөрөй яһау. Бөкөрөй ҡамыры. Бөкөрөй ашау.*

**2.** Малдың үпкә-бауырынан тапап бешерелгән бәлеш. □ Ливерный пирог. *Бөкөрөйгә үпкә-бауыр бешереү. Бөкөрөй ашау. Бөкөрөйҙәр менән һыйлау.*

**БӨКӨРӨШ** *и. диал. ҡар.* **керәндил.** *Бөкөрөш һатып алыу. Бөкөрөш ашау. Бөкөрөш менән сәй эсеү.*

**БӨКӨС** (Р.: горбатый; И.: humpbacked; Т.: kamburlu) *с. диал.*

Бөкрө, көмрө. □ Горбатый, сутулый. *Бөкөс ҡарт. Бөкөс ҡарсыҡ.*

**БӨКӨСЛӘНЕҮ (бөкөслән-)** *ҡ. ҡар.* **бөкрәйеү.** *Бөкөсләнеп бөткән ҡарт. Әбей бөкөсләнеп китҡән.*

**БӨКӨ ШАЛҠАН** *и. диал. ҡар.* **керән.** *Бөкө шалҡан япрағы. Бөкө шалҡан тамыры. Ҡыяр тоҙлағанда бөкө шалҡан тамыры һалаһың.*

**БӨКРӨ I** [боронғо төрки *букуруг/букурәг* < *бөк-*] (Р.: сутулый, горбатый; И.: round-shouldered; Т.: kamburlu) *с.*

Арҡаһы сыҡҡан; көмрө. □ Сутулый; горбатый. *Бөкрө арҡа. Бөкрө ҡарсыҡ. Бөкрө ҡарт.* ■ *[Булат:] Булмаҫ яуға бөкрө билле ир тыуған, тигәне шулдыр инде.* Р. Солтангәрәев. ● *Бөлгән илгә бөкрө билле бей килә.* Әйтем.

**БӨКРӨ II** (Р.: горб; И.: hump; Т.: kambur) *и.*

Арҡаның сурайып сыҡҡан ере. □ Горб. *Ҡарсыҡтың бөкрөһө тағы ла ныҡыраҡ сығып китҡән.*

**БӨКРӘЙЕҮ (бөкрәй-)** (Р.: горбиться, сутулиться; И.: stoop; Т.: kamburlaşmak) *ҡ.*

**1.** Бөкрөгә әйләнеү; бөкрө булыу; бөксәйеү. □ Горбиться, сутулиться; становиться сутулым. *Бөкрәйгән ҡарт. Ауырыуҙан бөкрәйеп ҡалыу.* ■ *«Ҡайҙан килдең? Кем балаһы булаһың?» — тип һораны ҡарсыҡ, бөкрәйгән билен саҡ-саҡ яҙып.* З. Ураҡсин.

**2.** Алға табан бөгөлөү; эйелеү. □ Сутулиться. *Бөкрәйеп атлау. Бөкрәйеп йөрөү. Уҡығанда бөкрәйеп ултырма, бөкрө булып ҡалаһың.*

**БӨКРӘЙТЕҮ (бөкрәйт-)** (Р.: сутулить, горбить; И.: make stoop; Т.: kamburlatmak) *ҡ.*

**1.** Бөкрө итеү; көмрәйтеү. □ Сутулить, горбить. *Бил бөкрәйтеп ауыр эштә йөрөү.* ■ *Бил бөкрәйтеп тоҙло тирен һыҡҡан бабам минең бында күмелгән.* Ә. Атнабаев.

**2.** *күсм.* Хәлде, дарманды алыу; бөгөү. □ Сгибать, ломать. *Кешеләрҙе ҡайғы бөкрәйтә. Ауырлыҡтар бөкрәйтә шул.*

**БӨКРӘНЛӘҮ (бөкрәнлә-)** (Р.: горбиться, сутулиться; И.: hunch up; Т.: kamburlaşmak) *ҡ.*

**1.** Арҡаны, билде яҙмай, бөкрө хәлдә тотоу; бөксәнләү. □ Горбиться, сутулиться. *Был ҡарт та бөкрәнләп йөрөй башлаған.*

**2.** *күсм.* Баш күтәрмәй эшләү; бөксәнләү. □ Работать не разгибая спины. *Мин дә инде*

*шул урман ҡырҡыу эшендә бөкрәнләп йөрөгән булам.*

**БӨКСӘ I** *и. диал. ҡар.* **бөрләтәү**. *Ҡош-ҡорт бөксәһе бик тәмле була. Бөксә ашарға яратыу.*

**БӨКСӘ II** *с. диал. ҡар.* **тәпәш I.** *Бөксә ҡатын. Бөксә ир.*

**БӨКСӘ III** *с. диал. ҡар.* **бөкрө I.** *Бөксә билем турайҙмай. Өй алдында бөксә генә ҡарсыҡ йөрөй.*

**БӨКСӘЙЕҮ (бөксәй-)** (Р.: стать сутулым, горбатым; И.: become stooping; Т.: kamburlaşmak) *ҡ.*

**1.** Бөкөскә әйләнеү; бөкрәйеү. □ Стать сутулым, горбатым. *Бөксәйеп бөткән ҡарт.*

**2.** Алға бөгөлөп, эйелеү; бөкрәйеү. □ Горбиться, сутулиться. *Бөксәйеп атлау.* ■ *Бында урман ҡырҡыусыларҙан тыш әле мыйыҡ та сыҡмаған, ҡыҙыҡ күреү өсөн генә килгән үҫмерҙәр ҙә, бәлтерәп бөткән, таяҡ таянып, бөксәйеп, бишмәт сабыуҙарының итәген ергә һөйрәлтеп атлаусы ҡарттар ҙа байтаҡ ине.* Н. Мусин.

**БӨКСӘЙТЕҮ (бөксәйт-)** (Р.: сутулить, горбить; И.: hunch; Т.: kamburlatmak) *ҡ.*

Көмрө итеү; көмрәйтеү, бөкрәйтеү. □ Сутулить, горбить. *Оло йәштәге ир арҡаһын бөксәйтеп атлап китте. Әбей билен бөксәйтеп аласыҡҡа инеп китте.*

**БӨКСӘН-БӨКСӘН** (Р.: сгорбившись, ссутулившись; И.: stoopingly; Т.: kamburlaşarak) *р.*

Бер эйелеп, бер турая биреп. □ Сгорбившись, ссутулившись. *Ҡарт бөксән-бөксән килеп ихатала нимәлер эшләп йөрөй.*

**БӨКСӘНЛӘҮ (бөксәнлә-)** (Р.: горбиться, сутулиться; И.: stoop; Т.: kamburlaştırmak) *ҡ.*

Арҡаны, билде яҙмай, бөкрө хәлдә тотоу; бөкрәнләү. □ Горбиться, сутулиться. *Ҡарт биле ауыртһа ла, бөксәнләп йөрөгән була. Бөксәнләп тупәл утау. Бөксәнләп урам һепереү.* ■ *Әммә ҡыҙҙар бер нигә иғтибар итмәй һаман бөксәнләп ҡуянтубыҡ эҙләйҙәр, күренгән береһен кескәй генә осло таяҡ менән әле генә ҡарҙан әрселгән йылы ерҙән соҡоп алалар ҙа шунда уҡ арлы-бирле һөрткөләп ашап та ебәрәләр.* З. Биишева.

**БӨКТӨРӨҮ (бөктөр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бөгөү.** *понуд. от* **бөгөү.** *Нужа бил бөктөрә.*

**БӨКҺӨҮ (бөкһө-)** (Р.: стать затхлым; И.: become musty; Т.: küf kokmak) *ҡ. диал.*

Еҫләнеү *(оҙаҡ ябып ҡуйылған һауытҡа ҡарата).* □ Стать затхлым *(о посуде, долго стоявшей в закрытом виде). Бөкһөп бөткән сәйнүк. Бөкһөп бөткән көбөсәк. Бөкһөп бөткән таба.*

**БӨКӘ** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **бөкөрөй.** *Бөкә бешереү. Бөкә ашау.*

**2.** *ҡар.* **билмән.** *Бөкәлек ит әҙерләү. Бөкә яһау.*

**БӨКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **бапаҡ I.** *Ана, бөкәй килә.*

**БӨКӘНЛӘҮ (бөкәнлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бөкрәнләү.** *Һаман бөкәнләп урман эшендә йөрөйһөңмө?*

**БӨЛГӨН I** (Р.: разорённый; И.: poor; Т.: yoksul) *с.*

Ас-яланғас, ярлы, сараһыҙ *(хәлгә ҡарата).* □ Бедный, нищий, разорённый, безвыходный *(о состоянии). Бөлгөн хәл. Бөлгөн тормошта йәшәү.*

**БӨЛГӨН II** *и. ҡар.* **бөлгөнлөк.** *Бөлгөндә йәшәү. Бөлгөндә көн итеү.*

**БӨЛГӨНЛӨК (бөлгөнлөгө)** (Р.: разорение; И.: devastation; Т.: yoksulluk) *и.*

Ас-яланғас, ярлы, сараһыҙ хәл. □ Разорение, разруха; бедность, нищета, нужда. *Бөлгөнлөктә көн итеү. Бөлгөнлөктән йонсоу. Бөлгөнлөктән ыҙаланыу. Бөлгөнлөктән ҡасыу. Бөлгөнлөктән сығыу хәле эҙләү. Һуғыш бөлгөнлөккә төшөрә.* ■ *Аслыҡ, бөлгөнлөктән тамам йонсоған ҡыҙҙар иртәнсәктән алып Оҙонғол ҡабағы буйында ҡуянтубыҡ ҡаҙып йөрөнөләр.* З. Биишева.

**БӨЛГӨНСӨЛӨК (бөлгөнсөлөгө)** *и. кар.* **бөлгөнлөк.** *Бөлгөнсөлөккә төшөү. Бөлгөнсөлөктө бөтөрөү өсөн тырышыу.*

**БӨЛДӨК** *с. диал. кар.* **хәүефле.** *Бөлдөк хәл. Бөлдөк эш.*

**БӨЛДӨРГӨ** (Р.: темляк; И.: sword-knot; T.: kılıç püskülü) *и.*

**1.** Ҡылыс, ҡамсы кеүек нәмәнең ҡулға кейә торған элмәге. □ Темляк. *Ҡылыс бөлдөргөһө. Ҡамсы бөлдөргөһө.*

**2.** *диал.* Элмәкле бау. □ Верёвка с петлёй. *Кейемде бөлдөргөһөнән эләктереп ҡуйырға кәрәк.*

**БӨЛДӨРГӨС** (Р.: разорительный; И.: ruinous; T.: yokedici) *с.*

Бөлдөрә, бөлгөнлөккә төшөрә торған. □ Разорительный, опустошительный, губительный. *Бөлдөргөс афәт. Бөлдөргөс ҡоролоҡ. Бөлдөргөс бәлә-ҡазалар. Бөлдөргөс хәлгә төшөү.*

**БӨЛДӨРГӘН** *и. бот. диал. кар.* **бөрлөгән.** *Бөлдөргән йыйыу. Бөлдөргән ашау. Бөлдөргән бешкән.* ■ *[Шәүрә:] Бөлдөргән бешкәс, гел ошонда, үрге туғайға ғына килербеҙ әле, йәме, әхирәт! «Ни өсөн «бөлдөргән» икән, «бөрлөгән» түгел?» — тип уйлай Емеш. Әммә өндәшмәй.* З. Биишева.

**БӨЛДӨРКӘ** *и. диал. кар.* **бөлдөргө.** *Ҡылыс бөлдөркәһе.*

**БӨЛДӨРӨҮ (бөлдөр-)** (Р.: разорять; И.: ruin; T.: yıkmak) *ҡ.*

**1.** Бөлгөнлөккә төшөрөү. □ Разорять. // Разорение. *Бөлдөрөп бөтөү. Аслыҡ бөлдөрҙө. Ҡоролоҡ бөлдөрҙө. Аҡсаһыҙлыҡ бөлдөрҙө.*

**2.** Насар хәлгә ҡалдырыу; харап итеү. □ Губить, уничтожать, истреблять. *Ямғыр яуып. бөлдөрҙө. Ҡырау сейәне бөлдөрҙө. Көтөлмәгән буран эште бөлдөрҙө.*

**БӨЛДӨРСӨН** *и. диал. ҡар.* **бөйән.** *Бөлдөрсөн ауырыуы. Бөлдөрсөндө дауалау. Бөлдөрсөн йәрахәте.*

**БӨЛӨК I** (Р.: плохой; И.: hard; T.: kötü) *с. диал.*

**1.** Насар, ауыр. □ Плохой, тяжёлый *(о состоянии). Бөлөк хәлдә ҡалдым.*

**2.** Бойоҡ, меҫкен. □ Жалкий, печальный, грустный *(о человеке). Бөлөк кенә ҡарсыҡ. Бөлөк кенә егет.*

**БӨЛӨК II** (Р.: очень; И.: very; T.: en) *киҫ.*

Үтә, иң. □ Очень. *Бөлөк шәп. Бөлөк матур. Бөлөк ҡупшы кейенә. Бөлөк һылыу ҡыҙ. Бөлөк оҫта бейей.*

**БӨЛӨНӨҮ (бөлөн-)** *ҡ.*

**1.** *ҡайт. ҡар.* **бөлөү 1.** *возвр. от* **бөлөү 1.** *Аслыҡтан бөлөнөп кителде әле.*

**2.** Ауыр хәлдән бойоғоп, меҫкенләнеү. □ Прибедняться, приходить в смятение, сильное волнение. *Апайым бушҡа-юҡҡа бөлөнөп бармай ул.*

**БӨЛӨҮ I (бөл-)** (Р.: разоряться; И.: come to ruin; T.: yıkılmak) *ҡ.*

**1.** Ас-яланғаслыҡҡа, ярлылыҡҡа ҡалыу, бөлгөнлөккә төшөү. □ Разоряться, нищать, беднеть. // Разорение. *Һуғыштан һуң ауыл бөлөп ҡалған. Ҡоролоҡтан бөлөү. Аслыҡтан бөлөү.* ■ *Илдәге буталыштар әсендерә ине уны. Кешеләр ҡырылыр, халыҡ бөлөр.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Ҡыйынлыҡҡа, меҫкен хәлгә ҡалып бирешеү; харап булыу. □ Терзаться, изводиться, быть погубленным. *Гәрлегемдән бөлөп төштөм.*

**БӨЛӨҮ II** *с. диал. ҡар.* **бысраҡ II.**

**БӨЛӨШ** *с. диал. ҡар.* **хәтфә.** *Бөлөш камзул. Бөлөш түбәтәй.*

**БӨЛУҒ I** [ғәр. بلوغ] (Р.: достижение, успех; И.: achievement; T.: ermek) *и. иҫк.*

Өлгәш, ҡаҙаныш. □ Достижение, успех.

**БӨЛУҒ II** [ғәр بلوغ] (Р.: совершеннолетие; И.: full age; T.: bülûğ) *и. иҫк.*

Балиғлыҡ. □ Совершеннолетие. *Бала бөлуғ йәшенә еткән.*

**БӨЛӘЛӘҮ** *и. миф. диал. ҡар.* **бапаҡ I.** *Баланы бөләләү менән ҡурҡыталар.*

**БӨЛӘҢГЕРТ I** (Р.: тусклый; И.: dull; T.: donuk) *с.*

**1.** Ҡараңғылы-яҡтылы, томанлы *(яҡтылыҡҡа ҡарата);* тоноҡ. □ Тусклый, неясный *(о лучах света). Бөләңгерт яҡтылыҡ. Тәҙрәнән бөләңгерт кенә яҡтылыҡ төшә.*

**2.** *кусм.* Һиҙелер-һиҙелмәҫ, асыҡ түгел; тоноҡ. □ Тусклый, неясный, мутный. *Ҡарт йәшлегенең бөләңгерт хәтирәләрен иҫләп ул-тыра.*

**3.** *диал.* Күкшел. □ Синеватый. *Бөләңгерт тауарҙан күлдәк тектереү.* ■ *[Ирназар] күтәрелеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, бөләңгерт күк йөҙөн иңләп, көнтыуыш тарафҡа иҫәпһеҙ самолёт ағыла.* Ә. Хәкимов.

**4.** *диал.* Бер аяҙып, бер яуып торған. □ Пасмурная *(о погоде). Бөләңгерт көн дә эсте бошора.*

**5.** *диал.* Болғансыҡ. □ Мутный *(о воде). Күлдең һыуы бөләңгерт була шул. Һыуы бөләңгерт ине, самауырға һалды ла ҡайнатты.*

**БӨЛӘҢГЕРТ II** (Р.: тускло; И.: dimly; Т.: donuk) *р.*

Тоноҡ, асыҡ түгел. □ Тускло, неясно. *Күҙем бөләңгерт күрә. Бала сағымды бөләңгерт кенә иҫләп ҡалам.*

**БӨЛӘҢГЕРТЛӘНЕҮ (бөләңгертлән-)** (Р.: тускнеть; И.: become dull; Т.: donuklaşmak) *ҡ.*

Бөләңгерткә әйләнеү, бөләңгерт булыу. □ Тускнеть, становиться тусклым, мутным. *Көн бөләңгертләнә башланы.* ■ *Бына, ниһайәт, ағастарҙы аралаған ҡояш нурҙары һүнде, урман эсе әкренләп бөләңгертләнә, томанһыу ҡараңғылыҡҡа сума башланы.* Ә. Хәкимов.

**БӨЛӘХӘТ** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **бола II.** *Төрлө бөләхәттәр булып торған.*

**2.** *ҡар.* **бәлә.** *Иплән кенә йөрөгөҙ, берәй бөләхәт сығарып ҡуймағыҙ.*

**БӨЛӘХӘТЛӘҮ (бөләхәтлә-)** *ҡ. диал.*

**1.** *ҡар.* **болартыу.** *Бүлмәне бөләхәтләп бөтөргәнһең.*

**2.** Тотоноп бөтөрөү. □ Растратить. *Аҡсаны бөләхәтләп бөтөү. Аҙыҡты бөләхәтләп бөтөрөү.*

**3.** Йонсотоу. □ Утомлять. *Бөләхәтләмә туғаныңды, ҡарап ҡына йөрөт.*

**БӨНҮҮӘТ** [ғәр. بُنُوَّة\بُنُوَات] (Р.: опека; И.: guardianship; Т.: velilik) *и. иҫк.*

Уллыҡ. □ Опека. *Бөнүүәткә бала алалар.*

**БӨР I** *и. диал. ҡар.* **бөрө.** *Ҡайын бөрө йыйып алдым әле.*

**БӨР II** *и. диал. ҡар.* **бөргәк.** *Бөр һарыҡ йөнөнә йәбешә.*

**БӨРГӨН** (Р.: однажды; И.: once; Т.: bir gün) *р. һөйл.*

Бер көнө, бер нисә көн элек. □ Однажды, недавно, несколько дней назад. *Бөргөн үк ҡайтҡайным.*

**БӨРГӘК (бөргәге)** (Р.: липучка; И.: greater burdock; Т.: dulavratotu) *и. бот.*

**1.** Ваҡ ҡына зәңгәр сәскәле, һырмауыҡ орлоҡло үлән. □ Липучка, липучник (лат. *Arctium lappa). Бөргәк тулып үҫә.*

**2.** Шул үләндең һырып торған ваҡ ҡына йомро орлоғо. □ Липучка. *Кейемгә бөргәк һырып бөттө.*

**3.** *диал. ҡар.* **дегәнәк 1.** *Салбарыңа бөргәк йәбешкән. Бөргәк япрағын һыҙлаған ергә баҫалар.*

**БӨРГӘКЛӘНЕҮ (бөргәклән-)** (Р.: созревать *(о репейнике)*; И.: (of burdock) ripeni; Т.: dulavratotu yetişmek) *ҡ. диал.*

Бешеп етеү, өлгөрөү *(дегәнәккә ҡарата).* □ Созревать *(о репейнике). Дегәнәк бөргәкләнде инде.*

**БӨРГӘНКЕ** *с. диал. ҡар.* **бөрмәле.** *Бөргәнке тун. Бөргәнке күлдәк.*

**БӨРГӘНСӘК I (бөргәнсәге)** (Р.: вид вяленого мяса; И.: kind of dried meat; Т.: kurutulmuş et türü) *и. диал.*

Таҙғарын эсендә һаҡланған ит. □ Вид вяленого мяса. ■ *Мал һуйғас иң яҡшы майлы ерен тоҡ ҡарын эсенә һалып бөргәнсәк эшләгәндәр, уны яҙ ит әҙәйгәс йә бик ҡәҙерле туғаны килгәндә башҡа иткә ҡушып ашатҡандар.* Экспедиция материалдарынан.

**БӨРГӘНСӘК II (бөргәнсәге)** *и. бот. диал.*

**1.** *ҡар.* **бөрмәкәй.** *Бөргәнсәк япрағы. Бөргәнсәк сәскәһе.*

**2.** *ҡар.* **дегәнәк 1.** *Бөргәнсәк һырыу. Бөргәнсәк япрағы йыйыу.*

**БӨРГӘНӘК (бөргәнәге)** *и. бот. ҡар.* **бөргәк 1,2.** *Бөргәнәк һырыу.*

**БӨРҘӘ** [ғәр. بردة] (Р.: бурда; И.: prophet Muhammad's cloak; Т.: Hz. Muhammed Peygamberimizin hırkası) *и. дини.*

Мөхәммәт пәйғәмбәр кейгән бөйлы ябынса. □ Бурда *(плащ-накидка пророка Мухаммеда).*

**БӨРЙӘН** (Р.: название башкирского племени; И.: name of a Bashkir tribe; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бер башҡорт ырыуының исеме. □ Бурзян *(название башкирского рода). Бөрйән батыры. Бөрйән һылыуы. Бөрйәндәр ере.* ■ *Ырыҫҡолдо үҙ күргән Ҡасҡын, Санъяр бөрйәндәре уның яғында торҙо, уның һүҙен һүҙ итергә тырышып, Ырымбурҙағы йыйында ҡатнашмаҫҡа булдылар.* З. Ураҡсин.

**БӨРККӨС** *и. ҡар.* **бөркөүес.** *Бөрккөс менән һыу һиптереү.*

**БӨРКӨЛДӘҮ (бөркөлдә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **гөрпөлдәү.** *Бөркөлдәп ҡолап төшөү.*

**БӨРКӨЛӨҮ (бөркөл-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бөркөү I, 1—4.** *страд. от* **бөркөү I, 1—4.** *Сәскәләргә һыу бөркөлгән.*

**2.** Көс менән берәй ерҙән, тишектән атылыу. □ Обдавать *чем,* выходить. *Мейестән ялҡын бөркөлә.* ■ *Тауҙан бөркөлөп сыҡҡан аҡһыл төтөн, балаҫтай ғына булып, Яйыҡ буйлап дала яғына таралды.* З. Ураҡсин. *Көбәктән шартлап утлы төтөн бөркөлдө.* Я. Хамматов. *Танауынан һылыу боландың ике яҡҡа тыны бөркөлә.* М. Сөндөклө.

**3.** Нык аңҡыу. □ Обдавать *чем. Сәскәләрҙән хуш еҫ бөркөлә.*

**4.** *күсм.* Кешенең эске хисе, шатлығы йөҙөндә, ҡиәфәтендә сағылыу. □ Проявляться *(о каком-л. радостном чувстве). Йөҙөнән шатлыҡ бөркөлә. Күҙенән нур бөркөлә.* ■ *Закир еңгәһенең тағы ла йәшәреп, алһыуланып киткән йомро, һылыу йөҙөнә, сикһеҙ мөхәббәт нуры бөркөлгән шоморт ҡара күҙҙәренә һоҡланып, хатта бер аҙ көнләшеп ҡараны.* З. Биишева. *Бөтә торошонан, нескә буй-һынынан йәшлек, сафлыҡ бөркөлөп торған ҡыҙ, үҙһүҙләнеп, итек ҡуксәләре менән ергә тып-тып бәреп алды.* Н. Мусин.

**БӨРКӨТ I** [дөйөм төрки *бүркүт, мүргүт* 'бөркөт'] (Р.: орёл; И.: eagle; Т.: kartal) *и. зоол.*

**1.** Йылы ит менән туҡланыусы, ҡая ташлы тауҙарҙа, урмандарҙа йәшәүсе ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған ҡара-көрән төҫтәге иң эре ултыраҡ йыртҡыс ҡош. □ Орёл; беркут. / Орлиный (лат. *Aquila*). *Һауала бөркөт оса. Бөркөт ҡанаты. Баҡраҡ бөркөт.* ■ *Һунарсылар уҡ-һаҙағын аҫып, ҡарсығаларын, бөркөттәрен яурындарына ҡундырып дала яғына юл алды, урмансылар балталарын күтәреп ағаслы тауға йүнәлде, һуғышсылар, көрәш майҙанына йыйылып, уҡ атыу, һөңгө ырғытыу, ҡороҡ ташлау оҫталыҡтарын үҫтерҙе.* З. Ураҡсин. *[Бөркөт] башҡа ҡарағоштарҙан ҡойроҡ төбөндә аҡ һыҙат булыуы менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

**2.** *күсм.* Ҡыйыу, көслө кешегә ҡарата әйтелә. □ Орёл *(употребляется по отношению к храброму, сильному человеку).* ■ *Эйе, шундай ҡеүәтле өс бөркөттө үҫтереп, ҡанатландырып осороп ебәреүе ҡатын кешегә еңел булмағандыр ул.* З. Биишева.

**3.** *миф.* Яҡлаусы, ҡурсалаусы изге ҡош, тотем, ҡояш символы. □ Орёл, мифологизированная птица, тотем, прародитель, покровитель; символ солнца. ■ *Бөркөт ҡырҡ артыу аша күрә.* Халыҡ ижадынан.

**4.** *әйл. ф.* **бөркөтөм** ир балаға яратып әйтелә. □ Орёл мой *(употребляется по отношению к ребёнку мужского пола).* ■ *[Таиба:] Закир һыуһағандыр ҙа баһа... Көнө лә, төнө лә ҡандай томра бит. Сарсағандыр бөркөтөм.* З. Биишева.

♦ **Бөркөт күҙле** үткер, зирәк, янып торған күҙле. □ Зоркие, сверкающие, проницательные глаза. *досл.* Орлиные глаза. **Бөркөт ҡарашлы** үткер, зирәк, янып торған ҡарашлы. □ Зоркий, проницательный взгляд. *досл.* Орлиный взгляд. **Бөркөт**

**танау** ҙур көмрө танау. □ Орлиный нос. ■ *Һунарсыларҙың олораҡы, ҡара мыйыҡлы, бөркөт танаулыһы, йәп-йәшел күҙҙәре мыҙлап янған күк бүрене һырты йылҡылдап торған ҡара айғырҙың эйәр башына арҡыры һалып алған, башҡалары билдәренә икешәрөсәр төлкө, тағы ла ниндәйҙер вак йәнлек тиреләре аҫҡандар.* З. Ураҡсин.

**БӨРКӨТ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһе аймағы. □ Беркут *(название родового подразделения башкир племени табын). Бөркөт аймағы башҡорто.*

**БӨРКӨТӨҮ (бөркөт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бөркөү I.** *понуд. от* **бөркөү I.** *Хуш еҫ бөркөтөү.*

**БӨРКӨТ ТЫРНАҒЫ** (Р.: когти орла; И.: eagle's talon; Т.: kartal tırnağı) *и. миф.*

Мифлаштырылған, һаҡлаусы көскә эйә булыусы бөркөт тырнағы. □ Когти орла, которые имеют обережную силу. ■ *Тел-теш баҫмаһын тип, бөркөт тырнағын ҡырҡып алалар ине.* Башҡорт мифологияһынан.

**БӨРКӨҮ I (бөрк-)** (Р.: брызгать; И.: sprinkle; Т.: püskürmek) *ҡ.*

**1.** Шыйыҡлыҡты өрөп сәсрәтеү. □ Брызгать, прыскать, кропить, окроплять. *Һыу бөркөү.* ■ *Кешенең алдында ғына, һылыу ҡыҙҙың майлап үргән сәс толомо кеүек, ишелеп-сылтырап өс-дүрт ҡарыш киңлектәге ҡаран ағып ята. Ул шунан услап һыу алды, ауыҙына уртланы һәм, сикәһен бүлтәйтеп, ҡорғаҡһыған ҡурайҙың эсенә бөрктө.* Н. Мусин.

**2.** Тишектән төтөн, боҫ һымаҡ нәмәне атылдырыу. □ Обдавать *чем. Мейес ялҡын бөркә.* ■ *Ҡояш был ваҡыт Кирәмәттең нәҡ түбәһендә ултыра ине. Бынан ҡарағанда ул ялҡын бөркөп торған янартау төҫлө күренә.* М. Кәрим. *Төлкөсура иһә йылғаға алып барып аттарҙы эсереп килде, мөрйәһенән төтөн бөркөп янған урт тирәһендә әйләнгеләп йөрөнө лә түмәр өҫтөнә ултырҙы.* Н. Мусин.

**3.** Ныҡ аңҡытыу. □ Пахнуть *(о запахе). Хуш еҫ бөркә.* ■ *Ҡояшта ер, хозурланып тын алған кеүек, хуш еҫ бөркөп ята.* Ә. Хәкимов. *Мең төрлө нәфис сәскәләр менән биҙәлгән сабынлыҡ, иҫ киткес татлы хуш еҫ бөркөп, яй ғына тулҡынып ята.* З. Биишева.

**4.** *күсм.* Көслө итеп һиҙҙереү, сәсеү. □ Пыхать. *Күҙҙәре шатлыҡ бөркөп тора. Йөҙө нур бөркә.* ■ *Тап шул минутта йүкәлектән, ҡуңыр йөҙөнә нур бөркөп балҡып торған аҡ тештәрен йылтыратып, көлә-йылмая йәш бер егет килеп сыҡты.* З. Биишева.

**5.** *күсм.* Күмәк булып бер юлы тышҡа атлығыу; тибеү. □ Пробиваться, прорываться *(о растениях и т. п.). Яҙ етеү менән, үләндәр бөркөп сыға.*

**6.** *а.х.* Зарарлы бөжәктәрҙе бөтөрөү өсөн үҫемлектәргә махсус ҡушылма һибеү. □ Опыливать, опылять, опрыскивать *(для уничтожения вредных насекомых). Алмағастарҙы бөркөү.*

♦ **Йән бөркөү** йәм өҫтәү. □ Вдохнуть жизнь, оживить. **Сәскә бөркөү** сәскә атыу. □ Зацвести. **Теш бөркөү** теш сыҡҡанды белдереп, төкөрөк өрөү *(йәш балаға ҡарата).* □ Зубы режутся *(у ребёнка).*

**БӨРКӨҮ II (бөрк-)** *ҡ. диал. ҡар.* **сәсеү I.** *Шалҡан бөрктөм.*

**БӨРКӨҮ III** [боронғо төрки *бүрк-ә-г(ү)* 'ҡапланған'] (Р.: душный; И.: stuffy; Т.: boğucu) *с.*

Эҫе ауыр һауалы; тынсыу, томра. □ Душный; жаркий, знойный. *Бөркөү һауа. Бөркөү көн.* ■ *Ул көн, Бураншаһуңғы тапҡыр балыҡ ауына сыҡҡан көн, үтә томороҡ, бөркөү ине.* З. Биишева. *Бөркөү өйҙән еләҫ ишек алдына сыҡҡас, Тәүфик ҡомһоҙланып һауа һуланы.* Ф. Иҫәнғолов. *Һауа бөркөү уға, һулыш ауыр, күкрәгендә ауырыу ялҡыны, янар уттай ҡыҙыу бар тәнкәйе, ярҙам итмәй һыуҙың һалҡыны.* Д. Юлтый.

**БӨРКӨҮЕС** (Р.: опрыскиватель; И.: pulverizer; Т.: pulvarizör) *и.*

**1.** Шыйыҡлыҡ бөркә торған ҡорал. □ Опрыскиватель, пульверизатор. *Түшәмде бөркөүес менән ағартыу. Ағастарға бөркөүес менән дарыу һиптереү.*

**2.** *тех.* Шыйыҡлыҡты йәки онтаҡ материалды бөркөү яйланмаһы. □ Форсунка.

**БӨРКӨҮЛЕК (бөркөүлеге)** (Р.: духота; И.: oppressive heat; Т.: havasızlık) *и.*

Эҫе ауыр һауа. □ Духота, жара. *Өйҙәге бөркөүлектән бөтәһе лә ҡыҙарышып ултыра.*

**БӨРКӨҮЛӘНЕҮ (бөркөүлән-)** (Р.: становиться душным; И.: become stuffy; Т.: havasızlanmak) *ҡ.*

Бөркөүгә әйләнеү, бөркөү булыу. □ Становиться душным. *Һауа бөркөүләнде. Өй эсе бөркөүләнеп китте.*

**БӨРКӨҮЛӘНДЕРЕҮ (бөркөүләндер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бөркөүләнеү.** *понуд. от* **бөркөүләнеү.** *Яңып ятҡан мейес өй эсен тағы ла бөркөүләндерә. Өйҙө бөркөүләндереп ҡаҙан ҡайнай.*

**БӨРКӨШӨҮ (бөркөш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бөркөү I.** *взаимн. от* **бөркөү I.** *Һыу бөркөшөү.*

**БӨРКӘЛЕҮ (бөркәл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бөркәү I.** *страд. от* **бөркәү I.** *Күҙенә йәш бөркәлгән. Йүргәккә бөркәлгән бала.*

**БӨРКӘНДЕРЕҮ (бөркәндер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бөркәнеү.** *понуд. от* **бөркәнеү.** *Юрған бөркәндереү.*

**БӨРКӘНЕҮ (бөркән-)** (Р.: закрываться с головой; И.: cover oneself up; Т.: bürünmek) *ҡ.*

**1.** Башты тотош ҡаплап ябыныу. □ Завёртываться, закрываться, укрываться с головой. *Юрған бөркәнеп йоҡлау.*

**2.** Башҡа ябыныу. □ Заматывать на голову *(шаль, платок). Ҡушъяулыҡ бөркәнеү.* ■ *Көн һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, шәл бөркәнеп кенә күршеләргә киткән Сәрби әбей ҡайтып инде.* Н. Мусин.

**3.** *диал.* Болот менән ҡапланыу. □ Окутываться, обволакиваться, покрыться облаками *(о небе). Көн бөркәнеп китте, яуыр ахыры.*

**БӨРКӘНСЕК (бөркәнсеге)** (Р.: платок-покрывало; И.: females' veil; Т.: peçe) *и.*

**1.** *этн.* Ҡатын-ҡыҙ битен бөркәй торған баш ябыуы. □ Платок-покрывало, закрывающее лицо женщины. *Йөҙҙө бөркәнсек менән ҡаплау.*

**2.** *рит.* Мәрхүмдең йөҙөн ҡаплай торған ябыу. □ Платок, слой савана, покрывающий лицо покойника. *Ҡатындар мәрхүмдең йөҙөнә бөркәнсек ҡапланылар.*

**3.** *һөйл.* Ҡарындағы баланы уратып ҡаплаған яры; йөҙлөк. □ Рубашка *(оболочка плода в утробе). Бөркәнсектә тыуыу.* ■ *[Бибеш:] Ҡарасаҡ инәй мәрхүм, ҡайһы бер бала ябай күҙгә күренмәҫ бөркәнсектә тыуа. Шул бөркәнсек уны бәлә-ҡазанан һаҡлай, тип һөйләй торғайны.* З. Биишева. *Бала бөркәнсектә тыуһа, бәхетле була.* Башҡорт мифологияһынан.

**БӨРКӘНСЕКЛЕ** (Р.: в платке-покрывале; И.: witha veil on ; Т.: peçeli) *с.*

**1.** Бөркәнсек (1) ябынған. □ В платке-покрывале. *Бөркәнсекле ҡатын.*

**2.** Бөркәнсеге (3) булған. □ Покрытый оболочкой. *Бөркәнсекле бала.*

**БӨРКӘТЕҮ (бөркәт-)** *ҡ. ҡар.* **бөркәндереү.** *Яулыҡ бөркәтеп сығарҙым.*

**БӨРКӘТӘҮ** *и. диал. ҡар.* **бөрләтәү**. *Тауыҡ боркәтәүе.*

**БӨРКӘҮ (бөркә-)** (Р.: закрывать с головой; И.: cover oneself; Т.: başından kapamak) *ҡ.*

**1.** Баштан аша ҡаплап ябыу. □ Закрывать, покрывать с головой. *Баланы йүргәк менән бөркәү.*

**2.** Башҡа ябындырыу. □ Надевать на голову. *Ҡушъяулыҡ бөркәп йөрөй.*

**3.** Ҡаплау, ябыу. □ Закрывать, покрывать. *Күҙемде йәш бөркәй.* ■ *Бөркәү һәйбәт булды, игенгә һыу үтерлек түгел.* М. Тажи. *Зөлхизәнең йондоҙҙай шат күҙҙәрен йәш бөркәй.* З. Биишева.

**БӨРКӘҮЛЕ** (Р.: крытый; И.: covered; Т.: kapalı) *с. диал.*

Көплө, ҡаплаулы. □ Крытый. *Бөркәүле машина. Бөркәүле баҙар.*

**БӨРЛӨГӘН** [боронғо төрки *бүр-лү-гән* ‘бөрлөгән’] *и. бот.*

**1.** *ҡар.* **ҡара бөрлөгән.** *Бөрлөгән ашау. Бөрлөгән емеше. Тәмле бөрлөгән.*

**2.** *ҡар.* **ҡыҙыл бөрлөгән.** *Бөрлөгән йыйыу. Бөрлөгән япрағы. Бөрлөгән ҡайнатмаһы.*

**БӨРЛӨГӘНЛЕ** (Р.: с ежевикой или костяникой; И.: blackberry; Т.: böğürtlenli) *с.*

Бөрлөгәне булған. □ С ежевикой или костяникой. *Бөрлөгәнле һауыт. Бөрлөгәнле туғай. Бөрлөгәнле ҡайнатма ашау.*

**БӨРЛӨГӘНЛЕК (бөрлөгәнлеге)** (Р.: место, изобилующее ежевикой или костяникой.; И.: blackberry; Т.: böğürtlenlik) *и.*

Бөрлөгән күп үҫкән урын. □ Место, изобилующее ежевикой или костяникой. *Бөрлөгәнлеккә барып сығыу. Баҡса артында ғына бөрлөгәнлек бар.*

**БӨРЛӘНТИН** [рус. *бриллиантин* < фр. *brillant*] (Р.: бриллиантин; И.: brilliantine; Т.: briyantin) *и.*

Үҙенән сыҡҡан ваҡ-ваҡ ҡына күберсекле йоҡа йылтыр тауар. □ Бриллиантин. *Бөрләнтиндән күлдәк.*

**БӨРЛӘТӘҮ** (Р.: зоб птицы; И.: crop; Т.: kursak) *и.*

Ҡош-ҡорттоң ашҡаҙаны. □ Зоб *(птицы). Ҡаҙ бөрләтәүе. Өйрәк бөрләтәүе. Бөрләтәү бешереү.*

**БӨРМӘ I** (Р.: сборка; И.: fold; Т.: büzgü) *и.*

**1.** Кейемдең бөрөп, йыйырып теккән урыны. □ Сборка, складка. *Күлдәк бөрмәһе. Бөрмә һалыу.*

**2.** Кейемдең йәки бүтән нәмәнең бау үткәреп бөрөлгән ере. □ Рубец *(для продёргивания шнура, резинки). Салбар бөрмәһе.* ■ *Ҡыяла торғас. бер заман дөбөр-шатыр күк күкрәне лә ҡойоп ямғыр яуырға кереште; малайҙарҙың әлеге бәрҙе ҡайғыһы китте, бер ҡулына шешкә теҙелгән балыҡтарын, икенсе ҡулдары менән һыуланып ауырайыуҙан төшөп барған ыштан бөрмәләрен тотоп, ауылға ҡарай йүгерҙеләр.* Н. Мусин.

**БӨРМӘ II** (Р.: сборчатый; И.: with folds; Т.: büzgülü) *с.*

Бөрөп, йыйырып тегелгән. □ Сборчатый, со сборками, со складками. *Бөрмә итәк. Бөрмә билле күлдәк.*

**БӨРМӘБАШ** *с. диал. ҡар.* **бөрмә башлы.** *Бөрмәбаш ҡыйыҡ.*

**БӨРМӘ БАШЛЫ** (Р.: с четырёхскатной крышей; И.: pyramidal; Т.: dört yamaçlı çatı) *с.*

Дүрт яҡлап ябылған *(өй ҡыйығына ҡарата).* □ Четырёхскатный *(о крыше). Бөрмә башлы өй төҙөү.*

**БӨРМӘ ДЕГӘНӘК (дегәнәге)** *и. бот. диал. ҡар.* **бөргәк 1, 2.**

**БӨРМӘК (бөрмәге)** (Р.: прицепник; И.: burdock species; Т.: dulavratotu türü) *и. бот. диал.*

Суҫҡа дегәнәге. □ Прицепник (лат. *Coucalis). Бөрмәк япрағы.*

**БӨРМӘКӘЙ I** (Р.: подмаренник; И.: bedstraw; Т.: yoğurt otu) *и. бот.*

Быуын-быуындан уратып сыҡҡан ваҡ япраҡлы, ойҡаш-ойҡаш аҡ, ал, һары сәскәле, йөнтәҫ ҡуш орлоҡло болон үләне. □ Подмаренник (лат. *Galium). Бөрмәкәй япрағы. Бөрмәкәй сәскәһе.*

**БӨРМӘКӘЙ II** *и. бот. диал. ҡар.* **сырмалсыҡ I.**

**БӨРМӘ ҠЫЙЫҠЛЫ** *с. ҡар.* **бөрмә башлы.** *Бөрмә ҡыйыҡлы өй.*

**БӨРМӘЛЕ** (Р.: сборчатый; И.: folded; Т.: bürülmüş) *с.*

Бөрмәләп тегелгән. □ Сборчатый, со сборками; складчатый. *Бөрмәле күлдәк. Бөрмәле конструкциялар.* ■ *Алтынбай улың [Насирҙың] яурындары төшә биргән мыҡты кәүҙәһенә, өҫтөндәге ярым ҡаҙакса, ярым башҡортса кейеменә күҙ һалды: башында елкәһе ҡаплаулы ҡаҙаҡ күләпәрәһе. яғаһыҙ күлдәк, бөрмәле салбар.* З. Ураҡсин.

**БӨРМӘЛӘНДЕРЕҮ (бөрмәләндер-)** *ҡ. ҡар.* **бөрмәләү.** *Бөрмәләндереп тегелгән тун.*

**БӨРМӘЛӘНЕҮ (бөрмәлән-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бөрмәләү.** *страд. от* **бөрмәләү.** *Күлдәге бөрмәләнеп тегелгән.*

**БӨРМӘЛӘҮ (бөрмәлә-)** (Р.: сборить; И.: fold; Т.: büzmek) *ҡ.*

Бөрмәле итеү, бөрмә яһау. □ Сборить, присборивать, делать сборки; делать складки. *Бөрмәләп тегеү. Тунды бөрмәләп тегеү.* ■ *Торомтай арбаһының ҡабығындағы күмер саңын һеперен төшөрҙө, аҡсаһын шутлап, бөрмәләп тегелгән кескәй көшөлөгөнә һалды ла, эшләй белһәң, бына шулай ул тигән кеүек, улына ҡарап ҡуйҙы.* Н. Мусин.

**БӨРМӘСӘ I** *и. диал. ҡар.* **бөрмә I.** *Күлдәк бөрмәсәһе. Ыштан бөрмәсәһе.*

**БӨРМӘСӘ II** *и. бот. диал. ҡар.* **бөргәк 1, 2.** *Бөрмәсә орлоғо. Балағыңа бөрмәсә орлоғо һырыған.*

**БӨРМӘТ I** *с. диал. ҡар.* **бөрмә II.** *Бөрмәт тун. Бөрмәт итәк. Бөрмәт күлдәк.*

**БӨРМӘТ II** *и. бот. диал. ҡар.* **бөрмәкәй.** *Бөрмәттең орлоғо кейемгә йәбешеүсән була.*

**БӨРӨ I** [боронғо төрки *бүр-ү* < *бөгүр-үг* 'бөрө, бөйөр'] (Р.: почка; И.: bud; Т.: tomurcuk) *и. бот.*

Үҫемлектең япраҡҡа тумалған бәбәге. □ Почка (лат. *gemma*). *Ҡайын бөрөһө. Сәскә бөрөләре. Емеш бөрөләре. Бөрө йыйыу.* ■ *Ҡарағайҙар асыҡ йәшел, ә ҡайындарҙың туҙы тағы ла ағыраҡ күренгән һымаҡ; бөрөләре суҡлана башлаған, күрәһең, ҡышҡылыҡҡа үле йоҡоға талған ағастарҙың олононда яҙғы һут уйнарға керешкән.* Н. Мусин. *Ана, монтаж менән булашҡан егеттәрҙе ҡара! Ҡышын ҡурышып йөрөгән кешеләр бөрө тиртеп япраҡ ярырға ултырған ағастар кеүек күренә.* Р. Солтангәрәев.

**БӨРӨ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Һалъют ҡәбиләһе аймағы. □ Бурә *(название родового подразделения башкир племени сальют). Бөрө аймағы башҡорто.*

**БӨРӨ III** (Р.: шишка; И.: cone; Т.: kozalak) *и. диал.*

1. Түбырсыҡ. □ Шишка. *Ҡарағай бөрөһө. Шыршы бөрөһө.*

2. Имән сәтләүеге. □ Жёлудь.

3. Гөлйемеш емеше. □ Плод шиповника. *Бөрө йыйыу. Бөрө ҡайнатып эсеү.*

**БӨРӨЖ I** [ғәр. برج] (Р.: зодиак; И.: zodiac; Т.: burç) *и. иҫк. астр.*

1. Ҡояштың йыллыҡ хәрәкәт юлы буйлап урынлашҡан ун ике йондоҙлоҡ төркөмө һәм уларҙың һәр береһе *(хәмәл, сәүер, жәүзә, саратан, әсәд, сөмбәлә, мизан, ғәҡрәп, ҡәүес, жәди, дәлү, хут).* □ Зодиак.

2. Шул йондоҙлоҡ нигеҙендә аталып йөрөтөлгән ун ике айҙың дөйөм атамаһы. □ Знак зодиака, созвездие. *Ун ике бөрөж.*

**БӨРӨЖ II** *и. диал. ҡар.* **бөрөз 2.** *Бөрөж менән соҡоу.*

**БӨРӨЗ** (Р.: пешня; И.: ice pick; Т.: buz keskisi) *и.*

1. Ағас һаплы лом; һөймән. □ Пешня. *Бөрөз һабы.*

2. Умарта, кәмә эсен соҡой торған ҡасау башлы, ағас һаплы ҡорал. □ Долото *(для выдалбливания колоды, лодки). Бөрөз ҡайрау.*

3. Беҙ һымаҡ уҡ башағы. □ Острый конец стрелы. *Уҡ бөрөзө.*

4. *диал. ҡар.* **бағау.** *Бөрөз һаплау.*

**БӨРӨЙ** *и. диал. ҡар.* **түбырсыҡ.** *Шыршы бөрөйө.*

**БӨРӨКӨН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһе аймағы. □ Бэрэкэн *(название родового подразделения башкир племени табын). Бөрөкөн аймағы башҡорто.*

**БӨРӨЛӨ** (Р.: с почкой; И.: having buds; Т.: tomurcuklu) *с.*

Бөрөһө булған. □ С почкой, имеющий почки. *Бөрөлө ағас ботағы.*

**БӨРӨЛӨҮ I (бөрөл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бөрөү.** *страд. от* **бөрөү.** *Бөрөлгән күлдәк итәге. Бөрөлгән япраҡ.*

**БӨРӨЛӨҮ II (бөрөл-)** *ҡ. ҡар.* **ҡыҫылыу.** *Күҙе бөрөлөп кенә тора.*

**БӨРӨЛӘНЕҮ (бөрөлән-)** (Р.: набухать; И.: burgeon; Т.: tomurcuklanmak) *ҡ.*

**1.** Бөрө тумалтыу. □ Набухать *(о почках на деревьях). Ағастар бөрөләнде.*

**2.** *күсм.* Ғәмәлгә билге биреү; яралыу. □ Зарождаться *(о чувствах). Тәүге хистәр бөрөләнә. Мөхәббәте бөрөләнде.* ■ *[Закир:] Гөлйыһандың, гонаһһыҙ сабыйҙың, тәү бөрөләнгән саф тойғоһона ундай ҡара тап булып төшөргә теләмәйем мин. Теләмәйем!* З. Биишева.

**БӨРӨМ** *и. диал. ҡар.* **бөрмә I, 2.** *Ыштан бөрөмө. Тоҡсай бөрөмө.*

**БӨРӨНӨҮ (бөрөн-)** *ҡ. диал. ҡар.* **төрөнөү 1.** *Юрғанға бөрөнөп ятыу.*

**БӨРӨНӘН ҮРСЕҮ (бөрөнән үрсе-)** (Р.: почковаться; И.: bud, gemmate; Т.: tomurcuklanmak) *ҡ. бот.*

Бөрөләнеү ярҙамында үрсеү. □ Почковаться. *Был ҡыуаҡ бөрөнән үрсей.*

**БӨРӨС** (Р.: косяк; И.: jamb; Т.: söve) *и. диал.*

Ишек яңағы. □ Косяк. *Бөрөскә һөйәлеү.*

**БӨРӨҮ (бөр-)** (Р.: сборить; И.: fold; Т.: büzmek) *ҡ.*

**1.** Тигеҙ һырҙар яһап йыйырыу, бөрмә яһау. □ Сборить, присборивать, делать сборки; делать складки. *Күлдәк итәген бөрөп тегеү. Түндың билен бөрөү.* ■ *Башына ябынған шау биҙәк зәңгәр кешмир яулығы, төрлө ебәк таҫмалар баҫып, билдән бөрөп, мул итеп тегелгән һары сатин күлдәге, уҡалы ҡыҙыл бәрхәт камзулы менән ул [Таиба әбей] хәҙер хужа ҡатынға түгел, ә ҡунаҡ ҡоҙағыйға оҡшап уҡ тора.* З. Биишева.

**2.** Йыйырып остан тарайтыу. □ Делать круглым, округлым. *Тоҡсайҙың ауыҙын бөрөп ҡуйыу. Ирендәрен бөрөп кенә һөйләшә.* ■ *Туп шикелле йоморсаҡ, көләкәс Йәнеш, йә нәфис бармаҡтары менән әсәһенең тығыҙ, аҡ күкрәген матҡып тотоп, йотлоғоп имә, йә һөткә мансылған ирендәрен уймаҡ хәтле генә итеп матурлап бөрә.* З. Биишева.

**3.** Йыйып йомарлау. □ Сборить, присборивать. *Һыуыҡ ҡайын япраҡтарын бөргән.*

**4.** Йыйырып тартылдырыу; ҡурыштырыу. □ Вязать. *Муйыл ауыҙҙы бөрә.*

**5.** *күсм.* Ҡыҫҡан һымаҡ итеү. □ Резко схватывать. *Йөрәкте бөрөп алды.*

♦ **Бөрөп алып барыу** 1) ҡыҫмаҡҡа алыу. □ Взять в оборот, прижать к стене. *Дошманды бөрөп алып барыу;* 2) ҡабаландырыу. □ Торопить. **Бөрөп (тотоп) алыу** матҡып тотоу. □ Зацепить. ■ *Хаммат, үҙе лә аңламаҫтан, ҡапыл ҡустыһының яғаһынан бөрөп тотоп алды ла һелкетә тартып күҙенә теклән ҡараны.* З. Биишева. *Тәлкөсура, ҡапыл ынтылып, уның [Уйылдандың] яғаһынан бөрөп тотто ла, лып иттереп урындыҡҡа ултыртты.* Н. Мусин. **Май бөрөү** 1) бик нык һимереү. □ Оболакиваться, покрываться жиром, маслом; ожиреть. ■ *[Ҡунаҡхана хужаһы] бик шәп кейенгән, ләпәш, йыуан кәүҙәле, май бөргән күҙҙәре уйнаҡлап торған кешенең ҡатланып-ҡарталанған елкәһендәге тирҙе ҙур ҡульяулыҡ менән тырышып-тырышып һөртөүен күрҙе.* Н. Мусин; 2) үтә нык байып, һаранайыу. □ Сильно разбогатев, скупиться, жадничать. *Күршене май бөрә башланы бит әле.*

**БӨРӨШ** (Р.: сморщенный; И.: wrinkled; Т.: buruşuk) *с.*

Бөрөлөп бәләкәсәйгән. □ Сморщенный. *Бөрөш ирендәр.*

**БӨРӨШАУЫҘ** *и. зоол. диал. ҡар.* **бөрөш I.** *Бөрөшауыҙ тотоу.*

**БӨРӨШКӘК (бөрөшкәге)** (Р.: поперечный топор; И.: transversal axe; Т.: balta türü) *и. диал.*

Арҡыры балта. □ Поперечный топор. *Бөрөшкәк һаплау.*

**БӨРӨШ ҠАСАУ** (Р.: круглое долото; И.: gouge; Т.: oyma keskisi) *и.*

Йомро ҡасау. □ Круглое долото. *Бөрөш ҡасау менән тишеү.*

**БӨРӨШӨҮ (бөрөш-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **бөрөү 1.** *взаимн. от* **бөрөү 1.** *Күлдәкте бөрөшөп биреү. Түнды бөрөш әле.*

**2.** Кибеп, һулып йомарланыу; ҡурышыу. □ Съёживаться, морщиться. *Эҫегә еләк бөрөшкән. Һыуыҡҡа бөрөшкән япраҡтар.*

**3.** Йыйырылып тартылыу *(телгә, ауыҙ эсенә ҡарата);* ҡурышыу. □ Вязать *(во рту). Ауыҙ бөрөшөү.*

**4.** *диал. ҡар.* **бөршәйеү 1.** ■ *Ҡыштың буйы бөрөшкән зат әлһерәп, күрҙе сығып көндөң күҙен тыштағы.* М. Аҡмулла.

**БӨРӨШТӨРӨҮ (бөрөштөр-)** (Р.: морщить; И.: wrinkle; Т.: buruşturmak) *ҡ.*

**1.** Бөрөп бәләкәсәйтеү, тарайтыу. □ Морщить. *Ауыҙҙы бөрөштөрөү.* ■ *[Уйылдан] тартмаһын асып, ҡәләм, ҡағыҙ алды ла, һалынҡы иренен бөрөштөрөп уйлана-уйлана, яҙырға тотондо.* Н. Мусин.

**2.** Киптереп, һулытып йомарлау; ҡурыштырыу. □ Палить, сушить, съёживать. *Һыуыҡ япраҡтарҙы бөрөштөрә. Ҡырау бойҙайҙы бөрөштөрҙө.*

**3.** Йыйырып тартылдырыу; ҡурыштырыу. □ Вязать. *Ҡара миләш ауыҙҙы бөрөштөрә.*

**БӨРӨ ЯРЫУ (бөрө яр-)** (Р.: почковаться; И.: to bud; Т.: tomurcuklanmak) *ҡ. бот.*

Бөрөгә тумалыу. □ Почковаться. *Ағастар бөрө яра.*

**БӨРСӨК I (бөрсөгө)** [төрки сығанаҡлы, *бөртөк* менән тамырҙаш] (Р.: маленькая капелька; И.: tiny bit; Т.: damlacık) *и.*

**1.** Бик бәләкәс кенә бөртөк *(шыйыҡлыҡҡа ҡарата).* □ Маленькая капелька, крошечная частичка *чего-л. (о жидкости). Фонтандан һыу бөрсөгө сәсрәй.* ■ *Һалдат тешен ҡыҫып ыңғырашмаҫҡа тырышһа ла, маңлайын бөрсөк-бөрсөк тир ҡаплауына, ара-тирә ыһ тип күҙен йомоуына ҡарағанда, сак түҙеп ятыуын аңларға мөмкин ине.* Ә. Хәкимов. *Әхмәт, рәйестең асыуланып ҡысҡырыуына ҡарамаҫтан, еңел һулыш алып ҡуйҙы, маңлайына бәреп сыҡҡан ваҡ тир бөрсөктәрен ҡул һырты менән һөрттө, өҫтәлгә ҡутәреп һуҡҡан бүркен алып, ҡолаҡсындарын ҡайтарып бәйләп, башына кейҙе.* Н. Мусин.

**2.** Өрөлөп торған бәләкәс кенә ҡабарсыҡ. □ Волдырь, водянистая мозоль. *Бөрсөктәр барлыҡҡа килә.*

**БӨРСӨК II** (Р.: очень маленький; И.: tiny; Т.: küçücük) *с.*

**1.** Бик бәләкәй. □ Очень маленький. *Бөрсөк тамсы. Бөрсөк алтын.*

**2.** *диал.* Ҡыҫыҡ *(күҙгә ҡарата).* □ Узкий *(о глазах). Бөрсөк күҙ.*

**БӨРСӨКЛӘНЕҮ (бөрсөклән-)** (Р.: превращаться в капельки; И.: turn into droplets; Т.: damla oluşması) *ҡ.*

Бөрсөк булыу *(шыйыҡлыҡ тураһында).* □ Превращаться в капельки, в маленькие крошечные частички *(о жидкости). Бөрсөкләнеп тир аға.*

**БӨРСӨКЛӘҮ (бөрсөклә-)** (Р.: очищать; И.: pick; Т.: soymak) *ҡ.*

Ишкән бауҙың тороп ҡалған остарын, йүкәләрен таҙартыу; бөрсөү. □ Очищать *(от кончиков «усов», например, аркан). Арҡанды бөрсөкләү.*

**БӨРСӨЛӨҮ (бөрсөл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бөрсөү.** *страд. от* **бөрсөү.** *Бөрсөлгән арҡан.*

**БӨРСӨМӘ** *и. диал. ҡар.* **сабыртҡы.** *Тәңгә бөрсөмә сығыу.*

**БӨРСӨҮ (бөрсө-)** (Р.: очищать; И.: clean; Т.: soymak) *ҡ.*

**1.** Ишкән бауҙың тороп ҡалған остарын, йүкәләрен таҙартыу; бөрсөкләү. □ Очищать *(от кончиков «усов», например, аркан). Бабай арҡан бөрсөп ултыра.*

**2.** Ваҡ емеш-еләкте берәмләп йыйыу. □ Собирать мелкие ягоды поштучно. *Бөрсөп йыйыу. Еләкте бөрсөп йыйыу. Муйылды бөрсөп бөтөр.*

**3.** Картуфты шытымынан таҙартыу. □ Очистить картофель от ростков.

**БӨРСӘ I** [төрки сығанаҡлы *бүр-*] (Р.: блоха; И.: flea; Т.: pire) *и.*

**1.** *зоол.* Һикереп йөрөй торған ваҡ ҡына ҡан һурғыс паразит бөжәк. □ Блоха. / Блошиный (лат. *Siphonaptera*). *Сыбар бөрсә. Имән бөрсәһе. Тал бөрсәһе. Еләк бөрсәһе. Кәбеҫтә бөрсәһе. Етен бөрсәһе. Йәшелсә бөрсәһе. Ҡом бөрсәһе. Ер бөрсәһе. Өй бөрсәһе. Кеше бөрсәһе. Бөрсә талау.* ● *Бөрсәгә асыуланып, тунды утҡа яҡмайҙар.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Бәләкәй кәүҙәле етеҙ кешегә әйтелә. □ Ловкий, шустрый *(по отношению к маленькому человеку). Был ҡыҙ торғаны бөрсә инде.*

**3.** *күсм.* Бәләкәй машиналарға бирелгән исем. □ Маленькая машина.

♦ **Ут бөрсәһе** бәләкәй кәүҙәле, ут кеүек етеҙ кеше. □ Живой, шустрый *(по отношению к человеку маленького роста).* ■ *Ҡайһылай үткер ҡыҙыҡай, ут бөрсәһе кеүек, — тип уйланы ул [Төлкөсура] һаман албырғауы үтмәгән көйө. — Ошо йорт хужаһының ҡыҙымы икән ни?* Н. Мусин.

**БӨРСӘ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуы аймағы. □ Бэрсэ *(название родового подразделения башкир-бурзянцев). Бөрсә аймағы.*

**БӨРСӘЙЕҮ (бөрсәй-)** (Р.: распухать; И.: swell; Т.: sivilce çıkmak) *ҡ.*

Бөрсөк кенә булып сурайыу *(һыҙҡыға ҡарата).* □ Распухать *(о прыщах). Битемә бөрсәйеп һыҙҡылар килеп сыҡты.*

**БӨРСӘКӘЙ** *и. бот. диал. ҡар.* **һырлан 1.** *Бөрсәкәй һырыны.*

**БӨРСӘЛӘЙ** *и. бот. диал. ҡар.* **һырлан 1.** *Бөрсәләй орлоҡтары.*

**БӨРСӘНӘЙ** *и. бот. диал. ҡар.* **һырлан 1.** *Салбарыма һырыған бөрсәнәйҙәрҙе таҙартып ултырам.*

**БӨРТӨК (бөртөгө)** [боронғо төрки *бүрт-үг* 'бөртөк' < *бүр-*] (Р.: крупинка; И.: grain; Т.: tanecik) *и.*

**1.** Бер төрлө ваҡ өлөшсәләрҙән торған нәмәнең бер берәмеге. □ Крупинка, крупица; частица; зёрнышко, зерно. *Ынйы бөртөктәренән теҙелгән мәрйен. Тары бөртөктәре йәбештереп һүрәт эшләү. Ваҡ ҡына ҡар бөртөктәре төшә башланы.* ■ *Ел Алатау артынан ҡалын һоро болоттарҙы ҡыуалап килтерҙе лә туңаҙыған ер өҫтөнә тәүге ҡар бөртөктәрен түңкәреп бәрергә тотондо.* Н. Мусин. *Ҡайын туҙынан семәрләп эшләнгән моҙғалар мөлдөрәшеп ятҡан ҡара ҡарағат бөртөктәре менән өймәләм тулғайны.* З. Биишева.

**2.** Иҫәпләү, һанау берәмеге. □ Штука; голова *(единица счёта). Төркөмдә ике бөртөк кенә ҡыҙ, ҡалғандары гел егеттәр. Баланың ике бөртөк кенә теше сыҡҡан.*

**3.** *күсм. Ниҙеңдер* бәләкәй генә бер өлөшө. □ Крупица. ■ *Кешеләр нимә генә һөйләһә лә, һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бөртөгө бар.* Ә. Вәли.

♦ **Бер бөртөк [тә]** *йәки* **бөртөк тә** 1) бер ҙә, әҙ генә лә. □ Ни крошки, ничуть. *Бөртөгө лә ҡалмаһын. Бөртөк тә бесән ҡалманы;* 2) һис тә. □ Нисколько. *Бер бөртөк һанламай. Бер бөртөк теймәнем.* ■ *[Уйылдан — Төлкөсураға:] Башҡа ҡыҙҙарҙан бөртөк тә тартынып тормайым, шул һинең һеңлеңде күрһәм, йомшарам да төшәм.* Н. Мусин.

**БӨРТӨКЛӨ** (Р.: зернистый; И.: grainy; Т.: taneli) *с.*

Бөртөк-бөртөк таралып торған, бөртөктәрҙән (1) торған. □ Зернистый, зерновой; гранулированный. *Бөртөклө ыуылдырыҡ. Инәй сәйнүккә бөртөклө сәй һалып самауырҙан һыу ағыҙҙы.*

**БӨРТӨКЛӨ АШЛЫҠ (ашлығы)** *и. бот. ҡар.* **бөртөклөләр.**

**БӨРТӨКЛӨЛӘР** (Р.: зерновые культуры; И.: crops; Т.: ) *и. бот.*

Бөртөклө иген (ашлыҡ) культуралары. □ Зерновые культуры.

**БӨРТӨКЛӘНДЕРЕҮ (бөртөкләндер-)** (Р.: гранулировать; И.: granulate; Т.: tanelemek) *ҡ.*

Бөртөклөгә әйләндереү. □ Гранулировать. *Бөртөкләндерелгән сәй. Ашламаларҙы бөртөкләндереү.*

**БӨРТӨКЛӘНЕҮ (бөртөклән-)** (Р.: быть гранулированным; И.: be granulated; Т.: tanelenmek) *ҡ.*

Бөртөклө-бөртөклөгә әйләнеү, бөртөклө-бөртөклө булыу. □ Быть гранулированным. *Бөртөкләнгән ашламалар. Бөртөкләнгән сәй.*

**БӨРТӨКЛӘҮ (бөртөклә-)** (Р.: перебирать; И.: sort out; Т.: ayıklamak) *ҡ.*

Бөртөк-бөртөк итеп айырыу; берәмләү. □ Перебирать, собирать *(по крупинке, по крупице, по одному). Бөртөкләп йыйыу. Бөртөкләп ыҫәпләү.* ■ *Кыҫкаһы, ғүмер-ғүмергә ағас-ташты бөртөкләп ыҫәпләп, кәҙерләп өйрәнгән [кешеләр] өсөн был хәтәр күренеш.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Бөртөкләп һанарлык** бик аҙ, бармак менән һанарлык. □ Очень мало. *Ауылда һуғыш ветерандары бөртөкләп һанарлык кына калды.*

**БӨРШӘЙЕҮ (бөршәй-)** (Р.: сжиматься; И.: curl up; Т.: büzülmek) *к.*

**1.** Кәүҙәне, аяк-кулды йыйып йомарланыу; шокрайыу. □ Сжиматься, съёживаться, сморщиваться. *Бала һалкын өйҙә бөршәйеп кенә йоклап ята. Бесәй бөршәйеп кенә урындыкка менеп яткан.* ■ *Төлкөсура эйәрҙә бөршәйә биреп ултырған Миңлегөлдө яңы абайланы, ниҙер һиҙенде һәм атын саптырып килеп етте.* Н. Мусин. *Бына Емеш мырҙаһы Һөйөндөктө күтәреп, иртәнге һалкындан бөршәйеп, тупһала баҫып тора.* З. Биишева. *Ғабдулланың һынаулы үткер карашын күргән Якуп, бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып калды.* М. Кәрим.

**2.** *диал. кар.* **бөрөшөү 2—3.** *Япрактар эҫегә бөршәйгән.*

**БӨРШӘЙЕШЕҮ (бөршәйеш-)** *к. урт. кар.* **бөршәйеү.** *взаимн. от* **бөршәйеү.** *Балалар өшөгәндәр ҙә бөршәйешеп кенә ултыралар.* ■ *Ауыл араһында күшегеүҙән бөршәйешкән малдар каңғырып, бакырышып йөрөй.* Н. Мусин. *Үләндәр кыуарған, ағас япрактары ла бөршәйешеп йомарлана башлаған.* З. Уракси́н.

**БӨРШӘЙТЕҮ (бөршәйт-)** (Р.: морщить; И.: pucker; Т.: buruşturmak) *к.*

Бөрөш итеү, бөрөштөрөү. □ Морщить. *Иренде бөршәйтеү.*

**БӨРӘ** *и. бот. диал.*

**1.** *кар.* **бөрө I.** *Кайын бөрәһе бик файҙалы.*

**2.** *кар.* **бөргәк.** *Бөрә һырыған.*

**БӨРӘТ** (Р.: скручённое толстое лыко; И.: thick twisted bast; Т.: bükülmüş kalın ıhlamur kabuğunun içi) *и.*

Йыуан итеп боролған йүкә. □ Скручённое толстое лыко. *Бөрәт алып кайтыу.*

**БӨСӘЛ** *с. диал. кар.* **булдыкһыҙ.** *Был бөсәл егет кайҙан килгән?*

**БӨҪКӨҮ (бөҫкө-)** (Р.: стать затхлым; И.: become musty; Т.: küf kokmak) *к. диал.*

Һөт ашамлыктарының әсеп еҫләнеүе; бүкһеү. □ Стать затхлым *(о молочных продуктах). Һөт бөҫкөгән.*

**БӨТЕЙ** *и. диал. кар.* **бетеү.** *Бөтей тағып йөрөгәндәр.*

**БӨТКӨЛ** *а. кар.* **бөтә.** *Бөткөл ил. Бөткөл ауыл.*

**БӨТКӨЛЛӨ** *а. кар.* **бөтә.** *Халыктың бөткөллөһө бесән эшләй.*

**БӨТКӨЛЛӘЙ** *р. диал. кар.* **бөтөнләй.** *Бөткөлләй онотканмын.*

**БӨТКӨЛ ТҮГЕЛ** *р. шул ук* **бөтөрлөк түгел** *(кар.* **бөтөү**). *Бында еләк күп, бер ҙә генә бөткөл түгел.*

**БӨТКӨҺӨҘ** (Р.: неиссякаемый; И.: inexhaustible; Т.: tükenmez) *с.*

**1.** Бөтә торған түгел, бөтмәй торған. □ Неиссякаемый, неисчерпаемый, неистощимый. *Еләк быйыл бөткөһөҙ күп.* ■ *Әхмәтхан тағы уны [Мәусифаны] какмай ҙа, әллә ни осондороп та ебәрмәй — бисә бисә урынында булырға тейеш, эйе, ой тирәһендә эш тауык сүпләһә лә бөткөһөҙ, шунда соконһон.* Р. Камал.

**2.** Иге-сиге юк, сиктән тыш күп; бөтмәҫ. □ Много. *Бөткөһөҙ байлык. Бөткөһөҙ кыуаныс.* ■ *Зөлхизәнең бөткөһөҙ бәхет менән нурланған күҙҙәренә тағы моң йүгерҙе.* З. Биишева.

**БӨТКӘНЕ** (Р.: сплошь; И.: wholly; Т.: büsbütün) *р.*

Тотошо менән; шау. □ Сплошь, целиком, полностью. *Күлдәктең бөткәне сәскәле биҙәк.*

**БӨТЛӨК I (бөтлөгө)** *и. диал. кар.* **булмыш.** *Бөтлөгө шул.*

**БӨТЛӨК II** *а. диал. кар.* **бөтә.** *Бөтлөк ерҙә ҡоролоҡ булған.*

**БӨТЛӘҮ** (Р.: место спячки рыб; И.: fishes' hibernating place; Т.: balıkların uyuduğu yer) *и. диал.*

Балыҡ ятыуы. □ Место спячки рыб. *Бөтләүгә мурҙа ҡуйҙым әле. Бөтләүҙә балыҡ тотоу.*

**БӨТМӨР** (Р.: аккуратный; И.: exact; punctual; Т.: dakik) *с.*

**1.** Эште ентекләп, урын-еренә еткереп эшләүсән. □ Аккуратный, пунктуальный. *Бөтмөр ҡыҙ. Бөтмөр халыҡ.*

**2.** Һәр яҡтан етеш, бай. □ Состоятельный, обеспеченный; аккуратный. *Бөтмөр йорт. Бөтмөр ауыл.*

**БӨТМӨРЛӨ** *с. диал. кар.* **бөтмөр.** *Бөтмөрлө хужа.*

**БӨТМӨРЛӨК (бөтмөрлөгө)** (Р.: аккуратность; И.: neatness; Т.: özen) *и.*

Бөтмөр булыу. □ Аккуратность, опрятность. *Бөтмөрлөгөнә иҫем китә.*

**БӨТМӨРЛӘҮ (бөтмөрлә-)** (Р.: делать аккуратно; И.: do smth. punctually; Т.: özenle yapmak) *ҡ.*

Ентекләп, урын-еренә еткереү. □ Делать *что-л.* аккуратно. *Егет бөтә эште бөтмөрләп эшләй.*

**БӨТМӨШ** (Р.: натура; И.: nature; Т.: öz) *и.*

Бөтә булған тәбиғи сифат (*эйл. ф.* ҡулланыла); булмыш. □ Натура, характер, природа. *Бөтмөшө менән әсәһе.*

**БӨТМӘРСЕК (бөтмәрсеге)** *и. бот. диал. кар.* **ҡуянтубыҡ.** *Яҙ көнө бөтмәрсек ҡаҙып ашай торғайныҡ.*

**БӨТМӘҪ** (Р.: неиссякаемый; И.: inexhaustible; Т.: tükenmez) *с.*

Бик күп; бөткөһөҙ. □ Неиссякаемый, неисчерпаемый, неистощимый. *Бөтмәҫ дәрт. Бөтмәҫ көс. Бөтмәҫ ҡыуаныс.* ■ *Башҡортостан ере, тауҙары ла, ер аҫты ла бөтмәҫ хазина.* Р. Ниғмәтуллин.

**БӨТМӘҪ-ТӨКӘНМӘҪ** (Р.: нескончаемый; И.: never-ending; Т.: bitmez tükenmez) *с.*

Иге-сиге юҡ, сиктән тыш күп; иҫәпһеҙ-хисапһыҙ. □ Нескончаемый, неиссякаемый, неисчерпаемый, неистощимый. *Бөтмәҫ-төкәнмәҫ эш. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ байрам. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ күңел асыу.*

**БӨТНӨК (бөтнөгө)** (Р.: мята; И.: mint; Т.: nane) *и.*

Медицинала, парфюмерияла, кондитер эшендә ҡулланыла торған хуш еҫле үлән. □ Мята. / Мятный (лат. *Mentha*). *Бөтнөк майы. Ҡыр бөтнөгө. Урман бөтнөгө. Болон бөтнөгө. Һыу бөтнөгө.*

**БӨТНӨКЛӨ** (Р.: мятный; И.: minty; Т.: naneli) *с.*

Бөтнөк ҡушылған, бөтнөк ҡушып эшләнгән. □ Мятный, с мятой. *Бөтнөклө сәй. Бөтнөклө теш пастаһы.*

**БӨТӨЙЛӘҮ (бөтөйлә-)** (Р.: делать треугольным; И.: make triangular; Т.: üçgen şeklinde yapmak) *ҡ. диал.*

Өсмөйөшләү, өсмөйөшлө итеү. □ Делать треугольным. *Бөтөйләп төргән.*

**БӨТӨК** *а. диал. кар.* **бөтә.** *Бөтөк ауыл. Бөтөк халыҡ. Бөтөк ил.*

**БӨТӨКӘ** *с. диал. кар.* **ҡыҫыҡ I.** *Бөтөкә генә күҙле ҡыҙ.*

**БӨТӨЛӨҮ (бөтөл-)** *ҡ. эйһ. ф. кар.* **бөтөү.** *Йонсоп бөтөлдө. Һағынып бөтөлдө.*

**БӨТӨМ** (Р.: концовка; И.: ending; Т.: sonuç) *и.*

**1.** Әҫәрҙең һуңғы, йомғаҡлау өлөшө. □ Концовка. *Романдың бөтөмө.*

**2.** *кар.* **ос 3.** *Эштең бөтөмө. Һүҙҙең бөтөмө.*

**БӨТӨН I** [дөйөм төрки *бүтүн, бүдүн* 'барлыҡ, бөтөн; ил'] (Р.: целый; И.: unbroken; Т.: bütün) *с.*

**1.** Күләме, дәүмәле кәмемәгән; теүәл. □ Целый, нетронутый, непочатый. *Бөтөн кәбән. Бөтөн май. Бөтөн картуф. Бөтөн ағас. Бөтөн гәзит.*

**2.** Тыуҙан, тишелгән, зарарланған ере юҡ; туҙмаған, төҙөк. □ Единый, цельный, целостный. *Йорт-ҡураһы бөтөн.*

**3.** Мохтажлығы, кәмселеге юҡ; етеш. □ Целый, неповреждённый. *Бөтөн тормошта йәшәйбеҙ.* ■ *Донъя бөтөн, борсолорлоҡ мәсьәлә юҡ.* Ә. Әминев.

**4.** Кәм түгел, теүәл; камил. □ Совершенный, невредимый. *Аҡылы бөтөн. Ҡарсыҡ йөҙҙө үтһә лә, иҫе-аҡылы бөтөн.*

**5.** *мат.* Кәсергә бүленмәгән; теүәл. □ Целый, целое. *Бөтөн һандарҙы бер бағанаға айырып яҙығыҙ. Өс бөтөн йөҙҙән ун дүрт.*

**БӨТӨН II** *билд. а. ҡар.* **бөтә.** *Бөтөн халыҡ. Бөтөн ил.* ■ *Бөтөн ауыл, йомшаҡ көрт күпмәһенә ураныл, рәхәтләнеп йоҡомһорап ята.* Г. Ғиззәтуллина. *Дуҫы үлгәс, фронтовиктарҙан Мәсәлим бөтөн ауылда бер үҙе ҡалды.* Ә. Хәкимов.

**БӨТӨНЛӨК (бөтөнлөгө)** (Р.: целость; И.: integrity; Т.: bütünlük) *и.*

**1.** Бөтөн булыу хәле йәки сифаты; әске бер берҙәмлекте тәшкил иткән, бер бөтөн булып күҙ алдына баҫҡан хәл йәки торош. □ Целость, цельность, целостность. *Уны быяланың бөтөнлөгө ҡыҙыҡһындыра ине. Кәртә-ҡураһының бөтөнлөгө лә хужаның уңғанлығы тураһында һөйләй.*

**2.** Етешлек, мохтажһыҙлыҡ. □ Обеспеченность, достаток, благосостояние. *Бөтөнлөктә йәшәү.*

**БӨТӨНЛӘЙ** (Р.: целиком; И.: as a whole; Т.: büsbütün) *р.*

**1.** Бөтөн көйө, тулы көйө, өлөшкә бүлмәй. □ Целиком. *Тауыҡты бөтөнләй бешереү.*

**2.** Тулыһы менән; тотош, тулыһынса. □ Совсем, совершенно, полностью. *Бөтөнләй онотоу. Бөтөнләй үҙгәреү. Бөтөнләй шәбәйеү.* ■ *Көндөҙ дала күге ҡыҙһа ла, көндәрҙең көҙгә тартылғаны һиҙелә, төнөн һалҡынайта, таңға табан бөтөнләй һыуыта.* З. Ураҡсин. *Оҙаҡламай утрауҙың бөтөнләй күҙҙән юғалыуы ла бар.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Бөтә ваҡытҡа, тотош, бөтөнләйгә. □ Совсем, насовсем. *Бөтөнләй китеү. Бөтөнләй ҡайтыу.*

**4.** Бик тә бик, бик ныҡ; тамам. □ Слишком. *Бөтөнләй шашып китеү. Бөтөнләй тыңламау.*

**5.** Һис бер, һис. □ Совсем, наотрез. *Бөтөнләй эшләгә килмәй.* ■ *Төнөн дә бөтөнләй туҡдырманы. Ә иртән ҡояш .. ҡалҡып сығыу менән, ҡалай, таҡта түбәләрҙән тамсылар суп-суп ҡойолдо, урамдарҙа тәүге күләүектәр эркелде.* З. Ураҡсин. *Ғәлим тәмәке тоҡандырҙы, уның [Йосоптоң] һуңғы һүҙҙәрен ишетмәгәндәй, бөтөнләй икенсе нәмә тураһында һөйләй башланы.* Н. Мусин.

**БӨТӨНЛӘЙГӘ** (Р.: насовсем; И.: for good; Т.: ebediyen) *р.*

Бөтә ваҡытҡа, тотош, бөтөнләй. □ Насовсем, навсегда; совсем. *Бөтөнләйгә ҡайтыу.* ■ *[Азамат — Мусинға:] «Мин китһәм, бәлки, һиңә бөтөнләйгә ҡалырға тура килер», — тине.* Р. Солтангәрәев.

**БӨТӨНЛӘНЕҮ (бөтөнлән-)** *ҡ. ҡар.* **бөтәйеү.** *Донъя бөтөнләнә башланы.*

**БӨТӨН ОЙОҠ (ойоғо)** (Р.: длинные шерстяные чулки ручной вязки; И.: long woolen hand-made socks; Т.: uzun yün çorap) *и. диал.*

Оҙон ҡуныслы бәйләм ойоҡ. □ Длинные шерстяные чулки ручной вязки. *Бөтөн ойоҡ бәйләү. Бөтөн ойоҡ кейеү.*

**БӨТӨНӨҺӨ** (Р.: весь; И.: all; Т.: hepsi) *билд. а.*

**1.** Бөтә булғаны, барыһы, һәммәһе. □ Весь, всё, вся. все. ■ *Бөтөнөһө дөрөҫ. тик барыбер күңеле тыныс түгел Мәсәлим ҡарттың.* Ә. Хәкимов.

**2.** Бөтәһе, барлығы. □ Всего, итого. *Бөтөнөһө биш кеше.*

**БӨТӨНӘЙЕҮ (бөтөнәй-)** *ҡ. ҡар.* **бөтәйеү.** *Өҫ-баш бөтөнәйҙе.*

**БӨТӨНӘЙТЕҮ (бөтөнәйт-)** *ҡ. ҡар.* **бөтәйтеү.** *Өҫ-башты бөтөнәйтеү. Хужалыҡты бөтөнәйтеү.*

**БӨТӨРГӨС I** (Р.: палочка или верёвочка для натягивания укорачивающейся основы; И.: appliance for spreading warp; Т.: dokuma işinde kullanılan cihaz) *и. тук.*

Киндерҙе һуғып бөтөрҙән алда, буйлыҡ ҡыҫҡа ҡалып, сөйҙән көрөҫкә етмәй башлағас, осон бөтөрөп ҡуйыр өсөн ялғап тарттыра торған тейәкле бау. □ Палочка или верёвочка для натягивания укорачивающейся основы.

**БӨТӨРГӨС II** *и. диал. ҡар.* **юйғыс.** *Бөтөргөс менән юйыу.*

**БӨТӨРКӘ** *с. диал. ҡар.* **бөҙрә I.** *Бөтөркә сәстәр. Бөтөркә ял.*

**БӨТӨРКӘЛӘНЕҮ I (бөтөркәлән-)** (Р.: быть приветливым; И.: be affable; Т.: güleryüzlü olmak) *ҡ. диал.*

Өлтөрәп тороу. □ Быть приветливым. *Барһаң, бөтөркәләнеп тора.*

**БӨТӨРКӘЛӘНЕҮ II (бөтөркәлән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бөҙрәләнеү.** *Сәсе бөтөркәләнеп тора.* ■ *Уның [Алёшаның] көнбағыш сәскәһе шикелле тулҡынлы һары сәстәренең һалдат фуражкаһы аҫтынан кәзә мөгөҙө шикелле бөтөркәләнеп сығып тороуы Байраҫҡа айырата оҡшаны.* З. Биишева.

**БӨТӨРӨЛӨҮ I (бөтөрөл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бөтөрөү I. 1—6.** *страд. от* **бөтөрөү I, 1—6.** *Шау биҙәктән бөтөрөлгән күлдәк.*

**БӨТӨРӨЛӨҮ II (бөтөрөл-)** *ҡ.*

**1.** *диал. ҡар.* **өйрөлөү 1.** *Бөтөрөлөп бейеү.*

**2.** *Кемгәлер* үтә итәғәтле булып йүгереп тороу. □ Вертеться волчком *(вокруг кого-л.) Килене бөтөрөлөп тора.*

**БӨТӨРӨНӨҮ (бөтөрөн-)** (Р.: утомляться; И.: get tired; Т.: yorulmak) *ҡ.*

**1.** Төҫ ташлау, йонсоу; бирешеү. □ Утомляться. *Бөтөрөнөп китеү.* ■ *Атаһы ҡапыл ҡартайып, бөтөрөнөп киткән кеүек. Төлкөсура уға йәлләп ҡараны.* Н. Мусин.

**2.** Өлтөрәп тороу. □ Быть приветливым. ■ *— Юҡ, әсәй, һис бер һүҙем юҡ. Ниңә инде улай бөтөрөнәһең?* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал. ҡар.* **меҫкенләнеү.**

**БӨТӨРӨҮ I (бөтөр-)** (Р.: заканчивать; И.: finish; Т.: bitirmek) *ҡ.*

**1.** Аҙағына еткереү, тамам итеү; эш итеү, тамамлау. □ Кончать, заканчивать, оканчивать; завершать. // Заканчивание, оканчивание, завершение. *Был эште бөтөрөп ҡуйыу. Уҡыуыңды бөтөргәс тә, эшкә төш.* ■ *Шундай шәп өй бөтөрөп ингәс кенә, ҡунаҡ килер мәл еткәс кенә, доньяңды ташлап ҡасып булмай ҙа инде?* Т. Ғарипова.

**2.** Алып барыу, башҡарыу. □ Вести *(дела),* делать, работать. // Ведение *(дел). Килен йорттағы эште бер үҙе бөтөрә.*

**3.** Тотош бер төрлө нәмәнән эшләү. □ Делать из однородного материала. *Шау биҙәктән бөтөрөп балаҫ һуғыу.*

**4.** Кәмetә-кәмetә юҡ итеү; тамам итеү. Тотош тотоноу, тотош туҙҙырыу *(аҡсаны, малды).* □ Тратить, расходовать. // Трата, расход. *Аҙыкты бөтөрөү. Һыуҙы бөтөргәнсә эсеү.* ■ *Ултыра торғас, мин теге кеҫәләге сәтләүекте бөтөргәнмен дә ҡуйғанмын.* Т. Йәнәби. *Ул [Иванов] тапҡан-таянғанын Нинаның уҡыуына бөтөрә. Уны кейендерә, уның өсөн түләй.* Д. Юлтый.

**5.** Сик һалыу, туҡтатыу; булғанды ғәмәлдән юҡ итеү. □ Кончать, прекращать; устранять, изживать, искоренять. *Талашты бөтөрөү. Һуғышты бөтөрөү. Һүҙҙе бөтөрөү. Етешһеҙлекте бөтөрөү. Наҙанлыкты бөтөрөү. Керҙе бөтөрөү. Көстө бөтөрөү. Түҙемлекте бөтөрөү.*

**6.** Тар-мар итеү, юҡ итеү, үлтереү. □ Уничтожать, истреблять. // Уничтожение, истребление. *Һалдаттар дошмандарҙы бөтөрә генә.* ■ *Иштуған уйсан ғына көлөп алды: «Ысынлап та, һуғышҡа ингән сакта кеше, үләм, тип барамы ни? Юҡ. Ул бит дошманды һис шикһеҙ еңәм, бөтөрәм тигән якты өмөт һәм ышаныс менән инә!»* З. Биишева.

**7.** Яраҡһыҙ хәлгә килтереү, эшлектән сығарыу. □ Портить, причинять повреждение. // Порча. *Күҙеңде бөтөрөп ни эшләп ҡараңғыла уҡып ултыраһың? Үҙеңде бөтөрөп, кеше өсөн ҡайғырып ултырма.*

**8.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш, хәрәкәткә тамамланғанлыҡ мәғәнәһе бирә. □ С деепр. основного глагола на *-п* выступает в роли вспом. гл. и обозначает

законченность действия. *Ашты ашап бөтөрөү. Эшләп бөтөрөү. Китапты яҙып бөтөрөү. Шәлде бәйләп бөтөрөү.* ■ *Рамғун, һөттө ҙур кәнәғәтлек менән әҙләп-әҙләп йотоп бөтөргәс, ерән мыйығын һыпырып ҡуйҙы ла, ҡара күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡарап торған ҡоралай һынлы ҡатыны Зәмбиләнең арҡаһынан наҙлы ғына итеп ҡағып алды.* З. Ураҡсин.

♦ **Эшен бөтөрөү** үлтереү, юҡ итеү. □ Убить *кого,* покончить *с кем. Дошмандың эшен бөтөрҙө лә, юҡ булды.*

**БӨТӨРӨҮ II (бөтөр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бороу I, 4.** *Һүҙҙе бөтөрөү. Иғтибарҙы бөтөрөү.*

**БӨТӨРСӨК I (бөтөрсөгө)** *и. диал. ҡар.* **өйрөлтмәк 1.** *Бөтөрсөк әйләндереү.*

**БӨТӨРСӨК II** (Р.: проворный; И.: prompt; Т.: çevik) *с.*

Етеҙ. □ Проворный. *Бөтөрсөк ҡыҙ. Бөтөрсөк хужа.*

**БӨТӨРТӨҮ (бөтөрт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бөтөрөү I, 1—6.** *понуд. от* **бөтөрөү I, 1—6.** *Уҡыуын бөтөртөү. Эште эшләтеп бөтөртөү. Ашты ашатып бөтөртөү. Йырҙы йырлатып бөтөртөү.*

**БӨТӨҮ (бөт-)** (Р.: заканчиваться; И.: finish; Т.: bitmek) *ҡ.*

**1.** Ахырға етеү, тамам булыу. □ Кончаться, заканчиваться, оканчивать, прекращать, завершаться. // Завершение. *Йәй бөттө. Йыйылыш бөттө. Байрам бөттө.* ■ *Яйыҡ туғайы бөткән ерҙә ҡымыҙсылар теҙелгән.* З. Ураҡсин.

**2.** Тотош бер нәмәнән эшләнеү. □ Образоваться из однородного материала. *Саф алтындан бөткән көмбәҙ. Шау биҙәктән бөткән килдәк.*

**3.** Кәмей-кәмей юҡ булыу; тамам булыу, тотош тотонолоу *(аҡсаға, малға ҡарата).* □ Кончаться, расходоваться. *Малдарға аҙыҡ бөттө. Тауыҡтарға ем бөттө.*

**4.** Йыуылыу, юйылыу; *ниндәйҙер* бер сифат юҡ булыу. □ Выводиться, исчезать. // Исчезновение. *Күлдәккә тейгән был тап бөтмәй. Ауыртыу бөттө.*

**5.** Булған ерҙән тыныу; баҫылыу, туҡтау; ғәмәлдән юҡ булыу. □ Истощаться, иссякаться; кончаться, заканчиваться. *Талаш-тартыш бөттө. Афәт бөттө. Дуҫлыҡ бөттө. Хәүеф-хәтәр бөттө.* ■ *[Байрас:] Былтыр йәй, исмаһам, һуғыштың бөтөрөнә, атайымдарҙың ҡайтырына өмөт ҙурыраҡ ине әле.* З. Биишева.

**6.** Тар-мар булыу, юҡ булыу; үлеү, һәләк булыу. □ Истощаться, иссякать. *Дошман бөтөү.*

**7.** Яраҡһыҙ хәлгә килеү, эшлектән сығыу. □ Ухудшаться, портиться. *Күп уҡыуҙан күҙем бөттө. Көнө буйы йүгереп аяҡтар бөттө.*

**8.** Сифат ҡылымдың *-ған* формаһында үҙенән алда торған төбәү килештәге һүҙ менән килеп, шул һүҙ анлатҡан сифатҡа йүнәлеүҙе белдерә. □ В форме прич. основ. глагола на *-ған* с сущ. в напр. падеже обозначает направленность к признаку, образующему это существительное. *Йырға бөткән ҡыҙ. Эшкә бөткән егет.*

**9.** *-п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәлдең һуңғы дәрәжәһен белдергән ҡушма ҡылым яһай. □ С деепр. основного гл. *-п* выступает в роли вспом. гл. и обозначает высшую степень проявления действия. *Һағынып бөтөү. Һыуһап бөтөү. Ҡайғырып бөтөү. Борсолоп бөтөү.*

**10.** *-п* формаһындағы хәл ҡылым менән килеп, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәлдең тамамланғанын белдергән ҡушма ҡылым яһай. □ С деепр. основного гл. *-п* выступает в роли вспом. гл. и обозначает завершение действия. *Кейенеп бөтөү. Ашап бөтөү. Эшләп бөтөү.* ■ *Бибеш бешереп бөткән ҙур бер табаҡ бауырһағын киндер ашъяулыҡ менән ябып ултыртты ла, бүтән бер һүҙ ҙа әйтмәй, өҫтөнә ҡыҫҡа көпө кейеп алды.* З. Биишева. *Йосоп сәй эсеп бөткәс кенә, үҙенең ни өсөн килеүен хәтерләп, лыҡылдауҙан туҡтаны, ҡабаланып урынынан торҙо.* Н. Мусин. *Шулай ҙа сәй эсеп*

*бөткәнсе, Мараттың ике күҙе баяғы эйәрҙә булды.* З. Ураҡсин.

♦ **Бөтөрлөк түгел** бөтә торған түгел. □ Неиссякаемый, нескончаемый. *Эш бөтөрлөк түгел.* **Бөткән баш — бөткән** берәй хәүефле эшкә, ҡылыҡҡа тәүәккәллек белдергәндә әйтелә. □ Или пан, или пропал; была ни была; будь *что* будет. **Бөттө баш** хәүефкә төшөп, ҡайғырыуҙы белдерә. □ Всё, пришёл конец *(при переживании, волнении).* ■ *Бөттө баш! Атайымды, әсәйемде, туғандарымды уйлап алдым.* М. Кәрим. **Бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп** *шаяр.* Хафаланғанда, хәүеф белдергәндә әйтелә. □ Говорится при беспокойстве. ■ *Өсөнсө көн инде бына китте баш, ҡалды муйын һерәйеп, тип, ни эшләргә лә белмәй ҡайғырып ултырам, ти батша.* Әкиәттән. **Бөтәһе түгел** бик күп, сикһеҙ күп. □ Очень много. *Магазинда китап бөтәһе түгел.* **Көн(ө) бөтөү** 1) тыныс, рәхәт тормош, иркенлек бөтөү. □ Пришёл конец хорошей, спокойной жизни; 2) ҡулланылыштан сығыу, кәрәклеге бөтөү. □ Выйти из употребления; 3) ғүмере бөтөү. □ Умереть. *Көнө бөткәс, ни хәл итәһең.* **Күңел бөтөү** *кемдеңдер* бер ҡылығына бик риза, ҡәнәғәт булып ҡыуаныу. □ Быть довольным *чем,* радоваться *чему.*

**БӨТӨШ** (Р.: узкий; И.: Asian; Т.: dar gözlü) *с.*

Бәләкәй генә булып бөтәшеп торған; ҡыҫыҡ. □ Узкий *(о глазах). Бөтөш күҙле ҡыҙ.*

**БӨТӘ** (Р.: весь; И.: all; Т.: tüm) *а.*

Бар булған; барлыҡ, һәммә. □ Весь, вся, всё, все. *Бөтә ҡала. Бөтә ауыл. Бөтә ғаләм. Бөтә йыһан. Бөтә көс. Бөтә йөрәктән.* ■ *Иштуғандың бөтә йәне-йөрәген аҙаплы тетрәү һаман тәрәнерәк солғап ала барҙы.* З. Биишева. *Ысынлап та, Мараттың яҡшы уҡыуы өсөн һис ни ҙә камасауламаҫҡа тейеш, булдыҡлы малай, өйөндә бөтә шарттар ҙа бар.* Н. Мусин. *Мал эйәһенә окшамаһа харам була тигән мәҡәлде раҫлап, әсәйемдең бөтә һыйырҙары ла сабыр, аҡыллы булды.* Г. Ғиззәтуллина.

♦ **Бөтә йәме (ҡыҙығы, тәме) шунда** һоҡланыу белдергәндә әйтелә. □ В том-то и вся краса.

**БӨТӘ ДОНЪЯ ТАРТЫЛЫШЫ** (Р.: всемирное тяготение; И.: gravity; Т.: yer çekimi) *и. физ.*

Ғаләмдәге бөтә әйберҙәрҙең бер-береһенә тартылыу үҙенсәлеге. □ Всемирное тяготение. *Бөтә донъя тартылышы законы.*

**БӨТӘЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһе аймағы. □ Бутэй *(название родового подразделения башкир племени табын). Бөтәй аймағы башҡорто.*

**БӨТӘЙЕҮ (бөтәй-)** (Р.: становиться зажиточным; И.: become well-to-do; Т.: zenginleşmek) *ҡ.*

**1.** Тулы, теүәл, бөтөнгә әйләнеү. □ Превращаться в целое, становиться целостным. *Әсәйем ҡайтҡас, йортобоҙ бөтәйеп ҡалғандай булды.*

**2.** Мохтажһыҙға, етешкә әйләнеү; етеш булыу. □ Становиться зажиточным, совершенным; улучшаться *(о жизни). Бөтәйеп алыу. Донъялар бөтәйеп ҡалды.*

**3.** Яңырыу, төҙөкләнеү. □ Обновляться, прийти в порядок. *Өҫ-баш бөтәйҙе. Кәртә-ҡура бөтәйҙе.*

♦ **Күңел бөтәйеү** ҡәнәғәтләнеү, тынысланыу. □ Душевно успокоиться.

**БӨТӘЙТЕҮ (бөтәйт-)** (Р.: поправлять дела; И.: repair affairs; Т.: işleri düzeltmek) *ҡ.*

**1.** Бөтөнгә (2) әйләндереү, бөтөн итеү. □ Поправлять дела. *Атайым һуғыштан ҡайтҡас, йорт-ҡураны бөтәйтергә тотондо. Баҙарға барып, өҫ-башты бөтәйтеп ҡайттыҡ.*

**2.** Етеш, мохтажһыҙ, бөтөн итеү. □ Улучшать *(жизнь),* делать состоятельным. *Хужалыҡты бөтәйтеү.*

**3.** Яңы кейем-һалым менән тәьмин итеү. □ Обеспечить новой одеждой. *Аҡса эшләп балаларын бөтәйтте.*

**БӨТӘКӘЙ** (Р.: проходящий; И.: passing; Т.: geçici) *с.*

Үтә торған *(ауырыу тураһында).* □ Проходящий *(о болезни). Бөтәкәй ауырыу ул, борсолма.*

**БӨТӘРЛӘНЕҮ (бөтәрлән-)** (Р.: мяться; И.: be crumpled; Т.: buruşmak) *к.*

Ойпаланыу, йомарланыу; бөгәрләнеү, таушалыу *(об одежде, бумаге).* □ Мяться. *Бөтәрләнгән күлдәк. Бөтәрләнгән кейем. Дәфтәр бөтәрләнгән.*

**БӨТӘРЛӘҮ (бөтәрлә-)** (Р.: сворачивать; И.: crumple; Т.: buruşturmak) *к. диал.*

Ойпалау, йомарлау; бөгәрләү. □ Сворачивать, свёртывать; комкать; мять. *Кейемде бөтәрләү. Ҡағыҙҙы бөтәрләү. Өҫ-башты бөтәрләү.*

**БӨТӘҮ I** (Р.: немолотый; И.: unground; Т.: bütün) *с.*

**1.** Үҙ рәүеше боҙолмаған, ярғылап бүлгеләнмәгән; бөтөн. □ Немолотый *(о зерне, горошинах перца),* целый *(о картофеле). Бөтәү бойҙай. Бөтәү картуф бешереү. Бөтәү боросто төйөү.*

**2.** *диал. күсм.* Эшләп ҡаҡшамаған, бирешмәгән. □ Цельный, невредимый, здоровый. *Бөтәү ир.*

**3.** *диал. ҡар.* **камил.** *Бөтәү бала.*

**4.** *диал. ҡар.* **хәлле.** *Бөтәү ғаилә.*

**5.** *ҡар.* **бөтәш 1.** *Бөтәү яра.* ■ *Әсәһе емешеү һыу менән уның [Миңлегөлдөң] уҡмаш ҡанын йыуҙы, дегәнәк япрағы ҡуйып, һәйбәтләп ураны ла: «Аяҡһып йөрөмә инде, йә бөтәү яраға әйләнеп китер», — тип киҫәтте.* Н. Мусин.

**БӨТӘҮ II** (Р.: овчарня; И.: sheep shed; Т.: ahır) *и. диал.*

Һарыҡ аҙбары. □ Овчарня. *Һарыҡтарҙы бөтәүгә бикләнек.*

**БӨТӘҮ III (бөтә-)** (Р.: соединять; И.: connect; Т.: bağlamak) *к. диал.*

Бергә ҡушыу. □ Соединять.

**БӨТӘҮЛӘЙ** (Р.: целиком; И.: as a whole; Т.: bütünüyle) *р.*

Бөтәү көйө, йомро көйө. □ Целиком, в целом виде. *Дарыуҙы бөтәүләй йотоу. Бөтәүләй бешерелгән йомортҡа.*

**БӨТӘҮ ЭЙӘҺЕ** *и. миф. ҡар.* **аҙбар эйәһе.**

**БӨТӘҺЕ** (Р.: все; И.: all; Т.: hepsi) *а.*

**1.** Бөтә кеше *йәки* нәмә. □ Все, всё. *Бөтәһе бергә килде.* ■ *Ул [Емеш] бесәй балаһын, кәзә бәрәсен, ҡаҙ, тауыҡ себешен үлеп ярата, колонсаҡ күрһә, ярата... һоҡланыуҙан телһеҙ ҡала, уларҙың һәр бер хәрәкәте, ҡыланышы, уйыны, ашауы, йоҡлауы бөтәһе-бөтәһе уға иҫ киткес таныш һәм яҡын күренә.* З. Биишева. *Һсынлап та, ерҙән колаҡ ҡаҡтыңмы — бөтәһенән дә колаҡ ҡаҡтың тигән һүҙ.* Ә. Әминев.

**2.** Бар булғаны; барлығы, һәммәһе. □ Всего, итого. *Бүлмәлә бөтәһе алты кеше.* ■ *Бөтәһе утыҙ полк. Уларға ил ҡарттары, атай-әсәйҙәр, килендәр, йәш-елкенсәк ҡушыла.* Р. Солтангәрәев.

**БӨТӘШ** (Р.: закрытый; И.: cicatrized; Т.: kapalı) *с.*

**1.** Ауыҙланып, тишек булып торған ере тыштан тартылып көпләнгән. □ Закрытый, затянутый.

**2.** *ҡар.* **бөтөш.** *Бөтәш күҙ.*

**БӨТӘШЕҮ (бөтәш-)** (Р.: заживать; И.: cicatrized; Т.: iyilişmek) *к.*

**1.** Тартылып, тығылып көпләнеү *(ауыҙланып, тишек булып торған ергә ҡарата).* □ Забиваться, засоряться, закупориваться *(об отверстии).* // Засорение. *Һыу торбаһы бысраҡ тығылып бөтәшкән.*

**2.** Йүнәлеү, ҡапланыу, төҙәлеү *(яраға ҡарата).* □ Заживать, рубцеваться, зарубцовываться, затягиваться *(о ране).* // Заживление, рубцевание. *Яра бөтәшеү.* ■ *Ниндәйҙер үлән орлоҡтары, әскелтем еләктәр ашай торғас, бүре әкренләп һауыға, яраһы ла бөтәшә башланы.* Ә. Хәкимов.

**БӨТӘШТЕРЕҮ (бөтәштер-)** (Р.: закрывать; И.: block; Т.: kapatmak) *к.*

**1.** Томалау, бөтәш итеү, йүнәтеү. □ Закрывать, заделывать, чинить. // Заделка, починка. *Тәҙрә ярығын бөтәштереү.*

**2.** Йүнәтеү, төҙәтеү, шәбәйтеү *(яраға карата).* □ Заживать, зарубцевать. *Эттәр яралы ерен ялап бөтәштерә.* ■ *Мөғжизәле май беҙҙең урман-ҡырҙарҙа үҫкән үләндәр нигеҙендә эшләнгән һәм йәрәхәттәрҙе 3—5 көнгә иртәрәк бөтәштереү һәләтенә эйә.* «Йәшлек», 14 сентябрь 2010.

**3.** Яңыртыу, тулыландырыу. □ Обновлять, обновить, подновить. *Өҫ-башты бөтәштерергә тип ҡалаға юлландыҡ. Йорт-ҡураны бөтәштерергә тип әбейҙең улы ла ҡайтҡайны.*

**БӨХЕЛ** [ғәр. بخل] (Р.: скупость; И.: stinginess; Т.: cimrilik) *и. иҫк.*

Һаранлыҡ. □ Скупость, жадность.

**БӨХИЛ** [ғәр. بخيل] (Р.: скупой; И.: miserly; Т.: bahil) *с.*

Аҡсаһын, нәмәһен бик ҡыҫып тотоусан, һаран. □ Скупой, жадный, прижимистый. *Бөхил ҡарт. Бөхил ир.*

**БӨХИЛЛӘНЕҮ (бөхилллән-)** (Р.: быть скрягой; И.: be a miser; Т.: cimri olmak) *ҡ.*

Бөхил булыу, һаранланыу. □ Быть скрягой, скряжничать. *Ярай инде, бөхилләнмә.*

**БӨХТӘ** [фарс. بخته ‘камил’] (Р.: опрятный; И.: neat; Т.: özenli) *с.*

**1.** Донъя ҡарауға, эш-йомошҡа бик етеш, тәрбиәле; йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡ һаҡлаусан, матур итеп эшләүсән. □ Опрятный, аккуратный; пунктуальный. *Бөхтә ҡатын.*

**2.** Тышҡы күренеше, ҡиәфәте матур күренешле; йыйнаҡ, ыҫпай. □ Опрятный, аккуратный. *Бөхтә йорт. Өҫ-башы бөхтә.* ■ *Йәшкелт күҙле, алсаҡ йөҙлө, һарғылт сәсен артыҡ оҙон итмәйенсә, бик бөхтә итеп алдырған уртаса кәүҙәле егет Төлкөсурағa оҡшай уҡ башлағайны.* Н. Мусин. *Эштән ҡайтҡан нефтселәр, бөхтә генә кейенешеп, йорт алдына сыҡҡан.* Р. Солтангәрәев.

**БӨХТӘЛЕК (бөхтәлеге)** (Р.: опрятность; И.: neatness; Т.: özenlik) *и.*

Таҙа, матур күренеш; йыйнаҡлыҡ, ыҫпайлыҡ. □ Опрятность, аккуратность. *Кейемдең бөхтәлеге. Бөхтәлек менән айырылыу.* ■ *Социологтар хәҙер тормош шарттары, эш урыны бөхтәлегенең хеҙмәткә ныҡ тәьҫир итеүе тураһында юҡҡа ғына яҙмайҙарҙыр.* Р. Солтангәрәев.

**БӨХТӘЛӘҮ (бөхтәлә-)** (Р.: приводить в опрятный вид; И.: render neat; Т.: temizlemek) *ҡ.*

Бөхтә итеү. □ Приводить в опрятный вид. *Өй эсе бөхтәләп йыйыштырылған. Өй бик бөхтәләп төҙәлгән.* ■ *Түбә таҡтаһынан арыуын ярым самаһы түбәнгә төшөрөп эшләнгән урҙаға һәр төрлө кейемдәр, сепрәк-сапраҡ бик бөхтәләп теҙеп эленгән.* Н. Мусин.

**БӨХТӘҺЕҘЛЕК (бөхтәһеҙлеге)** (Р.: неопрятность; И.: untidiness; Т.: şapşallık) *и.*

Йыйнаҡһыҙлыҡ. □ Неопрятность, неаккуратность. *Ошо баланың бөхтәһеҙлеге. Бөхтәһеҙлек арҡаһында эше лә бармай.*

**БӨШНӨК (бөшнөгө)** (Р.: треугольный пирог с ягодной начинкой; И.: sort of a pie; Т.: börek türü) *и.*

Өсмөйөшлө итеп эсенә еләк-емеш һалып бешерелгән ашамлыҡ. □ Треугольный пирог с ягодной начинкой. *Бөшнөк бешереү. Бөшнөк ашау. Тәмле бөшнөктәр.*

**БӨШӨГӨҮ (бөшөк-)** *ҡ. диал. ҡар.* **күшегеү.** *Бөшөгөп бөтөү. Ямғыр аҫтында себештәр бөшөккән.*

**БРА** [рус. < фр. *bras* ‘ҡул’] (Р.: бра; И.: sconce; Т.: aplik) *и.*

Стена шәмдәле. □ Бра. *Гәлсәр бра. Бра һатып алыу.*

**БРАВО** [рус. < ит. *bravo* ‘шәп, ҡыйыу’] *ымл. ҡар.* **афарин.**

**БРАДӘР** [фарс. برادر] (Р.: брат; И.: brother; Т.: birader) *и. иҫк. кит.*

**1.** Ир туған. □ Брат. *Брадәремә ярҙам итергә кәрәк.*

**2.** Дуҫ, иптәш. □ Друг, товарищ. *Брадәрем менән китеп барам.*

**БРАЗИЛ** [рус. < порт. *Brasileiros*] (Р.: бразилец; И.: Brazilian; Т.: Brezilyalı) *и.*

Бразилияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. □ Бразилец. *Бразил халҡы. Бразил ҡатыны.*

**БРАК (брағы)** [рус. < нем. *Brack*] (Р.: брак; И.: waster; Т.: ıskarta) *и.*

Әйберҙәге етешһеҙлек; боҙолған тауар. □ Брак, бракованный товар. *Алған әйберҙәребеҙ брак булған. Бракка сығарыу.*

**БРАКОНИДА-БӨЖӘКТӘР** (Р.: браконіды; И.: braconidae; Т.: braconidae) *и. зоол.*

Бөтә ер шарында осрай торған, башҡа бөжәктәрҙең паразиты булған ҡанатлы бөжәктәр. □ Бракониды (лат. *Braconidae*). *Браконида-бөжәктәр осоп йөрөй.*

**БРАКОНИДАЛАР** [рус. < лат. *Braconidae*] *и. зоол. ҡар.* **браконида-бөжәктәр.** *Браконидалар үрсеп киткән.*

**БРАКОНЬЕР** [рус. < фр. *braconnier*] (Р.: браконьер; И.: poacher; Т.: kaçak avcı) *и.*

Тейешһеҙ урында йәки тыйылған ысул менән һунар итеүсе, балыҡ тотоусы. □ Браконьер. / Браконьерский.

**БРАКОНЬЕРЛЫҠ (браконьерлығы)** (Р.: браконьерство; И.: poaching; Т.: kaçak avcılık) *и.*

Тейешһеҙ урында һәм ваҡытта йәки тыйылған ысул менән һунар итеү, балыҡ тотоу. □ Браконьерство. *Браконьерлыҡ менән шөғөлләнеү.*

**БРАМАТ** *и. ҡар.* **мөстән I.**

**БРАМАТ ЙӨРӨҮ (брамат йөрө-)** *ҡ. ҡар.* **бырамат йөрөү.**

**БРАМАТ САБЫУ (брамат сап-)** *ҡ. шул уҡ* **бырамат сабыу** (*ҡар.* **бырамат**).

**БРАМАТТА ЙӨРӨҮ (быраматта йөрө-)** *ҡ. шул уҡ* **быраматта йөрөү** (*ҡар.* **бырамат**).

**БРАСС** [рус. < фр. *brasser* ‘болғау, бутау’] (Р.: брасс; И.: breast stroke; Т.: kurbağalama) *и. спорт.*

Ҡул менән аяҡты бер тигеҙ ташлап йөҙөү төрө. □ Брасс.

**БРАУЗЕР** [рус. < ингл. *Web browser*] (Р.: браузер; И.: Web browser; Т.: tarayıcı) *и.*

Интернетта сайттарҙа эҙләү һәм ҡарау өсөн эшләнгән программа. □ Браузер.

**БРАУНИНГ** [рус. < ингл. *browning*] (Р.: браунинг; И.: browning; Т.: browning tabanca) *и.*

Ҙур булмаған автоматик пистолет. □ Браунинг.

**БРАХМАН** [рус. < боронғо һинд *brahma* ‘маҡтау’] (Р.: брахман; И.: Brahman; Т.: Brahman) *и.*

Һиндостандағы иң юғары ҡатлам кешеһе. □ Брахман (*представитель высшего сословия в Индии*).

**БРАХМАНИЗМ** [рус.] (Р.: брахманизм; И.: Brahmanism; Т.: Brahmanism) *и.*

Яңы эраға тиклемге VIII – IX быуаттарҙа барлыҡҡа килгән боронғо һинд дине. □ Брахманизм.

**БРЕЙК-ДАНС** (Р.: брейк; И.: break dance; Т.: break dance) *и.*

Урамда башҡарылған бейеү төрө. □ Брейк-данс. *Брейк-данс студияһы. Брейк-данс оҫтаһы.*

**БРЕЙН-РИНГ** [рус. < ингл. *brain* ‘мейе’ + *ring* ‘көрәш аренаһы’] (Р.: брейн-ринг; И.: brain-ring; Т.: breynring) *и.*

Эрудицияға ҡоролған уйын. □ Брейн-ринг.

**БРИГ** [рус. < ингл. *brig*] (Р.: бриг; И.: brig; Т.: brik) *и. диңг.*

Ике мачталы елкәнле судно. □ Бриг.

**БРИГАДА** [рус. < фр. *brigade*] (Р.: бригада; И.: brigade; Т.: ekip) *и.*

**1.** Билдәле бер эш башҡарған төркөм. □ Бригада./Бригадный. *Йәшелсә бригадаһы. Комплекслы бригада. Төҙөлөш бригадаһы. Бригада подряды. Поезд бригадаһы.*

**2.** *хәрби.* Бер нисә полктан, батальондан, батареянан йәки бер үк төрлө бер нисә хәрби караптан торған ғәскәри берәмек. □ Бригада. *Танк бригадаһы. Артиллерия бригадаһы.*

**БРИГАДИР** [рус. < нем. *Brigadier* < фр. *brigade*] (Р.: бригадир; И.: foreman; Т.: ustabaşı) *и.*

**1.** Бригада (1) етәксеһе. □ Бригадир. / Бригадирский. *Төҙөүселәр бригадиры.*

**2.** *хәрби.* Полковник менән генерал араһындағы хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге хәрби кеше. □ Бригадир. ■ *Бригадир булған, һай. Салауат егерме лә ике йәшендә.* Халыҡ йырынан.

**БРИГАДИРЛЫҠ (бригадирлығы)** (Р.: бригадирство; И.: foreman's work; Т.: ekip başı olmak) *и.*

Бригадир вазифаһындағы эш. □ Бригадирство. *Бригадирлыҡҡа уҡырға кәрәк. Бригадирлыҡтан китеү.* ■ *Шунан был [Мортаза] бригадирлыҡтан китте, яңы машиналар күп килә, белемем етмәй, тип үҙе һораған, тинеләр.* Р. Солтангәрәев.

**БРИДЖ** [рус. < ингл. *bridge*] (Р.: бридж; И.: bridge; Т.: briç) *и.*

Кәрт уйыны. □ Бридж.

**БРИДЖИ** [рус. < ингл. *breeches*] (Р.: бриджи; И.: breeches; Т.: pantolon) *и.*

Оҙонлоғо тубыҡтан аҫтараҡ булған ҡыҫҡа салбар. □ Бриджи. *Бриджи кейеү.*

**БРИЗ** [рус. < фр. *brise*] (Р.: бриз; И.: breese; Т.: esinti) *и.*

Көндөҙ диңгеҙҙән йылыраҡ ярға, төнөн ярҙан йылыраҡ диңгеҙгә табан иҫә торған әкрен ел. □ Бриз.

**БРИКЕТ** [рус. < фр. *briquette*] (Р.: брикет; И.: briquet; Т.: briket) *и.*

Артабан уңайлы файҙаланыуҙы тәьмин итеү маҡсатында күмер, торф, руда, быҫҡы онтағы, үлән оно һ. б. онтаҡтарынан кирбес, плита һ. б. рәүешендә преслап ҡойылған материал. □ Брикет. / Брикетный.

**БРИКЕТЛАНЫУ (брикетлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **брикетлау.** *страд. от* **брикетлау.** *Брикетланған йәшелсәләр. Брикетланған күмер.*

**БРИКЕТЛАУ (брикетла-)** (Р.: брикетировать; И.: briquette; Т.: briketlemek) *ҡ.*

Брикетҡа һуғыу. □ Брикетировать. // Брикетирование. *Торфты брикетлау. Күмерҙе брикетлау.*

**БРИФИНГ** [рус. < ингл. *briefing* < *brief* 'ҡыҫҡа'] (Р.: брифинг, И.: briefing; Т.: brifing) *и.*

*Ниндәйҙер* бер мәсьәлә буйынса хөкүмәттең ҡарашын ҡыҫҡаса ғына еткереү өсөн рәсми кешеләрҙең журналистар менән осрашыуы. □ Брифинг.

**БРИЧКА** [рус. < пол. *bryczka*] (Р.: бричка; И.: light carri age; Т.: hafif gezini arabası) *и.*

Һыңар тәртәле, тимер арба. □ Бричка. *Бричка егеү. Бричкала барыу.*

**БРОЙЛЕР** [рус. < ингл. *broil* 'утта ҡурыу'] (Р.: бройлер; И.: broiler; Т.: et tavuğu) *и.*

**1.** Ит өсөн үҫтерелгән себеш. □ Бройлер. *Бройлерҙар һатып алыу.*

**2.** Шул себештәрҙе үҫтереү өсөн махсус бина. □ Бройлер.

**БРОКЕР** [рус. < ингл. *broker*] (Р.: брокер; И.: broker; Т.: komisyoncu) *и.*

**1.** Ҡиммәтле ҡағыҙ, тауар, хеҙмәттәр буйынса килешеү төҙөгәндә аралашсы фирма йәки айырым кеше. □ Брокер.

**2.** Биржалағы аралашсы. □ Брокер.

**БРОКЕРАЖ** [рус. < ингл. *brokerage*] (Р.: брокераж; И.: brokerage; Т.: komisyonculuk) *и.*

Брокерға түләнгән хаҡ, әжер. □ Брокераж.

**БРОККОЛИ** [рус. < ит. *broccolo*] (Р.: брокколи; И.: broccoli; Т.: brokoli) *и. бот.*

Төҫлө кәбеҫтәнең бер төрө. □ Брокколи (лат. *Brassica oleracea*).

**БРОМ** [рус < гр. *bromos* 'һаҫыҡ еҫ'] (Р.: бром; И.: bromine; Т.: brom) *и. хим.*

**1.** Көслө еҫле, ҡуйы ҡыҙыл пар сығара торған шыйыҡса, химик элемент. □ Бром. / Бромовый.

**2.** *һөйл.* Бром ҡушып яһалған дарыу. □ Лекарство с бромом.

**БРОМЛЫ** (Р.: бромистый; И.: bromide; Т.: bromli) *с.*

Составында бром булған. □ Бромистый. *Бромлы натрий. Бромлы магний. Бромлы тоҙҙар медицинала ҡулланыла.*

**БРОНЕВИК (броневигы)** [рус.] (Р.: броневик; И.: armoured car; Т.: zirhli araba) *и.*

Броня менән көпләнгән машина. □ Броневик.

**БРОНЕПОЕЗД** [рус.] (Р.: бронепоезд; И.: armoured train; Т.: zirhli tren) *и.*

Тимер юл һыҙығында хәрәкәт итеү өсөн тәғәйенләнгән бронялы хәрби поезд. □ Бронепоезд.

**БРОНЕТАНК** [рус.] (Р.: бронетанк; И.: armoured tank; Т.: zirhlitank) *и.*

Бронялы хәрби танк. □ Бронетанк.

**БРОНЕТАНКЫЛЫ ҒӘСКӘР** [рус.] (Р.: бронетанковые войска; И.: armoured troops; Т.: motorize kuvvet) *и.*

Хәҙерге заман армияһында мөһим төрҙәрҙән һаналып, нигеҙҙә, танк һәм артиллериянан торған ғәскәр. □ Бронетанковые войска. *Бронетанкылы ғәскәрҙәр фронт һыҙығының алдына ҡуйылды.*

**БРОНЗА** [рус. < фр. *bronze*] (Р.: бронза; И.: bronze; Т.: bronz)*и.*

Баҡырға ҡурғаш һ. б. металдар ҡушып ҡойолған эретмә. □ Бронза. / Бронзовый. *Бронза ҡуйыу. Спорт уйынында бронза миҙал яулау.*

**БРОНЗА ДӘҮЕРЕ** (Р.: бронзовый век; И.: Bronze age; Т.: Tunç Çağı) *и. тар.*

Төрлө нәмә эшләү өсөн бронза ҡулланылған борондо дәүер. □ Бронзовый век. *Бронза дәүере ҡалдыҡтары. Бронза дәүерен өйрәнеү.*

**БРОНЗАЛАНЫУ (бронзалан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бронзалау.** *страд. от* **бронзалау.** *Бронзаланған ҡумта.*

**БРОНЗАЛАТЫУ (бронзалат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бронзалау.** *понуд. от* **бронзалау.**

**БРОНЗАЛАУ (бронзала-)** (Р.: бронзировать; И.: bronze; Т.: bronzla kaplamak) *ҡ.*

Бронза ялатыу. □ Бронзировать. *Ишек тотҡаһын бронзалау.*

**БРОНЛӘНЕҮ (бронлән-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бронләү.** *страд. от* **бронләү.** *Поезда бронләнгән урын.*

**БРОНЛӘТЕҮ (бронләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бронләү.** *понуд. от* **бронләү.** *Апайымдан поезға урын бронләттем.*

**БРОНЛӘҮ (бронлә-)** [рус. *бронь*] (Р.: бронировать; И.: reserve; Т.: ayırtmak) *ҡ.*

Алдан урын алыу, бронға теркәү. □ Бронировать. // Бронирование. *Ҡунаҡханаға урын бронләү.*

**БРОНХИТ** [рус.] (Р.: бронхит; И.: bronchitis; Т.: bronşit) *и. мед.*

Ҡурылдай тиресәһенең шешеүе; ҡурылдай шеше. □ Бронхит. *Хроник бронхит.*

**БРОНХЫ** [рус. < гр. *bronchos* 'тамаҡ'] (Р.: бронх; И.: bronchial tubes; Т.: bronş) *и. анат.*

Ҡурылдайҙың тармаҡланған, үпкәләргә тиклем бара торған көпшәле өлөшө; ҡурылдай тармаҡтары. □ Бронх. *Бронхылар шешеү.*

**БРОНЬ** [рус. *бронь*] (Р.: бронь; И.: reservation; Т.: rezervasyon) *и.*

Ҡунаҡхана, театр, ресторан кеүек ерҙәрҙә һәм транспортта алдан урын алыу һәм шул тәғәйенлекте раҫлаған документ. □ Бронь. *Тимер юл броне.*

**БРОНЯ** [рус.] (Р.: броня; И.: armour; Т.: zırh) *и.*

Ҡорос йәки башҡа ныҡ материалдан эшләнгән һаҡланыу көпләнмәһе, ҡалҡаны *(хәрби караптарҙа, танкыла һ. б.).* □ Броня. *Танк броняһы.*

**БРОНЯЛАТЫУ (бронялат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бронялау.** *понуд. от* **бронялау.** *Танкыны бронялаталар.*

**БРОНЯЛАУ (броняла-)** (Р.: бронировать; И.: armour; Т.: zırhla kaplamak) *ҡ.*

Броня менән көпләү. □ Бронировать. *Машинаны бронялау.*

**БРОНЯЛЫ** (Р.: броневой; И.: armoured; Т.: zırhlı) *с.*

Броня менән көпләнгән. □ Броневой, бронированный. *Алғы һыҙыҡҡа бронялы танкылар килеп сыҡты.*

**БРОШЮРА** [рус. < фр. *brochure* < *brocher* 'тегеү'] (Р.: брошюра; И.: booklet; Т.: broşür) *и.*

Ғәҙәттә, ижтимағи-сәйәси, фәнни һ. б. темаға бағышланған ҡағыҙ тышлы йоҡа китап. □ Брошюра. *Брошюра сығарыу.*

**БРОШЮРАЛАУ (брошюрала-)** (Р.: брошюровать; И.: stitch; Т.: dikmek) *ҡ.*

Баҫылған китап-журналды тегеү; төпләү. □ Брошюровать. // Брошюрование. *Брошюралау станогы. Журналдарҙы брошюралау.*

**БРУДЕРШАФТКА ЭСЕҮ (брудершафтка эс-)** [рус. < нем. *Brüderschaft* 'туғанлыҡ'] (Р.: пить на брудершафт; И.: drink brotherhood (with); Т.: kardeşlerce içmek) *ҡ.*

Дуҫлашыу хөрмәтенә айырым бер төрлө сәкәшеп эсеү. □ Пить на брудершафт.

**БРУТТО** [рус. < ит. *brutto* 'бысраҡ'] (Р.: брутто; И.: gross; Т.: brüt ağırlık) *и. махсус.*

Тауарҙың төргәге менән ауырлығы. □ Брутто.

**БРЫНЗА** [рус. < рум. *brinza*] (Р.: брынза; И.: sheep cheese; Т.: peynir türü) *и.*

Һарыҡ һөтөнән яһалған сыр. □ Брынза.

**БУАНЗУ-БҮРЕ** (Р.: буанзу; И.: kind of bear; Т.: kurt türü) *и. зоол.*

Тибетта, Һиндостанда йәшәй торған айырым бүре. □ Буанзу (лат. *Canis primaevus*). *Гималай тауҙарында буанзу-бүре осрай.*

**БУБЕН** [рус.] (Р.: бубен; И.: tambourine; Т.: tef) *и.*

Ағас ҡулса рәүешендәге һуҡмалы музыка ҡоралы. □ Бубен.

**БУБЕНСЫ** (Р.: бубнист; И.: trambourine drummer; Т.: tef calan kimse) *и.*

Бубен уйнаусы. □ Бубнист.

**БУБИ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бүләр ырыуы аймағы исеме. □ Буби *(название родового подразделения башкир рода буляр). Буби нәҫеле башҡорто.*

**БУБЫР** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ҡәбиләһе аймағы. □ Бубыр *(название родового подразделения башкир племени тамьян). Бубыр аймағы башҡорто.*

**БУҒА** (Р.: созвездие Тельца; И.: Taurus; Т.: Boğa burcu) *и.*

**1.** *астр.* Йондоҙлоҡтарҙың береһе (*Ҡуҙы һәм Игеҙәктәр йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан*). □ Телец *(созвездие). Буға йондоҙлоғо аҫтында тыуыу.*

**2.** *миф. ҡар.* **үгеҙ.** *Ер буға өҫтөндә тора.*

**БУҒАҘ** *и. диал. ҡар.* **күмәгәй.** *Буғаҙы сығып тора.*

**БУҒАЙ** [төрки] (Р.: кажется; И.: as if; Т.: herhalde) *мод.*

Ҡәтғиһеҙлекте, фаразды белдерә. □ Кажется, по-видимому, как будто. *Ул бөгөн ҡайта, буғай.* ■ *Был самауырҙы баҫырға берәй нәмә табып бир әле, еҫе бар, буғай.* И. Насыри. *Донъя һил, халыҡ йоклай, буғай.* Р. Солтангәрәев.

**БУҒАЛАҠ (буғалағы)** *и. диал. ҡар.* **боғал.**

**БУҒАН** *и. зоол. диал. ҡар.* **боған.** *Күлдә буғандар йөҙә.*

**БУҒАРСА** *и. зоол. диал. ҡар.* **бөгәрсәй.** *Буғарсай тотоу. Ҡармаҡҡа буғарсай эләкте.*

**БУҒЫР-БУҒЫР** *оҡш. ҡар.* **быҒыр-быҒыр.** *Буғыр-буғыр бутҡа бешә.*

**БУҒЫРЛАТЫУ (буғырлат-)** *ҡ. ҡар.* **быҒырлатыу.** *Буғырлатып бутҡа бешереү.*

**БУҒЫРЛАУ (буғырла-)** *ҡ. ҡар.* **быҒырлау.** *Буғырлап өйрә бешә.*

**БУДДИЗМ** [рус. < санскр. *buddha*] (Р.: буддизм; И.: Buddhism; Т.: Budizm) *и.*

Яңы эраға тиклем VI быуат аҙағында төньяҡ Һиндостанда барлыҡҡа килгән Тибет, Монголия, Һинд Ҡытайы, Ҡытай, Бирма, Япония һәм ҡайһы бер көнсығыш илдәрендә таралған дин. □ Буддизм.

**БУҘ I** [дөйөм төрки *боҙ* 'бурташ'] (Р.: сивый; И.: pale grey; Т.: boz) *с.*

**1.** Көлһыу; күгелйем. □ Сивый; светло-серый, светло-пепельный; землисто-серый. *Буҙ төҫтәге ат һатып алдым.*

**2.** *миф.* Изгеләштерелгән илаһи һәм шул уҡ ваҡытта аҫҡы донъя, үлем символы булып торған көлһыу, күгелйем төҫ. □ Сивый, светло-серый; мифологизированный цвет, имеющий неоднозначную символику – сакральность, святость, божественность, в то же время цвет смерти, нижнего мира.

**БУҘ II** (Р.: пустой; И.: deserted; Т.: boş) *с.*

**1.** Кеше биләмәгән, буш ятҡан; ҡола. □ Пустой, пустынный. *Буҙ ялан. Буҙ ҡырҙар.*

**2.** Иркендә йөрөгән, ирекле. □ Независимый, свободный, пользующийся свободой; пущенный на волю (*о скоте*). *Буҙ мал.*

**3.** *күсм.* Донъя йөгөнә егелмәгән; аяулы. □ Беззаботный. *Буҙ бала.* ■ *[Фәүзиә:] Эй, Ихсанбай, балаҡайым... Ошо мәл һин ҡыҙҙарҙың иң һылыуын сиртеп йөрөп әйттерер буҙ егет булыр инең дә һуң...* Т. Ғарипова.

**4.** Яҡыны, иптәше булмаған; яңғыҙ. □ Одинокий, без пары. *Буҙ дөйә. Буҙ өйрәк.* ■ *Юҡ илдә буҙ баланың ҡото булмаҫ, быҙауы үлгән һыйырҙың һөтө булмаҫ.* М. Аҡмулла.

**БУҘ III** (Р.: сокол; И.: falcon; Т.: şahin) *и. иҫк.*

Ыласын. □ Сокол (лат. *Falco*). *Һауала буҙ осоп йөрөй.*

**БУҘ IV** (Р.: шум; И.: uproar; Т.: gürültü) *и. иҫк.*

Ғауға, шау-шыу. □ Шум, крик, гам, галдёж. *Буҙ сыҡты.* ● *Киҫекһеҙ кешенән буҙ сыға.* Әйтем.

**БУҘ V** *и. ҡар.* **бүҙ.** *Буҙ күлдәк.*

**БУҘА I** [дөйөм төрки *bōza* 'һыра'] (Р.: буза; И.: boza; Т.: boza) *и. этн.*

Һоло, арыш, арпа йәки бойҙай ярмаһынан ҡайнатып әсеткән милли эсемлек. □ Буза (*национальный напиток, приготовленный из зёрен овса, ржи, ячменя или пшеницы*). *Буҙа ҡойоу. Буҙа һөҙөү.*

**БУҘА II** (Р.: жимолость; И.: elder; Т.: mürver) *и. бот. диал.*

Айыу баланы. □ Жимолость (лат. *Lonicera*). *Буҙа үҫкән ағасты күргәнең бармы?*

**БУҘАҒЫЙ** *и. диал. ҡар.* **буҙа I.**

**БУҘАҠЛАУ (буҙаҡла-)** (Р.: ткать в красную и белую полоску; И.: weave in red and white pattern; Т.: kırmızı ve beyaz çizgili dokumak) *ҡ. туҡ.*

Буй-буй ҡыҙыл итеү (*киндерҙе*). □ Ткать в красную и белую полоску. *Буҙаҡлап балаҫ һуғыу. Таҫтамалдарҙы ҡыҙыл киҙе менән буҙаҡлап һуҡтылар.*

**БУҘАМЫҠЛАНЫУ (буҙамыҡлан-)** (Р.: тронуться (*о льде*); И.: break cice; Т.: buzlar çözülmek) *ҡ. диал.*

Боҙ ҡуҙғалыу. □ Тронуться (*о льде*). *Буҙамыҡлана башланы.*

**БУҘАН I** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһе аймағы. □ Бузан (*название родового подразделения башкир племени табын*). *Буҙан аймағы башҡорто.*

**БУҘАН II** *с. диал. ҡар.* **дыуамал.** *Буҙан егет.*

**БУҘАР** [рус. *будара*] (Р.: бударка; И.: catamaran; Т.: katamaran) *и. диал.*

Ҙур ҡуш кәмә, йөк кәмәһе. □ Бударка (*гребное судно*); катамаран. *Йылға өҫтөндә буҙарҙар йөҙә.*

**БУҘАРТЫУ (буҙарт-)** (Р.: делать серым; И.: make grey; Т.: bozartmak) *ҡ.*

**1.** Буҙ төҫкә индереү, буҙ итеү. □ Делать серым. *Йөҙҙө буҙартыу.*

**2.** Төҫтө ҡасырыу, төҫһеҙләндереү. □ Делать тусклым. *Керҙе буҙартыу.*

**БУҘАРЫНЫУ (буҙарын-)** (Р.: сереть; И.: turn grey; Т.: bozarmak) *ҡ.*

Төҫ ҡасып, буҙ төҫкә инеү. □ Сереть, становиться серым. *Ҡурҡыштан буҙарыныу.*

**БУҘАРЫУ (буҙар-)** [дөйөм төрки *bozar-* 'буҙарыу'] (Р.: сереть; И.: become grey; Т.: bozarmak) *ҡ.*

**1.** Буҙ төҫкә инеү. □ Сереть, становиться серым, тускнеть. *Күк йөҙө буҙарҙы. Кер буҙарған.* ■ *Алтынбай төтөн сығарыуҙан бөтөнләй тыйылып килһә лә, офоҡ сите буҙара башлағас, ҡыу ҡамыш, әрем йыйып, ут тоҡандырып йылынып алды.* З. Ураҡсин.

**2.** Төҫ ҡасыу, төҫһеҙләнеү. □ Синеть, становиться синим *(о лице). Һалҡындан йөҙө буҙарған.* ■ *Һалдат ҡапыл тыны бығылып тынып ҡалды. Уның аҡһыл йөҙө буҙарып китте.* З. Биишева.

**БУҘАТ** (Р.: название звезды из созведия Малой Медведицы; И.: name of a star of the Lesser Bear; T.: Küçükayı takımyıldızından bir yıldızın ismi) *и.*

**1.** *астр.* Кесе Етегәндең бер йондоҙоноң исеме. □ Название звезды из созведия Малой Медведицы. *Буҙат йондоҙо.*

**2.** *миф.* Күктә йәшәүсе ат. □ Конь, живущий на небе. ■ *Кесе Етегәндә Буҙат менән Һарат йәшәй.* Башҡорт мифологияһынан.

**БУҘҒЫЛ** (Р.: сероватый; И.: greyish; T.: boz) *с.*

Буҙ төҫкә тартым. □ Сероватый. *Буҙғыл төҫ. Буҙғыл һарыҡ.*

**БУҘҠА ТУРҒАЙ** *и. зоол. диал. ҡар.* **һабан турғайы.** *Һауала буҙҡа турғайҙар сырылдаша.*

**БУҘЛАҠ I (буҙлағы)** *и. зоол. диал.*

**1.** *ҡар.* **буҙыҡай.** *Буҙлаҡ ите.*

**2.** *ҡар.* **сырлауыҡ.** *Баҫыу өҫтөндә буҙлаҡтар оса.*

**БУҘЛАТЫУ (буҙлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **буҙлау.** *понуд. от* **буҙлау.** *Ниңә инде ҡустыңды буҙлатаһың?*

**БУҘЛАУ I (буҙла-)** (Р.: выть; И.: howl; T.: bozlamak) *ҡ. диал.*

**1.** Һуҙып илау. □ Выть, плакать в голос. *Буҙлап илау. Бутаһынан айырылған дөйә һымаҡ буҙлап илай, бахыр.*

**2.** *күсм.* Йәмһеҙ тауыш менән йырлау. □ Петь неприятным голосом. *Йырҙы белһә лә, белмәһә лә буҙлаған була.*

**3.** *миф.* Хәүеф-хәтәр менән бәйле йәмһеҙ тауыш сығарыу. □ Реветь, выть неприятным голосом; мифологизированное действие, вызывающее несчастье. *Буҙларға ярамай, бәлә килә.*

**БУҘЛАУ II** *с. диал. ҡар.* **буҙ.** *Төҫө буҙлау ғына була ул ҡоштоң.*

**БУҘЛАШЫУ (буҙлаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **буҙлау 2.** *взаимн. от* **буҙлау 2.** *Кистәрен ҡатындар йыйылышып буҙлашып ултыралар.*

**БУҘ ТУМЫРТҠА** (Р.: седой дятел; И.: woodpecker species; T.: küçük yeşil ağaçkakan) *и. зоол.*

Япраҡлы урмандарҙа йәшәүсе ағас бөжәктәре һәм уларҙың ҡурсаҡтары менән туҡланыусы, башы, кәүҙәһенең аҫты буҙ төҫтәге күгәрсендән бәләкәйерәк ултыраҡ ҡош. □ Седой дятел (лат. *Picus canus). Ағаска буҙ тумыртҡа ҡунған.* ■ *[Буҙ тумыртҡаның] ҡанаттарының осонда — буй, ә ҡойроҡ өҫтөндә арҡыры аҡ һыҙыҡтар бар.* Э. Ишбирҙин.

**БУҘ ТУРҒАЙ** (Р.: степной жаворонок; И.: (sky)lark; T.: boğmaklı toygar) *и. зоол.*

**1.** Яландарҙа һәм баҫыуҙарҙа йәшәүсе бөжәктәр, үлән орлоҡтары менән туҡланыусы, һырт яғы буҙ, ҡанаттары ҡара көрән таптар менән сыбарланған һорғолт аҡ төҫтәге, турғай ҙурлығындағы күсмә ҡош. □ Степной жаворонок (лат. *Melanocorypha calandra). Буҙ турғайҙар оса.* ■ *[Өммөгөлсөм:] Әгәр бер Хоҙайым тел аҫкысы биреп, буҙ турғай булып һайрай алһам, бәлки, йөрәгемдә янғанды әҙ генә булһа ла аңлата алыр инем һиңә.* З. Биишева. *[Буҙ турғай] яҙғыһын бөжәктәр, йәйгеһен үлән орлоҡтары һәм иген менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**2.** *диал. ҡар.* **һабан турғайы.** *Буҙ турғайҙар сырлай.*

**3.** *диал. ҡар.* **йорт турғайы.** *Буҙ турғайҙар ем супләй.*

**4.** *диал. ҡар.* **сырлауыҡ.** *Буҙ турғайҙар һайрай.*

**БУҘШЕШЕК (буҙшешеге)** (Р.: опухоль; И.: tumour; T.: şişlik) *и. диал.*

Шеш. □ Опухоль. *Буҙшешек сыҡҡан.*

**БУҘЫҠА** *и. диал. ҡар.* **буҙыҡай.** *Буҙыҡалар ҡорҡолдай.*

**БУҘЫҠАЙ** (Р.: тетёрка и самка глухаря; И.: she-wood grouse; T.: keklik) *и.*

Ҡорҙоң һәм һуйырҙың инәһе. □ Тетёрка и самка глухаря. *Буҙыҡайҙар йүгерешә.*

**БУҘЫР** [рус. < фр. *poudre*] (Р.: пудра; И.: powder; Т.: pudra) *и.*

Биткә яға торған хуш еҫле йомшаҡ онтаҡ. □ Пудра. *Биткә буҙыр һөртөү.*

**БУҘЫРЛАНЫУ (буҙырлан-)** *ҡ.*

**1.** *ҡайт. ҡар.* **буҙырлау.** *возвр. от* **буҙырлау.** *Көҙгө алдында буҙырланыу.*

**2.** *төш. ҡар.* **буҙырлау.** *страд. от* **буҙырлау.** *Буҙырланған битен ямғыр тамсылары йыуа.*

**БУҘЫРЛАУ (буҙырла-)** (Р.: пудрить; И.: powder; Т.: pudra kullanmak) *ҡ.*

Буҙыр менән ҡаплау; буҙыр һөртөү. □ Пудрить. *Битте буҙырлау.*

**БУЖАЙ** (Р.: толстый; И.: thick; Т.: şişman) *с. диал.*

Йыуан. □ Толстый *(о человеке). Бужай кеше.*

**БУЖАЛ** (Р.: заранее назначенный срок перевозки невесты в дом жениха; И.: agreed upon time; Т.: gelini getirme zamanı) *и. этн.*

Ҡыҙҙы күсереүгә алдан билдәләнгән ваҡыт. □ Заранее назначенный срок перевозки невесты в дом жениха. *Килен йәрәшкәс, бер-ике айҙан бужал ҡуялар.*

**БУЖАН** *и. зоол. диал. ҡар.* **иңкеш.** *Бужандар оса.*

**БУЖМАҠ** *с. диал. ҡар.* **бурсылаҡ.** *Бужмак кәүҙәле, көптәй ҙур ҡорһаҡлы булһа ла, нык-нык баҫып килә.*

**БУЗАРА** (Р.: ласка; И.: caress; Т.: şefkat) *и. диал.*

Иркәләү, наҙ. □ Ласка.

**БУЗАРЫУ (буҙар-)** *ҡ. диал. ҡар.* **буҙарыу.**

**БУЙ I** [боронғо төрки *бог* 'буй, оҙонлоҡ'] (Р.: длина; И.: length; Т.: boy) *и.*

**1.** *Нәмәнең* оҙонлоҡҡа булған һуҙымы; оҙонлоҡ. □ Длина. *Бүрәнәнең буйы ике метр. Өҫтәлдең буйы.* ■ *Һыбайлыларҙың алдағыһы бер-ике мәртәбә йәнлекте уҙып китте, әйелә биреп, ҡулындағы беләк буйы суҡмары менән һелтәнде, кейеге сак-сак ялтанып ҡала алды.* З. Ураҡсин. *Ҡояш билбау буйы күтәрелеп, апаруҡ ҡыҙҙыра башлағайны инде.* Ә. Хәкимов.

**2.** *Кешенең* йәки *бер нәмәнең* бейеклеккә булған үлсәме; бейеклек. □ Рост. *Буйы бигерәк оҙон.* ■ *Алпамыша ғәйәт ирәбе, ғәләмәт көслө батыр булып күҙ алдына баҫа: уның буйы ғына ла алтмыш (ҡайһы бер вариантта етмеш) аршын, яурыны алты аршын.* Халыҡ ижадынан. ● *Баланың буйын күтмә, аҡылын көт.* Әйтем. *Дөйәләй буйың булғансы, төймәләй аҡылың булһын.* Әйтем.

**3.** Кешенең бөтә һыны, кәүҙә. □ Стан, фигура. ■ *Ҡашың ҡара, буйың зифа.* Халыҡ йырынан.

**4.** *Ниҙеңдер* бөтә һуҙымын билдәләгән ара, әйләнә тирәһе, эргәһе. □ Расстояние, определяемое пространством, вдоль *чего-л. Йылға буйы. Ҡойма буйы.* ■ *Ҡарғалар һыу буйындағы эре тирәктәргә оя ҡороу мәшәҡәте менән ҡар ҙа ҡор киләләр.* З. Ураҡсин. *Ишек алдында, нигеҙ буйында, Таиба әбей менән Өммөгөлсөм бойоғошоп ҡына тынып ултыра.* З. Биишева. *Ҙурырак балыҡтар, суртан йәки йәйендәр шамбырлаған һайын, ҡамыш буйҙары дерелдәп ҡала.* Д. Бүләков. *Йылға буйын һыҫҡәндереп, Оҙонталда сыбырткы шартлаттылар, шунан тағы тауыштар өҙөлдө.* Р. Камал.

**5.** Оҙонға тартылған бер рәт, һыҙат. □ Ряд. *Ике буй түтәл кишер сәсеү. Ҡулдәгенә ике буй төймә тағылған.* ■ *Йөҙйәшәр имәндең бер буйы ҡара янған, йыуан ҡуш олоно ике яҡҡа ярылып төшкән, ҡабыҡтары сәрпәкләнеп сәсрәгән, ус аяһындай япраҡтары көйөп, көлгә әйләнгән.* З. Ураҡсин.

**БУЙ II** (Р.: вдоль; И.: lengthwise; Т.: boy) *с.*

**1.** Оҙонға тартылған, оҙонлайға ҡуйылған. □ Вдоль, в длину. *Буй таҡталар. Урындыҡҡа буй балаҫ түшәлгән. Ҡыҙылға ҡара буй төшкән туҡыма.*

**2.** Оҙонлоҡҡа булған һуҙым йүнәлешендә үтә торған. □ Продольный. *Буй бысҡыһын тотоп атайым урманға китте. Буй бысыу.*

♦ **Буй ятҡан(ды) ағасты** (*йәки* **сүпте**) **арҡыры һалмау** бер ни ҙә эшләмәү, тик

ятыу. □ Лежать на боку; пальцем о палец не ударить.

**БУЙ III** [рус. < гол. *boei*] (Р.: буй; И.: buoy; Т.: şamandıra) *и.*

Һыу төбөндәге нәмәнең тәңгәлен, һай урынды, ау һалған ерҙе һәм башҡаларҙың урынын күрһәтеү өсөн йөҙҙөрөп ҡуйылған билдә; ҡалҡыуыс. □ Буй. *Йылға өҫтөндә буйҙар ғына күренеп тора.*

**БУЙ IV** (Р.: верхняя часть платья; И.: bodice; Т.: elbisenin üst kısmı) *и. диал.*

Күлдәктең өҫкө өлөшө. □ Верхняя часть платья. *Ҡыҫҡа буйлы күлдәк.*

**БУЙ АЛЫУ (буй ал-)** (Р.: беременеть; И.: become pregnant; Т.: gebe kalmak) *ҡ.*

Ауырға ҡалыу. □ Беременеть, забеременеть. *Буй алып, әсә булған.*

**БУЙБАШ** (Р.: непослушный; И.: disobedient; Т.: yaramaz) *с. диал.*

Тыңлауһыҙ. □ Непослушный. *Буйбаш бала.*

**БУЙ БИРЕҮ (буй бир-)** (Р.: подчиняться; И.: give in; Т.: uymak) *ҡ.*

**1.** Буйһоноу. □ Подчиняться, поддаваться *кому-чему,* не устоять *перед кем-чем. Батшаға буй биреү.* ■ *[Мотал — Нисаға:] Мин һиңә кем? Теге гәзиткә төшөрҙөләр тигәс тә, бөтәгеҙ ҙә буй бирмәй башланығыҙмы инде?* М. Хәйҙәров. *Таиба әбейҙең кесе улы Закир өлкәндәргә бер ҙә буй бирмәне.* З. Биишева. *Бейә Аҡйелекте өҫкә сөйгән, ергә алып һуҡҡан, әммә егет уны ҡулынан ысҡындырмаған. Шунан бейә буй биргән, ҡырыҫланмаҫ булған.* Әкиәттән.

**2.** Үҙ ыңғайына ҡуйыу; буйлатыу. □ Распустить *кого (ослабить надзор). Балаға буй биреү.*

**БУЙ-БУЙ** (Р.: полосатый; И.: striped; Т.: çizgili) *с.*

**1.** Күп буйлы, һыҙат-һыҙат. □ Полосатый, с полосами. *Буй-буй һыҙатлы тауар. Буй-буй биҙәкле күлдәк.*

**2.** Күп рәтле, рәт-рәт. □ Рядами. *Ҡарағайҙарҙы буй-буй ултыртыу.* ■ *Урманда ағасты буй-буй киҫеп, ағасын ауҙарып китәләр ҙә, һатҡанын һаталар, һатмағаны ята икән аунап, тип һөйләгәйне бирәү.* Р. Солтангәрәев.

**БУЙ-БУЙҘАҠ** (Р.: нисколько; И.: not at all; Т.: hiç) *р.*

**1.** Бер ҙә. □ Нисколько. *Буй-буйҙаҡ эшләмәй.*

**2.** Буш ҡул менән. □ С пустыми руками.

**3.** Бушҡа. □ Попусту, напрасно.

**БУЙ БЫСҠЫ** (Р.: продольная пила; И.: ripsaw; Т.: bıçkı testeresi) *и.*

Буй йүнәлештә ҡырҡыу өсөн ҡулланылған ҡыя тешле бысҡы. □ Продольная пила. *Буй бысҡы менән бысыу.*

**БУЙ-БУЙЫНА** (Р.: беспрерывно; И.: continuously; Т.: sürekli) *р.*

Туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ. □ Беспрерывно, непрерывно. *Буй-буйына һөйләнеү.*

**БУЙГӨЙӘҘ** (Р.: неуклюжий; И.: awkward; Т.: acemi) *с. диал.*

Һынһыҙ, һөмһөҙ *(кешегә ҡарата).* □ Неуклюжий *(о человеке). Буйгөйәҙ кеше.*

**БУЙГҮЛМӘК (буйгүлмәге)** *и. диал. ҡар.* **һыпайта.** *Буйгүлмәк кейеү.*

**БУЙҒА** (Р.: вдоль; И.: along; Т.: boylu boyunca) *р.*

Буй йүнәлештә. □ Вдоль. *Ағасты буйға бысыу. Ерҙе буйға һөрөү. Туҡыманы буйға бесеү.*

**БУЙҒА БӨТКӘН** (Р.: неспособный; И.: blunder; Т.: beceriksiz) *с.*

**1.** Ҡулынан эш килмәгән кешегә ҡарата хуп күрмәгәнде белдергәндә әйтелә; ҡоро кәүҙә. □ Неспособный; недотёпа, пустышка. *Буйға бөткән егет.* ■ *Бер зәғиф, көсһөҙ, һөнәрһеҙ, буйға бөткән бәндә мин.* Ш. Бабич.

**2.** Зифа буйлы. □ Стройный. *Буйға бөткән ҡыҙҙар.*

**БУЙҒА ЕТЕҮ (буйға ет-)** (Р.: достигнуть совершеннолетия; И.: become of age; Т.: erginlik yaşına girmek) *ҡ.*

Үҫеп, тейешле йәшкә йәки бейеклеккә етеү. □ Достигнуть совершеннолетия, вырастать. *Буйға еткән ҡыҙ. Үҫемлектәр буйға*

*еткән.* ■ *Егет кенә булып, буйға еткәс, кояш булып йәйел йыһанға.* Халыҡ ижадынан.

**БУЙҒА ҠАЛЫУ (буйға ҡал-)** *ҡ. ҡар.* **буй алыу.** *Ҡатын буйға ҡалған.*

**БУЙҒАУ** (Р.: основа в ткачестве; И.: warp; Т.: atkı) *и. диал. туҡ.*

Буйлыҡ, буй еп. □ Основа ткани, уток *(в домашнем ткачестве). Балаҫ буйғауы.*

**БУЙҒА УҘЫУ (буйға уҙ-)** *ҡ. ҡар.* **буй алыу.** *Егеттең кәләше буйға уҙған.* ■ *[Тәңкәбикә — Шәфәккә:] Хоҙай ҡушмағас, буйыңа ла уҙмай ҡалдың шул. Бала үҫтереп торор инең, исмаһам.* М. Кәрим.

**БУЙҒА ҺИКЕРЕҮ (буйға һикер-)** *ҡ. ҡар.* **буй ебәреү.** *Оҙайлы ямғырҙарҙан һуң, картуфтар буйға һикерҙе.*

**БУЙҒОРАМА** *и. диал. ҡар.* **түрыюрған.** *Буйғорама яһау.*

**БУЙҒЫҘ** (Р.: совершеннолетняя девушка; И.: grown-up girl; Т.: bülüğ kız) *и. диал.*

Еткән ҡыҙ. □ Совершеннолетняя девушка. *Буйғыҙҙар киске уйынға сығалар.*

**БУЙҘА БУЛЫУ (буйҙа бул-)** (Р.: быть беременной; И.: be pregnant; Т.: hamile olmak) *ҡ.*

Ауырлы булыу. □ Быть беременной. *Был ҡатындың буйында бар.*

**БУЙҘАҒЫ БАЛА** (Р.: ребёнок в утробе; И.: baby in the womb; Т.: fetus, ana rahmindeki çocuk) *и.*

Ҡарындағы бала. □ Ребёнок в утробе. *Йөклө ҡатындар буйҙағы баланың сәләмәтлеген уйларға бурыслы.*

**БУЙҘАЙ КҮЛМӘК (күлмәге)** *и. диал. ҡар.* **һыпайта.** *Буйҙай күлмәк тегеү.*

**БУЙҘАҠ I** [боронғо төрки *буйлаҡ* 'үҫкән, етлеккән'] (Р.: холостой; И.: single; Т.: bekâr) *с.*

**1.** Ҡатыны булмаған; ҡатынһыҙ; өйләнмәгән. □ Холостой. *Ауылдарҙа буйҙаҡ егеттәр, ирҙәр күп.*

**2.** Ҡатынһыҙ кешегә хас. □ Холостой, холостяцкий. *Сәлимде буйҙаҡ тормош та ялҡытты.*

**БУЙҘАҠ II** (Р.: бездетная; И.: childless; Т.: çocuksuz) *с.*

**1.** *диал.* Биҙәү, балаһы булмаған. □ Бездетная *(о женщине). Буйҙаҡ ҡатын.*

**2.** *диал. ҡар.* **тол I.** *Ире үлеп, буйҙаҡ ҡатын булғанына ла оҙаҡ йылдар үтте.*

**3.** *диал.* Ҡыҫыр. □ Яловая. *Буйҙаҡ һыйыр.*

**БУЙҘАҠ III** *с. диал. ҡар.* **яңғыҙ.** *Буйҙаҡ баш.*

**БУЙҘАҠ IV** *с. диал. ҡар.* **даими.** *Буйҙаҡ эш тапҡан.*

**БУЙҘАҠЛЫҠ (буйҙаҡлығы)** (Р.: положение холостяка; И.: bachelorhood; Т.: bekârlık) *и.*

Өйләнмәгән булыу. □ Положение холостяка, холостяцкое положение. *Егетте буйҙаҡлыҡ ялҡытты, өйләнергә булды.*

**БУЙҘАН-БУЙ(ҒА)** (Р.: по всей длине; И.: from end to end; Т.: tüm uzunluğu boyunca) *р.*

Бөтә оҙонлоҡҡа, бөтә буйға. □ По всей длине, из конца в конец; от края до края. *Буйҙан-буй һыҙат төшкән. Буйҙан-буйға йүгереү. Урманды буйҙан-буйға үтеп сығыу.* ■ *Шунан яҫы бысҡы менән бүрәнәне буйҙан-буйға ярып таҡта яһайҙар.* Р. Солтангәрәев.

**БУЙҘАНЛАУ (буйҙанла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **һуйҙанлау.** *Буйҙанлап урамда йөрөгәнсе, эшкә инһәң яҡшыраҡ булыр ине.*

**БУЙҘАУ (буйҙа-)** *ҡ. диал. ҡар.* **буйлау.**

**БУЙ ЕБӘРЕҮ (буй ебәр-)** (Р.: расти; И.: grow; Т.: büyümek) *ҡ.*

Үҫеп оҙонайыу *(үҫемлектәргә ҡарата).* □ Расти, вырастать *(о растениях). Картуф баҡсаһында ҡый үләндәре буй ебәргән.* ■ *Һоло буйға һикергәс тә утауҙы туҡтаттылар.* А. Таһиров. *Ана бит, әҙәм ҡулы ҡиҫкән йүкә урманы урынында ҡотороноп үҫаҡ үҫә, ҡасандыр ҡарағайҙар буй ебәреп, ҡояшҡа ҡарап ҡыуанышып ултырған биләмәне сауҡалыҡ баҫып алған.* Н. Мусин.

**БУЙ ЕТЕҮ (буй ет-)** (Р.: достигать; И.: reach; Т.: ermek) *ҡ.*

**1.** Ынтылғанда, үрҙәге нәмәгә ҡул етеү. □ Достигать. *Минең мейес башына буйым етә.*

**2.** *ҡар.* **буйға етеү.** *Буй еткән ҡыҙҙары бар.*

**БУЙ ҠУЙЫУ (буй ҡуй-)** (Р.: давать волю; И.: give vent to smth; Т.: engel olmamak) *ҡ.*

Ирек ҡуйыу. □ Давать волю *в чём. Балаға буй ҡуйыу.*

**БУЙЛАЙ** (Р.: вдоль; И.: along; Т.: boylu boyunca) *р.*

Буй йүнәлештә, буйҙан-буй. □ Вдоль. *Ағасты буйлай киҫеү. Күлдәкте буйлай тегеү.*

**БУЙЛАП** (Р.: вдоль по; И.: along; Т.: boyunca) *бәйл.*

Төп килештәге исем менән килеп, *ниҙеңдер* буй йүнәлешендә хәрәкәт итеүен белдерә. □ Вдоль по *(послелог с сущ. в осн. п.). Күпер буйлап барыу. Таҡта буйлап ҡына йөрөү. Айыу юлы буйлап китеү.* ■ *Ҡойма буйлап сыйырҙарын сылтыратып ике эт лар-лор өрөп, йөрөп тора.* З. Ураҡсин. *Яҡуп иптәштәрен оҙаҡ көттөрмәне. Картуф баҡсаһы аша башта ул күл яғына сыҡты, унан тыҡрыҡ буйлап урамға менде.* М. Кәрим. *[Зөлхизә] йәш бала шикелле, ҡулдарын сәпәкәйләп, түҙемһеҙләнеп, яр буйлап йүгереп йөрөнө.* З. Биишева.

**БУЙЛАТЫУ (буйлат-)** (Р.: перемещаться вдоль; И.: travel all over; Т.: boyunca hareket etmek) *ҡ.*

**1.** Буйлай хәрәкәт иттереү. □ Двигаться вдоль *чего,* по *чему. Ҡойма буйлатып алып барыу. Бағана буйлатыу.*

**2.** Арҡыры-буй гиҙҙереү. □ Заставлять исходить, изъездить. *Ауыл буйлатып алып йөрөнө.*

**3.** *Ниҙеңдер* ашаһына, төбөнә еткереү. □ Доставать, касаться, дотрагиваться. *Күл төбөн буйлатып ҡарау.*

**4.** *күсм.* Ирек ҡуйып, шаштырыу. □ Баловать, избаловать; дать волю. *Улдарын буйлатҡандар, тыңламай.*

**БУЙЛАУ (буйла-) I** (Р.: двигаться вдоль; И.: pass along smth; Т.: boyuna hareket etmek) *ҡ.*

**1.** Буй йүнәлештә хәрәкәт итеү. □ Двигаться вдоль *чего. Яландарҙы буйлау. Йылғаны буйлау.* ■ *Ҡоштар йырын тыңлап, туғайҙарҙы буйлап, сәскәләрҙән йыйҙыҡ наҙҙарҙы.* Ф. Әсәнов.

**2.** Үрмәләп менеү *(ултырған ағасҡа, бағанаға).* □ Взбираться, карабкаться. *Электр бағанаһына буйлау. Солоҡ ағасына буйлау.*

**3.** *Ниҙеңдер* ашаһына, төбөнә етеү. □ Достигать *(дна). Йылғаның тәрәнлеген таяҡ менән буйлап ҡарау.*

**4.** Буйһонмай, тейешле йүнәлештән, ыңғайҙан сығыу. □ Не слушаться, не повиноваться. *Ат буйлай бит әле. Утынды бысам тиһәм, бысҡы буйлап тик тора.*

**5.** *күсм.* Буйһонмай, тәртиптән сығыу. □ Избаловаться, становиться избалованным. *Был бала буйлай башлаған, тыңламай.*

**6.** *диал.* Бер ғәҙәтте ҡыуыу. □ Заниматься одним и тем же делом.

**БУЙЛАУ (буйла-) II** *ҡ. диал. ҡар.* **оҙатыу II.** *Балаҫҡа еп буйланым.*

**БУЙЛЫ I** (Р.: полосатый; И.: striped; Т.: çizgili) *с.*

Буй һыҙатлы. □ Полосатый. *Буйлы биҙәк. Буйлы салбар. Буйлы ойоҡ.* ■ *Буйлы зәңгәр күлдәктең еңен Яҡуп шатырҙатып төптән үк йыртты ла алды.* М. Кәрим.

**БУЙЛЫ II** (Р.: имеющий *какой-л.* рост; И.: having a height of; Т.: boylu) *с.*

*Ниндәйҙер* буйға эйә. □ Имеющий *какой-л.* рост, *какого-л.* роста. *Һомғол буйлы ҡыҙҙар. Зифа буйлы ҡатын. Ҡыҫҡа буйлы ир килә ята.* ■ *Вәзир. ҡырын йығыла биреп, оҙонса буйлы сибек Айҙарҙы баш аша ырғытты.* М. Кәрим. *Күк йөҙө ише зәп-зәңгәр күҙле, ай ҡашлы, ҡыр кәзәһенекеләй һомғол буйлы еңгәһен онота алманы ул.* И. Ноғоманов. *Үҙенән кәмендә ун биш-ун алты йәшкә олораҡ булған был йоҡа кәүҙәле, бәләкәс буйлы кешене Амантаев ихтирам итә.* Р. Солтангәрәев.

**БУЙЛЫҠ (буйлығы)** (Р.: основа в ткачестве; И.: warp; T.: atkı) *и.*

**1.** *туҡ.* Туҡыманың оҙонлоҡҡа оҙайтылған ебе. □ Основа, уток *(в ткачестве).* / Основный. *Еп буйлыҡ. Йөн буйлыҡ. Буйлыҡ оҙатыу.*

**2.** Төҙөлөштә буйға һалына торған материал (*ағас һ. б.*). □ Строительный материал, устанавливаемый в длину (*дерево и т. д.*).

**3.** Ышлыяның арттан әйләндереп, ике яҡ ҡолаҡбау түбәнә тартылған бауы. □ Часть шлеи, протянутая вдоль спины лошади к гужам.

**БУЙЛЫҠҠАН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ҡәбиләһе аймағы исеме. □ Буйлыккан *(название родового подразделения башкир племени усерган). Буйлыҡҡан аймағы башҡорто.*

**БУЙМА-БУЙ** *р. диал.*

**1.** *кар.* **туранан-тура**. – *Ауылда алып барылған бөтә эштәрҙә буйма-буй ҡатнашып йөрөй.*

**2.** Бер туҡтауһыҙ. □ Беспрестанно. *Ямғыр буйма-буй яуа.*

**БУЙРАҠ** *с. кар.* **буръяк.**

**БУЙСАН** (Р.: рослый; И.: tall; T.: boylu) *с.*

Буйға оҙон, оҙон буйлы. □ Рослый, высокий, высокого роста. *Буйсан егет. Буйсан ҡыҙ.*

**БУЙСАНЛЫҠ (буйсанлығы)** (Р.: высокорослость; И.: tall; T.: uzun boyluluk) *и.*

Буйсан булыу. □ Высокорослость. *Төркөмдәге егеттәрҙән ул буйсанлығы менән айырылып тора.* ■ *Ғүмерендә күрмәгән затлы кейемдәр һуштын алды Гөлбаныуҙың. Үҙенең ун биш йәшендә тиңдәштәренән буйсанлығы менән айырылып торған ҡыҙға итектәренә тиклем йәтешле булды.* Т. Ғарипова.

**БУЙТ I** (Р.: инерция; И.: inertia; T.: atalet) *и. иҫк.*

*Нәмәнең* үҙ хәрәкәтен, үҙ хәлен һаҡлау көсө; һәлмәклек; инерция. □ Инерция. *Буйт менән хәрәкәт итеүсе уйынсыҡ.*

**БУЙТ II** (Р.: толк; И.: use, sense; T.: mana) *и. диал.*

Мәғәнә, рәт. □ Толк. *Ул малайҙан буйт юҡ.*

**БУЙТЛАҠ (буйтлағы)** (Р.: человек, поддакивающий *кому-л.*; И.: person saying yes to smb; T.: evetleyen kimse) *и. һөйл.*

Кеше һүҙен йөпләп, ҡеүәтләп торған кеше. □ Человек, поддакивающий *кому-л. Ул буйтлаҡ ни, нимә тиһәң дә ыңғайына һөйләй инде.*

**БУЙТЛАУ (буйтла-)** (Р.: ударить по ходу; И.: spur; T.: vurmak) *к.*

**1.** *Ниҙәләр* килгән ыңғайына елләтеп һуғыу. □ Ударить по ходу *(чтобы ускорить движение чего-л.). Уйынсы тупты буйтлап ебәрҙе.*

**2.** *күсм. Кемдеңдер* һүҙен йөпләү; ҡеүәтләү. □ Поддакивать *кому,* одобрять *кого. Ихлас күңелдән буйтлау.*

**БУЙТЛЫ** (Р.: подходящий для броска; И.: heavy; T.: sağlam) *с.*

Бәргәндә, һелтәгәндә шәп оса, ныҡ тейә торған; һәлмәк, елле. □ Подходящий для броска. *Буйтлы сәлек. Буйтлы ҡайыш.*

**БУЙТҺЫҘ** (Р.: бестолковый; И.: muddle-headed; T.: salak) *с.*

Мәғәнәһеҙ. □ Бестолковый. *Буйтһыҙ кеше.*

**БУЙТЫМ** (Р.: вдоволь; И.: in plenty; T.: yeterince) *р. диал.*

Ҡулыһынса етерлек; мул; теләгәнсә, ҡәнәғәт булғанса. □ Вдоволь, много, достаточно. *Ашау беҙҙә буйтым.*

**БУЙ ҮЛСӘГЕС** (Р.: ростомер; И.: stadiometer; T.: boy ölçer) *и.*

Кешенең буйын үлсәй торған ҡорамал. □ Ростомер. *Балалар табибы буй үлсәгес менән малайҙы үлсәп ҡараны.*

**БУЙ ҺАЛЫУ (буй һал-)** (Р.: проверять глубину воды ростом; И.: measure water depth by one's height; T.: su derinliğini boy ile kontrol etmek) *к.*

**1.** Аяҡ үрә төшөп, һыуҙың тәрәнлеген үлсәү. □ Проверять глубину воды ростом. *Мин күл ситенә буй һалып ҡараным.* ■ *Беҙҙең генә Ҡомкүл һыуы тәрән, буй һалһам да буйым буйламай.* Халыҡ йырынан.

**2.** Ҡолас ташлау. □ Плавать брассом. *Буй һалып йөҙөү.*

**БУЙҺИКЕ** (Р.: узкие нары вдоль стены; И.: narrow plank bed along a wall; Т.: dar tahta yatak) *и. диал.*

Стена буйлап эшләнгән тар һике. □ Узкие нары, скамья вдоль стены. *Һауыт-һабаны буйһикегә ҡуйыу.*

**БУЙҺОНҒАНЛЫҠ (буйһонғанлығы)** (Р.: подчинённость; И.: subordination; Т.: bağlılık) *и.*

Буйһоноулы, бойондороҡлолоҡ хәле. □ Подчинённость. *Тәбиғәткә буйһонғанлыҡ. Етәксегә буйһонғанлыҡ.*

**БУЙҺОНДОРОУ (буйһондор-)** (Р.: подчинять; И.: subordinate; Т.: boyun eğdirmek) *ҡ.*

**1.** Көс менән баш эйҙереү; теҙ сүктереү, бойондороҡло итеү. □ Подчинять, покорять. *Халыҡты буйһондороу. Ауылды буйһондороу.*

**2.** Яулап алып, үҙеңә хеҙмәт иттереү. □ Покорять. *Кеше тәбиғәтте буйһондорорға тырыша.*

**3.** *Кемдеңдер* иркенә, *ниҙеңдер* яйына күндереү. □ Приучать *к чему-л. Яңы хужа хеҙмәткәрҙәрҙе тәртипкә буйһондорорға тырышты.*

**БУЙҺОНОУ (буйһон-)** [дөйөм төрки *буйун сун-* 'муйынды һоноу'] (Р.: подчиняться; И.: submit; Т.: boyun eğmek) *ҡ.*

**1.** *Кемдеңдер* көсөнә баш эйеү; теҙ сүгеү. □ Подчиняться, покоряться, повиноваться. // Подчинение, повиновение. *Батшаға буйһоноу. Ата-әсәгә буйһоноу.* ■ *Мәңгенән бирле әкрен, ләкин мөһабәт, тәртипле аға торған Ағиҙелдең һыуы .. ни нәмәгәләр буйһонған.* М. Ғафури.

**2.** *Кемдеңдер* иркенә, *ниҙеңдер* яйына күнеү. □ Подчиняться. *Яҙмышҡа буйһоноу. Мәктәптә балалар тәртипкә буйһонорға тейеш.* ■ *Рәмистең йөрәге сәнсеп китте. Әммә ул үҙенән-үҙе ҡайҙалыр алып китеп барған аяҡтарына буйһоноп, барҙы ла барҙы.* З. Йәнбирҙина.

**3.** Етәкселек аҫтында булыу. □ Быть в подчинении *кого-л. Ҡала хакимиәтенә буйһонған уҡыу йорттары.*

**БУЙҺОНОУСАН** (Р.: покорный; И.: obedient; Т.: boyun eğen) *с.*

Тыңлаусан, баш эйеүсән, яраҡлашыусан. □ Покорный, послушный, безотказный. *Буйһоноусан хеҙмәткәр. Буйһоноусан бала.*

**БУЙҺОНОУСАНЛЫҠ (буйһоноусанлығы)** (Р.: покорность; И.: submissiveness; Т.: boyun eğme) *и.*

*Кемдеңдер, нимәнеңдер* көсөнә буйһоноу һәләте. □ Покорность, безропотность. *Егеттең буйһоноусанлығы хужаларға оҡшай ине.*

**БУЙҺУҘМА** *и. диал. ҡар.* **түрьюрған.** *Буйһуҙма тегеү.*

**БУЙ-ҺЫН** (Р.: фигура; И.: stature; Т.: endam) *и. йыйн.*

Кешенең тышҡы рәүеше; кәүҙә. □ Фигура, стан. *Ҡыҙҙың буй-һыны зифа.* ■ *Нурания хәҙер аңланы: ул Ғилемхандың буйһынына ла, сағыусы, күрәшсе булыуына ла ҡыҙыҡманы — уны Ғилемхандың йомшаҡ күңеле, миһырбанлығы әүрәтте, йөрәген әсир итте.* Р. Камал. *Тик буй-һынында ғына еңгәмдең ҡатын-ҡыҙҙарға хас һомғоллоғо, һөйкөмлөлөгө һаҡланып ҡалғайны.* Д. Бүләков.

**БУЙҺЫУ** (Р.: с длинным туловищем; И.: long bodied; Т.: uzun gövdeli) *с.*

**1.** Оҙон тороҡло. □ С длинным туловищем *(о лошади). Буйһыу ат.*

**2.** *диал. ҡар.* **буйсан.** *Буйһыу егет.*

**БУЙЫ(НА)** (Р.: в течение, по; И.: during; Т.: boyunca) *бәйл.*

Төп йәки эйәлек килештәге ара һәм ваҡыт төшөнсәле һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең дауамын белдерә. □ В течение, по. *Ғүмер буйы. Көнө буйы йоҡлап ятыу. Аҙна буйы ямғыр яуыу.* ■ *Улай тиһәң, ғәйепте бер*

*Гөлбаныуҙан ғына әҙләү ҙә дөрөç түгелдер: Ихсанбай бит ғүмере буйы йылғаның ике ярылай, икегә бүленеп, үҙе йәшәгән тормошто яратмай, шикләнеп, икеләнеп йәшәне.* Т. Ғарипова. *Төн буйына кар яуған: ергә япкан аҡ юрған.* С. Әлибаев.

♦ **Һыу буйы** оҙон-оҙаҡ һөйләнгән *(һүҙгә, хәбәргә ҡарата).* □ Очень длинный *(о разговоре). Һыу буйы хәбәр һөйләү.*

**БУЙЫ-БУЙЫНА** (Р.: беспрестанно; И.: incessantly; Т.: durmadan) *р. диал.*

Туҡтауһыҙ. □ Беспрестанно. *Буйы-буйына һөйләнә лә йөрөй.*

**БУЙЫ МЕНӘН** (Р.: во всю длину; И.: at full length; Т.: tam boyda) *р. диал.*

**1.** Буйҙан-буйға. □ Во всю длину. *Буйы менән күренеп ята.*

**2.** Туҡтауһыҙ. □ Беспрестанно. *Буйы менән һөйләнеү.*

**БУЙЫНА ЕТЕҮ (буйына ет-)** (Р.: находиться на последнем месяце беременности; И.: become pregnant; Т.: hamile liğin son ayında olmak) *ҡ.*

Балаға етешеү. □ Находиться на последнем месяце беременности. ■ *Ағайым һуғышка китерҙән бер йыл элек кенә кәләш алғайны. Буйына еткән Шәмсекәмәр еңгәм һалдат оҙатҡанда .. ер-һыу илап ҡалды.* Г. Вәлиев.

**БУЙЫНДА БУЛЫУ (буйында бул-)** (Р.: быть беременной; И.: be pregnant; Т.: hamile olmak) *ҡ.*

Йөклө булыу. □ Быть беременной. ■ *Берүк ата-әсәләренә еткер, ҡыҙҙарының хәле насар. Буйында булғанын да белмәгәндәр.* Һ. Дәүләтшина.

**БУЙЫНСА** [дөйөм төрки *бойунча* < *бог* ‘буй; үҙе’] (Р.: по; И.: about, concerning; Т.: boyunca) *бәйл.*

**1.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-шөғөлдөң йүнәлешен, йөкмәткеһен белдерә. □ По *(послелог с сущ. в им. пад. обозначает направление, содержание действия). Мөһим мәсьәлә буйынса ултырышка йыйылыу.*

**2.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең бер нәмәгә ярашлы, килешле рәүештә башҡарылғанын белдерә. □ По *(послелог с сущ. в им. пад. обозначает выполнение действия согласно чему-л.). Закон буйынса эш итеү. Эшселәрҙе исемлек буйынса тикшереп сығыу. Һүҙлек буйынса тәржемә итеү.* ■ *Алтынбай, күнегеп киткән ғәҙәте буйынса, көн тыуыу менән аяғына баçты.* З. Ураҡсин. *Ошо сәғәттән алып ҙур сәйәхәткә әҙерлек башланды, һөйләшеп килешеү буйынса, Ғабдулла менән Айҙар Ҡылыстың арғы башындағы таллыкка мурҙа үрергә китергә булды.* М. Кәрим.

**3.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, *кемдең* йәки *нисеңдер* үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәт нигеҙен белдерә. □ По *(послелог с сущ. в им. пад. обозначает связь с профессиональной сферой). Һөнәре буйынса нефтсе.* ■ *Улар [Саҡай менән Сафа] бала сактан уҡ мәҙрәсә буйынса дуç кеше.* Б. Бикбай.

**4.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп *ниндәйҙер* мөнәсәбәттәге эш төрөн, эш өлкәһен белдерә. □ По (*послелог с осн. п. в разн. знач.). Төҙөлөш буйынса белгес. Хоккей буйынса беренсе урын алыу. Мәктәп буйынса саңғы ярышы ойоштороу* ■ *Нинаның әҙәби әçәрҙәре аҙ ине, күберәге тимер юл транспорты буйынса техник белешмә китаптары.* Б. Бикбай.

**5.** *диал. ҡар.* **буйы(на).** *Бер йыл буйынса эшләмәү. Юл буйынса бошоноп уйланып барыу.*

**БУЙЫНСА** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **муйынсаҡ.**

**2.** *ҡар.* **хәситә.**

**БУЙЫШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ҡәбиләһе аймағы. □ Буйыш *(название родового подразделения башкир племени катай). Буйыш аймағы башҡорто.*

**БУЙ ЮРҒАН** *и. диал. ҡар.* **түрьюрған.**

**БУКЕТ** [рус. < фр. *bouquet*] *и. ҡар.* **гөлләмә.**

**БУКЕТЛАНЫУ (букетлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **букетлау.** *страд. от* **букетлау.**

**БУКЕТЛАУ (букетла-)** (Р.: букетировать; И.: thin out; Т.: seyrekleştirmek) *ҡ. а.х.*

Үҫемлек рәттәрен арҡырылай һөрөп, айырым төркөмдәргә бүлеү; һирәкләү. □ Букетировать. *Сөгөлдөрҙө букетлап утау.*

**БУКИНИСТ** [рус. < фр. *bouquiniste* < *bouquin* 'иҫке китап'] (Р.: букинист; И.: bouquiniste; Т.: eski kitapçı) *и.*

**1.** Файҙаланыуҙа булған китаптар менән һатыу итеүсе. □ Букинист. *Букиниска китап алып барам.*

**2.** Ҡиммәтле иҫке китаптар, ҡулъяҙмалар менән сауҙа итеүсе. □ Букинист.

**БУКИНИСТИК** (Р.: букинистический; И.: second-hand; Т.: genellikle eski kitap satan) *с.*

Тотолған, иҫке китаптар менән һатыу иткән. □ Букинистический. *Букинистик сауҙа нөктәһе. Букинистик киоск. Букинистик магазиндан китаптар һатып алыу.*

**БУКЛЕТ** [рус. < фр. *bouclette*] (Р.: буклет; И.: booklet; Т.: kitapçık) *и.*

Бер биткә сығарылған мәғлүмәт, реклама һ. б. характерҙағы бөкләнмәле баҫма. □ Буклет. *Реклама буклеты.*

**БУКМЕКЕР** [рус. < ингл. *bookmaker*] (Р.: букмекер; И.: bookmaker; Т.: müşterek bahisçi) *и.*

Бәйгегә һәм төрлө уйындарға ҡуйылған аҡсаны йыйыусы һәм отошто таратыусы кеше. □ Букмекер.

**БУКСИР** [рус. < нем. *Bugsierer*] (Р.: буксир; И.: tug (boat); Т.: römorkör) *и.*

Тартып йәки этеп йөрөтөлә торған карап. □ Буксир. ■ *Буксирҙар ватып үткән урындарҙа ғына тәртипһеҙ рәүештә өйөлөшкән боҙ киҫәктәре араһынан күкшелт һыу үҙенең тулҡынсыҡтарын тәгәрләтә.* Й. Солтанов.

♦ **Буксирға алыу** ярҙамсылыҡ итеү. □ Брать на буксир.

**БУКСИРЛАУ (буксирла-)** (Р.: буксировать; И.: tow; Т.: yedemek) *ҡ.*

Тағып һөйрәү; буксирға алыу. □ Буксировать. *Машинаны буксирлау.*

**БУҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **бапаҡ I.**

**БУҠАН** (Р.: коротыш; И.: tubby person; Т.: kısa boylu kimse) *и. диал.*

Бәләкәй буйлы кеше. □ Коротыш, коротышка.

**БУҠЫЛДАҠ (буҡылдағы)** *и. диал. ҡар.* **мығырлаҡ.**

**БУҠЫЛДАУ (буҡылда-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бупылдау.**

**БУЛА** (Р.: из-за, ради; И.: for the sake of; Т.: için) *бәйл.*

Төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-хәрәкәттең ниәт, маҡсатын белдерә. □ Из-за, ради *(послелог с мест. и дат. п. или с гл. в ф. на -ырға/-ергә). Ҡайтырға була урындан тороу.* ■ *Ике-өс ҡыҙ ишекте асмаҫҡа була кеҙегә килеп йәбеште.* Ж. Кейекбаев. *Гармунына була Ғимаҙиҙы Фатимаһы менән бер түйға саҡырғайнылар.* Д. Исламов.

**БУЛАВКА** [рус.] *и. ҡар.* **төйрәүес.**

**БУЛАВКА-БӘШМӘКТӘР** *и. бот. ҡар.* **төйрәүес бәшмәктәр.**

**БУЛАТ** [фарс. پولاد] (Р.: булат; И.: damask steel; Т.: şam çeliği) *и.*

Ҡорал өсөн ҡойолған боронғо ҡорос. □ Булат. *Һалдат булат хәнйәр тағып алған. Булат ҡылысы менән һелтәнде.* ● *Күк тимер булат булмаҫ.* Әйтем.

**БУЛАШТЫРЫУ (булаштыр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **маташтырыу.**

**БУЛАШЫУ (булаш-)** *ҡ. диал.*

**1.** *ҡар.* **булышыу 3.** ■ *Күңелле генә һөйләшкән ҡыҙ ҡапыл шымтайҙы, һағайҙы, күлдәк еңдәрен тартҡыланы, шунан үҙ алдына ниҙер булашҡан Бикморатҡа өндәште.* Н. Мусин.

**2.** *ҡар.* **тырышыу.**

**БУЛҒАДИР** *и. иҫк. ҡар.* **бригадир 2.**

**БУЛҒАН I** (Р.: проворный; И.: businesslike; Т.: çevik) *и.*

Ҡулынан эш килгән; булдыҡлы. □ Проворный, деловой, деловитый, дельный. *Булған менән эшләүе лә еңел.* ■ *Егеттәрҙең булғаны, ҡыҙҙарҙың уңғаны [осрашыу] юлын барыбер таба торғайны.* С. Агиш.

**БУЛҒАН II** (Р.: весь; И.: available; Т.: tüm) *билд. а.*

Һәммә, барлыҡ. □ Весь, вся, всё; все; имеющийся в наличии. *Булған аҡсаны тотоноп бөтөрөү. Булған ғына аҙыҡты ашап бөтөрөү. Булған халыҡты байрамға саҡырыу. Булған дуҫтарҙы йыйыу. Булған таныштарға шылтыратып сығыу.*

**БУЛҒАНЛЫҠ (булғанлығы)** (Р.: проворность; И.: promptness; Т.: çeviklik) *и.*

Уңғанлыҡ. □ Проворность. *Етешлек булғанлыҡтан килә.*

**БУЛҒЫЛАУ (булғыла-)** (Р.: случаться; И.: occur; Т.: bazen olmak) *ҡ.*

Һирәк-мирәк булыу. □ Случаться, бывать *(временами, время от времени, изредка). Беҙҙә байрамдар, күңел асыуҙар булғылап тора. Беҙҙә ҡунаҡтар булғылап тора.*

**БУЛДЫҠЛЫ** (Р.: деловитый; И.: efficient; Т.: becerikli) *с.*

Ҡулынан эш килгән, эшкә уңған; эшлекле. □ Деловитый, дельный, деловой, предприимчивый. *Булдыҡлы кеше. Булдыҡлы булыу. Һәр эшкә булдыҡлы.* ■ *Ысынлап та, Мараттың яҡшы уҡыуы өсөн һис ни ҙә ҡамасауламаҫҡа тейеш, булдыҡлы малай, өйөндә бөтә шарттар бар.* Н. Мусин. ● *Булдыҡлы эшкә тотонһа, ташыңды ла аш итер.* Мәҡәл.

**БУЛДЫҠЛЫЛАНЫУ (булдыҡлылан-)** (Р.: становиться деловитым; И.: become businesslike; Т.: becerikli olmak) *ҡ.*

Булдыҡлыға әйләнеү, булдыҡлы булыу. □ Становиться деловитым, деловым, предприимчивым. *Булдыҡлыланып китеү.*

**БУЛДЫҠЛЫЛЫҠ (булдыҡлылығы)** (Р.: деловитость; И.: dexterity; Т.: beceriklilik) *и.*

Ҡулдан эш килеү сифаты; һәләтлек. □ Деловитость, предприимчивость. ■ *Әммә үҙенең булдыҡлылығы менән ул [Айҙар] бер генә тапҡыр ҙа шапырынманы, уның йөҙөндә ҡуҡырайыуҙың әҫәре лә сағылманы.* М. Кәрим.

**БУЛДЫҠҺЫҘ** (Р.: неспособный; И.: incapable; Т.: beceriksiz) *с.*

Ҡулынан эш килмәгән; эшлекһеҙ. □ Неспособный, бездарный, бестолковый. ■ *Башҡорттар борон-борондан алыҫ юлға арыҡ атты эйәрләмәгән, булдыҡһыҙ ирҙәрҙе илсе итеп ебәрмәгән.* М. Кәрим. ● *Булдыҡһыҙ эшкә тотонһа, ашыңды ла таш итер.* Мәҡәл.

**БУЛДЫҠҺЫҘЛАНЫУ (булдыҡһыҙлан-)** (Р.: становиться неспособным; И.: get ungifted; Т.: beceriksiz olmak) *ҡ.*

Булдыҡһыҙға әйләнеү, булдыҡһыҙ булыу. □ Становиться неспособным, бестолковым.

**БУЛДЫРМАЛЫ** (Р.: способный; И.: able; Т.: yetenekli) *с. диал.*

Булдыҡлы. □ Способный, предприимчивый.

**БУЛДЫРСА** (Р.: вид кишок; И.: sort of guts; Т.: bağırsaklar türü) *и. диал.*

Эсәк төрө. □ Вид кишок.

**БУЛДЫРТЫУ (булдырт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **булдырыу.** *понуд. от* **булдырыу.**

**БУЛДЫРЫЛЫУ (булдырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **булдырыу 1, 3.** *страд. от* **булдырыу 1, 3.** *Танышлыҡ булдырылды. Малға аҙыҡ булдырылды.*

**БУЛДЫРЫУ (булдыр-)** (Р.: приобретать, создавать; И.: make, create; Т.: edinmek) *ҡ.*

**1.** Барлыҡҡа, ғәмәлгә килтереү; бар итеү. □ Приобретать, заводить *что;* обзаводиться *чем;* создавать, осуществлять, устанавливать. *Танышлыҡ булдырыу. Мөмкинселек булдырыу. Илдә тәртип булдырҙы. Баҡсала үҫемлектәргә яһалма шарттар булдырғандар.* ■ *Йыйылышта һәр кемгә айырым таҫтамал булдырырға тигән ҡарар сығарылды.* М. Тажи.

**2.** Эш итә алыу, ҡулдан эш килеү. □ Справляться *с чем. [Таһир] йырларға ярата һәм булдыра ла.* ■ *Ҡул эйәһе хәҙер*

*инде вәғәҙәһен үтәмәй булдыра алмаған.* Әкиәттән.

**3.** Тейешле сифат, хәлгә еткереү. □ Доводить до готовности. *Балсыкты булдырғансы баҫтык. Ҡамырҙы булдырғас, йәйергә тотондом.* ■ *Ҡыҙ бик шәп итеп мунса булдырған да: «Әбей мунса булды, һине нисек алып барайым?» — тигән.* Әкиәттән.

**БУЛМАҒАН** (Р.: бездарный; И.: talentless; Т.: istidatsız) *с.*

Ҡулынан эш килмәгән; эшлекһеҙ. □ Бездарный, бестолковый, недотёпа. *Булмаған егет менән дуҫлашма.*

**БУЛМАҺА** (Р.: если уж так; И.: as a last resort; Т.: öyleyse) *мөн.*

*Берәй нәмәгә* ҡарата билдәле бер уйфекергә килгәндә әйтелә. □ Если уж на то пошло, если уж дело за этим стало, если уж так, раз уж так, коли уж так; в крайнем случае. *Булмаһа, урамда йөрөп киләйек.* ■ *[Янһары:] Туҡта, былай ярамай. Булмаһа, һунарға барып ҡайтайым әле.* Әкиәттән. *Ә егеттәр бының йәнен язалай: «Бик булмаһа, урлап та алып китәм инде мин уны! Хәҙер һаҡалыңды һыйпап тороп ҡалдың, һине, әллә ҡайҙа йөрөгән кешене, көтөп ултырыр тиһеңме?»* Р. Солтангәрәев.

**БУЛМЫШ** (Р.: действительность; И.: reality; Т.: gerçek) *и.*

**1.** Ғәмәлдә булған, ысынға тап килгән хәл. □ Действительность, окружающая обстановка. *Хәҙерге булмыш. Булмышыбыҙ тәбиғәткә бәйләнгән.* ■ *Тәбиғәттең ҡануны шулай: бер нәмә лә юғалмай, ул икенсе бер нәмәгә олғаша, башҡа рәүеш ала ла булмышын дауам итә.* З. Ураҡсин.

**2.** Ғәмәлдә булған, тәбиғәттән килгән сифат. □ Природа, характер. *Бөтә булмышы менән рәссам кеше. Булмышы менән яҙыусы. Булмышы менән йомшаҡ кеше.* ■ *Аҡһаҡ бүре, көсөгөн эйәртеп, урман шырлығына атланы. Вайымһыҙлығы, иҫһеҙлеге юғалып, бар булмышын йәшәү комары биләп алғайны уның.* Ә. Хәкимов.

**БУЛҺА КӘРӘК** *мөн. ҡар.* **буғай.** ■ *Икенсе танкыға бер ыңғай бер нисә снаряд тейҙе булһа кәрәк, ул соҡорға ауышайып төштө.* С. Кулибай.

**БУЛЪЯЛ** (Р.: назначенная дата свадьбы; И.: set time (about a wedding); Т.: düğün tarihi) *и. этн.*

Алдан билдәләнгән туй ваҡыты. □ Назначенная дата свадьбы. *Булъял ҡуйып кейәү алып та ҡайтты.*

**БУЛЪЯЛ КӨН** (Р.: день проводов невесты; И.: day for seeing a bride off; Т.: gelinin kocasının evine tasındığı gün) *и. этн.*

Килен оҙатыу көнө. □ День проводов невесты. *Булъял көндәрем тулды инде, тор тиһәгеҙ ҙә, тормайым.*

**БУЛЪЯУ** *и. этн. диал. ҡар.* **булъял.**

**БУЛЫМЛЫ** *с. диал. ҡар.* **булдыҡлы.** ■ *[Илғужа:] Эйе, был булымлы бисә ни етте ирҙәрҙән былай. Әбей батша кеүек.* Ғ. Ибраһимов.

**БУЛЫНЫУ (булын-)** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **булыу 10, 14.** ■ *[Шатморат:] Етәр, былай ҙа күп ҡунаҡ булынды.* Д. Исламов.

**БУЛЫР-БУЛМАҪ** (Р.: пустяковый; И.: insignificant; Т.: olur olmaz) *с.*

**1.** Тейешле самаға етмәгән; әҙ-мәҙ, барлы-юҡлы. □ Пустяковый, пустячный, малозначительный, сомнительный. *Булыр-булмаҫ мәсьәлә. Булыр-булмаҫ малы менән маҡтанған була.*

**2.** Тейешле сифат кимәленә килеп бөтмәгән; йүнһеҙ, өмөтһөҙ. □ Неспособный, бездарный; нестоящий, негодный. *Булыр-булмаҫ табип.* ■ *[Гөләйшә:] Эй-й-й, ҡуй инде, ҡасан һуғыш бөтә лә ир-ат әйләнеп ҡайта инде. Көнө лә, төнө лә булыр-булмаҫ кешеләргә ҡалды бит, ни эшләйһең.* К. Кинйәбулатова.

**БУЛЫУ (бул-)** (Р.: бывать, иметься; И.: be; happen; there is/are; Т.: olmak) *ҡ.*

**1.** Тормошта, булмышта урын алып тороу. □ Бывать, иметься, наличествовать. *Ер йөҙөндә бик күп халыҡ булған. Ҡоштарҙың ҡанаты була.* ■ *Уға [Рәшиҙәгә] иғтибар*

*итеүсе лә булманы.* М. Тажи. *[Әбей:] Әҙерәк барғас яңғыҙ йорт, өс ҡайын булыр, шунда минең апайым тора.* Әкиәттән. *Лапаҫ бик ышыҡ, уның эсендәге йыйнаҡлыҡ. Һәр нәмәнең үҙ урынында булыуы барып ингәс тә күҙгә бәрелеп тора.* Н. Мусин.

**2.** Эш-хәрәкәт, хәл, күренеш ғәмәлгә килеү, башҡарылыу. □ Совершать, состояться. *Был ни хәл булды? Дәрес булмай. Туй була. Бойороҡ булды. Команда булды.* ■ *Тау текә, юл ҡырын .. Төрлө хәл була.* З. Биишева. *[Күсмәҫ хан менән Күсәр хан:] Беребеҙҙең ҡыҙ, беребеҙҙең ул булһа, ҡоҙа булышырбыҙ.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Бер көн эсендә уларҙың кескәй генә ҡалаһында әҙәм ышанмаҫлыҡ хәл булды: ун-ун ике йәштәрҙәге ун һигеҙ бала юҡҡа сыҡты.* Н. Ғәйетбаев. *Йыйын ваҡытында сауҙа ойоштороу ҙа бик мөһим, сөнки өшө мәлдә алыш-биреш тә көслө буласаҡ.* З. Ураҡсин.

**3.** *Ҡайҙалыр* урын биләү, ҡатнашыу. □ Находиться, быть. *Бергә булыу. Кәңәштең уртаһында булыу. Өйҙә булыу. Өмәлә булыу. Үҙ урынында булыу. Эштә булыу. Әллә ҡайҙа булды.* ■ *[Ҡаҙаҡ малайы:] Минең тура ат өлкән бәйгеләрҙә булды. Бер атҡа ал биргәне юҡ!* Д. Юлтый. *Рамғун ҡыҙы менән дә, оҙон юлда булып уңышлы кәсеп итеп ҡайтҡандарҙың эше менән дә ҡәнәғәт ҡалды.* З. Ураҡсин. ● *Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы.* Әйтем.

**4.** Тыуыу, ваҡыты етеү, башланыу *(тәүлек, йыл миҙгеленә ҡарата).* □ Начаться, наступать. *Кис булды. Йәй булды. Төн булды.* ■ *Йыл артынан йыл үтте, яҙ булды ла боҙ китте.* С. Юлаев.

**5.** Тулыу, уҙыу, үтеү *(ваҡытҡа ҡарата).* □ Пройти *(о времени). Биш көн булды.* ■ *Бына бер ай була инде — өшө позицияла ятабыҙ.* Д. Юлтый.

**6.** *Берәй* процесс һөҙөмтәһендә *ниндәйҙер* бер сифатҡа, рәүешкә һ. б. күсеү, әүерелеү. □ Становиться, быть *кем-л. Егет булыу. Табип булыу. Әсә булыу.* ■ *[Ҡыҙ:] Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам.* Әкиәттән.

**7.** Тейешле сифатҡа, хәлгә етеү, өлгөрөү. □ Доходить до готовности. *Мейес булған. Мунса булды. Балсыҡты булғансы, үҙләнгәнсе баҫыу.*

**8.** Тейешенсә килеп сығыу, уңыу. □ Получаться, удаваться. *Эш булды. Булмаҫты ҡыуыу.*

**9.** Ҡулдан эш килеү. □ Быть способным делать *что.* ■ *Уралып ятҡан Уралда булырҙай менән дуҫлашып, булмаҫтай менән усләшеп, яуға ҡарышы яу сабыр батыр ирҙәр бар.* Ҡобайырҙан. ● *Булыр бала биләүҙән.* Әйтем.

**10.** *Берәй нәмә* менән шөғөлләнеү, берәй эш алып барыу. □ Заниматься *чем. Уҡыу менән булыу. Буш менән булыу.* ■ *Әхмәҙи йорт тирәһендәге хужалыҡ эштәре менән булды.* Ж. Кейекбаев.

**11.** Әҙәрлекләп йәки маҙаһыҙлап бәйләнеү. □ Связываться *с кем,* приставать *к кому,* трогать *кого. Кеше менән булыу. Юҡ менән булыу. Бала менән булма.*

**12.** Төп ҡылымға ҡушылып берәй эш-хәрәкәттәге мөмкинлекте белдерә. □ С осн. гл. означает возможность совершения действия. *Ара алыҫ, йыш барып булмай. Инһәм буламы?* ■ *[Төлнур:] Ҡара папкаһыҙ ғына, былай ғына ла әйтергә булалыр бит, Сафа Сөләймәнович?* М. Тажи.

**13.** *Булды* формаһында килеп, тейешле самаға етеү, тулыуҙы белдерә. □ В форме **булды** обозначает достижение предела: всё, достаточно. *Булды, бүтән ашамайым.*

**14.** Ҡайһы бер исемгә, сифатҡа ҡушылып, ҡушма ҡылым яһай. □ С прил. и сущ. означает действие, связанное со знач. имени. *Бәхил булыу. Вафат булыу. Ғашиҡ булыу. Ҡунаҡ булыу. Мәхрүм булыу. Риза булыу. Харап булыу. Хасил булыу. Хур булыу. Һәләк булыу. Әрәм булыу. Ипле булыу.* ■ *Аҙна самаһы ҡаҙыуға ике йорт урыны асыҡланды, мейес төптәре, баҙ сокорҙары хасил булды, ҡайраҡ таштан яһалған ҡул тирмәне килеп сыҡты.* З. Ураҡсин.

**15.** Исемгә, сифатка ҡушылып, ҡушма хәбәр бәйләнеше яһай. □ С сущ. и прил. образует вспом. глагол. *Балтасы булып эшләү. Беренсе булып килеү. Кеше булып ҡыланыу. Тотоп ашарҙай булыу.* ■ *Ерҙә ниндәй генә гөл үҫмәһен, тиң була алмаҫ беҙҙең гөлдәргә.* М. Хәй. *Һәр ата өсөн үҙ ҡыҙы була алтын.* Р. Ниғмәти. *Ҡыуат та зирәк, телгә оҫта, сәсән булды микән атаһы?* Халыҡ йырынан. *Ғәйникамалға күңеле төшкәс, Алтынбай, уның менән өйләнешеп, берәй тын ғына ауылда хужа булып йәшәү тураһында ла хыялланып ҡуя ине.* З. Ураҡсин.

**16.** *Булды, булһын* формаһында килеп, *ниндәйҙер* сифат, хәлдең ҡабатланыуын белдерә. □ В форме *булды, булһын* обозначает повтор действия. *Кисә булды — кисә һуңлап килде. Ҡыҙы булһын — ҡыҙы, үҙе булһын — үҙе эшкә йүгереп торалар.*

**17.** Төп ҡылымдың *-маҡ, -маҡсы, -рға* формаһынан һуң, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, маҡсатты белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-маҡ, -маҡсы, -рға* выступает в роли вспом. гл. со знач. цели. *Бармаҫҡа булыу. Яҙмаҡ булыу. Нишләп бында килергә булдың?* ■ *[Сәлмән] ағаларын алдан иҫкәртеп ҡуймаҡсы була.* Әкиәттән. *Юлсылар ҡунаҡсыл тирмәлә аш ашап, ҡымыҙ эсеп бер аҙ ирәйеп алғас, таңға ҡуҙғалырға булып, йоҡларға ауҙылар.* З. Ураҡсин.

**18.** Төп ҡылымдың *-рға* формаһынан һуң, *булһын* рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, теләкте белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-рға* выступает в роли вспом. гл. со знач. пожелания. *Тырышып уҡырға булһын инде. Шатлыҡ менән ғүмер итергә булһын.*

**19.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһынан һуң, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, берәй эште эшләргә мөмкинлекте йәки түгеллекте белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-п* выступает в роли вспом. гл. со знач. возможности или невозможности. *Ашап булмай. Эшләп булмай.* ■ *Был ҡоштан улай ҡотолоп булмай, сөнки ул күҙгә күренмәй торған ҡош.* Әкиәттән. *Ҡыҙҙы теләһә кемгә күҙ йомоп биреп ултырып булмай, төшкән ерен дә ҡарарға кәрәк.* З. Ураҡсин.

**20.** Хәл ҡылымдың юҡлыҡтағы *-май* формаһынан һуң, *булмай* йәки *булмаҫ* рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, тейешлек, кәрәклекте белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-май/-маҫ* выступает в роли вспом. гл. со знач. необходимости. *Уҡымай булмай. Эшләмәй булмаҫ.*

**21.** Сифат ҡылымдың *-ған* формаһынан һуң, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эшхәрәкәттең ысынға тура килмәүен белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-ған* выступает в роли вспом. гл. со знач. несоответствия действительности. *Ауырыған булып ятыу. Йоҡлаған (кеше) булып ятыу. Күпте белгән булып һөйләү.* ■ *Кис менән Гөлзифа, ниндәйҙер йомош тапҡан булып, Тәнзиләләргә үҙе килеп инде.* З. Ғәлимов. *Иштән ҡарт хужанан һуғымдың һимеҙлеге, ҡанса бот ите сығыуын, эс майы нисә табаҡ булыуын, нисә ҡаҙы тултырғанын һорашып ҡараны ла, һүҙ артыҡ йәбешеп бармағас, тамағын ҡырғылаған булып, тынып ҡалды.* З. Ураҡсин.

**22.** Сифат ҡылымдың *-ған* формаһынан һуң, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәткә кәмһетеп йәки йәлләп ҡарауҙы белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-ған* выступает в роли вспом. гл. со знач. унижения или сочувствия. *Ватып-емереп русса һөйләшкән булыу.* ■ *Килеүсе билен киң һары ҡайыш менән быуған, һул яғына ҡабуралы наган таҡҡан булған.* А. Таһиров. *Иҫемә килеп күҙемде асып ебәрһәм, әсәйем эргәмдә ултыра, сәсемде һыйпаған була, күҙҙәре йәш менән тулған.* З. Ураҡсин.

**23.** Хәл ҡылымдың *-а* формаһынан һуң, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, кеше һүҙен шиккә алыу йәки кире ҡағыуҙы белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-а* выступает в роли вспом. гл. со знач. отрицания или сомнения. *Мин шунда бара булам да, бабайҙы алып китә булам. Шәм ҡыуығы тора торғас, үҙе ярылып китә була.*

**24.** Төп ҡылымдың *-рға* формаһынан һуң, **булһа** рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, *ниндәйҙер* ниәт, маҡсаттың шарт ителеүен белдерә. □ С осн. гл. на *-рға* в ф. *булһа* выступает в роли вспом. гл. со знач. условия. *Һөйләргә булһа, һөйләрбеҙ. Эшләргә булһа, барам.*

**25.** Киләсәк заман сифат ҡылымдың *-һы* формаһынан һуң, юҡлыҡта ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, ҡәтғи тыйыуҙы, иҫкәртеүҙе белдерә. □ С причастием на *-һы* выступает в роли вспом. гл. в отриц. ф. со знач. запрета, предупреждения. *Алаһы булма! Бараһы булма! Шаулашаһы булмағыҙ!*

**26.** Беренсе киләсәк заман ҡылымдың юҡлыҡ формаһынан һуң, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттен киҫелеүен, өҙөлөүен белдерә. □ С гл. I буд. вр. в отр. ф. выступает в роли вспом. гл. со знач. разрыва, прекращения действия. *Килмәҫ булыу. Әйтмәҫ булыу. Яратмаҫ булыу.* ■ *Насир ҡара айғырын урлатҡаны бирле үҙенә урын таба алманы, төнгө йоҡоларын юғалтты, ашар аштары тамағына бармаҫ булды.* З. Ураҡсин.

**27.** Төп ҡылымдың *-а/-й* формаһынан һуң, *булыр* рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, фараз итеүҙе белдерә. □ С осн. гл. в ф. *-а/-й* выступает в роли вспом. гл. в ф. *булыр* со знач. предположения. ■ *Нарынбайға ҡарап, был кеше берәй ҙур ҡайғы кисерә булыр, тип уйлайһың.* Ш. Насыров.

**28.** Исем ҡылымдан һуң *була, булды* формаһындағы ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, икенсе бер эш-хәрәкәттең шунда уҡ башланғанын белдерә. □ После имени действия в форме *була, булды* выступает в роли вспом. гл. со знач. внезапного начала действия. ■ *Төлкөсураның ҡолас ташлап Ҡотлогужаның ҡолаҡ төбөнә һалып ебәреүе булды, тегеһе, киҫкән ағас кеүек, арма-торма барып та төштө.* Н. Мусин. *Күсер ҡапҡа тышындағы сыйыырҙы түҙемһеҙлек менән ике-өс ҡат тартып ебәреүе булды, йорт ҡапыл хәрәкәткә килде: ишектәр шарт-шорт асылып ябылды, кемдәрҙер тап-топ йүгерҙе, ҡысҡырышты.* З. Ураҡсин. *Бакса рәшәткәһенең сосайып торған ҡаҙығына тотоноп һикмәккә баҫыуым була, ниндәйҙер тылсымлы донъяның көсөргәнешле тулҡынына эләгәм.* Г. Ғиззәтуллина.

**29.** Урын-ваҡыт килештәге исем ҡылымдан йәки исемдән һуң, *булды* формаһында ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, берәй эш-хәрәкәттең туҡтауһыҙ дауам итеүен белдерә. □ После имени действия или сущ. в местно-врем. падеже выступает в роли вспом. глагола в ф. *булды* со знач. непрерывности действия. *Йырлауында булды.* ■ *Зилбәр көндөҙ-көнө буйы хәрби кейемдә булды, ҡалғанең нығытмаларын ҡарап, тикшереп тороу уға йөкмәтелгәйне.* З. Ураҡсин.

**30.** Сифат ҡылымдың *-ған* формаһында *булыр* рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең билдәле бер мәлгә башҡарыласағын, тамамланасағын белдерә. □ С прич. прошедшего времени на *-ған* выступает в роли вспом глагола в ф. *булыр* со знач. завершения действия к определённому моменту. ■ *[Иренә — киләше:] Ятып йоҡла. Иртән тороуыңа эш бөткән булыр.* Әкиәттән.

**31.** Шарт һөйләмдән һуң, шул уҡ яһалышҡа *ине* ярҙамлыҡ ҡылымы ҡушылып, эш-хәлде билдәле шартҡа бәйләп, үткән бер мәлгә күсерә. □ После условного предложения со вспом. глаголом *ине* переносит действие на прошлое, связывая его с каким-л. условием. ■ *[Ҡыҙ — егетҡә:] Мин килмәһәм, ошо ерҙә мәңге йоҡлаған булыр инең.* Әкиәттән.

**32.** Сифат ҡылымдың *-ған* формаһына *булған икән, булып сыҡты* рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, *ниндәйҙер* эштең, сифаттың бер билдәһе хәҙер килеп асыҡланғанын белдерә. □ С причастием на *-ған* выступает в роли вспом. глагола в ф. *булған икән, булып сыҡты* со знач. обнаружения, выяснения наличия действия, свой-

ства предмета. *Бында ҡурай еләге бик уңған булған икән.* ■ *Торлаҡ йорттар яртылаш ергә ҡаҙып эшләнгән булып сыҡты, өҫкө өлөшө таштан йә кәҫтән һалынған.* З. Ураҡсин.

**33.** Хәл ҡылымдың *-а/-й* формаһына *торған булған, -р* формаһына *булған* рәүешендә ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, дауамлы, билдәһеҙ борон үткән заман формаһы яһай. □ С деепр. на *-а/-й* со вспом. гл. *торған булған*, на форму *-р* со вспом. гл. *булған* образует давнопрошедшее неопределённое время и означает многократность действия в прошлом. ■ *[Хасбулат:] Салауат батыр ғәскәрен һуғышҡа саҡырған саҡта ошо борғоно ҡыҫҡырттыра торған булған.* З. Биишева. *Бабай һунарға йөрөгән, ә Шүлгән менән Урал өйҙә ҡалыр булған.* «Урал батыр».

**34.** Төбәү килештәге һүҙҙәр менән *нимәгәлер* төбәүҙе, юрауҙы, арнауҙы белдерә. □ Со словами в направительном падеже обозначает пожелание, посвящение, нацеление. *Шатлыҡҡа булыу. Бәхеткә булыу.* ■ *[Һылыуҡай:] Илама, балам, күҙ йәшең миңә булмаһын.* Б. Бикбай.

**35.** *диал. ҡар.* **туйыу 3.** ■ *Бер аҙ уйын уйнап, көлөп булғандан һуң, Мәсем хан бер уй уйлай, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Була ул** *ниҙелер* үтәргә әҙерлекте белдергәндә әйтелә. □ Есть, будет сделано, хорошо, с удовольствием. — *Бар, утын алып ин!* — *Була ул!* **Булған да бөткән** үткәнде оноторға кәңәш иткәндә әйтелә. □ Что было, то было; что было, того не вернёшь. **Булғас та булыр икән** берәй эш-хәлгә, кешегә аптырап, иҫ-аҡыл киткәндә әйтелә. □ Надо же! *(об удивлении).* **Булһа булыр, булмаһа юҡ** берәй эштең килеп сығыу-сыҡмауына икеләнгәндә әйтелә. □ Будь что будет. **Була бирһен** берәй эштең булыуына ҡаршы килмәгәндә әйтелә. □ Пусть будет так. **Булаһы булған, буяуы һеңгән** эш үтеп, әһәмиәтен юғалтыуын белдерә. □ Было, да быльём поросло. **Булыр ҙа булыр, булмаҫ** бер эш-хәлгә йәки кешегә ныҡ аптырағанда әйтелә. □ Надо же! *(об удивлении).* ■ *Булыр ҙа булыр, булмаҫ бындай вәхшилек һәм яуызлыҡ.* Х. Ғиләжев. **Кем дә булһа** берәй кеше. □ Кто-нибудь. **Ни булһа ла булыр** бер нәмәгә тәүәккәллек итергә йәки бер эш-хәлде үҙ яйына ҡуйырға булғанда әйтелә. □ Что будет, то и будет. **Ни ҙә булһа** берәй нәмә. □ Что-нибудь. **Булды ни, булманы ни** барыбер мәғәнәһендә. □ Всё равно. **Булды ти** берәй нәмәне килеп сыҡҡан итеп фаразлауҙы белдерә. □ Ну, скажем, так; хотя бы и так; пусть так. **Булыры булған, буяуы уңған (һеңгән)** 1) үткәнгә үкенмәүҙе белдергәндә әйтелә. □ Что было, то было; что было, быльём поросло. ■ *Юлға бағыр инем дә ул, тәҙрәләрем туңған. Инде хәҙер булырым булып, буяуҙарым уңған.* Т. Йосопов; 2) күскәре ҡайтҡан, ғүмере үткән. □ Время миновало. **Булмаһа булмай икән баҙарҙарҙа сөсө икмәк** берәй эш-хәл тырышып-тырышып та килеп сыҡмаған саҡта әйтелә. □ О безнадёжном деле. ■ *[Ишмырҙа:] Бер ауылды ла ҡалдырмай ҡыҙырып сыҡтым. Булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө ҡумәс тигәндәй, булманы, табылманы трактор.* Ә. Вәли. **Булғас булыр икән** берәй эш-хәлгә, кешегә аптырап, иҫ-аҡыл киткәндә әйтелә. □ Вот тебе на *(об удивлении).*

**БУЛЫШ** *и. ҡар.* **булышлыҡ.**

**БУЛЫШЛЫҠ (булышлығы)** (Р.: помощь; И.: assistance; Т.: yardım) *и.*

Кеше эшен еңеләйтер өсөн булған ҡатнашлыҡ; ярҙам. □ Помощь, поддержка, подспорье. *Һеҙҙең булышлыҡ менән мәсьәләне хәл иттек.* ■ *Миңлебайҙа уның төшөн юрау ҡайғыһы бармы ни, ул өй йыйыштырып, тамаҡҡа әҙерләргә ҡатынына булышлыҡ итеп йөрөнө.* Т. Йәнәби.

**БУЛЫШСЫ** *и. ҡар.* **ярҙамсы 1.**

**БУЛЫШЫУ (булыш-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **булыу 13.** *взаимн. от* **булыу 13.** *Ҡунаҡ булышыу. Әхирәт булышыу.*

**2.** Ярҙам итеү; ярҙамлашыу. □ Помогать. *Күршегә булышыу. Иптәшеңә булышыу.*

**3.** Мәшғүл булыу, шөғөлләнеү; маташыу. □ Заниматься *чем*, возиться *с чем*. *Хужалыҡ менән булышыу. Эш менән булышыу.*

**4.** Эҙәрлекләп, маҙаһыҙлап, бәйләнеү. □ Связываться *с кем*, придираться *к кому*, приставать *к кому*. *Күршеләр менән булышыу. Бала менән булышма.*

**БУЛЬВАР** [рус. < фр. *boulevard*] (Р.: бульвар; И.: boulevard; Т.: bulvar) *и.*

Ҡала урамының, ғәҙәттә, уртаһынан үткән киң аллея. □ Бульвар. / Бульварный. *Бульвар буйлап йөрөү.*

**БУЛЬДОЗЕР** [рус. < ингл. *bulldozer* ] (Р.: бульдозер; И.: bulldozer; Т.: yoldüzer) *и.*

Тракторға һ. б. аҫылмалы киң көрәк һымаҡ яйланма беркетелгән үҙйөрөшлө машина (*юлдар, каналдар төҙөү-төҙәтеү эштәрендә, ер ҡаҙыу, тупраҡ ҡатламын күсереүҙә файҙаланыла*). □ Бульдозер. / Бульдозерный. *Бульдозерҙа йөрөү.*

**БУЛЬДОЗЕРСЫ** (Р.: бульдозерист; И.: bulldozer operator; Т.: buldozer sürücüsü) *и.*

Бульдозерҙа эшләгән кеше. □ Бульдозерист.

**БУМ** [рус. < ингл. *boom* 'шау-шыу'] (Р.: бум; И.: boom; Т.: patlama) *и.*

**1.** *икт.* Хаҡы күммәтләнәү сәбәпле ҡайһы бер тауарҙарға ихтыяж күтәрелеү. □ Бум.

**2.** *күсм.* Ғәҙәттән тыш шау-шыу; ажиотаж. □ Бум. *Һайлау алды бумы.*

**БУМА** *и. диал. ҡар.* **быума.**

**БУМАЗЫЙ** [рус. *бумазея* < фр. *bombasin* < ит. *bambagia* 'мамыҡ'] (Р.: бумазея; И.: flannelette; Т.: flanel taklidi pamuklu kumaş) *и.*

Бер яғы өбөрөлө мамыҡ туҡыма. □ Бумазея. *Бумазыйҙан күлдәк тегеү. Бумазыйҙан тегелгән кейем.*

**БУМАЛА** [рус. *помело*] (Р.: кисть; И.: little brush; Т.: fırça) *и.*

Буяу, таҙартыу өсөн һаплап эшләнгән ҡыл йәки йүкә суҡ. □ Кисть, помазок; помело. *Рәссам бумалаһы. Аҡбалсыҡ бумалаһы.* ■ *Ала-кола алъяпкыстар быуып, бумалалар күтәреп, буяусылар .. ашығып атлай.* Г. Ғүмәр.

♦ **Бумала баш** ҡырҡылған ялбыр сәсле ҡатын-ҡыҙға әйтелә. □ Голова как помело *(о женщине с растрёпанными волосами).* ■ *[Сәйҙел:] Һинең бумала баш машинала ултыра.* Ә. Атнабаев.

**БУМАЛА ҮҢӘҘ** (Р.: пеницилл; И.: penicillin(e); Т.: penisilin) *и. бот.*

Үңәҙ бәшмәге. □ Пеницилл, пенициллиум; плесневые грибки (лат. *Penicillium*).

**БУМЕРАНГ** [рус. < ингл. *boomerang*] (Р.: бумеранг; И.: boomerang; Т.: bumerang) *и.*

Ырғытҡандан һуң, кире әйләнеп ҡайта торған кәкре суҡмар рәүешендәге ҡорал. □ Бумеранг.

**БУНГАЛО** [рус. < һинд *banglā* 'өй'] (Р.: бунгало; И.: bungalow; Т.: bungalov) *и.*

Ҡала ситендәге еңелсә эшләнгән йорт. □ Бунгало.

**БУНКА-КҮБӘЛӘК (күбәләге)** (Р.: пестрянка виноградная; И.: vine bud moth; Т.: bağ göz kurdu) *и. бот.*

Күбәләк төрө; йөҙөм алаҡасы. □ Бунка, пестрянка виноградная (лат. *Theresimima ampellophaga*).

**БУНКЕР** [рус. < ингл. *bunker*] (Р.: бункер; И.: bunker; Т.: ihrakiye) *и.*

**1.** Бөртөклө һәм киҫәкле нәмә һала торған үҙе бушатылмалы һауыт. □ Бункер *(вместилище)*. / Бункерский.

**2.** Караптың рейсҡа етерлек ҡаты яғыулыҡ һаҡлай торған махсус бүлеге. □ Бункер *(судовой)*.

**3.** Ер аҫтына эшләнгән һаҡланыр, ҡасыр урын. □ Бункер *(подземное укрытие)*.

**БУПУП (бупубы)** *и. зоол. диал. ҡар.* **һөҙһөт.**

**БУПЫЛДАҠ I (бупылдағы)** *и. зоол. диал.*

**1.** *ҡар.* **һөҙһөт.**

**2.** *ҡар.* **ваҡ мөншөгөр.**

**3.** *ҡар.* **һаҙ ябалағы.**

**БУПЫЛДАҠ II** (Р.: ворчливый; И.: grumbling; Т.: mızmız) *с.*

Гел ризаһыҙланып, һөйләнеп йөрөүсән. □ Ворчливый. *Бупылдаҡ ҡатын. Бупылдаҡ булыу.*

**БУПЫЛДАҠ III** (Р.: ворчун; И.: grumbler; Т.: dırdırcı) *и.*

Гел ризаһыҙланып, һөйләнеп йөрөүсән кеше. □ Ворчун, ворчунья.

**БУПЫЛДАУ (бупылда-)** (Р.: ворчать; И.: grumble; Т.: homurdanma) *ҡ.*

**1.** Ризаһыҙланып, асыуланып, үҙ алдыңа һөйләнеү. □ Ворчать. *Бупылдығын сығыу. Бупылдап әрләү. Бупылдап һөйләшеү.*

**2.** Аңлайышһыҙ итеп ауыҙ эсенән һөйләү. □ Бормотать. *Ҡатын бупылдап кемделер әрләп йөрөй.*

**БУР I** (Р.: мел; И.: chalk; Т.: tebeşir) *и.*

Аҡ төҫтәге йомшаҡ эзбиз ташы; аҡбур. □ Мел. / Меловый. *Таҡтаға бур менән һүрәт төшөрөү. Һауыт-һабаны бур менән таҙартыу. Өйҙө бур менән аҡлап ҡуйыу.*

**БУР II** [рус. *вор*] (Р.: вор; И.: thief; Т.: hırsız) *и.*

Кеше әйберен, милкен үҙләштереүсе, урлаусы; уғры. □ Вор. / Воровский. ■ *Ҡалала күптән һатыу итеү селтәренә бурҙар ояланған икән, тигән хәбәр йөрөй.* Н. Ғәйетбаев. ● *Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ.* Мәҡәл. *Дөйә урлаған да бур, төймә урлаған да бур.* Мәҡәл.

♦ **Һәптән бур** *шаяр.* Үҙенекен үҙе урлаған кеше. □ Человек, который ворует у себя; клептоман.

**БУР III** [рус. < нем. *Bohrer*] (Р.: бур; И.: drill; Т.: frez) *и.*

Быраулау ҡорамалы. □ Бур. *Ер бырауы. Теш бырауы.* ■ *Берҙән-бер бур көҙҙән бирле ватыҡ ултырған. Механик йүнәтеү сараһын күрмәгән, ни Булатҡа әйтмәгән.* Р. Солтангәрәев.

**БУР IV** (Р.: бунтарь; И.: brawler; Т.: kavgacı) *и. тар.*

XVIII б. боласы, батшаға ҡаршы сығыусы. □ Бунтарь.

**БУРА I** (Р.: сруб; И.: blockhouse; Т.: kesme) *и.*

**1.** Ой, һарай, келәт һ.б. өсөн бүрәнәләрҙең баш-башын киртеп өҫтө-өҫтөнә һалып күтәргән ҡоролма. □ Сруб. / Срубовый. *Ҡарағай бура. Мунса бураһы. Өй һалырға бура бурау.* ■ *Буй биҙрә ҡоҙоҡтоң .. бураһына доңғор-доңғор һуғылып түбән төшә.* Ш. Янбаев.

**2.** Келәттә ашлыҡ, он кеүек нәмә һалыу өсөн бүлеп ҡуйылған урын. □ Закром; сусек. *Иген бураға һалынды. Бураларҙы иген менән тултырыу.*

**3.** Тау, тау-урман башҡорттарында ҡәбер кәртәһе. □ Ограда могилы у горных и горнолесных башкир. *Тимер рәшәткәләр батҡан, күп таштар ҡыйтайған, байтаҡ буралар емерелеп ята.* Ә. Әминев.

♦ **Ҡара бура** нигеҙ тупрағын эстән уратып, иҙән аҫтына эшләнгән бура. □ Подполье, подвал, погреб.

**БУРА II** (Р.: верблюд-самец; И.: he-camel; Т.: deve) *и.*

Оло ата дөйә. □ Верблюд-самец.

**БУРА III** [ғәр. بورة] (Р.: бура; И.: borax; Т.: borat) *и.*

Натрий тоҙо, микроашлама. □ Бура.

**БУРАҘНА** [рус. *борозда*] (Р.: борозда; И.: furrow; Т.: karık) *и.*

**1.** Ер һөргәндәге һабан йырған йырынды. □ Борозда. *Бураҙна ярыу.* ■ *Һабанға төшкән көн Ваһап менән Шәмсетдин .. уландарына бураҙна ярып бирә лә шуның менән эштәре бөтә.* Ж. Кейекбаев. *Тракторҙа егет ер һөрә, бураҙнаһы ҡала артында.* М. Сөндөклө.

**2.** *күсм.* Баҫыу, игенсенең эш урыны. □ Поле, место работы земледельца. *Бураҙнала тыуған.*

**3.** *миф.* Мифологияла юл эйәһе Хызыр Ильястың юлы. □ Борозда; путь, дорога духа Хызыр Ильяса.

**БУРАҘНАЛАНЫУ (бураҙналан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бураҙналау.** *страд. от* **бураҙналау.**

**БУРАҘНАЛАУ (бураҙнала-)** (Р.: бороздить; И.: furrow; Т.: karıklamak) *ҡ.*

Бураҙна һалыу. □ Бороздить, прокладывать борозды. *Ерҙе бураҙналау. Баҫыуҙы бураҙналап сығыу.*

**БУРАҘНАЛЫ** (Р.: с бороздой; И.: furrowed; Т.: karıklı) *с.*

Бураҙнаһы булған. □ С бороздой, имеющий борозду. *Бураҙналы ҡырҙар.*

**БУРАҠ (бурағы)** *и. диал. ҡар.* **тырыз.**

**БУРАЛАЙ** (Р.: крупный; И.: giant; Т.: kocaman) *с.*

Ҙур кәүҙәле, эре һөйәкле. □ Крупный. *Буралай һыйыры бар.*

**БУРАЛАНЫУ I (буралан-)** (Р.: горячиться; И.: fly into a passion; Т.: kızmak) *и. һөйл.*

Асыуланып туҙыныу. □ Горячиться, кипятиться, разбушеваться. *Юҡ-барға бураланыу.* ■ *Ул ире менән бер ҙә уйнап-көлөп, тыныс ҡына һөйләшмәне. Бураланып, аҡырҙы ла баҡырҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**БУРАЛАНЫУ II (буралан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **буралау.** *страд. от* **буралау.** *Шишмәнең сығып ятҡан ере бураланған.*

**БУРАЛАТЫУ (буралат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **буралау.** *понуд. от* **буралау.** *Өй буралатыу. Мунса буралатыу.*

**БУРАЛАУ (бурала-)** (Р.: сделать сруб; И.: make a blockhouse; Т.: kesme yapmak) *ҡ.*

Бура менән әйләндереү; буралы итеү. □ Сделать сруб. *Ҡоҙоҡ буралау.*

**БУРАЛАШЫУ (буралаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **буралау.** *взаимн. от* **буралау.** *Шишмәне буралашыу.*

**БУРАЛЫ** (Р.: срубный; И.: with a frame (work); Т.: kesmeli) *с.*

Бураһы булған, бура менән. □ Срубный, со срубом. *Буралы ҡойо. Буралы ҡойма.*

**БУРАЛЫҠ** (Р.: пригодный для сруба; И.: for log; Т.: kesme için) *с.*

Бура бурарлыҡ. □ Пригодный для сруба *(о дереве). Буралыҡ ағас.* ■ *Беҙҙә хәҙер буралыҡ, таҡталыҡ ҡарағайҙы Бөрйән районына барып һорап алалар.* «Киске Өфө», № 36, 2011.

**БУРАЛЫУ (бурал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бурау I.** *страд. от* **бурау I.** *Буралған мунса. Буралған ҡоҙоҡ.* ■ *Йыуан ҡарағайҙарҙан буралған һап-һары шыма стеналар, иҙәнгә, түбәгә берәр аршын киңлектәге таҡталар йыйылып түшәлгән.* Н. Мусин.

**БУРАМ** *и. диал. ҡар.* **бура I, 1.**

**БУРАМА** (Р.: бревенчатое сооружение; И.: structure made of logs; Т.: ağaç ev) *и.*

**1.** Мүкһеҙ генә күтәрелгән ҡоролма. □ Бревенчатое сооружение. ■ *Ҡотлоғужа, тимерлек өсөн бер бурама һалдырып бирәм, тип әллә нисә тапҡыр әйтте, тик һаман ҡыл да ҡыбырҙатҡаны юҡ.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Ағастан бурап яһалған йәйге аласыҡ. □ Летнее бревенчатое жилище. ■ *[Торомтай] ихатаһына сығып ни тотоп, ни эшләргә белмәй тишек-тошоҡ түбәлеге, бүрәнәләре йыйылманмай ғына һалынған бурама аласығы тирәһендә тертәңләп йөрөй бирә лә тағы өйөнә инә.* Н. Мусин.

**3.** *диал. ҡар.* **бура I, 3.** ■ *[Шафиҡ] ҡыҙ ҡәбеpeнең бурамаһын йүнәтә. Бураманы ике урынлы итеп бурай.* Ә. Вахитов.

**БУРАН I** [фарс. بوران] (Р.: метель; И.: snowstorm; Т.: buran) *и.*

**1.** Ойоҡһотоп өргән ҡарлы ел. □ Метель, буря, буран, вьюга. / Вьюжный. *Ҡар бураны. Аҡман-тоҡман бураны. Айыу бураны. Йәйәүле буран. Ҡара буран. Ҡом бураны. Ләүән бураны. Өйөрмә буран. Һырғай буран. Буран сығыу.* ■ *Төнгө ҡунаҡтар йәнә ике көн буран көсәйгәнде көттөләр, был кистә дала еле ҡар ҙа килтерҙе.* З. Ураҡсин. *Тәүҙә әрбәк-һәрбәк кенә яуған ҡар таң алдынан көслө буранға әйләнде.* Н. Мусин. *Буран көсәйҙе, күҙ алдын аҡ ебәк пәрҙә ҡаплап-ҡаплап ҡуйҙы.* Р. Камал. ● *Буранда бүре ҡоторор, урамда тиле ҡоторор.* Мәҡәл.

**2.** *күсм.* Көслө ыҙғыш, талаш. □ Ссора, скандал. ■ *Әбүшахман ҡорҙаш менән әрләшеп, бер аҙ эсте бушатып алдым. Шул ел менән ҡайтып, өйҙә лә буран борҡотоп алмаҡсы булғайным, Гөлйемеш еңгәгеҙҙең аҡылы еңде — буран сыҡманы.* С. Кулибай.

**3.** *миф.* Буранды сағылдырыусы аҡ һаҡаллы ҡарт рәүешендәге уҫал зат; көслө ел, буран эйәһе. □ Метель; демоническое существо в облике косматого белобородого старика. *Буран ҡотора. Буран ыжылдай.*

♦ **Ҡара буран** өйҙәге көслө талаш, ыҙғыш. □ Крупная ссора, скандал. ■ *Ҡулдәкфәлән алырға булһа, өйҙә ҡара буран сыға.* Ғ. Ғүмәр. **Буран ҡубыу (***йәки* **сығыу)** талаш-тартыш, ғауға ҡалҡыу. □ Подниматься, начаться *(о скандале).* **Буран ҡуптарыу (***йәки* **сығарыу, туҙҙырыу)** талаш-тартыш, ғауға ҡалҡытыу. □ Поднять шум, скандал. ■ *«Ерле юҡҡа буран ҡуптара ул Фатима», — тине [Тимер].* Б. Бикбай. *[Әхмәтша бабай] йә урманда, йә башҡа ерҙә кәйефе ҡырылып ҡайта ла, өйгә ингәс, буран сығара, күңеле баҫылғансы бер тулап ала.* Ф. Әсәнов. **Буран уйнау** талашыу-тартышыу, ғауғаланыу. □ Скандалить, шуметь. ■ *[Фәрит:] Һиҙеп торам: өйҙә шау-шыу китәсәк, буран уйнаясаҡ.* Ғ. Байбурин.

**БУРАН II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡалмаҡ ырыуы аймағы. □ Буран *(название родового подразделения башкир-калмаков). Буран аймағы башҡорто.*

**БУРАНАЙ** (Р.: март; И.: March; Т.: Mart) *и.*

Йылдың өсөнсө айының исеме; март. □ Название третьего месяца календарного года; март.

**БУРАН АНАҺЫ** (Р.: дух метели; И.: spirit of a blizzard; Т.: buran hocası) *и. миф.*

Буран эйәһе. □ Дух бурана.

**БУРАНҒАРАҠ (буранғарағы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡалмаҡ ырыуы аймағы. □ Бурангарак *(название родового подразделения башкир-калмаков). Буранғараҡ аймағы башҡорто.*

**БУРАНҒОЛ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй, ҡошсо, табын, ҡаңлы ҡәбиләләре аймағы. □ Бурангул *(название родового подразделения башкир племён ай, кошсы, табын, канлы). Буранғол аймағы башҡорто.*

**БУРАНКА** [рус.] *и. ҡар.* **борғаҡ I.**

**БУРАНҠЫ** *и. диал. ҡар.* **төйөҫ.**

**БУРАНЛАУ (буранла-)** (Р.: вьюжить; И.: be storming; Т.: bora çıkmak) *ҡ.*

Буран сығыу, буран булыу. □ Мести, вьюжить *(о метели). Буранлап тороу.* ■ *Аҙналар буйына буранлап яуған ҡарҙан юлдар өҙөлөп ҡалды.* М. Тажи.

**БУРАНЛЫ** (Р.: с метелью; И.: with a snowstorm; Т.: boralı) *с.*

Бураны булған. □ С метелью, бурей. *Буранлы төн ине.*

**БУРАНСЫ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ҡәбиләһе аймағы. □ Буранcы *(название родового подразделения башкир племени катай). Буранcы аймағы башҡорто.*

**БУРАН ТУРҒАЙЫ** (Р.: белая лазоревка; И.: white willowbiter; Т.: gök mavisi baştankara) *и. зоол.*

**1.** Япраҡлы һәм аралаш урмандарҙа, һыу буйындағы шырлыҡтарҙа йәшәүсе, өҙләкһеҙ һикергеләп йөрөүсе, бөжәктәр һәм уларҙың ҡурсаҡтары менән туҡланыусы турғайҙан бәләкәйерәк ултыраҡ ҡош. □ Белая лазоревка (лат. *Cyanistes cyanus*). ■ *[Буран турғайының] ҡанаттарында, ҡойроғоноң ике яҡ ситендә аҡ һыҙыҡтар бар.* Э. Ишбирҙин.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡыҙылтүш.**

**БУРАН ТҮРӘ** *и. зоол. диал. ҡар.* **буран турғайы 1.**

**БУРАТ** (Р.: сито из конских волос; И.: sieve made of horsehair; Т.: at kılından elek) *и.*

Ҡыл иләк *(орлоҡ таҙартыу өсөн).* □ Сито из конских волос *(для очищения зерна).*

**БУРА ТАЯҒЫ** (Р.: палка для игры в городки; И.: gorodki (a kind of skittles); Т.: oyunda kullanılan sopa) *и. этн.*

Бура туп уйынында ҡулланылған таяҡ. □ Палка для игры в городки.

**БУРА ТУП (тубы)** (Р.: игра в городки; И.: gorodki (a kind of skittles); Т.: oyun türü) *и. этн.*

Уйын исеме *(уйнаусылар ике төркөмгә бүленә; билдәле аралыкта ике дүрткел оя һыҙыла; шул оя эсенә ҡарыш оҙонлоғондағы йыуан ғына таяҡтар — туптар бурап ҡуйыла; ҡара-ҡаршы төркөмдәр беләк оҙонлоҡ таяҡ менән шул туптарҙы оянан бәреп сығарырға тырыша; ҡайһы төркөм алдараҡ сығарып бөтә, шул еңә).* □ Городки *(название игры). Бура туп уйнау.*

**БУРАТЫУ (бурат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бурау I.** *понуд. от* **бурау I.** *Өй буратыу. Мунса буратыу.* ■ *[Уйылдан] ана хәҙер бик ҙур иттереп яңы өй буратып ята.* Н. Мусин.

**БУРАУ I (бура-)** (Р.: рубить сруб; И.: erect (of logs); Т.: kesme kesmek) *ҡ.*

Бура итеп һалыу. □ Рубить *(сруб). Өй бурау. Мунса бурау. Һарай бурау.* ■ *Моратша .. бурап ҡуйған яңы өйөн һала алмай, ауылға кире ташып алды.* Һ. Дәүләтшина. *Бураны урманда бурағайнылар, шунан ат менән оҙон арбаға тейәп алып ҡайттылар.* Р. Солтангәрәев.

**БУРАУ II (бура-)** (Р.: мести *(о метели)*; И.: be storming; Т.: bora çıkmak) *ҡ.*

Ҡарҙы өйрөлтөп-өйрөлтөп осороу; ойоҡһотоу. □ Мести *(о метели). Бурап-бурап ҡар яуа.* ■ *Көтмәгәндә бурай-бурай ҡар яуып киткән. Кәртә-ҡураны, тирмәне ҡар баҫҡан.* Әкиәттән. *Бурай ҙа ғына бурай ҡарҙар яуа.* Халыҡ йырынан.

**БУРАУ III** *и. диал. ҡар.* **бура I, 1.**

**БУРАУЫҘ** *и. диал.*

1. *ҡар.* **ҡыпһыуыр.**
2. *ҡар.* **бөгәзе.**

**БУРА ҺУҒЫУ (бура һуҡ-)** (Р.: играть в городки; И.: play gorodki; Т.: oyun türü) *ҡ. этн.*

Бура туп уйыны уйнау. □ Играть в городки.

**БУРАШЫУ (бураш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бурау I.** *взаимн. от* **бурау I.** *Бура бурашыу. Мунса бурашыу. Ағайыма өй бурашам.*

**БУРБАЙ** (Р.: икры ног; И.: calves; Т.: baldır) *и.*

Аяҡтың бөгәрҙән түбән яғындағы йыуан ите; балтыр. □ Икры ног. *Нәҙек бурбайлы аяҡ.*

**БУРБАЙ ҺӨЙӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **сираҡ.**

**БУРГОМИСТР** [рус. < нем. *Bürgermeister*] *и. ҡар.* **бурмистр.**

**БУРГОМИСТР-АҠСАРЛАҠ (аҡсарлағы)** (Р.: бургомистр, чайка большая полярная; И.: Polar (sea)gull species; Т.: kutup martısı) *и. зоол.*

Ҡаяларҙа оя ҡороусы аҡсарлаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡош төрө. □ Бургомистр, чайка большая полярная (лат. *Larus hyperboreus*).

**БУРГОН АУЫРЫУЫ** (Р.: Бургона болезнь; И.: Burgon; Т.: Burgon hastalığı) *и. мед.*

Түбәнге муйын йәки өҫкө күкрәк умыртҡаһындағы осло үҫентеләрҙең ауыр күтәреү һөҙөмтәһендә һыныуы. □ Бургона болезнь.

**БУРҒОРТ** *и. диал. ҡар.* **һурнаҡ.**

**БУРҘА** *и. диал. ҡар.* **йыуынды.**

**БУРҘАЙ I** [рус. *борзая*] (Р.: борзая; И.: greyhound; Т.: tazı) *и.*

Нәҙек оҙон аяҡлы, оҙон асҡаҡ кәүҙәле йүгерек һунар эте. □ Борзая. *Бурҙай эттәр эйәртеп һунарға барыу.* ■ *Ут быҙлаған. төтөн еҫе килгән урындарҙы, көтөү йөрөгән ерҙәрҙе урап үтергә кәрәклеген дә яҡшы белә ул [Насир], сөнки далала этһеҙ, ҡоралһыҙ йөрөгән кеше юҡ, ә көтөүселәрҙең бурҙайҙары бүренән яман, яҡын барырлыҡ түгел, йолҡҡолап ташлауҙары мөмкин.* З. Ураҡсин.

**БУРҘАЙ II** *с. диал. ҡар.* **шәп.** *Бурҙай ир ине.*

**БУРҘАТ** *с. ҡар.* **бурлат.**

**БУРЖУАЗ** [рус. *буржуазный* < фр.] (Р.: буржуазный; И.: bourgeois; Т.: burjuva) *с.*

Буржуазияға хас. □ Буржуазный. *Буржуаз матбуғат. Буржуаз республика.*

**БУРЖУАЗИЯ** [рус. < фр. *bourgeoisie* ‘ҡала кешеләре’] (Р.: буржуазия; И.: bourgeoisie; Т.: burjuvazi) *и. иҡ.*

Һатыу, етештереү, финанс, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә килем туплау-

сы эре капитал хужалары синыфы. □ Буржуазия. *Буржуазия вәкилдәре.*

**БУРЖУЙ** [рус.] (Р.: буржуй; И.: bourgeoisie; Т.: burjuvazi) *и. кәмһ.*

Буржуазия синыфы вәкиле. □ Буржуй. / Буржуйский.

**БУРИЗ** *и. диал. кар.* **борош.**

**БУРКА I** [рус. < төрки] (Р.: бурка; И.: felt cloak; Т.: kepenek) *и.*

Кавказ халҡының, казактарҙың өҫ кейеме. □ Бурка. *Бурка кейеп йөрөү.*

**БУРКА II** [рус. < төрки] (Р.: бурки; И.: felt boots with leather soles; Т.: aba ayakkabı) *и.*

Кейеҙ йәки фетрҙан күн табанлап тегелгән итек. □ Бурки. *Аҡ ҡуныслы бурка.* ■ *Ҡаракүл яғалы өр-яңы пальто, ҡаракүл бүрек, аяҡта һары күн һыҙмалы, ҡуныҫы ҡайтарылған аҡ бурка.* З. Биишева.

**БУРҠЫЛДАҠ** *с. кар.* **бупылдаҡ II.**

**БУРҠЫЛДАУ (бурҡылда-)** *ҡ. кар.* **бупылдау.**

**БУРЛАК (бурлагы)** [рус.] (Р.: бурлак; И.: barge hauler; Т.: yedekçi) *и. иҫк.*

Карап, баржаны йылға үренә арҡан менән һөйрәгән эшсе. □ Бурлак. / Бурлацкий. ■ *Ҙур Волганың ташлы ҡомдарында бурлак һалған эҙҙәр күмелгән.* Ҡ. Даян. *Баржа тартып уҙған бурлактар... Аттай егелеп, ауыр баржаларҙы улар үргә һөйрәп баралар.* Р. Ғарипов.

**БУРЛАҠ (бурлағы)** *и. диал. кар.* **ҡалдау I.**

**БУРЛАНЫУ I (бурлан-)** *ҡ. төш. кар.* **бурлау.** *страд. от* **бурлау.** *Өй тыштан матур итеп бурланған.*

**БУРЛАНЫУ II (бурлан-)** *ҡ. диал. кар.* **урлашыу.** *Ул бурланып та йөрөгән.*

**БУРЛАТ** (Р.: багровый; И.: crimson; Т.: kıpkırmızı) *с.*

Сөм-ҡыҙыл, ҡып-ҡыҙыл, ҡуйы ҡыҙыл. □ Багровый, ярко-красный, кумачовый. *Бурлат төҫтәге сәскә. Бурлат туҡыманан күлдәк тегеү.* ■ *Мәк сәскәһе бурлат, алһыу була, ҡып-ҡыҙылы була, күрәһе.* К. Кинйәбулатова.

♦ **Бурлат кеүек ҡыҙарыу** оялыштан йәки башҡа сәбәптән ҡып-ҡыҙыл булыу. □ Покрываться румянцем, краснеть.

**БУРЛАТ ҠЫҘЫЛ** *с. кар.* **бурлат.**

**БУРЛАТЫУ (бурлат-)** *ҡ. йөкм. кар.* **бурлау.** *понуд. от* **бурлау.** *Ҡыҙымдан мейес бурлатайым әле. Мунсаны тыштан бурлатып ҡуйырға кәрәк.*

**БУРЛАУ (бурла-)** (Р.: белить; И.: whitewash; Т.: badana etmek) *ҡ.*

Аҡбур менән ағартыу. □ Белить. *Мейесте бурлау. Мунсаны бурлау. Өйҙө бурлау.* ■ *Балалар уҡыуға төшкәнсе мәктәптең тәҙрәләрен йыуыштырып, мейестәрен һылап, бурлап алаһы ла бар әле.* М. Тажи. *Атаҡайымдың сыуалын аҡбур менән бурлайым.* Сеңләүҙән.

**БУРЛЫ** *с. диал. кар.* **бурыл.**

**БУРЛЫҠ (бурлығы)** (Р.: воровство; И.: stealing; Т.: hırsızlık) *и.*

Урлашып йөрөү. □ Воровство. ● *Бурлыҡ — хурлыҡ.* Әйтем.

**БУРМАШ** (Р.: мормыш; И.: gammarus; Т.: gammarus) *и. диал.*

Ҡармаҡ һалғанда файҙаланылған күл ҡорто. □ Озёрный рачок, используемый при ужении рыбы, мормыш, рачок-бокоплав (лат. *Orchestidae*).

**БУРМИСТР** [рус. < нем. *Bürgermeister Bürger* 'һарайҙа йәшәүсе' + *Meister* 'хужа кеше'] (Р.: бурмистр; И.: mayor; Т.: belediye başkanı) *и.*

Ҡайһы бер Европа илдәрендәге һәм элекке Рәсәйҙәге ҡала идараһының башлығы. □ Бурмистр.

**БУРМИСТРЛЫҠ (бурмистрлығы)** (Р.: бурмистрство; И.: mayor; Т.: belediye başkanlığı) *и.*

Бурмистр булыу. □ Бурмистрство. *Бурмистрлыҡ хоҡуғы. Бурмистрлыҡ вазифаһы.*

**БУРНАҠ (бурнағы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең ҡәбиләһе аймағы. □ Бурнак *(название родового подразделения башкир племени мин). Бурнаҡ аймағы башҡорто.*

**БУРСА** [рус. *брус*] (Р.: брус; И.: squared beam; Т.: mertek) *и.*

Дүрт ҡырлы итеп юнылған ағас. □ Брус. ■ *Ғарифтың кәртәһе түр, имән ағастарҙан юнып эшләнгән бурсалар тейәлгән йөктәр менән ҡапланды.* Ғ. Хәйри.

**БУРҪ-БУРҪ** (Р.: слово, выражающее ворчание; И.: word to express grumbling; Т.: homurtu) *оҡш.*

Асыуланып, ҡырыҫ һөйләшеүҙе белдергән һүҙ. □ Слово, выражающее ворчание. *Бурҫ-бурҫ итеп һөйләшеү.*

**БУРҪЛАҠ** (Р.: пухлый; И.: fleshy; Т.: tombul) *с.*

Һимеҙ, тулы *(биткә ҡарата).* □ Пухлый, мясистый *(о лице).* ■ *[Ялин] әле йәш булыуына ҡарамаҫтан, тәненә ит ултырып бөткән, .. ҡыҙара биреп торған бурҫлаҡ битле кеше.* Н. Мусин.

**БУРҪЛЫҠ (бурҫлығы)** *и. диал. ҡар.* **бурһыҡ.**

**БУРҪЫҠ** (Р.: гнилой; И.: rotten; Т.: çürük) *с. диал.*

Серек. □ Гнилой.

**БУРҪЫҠ ИМЕ** *и. диал. ҡара* **бурһыҡ име.**

**БУРҪЫЛДАУ (бурҫылда-)** (Р.: ворчать; И.: grumble; Т.: homurdanmak) *ҡ.*

Бурҫ-бурҫ итеү. □ Ворчать. *Бурҫылдап һөйләшеү.*

**БУРҪЫУ (бурҫы-)** (Р.: опухать от слёз; И.: sulk; Т.: şişmek) *ҡ. диал.*

**1.** Оҙаҡ илауҙан шешенеү. □ Опухать от слёз. *Бурҫып бөтөү.*

**2.** Турһайыу. □ Надуться. *Бурҫып йөрөү.*

**БУРТ** [рус. < пол. *burt*] (Р.: бурт; И.: clamp; Т.: loda) *и.*

Эҫкертләп, һалам менән ҡаплап ҡуйылған йәшелсә өйөмө. □ Бурт. *Картуфты буртҡа өйөп һалыу.*

**БУРТАҠ (буртағы)** *и. диал. ҡар.* **турһыҡ.**

**БУРТАШ** *и.*

**1.** *ҡар.* **аҡбур.**

**2.** *диал.* Аҡ балсыҡ. □ Белая глина.

**БУРТЫЙ** *и. зоол. диал. ҡар.* **ташбаш 1.**

**БУРҺАЙ** *и. диал. ҡар.* **бурҙай.**

**БУРҺЫҠ I (бурһығы)** (Р.: барсук; И.: badger; Т.: porsuk) *и. зоол.*

Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған оҙонса башлы, осло томшоҡло, йыуан кәүҙәле, ҡыҫҡа ҡойроҡло, шырт йөнлө йыртҡыс йәнлек. □ Барсук. / Барсуковый, барсучий (лат. *Meles meles). Бурһыҡ ите. Бурһыҡ майы. Бурһыҡ тиреһе. Бурһыҡ өңө. Бурһыҡ балаһы. Инә бурһыҡ. Бурһыҡҡа һунар итеү.*

**БУРҺЫҠ II (бурһығы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ҡәбиләһе аймағы. □ Бурсык *(название родового подразделения башкир племени катай). Бурһыҡ аймағы башҡорто.*

**БУРҺЫҠ ИМЕ** (Р.: способ лечения туберкулёза; И.: method to treat T. B.; Т.: halk medsininde veremin tedavisi) *и. миф.*

Туберкулёзды дауалау име. □ Способ лечения туберкулёза.

**БУРҺЫТЫЛЫУ (бурһытыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бурһытыу.** *страд. от* **бурһытыу.**

**БУРҺЫТЫУ (бурһыт-)** (Р.: допускать гниение; И.: let rot; Т.: çürütmek) *ҡ.*

**1.** Боҙоп, еҫләндереү (*ит, май кеүек нәмәне*); һөрһөтөү. □ Допускать гниение, прение. *Майҙы бурһытыу.*

**2.** Дымландырып, күгәртеү, серетеү; бәҫәртеү. □ Допускать преть. *Игенде бурһытыу. Керҙе киптермәй бурһытыу.*

**БУРҺЫУ (бурһы-)** (Р.: тухнуть; И.: become rotten; Т.: küf kokmak) *ҡ.*

**1.** Боҙолоп еҫләнеү (*ит, йомортҡа кеүек нәмәгә ҡарата*); һөрһөү. □ Тухнуть, протухать (*о мясе, яйцах и т. п.*). ■ *Тоҙҙо аҙыраҡ һалғанмын да ит бурһыған да ҡуйған.* Б. Бикбай. *Һеҙҙе көтөп ултырһаң, ҡаҙҙың да бурһыуы бар.* Әкиәттән.

**2.** Дым тартып күгәреү, сереү; бәҫәреү. □ Преть, гнить; гореть. *Бурһыған ағас. Бурһыған бойҙай. Бурһыған кер.* ■ *Йәйге еңел, саф һауа юҡ инде хәҙер: серегән үлән, бурһыған ағас, дым, нилектәндер юғарыға күтәрелмәй мөрйәләргә уралған төтөн*

*еҫтәре — бөтәһе бергә ҡушылып, ошо мәлгә генә хас еҫ аңҡыта.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Дәртһеҙ, күңелһеҙ хәлгә төшөү. □ Впадать в уныние.

**БУРЪЯҠ** (Р.: мутный; И.: turbid; Т.: bulanık) *с.*

Ҡом, балсыҡ ҡатнашып болғанған; болғансыҡ. □ Мутный. *Бурьяҡ һыу. Бурьяҡ булыу.* ■ *Уйылдандың ҡиәфәтенә йән керҙе, ырғып торҙо ла аҡсаларын көҙгө бурьяҡ һыуға бырағтырҙы.* Н. Мусин.

♦ **Буръяҡ һыуҙа балыҡ тотоу** (*йәки* **һөҙөү**) буталсыҡ хәл-шарттан файҙаланып ҡалырға тырышыу. □ Воспользоваться поднявшейся суматохой. ■ *Киреһенсә, улар үҙҙәре лә ошо бурьяҡ һыуҙа балыҡ тотоп ҡалырға тырышалар. Ә Ныязғол ҡотолдо иһә, уларға үҙҙәре күтәрә алғанса өлөш сығасаҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**БУРЪЯҠЛАНДЫРЫУ** (**буръяҡландыр-**) (Р.: мутить; И.: make turbid; Т.: bulandırmak) *ҡ.*

Буръяҡҡа әйләндереү; буръяҡлау. □ Мутить, делать мутным. *Һыуҙы бурьяҡландырыу.*

**БУРЪЯҠЛАНЫУ** (**буръяҡлан-**) *ҡ. төш. ҡар.* **буръяҡлау.** *страд. от* **буръяҡлау.** *Йылғалағы һыу бурьяҡланды. Ҡоҙоҡ һыуы бурьяҡланған.* ■ *Төлкөсура йылға буйына кире килде, йылға оҙаҡҡа һуҙылған көҙгө ямғырҙарҙан ташып киткән, бурьяҡланып аға.* Н. Мусин. *Бурьяҡланып, ярҙарынан ашып аҡҡан Иҙелгә кәмә төшөрөрлөк түгел ине әле.* Ә. Хәкимов.

**БУРЪЯҠЛАТЫУ** (**буръяҡлат-**) *ҡ. йөкм. ҡар.* **буръяҡлау.** *понуд. от* **буръяҡлау.** *Һыуҙы бурьяҡлатыу.*

**БУРЪЯҠЛАУ** (**буръяҡла-**) (Р.: мутить; И.: make turbid; Т.: bulandırmak) *ҡ.*

Буръяҡҡа әйләндереү. □ Мутить, делать мутным. *Йылғаны бурьяҡлау.*

**БУРЫЖ** *и. зоол. диал. ҡар.* **борош I.**

**БУРЫЗ** *и. зоол. диал. ҡар.* **борош I.**

**БУРЫҠ** (**бурығы**) (Р.: корневище рогоза; И.: reed mace rhizome; Т.: su kamışı damırları) *и.*

Екән тамыры. □ Корневище рогоза.

**БУРЫЛ I** (Р.: чалый; И.: roan; Т.: demir kırı) *с.*

Буҙ менән ҡара ҡатнаш (*йылҡы төҫөнә ҡарата*). □ Чалый. *Бурыл ат. Бурыл ала. Бурыл ҡара. Бурыл туры. Бурыл күк. Бурыл ерән.* ■ *Оҙакламай Зөлкәрнәй, Зөлхизәнең ошо йыр тауышын ишеткәндәй, бурыл толпарын аяңдатып елә-саба килеп тә еткән.* Н. Иҙелбай. *Күҙ алдымдан сабып үтеп китте ауылымдың бурыл ҡашҡаһы.* Ғ. Байбурин.

**БУРЫЛ II** (Р.: чалый конь; И.: roan horse; Т.: demir kırı at) *и.*

Бурыл төҫтәге ат. □ Чалый конь. *Бурылды егеү.* ■ *Алтынбай үҙе лә аңғармаҫтан урталағы бурылдың ауыҙын ҡайырып, сыбыртҡы менән һырт буйына бер тартыуы булды, юртаҡ ризаһыҙлыҡ белдергәндәй бышҡырып ҡына ҡуйҙы ла, тәгәрләгән йомғаҡ кеүек елдереп алып китте.* З. Ураҡсин.

**БУРЫЛДАҠ** *с. диал. ҡар.* **бупылдаҡ II.**

**БУРЫС I** (Р.: долг; И.: duty; Т.: borç) *и.*

**1.** Үтәлеүе мотлаҡ булған эш. □ Долг, обязанность. *Хәрби бурыс. Халыҡ алдындағы бурыс.* ■ *Ил намыҫын һаҡлап яуға сығыу — батыр егеттәрҙең бурысы.* Халыҡ йырынан.

**2.** Алға ҡуйылған маҡсат. □ Задача, цель. *Үҙ алдыңа бурыс ҡуйыу.* ■ *Беҙҙең, йәғни һеҙҙең бурыс — шул кешене тейешле кимәлдә ҡаршы алыу, хужалыҡ менән таныштырыу, халыҡ менән осраштырыу.* Ә. Әминев.

**3.** Кире ҡайтарыу шарты менән алынған аҡса йәки хаҡын аҙаҡ түләргә алған нәмә; үтес. □ Долг, задолженность. *Бурысҡа аҡса алыу. Бурысҡа әйберҙәр алыу. Бурысты ваҡытында ҡайтарыу.* ■ *[Имай:] Йә, ҡустым, утыҙ һум бурысыңды ҡасан түләйһең?* Һ. Дәүләтшина. ● *Бурысын йәшергән бөлөр, ауырыуын йәшергән үлер.* Мәҡәл.

**БУРЫС II** *и. диал. ҡар.* **борош.**

**БУРЫСЛАНЫУ** (**бурыслан-**) (Р.: брать в долг; И.: borrow; Т.: borçlanmak) *ҡ.*

Бурыҫка алыу, бурыҫка төшөү. □ Взять, брать в долг *у кого,* войти в долг *к кому,* задолжать *кому.*

**БУРЫСЛЫ** (Р.: обязанный; И.: grateful; Т.: borçlu) *с.*

**1.** Үтәлеүе мотлаҡ һәм изге булған эшле. □ Обязанный, благодарный, признательный. *Мин һеҙгә бурыслымын.* ■ *Хафиз ағайға ул [Сәғиҙә] үҙен ғүмергә бурыслымын тип һананы.* М. Тажи.

**2.** Ҡайтарып биреү шарты менән аҡса йәки хаҡын аҙаҡ түләү өсөн бер *нәмә* алған; бирәсәкле. □ Имеющий долг. *Бурыслы кеше. Бурыслы ил.*

**БУРЫСТАШ** (Р.: содолжник; И.: co-debtor; Т.: borç ortağı) *и. юр.*

Уртаҡ бурысы булған кеше. □ Содолжник.

**БУРЫШ** *и. диал. ҡар.* **борош I.**

**БУСАЛАНЫУ (бусалан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бошаланыу.**

**БУСМЫҠ** (Р.: толстопузый; И.: pot-bellied; Т.: koca göbekli) *с. диал.*

Күпкәк эсле *(кешегә ҡарата).* □ Толстопузый *(о человеке). Бусмыҡ малай.*

**БУССОЛЬ** [рус. < фр. *boussole* ] (Р.: буссоль; И.: compass; Т.: pusula) *и.*

Мөйөш үлсәү ҡоралы. □ Буссоль. *Буссоль менән үлсәү.*

**БУСТЫШ АҠТАМЫРЫ** (Р.: пырей пустошный; И.: couch grass; Т.: ayrık otu) *и. бот.*

Дала аҡтамыры. □ Пырей пустошный (лат. *Elytrigia).*

**БУҪАҒА I** *и. диал. ҡар.* **тупһа.** ■ *Француз, француз килә, ти, яуы еткән Мәскәүгә лә буҫағала тора, ти.* Халыҡ йырынан. *Буҫағаға ултырырға ярамай. ауырыу йоға.* Башҡорт мифологияһынан. *«Был һинме?» — тип тауыш бирә Бәхтиәр ҡарт яткан еренән, «һинме» тип һорауы былай ғына, сөнки дуҫынан башҡа уның буҫағаһын аштап ингән кеше юҡ иҫәбе ине.* Ә. Хәкимов. ● *Килен ҡәйнә буҫағаһынан.* Мәҡәл.

**БУҪАҒА II** (Р.: подарок невесты родственникам жениха; И.: bride groom's gift to relatives; Т.: gelinin yeni akrabalarına verdiği hediye) *и. этн.*

Кәләштең кейәү яғы туғандарына бүләге. □ Подарок невесты родственникам жениха.

**БУҪАҒАЛЫ** (Р.: с порогом; И.: with a threshold; Т.: eşikli) *с.*

Буҫағаһы булған. □ С порогом. *Ишеге бейек буҫағалы.*

**БУҪАЛАҠ** (Р.: толстый; И.: stout, plump; Т.: terütaze) *с.*

Һимеҙ, таҙа *(йәш балаға ҡарата).* □ Толстый, тучный, полный; бутуз *(о младенце). Буҫалаҡ бала. Буҫалаҡ кеше. Буҫалаҡ булыу.*

**БУҪАЛАҠТАЙ** (Р.: крупный; И.: very robust; Т.: kocaman) *с.*

Ҙур, ауыр кәүҙәле; уҫлаптай. □ Крупный, здоровенный, несуразно большой. *Буҫалаҡтай ул үҫтерә.*

**БУҪАТЫУ (буҫат-)** (Р.: предупредить; И.: menace; Т.: uyarmak) *ҡ. диал.*

Ҡурҡытып киҫәтеү. □ Предупредить, угрожать. *Буҫатып ҡуй, кешегә һөйләнмәһен.*

**БУҪЛЫҒЫУ (буҫлыҡ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **буҫығыу.** ■ *Төшөмдән буҫлығып уяныл киткәм, мендәрем еп-еүеш.* Г. Ғиззәтуллина.

**БУҪТАУ** (Р.: сукно; И.: cloth; Т.: çuha) *и.*

Уң яғы кейеҙләнеберәк торған ҡалын, беше йөн туҡыма. □ Сукно. *Ҡыҙыл буҫтау. Буҫтау тун. Буҫтау һуғыу. Буҫтау баҫыусы.* ■ *Бүгәсәү батша бар, тиҙәр, буҫтау бишмәттәре мул тиҙәр.* Халыҡ йырынан. *Затлы тиреләргә, татлы балға алмашып алып ҡайткан буҫтау, ебәктәрҙе ырыу баштарына, сардарҙарға тараттылар, артабан улар ырыуҙаштарының тейешле кешеләренә еткерәсәк.* З. Ураҡсин.

**БУҪЫҒЫУ (буҫыҡ-)** (Р.: долго беззвучно плакать; И.: weep silently; Т.: sessizce ağlamak) *ҡ.*

Оҙаҡ илап, быуылыу, хәлһеҙләнеү. □ Долго беззвучно плакать, не успокаиваться от долгого плача. *Илап, буҫығып бөтөү.* ■ *[Хәтирә] .. тырт-мырт атлап өйгә бер инде, бер сыҡты, ахырҙа түҙмәне, әле саҡ*

*атлай башлаған малайын ҡосаҡланы ла буҫығып уларға тотондо.* Н. Мусин.

**БУҪЫҠ (буҫығы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkırt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе аймағы. □ Бусык *(название родового подразделения башкир племени кыпчак). Буҫыҡ аймағы башҡорто.*

**БУҪЫУ (буҫ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **уҫыу.** *Ҡулды буҫып ебәреү.*

**БУТ I** *и. диал. ҡар.* **гөмбөр II.** *Ҡуптән балыҡҡа йөрөгән юҡ, бут ҡайҙа икән?*

**БУТ II** (Р.: толк; И.: use, sense; Т.: mana) *и. диал.*

Мәғәнә, әһәмиәт. □ Толк. *Бутһыҙ кеше була ла инде.*

**БУТА I** (Р.: верблюжонок; И.: young of camel; Т.: köçek) *и.*

Дөйә балаһы. □ Верблюжонок. ■ *Йәш ҡолондарҙың сәңгел тауыштары, дөйәләрҙең үҙ буталарын эҙләп тамаҡ төбө менән аҡырыуҙары әленән-әле һауаны яра.* З. Ураҡсин.

**БУТА II** (Р.: изготовленный из шерсти верблюжонка; И.: made from young of camel's hair; Т.: köçek deri) *с.*

Дөйә балаһы йөнөнән эшләнгән. □ Изготовленный из шерсти верблюжонка. *Бута билғауҙар тағып алыу.*

**БУТА III** *и. диал. ҡар.* **билғау.** *Бута тағыу.* ■ *Аяғында йәшел ҡатаһы, билкәйендә ебәк бутаһы.* Халыҡ йырынан.

**БУТАЛ** [рус. *поталь*] (Р.: поталь; И.: tinsel; Т.: altın yaprağı) *и.*

**1.** Биҙәү эше өсөн әҙерләнгән йоҡа ғына табаҡлы йәки епле алтын йәки көмөш. □ Поталь, сусальное золото. *Алтын бутал менән биҙәү. Көмөш бутал менән һүрәт төшөрөү. Буталлы уҡа.*

**2.** Алтын, көмөш төҫөндәге буяу. □ Золотистая или серебристая краска. *Бутал менән һүрәт төшөрөү. Сынаяҡтарға бутал ялатыу.*

**3.** Һауыт-һаба буяуы. □ Краска для посуды. *Ҡыҙыл буталға буяу. Сынаяҡты күк бутал менән биҙәү.*

**БУТАЛА** [рус. *ботало*] (Р.: ботало; И.: little bell for cattle; Т.: çıngırak) *и.*

Йылҡы, һыйыр малдарының муйынына тағылған дыңғырҙаҡ. □ Ботало *(глухой колокольчик, привешивается к шее лошадей, коров).*

**БУТАЛАНДЫРЫУ (буталандыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **буталаныу.** *понуд. от* **буталаныу.**

**БУТАЛАНЫУ (буталан-)** (Р.: болтаться без дела; И.: hang about; Т.: oyalanmak) *ҡ.*

Кеше араһында буталып йөрөү. □ Болтаться, ходить без дела. *Эшһеҙ буталанып йөрөү.*

**БУТАЛАУ (бутала-)** *ҡ. ҡар.* **бутау I.** ■ *Биҙрәләр менән генә ташып һибелгән һыу ҡырмыҫҡа ояһына таяҡ тығып буталау менән бер ине, киреһенсә, ул көлдө борхотоп, янғынды арттырып ҡына ебәрә ине.* И. Ғиззәтуллин.

**БУТАЛДЫРЫУ (буталдыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **буталыу.** *понуд. от* **буталыу.**

**БУТАЛЛАНЫУ (буталлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **буталлау.** *страд. от* **буталлау.** *Буталланған сынаяҡ.*

**БУТАЛЛАУ (буталла-)** (Р.: покрывать поталью; И.: cover with tinsel; Т.: altın yaprağı ile süslemek) *ҡ.*

**1.** Бутал (1) менән биҙәү. □ Покрывать поталью, сусальным золотом. *Батмусты буталлау.* ■ *Һарайҙың буталлап, көмбәҙләп, алтын менән ябылған түбәләре .. күҙҙең яуын алып тора.* З. Биишева.

**2.** Бутал (2) менән буяу. □ Красить золотистой или серебристой краской. *Һауыт-һабаны буталлау.*

**3.** Бутал (3) менән буяу. □ Красить посуду. *Ҡыҙыл бутал менән буталлау.*

**БУТАЛЛЫ** (Р.: покрытый поталью; И.: tinsel covered; Т.: altın yapraklı) *с.*

Бутал менән биҙәлгән. □ Покрытый поталью, сусальным золотом. *Буталлы уҡа. Буталлы һауыт.* ■ *[Рамаҙан] буталлы яҙыуына күҙ төшөрөп, түш кеҫәһенә тыҡты.* Ә. Хәкимов.

**БУТАЛСЫҠ** (Р.: запутанный; И.: confused; Т.: karışık) *с.*

Билдәле бер тәртибе юғалған; сыуалсыҡ; аңлауға ауыр, аңлайышһыҙ. □ Запутанный, сложный; беспорядочный, сумбурный. *Буталсыҡ төш күрҙем. Башым буталсыҡ уйҙар менән тулған. Буталсыҡ мәсьәләнең осона сығып булмай.* ■ *[Закир] тағы баяғыса, эйәр өҫтөндә бәйһеҙ һалпаңлап, буталсыҡ уйҙар иркенә бирелеп бара бирҙе.* З. Биишева. *Ул был ҡәҙәр халыҡ араһынан, был саҡлы буталсыҡ ерҙән Ғарифты табыуына ышанмай башланы.* М. Ғафури. *Валсыҡ-валсыҡ, сыуалсыҡ, асыҡ-тишек, буталсыҡ, тылсым-тылсым, мәтәлсек, булһын-булһын болғансыҡ.* Ш. Бабич.

**БУТАЛСЫҠЛЫҠ (буталсыҡлығы)** (Р.: запутанность; И.: (state of) confusion; Т.: karışıklık) *и.*

*Ниҙәлер* рәт, тәртип, аныҡлыҡтың булмауы, буталсыҡ хәл. □ Запутанность, беспорядочность, сумбурность. *Тормоштоң буталсыҡлығы. Фекер буталсыҡлығы.* ■ *Уйылдан был буталсыҡлыҡтарҙы, ғауғаны ҙурға олғайтырмай үткәреп ебәрергә өмөтләнә ине әле һаман.* Н. Мусин.

**БУТАЛЫУ (бутал-)** *ҡ.*

**1.** *төш. кар.* **бутау I.** *страд. от* **бутау I.**

**2.** Ҡушылып аралашыу. □ Перемешивать, перепутываться. *Балсыҡ ҡом менән буталған.* ■ *Тирә-яҡ хәрәкәткә килде. Төтөн, туҙан буталып, бер нәмә лә күренмәҫ булды.* И. Насыри.

**3.** Араға ҡыҫылып, бергә боларыу. □ Путаться, перемешиваться. *Өй алдында буталыу.* ■ *Беҙҙең егет ҡорона ингән өс үҫмер ҙә шунда бутала. Улар ҙа уйнай.* Ғ. Хәйри.

**4.** *Кем менәндер* аралашыу; сыуалыу. □ *неодобр.* Путаться *с кем,* иметь дело *с кем. Ирҙәр менән буталыу. Насар кешеләр менән буталыу.*

**5.** Мәшғүл булып, ығы-зығы килеү; мәшәҡәтләнеү. □ Быть занятым, суетиться. *Мәшәҡәттәр менән буталыу.*

**6.** Тәртипһеҙ, тыныҫһыҙ, ығы-зығы хәлгә килеү. □ Путаться, сбиваться. *Тормош буталған.* ■ *Беҙҙең полк тамам буталған. Ҡайһы рота, ҡайһы батальон икәнен аңлар хәл юҡ.* Д. Юлтый. *[Сәғиҙә:] Хәҙер замана буталыбыраҡ тора. Кем ғәйепле, кем хаҡлы икәнен белеүе ҡыйын.* М. Тажи.

**7.** Уй-фекер йүнәлешен юғалтыу. □ Сбиваться *(о мысли).* ■ *Фәриҙә уйҙарының осона сыға алманы, буталып бөттө.* Р. Солтангәрәев.

**БУТАЛЫШ I** (Р.: путаница; И.: muddle; Т.: darmadağınıklık) *и.*

**1.** Тәртипһеҙ, ығы-зығы хәл. □ Путаница, суматоха. *Уйҙар буталышы. Фекер буталышы.* ■ *[Мираттың] башында буталыш: әше тураһындамы, өйө тураһындамы, ҡатыны әйткәндәрҙе уйлағамы?* «Киске Өфө», № 37, 2011.

**2.** Халыҡ араһындағы ризаһыҙлыҡ хәрәкәте; сыуалыш. □ Суматоха, сумятица, переполох. *Буталыш яһау.*

**БУТАЛЫШ II** (Р.: неправильно; И.: erroneously; Т.: yanlış) *р. диал.*

Яңылыш, дөрөҫ түгел. □ Неправильно, ошибочно. *Һеҙ юлды буталыш алғанһығыҙ.*

**БУТАЛЫШЫУ (буталыш-)** *ҡ. урт. кар.* **буталыу.** *взаимн. от* **буталыу.**

**БУТАМА** *и. диал. кар.* **болғау II.**

**БУТАНЫУ (бутан-)** (Р.: рыться; И.: rummage; Т.: karıştırmak) *ҡ.*

*Ниҙер* эҙләп аҫтын-өҫкә аҡтарыу; соҡоноу. □ Рыться, копаться. *Һандыҡ эсендә бутаныу.* ■ *[Аллабирҙе:] Келәттә бутаныр йөрөргә һиңә кем ҡушты?* Ш. Биҡкол.

**БУТАРА** [рус. *бутара* < лат. *butarium* 'мискә'] (Р.: бутара; И.: sizing trommel; Т.: trampet) *и.*

Металл ҡатышҡан ҡомдо йыуа торған әйләнмә барабан. □ Бутара.

**БУТАРЛАУ I (бутарла-)** (Р.: сплавлять пески, оставшиеся после промывки россыпных месторождений золота; И.: float gold sands; Т.: kumları akıtmak) *ҡ.*

Алтыны йыуылып, өйөп ҡуйылған ҡом, ташты һыуға ағыҙыу. □ Сплавлять пески, оставшиеся после промывки россыпных месторождений золота. ■ *Гольцев һыуҙы йылдарҙа йыуып ташланған иҫке отвалдарҙы яҙғы ташҡын һыу менән бутарланы.* Я. Хамматов.

**БУТАРЛАУ II (бутарла-)** *к. диал. ҡар.* **һүтеү.** *Кейемде бутарлап һалып ҡуйҙым.*

**БУТАРСЫ** (Р.: старатель; И.: gold prospector; Т.: altın arayıcı) *и.*

Бутар эшендә эшләгән кеше. □ Старатель.

**БУТАР ЭШЕ** (Р.: бутара; И.: washtub; Т.: trommel) *и.*

Алтыны йыуылып, өйөп ҡуйылған ҡомташты һыуға ағыҙыу эше. □ Сплав песков, оставшихся после промывки россыпных месторождений золота; бутара. *Бутар эшенә йәлеп ителеү.*

**БУТАУ I (бута-)** (Р.: мешать, перемешивать; И.: mix; Т.: karıştırmak) *к.*

**1.** Ян-яҡҡа һелтәп, *ниҙеңдер* эсен ҡул йәки таяҡ һымаҡ нәмә менән айҡау. □ Мешать, перемешивать. *Ҡырмыҫҡа иләүен таяҡ менән бутау.*

**2.** Шыйыҡ йәки бөртөклө нәмәнең эсен әйләндереп-тулғандырып айҡау; болғатыу. □ Мешать, перемешивать. *Мейестәге күмерҙе бутау. Бутҡаны бутау.* ■ *Айыуғолаҡ көлдө бутап ҡарағайны, күмер булып бөткән бер көлсә килеп сыҡты, ти.* Әкиәттән.

**3.** Ҡушып аралаштырыу; болғатыу. □ Смешивать, перемешивать. ■ *Киндер майы бутап, сейле-бешле итеп әҙерләгән тары бутҡаһы ашалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Аҫтын-өҫкә туҙҙырыу; аҡтарыу. □ Путать, перепутывать. ■ *Атайҙың китаптар менән тулған шүрлеген аҡтарып бөттөм бутап.* Ш. Бабич.

**5.** Ике йәки бер нисә кеше йәки нәмәне үҙ-ара яңылыштырыу. □ Путать, принимать одно за другое. *Йөҙҙәрен бутау.* ■ *Беҙ бер мәктәптә ике Сәлих, икебеҙҙең дә фамилия Мәхмүтов. Кеше бутамаһын өсөн .. ул үҙен беренсе тип йөрөтә, ә мин икенсе.* С. Агиш. *Зәлифә ҡарт әсәһе өйрәткән теләктәрҙе бутай-бутай ҡабатланы.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *күсм.* *Ниҙеңдер* тәртибен, тыныслығын, мөнәсәбәтте боҙоу. □ Вмешиваться, спутать, нарушать принятый порядок вещей. *Дуҫтарҙың араһын бутау.* ● *Алабута аш булмаҫ, ара бутаған иш булмаҫ.* Мәҡәл.

**7.** *күсм.* Асыҡ йүнәлештән, тейешле тәртиптән яҙҙырыу; сыуалтыу, яңылыштырыу. □ Сбивать с толку, ввести в заблуждение. *Башты бутап йөрөмә. Донъя бутап бөттөләр.* ■ *[Пәлбаныу:] Һуғыш күп нәмәне бутаны, Ихсанбай. Иртән тигәнең кис була, кис тигәнең иртән була.* Т. Ғарипова.

**8.** *диал. ҡар.* **болғау I, 2.** *Ашты бутау.*

**БУТАУ II** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **болғау II.**

**2.** *ҡар.* **иҙелмә I.**

**БУТАУЫС** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **болғауыс 1.**

**2.** *ҡар.* **гөмбөр II.**

**БУТАФОР** [рус. < ит. *buttafuoria* ] (Р.: бутафор; И.: property man; Т.: donatımcı) *и.*

Бутафория әҙерләүсе кеше. □ Бутафор. *Театр бутафоры.*

**БУТАФОРИЯ** [рус. < ит. *buttafuoria*] (Р.: бутафория; И.: properties; Т.: sahne eşyaları) *и.*

**1.** Сәхнәлә йәки магазин күргәҙмәһендә ысын нәмәне алмаштырыу өсөн хеҙмәт иткән төрлө ялған нәмә (*мебель, һауытһаба, ҡорал йәки тауар*). □ Бутафория (*предметы театральной обстановки*). / Бутафорский. *Спектаклгә бутафория әҙерләү.*

**2.** *күсм.* Күҙ буяу, алдаҡ. □ Бутафория (*о чём-л. показном, фальшивом*). *Уның ҡыланыштары бутафория.*

**БУТАШЫУ (буташ-)** *к. урт. ҡар.* **бутау.** *взаимн. от* **бутау.**

**БУТЕРБРОД** [рус. < нем. *Butterbrot* 'майлы икмәк'] *и. ҡар.* **майлы икмәк.** *Сырлы бутерброд. Бутерброд эшләү. Бутерброд ашау.*

**БУТИК (бутиғы)** [рус. < фр. *boutique*] (Р.: бутик; И.: boutique; Т.: butik) *и.*

Модалы тауарҙар һатылған бәләкәй магазин. □ Бутик. *Бутикта кейенеү.*

**БУТИҢКӘ** (Р.: нитка, спаренная с пуховой пряжей для шали; И.: kind of thread; Т.: ip türü) *и. диал.*

Шәл бәйләй торған мамыҡ ебенә ҡатланған еп. □ Нитка, спаренная с пуховой пряжей для шали.

**БУТКА** [дөйөм төрки *ботка* 'бутҡа, ярма'] (Р.: каша; И.: porridge, gruel; Т.: lapa) *и.*

**1.** Һөткә йәки һыуға ҡуйы итеп ярманан бешергән ашамлыҡ. □ Каша. *Ҡарабойҙай буткаһы. Шыйыҡ бутка. Майлы бутка. Бутка бешереү.*

**2.** *күсм.* Болғанып, иҙелеп ятҡан нәмә. □ Каша *(вязкая однородная масса, напоминающая своим видом это кушанье). Юлдар буткаға әйләнгән.* ■ *Былай ҙа боламыҡ булып ятҡан ер, ҡар менән буталып, буткаға әйләнде.* Р. Солтангәрәев.

**3.** *күсм.* Буталсыҡлыҡ. □ Путаница. ■ *[Рәис:] Берәмләп һүҙ алып һөйләгеҙ, был ниндәй бутка ул!* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *этн.* Йола ашы. □ Обрядовое блюдо. *Ҡарға буткаһы. Теләк буткаһына ярма йыйыу.*

♦ **Ауыҙ эсендә бутка бешереү** ауыҙ эсенән аңлайышһыҙ мығырлау. □ Говорить невнятно и вяло; мямлить. **Майлы бутка түгел** еңел түгел тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Это не так-то легко. *букв.* Не каша с маслом. *Ятаҡта йәшәү майлы бутка түгел.* **Һүҙ буткаһы** буш, мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләү. □ Болтовня, пустой разговор.

**БУТНАЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһе аймағы. □ Бутнай *(название родового подразделения башкир племени табын). Бутнай аймағы башҡорто.*

**БУТ ТАШЫ** (Р.: бутовый камень; И.: rubble stone; Т.: moloz taşı) *и.*

Төҙөлөштә ҡулланылған йомшаҡ аҡ таш. □ Бутовый камень.

**БУТҺЫҘ** (Р.: бестолковый; И.: confused; Т.: aptal) *с. диал.*

Мәғәнәһеҙ. □ Бестолковый. *Бутһыҙҙың һүҙе лә шул инде үҙе кеүек.*

**БУТЫЙ** [рус. *боты* < фр. *botte* 'итек'] (Р.: боты; И.: high overshoes; Т.: ayakkabı) *и.*

Еүеш, һыуыҡ көндө кейә торған ҡуныслы аяҡ кейеме. □ Боты. ■ *Йоҡа бәлтә, оҙон ҡуныслы резина бутый кейгән ҡыҙ, машина туктағас, өшөгәнен ныҡырак тойҙо.* Ә. Вәли.

**БУТЫР-БУТЫР** (Р.: подражание звуку кипения густой массы; И.: onomatopoeic word; Т.: fokur fokur) *оҡш.*

Бутка бешкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку кипения густой массы. *Бутыр-бутыр бутка бешә.*

**БУТЫРЛАУ (бутырла-)** (Р.: булькать; И.: gurgle; Т.: fokur damak) *ҡ.*

Бутыр-бутыр иткән тауыш сығарыу. □ Булькать, клокотать. *Ҡаҙанда дөгө буткаһы бутырлай.*

**БУУА** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **быуа I.**

**2.** Балыҡ тотоу өсөн быуылған урын. □ Запруда для ловли рыб.

**БУУАУ** (Р.: запруда; И.: barrage; Т.: gölcük) *и. диал.*

Ваҡытлыса быуа. □ Запруда. *Бууау быуыу.*

**БУФ, буфф** (Р.: подражание звуку тяжёлого дыхания; И.: onomatopoeic word; Т.: off (ağir nefes alırken çıkan ses) *оҡш.*

Ауыр итеп һулыш сығарғандағы тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку тяжёлого дыхания *(животных). Ашап туйған һарыҡтар буф итеп ята.*

**БУФ-БУФ, буф та буф** (Р.: подражание многократным звукам тяжёлого дыхания; И.: onomatopoeic word; Т.: off (ağir nefes alırken çıkan ses) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат буф иткән тауышты белдергән һүҙ. □ *Многокр. от* **буф** *(подражание многократным звукам тяжёлого дыхания). Һыйырҙар буф-буф килеп көтөүҙән ҡайта.*

**БУФЕР I** [рус. < ингл. *buffer* ] (Р.: буфер; И.: buffer; Т.: tampon) *и.*

Төкөлөү, бәрелеү көсөн йомшарта торған ҡулайлама. □ Буфер. *Вагон буферы.* ■ *Тауар поезы ауыр итеп буферҙарын буферға бәреп ҡуҙғалды.* Б. Дим.

**БУФЕР II** [рус. < ингл. *buffer*] (Р.: буфер; И.: buffer; Т.: arabellek) *и.*

Компьютерҙа һәм иҫәпләү машиналары хәтеренең мәғлүмәтте ваҡытлыса һаҡлау бүлеге. □ Буфер. *Алмашыу буферы. Һүрәтләнеш буферы. Буфер хәтере. Буфер программаһы. Буфер өҙөклөгө. Буфер бите.*

**БУФЕР ДӘҮЛӘТ** (Р.: буферное государство; И.: buffer state; Т.: tampon devlet) *и.*

Ике дошман яҡтың бәрелешен кәртәләп, уртала ятҡан дәүләт. □ Буферное государство.

**БУФЕТ** [рус. < фр. *buffet* ] (Р.: буфет; И.: buffet; Т.: büfe) *и.*

**1.** Һауыт-һаба, эсемлек ҡуя торған шкаф. □ Буфет *(шкаф для хранения посуды, напитков).* /Буфетный.

**2.** Эсемлек, ваҡ-төйәк ашамлыҡ һата торған урын. □ Буфет *(стол или стойка для продажи закусок и напитков). Театр буфеты.*

**3.** Йәмәғәт урындарында ҡапҡылап сыға торған урын. □ Буфет *(небольшая закусочная при общественных учреждениях). Буфетка инеү.*

**БУФЕТСЫ** (Р.: буфетчик; И.: bartender; Т.: büfeci) *и.*

Буфетта эшләгән кеше. □ Буфетчик, буфетчица.

**БУФКА** [рус. *пуговка*] *и. диал. ҡар.* **төймә**. *Пинжәк буфкаһы.*

**БУФЫЛДАУ (буфылда-)** (Р.: тяжело дышать; И.: breathe heavily; Т.: ağır nefes almak) *ҡ.*

Буф-буф итеү. □ Тяжело дышать *(чаще о животных). Буфылдығы сығыу.*

**БУХАНКА** [рус.] (Р.: буханка; И.: loaves; Т.: somun) *и.*

Бешкән бөтөн икмәк. □ Буханка. *Бер буханка икмәк. Буханкалы икмәк.*

**БУХГАЛТЕР** [рус.< нем. *Buchhalter*] (Р.: бухгалтер; И.: accountant; Т.: muhasebeci) *и.*

Бухгалтерия (1) буйынса белгес. □ Бухгалтер. / Бухгалтерский. *Бухгалтер эше.*

**БУХГАЛТЕРИЯ** [рус.< нем. *Buchhalter* < *Buch* 'китап' + *halter* 'тотоусы'] (Р.: бухгалтерия; И.: accounting office; Т.: muhasebe bürosu) *и.*

**1.** Хужалыҡ эштәренә етештерелгән нәмә йәки аҡса иҫәбенә һалып хисап алып барыу теорияһы һәм практикаһы; иҫәп эше. □ Бухгалтерия *(теория и практика ведения учёта хозяйственно-финансовой деятельности).* / Бухгалтерский.

**2.** Хужалыҡ һәм ойошманың иҫәп бүлеге. □ Бухгалтерия *(структурное подразделение организаций). Ойошма бухгалтерияһы. Бухгалтерия бүлмәһе.*

**БУХГАЛТЕРЛЫҠ** (Р.: бухгалтерский; И.: bookkeeping; Т.: muhasebecilik) *с.*

Бухгалтерия менән бәйле. □ Бухгалтерский. *Бухгалтерлыҡ вазифаһы. Бухгалтерлыҡ курстары. Бухгалтерлыҡ эше. Бухгалтерлыҡ отчёты. Бухгалтерлыҡ балансы.*

**БУХТА** [рус. < нем. *Bucht* ] (Р.: бухта; И.: cove; Т.: körfez) *и.*

Ел-дауылдан ышыҡ диңгеҙ ҡултығы. □ Бухта. *Карап бухтаға инә.*

**БУХЫЙ** (Р.: рахитик; И.: person affected with rickets; Т.: raşitik) *и. диал.*

**1.** Рахит менән ауырыусы. □ Рахитик.

**2.** Йыуантыҡ, тулы тәнле бәпес. □ Бутуз *(о младенце). Эй, бухыйымды, кил әле бында.*

**БУХЫЛДАҠ (бухылдағы)** (Р.: хрипун; И.: one who wheezes; Т.: hırıltı ile söyleyen) *и. диал.*

Ҡарлыҡҡан тауышлы кеше. □ Хрипун.

**БУХЫЛДАУ (бухылда-)** (Р.: тяжело дышать; И.: breathe heavily; Т.: ağır nefes almak) *и. диал.*

Ауыр тын алыу. □ Тяжело дышать. *Бухылдап килеп инде.*

**БУҺҠЫН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ҡәбиләһе аймағы. □ Бускун *(название родового подразделения башкир племени усерган). Буһҡын аймағы башҡорто.*

**БУШ I** [дөйөм төрки *бош. бос* 'буш, бушаҡ'] (Р.: пустой; И.: empty; Т.: boş) *с.*

**1.** Эсендә бер нәмә лә йәки бер кем дә булмаған. □ Пустой, порожний. *Буш күнәк. Буш һарай. Буш һандыҡ. Буш сәңгелдәк.* ■ *Шатланмаҫлыҡмы ни, уның [Ғарифтың] сыҫкан йығылып төшһә, башы ярылырлыҡ буш бураһына йөҙ бот иген керҙе лә баһа!* Б. Бикбай. *Көршәк тулы булһа, ныҡлығын ул оҙаҡ йылдар һаҡлай. Ә буш көршәк иһә тора-тора үҙ алдына сатнай.* М. Кәрим. *Рамаҙан, аҫҡа ҡарап, байтаҡ ваҡыт өндәшмәй торғас, күҙ сите менән генә хужаның буш еңенә һирпелде.* Ә. Хәкимов.

**2.** Кеше йәшәмәгән, кешеһе булмаған; кешеһеҙ; бер кем йәки бер ни ҙә биләп тормаған. □ Пустой, свободный, незанятый. *Буш йорт. Буш ауыл. Буш яландар.* ■ *Ике яр ҙа буш, тик ҡоштарҙың сырҡылдашҡан тауыштары ғына һиллекте боҙоп, донъя барлығын иҫкә төшөрә.* З. Ураҡсин. *Нисә йыл буш ҡырҙарҙа ыңғырашҡайны тик бер ҡылған.* К. Кинйәбулатова.

**3.** Бер нәмәһеҙ, өлөшһөҙ. □ Без ничего, просто так. ■ *Муйыл ишек төбөнә йыйылып киткән бала-сағаны ла буш ҡалдырманы. Йә ҡалас һындырып, баҙар икмәгенән берәр телем икмәк, йә берәр лампасый өләште.* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡыҙ — егетҡә:] Мине һыуҙан айырһаң, бәхеттән буш ҡалырһың, барынан ҡолаҡ ҡағырһың.* «Аҡбуҙат». *Әгәр ҙә аҡылыңды йыймай эшләй торған булһаң, беҙ быны һиңә буш ебәрмәбеҙ.* Ғ. Дәүләтшин. *[Һин] һүҙ аҡылай, шаян һүҙҙәр ыҫҡындырғылай башланың. Мин дә буш ҡуйманым. .. Яуап ҡайтара торҙом.* И. Насыри.

**4.** Эш, шөғөл менән мәшғүл түгел; эшһеҙ. □ Незанятый трудом, делом; свободный. *Буш кешеләр урамда йөрөй. Буш ваҡытымда йырҙар өйрәнәм.* ■ *[Дәүләтбай:] Бына хәҙергә бер эшем дә юҡ, бушмын. Тик ятҡансы, бер аҙ эшләп булмаҫмы икән, тигәйнем.* И. Көҫәпҡол. *[Рәхимә:] Һәр ваҡыт уҡып, нисек арымайһығыҙ? Мин һеҙҙең буш торғанығыҙҙы һис бер күргәнем юҡ.* Ғ. Хәйри. *[Хисам] балыҡҡа беҙҙе эйәртеп алып бара. балыҡ булмаһа ла буш ҡалдырмай: ау, нәрәтәләрен яр башына сығарып, киптерергә йәйеп бөтә лә, беҙҙе ҡарауылларға ҡушып, үҙе һыу буйындағы яланда бесән сабырға тотона.* М. Тажи.

**5.** Хәрәкәт ирке сикләнмәгән, ни менәндер беркетелмәгән. □ Свободный. ■ *Һауаларҙан килә ике ҡош, береһе бәйле, береһе буш.* Халыҡ йырынан. *Алға эйелеп килеп, аттың арҡаһына еңел генә ҡамсы төшөрөп, теҙгенен буш ҡуйҙым.* Д. Юлтый.

**6.** *Низән* дә булһа ҡотҡарылған, азат, бер нәмәне биләмәгән. □ Незанятый; свободный. ■ *Бында барыбыҙҙы ла һөйләп тораһы юҡ. Быңдай мөнтөктәрҙән берегеҙ ҙә буш түгелһегеҙ.* Ғ. Дәүләтшин. *Мин хәҙер бөтә хыялдан буш.* С. Агиш.

**7.** Хаҡ түләтелмәгән; түләүһеҙ. □ Бесплатный, даровой, дармовой, безвозмездный. *Буш хеҙмәт. Буш малға өмөт итеү. Фатирҙы буш алып булмай. Дауаланыу буш.* ■ *[Күлдәктәр] эм-м, буш инде, йәғни, үҙебеҙҙең кооператив магазины бит, буш тип әйтерлек арзан һата.* Б. Бикбай. *Мин үҙем ҡамыр баҫырға биш һум биреп өйрәнгән булһам да, Мөжәһитҡә буш өйрәтмәксе булдым.* Т. Йәнәби. *Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә көн бөткән. Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған.* З. Биишева. *[Ҡарыя — Рәхмәйгә:] Бушһың атаһы үлгән ул, ашаған хаҡыңа түләп кит.* К. Кинйәбулатова. *Түләмәй, бушҡа эшләтә тиһеңме? Ә хеҙмәт бөтөнләй буш төшә инде уға.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Юҡ хөкөмөндәге, юҡ тип әйтерлек, әһәмиәте, баһаһы юҡ тип әйтерлек. □ Пустяковый, даровой, дармовой. ■ *Мейес алдына тәгәрләп төшөп, өҫтәре инде аҡһыл көл менән ҡапланып, һүрелә башлаған ҡуҙҙарға текәлде. Бына ул күмер тотош һүрелеп бөтөп, буш көл генә булып ҡаласаҡ. Ә ҡасан*

*ғына әле ул мейес эсендә, күмәк өйкөм араһында, баҙылдап яна ине!* Б. Бикбай.

**9.** Иғтибарға алырлыҡ булмаған эш, хәл, һүҙ, хәбәр. □ Пустое, пустяк. *Буштьы һөйләп йөрөмә.* ■ *[Муйылбикә:] Ҡуйсы, буш менән булмағыҙ, карт кешене мәшәкәтләп,* – *тиһә лә, үҙе ҡыҙыҡһынып көлә ине.* Һ. Дәүләтшина. *«Әһә, һиҙҙек эшеңде, һин тиктәҫкә йөрөмәйһең бит, егет»,* – *тинеләр иптәштәр. «Ҡуйығыҙ әле, буштьы һөйләмәгеҙ, ауылдаш килгәйне, шуның янына барып ултырғайным».* – *тигән булдым.* Т. Йәнәби.

**10.** Бер ниндәй маҡсатһыҙ, сәбәпһеҙ, былай ғына; тик. □ Просто так, без причины. ■ *Ахыр сиктә сығып кастым, юғиһә буш торғанда тукмалыр инем шул.* Т. Хәйбуллин. *[Хөрмәт:] «Ниңә көләһең?» «Буш!»* – *тине Исмәғил, ауыҙы колағына еткәнсе йылмайып.* Яр. Вәлиев.

**11.** *күсм.* Төшөнкө рухлы, уйлау, фекерләүгә һәләтһеҙ. □ Пустой (*о душе, сердце*). ■ *Ямғыр һуңындағы тын һауа кеүек хәҙер минең баш тын, күңел буш, йөрәк талғын тибә.* Д. Юлтый. *Ләкин шиғырҙарым һаман ғәйеп, күңелем дә инде буш һымаҡ.* М. Кәрим.

**12.** *күсм.* Етди булмаған, рухи яҡтан сикләнгән (*кешегә ҡарата*). □ Пустой, бессодержательный (*о человеке*). *Буш кешегә ышанып йөрөмә.*

**13.** *күсм.* Нигеҙендә дөрөҫлөк булмаған, нигеҙһеҙ; файҙаһыҙ, мәғәнәһеҙ, эстәлеге юҡ. □ Ошибочный, неправильный, ложный; пустой, безрезультатный, напрасный, бесплодный, тщетный. *Буш вәғәҙәләр бирҙе лә ҡасты. Буш мәҡәлә яҙып ултырма. Буш өмөттәргә бирелмә.* ■ *Ә буш күңел асыуҙарға, мәғәнәһеҙ урам тапауҙарға, юк-бар уйындарға, буш ыҙғыштарға кеше күпме ваҡытын, көсөн әрәм итә.* Р. Солтангәрәев. *«Нәгимдең һүҙенә ышанһаң, әллә ысын, әллә буш».* – *тип һүҙен осланы [әсәйем].* Н. Мусин. *Өфө тигәндәре ошо икән. «Аҙашырлыҡ, яман, таш ҡала»,* – .. *тип һөйләүҙәре ерле буш икән.* Ғ. Амантай.

♦ **Буш боғаҙ** юҡты-барҙы күп һөйләргә, шапырынырға яратҡан кешегә ҡарата әйтелә. □ Пустослов, пустомеля. **Буш итеү** насар итеү. □ Делать напрасно. *Бынан китеп буш итте ул.* **Буш итмәү** хаҡын түләмәй ҡалдырмау. □ Не обделить, не обойти *кого.* ■ *Был юлы ла буш итмәҫ, ҡоро ҡул менән ҡайтармаҫ уны [Юламанды] рәхимле диңгеҙе...* З. Биишева. **Буш ҡалыу** алданып, бер *нимәһеҙ* ҡалыу. □ Прозевать, остаться *ни с чем.* **Буш ҡул** *йәки* **буш ҡул менән** бер файҙаһыҙ, уңышһыҙ (йөрөү һ. б.). □ Понапрасну, впустую. *Буш ҡул менән ҡайтыу.* ■ *Шунан батшаның хеҙмәтселәре кейәү менән ҡыҙҙы эҙләнеләр-эҙләнеләр ҙә, таба алмағас, буш ҡул менән ҡайтып киттеләр.* Әкиәттән. **Буш ҡыуыҡ** бушҡа ғына әллә кем булып маҡтанып йөрөүсе. □ Хвастун-пустышка. **Буш тегеләй** кемгәлер асыуланып янағанда әйтелә. □ Слово, употребляемое при угрозе. **Буштьы бушҡа (юҡҡа) бушатыу (ауҙарыу)** файҙаһыҙ эш менән шөғөлләнеү. □ Бездельничать, ничем не заниматься. ■ *«Юҡты бушҡа бушатып ят инде»,* – *тип бошонып ҡуйҙы Яҡуп.* М. Кәрим. **Буштың атаһы үлгән** *ниҙәләр* хаҡ түләмәй генә алырға теләгән кешегә мыҫҡыл белдергәндә әйтелә. □ Бесплатно только птички поют; ничего бесплатного не бывает.

**БУШ II** *с. диал. ҡар.* **бушаҡ 1.** *Бауҙы буш ҡына итеп бәйләү.*

**БУШАҒАЙТЫУ (бушағайт-)** (Р.: ослаблять; И.: loosen; Т.: gevşetmek) *ҡ.*

Тығыҙ хәлдән бушаҡ хәлгә килтереү. □ Ослаблять (*что-л. туго завязанное, натянутое*). // Ослабление. *Бушағайта биреү. Билбауҙы бушағайтыу. Ҡайышты бушағайтыу.*

**БУШАЙТЫУ (бушайт-)** (Р.: ослаблять; И.: slacken off; Т.: boşaltmak) *ҡ.*

Тығыҙ хәлдән бушаҡ хәлгә килтереү. □ Ослаблять (*что-л. туго завязанное, натянутое*). Ослабевать, ослабнуть. *Бушайта төшөү.*

**БУШАЙЫУ (бушай-, бушая)** (Р.: ослабевать; И.: become looser; Т.: boşaltmak) *ҡ.*

**1.** Тығыҙ хәлдән бушаҡ хәлгә килеү. □ Ослабевать, ослабнуть. *Бушая төшөү.*

2. Киңәйеү, һуҙылыу *(аяҡ кейеменә ҡарата)*. □ Становиться свободным, разнашиваться *(об обуви)*. *Итек бушайып ҡалды.*

**БУШАҠ I** [дөйөм төрки *бош, бос* 'буш; бушаҡ'] (Р.: слабый; И.: lax; Т.: gevşek) *с.*

1. Тығыҙ түгел, ҡыҫтау түгел. □ Слабый, не тугой. *Бушаҡ булыу. Бейәләйҙе бушаҡ бәйләү. Аттың дилбегәһе бушаҡ.*

2. *күсм.* Кешегә, ауырлыҡҡа ҡаршы тора алмаған йомшаҡ холоҡло. □ Слабый, безвольный. *Уҡытыусы бушаҡ кеше ине, малайҙар уны тыңламанылар.*

3. *диал.* Ирекле, азат. □ Свободный.

**БУШАҠ II (бушағы)** *и. ҡар. диал.* **муйынсаҡ.**

**БУШАЛАҒАЙЫМҒА** (Р.: понапрасну; И.: in vain; Т.: boşuna) *р.*

Кәрәкһеҙгә, бушҡа, буштан-бушҡа. □ Понапрасну, попусту, зря, напрасно. *Бушалағайымға тауыш күтәреү.* ■ *[Фаҡиһа – балаларына:] Машинаны аслан бушалағайымға әйрәлтмәгеҙ, боҙоп ҡуйырһығыҙ.* Ж. Кейекбаев. *Бушалағайымға эшһеҙ һәлпәндәп йөрөмә.* Ф. Иҫәнғолов.

**БУШАН** *с. диал. ҡар.* **һәлкәү.**

**БУШАНЫУ (бушан-)** (Р.: освобождаться; И.: be relieved from; Т.: boşanmak) *ҡ.*

1. *Ниҙән дә* булһа ҡотолоу; бушау. □ Освобождаться, становиться свободным. *Вазифанан бушаныу.* ■ *Сыныйыр бығауҙан бушанып ҡалғас, Алпамыша бер килелеп ҡуйҙы, ти.* «Алпамыша». *[Ҡарағол:] Хәҙер күкрәгем ул ауыр ус утынан бушанды.* Д. Юлтый.

2. *диал.* Ауырҙағы баланан ҡотолоу. □ Освобождаться от бремени *(родить ребёнка)*. *Баланан бушанған әсә.* ■ *«Мине арбаға ултыртып алып ҡайт, мин ауырып киттем», – ти [әбей], бушанғанын әйтмәй, йәшерә.* «Алпамыша».

**БУШАТАН** (Р.: большое шило; И.: large awl; Т.: büyük biz) *и. диал.*

Ҙур беҙ. □ Большое шило. *Шул тартмала ғына ине бушатан, ҡайҙа булды икән?*

**БУШАТҠЫС** (Р.: разгрузчик; И.: unloading machine; Т.: boşaltıcı) *и.*

*Ниҙелер* бушата торған машина. □ Разгрузчик *(машина)*. *Вагон бушатҡыс. Бушатҡыслы машина.*

**БУШАТТЫРЫУ (бушаттыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бушатыу I.** *понуд. от* **бушатыу I.** *Малайҙарҙан бесән бушаттырыу.*

**БУШАТЫЛЫУ (бушатыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бушатыу I.** *страд. от* **бушатыу I.** *Утын бушатылып ҡуйылған. Эштән бушатылыу.*

**БУШАТЫНЫУ (бушатын-)** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **бушатыу I, 1, 2.** *возвр. от* **бушатыу I, 1, 2.**

**БУШАТЫУ I (бушат-)** (Р.: разгружать; И.: unload; empty; Т.: boşaltmak) *ҡ.*

1. Эсен йәки өҫтөн буш ҡалдырыу, бушҡа әйләндереү. □ Разгружать, выгружать, сгружать. // Разгрузка, выгрузка. *Биҙрәне бушатыу. Арбаны бушатыу.*

2. Йөктәге нәмәне алыу; *ниҙелер* бер ерҙән икенсе ергә ауҙарыу. □ Разгружать, выгружать. // Разгрузка, выгрузка. *Һөттө табаҡҡа бушатыу. Утынды кәртәгә бушатыу. Бесәнде бүртлеккә бушатыу. Тоҡтағы емде йәшниккә бушатыу.* ■ *Нығытма ҡороуға сығарылған халыҡ иртә таңдан ҡырмыҫҡа кеүек ҡымыйый башлай: берәүҙәр ҡатҡан ерҙе кәйлә менән аҡтара, таш бушата, икенселәр балта туҡылдата.* З. Ураҡсин. *Егеттәр Төлкөсура менән Миңлегөлгә күмерҙе күнәктәргә тултырып, түбәлек аҫтына тиҙерәк бушатырға ярҙам итә башланы.* Н. Мусин.

3. Китеп, буш ҡалдырыу. □ Освобождать. // Освобождение. *Йортто бушатыу.*

4. Эш-шөғөлдән арындырыу, буш итеү. □ Овобождать. *Кәрәкте бушатығыҙ, үҙемә кәрәк.*

5. Эш урынынан алыу; төшөрөү, сығарыу. □ Освобождать *(от должности)*, снимать *(с работы)*. *Эштән бушатыу.*

♦ **Күңелде** *(йәки* **эсте) бушатыу** ҡайғыны баҫып, күңелде еңеләйтеү. □ Отвести душу, излить душу; поделиться горем. *Йырлап эсте бушатыу.*

**БУШАТЫУ II (бушат-)** (Р.: ослаблять; И.: slacken; Т.: gevşetmek) *ҡ.*

Тығыҙ, ҡыҫыҡ хәлдән бушаҡ хәлгә килтереү. □ Ослаблять, отпускать. *Ҡайышты бушатыу. Аттың теҙгенен бушатыу.*

♦ **Теҙгенде бушатыу** талапты, ҡыҫымды кәметеү. □ Ослабить требования, контроль. *букв.* Отпустить поводья.

**БУШАТЫШЫУ (бушатыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бушатыу I, 1, 2.** *взаимн. от* **бушатыу I, 1, 2.** *Бесән бушатышыу. Утын бушатышыу. Ағас бушатышыу.* ■ *[Миңлегөл] атаһы менән ағаһы күмер тейәп урмандан ҡайтып төшкәс, уларға күмерҙе түбәлек аҫтына бушатышып йөрөп, был хаҡта онотоп торғайны, кискә табан Уйылдандың һүҙҙәре тағы иҫенә төштө.* Н. Мусин.

**БУШАУ I (буша-)** (Р.: разгружаться; И.: drain; Т.: boşaltılmak) *ҡ.*

**1.** Эсе йәки өҫтө буш ҡалыу; йөкһөҙ ҡалыу. □ Разгружаться, опорожняться. // Разгрузка. *Бушаған һауыт. Һандыҡ бушаны. Биҙрә бушаны.*

**2.** Йөгө алынып, йөкһөҙ ҡалыу. □ Разгружаться. *Бушаған вагон.*

**3.** Биләүсеһе китеп, буш ҡалыу. □ Опустеть, обезлюдеть. *Бушаған бүлмә. Бушаған ауыл. Эш урыны бушаны.*

**4.** Эш-шөғөлдән *йәки* берәй нәмәнән арыныу; буш булыу. □ Освобождаться, становиться свободным, никем не занятым. *Хужалыҡ эштәренән бушамау. Ҡунаҡтарҙан бушамау.* ■ *Урман ҡырҡыу ваҡытлыса туҡтатылып торғанлыҡтан, бушаған кешеләр күп кенә ине.* Н. Мусин.

♦ **Күңел (эс) бушау** тынғыһыҙлаған уйхистәрҙән арынып, тынысланыу. □ Успокоиться, избавившись от тревожных мыслей. ■ *Илап, күңеле бушағас, ул [Миңлегөл] аңына килә башлағайны.* Н. Мусин.

**БУШАУ II (буша-)** (Р.: ослабевать; И.: slack off; Т.: gevşemek) *ҡ.*

**1.** Тығыҙ, ҡыҫыҡ хәлдән бушаҡ хәлгә килеү. □ Ослабевать, слабеть. *Билбау бушаған. Ҡайыш бушаған. Сөй бушаған.* ■ *Бөтәбеҙ ҙә машинанан төштөк. Беҙ ҡуйған тәгәрмәстең тыны тамам бушаған ине, алмаш-тилмәш тын тултырҙыҡ.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Көс, ҡеүәттән яҙыу; йомшау, хәлһеҙләнеү. □ Слабеть, ослабевать, лишаться силы. *Быуын бушау.* ■ *Нәфисә хәлһеҙләнде. Аяҡ быуындары бушап, тәне дерелдәй башланы.* Я. Хамматов.

♦ **Билғау (билбау) аҫты бушау** асығыу. □ Проголодаться. *букв.* Ослабеть под поясом. ■ *Билбау аҫты бушағас, ҡарап тороу юҡ, картуф та тук эсәк һымаҡ тойола.* Б. Бикбай. **Ҡурйын аҫты бушау** *ҡар.* **билғау аҫты бушау.**

**БУШ БИҘРӘ** (Р.: пустое ведро; И.: empty bucket; Т.: boş kova) *и. миф.*

Юл уңмаясағын белдереүсе буш һауыт. □ Символ пустоты, неудачи; пустое ведро, предвещающее неудачную дорогу. ■ *Кеше өйҙән сыҡҡас, уның артынан буш биҙрә тоторға, иҙән һеперергә ярамай, юлы уңмай.* Экспедиция материалдарынан.

**БУШ КӨН** (Р.: суббота; И.: Saturday; Т.: Cumartesi) *и. миф.*

Мөһим эштәр башлау өсөн уңышһыҙ көн; ҡоро көн; шәмбе. □ Неудачный день для важных начинаний; суббота. *Буш көндө эш башларға ярамай.*

**БУШҠА** (Р.: попусту; И.: to no purpose; Т.: boşuna) *р.*

**1.** Һис бер файҙаһыҙға, кәрәкһеҙгә; юҡҡа. □ Попусту, впустую, понапрасну. *Бушҡа аҡса түгеү. Бушҡа ваҡыт әрәм итеү. Бушҡа тырышыу.* ■ *Үҙ һүҙенең бушҡа китмәүенә ҡыуанған ҡыҙ Төлкөсура яғына күҙ һирпеп алды, йәлп итеп әйләнде лә арҡыс-торҡос торған арбалар, аттар араһынан үҙ йомошо менән ҡайҙалыр йүгерҙе.* Н. Мусин. *Бына тағы бер көндө һәләк иттем, һиҙмәй ҡалдым бушҡа үткәнен.* Р. Ғарипов. *Уҡыу менән бик тиҙ үтер был оҙон ҡыш, уйнап-көлөп бушҡа йөрөмә, балам, тырыш.* М. Ғафури. *Ғомүмән, кәңәш шул: башҡа эшең булмаһа, көсөңдө бушҡа тукмә.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ. □ Беспричинно, беспочвенно. *Бушҡа ҡайғырыу.*

**3.** Һис бер түләүһеҙ; бушлай. □ Бесплатно, даром, безвозмездно. *Бушҡа дауалау. Бушҡа эшләү.*

♦ **Бушҡа китеү (сығыу)** әрәм булыу, юҡҡа сығыу. □ Оказаться, быть напрасным, пустым.

**БУШҠА САЛ** (Р.: многослойный плот; И.: multilayer raft; Т.: bir kaç katlı sal) *и. диал.*

Бер нисә ҡатлы һал. □ Многослойный плот.

**БУШҠОРҒА** (Р.: зря; И.: for nothing; Т.: boşuna) *р. диал.*

Бушҡа, алъюҫыҡҡа. □ Зря, попусту. *Бушҡорға илап ултырма.*

**БУШЛАЙ** (Р.: бесплатно; И.: free of charge; Т.: bedava) *р.*

**1.** Бер ниндәй хаҡһыҙ, буш көйө. □ Бесплатно, даром, безвозмездно. *Бушлай таратыу. Бушлай килгән тауар.*

**2.** Бер нәмәһеҙ көйө, буш ҡул менән. □ Без ничего, с пустыми руками. *Бушлай ғына килеү.*

**3.** Файҙалы эш башҡармай, буш көйө. □ Безрезультатно, напрасно, впустую; вхолостую (работать – *о механизмах*). *Моторҙы бушлай әйләндереп һынау.*

**БУШЛАТ** [рус. < төрки] (Р.: бушлат; И.: pea jacket; Т.: kısa gemici paltosu) *и.*

Буҫтау тышлы матрос курткаһы. □ Бушлат. *Матрос бушлаты.*

**БУШЛЫҠ (бушлығы)** (Р.: пространство; И.: space; Т.: boşluk) *и.*

**1.** Бер нәмәһе лә булмаған, буш киң арауыҡ. □ Пространство. *Ҡырҙар бушлығы. Икһеҙ-сикһеҙ бушлыҡ.* ■ *Бөтәһе лә, бөтәһе лә емерелде, уның [Миңлегөлдөң] алдына бына ошо ҡабат ҡутәрелмәҫ төн пәрҙәһе ҡоролдо, бер аҙым атланыулы, бушлыҡ йәһәннәменә осоп китер кеүек.* Н. Мусин.

**2.** Тотош материал эсендәге буш, ҡыуыш урын. □ Пустота. *Мәмерйә бушлығы.*

**3.** *тех., физ.* Һауаһыҙ, буш арауыҡ. □ Пустота, вакуум. *Пробиркалағы бушлыҡ.*

**4.** *күсм.* Кешеләр йәки яҡын тигән берәйһе менән аралашмау, яңғыҙлыҡ. □ Пустота. *Күңелдә ниндәйҙер бушлыҡ һиҙеү.*

**5.** *күсм.* Күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәндәге хәл, ҡыҙыҡһыныу, ынтылыштарҙың булмауы. □ Состояние потери или отсутствия *кого-л., чего-л.*, отсутствие интересов. ■ *[Миңлегөл] шатлыҡлы осоноп ҡуя, шунан күңелен ҡапыл төпһөҙ ҡара бушлыҡ биләп ала, һәм донъя түңкәрелеп киткәндәй тойола ине.* Н. Мусин.

**БУШ МЕЙЕС** (Р.: пустая печь; И.: empty stove; Т.: boş ocak) *и. миф.*

Эсендә бер нәмәһе лә булмаған мейес; байлыҡты, муллыҡты ҡасырыусы, тип һанала. □ Пустая печь, печь без дров; считается, что приводит к уходу достатка, изобилия. ■ *Мейес буш торорға тейеш түгел. Икмәк бешереп алғас, мейескә әҙерәк утын һалып ҡуяһың.* Экспедиция материалдарынан.

**БУШ ӨЙ** (Р.: пустующий дом; И.; uninhabited house; Т.: boş ev) *и. миф.*

Төрлө эруахтар эйәләгән кеше йәшәмәгән өй. □ Пустующий дом; место обитания духов. ■ *Буш өйгә тамаҡ ҡырып, иҫәнләшеп инергә кәрәк.* Башҡорт мифологияһынан.

**БУШТАН** (Р.: необоснованно; И.: groundlessly; Т.: sebepsiz) *р.*

**1.** *һир.* Һис бер сәбәпһеҙ; буштан-буш. □ Необоснованно, без основания. *Буштан яла яғыу.*

**2.** Көс түкмәй; анһат. □ Нетрудно, легко, без затруднений. *Аҡса буштан килмәй шул.*

**БУШТАН-БУШҠА** (Р.: бесплатно; И.: gratis; Т.: bedava) *р.*

**1.** Һис бер хаҡ түләүһеҙ; бушлай. □ Бесплатно, даром. *Буштан-буш алыу. Ауыл халҡын буштан-буш эшләтеү.*

**2.** Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ; тоҡтомалға. □ Понапрасну, зря, без основания, необоснованно, ни с того ни с сего. *Буштан-буш әрләү. Буштан-буш тауышланыу. Аҡса буштан-бушҡа китте.*

**БУШ ҺҮҘ** (Р.: пустословие; И.: verbiage; Т.: laf kalabalığı) *и.*

Алдаҡ, ғәйбәт һүҙ. □ Вздор, ложь, клевета.

**БУШЫМ** *и. диал. ҡар.* **бышым.**

**БУШЫМЛЫ** *диал. кар.* **бышымлы.**

**БУЯК I (буяғы)** *и. кар.* **буяу II.** *Кыҙыл буяк. Һары буякка маныу. Иҙәнде көрән буяк менән буяу. Йөндө төрлө төҫтәге буяктар менән буяу.*

**БУЯК II (буяғы)** *и. диал. кар.* **бөрләтәү.**

**БУЯЛЫУ (буял-)** *к.*

**1.** *төш. кар.* **буяу I.** *страд. от* **буяу I.** ■ *Күк көмбәҙе Сыуакай тауы яғында акһыл зәңгәр төҫкә буяла.* Н. Мусин. *Хужа уң кулы менән аксаны алды, һул кулы менән алтын төҫөндәге буяуға буялған ташбаканы кәштә өҫтөнә, Йәгләмүндең алдына һалды.* Н. Игеҙйәнова.

**2.** Тейеп бысрау; мансылыу; тап, эҙ калыу. □ Мазаться, пачкаться. *Бысракка буялыу. Салбарына бысрак буялған. Балға буялыу. Кәләмгә буялыу.* ■ *Алма тирһәң, тир алдыңа, алма тиргән кулкайың буялһын.* Халык йырынан.

**БУЯНЫП-ЯҺАНЫП** (Р.: нарядившись; И.: smarten oneself up; Т.: süslenerek) *р.*

Буянып, биҙәнеп, матурланып. □ Нарядившись, наряжаясь. *Буянып-яһанып кунакка барыу.*

**БУЯНЫУ (буян-)** (Р.: краситься; И.: make up; Т.: boyanmak) *к.*

Биткә, күҙгә һ. б. кершән, буяк яғыу; биҙәнеү. □ Краситься, подкрашиваться, гримироваться. *Кисәгә буянып барыу.*

**БУЯТЫУ (буят-)** *к. йөкм. кар.* **буяу I.** *понуд. от* **буяу I.** *Сәс буятыу. Кыҙымдан иҙән буяттым.* ■ *[Хөрмәт Солтан улы] ауылында ҙур төҙөкләндереү эштәрен йәйелдереп ебәрҙе .. барса ихаталарҙы кәртәләтте, буятты.* «Торатау», 13 август 2009. *[Рәшиҙә:] Һынды турайттым. сал төшә башлаған сәсте буяттым, .. ең һыҙғаныл эшкә тотондом.* М. Буракаева.

**БУЯУ I (буя-)** (Р.: красить; И.: paint, colour; Т.: boyamak) *к.*

**1.** Буяу менән каплау; буякка маныу. □ Красить, окрашивать. // Покраска, окраска, крашение. *Өй башын буяу. Солан иҙәнен буяу. Тукыманы буяу. Сәс буяу.* ■ *Саф алтынды нәжескә буяу менән, нәжес китәр, алтындың заты китмәҫ.* М. Акмулла.

**2.** Бысрак менән каплау; бысратыу. □ Пачкать, грязнить, марать. *Бысракка буяу.* ■ *Кыҙҙар ҙа, күмер саңы ултырған арба төбөндәге кабыкка устарын буяп, егеттәрҙең битенә ынтылды.* Н. Мусин. ● *Яман әҙәм ил буяр.* Мәкәл.

**3.** *диал.* Яғыу, һөртөү. □ Мазать. *Май буяу.*

♦ **Күҙ буяу** насарлыкты йәшереп, тыштан якшы күрһәтеү. □ Втирать очки, обманывать. *Күҙ буяу өсөн генә эшләй.* ■ *Күҙ буяу өсөн генә башкарылған эш менән булышырға ярамай икәнен аңлап эш башланык.* «Киске Өфө», 20 май 2011.

**БУЯУ II** (Р.: краска; И.: paint; Т.: boya) *и.*

**1.** *Бер нәмәгә ниндәйҙер* төҫ бирә торған матдә; буяк. □ Краска. *Тәбиғи буяу. Сәс буяуы алыу. Буяу һатып алыу. Ак буяу. Кыҙыл буяу. Зәңгәр буяу. Буяуы уңыу. Буяуы һеңеү.* ■ *Алтындың өҫтө бакырҙа ғына була торған йәшкелт күм-күк буяуға мансылды.* Я. Хамматов. *Томбойок та таждарын һары буяуға манған.* А. Игебаев. *Кайһы бер кешеләр тормошто төрлө биҙәктәрҙә күрә. Күңел талабы буйынса. бумаланы буяуға манып, күргәндәрен үҙ фәлсәфәһенән сығып, һүрәттәрендә сағылдыра.* «Башкортостан», 1 сентябрь 2010.

**2.** Төҫ, биҙәк. □ Краски, цвет, колорит. *Көҙгө буяуҙар.* ■ *Көҙ ағастарға төрлө төҫтәге буяуҙарын һипкән, һауа шундай саф, иртәнге һалкынлык бөтә тәнде рәхәт итеп кытыклай, тороп йүгерге килә.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Телмәрҙе, сәнғәт әҫәрен көсәйтә, байыта, биҙәй торған сара. □ Средство для выразительности речи. *Шағирҙың телмәре сағыу буяуҙарға мансылған.* ■ *Ғөмүмән, ыңғай образдарҙы идеаллаштырып, киреләрен тик кара буяуҙар менән генә һүрәтләү мәғрифәтселек әҙәбиәтенең характерлы һыҙаты булып тора.* Ә. Вилданов.

**БУЯУЛЫ** (Р.: крашеный; И.: painted; Т.: boyalı) *с.*

Буяу һөртөлгән, буялған. □ Выкрашенный, окрашенный, крашеный. *Буяулы иҙән. Буяулы ирендәр. Буяулы өҫтәл.* ■ *Их, Ғилман ағай, Ғилман ағай!.. – тине ул [Нәфисә] килештереп, күпереп кенә торған буяулы ирендәрен асыр-асмаҫ ҡына өндәшеп.* Д. Бүләков.

**БУЯУСЫ** (Р.: красильщик; И.: dyer; Т.: boyacı) *и.*

Буяу эше менән шөғөлләнгән эшсе. □ Красильщик. *Буяусы булып эшләү.* ■ *Буяусы эше нисек булһа ла рәссамға тартып тора, буяуҙарҙы оҫта итеп ҡуша белергә, стенаға яға, һыйпай-һылай белергә лә кәрәк.* З. Ураҡсин.

**БУЯУ ТАМЫР** (Р.: крап; И.: dyer's madder; Т.: kökboya bitkisi) *и. бот.*

Тамырында буяусы матдәһе булған күп йыллыҡ үлән. □ Крап, красильный корень (лат. *Rubia tinctorum*). *Буяу тамыр үләне.*

**БУЯШЫУ (буяш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **буяу I, 1.** *взаимн. от* **буяу I, 1.** *Бөгөн өй буяшырға кил.* ■ *Ҡоромға буялмаған кеше юҡ, ғауғаны башлаған Уйылдан менән Миңлеғолдоң биттәре бигерәк ныҡ ҡарайған, күрәһең, бигерәк ихлас буяшҡандар.* Н. Мусин. *Ҡором менән бит буяшыу – ҡырағайлыҡ! Ҡором күҙгә төшһә – зарарлы!* З. Биишева.

**БҮГЕҮ (бүк-)** (Р.: приедаться; И.: be satiated (with); Т.: bıkmak) *ҡ.*

**1.** Күп ашап биҙеү. □ Наедаться до отвращения; пресыщаться, переедать, приедаться. *Кәбеҫтә ашынан бүгеү. Ҡарабойҙай бутҡаһынан бүгеү. Ҡоро сәйҙән бүгеү. Бүккәнсе ашау.* ■ *Был аштан бөтөнләй бүкте ул [Фатима], еҫе танауға бәрелеү менән үк күңеле болғана башланы.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Ныҡ ялҡыу. □ Приедаться, надоедать. *Ҡунаҡтан бүгеү. Татлы һүҙҙән бүгеү.* ■ *Буйы – иҫке бүкән кеүек, йөҙө – шайтан үпкән кеүек, ә күҙҙәре шундай моңһоҙ, бар донъянан бүккән кеүек.* Р. Назаров. *Ҡалған ғүмере уның һары майҙай етеҙ булды, ул ғүмерҙән Фәүзиә эргәһендәгеләр ҙә бүгеп бөттө, үҙе лә туйҙы.* Т. Ғарипова.

**БҮГӘЙ** *и. диал. ҡар.* **боға.** ■ *[Сәмәрә:] Был .. колхоз бүгәйе һиңә тағы нимәгә кәрәк булғандыр?* Т. Ғарипова.

**БҮГӘК I (бүгәге)** *и. диал. ҡар.* **бүгән I.** *Бүгәк үҫеп сығыу.*

**БҮГӘК II (бүгәге)** *и. диал. ҡар.* **сүбәк I.** *Етен бүгәге. Киндер бүгәге. Бүгәк иләү.*

**БҮГӘЛӘ** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бүгәлә мамығы оса.*

**БҮГӘН I** (Р.: короткий седой волос; И.: thickened short grey hair; Т.: kısa beyaz saç) *и.*

Төптән ағарып, йыуан булып сыҡҡан ҡыҫҡа сәс. □ Утолщённый короткий седой волос. ■ *[Һәйыбикә:] Шулайҙыр, бына инде, һунар ваҡытында эттең этенең дә өйҙә торғоһо килмәй бит. Килен, башҡа эшең булмаһа, башым бик ҡысытып тора, ошо еремде генә ҡара әле, әллә бүгән сәсе бар инде?* М. Буранғолов.

**БҮГӘН II** *и. диал. ҡар.* **күгән I.** *Ишек бүгәне.*

**БҮГӘТ** *и. диал. ҡар.* **быуа I.** *Бүгәттә балыҡ тотоу.*

**БҮГӘҮ I (бүгә-)** (Р.: преграждать; И.: bar; Т.: engellemek) *ҡ. һир.*

Үтә алмаҫлыҡ итеп тотҡарлау, кәртәләү. □ Преграждать, загораживать, ставить преграду ■ *Беҙ уларҙың юлын бүгәнек. Бер ҡайҙа ла бара алманылар.* И. Көҫәпҡол.

**БҮГӘҮ II** (Р.: преграда; И.: bar; Т.: engel) *и. һир.*

Үтә алмаҫлыҡ итеп ҡоролған тотҡарлыҡ, кәртә. □ Преграда, препятствие, барьер. *Бүгәү һалыу.* ■ *Ағас йығып, юл ашаһына ҡапыл ғына бүгәүҙәр һалып өсөн урын ҡаралды.* Ғ. Ибраһимов.

**БҮҘ** [дөйөм төрки *бөз* 'тупаҫ мамыҡ туҡыма'] (Р.: бязь; И.: unbleached calico; Т.: ağartılmamış basma) *и. тук.*

Эре итеп һуғылған аҡ мамыҡ туҡыма. □ Бязь. *Аҡ бүҙ. Бүҙ күлдәк.* ■ *Баҙарҙарға барһаң, аҡ бүҙ алһаң.* Халыҡ йырынан. *Ул [Гөлйөҙөм], өҫтөндәге ҡалын һарғылт ҡаты бүҙ күлдәгенең итәген әйләндереп, күҙен, танауын һөртте.* Һ. Дәүләтшина. ● *Аҡ мамыҡтан бүҙ сығыр, аҡыллынан һүҙ сығыр.* Мәҡәл.

*Бохар даны менән бүҙ үтер, ата даны менән ҡыҙ үтер.* Мәҡәл.

**БҮҘӘНӘ I** [дөйөм төрки *бодәнә, бүдинә* ‘бытбылдыҡ’] (Р.: перепел; И.: quail; Т.: bayağı bıldırcın) *и. зоол.*

**1.** Һорғолт сыбар төҫлө, оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло, күгәрсен ҙурлығындағы ялан ҡошо; бытбылдыҡ. □ Перепел. / Перепелиный (лат. *Coturnix coturnix*). *Ата бүҙәнә. Инә бүҙәнә. Бүҙәнә ояһы. Бүҙәнә йомортҡаһы.* ■ *Ара-тирә «бытбылдыҡ, бытбылдыҡ» тип бүҙәнә ҡысҡырғаны ишетелә.* Ә. Вәли. *Ялан ғына ере, ай, ҡылғанлыҡ, бүҙәнәләр йүгерә төбөндә.* Халыҡ йырынан. *Аҡлан ерҙәге сабылған бесән араһынан бүҙәнә, тартай тауыштары килә.* З. Биишева. *[Бүҙәнә] ҡоро болондарҙа, яландарҙа, иген баҫыуҙарында йәшәй.* Э. Ишбирҙин. *Юл ыңғайы беҙгә ояһы-ояһы менән бүҙәнәләр тап була торҙо.* Д. Юлтый. *Эйе, таяҡ ике башлы шул ул, тип уйлай Ирназар. Юҡҡамы ни, бер йыл бүҙәнә һимерһә, икенсе йыл тартай һимерер, тимәгәндәр.* Ә. Хәкимов.

**2.** *миф.* Ҡатын-ҡыҙ түллелеген һынландырыусы ҡош. □ Перепелка, символизирующая женскую плодовитость. ■ *Бүҙәнәләй түлле бул.* Халыҡ ижадынан.

♦ **Бүҙәнәнән май ал, ябалаҡтан йөн ал** һарыҡтың йөнөн ҡырҡып бөткәс әйтелә торған теләк. □ Бери у перепела жир, у совы – шерсть *(пожелание, произносимое после стрижки овец).*

**БҮҘӘНӘ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ҡәбиләһе аймағы. □ Бузэнэ *(название родового подразделения башкир племени юрматы). Бүҙәнә аймағы башҡорто.*

**БҮҘӘНӘ ҠАРСЫҒАҺЫ** (Р.: ястреб-перепелятник; И.: sparrow hawk; Т.: bayağı atmaca) *и. зоол.*

Урманда йәшәүсе ваҡ хайуандар һәм ҡоштар менән туҡланыусы күгәрсен ҙурлығындағы ултыраҡ ҡош. □ Ястреб-перепелятник (лат. *Accipiter nisus*). ■ *Ҡор ҡарсығаһынан бәләкәй, ваҡ ҡарсығанан кәүҙәһенең аҫ яғы күрән һыҙыҡлы булыуы менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

**БҮҘӘНӘ ҠУҘАҒЫ** (Р.: сурепица сжатая; И.: winter cress; Т.: tere) *и. бот.*

Өҫкә табан тармаҡланыусы тура һабаҡлы, асыҡ һары сәскә атыусы ике йыллыҡ үлән; тиле шалҡан. □ Сурепица сжатая (сурепка, сурепица) (лат. *Barbarea stricta*). *Бүҙәнә ҡуҙағы сәскә атҡан.*

**БҮҘӘНӘ ТАРЫҺЫ** (Р.: росичка; И.: sundew; Т.: güneş gülü) *и. бот.*

Тарыға оҡшаш иген культураһы; ҡыяҡ үлән. □ Росичка (лат. *Panicum Sanguirale*). *Бүҙәнә тарыһы үҫтереү.*

**БҮҘӘРЕҮ (бүҙәр-)** *ҡ. ҡар.* **буҙарыу.** *Бер ҡыҙарҙы, бер бүҙәрҙе.*

**БҮҘӘТӘҮ** *и. диал. ҡар.* **бөрләтәү.** *Ҡош бүҙәтәүе.*

**БҮЖӘК** *с. диал. ҡар.* **сусаҡ I.** *Бүжәк тау.*

**БҮЗ** *и. диал. ҡар.* **бүҙ.** *Бүз тауар.*

**БҮЗЕКӘ** (Р.: карлик; И.: dwarf; Т.: cüce) *и. диал.*

Кәрлә. □ Карлик. *Бүзекә кеше.*

**БҮЗДӘК (бүздәге)** (Р.: бадяга; И.: freshwater sponge; Т.: sünger) *и. зоол.*

Күп күҙәнәкле хайуандарҙың сөсө һыуҙа йәшәүсе түбән тибы. □ Бадяга, пресноводная губка (лат. *Spongilla lacustris*).

**БҮКСӘ** *и. диал. ҡар.* **бүкһә I.** *Тауыҡ бүксәһе.*

**БҮКТЕРЕҮ (бүктер-)** (Р.: вызывать отвращение; И.: cause disgust; Т.: biktırmak) *ҡ.*

**1.** Күп ашағандан биҙҙереү. □ Вызывать отвращение *(о пище – при переедании). Бутҡа бүктерҙе.* ■ *Эс әсетеп китте. Ни, ҡарағат тиҙ бүктерә икән, – тип, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы Ҡыҙырас.* З. Биишева. *Беләһеңдер, бер бүктергән ашамлыҡты аҙаҡтан ауыҙға ла алғы килмәй, хатта күреү менән ҡоҫҡо килә башлай.* Н. Мусин. *Уйынмы ни, хеҙмәтеңде үрнәк яһап, маҡтап, илгә тараҡҡастар! Хәйер, майлы аш бүктерер, тиҙәр түгелме.* Ә. Хәкимов.

**2.** *күсм.* Ныҡ ялҡытыу. □ Приедаться, надоедать. *Татлы һүҙҙәр бүктерҙе.* ■ *Әйт-*

*мә инде. Бүктерҙе был донъя!..* Я. Хамматов. *«Еҙнәң бүләк иткән алтын балдаҡ» Ихсанбайҙы әллә ҡасан туйҙырған, туйҙырыу түгел, екһетеп бөтөргән. Бүктергән.* Т. Ғарипова.

**БҮКТӘРГЕ** *и зоол. диал. ҡар.* **мүктәрге.** *Бүктәрге ҡанаты.*

**БҮКТӘРГӘЙ** *и. зоол. диал. ҡар.* **мүктәрге.** *Бүктәргәйҙәр оса.*

**БҮКҺЕҮ (бүкһе-)** (Р.: тухнуть; И.: become rotten; Т.: küf kokmak) *ҡ. диал.*

Боҙолоп еҫләнеү; һөрһөү. □ Тухнуть. *Ит бүкһегән. Һөт бүкһегән.*

**БҮКҺӘ I** [дөйөм төрки *бөк-сә* 'бүкһә'] (Р.: зоб у птиц; И.: crop; Т.: kursak) *и.*

**1.** Ҡош ашҡаҙанының тәүге бүлеге; боғаҡ. □ Зоб *(у птиц).* ■ *Тауыҡ өсөн күпме аҙыҡ бар! Күпме кәрәк — әйҙә сүпләһен, тултырғансы үҙенең бүкһәһен.* Н. Нәжми. *Бүкһәләре тулған өйрәк бәпкәләрен хәтерләтеүсе йөҙләгән билмән балконға сығарып ҡуйылды.* И. Абдуллин. *Ә уртала көҙөрәйеп әтәс тора. Ас бүкһәһен киреп, эре генә тамаҡ ҡыра.* Ғ. Байбурин.

**2.** Күкрәктең юғарғы өлөшө, күкрәк башы. □ Верхняя часть грудины. ■ *Уның [Әхтәмдең] ҡаршыһында ғына бүкһәһен киреп .. Рух баҫып тора ине.* В. Исхаҡов.

**3.** *диал.* Күлдәктең өҫкө өлөшө. □ Верхняя часть платья. *Күлдәк бүкһәһен тегеп бөтөү.*

**БҮКҺӘ II** (Р.: толстый коротышка; И.: squab; Т.: kısa boylu kimse) *и. һөйл. кәмһ.*

Йыуан, төпөш, тулы кәүҙә. □ Толстый коротышка. ■ *Бына шунда сыҡты һөрән һалып байҙың йыуан, һимеҙ бисәһе, уң ҡулына өлкән сүмес алып, албаҫтылай булып бүкһәһе.* Х. Ғәбитов.

**БҮКӘ** (Р.: кусок жирного мяса, вручаемый победителю состязаний; И.: piece of fat meat as a prise; Т.: düğünde yarışma ödülü olarak verilen et parçası) *и. этн.*

Туй ярыштарында, һабантуйҙарҙа еңгән кешегә бүләк итеп бирелгән һимеҙ, ҙур ит өлөшө. □ Кусок жирного мяса, вручаемый победителю состязаний на свадьбе, сабантуе. *Бүкә алыу.*

**БҮКӘЙ I** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkırt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй ҡәбиләһе аймағы. □ Букей *(название родового подразделения башкир племени ай). Бүкәй аймағы башҡорто.*

**БҮКӘЙ II** [рус. *бука*] *и. диал. ҡар.* **бапаҡ I.** ■ *Ямалетдин ағай тап ҡарттарса беҙҙе бүкәй менән ҡурҡыта.* С. Ҡудаш. *Ишетәһеңме, Нәфисә? Йөҙ ҡылыс — ул һиңә бүкәй түгел.* Ә. Мирзаһитов.

**БҮКӘЙЛӘҮ (бүкәйлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **имгәкләү.** *Бүкәйләп йөрөү.*

**БҮКӘН I** [дөйөм төрки *буг/бүк* 'түңгәк'] (Р.: чурбан; И.: block; Т.: kütük) *и.*

**1.** Бүрәнәнән бысып алып ултыртылған ҡыҫҡа түмәр. □ Чурбан, колода, обрубок бревна. *Ҡайын бүкән.* ■ *Сәхәү .. бүкәнгә балта менән сапҡан һайын тирә-яғына ҡарап ала.* Р. Ғабдрахманов. *Йырсылар артынан иртәкселәр сыҡты. Бер оло ғына йәштәрҙәгеһе бер нисә урындан ямалған һөрғолт сәкмәнен асып, ҡуйынынан думбыраһын сығарҙы ла, бүкәнгә ултырып алып, сиртә башланы.* К. Мәргән. *Гөлбаныу көлдөксә эргәһендә, бүкән өҫтөнә тас ҡуйып, көл тоноғонда Мәҙинәнең, үҙенең .. кейемдәрен йыуа.* Т. Ғарипова.

**2.** Ергә ҡаҙып ултыртылған ҡыҫҡа ғына йыуан бағана. □ Кол. *Бүкән ултыртыу. Нигеҙ бүкәне.* ■ *Унан [балағандан] йыраҡ түгел йыуан имән бүкән ергә ҡаҙып ултыртылған да уның өҫтөнә осло моронло ҙур ғына суйын түш беркетелгән, шунда уҡ эреле-ваҡлы сүкештәр, оҙон һаплы ҡыҫҡыс ята, тимер-томор киҫәктәре, һүндерелгән күмер өйөп ҡуйылған.* Н. Мусин.

**3.** *диал.* Ваҡ-төйәк ҡуя торған бәләкәй генә тәпәшәк дүрткел шкаф; тумбочка. □ Небольшой шкаф, тумбочка. *Бүкәнгә әйберҙәр ҡуйыу.*

**4.** *диал.* Артһыҙ ултырғыс. □ Табуретка. *Бүкәнгә ултырыу.*

**5.** *диал.* Баулы балан, миләш. □ Связка гроздьев калины, рябины. *Бер бүкән балан. Ун бүкән миләш бәйләнем.*

**6.** *диал. ҡар.* **яҫтыҡ 2.** *Арбаның бүкәне ярылған.*

**7.** *диал. ҡар.* **көпсәк 1.** ■ *Урман юлы юрттырып бармалы түгел, быҫраҡ, тәгәрмәс бүкәненән батҡаҡ.* Ж. Кейекбаев. *Беҙ кире тау башына менгәндә, бүкәненә тиклем батҡаҡҡа батҡан тәгәрмәс шикелле, ҡояш яртылай тауға ышыҡланғайны инде.* Ғ. Хәйри.

**8.** *диал. ҡар.* **үрәсә.** *Арба бүкәне.*

**9.** *диал. ҡар.* **бүгән.** *Бүкән үҫеп сыҡҡан.*

**10.** (*йәки* **еҙ бүкән**) Уйын исеме (*балалар икешәрләп аллы-артлы түңәрәкләп баҫа; ике кеше түңәрәкте уратып баҫтырыша; ҡыуып етеп һуҡһа, үҙе ҡаса; ҡасҡаны һуғылмаҫ элек бер парҙың алдына барып баҫһа, арттағы бала ҡаса*). □ «Третий лишний» (*название детской игры*). *досл.* Чурбан. *Бүкән уйнау.*

**11.** *кусм.* Йыуан, аҙ хәрәкәтләнеүсән кеше. □ Толстый, неподвижный человек. *Был бүкән ҡыбырлағансы, үҙем барып киләйем.*

♦ **Бүкән баш** башы ҙур кешегә ҡарата әйтелә. □ Большеголовый (*о человеке*). **Бүкәнгә ултырыу** эш эшләр йәшкә етеү; хәлләнеү. □ Окрепнуть. *Балалар бүкәнгә ултырҙы.* **Күҙле бүкән** эшләмәй, ҡыбырламай тик ултырған кешегә ҡарата әйтелә. □ Болван, истукан. *букв.* Пень с глазами. **Ит бүкәне** бик йыуан, төпөш кешегә ҡарата әйтелә. □ Толстячок (*по отношению к человеку*). ■ *Әгәр эш билдән тотоп алышыуға китһә, был ит бүкәне теләһә кемгә бирешерлек түгел.* Н. Мусин.

**БҮКӘНБАШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ҡәбиләһе аймағы. □ Букәнбаш (*название родового подразделения башкир племени усерган*). *Бүкәнбаш аймағы башҡорто.*

**БҮКӘН II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ҡәбиләһе аймағы. □ Букән (*название родового подразделения башкир племени бурзян*). *Бүкән аймағы башҡорто.*

**БҮКӘНДЕ** *и. диал. ҡар.* **һәпәләк I.** *Бүкәнде уйнау.*

**БҮКӘНЛӘҮ (бүкәнлә-)** (Р.: связать пучок; И.: bind a bunch; Т.: bağlam bağlamak) *ҡ. диал.*

Бәйләм яһау. □ Связать пучок. *Баланды бүкәнләнек.*

**БҮКӘН ЮРҒАН** (Р.: подстилка для стула; И.: mat; Т.: sandalye örtüsü) *и. диал.*

Ултырғыс япмаһы. □ Подстилка для стула. *Бүкән юрған тегеү.*

**БҮКӘТ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ҡәбиләһе аймағы. □ Букәт (*название родового подразделения башкир племени тунгаур*). *Бүкәт аймағы башҡорто.*

**БҮКӘШ** (Р.: низкорослый; И.: undersized; Т.: kısa boylu) *с. диал.*

Бик йыуан төпөш (*кешегә ҡарата*). □ Низкорослый, толстый (*о человеке*). *Бүкәш ир.*

**БҮЛ** (Р.: плод; И.: foetus; Т.: yavru) *и. иҫк.*

Ҡарындағы бала; түл. □ Плод (*в утробе*). *Бүлле булыу.* ■ *Бүлле, бүлле, бүлле бүл, бүҙәнәнән түлле бүл, ҡарлуғастан һылыу бүл, ыласындан өлгөр бүл.* Йола һамағынан.

**БҮЛБЕ** [рус. *бульба* < укр.] (Р.: клубень; И.: tuber; Т.: yumru) *и.*

Үҫемлек тамырындағы йомарсаҡ; төйөрсә. □ Клубень. / Клубневый. *Картуф бүлбеһе. Георгин бүлбеһе. Сырмалсыҡ бүлбеһе.*

**БҮЛБЕЛЕ** (Р.: клубневый; И.: having tubers; Т.: yumru) *с.*

Бүлбеһе булған, бүлбеләрҙән торған. □ Клубневый. *Бүлбеле үҫемлектәр. Бүлбеле сырмалсыҡ. Бүлбеле лютик.*

**БҮЛБЕЛӘНЕҮ (бүлбелән-)** (Р.: образоваться *(о клубне)*; И.: form tubers; Т.: yumrulanmak) *ҡ.*

Бүлбелегә әйләнеү, бүлбеле булыу. □ Образоваться *(о клубне). Картуф бүлбеләнгән.*

**БҮЛГЕ** (Р.: межклеточная перегородка; И.: intercellular septum; Т.: hücrelerarası) *и. анат.*

Берәй эске ағзаның, ҡыуышлыҡтың ярыһы. □ Межклеточная перегородка. *Йөрәктең ике яртыһы бүлге менән бүленгән.*

**БҮЛГЕЛӘНЕҮ (бүлгеләң-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бүлгеләү.** *страд. от* **бүлгеләү.** ■ *Вәлишиндың ике ҡатлы ҙур йорто умарта кәрәҙе кеүек бүлгеләнеп, уға .. эшсе ғаиләләре килеп тулды.* Ә. Хәкимов.

**БҮЛГЕЛӘҮ (бүлгелә-)** (Р.: разделять; И.: divide; Т.: ayırmak) *ҡ.*

Өлөш-өлөшкә бүлеү. □ Разделять, делить. *Икмәкте бүлгеләү. Бүлгеләп ҡуйыу.* ■ *[Йәнбикә] урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп, сәй әҙерләне .. сөсө ҡумәс бүлгеләп һалды.* Һ. Дәүләтшина. *Роман ылаусыларҙы дүртбиш өйгә бүлгеләп урынлаштырҙы ла атын Торомтайҙарға табан ҡыуаланы.* Н. Мусин. *Аш-һыуға оҫта Хәлимә шунда уҡ туҡмас ҡырҡты. Итте, бешеп сыҡҡас, өлөштәргә бүлгеләне.* «Ағиҙел», № 9, 2010. *Хәтерендә, әсәһе Хәмиҙә өй эсен шаршауҙар менән ҡороп бүлгеләп бөтөргәйне, төптә — йәштәрҙең түшәге.* Р. Камал.

**БҮЛГЕС** (Р.: распределитель; И.: dispenser; Т.: dağıtma aracı) *и. тех.*

Берәй нәмәне бүлә, бүлеп оҙата торған ҡулайлама. □ Распределитель. *Газ бүлгес. Бүлгес барабан. Электр энергияһын бүлгес.*

**БҮЛДЕРЕҮ (бүлдер-)** *ҡ.*

**1.** *йөкм. ҡар.* **бүлеү I.** *понуд. от.* **бүлеү I.** *Икмәкте бүлдереү. Малды бүлдереү.* ■ *[Шәһүрә:] Хәтерегеҙҙәлер, йыл башында лесхоз .. санитар ҡырҡыуға тип, диләнкә бүлдергәйне.* Н. Мусин.

**2.** Берәй эш-хәлде киҫеп туҡтатыу; бүлеү. □ Прерывать. *Һүҙҙе бүлдереү. Эште бүлдереү.* ■ *Насирҙың аты тураһындағы хәбәрен Сәхипъямал әбей ҙур диҡҡәт менән, бер һүҙен дә бүлдермәй генә тыңлап бөттө, ҡабырғалары ҡайышланып бөткән көртөйө кеҫәһенән тоҡсай сығарып, шымарып ялтыраған борсаҡтай ғына йомро аҡ таштарҙы яулыҡ өҫтөнә таратып ебәрҙе.* З. Ураҡсин. *Рая бер ни өндәшмәне. Уның, берҙән, егеттәргә ошо төштө бүлдергәндәре өсөн асыуы килде.* Р. Солтангәрәев.

**БҮЛДӘК (бүлдәге)** *и. диал. ҡар.* **быуын I, 3.** *Орлоғо бүлдәк-бүлдәк була ҡаҡының.*

**БҮЛЕК I (бүлеге)** (Р.: отдел; И.: department; Т.: bölük) *и.*

**1.** Бөтөндөң бүленгән бер өлөшө. □ Отдел, отделение. *Шкафтың бүлеге. Портфелдең бер бүлеге.* ■ *Биш минуттан Батыр йәшенгән урынынан сыҡты ла ҡыйыу аҙымдар менән караптың алғы бүлегенә үтте, ишекте тартҡылап ҡараны, шунан коридорға илтеүсе ишеккә йүнәлде.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** Китап, гәзиттең үҙенә башҡа бер йүнәлешле өлөшө; рубрика. □ Раздел, глава; рубрика. *Гәзиттең яңылыҡтар бүлеге. Журналдың хроника бүлеге. Китаптың тәүге бүлеге.* ■ *Мәктәптән ҡайтып инеү менән, онотмаҫ борон тип, кәштәләге ҡалын дәфтәремде барып алдым, ундағы «Ауылым тарихы» тигән бүлеккә уҡытыусымдың һүҙҙәрен теркәнем дә, арыраҡ «Үҙебеҙҙең Одиссей» тип яҙып ҡуйҙым.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**3.** Төрлө тамашаның айырым бер өлөшө. □ Отделение. *Концерттың икенсе бүлеге. Кисәнең тантана бүлеге.* ■ *Мәжлестең рәсми бүлеге башланды.* С. Ҡудаш. *Ошо ваҡыт Фатима Мырҙабаева ла Өфөлә, Башҡортостан ауыл хужалығы институтының .. залында, концерт бүлеген тыңлап, ултыра ине.* Б. Бикбай.

**4.** Ойошма йәки хужалыҡтың айырым бер тармағы; *ниндәйҙер* системаның айырым бер ойошмаһы. □ Отдел, отделение. *Магазиндың парфюмерия бүлеге. Фабриканың тәьминәт бүлеге. Факультеттың әҙәбиәт бүлеге. Кадрҙар бүлеге. Хаттар бүлеге. Район ер бүлеге. Милиция бүлеге. Почта бүлеге. Тел бүлеге. Әҙәбиәт бүлеге.* ■ *Ул*

*[Нурислам Байтурин], ысынлап та, боронғо убаларҙы иҫәпкә алып йөрөнө. Был йомош уға мәғариф бүлегенән ҡушылғайны.* Ә. Хәкимов. *Бер аҙҙан Морозов баш инженер менән баш геологты һәм бүлек етәкселәрен саҡырып. Иҫәнғолов менән таныштырҙы.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**5.** Берәй фәндең берәй өлкәһе. □ Область, раздел *какой-л.* науки. *Оптика — физиканың бер бүлеге.*

**6.** *диал.* Айырым бер төркөм. □ Группировка, группа. *Малайҙар бүлектәргә бүленде.*

**БҮЛЕК II (бүлеге)** *и. диал. ҡар.* **турпыша 1.** *Бүлек тегеү.*

**БҮЛЕК-БҮЛЕК** (Р.: с перерывами; И.: off and on; Т.: bölük bölük) *р. диал.*

Бүлеп-бүлеп. □ С перерывами. *Ямғыр бүлек-бүлек яуып үтте.*

**БҮЛЕКСӘ** (Р.: подразделение; И.: subdivision; Т.: altbölüm) *и.*

**1.** Хужалыҡ һәм ойошманың айырым бер бәләкәй тармағы. □ Подразделение хозяйства или учреждения. *Агрофирма бүлексәһе.* ■ *Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы — республикабыҙ Яҙыусылар союзының иң эре бүлексәһе, боронғо матур ғөрөф-ғәҙәттәрҙе дауам итеп һәм байытып эшләүсе әҙәби-мәҙәни усаҡтарҙың береһе.* «Ағиҙел», № 9, 2009. *[Йәғәфәр] директор кабинетының ишеген тартып та ҡараны, унда бер кем дә юҡ, ахырҙа бүлексәләргә шылтыратып ҡараны, яуап биргән кеше булманы.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *Ниндәйҙер* системаның айырым бер бәләкәй ойошмаһы. □ Подразделение *какой-л.* системы. *Элемтә бүлексәһе.* ■ *Өс башҡорт ауылын эсенә алған Түбәнге Аллағыуат почта бүлексәһенә лә «Ағиҙел» журналы ни бары өс дана килә.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**БҮЛЕМ** (Р.: деление; И.: scale division; Т.: bölüm) *и.*

**1.** Үлсәү приборҙарының һыҙып бүленгән бер араһы. □ Деление *(на измерительной шкале). Термометрҙың терегөмөшө бер бүлемгә күтәрелгән.*

**2.** *ҡар.* **бүлек I, 1, 2.** ■ *Лапаҫтың һәр бүлемен, мөйөшөн тигәндәй ҡараны-тикшерҙе сыҡҡан күҙ, дегәнәк ҡолаҡ, бәхеткә ҡаршы, эҙләгәнен таба алманы.* «Ағиҙел», № 3, 2010. *Хөсәйен башын айғырҙың янып барған маңлайына терәне. Шунан ул һикереп торҙо, күрше бүлемдәге атты йәһәт кенә сығарҙы.* Т. Ғарипова.

**3.** Баҫыуҙа айырым кешегә бүленгән эш алды; ал. □ Полоса для жатвы, косьбы и *т. д. Үҙ бүлемеңдә урып ал.*

**БҮЛЕМ-БҮЛЕМ** (Р.: с перерывами; И.: zarf; Т.: bölük bölük) *с.*

Бүлектәргә бүлеп. □ С перерывами. *Бүлем-бүлем эшләү.*

**БҮЛЕМТЕК (бүлемтеге)** *и. диал. ҡар.* **бүлем.** *Аҙбарҙың бүлемтеге.*

**БҮЛЕМТӘ** *и. диал. ҡар.* **бүлексә.** *Бүлемтәгә шылтыратыу.*

**БҮЛЕНГӘН ЕМЕШ** (Р.: плод дробный; И.: fractional fruit; Т.: bölünmüş meyve) *и. бот.*

Бер нисә өлөшкә бүленгән емеш. □ Плод дробный. *Бүленгән емештән үрсеү.*

**БҮЛЕНДЕ** (Р.: выделения; И.: excretion; Т.: salgı) *и.*

Организмдан бүленеп сыҡҡан матдә; бүлендек. □ Выделения (например, *пот, моча). Лемурҙар барған юлдарын үҙҙәренең еҫле бүлендеҙәре менән бысрата.*

**БҮЛЕНДЕК I (бүлендеге)** (Р.: частное; И.: quotient; Т.: bölüm) *и. мат.*

Бер һанды икенсе һанға бүлгәндән барлыҡҡа килгән һан. □ Частное. *Туғыҙҙы өскә бүлергә лә, бүлендекте икегә ҡабатларға.*

**БҮЛЕНДЕК II (бүлендеге)** *и. ҡар.* **бүленде.** *Ауырыуҙың бүлендегенең составы үҙгәрә.*

**БҮЛЕНЕҮ (бүлен-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бүлеү I.** *страд. от* **бүлеү I**. *Бишкә бүленгән һан. Урталай бүленеү.* ■ *Алдан уҡ иҫкәртеп ҡуябыҙ: ауылдың өс төркөмгә бүленеүе, йәғни Урманбаевтарҙың үҙгәрәк. Сыртлановтарҙың тағы бүтәнсәрәк йәшәүе, ә быларҙың береһенә лә ҡушылмаусы битарафтарҙың ҡырҙараҡ йөрөүе Ҡуштирәктең үрҙә әйтелгән сифаттарына әҙ генә лә тап төшөрмәй.* Ә. Хәкимов. *Бына хәҙер дүртенсе көн инде*

*геологтар тау-таш араларын ҡыҙырып йөрөй. Тәүге көндә күмәкләп бергә йөрөнөләр, икенсе көнөнә икегә бүленделәр.* Н. Мусин. *Ҡыҙырас менән Ғариф, уйламағанда Юлайҙы осратҡанғамы әллә һүҙҙәре иң ҡыҙыу урынында бүленгәнгәме, ни әйтергә белмәй, тынып ҡалдылар.* З. Биишева. *Вәлетдин өтәләнеп үк китте, һә тигәнсе ул ҡыҙыл сепрәк өҫтөнә бер сама тигеҙ генә бүленгән ете киҫәк икмәкте теҙеп тә ҡуйҙы.* М. Кәрим.

**БҮЛЕНЕҮ БӨРТӨКТӘРЕ** (Р.: бластула; И.: blastula; Т.: blastula) *и. биол.*

Эмбриондың үҫеш стадияһында күкәйҙәр бүленеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән күп күҙәнәкле яралғы. □ Бластула, бластомеры, шары дробления. *Бүленеү бөртөктәрен тикшереү.*

**БҮЛЕНЕҮСЕ** (Р.: делимое; И.: dividend; Т.: bölünen) *и. мат.*

Икенсе бер һанға бүленә торған һан. □ Делимое, кратное. *Уртаҡ бүленеүсе. Бүленеүсе һандар.*

**БҮЛЕНЕҮСӘНЛЕК (бүленеүсәнлеге)** (Р.: делимость; И.: divisibility; Т.: bölünebilme) *и.*

**1.** Бүленеү һәләте. □ Делимость. *Күҙәнәктең бүленеүсәнлеге. Һандың бүленеүсәнлек билдәләре.*

**2.** *мат.* Бөтөн һандың башҡа һанға ҡалдыҡһыҙ бүленеү үҙенсәлеге. □ Делимость. *Һандың бүленеүсәнлек билдәләре.*

**БҮЛЕНЕШ** (Р.: деление; И.: division; Т.: bölünüş) *и.*

**1.** Тотош урындың сиктәрен билдәләп бүлеү. □ Деление, разделение. *Административ бүленеш.* ■ *Даруға урындағы идара башлығы, теге йәки был төбәктә хан вәкиле булған. Һуңынан даруға ханлыҡтың территориаль бүленеше, «өлкә» мәғәнәһендә ҡулланыла башлай.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

**2.** Өлөш-өлөшкә, төркөм-төркөмгә тарҡалыш. □ Деление, разделение на отдельные части, группы. *Хеҙмәт бүленеше. Спектаклдә ролдәр бүленеше.* ■ *Башҡорт фольклорын ул [Ғабдулла Амантай] төп ике төргә бүлә. Хәҙер беҙ ул бүленеште эпик һәм лирик төрҙәр тип әйтер инек.* Ә. Сөләймәнов.

**3.** *Нимәнеңдер* төрлө ергә таралып урынлашыуы. □ Распределение, размещение, расположение *чего-л., где-л. Ер ҡабығында химик элементтар бүленеше.*

**БҮЛЕНЕШЕҮ (бүленеш-)** (Р.: делиться; И.: divide; Т.: bölünmek) *ҡ.*

Өлөш-өлөшкә, төркөм-төркөмгә тарҡалыу. □ Делиться, разделяться на отдельные части, группы. *Бүленешеп бөтөү.* ■ *Күңелле уйындың йәме китте. Кешеләр төркөмдәргә бүленеште; ҡайһылары ҡайтыу яғына ыңғайланы.* Р. Камал. *Егерме һигеҙенсе июлдең төнөндә генә Аҡмәсет крепосына һөжүм итәсәк һалдаттар траншеяларҙан сыҡты. Улар, алдан билдәләнгән ергә еткәс, айырым төркөмдәргә бүленешеп, үҙҙәре өсөн тәғәйенләнгән позицияларға таралышты.* Я. Хамматов.

**БҮЛЕНМӘҪ** (Р.: неделимый; И.: indivisible; Т.: bölünmez) *с.*

Бүленмәй торған. □ Неделимый, нераздельный. *Бүленмәҫ мираҫ. Бүленмәҫ ризыҡ.*

**БҮЛЕНМӘҮСӘН** *ҡ. ҡар.* **бүленмәҫ.** *Бүленмәүсән һан.*

**БҮЛЕНМӘҮСӘНЛЕК (бүленмәүсәнлеге)** (Р.: неделимость; И.: indivisibility; Т.: bölünmezlik) *и.*

Бүленмәү үҙенсәлеге. □ Неделимость. *Һандарҙың бүленмәүсәнлеге.*

**БҮЛЕП ҺУҒЫУ (бүлеп һуҡ-)** (Р.: ткать узорами; И.: weave tracery; Т.: bezekle dokumak) *ҡ. диал. тук.*

Биҙәкләп һуғыу. □ Ткать узорами. *Бүлеп һуғылған балаҫ.*

**БҮЛЕП-ЯРЫП** (Р.: по частям; И.: divide into parts; Т.: bölerek) *р.*

Өлөш, киҫәктәргә айырғылап. □ Делить на части. *Бүлеп-ярып тұләү.* ■ *Аҡсаны уны бүлеп-ярһаң, бәрәкәте оса.* Һ. Дәүләтшина.

**БҮЛЕҮ I (бүл-)** (Р.: делить; И.: divide, partition; Т.: bölmek) *ҡ.*

**1.** Бөтөндән бер киҫәк йәки күмәктән бер төркөм айырыу. □ Делить, разделять. *Икмәк бүлеп алыу. Ҡарбузды бүлеү.* ■ *Үҙ йәнемде*

*бүлеп бирер инем, йәндән башҡа йөрөр хәлем юҡ.* Халыҡ йырынан. *Ҡайҙандыр, кемдәрҙер килеп, көтөүҙән унлаған баш йылҡы малын бүлеп, ҡыуып алып киткәндәр.* К. Мәргән.

**2.** Киҫәк-киҫәккә, өлөш-өлөшкә йәки төркөм-төркөмгә айырыу; өләшеү. □ Распределять, разбивать, расчленять. *Аш бүлеү. Малды бүлеү. Игенде бүлеү. Мөлкәт бүлеү.* ■ *Ҡунаҡтар дәрәжәһенә ҡарап бүлеп ултыртылған.* Т. Хәйбуллин. *[Карт] үҙе иҫән саҡта барлы-юҡлы мөлкәтен улдарына бүлеп бирмәксе булған.* Әкиәттән. *Унан Емеш ҙур ағас табаҡҡа алып биргән иттәрҙе өлөшләп бүлергә, һалма өсөн турарға кереште, Һөйөндөк менән ала бесәй ҙә, ит еҫен һиҙеп, шунда уҡ уның янына барып ултырҙы.* З. Биишева. *Ауыл тирәһендәге сабынлыҡтар өй башына бүлеп биреп бөтөлгән бит инде.* Н. Мусин.

**3.** Бөтөндө төркөмдәргә айырыу. □ Подразделять, классифицировать. *Бүлекте параграфтарға бүлеү.*

**4.** Араға ниҙер ҡуйып айырыу. □ Перегораживать. *Бүлмә бүлеү. Өйҙө таҡта менән бүлеү. Һарайҙы кәртә менән бүлеү.* ■ *Ике ҡаланы бер бейек тау бүлеп тора.* Әкиәттән. *Ауылды икегә бүлеп кескенә йылға аға.* Ф. Әсәнов.

**5.** Организмдан, үҙенең составынан тышҡа бүлеп сығарыу. □ Выделять, выводить *(из организма, из своего состава). Организмдағы артыҡ шыйыҡлыҡты бүлеп сығарыу.*

**6.** Эш-хәлде киҫеп туҡтатыу; хәрәкәтте тоткарлап туҡтатыу. □ Прерывать. *Йоҡоно бүлеү. Уйҙы бүлеү. Һүҙҙе бүлеү. Эште бүлеү. Донъяның ағышын бүлеү.* ■ *Батыр менән Хәлит бер-берең бүлә-бүлә үҙҙәре менән булған мажараларҙы һөйләп бирҙе.* Н. Ғәйетбаев. *Юламан ҡарттың ҡарағурғаш кеүек һәлмәк, күҙгә таш кеүек һалҡын уйҙарын бүлеп, аҫта, ҡырсын өҫтөндә, үҙәк өҙгөс йыр һыҙыла.* З. Биишева. *Ул [Байғужа] ҡабаланып тағы ла тәмәке төрҙө. Һүҙен бүлеп, тәмәке төтөнөн ҡабалана-ҡабалана һура башланы.* Д. Юлтый. *Ҡапыл уның [Зөфәрҙең] фекерен бүлеп, идара йортто яғынан бер оҙон, бер ҡыҫҡа сигнал яңғыраны.* Д. Бүләков.

**7.** *мат.* Бер һанды икенсе һанға таркатыуҙан ғибәрәт математик ғәмәл башҡарыу. □ Делить. *Унды бишкә бүлеү.*

**БҮЛЕҮ II** (Р.: деление; И.: division; Т.: bölmek) *и. мат.*

Бер һанды икенсе һан иҫәбенә бүлеүҙән ғибәрәт булған математик ғәмәл. □ Деление. *Бүлеү билдәһе. Бүлеү ғәмәле. Кәсерле бүлеү.*

**БҮЛЕҮСЕ** (Р.: делитель; И.: divisor; Т.: bölen) *и. мат.*

Икенсе бер һанды бүлә торған һан. □ Делитель. *Иң ҙур уртаҡ бүлеүсе.*

**БҮЛЕШЕҮ (бүлеш-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **бүлеү I, 1—4.** *взаимн. от* **бүлеү I, 1—4.** *Бүлешеп ашау. Алманы бөтәһенә лә тигеҙ итеп таратырға кәрәк, миңә тигеҙ итеп кенә бүлеш әле.*

**2.** Үҙ-ара бүлеү. □ Делить *что-л.* между собой. *Табышты бүлешеү. Мөлкәтте бүлешеү.* ■ *Бүреләр теге эт ауыҙындағы һөйәкте тартып алалар ҙа бүлешә башлайҙар.* Әкиәттән. *Сәлмән ҡарт үлгәс, уландар араһында мираҫ бүлешеү булды.* Ж. Кейекбаев. *Аҙаҡ ишетеүенсә, ун йәшендә уны [Шәрғиәне] ҡалаға олаҡтырғас, ата-әсәһенән ҡалған йорт-ерҙәрен, мал-мөлкәттәрен, ыҙғышып-талашып, бындағы туғантыумасаһы бүлешеп ала.* Ә. Хәкимов.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер хәл, тойғоно уртаҡ итеп бергә кисереү; уртаҡлашыу. □ Делиться *(радостью, горем)*, разделять *(радость, горе). Ҡайғыны бүлешеү. Шатлыҡты бүлешеү.*

**БҮЛК** (Р.: буль; И.: plop!; Т.: su sesi) *оҡш.*

Шыйыҡлыҡ сайҡалғанда, тар муйынлы һауыттан түгелгәндә йәки һыу аҫтынан һауа ҡалҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Буль *(подражание бульканью). Шешәләге һыу бүлк тип сайҡалып ҡуйҙы.*

**БҮЛК-БҮЛК, бүлк тә бүлк** (Р.: буль-буль; И.: plop! plop!; Т.: şırıl şırıl) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бүлк иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Буль-буль *(многокр. от* **бүлк***).*

*Бүлк-бүлк итеү. Бүлк-бүлк килеү.* ■ *Фляга эсендә нимәлер бүлк-бүлк сайҡалып килә.* Й. Солтанов.

**БҮЛКЕЛДӘҮ (бүлкелдә-)** (Р.: булькать; И.: gurgle; Т.: şırıldamak) *ҡ.*

Бүлк-бүлк итеү, бүлк-бүлк килеү. □ Булькать. *Шыйыҡлыҡ бүлкелдәп бара. Бүлкелдеге сығыу.* ■ *Эт, бүлкелдәгән тауыштар сығара-сығара, башын тәрән кәстрүлгә тыҡты.* Ә. Бикчәнтәев. *Эргәмдә генә бүлкелдәп шишмә сығып ятҡанын ишетәм.* М. Кәрим.

**БҮЛК ИТЕҮ (бүлк ит-)** (Р.: булькать; И.: gurgle; Т.: şırıldamak) *ҡ.*

Шыйыҡлыҡ сайҡалғанда, тар муйынлы һауыттан түгелгәндә йәки һыу аҫтынан һауа ҡалҡҡанда сыҡҡан тауыш сығарыу; бүлкелдәү. □ Булькать. *Шәрегә баҫҡан һайын һыу бүлк итеп ҡала.*

**БҮЛКӘ** (Р.: отсек; И.: compartment, section; Т.: bölme) *и.*

**1.** Бер бөтөн нәмәнең айырым бер өлөшө; бүлек, бүлкәс. □ Отсек, отделение; часть, кусок. *Тартманың бер бүлкәһе. Шоколадтың бер бүлкәһе. Һарымһаҡ бүлкәһе.* ■ *Артабан .. тауҙар китә. Тауҙарҙың бүлкәләре араһында тәрән уялар ята.* Ж. Кейекбаев. *Шәрәфи казематтың һәр бүлкәһен, һәр мөйөшөн тикшерҙе, ләкин лом йәки киркә түгел, шуға оҡшашыраҡ бер тимер һыныҡы ла таба алманы.* И. Насыри.

**2.** Һыу йәки һауа карабындағы айырым герметик бүлмә. □ Отсек. *Самолёт бүлкәһе. Пароход бүлкәһе.*

**БҮЛКӘЛЕ** (Р.: разделённый на части; И.: zarf; Т.: bölük bölük) *с.*

Бүлкәләргә бүленгән. □ Разделённый на части. *Бүлкәле тартма.*

**БҮЛКӘЛЕ-БҮЛКӘЛЕ** (Р.: местами перетянутый; И.: zarf; Т.: bölük bölük) *с.*

Бүлкәләргә бүленгән. □ Местами перетянутый (*о стручке*). *Бүлкәле-бүлкәле ҡуҙаҡ.*

**БҮЛКӘЛЕ ИКМӘК (икмәге)** (Р.: булочки; И.: bun; Т.: francala) *и.*

Ваҡ-ваҡ итеп йомарлап, бер табаға һалып бешергән әсе икмәк. □ Булочки. *Бүлкәле икмәк бешереү.*

**БҮЛКӘЛӘНЕҮ (бүлкәлән-)** (Р.: делиться на части; И.: be divided; Т.: bölümlenmek) *ҡ.*

Бүлкә-бүлкә булып бүленеү, бүлкәле булыу. □ Делиться, разделяться на части. *Бүлкәләнгән тау итәге. Бүлкәләнгән йәшник.*

**БҮЛКӘЛӘҮ (бүлкәлә-)** (Р.: делить на части; И.: divide; Т.: bölümlemek) *ҡ.*

Бүлкә-бүлкә итеп бүлеү, бүлкәле итеү. □ Делить, разделять на части. *Тартманы бүлкәләү. Һарайҙы бүлкәләп эшләү.*

**БҮЛКӘС** *и. ҡар.* **бүлкә 1.** ■ *Бынан һуң ул [Юлдаш] бүлкәс итеп эшләнгән таҡта ҡумта ла күрһәтте.* З. Биишева.

**БҮЛКӘСЛӘНЕҮ (бүлкәслән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бүлкәләнеү.** *Көрәшсенең мускулдары бүлкәсләнеп тора.* ■ *[Миңлеғәленең] икегә бүлкәсләнгән башы түшенә эйелгән, һыңар күҙен һалынып төшкән сәс ҡаплаған, ҡыҙарынған йөҙөнә бөрсөк-бөрсөк тир ҡалҡҡан, ҡымтып ҡыҫҡан ирендәре, күрек һыҙылған ыңғайға, бер асыла, бер ябыла.* Я. Хамматов.

**БҮЛКӘТ** (Р.: пояс; И.: zone; Т.: bölge) *и.*

**1.** *геогр.* Ер йөҙөнөн ике меридиан араһындағы өлөшө. □ Пояс *(экваториальный)*. / Поясной. *Көньяҡ бүлкәт.*

**2.** *геогр.* Ер йөҙөнөң айырым бер климатик зонаны тәшкил иткән өлөшө. □ Пояс *(климатический). Уртаса бүлкәт. Һыуыҡ бүлкәт. Эҫе бүлкәт.*

**3.** Ер йөҙөнөң ҡояш ҡалҡыу-байыуға ҡарап *ниндәйҙер* бер ваҡыт билдәләнеп бүленгән өлөшө. □ Пояс *(часовой). Ваҡыт бүлкәте.* ■ *Тикшеренеүселәрҙең күбеһенең фекеренсә, ҡабаттан декрет ваҡытына ҡайтыу, йыл һайын сәғәттәрҙе күсереүҙән баш тартыу һәм бүлкәт ваҡыты менән сағыштырғанда бер сәғәт айырма булған үҙгәрешһеҙ иҫәп менән йәшәү дөрөҫөрәк булыр.* «Салауат», 11 март 2011.

**4.** Ер йөҙөнөң айырым тәбиғи үҙенсәлекле өлкәһе. □ Пояс *(физико-географическая зона). Сүллек бүлкәте. Таулыҡ бүлкәтендә йәшәү.*

**5.** Илдең үҙенсәлекле иҡтисади өлкәһе. □ Пояс *(тарифный). Тариф бүлкәте. Хаҡ бүлкәте.*

**6.** *ҡар.* **бүлкә 1.** ■ *Помидор дүрт бүлкәттән тора һәм ҡыҙыл төҫтә. Йөрәк тә ҡыҙыл, ул дүрт камеранан тора. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: помидор, ысынлап та, йөрәк өсөн файҙалы.* Ф. Аҡбулатова.

**БҮЛМӘ** (Р.: комната; И.: room; Т.: oda) *и.*

**1.** Өйҙөң, бинаның стена менән бүленгән айырым өлөшө. □ Комната. / Комнатный. *Йоҡо бүлмәһе. Ҡунаҡ бүлмәһе. Эш бүлмәһе. Аш бүлмәһе. Ял бүлмәһе. Бүлмә ишеге.* ■ *Сәғиҙә апай ишек төбөндәге фанер менән генә бүленгән бәләкәй бүлмәлә тора.* Яр. Вәлиев. *Ҡолбаев, үҙе эргәһендәге бүтән кешеләрҙең дә йомоштарын йомошлап, бүлмә бушап ҡалғас, Ғәлимгә табанығыраҡ әйләнеп ултырҙы.* Н. Мусин.

**2.** Соландың бүлеп ҡуйылған айырым өлөшө; кәзәнкә. □ Отсек в сенях. *Бүлмәлә сәй эсеү. Бүлмәгә инеү. Бүлмәлә уйнау.*

**3.** Ойошмаларҙың махсус бер бүлеге. □ Кабинет, комната. *Милицияның балалар бүлмәһе.*

**4.** *диал.* Келәт. □ Амбар. *Бүлмәгә ашлыҡ һалыу.*

**5.** *диал.* Бура. □ Сруб. *Бүлмә бурау.*

**6.** *этн.* Ҡыҙ менән кейәүҙе ҡуша торған махсус өй. □ Специальный выделенный дом для брачной ночи невесты и жениха.

**БҮЛМӘ ГӨЛӨ** (Р.: комнатный цветок; И.: houseplant; Т.: ev bitkisi) *и.*

Өйҙә үҫтерелгән декоратив үҫемлек. □ Комнатный цветок.

**БҮЛМӘЛӘТЕҮ (бүлмәләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бүлмәләү.** *понуд. от* **бүлмәләү.** ■ *Рәҡиә апай йортто бүлмәләтте лә: «Һалҡындар төшә. Ауылдан йөрөп эшләй алмаҫһың», — тип Сәлимде лә индерҙе.* И. Ғиззәтуллин.

**БҮЛМӘЛӘҮ (бүлмәлә-)** (Р.: делить на комнаты; И.: divide into rooms; Т.: odalara ayırmak) *ҡ.*

Бүлмәгә бүлеү, бүлмәле итеү. □ Делить на комнаты. *Йортто бүлмәләү.*

**БҮЛМӘЛӘШ** (Р.: сосед по комнате; И.: roommate; Т.: oda arkadaşı) *и.*

Бер бүлмәлә йәшәгән кеше. □ Сосед по комнате *(в общежитии, гостинице и т. д.). Бүлмәләш ҡыҙ. Бүлмәләш егет. Бүлмәләшем өйҙә юҡ.* ■ *Суфияның ҡайһы бер сәйер ҡылыҡтарына инде өйрәнеп бөткән бүлмәләш ҡыҙҙар һәр ҡайһыһы үҙ эшендә булырға, Суфияға иғтибар итеүҙәрен һиҙҙермәҫкә тырышты.* З. Биишева.

**БҮЛСӘР** *и. диал. ҡар.* **балтыр.** *Бүлсәр ите.*

**БҮЛТ** (Р.: подражание моментальному вздутию; И.: word imitating instant swelling; Т.: imitasyon kelimesi) *оҡш.*

**1.** Ҡапыл өрөлөп, ҡабарып сыҡҡанды белдергән һүҙ. □ Подражание моментальному вздутию, вспучиванию *чего-л. Ирене бүлт итте.*

**2.** *ҡар.* **бүлк.** *Һыу бүлт итте.* ■ *Ҡапыл тертләп китәм. Сәйер. Ул иншмә ерҙә түгел, минең күкрәгемдән бүлкелдәй: бүлт, бүлт, бүлт.* М. Кәрим.

**БҮЛТ-БҮЛТ** *оҡш. ҡар.* **бүлк-бүлк.** *Бүлт-бүлт иттереп һауыттарға һөт ҡойоу.*

**БҮЛТЕК** (Р.: пухлый; И.: pudgy; Т.: şişman) *с.*

Бүлт итеп торған, бүлтәйгән. □ Пухлый. *Бүлтек ирен.* ■ *Үҙе ҡаптыра алмағанлыҡтан, Зөбәйҙәнең быға йәне көйә, былай ҙа бүлтек ирендәрен балалар кеүек нығыраҡ бүлтәйтә ине.* Н. Мусин.

**БҮЛТЕРЕК I (бүлтереге)** [дөйөм төрки *бөлә* ʻике туған'] (Р.: поздний приплод; И.: autumnal litter; Т.: sonbaharda doğan kuzular) *и.*

**1.** Йәйгә, көҙгә ҡалып, һуңлап тыуған кәзә, һарыҡ бәрәсе; йәйләүес, көҙләүес. □ Поздний, осенний приплод *(у овец и коз).*

**2.** *диал.* Бүре балаһы. □ Волчонок.

**БҮЛТЕРЕК II (бүлтереге)** (Р.: слабый; И.: sickly; Т.: zayıf) *с.*

Кәгеҙ, ябыҡ, буйға бәләкәй. □ Слабый, хилый, исхудалый, тощий, малорослый. *Бүл-*

*терек мал. Бүлтерек кәзә бәрәсе. Бүлтерек кеше.* ■ *Буйы буйға етмәгән, үҙе ҡыҙҙар менән йөрөгән була, бүлтерек.* Ә. Вәли. *Хәйер, мастер башы менән ул [Гәндәлип], бүлтерек кәзә тәкәһе кеүек, ҡапҡа таҡтаһы шымартып булашмаҫ инде.* Д. Бүләков. *[Ҡорбанбикә еңгә – Вәзиргә:] Ана, бүлтерек бәрәс, ултыр, аша, – тине йомшара төшөп.* М. Кәрим.

**БҮЛТЕРЕКЛӘҮ (бүлтереклә-)** (Р.: окотиться позже срока; И.: lamb after due term; Т.: geç kuzulamak) *ҡ.*

Йәйгә йәки көҙгә ҡалып, һуңлап бәрәсләү. □ Окотиться позже срока *(об овцах и козах). Һарыҡ бүлтереклэгән.*

**БҮЛТӘЙЕҮ (бүлтәй-)** (Р.: выпячиваться; И.: bulge out; Т.: kabarmak) *ҡ.*

Өрөлөп, тумалаҡ ҡына булып ҡабарыу; тупайыу. □ Выпячиваться, вздуваться. *Ҡорһағы бүлтәйгән. Яңағы бүлтәйгән.* ■ *Уның [Насиптың] ике урты бүлтәйеп сыҡҡан. Күрәһең, ауыҙындағы икмәген сәйнәп бөтөрмәй ойоп китҡән.* М. Кәрим. *Сәфәрғәле бүлтәйеп кенә сығып килгән ҡорһағын һелкетеп кеткелдәне.* В. Нафиҡов. *Соколовтың буш ҡулы, ирекһеҙҙән, бүлтәйеп торған салбар кеҫәһен ҡапшап ҡуя.* Ә. Хәкимов.

**БҮЛТӘЙТЕҮ (бүлтәйт-)** (Р.: выпячивать; И.: stick out; Т.: kabartmak) *ҡ.*

Өрөлдөрөп, тумалаҡ итеп ҡабартыу. □ Выпячивать. *Иренде бүлтәйтеү.* ■ *Гөлнур ҡалын ирендәрен бүлтәйтеп, бәләкәй генә танауын йыйырған.* Ғ. Шәрипов. *Ниңә бурҙайың көн дә китеп олаға ла, ҡисҡырын ғына ике бөйөрөн туптай бүлтәйтеп, ауыҙморонон ҡанйыратып ҡайтып инә?* Й. Солтанов. *Әмилә, үпкәләгәнен аңлатып, ирендәрен бүлтәйтте.* Н. Ғәйетбаев.

**БҮЛТӘК I (бүлтәге)** *и. диал. ҡар.* **бүлкә 1.** *Бүлтәкле тартма.*

**БҮЛТӘК II (бүлтәге)** *и. диал. ҡар.* **бүлкә 1.** *Картуфтарҙың ҡайһы бере бүлтәктәргә бүленеп тора.*

**БҮЛӘ I** (Р.: правнук; И.: great grandson; Т.: torun oğlu) *и.*

**1.** Ейән йәки ейәнсәрҙең улы; өсөнсө быуын. □ Правнук. ■ *Ишембай ауылына нигеҙ һалған Ишембай Аҡбирҙиндың бүләһе Наил Хәйруллиндың саялығы тураһында һөйләгәндә, халҡына һөйөү, рух, милләттәштәре, яҡындары өсөн янып-көйөп йәшәүен алғы урынға ҡуйырға кәрәк.* «Башҡортостан», 20 август 2011.

**2.** Бер туған ҡатындарҙың балалары *(бер-береһенә ҡарата).* □ Двоюродные братья и сёстры *(дети родных сестёр по отношению друг другу). Бүләләр үҙ-ара бик дуҫтар.*

**3.** *диал.* Өләсәһенең тыуған ауылы кешеләренә ҡарата ир бала. □ Мальчик по отношению к односельчанам бабушки. *Ул малай беҙҙең бүлә инде.*

**4.** *диал.* Нәҫел-нәсәп. □ Родня. *Бүләләр йыйылышҡан.*

**БҮЛӘ II** (Р.: промежуток рабочего времени от одного перерыва до другого; И.: interval between working hours; Т.: süre) *и.*

Бүлеп-бүлеп, ял итеп эшләгән эштең бер өлөшө; тына. □ Промежуток рабочего времени от одного перерыва до другого. *Бер бүлә эшләп алыу. Ашлыҡты ике бүлә урыу.*

**БҮЛӘ-БҮЛӘ** (Р.: с перерывами; И.: off and on; Т.: bölük bölük) *р. диал.*

Бер нисә бүлемгә бүлеп. □ С перерывами, по частям. *Бүлә-бүлә эшләү.*

**БҮЛӘК I (бүләге)** [боронғо төрки *бәлгүт* 'бүләк, иҫтәлек'] (Р.: подарок; И.: present; Т.: hediye) *и.*

**1.** Кешене шатландырыу өсөн һәм яҡшы теләктәр менән бүшлай бирелә торған нәмә. □ Подарок, дар; вознаграждение. *Иҫтәлекле бүләк. Ҡәҙерле бүләк. Бүләк биреү. Бүләк алыу. Бүләк өләшеү. Ақсалата бүләк. Ярышта еңгәндәргә ҡиммәтле бүләктәр биреү.* ■ *[Зәйнәп:] Китҡән кешеләргә кеҫә бүләктәре биреп ебәргәндә насар булмаҫ ине.* Н. Ҡәрип. *[Ғамир] атты яҡшы ҡараған өсөн Беренсе майҙа бүләк алды.* Б. Бикбай. *Емеш һаман әле, бая апаһы бүләк иткән үҙенең тәүге байрам кейемдәрен бер кейеп, бер сисеп, һыланып-һыйпанып маташа.* З. Биишева.

*Һөҙөмтә ҙур булмаһа ла, төнгө топҡондар өсөн баҒауылдар маҡтау һүҙе ишетте, бүләк рәүешендә өҫтәлмә сәй-шәкәр ҙә алды.* З. Ураҡсин. *Байрам һайын балалар йортонда тәрбиәләнеүселәргә лә бүләктәр бирәләр — был көндөң иң ҙур йәме лә, моғайын, шунда булғандыр.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *миф.* Бер кешенең икенсе кешегә һаулыҡ, уңыш теләп биргән әйбере. □ Вещь, подаренная с пожеланием благ, здоровья. *Бүләк тапшырыу.*

**3.** *йола* (баш хәреф менән). Атаһының үлеменән һуң тыуған балаларға ҡушылған исем. □ Личное имя, данное ребёнку, родившемуся после смерти отца. ■ *Атайҙары һуғышҡа киткәс тыуған балаларға Бүләк Бүләкбай, Бүләкбикә тип исем ҡушалар ине.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Дөйә лә бүләк, төймә лә бүләк** бүләктең ҙуры, бәләкәйе булмай тигән мәғәнәлә әйтелә. □ И верблюд подарок, и пуговица подарок. *соотв.* Дорого внимание, а не подарок.

**БҮЛӘК II (бүләге)** (Р.: часть; И.: piece, part; Т.: bölüm) *и. диал.*

Бер төркөм йәки бөтөн нәмәнең бүленеп торған өлөшө; бүлкә. □ Часть, кусок. *Икмәк бүләктәре. Һарымһаҡ бүләктәре.*

♦ **Ала бүләк** үҙенә бер башҡа, үҙенә бер төрлө. □ Своеобразный, выделяющийся среди других. ■ *Эҡолдоң өйө әллә ҡайҙан матурлығы, байлығы менән ауылдағы башҡа өйҙәрҙән ала бүләк булып айырылып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**БҮЛӘК III (бүләге)** (Р.: небольшой лес на склоне горы или среди поля; И.: small wood; Т.: yamaçtaki ağaçlık) *и.*

Ер уртаһындағы, тау битендәге өйкөм ағаслыҡ. □ Небольшой лес на склоне горы или среди поля. *Бүләктә бесән сабыу.*

**БҮЛӘК ИТЕҮ (бүләк ит-)** (Р.: дарить; И.: present; Т.: hediye vermek) *ҡ.*

**1.** Бүләккә биреү. □ Дарить *что кому.* ■ *Һөнәрсенең үҙе өсөн ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә бүләк итеүҙән дә ләззәтле, һатып биреүҙән дә ғазаплы эш булмай.* З. Биишева.

**2.** Арнау, төбәү. □ Посвящать. *Йыр бүләк итеү.*

**3.** *йәки* **ғүмер бүләк итеү.** Тыуҙырыу, ғүмер биреү. □ Родить, подарить жизнь *кому-л. Донъяның ҙурлығын, киңлеген, матурлығын күреп ҡыуана кеше. Былярҙың бөтәһен дә, бөтәһен дә уға әсә бүләк иткән бит.* Ғ. Әмири.

**БҮЛӘКЛЕК** (Р.: подарочный; И.: gift; Т.: hediyelik) *с.*

Бүләккә бирә торған. □ Подарочный. *Бүләклек аҡса.*

**БҮЛӘКЛӘНЕҮ (бүләклән-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бүләкләү.** *страд. от* **бүләкләү.** *Аҡса менән бүләкләнеү. Миҙал менән бүләкләнеү.* ■ *Әсғәт Мәсғүт улы ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм Халыҡтар Дуҫлығы ордендары менән бүләкләнде.* «Ағиҙел», № 7, 2011.

**БҮЛӘКЛӘТЕҮ (бүләкләт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бүләкләү.** *понуд. от* **бүләкләү.** *Эшселәрҙе аҡса менән бүләкләтеү.*

**БҮЛӘКЛӘҮ (бүләклә-)** (Р.: дарить; И.: give presents; Т.: hediye vermek) *ҡ.*

Кешенең хеҙмәтен, ҡаҙаныштарын, ҡаһарманлығын баһалап, бүләк биреү. □ Дарить *что кому,* одаривать *кого чем;* награждать, премировать. *Ҡиммәтле бүләк менән бүләкләү. Орден менән бүләкләү. Миҙал менән бүләкләү.* ■ *Бәхтиәр үҙе һаҡалын ҡырған. Күптән түгел генә үҙен бүләкләп биргән ҡара салбарын кейгән.* А. Таһиров.

**БҮЛӘК-ҺАНАҠ (бүләк-һанағы)** (Р.: подарки *(обрядовые)*; И.: presents, gifts; Т.: hediyeler) *и. этн. йыйн.*

*Кемгәлер* тәғәйенләнгән бүләктәр. □ Подарки *(обрядовые). Бүләк-һанаҡ алып килеү.*

**БҮЛӘКӘЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе аймағы. □ Булякэй *(название родового подразделения башкир племени кыпчак). Бүләкәй ҡаҙаҡ аймағы башҡорто.*

**БҮЛӘР** (Р.: название башкирского племени; И.: name of a Bashkir tribe; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и.*

Башҡорт ҡәбиләһе исеме. □ Буляр *(название башкирского племени). Бүләр ҡәбиләһенә ҡараған ырыуҙар.*

**БҮЛӘСӘР** [дөйөм төрки *бөлә* ‘ике туған’] (Р.: правнучка; И.: great granddaughter; Т.: torun kızı) *и.*

**1.** Ейән йәки ейәнсәрҙең ҡыҙы; өсөнсө быуын. □ Правнучка. *Бүләсәрен күреү бәхете тейеү.*

**2.** *диал.* Бер туған ҡатындарҙың балалары *(бер-береһенә ҡарата).* □ Двоюродные братья и сёстры *(дети родных сестёр по отношению друг к другу). Бүләсәрен күреү.*

**3.** *диал.* Өләсәһенең тыуған ауылы кешеләренә ҡарата ҡыҙ бала. □ Девочка по отношению к односельчанам бабушки. *Был ҡыҙ беҙҙең бүләсәребеҙ була.*

**БҮЛӘТЕЙ** *и. бот. диал. ҡар.* **ҡара һоло.** *Бүләтей орлоғо.*

**БҮНӘТӘЙ** [рус. *понятой*] (Р.: понятой; И.: witness; Т.: tanık) *и.*

Тентегәндә, мөлкәтте яҙғанда шаһит итеп саҡырылған кеше. □ Понятой. *Бүнәтәйҙәр билдәләү.* ■ *Ауылда тентеү башланды, ауылдың төрлө мөйөшөнә һалдаттар менән бүнәтәйҙәр йүгерҙе.* С. Агиш. *Беҙҙән ниндәйҙер винтовка эҙләйҙәр икән. Сабит бабай бүнәтәй булып килгән.* Яр. Вәлиев. *Бүнәтәйҙәр, Кинйәғолдоң егерме биш-утыҙ бот ҡарабойҙай төшмәле урыны тәләфләнгән, Әхмәтша карт .. көҙ игенләтә түләргә тейеш, тип таптылар.* Ж. Кейекбаев.

**БҮРАУЫҘ** *и. диал. ҡар.* **ҡыпһыуыр.** *Бүрауыҙынды биреп тор әле, күрше.*

**БҮРЕ** [боронғо төрки *бөрүг* ‘бүре’] (Р.: волк; И.: wolf; Т.: kurt) *и.*

**1.** *зоол.* Эт нәҫеленән булған ҡырағай йыртҡыс йәнлек. □ Волк. / Волчий (лат. *Canis lupus). Ата бүре. Күк бүре. Бүре өңө. Бүре балаһы. Бүре олой. Бүре һуғыу. Бүре һунары.* ■ *[Хәйрүш:] Тирә-яҡта бүреләр өйөрө олой, кот осҡос эре айыуҙар имәндәрҙе йыға баҫып үкерешеп йөрөй, аяҡ аҫтында ағыулы йыландар ыҫылдап шыуыша, ҡарағас ҡыуыштарынан супайҙар таҫрайып ҡарап тора, һалҡын, еүеш ҡанаттары менән битте-күлде сирҡандырғыс һыйпап, ярғанаттар оса.* З. Биишева. *Бүреләр юл ситендә ултырып ҡына ҡалманы, ат артынан ҡыуа төштөләр бит, өсәүһе бер яҡтан, өсәүһе икенсе яҡтан сабалар, әлеге бәләкәйерәге генә сана артынан ҡыуа.* З. Ураҡсин. *[Миңлегөл:] Иплән, Уйылдан ағай! Берәй ерендә ауырттырһаң, бүре һуға алмаҫһың!* Н. Мусин.

**2.** *миф.* Төрки халыҡтарында тотем, тыуҙырыусы һәм ҡурсалаусы булып торған, теше, тырнағы, йөнө, үте һаҡлау һәм дауалау сараһы булып һаналған йәнлек. □ Волк; тотем, прародитель, покровитель тюрков, чьи клыки, когти, шерсть, желчь служат амулетами и лечебными средствами. ■ *Ырыуҙы башлап ебәргән һунарсыны баш бүре тип атағандар.* Халыҡ ижадынан.

**3.** *күсм.* Уҫал, яуыз кешегә ҡарата әйтелә. □ Волк *(употребляется по отношению к злому, жестокому человеку). Ул бүренән бөтә нәмәне лә көтөргә була.*

♦ **Бүре аҙығы** асыуланып әрләгәндә әйтелә торған һүҙ. □ Волчья еда (*употребляется при гневе, возмущении*). ■ *Хәйретдиндең асыуы ҡабарып, ул атты .. тиргәй башланы: «Ах, һин бүре аҙығы, үләт тоҡсайы...»* Н. Иҙелбай. **Бүре алғыр** (*йәки* **ашағыр, йыҡҡыры**) әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә. □ Чтоб ты пропал! *(Употребляется при сильном гневе, возмущении.) досл.* Чтобы тебя волк схватил. **Бүре ауыҙ** 1) ҙур ауыҙлы кешегә ҡарата мыҫҡыллау һүҙе. □ Волчья пасть *(употребляется по отношению к человеку с большим ртом)*; 2) ерле-юҡҡа ауыҙ күтәреп илаған балаға әйтелә. □ Волчья пасть *(о ребёнке, который громко и капризно плачет)*; 3) яман хәбәр һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Волчья пасть *(употребляется по отношению к человеку, который говорит плохую весть). Кит, бүре ауыҙ, юҡты һөйләп ултыраһың;* 4) иҙеүсе, талаусы. □ Мироед. **Бүре бауыр** үтә ҡаты бәғерле, миһырбанһыҙ.

□ Злой, жестокий (*о человеке*). ■ *Эх, замандамы ни эш. Беҙҙең ауыл Фәғилә бахырҙы бүре бауыр Сакай ни ҡара көнгә еткерҙе.* Б. Бикбай. **Бүре бауыры ашаған** бик уҫал, яуыз (*кеше*). □ Злой, жестокий (*о человеке*). **Бүре башы ашарҙай булыу** ныҡ асығыу. □ Сильно проголодаться. *Бүре башы ашарҙай булып ҡайтыу.* ■ *Әлмисаҡ Туҡмаҡлы ашамлыҡтарҙы һыпырҙы ғына. Ситтән ҡарап тороусы булһа, йә был аҫҡа ҡырҡылып йөрөгән, көнө буйына һабан һөрөп, бүре башы ашарҙай булып асығып ҡайтҡан кешеләр, тип уйлар ине.* Б. Бикбай. **Бүренән өркән һарыҡ көтөүе кеүек** ҡурҡыштан эркелешеп ҡасҡан кешеләр төркөмөнә ҡарата әйтелә. □ Как стадо баранов, вспугнённое волком. **Бүреһе олоу** ҙур табыш, файҙаға, уңышҡа осрау. □ Везти *кому* (*о неожиданной удаче*). ■ *Бүреһе олоно Ҡәйүмдең: юҡ ҡына хаҡҡа урағын урҙырыу, игенен һуҡтырыу ғына етмәне, көҙ көнө бер келәт урынына халыҡтан ике келәт иген йыйып алды.* Ғ. Лоҡманов. *[Фаҡиһа:] Ҡайным мәрхүм ҡорҙашың һуғышта үлеп, Шәһиәхмәт ҡайнағаның бүреһе олоно инде.* Ж. Кейекбаев. **Ҡарт бүре** күпте күреп, йышылған кешегә ҡарата әйтелә. □ Старый волк, матёрый волк (*о бывалом, опытном человеке*). ■ *[Котлояр:] Һеҙ әле мине, ҡарт бүрене, алдамаҡсы булаһығыҙмы әле? Мин һеҙҙең кеүекте күрмәгәнме?* Һ. Дәүләтшина. **Эстә бүреләр олоу** бик ныҡ асығыу. □ Сильно проголодаться. ■ *Тик быуа асыҡтырған, эстә бүреләр олой.* А. Карнай.

**БҮРЕ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, үҫәргән, түңгәүер ҡәбиләләре аймағы. □ Буре (*название родового подразделения башкир племён бурзян, усерган, тунгаур*). *Бүре аймағы башҡорто.*

**БҮРЕ III** (Р.: волчий; И.: wolf; T.: kurt) *с. мәғ.*

Бүре (I) тиреһенән тегелгән. □ Волчий. *Бүре толоп. Бүре яға. Бүре тун. Бүре кәпәс.* ■ *Юрған аҫтында Емеш тағы ла нығыраҡ ҡалтырай башланы. Апаһы уның өҫтөнә көпө лә, иренең бүре толобон да өҫтәп япты.* З. Биишева. *Насир бүре кәпәсен сөйгә элде, тунын сисмәне, түшендәге бер төймәһен генә ысҡындырҙы ла ашыҡмай ғына үтеп ултырҙы.* З. Ураҡсин.

**БҮРЕ АУЫҘЫ** (Р.: волчий ободок; И.: wolf's jaws; T.: kurt ağzı) *и. миф.*

Бүренең тунап алып, киң итеп киптерелгән ауыҙ тиреһе; таҙартыу, һаҡлау көсөнә эйә. Уның аша ауырыуҙарҙы һәм түлһеҙ ҡатындарҙы үткәргәндәр. □ Волчий ободок (*вырезанные целиком и высушенные края пасти волка, которые выполняют функцию очищающего ободка; через него пропускают больных и бесплодных женщин*). ■ *Быума тигән ауырыуҙы бүре ауыҙы аша үткәргәндәр.* Башҡорт мифилогияһынан.

**БҮРЕ АУЫҘЫНАН ҮТКӘРЕҮ (бүре ауыҙынан үткәр-)** (Р.: пропускать через волчий ободок; И.: pass through wolf's jaws; T.: büyü ile tedavi etmek) *к. миф.*

Төрлө им өсөн кешене бүренең тунап алып, киң итеп киреп киптерелгән ауыҙ тиреһе эсенән үткәреү. □ Пропускать через волчий ободок с целью лечения и заговаривания от болезней. *Бүре ауыҙынан үткәреп имләгәс кенә һауығып китеү.*

**БҮРЕ АЯҒЫ** (Р.: плаун; И.: lycopodium; T.: kibrit otları) *и. бот.*

Һабағынан ергә тармаҡланып таралыусы күп йыллыҡ мәңге йәшел үҫемлек. □ Плаун (лат. *Lycopodium*). *Бүре аяғы баҫҡан тау бите.*

**БҮРЕ БАҘЫ** (Р.: волчья яма; И.: pitfall; T.: tuzak) *и.*

Һунарҙа йәнлектәрҙе эләктереү өсөн ҡаҙылған баҙ. □ Волчья яма. *Һунарсылар бүре баҙы ҡаҙҙы.*

**БҮРЕ БАЛАҺЫ** (Р.: волчонок; И.: wolf cub; T.: kurt yavrusu) *и.*

Бүренең көсөгө. □ Волчонок. ■ *Бына бер аңра бүре балаһы иҫәр бәрәстең ҡойроғонан тартты.* М. Кәрим. *Хәйер, ышан һин уға. Әйтмәһә лә, ризаһыҙлығы йөҙөнә сыҡҡан.*

*Эйе, бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай инде.* Ә. Хәкимов.

**БҮРЕБАҪАР** (Р.: волкодав; И.: wolf-hound; Т.: kurt köpeği) *и.*

Бүрегә һунар итә торған эре, көслө эт. □ Волкодав. *Бүребаҫарҙар менән һунар итеү.*

**БҮРЕБАШ** *и. диал. ҡар.* **бөгәзе 1.** *Салғы бүребашы эшләү.*

**БҮРЕ БАШЫ** (Р.: волчий череп; И.: wolf's skull; Т.: kurt kafatası) *и. миф.*

Бүренең һаҡлаусы көскә эйә булыусы баш һөйәге. □ Волчий череп, имеющий обережную силу. ■ *Мал-тыуар имен булһын, тип ҡапҡа төбөнә бүре башы күмеү йолаһы булған.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕБОРОС** *и. бот. диал. ҡар.* **айыу емеше.** *Бүреборос ҡыуағы.*

**БҮРЕ ЕГЕТ** (Р.: волк-джигит; И.: bold fellow born from a woman and a hunter; Т.: masal kahramanı, kurt-yiğit) *и. миф.*

Башҡорт әкиәттәрендә, этиологик мифтарҙа осраған, бүре менән ҡатындан йәки һунарсы менән инә бүренән тыуған егет. □ Волк-джигит, сказочный персонаж башкирских сказок, рождённый от сожительства волка и женщины или охотника и волчицы.

**БҮРЕ ЕЛӘГЕ** (Р.: волчья ягода; И.: spurge flax; Т.: mezeryon) *и. бот.*

**1.** Ашарға ярамаған ҡыҙыл емешле ваҡ япраҡлы ҡыуаҡ. □ Волчья ягода, волчье лыко (лат. *Daphne mezereum*). *Бүре еләге бешкән. Бүре еләгенән ағыуланыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **эт ҡарағаты.** *Бүре еләге ҡыуағы.*

**3.** *миф.* Сихырлауҙа ҡулланылыусы бүре еләге. □ Волчья ягода, используемая для наведения порчи. *Бүре еләге менән боҙомлау.*

**БҮРЕ ЕМЕШЕ** (Р.: кизильник черноплодный; И.: cotoneaster plant species; Т.: dağ muşmulası) *и. бот.*

**1.** Алһыу сәскәле, сағыу ҡыҙыл йәки ҡара емешле, ваҡ сейә япраҡлы урманлы тау ҡыуағы. □ Кизильник черноплодный (лат. *Cotoneaster*). *Бүре емеше бешкән.*

**2.** *диал. ҡар.* **эт муйылы.** *Бүре емеше ашап ағыуланыу.*

**3.** *диал. ҡар.* **бүре еләге 1.** *Бүре емешен яңылыш ауыҙға алыу.*

**БҮРЕ ИСЕМЕ** (Р.: имя с компонентом «волк»; И.: name having «wolf» as its part; Т.: «kurt» kelimesiyle yapılan ad) *и. миф.*

Һаҡлаусы көскә эйә булыусы *бүре* һүҙенән яһалған исем. □ Имя с компонентом «бүре», имеющее обережную силу. *Бүрехан. Бүребай.*

**БҮРЕ ЙӨНӨ** (Р.: волчья шерсть; И.: wolf's hair; Т.: kurt yünü) *и. миф.*

Ауырыуҙарҙы һәм яңы тыуған балаларҙы төтәсләүҙә ҡулланылған бүре йөнө; шул уҡ ваҡытта һунарсылар һәм мал өсөн һаҡлаусы булып тора. □ Волчья шерсть, применяемая для окуривания больных и новорождённых; оберег для охотников и скота. ■ *Бала ҡурҡһа бүре йөнө менән ыҫлағандар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ ЙҮКӘҺЕ** *и. бот.*

**1.** *диал. ҡар.* **бүре еләге 1.** *Бүре йүкәһе — ағыулы емеш.*

**2.** *диал. ҡар.* **осҡат.** *Бүре йүкәһе ҡаяла лыпашып ятып тамырҙан тамырға йәйелеп үҫә.*

**БҮРЕ ЙӘЛДӘК (йәлдәге)** (Р.: название рода башкир; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и.*

Йәлдәк ҡәбиләһе ырыуы. □ Буре-ельдяк *(название рода башкир племени ельдяк). Бүре йәлдәк башҡорто.*

**БҮРЕК I (бүрке)** [боронғо төрки *бөрк, пөрүк* 'бүрек, яулыҡ'] (Р.: шапка; И.: furcap; Т.: başlık) *и.*

**1.** Һырып, тышлап тегелгән йылы баш кейеме. □ Шапка. / Шапочный. *Илтер бүрек. Ҡама бүрек. Ҡырма бүрек. Ҡаракүл бүрек. Ҡуян бүрек. Ҡатын-ҡыҙ бүрке. Ирҙәр бүрке. Ҡолаҡсынлы бүрек.* ■ *[Ҡолбаев] тейен бүркен һалып, уның өҫтәленә шапылдата ҡуйҙы ла ҡаҡ маңлайын тызыны.* Н. Мусин. *Салауат нисә йәшендә, йәшел ҡамсат бүрке башында.* Халыҡ йырынан. *[Сәғиҙулла] йөнө ҡырылып бөткән бәрән бүркен күҙенә*

*баҫыбырак кейеп, ҡояшҡа ҡарап алды.* З. Биишева.

**2.** Ҡайһы бер ҡоштарҙың түбәһендәге өлтәйеп торған йөнө; супай, өлтөк. □ Хохол, хохолок *(у птиц). Ҡайһы бер ҡоштарҙың бүрке була.* ■ *Күк күгәрсенкәйҙәрҙең күркенә, ҡарап торҙом йәшел бүркенә.* Халыҡ йырынан. *Ата турғайҙың түшендә ҡара тап, ә башында — ҡуйы һоро бүрек.* «Йәншишмә», 1 апрель 2009.

**3.** *миф.* Ирҙәрҙең власты, көстө кәүҙәләндергән баш кейеме. □ Мужская шапка, имеющая мужскую символику, символ власти.

♦ **Бүрек менән кәңәшләшеү** *шаяр.* Үҙ алдыңа уйлап, ҡарар итеү. □ Принимать самостоятельное решение. *букв.* Советоваться с шапкой. **Бүрек сөйөү** баш кейемен юғары ырғытып, хуплау, ҡотлау. □ Приветствовать, выражать восторг и одобрение, подбрасывая вверх шапки. ■ *Уларҙы [Салауаттарҙы] халыҡ солғап алған... Ҡылыс, һөңгө күтәреп, кәпәс сөйөп, батырҙарҙы ҡотлайҙар.* М. Кәрим. **Бүрек һалыу** түбәнселек менән үтенеү *кем алдында, кемгә.* □ Ломать шапку *перед кем (кланяться, унижаться).* **Бүректә үҫкән** ҡара эшкә ярамаған, кәгез кешегә әйтелә *(о слабом, щуплом человеке).* □ Недоносок. *букв.* Выросший в шапке. **Бүркен тышлау** кәрәген биреү, ныҡ ҡына туҡмау, дөмбәҫләү. □ Дать по шапке, наказать. **Бүректе ергә ороу** *нимәнелер* мотлаҡ эшләйем, үтәйем тип, бүрек ташлап һүҙ биреү. □ Дать твёрдое слово. *досл.* Кидать шапку. **Бүректе (*йәки* кәпәсте) алып һуғыу** *кар.* **бүректе ергә ороу. Бурҙың бүрке яна** ғәйепле кеше барыбер тотола мәғәнәһендә. □ На воре шапка горит.

**БҮРЕК II (бүрке)** (Р.: доска, прибиваемая над окном, дверью; И.: board nailed above a window or a door; T.: kapı veya pencere üzerindeki tahta) *и. диал.*

Тәҙрә йәки ишек ҡашы. □ Доска, прибиваемая над окном или дверью с внутренней стороны в деревенских избах. *Ишек башына бүрек сөйләү.*

**БҮРЕК АЛЫУ (бүрек ал-)** (Р.: срывание шапки; И.: ethnographic ceremony; T.: düğün töreni) *и. этн.*

Туйға килгән ҡоҙаларҙың юлына ҡаршы сығып, бүректәрен талау (*ҡоҙа хаҡ түләп кире ала*). □ Срывание шапки (*свадебный обряд: у приезжих сватов отнимают шапки и возвращают за вознаграждение*). *Ҡоҙалар ауылға килеп ингәс тә, бүрек алыу башланды.*

**БҮРЕКБАШ** (Р.: сморчок; И.: morel; T.: kuzugöbeği) *и. бот.*

Ҡыҫҡа һабаҡлы сөрөшөп торған башлы көрән бәшмәк. □ Сморчок (съедобный гриб) (лат. *Morchella*). *Бүрекбаш йыйыу.*

**БҮРЕКЛЕ** (Р.: в шапке; И.: with a furcap on; T.: şapkalı) *с.*

**1.** Бүрек кейгән. □ В шапке. *Бүрекле кеше.* ■ *Сафагәрәй хан яугирҙарынан ҡотолған кешене төрлө яҡтан йыйылған сауҙагәрҙәр уратып ала. Улар араһында һоро йәки ҡара ҡаракүлдән тегелгән ҡырма бүрекле әрмәндәр ҙә бар.* К. Мәргән. ● *Күкрәкленең башы бүрекле.* Әйтем.

**2.** Өлтөклө. □ Хохлатый. *Бүрекле тауыҡ. Бүрекле өйрәк.*

**БҮРЕКЛЕ БӨРКӨТ** (Р.: гарпия; И.: harpy; T.: harpiya kartalı) *и. зоол.*

Башында бүрке булған ҙур йыртҡыс ҡош. □ Гарпия (лат. *Harpia*). *Бүрекле бөркөт балаһы.*

**БҮРЕКЛЕ КҮБӘЛӘКТӘР** (Р.: хохлатки; И.: notodontidae; T.: çentikli kelebekler) *и. зоол.*

Алғы ҡанаттарының артҡы өлөшөндә бүрке булған күбәләктәр төрө. □ Хохлатки, хохлачи (лат. *Notodontidae*). *Бүрекле күбәләктәр оса.*

**БҮРЕКЛЕ ҠАРА ӨЙРӘК (өйрәге)** (Р.: чернеть хохлатая; И.: tufted duck; T.: tepeli patka) *и. зоол.*

Соср һыу яҡтылыҡтарында йәшәүсе ҙур башлы, нәҙек муйынлы, башлыса ҡара ҡауырһынлы аҡһыл түшле өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған ҡош. □ Чернеть хохлатая (лат. *Aythya fuligula*). *Һыуҙа бүрекле ҡара өйрәктәр йөҙә.*

**БҮРЕКЛЕ САРЛАҠ (сарлағы)** *и. зоол. ҡар.* **керелдәк сарлаҡ.** *Яр буйында бүрекле сарлаҡтар оса.*

**БҮРЕКЛЕ ТЕБЕЙЕК (тебейеге)** (Р.: хохлатая синица; И.: crested tomtit; Т.: tepeli baştankara) *и. зоол.*

Башында арҡыры ҡара һыҙыҡтары булған аҡ түҙтәге бүрекле, аралаш һәм ылыҫлы урмандарҙа йәшәүсе турғайҙан бәләкәйерәк ултыраҡ ҡош. □ Хохлатая синица (лат. *Lophophanes cristatus*). ■ *Бүрекле тебейек төрлө бөжәктәр һәм уларҙың ҡурсаҡтары менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**БҮРЕКЛЕ ТЮЛЕНЬ** (Р.: хохлач; И.: hooded seal; Т.: boz fok) *и. зоол.*

Тюлендәр ғаиләһенә ҡараған, башында бүрке булған, балыҡтар менән туҡланыусы арктик йәнлек. □ Хохлач, тевяк (лат. *Halichoerus grypus*). *Бүрекле тюлендәр ярға сыҡҡан.*

**БҮРЕКЛЕ ҺАБАН ТУРҒАЙЫ** (Р.: хохлатый жаворонок; И.: crested lark; Т.: tepeli toygar) *и. зоол.*

Ҙур көрән осло бүрекле ауыл тирәһендәге асыҡ урындарҙа йәшәүсе турғайҙан ҙурыраҡ ултыраҡ ҡош. □ Хохлатый жаворонок (лат. *Galerida cristata*). ■ *[Бүрекле һабан турғайының] һырт яғы һорғолт көрән, аҡ һәм ҡара таптар менән сыбарланған.* Э. Ишбирҙин.

**БҮРЕ КӨПШӘҺЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **айыу көпшәһе.** *Бүре көпшәһе һындырып алыу.*

**БҮРЕКСЕ** (Р.: шапочник; И.: furcap maker; Т.: şapkacı) *и.*

Бүрек тегеүсе. □ Шапочник (*мастер, шьющий шапки*). ■ *[Хәтмулланың] атаһы Насип ҡарт, ғүмер-ғүмергә игенсе булып йәшәүе өҫтөнә, ауылда оҫта итексе һәм бүрексе лә ине.* «Ағиҙел», № 7, 2011. ● *Баш барҙа бүрексе бөтмәҫ, аяҡ барҙа итексе бөтмәҫ.* Мәҡәл.

**БҮРЕКСЕЛЕК (бүрекселеге)** (Р.: шапочничество; И.: fur-cap maker's trade; Т.: şapkacılık) *и.*

Бүрек тегеү шөғөлө. □ Шапочничество, ремесло шапочника, шапочное дело. *Бүрекселек менән шөғөлләнеү.*

**БҮРЕКТЕКӘЙ** (Р.: хохлатая курица; И.: crested hen; Т.: tavuk) *и. диал.*

Бүрекле тауыҡ. □ Хохлатая курица. *Был бүректекәй башҡа тауыҡтар араһында айырылып тора.*

**БҮРЕКТЕКӘЙ СЫПСЫҠ (сыпсығы)** *и. зоол. диал. ҡар.* **суҡтурғай.** *Бүректекәй сыпсыҡтар сырылдаша.*

**БҮРЕК УЙЫНЫ** (Р.: игра в шапки; И.: ancient young people's game; Т.: oyun türü) *и. этн.*

Баш кейемен юғалтыусыны язалауға ҡоролған йәштәр уйыны; башлыҡтарҙы һынау мотивын сағылдыра. □ Игра в шапки (*молодёжная игра, в которой наказывается тот, кто потерял шапку; реликт испытания правителей*). *Бүрек уйыны уйнау.*

**БҮРЕ КӘКҮГЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **һөтлөгән.** *Бүре кәкүге йыйыу.*

**БҮРЕ ҠАМҒАҠ (ҡамғағы)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе аймағы. □ Буре камгак (*название родового подразделения башкир племени кыпчак*). *Бүре ҡамғаҡ аймағы башҡорто.*

**БҮРЕ ҠУҘҒАЛАҒЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **атҡолаҡ.** *Ҡаҙҙарға бүре ҡуҙғалағы орлоғо йыйып ашатыу.*

**БҮРЕҢКЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **бәрәңге.** *Бүреңке бешереү.*

**БҮРЕҢКЕ ГӨЛӨ** (Р.: бегония клубневая; И.: sort of window plants; Т.: çiçek türü) *и. бот. диал.*

Төбөндә бүлбеһе булған күк сәскәле бүлмә гөлө. □ Бегония клубневая (лат. *Begonia tuberosu*). *Бүреңке гөлө сәскә атҡан.*

**БҮРЕСЕ** (Р.: волчатник; И.: wolf hunter; Т.: kurt avcısı) *и.*

Бүре һунарсыһы. □ Волчатник (*охотник*). ■ *Бөгөн көндөң шәмәреүенә-боҙолоуынамы икән, таң атыр-атмаҫтан ялпаң-*

*лап, тау-таш гиҙгән бүресе Якуп та күренмәй.* Т. Хәйбуллин.

**БҮРЕ СЕЙӘҺЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **эт сейәһе.** *Бүре сейәһе ҡыуағы.*

**БҮРЕ СЫБЫҒЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **бүре еләге 1.** *Бүре сыбығынан ағыуланыу.*

**БҮРЕҪ I** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй, мырҙалар ҡәбиләләре аймағы. □ Бурес *(название родового подразделения башкир племен ай, мурзалар). Бүреҫ аймағы башҡорто.*

**БҮРЕҪ II** (Р.: злой; И.: evil; Т.: kasıtlı) *с. диал.*

Яһил. □ Злой, коварный. *Бүреҫ кеше.*

**БҮРЕҪ ҮЛӘНЕ** *и. диал. ҡар.* **бүҫер үләне.** *Бүреҫ үләне йыйыу.*

**БҮРЕ ҪЫРҒАҒЫ** *диал. ҡар.* **аҡман-тоҡман.**

**БҮРЕ ТАБАН(Ы)** (Р.: вид аппликации; И.: kind of applique; Т.: aplike türü) *и.*

**1.** Ҡорама биҙәктең бер төрө. □ Волчья стопа *(вид аппликации). Таҫтамалға бүре табан биҙәге һалып сигеү.*

**2.** Һаҡлау көсөнә эйә булған биҙәк исеме. □ Волчья стопа *(название узора; выполняет обережную функцию). Бүре табаны сигелгән кулъяулыҡ йөрөтөү.*

**БҮРЕ ТАРАМЫШЫ** (Р.: сухожилие волка; И.: wolf's sinew; Т.: kurt kirişi) *и. миф.*

**1.** *ҡар.* **тарамыш.**

**2.** Бурҙы табыр өсөн яндырыла торған бүре тарамышы. □ Сухожилие волка, сжигаемое при поисках вора. ■ *Бурҙы табыр өсөн бүре тарамышы яндыралар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ ТЕШЕ** (Р.: волчий клык; И.: wolf's fang; Т.: kurdun köpekdişi) *и.*

**1.** *ҡар.* **теш.**

**2.** *миф.* Мифологияла һаҡлау сараһы булып тороусы бүре теше. □ Волчий клык, используемый как амулет; оберег. ■ *Бүре тешен бишеккә элһәң, ен-шайтан килмәй.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ ТИРЕҺЕ** (Р.: волчья шкура; И.: wolf's skin; Т.: kurdun derisi) *и.*

**1.** *ҡар.* **тире.**

**2.** *миф.* Мифологияла кешене, уның йортон һаҡлаусы булараҡ ҡулланылыусы бүре тиреһе. □ Волчья шкура, оберегающая человека, его дом от нечистой силы. ■ *Бүре тиреһенән тегелгән тун ен-шайтандан һаҡлай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ ТУБЫҒЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **айыу көпшәһе.** *Бүре тубығы һындырып алыу.*

**БҮРЕ ТУН** (Р.: волчья шуба; И.: fur coat made of wolf's skin; Т.: kurt derisinden körkü) *и. этн.*

**1.** Бүре тиреһенән тегелгән тун *(юғары дәрәжәне, олпатлыҡты белдерә).* □ Волчья шуба, являющаяся символом знатности, высокого статуса. *Бүре тун кейгән тархандар.*

**2.** Туй йолаһында ҡоҙаларҙы оҙатҡанда кейелгән тире тун. □ Шуба, надеваемая при проводах сватов.

**БҮРЕ ТЫРНАҒЫ I** (Р.: горец змеиный; И.: common bistort; Т.: kurt pençesi) *и. бот.*

Оҙонса япраҡлы, ал төҫтәге ваҡ өйкөм сәскәле, ҡыҙыл тамырлы һыуһыл ер үләне. □ Горец змеиный (лат. *Polygonum bistorta). Бүре тырнағы сәскә атҡан.*

**БҮРЕ ТЫРНАҒЫ II** (Р.: волчьи когти; И.: wolf claws; Т.: kurt pençeleri) *и.*

**1.** *ҡар.* **тырнаҡ.**

**2.** *миф.* Мифологияла һаҡлаусы сара булараҡ бүре тырнағы. □ Волчьи когти, оберег, амулет. ■ *Бүре тырнағын баланың сәңгелдәгенә элеп ҡуйғандар, күҙҙән, сирҙән, биренән һаҡлаһын, тип.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ УЙЫНЫ** (Р.: название народной игры; И.: name of a popular game; Т.: halk oyunu) *и. этн.*

Уйын исеме. □ Название народной игры *(реликт тотемизма). Бүре уйыны уйнау.*

**БҮРЕ УТЫ** *и. диал. ҡар.* **сабыртҡы.** *Тәнемә бүре уты сыҡҡан.*

**БҮРЕҮ** (Р.: отек ног; И.: (o)edema in the legs; Т.: ayak şişmesi) *и. диал.*

Аяҡ шеше. □ Отек ног. *Аяғының бүреүе ҡалҡҡан.*

**БҮРЕ ҮТЕ** (Р.: волчья желчь; И.: wolf's bile; Т.: kurt safrası) *и.*

**1.** *кар.* **үт.**

**2.** *миф.* Һаҡлаусы көскә эйә булыусы, йүткереүҙе дауалағанда ҡулланылған бүре үте. □ Волчья желчь, имеющая обережную силу, используемая от чахотки. ■ *Бүре үте, төлкө үте имгә һәйбәт. Кеше йүткереп ауырыһа, бүре үте эсергәндәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ ҮТКӘРМӘҺЕ** (Р.: волчий ободок; И.: wolf's rim; Т.: bir örf) *и. миф.*

Ауырыуҙан һәм яман көстәрҙән һаҡлау өсөн яңы тыуған баланы, бала тапкан әсәне бүре үткәрмәһе аша үткәргәндәр. □ Волчий ободок; через него продевают новорождённого, роженицу, чтобы предохранить от болезней и злых духов. ■ *Оҙаҡ балаһы булмаған ҡатынды бүре үткәрмәһе йәки доғалар яҙылған үткәрмә аша үткәреү йолаһы булған.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРЕ ҺӨЙӘГЕ** *и. кар.* **бүреһуғар һөйәге.** *досл.* Волчья кость. ■ *Бүре һөйәгенә теште тейҙермәй генә ашарға, юкһа малыңды бүре ҡырыр.* Экспедиция материалдарынан.

**БҮРЕҺУҒАР** *и. кар.* **бүреһуғар һөйәге.**

**БҮРЕҺУҒАР БЫУЫН** *и. анат. кар.* **туларһыҡ быуыны.**

**БҮРЕҺУҒАР ТАРАМЫШ** (Р.: ахиллово сухожилие; И.: Achilles' tendon; Т.: Aşil tendonu) *и. анат.*

Үксәне бөгә һәм яҙа торған тарамыш. □ Ахиллово сухожилие. *Бүреһуғар тарамышы тартылыу.*

**БҮРЕҺУҒАР ҺӨЙӘГЕ** *и.*

**1.** *кар.* **туларһыҡ.**

**2.** *миф.* Малдың туларһыҡ һөйәге *(ашағанда уға теш тейҙермәй генә ашарға кәрәк, юкһа киләһе йыл малыңды бүре ҡыра).* □ Предплюсна *(по примете, когда ешь мясо, нельзя задевать шейные кости, иначе на следующий год твою скотину волк задерёт).*

**БҮРЕ ҺЫРҒАҒЫ** *и. диал. кар.* **аҡман-тоҡман.** *досл.* Волчий буран. *Март айында бүре һырғағы була.*

**БҮРЕ-ҺӘРЕ** (Р.: зверьё; И.: wild beasts; Т.: hayvanlar) *и. йыйн.*

Бүре һәм башҡа йыртҡыс йәнлек. □ *собир.* Зверьё. ■ *[Ибраһим — көтөүселәргә:] Илла-мәгәр йоҡоғоҙға баш булығыҙ, бүре-һәре йәбешмәһен.* Й. Мостафин.

**БҮРЕ ЫУЫ** *и. диал.*

**1.** *кар.* **сабыртҡы.** *Тәнде бүре ыуы ҡаплау.*

**2.** *миф.* Тәндең ҡыҙыл таптар менән ҡапланыуы. □ Крапивница, сыпь. Реликт тотемизма. Больного лечат обтиранием в бане волчьей шкурой и волчьим жиром, при этом знахарь издает звуки, имитирующие рык и вой волка. ■ *Бүре ыуын бүре бейәләйе менән бөтөрәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮРКЕЛ** (Р.: хохлатый; И.: crested; Т.: tepeli) *с. диал.*

Бүрекле. □ Хохлатый. *Ҡайһы тауыҡ бүркел була.*

**БҮРТЕК** (Р.: низкорослый; И.: undersized; Т.: kısa boylu) *с. диал.*

Тәбәнәк. □ Низкорослый *(о человеке). Бүртек егет.*

**БҮРТЕНЕҮ (бүртен-)** *ҡ.*

**1.** *кар.* **бүртеү 1, 2.** *Ирене бүртенгән. Ҡан тамыры бүртенгән.* ■ *Кәмә ямғыр һыуын эсеп, бүртенеп киткән.* К. Мәргән. *Емеш, һыуға бүртенгән ботинка баштарына теклән, һүҙһеҙ тора бирҙе.* З. Биишева. *Һыуға бүртенгән үлән тамырҙары тупраҡ ярып, ер аҫты ҡараңғылығынан тышҡа бәреп сығалар.* Ә. Чаныш.

**2.** *кусм.* Асыуҙан, оялыуҙан, көсөргәнеүҙән биткә ҡан йүгереп тулышыу. □ Надуваться. ■ *Халыҡ оҙаҡ ҡул сапты. Әхмәт кенә ҡырын ҡарап, бүртенеп ултырҙы.* Б. Хәсән. *Шәхми ыҡ-мыҡ итте, ҡыҙарынды, бүртенде.* Т. Йәнәби. *Ғәли һаман белмәмешкә, күрмәмешкә һалышты, ләкин һаман ҡыҙара, бүртенә ине.* М. Ғафури.

**БҮРТЕҮ (бүрт-)** (Р.: набухать; И.: swell; Т.: şişmek) *ҡ.*

**1.** Эстән тулышып тиртеү; бүртенеү, ҡабарыу. □ Набухать. *Ҡан тамырҙары бүртә. Ирене бүртеп китә. Бүртеп сығыу.* ■ *Тышта ла томра булғанлыҡтан, завод*

*эсендә һәр ваҡыт тын тарыҡмалы бөркөү, һауа уғата әҫе, тын алырға ла мөмкин түгел, ҡыҙара бүрткән биттәрҙән субырлап тир аға.* Ж. Кейекбаев. *Ғәҙилә әбей тамырҙары бүртеп торған ҡулын алмаш-тилмәш һыпырҙы.* «Ағиҙел», № 2, 2010.

**2.** Дым тартып, күләме ҙурайыу. □ Набухать, вздуваться. ■ *Дымланып бүртеп киткән шинелдәр һаман ауырая.* Ф. Иҫәнғолов. *Мәҙинә иртәнсәктән ҡалған бер сынаяҡ бүрткән бойҙай менән картуфты ҡабығы-ние менән ҡуша төйөп игеҙәктәрҙең ауыҙына ҡаптыра башланы.* Т. Ғарипова. *Ә ярма бүрткән дә бүрткән, ти, ярма бүрткәс, сүлмәк тулып киткән, ти.* Әкиәттән. *Шул уҡ ҡайындың ер өҫтөнә бүртеп сығып торған тамырына төшө ҡағып, Төлкөсура иртәнге һалҡында урман яңғыратып салғы сүкер ине.* Н. Мусин.

**3.** Һутка, дымға тулышып, моронларға етешеү *(бөрөгә, орлоҡҡа ҡарата).* □ Набухать. ■ *Сәпсектәрҙең сипылдашыуында, бына бүртәм, бына бүртәм, тип торған бөрөләрҙә .. – бөтә нәмәлә яҙ тыны һиҙелә.* З. Хисмәтуллин. *Баҡсаларҙа, хуш еҫ бөркөп, бөрө бүртә. Ә яҙғы ел уны һөйөп, үбеп үтә.* Р. Назаров.

**4.** Ҡалҡыу, сығыу. □ Выступать, выдаваться. ■ *Төшөндә лә ошо йөҙөк менән һаташты Григорий. Шундай шәп килеп сыҡҡан ул: түп-түңәрәк, өҫтө бүртә биреберәк тора, үҙенән күҙ сағылдырғыс саткылар сәселә.* Н. Мусин

♦ **Ҡыҙара бүртеү** ҡанға тулышып ҡыҙарыу. □ Наливаться кровью *(о лице – от удовольствия, стыда, гнева).* *Ҡыҙара бүртепултырыу.* ■ *Ҡымыҙ эсеп, ҡыҙара бүртеп, ҡыҙҙар һөйгөң киләме?* Халыҡ йырынан.

**БҮРТЛЕК (бүртлеге)** (Р.: чердак; И.: attic; Т.: çatı) *и.*

Өйҙөң, һарайҙың ҡыйыҡ эсе. □ Чердак./Чердачный. *Бүртлек тәҙрәһе. Бүртлек аҫты. Бүртлеккә бесән һалыу.*

**БҮРТЛЕКСӘ** *и. диал. ҡар.* **бүртлек.** *Бүртлексәгә бесән бушатыу.*

**БҮРТЛӘС** (Р.: пухлый; И.: plump; Т.: şişkin) *с.*

Бүртеп, ҡабарып торған; ҡабарынҡы. □ Пухлый. ■ *Бүртләс ирендәре өҫтөндә мыйығы ярып сыға башлаған егет кенә ине әле Сабирйән ул саҡта.* М. Хәйҙәров.

**БҮРТМӘКЕС** *и. диал. ҡар.* **ҡуянтубыҡ.** *Заманында бүртмәкесте күп ашаныҡ инде.*

**БҮРТМӘС I** (Р.: выпуклый; И.: embossed pattern; Т.: çıkık) *с.*

**1.** Бүртеп-бүртеп торған бөрсөклө. □ Выпуклый *(об узоре). Бүртмәс яулыҡ.* ■ *Уҡытыусы Зәйнәп уларға [балаларға] китаптан шиғыр күсереп яҙырға ҡушҡан да, үҙе башындағы елбәгәй һалған йәшел бүртмәс яулығының сәсәктәрен ҡулында уйнатып, .. тәрән уйға батҡан.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал. ҡар.* **бөрмә I.** *Ыштан бүртмәсе.*

**3.** Бүртеп, бүлтәйеп сыҡҡан; күпкәк. □ Вздутый. *Бүртмәс ҡорһаҡ.*

**БҮРТМӘС II** *и. диал. ҡар.* **ҡуянтубыҡ.** *Бүртмәс ҡаҙып ашау.*

**БҮРТМӘС III** *и. ҡар.* **бүртмәс бутҡа.** *Бүртмәс бешереү.*

**БҮРТМӘС БУТҠА** (Р.: обрядовая каша; И.: ceremonial gruel; Т.: düğün yemeği) *и. этн.*

Туй бөтөүгә ҡарата, ярмаһы бүрттереп кенә алынған, яртылаш бешерелгән бутҡа. □ Обрядовая слегка недоваренная каша, подаваемая в день завершения свадьбы. *Бүртмәс бутҡа йәһәт әҙер булыр ине.*

**БҮРТТЕРЕҮ (бүрттер-)** (Р.: замачивать; И.: wet; Т.: suya batırmak) *ҡ.*

**1.** Һыуға һалып йомшартыу *(борсаҡ, ярма кеүек нәмәне).* □ Слегка отваривать (например, *зерно, крупу*). *Борсаҡ бүрттереү. Дөгө бүрттереү.* ■ *«Бүрттерергә ҡуйған борсаҡ ҡына бар. Борсаҡ!» – тип ҡыуанды Ишбирҙе.* М. Кәрим.

**2.** Һутка, дымға тулыштырып, моронлау хәленә еткереү. □ Замачивать. *Орлоҡто бүрттереү.*

**БҮРТӘ I** [боронғо төрки *бугурта* 'һарғылт аҡ'] (Р.: караковый; И.: dark bay; Т.: doru) *с.*

Аҡ менән туры ҡатнаш *(йылҡы төҫөнә ҡарата).* □ Караковый *(о масти лошади). Бүртә бейә.* ■ *Арҡаларҙа уйнай бүртә атым, туғайҙарҙа уйнай туры атым.* Халыҡ йырынан. *[Ғаил ағай] эсе ҡабарып торған бүртә күк бейәһе менән сабып килде лә, ҡонаҡҡа йүгән кейҙереп, ул ҡарышһа ла, ай-вайына ҡуймай, ситкә, ваҡ ҡайынлыҡтар араһына, кертеп бәйләп ҡуйҙы.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**БҮРТӘ II** (Р.: караковый конь; И.: dark bay horse; Т.: doru at) *и.*

Бүртә төҫтәге ат. □ Караковый конь. *Күк бүртә.* ■ *Хәсән кешнәп торған бүртәне егә башланы.* С. Агиш. *Күк бүртә таҡыр юл буйлап һалмаҡ ҡына юрта.* И. Нигмәтуллин. *Аҡланға һыбайлылар сабышып килеп керҙе. Иң алдан аҡҡош муйынлы бүртәлә Роман-һеләүһен елә.* Б. Рафиҡов. *Икенсе көн күк бүртәне егеп алдым да бесәнгә киттем.* З. Хисмәтуллин.

**БҮРТӘЙЕҮ (бүртәй-)** *ҡ. ҡар.* **бүлтәйеү.** ■ *Рахмайҙың ирендәре бүртәйеп, үҙенә килешеп тора.* К. Кинйәбулатова.

**БҮРӘЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуы аймағы исеме. □ Бурэй *(название родового подразделения башкир племени бурзян). Бүрәй аймағы башҡорто.*

**БҮРӘК (бүрәге)** [төрки сығанаҡлы] *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **тырыз I.** *Бүрәккә бәшмәк йыйыу.*

**2.** *ҡар.* **эремсек билмәне.** *Бүрәк бешереү.*

**БҮРӘНӘ I** [рус. *бревно*] (Р.: бревно; И.: log; Т.: kütük) *и.*

Ҡырҡып, боталған оҙон йыуан ағас. □ Бревно. *Бүрәнә башы. Өй бүрәнәһе. Таҡта бүрәнәһе. Йомро бүрәнә. Бүрәнә һаллау. Бүрәнә әрсеү. Бүрәнә күпер. Бүрәнә өй.* ■ *Киң яурынлы, әзмәүерҙәй йәш егет һалмауыр алып торманы, әллә сәмләнеп, әллә асыуланып, бүрәнәнең бер яҡ башынан күтәрҙе лә ситкә ырғытты.* Н. Мусин. *Бүрәнә өйҙөң түр яғына буйҙан-буй түшәлгән урындыҡҡа йөндән һуғылған балаҫ йәйелгән, стена буйлатып аҡ кейеҙ түшәлгән, төпкө мөйөшкә эре биҙәкле, сатин тышлы мендәрҙәр ҡабартып ҡуйылған.* З. Ураҡсин. ● *Бүрәнә тартһаң, өй була.* Мәҡәл.

♦ **Артыҡ бүрәнә <башы>** кәрәкмәгән артыҡ кешегә ҡарата әйтелә. □ Лишний, ненужный человек. ■ *[Кормой:] Ярар, мин китәйем инде, артыҡ бүрәнә башы булмайым.* Б. Бикбай. **Бүрәнә үтә бүре күреү** белмәгән, күрмәгән көйө белгән булып һөйләү. □ Видеть пень через плетень. *досл.* Видеть волка через стену.

**БҮРӘНӘ КИҪЕҮ (бүрәнә киҫ-)** (Р.: рубить лес; И.: cut wood; Т.: ağaç kesmek) *ҡ. диал.*

Урман ҡырҡыу. □ Рубить лес. *Бүрәнә киҫергә киттем.*

**БҮРӘНӘ ҠОЙМА** (Р.: заплот; И.: solid fence made of logs and planks; Т.: duvar) *и. архит.*

Бүрәнәләрҙән һәм таҡталарҙан торған тоташ ҡойма. □ Заплот. *Бүрәнә ҡоймалы йорт.*

**БҮРӘНӘСЕ** *и. диал. ҡар.* **һалсы.** *Бүрәнәселәрҙең һалы яр ситендә тора.*

**БҮРӘТ** (Р.: бурят; И.: Buryat; Т.: Buryat) *и.*

Бүрәт Республикаһының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе *(монгол телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Бурят. / Бурятский. *Бүрәт халҡы. Бүрәт теле. Бүрәт ҡатыны.*

**БҮҪЕЛДЕРЕҮ (бүҫелдер-)** (Р.: обрушить; И.: bring down; Т.: düşürmek) *ҡ.*

**1.** Ауырлыҡ, көс баҫымы менән ишеү, емереү. □ Обрушить. *Ҡыйыҡты бүҫелдереү.* ■ *Яр аҫтында – ағастан яһалған ҙур тәгәрмәс. Тәгәрмәсте ҡап уртанан бүҫелдереп, һылыу аҡ тирәк үҫеп сыҡҡан.* Й. Солтанов.

**2.** Ҙур итеп үтәнән-үтә йыртыу, ярыу. □ Рвать, лопать. *Күлдәкте бүҫелдереү.* ■ *Немецтарҙың икенсеһе .. саҡ көскә йығылмай баҫып торған Ирназарҙың киң яурынын, гимнастёрка еңен бүҫелдергән тос beләктәрен ҡапшаны.* Ә. Хәкимов.

**БҮҪЕЛЕҮ (бүҫел-)** [боронғо төрки *бөс-* ‘ҡабартыу’] *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бүҫеү 3.** *страд. от* **бүҫеү 3.** *Был малай иптәштәренән бүҫелде генә.*

**2.** Ауырлыҡ, көс баҫымынан ишелеү, емерелеү. □ Продавливаться, проваливаться, проседать. *Түбә бүҫелгән. Ҡыйыҡ бүҫелгән.* ■ *Тик бүҫелеп төшкән ҡыйыҡтың һаламдарын йолҡоп ел олой.* Р. Ғарипов. *Буралағы арыш үҙен кәметкәнгә төҫөн боҙған һымаҡ итеп бер яғынан бүҫелеп, умшырайып ҡалды.* Г. Дәүләтшин.

**3.** Ҙур булып үтәнән-үтә йыртылыу. □ Рваться, лопаться; разорваться по швам. *Итәк бүҫелеп төшкән.* ■ *Миңлегөл башын тегеләй-былай күп тартҡылауҙан биләндәгән ҡола бейәне тынысландыра алмай аҙаплана, бүҫелгән күлдәк итәге ялп-йолп килә.* Н. Мусин. *«Күлдәгең бүҫелеп сыҡҡан бит», — тине Рәшит, арҡама ҡурһәтеп. Ысынлап та, күлдәк уң яҡ яурынынан алып буйҙан-буйға йыртылған ине.* Ш. Насыров.

**4.** Тишек, йыртыҡтан ҡыҫылып тышҡа тибеү; бытлығыу. □ Выбиваться, выдавливаться. ■ *Йыртыҡтарынан йөндәре бүҫелеп сыҡҡан бер-ике мендәр ята.* Г. Ғүмәр.

**5.** Ныҡ тулы, күп булыуҙан артып сығып тороу. □ Вздуваться, вздуться, выбиваться *(о скирдах и др.). Бүртләктә бүҫелеп бесән ята.* ■ *Ауыл ҡунағындағы ишкелле ҡоштабаҡ-ҡоштабаҡ ит бүҫелеп ултырмаһа ла, йыуаса-бауырһаҡ ише нәмә өҫтәлдә сәселеп ятмаһа ла, һый тигәнең байтаҡ ине бында.* Т. Ғарипова.

**6.** *күсм.* Тулышып, һытылырҙай булыу; өрөлөү. □ Набухать, надуться, вздуться. *Бүҫелеп торған елкә. Бүҫелгәнсә ашау.* ■ *Уның хатта, кеүәшнәнән ишелеп сыҡҡан ҡамыр кеүек, бүҫелгән һимеҙ муйыны ҡыпҡыҙыл булды.* И. Абдуллин.

**7.** *күсм.* Саманан артыҡ мул булыу. □ Хорошо уродиться, созревать *(о зернах). Иген бүҫелеп үҫкән.*

**БҮҪЕР** [ғәр. بواسیر 'шеш'] (Р.: грыжа; И.: hernia; Т.: fıtık) *и.*

**1.** Эс итен тишеп, тире араһына бүлтәйеп эсәк сыға торған ауырыу. □ Грыжа. *Бүҫер ҡалҡыу. Бүҫер сығыу. Бүҫер талау.* ■ *Ғилажиҙың һаман тештәре һыҙлай, етмәһә, тағы ҡапыл пәйҙә булған бүҫер ауырыуы йөҙәтә.* А. Таһиров. *[Мәхмүт:] Әгәр ҡайтҡанда был ҡурҡаҡ тағы осраһа, мылтыҡ аҫтына алырға ла, бүҫере ҡалҡҡансы йүгертергә.* К. Мәргән.

**2.** *миф.* Баланың эсенә инеп, ауырттырыусы бүҫер ауырыуы эйәһе. □ Дух грыжи, который, попав в ребёнка, вызывает боли в животе. *Бүҫер ҡыуыу. Бүҫер имләү.*

**БҮҪЕР ДОҒАҺЫ** (Р.: заговор грыжи; И.: hernia exorcism; Т.: fıtık büyüsü) *и. миф.*

Бүҫерҙе имләү доғаһы. □ Заговор грыжи. *Бағымсы бүҫер доғаһы уҡый башланы.*

**БҮҪЕРЕЛЕҮ (бүҫерел-)** *ҡ. ҡар.* **бүҫелеү.** ■ *Байрамғол шахта ауыҙына барып, шырпы тоҡандырҙы, ләкин шахта ауыҙы бүҫерелеп төшкән.* Т. Хәйбуллин.

**БҮҪЕР ЕЛӘГЕ** (Р.: жостер слабительный; И.: buckthorn; Т.: aci cehre) *и. бот. диал.*

Әҫпе еләге. □ Жостер слабительный (лат. *Rhamnus cathartica). Бүҫер еләге эсереү.*

**БҮҪЕРЕҮ (бүҫер-)** *ҡ. ҡар.* **бүҫеү.** *Күлдәкте бүҫереү. Ҡыйыҡты бүҫереү.*

**БҮҪЕР ИМЛӘҮ (бүҫер имлә-)** (Р.: магический способ лечения грыжи; И.: magic way to treat hernia; Т.: fıtık büyüsü) *ҡ. миф.*

Бүҫерҙе магик дауалау ысулы. □ Магический способ лечения грыжи. ■ *Бүҫерҙе йөрөүҙән туҡтаткас, уны имләп тышҡа сығаралар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮҪЕР ҠЫУЫУ (бүҫер ҡыу-)** (Р.: изгнание грыжи заговариванием; И.: hernia treatment by exorcism; Т.: fıtık büyüsü) *ҡ. миф.*

Имләү менән бүҫерҙе ҡыуып дауалау. □ Изгнание грыжи заговариванием. *Имсе әбей бүҫер ҙә ҡыуа.*

**БҮҪЕР ӨШКӨРӨҮ (бүҫер өшкөр-)** (Р.: способ лечения грыжи нашептыванием и сдуванием; И.: hernia treatment by putting a spell; Т.: fıtık büyüsü) *ҡ. миф.*

Бүҫерҙе шыбырлап һәм өрөп дауалау ысулы. □ Способ лечения грыжи нашептыванием и сдуванием. ■ *Илеш башҡорттары ошо әпсенде әйтеп бүҫер өшкөрәләр: бүҫер булған,*

*бүҫер булған, ун, туғыҙ, һигеҙ, ете, алты, биш, дүрт, өс, ике, бер; бер — берәү ҙә юк. Ай ҡайтты, көн ҡайтты, һин дә ҡайт, аша-йым, талайым, сәйнәйем, бөтөрәм!* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮҪЕР САБЫУ (бүҫер сап-)** (Р.: рубить грыжу; И.: way to treat hernia; Т.: fıtık tedavisi) *ҡ. миф.*

Бүҫерҙе дауалау ысулы. □ Рубить грыжу *(магический способ лечения грыжи).* ■ *Бүҫерҙе сабып та имләйҙәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮҪЕР ТАЛАУ (бүҫер тала-)** (Р.: загрызание грыжи; И.: method to treat hernia; Т.: fıtık tedavisi) *ҡ. миф.*

Бүҫерҙе дауалау ысулы. □ Загрызание грыжи *(магический способ лечения грыжи).* ■ *Заһира инәйем бүҫерҙе «талай» торғайны.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮҪЕР ТАШЫ** (Р.: камень для лечения грыжи; И.: stone used in hernia treatment; Т.: fıtık tedavisinde kullanılan taş) *и. миф.*

Бүҫерҙе дауалау өсөн ҡулланылған таш. □ Камень для лечения грыжи. *досл.* Камень грыжи. ■ *Олатайымдың бүҫер ташы була торғайны.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮҪЕР ТОТОУ (бүҫер тот-)** (Р.: приступы грыжи; И.: hernia fits; Т.: fıtık nöbeti) *ҡ. миф.*

Бүҫерҙең ҡапыл-ҡапыл ауыртып ебәреүе. □ Приступы грыжи. *досл.* Хватание грыжи. ■ *Өс айҙан һуң, бүҫер йәнләнә һәм йөрөп тота башлай.* Башҡорт мифологияһынан.

**БҮҪЕР ҮЛӘНЕ** (Р.: грыжная трава; И.: rupturewort; Т.: fıtıkotu) *и. бот.*

Яландарҙа, битләүҙәрҙә, юл ситтәрендә ергә йәйелеп үҫеүсе ваҡ япраҡлы дарыу үләне. □ Грыжная трава, грыжник (лат. *Herniaria). Бүҫер үләне йыйыу.*

**БҮҪЕР ЫРЫМЛАУ (бүҫер ырымла-)** (Р.: заговаривание грыжи; И.: mode to treat hernia; Т.: fıtık büyüsü) *ҡ. миф.*

Бүҫерҙе дауалау ысулы. □ Заговаривание грыжи *(магический способ лечения грыжи). Бүҫер ырымлай торған ҡарсыҡ кәрәк ине.*

**БҮҪЕҮ (бүҫ-)** (Р.: продавливать; И.: crush through; Т.: kırmak) *ҡ.*

**1.** Ауырлыҡ, көс баҫымы менән ишеү, емереү. □ Продавливать, проламывать. *Ҡыйыҡты бүҫеү.* ■ *Тотҡондар, тындарын ҡыҫып, үҙҙәренә тәғәйенле йәҙрәләрҙең стенаны бүҫеп инеүен көттөләр, ҡурҡып көттөләр, һағынып көттөләр.* Б. Рафиҡов.

**2.** Ҙур итеп үтәнән-үтә йыртыу, ярыу. □ Прорвать, разорвать. *Ҡулдәкте бүҫеп сығарыу.* ■ *[Сәлим — Кәримгә:] Бынан һуң ҡул һуҙаһы булһаң, апара ҡорһағыңды бүҫер ҙә төшөрөрмөн.* И. Ғиззәтуллин. *Мылтыҡ шартлағаны ишетелде, ләкин үлемесле яраланған бүре, йәнтәслимгә ырғып, үткер тырнаҡтары менән Миңлегөлдөң балитәкле күлдәген бүҫеп ебәрергә өлгөрҙө.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Кәрәген биреп туҡмау; бешеү. □ Сильно бить, обвалять. *Дошманды штыҡ менән бүҫеү.*

**4.** *күсм. һөйл. Ниндәйҙер* эш-хәрәкәтте артыҡ күп атҡарыу. □ Чрезмерность, излишество действия. *Икмәкте бүҫеү.* ■ *[Аҫылғужа:] Аба, ҡарсыҡ, йоҡоно бүҫтем, ахыры. Сәғәт нисә?* Б. Бикбай. *[Сөнәғәт:] Башҡортостандан сығып киткәне бирле һалма ашаған юҡ ине әле, тансыҡтан бүҫтем дә һалдым.* Ҡ. Ибәтуллин. *«Йә, улым, йоҡоно бүҫтеңме?» — ти атайым, йылмайып.* Н. Мусин.

**БҮҪКӘ** (Р.: неполный; И.: partially filled; Т.: dolu olmayan) *с.*

Тулынан ҡайтыш, тулыр-тулмаҫ. □ Неполный, не совсем наполненный. *Бүҫкә һауыт. Бүҫкә биҙрә. Бүҫкә булыу. Бүҫкә итеп ҡойоу.*

**БҮҪКӘРЕҮ (бүҫкәр-)** (Р.: уменьшаться; И.: decrease; Т.: azalmak) *ҡ.*

**1.** Тулынан ҡайтыш булып ҡалыу, бүҫкәгә әйләнеү. □ Уменьшаться, убавляться *(об уровне чего-л.).* ■ *Ҡаҙандағы аш тиҙ бүҫкәрҙе.* Ш. Янбаев. *Улар алмашлап эсә башланы. Кәрәгә бүҫкәрҙе.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Бер аҙ кәмеү, аҙайыу. □ Убавляться, уменьшаться. ■ *Ошо ла йырҙы йырланиһәм, күп хәсрәтем, ҡайғым бүҫкәрә.* Халыҡ йырынан. *Беҙҙең һөйләшеһе һүҙҙәр*

*ҡапсығының сирек өлөшө лә буҫкәрмәгәйне әле.* С. Кулибай. *Шафиҡ үҙе ҡыҙ ҡәберенә барып баш эйә лә был йорттан бөтөнләй китә. Ят кешеләр араһында ҡайғым буҫкәрмәҫме, тип уйлай ул.* Ә. Вахитов.

**БУҪКӘРТЕҮ (буҫкәрт-)** (Р.: уменьшать; И.: make fall, diminish; Т.: azaltmak) *ҡ.*

**1.** Тулынан ҡайтыш итеү, буҫкәгә әйләндереү. □ Уменьшать, убавлять *что (используя что-л.). Самауырҙы буҫкәртеү.* ■ *Салих бер нисә стаканды тиҙ генә буҫкәртте лә ирендәрен ялап ҡуйҙы.* Ғ. Хәйри. *Шулай итеп, былар һүҙгә тейешеп китеп, ҙур самауырҙың һыуын бер нисә тапҡыр буҫкәрттеләр.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Бер аҙ кәметеү, аҙайтыу. □ Уменьшать, убавлять. ■ *Йәнтимерҙең .. быуа ошо сикәләренә сал төшкән олпат кеше менән эс серҙәрен уртаҡлашаһы килде, уға үҙенең уй-хәсрәтен һөйләп, тулышып барған бойоҡ күңелен буҫкәртергә теләне.* Ғ. Вәлиев. *Сәлимәһен онота алмай мәңгелек ауыр уйҙарға тарыған Сәйет йыш ҡына һағышлы йыр менән буҫкәртә торған булған.* Ә. Вахитов.

**БУТБЕЛДЕК (бутбелдеге)** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **буҙәнә I, 1.** *Ата бутбелдек. Инә бутбелдек. Бутбелдек ояһы. Бутбелдек йомортҡаһы.*

**2.** *ҡар.* **ҡуянтубыҡ.**

**БУТЕК** *с. диал. ҡар.* **телһеҙ 1.** *Бутек кеше. Тыумыштан бутек.*

**БУТЕКЛӘНЕҮ (бутеклән-)** *ҡ. диал. ҡар.* **телһеҙләнеү.** *Бутекләнеп ҡалыу.*

**БУТИС** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуы аймағы. □ Бутис *(название родового подразделения башкир племени табын). Бутис аймағы башҡорто.*

**БУТЛӘНЕҮ (бутлән-)** (Р.: освоиться; И.: make oneself familiar (with); Т.: alışmak) *ҡ. диал.*

Күнегеү. □ Освоиться. *Бер бутләнеп алһа, торор әле.*

**БУТӘГӘ I** [дөйөм төрки *бөтөгә*] (Р.: типчак; И.: fescue (grass); Т.: çayır otu) *и.*

**1.** *бот.* Өйкөм-өйкөм булып түшәлеп үҫкән ваҡ ҡына ҡыяҡ япраҡлы ялан үләне. □ Типчак, овсяница бороздчатая *(лат. Festuca valesiaca). Бутәгәле ялан.* ■ *Тауҙа боронораҡ ҡоралай, боландар күнаҡ булған, уның һутлы бутәгәһен ашаған.* Б. Хәсән. *Бай бисәһе тик ебәктән генә кейенеп шауҙырлатып, тирмә тирәһенә үҫкән бутәгә үләнгә сабыуҙарын һөйрәлтә-һөйрәлтә бай артынан тирмәгә инеп ултырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *диал.* Сабылған урынға яңы шытып сыҡҡан йәш үлән йәки иген, ҡурпы. □ Отава. *Ямғырҙан һуң бутәгә ҡалҡып сыҡты.*

**БУТӘГӘ II** *и. диал. ҡар.* **бөрләтәү.** *Ҡош бутәгәһе.*

**БУТӘГӘ III** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **аҡтамыр.** *Бутәгә тамыры.*

**2.** *ҡар.* **ҡылған.** ■ *Ялан ғына ерҙең бутәгәһе сайҡала ла микән елдәргә.* Йырҙан. *Ҡылған бутәгәләренән, йәш теш кеүек, сирәм шыта.* Ә. Чаныш.

**3.** *и. диал.* Имән үҫентеһе. □ Молодые побеги дуба. *Бутәгәләр шытып сыҡҡан.*

**БУТӘГӘ IV** (Р.: низкорослый; И.: shortish, dwarf; Т.: kısa boylu) *с. диал.*

Тәбәнәк, тәпәшәк. □ Низкорослый *(о человеке, растении). Бутәгә кеше. Бутәгә сейә.*

**БУТӘГӘЛЕК (бутәгәлеге)** (Р.: поле, покрытое типчаком; И.: fescue (grass) ground; Т.: çayır alanı) *и.*

Бутәгә (I) үҫкән ер. □ Поле, покрытое типчаком. *Был тауҙа бутәгәлек.* ■ *Осоҡырыйһыҙ юҡ тип-тигеҙ дала... Әремлек, уйым-уйым бутәгәлек, ҡылған.* И. Көҫәпҡол.

**БУТӘН** [ғәр.-фарс. بوتن ‘башҡа, бутән’] (Р.: иной; И.: other, another; Т.: başka) *с.*

**1.** Икенсе төрлө; башҡа. □ Иной, другой, прочий. *Бутән һүҙҙәр әйтеү.* ■ *Күрешәк .. шул тәү нығытылған көйө ултыра! Тик ҡултамғаһы ғына бутән!* З. Биишева. *[Аҡйегет:] Һыртына эйәр теймәгән байтал кеүек ҡырыҫ инең быға тиклем һин, Зөбәржәт. Бөгөн бөтөнләй бутәнһең.* М. Кәрим.

**2.** Бынан башҡа; икенсе. □ Другой. *Бүтән ил.* ■ *Гөлбоҫтан да бөгөн ни өсөндөр бүтән көндәрҙәге кеүек асыҡ, көләс йөҙлө түгел.* Ғ. Дәүләтшин. *[Сынбулатов:] Януҙаҡ ағай, һин ҡыҫҡараҡ тот, бүтәндәр ҙә һөйләһен!* М. Тажи. *— Ә һуң аҙаҡ Әхмәт ҡайҙа киткән? — Әйтә алмайым, — тине, бүтәнен.* Ғ. Сәләм. *Йорош-торошо, майлап ҡырын һыйпап ҡуйған алтын сәсе, ҡыйғасланып, һыҙылып торған шундай уҡ алтын мыйығы менән дә ауылдың бүтән егеттәренә һис тә оҡшамаған был Һатыбал кескәй Емешкә матурлыҡтың да, бәхетлелектең дә иң юғары нөктәһе булып күренә.* З. Биишева. *Рамаҙан инде, эштең былай ап-анһат хәл ителеүенә үкенгән һымаҡ, иҫнәп урынынан ҡуҙғала башлағайны, ҡарт төптө бүтән яҡтан килтереп һуҡты.* Ә. Хәкимов.

**БҮТӘН II** (Р.: впредь; И.: from now on(wards); Т.: ileride) *р.*

Бынан ары, бынан башҡа; башҡа. □ Впредь, больше. *Бүтән бармайым.* ■ *Айбулат бүтән өндәшмәне.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡарт итте һоғонған да: «Тағы бир!» — тигән. «Бүтән бирә алмайым: алты иптәшем бар, улар хәҙер ҡайта». — тигән Ертыңлар.* Әкиәттән.

**БҮТӘН III** (Р.: кроме; И.: except; Т.: başka) *бәйл.*

Башҡа, тыш. □ Кроме. ■ *Ятҡан урынынан ара-тирә өрөп ҡалған эттәрҙән бүтән ауылдың тынлығын боҙоусы булманы.* Б. Ишемғол. *Аяҡлы-ҡуллы тигәнем, йылан итеп күргәнем бейҙән бүтән ни булыр?* Ҡобайырҙан. *Яҡиынан бүтән уйым юҡ, үлемдән бүтән берәүҙән юллай торған дауым юҡ.* «Урал батыр».

**БҮТӘНЕ-БҮТӘН** (Р.: чего-чего, а...; И.: but indeed; Т.: ama aslında) *р.*

Шулайын шулай ҙа, әммә... □ Чего-чего, а.. (но..) *Бүтәне-бүтән, әммә ҡыҙың һәйбәт.*

**БҮТӘНСӘ** (Р.: по-другому; И.: otherwise; Т.: yoksa) *р.*

**1.** Бүтән төрлө, икенсе бер төрлө; башҡаса. □ По-другому, по-иному, иначе. ■ *Хәҙер уйҙар ҙа, теләктәр ҙә бүтәнсәрәк — киңерәк, ҡоласлыраҡ.* З. Биишева. *Баҡҙа осҡан күбәләк тик гөлгә ҡауышыуҙы белә, ул бүтәнсә нә уҫал уй, нә лә шау-шыуҙы белә?* Ш. Бабич. *Кешеләрҙең дә алтынға ҡарашы бөтөнләй бүтәнсә.* Я. Хамматов.

**2.** Бынан ары, бынан башҡа; башҡа. □ Больше, впредь. ■ *Бейеүселәр сәхнәгә бүтәнсә сыҡманы.* Ғ. Әмири. *Бибеш, аптырап ҡатып ҡалған һеңлеһенә бүтәнсә иғтибар итмәй, бәпесен күтәреп өйгә инеп китте.* З. Биишева. *Ағаһы һуҡҡан бүрәнең бүтәнсә баш ҡалҡытмауын күргәс, Миңлегөл атын Уйылдан яғына ҡыуаланы, аҫтаныраҡ уратып үтеп, һуғыш менән сигенеүсе бүрәнең артынан төштө.* Н. Мусин. *Ҡыҙ әсәһен бүтәнсә йөҙәтмәне.* Һ. Дәүләтшина.

**БҮТӘНСӘЛЕК (бүтәнсәлеге)** (Р.: особенность; И.: peculiarity; Т.: özellik) *и.*

Бүтәнсә, башҡаса булыу. □ Особенность, специфика. *Бүтәнсәлек шундуҡ күҙгә бәрелә ине.*

**БҮТӘНСӘЛӘЙ** *р. диал. ҡар.* **бүтән II.** *Бүтәнсәләй миңә ҡысҡырма.*

**БҮҮӘТ** (Р.: приспособление для спасения затонувшего; И.: appliance to salvage the drowned; Т.: batanları kurtarma cihazı) *и. диал.*

Һыуға батҡан кешене ҡотҡарғанда ҡулланыла торған ҡорал. □ Приспособление для спасения затонувшего. *Бүүәт менән ҡотҡарыу.*

**БҮШМӘН** [рус. < ингл. *bush* 'ҡыуаҡ' + *man* 'кеше'] (Р.: бушмены; И.: bushman; Т.: bushman) *и.*

Бөтә Көньяҡ Африканың бик боронғо төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе *(хәҙерге ваҡытта көньяҡ һәм көнсығыш Африкала йәшәгән ҡәбиләләр).* □ Бушмены. *Бушмән халҡы. Бушмән ҡатыны.*

**БЫҒАЗЛАУ** *и. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.** *БыҒазлау төйөнө.*

**БЫҒАСА** (Р.: до сих пор; И.: till now; Т.: buraya kadar) *р.*

Быға тиклем, әлегә тиклем; әлегәсә. □ До сих пор, до этого времени. ■ *БыҒаса йоҡлап ятҡан дейеү ҙә ажғырып килеп сыҡҡан.* Әкиәттән. *Быны быҒаса талғын ғына иҫкән*

*ел көсәйә төштө, ағастар баш сайҡай, шаулай башланы.* Н. Мусин. *Яҡуптың аҡһыл йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, күҙҙәрендә быға-са күренмәгән яҡты балҡыны.* М. Кәрим. *Тайновтың табан балыҡтары бик һәйбәт ҡурылғайны. Шуның өҫтөнә, тағы уны көтөп ултырыусыларҙың билғау аҫтары ла бик ныҡ бушаған булғанлыҡтан, улар быға-са булмаған дәрәжәлә тәмле тойолдолар.* И. Насыри.

**БЫҒАУ** [боронғо төрки *боҡағу* 'тышау, бығау'] (Р.: оковы; И.: fetters; Т.: zincir) *и.*

**1.** Тотҡондағы кешенең аяҡ-ҡулына кейҙерә, хайуандарҙы тышай торған тимер ҡоршау. □ Оковы, кандалы; путы *(железные). Бығау һалыу. Аяҡ бығауы. Ат бығауы. Бығау аҫҡысы.* ■ *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫ, аяҡ-ҡулына бығау һалһаң да.* Халыҡ йырынан. *Күк болонда күк арғымаҡ йөрөй утлап, бәкәлендә ҡорос бығау бөткән тутлап.* Ә. Әхмәт-Хужа. *Түрәбайҙың ҡулына бығау һалып шулай ҡайнаған халыҡ алдына алып сыҡтылар.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Иректе, ихтыярҙы быуған нәмә; сынйыр. □ Путы, оковы, узы. *Ҡоллоҡ бығауы. Мөхәббәт бығауы.*

**БЫҒАУЛАНЫУ (бығаулан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бығаулау.** *страд. от.* **бығаулау.** *Бығауланған ат.* ■ *Бер мәл Юлай менән Салауат тачкаларын этәреп килгән ерҙән алдан киткән Ҡәнзәфәрҙе ҡумаҡлап тукмағандарын күреп ҡалдылар. Аяҡтары арбаға ҡуша бығауланған килеш шулай йүгерергә ҡайҙан көс тапҡандарҙыр.* Б. Рафиҡов.

**БЫҒАУЛАТЫУ (бығаулат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бығаулау.** *понуд. от* **бығаулау.** ■ *Батша һалдатты бығаулатып, бикләп ҡуя.* Әкиәттән. *Ә был арала батша Барсындың мәһәр менән ҡайтып килеүен күреп, ҡапҡаларҙы бикләтә, ишектәрен бығаулата.* Халыҡ ижадынан.

**БЫҒАУЛАУ (бығаула-)** (Р.: заковывать в оковы; И.: shackle; Т.: zincirlemek) *ҡ.*

Бығау менән ҡоршау, тышау. □ Заковывать в кандалы, оковы *кого-что;* надевать кандалы, оковы *на кого-что;* надевать путы (*железные*). *Аяҡты бығаулау. Атты бығаулап ебәреү.* ■ *[Миңнеғәлиев:] Батша түрәләре беҙҙең кеүек эшселәрҙе бығаулай.* А. Таһиров. *Йософто бығаулап, арыҡ бер дөйәгә ултырталар.* «Йософ ҡиссаһы».

**БЫҒЫМ** (Р.: ложное ребро; И.: false rib; Т.: sahte kaburga) *и. анат.*

Бил тәңгәлендәге күкрәк һөйәгенә тоташмаған йомшаҡ ҡыҫҡа ҡабырға. □ Ложное ребро. *Бығым ҡаҙыһы. Бығым һөйәге.*

**БЫҒЫМ ҠАБЫРҒА** *и. анат. ҡар.* **бығым.** *Бығым ҡабырға ҡаҙыһы.*

**БЫҒЫМ ҺӨЙӘГЕ** (Р.: подвздошная кость; И.: iliac bone; Т.: kalça kemiği) *и. анат.*

Янбаш һөйәген тәшкил итеүсе иң эре яҫы һөйәк. □ Подвздошная кость. *Бығым һөйәге сайраған.*

**БЫҒЫР-БЫҒЫР** (Р.: подражание шуму густой массы; И.: imitation of incoherent conversation; Т.: fokur fokur) *оҡш.*

Ҡуйы нәмә ҡайнағанда, ҡайнаған кеүек һауа урғылғанда сыҡҡан тауышты йәки ауыҙ эсенән әйтелгән аңлайышһыҙ тауышты белдергән һүҙ; буғыр-буғыр. □ Подражание шуму густой массы или звуку невнятного разговора. ■ *Ул арала ут өҫтөндә ултырған сәйнүк тә бығыр-бығыр ҡайнап, ҡапҡасты сылтырата башланы.* М. Ғафури. *Таҙҙың ағалары таш табып алып, түңгәк тултырылған тоҡтоң ауыҙына бәйләй ҙә һыуға ташлай. Тоҡ бығыр-бығыр килеп һыуға бата.* Әкиәттән.

**БЫҒЫРЛАҠ** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **бупылдаҡ II.** *Бығырлаҡ булыу.*

**2.** Һаҡау. □ Говорящий невнятно, косноязычный. *Бығырлаҡ бала.*

**БЫҒЫРЛАТЫУ (бығырлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бығырлау.** *понуд. от* **бығырлау.** *Йәшелсәне утҡа ҡыҙыу утта бығырлатып бешерергә ярамай.*

**БЫҒЫРЛАУ (бығырла-)** (Р.: бурлить; И.: seethe; Т.: fıkırdamak) *ҡ.*

**1.** Бығыр-бығыр итеү, бығыр-бығыр килеү; буғырлау. □ Бурлить, клокотать. *Сәйнүктә сәй бығырлап ҡайнай.* ■ *Ҡа-*

*ҙанда әрселмәгән бәрәңге быгырлап ҡайнай.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Ауыҙ эсенән аңлайышһыҙ рәүештә ниҙер һөйләү. □ Говорить невнятно, бормотать. ■ *Был кеше ниҙер быгырлап, .. Сабира апай баҡсаһына ыңғайланы.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡайтып кереү менән ул [Ғәйшә әбей], ризаһыҙлыҡ белдереп быгырлай башланы.* И. Ғиззәтуллин. *Шул ваҡыт асыуланып Тәнзилә килеп сыҡты: «Һин нимә быгырлайһың, бар ят!»* Н. Ҡотдосов.

**3.** *диал. ҡар.* **мыжғыу.** *Быгырлап ятҡан йылан ояһы.*

**БЫҒЫТЫУ (бығыт-)** *ҡ. диал.* **быҡтырыу**. *Дөгө бутҡаһы ла быгытып ҡарайым, ашамай.*

**БЫҒЫУ I (быҡ-)** (Р.: тушиться; И.: be stewing; Т.: kısık ateşte pişirilmek) *ҡ.*

**1.** Тандыр утта томаланып бешеү. □ Тушиться *(о мясе, овощах и т. п.). Ит быға. Кәбеҫтә быға. Быҡып бешеү.* ■ *Өй эсенә быҡып сыҡҡан йәш ит еҫе таралып китте.* З. Ураҡсин.

**2.** Боҫҡа, ҡайнар һыуға бешеп йомшау. □ Париться, запариваться, распариваться. *Һалам быға.* ■ *Шулай итеп, ут аҫтында төшкә тиклем ятҡан үләндәр яҡшылап быҡҡас, уларҙы атының яраларына яба.* Халыҡ ижадынан.

**3.** *диал. ҡар.* **иҙрәү 1.** *Быҡып йоҡлап китеү.*

♦ **Борсаҡ быҡыу** *ҡар.* **борсаҡ бешеү** (*ҡар.* **борсаҡ**).

**БЫҒЫУ II (быҡ-)** (Р.: льнуть; И.: cling to; Т.: yapışmak) *ҡ. диал.*

Ылығыу. □ Льнуть. *Кешегә быҡыу. Һаран кеше кешегә быҡмай, ҡаты, шыҡыр була.* ■ *[Григорий] үҙе лә кешегә бигүк быҡып бармағанлыҡтан, ауыл халҡы ла уның менән яҡындан аралашып йәшәү тураһында уйламай.* Н. Мусин. *Уға нимә булһын. Өйөндә яңғыҙы ғына быгырлап ятҡан шунда, кешегә быҡмаған.* Ә. Вахитов.

**БЫҘАУ I** [дөйөм төрки *бузау, бузағу* < *бурғағу* 'быҙау'] (Р.: телёнок; И.: calf, heifer; Т.: buzağı) *и.*

**1.** Ярты йәшкә тиклемге һыйыр малы. □ Телёнок. *Орғасы быҙау. Үгеҙ быҙау. Быҙау ҡарау.* ■ *«Му-му-му», — тип һыйыр менән быҙауҙары йөрөй.* Ш. Бабич. *Халыҡ өйөрө, гөр килеп, быҙау өйөнән кире сыҡты.* Б. Бикбай. *Һыйыр көтөүе килә. Быҙауҙар баҡыра.* Ғ. Амантай.

**2.** Шул уҡ йәшкә тиклемге болан, мышы балаһы. □ Лосёнок, оленёнок. *Урманда мышылар быҙауҙарын эйәртеп утлап йөрөй.*

**3.** *күсм.* Йомшаҡ, йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. □ Недотёпа, мямля. ■ *[Йәмлихә:] Мин булмаһам, был булдыҡһыҙ, быҙау .. арҡыры ятҡанды буй алып һала белмәҫ ине.* Ғ. Әхмәтшин.

♦ **Ике быҙауға кәбәк айыра белмәү** бик ябай ғына нәмәне лә аңлай алмау, аңра булыу. Быть несообразительным. ■ *Ике быҙауға кәбәк айырып бирә алмай, үҙе ҡаҙый булам, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Бер һүҙҙе ҡат-ҡат сәйнәп, ике быҙауға кәбәк айыра белмәгән аптыраҡҡа йыйып теҙгенен тоттора буламы һуң Бирҙеғол.* Ғ. Ибраһимов. **Ужым быҙауы** йыуаш, йомшаҡ, әкрен, ҡулынан эш килмәгән кешегә әйтелә. □ Мямля. *букв.* Озимый телёнок. ■ *[Сәғиҙә:] Өҫтөмдә алыштырып, теге ужым быҙауын да эйәртеп киләйем.* М. Тажи.

**БЫҘАУ II** (Р.: овсюг; И.: wild oats; Т.: yulaf) *и. диал. ҡар.*

**1.** Ҡара һоло. □ Овёс пустой *или* овсюг (лат. *Avena fatua*). *Быҙау орлоғо.*

**2.** Арыш атаһы. □ Спорынья. *Ашлыҡтың быҙауын иләп алалар.*

**БЫҘАУ ИТЕ** (Р.: телятина; И.: veal; Т.: buzağı eti) *и.*

Һуйылған быҙауҙың ашар өсөн әҙерләнгән түшкәһе һәм шул түшкәһенең берәй өлөшө. □ Телятина. *Быҙау ите бешереү.*

**БЫҘАУКА** (Р.: деревянный чан; И.: vat for measuring grain; Т.: ağaç fıçı) *и. диал.*

Ашлыҡ үлсәү өсөн ағас тәпән. □ Деревянный чан, используемый для взвешивания зерна. *Ике быҙаука арышка ике ай эшләйһең.*

**БЫҘАУ ҠАРАУСЫ** (Р.: телятник; И.: calf-house; Т.: buzağılara bakan kimse) *и.*

Быҙауҙарҙы ашатып-эсереп тотоусы махсус эшсе. □ Телятник. *Быҙау ҡараусы булып эшләү.*

**БЫҘАУЛАТЫУ (быҙаулат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **быҙаулау.** *понуд. от* **быҙаулау.** ■ *[Мырҙаш:] Шул Үлмәҫкол ағай булһа, тыу бейәһен ҡолонлатып, еленләмәгән һыйырын быҙаулатып килер инде.* З. Ураҡсин.

**БЫҘАУЛАУ (быҙаула-)** (Р.: телиться; И.: calve; Т.: buzağılamak) *ҡ.*

Быҙау килтереү. □ Телиться *(о корове и др.).* ■ *Хөрмәт ҡарттың һыйыры игеҙәк быҙау быҙаулаған.* З. Хисмәтуллин. *Хатта һыйырҙың быҙаулаған сағын да күргәнем юҡ.* Д. Юлтый. *Ҡарап ҡына торған яңғыҙ һыйыры быҙауларға яҡынлашҡанлыҡтан һыуалып китте.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Елгә еленләп, боҙға быҙаулау** бушҡа, хаҡ түләмәгәнгә эшләп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Трудиться бесплатно или за мизерную плату.

**БЫҘАУЛЫ** (Р.: имеющий телёнка; И.: having cubs; Т.: buzağılı) *с.*

Быҙауы булған. □ Имеющий телёнка, лосёнка, оленёнка *(о корове, лосе, олене). Быҙаулы һыйыр. Быҙаулы мышы.* ■ *Көтөүҙән тейгән иген алып ҡайтылмаған. Быҙаулы ҡыҙыл һыйыр ҙа бар.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫҘАУ СҮБЕ** *и. диал. ҡар.* **сыуын.** *Быҙау сүбен алып ташларға кәрәк.*

**БЫҘАУ ТАШЛАУ (быҙау ташла-)** *ҡ. ҡар.* **быҙау һалыу.** *Һыйырыбыҙ быйыл быҙау ташланы.*

**БЫҘАУ ТИЛЕТЕҮ (быҙау тилет-)** (Р.: приучить телёнка сосать чужую матку; И.: train calves to suck another dam; Т.: buzağı başka ineği emmeye öğretmek) *ҡ.*

Быҙауҙы икенсе һыйырҙы имергә өйрәтеү. □ Приучить телёнка сосать чужую матку. *Быҙауҙы тилетеп имеҙәбеҙ.*

**БЫҘАУ ТӨШӨРӨҮ (быҙау төшөр-)** *ҡ. ҡар.* **быҙау һалыу.** *Һыйыр ауырып китеп, быҙауын төшөрҙө.*

**БЫҘАУ ҺАЛЫУ (быҙау һал-)** (Р.: выкидыш у коров; И.: miscarriage; Т.: buzağı düşürmek) *ҡ.*

Үле быҙау тыуҙырыу *(һыйыр малына ҡарата).* □ Выкидыш у коров. *Һыйырыбыҙ ике йыл рәттән быҙау һала.*

**БЫҘАУ ҺАРАЙЫ** (Р.: телятник; И.: calf shed; Т.: buzağı ahırı) *и.*

Быҙауҙарҙы аҫырау өсөн махсус эшләнгән аҙбар. □ Телятник. *Быҙау һарайы төҙөү.*

**БЫҘ-БЫҘ** (Р.: о мерцающем свете; И.: word to express shimmering light; Т.: pırıl pırıl) *оҡш.*

Саҡ ҡына күренеп ҡалған утты, яҡтыны белдергән һүҙ. □ Подражание *(о мерцающем, колеблющемся свете). Шәм уты быҙ-быҙ килеп яна. Быҙ-быҙ итеү. Быҙ-быҙ килеү.* ■ *Айһыҙ төндә ергә арҡа терәп, күк ҡашмауын ҡарап ятаһың. Быҙ-быҙ янған тере йондоҙҙарҙы ҡулың менән һәрмәп тотаһың.* Й. Солтанов.

**БЫҘЛАҠ (быҙлағы)** (Р.: коптилка; И.: wick lamp; Т.: gaz lambası) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. ■ *[Зиннәт:] Улайһа, мин, әсәй, быҙлаҡҡа кәрәсин өҫтәп ҡуяйым, өйгә эштәремде ҡараштыра һалайым.* З. Ураҡсин.

**БЫҘЛАҠ БАКТЕРИЯЛАР** (Р.: бактерии светящиеся; И.: luminescent bacteria; Т.: parlak bakteriler) *и. бот.*

Иттә, балыҡта түбән температурала барлыҡҡа килгән, серетеү һәм ағыулау ҡурҡынысы тыуҙырмаған бактериялар. □ Бактерии светящиеся. *Быҙлаҡ бактериялар үрсеүе.*

**БЫҘЛАТЫУ (быҙлат-)** *ҡ.*

**1.** *ҡар. йөкм.* **быҙлау.** *понуд. от* **быҙлау.** *Быҙлатып яндырыу.* ■ *Иртән көтөү ҡуҙғатабыҙ, — һандуғас һайрай. Төндә усаҡ быҙлатабыҙ, — һандуғас һайрай.* М. Илбаев. *Фараларын быҙлатып, баҫыу башына машина килеп туҡтаны.* Яр. Вәлиев.

**2.** *күсм.* Ут кеүек яндырыу *(күҙҙе).* □ Светить, сиять *(о глазах). Ул шатлыҡтан күҙҙәрен быҙлатып ебәрҙе.* ■ *Һибәтов, күҙҙәрен быҙлатып йылмайған булып, һүҙҙе уратып-уратып башланы.* Ғ. Шәрипов.

**БЫҘЛАУ (быҙла-)** (Р.: мерцать; И.: twinkle; Т.: pırıldamak) *ҡ.*

**1.** Быҙ-быҙ итеү, быҙ-быҙ килеү. □ Мерцать. *Быҙлап яныу. Алыҫтан ут быҙлап күренә.* ■ *Күл уртаһында быҙлап ятҡан ваҡ ҡына тиҙәк ҡуҙҙары аяҡты бешерә.* Һ. Дәүләтшина. *Нигә был яҡтан ут өс тапҡыр, ә теге яҡтан бер генә тапҡыр быҙланы?* С. Кулибай. *Мәмерйәнең алдында быҙлап ҡына янған ут күренә.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ут һымаҡ яныу *(күҙгә ҡарата).* □ Излучать свет, блестеть, светиться, сиять *(о глазах). Күҙҙәре быҙлап тора.* ■ *[Бесәйҙең] күҙҙәре ҡот осҡос, йәшелле-зәңгәрле төҫтә быҙлап тора.* Яр. Вәлиев. *Асия халыҡҡа ялбарыулы ҡараш менән текәлде. Уның күҙҙәре ут кеүек быҙлап янды.* Н. Иҙелбай.

**БЫҘЛАУЫҠ (быҙлауығы)** (Р.: светляк; И.: glowworm; Т.: ateş böceği) *и. зоол.*

Төнөн быҙлап яҡтырып йөрөгән бәләкәй генә ҡуңыҙ. □ Светляк, светлячок (лат. *Lampyridae).* ■ *Буран тулҡындары араһынан быҙлауыҡ яҡтылығындай ғына уттар емелдәгәнен Исмәғил шәйләп алды.* Яр. Вәлиев.

**БЫҘМЫҠ (быҙмығы)** *и. этн. ҡар.* **әүмәлә.** *Быҙмыҡ бешереү.*

**БЫҘМЫҠАЙ** *и. этн. ҡар.* **әүмәлә.** *Быҙмыҡай ашау.*

**БЫҘЫҒЫУ (быҙыҡ-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бызмырлау.** *Был егет быҙығып ҡына эшләй. Быҙығып йөрөйһөң шунда.*

**БЫҘЫҠ (быҙығы)** (Р.: коптилка; И.: oil lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. *Быҙыҡ яндырыу. Быҙыҡ яҡтыһы.*

**БЫҘЫЛДАУ (быҙылда-)** *ҡ. ҡар.* **быҙлау.** ■ *Ҡараңғыла быҙылдаған тәмәке уты янында ике кеше һаҡлыҡ менән генә һөйләштеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Күпселек өйҙәрҙә ут һүнгән. Бибештәрҙең ҡунаҡ өйө яғында ғына шәм быҙылдай.* З. Биишева.

**БЫҘЫМЛЫҠ (быҙымлығы)** (Р.: колотушка; И.: beetle; Т.: çırgıcı) *и. тук.*

Туҡа йомшарта торған туҡмаҡ. □ Колотушка, деревянный молоток, валёк. *Быҙымлыҡ менән туҡа баҫыу.*

**БЫҘЫМЫҠ (быҙымығы)** *и. этн. ҡар.* **әүмәлә.** *Быҙымыҡ бешереү.*

**БЫҘЫРАЙЫУ (быҙырай-, быҙырая)** (Р.: наливаться *(о колосьях)*; И.: ripen; Т.: olgunlaşmak) *ҡ. диал.*

Тулышыу. □ Наливаться *(о колосьях). Ашлыҡ уңһа быҙырайып ултыра.* ■ *Ул арала һөлөктәрҙең иң аҙаҡҡыһы туйып, йыуан булып, быҙырайып тәгәрәп төштө.* Һ. Дәүләтшина. *Хәҙер бойҙайҙың бешеп еткән, быҙырайып ҡойолорға ултырған мәле.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЖАЛАЙ** (Р.: копотливый; И.: dawdler; Т.: mıymıntı) *с. диал.*

Ығыш. □ Копотливый. *Быжалай кеше.*

**БЫЖАН** *и. диал. ҡар.* **ҡуңыҙ.** *Быжандар оса.*

**БЫЖАНЛАУ (быжанла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **сыпранлау.** *Быжанлап йөрөү.*

**БЫЖ-БЫЖ** (Р.: подражание свисту ветра или звуку курая; И.: imitation of sound produced by wind; Т.: rüzgar sesi teklidi) *оҡш.*

Ҡурай өргәндә йәки ҡаты ел иҫкәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание свисту ветра или звуку курая. *Быж-быж итеп ҡурай өрөү.* ■ *Быж-быж ҡурай тартаһың, тал төбөндә ятаһың.* Халыҡ йырынан.

**БЫЖҒЫРТЫУ (быжғырт-)** (Р.: отругать; И.: berate; Т.: azarlamak) *ҡ.*

Ныҡ итеп орошоу; ҡыҙҙырыу. □ Отругать, обругать, выругать *кого. Балаларҙы быжғыртыу.* ■ *[Яубаҫар:] Тапҡандар әкиәт һата торған урын, әйтерһең, мин бүрәнәне улар өсөн өйөп ҡуйғанмындыр. Ғәйнулла, .. булмаһа, бөтәһен дә быжғыртып ҡыуып ебәрер инең.* С. Агиш. *Хәким балаларын быжғыртты: «Нимәштәп ултыраһығыҙ бында ҡукрайып? Китегеҙ бынан!..»* Я. Хамматов. *Тик бына [Шәһүрәнең] Мөбәрәкте тышҡа быж-*

*ғырткан шикеллерәк сығарып ебәреүе генә оҡшап етеңкерәмәне Гөлбаныуға.* Н. Мусин.

**БЫЖҒЫТЫУ I (быжғыт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **быжғыртыу.** ■ *Әй, ҡысҡырығыҙ, әтәстәр, бөткәнсе сыҙамығыҙ, кабинеттарҙан уларҙы быжғытып сығарығыҙ.* Р. Ғамзатов.

**БЫЖҒЫТЫУ II (быжғыт-)** (Р.: подстрекать; И.: incite; Т.: kışkırtmak) *ҡ. диал.*

Ҡотортоу. □ Подстрекать. *Балаларҙы уҡытыусыға ҡаршы быжғытыу.*

**БЫЖҠ** (Р.: кря; И.: quack; Т.: vak) *оҡш.*

Өйрәк ҡысҡырғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Кря, кря-кря (*подражание кряканью*). *Өйрәк быжҡ итеп ҡысҡырҙы.*

**БЫЖҠ-БЫЖҠ** (Р.: кря-кря; И.: quack-quack; Т.: vak vak) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат быжҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Кря-кря (*многокр. от* **быжҡ**). *Өйрәктәр быжҡ-быжҡ килә.*

**БЫЖҠЫЛДАТЫУ (быжҡылдат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **быжҡылдау.** *понуд от.* **быжҡылдау.** *Өйрәкте быжҡылдатыу.*

**БЫЖҠЫЛДАУ (быжҡылда-)** (Р.: крякать; И.: quack; Т.: vak vak etmek) *ҡ.*

Быжҡ-быжҡ итеү, быжҡ-быжҡ килеү. □ Крякать. / Кряканье. *Быжҡылдығын сығыу. Өйрәк быжҡылдай.* ■ *Урам яҡтан быжҡылдап, балаларын эйәртеп өйрәктәр ҡайтып килә.* С. Агиш.

**БЫЖҠЫЛДАШЫУ (быжҡылдаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **быжҡылдау.** *взаимн. от* **быжҡылдау.**

**БЫЖҠЫЛДЫҒЫ СЫҒЫУ (быжҡылдығы сыҡ-)** *ҡ. ҡар.* **быжҡылдау.**

**БЫЖЛАТЫУ (быжлат-)** (Р.: отругать; И.: give a scolding; Т.: azarlamak) *ҡ. диал.*

Быжғыртыу. □ Отругать. *Балаларҙы быжлатып эшкә ҡушыу.*

**БЫЖЛАУ I (быжла-)** (Р.: шипеть; И.: hiss; Т.: hışırdamak) *ҡ. диал.*

**1.** Шыжлау. □ Шипеть (*при кипении*). *Самауыр быжлап ултыра.* ■ *Самауыр быжлап, борҡорап ҡайнап тора.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *ҡар.* **бөжләү.** *Беҙҙән ҡурҡмаһа ла атаһынан аҙыраҡ быжлаңҡырай.*

**БЫЖМЫН** (Р.: болтливый; И.: twaddler; Т.: boşboğaz) *с. диал.*

Лаҡылдаҡ. □ Болтливый. *Быжмын ни хәбәрҙе һөйләр инде.*

**БЫЖМЫР** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **бызмыр.** *Быжмыр кеше эште яй эшләй.*

**2.** *ҡар.* **бөтмөр.** *Ул ни, быжмыр кеше, эшен тиҙ бөткән.*

**БЫЖМЫРЛАУ (быжмырла-)** (Р.: долго возиться; И.: dawdle, mess about; Т.: ağır davranmak) *ҡ.*

Мыштырлау, яй ҡуҙғалыу. □ Долго возиться. *Быжмырлап йөрөмә, тиҙерәк эшеңде эшлә.*

**БЫЖЫ** (Р.: рахитик; И.: rickety person; Т.: raşitik) *и. диал.*

**1.** Рахит менән ауырыусы. □ Рахитик. *Шул бер быжы инде.*

**2.** *миф.* Рахит ауырыуы эйәһе. □ Рахит; в башкирской мифологии дух болезни. ■ *Бала атламаһа, быжы өтәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫЖЫ ИМЛӘҮ (быжы имлә-)** (Р.: заговаривать рахит; И.: magical way to treat rickets; Т.: raşit tedavisi) *ҡ. миф.*

Рахит ауырыуын магик дауалау. □ Заговаривать рахит (*магический способ лечения рахита*). ■ *Быжы имләгәндә баланы икмәк көрәгенә бәйләп мейескә тығып алалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫЖЫҠ I** (Р.: вялый; И.: faded; Т.: solmuş) *с.*

**1.** Йылыла оҙаҡ ятып йомшарған, һулыған. □ Вялый (*об овощах*). *Быжыҡ картуф. Быжыҡ кишер. Быжыҡ шалҡан.*

**2.** *күсм.* Сибек. □ Слабый, хилый. *Быжыҡ ҡына бала булды.*

**3.** *диал.* Бәйләнсек. □ Назойливый. *Эй быжыҡ та инде был Закир.*

**БЫЖЫҠ II (быжығы)** (Р.: утиный клюв; И.: duck's beak; Т.: ördek gagası) *и. диал.*

Өйрәк мороно. □ Утиный клюв. *Өйрәктәр быжыҡтары менән һыу төбөнән нимәлер эҙләй.*

**БЫЖЫҠ III (быжығы)** (Р.: место сращения двух деревьев; И.: jointing place; Т.: iki ağacın birleşen yeri) *и. диал.*

Ике ағастың бер-береһенә ҡушылып үҫкән ере. □ Место сращения двух деревьев. *Быжыҡҡа менеп ултырҙым.*

**БЫЖЫҠЛАНЫУ (быжыҡлан-)** (Р.: надоедать; И.: pester; Т.: bıktırmak) *ҡ. диал.*

Теңкәгә тейеү. □ Надоедать. *Быжыҡланып йөрөмә әле.*

**БЫЖЫ ҠЫУЫУ (быжы ҡыу-)** (Р.: магический способ избавления от духа рахита; И.: magical way to cure rickets; Т.: halk tedavisi) *ҡ. миф.*

Рахит ауырыуын ҡыуып дауалау. □ Изгонять дух рахита (*магический способ лечения рахита*). ■ *Быжыны мейескә тығып алып, ҡурҡытып ҡыуалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫЖЫЛДАТЫУ (быжылдат-)** (Р.: дудеть в курай; И.: play the Bashkir flute; Т.: koray oynamak) *ҡ.*

Быж-быж иттереү, быж-быж килтереү (*ҡурайҙы*). □ Дудеть в курай. ■ *Ун ике йәштә булһам да ҡурай быжылдата, ҡыҙҙар бейерлек бер нисә көй уйнай белә инем.* С. Кулибай.

**БЫЖЫЛДАУ I (быжылда-)** (Р.: издавать длительный монотонный звук; И.: emit a continuous singsong sound; Т.: monotonses çıkarmak) *ҡ.*

Быж-быж итеү, быж-быж килеү. □ Издавать длительный монотонный звук. *Быжылдап йөрөү. Ҡурайҙа быжылдау.*

**БЫЖЫЛДАУ II (быжылда-)** (Р.: испугаться; И.: be frightened; Т.: korkmak) *ҡ. диал.*

Ҡурҡыу. □ Испугаться. *Минән быжылданыңмы?*

**БЫЖЫЛДАУ III (быжылда-)** (Р.: подняться; И.: rise; Т.: kabarmak) *ҡ. диал.*

Ҡабарыу. □ Подняться (*о тесте и т. п.*). *Икмәк ҡамыры быжылдаған.*

**БЫЖЫМ** (Р.: трусливый; И.: coward; Т.: korkak) *с. диал.*

Ҡурҡаҡ. □ Трусливый. *Быжым ҡыҙыҡай.*

**БЫЖЫ ӨТӨҮ (быжы өт-)** (Р.: опаливание рахита; И.: method to treat rickets; Т.: raşiti iyileştirme usulü) *ҡ. миф.*

Рахит ауырыуын өтөп дауалау. □ Опаливание рахита (*магический способ лечения рахита*). ■ *Быжы өтәм тип, мейескә тығып алалар атламаған баланы.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫЖЫР I** [боронғо төрки *бужур* 'сыбар'] (Р.: рябина, щербина; И.: pit; Т.: çopur) *и.*

**1.** Биттәге ваҡ-ваҡ ҡына уйым; шаҙра. □ Рябина, щербина. ■ *Тәрән быжырҙарын биртендереп, ҡара янып ултырған Мәхмутов та һүҙгә ҡушылды.* И. Насыри.

**2.** Һыу өҫтөндәге ваҡ тулҡын; бөҙөр. □ Рябь, зыбь. *Ел сыҡты, һыу өҫтөндә быжыр йүгерҙе.*

**БЫЖЫР II** (Р.: рябой, щербатый; И.: pitted; Т.: çopur yüzlü) *с.*

Ваҡ-ваҡ ҡына уйымлы (*биткә ҡарата*). □ Рябой, щербатый. *Быжыр бит. Быжыр кеше. Быжыр булыу.* ■ *Быжыр бер егет Ташлы урамына һыймай, баш сайҡап, үтеп-сүтеп йөрөй.* З. Биишева. *Нурғәлиевте быжыр Мәхмутов та кеүәтләне.* И. Насыри. *Аҙаҡтан Сөнәғәт уға Ғөмәр ауылында үгәй атаһы Ғилажда ҡунаҡта булыуын, Ғилаждың шул ауылдан Хөпөниса исемле бер быжыр ғына ҡыҙҙы кәләш итеп алып бирергә димләүен һөйләне.* Ж. Кейекбаев.

**БЫЖЫРЛАНЫУ (быжырлан-)** (Р.: покрываться рябинами, щербинами; И.: get covered with pits; Т.: çopur ile kapanmak) *ҡ.*

**1.** Ваҡ ҡына төрткө булып уйылып ҡалыу (*биткә, тәнгә ҡарата*); шаҙраланыу. □ Покрываться рябинами, щербинами (*о лице, теле*). *Сәсәктән һуң бите быжырланды.*

**2.** Ваҡ-ваҡ ҡына булып тулҡынланыу, йыйырсыҡланыу (*һыуға ҡарата*). □ Рябеть, рябить, рябиться, покрываться рябью. *Күл өҫтө быжырланды.* ■ *Йылғаның көҙгө кеүек шыма өҫтө быжырланып китте.* Х. Мохтар. *Бер нисә секунд Кинйәғолдоң сумған урынында һыу быжырланып торҙо.* А. Таһиров.

**БЫЖЫРЛАУ (быжырла-)** (Р.: покрывать сыпью, щербинами; И.: become covered with rash; Т.: buruşturmak) *ҡ.*

**1.** Ваҡ-ваҡ ҡына төрткө итеп уйғылау; шаҙралау (*битте, тәнде*). □ Покрывать сыпью, щербинами (*лицо, тело*). *Сәсәк битте быжырлай.*

**2.** Ваҡ-ваҡ ҡына итеп тулҡынландырыу, йыйырсыҡлау; бөҙөрләү (*һыу өҫтөн*). □ Рябить, покрывать рябью. *Ел һыуҙы быжырлай.*

**БЫЖЫРМАҠ I (быжырмағы)** (Р.: зыбь; И.: surge; Т.: dalgacık) *и.*

Быжыр-быжыр булып торған ҡытыршы; быжыртмаҡ. □ Зыбь, рябь. *Һыу өҫтөнөң быжырмағы.*

**БЫЖЫРМАҠ II** (Р.: рябой; И.: pitted; Т.: çopur yüzlü) *с.*

Ваҡ-ваҡ ҡына уйымлы. □ Рябой, щербатый. *Быжырмаҡ бит. Быжырмаҡ булыу. Таҙ ҡарын быжырмаҡ була.*

**БЫЖЫРМАҠЛАНЫУ (быжырмаҡлан-)** (Р.: рябиться; И.: ripple; Т.: dalgalanmak) *ҡ.*

Быжырмаҡҡа әйләнеү, быжырмаҡ булыу. □ Рябиться, покрываться рябью. ■ *Эргәлә генә бик ҙур күл йәйрәп ята. Ел-фәлән булмағанлыҡтан, уның өҫтө беленер-беленмәҫ кенә быжырмаҡланып тора.* Н. Мусин.

**БЫЖЫРМАҠЛАУ (быжырмаҡла-)** (Р.: рябить; И.: ripple; Т.: dalgalanmak) *ҡ.*

Быжырмаҡ яһау, быжырмаҡлы итеү. □ Рябить, покрывать рябью. *Һыу өҫтөн быжырмаҡлау.*

**БЫЖЫРТМАҠ (быжыртмағы)** *и. ҡар.* **быжырмаҡ I.** *Һыу өҫтөндә быжыртмаҡ.*

**БЫЖЫУ I (быжы-)** (Р.: становиться вялым; И.: become faded; Т.: gevşeklenmek) *ҡ.*

**1.** Йылыла оҙаҡ ятҡандан йомшап бөршәйеү. □ Становиться вялым (*об овощах*). *Картуф быжыған. Кишер быжыған. Ҡыяр быжыған.*

**2.** Таушалыу. □ Мяться. *Быжып бөткән ҡалпағым.*

**3.** *диал. ҡар.* **бәҫәреү 1.** *Быжыған бесән.*

**БЫЖЫУ II (быжы-)** (Р.: пырнуть; И.: thrust; Т.: bıçaklamak) *ҡ. диал.*

Сәнсеп ебәреү. □ Пырнуть (*чем-л. острым*). *Бысаҡ менән быжыу.*

**БЫЖЫ ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух рахита; И.: rickets spirit; Т.: raşit ruhu) *и. миф.*

Рахит ауырыуын тыуҙырыусы эйә. □ Дух рахита. ■ *Быжы эйәһе мейестән, өтөүҙән ҡурҡып балаһан сығып ҡаса икән.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫЗ, бызз** (Р.: бзз; И.: imitation of insects' buzzing; Т.: vız) *оҡш.*

Бал ҡорто, себен, серәкәй кеүек бөжәктәр осҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □Бзз (*подражание жужжанию насекомых*). *Серәкәй бызз итеп оса.*

**БЫЗ-БЫЗ, быз да быз** (Р.: бзз-бзз; И.: buzzing; Т.: vız-vız) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат быз иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Бзз-бзз (*усил. от* **быз**). *Бал ҡорттары быз-быз килеп оса.*

**БЫЗҠ-БЫЗҠ, бызҡ та бызҡ** (Р.: подражание пиликанью на гармони; И.: word imitating a strumming sound; Т.: vız) *оҡш.*

Гармунды насар тартҡанда сыҡҡан көйһөҙ тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание пиликанью на гармони. *Гармунды бызҡ-бызҡ килтереү.*

**БЫЗҠЫЛДАТЫУ (бызҡылдат-)** (Р.: пиликать на гармони; И.: strum; Т.: armonik çalmak) *ҡ.*

Бызҡ-бызҡ иттереү, бызҡ-бызҡ килтереү. □ Пиликать (*на гармони*). *Гармунды бызҡылдатыу.*

**БЫЗҠЫЛДАУ (бызҡылда-)** (Р.: пиликать; И.: scrape; Т.: armonik çalmak) *ҡ.*

Бызҡ-бызҡ итеү, бызҡ-бызҡ килеү (*гармунға ҡарата*). □ Пиликать (*о гармони*). *Бызҡылдығы сығыу.*

**БЫЗЛАТЫУ (бызлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бызлау.** *понуд. от* **бызлау.** *Серәкәйҙе бызлатыу.*

**БЫЗЛАУ (бызла-)** (Р.: жужжать; И.: buzz; Т.: vızıldamak) *ҡ.*

Быз итеү. □ Жужжать (*о насекомых*). ■ *Бал ҡорттары бызлап оса, сәскәләрҙең һутын йыя.* М. Сөндөклө. *Асыҡ тәҙрәнән*

*өйгә бер бал ҡорто аҙашып керҙе. Бызлап стенаға, түшәмгә бәрелеп йөрөнө-йөрөнө лә Байморат ҡарттың яңағынан сағып алды.* Ф. Янышев.

**БЫЗМЫҠАЙ** *и. диал. ҡар.* **әүмәлә.** *Бызмыҡай бешереү.*

**БЫЗМЫР** (Р.: медлительный; И.: sluggish; Т.: yavaş) *с.*

**1.** Тиҙ ҡуҙғала алмаған, яй эшләүсән; мыштыр. □ Медлительный; копотливый, непроворный. *Бызмыр кеше. Бызмыр булыу.*

**2.** *диал.* Ялҡытҡыс. □ Нудный. *Бызмыр егет.*

**БЫЗМЫРЛАУ (бызмырла-)** (Р.: копошиться; И.: potter (about); Т.: ağır davranmak) *ҡ.*

Яй ҡуҙғалыу; мыштырлау. □ Копаться, копошиться. *Бызмырлығын сығыу.* ■ *[Егет:] Йә, йә, инеүеңде бел, ағай. Поезд ишәк түгел, бызмырлап торғанды көтмәй ул.* З. Биишева.

**БЫЗМЫРЛЫҠ (бызмырлығы)** (Р.: копотливость; И.: sluggishness; Т.: yavaşlık) *и.*

Бызмыр ҡыланыш. □ Копотливость, медлительность. ■ *Гаев .. Хәмит Хисмәтуллиндың вайымһыҙлығына, бызмырлығына һуҡраныр алды.* Ш. Янбаев.

**БЫЗЫЙЫТ** *и. диал. ҡар.* **аҡыя.** *Бызыйыт балаһы.*

**БЫЗЫЛДАҠ I** (Р.: жужжащий; И.: buzzing; Т.: vızıldayan) *с.*

Быз-быз тауыш сығарған *(бөжәккә ҡарата).* □ Жужжащий *(о насекомом). Бызылдаҡ себен. Бызылдаҡ ҡорт. Бызылдаҡ ҡуңыҙ.*

**БЫЗЫЛДАҠ II (бызылдағы)** (Р.: коптилка; И.: wick lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. *Бызылдаҡ яҡтыһы.*

**БЫЗЫЛДАҠ ҠУҢЫҘҘАР** (Р.: жужелицы; И.: ground beetles; Т.: ağılıböcek) *и. зоол.*

Урта бүлкәттәрҙә йәшәй торған ҡуңыҙҙар ғаиләһе. □ Жужелицы (лат. *Carabidae*). *Бызылдаҡ ҡуңыҙҙар төрө.*

**БЫЗЫЛДАҠТАР** *и. ҡар.* **бызылдатҡыстар.** *Себен бызылдаҡтары.*

**БЫЗЫЛДАТҠЫСТАР** (Р.: жужжальцы; И.: halteres; Т.: halter) *и.*

Себен, күгәүен, серәкәй кеүек ҡайһы бер ике ҡанатлы бөжәктәрҙә үҫешеп етмәгән, һиҙеү ағзаһы булып хеҙмәт итә торған артҡы ҡанаттар. □ Жужжальцы. *Күгәүен бызылдатҡыстары.*

**БЫЗЫЛДАТЫУ (бызылдат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бызылдау.** *понуд. от* **бызылдау.** *Күгәүенде бызылдатыу.*

**БЫЗЫЛДАУ (бызылда-)** (Р.: жужжать; И.: buzz; Т.: vızıldamak) *ҡ.*

Быз-быз итеү, быз-быз килеү. □ Жужжать *(о насекомых).* // Жужжание. *Иңкеш бызылдай. Бызылдығын сығыу.* ■ *Ләпәктәр менән күгәүендәр өҙлөкһөҙ бызылдап, күк айғыр янында өйрөлә.* З. Биишева. *Уның байлығы ла, яҡын тирәгә таралған даны ла бал ҡорто менән бызылдап осоп йөрөй.* Ж. Кейекбаев. *Өй баҙындағы умартанан сыҡҡан бер ҡорт тәҙрәлә туҡтауһыҙ бызылдай.* Н. Мусин.

**БЫЗЫЛДАШЫУ (бызылдаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бызылдау.** *взаимн. от* **бызылдау.**

**БЫЗЫМЫҠ (бызымығы)** (Р.: болтушка из муки; И.: kind of mash; Т.: kaymaklı, unlu lapa) *и. диал.*

Ҡаймаҡҡа он туҡып бешерелгән боламыҡ. □ Болтушка из муки, заваренная в сметане. *Бызымыҡ бешереү.*

**БЫЗЫРАҠ (бызырағы)** (Р.: колотушка; И.: beetle; Т.: çekiç) *и. диал.*

Әйберҙе йомшартыу өсөн ҡулланылған туҡмаҡ. □ Колотушка, молоток. *Бызыраҡ менән йомшартыу.*

**БЫЗЫР-БЫЗЫР** (Р.: подражание звуку шипения; И.: imitation of a hissing sound; Т.: hışır hışır) *оҡш.*

Шыйыҡлыҡ төбөнән ваҡ ҡына булып бызырлап һауа ҡалҡҡанды белдергән һүҙ. □ Подражание звуку шипения. *Баҫҡанда һыу төбөнән бызыр-бызыр итеп һауа ҡалҡа.*

**БЫЗЫРЛАУ (бызырла-)** (Р.: шипеть; И.: fizz; Т.: hışırdamak) *ҡ.*

**1.** Бызыр-бызыр итеү, бызыр-бызыр килеү. □ Шипеть *(о шипущих напитках). Бызырлығын сығыу. Ойотҡо бызырлап ҡайнай.*

**2.** Тәнгә ҡыҙыл бөрсөктәр ҡалҡыу; сабыртыу. □ Высыпать *(о появлении сыпи на коже). Эҫегә тән бызырлап сабыртҡан.*

**БЫЗЫРМАҠ (бызырмағы)** (Р.: зыбь; И.: ripple; Т.: dalgacık) *и.*

Ваҡ-ваҡ ҡына быжырмаҡ. □ Зыбь, рябь. *Һыу өҫтөндә бызырмаҡтар уйнай.*

**БЫЗЫРЫҠ (бызырығы)** (Р.: валёк; И.: battledore; Т.: avara demiri) *и. диал.*

Кер туҡмағы. □ Валёк. *Бызырыҡ менән кер туҡмау.*

**БЫЙМА** (Р.: валенок; И.: felt boot; Т.: keçe çizmeler) *и.*

Йөндән баҫылған ҡунысլы ҡышҡы аяҡ кейеме. □ Валенок, валенки. *Калушлы быйма. Быйма ҡунысы. Быйма баҫыу. Быйма төпләү.* ■ *Аҡ ҡарҙа аҡ быйма менән их күңелле атлауы.* С. Муллабаев. *Сибәғәт ауылдар буйлап йөрөп быйма баҫты, самауыр, һауыт-һаба яманы.* Т. Ғарипова. *Ҡарабаш диванға ятты. Аҙ ғына ла тартынып тормай, үҙ өйөндәге һымаҡ, сисенеп ташланы. Быймаларын сисеп, мейескә терәп ҡуйҙы.* И. Насыри. *Ул шәл дә бәйләй, мейес тә һала, кейем дә тегә, ҡурай ҙа тарта, быйма ла баҫа, театрҙа ла уйнай икән.* М. Кәрим.

**БЫЙМАСЫ** (Р.: валяльщик; И.: fuller; Т.: keçe çizmeleri yapan kimse) *и.*

Быйма баҫыусы. □ Валяльщик, валяльщица валенок. *Быймасыға быйма баҫырға йөн бирҙем.*

**БЫЙПАНЛАУ (быйпанла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **быйтанлау.** *Ҡыҙҙар быйпанларға ярата.*

**БЫЙТАНЛАҠ** (Р.: кокетливый; И.: coquettish; Т.: cilveli) *с.*

Уйнаҡлап, ҡылансыҡланып торған; ҡыйпысыҡ *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата).* □ Кокетливая. *Быйтанлаҡ ҡыҙ. Быйтанлаҡ булыу.*

**БЫЙТАНЛАУ (быйтанла-)** (Р.: кокетничать; И.: flirt (with); Т.: cilve yapmak) *ҡ.*

Башты-күҙҙе уйнатып, ҡылансыҡланыу; йыртанлау. □ Кокетничать. *Сәлимә быйтанлап сығып китте.*

**БЫЙТЫҠАС** *с. һөйл. ҡар.* **быйтанлаҡ.** *Быйтыҡас ҡыҙ.*

**БЫЙТЫС** (Р.: кокетливый; И.: arch; Т.: cilveli) *с.*

Ҡылансыҡ *(бәләкәй ҡыҙҙарға ҡарата).* □ Кокетливая *(о маленьких девочках). Быйтыс ҡыҙыҡай.*

**БЫЙЫЛ** (Р.: в этом году; И.: this year; Т.: bu sene) *р.*

Ошо йыл. □ В этом году, в нынешнем году. ■ *Ҡасандыр шул ерҙә Шәһәрбаныу Гөлбаныуға салғы торорға, бесән сабырға өйрәткәйне, быйыл Гөлбаныу үҙе Мәҙинәһен өйрәтте.* Т. Ғарипова. *Төлкөсура .. быйыл ғына менгегә өйрәтелгән тайын йүгәнләп, һыртына үңлек һалып әҙерләп ҡуйған.* Н. Мусин.

**БЫЙЫЛҒЫ** (Р.: нынешний; И.: current; Т.: şimdiki) *с.*

Ошо йылғы. □ Нынешний. *Быйылғы уҡыу йылы. Быйылғы йәй.* ■ *Һалҡын ҡышты артта ҡалдырып, кәкүк айына аяҡ баҫҡас та быйылғы йыйын тураһында һүҙ ҡуҙғалды.* К. Мәргән. *Бәхеткә, йылдар ҙа имен килде, миҙгеленә ҡарап ҡойоп ямғыр яуғас, ураҡ өҫтөндә, хәс тә быйылғы кеүек, көндәр гел аяҙ торғас, игендәр ҡотороп үңды, эҫкерт-эҫкерт көлтә ырҙынға ташылды.* Ә. Хәкимов.

**БЫҠ-БЫҠ** (Р.: подражание звуку, возникающему при кипении густой массы; И.: word imitating indistinct talking; Т.: fokur fokur) *оҡш.*

Ҡуйы нәмә яй ғына ҡайнағанда сыҡҡан йәки аңлайышһыҙ итеп, өҙөп-өҙөп эстән һөйләнгән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку, возникающему при кипении густой массы или невнятному разговору. *Бутҡа быҡ-быҡ итеп бешә. Быҡ-быҡ килә, нимә әйткәне аңлашылмай.*

**БЫҠРА** *с. диал. ҡар.* **шамтыр.** *Быҡра әбей.*

**БЫҠТЫРЫЛЫУ (быҡтырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **быҡтырыу.** *страд. от* **быҡтырыу.** *Быҡтырылған ит.* ■ *[Ҡыҙы:] Өйрәк ите һалып,*

*талғын ғына утта быктырылған өйрәне һинең кеүек бер генә кеше лә бешерә белмәй, әсәй.* Г. Ғиззәтуллина. *Килгән кеше ситләтеп кенә башланы: «Батыр ашы — баҫыуҙа, сапҡын ашы — соҡорҙа, тигәндәрме әле? Быктырылған һарыҡ ите кемдеке була инде, былай булғас?»* К. Мәргән.

**БЫКТЫРЫУ (быктыр-)** (Р.: тушить; И.: stew; Т.: pişirmek) *ҡ.*

**1.** Тандыр ғына утта томалап бешереү. □ Тушить. *Йәшелсә быктырыу. Ит быктырыу. Кәстрүл ҡапҡасын ябып, балыкты быктырырға ҡуйыу.* ■ *Бер аҙ ҡарап торҙо ла ул һарыҡ итен быктырырға һалыу өсөн урын әҙерләшергә тотонол китте.* К. Мәргән.

**2.** Боҫҡа, эҫегә, һыуға йомшартыу, ебетеү. □ Парить. *Кәбеҫтә быктырыу. Малға һаламды быктырып ашатыу.*

**БЫҠЫЙ** (Р.: неряшливый; И.: sloven; Т.: çapaçul) *с. диал.*

Әрпеш. □ Неряшливый. *Быҡый хужабикә.*

**БЫҠЫЛДАҠ (быҡылдағы)** (Р.: болтливый; И.: mumbler; Т.: mırmırık) *с.*

Бык-бык итеп һөйләгән. □Болтливый. *Эй, быкылдаҡ, теләһә ни һөйләр ҙә торор инде.*

**БЫҠЫЛДАУ (быҡылда-)** (Р.: клокотать; И.: bubble; Т.: şırıldamak) *ҡ.*

**1.** Бык-бык итеү, бык-бык килеү. □ Клокотать, булькать *(о кипящей густой массе). Бутҡа ҡуйырып быкылдай башланы.*

**2.** *күсм.* Аңлайышһыҙ итеп һөйләнеү. □ Говорить невнятно, бормотать. ■ *Стражник нимәлер быкылдай башлағайны ла, Хисамый тағы йоҙроҡ күрһәтеп, уның телен тыйҙы.* Б. Бикбай.

**БЫҠЫР-БЫҠЫР** (Р.: подражание звуку, возникающему при сильном кипении густой массы; И.: word imitating bubbling sounds; Т.: şırıl şırıl) *оҡш.*

Ҡуйы нәмә нык ҡайнағанда сыҡҡан йәки һыу эсенән һауа урғылып сыҡҡандағы, һыуға төшөп болғанғандағы тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку, возникающему при сильном кипении густой массы или при выходе пузырьков воздуха из жидкости. *Быҡыр-быҡыр ҡайнау.* ■ *Көндөҙ өйрәк күлдә йөрөй быҡыр-быҡыр.* С. Ҡудаш.

**БЫҠЫРЛАУ (быҡырла-)** (Р.: булькать; И.: boil; Т.: şırıldamak) *ҡ.*

Быҡыр-быҡыр итеү, быҡыр-быҡыр килеү. □ Булькать, клокотать. *Бутҡа быҡырлай. Быҡырлығын сығыу.*

**БЫЛ (бының, быға, быны, бынан, бында; күпл. былар)** [*бу ол (ул)* < дөйөм төрки *бу, бун*] (Р.: этот; И.: this; Т.: bu) *күрһ. а.*

**1.** Нәмәне йәки эш-хәлде айырып күрһәтеү, билдәләү хеҙмәтен үтәй. □ Этот, эта, это; эти. *Был урында. Был донъя. Был көндәр. Был кешеләр.* ■ *Сәғиҙә был ауылда ғүмер буйы йәшәрмен тип башына ла килтермәй ине.* М. Тажи. *Юғары остан урап ҡайтҡанда, Вәзир урамдың был яғына сыҡты.* М. Кәрим.

**2.** Билдәле бер нәмәгә, булып үткән эш-хәлгә тоҫҡау өсөн ҡулланыла. □ Употребляется как личное местоимение, указывая на *какое-л.* событие. ■ *[Ҡамыр батыр] юлға сығырға булған. Был хаҡта ата-әсәһенә лә әйткән.* Әкиәттән.

**3.** Билдәле бер затҡа тоҫҡап, зат алмашы хеҙмәтен үтәй. □ Употребляется как личное местоимение, указывая на *какое-л.* лицо. ■ *Көтөүсе .. Ерәнде етәкләп, сығып китә. Эй бара, ти, был, эй бара, ти. Бара торғас, бер йылға буйына етә, ти.* Әкиәттән. *Элекке заманда бер бабай менән бер әбей йәшәгән, ти. Быларҙың берҙән-бер ҡыҙҙары булған, ти.* Әкиәттән.

♦ **Был ни был, был ни хәл был, был ни эш был** берәй нәмәгә аптырағанда әйтелә. □ Что это такое, что это за дело? *(при удивлении).* ■ *«Был ни хәл был, ҡайҙа киттеләр һуң әле беҙҙекеләр?» — тине Айбулат.* Һ. Дәүләтшина. **Был ни тигән һүҙ** берәй кешенең һүҙенә аптырағанда, ғәжәпкә ҡалғанда әйтелә. □ Что это значит? *(при удивлении).* ■ *[Үмәр:] Был ни тигән һүҙ тағы! Быға тиклем кем кейәү күҙләп ҡыҙ биргән?* Һ. Дәүләтшина. **Эшме ни был** берәй

нәмәгә ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. □ Разве это дело? *(выражает недовольство).*

**БЫЛАҒАЙ** [монг. *булға-ғай* 'ығы-зығылы'] (Р.: балагур; И.: jester; Т.: şakacı) *с.*

Урынһыҙға һөйләнеп, бәйләнеп, еңел ҡыланған. □ Балагур, шутник, весельчак. *Былағай булыу.* ■ *[Биктимер:] Бәшәр былағай ул, беҙ әйткәнде ҡолағына ла алмай.* Б. Ишемғол.

**БЫЛАҒАЙЛАНЫУ (былағайлан-)** (Р.: дурить; И.: frolic; Т.: yaramazlık etmek) *ҡ.*

Былағайса ҡыланыу. □ Дурить; озорничать, безобразничать, сумасбродничать. *Былағайланма, эшеңде эшлә!* ■ *Бер ваҡыт Зәйнулла, шаталаҡ ғәҙәте буйынса былағайланып китеп, ниңәлер зарланып ташланы: «Эш ҡуша ла тора бынау!»* Яр. Вәлиев.

**БЫЛАҒАЙЛЫҠ (былағайлығы)** (Р.: озорство; И.: mischief; Т.: yaramazlık) *и.*

Былағай булыу хәләте. □ Озорство, сумасбродство. *Былағайлыҡҡа бирелде.* ■ *«Ошо Маһинурҙың былағайлығы бөтмәҫ». — тигән булды әсәйем, ниндәйҙер ҡурҡыныс һиҙенгәндәй.* З. Ураҡсин.

**БЫЛАЙ I** (Р.: обыкновенный; И.: usual; Т.: sıradan) *с.*

Ғәҙәттәге, ҡәҙимге. □ Обыкновенный, обычный. ■ *Әлек осар тейен былай тейенгә ҡарағанда күберәк ине.* Я. Хамматов.

**БЫЛАЙ II** [*бы-лай* < дөйөм төрки *бу, бун*] (Р.: так; И.: thus, so; Т.: böyle) *р.*

**1.** Был рәүешле. □ Так, этак, эдак. *Былай ярамай. Былай эшләмә.* ■ *Ире унан: «Ниңә былай илайһың, ни булды?» — тип һораған.* Әкиәттән. *Рамаҙан инде, эштең былай апанһат хәл ителеүенә үкенгән һымаҡ, иҫнәп урынынан ҡуҙғала башлағайны, ҡарт төптө бөтән яҡтан килтереп һуҡты.* Ә. Хәкимов. *Билдәле, уның былай ҡапыл ғына бөлөп китеүенә кеше ышанмаясаҡ ине.* Б. Бикбай.

**2.** Был яҡҡа. □ Сюда. *Былай китәбеҙ. Былай ҡара.* ■ *Ҡала урамынан бер тегеләй, бер былай үткән халыҡты ҡарап, тупһала ултырабыҙ.* Т. Йәнәби. *Бүре, кәбән урынына барып, бер тегеләй, бер былай әйләнде лә, ҡапыл туҡтап, ниндәйҙер йомғаҡты мороно менән һаҡ ҡына ҡуҙғатып ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов.

**3.** Берәй нәмәнең, эш-хәлдең төрлө яғын самалап, уртасараҡ бер фекер, мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә. □ Как таковой. *Үҙе былай арыу ғына әртис инде.* ■ *Йөҙөк былай үҙе саф алтын түгел.* С. Агиш. *Былай өҫтө-башы арыу ғына күренә Ләләнең, әммә бер ҙә төҫө юҡ, миңрәү һымағыраҡ булып киткән.* Б. Бикбай.

**4.** Һөҙөмтәһеҙ. □ Без последствий. *Былай ғына ҡалдырмам.*

**5.** Бушҡа, түләүһеҙ. □ Безвозмездно. *Китабын былай бирҙе, хаҡ һораманы.*

**БЫЛАЙ III** (Р.: с; И.: from; Т.: ...dan) *бәйл.*

Алып, бирле *(сығанаҡ килеш формаһындағы һүҙҙән һуң килгәндә).* □ С, со, от *(послелог с исх. п.). Ҡыштан былай. Ҡаланан былай.*

♦ **Былай булғас** (*йәки* **булһа)** телгә алынған эш-хәлдән, шарттан сығып, бер төрлө йомғаҡ яһағанда әйтелә. □ В таком случае, раз уж так, если так. ■ *[Өмәт:] Һеҙ һаман да ҡурҡаһығыҙ! Былай булһа, ғүмергә кеше була алмаҫһығыҙ!* Д. Юлтый. **Былай ғына** 1) бер нәмәһеҙ, шул көйө генә. □ Просто так, так себе, лишь только так. ■ *[Төлнур:] Ҡара папкаһыҙ ғына, былай ғына әйтергә булалыр бит, Сафа Сөләймәнович?* М. Тажи; 2) *ниндәйҙер* бер ниәт, эш менән түгел; тик, буш. □ Просто так. ■ *[Хафиз:] Һабантуйға килдегеҙме, ҡыҙҙар? [Зифа:] Былай ғына килдек әле ҡул буйына.* Ҡ. Даян. **Былай ҙа** бынан башҡа ла, унһыҙ ҙа. □ Без того, и так. ■ *Ул [әсә] былай ҙа Мөхитте күрә алмай. Мөхиттән ҡотола алмай йөрөй.* К. Кинйәбулатова. **Былайға китһә** (*йәки* **ҡалһа)** уңайһыҙ бер эш-хәлдән сығып, йомғаҡ яһап ҡуйғанда әйтелә. □ Если уж на то пошло. ■ *[Әпләс:] Арыу тәрбиәләп ҡуяйыҡмы әллә тип йөрөгән йөрөш инде. Былайға ҡалһа, әҙәм балаһын ҡайҙа ҡумһаң дә ятып ҡала ғуй.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫЛАЙ-АЛАЙ I** (Р.: очень; И.: word expressing the highest degree of smth; Т.: pek) *р.*

Юҡлыҡ йәки һорау формаһындағы хәбәр булып, *ниҙеңдер* юғары дәрәжәләге бер сифатын белдерә. □ Очень, сильно *(знач. сказ. выражает высшую степень чего-л). Ауыҙы былай-алай түгел. Тауышы былай-алаймы. Былай-алай ғына ҡыскырмай.*

**БЫЛАЙ-АЛАЙ II** (Р.: настолько; И.: thus much; Т.: o kadar) *р. диал.*

Шул саҡлы. □ Настолько. *Былай-алай көслө.*

**БЫЛАЙТЫП** (Р.: так; И.: so, in this way; Т.: böyle) *р.*

Былай итеп, был рәүешле. □ Так, таким образом. *Былайтып ҡыйырһытма.*

**БЫЛАЙТЫУ (былайт-)** (Р.: делать так; И.: do so; Т.: böyle yapmak) *к. ыҡ. ф. һөйл.*

Былай итеү. □ Делать так, таким образом. *Былайтып эшлә.* ■ *Юлдыбаевтың былайтып һис бер асыуһыҙ-ниһеҙ иптәштәрсә һөйләп биреүе .. йыйылған кешеләрҙе ирәбеләндереп ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЛАЙЫРАҠ** (Р.: эдак; И.: in this manner; Т.: böyle) *р.*

1. Шулайыраҡ, шуға оҡшатып. □ Эдак, примерно так. *Былайыраҡ итһәң...* ■ *Бына хәҙер былайыраҡ фараз итеп ҡарайыҡ: кешеләр бер-береһенә ышанысты бөтөнләй юғалтты, ти, һәр кем тик үҙенә генә ышанып йәшәй, ти. Ни килеп сығыр ине һуң ул саҡта?* Н. Мусин.

2. Үҙеңә, яҡыныраҡ. □ Ближе, поближе. *Былайыраҡ кил.*

3. Артыҡ, ныҡ, яҡшы. □ Сильнее, больше, лучше. ■ *Ата менән әсә шатлыҡтан ни эшләргә лә белмәгән. Малай уларҙан да былайыраҡ ҡыуанған.* Әкиәттән. *Хөббөниса ауылда хәлле генә йәшәгән ҡатын... Эш тиһәң инде — емертеп һала, арлы-бирле ирҙәреңдән былайыраҡ.* Р. Солтангәрәев. *Тиңһенә алманы мине. Минән былайыраҡ үҙе ғазапланды.* М. Кәрим. *Улының уҡырға инә алмауына, уның үҙенән дә былайыраҡ, әсәһе ҡара ҡайғыға ҡалды, ғәҙелһеҙлекте төҙәтергә лә тырышып ҡараны.* Ә. Хәкимов.

**БЫЛ АРАЛА** (Р.: на днях; И.: the other day; Т.: bu arada) *р.*

1. Ошо ваҡыт эсендә. □ На днях. ■ *Әбей менән бабайҙы дейеү осора тибеп ебәргән, ти. Был арала егет байтаҡ ер киткән, ти.* Әкиәттән. *Артабан ул күбәне кәбән ҡойолаҫаҡ ергә еткәнсе һәнәге менән топоп килде. Был арала Әхәт өс күбә тарттырырға өлгөргәйне инде.* Н. Мусин.

2. Һуңғы ваҡытта. □ В последнее время. ■ *[Гәрәй:] Был арала һин байғошҡа ла тынғы юҡ, Сакай туған.* Б. Бикбай. *Ҡыҙырас был арала киноға йылдағыға ҡарағанда ла йышыраҡ йөрөй башланы.* З. Биишева.

**БЫЛАУ** [фарс. پلو] (Р.: плов; И.: pilau; Т.: pilav) *и.*

Дөгө менән иттән быҡтырып бешергән ашамлыҡ. □ Плов. *Былау бешереү.* ■ *Үзбәк кәрҙәштәребеҙҙе иҫтәремә төшөрөп, былау килтерттем.* Т. Арслан. *[Шәрифә:] Әллә былау бешерәбеҙме? Насип былау ярата бит.* И. Абдуллин.

**БЫЛАШ** *и. диал. ҡар.* **ыҙғыш.** *Былаш сығармағыҙ.*

**БЫЛАШЫУ (былаш-)** *к. диал. ҡар.* **булашыу.**

**БЫЛБЫЛ** [ғәр.-фарс. بلبل 'һандуғас'] (Р.: соловей; И.: nightingale; Т.: bülbül) *и. шиғр.*

Турғай төркөмөнә ҡараған һорғолт төҫтәге бик матур һайрай торған бәләкәй генә күсәр ҡош; һандуғас. □ *поэт.* Соловей. *Былбыл һайрауы. Былбыл тауышы.* ■ *Ярҙарына Иҙел кермәй шашты, һыңлап йыр башланы былбылдар.* Х. Кәрим. *Баҡсаһыҙ былбылдар ҙа һайрай алмаҫ.* М. Аҡмулла. *Былбыл булып һайра, күңелемде йыуат, былбылым.* Я. Ҡолмой. *Уянды былбыл, ҡунды тирәккә. Теләне таңға изге теләктәр.* М. Ғәли.

**БЫЛДЫР** (Р.: говорящий быстро и невнятно; И.: speaking indistinctly; Т.: mırıltılı) *с.*

Һүҙҙе ҡабаланып, аңлайышһыҙ итеп һөйләүсән. □ Говорящий быстро и невнятно. *Былдыр кеше. Былдыр булыу.*

**БЫЛДЫР-БЫЛДЫР** (Р.: подражание звуку невнятного разговора; И.: word expressing muttering; Т.: mırıl mırıl) *оҡш.*

Ситтән айышһыҙ, өҙөкһөҙ булып ишетелгән һөйләшеүҙе белдергән һүҙ; лыбыр-лыбыр. □ Подражание звуку (например, *невнятного разговора). Былдыр-былдыр итеү. Былдыр-былдыр килеү. Былдыр-былдыр һөйләү.* ■ *Тиҫтерҙәр менән былдыр-былдыр хәбәр һөйләшкән, серләшкән булып, күк үлән күренеү менән ҡарыш тау түмәләстәргә әтмәкәй, йыуа йыйырға сыға инек.* Х. Назаров.

**БЫЛДЫРЛАҠ** (Р.: говорящий быстро и невнятно; И.: mumbler; Т.: mırmırık) *с.*

Былдыр-былдыр итеп һөйләгән *(кешегә ҡарата).* □ Говорящий быстро и невнятно. *Былдырлаҡ бала.*

**БЫЛДЫРЛАУ (былдырла-)** (Р.: бормотать; И.: mumble; Т.: mırıldanmak) *ҡ.*

Былдыр-былдыр килеү. □ Бормотать, лепетать. // Бормотание, лепет. *Былдырлап һөйләшеү. Былдырлығын сығыу.*

**БЫЛДЫРЛАШЫУ (былдырлаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **былдырлау.** *взаимн. от* **былдырлау.** ■ *Ләкин йәштәр үҙ-ара әлләниндәй бик ҡыҙыҡ хәбәр менән мауығып, былдырлашып, әбейҙең был өмөтлө һүҙҙәрен ишетмәнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫЛЙЫМАУ (былйыма-)** (Р.: быть беспечным; И.: not care a straw; Т.: özensiz olmak) *ҡ. диал.*

Иҫ китмәү. □ Быть беспечным, и в ус не дуть. *Былйымай ғына ултырыу.*

**БЫЛЙЫРАУ (былйыра-)** (Р.: развариваться; И.: be overcooked; Т.: çok pişmek) *ҡ.*

Ныҡ йомшау, иҙрәү. □ Развариваться. *Картуф оҙаҡ ҡайнап былйырап киткән.*

**БЫЛҠ-БЫЛҠ** (Р.: бульк-бульк; И.: imitation of a repeated gurgling; Т.: şırıl şırıl) *оҡш.*

**1.** Нәҙек муйынлы һауыттан шыйыҡлыҡ аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Бульк-бульк *(подражание многократному бульканью).* ■ *Ғәлләмдең шешәнән сынаяҡҡа ҡойған араҡыһы былҡ-былҡ аға башланы.* А. Таһиров.

**2.** Яҡтылыҡтың бер көсәйеп, бер һүрелеп китеүен белдерә. □ Подражание многократным вспышкам света. *Былҡ-былҡ итеү. Былҡ-былҡ килеү.* ■ *Йәмилә ҡарауыл өйөнә еткәндә, тәҙрә төбөндә ҡалған фонарҙың кәрәсине бөтөп, филтәһе ҡуҙланып, былҡ-былҡ килеп ултыра ине.* З. Ураҡсин.

**БЫЛҠЫ** (Р.: рыхлый; И.: friable; Т.: bıngıl bıngıl) *с.*

**1.** Һимеҙ, йомшаҡ тәнле. □ Рыхлый, дряблый. *Былҡы тәнле кеше.*

**2.** *күсм.* Эшкә йомшаҡ, йүнһеҙ. □ Слабый. *Былҡы кеше.*

**БЫЛҠЫЛАНЫУ (былҡылан-)** (Р.: одряхлеть; И.: be flabby; Т.: bıngıldamak) *ҡ.*

**1.** Һимеҙ, йомшаҡ тәнлегә әйләнеү; былҡы булыу. □ Быть рыхлым, дряблым *(о человеке). Тәне былҡыланып киткән.*

**2.** *күсм.* Эшкә йомшаҡ, булдыҡһыҙға әйләнеү; булдыҡһыҙ булыу. □ Быть слабым, слабовольным. *Былҡыланып йөрөмә.*

**БЫЛҠЫЛДАУ (былҡылда-)** (Р.: трястись; И.: shake while walking; Т.: titremek) *ҡ.*

Һимеҙлектән йомшаҡ булып һелкенеү *(тәнгә ҡарата).* □ Трястись при движении *(о рыхлом, дряблом теле).* ■ *Бай былҡылдап торған йыуан елкәһен көскә бороп, иркенләп ултырҙы.* Я. Хамматов.

**БЫЛҠЫМ** (Р.: неуклюжий; И.: clumsy; Т.: sakar) *с.*

Тотҡан нәмәһен төшөрөп барыусан, ҡулайһыҙ. □ Неуклюжий, неловкий. *Былҡым кеше.* ■ *Йөҙө ҡара Нәсимә ни ҡабаланып килеп, анау ишек алдында дөмәйеп ятҡан ташҡа һөрөндө лә табаны төшөрөп ярып ҡуйҙы, былҡым.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЛҠЫМЛАНЫУ (былҡымлан-)** (Р.: ожиреть; И.: become obese; Т.: çok şişmanlaşmak) *ҡ. диал.*

Артыҡ ныҡ һимереү. □ Сильно ожиреть. *Был ҡатын былҡымланып киткән.*

**БЫЛҠЫН** *с. диал. ҡар.* **һимеҙ.** *Былҡын ҡатын.*

**БЫЛСАЙЫУ (былсай-, былсая)** (Р.: воспаляться и слезиться; И.: water, become inflamed; Т.: yangılanmak) *ҡ.*

Сейләнеп, йәшкәҙәп, ҡыҙарып тороу *(күҙгә ҡарата)*. □ Воспаляться и слезиться *(о глазах)*. *Күҙе былсайып тора.*

**БЫЛСЫҠ** [*был-, бал-* ‘шыйыҡлыҡ’] (Р.: воспалённый и слезящийся; И.: inflamed and watering; Т.: yangılanmış) *с.*

Сейләнеп, йәше ҡойолоп, ҡыҙарып торған; бысый. □ Воспалённый и слезящийся *(о глазах)*. *Былсыҡ күҙ.*

**БЫЛСЫҠЛАНЫУ (былсыҡлан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **былсайыу.** *Күҙе былсыҡланып тора.*

**БЫЛСЫЛДАУ (былсылда-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бысылдау.** *Икмәк былсылдап тора.*

**БЫЛСЫМ** *с. диал. ҡар.* **былсыҡ.** *Былсым күҙ.*

**БЫЛСЫМАҠ (былсымағы)** *с. диал. ҡар.* **бысый.** *Былсымаҡ икмәк. Былсымаҡ күҙ.*

**БЫЛСЫМАҠЛАНЫУ (былсымаҡлан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бысыйланыу.** *Икмәгем әллә бешеп етмәне инде, былсымаҡланып тора.*

**БЫЛТ** (Р.: подражание внезапному движению; И.: word expressing abrupt movement; Т.: çat) *оҡш.*

Киҫкен хәрәкәтте, ҡапыл күренгәнде белдергән һүҙ. □ Подражание внезапному, неожиданному движению, действию; мерцанию. *Былт итеү. Былт итеп килеп сығыу.* ■ *Бер эт килеп сыҡты былт итеп, бесәй тороп ҡасты йылт итеп.* Р. Талипов. *Шул арала тау тыҡрығынан, былт итеп, Яҡуп килеп сыҡты.* М. Кәрим.

**БЫЛТАЙЫУ (былтай-, былтая)** (Р.: раздуваться; И.: be puffed up; Т.: kabarmak) *ҡ.*

**1.** Йомро ғына булып ҡабарыу; бүлтәйеү. □ Раздуваться, вздуваться, вспухать. *Яңағы былтайып шешеп сыҡҡан. Ҡорһағы былтайып тора.*

**2.** *диал. ҡар.* **ҡылтайыу.** ■ *[Аҡмал:] Ярамай! Әле улар асыулы, тукмап ташларҙар. Шунан, ниңә ерле юкка улар алдында былтайырға?* Б. Рафиҡов.

**БЫЛТАНДАҠ (былтандағы)** (Р.: непоседа; И.: fidget; Т.: yerinde durmaz) *и. диал.*

Тиктормаҫ. □ Непоседа. *Былтандаҡ бала.*

**БЫЛТАНЛАУ (былтанла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыйшанлау.** *Ҡыҙ былтанларға ярата.*

**БЫЛТ-БЫЛТ** (Р.: подражание мерцанию, миганию (света); И.: word to express abrupt movement, etc.; Т.: çatpat) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат былт, ялп-йолп иткәнде белдергән һүҙ. □ Подражание мерцанию, миганию (света). *Былт-былт итеү.* ■ *Ҡайҙандыр иҫкән елгә [шәм] былт-былт итә. Уның былт-былт итеүенән бәләкәй өйҙөң һәр ерендә шомло күләгәләр уйнай.* Ғ. Ғүмәр. *Хәҙер инде ҡаланың уттары йымйым итеп янмай, былт-былт итеп тона, һүнә бара ине.* М. Кәрим.

**БЫЛТЫҠ** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **ҡылтым.** *Былтыҡ ҡыҙ. Ул былтыҡ тиҙ генә үсегеп бара.*

**2.** *ҡар.* **ҡылансыҡ.** *Былтыҡ кеше.*

**БЫЛТЫЛДАУ (былтылда-)** (Р.: мигать; И.: twinkle; Т.: göz kırpmak) *ҡ.*

Былт-былт итеү, былт-былт килеү. □ Мигать, мерцать *(о свете)*. *Май шәм былтылдай.* ■ *Шәм, һүнәм, һүнәм тигән кеүек, былтылдап ҡара һөрөмөн .. түҙҙырҙы.* Ғ. Ильяс. *Көҙгө төн. Ҡыҙарып ҡына янған етеле лампа бер-ике тапҡыр былтылдап күҙ ҡыҫты ла ҡапыл һүнде.* Ә. Зәйнуллин.

**БЫЛТЫМ** *с. диал. ҡар.* **ҡылтым.** *Былтым кеше.*

**БЫЛТЫР** [дөйөм төрки *былтыр* < боронғо төрки *бир йыл турур* ‘бер йыл булыр’] (Р.: в прошлом году; И.: last year; Т.: bıldır) *р.*

Үткән йыл, быйылдан алда ғына булған йыл. □ В прошлом году, в минувшем году. ■ *«Мин шулай былтыр», — тип [Йәнтимер] үҙенең уҙған йылғы «шәплектәрен» һөйләй башланы.* С. Агиш. *[Зөлхизә:] Әсәйем ул таҡталарҙы былтыр күрше Дауыт ағайға бирҙе.* Ә. Хәкимов. *Ә бит турғайҙар былтыр ни хәтлем күмәктәр һәм ниндәй туктар ине.* Һ. Дәүләтшина. ● *Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡыҫҡырмайҙар.* Мәҡәл.

♦ **Биш былтыр** әллә ҡасан, бик күптән. □ Очень давно. **Былтырҙың күҙе йылтыр** кеше үткәндәге берәй нәмәне һөйләгәндә ышанып етмәгәнде белдереү өсөн әйтелә.

□ Что было, то прошло; что было, то быльём поросло. **Былтыр үлгән ябалакты быйыл атып алыу** күптән билдәле хәлде яңы белеп ҡалыу. □ *соотв.* Открывать Америку. ■ *Ул иҫке сараларҙы яңы Америка асҡан кеше кеүек газета сәхифәләренә яҙып ятыуығыҙға аптырайым. Шулай уҡ һеҙҙең кеүектәргә беҙҙең башҡорттар «былтыр үлгән ябалаҡты быйыл атып алдыңмы», тиҙәр.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**БЫЛТЫРҒЫ** (Р.: прошлогодний; И.: last year's; Т.: bıldırki) *с.*

Үткән йылғы. □ Прошлогодний. *Былтырғы ҡыш. Былтырғы уңыш.* ■ *[Тимер:] Беҙ быйыл былтырғыға ҡарағанда ике тапҡыр артығыраҡ сәстек.* Б. Бикбай. *Мин уның былтырғы сағын күрмәгәс, уға ҡаршы бер нәмә лә әйтә алмайым.* С. Агиш.

♦ **Биш былтырғы** әллә ҡасанғы, бик күптәнге. □ Давнишний. *Биш былтырғы кейем.*

**БЫЛТЫРЛЫ-БЫЙЫЛЛЫ** (Р.: за последние два года; И.: last two years; Т.: son iki yılda) *р.*

Һуңғы ике йыл эсендә. □ За последние два года. *Былтырлы-быйыллы ҡыш һыуыҡ булды.*

**БЫЛЫҒЫУ (былыҡ-)** (Р.: плесневеть; И.: grow mouldy; Т.: küflenmek) *ҡ.*

Дымланып ҡыҙыу *(иген, бесәнгә ҡарата).* □ Плесневеть, покрываться плесенью *(о зерне, сене).* ■ *Һылай өйөлгән игендең дымланыуы, былығып китеүе бар.* Ғ. Дәүләтшин.

**БЫЛЫҠ** *с. ҡар.* **шыйыҡ.** *Былыҡ тал.*

**БЫЛЫҠТЫРЫУ (былыҡтыр-)** (Р.: подвергать прению; И.: cause rotting; Т.: çürütmek) *ҡ.*

**1.** Дымлы көйө өйөп, ҡыҙыуға, сереүгә юл ҡуйыу *(иген, бесәнде).* □ Подвергать прению, гниению *(зерна, сена). Игенде былыҡтырыу. Бесәнде былыҡтырыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **быҡтырыу 1.** *Кәбеҫтә былыҡтырыу.*

**БЫЛ ЮЛЫ** (Р.: на этот раз; И.: this time; Т.: bu sefer) *р.*

Был тапҡыр, был мәртәбә. □ На этот раз. ■ *Бер сирканыс алған Яҡуп үҙе лә был юлы ишеккә менән ҡыйыуыраҡ эш итте.* М. Кәрим. *Әһә, был юлы ыңғай уҡ әйләндереп һалдым бит баҡуйҙы.* Н. Мусин. *Әүәл ҡырандаста йөрөһәләр, был юлы юлдаштар һыбай сыҡты.* Р. Камал.

**БЫНА** (Р.: вот; И.: here (it is), there; Т.: işte) *күрһ. а.*

**1.** Алдағы бик яҡын кешене йәки нәмәне күрһәткәндә, бер нәмәне кешегә биргәндә, бер һүҙгә, эш-хәлгә кешенең иғтибарын тартыу өсөн әйтелә. □ Вот. *Бына алма.* ■ *Бына ике-өс һарыҡ, бәрәстәрен эйәртеп, кәбәнгә табан ыңғайланы.* Ә. Хәкимов. *Кейеҙбай кеҫәһенән алмаһын сығарып: «Бына алма — әжәл дарыуы. Ҡыҙға шуны ашатырға кәрәк», — ти.* Әкиәттән. *Бына мин үҙемдең тормоштан бер миҫал килтерәйем әле.* М. Тажи.

**2.** Үҙенән алда килгән һүҙ белдергән мәғәнәне көсәйтеү өсөн ҡулланыла. □ Вот. ■ *Ата-әсәләрҙең ғүмере булып беҙгә ҡалды бына был тормош.* Ғ. Сәләм.

**3.** Йомғаҡлау һүҙҙәренән алда килеп, уларҙың мәғәнәләренә асыҡлыҡ өҫтәй. □ Вот. ■ *[Заятүләк:] Ерем — Балҡантау, һыуым — Дим. Бына шул ерҙәргә һағынам мин.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Кеше, ҡурай моңона тәбиғәттең бына шулай берҙәм яуап биреүен ишетеүҙән оло кинәнес тапҡандай, уйнауынан туҡтаны.* Н. Мусин.

**4.** «Хәҙер» һүҙе менән килеп, уға һөҙөмтәлелек мәғәнәһе өҫтәй. □ Вот. ■ *[Үмәр:] Беҙҙең ҡайғы ҡайғы булмаған икән, бына хәҙер баш ҡайғыһы тыуҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Бына хәҙер алда һәр бер уба, соҡор-саҡырҙарына тиклем таныш булған урындар башлана.* Б. Бикбай.

**5.** Эш-хәл йәки ваҡиғаларҙың барышын күҙ алдында булған кеүек итеп һүрәтләү өсөн ҡулланыла. □ Вот. ■ *Бына ҡыш үтеп, яҙ килеп еткән.* Әкиәттән. *Бына бер саҡ, ҡултыҡҡа килеп еттем генә тигәндә, айырата яман ҡоторонған тулҡын Бураншаларҙы баҫып киткән.* З. Биишева. *Бына акрын ғына ишек асылып ябылды, унан ҡапҡа шығырлап*

*ҡуйҙы. Яҡуп уларҙың бөтәһен дә ишетеп ятты.* М. Кәрим.

**6.** Һөйләгән һүҙгә төрлө тойғо биреү өсөн ҡулланыла. □ Вот. ■ *[Юламан:] Бына, исмаһам, минең Бураншам шундай һирәк осрай торғандарҙың береһе ине.* З. Биишева. *[Ғамир:] Мин үҙем дә .. аңламайым шул бына.* Б. Бикбай.

**7.** *Берәй* эш-хәлдең хәҙер йәки оҙаҡламай, тиҙ үк булырға тейешлеген белдереү өсөн ҡулланыла. □ Вот. ■ *Әсәйем уны [атайымды], бына ҡайта, бына ҡайта, тип көттө лә көттө. Ул ҡайтманы.* М. Тажи.

♦ **Бына ғына** бик яҡында, эргәлә. □ Очень близко, тут. ■ *[Фатима:] Туҡтағыҙ, мин барып киләйем, уның [Харистың] өйө бына ғына тора.* Б. Бикбай. **Бына инде** берәй эш, хәбәргә аптырап ҡалғанда әйтелә. □ Вот тебе и на! *Бына инде, ул ни тигән эш тағы.* **Бына нимә** берәй һүҙ әйтер алдынан иғтибарҙы тартыу өсөн әйтелә. □ Вот что. ■ *Улай булһа, бына нимә, — тип елкенеп китә тағы Өйрәнсек. — Һин мине үҙеңә ярҙамсы итеп алаһың.* З. Биишева. **Бына тағы** берәй нәмәгә аптырағанда әйтелә. □ Вот тебе и на! ■ *[Муйылбикә:] Ҡуйсы, буш менән булмағыҙ, ҡарт кешене мәшәҡәтләп. [Мәғфүрә:] Бына тағы! Нишләп буш булһын.* Һ. Дәүләтшина. **Бына(мын) тигән** бик яҡшы, сиктән тыш яҡшы. □ Превосходный, прекрасный, исключительный, замечательный; на все сто. ■ *Кинйәулының кәләше ..ҡайныға бына тигән күлдәк тоттора: үҙе ап-аҡ, үҙе йомшаҡ, үҙе йоҡа ғына.* Әкиәттән. *Д. Юлтыйҙың .. бик күп бына тигән әҫәрҙәре бар.* Р. Ниғмәти. *Минең бик һәйбәт, бына тигән бер иптәш бар ине.* С. Агиш. *Үҙем эшләй башлағас та, бынамын тигән баян алып ебәрәм.* Ф. Иҫәнғолов. **Бына һин уны** (*йәки* **әле**) ғәжәпләнеп хуплағанда йәки шелтә белдергәндә әйтелә. □ Вот оно что! Вот оно как! *Ҡайһылай матур эшләнгән. Бына һин уны!* **Бына һиңә** кешенең ҡапыл беленгән бер ҡылығына аптырағанда әйтелә. □ Вот тебе и ..! ■ *Бына һиңә ипле кеше, бына һиңә түрә!* Б. Бикбай. **Бына һиңә йоҙроҡ** берәй кешенең һораған нәмәһен асыу менән кире ҡаҡҡанда әйтелә. □ Вот тебе на *(говорится при отказе)*. **Бына (һиңә) кәрәк булһа** көтөлмәгән, ғәжәп нәмә килеп сыҡҡанда әйтелә. □ Вот тебе и на!

**БЫНА-БЫНА** (Р.: вот-вот; И.: just about; Т.: hemen) *р.*

Хәҙер, ошо мәлдә; тиҙ үк. □ Вот-вот. *Бына-бына китергә торам.* ■ *[Юламан] ваҡыт-ваҡыт хатта үҙен дә онота һымаҡ, бына-бына диңгеҙгә ҡолап төшөр ҙә, бер ҡасан да йәшәмәгән кеүек, юҡ та булыр һымаҡ.* З. Биишева. *Ҡояш бына-бына килеп сығырға тейеш. Офоҡҡа алһыу шаршау һуҙылды.* С. Агиш.

**БЫНАҒАЙ** *ымл. ҡар.* **бынағайыш.** ■ *Исмәғил уға [Хөрмәткә] һоҡланып оҙаҡ ҡарап торҙо. Бынағай, була бит кешеләр.* Яр. Вәлиев.

**БЫНАҒАЙЫШ** (Р.: вот тебе и на; И.: well, really!; Т.: yapma!) *ымл.*

Көтөлмәгән бер нәмәгә ғәжәпләнгәндә, аптырағанда әйтелә. □ Вот тебе и на! ■ *Бынағайыш, — тип аптырай Ғәйзулла бабай, — Бынау төндә ниндәй эше иреккән ҡуркмай, өркмәй шулай йырлап йөрөр икән?* Н. Мусин. *Был юлы минең ҡулда ҡурай юҡ ине шул. Бынағайыш, ни эшләргә?* С. Кулибай. *[Майшәкәр:] Бынағайыш! Ул һине өсөнсө ай һарғайып-сабырһыҙланып көтә.* Г. Әхмәтшин.

**БЫНАМЫ** *с. ҡар.* **бынамын тигән I.** ■ *Ҡайһы урамға ғына барһаң да, ҡайҙа ғына ҡараһаң да, бынамы итеп һалынған йорттар күрәһең.* Ә. Вәли.

**БЫНАМЫН** *с. ҡар.* **бынамын тигән I.** ■ *Ҡарап тороуға бынамын кеше.*

**БЫНАМЫН ТИГӘН I** (Р.: превосходный; И.: splendid, superb; Т.: mükemmel) *с.*

Бөтә яҡтан килгән, бик яҡшы. □ Превосходный, прекрасный, исключительный, замечательный. *Ҡарап тороуға бынамын тигән кеше. Бынамын тигән егет.* ■ *[Өммөгөлсөм — Закирға:] Әй-й, ҡыҙҙарҙың бынамын тигәненең башын әйләндерер сағың бит әле һинең, ҡәйнеш.* З. Биишева. *Башлыҡтың башына бынамын тигән бер фекер килеп төштө.* М. Кәрим. *Ун һигеҙе тулғанда Ирна-*

*зар бынамын тигән күркәм егет ине.* Ә. Хәкимов.

**БЫНАМЫН ТИГӘН II** (Р.: превосходно; И.: extremely well; Т.: mükemmel) *р.*

Бик яҡшы, тейешенсә, кәрәгенсә. □ Превосходно, прекрасно, исключительно. *Бынамын тигән йәшәп ятыу.* ■ *Ул [Алма], ҡымыҙ эсә торғас, бынамын тигән булып таҙарып китте.* Ҡ. Ибәтуллин.

**БЫНАН** (Р.: вот отсюда; И.: from here, from this place; Т.: buradan) *р.*

**1.** Ошо ерҙән, ошо урындан. □ Вот отсюда, из этого места. *Бынан мәктәпкә барып була. Бынан китеп торорғоҙ.* ■ *Бынан малай саҡта атаһы менән киткән, хәҙер, егет булғас, ҡайтҡан Аҙнағол.* З. Биишева. *Һиңә бынан китергә кәрәк. Берәй урынға барып эшкә инергә кәрәк. Юғиһә, бында үҙеңде эт кеүек итеп үлтереп китерҙәр.* Д. Юлтый.

**2.** Ошо мәлдән. □ Отныне, с настоящего времени. *Бынан ете йыл элек.* ■ *Был Сурағолдоң бынан һигеҙ йыл элек ташлап ҡасҡан ауылы ине.* Т. Хәйбуллин. *Бынан күп йыл элек Урал аша бер поезда китеп барабыҙ.* Ғ. Сәләм.

**БЫНАН АРЫ** (*йәки* **былай, кире, түбән, һуң**) (Р.: отныне; И.: from now on; Т.: bundan sonra) *р.*

Бының аръяғында, алдағы көндә, киләсәктә. □ Отныне. *Бынан ары кешене эшкә ҡарап алырға кәрәк.* ■ *Бынан ары тулҡын уларҙы бик тиҙ ярға сығарып ташланы.* З. Биишева. *Бынан ары алыш күпме һәм нисек барғандыр, асыҡ ҡына хәтерләмәйем.* М. Кәрим.

**БЫНАУ** (Р.: вот этот; И.: this, this here; Т.: bu) *күрһ. а.*

**1.** Әргәләге нәмәгә төҫҡағанда йәки ҡулға тотоп күрһәткәндә әйтелә; бына был. □ Вот этот, вот эта, вот это. *Бынау кеше. Бынау өй.* ■ *[Таҙ:] Хәҙер үк бынау кейеҙгә ултыр ҙа атайым менән әсәйемде, ике ағайымды алып кил.* Әкиәттән. *Аҡ ҡарға уйылып ҡалған бынау семәрле ҡалуш әҙҙәре хас та атайымдыҡы кеүек.* Г. Ғиззәтуллина. *Уның башында тап бынауы Хасбулат олатайҙың башындағы кеүек йондоҙло ялбыр папаха.* З. Биишева.

**2.** Билдәле бер нәмә тураһында хәбәр иткәндә *нимәгәлер* баҫым яһар өсөн ҡулланыла. □ Вот этот, вот эта, вот это. ■ *[Миңлебай:] Ҡола бейә китте. Бынау Ҡотоҡ ағай арттырманы бит. Ахыры тукһан биш һумға һаттым.* Т. Йәнәби. *Нимә күҙәтәһең бынау ирәүән, асыҡ дала ерҙә?* Ә. Хәкимов.

**БЫНАУЛАЙ** (Р.: вот так; И.: in this way; Т.: böyle) *р.*

Бына ошолай, ошо рәүешле. □ Вот так, вот таким образом. *Бынаулай эшлә.* ■ *Ул [Мансур]: «Бынаулай яман көндө лә йөрөймө икән ни?» — тип уйлай ҙа тағы ла тырышыбыраҡ атлай.* Ш. Насыров.

**БЫНАУЛАЙТЫП** (Р.: вот так, вот таким образом; И.: like this; Т.: işte böyle) *р.*

Ошо рәүешле; ошолай итеп. □ Вот так, вот таким образом. *Бынаулайтып йөрөмә.* ■ *Мау баш булмаҫ ерҙән мау баш булырһың, бынаулайтып хәсрәт уты йотоп ултырғас.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫНАУЫНАН** (Р.: вот отсюда; И.: from here; Т.: buradan) *р.*

**1.** Бынау ерҙән, ошо урындан. □ Вот отсюда, из этого места. *Бынауынан уҡып алып китеү. Ул бынауынан сығып китте.*

**2.** Һуғырға янағанда әйтелә. □ Вот сейчас (*употр. для выражения угрозы*). ... *Кит! Хәҙер бынауынан!* ■ *[Эткол бай:] Ниегеҙ тағы бүленмәгән? Бынауынан икегеҙҙе ике яҡҡа һалып ебәрермен.* Т. Хәйбуллин.

**БЫНАУЫНДА** (Р.: вот здесь; И.: here; Т.: burada ) *р.*

**1.** Бына был ерҙә, ошо урында; ошонда. □ Вот здесь, на этом месте. *Бынауында тороп тороу.*

**2.** Бына был ергә, ошо урынға. □ Вот сюда, сюда. *Әйберҙе бынауында ҡуй. Бынауында ҡара.* ■ *Кенәгәне Айбулат яғына бороп: «Бына бынауында ҡулыңды ҡуй», — тип уң яҡ биттең түбәнерәк бер һыҙығының өҫтөнә төрттө.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫНАУЫНДАЙ** (Р.: вот такой; И.: like this; Т.: böyle) *с.*

Ошоноң кеүек, ошо рәүешле; ошондай. □ Вот такой. *Бынауындай матур ҡыҙ.* ■ *Мөлөк ағай уйлай-уйлай башы ҡаңғырып китте, юлында бынауындай уңайһыҙлыҡ, күңелһеҙлек осрағас, асыуы ла килде.* Т. Хәйбуллин. *Рәхимә һаман ярһый ине: «Иллә башбаштаҡ беҙҙең был Айбулат, иллә үҙе тигәнсә йөрөп ята. Бынауындай ҡыҫтау саҡта!»* Һ. Дәүләтшина.

**БЫНДА** (Р.: здесь; И.: here; Т.: burada) *р.*

**1.** Был урында, ошо ерҙә; ошонда. □ Здесь, тут. *Бында тороу. Бында эшләү.* ■ *Бында тауҙар, бында киң баҫыуҙар. Ҡарап торам, шул саҡ янымдан көн яғына китте цистерналар, Уралыма керҙе вагондар.* Ғ. Сәләм. *Йәйгенәйен бында йәйләгәйнем, ҡышҡынайын ҡайҙа ҡышлайым?* Халыҡ йырынан. *Гөлйыһанды бында осратырмын тип уйламағанға, ахыры, Закир, ысынлап та, ҡапыл ҡаушап ҡалған һымаҡ булды.* З. Биишева. *Бында инде Шәхми ҡарт ағарынып ҡойолдо ла төштө.* Т. Йәнәби.

**2.** Ошо урынға, ошо ергә. □ Сюда. *Бында килеү. Бында ҡарау.* ■ *Ямал башындағы яулығын ипләштереп алды ла гармунсыға эйәк ҡаҡты: «Йә, бындараҡ, яҡынырыҡ килеп баҫ инде. Ҡурҡма, тешләмәм».* М. Тажи. *[Батша:] Шул ҡулы ҡаймыҡҡан кешене тотоп килтерегеҙ әле бында!* Әкиәттән. *Бында килгәс тә, беҙҙе иркен йорттарға урынлаштырҙылар.* Д. Юлтый.

**БЫНДАҒЫ** (Р.: здешний; И.: local; Т.: yerli) *с.*

Был урындағы, ошо ерҙәге; ошондағы. □ Здешний, местный. *Бындағы халыҡ. Бындағы тормош.* ■ *Бындағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә инергә тырышып йөрөп ҡараһам да, мине алманылар. Аптырағас, ундағы Заһиҙулла хәҙрәт мәҙрәсәһенә барып индем.* Т. Йәнәби. *Бындағы тыныс тормош, ниңәлер, йыуашлата төштө.* Д. Юлтый.

**БЫНДАЙ** (Р.: такой; И.: such; Т.: böyle) *күрһ. а.*

Ошоға оҡшаған, ошоноң кеүек; ошондай. □ Такой. *Бындай матур сәскәләр беҙҙә генә үҫә. Бындай ерҙе күргәнем юҡ.* ■ *Йәнтимергә минең әйткән һүҙҙәремдең һәр бер өнө уҡ ине. Бындай һүҙгә нәмә тип тә яуап бирә белмәне.* С. Агиш. *Күптән ҡатын-ҡыҙ ауыҙынан бындай һүҙ ишетмәгәс, миңә был һүҙ бик яҡын тойолдо.* Д. Юлтый.

**БЫР, бырр** (Р.: подражание шуму, возникающему при порхании птиц; И.: onomatopoeic word; Т.: yansima) *оҡш.*

Ваҡ ҡош осоп күтәрелгәндә, өйрөлтмәк өйрөлгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; пыр. □ Подражание шуму, возникающему при порхании птиц, при их взлёте, вращении юлы. *Быр итеү.* ■ *Турғай бырр итеп осоп китә.* Әкиәттән.

**БЫРАҒЫТЫУ (бырағыт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бырыҡтырыу.** *Кейемдәрҙе бырағытыу.*

**БЫРАҠТЫРТЫУ (бырактырт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бырактырыу.** *понуд. от.* **бырактырыу.**

**БЫРАҠТЫРЫЛЫУ (бырактырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бырактырыу.** *страд. от* **бырактырыу.** ■ *Яңып бөтмәгән торомбаштар ямғыр аҫтына бырактырылды. Тора-бара төтөн дә кәмене.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫРАҠТЫРЫУ (бырактыр-)** (Р.: бросать; И.: fling, cast; Т.: bırakmak) *ҡ.*

Теләһә нисек ташлау, атып ебәреү; бырғау, бырғытыу, ырғытыу. □ Бросать, кидать, швырять. *Бырактырып ебәреү. Ҡулындағы ағасын бырактырып ебәрҙе.* ■ *[Камил — Рифҡәткә:] Барыбыҙҙың күҙ алдында ҡулыңдағы бысаҡты ҡулға алып бырактыр!* Ф. Иҫәнғолов. *Дейеүҙе Урал елтерәтеп күтәреп алды, бырактырып та ебәрҙе. ти.* «Урал батыр». *Егермеләп йәшникте һә тигәнсе һыуға бырактырып бөткәс, буш машинаны ярға сығарыу ҡыйын булманы.* Ә. Хәкимов. *Әсә һаман шик-шөбһәне еңергә, өҫтөнә ябырылған яуҙы үҙенән ситкә бырактырырға ынтылды.* Р. Камал.

**БЫРАМ** *и. диал. ҡар.* **борам.** *Бырам ишкәге. Бырам менән икенсе ярға сығыу.*

**БЫРАМАТ** [рус. *промотать*] *с. диал. кар.* **мөстән I.** ■ *[Миңлекәй еңгә:] Береһе иҫерек, икенсеһе иҫәүән, өсөнсөһө бырамат — ни кылайым инде шулар менән?* М. Кәрим.

♦ **Бырамат сабыу** *йәки* **бырамата йөрөү** ваҡытты бушҡа уҙғарып йөрөү; ел ҡыуыу, эт һуғарыу. □ Слоняться без дела, бездельничать; бить баклуши.

**БЫРАМАТ ЙӨРӨҮ (бырамат йөрө-)** (Р.: обрядовое хождение по домам; И.: ritual rounding of houses; Т.: bir örf) *к. йола.*

Ауылсылап йөрөү. □ Обрядовое хождение по домам. *Балалар бырамат йөрөп тәмле кәнфиттәр, бәлештәр йыя.*

**БЫРАН-ЗАРАН** *р. кар.* **пыран-заран.** ■ *Юл өҫтөндә ылау аттары, автомашиналар, немец һалдаттары быран-заран ҡыйралып ята.* С. Кулибай.

**БЫРАСЫЛ** [рус. *прасол*] (Р.: прасол; И.: cattle dealer; Т.: at satan kimse ) *и. иҫк.*

Ат менән сауҙа иткән кеше. □ Прасол. *Бырасылдан ат һатып алдым.*

**БЫРАУ** [дөйөм ҡыпсаҡ *бурау* < *бур-гаг* 'бырау'] (Р.: сверло; И.: drill; Т.: matkap) *и.*

Бороп тишек тишә торған ҡорал. □ Сверло; бурав. *Боҙ бырауы. Ер бырауы. Ҡасау бырау. Бырау менән тишеү.* ■ *Ауыл яғынан баҡсаға табан артына бырауҙар таҡҡан трактор килә ине.* Ф. Әсәнов. *Инде бырауҙы алып, бөтә көсөмдө һалып, тотонамын тишергә — ни ул малай кешегә!* Ф. Рәхимғолова.

**БЫРАУЛАНЫУ (быраулан-)** *к. төш. кар.* **быраулау.** *страд. от* **быраулау.** *Бырауланған скважиналар.*

**БЫРАУЛАТЫУ (быраулат-)** *к. йөкм. кар.* **быраулау.** *понуд. от* **быраулау.** *Скважина быраулатыу.*

**БЫРАУЛАУ (быраула-)** (Р.: бурить; И.: bore; Т.: sondaj etmek) *к.*

**1.** Бырау менән бороу. □ Бурить. // Бурение. *Бораулау станогы. Бораулау эштәре.* ■ *Ҡарт бер уйынсыҡ тәгәрмәсте быраулап тиште лә бағаналағы ҡаҙаҡҡа элеп ҡуйҙы.* М. Тажи. *Боҙҙо быраулай торғас, Ғәлинурға бында ла ярҙам кәрәк булып сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Махсус ҡорал менән ер ҡатламдарын тишеү. □ Буравить, сверлить. // Бурение. *Бораулау вышкаһы. Бораулау мастеры.* ■ *Нефтселәр өсөн айҙар буйы тырышып бырауланған скважиналарҙан нефть сығыуҙан да шатлыҡлы эш булырмы?* А. Карнай. *Шахталар ҡаҙып һәм скважиналар бораулап, кеше ер аҫтына байтаҡ ҡына үтеп ингән.* Д. Бураҡаев.

**БЫРАУЛАУСЫ** *и. кар.* **бырауcы.** ■ *Бораулаусы Титов һәм Меркуловтың йөҙҙәрендә шатлыҡ уйнаны.* Ә. Бикчәнтәев. *Бораулаусылар ни тиклем тиҙерәк эшләһәләр һәм яңы ятыштарҙы күберәк асһалар, ҡара алтынды ла шул тиклем күберәк сығарырға була.* Ҡ. Әхмәров.

**БЫРАУЛЫЛАР** (Р.: сверлоносные; И.: borer insects; Т.: zar kanatlılar) *и. зоол.*

Инәләренең арт яғында йоморҡаларын башҡа нәмәләргә ҡаҙап һалыу өсөн айырым яйланмаһы булған яры ҡанат бөжәктәр; тишкеслеләр. □ Сверлоносные (лат. *Terebrantia*). *Бырауылар яры ҡанатлы була.*

**БЫРАУСЫ** (Р.: бурильщик; И.: driller; Т.: sondajcı) *и.*

Ер бораулау эшендә эшләгән кеше. □ Бурильщик, сверлильщик. *Ер аҫтында бик тәрәндә ятҡан нефткә барып еткәнсе бырауcы ауыр һәм оҙон юл үтә.*

**БЫР-БЫР** (Р.: подражание многократным звукам, возникающим при порхании птиц, при их взлёте; И.: onomatopoeic word; Т.: fır fır) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат быр итеү. □ Подражание многократным звукам, возникающим при порхании птиц, при их взлёте. *Быр-быр итеү. Быр-быр килеү. Турғайҙар, быр-быр килеп, ағаска осоп ҡуна.*

**БЫРҒАЛЫУ (быргал-)** *к. төш. кар.* **бырғау.** *страд. от* **бырғау.**

**БЫРҒАУ (бырға-)** (Р.: бросать; И.: fling, cast; Т.: atmak) *к.*

Теләһә нисек ташлау, атып ебәреү; бырғытыу, бырактырыу, ырғытыу. □ Бросать,

кидать, швырять. ■ *[Алдар Күсәрбайҙы] елкәһе аша иул саклы нык бырғай, тегенеһе хатта һушлан яҙа.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

♦ **Кәпәсте бырғап эшләү** күңел һалып, тырышып эшләү. □ Работать с большим увлечением, старанием и охотой. ■ *Әхсән бабай күпте күргән, ҡартлыҡҡа ла бирешмәй. Колхоз тапшырған эштәрҙе кәпәсен бырғап эшләй.* С. Кулибай.

**БЫРҒЫ** (Р.: узкий; И.: narrow; Т.: dar) *с. диал.*

Тар. □ Узкий. *Бырғы күлдәк.*

**БЫРҒЫСЫ** (Р.: брызгун; И.: fish species; Т.: balık türü) *и. зоол.*

Һинд океанының көнсығыш өлөш ярҙарында йәшәүсе, ауыҙынан һыу һиптереп себен аулай торған балыҡ. □ Брызгун (лат. *Toxotes jaculator*). *Һыуҙа бырғысылар һикерешә.*

**БЫРҒЫСЫ БАЛЫҠ (балығы)** *и. зоол. ҡар.* **бырғысы.** *Бырғысы балыҡ себен аулай.*

**БЫРҒЫТЫЛЫУ (бырғытыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бырғытыу.** *страд. от* **бырғытыу.**

**БЫРҒЫТЫУ (бырғыт-)** (Р.: бросать; И.: fling, cast; Т.: atmak) *ҡ.*

Теләһә нисек ташлау, атып ебәреү; бырғау, бырактырыу, ырғытыу. □ Бросать, кидать, швырять. ■ *Оморҙаҡ иуларҙы [аҫыл таштарҙы] йыйып, түбәнгә бырғыта башлаған, бай уларҙы кесерткән токка тултырып торған.* Әкиәттән. *Килен, аптырап, бер бармағын өҙөп алды ла артҡа табан бырғытты, ти.* Әкиәттән. *Рәнйетһә лә ауырыу .. котолормон, ул бырғытмаҡ була уптыҡындан!* А. Игебаев. *Юлың оҙон, атың, арып, ерле юҡҡа бышлыҡмаһын, өркөпнитеп ярлылыҡта саң эсенә бырғытмаһын.* В. Әхмәҙиев.

**БЫРҠ** (Р.: бульк; И.: gurgling sound; Т.: lık) *оҡш.*

**1.** Шыйыҡлыҡ йәки ҡуйы масса ҡайнағандағы тауышты белдергән һүҙ. □ Бульк *(подр. звуку, возникающему при кипении жидкости или густой массы). Бырҡ итеү.*

**2.** Һыу эсенән һауа, баҫҡан ерҙән һыу йәки бүтән еүеш нәмә ҡапыл урғылып сыҡҡандағы тауышты белдергән һүҙ. □ Хлюп *(подр. звуку, возникающему, например, при ходьбе по жидкой грязи). Бырҡ итеп ҡалыу.*

**БЫРҠ-БЫРҠ** (Р.: бульк-бульк; И.: onomatopoeic word; Т.: lık lık) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бырҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Бульк-бульк, хлюп-хлюп. *Бырҡ-бырҡ итеү. Бырҡ-бырҡ килеү.* ■ *Инде һәйбәт кенә йөҙөп барғанда, Юламаныбыҙ бырҡ-бырҡ итеп .. һыуға сумып сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫРҠЫЛДАТЫУ (бырҡылдат-)** (Р.: вызывать бульканье; И.: cause gurgling; Т.: lıkırdatmak) *ҡ.*

**1.** Ҡайнатып бырҡ-бырҡ иттереү, бырҡ-бырҡ килтереү. □ Вызывать бульканье *(при кипении). Бырҡылдатып дегет ҡайнатыу.*

**2.** Йомшаҡ еүеш нәмәне бырҡ-бырҡ иттереү, бырҡ-бырҡ килтереү. □ Вызывать хлюпающие звуки при ходьбе, например, по жидкой грязи. *Һаҙлыҡ ергә бырҡылдата баҫыу.*

**БЫРҠЫЛДАУ (бырҡылда-)** (Р.: булькать; И.: gurgle; Т.: lıkırdamak) *ҡ.*

**1.** Ҡайнап бырҡ-бырҡ итеү, бырҡ-бырҡ килеү. □ Булькать. *Бырҡылдығын сығыу. Бырҡылдап бутҡа бешә.*

**2.** Йомшаҡ еүеш нәмәнән һауа йәки һыу урғылған тауыш сығыу; бырҡ-бырҡ итеү, бырҡ-бырҡ килеү. □ Хлюпать. *Һаҙлыҡ ер бырҡылдап ята. Һыйырҙар баҫҡан һайын, бырҡылдап һыу атлығып сыға.*

**БЫРҠЫРАТЫУ (бырҡырат-)** (Р.: раздавить *кого*; И.: crush, squash; Т.: ezmek) *ҡ.*

Еүеше һығылып сыҡҡансы иҙеү. □ Раздавить *кого.* ■ *Ҡамыр батыр .. сукмары менән уны [дейеүҙе] бырҡырата һуҡҡан.* Әкиәттән.

**БЫРҠЫРАУ (бырҡыра-)** (Р.: хлюпать; И.: squelch; Т.: şap şap yürümek) *ҡ.*

Һыуланып, йомшап иҙелеү. □ Хлюпать *(о грязи и т. п.). Туңған картуф ереп, бырҡырап ята.*

**БЫРҪ** (Р.: подражание звуку фырканья; И.: onomatopoeic word; Т.: horuldama) *оҡш.*

Өрккән бесәй тауышын белдергән һүҙ. □ Подражание звуку фырканья, например, кошки и т. п. ■ *Ғәбиҙә еңгәй, бесәй кеүек бырҫ итеп һикереп, Ғәләү ағай алдына килеп баҫты.* С. Кулибай.

**БЫРҪ-БЫРҪ** (Р.: подражание многократным звукам фырканья; И.: onomatopoeic word; Т.: horuldama) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бырҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание многократным звукам фырканья, например, кошки и т. п.

**БЫРҪЫЛДАТЫУ (бырҫылдат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бырҫылдау.** *понуд. от* **бырҫылдау.** *Бырҫылдатма бесәйҙе.*

**БЫРҪЫЛДАУ (бырҫылда-)** (Р.: фыркать; И.: snort; Т.: horuldamak) *ҡ.*

Бырҫ-бырҫ килеү. □ Фыркать. *Бесәй, ят кеше тоторға иткәндә, бырҫылдай.*

**БЫРТ** (Р.: подражание звуку удара острым предметом по мягкой поверхности; И.: onomatopoeic word; Т.: çıt) *оҡш.*

**1.** Энә, сөй кеүек осло нәмә ҡаты булмаған нәмәгә ҡапыл ҡаҙалғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку удара острым предметом по мягкой поверхности *чего-л. Бырт итеү. Бырт итеп ҡалыу.*

**2.** Ҡаты нәмәне һындырғанда, ҡырҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; мырт. □ Подражание звуку *чего-л.* ломающегося; хруст. *Киптән ҡурай бырт итеп һынды ла ҡуйҙы.*

**БЫРХ** (Р.: подражание внезапному смеху; И.: onomatopoeic word; Т.: kahkaha) *оҡш.*

Ҡапыл көләп, кешнәп ебәргәндәге кеүек тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание внезапному смеху, ржанию. *Бырх итеп көләп ебәреү.*

**БЫРХ-БЫРХ** (Р.: подражание звукам внезапного смеха; И.: word expressing a burst of laughter; Т.: kahkaha) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бырх иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звукам внезапного смеха, ржания *(многокр. от* **бырх***).* ■ *Ҡарт алаша, .. бырх-бырх бышҡырғылап, сиҙәмде тилмереп еҫкәштерә лә йәнә аяғүрә серемгә тала.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫРХЫЛДАУ (бырхылда-)** (Р.: прыскать; И.: burst out laughing; Т.: kahkaha basmak) *ҡ.*

Бырх-бырх итеү, бырх-бырх килеү. □ Прыскать *(со смеху). Бырхылдығын сығыу. Бырхылдап көләп ебәреү.* ■ *Сәғиҙә уның [Тайморзиндың] өҫ-башына ҡарап тора торғас, сыҙамай бырхылдап көләп ебәрҙе.* М. Тажи.

**БЫРХЫЛДАШЫУ (бырхылдаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бырхылдау.** *взаимн. от* **бырхылдау.** *Ҡыҙҙар бырхылдашып көлөшәләр.*

**БЫРЫЛДАУ I (бырылда-)** (Р.: порхать; И.: flutter; Т.: uçmak) *ҡ.*

Быр-быр итеү, быр-быр килеү. □ Порхать *(о птице, бабочке и т. п.). Бырылдығын сығыу. Бырылдап осоп китеү.* ■ *[Ҡыуыусыларҙың] бер пуляһы йомран алдындараҡ ташҡа тейеп рикошет яһаны. Бызылдап, һыҙғырып килеү тауышын юғалтып, бырылданы.* А. Таһиров.

**БЫРЫЛДАУ II (бырылда-)** (Р.: ворчать; И.: grumble; Т.: homurdanmak) *ҡ.*

Ризаһыҙ төҫ менән асыуланып, үҙ алдына һөйләнеү. □ Ворчать. *Ҡатын бырылдап һөйләнә.*

**БЫРЫЛДАТЫУ I (бырылдат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бырылдау.** *понуд. от* **бырылдау.** *Күбәләкте бырылдатыу.*

**БЫРЫЛДАТЫУ II (бырылдат-)** (Р.: сильно ругать; И.: scold, rail (at); Т.: azarlamak) *ҡ. диал.*

Пыр туҙҙырыу. □ Сильно ругать. *Хәҙер бырылдатып сығарам мин уны.*

**БЫРЫЛДАШЫУ (бырылдаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бырылдау.** *взаимн. от* **бырылдау.** *Ир менән ҡатын бырылдашып һөйләнәләр.*

**БЫСАҠ (бысағы)** (Р.: нож; И.: knife; Т.: bıçak) *и.*

**1.** Ҡырҡыу, турау, телеү өсөн ҡулланылған ҡыҫҡа һаплы, йоҡа йөҙлө үткер ҡорал. □ Нож. *Бысаҡ бите. Бысаҡ йөҙө. Бысаҡ осо. Бысаҡ һабы. Бысаҡ һырты. Иҙән бысағы. Икмәк бысағы. Салғы бысаҡ. Бысаҡ үткерләү.* ■ *Урман батыр йәһәт кенә бысаҡ үткерләп алған да һимеҙ бер бейә тотоп һуйған.* Әкиәттән. *Ишек төбөндә улы Хис-*

*булла бүкәнгә атланып ултырып алған да бик тырышып бысаҡ ҡайрай.* З. Биишева. *Ул [Айҙар] өләсәһенең һалма бысағы менән сыбыҡ ҡырҡып, уларҙы ботаҡтарҙан әрсеп, Айҙар алдына һалып торҙо.* М. Кәрим. *Теге егет арттан килеп, бысаҡ менән сәнсер кеүек булып тойола ине.* Т. Йәнәби. ● *Асыу — бысаҡ, аҡыл — дуҫ.* Әйтем. *Үткер һүҙ йәнгә хас, үткер бысаҡ ҡанға хас.* Мәҡәл. *Үтмәҫ бысаҡ ҡул киҫер.* Әйтем.

**2.** Эш ҡоралдарының ҡырҡыу, турау өсөн тәғәйенләнгән өлөшө. □ Нож. *Ит турағыстың бысағы. Ҡағыҙ ҡырҡҡыстың бысағы.*

**3.** *миф.* Һаҡлаусы, ҡурсалаусы, яман көстәрҙән һаҡлаусы әйбер. □ Нож; мифологизированный предмет-оберег, которым отпугивают нечистую силу; разрезают невидимые «путы» *(тышауын ҡырҡыу)* ребёнку, который долго не начинает ходить; втыкают для очерчивания охраняемого пространства и т. д. ■ *Кисен тәҙрә төбөнә бысаҡ һалып ятабыҙ, шайтан килмәһен, тыныс йоҡларға яҙһын, тип.* Башҡорт мифологияһынан.

♦ **Бысағы май өҫтөндә** аш-һыуға, ризыҡ-ниғмәткә мул, һыйсыл *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата).* □ Щедрый, обильный, богатый *(о женщине).* **Бысағымамы ни** һис кәрәкмәй тигән мәғәнәлә әйтелә. □ На кой чёрт. *Уның ярҙамы бысағымамы ни!* **Бысағын ашаған** үтә һаран, һарандың һараны. □ Скупой, скряга. ■ *[Әфтәх:] Мин үҙем йәш саҡта Мөьмин тигән байҙа малайлыҡта торған кеше .. Ул, бысағын ашаған, эшлектән сыҡҡан һаран нәмә ине.* С. Агиш. **Бысаҡҡа-бысаҡ килеү** ҡаты ҡаршылыҡҡа килеү, ныҡ талашыу; янъяллашыу. □ Быть на ножах *с кем.* ■ *[Нурдәүләт:] Беҙ уның [Тәскирә] менән ғүмер баҡый бысаҡҡа бысаҡ килеп йәшәнек инде. Бер генә тапҡыр ҙа уртаҡ тел таба алманыҡ.* М. Хәйҙәров. **Бысаҡ ҡаҙалғыр** ҡарғағанда әйтелә. □ Чтоб провалился *(зложелание).* ■ *Ҡанға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыр.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Бысаҡ телле** үткер телле, үтә әсе телле. ■ *Юҡты-барҙы күп күргән, бысаҡ телле кешенең алыҫыраҡ булғаны хәйерле.* Б. Бикбай. **Бысаҡһыҙ һуйыу** сараһыҙ итеү, йонсотоу; бик ауыр хәлгә ҡуйыу. □ Поставить в крайне трудное положение. *досл.* Зарезать без ножа. **Быуынһыҙ ергә бысаҡ һалыу** булмаҫтай нәмәне талап итеү. □ С ножом к горлу пристать *(требовать невозможного).* ■ *[Үмәр:] Тел бөгөлгән ерҙән һынмаһа, быуынһыҙ ергә бысаҡ һалып та бер эш сыҡмаҫ.* Һ. Дәүләтшина. **<Йөрәккә> бысаҡ булып ҡаҙалыу** күңелгә ауыр тойғо, көслө әрнеү һалыу, йөрәккә ауыр булыу. □ Нож в сердце *кому.* ■ *Рәсихтың һүҙе йөрәгемә бысаҡ булып ҡаҙалды. Киҙәндем дә ҡолаҡ төбөнә тондорҙом.* Ғ. Ғүмәр.

**БЫСАҠАЙ** (Р.: неряшливый; И.: sloven; Т.: hırpani) *с. диал.*

Әрпеш. □ Неряшливый. *Бысаҡай хужабикә.*

**БЫСАҠЛАУ (бысаҡла-)** (Р.: резать; И.: slaughter; Т.: bıçaklamak) *ҡ.*

Малды салыу; бысаҡ һалыу. □ Резать, колоть, забивать *(животных).* ■ *[Истым:] Атымдың аяғы һынып ятып ҡалды, әрәм булмаһын, бысаҡлап тунап алығыҙ.* Хикәйәттән. *Һуғым малын бысаҡ менән салыу йәки бысаҡлау башҡорттарҙа. һис шикһеҙ. һуңырак ингән бер йола булып һанала.* Ж. Кейекбаев. *Ҡуянды бысаҡлай һалып, һуйып алдым, ите ике ҡаҙанға һыйманы, бер ҡаҙанға етмәне.* Халыҡ ижадынан.

**БЫСАҠЛАШЫУ (бысаҡлаш-)** (Р.: драться на ножах; И.: fight with knives; Т.: bıçaklaşmak) *ҡ.*

Бысаҡ тотоп һуғышыу. □ Драться на ножах. *Егеттәр бысаҡлашып киттеләр.*

**БЫСАҠЛЫ** (Р.: зарезанный; И.: slaughtered; Т.: bıçaklı) *с.*

**1.** Һуйылған. □ Зарезанный. *Бысаҡлы ҡуянды ашайбыҙ.*

**2.** Бысағы булған. □ Имеющий нож. *Бысаҡлы кеше.*

**БЫСАҠ ҮЛӘН** *и. бот. диал. ҡар.* **бысҡы үлән.** *Бысаҡ үлән бармағымды киҫеп ебәрҙе.*

**БЫСАЛА** *и. диал. ҡар.* **бысылғы I.** *Һыйырҙың тояҡ араһы бысала булған.*

**БЫСАЛАНЫУ (бысалан-)** *к.*

1. *диал. кар.* **бысылғылау.** *Малдың тояғы бысаланған.*

2. *диал.* Сейләнеү йәки һыуланыу. □ Преть или мокнуть *(о ногах). Аяк бысаланыу.*

**БЫСЌ** (Р.: хлюп; И.: squelch; Т.: şap) *окш.*

Һыулы йомшаҡ нәмәгә ҡапыл баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Хлюп *(подражание звуку, возникающему при ходьбе по жидкой, вязкой грязи и т. п.). Быск итеү.*

**БЫСЌАЙ** *с. диал. кар.* **бысый.** *Быскай икмәк.*

**БЫСЌ-БЫСЌ** (Р.: хлюп-хлюп; И.: onomatopoeic word; Т.: şap şap) *окш.*

Ҡабат-ҡабат быск иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Хлюп-хлюп *(усил. от быск). Быск-быск итеү. Быск-быск килеү.*

**БЫСЌЫ** (Р.: пила; И.: saw; Т.: bıçkı) *и.*

Ағас, тимер, таш ҡырҡа торған тешле үткер ҡорал. □ Пила. *Аркыры бысҡы. Буй бысҡы. Бысҡы теше. Йәйә бысҡы. Түңәрәк бысҡы. Ҡул бысҡыһы. Тимер бысҡы. Электр бысҡыһы. Төлкөсура үҙе бысҡы тарта, үҙе әле генә атаһы һөйләгәндәр тураһында туктауһыҙ уйлана.* Н. Мусин. *Бында унан [ағастан] такта ярҙы бысҡылар, ә кем уны иғымартыр һәм йышҡылар?* Х. Кәрим.

♦ **Үтмәҫ бысҡы** ялҡытҡыс, күп һөйләгән кеше. □ Нудный человек.

**БЫСЌЫ-БАЛЫЌ (бысҡы-балығы)** (Р.: пила-рыба; И.: sawfish; Т.: testere balığı) *и. зоол.*

Томшоғо бик оҙон һәм өҫтән дә, аҫтан да тешле булып, ике яҡлы бысҡыға оҡшаған, йылы диңгеҙҙәрҙә йәшәй торған эре йыртҡыс балыҡ. □ Пила-рыба (лат. *Pristidae*). *Бысҡы-балык үрсетеү.*

**БЫСЌЫ ЌОЛАҒЫ** (Р.: ручка лучковой пилы; И.: sash saw handle; Т.: bıçkı sapı) *и. диал.*

Йәйә бысҡының һабы. □ Ручка лучковой пилы. *Бысҡы ҡолағынан тотоу.*

**БЫСЌЫЛ** (Р.: хлюпающий; И.: squelching; Т.: vıcık) *с.*

Һыуланып, лысҡылдап ятҡан; дымлы, еүеш *(ергә карата).* □ Хлюпающий, жидкий, вязкий; влажный, мокрый. *Бысҡыл тупраҡ. Ер бысҡыл, һаҙмат булып ята.*

**БЫСЌЫЛДАЌ** *с. диал. кар.* **бысый.** *Бысҡылдаҡ икмәк. Бысҡылдаҡ күҙ.*

**БЫСЌЫЛДАУ (бысҡылда-)** (Р.: хлюпать; И.: squelch; Т.: vıcıldamak) *к.*

Һыуланып, йомшап иҙелеү; бырҡырау. □ Хлюпать *(о грязи и т. п.). Аяҡ аҫтында батҡаҡ бысҡылдап ята.*

**БЫСЌЫСЫ** (Р.: пильщик; И.: sawyer; Т.: bıçkıcı) *и.*

Бысыусы. □ Пильщик *(рабочий, занятый пилкой, распиливанием чего-н.). Бысҡысылар бригадаһы.*

**БЫСЌЫСЫЛАР** *и. зоол. кар.* **бысҡысы себендәр.** *Бысҡысыларҙан күргән зарар.*

**БЫСЌЫСЫ СЕБЕНДӘР** (Р.: пилильщики; И.: sawflies; Т.: ağaçkesen) *и. зоол.*

Күпселектә ылыҫлы урманға зарар килтерә торған себендәр. □ Пилильщики (лат. *Symphyta*). *Бысҡысы себендәргә ҡаршы көрәш.*

**БЫСЌЫ ТАБЫ (оно, онтағы)** (Р.: опилки; И.: sawdust; Т.: bıçkı talaşı) *и.*

Бысҡы менән бысҡан ерҙән ваҡланып төшкән онтаҡ ағас. □ Опилки. *Бысҡы табынан эшләнгән йыһаз.*

**БЫСЌЫ ТЕШЛЕ ЯПРАЌ (япрағы)** (Р.: лист пиловидно-зубчатый; И.: form of dentate leaf; Т.: bıçkı gibi yaprak) *и. бот.*

Бысҡы һымаҡ тешле формалағы япраҡ төрө. □ Лист пиловидно-зубчатый. *Бысҡы тешле япраҡлы үҫемлектәр.*

**БЫСЌЫ ҮЛӘН** (Р.: телорез; И.: water grass species; Т.: su asker) *и. бот.*

Йыуан ҡыҫҡа тамырлы, үткер ҡырлы япраҡлы, аҡ сәскә атыусы быуа үҫемлеге. □ Телорез (лат. *Stratiotes*). *Бысҡы үләнгә ҡулым ҡырҡылды.*

**БЫСМА I** (Р.: нудный; И.: boring; Т.: sıkıcı) *с. диал.*

Ялҡытҡыс. □ Нудный. *Бысма телмәр.*

**БЫСМА II** *с. диал. кар.* **бысый.** *Бысма күҙ. Бысма икмәк.*

**БЫСРАЌ I (бысрағы)** (Р.: грязь; И.: mud; Т.: çamur) *и.*

**1.** Һыуға ебеп буталған тупраҡ; батҡаҡ. □ Грязь, слякоть. *Бысраҡҡа батыу. Юл бысрағы.* ■ *Юл да һурыға төштө. Арба тәгәрмәстәренә укмашҡан бысраҡтарҙы ҡарт ҡырғылап төшөрҙө.* М. Тажи. *Бер көн ҡоро, бер көн ямғыр булып, ерҙең бысраҡҡа мансылып, ҡара тупрағы әйләнеп ятҡан заманы.* Ғ. Дәүләтшин. *[Уйылдан] ике яҡ эргәнән ҡабыҡ ҡыҫылған, тик алды асыҡ соланға менеп баҫҡас, тамаҡ ҡырған булды, итек табанына йәбешкән бысраҡты төшөрөү өсөн, ҡаты-ҡаты баҫты.* Н. Мусин.

**2.** Ягылып, һеңеп, ҡатышып *ниҙеңдер* таҙалығын, сафлығын бөтөргән нәмә. □ Грязь. *Бысраҡҡа ҡатыу.* ■ *[Рәхимә:] Кеше килгәндә бер ерҙә бысраҡ булмаһын.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Насарлыҡ, алдаҡ, ялғанға ҡоролған эш, ҡылыҡ. □ Грязь. ■ *Был донъяла эшләнгән ялғандарыңды, бысраҡтарыңды дин, шәриғәт алдында йыумаҡ булаһыңмы?* М. Тажи.

**4.** *миф.* Ен-шайтан, ауырыу эйәләре йәшәгән ер. □ Место обитания нечистой силы.

**БЫСРАҠ II** (Р.: грязный; И.: muddy; Т.: çamurlu) *с.*

**1.** Ебеп, иҙелеп ятҡан. □ Грязный, запачканный. *Бысраҡ юл. Бысраҡ урам.* ■ *Урамдарҙа йөрөү имәнес була башланы, бысраҡ урамда бер кем дә йөрөмәй.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Таҙа түгел, *нимәгәләр* буялған йәки ҡатышҡан, әшәке. □ Грязный, запачканный, нечистый. *Бысраҡ иҙән. Бысраҡ кейем. Бысраҡ һыу. Бысраҡ дәфтәр.* ■ *Һарайҙағы аттарҙың ҡайһылары яталар, ҡайһылары бысраҡ һары һыу эсендә баҫып торалар ине.* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Алдаҡ, ялғанға, намыҫһыҙлыҡҡа ҡоролған. □ Грязный, гнусный, безнравственный; пакостный. *Бысраҡ эш. Ҡулы бысраҡ. Бысраҡ кеше.* ■ *Мәрғүп тә инде был саҡлы ялған, бысраҡ бер ғауғаға сыҙап торһонмо?* Т. Йәнәби. *Гөлйөҙөм был бысраҡ әҙәмдәрҙең хәшәрәт тауыштарын ишетеү менән бик ҡаты ғазапланды ла, үҙенең бөтә көсөн йыйып, урынынан ҡалҡты.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Бысраҡ ташлау** (*йәки* **ягыу**) яла, ғәйеп ягыу. □ Обливать грязью *кого.* **Бысраҡ һүҙ** әҙәпһеҙ, насар һүҙ. □ Брань, мат.

**БЫСРАҠЛАНЫУ (бысраҡлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бысраҡлау.** *страд. от* **бысраҡлау.** *Бысраҡланған итегем менән үтеп тормайым.*

**БЫСРАҠЛАУ (бысраҡла-)** *ҡ.*

**1.** *ҡар.* **бысратыу 2.** *Кейемде бысраҡлау. Иҙәнде бысраҡлау.*

**2.** *күсм.* Яла, ғәйеп ягыу, ҡара ягыу; әшәкеләү. □ Порочить, бесчестить, позорить. *Намыҫты бысраҡлау. Сәбәпһеҙгә кешене бысраҡларға тороу.*

**БЫСРАҠ-ҺАСРАҠ** (Р.: измазанный; И.: smeared, soiled; Т.: lekeli) *с. диал.*

Бысранып бөткән. □ Измазанный, загрязнённый. *Бысраҡ-һасраҡ ҡулың менән күрешергә итәһеңме? Өйгә бысраҡ-һасраҡ итеге менән килеп кергән.*

**БЫСРАНЫУ (бысран-)** (Р.: пачкаться; И.: soil oneself; Т.: kirlenmek) *ҡ.*

**1.** Бысраҡҡа буялыу. □ Пачкаться; мараться. *Күлдәк бысранған. Бите бысранған.* ■ *[Әсәһе:] Бик һәйбәт йыуғанһың, ҡыҙым, тик бысрандың бит үҙең.* К. Кинйәбулатова. *Итәгенә күп итеп йыйып алған ҡуянтубыҡтарҙы усы менән һыпырып таҙарта-таҙарта бер-бер артлы ауыҙына оҙатып ултырған Шәүрә лә, бысранған ирендәрен еңе менән һөртөп, һикереп торҙо.* З. Биишева. *Таҙа ғына йөрө, бысранма! Олатайҙар килә! — тине әсәһе Тимербулатҡа.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Насар, намыҫһыҙ эшкә ҡатнашыу. □ Пачкаться, мараться. *Ул аңлайышһыҙ вәғәҙәгә ышанып, бысранғым килмәй.*

**БЫСРАТЫЛЫУ (бысратыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бысратыу.** *страд. от* **бысратыу.** *Кейем бысратылған.*

**БЫСРАТЫУ (бысрат-)** (Р.: пачкать; И.: make dirty; Т.: kirlemek) *ҡ.*

**1.** Еүешләп, аяҡ аҫтын батҡаҡлатыу. □ Пачкать, марать, грязнить. ■ *[Аҡназар:] Көн боҙола, баҙарға барып ҡалырға кәрәк.*

*Күҙ көнөн белмәçһең, йә бысратып ебәрер.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Бысраҡ тейҙереү, бысраҡҡа әйләндереү; бысраҡлау. □ Грязнить, пачкать, марать. *Күлдәкте бысратыу.* ■ *Бысратмайым биттәрен, йыртмайым һүрәттәрен, дуçтарым уҡыр тағы, таҙа булһын китабым.* Ә. Вахитова.

**3.** *күсм.* Мәсхәрә йәки хур итеү; ҡара яғыу. □ Чернить, очернять, порочить, бесчестить, марать. *Исемен бысратыу.* ■ *[Нурҡай:] Ҡыу һин мине, Мифтах! Исемемде ҡушып, былар алдында бысратма үҙеңде.* К. Мәргән. ● *Аяғы яман түрҙе бысрата, теле яман илде бысрата.* Мәҡәл.

♦ **Ҡул бысратыу** яманға ҡағылып, яманатлы булыу. □ Марать руки, пачкать руки *об кого, обо что.*

**БЫСРАУ (бысра-)** (Р.: пачкаться; И.: get oneself dirty; Т.: kirlenmek) *ҡ.*

Таҙалыҡты юғалтыу, кер, бысраҡ тейеү, бысраҡҡа әйләнеү. □ Пачкаться, мараться. *Бит бысрау. Ҡул бысрау. Бысраған ҡул. Сылтырап аҡҡан көмөш һыуҙарыбыҙ бысранһа, ҡаныбыҙ бысрар.*

**БЫСТАНЛАУ (быстанла-)** (Р.: возиться; И.: dawdle; Т.: kımıl kımıl kımıldamak) *ҡ.*

Әһәмиәтһеҙ эш менән оҙаҡ мәшәҡәтләнеү. □ Возиться, копошиться. *Баҡсала быстанлау.*

**БЫСТЫҠ I** (Р.: слезящийся; И.: running; Т.: yaşlı) *с. диал.*

Йәшле. □ Слезящийся. *Быстыҡ күҙ.*

**БЫСТЫҠ II** (Р.: малюсенький; И.: wee; Т.: küçücük) *с. диал.*

Бәләкәй генә. □ Малюсенький. *Шунда быстыҡ ҡына йүкә үçеп ултыра.*

**БЫСТЫР I** (Р.: копотливый; И.: dawdler; Т.: yavaş davranan) *с. диал.*

Ығыш, мыштыр. □ Копотливый. *Ул быстыр һаман эшләп бөтмәгән.*

**БЫСТЫР II** (Р.: мошка; И.: midge; Т.: üvez) *и. зоол. диал.*

Ләпәкәй. □ Мошка (лат. *Simuliidae*). *Күҙенә быстыр кергән.*

**БЫСТЫР-БЫСТЫР** *оҡш. диал. ҡар.* **лыстыр-лыстыр.** *Аяҡ аçты быстыр-быстыр килә.* ■ *Пар ат егелгән ҡырандас быстыр-быстыр яй ғына алға бара.* Ф. Иçәнғолов.

**БЫСТЫРЛАУ (быстырла-)** (Р.: хлюпать; И.: champ; Т.: şap şap yürümek) *ҡ. диал.*

**1.** Лыстырлау. □ Хлюпать, чавкать. *Быстырлап һыу аға.*

**2.** *күсм.* Оҙаҡ, яй ҡыланыу; мыштырлау. □ Копошиться. *Быстырлап йөрөмә.* ■ *Нимә, кеше барында быстырлайһың? — тине әсәй.* Ғ. Хәйри.

**БЫСТЫРЫУ (быстыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бысыу.** *понуд. от* **бысыу.** *Утын быстырыу.*

**БЫСЫЙ** (Р.: недопечённый; И.: sodden; Т.: yarı pişmiş) *с.*

**1.** Бешеп етмәүҙән йәбешкәкләнеп, лысҡылдап торған *(икмәккә ҡарата).* Недопечённый, сырой *(о хлебе). Бысый икмәк.*

**2.** Һыуланып, сейләнеп торған; былсыҡ *(күҙгә ҡарата).* □ Слезящийся от воспаления *(о глазах). Бысый күҙ.* ■ *«Бер күҙҙе бәйләйек. Бысый күҙ өркөтөр уларҙы». — Етембай уныһын да алдан уйлап ҡуйған, кеçәһенән нәҙек ҡайыш тағылған тире ярпыһы алып, башына тейешенсә бәйләп тә ҡуйҙы.* Б. Рафиҡов.

**БЫСЫЙЛАНЫУ (бысыйлан-)** (Р.: недопечься; И.: be sodden; Т.: yarı pişmek) *ҡ.*

**1.** Йәбешкәк, ауыр булыу *(икмәккә ҡарата)*; бысый булыу. □ Недопечься, остаться сырым *(о хлебе). Икмәк бысыйланған.*

**2.** Ҡыҙарып, сейләнеү; былсыҡланыу *(күҙгә ҡарата).* □ Становиться слезящимся от воспаления *(о глазах). Бысыйланған күҙ.*

**3.** Һыуланып, сейләнеп, иҙелеп тороу. □ Преть *(о ногах). Тирләп, аяғым бысыйланып бөттө.*

**БЫСЫЙЛАУ (бысыйла-)** *ҡ. ҡар.* **бысыйланыу 2, 3.** *Күҙе бысыйлап тора.*

**БЫСЫҠ** *с. диал. ҡар.* **бысый.** ■ *Исемлекте барлап сыҡҡас, тоҡтондарға әҙәм ашамаç шыйыҡ һурпа, бысыҡ икмәк йораты таратыла.* Ә. Хәкимов.

**БЫСЫҠА** (Р.: слезящийся; И.: running; Т.: yaşlı) *с. диал.*

Йәшле. □ Слезящийся. *Бысыҡа күҙ.*

**БЫСЫЛҒЫ I** (Р.: грибок; И.: fungus; Т.: mantarhastalığı) *и. мед.*

Кешелә — бармаҡ, малда тояҡ араһы сейләнеп, иҙелеп тороуҙан ғибәрәт сир. □ Грибок *(кожное заболевание; у человека — между пальцами ног, у парнокопытных — между копытами). Бысылғы булыу. Оҙаҡ ысыҡ кисеп йөрөй торғас, һарыҡтар бысылғы менән ауырый башланы.*

**БЫСЫЛҒЫ II** *и. бот. диал. ҡар.* **меңьяпраҡ.** *Июль баштарында бысылғы сәскә ата.*

**БЫСЫЛҒЫЛАНЫУ (бысылғылан-)** *ҡ. ҡар.* **бысылғылау.** *Аяҡтары бысылғыланып тора.*

**БЫСЫЛҒЫЛАУ (бысылғыла-)** (Р.: преть; И.: get wet; Т.: ıslanmak) *ҡ.*

Бысылғы булып иҙелеү; сейләнеү. □ Преть, мокнуть *(о ногах). Аяғы ярылып, бысылғылап бөткән.*

**БЫСЫЛДАҠ I** (Р.: слезящийся; И.: running; Т.: yaşlı) *с.*

Сейләнеп торған; бысый *(күҙгә ҡарата).* □ Слезящийся *(о глазах). Бысылдаҡ күҙ.*

**БЫСЫЛДАҠ II (бысылдағы)** (Р.: влажный лишай; И.: pityriasis skin disease; Т.: nemli liken) *и. диал.*

Еүеш тимерәү. □ Влажный лишай. *Бысылдаҡ сығыу.*

**БЫСЫЛДАУ (бысылда-)** (Р.: недопечься; И.: be unbaked; Т.: yarı pişmek) *ҡ.*

**1.** Йәбешкәкләнеп, лыҫҡылдау *(икмәккә ҡарата).* □ Недопечься *(о хлебе). Икмәк сей, бысылдап тора.*

**2.** Һыуланып, сейләнеү *(күҙгә ҡарата).* □ Становиться слезящимся от воспаления *(о глазах). Күҙе бысылдап тора.*

**3.** Сейләнеү. □ Преть, гнить, мокнуть. *Бесән ямғырға бысылдап ята. Аяғы бысылдап бөткән.*

**БЫСЫЛҠЫ** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **бысый.** *Бысылҡы икмәк. Бысылҡы күҙ.*

**2.** *ҡар.* **бысылғы I.** *Малдарҙың тояғына бысылҡы сыҡҡан.*

**БЫСЫЛЫЙ** (Р.: неуклюжий; И.: clumsy; Т.: beceriksiz) *с.*

Тотҡан нәмәһен төшөрөп барыусан; ишһеҙ ҡуллы; былҡым. □ Неуклюжий, неловкий. *Бысылый ҡатын.*

**БЫСЫЛЫУ (бысыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бысыу.** *страд. от* **бысыу.** *Утын бысылған.* ■ *Беҙҙең Ҡыҙылташ йылғаһы аша күпер ғәләмәт ҡыҙыҡ итеп һалынған. Баш-баштары ярҙағы таш бураларға терәлгән буй урҙалар дүрткелләп бысылған арҡыры урҙалар менән арҡыс-торҡос тоташтырылған.* Н. Мусин.

**БЫСЫМ** *с. диал. ҡар.* **бысый.** *Бысым икмәк.*

**БЫСЫУ (быс-)** (Р.: пилить; И.: saw; Т.: kesmek) *ҡ.*

Бысҡы менән ҡырҡыу. □ Пилить. *Утын бысыу. Бүрәнә бысыу. Бысып төшөрөү.* ■ *Сәлмән һырғыйырап ағастарҙы һайлап, берәм-берәм йығырға керешеп киткән. ти. Йығып ебәрә лә, ботап, бысып, ярып, өйә бара, ти.* Әкиәттән. *Ҡак имәнде бысыуы еңел түгел, суйындай тағырлап тора.* Н. Мусин. *Гүйә улар хәҙер магазиндың аҫтына төшәсәктәр ҙә баҙҙа магазинды тотоп торған ниндәйҙер бер бағананы быса башлаясаҡтар.* С. Агиш.

**БЫСЫШҠЫ** (Р.: слезящийся; И.: running; Т.: yaşlı) *с. диал.*

Йәшле. □ Слезящийся. *Бысышҡы күҙ.*

**БЫСЫШҠЫ ҮЛӘНЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **юл япрағы.** *Яраға бысышҡы үләне ябыу.*

**БЫСЫШЫУ (бысыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бысыу.** *взаимн. от* **бысыу.** *Утын бысышыу.* ■ *[Булат:] Кисә ул. Рахмай. көнө буйы уларға [Сәмси әбейҙәргә] утын бысышҡан.* К. Кинйәбулатова.

**БЫҪ, быҫҫ** (Р.: подражание шипению; И.: onomatopoeic word; Т.: hışır hışır) *оҡш.*

Сей утын янғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание шипению, например, сырых дров при горении. *Мейестә «быҫ» тип сей утын янып китә алмай ята.*

**БЫҪҠАҠ I** (Р.: моросящий; И.: drizzling; Т.: yoğun sis) *с.*

Яй ғына яуып торған ваҡ күҙле *(ямғырға ҡарата).* □ Моросящий. *Быҫҡаҡ ямғыр.* ■ *Яуһа яумай, бер башлаһа, тымыуҙы белмәй торған быҫҡаҡ ямғырҙар теңкәгә тейә.* Ҡ. Ибәтуллин. *Бер нисә көндән күктә ауыр болоттар ҡапланы, быҫҡаҡ ямғырҙар яуырға тотондо.* Т. Ғиниәтуллин.

**БЫҪҠАҠ II (быҫҡағы)** *и. диал. ҡар.* **һаңғырау бәшмәк.** *Быҫҡаҡ ҡалҡып сыҡҡан.*

**БЫҪҠАҠЛАУ (быҫҡаҡла-)** (Р.: моросить; И.: drizzle; Т.: çiselemek) *ҡ.*

Ваҡ ҡына күҙле булып, яй ғына һибәләү *(ямғырға ҡарата).* □ Моросить. *Быҫҡаҡлап ямғыр яуа.* ■ *Көҙгө көндәге һымаҡ, быҫҡаҡлап ҡына һалҡын ямғыр һибәләй башланы.* Я. Хамматов. *Урам тын, быҫҡаҡлап ҡына ямғыр яуа.* Б. Хәсән. *Бер нисә көн генә аяҙыҡкандай булып торҙо ла, ваҡ күҙле ямғыр тағы ла өҙлөкһөҙ быҫҡаҡларға кереште.* Ғ. Ибраһимов.

**БЫҪҠЫЙ** (Р.: коптилка; И.: wick lamp; Т.: kandil) *и. диал.*

Һуҡыр шәм. □ Коптилка. ■ *Һәр кис ҡайтҡас, көҙгө төн буйына ҡәләм төшөрмәне ҡулынан, быҫҡый яҡтыһында таңға тиклем хәреф теҙҙе дәфтәр юлына.* М. Марат.

**БЫҪҠЫЛДАУ (быҫҡылда-)** *ҡ. диал. ҡар.* **быҫҡаҡлау**. ■ *Сәхипгәрәй, быҫҡылдап яуған ямғыр тауышына ойоп, ҡуҙғалмай торҙо.*

**БЫҪҠЫТА БАҪЫУ (быҫҡыта баҫ-)** (Р.: раздавить; И.: crush; Т.: ezmek) *ҡ. диал.*

Һыта баҫыу. □ Раздавить *кого, что* ногой. *Сиңерткәне быҫҡыта баҫтым.*

**БЫҪҠЫТЫУ (быҫҡыт-)** (Р.: дымить; И.: smoke; Т.: tütmek) *ҡ.*

**1.** Һыҙҙырып ҡына төтөн сығарыу; төтәтеү. □ Дымить. *Тәмәке быҫҡытыу.* ■ *Малды себен-серәкәй йонсотҡан йәйге эҫелә .. [Исхаҡ] бер нисә урында төтөнлөк быҫҡытып ебәрә ине.* Ш. Янбаев. *Ай башы. Завод морйәһе быҫҡытып төтөн сығара.* Т. Арслан. *Ҡайһыһы стена буйына эшләнгән оҙон һикелә һуйҙайып ята, бер-икәүһе меиес ауыҙы эргәһенә сүкәйеп ултырған да тәмәке быҫҡыта.* Н. Мусин. *Улар бәләкәс кенә өйҙә тәмәке төтөнө менән шул тиклем быҫҡытҡандар, күҙгә төртһәң дә күренмәй тигәндәй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Аҫтан ғына һүҙ йөрөтөү; ҡотортоу. □ Подстрекать, сплетничать *(тайком пускать слух).* ■ *[Юлдыбикә:] Әйтәм бер көндө күрешебеҙ Әлхәмбикә һөйләнеп ултырҙы. «Ауыҙың арандай булып, әллә ҡайҙан бушты быҫҡытаһың да ултыраһың», — тип әрләп ташланым.* Т. Хәйбуллин.

**БЫҪҠЫУ (быҫҡы-)** (Р.: тлеть; И.: smoulder; Т.: tütmek) *ҡ.*

**1.** Ялҡынһыҙ ғына төтәү. □ Тлеть, слабо гореть. *Быҫҡып яныу. Мейестә тором-баш быҫҡый.* ■ *Быҫҡып янған утын баштарынан күбек ҡатыш һыу сыға.* К. Бакиров. *Ауылдың ярты өлөшө янған, өйҙәрҙең нигеҙҙәре төбөндә .. төтөн быҫҡый.* С. Кулибай. *Быҫҡып янған утты осраттым да ҡороғанын һалдым сатырҙың.* Я. Ҡолмой.

**2.** *күсм.* Бик һүлпән, дәртһеҙ булыу *(эштормошҡа ҡарата).* □ Быть вялым, медлительным, слабым *(по отношению к делу, жизни).* ■ *Мин һүнеүҙе белмәй гел янырмын, быҫҡый торған заттан түгелмен.* Ғ. Әмири. *Әнүәр сыраҡ ише быҫҡымаясаҡ, ә дөрләп янасаҡ.* Р. Камал.

**3.** *күсм.* Бер ергә сығып йөрөмәй, эшһеҙ-хәрәкәтһеҙ томаланып көн итеү. □ Жить вяло, в медленном темпе, топтаться на месте. ■ *Ҡыш буйы ыҙмала быҫҡып ятҡандан һуң, яҙ башы киң яланға сығып, бер иркенләп тын алыуы үҙе ни тора!* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Асыҡтан-асыҡ һөйләнмәй, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа быш-быш йөрөү *(һүҙгә ҡарата).* □ Распространяться тайком *(о сплетнях).* ■ *[Айсыуаҡ:] Бер быҫҡыған һүҙ бар, дөрөҫ булһа? Һаҡлан, бейем, һин шул хәбәрҙән!* Х. Ғәбитов.

**5.** Йәшерен тойғолар кисереү. □ Тлеть, теплиться *(о чувствах).* ■ *Ләкин шуныһы ғәжәп: асыуланыуы нәфрәткә әйләнмәне, киреһенсә, яңы быҫҡый ғына башлаған мөхәббәт усағын дөрләтеп ебәрҙе.* Н. Ҡотдосов.

**6.** *диал. кар.* **быҫҡаҡлау.** ■ *Болоттар түбәндән генә йөҙә. Бына-бына быҫҡып ямғыр яуып ебәрер төҫлө.*

**БЫҪЛЫҒЫУ (быҫлыҡ-)** *ҡ. диал. кар.* **бышлығыу.** *Быҫлығып уяныр киттем.*

**БЫҪЛЫҠ I (быҫлығы)** (Р.: дымарь; И.: smoker; Т.: tütünlük) *и. диал.*

Төтәткес. □ Дымарь. *Быҫлыҡ менән төтәтеү.*

**БЫҪЛЫҠ II** (Р.: слезящийся; И.: running; Т.: yaşlı) *с. диал.*

Йәшле. □ Слезящийся. *Быҫлыҡ күҙҙәр.*

**БЫҪМЫРЫЛЫУ (быҫмырыл-)** (Р.: существовать вяло; И.: exist inertly; Т.: varlığını sürdürmek) *ҡ.*

Ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ булып, һүлпәнләнеп көн итеү. □ Существовать, жить вяло, слабо. *Йәй көнө өйҙә быҫмырылып ултырып булмай.*

**БЫҪТАУ** (Р.: ворчливый; И.: grumbler; Т.: homurtucu) *с. диал.*

Мыжыҡ. □ Ворчливый. *Эй быҫтау ҙа инде был хужабикә ҡарсыҡ.*

**БЫҪТЫЙ** (Р.: разговаривающий со звуком «ҫ» вместо «с»; И.: smb speaking using the «ҫ» sound; Т.: peltek *s* ile konuşan kimse) *и. диал.*

«С» өнө урынына «ҫ» менән һөйләшеүсе. □ Разговаривающий со звуком «ҫ» вместо «с». *Быҫтый бала.*

**БЫҪЫЛДАҠ АҠҠОШ** (Р.: лебедь-шипун; И.: swan species; Т.: sessiz kuğu) *и. зоол.*

Рәсәйҙә йәшәй торған ыҫылдаусы аҡҡош төрө; телһеҙ аҡҡош. □ Лебедь-шипун, лебедь немой (лат. *Cygnus olor*). *Быҫылдаҡ аҡҡоштар оса.*

**БЫҪЫМЛАУ (быҫымла-)** *ҡ. диал. кар.* **быҫҡаҡлау.** *Быҫымлап яуып тик тора.*

**БЫҪЫУ (быҫ-)** *ҡ. диал. кар.* **быуыу.** *Быуа быҫыу.*

**БЫТАҠАЙТЛАУ (бытаҡайтла-)** (Р.: путать; И.: confuse; Т.: karıştırmak) *ҡ. диал.*

Бутау. □ Путать. *Бытаҡайтлап йөрөмә.*

**БЫТАЛАЙ** (Р.: разговаривающий скороговоркой; И.: pattering; Т.: hızlı konuşan) *с. диал.*

Ҡыҙып-ҡыҙып тиҙ һөйләшеүсе. □ Разговаривающий скороговоркой. *Улар аралары менән быталайҙар.*

**БЫТАЛАҠ (быталағы)** *и. диал. кар.* **йылыу II.** *Быталаҡтан һыу алыу.*

**БЫТБЫҠ (бытбығы)** (Р.: кокетка; И.: coquette; Т.: flört) *и. диал.*

Ҡыйшандаҡ. □ Кокетка. *Был ҡыҙ бытбыҡ та инде.*

**БЫТБЫЛДАУ (бытбылда-)** (Р.: кричать *(о перепеле)*; И.: cry (about quails); Т.: bıldırcın ötüşü) *ҡ.*

Быт-быт итеп ҡысҡырыу, быт-быт килеү *(бөҙәнәгә ҡарата).* □ Кричать *(о перепеле).* ■ *Һеркә осорған ҡукшел арыш араһында бытбылдыҡтар бытбылдай.* Р. Ғабдрахманов. *Әллә ҡайҙа бытбылдаған бөҙәнәләрҙең тауышы ҡолаҡ төбөндә генә ишетелә.* Һ. Дәүләтшина. *Һәр төрлө ҡош-ҡорт арыу-талыуҙы белмәй һайрай, һыҙғыра, бытбылдай.* Ш. Янбаев.

**БЫТБЫЛДЫҠ I (бытбылдығы)** (Р.: перепел; И.: quail; Т.: bıldırcın) *и. зоол.*

**1.** Бөҙәнә. □ Перепел (лат. *Coturnix*). *Инә бытбылдыҡ. Бытбылдыҡ ояһы. Бытбылдыҡ тауышы.* ■ *Ара-тирә ишетелә бытбылдыҡ ҡысҡырғаны.* Ғ. Рамазанов. *Элекке кеүек һандуғастар һайрауы, бытбылдыҡ, тартай тауыштары ла ишетелмәй.* Н. Ҡәрип.

**2.** *диал. кар.* **тартай 1.** *Бытбылдыҡ балаһы.* ● *Бытбылдыҡҡа төш булһа, бөҙәнәгә урын юҡ.* Мәҡәл.

**БЫТБЫЛДЫҠ II** (Р.: подражание крику перепела; И.: onomatopoeic word; Т.: bıldırcın sesinin taklidi) *оҡш.*

Бөҙәнә тауышын белдергән һүҙ. □ Подражание крику перепела. ■ *Йылға буйындағы бөҙәнә генә ара-тирә бытбылдыҡ-бытбылдыҡ тип ҡуя.* Т. Байышев. ● *Бөҙәнәнең өйө юҡ, ҡайҙа барһа — бытбылдыҡ.* Мәҡәл.

**БЫТ-БЫТ** (Р.: подражание крику перепела; И.: onomatopoeic word; Т.: bıldırcın sesine taklit etmek) *оҡш.*

**1.** Бөҙәнә тауышын белдергән һүҙ. □ Подражание крику перепела. ■ *Быт-быт*

*бытбылдык үлән төбөндә тик ята.* Т. Йәнәби.

**2.** Мотор токана яҙып туктағанда сыккан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку невключающегося мотора. *Машина быт-быт итеп калды ла һүнде.*

**3.** *күсм.* Өҙөк-өҙөк, етеҙ һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание прерывистому, быстрому разговору. *Быт-быт итеү. Быт-быт килеү. Быт-быт итеп һөйләү.*

**БЫТКАШЫУ (быткаш-)** (Р.: находиться в тесноте; И.: live cooped; Т.: kalabalık olmak) *к.*

Күмәк булып кыҫылышыу; тығылышыу. □ Находиться в тесноте. *Быткашып йәшәү.* ■ *[Хәҙисә апайҙың] өйөндә кәзә мөгөҙөнә элер нәмәһе юк. Бер бүлмәлә быткашып йәшәйҙәр.* З. Биишева.

**БЫТКЫМ** *с. диал. кар.* **куйы.** *Быткым үлән. Быткым сәс. Быткым ағаслык.*

**БЫТКЫУ (быткы-)** (Р.: скопляться; И.: abound in; Т.: yığılmak) *к. диал.*

Күп булыу, өйөлөшөү. □ Быть в большом количестве, скопляться. *Еләк быткып ята унда.*

**БЫТКЫШ** (Р.: тесно; И.: thickly; Т.: çok) *р. диал.*

Куйы, күп, тығыҙ. □ Тесно, много, густо. *Бүлмәлә быткыш. Үҫентеләрегеҙ кайһылай быткыш сыккан, һирәкләтегеҙ.*

**БЫТКЫШЫУ (быткыш-)** (Р.: скопляться; И.: abound in; Т.: çok sayıda olmak) *к. диал.*

Күп булыу, өйөлөшөү. □ Быть в большом количестве, скопляться. *Быткышып торған йондоҙҙар.*

**БЫТЛЫҒЫУ (бытлык-)** (Р.: выдавливаться; И.: be squeezed out; Т.: sıkıştırmak) *к. һир.*

Һытылып, кыҫылып ағыу. □ Выдавливаться, выжиматься. *Бытлығып сығыу.*

**БЫТМЫКАЙ** *с. диал. кар.* **былкы.** *Бытмыкай катын.*

**БЫТЫЙ** (Р.: любящий лепетать; И.: fond of chattering; Т.: bıdır bıdır konuşan) *с.*

**1.** Һүҙгә әүәҫ, һөйләнсек, бытылдак *(бәләкәй балаға карата).* □ Любящий лепетать, тараторить *(о маленьком ребёнке). Бытый бала.* ● *Бытый тик тормай, артына һукһаң да ултырмай.* Мәкәл.

**2.** *диал.* Һакау. □ Косноязычный. *Бытый кыҙыкай.*

**3.** *диал.* Һүҙгә, эшкә катнашып, буталып йөрөгән *(кеше).* □ В каждой бочке затычка *(о человеке, вмешивающемся во все дела). Бытый катын.*

**БЫТЫКАЙ** *с. диал.*

**1.** *кар.* **әрпеш.** *Бытыкай катын.*

**2.** *кар.* **бытый 3.** *Бытыкай, ниңә кәрәкмәгән эшкә кыҫылып йөрөйһөң?*

**БЫТЫЛДАК** (Р.: любящий тараторить; И.: fond of chattering; Т.: bıdır bıdır konuşan) *с.*

Күп һөйләгән, һүҙгә әүәҫ, бытый *(бәләкәй балаға карата).* □ Любящий тараторить *(о маленьком ребёнке). Бытылдак бала.*

**БЫТЫЛДАУ (бытылда-)** (Р.: тараторить; И.: chatter; Т.: bıdır bıdır konuşmak) *к.*

Ниҙер өҙлөкһөҙ һөйләү, быт-быт килеү *(бәләкәй балаға карата).* □ Тараторить *(о маленьком ребёнке),* разговаривать без умолку, лепетать. *Бытылдығын сығыу.* ■ *Үҙе [кустым] әүәҫ шаярырға, бытылдап һүҙе бөтмәй.* А. Игебаев. *Өммөгөлсөм хатта шикләнеп куйҙы: «Эй Хоҙайым, ярамағанды, артыкты бытылдап ташланыммы икән әллә? Асыуландырҙым, шикелле, кәйнеште».* З. Биишева. *Шунда, ни әйтергә белмәй аптырап торғанда, Зимфира ашыға-ашыға бытылдарға керешә.* Ә. Бикчәнтәев.

**БЫТЫЛЫУ (бытыл-)** *к. диал. кар.* **бүҫелеү 2—5.** *Йөндәре бытылған яҫтык.*

**БЫТЫМЫР** *с. диал. кар.* **бытый.** *Бытымыр бала.*

**БЫТЫР I** (Р.: подражание мерным отрывистым звукам; И.: onomatopoeic word; Т.: patır patır) *окш.*

Мотор токанғанда йәки автоматтан бер ыңғай атканда сыккан тауышты белдергән һүҙ. □ Та-та *(подражание мерным отрыви-*

*стым звукам, например, стрельбе). Бытыр итеү.*

**БЫТЫР II** (Р.: разговаривающий без умолку; И.: pattering; Т.: bıdır) *с. диал.*

Ҡыҙыу һөйләшеүсе. □ Разговаривающий без умолку. *Ул бытыр ҡатынды аңлап буламы ни, нимәлер бытырланы ла сығып та китте.*

**БЫТЫР-БЫТЫР** (Р.: подражание мерным отрывистым звукам; И.: onomatopoeic word; Т.: patır patır) *оҡш.*

**1.** Ҡабат-ҡабат бытыр (I) иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Та-та *(подражание мерным отрывистым звукам, например, стрельбе). Бытыр-бытыр атыу. Бытыр-бытыр итеү. Бытыр-бытыр килеү.*

**2.** Бутҡа бешкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; бутыр-бутыр. □ Подражание звуку кипения густой массы. *Бытыр-бытыр бутҡа бешә.* ■ *Бытыр-бытыр бутҡа бешә, уртаһына май төшә.* Халыҡ ижадынан.

**3.** Шәп итеп, өҙлөкһөҙ һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание безумолчному разговору. *Бытыр-бытыр һөйләшеү.*

**БЫТЫРЛАҠ** (Р.: говорящий много и быстро; И.: chatterer; Т.: bıdır bıdır konuşan) *с.*

Бытырлап һөйләй торған. □ Говорящий много и быстро, любящий тараторить. *Бытырлаҡ кеше.*

**БЫТЫРЛАУ (бытырла-)** (Р.: тарахтеть; И.: rattle; Т.: patırdamak) *ҡ*

**1.** Бытыр-бытыр итеү, бытыр-бытыр килеү. □ Тарахтеть. ■ *Мотор бытырлап торҙо ла, бер нисә тапҡыр сөскөрөп алғас, эшләй башланы.* Ә. Вәли.

**2.** Ҡабаланып, өҙлөкһөҙ һөйләү. □ Тараторить, разговаривать без умолку, скороговоркой. *Бытырлығын сығыу.* ■ *Бытырлай биреберәк һөйләшә торған кеше булғанлыҡтан, уның [һөйләүсенең] ҡайһы бер һүҙҙәре ишетелмәй ҡала.* К. Мәргән. *Әсәһе менән бергә тороп, әллә ниҙәр бытырлап һөйләнә-һөйләнә имгәкләп килгән ҡара малайҙы Айбулат ҡулына алып һөйҙө.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫТЫРЫЙ** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **бәрҙе.** *Ҡармаҡҡа бытырый эләкте.*

**2.** *ҡар.* **селбәрә I.** *Йылға ситендә бытырыйҙар күренә.*

**БЫТЫРЫУ (бытыр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **болартыу 1.** *Өйҙө бытырма.*

**БЫТЫШ** *с. диал.*

**1.** *ҡар.* **булдыҡһыҙ.** *Бытыш уҡыусы.*

**2.** Буталған. □ Перемешанный. *Бытыш әйберҙәр.*

**БЫТЫШЫУ (бытыш-)** *ҡ. диал.*

**1.** *ҡар.* **быткышыу.** ■ *Һине уткәрмәҫкә тигәндәй, бытышып үҫкән ҡалын ҡуйы урман аңғармаҫтан өҙөлә.* Н. Мусин.

**2.** Тығылыу *(һүҙгә, эшкә).* □ Вмешиваться *(в чужие дела). Кит, бытышма!*

**3.** Теләр-теләмәҫ эшләү; ығышыу. □ Работать без охоты. *Бытышып ҡына йорой инде, бер ҙә эшләргә теләмәй.*

**БЫУ** [дөйөм төрки *бу* < *буғу* ‘быу, томан’] (Р.: пар; И.: steam; Т.: buhar) *и.*

**1.** Дымлы нәмәнән земберләп күтәрелгән шыйыҡ томан. □ Пар. *Быу бөркөү. Быу күтәрелеү.* ■ *Быу бөркөп торған баҫыуҙа сәсеүҙәр ҡыҙыу бара.* Р. Ниғмәти. *Яңы ғына ҡарҙан әрселгән баҫыуҙарҙан, аҡһыл төтөн кеүек булып, быу сыға.* Ф. Әсәнов.

**2.** Ҡайнар һыуҙан күтәрелгән аҡ томан; боҫ. □ Пар *(водяной).* ■ *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа көн, диңгеҙ йөҙө ҡайнарланып, быу булып күккә оса ла һыу булып ергә төшә.* Ш. Бабич. *Айбулат ҡаҙан быуы, самауыр боҫо менән йылынған өйөндә гимнастёркаһының иҙеүен ысҡындырып, бәләкәй ҡыҙын түбығына таяндырып, түрҙә аяҡ салып, ғаиләһе менән ыумас эсеп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Йылы һауа менән һыуыҡ һауа аралашҡанда хасил булған ҡуйы аҡ томан. □ Пар. *Ишектән быу сығып тора.* ■ *Аттарының өҫтөн аҡ бәҫ ҡаплаған, морондарынан оҙон быу сығарып, саҡ атлап баралар.* Б. Бикбай.

**4.** Тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡунған дым, быуаҡ. □ Пот. ■ *Сабышып йөрөгән аттарҙан быу боҫорай, һыбайлыларҙың ҡулдарын һелтәүҙәре күренә.* Т. Килмөхәмәтов.

**5.** *миф.* Күҙҙән им итеп ҡулланылған быу. □ Пар, используемый в заговаривании от сглаза. *Тәҙрә быуы күҙҙән килешә.*

**БЫУА I** [дөйөм төрки *буа* < *буғ-ағ* 'быуа'] (Р.: пруд; И.: pond; Т.: baraj) *и.*

**1.** Быуып яһаған һыу һаҡлағыс. □ Пруд. *Тирмән быуаһы. Быуа балығы.* ■ *Павловка һыу һаҡлағысы – быуаларҙың иң ҙуры.* М. Хисмәтов. *Ҡояш байып барғанда, ул быуа буйындағы ҡамыштар араһында балыҡ ҡаптырып ултыра ине инде.* Р. Мөхәмәтов.

**2.** Шул һыу һаҡлағысты тотоу өсөн ағас, таш менән нығытып яһалған кәртә. □ Запруда. *Быуа быуыу.* ■ *[Хәлимулла:] Ямғырҙы әйтәм, шәп яуа бит. Тирмәнсенең быуаһын да йырып ебәрер әле.* С. Агиш.

♦ **Быуа быуырлыҡ** бик күп. □ Хоть пруд пруди *(т. е. очень много).* ■ *[Ишбулды:] Ирҙәр етмәһә, беҙҙә бисәләр быуа быуырлыҡ, – тине.* Ғ. Әмири. *Эй, беҙҙең кейек йырсылар быуа быуырлыҡ ул, – ти [Рәшит].* Р. Солтангәрәев.

**БЫУА II** (Р.: промежуток рабочего времени между двумя перерывами на отдых; И.: interval between working hours; Т.: dinlenme saatleri arasında çalışma süresi miktarı) *и.*

Туҡтап ял алғанға тиклемге эш ваҡыты, һыуһын, тына. □ Промежуток рабочего времени между двумя перерывами на отдых. *Кис менән бер быуа бесән сабып ҡайттыҡ.* ■ *Еләҫ ел иҫеп үтте һәм, эҫенән сарсаған халыҡтың теләгән үтәгәндәй, ике быуа килеп, ямғыр һибәләп алды.* С. Кулибай.

**БЫУАҒЫТЫУ (быуағыт-)** *ҡ. диал.*

**1.** *ҡар.* **быуланыу 3.** *Өй бүрәнәләре быуағытып тора.*

**2.** *ҡар.* **бәҫләнеү.** *Ағастар быуағытты.*

**БЫУАҘ** [дөйөм төрки *буаз, бугаз* 'йөклө'] (Р.: стельная; И.: cow in calf; Т.: gebe) *с.*

Ҡарынында балаһы бар *(малға ҡарата).* □ Стельная *(о корове),* суягная *(об овце, козе),* супоросная *(о свинье),* жерёбая *(о кобыле, ослице, верблюдице, лосихе). Быуаҙ бейә. Быуаҙ кәзә. Быуаҙ һыйыр. Быуаҙ һарыҡ.* ■ *Малдың һимеҙлеген, арыҡлығын һынап ҡарағаным юҡ, быуаҙ мал тураһында мин аҙ ғына булһа ла хәбәрҙар түгел.* Д. Юлтый. *Үткән йыл алтмыш ете бейә тороҡторолдо. Өсәүһе генә быуаҙ түгел. Ҡалған алтмыш дүрте быуаҙ.* Ә. Вәли.

**БЫУАҘҘАУ** *и. диал. ҡар.* **боғаҙ.** *Быуаҙҙауын быуыу. Быуаҙҙауға йәбешеү.*

**БЫУАҘЛАУ (быуаҙла-)** *ҡ. ҡар.* **быуаҙыу.** *Һарыҡ быуаҙлаған.*

**БЫУАҘЛЫҠ (быуаҙлығы)** (Р.: стельность; И.: state of pregnancy; Т.: gebelik) *и.*

Быуаҙ булған хәл. □ Стельность *(коров),* суягность *(овец, коз),* супоросность *(свиней),* жерёбость *(кобыл, ослиц, верблюдиц, лосих и др. копытных). Быуаҙлыҡ дәүере. Быуаҙлыҡтың икенсе яртыһында аҡһымға бай аҙыҡ ашатҡан һарыҡтарҙың бәрәстәре нык һәм таҙа була.*

**БЫУАҘЫУ (быуаҙы-)** (Р.: становиться стельной; И.: get pregnant; Т.: gebe olmak) *ҡ.*

Быуаҙ хәлгә ҡалыу *(малға ҡарата).* □ Становиться стельной *(о корове),* становиться суягной *(об овце, козе),* становиться жерёбой *(о кобыле, ослице, верблюдице),* становиться супоросной *(о свинье). Һыйыр быуаҙыған.*

**БЫУАЙ** *и. диал. ҡар.* **бабай.** *Быуайымдарға барып киләйем әле.*

**БЫУА КҮЛ** (Р.: озеро запрудное; И.: pond lake; Т.: göl) *и. геогр.*

Ер ишелеүҙән, уйылыуҙан һәм лава ағымы менән быуылған күл төрө. □ Озеро запрудное. *Быуа күлдең һыуы.*

**БЫУАҠ I (быуағы)** [дөйөм төрки *бу* < *буғу* 'быу, төтөн'] (Р.: пар; И.: perspiration; Т.: buhar) *и.*

**1.** Тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡунған дым, бөрсөк-бөрсөк тир; быу. □ Пар *(влажный налёт на предметах). Тәҙрә быуаҡ менән ҡапланды.*

**2.** *диал. ҡар.* **ҡырау 1.** *Сәскәләрҙе быуаҡ һуҡҡан.*

**3.** *диал. ҡар.* **бәҫ II, 1.** *Ағастарға быуаҡ ҡунған.*

**БЫУАҠ II (быуағы)** (Р.: часть; И.: part; Т.: bölüm) *и.*

Айырым-айырым бүленеп торған нәмәнең бер бүлеге; бүлкә, өлөш. □ Часть. *Бер-бер артлы теҙелеп киткән күлдәрҙең бер быуағы.*

**БЫУАҠ III (быуағы)** *и. диал. кар.* **баба II, 1.** *Малайҙы быуаҡҡа алып барырға кәрәк.*

**БЫУАҠ-БЫУАҠ** (Р.: частями; И.: in parts; Т.: bölük bölük) *с.*

Быуаҡтарҙан торған, быуаҡ (II) барлыҡҡа килтергән. □ Частями, отделениями, кусками. ■ *Кәмәлекәй буйҙары, әй, юл булыр, быуаҡ-быуаҡ ҡына күл булыр.* Халыҡ йырынан.

**БЫУАҠЛАНЫУ I (быуаҡлан-)** (Р.: запотевать; И.: become misted; Т.: buğu bağlamak) *ҡ.*

Дым менән, бөрсөк-бөрсөк тир менән ҡапланыу *(тәҙрәгә һәм башҡа нәмәгә ҡарата).* □ Запотевать. *Түшәм быуаҡланды. Тәҙрә быуаҡланды.*

**БЫУАҠЛАНЫУ II (быуаҡлан-)** (Р.: разделяться на части; И.: become divided into parts; Т.: bölünmek) *ҡ.*

Айырым-айырым, бүлкәт-бүлкәт булып бүленеү. □ Разделяться на части. *Бала түптүмалаҡ, ҡулдары быуаҡланып тора.*

**БЫУА ҠУСҠАРЫ** (Р.: прудовик; И.: lymnaeidae; Т.: salyangoz türü) *и. зоол.*

Күлдәрҙә йәшәй торған, ҡабырсағы ослайып бормаланған ҡусҡар. □ Прудовик (лат. *Lymnaeidae*). *Быуа ҡусҡары ҡабырсағы.*

**БЫУАН** *и. диал. кар.* **быуа I, 1.** *Балыҡҡа быуанға йөрөй торғайныҡ.*

**БЫУАНАҠ ҠАБЫРҒА** *и. диал. кар.* **ҡулан ҡабырға.** *Быуанаҡ ҡабырғаһы сайраған.*

**БЫУАР ЙЫЛАН** (Р.: удав; И.: boa; Т.: boa yılanı) *и. зоол.*

Осраған йәнлекте быуып үлтереп йота торған ағыуһыҙ йылан. □ Удав (лат. *Boa constrictor*). *Быуар йыланды матур тиреһе һәм ите өсөн тоталар, ләкин уны аулау еңел эш түгел, сөнки ул кешене һәм хайуандарҙы быуып үлтерә.*

**БЫУАРТЫУ (быуарт-)** (Р.: надоедать; И.: pester; Т.: bıktırmak) *ҡ. диал.*

Ҡыҫтаҡлау, йөҙәтеү. □ Надоедать. ■ *«Йә, йә, әйт», — тип, теге малайҙар Зөбәйҙе быуарта башланы.* Ж. Кейекбаев.

**БЫУАТ I** [монг. *богут* ‘быуындар’] (Р.: век; И.: century; Т.: yüzyıl) *и.*

**1.** Йөҙ йыл иҫәбе менән йөрөтөлгән ваҡыт араһы. □ Век. ■ *Һәр оҫта күп быуаттар буйы тупланған тәжрибәнән сығып эш итә.* Н. Бикбулатов. *Шүлгән мәмерйәһе таштарындағы ҡырағай ат һүрәттәрен бынан ике йөҙ быуат элек яһаған, тиҙәр.* Ә. Атнабаев.

**2.** *тар.* Ни менән дә булһа билдәләнгән бер тарихи осор. □ Век. *Таш быуат. Урта быуаттар.* ■ *Мин бында [аҫәремдә] Аҡмулла быуатына ҡағылмайым.* Д. Юлтый. *Археологтар тикшергән боронғо тарихи осор үҙе шартлы рәүештә өс ҙур дәүергә — таш, баҡыр-еҙ һәм тимер быуаттарға бүленә.* Н. Мәжитов.

**БЫУАТ II** *и. диал. кар.* **быуаҡ II.** *Был тау бер нисә быуатҡа бүлгеләнеп тора.*

**БЫУҒАЛАҠ (быуғалағы)** (Р.: силок; И.: noose; Т.: tuzak) *и.*

Йәнлекте муйынынан эләктереп күтәрер өсөн бөгөлгән ағас осона ҡуйылған тоҙаҡ. □ Силок. *Быуғалаҡ ҡуйыу. Быуғалаҡ менән ҡош тотоу.* ■ *Ҡуян шаҡыларына [Туҡмуйрыҡ] ағас бөгөп, быуғалаҡтар ҡуйҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**БЫУҘЫРЫУ (быуҙыр-)** *ҡ. йөкм. кар.* **быуыу.** *понуд. от* **быуыу.** ■ *[Батша] түрәләрҙе баш ҡылып, ил телләген быуҙырып, арыҫландай ирҙәрҙе йыуаш ҡуйҙай итте инде.* Ҡобайырҙан.

**БЫУЛАНДЫРЫУ (быуландыр-)** (Р.: испарять; И.: evaporate; Т.: buğulamak) *ҡ.*

Быуға тотоу, быулы итеү. □ Испарять, держать над паром. *Стаканды быуландырыу.* ■ *Ҡаҙандан күтәрелгән боҫ түбә таҡталарын быуландырҙы, ҡатһыҙ тәҙрәнең туңы иреп, өй эсе яҡтырып киткәндәй булды.* З. Ураҡсин.

**БЫУЛАНЫУ (быулан-)** (Р.: испаряться; И.: vaporize; Т.: buğulanmak) *ҡ.*

**1.** Быу булып ҡалҡыу. □ Испаряться. *Быуланып ятыу.* ■ *Тын, тәмәке төтөнө һымаҡ булып быуланып, һауаға күтәрелде.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡарҙар ирей бында... Ер быулана, әйтерһең, ҡыш түгел, яҙ инде.* Х. Ғиләжев. *Шаулайҙар ямғырҙар, күк күкрәп үтә, быуланалар ҡырҙар, игендәр үҫә.* Ә. Вәли.

**2.** Быу сығарыу. □ Затуманиваться, покрываться туманом. ■ *Тирә-як ҡояш нурҙарына ҡойонop быулана.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Быу менән, бөрсөк-бөрсөк дым менән ҡапланыу. □ Потеть, запотевать *(о предметах). Быуланған тәҙрә.* ■ *Өйгә инеп, быуланып боҙланған ҡаштарын һыпырҙы ла, ауыҙына бәйләгән дебет яулығы менән билғауын сисеп, сыуал алдына арҡырылай бәйләтып ҡуйылған ағас урҙаға элеп, туның сисә һалып һәндерәгә ырғытты.* Т. Хәйбуллин.

**БЫУЛАУ (быула-)** *к. ҡар.* **быуландырыу.** *Өйҙө быулап аш ҡайнай.*

**БЫУЛЫҒЫУ (быулыҡ-)** (Р.: задыхаться; И.: be short of breath; suffocate; Т.: boğulmak) *к.*

Тын юлы ҡыҫылып, һулыш туҡтау. □ Задыхаться. *Быулығып үлеү. Йүгереп быулығыу.* ■ *Һул як мөйөштәге яралы һалдат ҡысҡыра, әллә быулыға инде.* И. Ғиззәтуллин. *[Мулдаҡайҙың] танау тишектәре киңәйгән, хәле бөтөп, өнө быулыҡҡан кеше кеүек ахылдап, үҙе ҡурҡыныс хәбәрҙе тиҙерәк әйтә һалып, ашығыс ҡасырға тигән һымаҡ, һүҙҙәрен ҡабалан һөйләне.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Өн быулығыу** (*йәки* **быуылыу**) һүҙ әйтә алмаҫ булыу. □ Лишиться голоса, потерять дар речи.

**БЫУЛЫҠ (быулығы)** (Р.: навесная доска над котлом; И.: sort of pendant plank; Т.: kazan üzerindeki tahta) *и.*

Түшәм быуланмаһын өсөн ҡыйыҡлап яһап, ҡаҙан өҫтөнә аҫып ҡуйылған таҡта. □ Навесная доска над котлом *(предохраняющая потолок от испарений). Ҡаҙан өҫтөнә быулыҡ сөйләү.*

**БЫУМА** (Р.: эпилепсия; И.: epilepsy; Т.: epilepsi, sara) *и.*

**1.** *мед.* Тын быуылып, тотош тартыштырып, ҡапыл ҡолата торған ауырыу. □ Эпилепсия, припадок. *Быума ауырыулы кеше. Уның быумаһы бар.* ■ *[Фәхри – Яҡупка:] Бына бит, күрше, бәлә аяҡ аҫтында ғына ята икән, быумам тотоп, иҫтән яҙғанмын.* Б. Бикбай. *Әсәһенең быңдай быума хәленә төшөүен йыш күрһә лә, Исмәғилдең был юлы үҙәге өҙөлгәндәй булды.* Яр. Вәлиев.

**2.** *миф.* Тынды быуып, ҡапыл ҡолата торған ауырыуҙың эйәһе. □ Дух падучей болезни, эпилепсия. ■ *Быума тотҡанда, кеше, тыны быуылып, ҡапыл ҡолап китә.* Экспедиция материалдарынан.

**БЫУМА БУЛЫУ (быума бул-)** (Р.: болеть эпилепсией; И.: fall ill epilepsy; Т.: epileptik olmak) *к.*

Быума (1) менән ауырыу. □ Болеть эпилепсией, припадком; стать, быть больным падучей болезнью. ■ *Быума булһа, курсакты баштан әйләндереп, һыуға ағыҙғандар.* Экспедиция материалдарынан.

**БЫУМА БЫУЫУ (быума быу-)** (Р.: схватывать *(о припадках)*; И.: suffocate person ill with epilepsy; Т.: sara nöbetine tutulmak) *к.*

**1.** Ауырыуҙың быумаһы башланыу. □ Схватывать *(о припадках эпилепсии).*

**2.** *миф.* Ауырыуҙы быума эйәһе быуыу. □ Удушить больного духом эпилепсии. ■ *Быума быуғанда, кеше, тыны ҡыҫылып, ҡапыл ҡолап китә.* Экспедиция материалдарынан.

**БЫУМА ЙӨТӘЛ** (Р.: коклюш; И.: hooping cough; Т.: boğmaca öksürüğü) *и. мед.*

Тын бирмәй быуып, оҙаҡ йүткергән йүтәл; сәсәтмә. □ Коклюш; астматический кашель. ■ *[Сәлихтең] әсәһе һаман сирләй. уны быума йүтәл ғазаплай.* Х. Мохтар.

**БЫУМА ҠЫУЫУ (быума ҡыу-)** (Р.: изгонять духа эпилепсии; И.: exorcize an epilepsy-ridden person; Т.: epilepsi ruhunu kovmak) *к. миф.*

Быума эйәһен ҡыуыу йолаһы. □ Изгонять духа эпилепсии. ■ *Быуманы һыйыр тиҙәгенә лә ҡыуалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫУМАЛЫ** (Р.: больной эпилепсией; И.: sick with epilepsy; Т.: saralı) *с.*

Быума ауырыулы. □ Больной эпилепсией, эпилептик. *Быумалы кеше.*

**БЫУМА РӘНЙЕҮЕ** *и.*

**1.** *кар.* **быума 2.** *Быума рәнйеүе тейгән бала.*

**2.** *миф.* Яман көстәрҙән килгән ауырыу. □ Болезнь от нечистой силы. ■ *Быума рәнйеүен йәшен осоғон һорап та бөтөргәндәр.* Башҡорт мифологияһынан.

**БЫУМА ТОТОУ (быума тот-)** (Р.: схватывать *(о припадках)*; И.: epilepsy bout; Т.: sara nöbetine tutulmak) *и. мед.*

**1.** Ҡапыл-ҡапыл быуманан ҡолау. □ Схватывать *(о припадках).* ■ *[Фәхри – Яҡупҡа:] Бына бит, күрше, бәлә аяҡ аҫтында ғына ята икән, быумам тотоп, иҫтән яҙғанмын.* Б. Бикбай.

**2.** *миф.* Быума эйәһе тотоу. □ Схватывание духа эпилепсии.

**БЫУМА ҮЛӘНЕ** (Р.: жабник полевой; И.: sort of a medicinal herb; Т.: filago arvensis) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ҡомло далаларҙа үҫеүсе бер йыллыҡ дарыу үләне. □ Жабник полевой (лат. *Filago arvensis*). *Быума үләне йыйыу.*

**БЫУМА ӘПСЕНЕ** (Р.: заговор эпилепсии; И.: epilepsy exorcism; Т.: sara büyüsü) *и. миф.*

Быума ауырыуын өшкөрөү әпсене. □ Заговор эпилепсии. *Быума әпсене әйтеү.*

**БЫУНАҠ (быунағы)** (Р.: колено; И.: joint; Т.: boğum) *и.*

Өлөш-өлөш булып, бер буйға теҙелеп торған нәмәнең бүлкәттәре араһындағы билдә; быуынтыҡ. □ Колено *(о злаковых). Ҡамыл быунағы. Ҡамыш быунағы.*

**БЫУНАҠЛАНЫУ (быунаҡлан-)** (Р.: образовываться; И.: form (about cereals); Т.: boğumlanmak) *ҡ. бот.*

Быунаҡлыға әйләнеү, быунаҡлы булыу. □ Образовываться, формироваться *(о злаковых растениях). Ҡамыштың һабағы быунаҡланып тора.*

**БЫУНАҠЛАУ (быунаҡла-)** (Р.: образовать колена; И.: form (of cereals); Т.: boğumlamak) *ҡ.*

**1.** Быунаҡ яһау, быунаҡлы итеү. □ Образовать, формировать колена *(о злаковых).*

**2.** Быунағын ҡырҡыу йәки һындырыу. □ Резать или ломать колена *(о злаковых).*

**БЫУНАҠЛЫ** (Р.: коленчатый; И.: consisting of nodes; Т.: boğumlu) *с.*

Быунаҡтарҙан торған. □ Коленчатый. *Быунаҡлы ҡамыл. Быунаҡлы ҡамыш.*

**БЫУЫЛДАУ (быуылда-)** (Р.: жужжать; И.: buzz; Т.: vızıldamak) *ҡ. диал.*

Безелдәү. □ Жужжать. *Иңкеш быуылдай.*

**БЫУЫЛМА I** (Р.: спазм; И.: spasm; Т.: ağrı) *и.*

Тын, ҡан, аш, эсәк юлдарының быуылып, ныҡ ауыртыуы; спазма. □ Спазм, спазма. *Быуылма йүтәл. Тамаҡ быуылмаһы.*

**БЫУЫЛМА II** *и. диал. кар.* **быума.** *Быуылма йонсота баланы.*

**БЫУЫЛТЫУ (быуылт-)** (Р.: прудить; И.: dam; Т.: baraj yapmak) *ҡ.*

Үтә алмаҫлыҡ итеп тоҡкарлау, бикләү. □ Прудить, запруживать. *Тынды быуылтыу. Быуаны быуылтыу.*

**БЫУЫЛЫУ (быуыл-)** *ҡ.*

**1.** *төш. кар.* **быуыу.** *страд. от* **быуыу.** ■ *Бөхтә итеп тегелгән гимнастёрка якиы ҡайыш менән быуылған.* Д. Юлтый.

**2.** Хәрәкәт итә, үтә алмаҫлыҡ булып тоҡкарланыу, бикләнеү. □ Плотно закрываться, закупориваться. *Ҡан тамыры быуылыу. Тын быуылыу.* ■ *Үҙҙәренең ҡапҡа эстәренә барып ингәс тә Фәүзиәнең тыны быуылып, һулыш ала алмай торҙо.* Т. Ғарипова. *Зәкиҙең тамағы быуылғандай итте, күҙенә йәш тығылды, тик ул иламаҫҡа, үҙ һүҙендә ныҡ торорға тырыша ине.* С. Агиш. *Үлем алдындағы һымаҡ, уның тыны быуылды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Аға алмаҫлыҡ булып һыу юлы кәртәләнеү. □ Прудиться, запрудиться. *Быуылып ятҡан һыу.* ■ *Шарлап йүгерә аҡҡан Һүлтан йылғаһы ла юлы быуылғанға асыуланып ярға бәрелә, алдына дошман һөңгөһө булып*

*төшкән таш-тупрактарҙы этеп, төртөп, йырып ебәргәндәй була.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Тын юлы ҡыҫылып, һулыш туҡтау. □ Задыхаться, давиться. *Быуылып ҡолау. Быуылып үлеү.*

**5.** Тын ала алмау. □ Задыхаться. *Быуылып көлөү. Быуылып йүткереү.* ■ *Быуылып илай [әбей], быуылып-быуылып илай ҡайғылары ташып барғанға.* Х. Ҡунаҡбай.

**6.** *күсм.* Көслө хискә тулышыу. □ Переполняться, наполняться *(чувствами). Күҙ йәшенә быуылыу.* ■ *Ул [Зәлифә] эсендәге бөтә ҡайғыға быуылып. Сафура менән бергә иланы.* Һ. Дәүләтшина. *Ишекте шым ғына асып индем дә тыуған өйҙөң таныш хуш еҫтәренән башым әйләнеп, күңелем тулыуҙан һушым быуылып, мөйөшкә һыйындым.* Г. Ғиззәтуллина.

**БЫУЫМ** (Р.: приспособление для ловли рыб; И.: fishtacl; Т.: balık tutma cihazı) *и.*

Балыҡ тотоу өсөн эшләнгән ҡулайлама. □ Приспособление для ловли рыб.

**БЫУЫН I** [дөйөм төрки *буғ-ун* ‘быуын’] (Р.: сустав; И.: joint; Т.: eklem) *и. анат.*

**1.** Кеше, йәнлек организмындағы һөйәктәрҙең йәки кимерсәктәрҙең ҡуҙғалмалы булып, бер-беренә тоташҡан, ялғанған урыны. □ Сустав. *Бармаҡ быуыны. Бәкәл быуыны. Терһәк быуыны. Тубыҡ быуыны. Быуын сығыу. Быуын ултыртыу. Быуын һыҙлау.* ■ *Оҙон юлдар уның быуындарын, елек һөйәктәрен талдырған.* Б. Вәлид. *Өс саҡрым араны тотош тигәндәй йүгереп үткән Байрас, ҡапыл быуындары һығылып киткәндәй булып, түтәл янына ултырҙы.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Тәндәге көс, хәл. □ Сила, мощь. *Быуын бөтөү. Быуын ҡалмау.* ■ *Күпме генә серәшеп алға ынтылмаһын, быуындары йомшап, тигеҙ ерҙә абына ла китә Ирназар.* Ә. Хәкимов. *Быуындарыңды ҡатыр, рухыңды нығыт!* Р. Камал.

**3.** *бот.* Башаҡлылар һабағын, ҡайһы бер үҫемлек олонон өлөш-өлөшкә бүлеп торған урын. □ Колено; узел. *Бамбук ағасының быуыны. Ҡамыш быуыны.* ■ *Кисәгенән матур көн башлана, бер быуынға ҡалҡты ужымдар.* С. Кулибай.

**4.** *тех.* Бер буйға теҙелеп, өлөш-өлөш булып торған нәмәнең бер бүлкәте. □ Звено. *Сынйыр быуыны. Торба быуыны. Ракета быуыны.* ■ *Пароход артынан ҡала барған бейек тулҡындар һалды быуындары менән бәүетә.* Ж. Кейекбаев.

**5.** Ҡатмарлы телмәр йәки көйҙөң, йырҙың айырым-айырым өлөштәре. □ Колено. *Ритмик быуын.* ■ *Тәүгеһенең йыры һигеҙ быуын, ә икенсеһе ике быуындан арттыра алмай .., — ти карт һандуғастар тынған арала.* Ә. Чаныш.

**6.** *мат.* Сикләүһеҙ унарлы кәсерҙәге ҡабатланып килгән һандар төркөмө. □ Член. *Оҡшаш быуындарҙы берләштереү.*

**7.** *миф.* Тормош бәйләнешен, өҙөкһөҙлөгөн белдергән тән өлөшө. □ Сустав; мифологизированная часть тела, символ взаимосвязи, непрерывности жизни. *Быуын нығыу. Быуын ҡороу.*

♦ **Быуын бушау** (*йәки* **бөтөү, йомшарыу**) хәлһеҙләнеү. □ Ослабеть, обессилеть. ■ *Сабый ҡысҡырғанын сыҡҡан был арбаусы моң Фәүзиәне саҡ аяҡтан йыҡманы: быуындары бушап, әкрен генә иҙәнгә сүгәләй башланы.* Т. Ғарипова. *Ҡыҙыҡайҙың шунда уҡ быуыны бөттө, һыны ҡатты.* Ф. Иҫәнғолов. *Көтмәгән ауыр ҡайғыны ишетеп, Кәримдең быуындары бушаны.* Я. Хамматов. **Быуынға төшөү** 1) хәлде алыу, хәлһеҙләндереү. □ Обессилить, ослабить. *Ҡымыҙ эскәйнем, быуынға төштө.* ■ *Урман эше еңел эш түгел, ирмен тигән ирҙәрҙең дә быуынына төшә ул, — тип дауам итте Хикмәттең атаһы Рахман.* Х. Ғиләжев; 2) бер нәмәне тылҡып, кешенең йәненә тейеү, маҙаһын ҡоротоу. □ Уморить, утомить; донимать. ■ *Атай, ат алып бир, тип [улы] атаһының быуынына төшә.* Әкиәттән. *Йә йәнеңде, йә көтөүеңдән өс яҡшы ат һайлап бирәһең! — тип быуынына төшәләр [һыбайлылар Насырҙың].* М. Буранғолов. *[Мәғфүрә:] Еңгә, бер уҡ шуны инәйемдән һорап ҡара әле, миңә уҡып торорға бирмәҫ микән? — тип бы-*

*уынына төштө.* Һ. Дәүләтшина. **Быуынға ултырыу** 1) буйға үҫеү, быуын хасил итеү (*игенгә карата*). □ Образоваться *(о колене у злаковых). Арыштар инде быуынға ултырҙы.* И. Насыри; 2) буйға үҫеп нығыныу, эш эшләр йәшкә етеү; көскә ултырыу. □ Окрепнуть. ■ *Минең атайымдың — заманында районыбыҙҙа данлыклы балта оҫтаһы булған Арслан ҡарттың — һүҙе менән әйткәндә, ирҙең .. быуынға ултырған, ҡулында тимер ереткән сағы.* З. Биишева; 3) хужалыкты нығытыу, хәлләнеү. □ Улучшать своё положение, крепнуть. ■ *[Гәрәй] пар тирмәнен кабат ҡотайып, быуынға ултырып алған Иван Лесинға һатты.* Б. Бикбай. **Быуынға һикереү** *диал. кар.* **быуынға ултырыу 1.** ■ *Юлдың ике яғында ла инде быуынға һикереп килгән бойҙай баҫыуҙары ята.* Ә. Вәли. **Быуынға һуғыу** *шул ук* **бәкәлгә һуғыу** (*кар.* **бәкәл**). **Быуынды алыу** 1) хәлде бөтөрөү, арытыу. □ Утомить, измотать. ■ *Тубыктан ала ҡар йырмаслап текә тауға артылыу .. быуынды ала.* Н. Мусин. *Анау Бәләбәй тауҙарын йөк менән менеү аттың ярты быуынын ала.* Х. Ғиләжев; 2) дәртте һүндереү, эшкә-тормошҡа ынтылышты ҡайтарыу, йәшәр көстө бөтөрөү. □ Утомить, измотать. ■ *Һәләкәткә дусар ителеү уйы [Котлоярҙың] быуынын алған, ышанысын ҡайтарған.* М. Минһажетдинов. **Быуынды ҡырҡыу** тормош хәлен ҡаҡшатыу. □ Выбивать из колеи. **Быуын ҡаҡшау** 1) көс, хәлдән яҙыу, хәлһеҙләнеү. □ Обессилеть, ослабеть. *Ҡурҡыуымдан быуыным ҡаҡшаны;* 2) хужалыкта, ил араһында көсһеҙ булып ҡалыу. □ Обессилеть, ослабеть. ■ *Ҡаҡшаны быуыны, тамам ҡаҡшаны, элек бит урамға һыймаҫтай булып йөрөй торғайны ул [Гәрәй].* Б. Бикбай. **Быуын** (*йәки* **аяҡ быуыны) ҡалтырау** ҡурҡыуға төшөү; ҡаушау. □ Испугаться, растеряться. ■ *[Кәләмбай:] Быуындарым ҡалтырап ҡаушаным да киттем.* Т. Хәйбуллин. **Быуын ҡатып көлөү** бик ихлас итеп, нык көлөү; эс ҡатып көлөү. □ Заливаться смехом. ■ *Ағалары унан [Кейеҙбайҙан]: «Тотторған, ти, ат һиңә ҡойроғон», — тип, быуындары ҡатып көлдө, ти.* Әкиәттән. **Быуын ҡороу** бик нык арыу, хәлдән тайыу. □ Выбиться из сил. ■ *[Баян:] Мин тупһа аша өйгә ингәс тә, быуыным ҡороп йығылып киттем.* М. Әүәзов. **Быуын нығыу (ҡатыу)** 1) буйға етеп нығыныу; көскә ултырыу. □ Встать на ноги, окрепнуть. ■ *Етмәгәйне әле ҡатып быуындар ҙа, ҡылыс айкап яу утына ташландык.* Х. Ғиләжев. *[Йәнбирҙе:] Икегеҙ ҙә, улдарым, күҙебеҙҙең нурҙары; тешәр сағығыҙ үтмәгән, быуыныгыҙ ҡатмаған...* «Урал батыр»; 2) нығыныу, көсәйеү. □ Входить в силу, окрепнуть. **Быуын таралыу** тән иҙерәп, ойоу. □ Расслабиться. ■ *Йылыла малайҙарҙың быуыны таралып, күҙҙәре үҙенән-үҙе йомола башланы.* Ф. Иҫәнғолов. **Быуыны йомшаҡ** эшкә булдыҡлылығы етмәгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Недостаточно крепкий, слабоватый *(о человеке).* **Ҡырҡ быуынынан турап, утҡа һалһаң да үс ҡанмаҫ** ҡаты асыуҙы белдергән әйтем. □ *досл.* Даже если разрежешь его сорок суставов и бросишь в огонь, и то не останешься довольным *(выражает гнев).* ■ *[Сурағол:] Ҡан илатҡан был түрәләрҙе ҡырҡ быуынынан турап утҡа һалһаң да үс ҡанмаҫ.* Т. Хәйбуллин. **Әл быуын** хәлһеҙ, кәрһеҙ. □ Слабый, бессильный *(физически).*

**БЫУЫН II** (Р.: поколение; И.: generation; Т.: kuşak) *и.*

**1.** Баҫҡыс-баҫҡыс килгән туғанлыҡтың бер үк кимәлендә торған кешеләр. □ Поколение. ■ *Тереклек донъяһындағы йән эйәләренең иһә һәр кайһыһының үҙ ғүмер юлы: яҡты донъяға килә торалар, яңы быуынға яңы ғүмер бүләк итеп, китә торалар.* Н. Мусин. *Килер быуын, һеҙҙең икегеҙҙе лә ырыу башлыҡтары һанап, даныгыҙҙы оҙаҡ йылдарға һаҡлар.* «Ҡуҙыйкүрпәс».

**2.** Бер осорҙа йәшәп, йәш араһы яҡын булған кешеләр. □ Поколение. *Бер быуын кешеләре. Йәш быуын. Оло быуын. Киләсәк быуын.* ■ *Ағиҙелкәй, һинең буйҙарыңда нисә быуын ғүмер кисергән!* Р. Ниғмәти. *Ниндәй бәхетле быуын бит һеҙ!* З. Биишева.

**3.** Кеше ғүмеренең билдәле дәүере. □ Определённый отрезок жизни человека. ■ *Үҙ быуынында күпте күргән, күпте ишеткән әлеге Әхмәҙулла бабай менән беҙ текә .. ҡая янында ултырабыҙ.* Ә. Вахитов.

**4.** *миф.* Тормош мәңгелеген һәм өҙөкһеҙлөгөн белдереүсе быуын. □ Поколение; символ непрерывности, вечности жизни. *Быуындан быуынға тапшырыу.*

**БЫУЫН III** *и. диал. ҡар.* **быуа II, 1.** *Быуын быуыу.*

**БЫУЫН АРАҺЫНАН ҮҪЕҮ (быуын араһынан үҫ-)** (Р.: расти; И.: sprout; Т.: çıkmak) *ҡ. бот.*

Үҫемлек һабағының быуын араһы туҡымаһы иҫәбенә үҫеүе. □ Расти *(о вставочных ростках). Быуын араһынан үҫкән һабаҡ.*

**БЫУЫН АЯҠЛЫ ҮРМӘКСЕ** (Р.: паук коленчатоногий; И.: sea spider; Т.: deniz örümcekleri) *и. зоол.*

Быуынтыҡ аяҡлы умыртҡаһыҙ диңгеҙ бөжәге. □ Паук коленчатоногий (лат. *Pantopoda*). *Быуын аяҡлы үрмәксе ауы.*

**БЫУЫНДАШ** (Р.: современник; И.: compatriot; Т.: çağdaş) *и.*

*Кем менәндер* бер быуын тәшкил итеүсе, замандаш. □ Современник. *Быуындаштар ҡоро.*

**БЫУЫН ҠАЙМЫҒЫУ (быуын ҡаймыҡ-)** *ҡ. ҡар.* **быуын сығыу.** *Быуыным ҡаймығып дауаханала яттым.*

**БЫУЫН ҠАТЫУЫ** (Р.: неподвижность суставов; И.: joint's immobility; Т.: ankiloz) *и.*

Быуындарҙы ҡуҙғатыу һәләтен юғалтыу. □ Неподвижность суставов *(от старости). Өләсәйем быуын ҡатыуынан яфалана.*

**БЫУЫНЛАНЫУ (быуынлан-)** (Р.: образовывать коленчатые сочленения; И.: form cranked nodes; Т.: boğumlanmak) *ҡ.*

Быуын (I, 3) барлыҡҡа килтереү *(башаҡлы игенгә, ҡайһы бер олонло үҫемлеккә ҡарата).* □ Образовывать коленчатые сочленения *(по отношению к растениям). Арыш быуынлана башланы.*

**БЫУЫНЛАНЫШ** (Р.: сочленение; И.: joint; Т.: eklem) *и. анат.*

Һөлдә һөйәктәренең ҡуҙғалмаҫлыҡ йәки бер аҙ ҡуҙғалырлыҡ булып үҙ-ара тоташыуҙары, ялғаныуҙары; ялғаныш. □ Сочленение.

**БЫУЫНЛАУ (быуынла-)** (Р.: разделывать по суставам; И.: cut by joints; Т.: boğumlamak) *ҡ.*

Быуынынан айырыу, быуынлы еренән ҡырҡыу. □ Разделывать по суставам *(например, тушу барана). Һарыҡ түшкәһен быуынлау.*

**БЫУЫНЛАШЫУ (быуынлаш-)** (Р.: сочлениться; И.: joint; Т.: eklemlenmek) *ҡ.*

Быуын (I, 1) булып тоташыу. □ Сочлениться *(о костях). Һөйәктәр быуынлашып тора.*

**БЫУЫНЛЫ** (Р.: состоящий из звеньев; И.: consisting of joints; Т.: boğumlu) *с.*

Быуындарҙан (I, 4) торған. □ Состоящий из звеньев. *Быуынлы торба. Күп быуынлы ракета.*

**БЫУЫНЛЫ СӘСКӘ** *и. бот. ҡар.* **быуын сәскә.** *Быуынлы сәскә орлоғо.*

**БЫУЫНЛЫ ТӨЛКӨГОЙРОҠ (төлкөгойроғо)** (Р.: лисохвост коленчатый; И.: foxtail grass; Т.: yassi tilkikuyruğu) *и. бот.*

Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған оҙон тамырлы башаҡлы үҫемлек. □ Лисохвост коленчатый (лат. *Alopecurus geniculatus*). *Быуынлы төлкөгойроҡ башағы.*

**БЫУЫНЛЫ ҺАБАҠ (һабағы)** (Р.: стебель коленчатый; И.: cranked stem; Т.: boğumlu sap) *и. бот.*

Быуындарҙан торған һабаҡ төрө. □ Стебель коленчатый. *Ҡаҙ үләне быуынлы һабаҡтарҙан тармаҡланып үҫә.*

**БЫУЫН СЫҒЫУ (быуын сыҡ-)** (Р.: вывихнуться; И.: dislocate; Т.: eklem çıkmak) *ҡ.*

Һөйәктәрҙең быуын менән ҡапланған өлөшөнөң бер-береһенә тейеү нөктәһен юғалтып үҙ урынынан ҡуҙғалыуы. □ Вывихнуться *(о суставе). Аяҡ быуыны сығыу.*

**БЫУЫН СӘСКӘ** (Р.: цикорий; И.: chicory; Т.: hindiba) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған, үҙәкле, оҙон тамырлы, ҡаты һабаҡлы, башлыса зәңгәр сәскәле күп йыллыҡ үҫемлек. □ Цикорий (лат. *Cichorium*). *Быуын сәскә орлоғо.*

**БЫУЫН ТАЙЫУ (быуын тай-, быуын тая)** *ҡ. кар.* **быуын сығыу.** *Аяҡ быуыным тайған.*

**БЫУЫНТЫҠ (быуынтығы)** (Р.: колено; И.: joint, node; Т.: boğum) *и.*

**1.** *бот.* Башаҡлылар һабағының, ҡайһы бер үҫемлек олононоң быуын кеүек төйөрләнеп торған ере; быунаҡ. □ Колено, узел. *Ҡамыш быуынтығы. Үлән һабағының быуынтығы.*

**2.** *зоол.* Ҡайһы бер умыртҡаһыҙ хайуандарҙа кәүҙәнең бер бүлеге йәки аяҡтарҙың состав өлөшө. □ Членик. *Быуынтыҡ аяҡлы хайуандар.*

**БЫУЫНТЫҠ АЯҠЛЫЛАР** (Р.: членистоногие; И.: arthropoda; Т.: eklembacaklılar) *и. зоол.*

Кәүҙәләре быуынтыҡланып, симметрик ике яртыға (сегменттарға) бүленгән, тәндәре хитин менән ҡапланған, аяҡтары ҡабатланып килгән бер тигеҙ өлөштәрҙән торған умыртҡаһыҙ хайуандарҙың иң юғары төрө; мәҫәлән, ҡыҫала һымаҡтар, үрмәксе һымаҡтар һ. б. □ Членистоногие, суставчатоногие (лат. *Arthropoda*). *Быуынтыҡ аяҡлы хайуандар.*

**БЫУЫНТЫҠЛАНЫУ (быуынтыҡлан-)** (Р.: образовывать коленчатые сочленения; И.: form cranked nodes; Т.: boğumlanmak) *ҡ.*

Быуынтыҡлы булыу. □ Образовывать коленчатые сочленения *(по отношению к растениям). Ҡамыш быуынтыҡлана башлаған.*

**БЫУЫНТЫҠЛЫ** (Р.: коленчатый; И.: articulate; Т.: boğumlu) *с.*

Быуынтыҡтарҙан (1) торған. □ Коленчатый, членистый. *Бамбуктың быуынтыҡлы олоно.*

**БЫУЫН УЛТЫРТЫУ (быуын ултырт-)** (Р.: вправлять сустав; И.: set a joint (right); Т.: eklemi yerine koymak) *ҡ.*

Ҡаймыҡҡан быуынды үҙ урынына ҡуйыу. □ Вправлять сустав. *Имсе быуын ултыртыу менән дә булыша.*

**БЫУЫНҺЫҘ** (Р.: слабый; И.: weak; Т.: güçsüz) *с.*

Хәлһеҙ, көсһөҙ. □ Слабый, бессильный *(физически).* Быуынһыҙ булыу. *Быуынһыҙ бала.* ■ *Бирмәҫ быуынһыҙ булып иларға кереште, ти.* Әкиәттән. *Ҡыҙ әлеге быуынһыҙ итерлек ҡарашын уға тағы бер атып алды.* Н. Мусин.

♦ **Быуынһыҙ булып көлөү** көлөүҙән хәлһеҙләнеү. □ Смеяться. **Быуынһыҙ ергә бысаҡ һалыу** булмаҫтай нәмәне талап итеү. □ Приставить нож к горлу *(требовать невозможного).*

**БЫУЫНҺЫҘЛАНЫУ (быуынһыҙлан-)** (Р.: становиться слабым; И.: weaken; Т.: güçsüzleşmek) *ҡ.*

Тәнде тота алмаҫ булыу; бушаҡланыу. □ Становиться слабым, бессильным, слабеть, обессилевать. ■ *Быуынһыҙланып тегеләй-былай сайҡала.* И. Ғиззәтуллин. *Быуынһыҙланып, балаһының алдына, бысраҡ тротуарға тубыҡланды.* Г. Ғиззәтуллина.

**БЫУЫНЫУ (быуын-)** *ҡ. ҡайт.* от **быуыу 1, 2.** *возвр. от* **быуыу 1, 2.** ■ *Ебәк кенә билғау — буй ука, быуынһам да тормай билемдә.* Халыҡ йырынан.

**БЫУЫН ШЕШЕ** (Р.: артрит; И.: arthritis; Т.: artrit) *и. мед.*

Быуын ауырыуы. □ Артрит. *Быуын шешенән яфаланыу.*

**БЫУЫП ҮЛТЕРЕҮ (быуып үлтер-)** (Р.: удушить; И.: suffocate; Т.: boğup öldürmek) *ҡ.*

Үлем язаһының борон ҡулланылған бер ысулы. □ Удушить *(один из древних способов смертной казни).* ■ *Атмағыҙ, киҫмәгеҙ, һеҙ уны быуып үлтерегеҙ.* Д. Юлтый.

**БЫУЫУ (быу-)** (Р.: затягивать; И.: tighten; Т.: sıkmak) *ҡ.*

**1.** Бау йәки башҡа нәмә менән уратып ҡыҫыу. □ Затягивать, перевязывать. *Ҡулды быуыу. Быуып бәйләү. Сумаҙанды быуып бәйләү.* ■ *Ыштанымды сестра апай яра*

*бәйләй торған оҙон тар марля менән быуып ҡуйҙы.* М. Кәрим.

**2.** Билгә ҡайыш, билғау тағыу, уратып бәйләү. □ Подпоясывать. *Билде быуыу. Ҡайыш быуыу.* ■ *Сәлмән .. тороп, йәһәт кенә сәкмәнен кейеп, билен һығып быуған.* Әкиәттән. *Доньяға Күсәк бала тыуҙы инде, биленә алмас ҡылысын быуҙы инде.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Тотош аҡтан кейенеп, билен көмөшлө ҡәмәр менән быуып ебәргән Аҙнагол, ҡоласын киң йәйеп, кәмәлә аяғүрә баҫып килә.* З. Биишева. *Ә инде ат егеп йөрөгән сағында солан күтәрмәһендә аҡ алъяпҡыс быуған, яулығын артҡа ҡайтарып ябынған ҡыҙ һыны күренгәс, [Төлкөсура] ҡерт итеп ҡалды.* Н. Мусин.

**3.** *Нимәнеңдер* хәрәкәтен тоткарлау. □ Прудить, запруживать. *Йылғаны быуыу. Тонсоу һауа һулышты быуа.* ■ *Зариф ҡарт Муйыллы йылғаһын быуып балыҡ үрсетте.* Б. Бикбай. *Борон, һыу тирмәне ҡороу өсөн, шишмәне бер нисә ҡабат быуып ҡарағандар.* М. Хужин.

**4.** Нығ ҡыҫып, тын юлын бикләү. □ Душить, давить, жать. *Муйынды быуыу.* ■ *Мәскәй ҡапыл Ҡамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә быуа башлаған.* Әкиәттән. *Рамаҙандың йөрәге дарҫлап тибә, тамағын әллә ниндәй ҡоро йүтәл быуып барған кеүек.* Ә. Хәкимов. *Фатима ҡапыл уның алҡымынан һығып алып, ергә йыҡты ла аяуһыҙ быуа башланы.* Б. Бикбай.

**5.** Муйынды һығып үлтереү. □ Душить, давить. *Быуып ташлау.* ■ *Түҙемлектән сыҡҡан крәҫтиәндәр адвокат өйөнә барған, уны быуып ырғытырға уйлаған.* Д. Юлтый. *Бисәһен дә урман ене быуып үлтергән, тип һөйләй торғайнылар.* Д. Юлтый.

**6.** Тынды ҡыҫып, тотош тартыштырып, ҡапыл ҡолатыу *(быумаға ҡарата).* □ Схватывать *(о припадках). Быума быуыу.*

**7.** Тамаҡлау. □ Загрызать, задирать. ■ *Ошо аҙна эсендә генә дүрт-биш һарыҡты бүре быуып китте.* М. Тажи. *Бүре лә быуып йыҡмай бит шул мәлғүнде!* М. Кәрим.

**8.** *күсм.* Ирек бирмәй ҡыҫыу; сикләү. □ Душить, давить; притеснять. *Ихтыярҙы быуыу. Теләкте быуыу.* ■ *Нурихановкилеште, шул арала үҙе уйлап алырға өлгөрҙө: әллә дуҫының берәй ваҡыт инициативаһын быуып, үҙе йүнәлеш бирҙеме икән әшендә?* Д. Буләков. *Аслыҡ та, һыуһын да икеһе бер юлы быуып алды мине.* М. Кәрим.

♦ **Бил быуыу** эшкә ихласлыҡ, дәрт, ҙур теләк менән тотоноу. □ Приступить к работе засучив рукава. *Бил быуып эшләү.* **Билде биштән быуып** ҙур ихласлыҡ, дәрт һалып. □ Взяться *за что-л.* с большим желанием, душевным подъёмом. *Билде биштән быуып эшкә тотоноу.* **Быуа быуырлыҡ** бик күп. □ Хоть пруд пруди *(т. е. очень много). Беҙҙә ҡыҙҙар быуа быуырлыҡ.* **Күҙ быуыу** зиһенде томалап, кешенең ихтыярына тәьҫир итеү. □ Околдовывать, гипнотизировать. *Күҙ быуып, аҡсамды алып киттеләр.* **Юлды быуыу** 1) *кемдең* йәки *нимәнеңдер* үтер юлына кәртә ҡуйыу, үтер юлын бикләү. □ Перекрыть дорогу. ■ *Хаммат Байрасты ишеккә ебәрмәй юлын быуҙы.* З. Биишева; 2) *кемдеңдер* эш-тормоштағы иркен кәртәләү. □ Препятствовать *кому-чему.* ● *Яман тыуыр, юлды быуыр.* Мәҡәл.

**БЫХ** (Р.: подражание звуку тяжёлого дыхания; И.: onomatopoeic word; Т.: ses taklidi) *оҡш.*

Ауыр итеп һулыш алғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание звуку тяжелого дыхания. *Быx итеү.*

**БЫХ-БЫХ** (Р.: подражание многократным звукам тяжёлого дыхания; И.: onomatopoeic word; Т.: ses taklidi) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бых иткән тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание многократным звукам тяжёлого дыхания (многокр. от **быx**). *Быx-быx итеү. Быx-быx килеү.*

**БЫХЫЛДАТЫУ (быхылдат-)** *к. йөкм. ҡар.* **быхылдау.** *понуд.* от **быхылдау.** ■ *Малайҙарға етә ҡала: сыбыҡ менән һыҙыра тартып, туйған һыйырҙарҙы быхылдатып, кем уҙармандан саптырып, өйҙәренә алып ҡайталар.* Һ. Дәүләтшина.

**БЫХЫЛДАУ (быхылда-)** (Р.: пыхтеть; И.: puff; pant; Т.: fışnamak) *к.*

Бых-бых итеү, бых-бых килеү. □ Пыхтеть. *Быхылдығын сығыу. Быхылдап йүгереү.* ■ *Ат быхылдап, тыны бөтөп, һыу эсенә сүгә лә башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫХЫУ** *с. диал. кар.* **тыңҡыш II.** *Быхыу танау.*

**БЫШ-БЫШ** (Р.: подражание шёпоту; И.: onomatopoeic word; Т.: fısıl fısıl) *оҡш.*

Шым ғына һөйләгәндә сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание шёпоту, тихой речи. *Быш-быш итеү. Быш-быш килеү.* ■ *Рамазан ҡағыҙ алды ла .. яҙа башланы. Быш-быш килеп уны уҡып ҡараны.* Ф. Иҫәнғолов. *Юлсылар, быш-быш һөйләшеп, ниндәйҙер кәңәш ҡороп алдылар.* М. Кәрим. *Ике дуҫы менән Сара ағас төбөнә килә, быш-быш һөйләй ниҙер үҙе, дуҫтарға ҡарап көлә.* Ф. Рәхимғолова.

**БЫШ-БЫШ ХӘБӘР** (Р.: слухи; И.: gossip; Т.: dedikodu) *и.*

Асыҡтан-асыҡ һөйләмәй, йәшерен генә һөйләнгән хәбәр. □ Слухи, толки. *Ҡолаҡтан ҡолаҡҡа быш-быш хәбәр йөрөй.*

**БЫШҠЫРТЫУ (бышҡырт-)** *ҡ. йөкм. кар.* **бышҡырыу.** *понуд.* от **бышҡырыу.** ■ *Йылҡы малы ятаҡлап ауырыһа, ялынан йәки ҡойроғонан ҡылын алып танауына тығалар. Танауын ҡул менән ҡыҫып тотоп, атты бышҡыртырға тырышалар.* Экспедиция материалдарынан.

**БЫШҠЫРЫНЫУ (бышҡырын-)** (Р.: фыркаться; И.: snort; Т.: homurdanmak) *ҡ.*

Бер ынғай ҡабат-ҡабат бышҡырыу. □ Фыркаться. ■ *Зөлкәрнәйҙең .. аты тибенгеләп, бышҡырынып ҡуйған.* Н. Иҙелбай. *Ҡойолған миләште сүпләргә төшкән һуйырҙар, ҡорҙар йыш ҡына ҡаптырлап осоп күтәрелә, аҙым һайын тиерлек яртылаш ағарған ҡуяндар лапы аҫтынан ялп итеп килеп сығып, аттарҙы ҡолаҡтарын ҡайсылап, бышҡырынырға, хатта ситкә ялтанырға мәжбүр итә.* Н. Мусин.

**БЫШҠЫРЫУ (бышҡыр-)** (Р.: фыркать; И.: snort, sniff; Т.: nefes çıkarma) *ҡ.*

**1.** Шурылдатып танауҙан ҡапыл өрөү *(хайуандарға ҡарата).* □ Фыркать *(о животных). Аттар бышҡыра. Бышҡыра башлау. Бышҡырып ебәреү.* ■ *[Болан] бышҡырып, башын сайҡаны ла ялмап алды ваҡ тал япрағын.* Р. Ғарипов. *Аттар, тояҡ аҫтынан ҡырсынташ осороп, бышҡыра-бышҡыра өйөрөлөп юрта.* Ә. Хәкимов. *Әһә, йылҡылар яланда, буғай, уларҙың кешнәгән, бышҡырған, тупылдап сапҡан тояҡ тауыштары ишетелә.* Н. Мусин. *Һарайғыр бышҡыра-бышҡыра тауға менеп етеүгә, ел ҡаршыға әйләнде.* Т. Ғарипова. *Ҡарт алаша .. аралаш үрелеп, бырх-бырх бышҡырғылап, сиҙәмде тилмереп еҫкәштерә лә йәнә аяғүрә серемгә тала.* Ф. Иҫәнғолов. *Серле урман. .. Ҡайҙалыр сиңерткә сырылдай. Һыйырҙарҙың көйшәгәне, һирәк-һаяҡ, доңғорҙаҡ тауышына ҡушылып, ҡола бейәнең бышҡырғаны ишетелә.* В. Әхмәҙиев. *Тышаулы ат, күгәүендән йөҙәп, башын сайҡай, йыш-йыш бышҡырып.* Ҡ. Даян. *Юлда берәү ҙә һөйләшмәне. Аттар ғына бышҡыра-бышҡыра үргә ынтылдылар.* Ш. Янбаев.

**2.** Бырх итеп ауыҙ-морондан һыу бөркөү *(кешегә ҡарата).* □ Фыркать *(о человеке).* ■ *Булат оҙаҡ итеп бышҡыра-бышҡыра йыуынды.* К. Мәргән. *[Шоғайып] яҡшы йөҙә: тәрәнгә сума, өҫкә сығып, һыу ургылап бышҡыра, тағы ҡолас ташлап йөҙөп китә.* Х. Кәрим.

**БЫШҠЫРЫШЫУ (бышҡырыш-)** *ҡ. урт. кар.* **бышҡырыу.** *взаимн. от* **бышҡырыу.** ■ *Бер минут үттеме, юҡмы — тояҡ тауыштары эргәлә үк дөпөлдәй, ярһыған аттарҙың шаулатып тын алғаны, бышҡырышҡаны ишетелә ине.* Ф. Иҫәнғолов.

**БЫШЛАТЫУ (бышлат-)** *ҡ. диал. кар.* **төтәҫләү.** *Ҡорт бышлатыу.*

**БЫШЛЫҒЫУ (бышлыҡ-)** (Р.: париться; И.: be an a sweat; Т.: terlemek) *ҡ.*

Эҫеләп, бешеп киткәнлектән, ауыр тын алыу; тонсоғоу. □ Париться, упариваться. *Түн кейеп бышлығыу. Йүгереүҙән бышлығыу.* ■ *Мәҙрәсә ғәйәт тығыҙ. Бөтә кеше тиргә батып, бышлығып ултыра.* М. Ғафури. *Шул саҡ ишектән Төлкөсура атылып килеп инде. .. Йүгереүҙән бышлығып, хәбәрен һалды: «Атай,*

*Ҡотлоғужа байҙың йылҡы көтөүен бүреләр баҫҡан!..»* Н. Мусин. *Саба торған атты ҡапыл ҡыуырға ярамай, уның бышлығып, сәсәп ҡалыуы бик мөмкин, ә йәш атта ундай хәлдең булыуы бигерәк тә мөмкин.* Д. Юлтый. *Сығып киткәндә улар [Алһыу менән Гөлгөнә] гөбөргәйелде сумаҙан эсендә ҡалдырҙылар. Бышлығып үлмәһен өсөн, сумаҙандың ҡапҡасын аҙ ғына асып ҡуйҙылар.* С. Агиш.

**БЫШЛЫҠТЫРЫУ (бышлыҡтыр-)** *к. йөкм. ҡар.* **бышлығыу.** *понуд. от* **бышлығыу.** *Эҫелә бышлыҡтырып йөрөтмә баланы.*

**БЫШТЫҠ (быштығы)** (Р.: упитанный, короткошейный; И.: obese person; Т.: şişman) *с.*

Ҡыҫҡа муйынлы, итләс *(кешегә ҡарата).* □ Упитанный, короткошейный *(о человеке). Быштыҡ егет.*

**БЫШТЫР** *с. ҡар.* **ығыш.** *Быштыр кеше.*

**БЫШТЫРЛАУ (быштырла-)** *к. диал. ҡар.* **мыштырлау.** *Эште быштырлап эшләү.*

**БЫШЫЛДАУ (бышылда-)** (Р.: шептать; И.: whisper; Т.: fısıldamak) *к.*

Әкрен генә тауыш менән һөйләү; быш-быш итеү, быш-быш килеү. □ Шептать. *Бышылдап һөйләү.* ■ *[Хәлимов] ауыҙын минең ҡолаҡҡа ҡуйып бышылдай башланы.* Д. Юлтый. *Байрас үҙ янында ултырған Моратшаға бышылдап нимәләр һөйләргә кереште.* З. Биишева. *«Кем унда?» — тип бышылданы Яҡуп. Урам яҡтан Гөлнур сипылдап яуап ҡайтарҙы.* М. Кәрим. *Егет юлға мендә. Кинәт алда ниндәйҙер бышылдау ишетелде.* Ғ. Сәләм. *«Егет, башың иҫән саҡта сығып ҡотол!» — тип бышылдаған был ҡыҙ.* Әкиәттән. *Шул ваҡыт Ләлә лә, атаһының ҡолағына эйелеп, нимәләр бышылданы.* Б. Бикбай. *Аҡ ҡайындың йәшел япраҡтары ҡолағыма ниҙер бышылдай.* Т. Ҡарамышева. *БыҒаса көр тауышлы Фәхри ни өсөндөр бышылдап һөйләшә ине.* А. Ғирфанов.

**БЫШЫЛДАШЫУ (бышылдаш-)** *к. урт. ҡар.* **бышылдау**. *взаимн. от* **бышылдау**. ■ *Көндөҙ ҡояш эҫеһенән йоҡомһораған төҫлө әлһерәп торған ағастар төнгө еләҫлектә әкрен генә бышылдашалар.* Ә. Вәли. *«Ни өсөн шул хәтле ҡиәфәтле ул?» — тип апайымдан һорағайным, беҙҙең бышылдашҡанды Азамат ағай ишеткән дә барған.* Й. Мостафин.

**БЫШЫМ** (Р.: мягкая обувь с кожаной головкой; И.: kind of soft footwear; Т.: ayakkabı türü) *и.*

**1.** Бәкәл тәңгәленән бөрөп бәйләнә торған ҡыҫҡа киндер ҡуныслы йомшаҡ күн ҡата. □ Мягкая обувь с кожаной головкой и холщовыми голенищами. *Бышым кейеү.*

**2.** Ҡата, ҡынйыраҡ кеүек аяҡ кейемдәренең туланан йәки киндерҙән тегелгән, бөрөп бәйләп ҡуймалы ҡунысы. □ Холщовый верх национальной обуви. *Тула бышым. Ҡынйыраҡ бышымы.* ■ *Бабай ике сәңгел йыҡҡан, әбей ике биләү һуҡҡан, бабай ике бишек бөккән, әбей ике бышым теккән.* Халыҡ ижадынан.

**БЫШЫМ-БЫШЫМ** (Р.: тайком; И.: secretly; Т.: gizli) *р.*

Аҫтыртын, йәшерен. □ Тайком, тайно, скрытно, втихомолку. *Бышым-бышым эш итеү.* ■ *[Яубикә:] Аҡмырҙа ла шул ҡаҫҡындар менән бышым-бышым ғына эш итә.* Б. Бикбай.

**БЫШЫМЛЫ** (Р.: с холщовыми голенищами; И.: having linen tops (of a boot); Т.: keten konçlu) *с.*

Бышымы (2) булған. □ С холщовыми голенищами. *Бышымлы ҡата. Бышымлы сабата.*

**БЫШЫМЛЫ ҠАТА** (Р.: обувь с холщовыми голенищами; И.: kind of soft footwear; Т.: ayakkabı türü) *и. этн.*

Бышымы (2) булған күн аяҡ кейеме. □ Кожаная обувь с холщовыми голенищами.

**БЫШЫМЛЫ ҠЫНЙЫРАҠ (ҡынйырағы)** (Р.: обувь из лошадиной шкуры; И.: horse-skin footwear; Т.: ayakkabı türü) *и. этн.*

Ат тиреһенән тегелгән аяҡ кейеме. □ Обувь из лошадиной шкуры. *Бышымлы ҡынйыраҡ тегеү. Бышымлы ҡынйыраҡ кейеү.*

**БЫШЫМЛЫ САБАТА** (Р.: лапти с пришитым сукном по краям; И.: bast shoe; Т.: ayakkabı türü) *и. этн.*

Ҡалын йүкәнән үрелеп, туҙ бауҙар менән ҡапланған, ҡырҙарынан бау менән тартыла торған киндер тегелгән сабата. □ Лапти, сплетённые из толстых полос лыка, прикрытых берестяными лентами; вверху по краю к ним пришито сукно, затягивающееся шнурком. *Бышылмлы сабата үреү.*

**БЫШЫР-БЫШЫР** *окш. ҡар.* **шыбыр-шыбыр.** ■ *[Алтынбай ҡарт:] Нимәһе, мал урларға йыйынған кеүек, бышыр ҙа бышыр?! Ул ни тигән эш?!* З. Ураҡсин.

**БЫЯҠ (быяғы)** (Р.: эта сторона; И.: this side, this way; Т.: bu taraf) *и. ыҡҫ. ф. һөйл.*

Был яҡ. □ Эта сторона. ■ *Ҡыу, тиҙерәк ҡыу! Быяҡҡа ҡайыр!* Я. Хамматов.

**БЫЯЛА** [фарс. پیاله 'пияла; чаша'] (Р.: стекло; И.: glass; Т.: cam) *и.*

**1.** Кварц ҡомон иретеп, махсус ысул менән эшкәртеп яһаған үтә күренмәле ҡаты нәмә. □ Стекло. *Аҡ быяла. Күҙлек быялаһы. Тәҙрә быялаһы. Быяла кисәге. Быяла заводы. Быяла һауыт.* ■ *Таиба әбей, тирләп тонған тәҙрә быялаһы үтә ниҙәрҙер күрергә теләгән һымаҡ, бик оҙаҡ тышҡа ҡарап, тынып ултырҙы.* З. Биишева. *Ауылды тулған ай яҡтыһы ҡаплаған. Уның һалҡын нурҙары тәҙрә быялаларында ялтырай.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне, икһеҙ-сикһеҙ булып йәйелеп ятҡан диңгеҙ аша бөгөлөп-һығылып торған быяла күпер һалынды, ти.* Халыҡ ижадынан. *Иртән тороуға батшаның иҫе-аҡылы китеп тора, ти: Көмөшбайҙың йортонан алып уның һарайына саҡлы быяла күпер һалынған, күперҙең ике яғында ике шишмә ағып ята, ти.* Әкиәттән. *Сафа .. Гөлнур алдында бөгөлөп-һығылып күҙлек быялаларын һөртөштөрҙө.* М. Тажи.

**2.** *диал. ҡар.* **тәҙрә.** *Быяланан тышҡа күҙ һалыу.*

**БЫЯЛА КҮБӘЛӘГЕ** (Р.: стеклянница; И.: hornet moth; Т.: cam kanatlılar) *и. зоол.*

Емеш ағастары ҡороткосо булған үтә күренмәле ҡанатлы күбәләк. □ Стеклянница (лат. *Sesiidae*). *Быяла күбәләге ҡанаттары.*

**БЫЯЛА ҠАНАТ** *и. ҡар.* **быяла күбәләге.** *Быяла ҡанаттар сәскә ҡуна.*

**БЫЯЛАЛАНЫУ (быялалан-)** (Р.: становиться стеклянным; И.: become lifeless; Т.: gözleri donmak) *ҡ.*

Туң, мәғәнәһеҙ, бәғерһеҙгә әйләнеү *(күҙҙәргә ҡарата).* □ Становиться стеклянным, безжизненным, неподвижным, жестоким *(о глазах).* ■ *Старостаның .. күҙҙәре быялаланды, шәмәрҙе.* Ж. Кейекбаев.

**БЫЯЛАЛАУ (быялала-)** (Р.: стеклить; И.: glaze; Т.: camlamak) *ҡ.*

Быялалы итеү, быяла ҡуйыу. □ Стеклить, застеклять, остеклять. *Тәҙрәне быялалау.* ■ *Ләкин әле яңы йортта эш күп һаман да. Тәҙрәләрҙе лә кәрәк быялаларға.* М. Сөндөклө.

**БЫЯЛАЛЫ** (Р.: застеклённый; И.: glazed; Т.: camlı) *с.*

Быяла ҡуйылған. □ Застеклённый, со стёклами. *Быялалы шкаф. Быялалы ишек.* ■ *Түрбаш яғына сыға торған ишек төбөндәрәк быялалы шкаф ултыртылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Юлдаш, серле шыбырлап, бүлмәнең бер мөйөшөндә яҙыу өҫтәле янында торған быялалы шкафҡа күрһәтте.* З. Биишева.

**БЫЯЛА МАМЫҠ (мамығы)** (Р.: стекловолокно; И.: glass fibre; Т.: cam elyafı) *и.*

Быяла саңы ҡушып, мамыҡҡа оҡшатып яһалған синтетик материал. □ Стекловолокно. *Быяла мамыҡ сәнәғәте.*

**БЫЯЛА СҮС** *и. ҡар.* **быяла мамыҡ.** *Быяла сүс етештереү.*

**БЫЯЛАСЫ** (Р.: стекловар; И.: glassblower; Т.: camcı) *и.*

**1.** Быяла ҡайнатыусы. □ Стекловар, стеклодув.

**2.** Ишек, тәҙрәгә быяла ҡуйыусы, быяла ҡырҡыусы. □ Стекольщик, стеклорез. ■ *Бик ярата был ҡарт үҙ эшен, һөйәк һаплы алмаз ҡулында. Бер кем әйтмәй ләкин йылы һүҙ ошо быяласы турында.* М. Сөндөклө.

**БЫЯЛАҺЫҘ** (Р.: без стекла; И.: without window glasses; Т.: camsız) *с.*

Быялаһы булмаған. □ Без стекла. *Быялаһыҙ тәҙрә.* ■ *Быялаһыҙ тәҙрәле, һалкын, ташландык өйҙә ятыу онотолдо.* Д. Юлтый.

**БЫЯУ** *и. диал. ҡар.* **буяу.** *Аҡ быяу. Зәңгәр быяу. Быяу һатып алыу.*

**БӘ, бә-ә-ә** (Р.: ме; И.: imitation of bleat(ing); Т.: me) *оҡш.*

Кәзә, һарыҡ баҡырған тауышты белдергән һүҙ. □ Ме *(подражание блеянию коз, овец). Бә-ә-ә итеү.* ■ *[Бүре] кәзә булып мыҡырлап ебәргән: «Бә-ә-ә, бә-ә-ә!.. Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ!»* Әкиәттән.

**БӘБЕКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **бәпес.** ■ *[Өләсәһе — Гүзәлгә:] Эшләргә өйрәнерһең әле, рәхәтләнеп үйнап ҡал, бәбекәйем.* Ф. Рәхимғолова.

**БӘБЕРҘӘК (бәберҙәге)** *и. диал. ҡар.* **ҡатмар.** ■ *[Гөльямал] оҙон бәберҙәкле сыбар күлдәк өҫтөнән тәңкәләр менән тулған уҡалы елән кейгән.* Я. Хамматов.

**БӘБЕРКӘ** [рус. *оборка*] (Р.: оборка; И.: frill; Т.: fırfır) *и. диал.*

Балитәк; ҡатмар. □ Оборка. ■ *[Гөльямал] байрамдарҙа ғына кейә торған бәберкәле күлдәге өҫтөнән күп мәрйенле түшелдереген һалып, сәсен икегә ярып үрҙе.* Я. Хамматов.

**БӘБИТӘК (бәбитәге)** *и. диал. ҡар.* **балитәк.** *Бәбитәкле күлдәк.*

**БӘБӘЙ I** *и. диал. ҡар.* **бәпес.** ■ *Үҙегеҙҙе бәбәй урынына күнләйем.* И. Насыри.

**БӘБӘЙ II** *и. диал. ҡар.* **балитәк.** *Күлдәк бәбәйҙәре.*

**БӘБӘЙ ИТӘК (итәге)** *и. диал. ҡар.* **балитәк.** ■ *Өйҙән йәш кенә ҡыҙмы, ҡатынмы сыҡты. Ул бәбәй итәкле күлдәк .. кейгән.* Н. Мусин.

**БӘБӘЙЛӘҮ (бәбәйлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бәпесләү.** ■ *[Айтуғанов көлөп ҡуйҙы:] .. Батталовтың ҡатыны бәбәйләне. Шуға ашығам.* Р. Ғабдрахманов.

**БӘБӘК I (бәбәге)** [боронғо төрки *бәбә-к* 'бала'] (Р.: зародыш; И.: germ; Т.: bebek) *и.*

**1.** Үҫә торған һәр нәмәнең башланғыс яралғыһы. □ Зародыш, зачаток. *Теш бәбәге.*

**2.** Яңы ғына шытып сыҡҡан йәш үҫенде. □ Ростки. *Үҫемлек бәбәге.* ■ *Көн күрергә ынтылған ыуыҙ ғына бәбәк тә ниндәй ҡаты асфальтты тишеп сыға.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Сәскәнең үҙәгендәге емешлек. □ Плодник, пестик. *Бәбәк ярыу. Сәскә бәбәге.* ■ *[Бал ҡорто] оҙон томшоғон сәскәнең һары һеркәле бәбәгенә батырҙы.* Ф. Иҫәнғолов. *Сәскәләрҙең бәбәктәре һөйләйҙәр миңә: «Беҙҙең ерҙә тик матурлыҡ, тик йәшәү еңә!»* Ғ. Әмири. *Сәскәләрҙең алһыу-ҡыҙыл бәбәктәрендә ынйы бөртөктәре һымаҡ эре ысыҡ тамсылары йылтырай.* Ә. Вәли. *Умырзая сәскәләренең бәбәктәренә .. иртәнге тамсылар ҡунған.* Ф. Әсәнов.

**4.** Орлоҡто, бороно йомоп торған көп. □ Оболочка, кожура семян. ■ *Бәбәктәрен тишеп ҡояш нурына ынтыла бөрөләр.* М. Тажи.

**5.** *диал. ҡар.* **бәпкә II.** *Бәбәк ашы.*

**БӘБӘК II (бәбәге)** (Р.: веко; И.: eyelid; Т.: göz kapağı) *и.*

**1.** (*йәки* **күҙ бәбәге**) Күҙ ҡабағының керпек үҫкән сите, керпек төбө. □ Веко. *Күҙ бәбәге. Аҫҡы бәбәк. Өҫкө бәбәк.* ■ *[Мөлөк ағайҙың] атылып сыҡҡан күҙ йәштәре, бәбәктәренән ашып, битен йыуып ағып төштө.* Т. Хәйбуллин. *Емеш ағаһының күҙ бәбәгендә ҡара ҡурғаш кеүек ауыр йәш тамсыһы күреп ҡалғандай булды: бәлки, күҙ йәшен башҡалар күрмәһен өсөн ҡабаланғандыр ҙа.* З. Биишева. *Күҙ бәбәген шәмәртеп, йөрәк итен һыҙлатып, ҡыйғас ҡашлы һылыуҙар йәрен ҡалған оҙатып.* А. Игебаев.

**2.** *диал.* Күҙ ҡараһы. □ Зрачок. *Муйыл кеүек ҡара бәбәк.*

**3.** (*йәки* **ҡолаҡ бәбәге**) *диал. ҡар.* **йәрпесәк I.** *Ҡолаҡ бәбәгенә алҡа тағыу.*

**БӘБӘК III (бәбәге)** (Р.: стебель лука; И.: the stem of the onion; Т.: soğan sapı) *и. диал.*

Һуғандың орлоҡ бирә торған һабағы. □ Стебель лука, образовывающий семена.

**БӘБӘК БӨРӨЛӘРЕ** (Р.: почки выводковые; И.: deciduous buds; Т.: tomurcuk) *и. бот.*

Сәскәле үҫемлектәрҙән ҡойолоп йәш үҫенте барлыҡҡа килтереүсе бөрөләр; үрсеү

бөрөләре, оя бөрөләре. □ Почки выводковые. *Бәбәк бөрөләренән үрсеүсе үҫемлектәр.*

**БӘБӘК МУҠСАҺЫ** (Р.: зародышевый мешок; И.: embryonic bag; Т.: embriyon kesesi) *и. бот.*

Сәскәле үҫемлектәрҙең орлоҡ бөрөләренең үҙәк өлөшө. □ Зародышевый мешок. *Бәбәк муҡсаһы өлгөргән.*

**БӘБӘК ТАМЫРЫ** (Р.: корень зародышевый; И.: embryonic root; Т.: embriyon kökü) *и. бот.*

Үҫемлек бәбәгенең тамыр булып үҫешеүсе өлөшө. □ Корень зародышевый. *Бәбәк тамыры үҫешеү.*

**БӘБӘК ТОҠСАЙЫ** *и. бот. ҡар.* **бәбәк муҡсаһы.** *Бәбәк тоҡсайы өлгөрөү.*

**БӘБӘК ҺАБАҒЫ** (Р.: стебель зародышевый; И.: embryonic stalk; Т.: embriyon sapı) *и. бот.*

Һабаҡтың тамыр менән тәүге бәбәк япраҡтары араһындағы өлөшө. □ Стебель зародышевый. *Бәбәк һабағы шытҡан.*

**БӘБӘК ЯПРАҒЫ** (Р.: лист зародышевый; И.: embryonic blade; Т.: embriyon yaprağı) *и. бот.*

Үҫемлектең орлоҡ эсендә үк төрөлә башлаған тәүге япраҡтары. □ Лист зародышевый. *Бәбәк япраҡтары сығып килә.*

**БӘБӘК ЯРЫУ (бәбәк яр-)** (Р.: взойти; И.: sprout; Т.: çıkmak) *ҡ.*

**1.** Орлоҡтан морон төртөп, шытып сығыу. □ Взойти. *Үҫемлектәр бәбәк яра.*

**2.** *күсм.* Барлыҡҡа килеү, башланғыс алыу. □ Появляться. *Бәбәк ярып килгән фекер.* ■ *Күңелдәргә ҡанат ҡуйҙы йәшелек яҙы, йөрәктәрҙә һөйөү тәү ҡат бәбәк ярҙы.* Ш. Бикҡол.

**БӘБӘЛӘК (бәбәләге)** *и. диал. ҡар.* **бөгәләк 1.** *Бәбәләк йомортҡалары.*

**БӘБӘЛӘШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и. этн.*

Тамъян ырыуы аймағы. □ Бәбәләш *(название родового подразделения башкир рода тамьян). Бәбәләш аймағы башҡорто.*

**БӘБӘНӘК (бәбәнәге)** *и. диал. ҡар.* **бәбәк I, 1, 2.**

**БӘГӘРӘК (бәгәрәге)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и.*

Бер башҡорт аймағы исеме. □ Бәгәрәк *(название родового подразделения башкир).*

**БӘҒДЕ** [ғәр. بعد] (Р.: после; И.: after; Т.: sonra) *бәйл. иҫк.*

Һуң. □ После. *Һуғыш бәғдендә.* ■ *Йәнә солох бәғдендә Бирҙебәк [менән] солтан Мансур нәһере Иҙелдең ике тарафынан мөкамәрә өсөн уҡ атты.* «Башҡорт шәжәрәләре». *[Сабир мулла:] Әммә бәғде мөфти хеҙмәттәренә үпкә һүҙем бар.* Б. Ишемғол. *Әлхасыл, Бaһау ҡусты, кәбер әйәһенән ҡалған мираҫ хаҡына мал биреп, ағаһын бәхилләштерергә риза икән, тип ишеттем, бәс, шулай булғас, шуның бәғдендә, тине Сафа мулла һәм, әйтер һүҙен әйтеп бөтөрмәй, Шаһиәхмәтҡә ҡарап ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**БӘҒДӘ** [ғәр. بعد] (Р.: затем; И.: then, after that; Т.: sonra) *р. иҫк.*

Шунан һуң, шунан. □ Затем. ■ *Бәғдә туған энем Сәримға, бәғдә хәләл ефетемә күптән-күп доғаи сәләмдәремде күндергәйһеҙ.* Ғ. Хәйри. *Бәғдә Хөсәйен алып килгән балаҫҡа шаһзадәләр ултырып остолар һәм Нурнәһәрҙең иленә төштөләр.* М. Өмөтбаев.

**БӘҒД-ӘС-СӘЛӘМ** [ғәр. بعد السلام] (Р.: после приветов; И.: after salutations; Т.: selamlardan sonra) *р. кит.*

Сәләмдән һуң. □ После приветов. ■ *Ҡәрҙәштәрем, барсағыҙға күп-күп сәләм, һеҙҙәргә бәғд-әс-сәләм ғибрәт ҡәләм.* М. Аҡмулла.

**БӘҒЕМБӘ** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Һары бәғембәләр.*

**БӘҒЕР** [дөйөм төрки *бағыр* 'бауыр, эс'] (Р.: сердце; И.: soul; Т.: kalp) *и.*

**1.** Кешенең бөтә хис, тойғоһон туплаған эске донъяһы; күңел, йөрәк. □ Сердце, душа *(как внутренний мир человека).* ■ *Ҡара ҡандар тама бәғеремдән яуыз ҡуллы яҙмыш ҡыҫҡанда.* С. Ҡудаш. *[Әсәлек тойғоһо] бәғерҙәрҙе телгеләгән түҙгеһеҙ һағыныу бу-*

*лып тыуҙы ла Дилбәрҙең төндәрен ҡараңғы тамуҡҡа әйләндерҙе.* Ғ. Ғиззәтуллина.

**2.** *эйл. ф.* **бәғерем.** Ҡәҙерле күргән кешегә иркәләп, яратып әйтелә. □ *ласк.* Родимый, сердечко моё, душенька. ■ *Барыбер бүтәндәргә ҡыҙыҡмам, йәнем, бәғерем, һине онотмам.* А. Игебаев. *Сәйҙел бәғерем, бөгөн мин ниндәй шат, ҡыуанысым һыймай үҙемә.* Ғ. Сәләм.

♦ **Бәғер ите** иң ҡәҙерле, йөрәккә яҡын булған зат. □ Самое дорогое, ценное. ■ *Бала, бала... Ахыры, ҡарттар юҡҡа: «Бала — бәғер ите», — тимәгән.* Ғ. Сәләм. **Бәғер итен ашау (телеү)** бик ныҡ үртәп әрнетеү, йәнде ғазаплау. □ Терзать душу. **Бәғер киҫелеү** күңел ғазабы кисереү, өҙгөләнеү. □ Душа разрывается на части. **Бәғер(ем) киҫәге** ҡәҙерле күргән кешегә яратып әйтелә. □ *ласк.* Родимый, сердечко мое, душенька. **Бәғер көйөү** эстән көйөү, күңел әсенеү. □ Сильно горевать, убиваться. **Бәғер ҡатыу** хис-тойғо нескәлеге бөтөү, ҡаты хис уяныу. □ Стать жестоким, немилосердным. **Бәғер ҡороу** 1) бик ныҡ ҡайғырыу, әсенеү. □ Сильно горевать, печалиться. ■ *Көнө-төнө бәғерем ҡорой исемем һалдат булғанға.* Бәйеттән. *Тәҡәтем юҡ, бәғерем ҡорой етем ҡалған балаға.* Бәйеттән; 2) теңкә ҡороу. □ Надоедать. **Бәғер ҡыйылыу** 1) йән әсеү, йөрәк әрнеү. □ Душа разрывается на части. ■ *Ике күҙҙән берәүгә ҡалғас, ҡыйыла бәғерҙәрем.* Халыҡ йырынан; 2) яфа сигеү, тәҡәтһеҙ булыу. □ Мучиться, страдать, терзаться. **Бәғер ташыу** аҙарыныу, әсенеү. □ Душа болит *у кого.* ■ *Рәйсә?!. Эйе, Рәйсә шул, ана кем өсөн бәғерҙәре таша икән.* Д. Бүләков. **Бәғер телгеләнеү** күңел ғазабы кисереү, өҙгөләнеү; йән әсеү, йөрәк әрнеү. □ Душа разрывается на части. ■ *Бәғере нисек кенә телгеләнмәһен, үҙәге нисек кенә өҙгөләнмәһен, тешен ҡыҫып түҙҙе әсә.* Яр. Вәлиев. **Бәғер һыҙлау** *ни өсөндөр* йән әсеү, йөрәк әрнеү. □ Душа болит *у кого.* ■ *Ҡыҙ тинеңме — ҡан ҡыҙырға башлай, бәғерең һыҙлана, йәш йөрәктә әллә ниндәй тәмле уйҙар ҡуҙғала.* Ш. Бабич. **Бәғер яныу** аҙарыныу, әсенеү. □ Душа болит *у кого.* ■ *Улар тел беҙҙәрен сәнсеп, ағыуланды бөтә йәнем. Аға йәшем, яна бәғерем, мөгәҙҙәп дәхи выжданым.* Д. Юлтый. **Бәғере таш** 1) күңеле бик ҡаты булған, һалҡын күңелле. □ Жестокосердный, бессердечный, безжалостный. ■ *Ихтыярым минең таш булһа ла, бәғере уның таш тип уйлама.* Ә. Ғайсин; 2) дәрте һүнгән, үлгән. □ Вялый, безжизненный, бесстрастный, апатичный. **Бәғергә инеү** *ҡар.* **бәғерҙе иретеү. Бәғергә таш булыу** ауыр ҡайғыға һалыу. □ Причинить горе, печалить. ■ *Балалары араһында иң яҡын күргәне, үҙе иҫән ваҡытта уҡ имамлыҡҡа фатиха бирергә ниәтләгән Алсынбайы юғалыу бәғеренә таш булып ултырҙы [Аҡназарҙың].* Ә. Хәкимов. **Бәғергә тейеү** ҡайғы-хәсрәткә төшөрөү. □ Причинить горе, печалить. **Бәғергә тоҙ һалыу** кешелә әсе тойғо уятыу; әрнетеү. □ Бередить рану. *букв.* Сыпать на сердце соль. ■ *Тағы ла тегенең бәғеренә тоҙ һалам: «Был беҙгә табан килә, сукынсыҡ».* С. Агиш. *Нисек кенә әйтһәң дә, был бисә бәғергә тоҙ һалды.* Ә. Бикчәнтәев. **Бәғергә үрелеү** йылы, татлы хистәр уятыу. □ Пробуждать тёплые чувства. **Бәғерҙе иретеү** кешелә йылы тойғо, яҡшы ҡараш уятыу. □ Пробуждать тёплые чувства. **Бәғерҙе киҫеү** күңелдә әсендереү. □ Терзать душу. ■ *Һандуғаскай, наҙлым, ҡуй, һайрама, һайрап, йәш бәғеремде киҫмәй тор.* Ш. Бабич. *Мәғәнәһеҙгә үткән һәр минут көйә булып киҫә бәғерҙе.* М. Хәй. *Тыуған ерҙәр иҫкә төшөп, йөрәк-бәғерҙе киҫә.* Халыҡ йырынан. **Бәғерҙе өҙөү** нескә, әрнеткес хис уятыу; күңелдә әсендереү. □ Терзать душу. ■ *Гөлдәр араһында һандуғастар сут-сут һайрап, бәғерҙәрем өҙәләр.* Д. Юлтый. *Был икеһе ул тиклем йәл түгел: ҙурҙар, бына иң бәләкәйе бәғерҙе өҙә, — тип аңлатты беҙгә өләсәйем.* Ә. Чаныш. **Бәғерҙе телеү** бик ныҡ әрнетеү, әсендереү. □ Причинять горе, печалить. ■ *Үкһеҙҙәрҙең үкенесе телә бәғерҙе.* Р. Бикбаев. **Ҡаты** (*йәки* **таш) бәғер(ле)** шәфҡәтһеҙ, аяуһыҙ. □ Жестокосердный, бессердечный, безжалостный. ■ *[Фәтхи:] Иламайым икән — таш бәғер тип уйламағыҙ, беҙҙең бабайҙар ҙа иламаған.* С. Агиш. *Уның*

*[егеттең] йырҙары шул тиклем моңло булған — иң ҡаты бәғерле кешенең күңеле лә балауыҙ һымаҡ ирер булған.* Ә. Вахитов. *[Нәркәс — Һәүбәнгә:] Егеткәйем, тыңласы, таш бәғерле булмасы!* «Аҡбуҙат». *Сәлкәй баҫҡаҡ кеүек бик үк ҡаты бәғерле күренмәһә лә, ҡул аҫтына килеп ингән яңы ил халҡына йомшаҡлыҡ күрһәтергә тейеш түгел икәнлеген оҙаҡҡа хәтерҙә ҡалдырырлыҡ итеп, доньяларын аҡтарып һәм, «ваҡыты еткәс, тағы киләсәген» белдереп китте.* К. Мәргән.

**БӘҒЕРҘӘЙ** *и. диал. ҡар.* **ташбаш 1.** *Ҡармаҡҡа бәғерҙәй эләктереү.*

**БӘҒЕРЛЕ** (Р.: мягкосердечный; И.: soft-hearted; Т.: iyi kalpli) *с.*

Аяй, йәлләй белеүсән. □ Мягкосердечный, добрый, отзывчивый, жалостливый. ■ *[Һомай — Шүлгәнгә:] Ҡан коҫәгән, йәш түккән, күптәр башына еткән, ҡан эсергә уҡталған уҫал йөрәгең бөтһөн, бәғерле йөрәк үҫһен.* «Урал батыр».

**БӘҒЕРҺЕҘ** (Р.: жестокий; И.: merciless; Т.: sert) *с.*

Аяй, йәлләй белмәй торған. □ Жестокий, немилосердный, безжалостный. *Бәғерһеҙ кеше. Бәғерһеҙ булыу.* ■ *[Маһруй:] Ҡош телендәй генә хат яҙып ебәрһәгеҙ, тигән бит, өҙөлөп-өҙөлөп һораған. Бигерәк тә бәғерһеҙ икәнһең, Сәрүәркәйем.* Х. Ибраһимов.

**БӘҒЕРҺЕҘЛЕК (бәғерһеҙлеге)** (Р.: жестокость; И.: cruelty; Т.: sertlik) *и.*

Мәрхәмәтлек, шәфҡәтлектең булмауы, аяй, йәлләй белмәү хисе. □ Жестокость. ■ *Беҙ үҫеп килеүсе быуынды бәғерһеҙлектән, көс ҡулланыуҙан һәм битарафлыҡтан аралау өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ.* «Атайсал», 1 июнь 2010. *Бәғерһеҙлеккә ҡаршы тәү тапҡыр баш күтәреүем, бәлки, ошо булғандыр.* М. Кәрим. *Хәйер, сит кешеләргә ҡарата бәғерһеҙлеген электән белә ине бит.* Ғ. Ғиззәтуллина.

**БӘҒЕҪ** [ғәр. بعث] (Р.: воскрешение; И.: resurrection; Т.: kıyamet) *и. иҫк.*

**1.** Дини ҡарашса, үлгән кешеләрҙең терелеп ҡәберҙәренән ҡалҡып сығыуы *(ҡиәмәт көнөндә).* □ Воскрешение. ■ *«И, Хоҙай, ҡотҡар!..» — тинек, көттөк бәғеҫ, көттөк хөшөр.* М. Ғафури.

**2.** *Кемделер ҡайҙалыр* ебәреү. □ Отправлять *куда кого.*

**3.** Вәкил итеп ебәреү. □ Отправить представителем *кого.*

**БӘҒЗАН** *р. ҡар.* **бәғзән.** ■ *Бәғзан кәйефһеҙ ҙә булып алам.* М. Ғафури.

**БӘҒЗЕ** [ғәр. بعض] (Р.: некоторый; И.: some; Т.: bazı) *билдһ. а.*

Ҡайһы, ҡайһы бер. □ Некоторый. *Бәғзе ваҡыт. Бәғзе кеше. Бәғзе эш.* ■ *Гөлйыһан, ап-аҡ ҡулдарын күйәнтә өҫтөнә һалып, күнәктәрен бәүелтә-бәүелтә уға иркә көлөп ҡараны: «Беҙҙә бәғзе бер ҡыҙҙар шулай... һыу ташырға яраталар ул, Закир ағай...»* З. Биишева. *Ихсанбайҙың бәғзе ҡорҙаштары яраланып ҡайта ла башланы.* Т. Ғарипова. *[Шайтан йылғаһының] һыуҙары гипс тоҡомдарын иретә лә төрлө ҡыуышлыҡтар яһай. Бәғзе ерҙәрҙә был ҡыуышлыҡтарҙың төбәһе емерелеп төшә.* Д. Бураҡаев. *Бәғзе бер емеш ағастары ла боҙ һуҡҡан шикелле, имгәнеп-һынып, көйөп-һарғайып бөткән.* В. Нафиҡов.

**БӘҒЗЕЛӘР** (Р.: некоторые; И.: some, some people; Т.: bazılar) *и.*

Ҡайһы бер кешеләр. □ Некоторые. ■ *Бәғзеләрҙән ерҙә аҡ нур ҡала, бәғзеләрҙән ҡала ҡуләгә.* Р. Бикбаев. *Бәғзеләре, беләм, асмаҫтар ҙа ине, астырыусылары бар.* М. Кәрим.

**БӘҒЗӘН** [ғәр. بعضا] (Р.: иногда; И.: sometimes; Т.: bazen) *р. иҫк.*

Ҡайһы ваҡыт, ҡайһы саҡ; бәғзан. □ Иногда. *Бәғзән ҡурҡып китәм.* ■ *Йөрәгемдә бәғзән шиктәр тыуһа, һинең һүрәтеңде аламын.* Д. Юлтый. *Көҙгө ҡыҫҡа көндәр, яҡты йондоҙло оҙон, аяҙ көҙгө төндәр, бәғзән оҙон-оҙама быҫҡаҡ. Ер йөҙөн ҡаплаған ҡалын, ҡуйы төндәргә әүерелеп, һәлмәк кенә булып уҙып торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӘҒИД** [ғәр. بعيد] (Р.: далёкий; И.: far-off; Т.: uzak) *с. иҫк. кит.*

Алыҫ. □ Далёкий. *Бәғид ҡала.*

**БӘҒИЛ** [ғәр. بغل] *и. кар.* **касыр.** *Бәғилгә йөк тейәү.*

**БӘҒҮЛӘН** *и. диал. кар.* **бәпембә 1.** ■ *Бәғүләндең һабағын ауыҙға кабып. бәп-бәп бәғүлән, тип кабат-кабат әйтһәң, бөгәрләнә.* Экспедиция материалдарынан.

**БӘҒӘНӘШ I** (Р.: воронец колосовидный; И.: baneberry; Т.: baneberry) *и. бот.*

Ышык урында, йүкә араһында кәпрайып үҫкән киртләс япраклы, мурт ботаклы күп йыллык үлән *(тамырын кайнатып эсәләр)*; салауат тамыры, көртбаҫар. □ Воронец колосовидный (лат. *Actaea spicata*). *Бәғәнәш тамырын каҙып алыу.*

**БӘҒӘНӘШ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән кәбиләһе аймағы. □ Бэгэнэш *(название родового подразделения башкир племени бурзян). Бәғәнәш аймағы башкорто.*

**БӘД** [фарс. بد] (Р.: плохой; И.: bad, poor; Т.: kötü, bed) *с. иҫк. кит.*

Насар, яман. □ Плохой, скверный. *Бәд уй.* ■ *Дәүләттә әҙәм бармы котормаған, эстәрен бәд гөманға тултырмаған.* М. Акмулла. *Ни кем бер бәд мәҙһәб кылыс менән үҙ башын сапкылап бөтөргән, кандары аккан.* М. Өмөтбаев.

**БӘДАИ** [ғәр. بدائی] (Р.: начальный; И.: primary; Т.: ilk, bed) *с.*

Баштағы, тәүге. □ Начальный, первоначальный. *Бәдаи һүҙ.*

**БӘДАСЫЛ** [фарс.-ғәр. بد اصل] (Р.: низкого происхождения; И.: of low origin; Т.: bedasl) *с.*

Түбән нәҫелле, насар сығышлы. □ Низкого происхождения. *Бәдасыл кеше. Бәдасыл булыу.*

**БӘДБУЙ** [фарс. بدبوی] (Р.: вонь; И.: stink; Т.: pis koku) *и. иҫк.*

Һаҫык еҫ. □ Вонь, зловоние. *Бәдбуйҙы бөтөрөү.*

**БӘДБӘХЕТ** [фарс. بدبخت] (Р.: несчастный; И.: unfortunate; Т.: bedbaht) *с.*

**1.** Кәһәрле, кәбәхәт. □ Несчастный; злополучный; злосчастный; проклятый, окаянный. *Бәдбәхет кеше. Бәдбәхет бәндә.* ■ *Карт көнөмдә битемә кара якты бәдбәхет кыҙыкай! Ух! — тип екеренгән Олоғатай.* Н. Иҙелбай.

**2.** Әрләгәндә әйтелә. □ Негодяй, мерзавец. *Бәдбәхет дошман.* ■ *Тфү, бәдбәхет! — тип Иҫәнгол хажиҙың вариҫы Кавказ батшаһының вариҫына лас итеп төкөрөп сығып китте.* М. Кәрим.

**БӘДГӨМАН I** [фарс. بدگمان] (Р.: подозрение; И.: mean trick; Т.: pislik) *и. иҫк.*

Насар уй. □ Подозрение; плохое, дурное, пакость. *Бәдгөман уйлау. Бәдгөман кылыу.*

**БӘДГӨМАН II** [фарс. بدگمانی] (Р.: подозрительный; И.: nasty; Т.: kötü) *с.*

Насар уйлы. □ Подозрительный, дурной, скверный, пакостный. *Бәдгөман әҙәм. Бәдгөман булыу.*

**БӘДДОҒА** [фарс. بد دعا] (Р.: проклятие; И.: damnation; Т.: beddua) *и.*

Насар теләк, карғыш. □ Проклятие, анафема. *Бәддоға кылыу. Бәддоға укыу.* ■ *Фәүзиә бойокто... Быны сәбәбен аңлап торған Шәмсениса инәй Айсыуакты төтәҫләне: «Әҙәмдең аяулы балаһын рәнйетһәң, бәддоға укырмын мин һиңә».* Т. Килмөхәмәтов. *[Әсә:] Ашка таш менән атаһың килһә, кит. Бәддоға укырмын.* И. Абдуллин.

**БӘДЕҮӘМ** [ғәр.-фарс. بدوام] (Р.: бадуам; И.: name of a religious book; Т.: dini kitap) *и. дини*

Мәҙрәсәлә дәреслек булып йөрөгән көйлө дин китабы. □ Бадуам *(религиозная книга). Бәдеүәм укыу.*

**БӘДЕҮӘМСЕ** (Р.: сторонник кадимизма; И.: adherent of old Islamic teaching methods; Т.: eski dini eğitim usulü taraftarı) *и. иҫк.*

Кәҙимге ысул менән укытыу яклы кеше. □ Сторонник кадимизма *(старых религиозно-схоластических методов обучения). Бәдеүәмселәр караשы.*

**БӘДИҺИ I** [фарс. بدیهی] (Р.: очевидный; И.: obvious; Т.: bedihi) *с.*

Билдәле, ап-асыҡ. □ Очевидный, явный, несомненный. *Бәдиһи эш. Бәдиһи күренеш.*

**БӘДИҺИ II** [фарс. بديهيات] (Р.: очевидность; И.: obviousness; Т.: bedihiyat) *и.*

Асыҡ билдәле хәҡиҡәт. □ Очевидность, явность, несомненность, аксиома. *Бәдиһи килтереү.*

**БӘДНАМ** [фарс. بدنام] (Р.: дурная слава; И.: ill fame; Т.: bednam) *и. иҫк. кит.*

Насар даны таралған исем; яманат. □ Дурная слава, позор, плохая репутация. *Бәднам йөрөтөү.* ■ *Нисә йөҙ йыл иҙелдегеҙ ҡара пәрҙәләр аҫтында булып махрүм хөрриәттән, өйөлгән тау кеүек бәднамдар аҫтында итеп түҙем.* Д. Юлтый.

**БӘДӘЛ** [ғәр. بدل] (Р.: возмещение; И.: compensation; Т.: bedel) *и. иҫк.*

**1.** *Берәй нәмә* өсөн түләнгән аҡса; взнос түләү. □ Возмещение, замена, эквивалент; компенсация. *Ағзалыҡ бәдәле. Бәдәлгә аҡса алыу.* ■ *[Ағалары — Йософҡа:] Ялған төшлә үҙеңде һөйҙөрҙөгөң, был [яфалы] көн шуның бәдәлелер.* «Йософ вә Зөлайха». *[Хөсәйенов:] Мин ул йәмғиәткә йылына 80 тин көмөш ағзалыҡ бәдәле түләйем.* С. Агиш.

**2.** Кешенең башҡа берәүгә ялланып хажға барыуы. □ Наёмное паломничество в Мекку *(желающий совершить хадж в Мекку нанимает вместо себя за плату другого человека). Бәдәл хаж.*

**БӘДӘЛСЕ** (Р.: наёмный паломник в Мекку; И.: hired pilgrim to Mecca; Т.: bedel) *и. дини*

Кешегә ялланып хажға йөрөүсе. □ Наёмный паломник в Мекку *(желающий совершить хадж в Мекку нанимает вместо себя другого человека за определённую плату). Бәдәлсе булып хажға барыу.*

**БӘДӘН I** [ғәр. بدن] (Р.: туловище; И.: body, figure; Т.: beden) *и. иҫк.*

Тән, кәүҙә. □ Туловище, стан; тело. *Һимеҙ бәдән.* ■ *Уның [Толомбайҙың] улы Уралбай, ашаулығы урамдай, бәдәне һимеҙ тулалы, ятһа урынынан тора алмай.* «Башҡорт шәжәрәләре».

**БӘДӘН II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ҡәбиләһе аймағы. □ Бәдән *(название родового подразделения башкир племени усерган). Бәдән аймағы башҡорто.*

**БӘДӘНИ** [ғәр. بدني] (Р.: телесный; И.: corporal; Т.: bedenî) *с. иҫк.*

Кәүҙәгә, тәнгә мөнәсәбәтле. □ Телесный, физический. *Бәдәни тәрбиә.*

**БӘДӘНЛЕ** (Р.: дородный; И.: portly; Т.: bedenli) *с. иҫк.*

Ҙур кәүҙәле. □ Дородный, рослый, статный. *Бәдәнле кеше.*

**БӘДӘҮИ I** [ғәр. بدوي] *с. ҡар.* **бәҙәүи I.** *Бәдәүи тормош. Бәдәүи ғәрәп.* ■ *Хужалығы иң төшөнкө яҡтарҙа мал аҫрауслыҡ бәдәүи хәлдә була.* Ғ. Ғисмәти.

**БӘДӘҮИ II** [ғәр. بدوي] *и. ҡар.* **бәҙәүи II.** *Бәдәүи ғәрәп. Бәдәүи ҡатын. Бәдәүи кейеме. Ғәрәбстан далаларында бәдәүиҙәр йәшәгән.*

**БӘҘАҒӘТ** [ғәр. بداءة] (Р.: начало; И.: beginning, origin; Т.: başlangıç) *и. кит. иҫк.*

Башланғыс. □ Начало. ■ *Әгәр булһа берәүҙең бер аҙ ғәре, был бәҙағәттән арҡа биреп ҡасыр имде.* Бәйеттән.

**БӘҘЕ** *и. диал. ҡар.* **ҡаҡы.** *Бәҙе ашау.*

**БӘҘЕЛ** [ғәр. بذل] *и. иҫк. ҡар.* **бүләк I.** *Бәҙел биреү.*

**БӘҘЕР** [ғәр. بدر] (Р.: полная луна; И.: full moon; Т.: bedir) *и. иҫк.*

Ун дүрт көнлөк ай, тулған ай. □ Полная луна *(четырнадцатидневная луна). Бөгөн күктә бәҙер.*

**БӘҘЕРЕБӘНЕЖ** [фарс. بدربنه] (Р.: круглые пуговицы на ножке; И.: kind of a round button; Т.: düğme) *и. иҫк.*

Һабаҡлы йомро төймә. □ Круглые пуговицы на ножке. ■ *Әхмәт байҙар кеүек, хәҙер бер бәҙеребәнежгә бер ҡуй тиреһе алып булмай.* Ғ. Ғүмәр.

**БӘҘИҒ** [ғәр. بديع] (Р.: изумительный; И.: fine; Т.: mükemmel, bedi) *с. иҫк. кит.*

Бик яҡшы, гүзәл. □ Изумительный, прекрасный. *Бәҙиғ зат.*

**БӘҘИҒӘТ** [ғәр. بديعة] (Р.: чудесная вещь; И.: fine thing; Т.: bedia) *и. кит. иҫк.*

Бик шәп, яҡшы нәмә. □ Чудесная, прекрасная вещь.

**БӘҘИҒӘТ АШАТЫУ (бәҙиғәт ашат-)** (Р.: угощать; И.: treat; Т.: misafir etmek) *ҡ.*

Һыйлау, ҡунаҡ итеү. □ Угощать. *Туғандарҙы саҡырып, бәҙиғәт ашатыу.*

**БӘҘЙЫЛАН** *и. диал. ҡар.* **баҡыр йылан I**. *Тауҙарҙа бәҙйылан да осрай.*

**БӘҘМӘН** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, ҡыпсаҡ ҡәбиләләре аймағы. □ Бәзмән *(название родового подразделения башкир племён бурзян, кыпчак). Бәҙмән аймағы башҡорто.*

**БӘҘРӘК (бәҙрәге)** (Р.: название башкирского рода; И.: name of a Bashkir clan; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и.*

Табын ҡәбиләһе ырыуы. □ Бадрак (*название рода башкир племени табын*). *Бәҙрәк ырыуы ораны. Бәҙрәк ырыуы ерҙәре.*

**БӘҘРӘФ** [фарс. بدرف] (Р.: туалет; И.: toilet, lavatory, WC; Т.: lavabo) *и.*

Тышҡа сыға торған урын; әбрәкәй. □ Туалет, уборная. ■ *Ә уның урыны бына бында! — тип ҡарт бәҙрәф таҡтаһын балта менән ҡайырып асты.* Ә. Хәкимов.

**БӘҘӘҒӘТ** [ғәр. بذاءة] (Р.: испорченность; И.: depravity; Т.: bozukluk) *и.*

Боҙоҡлоҡ, оятһыҙлыҡ. □ Испорченность, бессовестность, распущенность. *Бәҙәғәт ҡылыу.*

**БӘҘӘНКӘЙ** *(баш хәреф менән) и. астр. диал. ҡар.* **Етегән йондоҙ**. ■ *Бәҙәнкәй етәү. Өлкәр нисәү? Һарат менән Буҙат тик икәү.* Халыҡ йырынан.

**БӘҘӘҮИ I** [ғәр. بدوي] (Р.: кочевой; И.: nomadic; Т.: bedevi) *с.*

Күсмә тормошло. □ Кочевой. *Бәҙәүи тормош. Бәҙәүи ғәрәп.* ■ *Берәүҙәр эҫе көндәрҙә һыу буйынан ҡайтмайҙар, бәҙәүи ғәрәптәй, .. бөтә ялдарын шунда, яр буйында үткәрәләр.* Ә. Чаныш. *Әҙер байлыҡты күреп, ике күҙе дүрт булған ҡомһоҙ сауҙагәр бәҙәүи тимерсе менән уның ярҙамсыһын ҡулға алырға бойорған.* И. Ғиззәтуллин.

**БӘҘӘҮИ II** [ғәр. بدوي] (Р.: бедуин; И.: bedouin; Т.: bedeviler) *и.*

Күсмә тормош менән йәшәгән сүл ғәрәбе. □ Бедуин, араб-кочевник. *Бәҙәүи ҡатын. Бәҙәүи кейеме. Ғәрәбстан далаларында бәҙәүиҙәр йәшәй.*

**БӘҘӘҮӘТ** [ғәр. بداوة] (Р.: кочевничество; И.: nomadism; Т.: bedevilik) *и.*

Күсмә тормош. □ Кочевничество. *Бәҙәүәттә йәшәү.*

**БӘЖЕ** *и. диал. ҡар.* **киндер.** *Бәже һуғыу. Бәже баҫыуы.*

**БӘЖЕЙ** *и. диал. ҡар.* **киндер.** *Бәжей орлоғо. Бәжей майы.*

**БӘЖЕҮ (бәже-)** *ҡ. диал. ҡар.* **быжыу I.** *Картуф бәжегән. Сөгөлдөр бәжегән.*

**БӘЖӘКӘЙ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ҡәбиләһе аймағы. □ Бәжәкәй *(название родового подразделения башкир племени табын). Бәжәкәй аймағы башҡорто.*

**БӘЖӘНӘК (бәжәнәге)** (Р.: печенег; И.: Pecheneg; Т.: Peçenekler) *и. иҫк.*

Боронғо төрки ҡәбиләләр берләшмәһе. □ Печенег. *Бәжәнәктәр берләшмәһе.*

**БӘЗ** [ғәр. بز] (Р.: бязь; И.: coarse calico; Т.: bez) *и.*

Арзанлы йоҡа кизе-мамыҡ туҡыма. □ Бязь. / Бязевый. *Бәз күлдәк.* ■ *Ҡайындар иһә йәшел яулыҡтарын көҙгө байлыҡта ауыл ҡатындары ябына торған бәз шәлгә алмаштырған.* Н. Мусин. *.. Эсе ҡара бәздән, уртаһына мамыҡ ҡуйҙырып, бишмәт тектерҙеләр.* М. Ғафури. ● *Ауылға килгән бәз арзан, ауыҙға килгән һүҙ арзан.* Мәҡәл.

**БӘЗЕЙ** *и. диал.*

1. *ҡар.* **ҡаҡы.**

2. *ҡар.* **киндер.**

**БӘЗЕМ** [фарс. بزم] (Р.: собрание; И.: gathering; Т.: bezm) *и. иҫк.*

Йыйылыш, кисә. □ Собрание, торжество. *Бәзем үткәреү. Бәземгә барыу.*

**БӘЗЕР** (Р.: вытаращенный; И.: goggle-eyed, bulging; Т.: parlak gö̈z) *с.*

Мызлап янып торған *(күҙгә карата).* □ Вытаращенный *(о глазах). Бәзер күҙ.*

**БӘЗЛӘТЕҮ (бәзләт-)** *к. диал. кар.* **бәзрәйтеү.** *Күҙҙе бәзләтеп карау.* ■ *Малайҙар .. бер аҙ күҙҙәрен бәзләтешеп торҙолар ҙа кабаланып [һыу инергә] сисенә башланылар.* Р. Солтангәрәев.

**БӘЗЛӘҮ (бәзлә-)** *к. диал. кар.* **бәзрәйеү.** *Күҙе бәзләп тора.*

**БӘЗРЕЙ** *с. диал. кар.* **бәзер.** *Бәзер күҙ.*

**БӘЗРӘЙЕҮ (бәзрәй-)** (Р.: выпучиться; И.: stare; goggle; Т.: fırlamak) *к.*

Мызлап янып текәлеү *(күҙгә карата).* □ Выпучиться *(о глазах). Бәзрәйеп карау. Күҙҙәре бәзрәйеп тора.* ■ *[Ғилмандың] ирендәре һалынып төштө, һул сикәһе һулкылдап тартырға тотондо, күҙҙәре бәзрәйҙе.* Я. Хамматов.

**БӘЗРӘЙЕШЕҮ (бәзрәйеш-)** *к. урт. кар.* **бәзрәйеү.** *взаимн. от* **бәзрәйеү.** *Бәзрәйешеп ултырыу.*

**БӘЗРӘЙТЕҮ (бәзрәйт-)** (Р.: пялить; И.: stare (at); Т.: gö̈zleri dikmek) *к.*

Мызлатып, нык итеп текәлтеү *(күҙҙе).* □ Пялить, таращить *(глаза). Күҙҙе бәзрәйтеү.* ■ *Этҡол кемдәндер йәшенгән кеүек, күҙҙәрен бәзрәйтеп, тирә-яғына карады.* Г. Дәүләтшин. *Ә кыҙҙан арттарак, моронон карға тығып, күҙен бәзрәйтеп, бер эт шыңшып ята, ти.* Әкиәттән.

**БӘЗӘКӘЙЛӘҮ (бәзәкәйлә-)** *к. диал. кар.* **сәнскәкләү.** ■ *Көтөүҙән һыйырҙар бәзәкәйләп кайта башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**БӘИН** [ғәр. بائن] (Р.: очевидный; И.: evident; Т.: açık) *с.*

Асык күренеп торған, билдәле. □ Ясный, очевидный, явный. *Бәин эш.*

**БӘИНӘ** [ғәр. بيّنة] (Р.: очевидный факт; И.: obvious fact; Т.: beyyine) *и.*

Ап-асык дәлил. □ Очевидный факт. *Бәинә килтереү.*

**БӘЙ I** [дөйөм төрки *баг* ‘бау’] (Р.: завязка; И.: tie, string; Т.: bağ) *и.*

**1.** *Берәй нәмәне* быуыу йәки куша нығытыу өсөн бороп, ишеп әҙерләнгән еп; бау. □ Завязка, привязь. *Кыл бәй. Сүс бәй. Алъяпкыс бәйе. Кәпәс бәйе.* ■ *[Үмәр карт] капканың сүс бәйе ныкмы икән тип, кабат-кабат тартып караны.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Мал-тыуар, эт-кошто, китеп бармаһын өсөн, *берәй нәмәгә* куша беркетә торған аркан йәки сынйыр; бау. □ Завязка, привязь. *Бәйгә куйыу. Бәйҙәге эт.* ■ *Кейеҙбай бәйҙә торған күк толпарҙың теҙгенен сисә.* Әкиәттән. ● *Булыр колон бәйҙә уйнар.* Мәкәл.

**3.** *күсм.* Кешенең иркен тоткарлаған кәртә. □ Границы, рамки, ограничивающие свободу. *Бәйгә алыу. Бәйҙә тотоу. Бәйҙән ыскыныу.*

**4.** *миф.* Юл, яҙмыш, ғүмер символы. □ Символ дороги, пути, судьбы, непрерывности жизни, долголетия.

♦ **Бәйҙә тотоу** иркен сикләү, каты күҙәтеү аҫтында тотоу. □ Ограничивать свободу, держать под наблюдением. **Бәйҙән ыскынған эт кеүек** бик шашкан, которған кешегә карата әйтелә. □ Как с цепи сорвался. **Бәйҙән ыскыныу** иреккә сығыу. □ Как с цепи сорваться; выйти на волю. ■ *Был йүгәнһеҙлек, капыл бәйҙән ыскыныу уның сәләмәтлеген тиҙ какшатты, өс ай тигәндә Гәрәйҙең кулдары калтырауыкка әйләнде... Зиһене ысындан да таралды.* Б. Бикбай.

**БӘЙ II (бәй-бәй)** [төрки] (Р.: ба; И.: oh!; Т.: oh) *ымл.*

**1.** Аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. □ Ба *(межд. выражает удивление, изумление).* ■ *[Иркәбикә инәй]: Бәй, был һин түгелме һуң, Хәмит балам?* Ф. Рәхимғолова. *Мин туп-тура Өфөгә юл тоттом. Бәй, калаға килеүемә генә йәш яҙыусыларҙың кәңәшмәһе асылырға тора икән.* С. Кулибай. *[Гәрифә:] Бәй, күрмәй ҙә торамсы, һин түгелме һуң, Уйылдан?* Н. Мусин. *Тәнзилә әбей тәҙрәнән караны ла: «Бәй, бәй, был Хафиз кейәү түгелме һуң? Кем менән сәкәләшә икән?» — тип урамға сыкты.* М. Тажи. *Бәй, Акселәнде бик шәп тә, иртә лә ташыр тигәйнең бит, ә ул кымшанырға ла уйламай әле.* Б. Бикбай. *Бәй, уғаса ямғыр шыптырлатып коя башламаһынмы?* К. Кинйәбулатова.

*[Сәйҙел:] Бәй, Әрнит иптәш! Был һин түгелме?* Г. Сәләм.

**2.** Кеше һүҙен хуплағанда әйтелә. □ Ба *(межд. выражает одобрение слов кого-л.).* ■ *[Фәхри:] Ярай, ҡустым, әселәшеп йөрөмәйек, кисерешәйек бер-беребеҙҙе. [Ғамир:] Бәй, шулай итмәй ни, теге ни, булған, булған инде, кисерешергә кәрәк.* Б. Бикбай.

**БӘЙГЕ** [дөйөм төрки *байға* 'байрам итеү, ярыш'] (Р.: скачки; И.: horse race; Т.: at yarışı) *и.*

**1.** Менге аттарҙың көс, һәләтен күрһәтер өсөн үткәрелгән ярыш. □ Скачки, бега. *Бәйге аты. Бәйгегә ат яратыу. Бәйге сабыу. Бәйге һаҙу. Бәйгелә ҡатнашыу. Кесе бәйге. Оло бәйге.* ■ *[Әйләр хан менән Бүләр хан] бер-береһе менән бик дуҫ йәшәгән, һунарға сығып, ҡош атып, бәйге һап, ат сабыштырып, батырҙарын көрәштереп, күңел асып көн иткән, ти.* Әкиәттән. *Бәйгене ойошторған башлыҡтар тарафынан алдан хәбәр ебәрелде: аманатҡа алыныусыларҙың сапҡырҙары тәүгеләр араһында ҡатнашып тормаясаҡ, тик тәүге сабыштарҙа еңеүселәр менән генә ярышасаҡ.* З. Ураҡсин. *Замандың айҡалыш-сайҡалыштары арҡаһында онотолоп барған йоланы яңыртып, Ҡуштирәк һабантуй уҙғарырға булды, бәйгегә аттар әҙерләне.* Ә. Хәкимов. *Әй, егеттәр, һайлап арғымаҡ менегеҙ. Һайлап менегеҙ ҙә, сығығыҙ бәйгегә.* М. Хәй. *Минең Ерәнде үҙең беләһең бит инде, Яҡуп дуҫ, бер бәйгелә ал биргәне булманы.* Б. Бикбай. *Яҙғы сәсеү бөткәс, бесән алдына тиклем халыҡтың күбеһе буш була, ауылдарҙа бәйгеләр үткәрелә, аттар сабыштырыла, батырҙар көрәштерелә.* Д. Юлтый.

**2.** Шул ярыш башланған һәм бөткән майҙан. □ Место проведения конных скачек. ■ *Майҙанда егет-елән сабыш аттарын йөрөтөп, бәйге урыны менән таныштыра, бер тирләтеп, бер һыуындырып сыныҡтыра, ҡаҙаҡтар йүгереш дөйәләрен күнектерә.* З. Ураҡсин. *Бәйгенән бер-ике саҡрым китеп, кеше күҙенән юғалғас ҡына, аттың йөрөшөн әкренәйттем.* Д. Юлтый.

**3.** Ат сабыштарында һәм көрәштә еңеүсегә бирелә торған бүләк. □ Приз *(подарок победителю скачек, борьбы). Беренсе бәйге. Бәйге алыу. Бәйге таратыу.* ■ *Бикйән егетте күтәреп алып ергә ташлай. Шунан бәйге өләшеүсе Бикйәнгә бәйге бирә.* Әкиәттән. *Аттар саба бәйге алам тип, Ҡарасәс илай йәрһеҙ ҡалам тип.* Халыҡ йырынан. *Ҡалған бәйгене инде майҙанда көс һынашып алырға тура киләсәк.* Р. Солтангәрәев. *Иҫәнбай ауылында ҙур бәйге була. .. Әгәр ҙә шуға барһаң, көрән аттың бәйгеһе үҙеңә булыр. яраймы? — тине [Ғаяз бай].* Д. Юлтый.

**4.** Ат ярыштарының, туйҙарҙың атрибуты булған ҡыҙыл тауар киҫәге. □ Кусок красной материи, используемый как атрибут конных скачек и свадеб. ■ *Алыҫта, офоҡ һыҙығында сигелгән бәйге һөлгөләре шикелле, ҡыҙғылт һары болоттар хәрәкәтһеҙ аҫылынып тора.* З. Биишева. *Алдан килгән атҡа ҡарағылары килә, ул юҡ. «Ул сабып уҙҙы ла күҙҙән юғалды. Бәйгеһен дә таҡмаған...» тигән .. бер фекер тыуа.* Д. Юлтый.

**5.** *күсм.* Ярыш, көс һынашыу. □ Конкурс, состязание. *Сәсәндәр бәйгеһе.* ■ *Ижад бәйгеһендә ебәк шәлде Мостай Кәрим аты йыш ала.* Й. Гәрәй.

**6.** *миф.* Ырыуҙың именлеге осон, яман көстәрҙе ҡыуыу, балаларҙы һәм йәштәрҙе ҡурсалауға йүнәлтелгән ат сабыштары. □ Конные скачки; мифологизированное действие, направленное на обеспечение благополучия рода, изгнание злых сил, защиты и лечения детей, молодняка. *Исем бәйгеһе.*

**БӘЙГЕ АЛЫП ҠАСЫУ (бәйге алып ҡас-)** (Р.: обычай срыва красного пояса на свадьбе; И.: kind of traditional rite; Т.: düğün töreni) *к. этн.*

Туйҙа ҡунаҡтарҙың береһенең ҡыҙыл билғауын алып ҡасыу һәм шуны сабышып алыу йолаһы; ҡот сабыу. □ Обычай срыва красного пояса одного из гостей свадьбы и гонки за ним.

**БӘЙГЕ АТЫ** (Р.: скакун; И.: fast horse; Т.: yarış atı) *и.*

Бәйгелә ҡатнашыусы ат. □ Скакун, скаковая лошадь. *Бәйге аттары тотоу.*

**БӘЙГЕ ҠАМСЫҺЫ** (Р.: бич для гонки; И.: lash used in horse races; Т.: kamçı) *и.*

Ат сабышында ҡулланылған ҡамсы. □ Бич для гонки. *Бәйге ҡамсыһы шартлатыу.*

**БӘЙГЕЛЕК (бәйгелеге)** *и. ҡар.* **бәйге 3, 4.** ■ *Бер йәйләүҙә бик өлкән бәйге йыйылған. Майҙан халыҡ менән ала-сыбар. Унда көрәш, һәр төрлө уйын-көлкө. Сапҡын аттарға береү өсөн эленгән бәйгелектәр елберләй.* Әкиәттән.

**БӘЙГЕ САБЫУ (бәйге сап-)** (Р.: участвовать на скачках; И.: take part in horse races; Т.: at yarışlarına katılmak) *ҡ.*

Ат ярышында ҡатнашыу. □ Участвовать на скачках. *Егеттәр аттарын бәйге сабырға әҙерләй.*

**БӘЙГЕ ТЕГЕҮ (бәйге тек-)** (Р.: прибивать кол с красной тканью; И.: drive a special peg for national horse racing; Т.: bir simge bırakmak) *ҡ.*

Бәйге (4) тағылған ҡаҙыҡты ярыш майҙанына ҡаҙау. □ Прибивать кол с красной тканью на место проведения конных скачек. ■ *Мәсем хан Ураҙ ханға күрше булған... Йыл һайын бәйге тегеп, бәлүән һайлап, икәүе уйын уйнап ятыр булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**БӘЙГЕ ЭЙӘРЕ** (Р.: скаковое седло; И.: racing saddle; Т.: yarış eyeri) *и.*

Ат сабыштарында ҡулланылған алғараҡ һуҙылған яҫы ҡапталлы махсус эйәр. □ Скаковое седло. *Бәйге эйәренә менеп ултырыу.*

**БӘЙГЕ ЮЛЫ** (Р.: путь для конных скачек; И.: running track; Т.: yarış yolu) *и.*

Ат сабыштары өсөн махсус әҙерләнгән, төп йүнәлеше һәм үтәсәк урындары билдәләнгән юл. □ Путь, расстояние для конных скачек.

**БӘЙҒӘМБӘР** *и. ҡар.* **пәйғәмбәр.** *Мөхәммәт бәйғәмбәр.*

**БӘЙҒӘМБӘР ТЫРНАҒЫ** *и. бот. ҡар.* **пәйғәмбәр тырнағы.**

**БӘЙҒӘТ** [ғәр. بيعة] (Р.: клятва верности; И.: vow of fidelity; Т.: bağlılık yemini) *и. иҫк. кит.*

Тоғро булырға бирелгән ант. □ Клятва верности. *Бәйғәт биреү.*

**БӘЙЕЛ** [ғәр. بيل] (Р.: нрав; И.: temper; Т.: cibilliyet) *и.*

**1.** Ҡылыҡ, холоҡ. □ Нрав, характер; натура. *Йомшаҡ бәйелле кеше. Бәйеле аҙған.* ■ *«Ғүмере ҡыланмағанды, бәйелең аҙып йөрөмә! Әйҙә ҡайт!» — тип ул [Миңзифа] ирен этә-төртә алып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *миф.* Кешенең ҡылығы, холҡо, теләктәре, уның эске «мин»енең кәүҙәләнеше. □ Олицетворение характера, натуры человека; его желания; его двойник, внутреннее «я». Он может быть добрым, отзывчивым и злым; остаться без изменения и испортиться; может жить автономно от самого человека и не подчиняться ему.

♦ **Бәйеленә баш була алмау** теләктәренә ҡаршы тора алмау. □ Дать волю желаниям. **Кесе бәйел(ле)** кеселек(ле), түбәнселек(ле); олоно оло тип белеүсән. □ Учтивый человек. **Киң бәйел(ле)** кешегә ярҙамсыл, йомарт; киң күңел(ле). □ Человек с широкой натурой. **Ҡаты бәйел** уҫал, яуыз. □ Злой. **Оло бәйел(ле)** 1) олоно оло тип хөрмәт итә белмәгән, үҙен ҙурға ҡуйыусан. □ Высокомерный; 2) олпат. □ Величественный.

**БӘЙЕЛ АҘЫУ (бәйел аҙ-)** (Р.: испортиться; И.: become spoilt; Т.: bozulmak) *ҡ.*

Холоҡ боҙолоу, холоҡһоҙланыу. □ Испортиться *(нравом, характером).* ■ *Һинең бәйелең аҙған, егет-елән янына йыйылған.* Халыҡ йырынан. *Бынау һыйырҙың бәйеле аҙып китте әле, тибеп, һөттө түгә лә ҡуя.* Т. Морат. *Дәғүәләшмә һин, юҡ икән дәлилең, бер ваҡытта ла аҙмаһын бәйелең.* А. Игебаев. ● *Бәйел аҙмай, башҡа бәлә килмәй.* Мәҡәл.

**БӘЙЕЛ ҮҘГӘРМӘҮ (бәйел үҙгәрмә-)** (Р.: остаться без изменения; И.: remain unaltered; Т.: huyu değişmemek) *ҡ.*

Холоҡ үҙгәрешһеҙ ҡалыу. □ Остаться без изменения *(о характере). Олоғайһа ла, бабайымдың бәйеле үҙгәрмәй.*

**БӘЙЕЛҺЕҘ I** (Р.: невыдержанный; И.: lacking self-control; Т.: acemi) *с.*

Насар холоҡло, тотанаҡһыҙ. □ Невыдержанный, распущенный. *Бәйелһеҙ булыу.* ■ *«Тә-әк! — тип һуҙып, Забирский ишеккә ыңғайланы, һөмөрө киткән, күҙендәге бәйелһеҙ ялҡын һүнгән. — Бығаса һине синыфташ*

*итеп, гел яклашып килгәйнем».* Ә. Хәкимов. *Ул сакта ук бәйелһеҙҙәрҙе тыйып маташты, шуға ла яратманылар үҙен.* Б. Рафиков.

**БӘЙЕЛҺЕҘ II** (Р.: страдающий недержанием мочи; И.: person suffering from uric incontinence; Т.: idrarını tutamayan) *с. диал.*

Бәүелен тота алмаған. □ Страдающий недержанием мочи. *Бәйелһеҙ бала.*

**БӘЙЕТ I** [ғәр. بيت ‘куплет, стих’] (Р.: баит; И.: sort of Moslem verse; Т.: beyit) *и.*

**1.** Ғибрәтле йә хәсрәтле бер ваҡиғаға арналған шиғри хикәйәт. □ Баит *(эпический и лиро-эпический жанр башкирского фольклора). Бәйет сығарыу. Бәйет әйтеү.* ■ *Был бәйетте яҙмаҫ инем, сыҙап булмай йөрәккә.* Бәйеттән. *Ул сакта Сәхип әбей иҫән ине, бәйеттәрҙе ул сығара торғайны.* С. Агиш.

**2.** Көнсығыш шиғриәтендә йәнәш рифмалы ике юллы шиғыр. □ Баит.

**БӘЙЕТ II** *и. диал. кар.* **мөйәт.** *Ҡамыт бәйете. Бәйет үреү.*

**БӘЙЕТСЕ** (Р.: сочинитель баитов; И.: author of *bheyts*; Т.: beyit yazan kimse) *и.*

**1.** Бәйет сығарыусы. □ Сочинитель баитов. *Бәйетсе ижады.*

**2.** Бәйет әйтеүсе. □ Исполнитель баитов. *Бәйетселәр ярышы.*

**БӘЙЛЕ I** (Р.: связанный; И.: tied; Т.: bağlı) *с.*

**1.** *Берәй нәмәгә* осо төйөнләп беркетелгән. □ Связанный, завязанный, привязанный *к кому-чему. Бәйле еп.* ■ *Айыу килгәс, тәпенең эсенә инеп, һайғауға бәйле итте тартһа, ырғаҡ ыскынып китмәле генә булды.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Бау осона тағылған, бауландырып тағылған. □ Привязанный к верёвке. *Бәйле күнәк. Арҡан бәйле тора.*

**3.** Таралмаҫлыҡ итеп бау менән тарттырылған, сырмалған. □ Связанный. *Бәйле йөк. Бәйле китап. Бәйле көлтә.*

**4.** Осо йәки ауыҙы бөрөп быуылған. □ Связанный. *Бәйле тоҡ. Нәмәләр бәйле ята.*

**5.** Өҫтөнән ҡаплап уралған, бинт менән уралған. □ Завязанный. *Күҙе бәйле кеше. Бәйле яра.*

**6.** Хәрәкәтләнә алмаҫлыҡ итеп сырмалған. □ Связанный. *Бәйле кеше. Бәйле ҡул. Бәйле ултырыу.* ■ *Карауатта бәйле ятҡан кеше Лайон бит!* Н. Ғәйетбаев.

**7.** Китеп бармаҫлыҡ итеп бау менән *нимәгәлер* беркетелгән *(мал-тыуар, ҡош-ҡортҡа ҡарата).* □ Привязанный. *Бәйле эт.* ■ *Менеп килгән аттарын кәртә артында бәйле ҡалдырып, ишек алдына үҙҙылар.* Б. Бикбай. *Алты ҡолас ала бейә тимер бағанала бәйле тора.* Әкиәттән. *Улар [колонсактар] гел генә шулай бәйле торалармы ни, бахырҙар?* З. Биишева. *Ҡарат әле тыныс ҡына бәйле тора, бөҙрә ялдары ҡырҡылған, ялбыр ҡойроғо ҡоросланған.* З. Ураҡсин. ● *Бәйле һарыҡ ерендә утлар.* Мәҡәл.

♦ **Аяҡ-ҡулы бәйле** өйҙән сығыу, йөрөү иркенән мәхрүм кешегә әйтелә. □ Связан по рукам и ногам. **Башы бәйле** булыры шикһеҙ, томошҡа ашыуы мотлаҡ. □ Безусловная достоверность, несомненность. **Бәйле ҡош һымаҡ** өйҙән сығыу, йөрөү иркенән мәхрүм кешегә әйтелә. □ Как привязанный. ■ *[Гөлзифа — Миләүшә хаҡында:] Бисара, һаман бәйле ҡош һымаҡ бала янында.* Б. Бикбай.

**БӘЙЛЕ II** (Р.: относящийся; И.: connected (with); Т.: bağlı) *бәйл.*

*Берәй нәмәгә,* эш-хәлгә, һөҙөмтәгә ҡатнашы, йоғонтоһо, мөнәсәбәте булған. □ Относящийся, связанный; зависимый, зависящий. ■ *Гөлбаныуға бәйле ни генә ҡыбырлатһа ла, ахыры хәйерле үтмәгәненә үҙе лә аптырай башланы инде Ихсанбай.* Т. Ғарипова. *[Сәғиҙә:] Оҙатырға пароходка төшһәм дә, ҡулыңды ҡыҫып ҡала алманым. Ул минең генә ғәйебемдән булмағандыр, йәшлек дыуамаллығына бәйле сәбәптәр арҡаһында килеп сыҡҡандыр.* М. Тажи. *Борон-борондан ил яҙмышына бәйле һәр оло ваҡиға халыҡ күңелендә йыр-моң булып ағылыр булған.* К. Мәргән. ● *Ир яҙмышы илгә бәйле.* Мәҡәл.

**БӘЙЛЕЛЕК (бәйлелеге)** (Р.: зависимость; И.: dependence; Т.: bağlılık) *и.*

Бәйле булыу. □ Зависимость. *Бәйлелектә булыу.*

**БӘЙЛӘМ I** (Р.: вязка; И.: bundle, bunch; Т.: bağlam) *и.*

**1.** Ҡуша бәйләнгән бер төрлө нәмәләр йыйымы. □ Вязка, вязанка, связка; пучок. *Аҫҡыстар бәйләме. Ике бәйләм китап.* ■ *Гранаталар бәйләменә ҡушып, тыйып булмаҫ йөрәк тауышын [Билал] танк аҫтына ырғытты.* Х. Кәрим. *Тәүге кеҫәһе буш ине, ә бына икенсеһенән бер бәйләм аҫҡыстар килеп сыҡты.* Н. Ғәйетбаев. *Малай аш бешереүсенән ике бәйләм банан һәм бер ус дөгө ярмаһы һорап алды.* Ә. Бикчәнтәев. *[Айбулат] урамға боролор алдынан уң яуырындағы тирелләр бәйләмен һул яғына алмаштырған кеше булып, тағы бер артына боролоп ҡараны ла, ҡуҡрәгән кереп, ары атланы.* Һ. Дәүләтшина. *Насир әсе төтөн алған тәпәш өйҙөң өрлөгөнә саҡ-саҡ башын бәрмәне, мөйөш тулы кипкән үлән бәйләмдәренә, тәҙрә төбөндәге шешә-шешә һөлөктәргә ҡарап аптырап ҡалды.* З. Ураҡсин.

**2.** Бер бәйгә һыйырлыҡ күләм. □ Пачка. *Бер бәйләм гәзит. Бер бәйләм сәлек. Ике бәйләм йүкә.* ■ *[Илбикә:] Өс-дүрт бәйләм киндер талҡыным йылҡысыға күлдәк тегергә.* Х. Ғәбитов. *Еләк, ҡып-ҡыҙыл еләктәр! Һабаҡтары менән өҙөп бәйләнгән өсөһөнә өс бәйләм еләк!* Ғ. Байбурин. *[Малайҙарҙың] һары башлыһы, уның [Биктимерҙең] янына уҡ килеп, тәлгәшләп йыйған бер бәйләм еләген уға һуҙҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**БӘЙЛӘМ II** (Р.: вязание; И.: knitting; crocheting; Т.: örgü) *и.*

**1.** Йөн йәки кизенән төрлө кейем бәйләү эше. □ Вязание. *Бәйләм энәһе.*

**2.** Бәйләнелә торған нәмә *(бейәләй, ойоҡ һ. б.).* □ Вязаные вещи. *Бәйләм бәйләү. Бәйләм кейемдәр. Бәйләм шәл. Бәйләм ойоҡ.* ■ *Фәүзиә бәйләмен бәйләүен белде, ата менән ул араһындағы бәхәскә ләм-мим һүҙ ҡыҫтырманы.* Т. Ғарипова. *[Гәйникамал инәй] ҡулына бәйләмен алып, тәҙрә ҡаршыһына килеп ултырҙы. Ләкин бер-ике генә күҙ әйләнде лә эшен ситкә ҡуйҙы.* Яр. Вәлиев. *Нәзифә уның [Миҙхәттең] ҡайтыуын көтөп, ашамайынса, бәйләмен бәйләп ултыра ине.* Н. Мусин. *Ҡолаҡ тыңлай, ҡул яҙа, ләкин беҙҙең иғтибарыбыҙ әбейҙәрҙең ҡулында. Уларҙың һөйләшә-һөйләшә эшләп, бәйләм бәйләп ултырыуы күҙ алдынан китмәй.* К. Мәргән.

**3.** Машина менән бәйләнгән туҡыма һәм шул туҡыманан тегелгән төрлө кейем. □ Трикотаж. *Бәйләм кейеү. Бәйләм тегеү.*

**БӘЙЛӘМ III** (Р.: привязанная; И.: tethered; Т.: bağlı) *с.*

Ҡымыҙға һауыла торған *(бейәгә ҡарата).* □ Привязанная для доения *(по отношению к кобыле). Бәйләм бейә. Бәйләм бейәләр өйөрө.* ■ *Артелдә бәйләм бейәләр генә дүрт өйөр ине.* Н. Мусин.

**БӘЙЛӘМ IV** (Р.: вязаный; И.: knitted; crocheted; Т.: örme) *с. диал.*

Бәйләнгән. □ Вязаный. *Бәйләм ойоҡ. Бәйләм күлдәк. Бәйләм ойоҡ кейеп алған.*

**БӘЙЛӘМЕС I** (Р.: кол; И.: stake, picket; Т.: kazık) *и.*

**1.** Мал бәйләй торған нәмә *(ҡаҙыҡ һ. б.).* □ Кол *(для привязывания животного). Быҙауҙы бәйләмескә бәйләү.*

**2.** Ауыҙ, морондо йәки ауырыу күҙҙе ҡаплап бәйләй торған бәй. □ Маска, повязка. *Грипп менән ауырыған кеше янында бәйләмес бәйләп йөрөргә кәрәк.*

**3.** *мед.* Яралы урынды ҡыҫып, бәйләп, беркетеп ҡуя торған яйланма. □ Повязка для ран. *Яраға бәйләмес һалыу.*

**4.** *этн.* Әбейҙәр маңлайға яулыҡ эсенән бәйләй торған өсмөйөшлө бәләкәй яулыҡ. □ Повязка *(налобная в виде косынки для тепла). Башҡа бәйләмес бәйләү.*

**5.** *диал. ҡар.* **сәсмәү 1.** *Сәсте бәйләмес менән үреү.*

**БӘЙЛӘМЕС II** *и. диал. ҡар.* **бәйләм I, II.** *Аҫҡыстар бәйләмесе.*

**БӘЙЛӘМЕСЛӘҮ (бәйләмеслә-)** (Р.: завязывать; И.: tie up; Т.: bağlamak) *ҡ.*

Бәйләмес (I, 4) итеп бәйләү. □ Завязывать, повязывать. *Яулыҡты бәйләмесләп ябыныу.*

**БӘЙЛӘМӘ I** *и. ҡар.* **ҡуныҫбау.** *Бәйләмә ишеү.*

**БӘЙЛӘМӘ II** *и. ҡар.* **бәйләм I, II.** *Аҫҡыстар бәйләмәһе.*

**БӘЙЛӘМӘ III** *и. ҡар.* **ялан кәртә.** *Атты бәйләмәгә ҡуйыу.*

**БӘЙЛӘМӘ IV** *с. кар.* **бәйләм III, IV.** *Бәйләмә бейә.*

**БӘЙЛӘНГӘНЛЕК (бәйләнгәнлеге)** (Р.: зависимость; И.: dependence; conditionality; Т.: bağımlılık) *и.*

*Нимәгәлер* бәйле булыу; *нимәгәлер* ихтыяж. □ Зависимость, обусловленность. *Туранан-тура бәйләнгәнлек.*

**БӘЙЛӘНЕҮ (бәйлән-)** (Р.: связываться; И.: connect; Т.: bağlanmak) *к.*

**1.** *төш. кар.* **бәйләү I.** *страд. от* **бәйләү I.** *Бәйләнгән яра. Бәйләнгән төргәк. Бәйләнгән ойоҡ.* ■ *Ил ағаһы ошонан аҙаҡ ханға үҙе йылдар буйына һаклап йөрөткән йүкә сәскәһен сайкатып, балан кағы кушып, мәтрүшкә катыш карағат сәйе эсергән, каҙаяк, аҫкорһак, мәтрүшкә кушып бәйләнгән кайын миндеген парлап, күкрәгенә куйған да муйыл сәскәһен еҫкәткән.* Н. Мусин. *Акъял батыр. Ертыңлар батырҙың бәйләнгән колағын күреп: «Колағыңа ни булды?» — тип һораған.* Әкиәттән. ● *Кыҙлы өйгә кырк ат бәйләнер.* Мәкәл.

**2.** Үҙ-ара яҡынлыкта булыу, тоташыу. □ Быть связанным, зависимым. *Вакиғалар бер-береһенә бәйләнгән.* ■ *Ул вакиғаның икеһе бер-береһенә бәйләнгән.* Д. Юлтый. *Ярай, вакыты менән барыһы асыкланыр әле; ә хәҙергә бары шуныһы асык: беҙ, ниндәйҙер, күҙгә күренмәгән ептәр менән бер-беребеҙгә бәйләнгәнбеҙ.* Б. Бикбай. *Башка бер-береһенә һис кенә лә бәйләнмәгән уйҙар килә.* С. Агиш.

**3.** *күсм. Нимәгәлер* йәки *ниндәйҙер* шартка мөнәсәбәтле, катнашлы булыу. □ Быть связанным, зависимым. *Ғүмере фәнгә бәйләнгән.* ■ *Һәр бер кешенең яҙмышы — ил яҙмышы, уның именлеге ил именлегенә бәйләнгән.* М. Кәрим. *Бөтә тормошобоҙ шул ергә бәйләнгән.* Т. Хәйбуллин. *Күҙ алмаһылай балаһының яҙмышы ете ятка бәйләнгәнен атайҙар ауырырак кисерә шул.* Ғ. Ғизәтуллина.

**4.** *күсм. Ниндәй ҙә булһа* эш, шөғөлгә бирелеү; тотоноу. □ Браться, приниматься. ■ *Сакай ауыл мәҙрәсәһен бөтөргәс, өйләнеп, хужалык эштәренә бәйләнеп китте.* Б. Бикбай.

**5.** *һөйл. Кем менәндер* бәйләнешкә инеү. □ Связываться, спутываться *с кем-чем (в каком-л. деле). Уның менән бәйләнмә.* ■ *Насар кыҙҙарға бәйләнһәң, булырһың әҙәм көлкөһө.* Халык йырынан. *«Уға [Кыҙылтешкә] бәйләнмәүең якшырак булыр ине», — тип инәлергә тотонды Самат.* Ә. Бикчәнтәев.

**6.** *күсм. Ниндәйҙер* талап, һорау менән йөҙәтеү. □ Приставать, привязываться, придираться. ■ *[Йосоп:] Бәйләнделәр бит миңә әкиәт һөйлә тип. Мин .. баш тарттым.* С. Агиш. *Шул вакыт Күсәк батыр әйләнә, ти, һүҙ әйтеп, балаларға бәйләнә, ти.* «Бабсак менән Күсәк».

**7.** Йөҙәтеп, тынғыһыҙлап, кешегә тағылыу. □ Приставать, привязываться, придираться. *Кыҙҙарға бәйләнеү.* ■ *Ул [катын] миңә бәйләнә, минең менән шаяра, танауҙан кыҫа, биттән һыйпай.* Д. Юлтый.

**8.** Берәй сәбәп табып, бәлә һалып, кешегә йәбешеү. □ Приставать, привязываться, придираться. *Юкка бәйләнмә.* ■ *Былар әрләшеп китә. Батша риза булмай. Көтөүсе оторо нығырак бәйләнә.* Әкиәттән. *Кыҫка ғына әйткәндә, бәйләнерлек урын юк.* И. Абдуллин. *Әхмәҙуллаға ике егет бәйләнде.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Күҙ бәйләнеү** караңғы төшөү. □ Темнеть, смеркаться. *Күҙ бәйләнгәс, килерһең.* ■ *[Буре] шуға көндөҙҙәрен берәй төпкөлдә боҫоп ята ла, күҙ бәйләнеү менән, максатһыҙниһеҙ кыҙырырға тотона...* Ә. Хәкимов. *Күҙ бәйләнеп өлгөргәс тә, дошман һалдаттары һауаға бер-бер артлы ракета сөйә башланылар.* Ғ. Ибраһимов. *Караңғы төшөп, күҙ бәйләнерлек булғас, уракСылар йокоға талды.* А. Таһиров. *Алыш күҙ бәйләнгәнсе дауам итте.* Ғ. Әмири. *Кояш та түбәнәйеп килә, күҙ бәйләнгәнсе, тауҙар араһын үтеп калырға кәрәк.* М. Тажи. *Кәмән менән Сәмән күҙ бәйләнгәс кенә үҙ ауылдарына кайтып инделәр, ти.* Әкиәттән. *Кояш байып, күҙ бәйләнә башлауға Шәңгәрәй уянды.* С. Агиш. *Күҙ бәйләнә башлағанда, Байморattың ута-*

*рына яҡынлаштыҡ.* Н. Мусин. *Эңер төштө, ҡараңғыланған бүлмә эсендә күҙ бәйләнә башланы.* Я. Хамматов. **Тел бәйләнеү** һүҙ һөйләй алмаҫ булыу *(аптырау, оялыу, ҡурҡыуҙан һ. б.).* □ Потерять дар речи, язык заплетается. ■ *[Карлуғас:] Күп уйлауҙан иҫем, аҡылым бөттө, һүҙ әйтергә телем бәйләнде.* Б. Бикбай. **Сәс бәйләнеү** бергә тормош ҡороу, өйләнешеү. □ Пожениться. ■ *Ҡашҡынайы ҡара, буйы зифа шул егеткә сәсем бәйләнгән.* Йырҙан. *Тәҡдир булып, сәскә сәс бәйләнһә, аҡ ҡорбандар салыр инем арнап.* Ҡ. Даян.

**БӘЙЛӘНЕШ** (Р.: связь; И.: connection; relationship; Т.: bağlantı) *и.*

**1.** *Ниндәйҙер* йәһәттән ике арала булған ҡатнашлыҡ. □ Связь, отношения. *Диалектик бәйләнеш.* ■ *Һис бер ваҡиғаға бәйләнеше булмаған был һорауға мин аптырап ҡалдым.* Д. Юлтый.

**2.** Хәбәр алышып тороу мөмкинлеге. □ Связь. *Бәйләнеш өҙөлдө.* ■ *Хәл ҡатмарланды. Кәжән менән Юрғашты араһындағы бәйләнеш өҙөлдө. Унда ебәрелгән кешеләр ҙә әйләнеп ҡайтманы.* Я. Хамматов.

**3.** Үҙ-ара хәбәр алышып тороу сараһы; элемтә. □ Связь. *Телефон бәйләнеше. Һауа бәйләнеше. Яһалма юлдаш аша бәйләнеш.* ■ *Телефон сымдары өҙөлөп бөттө, бәйләнеш юҡ.* С. Әлибаев. *Телефон бәйләнешенең рәте киткән.* Д. Юлтый.

**4.** Эш, тормоштағы үҙ-ара ҡатнашлыҡ. □ Общение *(с кем-чем-н., что даёт возможность сообщаться). Дуҫлыҡ бәйләнеше. Ғаилә бәйләнеше. Иҡтисади бәйләнеш. Халыҡ-ара бәйләнеш. Бәйләнешкә инеү. Бәйләнеш тотоу. Бәйләнеште өҙөү.* ■ *Шағир өсөн иң ҙур бәхет — уҡыусы менән үҙе араһында йөрәк бәйләнеше, көсләнгән бәйләнеше булдыра алыуҙа.* Н. Нәжми. *Сауҙа бәйләнештәре өҙлөкһөҙ арта баралар.* С. Агиш. *Быҙның өсөн улар менән тығыҙ бәйләнешкә инергә, бер төптән булырға кәрәк.* Д. Юлтый.

**5.** *хим.* Төрлө матдәнең химик ҡушылдығы. □ Соединение. *Көкөрт бәйләнештәре.*

**БӘЙЛӘНЕШЕҮ (бәйләнеш-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **бәйләнеү.** *взаимн. от* **бәйләнеү.** *Бер-береһенә бәйләнешеп алып киттеләр.*

**2.** Бәйләнеш булдырыу, бәйләнешкә инеү; аралашыу. □ Сотрудничать. ■ *Күрәһең, Аҡколаға үрелгән йүнһеҙ нәмә был өйҙө тышҡы донъя менән бәйләнешеү өсөн төйәк итеп кенә тота торғандыр.* Б. Бикбай.

**БӘЙЛӘНЕШКӘ КЕРЕҮ (бәйләнешкә кер-)** (Р.: войти в связь; И.: establish relations (with); Т.: ilişkiye girmek) *ҡ.*

Һөйләшеп, осрашып, хәл белешеп тора башлау; бәйләнеш тотоу. □ Войти в связь. *Интернет аша бәйләнешкә кереү. Телефон аша бәйләнешкә кереү.*

**БӘЙЛӘНЕШЛЕ** (Р.: соотносительный; И.: connected (with); Т.: bağlı) *с.*

Берәй нәмәгә, эш-хәлгә йәки һөҙөмтәгә *ниндәйҙер* йәһәттән ҡатнашлы, бәйле. □ Соотносительный, связанный. *Бәйләнешле төшөнсә.* ■ *Бында ла [Троицкиҙа] бит исемле урындар, әҙәбиәт тарихына бәйләнешле ерҙәр күп.* К. Мәргән.

**БӘЙЛӘНЕШ ТОТОУ (бәйләнеш тот-)** (Р.: держать связь; И.: hold connection (with); Т.: iletişimi koparmamak) *ҡ.*

Һөйләшеп, осрашып, хәл белешеп тороу. □ Держать связь, иметь связь. *Телефон аша бәйләнеш тотоу. Интернет аша бәйләнеш тотоу.*

**БӘЙЛӘНЕШҺЕҘ** (Р.: бессвязный; И.: incoherent, unconnected; Т.: anlamsız) *с.*

Мәғәнә йәһәтенән йәки башҡа яҡтан үҙ-ара яҡынлығы, ҡатнашы булмаған. □ Бессвязный, несвязный. *Бәйләнешһеҙ һүҙҙәр. Бәйләнешһеҙ уйҙар. Бәйләнешһеҙ һөйләү.* ■ *Уның [Фатиманың] башында бәйләнешһеҙ әллә ниндәй уйҙар ҡупмаштылар, ләкин бер уйының да осона сыға алманы.* Ж. Кейекбаев.

**БӘЙЛӘНМӘ** *и. этн. ҡар.* **ҡунысбау.** *Бәйләнмә ишеү.*

**БӘЙЛӘНСЕК** (Р.: назойливый; И.: obtrusive; importunate; Т.: yapışkan) *с.*

Кешегә бәйләнеп йөҙәтеүсән. □ Назойливый, навязчивый; задира. *Бәйләнсек кеше.* ■ *Иркә шунда уҡ Аҡназаровты таныны һәм,*

*бәйләнсек егеттән котолоуына ҡыуанып, уның эргәһенә ташланды.* Ә. Вәли. *Закир, вакытһыҙ хәтергә килгән был бәйләнсек уйҙан котолорға теләп, иғтибарын тартырҙай нөктә эҙләп ҡараны.* З. Биишева.

**БӘЙЛӘР** *и. этн. кар.* **байлар.**

**БӘЙЛӘТЕҮ (бәйләт-)** *ҡ. йөкм. кар.* **бәйләү I.** *понуд. от* **бәйләү I.** ■ *Ирен ҡайһылай итеп кейендерергә белмәйенсә, Зәлифә бөтөрөлөп йөрөй. Ике тапҡыр күлдәген алмаштырртты, өс мәртәбә галстук бәйләтте. Ҡара ҡуйы сәстәрен үҙе шымалап тарап ҡуйҙы.* «Ағиҙел».

**БӘЙЛӘҮ I (бәйлә-)** (Р.: завязывать; И.: knot; Т.: bağlamak) *ҡ.*

**1.** Бау йәки бау һымаҡ нәмәнең осон бергә ҡушып төйөнләү. □ Завязывать; связывать. *Сейәлдереп бәйләү. Элмәкләп бәйләү.* ■ *Эткол бауландырып бәйләп ҡуйған иҙербауын тартып өҙҙө.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Бауҙың осон *берәй нәмәгә* төйөнләп беркетеү. □ Связать, привязать. ■ *Ана Билдәштең мөгөҙөнә бау таҡтылар, сананың тәртәһенә бәйләнеләр.* Т. Ғарипова. *Беҙ [бүре балаһын] кистәрен сыйыырға бәйләп тота инек.* С. Кулибай. *Күрән аткайымды бәйләп ҡуйҙым күл буйҡайҙарына тирәккә.* Халыҡ йырынан. *Буҙансы батыр арҡандың бер осон бағанаға бәйләп .. ер аҫтына төшөп киткән.* Әкиәттән. *Ул арала Төлкөсура атынан һикереп төштө, теҙгенен саукаға бәйләне, суҡмарын һап осондағы бауынан беләгенә элгән килеш әкрен һәм һағайып атлап һеләүһен эргәһенә килде.* Н. Мусин. *Сәғиҙулла етеҙ һикереп эйәрҙән төштө лә атын лапаҫ аҫтына бәйләне.* З. Биишева.

**3.** Бауҙың осона берәй нәмә тағыу. □ Привязывать. ■ *Былар [батырҙар], арҡандың осона таш бәйләп, ер тишегенә төшөрөп ҡараған.* Әкиәттән.

**4.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә бау менән тартып ҡуша беркетеү. □ Привязывать, подвязывать. *Йөктө бәйләү. Ҡапҡаны бәйләү.* ■ *Кемдер серек йүкә менән иҫке ҡапҡаны бәйләп ҡуйған. Фәриҙә бауҙы сисә башланы.* Р. Солтангәрәев. *Ҡолғаларға бәйләп йөн иләйем, әллә нишләп йөнөм ырамай.* Халыҡ йырынан.

**5.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә бауландырып тағыу. □ Завязывать. ■ *Билкәйемде минең шул талдыра: ҡайыш баулы ҡылыс бәйләһәм.* Халыҡ йырынан.

**6.** Урап йәки осон осҡа төйнәп, өҫбашҡа ҡулайлау *(ҡайһы бер өҫ кейемена ҡарата).* □ Завязывать, обвязывать, повязывать. *Алъяпҡыс бәйләү. Галстук бәйләү. Таҫтар бәйләү. Шарф бәйләү. Шәл бәйләү. Ботинканың бауын бәйләү.* ■ *Сәғиҙә башына яулыҡ бәйләне.* М. Тажи. *Малайҙар сығып киткәс, Нәғимә инәй, һандыҡтан алып, оҙон сыбар күлдәген, йәшел бәрхәт камзулын кейҙе, яңы ҡушъяулығын бәйләне.* М. Кәрим. *Әбей яулығын эйәк аҫтынан салып бәйләй һалды, аҡ сәстәрен яулығы эсенә йыйып йәшерҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**7.** Таралмаҫлыҡ итеп бау менән тарттырыу. □ Завязывать, повязывать, перевязывать; паковать. *Китаптарҙы бәйләү.* ■ *Һалдаттар ашығып-ашығып Варшаванан алған нәмәләрен бәйләй.* Д. Юлтый.

**8.** Осон йәки ауыҙын бөрөп, бау менән быуыу. □ Связывать, обвязывать. *Тоҡто бәйләү.* ■ *Малайҙың кендеген ҡырҡып бәйләгәндәр ҙә, атаһының сәкмәненә урап, ҡыуышҡа индереп һалғандар.* Әкиәттән.

**9.** Өҫтөнән ҡаплап урау. □ Завязывать. *Ауыҙҙы бәйләү. Күҙҙе бәйләү.* ■ *Бинт пакетын асып, һыңар ҡул менән йәрәхәтте арлы-бирле генә бәйләнем.* Д. Юлтый.

**10.** Бау менән тарттырып әҙерләү, әҙер итеү. □ Вязать, связывать. *Һал бәйләү. Миндек бәйләү. Көлтә бәйләү.* ■ *Һабыр менән Иҫәнгилде, йүгерә-атлай йөрөп, көлтә бәйләй.* Ғ. Дәүләтшин. *Аҡйондоҙ инде көлтә бәйләргә тотондо.* М. Кәрим.

**11.** Билдән уратып тарттырыу; быуыу. □ Завязывать. *Билгә билбау бәйләү.*

**12.** Ҡуҙғала алмаҫлыҡ итеп ҡыҫып сырмау. □ Вязать, связывать, стягивать. *Аяғын бәйләү. Ҡулын бәйләү.* ■ *Һине бәйләп тотҡан нык бығауҙы бик тиҙ генә өҙә алмаҫһың.* Ш. Бабич. *Ҡыуғынсылар Заятүләкте, бер ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәһә лә, аяҡ-ҡулын*

*бәйләп, атаһы Сәмәр ханға алып ҡайталар.* Халыҡ ижадынан. *Зәбих менән Ишбулатовты һуҙып һалдылар, аяҡ-ҡулдарын арба үрәсәһенә шаҡарып бәйләнеләр.* Ә. Вәли.

**13.** Йөндән, ептән махсус энә йәки башҡа нәмә менән үреп төрлө кейем, төрлө нәмә эшләү. □ Вязать. *Ау бәйләү. Бейәләй бәйләү. Бирсәткә бәйләү. Селтәр бәйләү. Шәл бәйләү.* ■ *Гөләйшә инәйем уның [Мөхиттең] муйынына шарф та бәйләп өлгөрттө.* К. Кинйәбулатова. *Айһылыу .. көслө ихтыярҙы аңлатҡан аҡыллы баҙыҡ ҡараштарын алыҫҡа төбәп, тын ғына шәл бәйләп ултыра.* З. Биишева. *Болдорҙа ултырған ҡатын, бәйләүенән туҡтамай ғына, ара-тирә керҙәргә күҙ һалып ала.* М. Кәрим. *Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем, шәлем түңәрәк түгел.* Халыҡ йырынан.

**14.** *күсм. Нимәгә* йәки *ҡайҙалыр* айырылмаҫлыҡ итеп беркетеү. □ Привязывать. ■ *Яҙмыш уны [Сәғиҙәне] Ҡарамалы ауылына мәңгегә бәйләп ҡалдырҙы.* М. Тажи. *Бәйләнең һин минең хистәремде, китеп булмай һинең яныңдан.* М. Хәй.

**15.** *күсм.* Бер тәртипкә, мәғәнәгә килтереп ялғау, теҙеү. □ Связывать. ■ *Ул ашыҡты, һүҙҙәрен бәйләмәй һөйләргә кереште.* С. Агиш.

**16.** *күсм. Ниндәйҙер* йәһәттән ике араны ҡатнаштырыу. □ Связывать, увязывать. *Уҡытыусылар уҡытыу эшен фәнгә бәйләп алып бара.*

**17.** Мөнәсәбәте, ҡатнашы бар тип күрһәтеү. □ Связывать. *Кешегә бәйләп һөйләү.*

**18.** Эш-хәлде, берәй һөҙөмтәне *ниндәйҙер* сәбәпкә ҡайтарыу. □ Связывать *с чем-л. Төҙөлөш эшенең артҡа ҡалыуын билдәле ҡыйынлыҡтарға бәйләү.*

**19.** *миф.* Кешеләр араһындағы йәки урынға бәйләнеште, ныҡлыҡты, бөтөнлөктө белдереп бер-береһенә беркетеп ҡуйыу. □ Связывать, завязывать, привязывать *(мифологизированное действие, обеспечивающее связь, прочность, цельность, прикреплённость к месту, человеку. В некоторых обрядах используется как преграда, оберег от порчи, сглаза).*

♦ **Бәйләгән кәүек артта ҡалдырыу** бик тиҙ артта ҡалдырыу. □ Оставить позади. *Бәйләгән кәүек тороу. Бәйләгән кәүек ҡалыу.* ■ *Поездың йөрөшө рәхимһеҙ бит. Бер нисә минут эсендә йәйәүлеләрҙе бәйләгән кәүек артта ҡалдырып китте.* Д. Юлтый. *Яңғыҙ һыбайлы арттағыларҙы бәйләгән һымаҡ ҡалдыра бара.* Т. Килмөхәмәтов. **Бәйләп һоғондороу** алдап, хәйләләп, үҙ мәнфәғәттәрен күреү *(бик хәйләкәр кешегә ҡарата әйтелә).* □ Хитрить, предусматривая собственные цели. **Күҙ бәйләү** зиһенде томалап, кешенең ихтыярына тәьҫир итеү. □ Околдовывать, гипнотизировать. **Күңел бәйләү** йөрәккә ярашлы күреү, оҡшатыу. □ Иметь расположение *к кому-чему.* ■ *Ә Зөлхизә бирәүгә лә күңел бәйләмәй, ҡыр кәзәһе шикелле теремек, шаян булып, уйнап-көлөп йәшәй бирҙе.* З. Биишева. *Уралды ул [Һомай] күргәс тә, батырлығын белгәс тә, яҡшылығын һиҙгәс тә, Уралға күңел бәйләгән, ул Уралды һайлаған.* «Урал батыр». **Өмөт бәйләү** *нимәнеңдер* булырына ышаныу, өмөтләнеү. □ Возлагать надежду на *кого-что;* надеяться, иметь надежду. **Сәсен бәйләү, сәсте** (*йәки* **сәсте сәскә) бәйләү** бергә тормош ҡороу, өйләнешеү. □ Пожениться. ■ *Тимерҡаҙыҡ менән сәсте сәскә бәйләгәндән бирле ул [Зәйтүнә] үҙен бик бәхетле тиеп һанай ине.* Ғ. Ибраһимов. **Эт бәйләһәң торғоһоҙ** бик һыуыҡ *(ғәҙәттә, бүлмәлә, бинала).* □ Очень холодно *(в помещении).* ■ *Мәктәп, халыҡса әйткәндә, эт бәйләһәң торғоһоҙ.* З. Биишева.

**БӘЙЛӘҮ II** (Р.: привязь; И.: tether; Т.: kazık) *и.*

Бәйләй торған урын. □ Привязь *(место). Атты бәйләүгә ҡуйыу.* ■ *Бәйләүҙә аттарҙың булмауына ҡарағанда, ҡунаҡтар күптән килгән булырға тейеш.* Н. Иҙелбай.

**БӘЙЛӘҮЕС I** (Р.: послелог; И.: postposition; Т.: bağlaç) *и. лингв.*

Исем, алмаш, һандан булған бер һүҙҙең икенсе һүҙгә булған мөнәсәбәтен күрһәтә торған ярҙамсы һүҙ (мәҫәлән, өсөн, менән, тиклем һ. б.). □ Послелог. *Төп килеш бәйләүестәре.*

**БӘЙЛӘҮЕС II** *и. ҡар.* **һеңер.** *Аяҡтың бәйләүесе өҙөлөү.*

**БӘЙЛӘҮЕС III** *и. ҡар.* **бәйләмес I.** *Быҙауҙы бәйләүескә бәйләү. Ауыҙ-моронға бәйләүес тағыу. Сәсте бәйләүес ҡушып үреү.*

**БӘЙЛӘҮЕС ТАРАМЫШТАР** (Р.: связки; И.: ligaments; Т.: bağ) *и. анат.*

Һөлдәнең айырым өлөштәрен йәки айырым ағзаларҙы тоташтыра торған айырым туҡымалар. □ Связки. *Аяҡтың бәйләүес тарамышы өҙөлөү.*

**БӘЙЛӘҮЕСТӘР** *и. анат. ҡар.* **бәйләүес тарамыштар.** *Бәйләүестәрҙең бөтөнлөгө.*

**БӘЙЛӘҮЕС ТУҠЫМА** (Р.: ткань соединительная; И.: connective tissue; Т.: bağ dokusu) *и. анат.*

Хайуандарҙа ағзаларҙың һөлдәһен (каркасын) барлыҡҡа килтерә һәм башҡа махсус туҡымаларҙы беркетеүгә хеҙмәт итә торған туҡыма; тоташтырғыс туҡыма. □ Ткань соединительная. *Бәйләүес туҡыманың составы.*

**БӘЙЛӘҮЛЕ** *с. ҡар.* **бәйле I.** *Бәйләүле эт.*

**БӘЙЛӘҮСЕ** (Р.: вязальщик; И.: knitter; Т.: örgücü) *и.*

**1.** Энә йәки ырғаҡ менән ойоҡ-бейәләй һ. б. бәйләгән кеше. □ Вязальщик, вязальщица. *Бәйләүселәр кис ултырып бәйләм бәйләйҙәр.*

**2.** *күсм. Кемдер, нимәлер* араһында бәйләнеш булдырыусы. □ Связной, создающий связь между *кем-л. Бәйләүсе хеҙмәте.*

**БӘЙЛӘШЕҮ (бәйләш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **бәйләү I, 1—16.** *взаимн. от* **бәйләү I, 1—17.** *Ат бәйләшеү. Тоҡтоң ауыҙын бәйләшеү.* ■ *Тимерғәле һарыҡты йыҡты, малайҙар уның аяҡтарын бәйләштеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**БӘЙМЫШ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ҡәбиләһе аймағы. □ Бэймиш *(название родового подразделения башкир племени катай). Бәймыш аймағы башҡорто.*

**БӘЙМӘН ТАБЫУ (бәймән тап-)** (Р.: отдышаться; И.: recover one's breath; Т.: nefes almak) *ҡ. диал.*

Хәл алыу, тынысланыу. □ Отдышаться, успокоиться. ■ *Балаларын башлы-күҙле иткәс кенә бәймән тапты.* Экспедиция материалдарынан.

**БӘЙМӘТ** (Р.: вид мелкой речной рыбы; И.: small riverine fish species; Т.: küçük balık) *и. диал.*

**1.** Ваҡ балыҡ. □ Вид мелкой речной рыбы. *Бәймәт тотоу.*

**2.** *ҡар.* **алабуға.** *Ҡармаҡҡа бәймәт эләккән.*

**БӘЙНӘ-БӘЙНӘ** [ғәр. بين-بين ‘ара, бәйләнеш’] (Р.: подробно; И.: in detail, minutely; Т.: detayli) *р.*

Бик ентекләп, бер нәмәһен дә ҡалдырмай теҙеп (һөйләү). □ Подробно, слово в слово. *Бәйнә-бәйнә һөйләп биреү.* ■ *Башлағас, һөйләйем инде, — тип, [Зөлхизә апай] .. бәйнә-бәйнә тормошон һөйләп бирҙе.* М. Биктимерова. *Бай үҙенең кем икәнен, ҡайҙа китеп барғанын, ниндәй бәләгә осрап, туҡтап ҡалғанын бәйнә-бәйнә һөйләп бирә.* Әкиәттән. *Исмәғил өйөнән сығып киткәндән алып дәрес аҙағына тиклем кисергәндәрен бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе.* Яр. Вәлиев.

**БӘЙНӘЛМИЛӘЛ I** [ғәр. بين الملل] (Р.: интернационал; И.: the International; Т.: beynelmilel) *и. иҫк.*

Ҡайһы бер атамалар эсенә инеп, халыҡ-ара берекмә тигәнде аңлата; интернационал. □ Интернационал. ■ *Һәр урында яңғырай «Бәйнәлмиләл» — берлек йыры.* Д. Юлтый.

**БӘЙНӘЛМИЛӘЛ II** [ғәр. بين الملل] *с. иҫк. ҡар.* **халыҡ-ара.** *Бәйнәлмиләл килешеү. Бәйнәлмиләл байрам.*

**БӘЙНӘТ** [ҡаҙ. < ғәр.] (Р.: мука; И.: torment, torture; Т.: ızdırap) *и. диал.*

Ыҙа, имгәк, мәшәҡәт. □ Мука. *Бәйнәт кенә бала булдың башыма.* ■ *Күҙгә ҡан һауып, аҡлап китте. Тора-бара тома һуҡыр булдым. Башыма бер бәйнәт кенә булды бит.* Ҡ. Аралбаев. ● *Бәйнәт, бәйнәт — төбө зиннәт.* Мәҡәл.

**БӘЙСӘКӘ** *и. диал. ҡар.* **тәпәш.** *Бәйсәкә өй. Бәйсәкә егет.*

**БӘЙТ** [ғәр. بيت] (Р.: дом; И.: home, dwelling; Т.: ev) *и. иҫк.*

Йорт, өй. □ Дом, жилище. *Бәйте бар. Бәйте ҙур.*

**БӘЙТЕЛҒАРУС** [ғәр. بيت العروس ‘дом невесты’] (Р.: комната невесты; И.: bride’s room; Т.: gelin odası) *и. иҫк.*

Ҡыҙҙың кейәү ҡаршылаған бүлмәһе. □ Комната невесты. *Бәйтелғаруска килеү.*

**БӘЙТЕЛМАЛ** [ғәр. بيت المال] (Р.: казна; И.: exchequer; Т.: beytülmal) *и. иҫк.*

Дәүләттең байлығын һаҡлаған урын; ҡаҙна. □ Казна. *Дәүләт бәйтелмалы.*

**БӘЙТУЛЛА** [ғәр. بيت الله] (Р.: дом Аллаха; И.: the Qaaba; Т.: Kâbe) *и. иҫк. кит.*

Дини ҡарашса, Алланың өйө; ғибәҙәт өйө, ҡәғбә. □ По религиозным представлениям, дом Аллаха, Кааба. *Бәйтуллаға ҡарап намаҙ уҡыу.*

**БӘЙҺЕҘ** (Р.: без завязки; И.: stringless, ropeless; Т.: bağsız) *с.*

**1.** Бау, арҡан менән ҡуша нығытылмаған. □ Без завязки. *Бәйһеҙ ҡапҡа. Йөк бәйһеҙ ултыра.*

**2.** Осо йәки ауыҙы бөрөп быуылмаған. □ Не связанный. *Бәйһеҙ тоҡ. Тоҡ бәйһеҙ ята.*

**3.** Тарттырып бәйләнмәгән. □ Не связанный, не завязанный. *Бәйһеҙ көлтә.*

**4.** Өҫтөнән ҡаплап уралмаған. □ Не завязанный. *Күҙе бәйһеҙ. Бәйһеҙ яра.*

**5.** Сырмап бәйләнмәгән. □ Не связанный. *Бәйһеҙ ҡул.* ■ *Дон буйындағы боласыларҙы баҫтырҙы, шведтарҙы еңде, хәҙер уның ҡулы бәйһеҙ.* Н. Мусин.

**6.** Бау менән беркетелмәгән. □ Не завязанный, без привязи. *Бәйһеҙ ат. Эт бәйһеҙ йөрөй.* ■ *Эт бәйһеҙ булған икән, Батырҙың балағына килеп йәбеште.* Н. Ғәйетбаев. *[Насир] Бәйһеҙ эт абалап сыҡҡанға, ҡапҡаны асырға ҡыймай туҡтап ҡалды, эт тә тышҡа ынтылмай, эс яҡтан ярһып өрә.* З. Ураҡсин.

**7.** *күсм.* Әҙәп, тәртиптә йәки эш, ҡылыҡта сикте, саманы белмәгән. □ Необузданный. *Бәйһеҙ кеше.* ■ *[Һөнәрсенең] уйсан күҙҙәрендә ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар ята.* З. Биишева. *[Гөбәй] Мәһинурҙы нисек тә һындырырға ҡырталашып, үҙенең ялтыуын, асылында иһә бәйһеҙ нәфсеһен бар нәмәнән өҫтөн ҡуйып, баланың барлығын-юҡлығын иҫәпкә лә алмай торғайны.* Ә. Хәкимов.

**БӘЙҺЕҘЛӘНЕҮ (бәйһеҙлән-)** (Р.: становиться необузданным; И.: become ungovernable; Т.: dizginsiz olmak) *ҡ.*

Әҙәп, тәртиптә саманан, сиктән сығыу; шашыу. □ Становиться необузданным. *Бәйһеҙләнеп китеү.*

**БӘЙӘ** *и. диал. ҡар.* **хаҡ II.** ■ *[Кунаҡкол ҡарт] үҙенең бәйәһен төшөрмәҫкә тырыша.* К. Мәргән. *Китап, һиңә бәйә биреп булмай, һис төшөрмәм һине мин ҡулдан.* М. Хәй.

**БӘЙӘЛЕ** *с. диал. ҡар.* **хаҡлы III.** *Бәйәле китап. Бәйәле кейем. Бәйәле тауар.*

**БӘЙӘН ИТЕҮ (бәйән ит-)** [ғәр. فعل البيان ‘аңлатма’] (Р.: излагать; И.: set forth; expound; communicate; Т.: beyan etmek) *ҡ.*

Белдереү, һөйләп биреү, аңлатыу. □ Излагать, рассказать, объяснять, разъяснять. ■ *Өсөнсө ырыу исеме булып ҡыпсаҡ, белерһегеҙ, бәйән итеп яҙып ҡуйһаҡ.* «Күҫәкбей». *[Ғатаулла ҡарт] кешеләрҙең ғүмер буйына ергә туймай, зар-интизар йәшәүҙәре, аҙаҡ нисек итеп бәхетле тормош ҡороп ебәреүҙәре тураһында бәйән итә.* Р. Солтангәрәев. *Күңелдәрҙе яҡты һағышҡа сорнауҙы, ғүмерлек мөхәббәт тураһында бәйән итеүсе был йыр йәшенә лә, ҡартына ла берҙәй оҡшай.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 9, 2010.

**БӘЙӘН ҠЫЛЫУ (бәйән ҡыл-)** *ҡ. ҡар.* **бәйән итеү.** ■ *Өфөлә булған ваҡиғаларҙы бик ныҡ борослап, оҙон иттереп бәйән ҡыл әле.* С. Ҡудаш.

**БӘК (бәге)** [боронғо төрки *бәг* ‘хужа’] *и. иҫк. ҡар.* **бей.** *Ишмөхәмәт бәк.*

**БӘКАРӘ** [ғәр. بكارة] *и. ҡар.* **ҡыҙлыҡ.**

**БӘКЕ** (Р.: складной ножик; И.: jack-knife; Т.: sustalı) *и.*

Япмалы бәләкәй бысаҡ. □ Складной ножик. *Ике йәпле бәке. Сәс бәкеһе. Бәке менән ҡырыу. Асмалы бәке. Еҙнә бәкеһе.* ■ *Туғанов .. һәр ваҡыт кеҫәһендә йөрөтә торған әллә нисә асмалы бәкеһе менән консерваны асырға тотондо.* Ә. Вәли. *[Шафиктың] күптәнән бәке теймәгән һаҡал-мыйығы тырпайҙы.* Я. Хамматов. *Һөйәк һаплы, ике йәп-*

*ле, асылмалы-ябылмалы бәке инде шунда.* Ф. Иҫәнғолов. *Сәлим йәнә ҡыйыулана бирә, Кәрим ағайға бәкеһен күрһә[тә].* И. Ғиззәтуллин.

**БӘКЕР I** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең, бөрйән ҡәбиләләре аймағы. □ Бакир *(название родового подразделения башкир племён мин, бурзян). Бәкер аймағы башҡорто.*

**БӘКЕР II** [ғәр. بكر] (Р.: девственность; И.: virginity; Т.: bekirelik) *и.*

Боҙолмаған ҡыҙ сифаты; ҡыҙлыҡ. □ Девственность. ● *Ҡыҙҙың бәкере кемгә китһә, фекере шунда булыр.* Мәҡәл.

**БӘКЕС I** (Р.: сильно загнутый; И.: crooked heavily; Т.: bükük) *с.*

**1.** Осо саманан артыҡ эскә тартып һапланған *(салғы йәки ураҡҡа ҡарата)*; *киреһе* — һоноҡ. □ Сильно загнутый *(о косе, серпе). Бәкес салғы. Бәкес ураҡ.*

**2.** Ике осо ныҡ эскә йомолған *(айға ҡарата)*; *киреһе* — яҙыҡ. □ Сильно загнутый. *Бәкес ай.* ● *Ай тыуғанда бәкес булһа, яуынға була.*

**БӘКЕС II** *и. диал. ҡар.* **әтмәкәй.** *Бәкес ашау.*

**БӘКЕС III** (Р.: толкуша деревянной ступы; И.: brake; Т.: tokmak) *и. диал.*

Ағас киле төйгөсө. □ Толкуша деревянной ступы; льномялка, мялка. *Бәкес менән төйөү.*

**БӘКЕСЛӘҮ (бәкеслә-)** (Р.: подправить лезвие косы; И.: set blade of a scythe; Т.: tırpanın bıçağını düzeltmek) *ҡ. диал.*

Салғы йөҙөн туралау. □ Подправить лезвие косы. *Салғы бәкесләү.*

**БӘКТӘРГӘЙ** *и. диал. ҡар.* **мүктәрге.** *Һаҙ бәктәргәйе.*

**БӘКӘЙ I** *и. диал. ҡар.* **бәкәл I.** ■ *Ағиҙелде аша сыктым аҡ бәкәйле ат менән.* Йырҙан.

**БӘКӘЙ II** *и. диал. ҡар.* **бәрәс I.** *Һарыҡ бәкәйе.*

**БӘКӘЙ III** *и. диал. ҡар.* **бәкәлсәй.** *Бәкәйенән кире батты.*

**БӘКӘЙ IV** *с. диал. ҡар.* **бәләкәй I.**

**БӘКӘЙЛӘҮ I (бәкәйлә-)** (Р.: оягниться; И.: lamb, yean; Т.: kuzulamak) *ҡ. диал.*

Бәрәсләү. □ Оягниться. *Күберәген һарыҡ ҡыш көнө бәкәйләй.*

**БӘКӘКЛӘҮ II (бәкәклә-)** (Р.: сопротивляться; И.: resist; contradict; Т.: direnmek) *ҡ. диал.*

**1.** Сыпрандау, тыпырсыныу. □ Сопротивляться, биться ногами; перечить. *Бәкәкләп ҡарышыу.*

**2.** *күсм.* Әйбер еткерә алмай йонсоу. □ Изнуриться от бедности. *Етешһеҙлектән бәкәкләп йәшәү.*

**БӘКӘЛ I** [дөйөм төрки *бакал* 'бәкәл һөйәге'] (Р.: щиколотка; И.: ankle; Т.: ayak bileği) *и. анат.*

**1.** Аяҡтың енсек түбәнендәге сурайып торған быуын һөйәге. □ Щиколотка, лодыжка. *Бәкәл быуыны.* ■ *Яраһы артыҡ ҡаты түгел, пуля уң аяғының бәкәленә тейгән.* Ш. Насыров.

**2.** Малдың аяҡ быуыны. □ Бабка *(сустав ноги у животного). Нәҙек бәкәлле ат.* ■ *Һикергәндә, уларҙың [коралайҙарҙың] бәкәлдәре .. шырт-шырт итеп бара ине.* М. Тажи. *Низам байҙың аҡ бәкәлле өйөр айғыры киң күкрәге менән өҫтө боҙланып ҡатҡан тәрән ҡарҙы алдан төшөп яра, уның артынан тыу бейәләр, тай-тулаҡ әйәрә.* З. Ураҡсин. *Ҡаһым түрә менгән һор юрғаның бәкәлдәре генә аҡ ине.* Халыҡ йырынан.

**3.** Беләк быуыны. □ Сустав руки.

**4.** *миф.* Тәндең мифлаштырылған өлөшө. □ Щиколотка, лодыжка, бабка *(мифологизированная часть тела).*

♦ **Бәкәле шыйыҡ** эшкә булдыҡлылығы етмәгән кешегә ҡарата әйтелә; быуыны йомшаҡ. □ Недостаточно крепкий, слабоватый. **<Ҡаҡ> бәкәлгә һуғыу** 1) берәй эште башҡарыу мөмкинлегенән яҙҙырыу, сараһыҙ итеү, эшкә, тормошҡа ҙур ҡамасаулыҡ килтереү. □ Подвести; поставить в трудное положение. *Төҙөлөш материалдарының юҡлығы бәкәлгә һуға.* ■ *Ураҡ өҫтөндә.. герман һуғышы сығып, бәкәлгә һуҡты.* Ф. Иҫәнғолов. *Машинаның йыш көйһөҙләнеүе бәкәленә һуға*

*егеттең*. Н. Мусин; 2) өҫтөнлөк күрһәтеп, мыҫҡылға ҡалдырыу. □ Осадить, принизить; утереть нос, заткнуть за пояс. ■ *Халыҡ гөж килеп ҡалды: «Һыңар ҡуллы сатан бәкәлегеҙгә һуҡты бит, егеттәр!»* Ҡ. Ибәтуллин.

**БӘКӘЛ II** (Р.: весь; И.: all; Т.: bütün) *билд. а.*

Бөтә. □ Весь. *Бәкәл халыҡ ошонда.*

**БӘКӘЛ III** *р. ҡар.* **бөтөнләй 2.** *Бәкәл онотҡанмын.*

**БӘКӘЛ БЫУЫНЫ** (Р.: путовый сустав; И.: sort of a joint; Т.: eklem) *и. анат.*

Аяҡ башын тоташтырып, сурайып сығып торған һөйәк быуыны. □ Путовый сустав. *Бәкәл быуыны ҡимәлйеү.*

**БӘКӘЛДӘ** *р. диал. ҡар.* **бөтөнләй 2.**

**БӘКӘЛСӘЙ** (Р.: альчик; И.: pastern mandrel; Т.: bukağılık) *и. анат.*

**1.** Малдың бәкәл быуынындағы ваҡ-ваҡ тупар һөйәк; ашыҡ. □ Альчик, бабка, путовая кость *(надкопытный сустав у лошади). Бәкәлсәй һөйәге.* ■ *Минең сәкәнем дә, сөрөм, тубым да, ашыҡ, бәкәлсәйҙәрем дә [ҡыйыҡса мөйөшөндә ине].* С. Кулибай.

**2.** Шул һөйәктәр менән уйнай торған уйын исеме *(арҡыры һыҙыҡҡа теҙеп ултыртылған бәкәлсәйҙәргә ситтәге бер билдәнән тороп, һуҡҡыс менән бәрәләр; йығылғанын кеше үҙенә ала; теймәй аша барып төшһә, ирегә әйләнеп, тағы бәрәләр; был юлы кемдеке яҡыныраҡ төшкән, шул башлап бәрә; һуҡҡысҡа ҡурғашлап яһаған шул уҡ бәкәлсәйҙе ҡулланғанда, йығылған бәкәлсәйҙе һуҡҡысы йөҙ түбән, йәғни «бүк», булып төшкән кеше генә ала, салҡан, йәғни «сик», булып төшһә, алмай ире ултырта).* □ Бабки *(название игры с использованием путовых и надкопытных костей животных). Бәкәлсәй уйнау. Бәкәлсәй һуғыу.* ■ *Өй артында ауыл малайҙары бәкәлсәй уйнай.* А. Таһиров.

**3.** *диал.* Бармаҡ быуыны. □ Сустав пальцев. *Бәкәлсәйем сыҡты, бармағым һыҙлай.*

**4.** *диал. ҡар.* **бәкәл I.** ■ *Мин бәкәлсәйемдең яныл һыҙлай башлауын тойҙом.* Н. Мусин.

**БӘКӘЛ СӘСЕ** (Р.: щётка; И.: bristle; Т.: tüy) *и. диал.*

Аттың бәкәлендәге оҙон йөн, сәсә. □ Щётка *(над копытом у лошади). Бәкәл сәсе ҡойолоу.*

**БӘКӘЛӘ** (Р.: низкорослый; И.: dumpy; Т.: küçük) *с. диал.*

Тәпөш. □ Низкорослый. *Бәкәлә булып ҡалыу.*

**БӘКӘС I** *с. диал. ҡар.* **бәләкәс I.** *Бәкәс малай.*

**БӘКӘС II** (Р.: альчик; И.: pastern mandrel (bone); Т.: bukağılık) *и. диал.*

Ашыҡ. □ Альчик *(у животных). Бәкәс һөйәге.*

**БӘҠА I** [ғәр. بقاء] (Р.: вечность; И.: eternity; the next world; Т.: ebediyet) *и. иҫк.*

Мәңгелек, мәңгелек донъя; теге донъя. □ Вечность; загробный мир.

**БӘҠА II** [ғәр. بقاء] (Р.: сохранность; И.: economy, parsimony; Т.: tutumluluk) *и. иҫк.*

Һаҡлылыҡ. □ Сохранность. *Бәҡаның файҙаһы.*

**БӘҠИА** [ғәр. بقية] (Р.: остатки; И.: remainder; Т.: kalıntılar) *и. иҫк. кит.*

Ҡалған нәмә; ҡалдыҡ. □ Остатки, остальное. ■ *Ҡағыҙ-ҡара етмәҫ, яҙһам хәлегеҙҙе, тетрәтер таштан ҡаты күңелегеҙҙе, фекер итеп ҡарағыҙ бер эшегеҙҙе, бәҡиаһы тарихтарҙа яҙылыр инде.* Бәйеттән.

**БӘҠҠАЛ** [ғәр. بقال] (Р.: торговец продуктами питания; И.: foodstuffs trader; Т.: bakkal) *и. иҫк.*

Аҙыҡ һатыусы, йәшелсә һатыусы. □ Торговец продуктами питания. *Бәҡҡалдан аҙыҡ-түлек һатып алыу.*

**БӘЛДӘ I** [ғәр. بلدة] (Р.: город; И.: town, fortress; Т.: belde) *и. иҫк.*

Ҡала. □ Город, крепость. *Бәлдә Өфө.*

**БӘЛДӘ II** [рус. *блюдце*] (Р.: блюдце; И.: (small) saucer; Т.: fincan tabağı) *и. диал.*

Сынаяҡ аҫты. □ Блюдце. *Бәлдәгә сәй ҡойоу.*

**БӘЛДӘҮ (бәлдә-)** (Р.: пустить с силой; И.: shoot an arrow (forcibly); Т.: kuvvetle atmak) *ҡ. иҫк.*

Көс менән бәреү; елгәреү. □ Пустить с силой *(стрелу). Уҡ бәлдәү.* ■ *Ҡуҙы яурын*

*ҡорос башаҡ, бәлдәгәндә тайшанып ҡырын китһәң, һиңә хурлыҡ.* Ҡобайырҙан.

**БӘЛЕ** (Р.: соответствие; И.: correspondence; equivalence; Т.: uygunluk) *и. иҫк.*

**1.** *Нимәгәләр* торош иткән, ҡиммәтен ҡайтарырлыҡ булған күләм. □ Соответствие, равнозначность. *Эшенә бәле хаҡы.* ■ *[Әтҡол:] Һин уларҙы ашат, эсер, шуның бәленә улар эшләмәһен дәме әллә?* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *с. мәғ.* Хаҡы, ҡиммәте һ. б. яғынан *нимәгәләр* тиң; торошло. □ Равносильный, равноценный. *Бер үҙе бишәүгә бәле. Минең этем атҡа бәле.* ■ *Эте һарыҡҡа бәле.* М. Ҡулаев.

**БӘЛЕШ I** (Р.: большой пирог с начинкой; И.: (large) meat pie; Т.: börek) *и.*

**1.** Таба йәки тимергә йәйелгән ҡамыр эсенә ниндәйҙер ризыҡ һалып, ҡамыр менән өҫтөн ҡаплап бешергән ашамлыҡ. □ Большой пирог с начинкой, выпекаемый на противне *(начинка кладётся между двумя слоями). Вак бәлеш. Еләк бәлеше. Балан бәлеше. Ит бәлеше. Ҡабаҡ бәлеше. Бәлеш ҡапҡасы. Бәлеш төбө. Бәлеш тышы.* ■ *Сәлимә мейестән әле генә сыҡҡан бәлеште табаһы менән күтәреп килтерҙе.* С. Агиш. *Сәрбиямал сәхәргә ит бәлештәре, майлы ҡоймаҡтар, ҡаймаҡлы сәйҙәр әҙерләй.* З. Биишева. *Бына туралған ит һалып бешерелгән кәбеҫтә бәлеше, ни тиклем генә тырыштырһам да, һинеке кеүек тәмле килеп сыҡмай.* Г. Ғиззәтуллина. *Бәҙри .. Гөлбәҙәр борослап-һуғанлап бешергән бәлештәрҙе ашарға ярата.* Д. Исламов.

**2.** *күсм.* Булдыҡһыҙ, йомшаҡ кеше. □ Размазня *(о человеке).* ■ *[Аллабирҙе — Арыҫланға:] Милиция кешегә улай бәлеш булырға ярамай, туған.* Ш. Бикҡол.

**3.** Йола ашы. □ Обрядовое блюдо, выполняющее проецирующую функцию. *Бәпәй бәлеше. Килен бәлеше.*

♦ **Бәлеш ауыҙ** 1) илаҡ кешегә ҡарата әйтелә. □ Плакса, нюня; 2) булдыҡһыҙ, йомшаҡ кешегә ҡарата әйтелә. □ Ротозей, разиня.

**БӘЛЕШ II** (Р.: ба; И.: oh! (really); Т.: ya) *ымл.*

Ҡапыл аптырағанда әйтелә. □ Ба *(слово, выражающее недоумение). Бәлеш, килеп тә еттеңме?* ■ *[Барый:] Беләһеңме, Самат Кәлиевич кем ул? Директор! [Гөлзада:] Бәлеш!* Ш. Насыров.

**БӘЛЕШ ҠАПҠАСЫ** (Р.: верхний слой пирога; И.: the upper layer; Т.: böreğin üst katmanı) *и.*

Бәлештең өҫкө яғы. □ Верхний слой пирога. *Бәлеш ҡапҡасын телеп алыу.*

**БӘЛЕШЛӘНЕҮ (бәлешлән-)** *ҡ. ҡар.* **бәлшәйеү 1.** *Ирене бәлешләнгән.*

**БӘЛЕШ ТӨБӨ** (Р.: нижний сочень пирога; И.: lower dribbling; Т.: böregin altı) *и.*

Бәлештең аҫҡы яғы. □ Нижний сочень пирога. *Бәлеш төбө ашау.*

♦ **Бәлеш төбө көтөү** ашыҡмай ғына, иң артта йөрөү. □ Не торопясь, идти сзади, позади, ждать свою долю.

**БӘЛЖЕРӘҮ (бәлжерә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бәлйерәү.** *Эҫегә бәлжерәү.*

**БӘЛЖЕҮ (бәлже-)** (Р.: распустить губы; И.: get ready to grab; Т.: dudakları büzmek) *ҡ. диал.*

**1.** Ауыҙ бәлшәйтеү. □ Распустить губы. *Бәлжеп үпкәләү.*

**2.** Быжыу. □ Увядать. *Картуф бәлжегән.*

**БӘЛЖӘЙЕҮ (бәлжәй-)** (Р.: плакать, скривив губы; И.: weep, whimper; Т.: dudakları büzerek ağlamak, ağlama) *ҡ. диал.*

Һытылып илап барыу. □ Плакать, скривив губы. *Бәлжәйергә әҙер генә тораһың.*

**БӘЛЖӘЛӘҮ (бәлжәлә-)** (Р.: наложить шину; И.: splint; Т.: cebirye almak) *ҡ. диал.*

Һынған ағзаны бәйләп ҡуйыу; талыҡлау. □ Наложить шину. *Аяҡты бәлжәләп ҡуйыу.*

**БӘЛЗӘМ** [рус. *бальзам* < гр. *balsamon*] (Р.: бальзам; И.: balm; Т.: pelesenk yağı) *и.*

**1.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең ыҫмалаһы һәм эфир майы булған хуш еҫле ҡуйы һуты *(айырым төрҙәре техникала, медицинала ҡулланыла).* □ Бальзам *(смолистый сок). Бәлзәм ағасы.*

**2.** Дарыу үләненән яһалған төнәтмә. □ Бальзам *(настойка). Бәлзәм яһау. Бәлзәм эсеү.*

**БӘЛЗӘМЛЕ** (Р.: бальзамический; И.: balsamic; Т.: mumyalı) *с.*

Бәлзәме булған. □ Бальзамический. *Бәлзәмле сәй. Бәлзәмле матдәләр.*

**БӘЛЗӘМЛӘНЕҮ (бәлзәмлән-)** *к. төш. ҡар.* **бәлзәмләү.** *страд. от* **бәлзәмләү.**

**БӘЛЗӘМЛӘТЕҮ (бәлзәмләт-)** *к. йөкм. ҡар.* **бәлзәмләү.** *понуд. от* **бәлзәмләү.**

**БӘЛЗӘМЛӘҮ (бәлзәмлә-)** (Р.: бальзамировать; И.: embalm; Т.: mumyalamak) *к.*

**1.** Боҙолоуҙан, сереүҙән һаҡлай торған матдә һөртөп һеңдереү. □ Бальзамировать. *Мәйетте бәлзәмләү.*

**2.** *Берәй нәмәгә* бәлзәм ҡушыу. □ Добавлять бальзам *во что-л. Сәйҙе бәлзәмләп эсеү.*

**БӘЛИ** [фарс. بلى] (Р.: да; И.: yes, indeed; Т.: evet) *мөн. иҫк.*

Эйе, шулай. □ Да, так.

**БӘЛИҒ I** *с. ҡар.* **балиғ.** *Бәлиғ бала.*

**БӘЛИҒ II** [ғәр. بليغ ] (Р.: красноречивый; И.: perfect; Т.: beliğ) *с.*

Матур, төҙөк телле, камил. □ Красноречивый, совершенный. *Бәлиғ әҫәр.*

**БӘЛИҒАНӘ** [фарс. بليغانه] (Р.: красноречиво; И.: with high quality; thoroughly; Т.: nitelikle) *р. иҫк.*

Матур итеп, еренә еткереп. □ Красноречиво, качественно. *Бәлиғанә һөйләү. Бәлиғанә эшләү.*

**БӘЛИҒ БУЛЫУ (бәлиғ бул-)** *к. ҡар.* **балиғ булыу.** ■ *Бәлиғ булған балаларҙы булмаҫ алдап.* М. Ғафури.

**БӘЛЙЕРӘТЕҮ (бәлйерәт-)** (Р.: дряхлеть; И.: grow decrepit; Т.: halsiz düşürmek) *к.*

Хәлһеҙләндереп, ҡарыуһыҙландырып ҡаҡшатыу. □ Дряхлеть. *Әҫәлек уны бәлйерәтте.*

**БӘЛЙЕРӘҮ (бәлйерә-)** (Р.: становиться вялым; И.: become listless; Т.: halsiz düşmek) *к.*

**1.** Хәлһеҙләнеп, ҡарыуһыҙланып, ҡаҡшап ҡалыу. □ Становиться вялым, апатичным, дряхлеть. *Әҫәнән бәлйерәү.* ■ *Ҡартлыҡтан бәлйерәгән бер айыу, һыйыр-фәлән ауларға .. ҡулынан килмәй башлағас, тауыҡ үрсетеп көн күрмәксе булған.* Әкиәттән. *Ниңәләр буйһондо Гөлбаныу. Хәлһеҙләнеп, бәлйерәп киткән аяҡтарын өйөнә табан өҫтөрәне.* Т. Ғарипова.

**2.** *күсм.* Булдыҡһыҙланыу, ебеү. □ Киснуть, раскисать. *Бәлйерәгән ҡиәфәт. Ҡартлыҡтан бәлйерәү.* ■ *[Шәрәф:] Ҡара, малай, бик шәп ҡыҙ ул Сания. Бәлйерәп йөрөһәң, ҡолаҡ ҡағырһың.* Н. Мусин. *Ҡушкөбәк тиштектәренән күҙҙәрен алмайынса, Ғәбделхәй ҡапыл бәлйерәне.* Я. Хамматов. *Уйнамаһаң, ҡайтып йоҡла, бәлйерәп тик ултырма!* Халыҡ ижадынан. *Был ҡыҙ алдында әллә кемең дә бәлйерәп төшөр.* Н. Мусин.

**БӘЛЙЕРӘШЕҮ (бәлйерәш-)** *к. урт. ҡар.* **бәлйерәү 1.** *взаимн. от* **бәлйерәү 1.** *Бәлйерәшеп ултырыу.*

**БӘЛЙЕҮ (бәлйе-)** *к. ҡар.* **бәлйерәү.**

**БӘЛЙӘ** [фарсы بل *бәл, бел* ‘көрәк’] (Р.: поперечный топор; И.: transverse axe; Т.: balta türü) *и.*

Кәкре йөҙлө бағау. □ Поперечный топор *(для выдалбливания колодочных ульев и бортей). Бәлйә менән соҡоу.*

**БӘЛК** (Р.: подражание неустойчивому движению; И.: clap! flop!; Т.: pat) *оҡш.*

*Ниҙендер* тоталҡаһыҙ булып ҡапыл төшөүен белдергән һүҙ. □ Подражание неустойчивому движению. *Бәлк итеү.* ■ *[Йоҡас ҡарттың] башы, быуынһыҙ нәмә кеүек, бәлк итеп төшөп китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӘЛК-БӘЛК** (Р.: подражание многократным неустойчивым движениям; И.: flop! flop!; Т.: pat pat) *оҡш.*

Ҡабат-ҡабат бәлк иткәндә белдергән һүҙ. □ Подражание многократным неустойчивым движениям *(многокр. от* **бәлк***). Бәлк-бәлк итеү. Бәлк-бәлк килеү.*

**БӘЛКЕЛДӘТЕҮ (бәлкелдәт-)** (Р.: шатать; И.: sway; Т.: sallandırmak) *к.*

Бәлк-бәлк иттереү, бәлк-бәлк килтереү. □ Шатать, лишать устойчивости. *Йоҡомһорап арбала башты бәлкелдәтеп барыу.*

**БӘЛКЕЛДӘҮ (бәлкелдә-)** (Р.: лишаться устойчивости; И.: lose balance; reel; Т.: sallanmak) *к.*

Бәлк-бәлк итеү, бәлк-бәлк килеү. □ Лишаться устойчивости, терять равновесие, шататься. *Бәлкелдегән сығыу.* ■ *Бер үҫмер колхоз идараһына аяктары бәлкелдәп килеп ин[де].* Й. Солтанов.

**БӘЛКЕМ** *инш. диал. кар.* **бәлки II.** ■ *Зәйнәп, укыусылар. бәлкем. минән һинең үткәнеңде һорарҙар.* Г. Сәләм. *Тәүҙәрәк Тәзкирә, Мансаф, бәлкем, акылға ултырыр, улын һағыныр, тип өмөт иткәйне.* Ә. Вәли.

**БӘЛКИ I** [ғәр. بلكي] (Р.: а; И.: yet; on the contrary; Т.: belki) *терк.*

Ҡара-ҡаршы ҡуйылып, баш һөйләмгә асыҡлыҡ йәки өҫтәмә индергән эйәрсән һөйләмде теркәй. □ А *(противительный союз). Ел тыҡтамай, бәлки көсәйә генә бара.*

**БӘЛКИ II** (Р.: может быть; И.: probably; Т.: belki) *инш.*

**1.** Уй, фараздың бик үк ышаныс менән әйтелмәгәнен белдерә. □ Может быть, возможно, вероятно, пожалуй. ■ *Ҡайғырма ла, дуҫкай, ай. ҡайғырма, бәлки. рәхәт көндәр күрерһең.* Халыҡ йырынан. *Кем белә, бәлки, Ниязғолдоң берәй ярҙамы тейеп ҡуйыуы бар.* Һ. Дәүләтшина. *[Һөнәрсе — Өйрәнсеккә:] Әйҙә бергәләп эҙләнәйек, бәлки, быға бер кем дә эшләй белмәгән көрләктәр яһарбыҙ, — тигән.* З. Биишева.

**2.** Кәңәш, өндәүҙең бик үк ҡәтғи әйтелмәгәнен белдерә. □ Может быть, возможно, вероятно, пожалуй. *Һөнәрһеҙ ҡыйын бит, бәлки, берәй ергә уҡырға инерһең, ә?* ■ *Сәйҙел, Зәйнәп! Әйҙә киттек шунда, бәлки, йырҙы ҡабат башларбыҙ.* Г. Сәләм. *Ысынлап та, әсәй булған кешеләргә ҡыҙҙары тураһында тәрәнерәк. ныҡырак уйларға, .. уларҙы ҡәҙерһеҙгә ҡалыуҙан һаҡларға кәрәктер, бәлки?!* З. Биишева.

**3.** Һорауҙы йомшартыу өсөн ҡулланыла. □ Может быть *(употребляется для смягчения вопроса). Бәлки, һинең ҡайтҡың килер?* ■ *Ахыр ул [Һөнәрсе] Өйрәнсеккә тағы өмөтлө ҡараш ташлаған: «Бәлки, өйрәнеп ҡарарһың? Айыу балаһы ла өйрәнә».* З. Биишева.

**БӘЛЛЕҮ** *и. диал. кар.* **сәңгелдәк 1.** ■ *Ҡәмәрҙең (шулай ине ҡыҙ) бәллеүе булған тулҡын, диңгеҙ ярһыу күңел биргән, һәм ҡояш биргән ялҡын.* М. Кәрим.

**БӘЛЛИ-БӘҮ** (Р.: баюшки-баю; И.: bye baby!; Т.: ninni) *ымл.*

Сабый баланы көйләп йоҡлатҡанда әйтелә; әүәй. □ Баюшки-баю, баю-баюшки-баю. ■ *Йоҡла, бәгерем, йом күҙеңде, әлли-бәлли, бәлли-бәү.* М. Харис.

**БӘЛЛҮР** [фарс.-ғәр. بلور] (Р.: хрусталь; И.: cut glass, crystal; Т.: billur) *и.*

Гәлсәр. □ Хрусталь. *Бәллүр һауыт.*

**БӘЛЛҮР ТАШ** (Р.: слюда; И.: mica; Т.: mika) *и. мин.*

**1.** Тауҙа була торған йылтыр таш; йылтырған. □ Слюда. *Бәллүр таш табыу. Бәллүр таш эҙләү. Бәллүр таш осратыу.*

**2.** *кар.* **гәлсәр.**

**БӘЛЛӘ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуы аймағы. □ Бәлле *(название родового подразделения башкир бурзянцев). Бәллә аймағы башҡорто.*

**БӘЛЛӘҮЕР I** [фарс.-ғәр. بلور] (Р.: хрусталь; И.: cut glass, crystal; Т.: billur) *и. иҫк.*

**1.** Үҙенә бер төрлө итеп эшләнгән юғары сифатлы саф быяла; гәлсәр. □ Хрусталь. *Бәлләүерҙән эшләнгән һауыт.*

**2.** Бәллүр таш ҡырлы-ҡырлы булып кристаллашҡан үтә күренмәле тау тоҡомо; йылтырған. □ Слюда. *Бәлләүер табыу.*

**БӘЛЛӘҮЕР II** (Р.: хрустальный; И.: crystal; Т.: billur) *с. иҫк.*

Бәлләүерҙән (I) эшләнгән. □ Хрустальный. *Бәлләүер ваза. Бәлләүер һауыт.*

**БӘЛМӘН** *и. диал. кар.* **билмән.** *Бәлмән бешереү.*

**БӘЛСӘН I** *и. диал. кар.* **дегәнәк 1.** *Бәлсән орлоғо.*

**БӘЛСӘН II** *и. диал. кар.* **ләйсән.** *Бәлсән ямғыры.*

**БӘЛТЕК** (Р.: маленький; И.: small; little; Т.: küçük) *с. диал.*

Бәләкәй. □ Маленький. *Бәлтек кенә кеше. Шишмәгә бәлтек кенә улаҡ ҡуйғандар.*

**БӘЛТЕРӘК (бәлтерәге)** (Р.: трусливый; И.: coward; Т.: korkak) *с. диал.*

Ҡурҡаҡ. □ Трусливый, трусиха. *Бәлтерәк кеше.*

**БӘЛТЕРӘҮ (бәлтерә-)** *ҡ. диал.*

**1.** *ҡар.* **бәлйерәү**. *Эҫегә бәлтерәп төшөү.* ■ *Бында урман ҡырҡыусыларҙан тыш әле мыйыҡ та сыҡмаған, ҡыҙыҡ күреү өсөн генә килгән үҫмерҙәр ҙә, бәлтерәп бөткән, таяҡ таянып, бөксәйеп, бишмәт сабыуҙарының итәген ергә һөйрәлтеп атлаусы ҡарттар ҙа байтаҡ ине.* Н. Мусин.

**2.** Маташыу, мәшәҡәтләнеү. □ Возиться, заботиться, хлопотать. *Балалар менән бәлтерәү.*

**3.** Ҡалтырау. □ Дрожать. *Ҡурҡыуҙан бәлтерәп төшөү.*

**4.** *ҡар.* **интегеү**. *Ауыр эштән бәлтерәү.*

**БӘЛТӘ** [рус. < фр. *paletot*] (Р.: пальто; И.: (over) coat; Т.: manto) *и. һөйл.*

Оҙон сабыулы, күлдәк, костюм һ. б. өҫтөнән кейә торған йылы кейем. □ Пальто. *Йоҡа бәлтә. Ҡыштҡы бәлтә. Ҡаракүл яғалы бәлтә. Бәлтә кейеү.*

**БӘЛТӘКӘ** *и. диал. ҡар.* **босҡаҡ 1.** *Бәлтәкәле саңғы.*

**БӘЛҮӘ** (Р.: блюдце; И.: saucer; Т.: fincan tabağı) *и. диал.*

Сынаяҡ аҫты. □ Блюдце. *Бәлүәнән сәй эсеү.*

**БӘЛҮӘН** *и. һөйл. ҡар.* **бәһлеүән.** *Бәлүәндәр көрәше.*

**БӘЛ ҺАЛЫУ (бәл һал-)** *ҡ. ҡар.* **бәләү 2.**

**БӘЛШӘЙЕҮ (бәлшәй-)** (Р.: деформироваться; И.: become deformed; Т.: biçimsizleşmek) *ҡ.*

**1.** Үҙ рәүешен юғалтып, йәйелеп китеү; йәмшәйеү. □ Деформироваться. *Ауыҙы бәлшәйгән. Бәлшәйеп төшкән.*

**2.** *күсм. мыҫҡ.* Иларға итеп ауыҙҙы боҙоу. □ Кривить губы. *Ирен бәлшәйеү. Бер һүҙ әйтер хәл юҡ, бәлшәйеп бара.*

**БӘЛШӘЙТЕҮ (бәлшәйт-)** [төрки] (Р.: деформировать; И.: flatten (one's lips); rumple; Т.: biçimsizleştirmek) *ҡ.*

Рәүешен боҙоп, йәйеү. □ Деформировать. *Ирендә бәлшәйтеү. Эшләпәне бәлшәйтеү.* ■ *Һылыу көртка .. ауыҙын бәлшәйтеп, иламһырап ҡуйғандай булды.* Т. Йәнәби.

**БӘЛӘ** [ғәр. بلا 'бәлә'] (Р.: беда; И.: misfortune; Т.: bela) *и.*

**1.** Тормош именлеген боҙған ауыр, ҡайғылы хәл-ваҡиға. □ Беда. *Бәләгә осрау (тарыу. эләгеү). Башҡа бәлә алыу. Башҡа бәлә төшөү. Бәләнән ҡотолоу. Бәлә килтереү.* ■ *[Булат:] Әсәйем әйтә, был интегеүҙәр һуғыш бәләһе.. ти.* К. Кинйәбулатова. *Тик торғанда бер бәләһе булыр, тип Әтәскол ҡурҡҡан да, Төлкөгә Тауыҡты биргән дә ебәргән, ти.* Әкиәттән. ● *Бәлә — аяҡ аҫтында.* Әйтем. *Бәлә — баш өҫтөндә, каза — ҡаш аҫтында.* Әйтем.

**2.** Йән көйҙөрөрлөк, мәшәҡәт килтерерлек эш-хәл. □ Беда, неприятность. *Бәлә сығарыу.* ■ *[Әбей — ҡыҙҙарына:] Ах, һеҙ, өйөрлө хәсрәт. Башыма бәлә булдығыҙ бит.* Әкиәттән. *Яҡуп һәр бер бойороҡто теүәл үтәргә тырышты. Тик инде өйрәнеп бөттөм тигәндә генә. көтөлмәгән бәлә килеп сыҡты.* М. Кәрим.

**3.** Именлек, тынытлыҡты боҙған ығы-зығы, шау-шыу. □ Неурядица. *Бәлә ҡуптарыу.*

**4.** *Кемгәлер* тағылған ғәйеп. □ Клевета, наговор, напраслина. *Нахаҡ бәлә. Бәлә яғыу.* ■ *Ҡыҙылтеш .. бөтә бәләне бүтәндәргә ауҙарып, үҙен аҡларға маташты.* Ә. Бикчәнтәев.

**5.** *миф.* Эт ҡиәфәтендәге яман көс, бәлә. □ Беда, злой дух в облике собаки. ● *Бәлә ағас башынан йөрөмәй, кеше башынан йөрөй.* Әйтем.

♦ **Аҡ эттең бәләһе ҡара эткә** ғәйепте ғәйепләнән ғәйепһеҙгә ауҙарғанда әйтелә. □ Валить с больной головы на здоровую. **Аяҡлы бәлә** йыш ҡына ҡыйынлыҡ, мәшәҡәт килтергән, имгәк кешегә ҡарата әйтелә. □ Обуза. **Башҡа бәлә алыу** үҙ иркең менән мәшәҡәтле эшкә тотоноу. □ Нажить беду. **Башҡа бәлә төшөү** мәшәҡәтле эш-хәлгә тарыу. □ Беда свалилась. **Бына бәлә** берәй ҡыйын хәлгә төшкәндә әйтелә. □ Вот беда. ■ *[Саҡай:] Бына бәлә! Ике йөҙ бот иген етешмәй бит.* Б. Бикбай. **Бәлә(һе)нән баш-**

**аяҡ** бәләнән алыҫ булған яҡшы тигән мәғәнәлә әйтелә. □ От греха подальше; берегись бед пока их нет. ■ *[Сәйҙел – улына:] Эй, балам, берүк үҙеңде һаҡла инде. Бәләнән баш-аяҡ...* Я. Хамматов. *Ахыр, Аҙнағол килмәҫ була. Бер йыл үтә. Аҙнағол күренмәй. «Бәләһенән баш-аяҡ», – тип ҡыуана Юламан ҡарт.* З. Биишева. **Мең (йәки ҡырҡ) бәлә менән** бик ҙур ҡыйынлыҡ менән. □ С большим трудом. ■ *Мең бәлә менән Лапашты заводына барып еттек.* М. Ғафури. **Эт бәләһе менән** бик ҙур ҡыйынлыҡ менән. □ С горем пополам. *Эт бәләһе менән ҡайтып етеү.*

**БӘЛӘГӘ ҠАЛЫУ (бәләгә ҡал-)** (Р.: попасть в беду; И.: get into trouble; Т.: belaya düşmek) *ҡ.*

Ауыр хәлгә төшөү, ҡазаға дусар булыу. □ Попасть в беду. *Бәләгә ҡалғандарға ярҙам итеү.*

**БӘЛӘГӘ ОСРАУ (бәләгә осра-)** (Р.: попасть в беду; И.: come to grief; Т.: belaya düşmek) *ҡ.*

Ауыр хәлгә төшөү, ҡазаға дусар булыу. □ Попасть в беду. *Көтмәгәндә ҙур бәләгә осраны Сәлим.*

**БӘЛӘГӘ ТАРЫУ (бәләгә тары-)** (Р.: попасть в беду; И.: run into trouble; Т.: belaya düşmek) *ҡ.*

Ауыр хәлгә төшөү, ҡазаға дусар булыу. □ Попасть в беду. *Бәләгә тарып, аптырап ҡалыу.*

**БӘЛӘД** [ғәр. بلد] (Р.: город; И.: town; country; Т.: şehir) *и. иҫк.*

**1.** Ҡала. □ Город, страна. *Бәләдкә килеү.*

**2.** Ил, өлкә. □ Страна, область. *Бәләдтәр араһындағы бәйләнеш.*

**БӘЛӘДИ** [ғәр. بلدي] (Р.: городской; И.: urban; Т.: beledi) *с. иҫк.*

**1.** Ҡалаға мөнәсәбәтле. □ Городской. *Бәләди ҡанун.*

**2.** Илгә, өлкәгә мөнәсәбәтле. □ Государственный, областной. *Бәләди сер. Бәләди ҡоролош.*

**БӘЛӘК I (бәләге)** [рус. валёк] (Р.: валёк; И.: battledore; Т.: çamaşır tokacı) *и.*

Кер туҡмағы. □ Валёк. *Бәләк менән кер туҡмау.*

**БӘЛӘК II (бәләге)** *и. диал. ҡар.* **тараҡан.** *Бәләктәрҙе ағыулау.*

**БӘЛӘК III (бәләге)** *и. диал. ҡар.* **бәкәл I.** *Бәләк быуыны.*

**БӘЛӘК IV** (Р.: плохой; И.: bad; arduous; Т.: bozuk) *с. диал.*

**1.** Насар, ауыр. □ Плохой, трудный. *Бәләк хәл.*

**2.** Бойоҡ, меҫкен; йонсоу. □ Измученный. *Бәләк кеше.*

**БӘЛӘК V** (Р.: опасно; И.: dangerously; Т.: tehlikeli) *р. диал.*

**1.** Хәүефле. □ Опасно. *Хәл бәләк бит!*

**2.** Бик. □ Очень. *Бәләк шәп.*

**БӘЛӘКЛӘҮ (бәләклә-)** (Р.: бить вальком; И.: soften with a battledore; Т.: çamaşır tokmaği ile yumuşatmak) *ҡ. диал.*

Бәләк менән һуғып йомшартыу. □ Бить вальком. *Керҙе бәләкләп йыуыу.*

**БӘЛӘКӘЙ I** [*балакай* < *бала* 'кескенә'] (Р.: маленький; И.: small; little; Т.: küçük) *с.*

**1.** Дәүмәле, күләме яғынан ҙур булмаған; бәләкәс; *киреһе* – ҙур. □ Маленький, небольшой. *Бәләкәй ағаслыҡ. Бәләкәй бүлмә. Бәләкәй йылға. Бәләкәй китап. Бәләкәй итеп яҙыу.* ■ *Был саҡта Гәрәй аңына килеп, элекке үҙ өйөнөң бәләкәй яғында уфтанып ултыра, ә Шәүәли өҙлөкһөҙ илай ине.* Б. Бикбай.

**2.** Буйға, кәүҙәгә ҙур булмаған. □ Невысокий. *Бәләкәй кәүҙәле кеше.* ■ *Ғәлимдең күҙ алдынан бәләкәй, ҡаҡса кәүҙәле әсәһе китмәй.* Н. Мусин.

**3.** Һан яғынан ҙур булмаған; әҙ. □ Небольшой, маленький. *Бәләкәй төркөм.* ■ *Фатир яҡшы, таҙа, ғаиләһе бәләкәй, ике генә ҡыҙы бар.* Д. Юлтый. *Йәш ғалим Марат Әлимғолов Урал тауҙары ҡуйынында ятҡан бәләкәй генә бер ауылға килеп төштө.* З. Ураҡсин.

**4.** Оҙонлоҡ яғынан ҙур булмаған; ҡыҫҡа. □ Небольшой. *Бәләкәй аҙым.*

**5.** Йәш яғынан ҙур булмаған, кесе йәштәге. □ Маленький, малый, малолетний. *Бәләкәй малай. Бәләкәй ҡыҙ. Йәшкә бәләкәй. Бәләкәй булыу. Бәләкәйҙән эшкә өйрәнеү.* ■ *Ике бәләкәй бала киҫкә тиклем илап, ҡараңғы төшкәс кенә, йоҡлап китте.*

Һ. Дәүләтшина. *Йүгереп йөрөгән бәләкәй малайҙар тубыҡҡаса күлдәк кейгәндәр.* Ғ. Амантай.

**6.** Йәш яғынан икенсе берәүгә ҡарағанда кесе. □ Младший. *Бәләкәй ҡайнаға. Бәләкәй апай.* ● *Олоho күрмәй, бәләкәйе белмәй.* Әйтем.

**7.** *ҡусм.* Еңел генә башҡарырға мөмкин булған; анһат. □ Лёгкий. ■ *Эш бик бәләкәй нәмәлә ҡалды: ятаҡханаға ҡайтырға ла институт нәмәләрен тапшырып, станцияға төшөргә.* С. Агиш.

**8.** *ҡусм.* Әһәмиәте яғынан ҙур булмаған. □ Малый, маленький. *Бәләкәй төҙәтмә. Бәләкәй мәсьәлә.* ■ *[Сәғиҙә:] Бәләкәйме, ҙурмы, һәр яңылыҡтың башланғысын тоя белергә кәрәк.* М. Тажи.

**9.** Ҡиммәте яғынан ҙур булмаған. □ Мелкий, некрупный, недорогой. *Бәләкәй аҡса. Бәләкәй генә бүләк.*

**10.** *ҡусм.* Урыны, дәрәжәһе яғынан кесе. □ Младший. ■ *Таҙ .. бәләкәйерәк һанатты саҡыртты ла: «Хәҙер үк минең атайым менән әсәйемде .. алып кил!» — тип бойорҙо, ти.* Әкиәттән.

**БӘЛӘКӘЙ II** (Р.: малыш; И.: baby, infant; Т.: bebek) *и.*

Бала, бәпес. □ Малыш, дитя, ребёнок. ■ *[Ғәффә:] Бәләкәйҙәремдең яңы башлыҡүҙле булғандарын күреп торам, ниңә ҡартайырға?* С. Агиш.

**БӘЛӘКӘЙ III** (Р.: немного; И.: a little; Т.: biraz) *р.*

Бер ни тиклем, әҙ генә. □ Немного, маленько. ■ *Бәләкәй ҡуҙғалыбыраҡ, кеше төҫлө, аяҡты ҡапылыраҡ алып атлаһаңсы.* Т. Хәйбуллин.

**БӘЛӘКӘЙ IV** (Р.: чекушка; И.: quarter-litre bottle (of spirits); Т.: çeyrek) *и. һөйл.*

250 грамм шыйыҡлыҡ һыйышлы шешә; сәкүшкә. □ Чекушка. ■ *[Тәминдәр] бер бәләкәйҙең етеп килгән башына.* Ә. Вәли.

**БӘЛӘКӘЙ АҠ СЕЛӘН** (Р.: цапля малая; И.: lesser heron; Т.: küçük balıkçıl) *и. зоол.*

Ваҡ балыҡтар менән туҡланыусы аҡ ҡауырһынлы һыу ҡошо. □ Цапля малая (лат. *Egretta garzetta*). *Бәләкәй аҡ селән балаһы.*

**БӘЛӘКӘЙ КҮЛ БОҒАҺЫ** (Р.: выпь малая; И.: lesser bittern; Т.: küçük balaban) *и. зоол.*

Европаның үҙәгендә һәм көньяғында йәшәүсе ҡош. □ Выпь малая, волчок (лат. *Ixobrychus minutus*). *Бәләкәй күл боғаһы оса.*

**БӘЛӘКӘЙ ҠАРАБАШ** (Р.: кровохлёбка маленькая; И.: burnet; Т.: küçük mesine) *и. бот.*

Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ингән, сәскәһе тәүҙә йәшкелт, аҙаҡ ҡыҙғылт төҫкә инеүсе күп йыллыҡ дарыу үләненең бер төрө. □ Кровохлёбка маленькая (лат. *Sanguisorba*). *Бәләкәй ҡарабаш йыйыу.*

**БӘЛӘКӘЙ ҠАРЫН** (Р.: сетка; И.: reticulum; Т.: ağcık) *и. анат.*

Көйшәүсе имсәкле хайуандарҙың ҡатмарлы ашҡаҙандарында икенсе бүлек; оло ҡарындағы аҙыҡ бында килә һәм көйшәү өсөн кире ауыҙға сығарыла. □ Сетка. *Аҙыҡ бәләкәй ҡарындан кире ауыҙға килә.*

**БӘЛӘКӘЙ ҠАРЫНЪЯУ** (Р.: сальник малый; И.: epiploon; Т.: küçük bez) *и. анат.*

Бауырҙан ашҡаҙандың бәләкәй бөгөмөнә бара торған ҡарынъяу. □ Сальник малый. *Бәләкәй ҡарынъяу эшмәкәрлеге.*

**БӘЛӘКӘЙ ҠУШЫ** (Р.: луток; И.: smew; Т.: sütlâbi) *и. зоол.*

Сөсө һыу яҡтылыҡтарында йәшәүсе бөжәктәр, ҡуңыҙҙар менән туҡланыусы аҡһыл-сыбар ҡауырһынлы һыу ҡошо. □ Луток, крохаль малый (лат. *Mergellus albellus*). *Бәләкәй ҡушы ҡауырһындары.*

**БӘЛӘКӘЙЛЕК (бәләкәйлеге)** (Р.: малость; И.: smallness; scantiness; Т.: küçük) *и.*

**1.** Бәләкәй булыу. □ Малость, мизерность. *Бүлмәнең бәләкәйлеге күренеп тора.*

**2.** Бәләкәй буй. □ Малый рост. *Бәләкәйлектән кәштәгә буй етмәй.*

**БӘЛӘКӘЙЛӘНЕҮ (бәләкәйлән-)** (Р.: уменьшаться; И.: lessen; Т.: azalmak) *ҡ.*

Бәләкәйгә (I, 1—4) әйләнеү; бәләкәсәйеү. □ Уменьшаться. ■ *Зәбирә еңгә Хәмиткә ҡарағанда нығыраҡ ҡартайған. Кәүҙәһе лә бәләкәйләнә төшкән.* С. Агиш.

**БӘЛӘКӘЙЛӘТЕҮ (бәләкәйләт-)** (Р.: уменьшать; И.: diminish, make smaller; Т.: azaltmak) *к.*

Бәләкәйгә (I) әйләндереү, бәләкәй (I) итеү; бәләкәсәйтеү. □ Уменьшать, делать маленьким *(в объёме, размере). Күлдәкте бәләкәйләтеү. Өҫтәлде бәләкәйләтеү. Бал ҡорто ғаиләләренең ояларын бөтә кәрәҙҙәр ҙә ҡорт менән тулғанға тиклем бәләкәйләтәләр.*

**БӘЛӘКӘЙЛӘҮ (бәләкәйлә-)** *к. диал. ҡар.* **бәләкәсәйтеү.** *Күлдәкте бәләкәйләү.*

**БӘЛӘКӘЙ СЫБАР ТУМЫРТҠА** *и. зоол. ҡар.* **ваҡ ала тумыртҡа.** *Бәләкәй сыбар тумыртҡа ағасҡа ҡунған.*

**БӘЛӘКӘЙ СЫПҠАЙ** (Р.: поганка малая; И.: dabchick; Т.: küçük batağan) *и. зоол.*

Сыпҡайҙар ғаиләһенә ҡараған, йәйен ҡара көрән, ҡышын һоро төҫтәге бәләкәй һыу ҡошо. □ Поганка малая (лат. *Podiceps ruficollis*). *Һыуҙа бәләкәй сыпҡайҙар йөҙә.*

**БӘЛӘКӘЙ ТЕЛ** (Р.: язычок; И.: uvula; Т.: küçük dil) *и. анат.*

Йомшаҡ аңҡауҙың артҡы сигендә урынлашҡан урта суҡ. □ Язычок. *Бәләкәй тел ҡатнашлығы.*

♦ **Бәләкәй телгә лә теймәү** бик аҙ булыу *(ашамлыҡҡа ҡарата).* □ Очень мало *(о пище, угощении).*

**БӘЛӘКӘЙ ТОРНА** (Р.: журавль малый; И.: lesser crane; Т.: küçük turna) *и. зоол.*

Үҫемлектәр һәм бөжәктәр менән туҡланыусы башы һәм муйыны ҡара, ҡанаттары күкһел һоро төҫтәге дала һәм сүлдәрҙә йәшәүсе ҡош. □ Журавль малый, красавка (лат. *Anthropoides virgo). Бәләкәй торналар оса.*

**БӘЛӘКӘЙ УРАМ** (Р.: двор; И.: court; yard; Т.: hane) *и. диал.*

Ишек алды. □ Двор. *Балалар бәләкәй урамда уйнап йөрөй.*

**БӘЛӘКӘС I** (Р.: маленький; И.: small; little; Т.: küçük) *с.*

**1.** Дәүмәле, күләме, кәүҙәһе ҙур булмаған; бәләкәй; *киреһе* — ҙур. □ Маленький, небольшой. *Бәләкәс өй. Бәләкәс ишек. Бәләкәс итеп ҡырҡыу. Бәләкәс кенә кеше.* ■ *Ғәйни ағай менән Хәсби апай, бәләкәс кенә туры бейәне егеп, баҫыу юлы менән .. йүнәлде.* Т. Йәнәби. *Бәләкәс кенә аҡ ҡуян, ҡолағында ҡараһы.* Халыҡ йырынан. *Бер сәғәт самаһы абынаһөрлөгә атлағас, бәләкәс кенә аҡлан табып, шунда туҡтарға булдылар.* Ә. Хәкимов. ● *Аяғы ҙур һыйғанын кейер, аяғы бәләкәс һөйгәнен кейер.* Мәҡәл.

**2.** Һан яғынан ҙур булмаған; аҙ. □ Малочисленный. *Бәләкәс кенә мәжлес. Бәләкәс ауыл.*

**3.** Оҙонлоҡ яғынан ҙур түгел; ҡыҫҡа. □ Маленький, небольшой, короткий. *Бәләкәс кенә таяҡ.*

**4.** Йәш яғынан ҙур булмаған; кесе йәштәге. □ Маленький, малый, малолетний. *Бәләкәс бала.* ■ *[Мәғфүрә] ҡырға сыҡҡанда Диләһен дә алып сыға, бәләкәс булһа ла иптәш бит әле, тип уйлай.* Һ. Дәүләтшина. *Ул әсәһен, бәләкәс сағындағы һымаҡ, ысын ихласлыҡ менән татлы итеп үпте.* Б. Бикбай.

**5.** Йәш буйынса икенсе берәүгә ҡарағанда кесе; бәләкәй. □ Младший. *Бәләкәс апай.* ■ *[Зәбирә:] Бәләкәс ҡыҙым быйыл унынсыны бөтөрә.* С. Агиш.

**6.** *күсм.* Еңел генә башҡарырға мөмкин булған; анһат. □ Незначительный, ничтожный; небольшой, маленький, лёгкий. *Бәләкәс эш. Кешегә кәңәш биреү бәләкәс нәмә түгел.*

**7.** *күсм.* Әһәмиәте ҙур булмаған. □ Незначительный, ничтожный; небольшой, маленький. *Бәләкәс мәсьәлә.* ■ *Икһеҙ-сикһеҙ оло диңгеҙгә нимә етмәй? Ниңә ул Юламан ҡарттың бәләкәс кенә бәхетен дә күпһенде?!* З. Биишева.

**8.** *күсм.* Урыны, дәрәжәһе яғынан ҙур булмаған. □ Незначительный, ничтожный; небольшой, маленький. *Бәләкәс кеше.*

**БӘЛӘКӘС II** (Р.: малыш; И.: small child, kiddy; Т.: bebek) *и.*

Бәләкәй бала, бәпес. □ Малыш, дитя, ребёнок. *Бәләкәсем минең.*

**БӘЛӘКӘС III** (Р.: немного; И.: a little, a bit; Т.: biraz) *р.*

Бер ни тиклем, аҙ ғенә. □ *прост.* Немного, маленько. *Бәләкәс ял итеп алыу.* ■ *Һеҙҙән килгән елгә битем ҡуям, һағыныуҙарым бәләкәс баҫһын тип.* Халыҡ йырынан. *Ҡай-*

*ҙалып сырылдап алған ҡоштар ғына шул тыныслыҡты бәләкәс кенә итеп семетеп алалар.* С. Агиш.

**БӘЛӘКӘСЛӘНЕҮ (бәләкәслән-)** *ҡ. ҡар.* **бәләкәсәйеү.** *Әбей ологайып бәләкәсләнеп ҡалған.*

**БӘЛӘКӘСӘЙЕҮ (бәләкәсәй-)** (Р.: уменьшаться; И.: shrink; Т.: küçülmek) *ҡ.*

Бәләкәскә әйләнеү. □ Уменьшаться, садиться. *Быйма аяҡҡа һыймай, бәләкәсәйгән.* ■ *Хатта тау итәгендәге эре-эре һарыҡташтар, ел-ямғырҙа, ҡояшта онталып, бәләкәсәйеп ҡалғандай.* Ә. Хәкимов.

**БӘЛӘКӘСӘЙТЕҮ (бәләкәсәйт-)** (Р.: уменьшать; И.: reduce; Т.: küçültmek) *ҡ.*

Бәләкәскә әйләндереү; бәләкәс итеү. □ Уменьшать *(в объёме, размере). Бүлмәне бәләкәсәйтеү. Күлдәкте бәләкәсәйтеү.*

**БӘЛӘ-ҠАЗА** (Р.: бедствие; И.: calamity, misfortune; Т.: felaket) *и. йыйн.*

Тормош именлеген боҙған, мал-мөлкәткә, һаулыҡ-сәләмәтлеккә зыян килтергән ауыр хәл-ваҡиға. □ Бедствие, несчастье, беда. *Бәлә-ҡазаға тарыу. Бәлә-ҡазаны еңеп сығыу.* ■ *[Бураншa:] Аһ, ниңә кешегә шундай бәлә-ҡаза, ҡайғы-хәсрәт килерен алдан тойоу һәләте бирелмәгән?!.* Ә. Хәкимов.

**БӘЛӘ-ҠАЗАҺЫҘ** (Р.: благополучно; И.: nicely; happily; Т.: başarılı) *р.*

Имен-аман. □ Благополучно, без приключений. *Ҡышты бәлә-ҡазаһыҙ үткәрҙек.*

**БӘЛӘ ҠАМЫТЫ** (Р.: обуза; И.: burden; Т.: ağırlık; sorumluluk) *и.*

**1.** Мәшәҡәт, ҡыйынлыҡ килтергән эш йәки берәй кеше. □ Обуза. *Был бәлә ҡамытының мәшәҡәте менән йәй ҙә үтеп бара.*

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, кешенең муйынына бәлә эйәһе кейҙергән ҡамыт. □ *досл.* Хомут беды, которую, по представлениям башкир, дух беды надевает человеку на шею. ■ *Бәлә ҡамыты кеше муйынына тағылһа, кеше бәләгә тарый.* Башҡорт мифологияһынан.

**БӘЛӘЛЕ** (Р.: бедственный; И.: calamitous; ill-starred; Т.: feci) *с.*

**1.** Аҙап, мәшәҡәт килтерә торған. □ Бедственный, злополучный. *Бәләле көн.* ■ *Биш балаға торорлоҡ, бәләле ҡыҙ Әнисә.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Ғауғасыл. □ Скандальный. *Бәләле кеше. Бәләле булыу.*

**БӘЛӘЛӘНЕҮ (бәләлән-)** (Р.: скандалить; И.: brawl, make a row; Т.: kavga etmek) *ҡ.*

Юҡ-барҙы бәлә итеп, ғауғалау; бәлә һалыу. □ Скандалить. *Бушҡа бәләләнеп йөрөү.*

**БӘЛӘН** *киҫ. һөйл. ҡар.* **фәлән.** *Бәлән кеше шунда тип һүгерҙеләр.*

**БӘЛӘНД** [фарс. بلند] (Р.: высокий; И.: high; Т.: yüksek) *с. иҫк. кит.*

**1.** Бейек, юғары. □ Высокий. *Бәләнд бина.* ■ *Күп ине мосолманға назарығыҙ, көн һайын бәләнд майҙан баҙарығыҙ.* М. Аҡмулла.

**2.** Бөйөк, оло. □ Великий. *Бәләнд кеше.* ■ *Вә ләкин күңелдәре бәләнд ирҙәр һәр кемде хурлауға бар, маҡтауға юҡ.* М. Аҡмулла.

**БӘЛӘСЕЛ** (Р.: скандальный; И.: scandalous; Т.: kavgacı) *с.*

Юҡ-барҙы бәлә итеп, оло тауыш ҡуптарыусан. □ Скандальный. *Бәләсел кеше.* ■ *[Гөлшат — бәрәскә:] Әй, һин бәләсел! Ниңә баҡыраһың? Һине юрый йәшерергә тырышам, ә һин тауыш бирәһең.* С. Мифтахов.

**БӘЛӘСНИК** *с. диал. ҡар.* **бәләсел.** *Һин бигерәк бәләсник кеше икән.*

**БӘЛӘҮ (бәлә-)** (Р.: приравнивать; И.: equate (with); Т.: eşitlemek) *ҡ. иҫк.*

**1.** Хаҡы, ҡиммәте яғынан сағыштырып тиңләү, тиң ҡуйыу. □ Приравнивать *что к чему (по стоимости),* оценивать на равных. *Бер йомғаҡ майға бәләп, бер күнәк картуф бирҙем.*

**2.** Биләп ҡуйғанды күрһәтеп, билдә һалыу. □ Отмечать, помечать знаком, поставить колышек. *Сабынлыҡты бәләп ҡуйыу.*

**БӘЛӘҮЛЕ** (Р.: отмеченный; И.: marked (with); Т.: işaretli) *с. иҫк.*

Билдә ҡуйып, бәләп, алдан биләп ҡуйылған. □ Отмеченный, помеченный знаком. *Бәләүле ер.*

**БӘЛӘХӘТЛӘҮ (бәләхәтлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **яфалау.** *Кейәү һәйбәт, яман һүҙе юҡ, бәләхәтләмәй.*

**БӘЛӘ ҺАЛЫУ (бәлә һал-)** (Р.: взывать о помощи, притворившись попавшим в беду; И.: call for help; Т.: yardım istemek) *к.*

**1.** Юҡ-барҙы бәлә итеп, оло тауыш күтәреү. □ Взывать о помощи, притворившись попавшим в беду. ■ *Ямғыр туктауһыҙ йыуған тәҙрә аша урам буйлап ҡайтыусы һыйыр, һарыҡ-кәзә көтөүе күренде. Уларҙың бәлә һалып баҡырған тауышы ишетелде.* Н. Ғәйетбаев.

**2.** *Берәй нәмәнең* ауырлығын башҡа кешегә төшөрөү. □ Возлагать свои хлопоты на другого человека. *Бәләңде һалма әле миңә.* ■ *Аяғын, ҡулын йәрәхәтләһә лә яҡындарына бәләһен һалмай малай.* «Шоңҡар», №7, 2010.

**БӘЛӘ ЯБЫУ (бәлә яп-)** *к. ҡар.* **бәлә ағыу.** *Юҡтан бәлә япма миңә.*

**БӘЛӘ ЯҒЫУ (бәлә яҡ-)** (Р.: возводить поклёп; И.: slander; Т.: karalamak) *к.*

Хурлау, яманлау; булмаған ғәйепте тағыу. □ Возводить поклёп. ■ *[Абдуллиндың] бөтә эше кешегә бәлә яғыу, нахаҡтан кеше рәнйетеү.* Я. Хамматов.

**БӘМБӘКӘ** *и. бот. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бәм-бәм бәмбәкә, һары тәкә, күк тәкә.*

**БӘН** *зат. а. иҫк. ҡар.* **мин.**

**БӘНД I** [фарс. بند] (Р.: связь; И.: connection; link; Т.: bağlantı) *и.*

Бәйләнеш. □ Связь. *Бәнд булдырыу.*

**БӘНД II** [фарс. بند] (Р.: завязка; И.: tie; Т.: bağ) *и.*

Бәйләгес, бәй. □ Завязка, привязь. *Бәнд менән бәйләп ҡуйыу.*

**БӘНД III** [фарс. بند] (Р.: припев; И.: refrain; Т.: nakarat) *и.*

Шиғырҙа һәр куплеттан һуң ҡабатланған юл; ҡушымта. □ Припев. *Шиғырҙың бәнден ятлап алыу.*

**БӘНДӘ** [фарс. بنده] (Р.: раб; И.: slave; Т.: kul) *и. иҫк.*

**1.** Ҡол. □ Раб, слуга. ■ *Ғүмер үтте булып бәндәгә бәндә.* М. Ғафури. *[Батша:] Һин ниндәй бәндә? [Бай:] Мин, батшам, бәндә түгел, бөтә илгә билдәле фәлән бай булам.* Әкиәттән.

**2.** *(йәки* **Алла бәндәһе)** Алла ҡоло, кеше. □ Раб божий. *Изге бәндә.* ■ *[Рәхимә:] Аллаһы Тәғәлә үҙенең иң яратҡан бәндәһенә хәсрәт ебәрермен тигән.* Һ. Дәүләтшина. *Бәлки, Зөлкәғиҙә әйткәнсә, бәндәнең хаҡ яҙғанын күрмәйенсә сараһы юҡтыр?* Ә. Хәкимов. ● *Бәндәгә ай ҙа килешмәй, ҡояш та килешмәй.* Әйтем. *Ҡайғыһыҙ бәндә ҡара һыуға һимерә.* Әйтем.

**3.** *кәмһ.* Кеше, әҙәм, инсан. □ Человечишка, человечек. *Алйот бәндә. Рәхимһеҙ бәндә. Яуыз бәндә.* ■ *[Бибинур:] Кешелекле кешенән ҡасып, һинең кеүек йөрәге мүкләнгән бәндәгә юлыҡҡанмын.* Д. Бүләков.

**4.** *миф.* Аллаһ тарафынан үҙенә оҡшатып яһалған йән эйәһе. □ Существо, созданное Аллахом по своему подобию.

♦ **Мин бәндәгеҙ** түбәнселек менән һөйләгәндә «мин» тиәһе урында әйтелә. □ Ваш покорный слуга. *Мин бәндәгеҙ һеҙгә ҡулдан килгәнсә ярҙам күрһәтергә әҙер.*

**БӘНДӘСЕЛЕК (бәндәселеге)** (Р.: быть человеком; И.: human condition; Т.: adam olmak) *и.*

Кеше булыу. □ Быть человеком. *Бәндәселек арҡаһында ҡылған гонаһтарымды ярлыҡа, тип ялбара Аллаһыға.*

**БӘНИ** [ғәр. بني] *и. ҡар.* **бине**. *Бәни, тыңлағыҙ.*

**БӘНИ БӘШӘР** (Р.: люди; И.: people; folk; Т.: insanlar) *и. иҫк.*

Кешеләр, әҙәмдәр. □ Люди.

**БӘНИ ИНСАН** *(йәки* **бәни әҙәм)** (Р.: люди; И.: people, humans; Т.: insanlar) *и. иҫк.*

Әҙәмдәр. □ Люди. ■ *Был булыр иң аҙырғы, иң ҡаты ҙур жиһат. Булыр һәм бәйнәлмиләл бәни инсан азат.* Халыҡ йырынан.

**БӘНИ ИСРАИЛ** [ғәр. بنو إسرائل] (Р.: сыны Израилевы (евреи); И.: Hebrews; Т.: Yahudiler) *и. иҫк.*

Йәһүдтәр. □ Евреи *(сыны Израилевы). Бәни исраил ғаиләһе.*

**БӘПЕЛДӘК (бәпелдәге)** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бәпелдәк мамығы.*

**БӘПЕЛДӘТЕҮ (бәпелдәт-)** (Р.: убаюкивать; И.: lull while patting; Т.: uyutmak) *к.*

**1.** Ҡул менән ҡағып, көйләп йоҡлатыу *(баланы).* □ Убаюкивать похлопывая *(ребёнка). Баланы бәпелдәтеү.* ■ *Кем бәпел-*

*дәтте бәпесте, кем уйнатты көн буйы?* С. Ҡудаш.

**2.** *иçк.* Ҡурҡҡан баланың йөрәген ултыртыу өсөн арҡаһын, күкрәген ҡул менән ҡаҡҡылап имләү. □ Успокаивать, легонько похлопывая по спине и груди *(испугавшегося ребёнка). Бәпелдәтеп имләү.*

**БӘПЕЛДӘҮ (бәпелдә-)** (Р.: кричать *(о зайце)*; И.: cry (hare); Т.: homurdanmak) *ҡ. диал.*

Ҡысҡырыу *(ҡуянға ҡарата).* □ Кричать *(о зайце). Ҡуян бәпелдәй башланы, яҙ оҙаҡламаç, ахыры.*

**БӘПЕМ** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бәпем сәскәһе.*

**БӘПЕМБӘ** (Р.: одуванчик; И.: dandelion; Т.: karahindiba) *и. бот.*

**1.** Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған ҡыуыш һабаҡлы, һары суҡ сәскәле, туҙғаҡ орлоҡло ваҡ үлән үçемлек. □ Одуванчик (лат. *Taraxacum). Сайҡалыша юл ситендә туҙғаҡ башлы бәпембәләр.* Р. Бикбаев.

**2.** *диал. ҡар.* **абаға.** *Бәпембә япрағы.*

**БӘПЕМБӘП (бәпембәбе)** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бәпембәп мамығы оса.*

**БӘПЕС** (Р.: малыш; И.: baby, infant; Т.: bebek) *и.*

**1.** Сабый бала; бәпәй. □ Малыш, дитя, ребёнок. *Бәпес бәүетеү.* ■ *Һәтес-һәтес-һәтес тә, бигерәк матур бәпес тә! Кем ҡарамаç, кем һоҡланмаç быҙдай матур бәпескә!* Ғ. Амантай. *Ҡәйнәһенең йөҙө яҡтырып, бәпес һөйөргә керешкәс, Бибешкә лә рәхәт булып, ҡулдары еңеләйеп, етеҙләнеп киткәндәй булды.* З. Биишева. *Әгәр ҙә януар әҙәм телен белһә, сәсе-башы туҙған бер ҡатындың, икеөс йәшлек кенә бәпесен ҡосаҡлап, илай-илай һөйләгән һүҙҙәрен аңлар ине.* Ә. Хәкимов.

**2.** *миф.* Теге донъя менән был донъя араһында торған зат, бала. □ Ребёнок, дитя, малый; мифологизированное лицо, находящееся между тем и этим миром.

**БӘПЕС БАРМАҠ (бармағы)** *и. диал. ҡар.* **сыңғарсай.**

**БӘПЕС БУТҠАҺЫ** (Р.: каша новорождённого; И.: ritual gruel; Т.: yenidoğan püresi) *и. этн.*

Яңы тыуған бала хөрмәтенә әҙерләнгән бутҡа. □ Каша новорождённого *(ритуальная каша в честь новорождённого).*

**БӘПЕС БӘЛЕШЕ** (Р.: пирог новорождённого; И.: ritual dish; Т.: yenidoğan turtu) *и. этн.*

Бала тыуғас, әсәгә туғандары алып килгән ашамлыҡ. □ Пирог новорождённого *(ритуальное блюдо, приносимое родственниками роженице). Бәпес бәлеше бешереү.*

**БӘПЕС ЙЫУАСАҺЫ** (Р.: гостинцы к чаепитию по случаю рождения ребёнка; И.: presents for a ritual tea party; Т.: çocuğun hediyeleri) *и. этн.*

Бала тыуыу уңайы менән үткәрелгән сәй һыйына бешерелгән йыуаса. □ Гостинцы к чаепитию по случаю рождения ребёнка.

**БӘПЕС ҠОЙМАҒЫ** (Р.: блины новорождённого; И.: pancakes baked for ritual tea drinking; Т.: yenidoğan krepi) *и. этн.*

Бәпес тыуыу уңайы менән үткәрелгән сәй һыйына ҡойолған ҡоймаҡ. □ Блины новорождённого *(блины, приготовленные к чаепитию по случаю рождения ребёнка).*

**БӘПЕСЛӘҮ (бәпеслә-)** (Р.: рожать; И.: give birth (to), bear; Т.: doğurmak) *ҡ.*

Бала табыу. □ Рожать *(о роженице).* ■ *Ҡал, Ғариф, әсәң бәпесләргә йөрөй, йомоштарына барғыларһың, — тине Камил.* Р. Ниғмәти.

**БӘПЕС МУНСАҺЫ** (Р.: баня для новорождённого; И.: bath for babies; Т.: yenidoğan için banyo) *и. этн.*

Яңы тыуған балаға яғылған мунса. □ Баня для новорождённого. ■ *Бәпес мунсаһында һамаклап баланы сабалар, эләүкәгә һалмай ғына йыуалар.* Башҡорт мифологияһынан.

**БӘПЕС СӘЙЕ** (Р.: чаепитие по случаю рождения ребёнка; И.: tea drinking in infants' honour; Т.: çocuk çayı) *и. этн.*

Бала тыуыу уңайы менән үткәрелгән сәй һыйы. □ Чаепитие по случаю рождения ребёнка. *Бәпес сәйенә саҡырыу.*

**БӘПЕС ТУЙЫ** (Р.: праздник в честь рождения ребёнка; И.: festivity in honour of a newborn bany; Т.: çocuğun doğumu şerefine kutlama) *и. этн.*

Бала тыуыу уңайы менән үткәрелгән мәжлес. □ Праздник в честь рождения ребёнка. *Бәпес туйы үткәреү.*

**БӘПКӘ I** (Р.: птенец гуся, утки; И.: gosling, duckling; Т.: badi) *и.*

**1.** Ҡаҙ, өйрәк себеше. □ Птенец гуся, утки. *Ҡаҙ бәпкәһе. Өйрәк бәпкәһе.* ■ *Сәрбиямалдың өйрәге бер оя бәпкә сығарҙы.* З. Биишева. *Ата ҡаҙ, муйынын һуҙып, күкте күҙәтә, бәпкәләр сүгәләй-сүгәләй үлән өҙә.* Т. Ғарипова. *Артыҡ шаһит булмаһын тип, Вәзир Насипты күл буйына бәпкә һаҡларға ҡыуып ебәрҙе лә, аулаҡ ҡалған өйҙөң аҫтын-өҫкә килтереп, аҡтарынырға кереште.* М. Кәрим.

**2.** *эйл. ф.* **бәпкәм.** Балаға иркәләп, яратып әйтелә. □ Птенчик мой, дитятко моё, родненький мой. ■ *Йәтим үҫтем, бәпкәм тиеп, иркәләүсем минең булманы.* Ғ. Хәйри.

**БӘПКӘ II** (Р.: бутон борщевника; И.: hogweed bud; Т.: tavşan otu tomurcuğu) *и.*

Балтырғандың яңы шытып сыҡҡан йәш япрағы *(аш итеп бешерәләр).* □ Бутон борщевника. *Бәпкә ашы.*

**БӘПКӘ III** [рус. *бабка*] *и. диал. ҡар.* **асамай I.** ■ *Ғәлимйән һикереп төштө, риҙыуандың бәпкәһенән тотоп, йөктө яурыны менән еңел генә күтәрҙе лә тәгәрмәсте кейҙереп ҡуйҙы.* Д. Бүләков.

**БӘПКӘ IV** *и. диал. ҡар.* **йәлдәү.** *Мурҙа бәпкәһе.*

**БӘПКӘ V** (Р.: суслон из пяти снопов; И.: several sheaves put up for drying; Т.: beş demet) *и. диал.*

**1.** Биш көлтәнән торған һоҫлан. □ Суслон из пяти снопов. *Бәпкә бәйләү.*

**2.** Көлтәләрҙе киптерергә һалыу ысулы. □ Способ укладки снопов для сушки. *Көлтәләрҙе бәпкәгә һалыу.*

**БӘПКӘ VI** *и. диал. ҡар.* **бәпембә 1.** *Бәпкә йөндәре оса.*

**БӘПКӘ VII** (Р.: молодой отросток; И.: young sprout; Т.: yeni filiz) *и. диал.*

Йәш үҫенте, шытым. □ Молодой отросток. *Үҫемлек бәпкәһе.*

**БӘПКӘ VIII** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ҡәбиләһе аймағы. □ Бэпкэ *(название родового подразделения башкир племени юрматы). Бәпкә аймағы башҡорто.*

**БӘПКӘ ЙӨНӨ** (Р.: пушок на теле; И.: fluff, down; Т.: tüy) *и.*

Кешенең тәнендәге ваҡ ҡына йомшаҡ йөн. □ Пушок на теле *(у человека).* ■ *Йәнтимерҙең өҫкө иренендәге бәпкә йөндәре хәҙер мыйыҡ кеүек булып күренә.* С. Агиш.

**БӘПКӘ СЫҒАРЫУСЫ ҠОШТАР** (Р.: птицы выводковые; И.: precocial birds; Т.: precocial kuşlar) *и. зоол.*

Йомортҡа баҫып себеш сығарыусы ҡоштар төркөмө. □ Птицы выводковые (лат. *Nidifugae*). *Бәпкә сығарыусы ҡоштар — ҡаҙ, өйрәк, күркә һ. б.*

**БӘПКӘ ҮЛӘНЕ** (Р.: горец птичий; И.: common knotgrass; Т.: düğüm-çimen) *и. бот.*

Талғын ерҙә үҫә торған ваҡ ҡына япраҡлы ҡыҫҡа үлән; ҡаҙ үләне. □ Горец птичий, спорыш, птичья гречиха (лат. *Polygonum aviculare*). *Ишек алдын бәпкә үләне баҫҡан.*

**БӘПКӘ ЯТЫШ** (Р.: подстропильник; И.: eave; Т.: saçak) *и. диал.*

Атлама ятҡан бүрәнә. □ Подстропильник. *Бәпкә ятыштар әҙерләү.*

**БӘПЛӘҮ (бәплә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **баплау.** *Бала бәпләү.*

**БӘПӘЙ I** *и. ҡар.* **бәпес.** *Илаҡ бәпәй. Бәпәйҙе бәүетеү.*

**БӘПӘЙ II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ҡәбиләһе аймағы. □ Бепей *(название родового подразделения башкир племени бурзян). Бәпәй аймағы.*

**БӘПӘЙ АШЫ** *и. диал. ҡар.* **бишек туйы.** *Бәпәй ашына саҡырыу.*

**БӘПӘЙ БУТҠАҺЫ** *и. ҡар.* **бәпес бутҡаһы.** *Бәпәй бутҡаһы бешереү.*

**БӘПӘЙ БӘЛЕШЕ** *и. ҡар.* **бәпес бәлеше.** *Бәпәй бәлеше бешереү.*

**БӘПӘЙ ЙЫУАСАҺЫ** *и. ҡар.* **бәпес йыуасаһы.** *Бәпәй йыуасаһы ашау.*

**БӘПӘЙ ҠОЙМАҒЫ** *и. кар.* **бәпес ҡоймағы.** *Бәпәй ҡоймағына саҡырыу.*

**БӘПӘЙЛӘҮ (бәпәйлә-)** (Р.: рожать; И.: give birth (to), bear; Т.: doğurmak) *ҡ.*

Бәпәй табыу; бәпесләү. □ Рожать *(о роженице). Бәпәйләргә ваҡыты еткән ҡатын.*

**БӘПӘЙ МАЙЫ** *и. диал. кар.* **бишек туйы.** *Бәпәй майына саҡырыу.*

**БӘПӘЙ МУНСАҺЫ** *и. кар.* **бәпес мунсаһы.** *Бәпәй мунсаһы яғыу.*

**БӘПӘЙ СӘЙЕ** *и. кар.* **бәпес сәйе.** *Бәпәй сәйенә саҡырыу.*

**БӘПӘЙ ТУЙЫ** *и. кар.* **бәпес туйы.** *Бәпәй туйы үткәреү.*

**БӘПӘЙТӘК (бәпәйтәге)** *и. диал. кар.* **балитәк.** *Бәпәйтәкле күлдәк.*

**БӘПӘЙ ҮҪТЕРЕҮ (бәпәй үҫтер-)** *ҡ. диал. кар.* **бишек туйы.** *Бәпәй үҫтерергә саҡырыу.*

**БӘПӘНӘ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ҡәбиләһе аймағы. □ Бәпәнә *(название родового подразделения башкир племени тамьян). Бәпәнә аймағы башҡорто.*

**БӘПӘҮЛЕК (бәпәүлеге)** (Р.: место, где растут одуванчики; И.: dandelion grown ground; Т.: kara hindiba çiçeği olduğu bir yer) *и. диал.*

Бәпембә үҫкән ер. □ Место, где растут одуванчики. *Бәпәүлектән бәпембәләр йыйыу.*

**БӘПӘҮЛӘҮ (бәпәүлә-)** (Р.: баловать; И.: pamper; Т.: şımartmak) *ҡ. диал.*

Иркәләтеү. □ Баловать. *Балаларын бәпәүләп кенә үҫтерәләр.*

**БӘРАБӘР** *с. кар.* **бәрәбәр.** *Оҙонлоғо бәрабәр ағастар.*

**БӘРАҒӘТ** [ғәр. براعة] (Р.: мастерство; И.: mastery; Т.: ustalık) *и. иҫк.*

Оҫталыҡ, һәләтлек. □ Мастерство, способность, умение. *Бәрағәттең файҙаһы.*

**БӘРАТ БАЙРАМЫ** [ғәр. براءة] (Р.: праздник Бараат; И.: name of a holiday in Moslem religion; Т.: Baraat Festivali) *и. дини.*

Ислам дине буйынса, шәғбән айының 15-ендә Мөхәммәт пәйғәмбәр мосолмандарҙың намаҙ уҡығанда боролған йүнәлешен Иерусалимдан Мәккәгә, ҡиблаға ҡарата үҙгәрткән, был көндән башлап ислам үҙ аллы дин булып һанала башлаған. □ Праздник Бараат *(15-й день шагбана считается днём, когда Пророк Мухаммед изменил направление, в котором мусульманин должен встать во время совершения молитвы от Иерусалима на Мекку. С этого момента ислам стал считаться самостоятельной религией). Бәрат байрамы үткәреү.*

**БӘРАТ КИСӘҺЕ** (Р.: ночь предопределения; И.: name of the Predetermination holiday; Т.: Miraç Gecesi) *и. дини.*

Бәрат байрамы алдындағы кис *(шәғбән айының 14-нән 15-нә ҡарты кисе).* □ Ночь предопределения *(ночь с 14-го на 15-е шагбана; в эту ночь мусульманин должен произносить молитвы и просить у Аллаха прощения грехов, так как предопределяется его будущее на один год). Бәрат кисәһендә теләктәр теләү.*

**БӘРАТ КӨНӨ** *и. кар.* **бәрат байрамы.**

**БӘРАӘТ** [ғәр. براءة ] (Р.: непричастность; И.: non-participation; Т.: beraet) *и. иҫк.*

**1.** Ғәйепһеҙлек, ҡатнашһыҙлыҡ. □ Непричастность. *Мин был эштә бәраәт.*

**2.** Судта аҡланып ҡотолоу. □ Оправдание в суде. *Бәраәт сығарыу.*

**БӘРБӘР I** (Р.: берберы; И.: the Berbers; Т.: Berberiler) *и.*

Башлыса Төньяҡ Африка илдәрендә йәшәгән боронғо бер халыҡ. □ Берберы *(народы Африки). Бәрбәр телдәре. Бәрбәр халҡы.*

**БӘРБӘР II** [ғәр. بربر ] (Р.: дикие народы; И.: savage nations; Т.: vahşi millet) *и.*

Ҡырағай халыҡ. □ Дикие народы. *Бәрбәр ҡәбиләләре.*

**БӘРБӘР III** [фарс. بربر] (Р.: парикмахер; И.: hairdresser; barber; Т.: berber) *и. иҫк.*

Сәс алыусы. □ Парикмахер. *Бәрбәр хеҙмәте. Бәрбәрҙән сәс алдырыу.*

**БӘР-БӘР-БӘР** (Р.: бяша-бяша; И.: onomatopoeic word; Т.: prüü prüü) *сак.*

Һарыҡты саҡыра торған һүҙ. □ Бяша-бяша *(употребляется для подзывания овец). Бәр-бәр-бәр, тип әбей һарыҡтарҙы саҡырырға тотонды.*

**БӘРБӘР ҒӘРӘПТӘРЕ** *и. ҡар.* **бәрбәр I.**

**БӘРГЕЛӘНЕҮ (бәргелән-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **бәргеләү.** *страд. от* **бәргеләү.** *Бәргеләнгән таш.*

**2.** Уңлы-һуллы һуғылыу. □ Метаться. *Һаташып бәргеләнеү.* ■ *Тәзкирә .. ҡуҙғала алмай байтаҡ торҙо. Шунан бәргеләнә башланы.* Ә. Вәли.

**БӘРГЕЛӘҮ (бәргелә-)** (Р.: бросаться; И.: throw, shy; Т.: atmak) *ҡ.*

**1.** Туҡтауһыҙ, ҡабат-ҡабат бәреү. □ Бросаться, кидаться *чем. Бәргеләп бөтөү. Таш менән бәргеләү.*

**2.** *ҡар.* **бәргесләү 2.** *Таш бәргесләү.*

**БӘРГЕСЛӘҮ (бәргеслә-)** (Р.: бросаться; И.: fling; Т.: atmak) *ҡ.*

**1.** *Кемгә* йәки *нимәгәлер* тоҫҡап бер нисә тапҡыр бәреү. □ Бросаться, кидаться *чем. Таш менән бәргесләү. Бәргесләп бөтөү.*

**2.** Уңлы-һуллы һуғыу. □ Бить. *Бәргесләп алыу.*

**БӘРД** [ғәр. بَرْد] *и. иҫк. ҡар.* **һыуыҡ II.** *Бәрд төштө.*

**БӘРҘЕ** (Р.: хариус; И.: grayling; Т.: gölge balığı) *и.*

Тау йылғаларында һәм күлдәрендә йәшәүсе, ите бик юғары сифатлы булып, ҡармаҡ һ. б. менән тотола, ҙурлығы 30—50 сантиметрҙан артмай торған, һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған сөсө һыу балығы. □ Хариус (лат. *Thymallus*). *Аҡ бәрҙе. Күк бәрҙе. Ҡара бәрҙе. Бәрҙе ҡармағы.* ■ *Бәрҙе бик сос балыҡ, һаҡ кына йөрөмәһәң, тотормон тимә.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡыяла торғас, бер заман дөбөр-шатыр күк күкрәне лә ҡойоп ямғыр яуырға кереште, малайҙарҙың әлеге бәрҙе ҡайғыһы китте.* Н. Мусин.

**БӘРҘЕКӘС** *и. диал. ҡар.* **бәрсәк I.** *Ҡармаҡҡа бәрҙекәс эләкте.*

**БӘРҘЕРЕҮ (бәрҙер-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **бәреү.** *понуд. от* **бәреү.** *Аяҡты бәрҙереү.*

**БӘРҘЕСӘК (бәрҙесәге)** *и. диал. ҡар.* **бәрсәк I.** *Бәрҙесәк тотоу.*

**БӘРҘӘК** (Р.: озорной; И.: mischievous; Т.: yaramaz) *с. диал.*

Шаян. □ Озорной. *Бәрҙәк кенә малайҙары бар.*

**БӘРЕЙ** [фарс. پَرى] ] (Р.: бес; И.: evil spirit; Т.: şeytan) *и.*

**1.** *миф.* Кешене аҙҙыра торған, сихырға һәләтле яман мифик зат. □ Бес, нечистая сила. ■ *Бәрей осраған кеше ғәҙәттә ауырый. Уны өшкөрөп йүнәлтәләр.* Башҡорт мифологияһынан.

**2.** *күсм.* Тәртипһеҙ, еңмеш балаға һәм уҫал, сарға ҡатын-ҡыҙға әрләп әйтелә. □ Бес, дьявол *(о непослушном, капризном ребёнке, злой, скандальной женщине). Был бәрей бик тиҙ ҡыҙып китә.*

♦ **Бәрей алмаштырған** 1) бик ҡыҙыу, ныҡ дыуамал кешегә әйтелә. □ Подменённый нечистой силой *(о вспыльчивом, пылком, взбалмошном человеке);* 2) *миф.* бала йәмһеҙ, ҡотһоҙ, илаҡ булғанда әйтәләр. □ Подменыш, подменённый нечистой силой *(говорят о ребёнке, который стал плаксивым).* ■ *Бәрей алмаштырған бала йәмһеҙ, ҡотһоҙ була.* Башҡорт мифологияһынан. **Бәрейе(м) һөймәй** берәй нәмәне йәки кешене ныҡ яратмағанда әйтелә. □ Недолюбливать, презирать *кого.* ■ *Бәрейем һөймәй шул һыпатһыҙ быжырҙы, — тине Фатима эстән. — Ҡыҫылмаған ере юҡ, йөрөй эшем эйәһендәй булып, һөмһөҙ.* Ж. Кейекбаев. **Бәрей арбаһына ултырған** тотанаҡһыҙ кеше. □ Несдержанный человек. **Бәрейе ҡуҙғалыу** ҡыҙып китеү, ныҡ туҙыныу, енләнеү. □ Беситься, неистовствовать. *досл.* Его бес тронулся.

**БӘРЕЙ БАЛАҺЫ** (Р.: подменыш; И.: imp; Т.: perilerin değiştirdiği çocuk) *и. миф.*

Бәрей алмаштырған бала. □ Подменыш; бесёнок. ■ *Бәрей балаһының эсе ҙур, аяҡ-ҡулдары нәҙек кенә була.* Экспедиция материалдарынан.

**БӘРЕЙ КҮБӘЛӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **шайтан күбәләге.** *Өйгә бәрей күбәләктәре осоп инә.*

**БӘРЕЙ ҠЫУЫУ (бәрей ҡыу-)** (Р.: изгнание злых духов; И.: curing through evil spirits exorcizing; Т.: şeytanı kovmak) *и. миф.*

Яуыз көстәрҙе ҡыуыу юлы менән дауалау. □ Изгнание злых духов *(способ лечения).*

**БӘРЕЛГӘН** *и. миф. ҡар.* **сарпыу II.** *Бәрелгән ҡағылыу.*

**БӘРЕЛЕҮ (бәрел-)** (Р.: ударяться; И.: strike (against); Т.: çarpmak) *ҡ.*

**1.** Көс менән барып йәки килеп һуғылыу. □ Ударяться, стукаться. *Түп ҡапҡаға бәрелде. Кәмә ташҡа бәрелде.* ■ *Дағалы тояҡтарҙан ырғыған ҡар киҫәктәре Алтынбайҙың битенә, түшенә тап-топ бәрелә, күҙен асырға ла ирек бирмәй.* З. Ураҡсин. *Мәскәй, бот-сат килеп, стенаға барып бәрелгән.* Әкиәттән. *Төлкөсура, бүлмәнән сығып, өлкән ишеккә йүнәлгәйне, әрбәк-һәрбәк тар коридорҙа аңғармаҫтан кемгәлер бәрелде.* Н. Мусин. *Ҡурҡынған Гөлбаныу, артҡа сигенә барып, ағасҡа бәрелде, унан ҡото алынып, килгән яғына, ауылға табан йүгерҙе.* Т. Ғарипова. *Януар тәүҙә ҡайҙалыр осоп китте, күҙ асып йомған арала, зыр әйләнеп, һырты менән ергә килеп бәрелде.* Ә. Хәкимов.

**2.** Һауа менән килеп ҡағылыу. □ Ударять, бить. *Дым бәрелә. Еҫ бәрелә. Эҫе бәрелә. Ялҡын бәрелә.* ■ *Мылтыҡ тауышы, тауташ, урманға бәрелеп, яңғырап китте.* Т. Хәйбуллин. *Яҡшы ашатылған ат күндәм генә юртып бара, сана шығырлаған тауыш ҡына ҡолаҡҡа бәрелә.* З. Ураҡсин. *Яңы көндөң тәүге нурҙары башта Ҡылыс арьяғындағы бейек текә ҡаяға килеп бәрелә.* М. Кәрим. *Бөтә ерҙә яҙ нуры, яҙ еҫе, ҡолаҡтарға әллә ниндәй моңдар килеп бәрелгәндәй тойола.* Н. Мусин. *Хәбир бабайҙың йөҙөнә һалҡын ел бәрелде.* З. Хисмәтуллин.

**3.** *күсм.* Кешегә тел, һүҙ менән ҡағылыу. □ Обращаться, держать себя *с кем каким-л. образом. Кешегә ҡаты бәрелеү.* ■ *[Ҡул батшаһы] егеткә бер ҙә ҡаты бәрелмәҫкә, күңелен табырға булды, ти.* Әкиәттән.

**4.** *миф.* Ҡайғы һәм босолоуҙарҙан ауырып китеү. □ Заболеть от горя и переживаний. *досл.* Столкнуться с духом болезни; мифологизированное действие.

♦ **Ары һуғылыш, бире бәрелеү** ни эшләргә белмәй ҡаңғырып йөрөү. □ Метаться, не находить себе места. ■ *Закир, сығынсы ат һымаҡ үрһәләнеп, кире сигенә, ары һуғыла, бире бәрелә йәки баш бирмәй бөтөнләй ситкә тартып алып китә.* З. Бишева. *Ҡотлоғужа асыуынан бишкә ярыла яҙҙы: ары һуғылды, бире бәрелде, урынлы-урынһыҙға аҡырҙы, екерҙе.* Н. Мусин. **Кемгә барып бәрелергә белмәү** кемдән кәңәш, ярҙам һорарға белмәй аптырағанды белдерә. □ Не знать, куда деваться, к кому обратиться; метаться, не находить себе места. ■ *[Ильяс] кемгә барып бәрелергә, ҡайғыһын кем менән уртаҡлашырға белмәй яфаланды.* Ғ. Ибраһимов. **Күҙгә бәрелеү** ҡарағанда иғтибарҙы йәлеп итеү. □ Бросаться в глаза. **Ҡайҙа барып бәрелергә белмәү** сара, толҡа тапмай аптырағанды белдерә. □ Не знать, куда деваться. ■ *Көн оҙон нисек ваҡыт үткәрергә, ҡайҙа барып бәрелергә белмәйем.* Ә. Бикчәнтәев. **Ҡаты бәрелеү (ҡағылыу)** кешегә ауыр һүҙ әйтеү, тупаҫ мөғәмәлә итеү. □ Обращаться грубо.

**БӘРЕЛЕШ** (Р.: столкновение; И.: clash, collision; Т.: çarpışma) *и.*

**1.** Ҡара-ҡаршы төкәлеш. □ Столкновение. *Йылы һауа ағымы менән һалҡын ағым бәрелеше. Ҡаршы килгән ағымдарҙың бәрелеше арҡаһында өйөрмә барлыҡҡа килә.*

**2.** Ике арала килеп сыҡҡан талаш, тартыш. □ Небольшая ссора, стычка, перебранка. *Күрше менән бәрелеш.* ■ *Асатай Ныязғол менән булған бәрелешен һөйләне.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ҡара-ҡаршы осрашҡан ҡораллы һуғыш. □ Схватка, стычка, столкновение. *Ҡоралды бәрелеш. Ике аралағы киҫкен көрәш. Синфи бәрелештәр.*

**БӘРЕЛЕШЕҮ (бәрелеш-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **бәрелеү 1.** *взаимн. от* **бәрелеү 1.** *Ике малай йүгереп килеп бәрелеште.*

**2.** Икәү-ара талаш, тартыш ҡуптарыу. □ Ссориться, скандалить. *Бәрелешеп алыу.*

**3.** Ҡара-ҡаршы килеп һуғышыу. □ Сражаться, воевать. *Дошмандар менән бәрелешеү.* ■ *Алғы ғәскәр бәрелешеп буталды, һуғыш аттарының әсе кешнәүҙәре, һөңгөләрҙең, ҡылыстарҙың ҡалҡандарға бәрелеп сыңлауы туҙан болото өҫтөнә ҡалҡып яңғырап торҙо.* З. Ураҡсин.

**БӘРЕП ҠУЙЫУ (бәреп ҡуй-, ҡуя)** (Р.: выкидывать; И.: throw, cast, fling; Т.: atmak) *ҡ.*

Ташлау. □ Выкидывать, выбрасывать. *Китаптарҙы бәреп ҡуйыу.*

**БӘРЕҮ (бәр-)** [төрки] (Р.: бросать; И.: throw, cast, fling; Т.: atmak) *ҡ.*

**1.** Ҡулға тотоп ситкә йәки тоҫҡап ырғытыу. □ Бросать, кидать. *Таш бәреү. Атып бәреү. Күтәреп бәреү.* ■ *Урал дейеүҙе йән асыуы менән атып бәрҙе, ти.* «Урал батыр». *Тамсың атып, ташты бәреү менән таштан һиңә юлдар ярылмаҫ.* Д. Юлтый.

**2.** Һауа менән килеп ҡағылыу. □ Ударять, бить. *Еҫ бәреү. Йылы бәреү.* ■ *Йылы бәрә. Юрғандың әллә ҡайһы еренән һыуыҡ бәргәндәй булды.* С. Агиш. *Талғын ғына өргән елбәҙәк ел .. сәскә еҫтәрен ҡыуып, биткә бәрә.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *күсм.* *Нимәгәлер (баш, йөрәк һ. б.)* нык тәьҫир итеү. □ Ударить *(в голову, сердце). Ҡайғылы хәбәр йөрәгенә бәрҙе.* ■ *Аҡландарҙың ҡымыҙы ай-һай уҫал, йотомонан бәрә мейегә.* Р. Бикбаев.

**4.** *Берәй нәмәгә* ҡуша килтереп һуғыу. □ Ударять, бить. *Ағын һыу һалдың ҡойроғон ташҡа бәрҙе.*

**5.** Тәнде, аяҡ-ҡулды абайламаҫтан бер нәмәгә һуғыу; төкөү. □ Ударять, бить. *Башты бәреү. Ҡулбашты бәреү.* ■ *Ул [Яҡуп], һөрлөгөп китеп, түбыгын ҡарағай тамырына бәрҙе.* М. Кәрим. *Атайым, ыуаланып килеп, урта ишеккә маңлайын бәреп алды.* Г. Ғиззәтуллина.

**6.** Кешене нык итеп һуғыу, ҡолатыу. □ Ударять, ушибать. *Бәреп йығыу. Бәреп осороу.* ■ *Буҙ толпар һаҡсыларҙы бәреп йыҡты ла сығып сапты, ти.* Әкиәттән.

**7.** *күсм.* Ата торған ҡорал менән зыянлау; атыу. □ Поражать. ■ *Беҙҙекеләр немецтәрҙең самолёттарын берәм-берәм бәреп төшөрә башлаған.* М. Тажи. *Тәҙрә аша башына атабыҙ тип, һул ҡулбашына бәргәндәр.* Ә. Вәли.

**8.** *Ниҙеңдер* эсенән тышҡа тибеү, тышҡа атылыу. □ Бить, пробиться *(об источнике, роднике и т. д.). Бәреп сығыу. Таш аҫтынан шишмә бәреп ята.* ■ *Инде ниндәйҙер иҫ киткес тылсымлы көс Өммөгөлсөмдө усаҡ алдынан бәреп сығарҙы.* З. Биишева. *Маңлайына тир бәреп сыҡҡан, биттәре алһыуланған Зөһрә юлда арҡыры ятҡан бүрәнәгә барып тотондо.* Н. Мусин.

**9.** *күсм.* Күңел эсенән тышҡа тибеп, ҡылыҡ, ҡиәфәттә сағылыу. □ Бить, пробиться. *Биткә бәреп сыҡҡан ҡыҙыллыҡ.* ■ *Егеттең [Иштуғандың] илһамлы яҡты күҙҙәре алыҫ күк тауҙарға төбәлгән, дәрт бәреп торған баҙыҡ, йәш йөҙөндә бәхет нуры уйнай.* З. Биишева. *Әллә көн буйы кисергәндәре, яман шеш һымаҡ тулышып, тышҡа бәреп сыҡты, әллә үҙенең көсһөҙлөгөнән йәне әрнеп китте — Рамаҙандың тамағына әсе төйөр килеп тығылды, битен ҡайнар күҙ йәштәре көйҙөрөп алды.* Ә. Хәкимов.

**10.** *күсм. һөйл.* Нык, ҡәтғи, тура итеп әйтеү. □ Сказать прямо в глаза, в лицо *кому.* ■ *— Улар .. иҫән булһа, һиңә силсәүиттә ултырырға тура килмәҫ ине, — тип бәрҙе теге кеше.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Башты ташҡа бәреп булмай** сараһыҙлыҡты белдереү өсөн әйтелә. □ Голову о камень не ударишь *(о бесысходности положения).* ■ *[Уҡытыусы:] Ҡыҙғаныс та бит, ни эшләйһең инде, башты ташҡа бәреп булмай.* З. Биишева. **Бәреп инеү** ҡаршылыҡты еңеп, ҙур ҡыҙыулыҡ, тиҙлек менән килеп инеү. □ Ворваться *куда, во что. Өйгә бәреп инеү.* ■ *Ауылға ҡапыл бәреп инһәк, аҡтар араһында паника ҡуптарып инек.* Б. Хәсән. *Йөрәктәргә бәреп инһен йырым.* З. Биишева. **Бәреп сығып китеү** ҙур тиҙлек менән ситкә йүгереү йәки сабыу. □ Выскочить, выбежать, броситься вон. **Бәреп әйтеү** нык, тура, ҡаты итеп әйтеү. □ Сказать *что-л.* прямо в глаза, в лицо *кому.* ■ *Йыйылыш һайын Фазылетдин Әхмәтханды тәнҡитләп һөйләр, уғрылығын йөҙөнә бәреп әйтер ине.* Р. Камал. ● *Бәреп әйткәндең ғәйебе юҡ.* Әйтем.

**БӘРЕШЕҮ (бәреш-)** *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **бәреү 1.** *взаимн. от* **бәреү 1.** *Туп бәрешеү. Таш менән бәрешеү.*

**2.** *диал. Ни менәндер* кешегә бәргеләү. □ Кидаться *(чем-то на кого-то).* ■ *[Салих:] Һин ниңә таш менән бәрешәһең?* Х. Мохтар.

**БӘРИӘ I** [ғәр. بريئة ] (Р.: пустыня; И.: desert, wilderness; Т.: çöl) *и. иҫк.*

Сүллек, дала. □ Пустыня, степь. *Бәриәлә йәшәү.*

**БӘРИӘ II** [ғәр. بريء ] (Р.: беспорочный; И.: immaculate; Т.: suçsuz) *с. иҫк.*

Кәмселекһеҙ, ғәйепһеҙ. □ Беспорочный, невинный, непричастный. *Бәриә ҡылыҡ.*

**БӘРКӘК (бәркәге)** (Р.: мездра; И.: inner side of hide; Т.: kazıntılar) *и. диал.*

Тире менән ит араһындағы яры. □ Мездра.

**БӘРЛЕГЕҮ (бәрлек-)** (Р.: ударяться; И.: bump; Т.: vurulmak) *ҡ.*

**1.** Ҡапыл килеп бер нәмәгә һуғылыу; төкөлөү, бәрелеү. □ Ударяться, стукаться. *Ҡоймаға бәрлегеү.* ■ *Исхаҡ .. өҫтәлгә тып-тып бәрлеккән күбәләктәрҙе ҡыуырға тырыша.* Ш. Янбаев.

**2.** *күсм.* Тап булыу, бәрелеү. □ Встретиться, сойтись. *Хәммәт был ҡыҙға нисек бәрлекте икән?* ● *Тау тауға бәрлекмәй, кеше кешегә бәрлегә.* Әйтем.

**БӘРМӘ АУЫРЛЫҠ (ауырлығы)** (Р.: ударная нагрузка; И.: percussive load; Т.: darbe yükü) *и.*

Ҡапыл көсөргәнеш барлыҡҡа килтереүсе сит көс тәьҫире *(мәҫәлән, эске яныулы двигателдәрҙә поршень ауырлығы).* □ Ударная нагрузка. *Бәрмә ауырлыҡ тәьҫире.*

**БӘРРАҠ** [ғәр. برّق] (Р.: блестящий; И.: radiant; Т.: berrak) *с. иҫк.*

Ялтырауыҡлы, нурлы. □ Блестящий, лучистый, сияющий.

**БӘРСӘК I (бәрсәге)** (Р.: кусочек; И.: piece; morsel; Т.: küçük parça) *и.*

Ваҡ-ваҡ итеп ҡырҡылған йәки ярылған киҫәк. □ Кусочек, осколок. *Бәрсәк итеү. Бәрсәк итеп һындырыу. Утын бәрсәге.*

**БӘРСӘК II (бәрсәге)** (Р.: мелкий хариус; И.: small grayling; Т.: gölge balığı) *и. зоол.*

Бәрҙе балаһы, ваҡ бәрҙе. □ Мелкий хариус. *Бәрсәк тотоу.*

**БӘРСӘК-БӘРСӘК** (Р.: понемногу; И.: a little at a time, from time to time; Т.: yavaş yavaş) *р. диал.*

Әҙләп-әҙләп, берәм-һәрәм. □ Понемногу, изредка. *Бәрсәк-бәрсәк ямғыр тамсылары төштө.*

**БӘРСӘКЛӘНЕҮ (бәрсәклән-)** *ҡ. төш. ҡар.* **бәрсәкләү.** *страд.* от **бәрсәкләү.** *Бәрсәкләнгән сыра. Бәрсәкләнгән ит.*

**БӘРСӘКЛӘҮ (бәрсәклә-)** (Р.: раздроблять; И.: split, splinter; Т.: parçalamak) *ҡ.*

Ваҡ-ваҡ, йоҡа-йоҡа итеп ҡырҡыу, ярыу *(ҡаты йәки туң нәмәне);* сәрпәкләү. □ Раздроблять, разломать на мелкие кусочки. *Туң итте бәрсәкләү. Утынды бәрсәкләп ярыу. Сыраны бәрсәкләү.*

**БӘРСӘК-ҺӘРСӘК** (Р.: по одному; И.: one at a time, one by one; Т.: birer birer) *р.*

Берәм-һәрәм. □ По одному, поодиночке, в одиночку. *Йыйылыштан кешеләр бәрсәк-һәрсәк тарала башланы.*

**БӘРСӘЛӘҮ (бәрсәлә-)** *ҡ. диал. ҡар.* **бәрсәкләү.** *Итте бәрсәкләп боҙоу.*

**БӘРХӘТ I** [рус. *бархат* < нем. < ғәр.] (Р.: бархат; И.: velvet; Т.: kadife) *и.*

Уң яғы ҡыҫҡа ғына ҡуйы йомшаҡ өбөрө менән һуғылған, ғәҙәттә, ебәк туҡыма. □ Бархат. *Йәшел бәрхәт. Ҡара бәрхәт. Ҡыҙыл бәрхәт.* ■ *Ер күкрәге бәрхәт һымаҡ йомшаҡ.* М. Тажи.

**БӘРХӘТ II** (Р.: бархатный, И.: velvet; Т.: kadife) *с.*

Бәрхәттән (I) тегелгән, эшләнгән. □ Бархатный. ■ *Малайҙар сығып киткәс, Нәғимә инәй, һандыҡтан алып, оҙон сыбар күлдәген, йәшел бәрхәт камзулын кейҙе, яңы ҡушъяулығын бәйләне.* М. Карим.

**БӘРХӘТ АҒАСЫ** (Р.: бархат амурский; И.: Amur cork tree; Т.: Amur kadife) *и. бот.*

Олоно бәрхәт һымаҡ йомшаҡ ҡат менән ҡапланған декоратив ағас; амур бәрхәте. □ Бархат амурский; бархатное дерево, амурское пробковое дерево (лат. *Phellodendron amurense). Бәрхәт ағасы ултыртыу.*

**БӘРХӘТ ГӨЛ** (Р.: бегония; И.: begonia; Т.: begonya) *и. бот.*

Япрағы тимгел-тимгел йәшел, күк, ал төҫтәрҙән торған сәскәле, бегониялар ғаиләһенә ҡараған декоратив үҫемлек; әҙрәс

гөл. □ Бегония (лат. *Begonia*). *Бәрхәт гөл үҫтереү.*

**БӘРХӘТ ҮЛӘН** (Р.: бархатцы; И.: (African, annual) marigold; Т.: kadife çiçeği) *и. бот.*

Ябай һәм бәрхәт кеүек йомшаҡ һары, ҡыҙғылт һары, көрән сәскә атыусы баҡса үҫемлеге. □ Бархатцы, бархотки (лат. *Tagetes*). *Бәрхәт үлән сәсеү.*

**БӘРЫҠ** [ғәр. برق] (Р.: молния; И.: (thunder) storm, lightning; Т.: berk) *и. иҫк.*

Йәшен. □ Молния, гроза. *Бәрыклы ямғыр.*

**БӘРЫС** [ғәр. برص] (Р.: проказа; И.: leprosy; Т.: cüzam) *и.*

Тән ағзалары өлөш-өлөш сереп төшә торған яман ауырыу; махау. □ Проказа. *Бәрыс ауырыуы.*

**БӘРӘБӘР I** [фарс. برابر] (Р.: одинаковый; И.: equal; Т.: aynı) *с.*

Үҙ-ара тиң, тигеҙ. □ Одинаковый, равный. *Бәрәбәр күреү. Ауырлығы бәрәбәр таштар.* ■ *Ялғанлыҡ һәм уғрылыҡ хөкөмдә бәрәбәрҙер.* М. Өмөтбаев. *Рөстәмгә үҙ һынына бәрәбәр башҡаларҙан өҫтөн булыу килешеп тора.* Ф. Иҫәнғолов. *Етмеш һөнәр, етмеш аҡыл талап итмә һин минән, мин бәрәбәр япраҡтарҙы ҡағып үткән ел менән* М. Кәрим.

**БӘРӘБӘР II** [фарс. برابر] (Р.: эквивалент; И.: equivalent; Т.: eçit) *и.*

*Нимәгәлер* тиң булған күләм, сифат. □ Эквивалент . ■ *Ошо хеҙмәт бәрәбәренә улар миңә көнөнә бер-ике мәртәбә сәй эсерәләр, аш ашаталар.* М. Ғафури.

♦ **Шуның менән бәрәбәр** шул уҡ ваҡытта, шуның менән бергә. □ Вместе с тем, в то же время.

**БӘРӘБӘР КҮРЕҮ (бәрәбәр күр-)** (Р.: почитать за равного; И.: equate (with); Т.: eşit görmek) *к.*

Тиң күреү, бер тигеҙ күреү. □ Почитать за равного *кого;* приравнять *к кому-чему.*

**БӘРӘД** [ғәр. برد] (Р.: град; И.: hail; Т.: dolu) *и. иҫк.*

Күктән яуған боҙ; борсаҡ. □ Град. *Бәрәд яуыу.*

**БӘРӘЙ I** *и. диал. кар.* **бәрәңге.** *Бәрәй бешереү. Бәрәй ҡаҙыу.*

**БӘРӘЙ II** (Р.: ба; И.: oh! yes; Т.: vay) *ымл. диал.*

Ғәжәпләнеүҙе белдергән һүҙ. □ Ба *(междометие, выражающее удивление). Бәрәй, атаһы Ишморат бит.*

**БӘРӘК** (Р.: ба; И.: oh! really; Т.: vay) *ымл.*

Аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. □ Ба *(междометие, выражающее удивление). Бәрәк, һин дә быңдамы?* ■ *Бәрәк, был бит бисә кеше, яулығы ялпылдап килә.* Т. Килмөхәмәтов.

♦ **Аңра бәрәк** әрләп, мыҫҡыллап әйтелә. □ Глупец. *Эй, аңра бәрәк, шуны ла белмәй.*

**БӘРӘКАЛЛА** [ғәр. بركالله] (Р.: ба! славно!; И.: well; Т.: iyi, güzel) *ымл.*

Алланың рәхмәте төшһөн *(хуплау, шөкөр итеүҙе белдергәндә әйтелә).* □ Ба! Славно! *(междометие, выражающее одобрение, восхищение, похвалу).* ■ *Һаумы, Камали ағай? — Бәрәкалла, үҙегеҙ нисек тораһығыҙ?* Ғ. Хәйри. *Бәракалла, егет, ғәйрәтеңә, тармар килә дошман яуҙары.* М. Ғафури. *[Кәзә Мәзин:] Һай, бәрәкалла, бәрәкалла, ни, Закир ҡустым, йомартлыҡ тигән нәмә пәйғәмбәрҙәрҙән ҡалған ғәҙәт ул.* З. Биишева.

**БӘРӘКӘЙ** *и. диал. кар.* **бәрәс I.** *Һарыҡ бәрәкәйе. Кәзә бәрәкәйе.*

**БӘРӘКӘС** *ымл. кар.* **бәрәк.** *Бәрәкәс, улым, төн уртаһында ҡайҙа бараһың?*

**БӘРӘКӘТ I** [ғәр. بركة] (Р.: изобилие; И.: abundance; Т.: bereket) *и.*

**1.** Тормош, көнкүрештәге матди муллыҡ, иркенлек, ҡот. □ Изобилие, обилие, благополучие, благодать. *Бәрәкәт килтереү. Йортҡа бәрәкәт.*

**2.** Күпкә етә, файҙа бирә торған сифат; ҡәҙер, файҙа. □ Выгода, польза. *Бәрәкәтен күреү. Бәрәкәте булһын.* ■ *Ҡуйсәле, — тигән ул [Язар ҡарт], — малды һанаһаң, бәрәкәте ҡаса ла ул.* Б. Бикбай. ● *Бәрәшән ҡулда бәрәкәт юҡ.* Мәҡәл. *Хәрәкәттә — бәрәкәт.* Әйтем.

**БӘРӘКӘТ II** (Р.: ба; И.: oh!; Т.: vay) *ымл.*

Аптырағанда әйтелә. □ Ба *(междометие, выражающее удивление). Бәрәкәт, ки-*

*леп тә еттеңме?* ■ *[Бәҙекәй әбей:] Бәрәкәт, индермәйҙәр ҙәһә!* С. Агиш.

**БӘРӘКӘТЕН ЕБӘРЕҮ (бәрәкәтен ебәр-)** (Р.: лишать благополучия; И.: deprive of charm; Т.: bereketini kaçırmak) *к.*

Көҙер-котон, йәмен юкка сығарыу. □ Лишать благополучия, прелести. ■ *Шулар инде ер һатып, йортто талап бәрәкәтте ебәргәндәр илегеҙҙән.* Д. Юлтый.

**БӘРӘКӘТЕН КАСЫРЫУ (бәрәкәтен касыр-)** *к. кар.* **бәрәкәтен ебәреү.** *Әйберҙең бәрәкәтен касырып, ниңә бысракка бәреп куйҙың?*

**БӘРӘКӘТЛЕ** (Р.: благодатный; И.: beneficial; Т.: bereketli) *с.*

**1.** Муллығы, именлеге менән яҡшы; ҡотло. □ Благодатный. *Бәрәкәтле тупрак. Бәрәкәтле ямғырҙар.* ■ *Эй, Уралым, бәрәкәтле төйәк! Рәхмәт яуһын һиңә халкыңдан, яралғанһың аҫыл таштарҙан һин, яралғанһың тотош алтындан.*

**2.** Бөтмәй, оҙаҡҡа етә торған. □ Экономный, выгодный; экономичный. *Бәрәкәтле булыу. Аҙыкты бәрәкәтле тотоноу. Бәрәкәтле яғыулык.* ■ *Бикмырҙа ағайҙың өйө йылы, өҫтө таҙа, тапканы бәрәкәтле булды.* Ф. Иҫәнғолов. *Бик бәрәкәтле булды был варенье. Ҡунаҡтар алдына ла мул-мул итеп ҡуябыҙ, үҙебеҙҙең өҫтәлдән дә өҙөлмәй, үҙе һис кәмемәй.* М. Садиҡова.

**БӘРӘКӘТҺЕҘ** (Р.: неэкономный; И.: uneconomical; Т.: idaresiz, bereketsiz) *с.*

Самалаған ваҡытҡа етмәй, тиҙ бөткән. □ Неэкономный, невыгодный. *Бәрәкәтһеҙ булыу. Аҡсаны бәрәкәтһеҙ тотоноу.* ■ *[Нигмәтулла:] Бер бот он алғанға әле бер аҙна ла юҡ. Шул бөттөмө?.. Ниңә бик бәрәкәтһеҙ булды?* М. Ғафури.

**БӘРӘКӘТҺЕҘЛӘНЕҮ (бәрәкәтһеҙләнд-)** *к. төш. кар.* **бәрәкәтһеҙләү.** *страд. от* **бәрәкәтһеҙләү.** *Кейемдәре бәрәкәтһеҙләнеп бысраҡта аунап ята.*

**БӘРӘКӘТҺЕҘЛӘҮ (бәрәкәтһеҙлә-)** (Р.: тратить неэкономно; И.: waste (away); Т.: tutumsuz olmak) *к.*

Бәрәкәтен, ҡотон ебәреү; ҡәҙерһеҙләү. □ Тратить, расходовать неэкономно. *Аҡсаны бәрәкәтһеҙләү. Аҙыҡты бәрәкәтһеҙләү.* ■ *[Мортаев – Шәмсиәгә:] Ҡара инде, ә! Аш бәрәкәтһеҙләп, кемде һыйлап сығарған?!* С. Сәйетов.

**БӘРӘМЕС I** *и. диал. кар.* **бесәй табаны.**

**БӘРӘМЕС II** (Р.: неважно; И.: not very well; Т.: önemli değil) *р. диал.*

Мөшкөл, насар, шәптән түгел. □ Неважно. *Үҙ хәлем бәрәмес, кешелә эшем юк.*

**БӘРӘМӘС I** (Р.: ватрушка; И.: curd tart; Т.: peynirli pasta) *и.*

Ауыҙын асыҡ итеп бешергән эремсек йәки бәрәңге бәлеше. □ Ватрушка. *Картуф бәрәмәсе. Ҡыҙыл эремсек бәрәмәсе.*

**БӘРӘМӘС II** (Р.: ба; И.: you don't say!; Т.: vay) *ымл. диал.*

Аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. □ Ба; ну, надо же! *(междометие, выражающее удивление). Бәрәмәс, уйламай әйттем.*

**БӘРӘМӘТ** [рус. *перемёт*] (Р.: перемёт; И.: seine; Т.: serpme) *и.*

Эре ҡармаҡ теҙеп, һыуға арҡыры тартҡан бау; еле. □ Перемёт. *Бәрәмәт ҡуйыу. Киселҙән өҫтәрәк бәрәмәт һалғандар.*

**БӘРӘН I** (Р.: коза или овца; И.: sheep, ewe (sometimes) goat; Т.: keçi, koyun) *и.*

Имеп туҡтағандан һуң тәүге бәрәсләгәнгә тиклемге кәзә, һарыҡ. □ Коза или овца *(до первого окота). Бәрән кәзә. Бәрән һарыҡ. Бәрән йөнө. Бәрән тиреһе.*

**БӘРӘН II** *и. диал. кар.* **орғасы.** *Бәрән һарыҡ.*

**БӘРӘН III** (Р.: мерлушковый; И.: lambskin; Т.: kuzu derisi) *с. мәғ.*

Бәрән (I) тиреһенән тегелгән. □ Мерлушковый, овечий. *Бәрән тун. Бәрән бүрек.*

**БӘРӘН ЙӨНӨ** (Р.: поярок; И.: lamb's wool felt; Т.: koyun yünü) *и.*

Бәрән һарыҡтың йөнө. □ Поярок. *Бәрән йөнөнән бәйләнгән бейәләй.*

**БӘРӘН КАБЫ** *и. диал. кар.* **бәрәнкап.** *Бәрән ҡабынан тун тегеү.*

**БӘРӘНКАП (бәрәнкабы)** (Р.: ягнячья шкура; И.: lamb skin; Т.: kuzu derisi) *и. диал.*

Яңы тыуған бәрәс тиреһе; күрпә. □ Ягнячья шкура. *Бәрәнкаптан тегелгән тун.*

**БӘРӘНЛӘТЕҮ (бәрәнләт-)** *к. йөкм. кар.* **бәрәнләү.** *понуд.* от **бәрәнләү.** *Һарыкты бәрәнләтеү.*

**БӘРӘНЛӘҮ (бәрәнлә-)** *к. диал. кар.* **бәрәсләү.** *Һарык бәрәнләне.*

**БӘРӘН ТУН** (Р.: мерлушковая шуба ; И.: lambskin fur coat; Т.: kuzu derisinden kürk) *и.*

Бәрән тиреһенән тегелгән тун. □ Мерлушковая шуба, овечья шуба.

**БӘРӘҢГЕ** (Р.: картофель; И.: potato (plant); Т.: patates) *и. бот.*

**1.** Эт ҡарағаты кеүектәр ғаиләһенә ҡараған, крахмалға бай бүлбеле йәшелсә; картуф. □ Картофель (лат. *Solanum tuberosum*). *Бәрәңге ултыртыу. Бәрәңге ҡаҙыу. Бәрәңге утау. Бәрәңге төбөн күмеү. Бәрәңге яланы. Бәрәңге баҙы. Бәрәңге күҙе. Бәрәңге һабағы.*

**2.** Шул үҫемлектең тамырындағы ашай торған бүлбеһе. □ Картофель. *Аҡ бәрәңге. Ҡыҙыл бәрәңге. Эре бәрәңге. Ярмалы бәрәңге. Ҡурған бәрәңге. Бәрәңге иҙмәһе. Бәрәңге бешереү.* ■ *Хужа ҡарсыҡ йомролай бәрәңге бешереп ҡуйған. Ул, бәрәңгеһенең боҫон борҡоратып, сөлмәген өҫтәлгә килтереп ултыртты.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Бәрәңге кәлжәмәһе** йүнһеҙ. □ Бестолковый. *Был бәрәңге кәлжәмәһе малай тыңлашмай.*

**БӘРӘҢГЕ АЛМАҺЫ** (Р.: семенники картофеля; И.: potato seed plants; Т.: patates tohumu) *и.*

Бәрәңге сәскәһененң бәләкәй генә алма рәүешендәге емеше; тыңҡау. □ Семенники картофеля. *Бәрәңге алмаһы сығыу.*

**БӘРӘҢГЕ БУТҠАҺЫ** (Р.: картофельное пюре; И.: potato mash; Т.: patates ezmesi) *и.*

**1.** Бәрәңге иҙмәһе. □ Картофельное пюре. *Бәрәңге бутҡаһы иҙеү.*

**2.** *кусм.* Йомшаҡ кеше. □ Растяпа. *Ул ни, бәрәңге бутҡаһы, бер һүҙ ҙә ҡаршы әйтә алмай.*

**БӘРӘҢГЕ ГӨЛ** *и. бот. диал. кар.* **бәрхәт гөл.** *Бәрәңге гөл үҫтереү.*

**БӘРӘҢГЕЛЕК (бәрәңгелеге)** (Р.: картофельное поле; И.: potato field; Т.: patates alanı) *и.*

Бәрәңге сәселә торған ер. □ Картофельное поле. *Бәрәңгелекте һөрҙөрөү.*

**БӘРӘҢГЕЛӘНЕҮ (бәрәңгелән-)** (Р: образовываться *(о клубнях картофеля)*; И.: set; Т.: yumrulanmak) *к.*

Бәрәңге тамырында бүлбеһе тумалыу, яралыу. □ Образовываться, завязываться *(о клубнях картофеля). Бәрәңгеләнә башлау.*

**БӘРӘҢГЕ СЫҒАРЫУ (бәрәңге сығар-)** (Р.: копать картошку; И.: dig potatoes; Т.: patates almak) *к.*

Бәрәңге ҡаҙып алыу. □ Копать картошку. *Бәрәңге сығарыу ваҡыты.*

**БӘРӘҢГЕ ТӨПӘЛСӘҺЕ** *и. диал. кар.* **бәрәңге алмаһы.** *Бәрәңге төпәлсәһе өлгөргән.*

**БӘРӘҢГЕ ТУЙРАҺЫ** *и. диал. кар.* **бәрәңге алмаһы.** *Бәрәңге туйраһы сыҡҡан.*

**БӘРӘС I** (Р.: ягнёнок, козлёнок; И.: lamb, kid; Т.: kuzu, keçi) *и.*

Тыуғандан алып имеп туҡтағанға тиклемге кәзә, һарыҡ. □ Ягнёнок или козлёнок. *Кәзә бәрәсе. Һарыҡ бәрәсе. Көҙгө бәрәс. Яҙғы бәрәс. Бәрәс тиреһе.* ■ *Һарыҡ бәрәсләп биргәс, саҡ-саҡ туңманы бәрәс. Шуға өйгә индерҙек, шешәнән һөт имдерҙек.* Ә. Әхмәт-Хужа. *Таиба әбей биргән яҙғы бәрәс йөнөнән Емеш үҙенә вәл һымаҡ итеп аҡ шәл бәйләп алды.* З. Биишева. *Бына ике-өс һарыҡ, бәрәстәрен эйәртеп, кәбәнгә табан ыңғайланы.* Ә. Хәкимов. *Мейес араһында йылыға иҙрәп йоҡлаған һарыҡ бәрәсе, тышта яр һалып баҡырған әсәһенең тауышын ишетептер, ялҡау ғына мыҡырлай.* Г. Ғиззәтуллина.

**БӘРӘС II** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе аймағы. □ Бәрәс *(название родового подразделения башкир племени кыпчак). Бәрәс аймағы башҡорто.*

**БӘРӘС III** (Р.: ба; И.: oh, really!; Т.: oh, gerçekten) *ымл.*

Ҡапыл аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. □ Ба *(междометие, выражающее удивление). Бәрәс, килеп тә еттеңме?* ■ *Бәрәс, — тине ябай башҡорт ҡатыны, — электрҙы белмәҫ ниндәй аҡыл ул?* Х. Ғиләжев.

**БӘРӘСЛЕ** (Р.: имеющий ягнёнка, козлёнка; И.: having lambs; kids; Т.: kuzulu, keçili) *с.*

Бәрәсе булған. □ Имеющий ягнёнка, козлёнка *(об овце, козе). Бәрәсле кәзә. Бәрәсле һарыҡ.* ■ *Ялан кәртә яғынан бәрәсле һарыҡ баҡырғаны ишетелә.* Г. Ғиззәтуллина.

**БӘРӘСЛӘТЕҮ (бәрәсләт-)** (Р.: принимать ягнят, козлят; И.: help with lambing; Т.: kuzu, keçi almak) *ҡ.*

Һарыҡ-кәзәнән бәрәс алыу, бәрәс килтертеү. □ Получать, принимать ягнят, козлят. *Тәрбиә яҡшы, аҙыҡ мул булғас, фермала һарыҡтарҙы бәрәсләтеү уңышлы бара.*

**БӘРӘСЛӘҮ (бәрәслә-)** (Р.: котиться, ягниться; И.: lamb, yean; Т.: kedilemek, kuzulamak) *ҡ.*

Бәрәс килтереү. □ Котиться *(о козе),* ягниться *(об овце). Һарыҡ бәрәсләгән. Кәзә бәрәсләгән.* ■ *[Сәрбиямал:] Анауы бәрәсләргә торған .. һарығымдың бәрәсен туңдырып ҡуйһағыҙ, йәнегеҙҙе алырмын!* З. Биишева.

**БӘРӘС ҺАЛЫУ (бәрәс һал-)** (Р.: выкидыш у овёц, коз; И.: slip; Т.: erken doğurmak) *ҡ.*

Көнө етмәҫ элек имгәнеп, үле бәрәс килтереү. □ Выкидыш *(у овец и коз). Һарыҡ бәрәс һалған.*

**БӘРӘҮЕЗ** [фарс. چرويزن] *и. диал. ҡар.* **ау II, 1, 2**. *Ҡош бәрәүезе. Балыҡ бәрәүезе.*

**БӘРӘҮӘЙҺЕҘ** (Р.: неэкономно; И.: uneconomical; Т.: tutumsuz) *р. диал.*

Һаҡһыҙ. □ Неэкономно. *Аҡсаны бәрәүәйһеҙ тотоноу.*

**БӘРӘ-ҺӘРӘ** (Р.: очумелый; И.: crazy; Т.: çılgın) *с. диал.*

**1.** Аңҡы-тиңке. □ Очумелый. *Бәрә-һәрә булдым да киттем.*

**2.** Арлы-бирле. □ Кое-как. *Ҡабыҡ-ҡобоҡ яғып бәрә-һәрә итә торғайныҡ.*

**БӘРӘШӘН I** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ҡәбиләһе аймағы. □ Бәрәшән *(название родового подразделения башкир племени тунгаур). Бәрәшән аймағы башҡорто.*

**БӘРӘШӘН II** (Р.: неэкономный; И.: unthrifty; Т.: tutumsuz) *с.*

Аҙыҡ-түлек йәки башҡа нәмәне самалап, кәрәгенсә генә тотона белмәгән; һаҡлыҡһыҙ. □ Неэкономный, расточительный. *Бәрәшән хужабикә. Бәрәшән тотоноу.* ● *Бәрәшән ҡулда бәрәкәт юҡ.* Мәҡәл.

**БӘРӘШӘНЛӘНЕҮ (бәрәшәнлән-)** (Р.: тратить неэкономно; И.: waste; Т.: israf etmek) *ҡ.*

**1.** Һаҡлыҡһыҙ, бәрәшән ҡыланыу. □ Тратить, расходовать неэкономно; быть неэкономным, расточительным. *Бәрәшәнләнеп аҡса тотоноу.* ■ *[Карсыҡ:] Нотоҡ уҡыуым түгел, [килен], оло булараҡ, кәңәш итеп әйтеүем генә: әҙер донъяға төштөм, тип, бәрәшәнләнеп, мал туҙҙырма. Хәләлде харамға сайыуҙан аң булығыҙ.* Т. Ғарипова. *Ялбыр шулай бәрәшәнләнеп йөрөй бирә, ти. Күп тә үтмәй, Ялбыр бөлгән дә ҡуйған, ти.* Әкиәттән.

**2.** Теләһә нисек тәләф ителеү, әрәм-шәрәм ителеү. □ Растратить, растранжирить. ■ *Ул [бай], иген яҡшы итеп йыйыламы, башаҡ сәселеп, бәрәшәнләнеп, туҙғылып ятмаймы тип, тикшереп йөрөнө.* Ғ. Дәүләтшин.

**БӘРӘШӘНЛӘҮ (бәрәшәнлә-)** (Р.: расходовать неэкономно; И.: squander; Т.: israf etmek) *ҡ.*

Самалап, кәрәгенсә генә тотонмай, теләһә нисек тәләф итеү. □ Расходовать неэкономно. *Бәрәшәнләп йәшәү. Аҙыҡты бәрәшәнләү. Бесәнде бәрәшәнләп бөтөләр ҙә, мал ас тора.*

**БӘС** [фарс. بس] (Р.: значит; И.: so, thus; Т.: demek) *инш. иҫк.*

Тимәк. □ Значит, так, следовательно; стало быть. ■ *Бәс, шулай, — ти Усман бабай, — яуҙарҙы еңеп сыҡтыҡ.* С. Кулибай.

**БӘСАЛӘТ** [ғәр. بسالة] (Р.: доблесть; И.: prowess; Т.: cesaret) *и.*

Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, егетлек. □ Доблесть. *Бәсаләт етеү.*

**БӘСЕЙ ҠОЙРОҠ (ҡойроғо)** *и. диал. бот. ҡар.* **аҡ алабута**. *Бәсей ҡойроҡто заманында күп ашаныҡ инде.*

**БӘСЕМ** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal

subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Дыуан ҡәбиләһе аймағы. □ Бэсем *(название родового подразделения башкир племени дуван). Бәсем аймағы башҡорто.*

**БӘСЕҮ (бәс-)** *к. диал. ҡар.* **сәлдереү 1.** *Минең уйынсыҡ машинамды бәскәндәр.*

**БӘСИМ** [ғәр. بسام] (Р.: приветливый; И.: affable, friendly; Т.: samimi) *с.*

Көләс, алсаҡ. □ Приветливый, улыбчивый, радушный. *Бәсим ҡыҙ. Бәсим хужабикә.*

**БӘСИР** [ғәр. بصير] (Р.: зоркий; И.: sharp-sighted; Т.: keskin gözlü) *с.*

**1.** Үткер күҙле. □ Зоркий, проницательный. *Бәсир ҡараш. Бәсир егет.*

**2.** Ул-был нәмәне яҡшы күреп белеүсән. □ Знающий, осведомлённый. *Бәсир етәксе.*

**БӘСИТ I** [ғәр. بسيط] (Р.: простой; И.: simple, common; Т.: basit) *с.*

Ҡатмарһыҙ, ябай. □ Простой. *Бәсит мәсьәлә. Бәсит эш. Бәсит хәбәр. Бәсит ҡылыҡ.*

**БӘСИТ II** [ғәр. بسيط] (Р.: бесхитростный; И.: artless; Т.: basit) *с.*

Хәйләһеҙ, бер ҡатлы. □ Бесхитростный, наивный. *Бәсит бала.*

**БӘСӘ** *и. диал. ҡар.* **баса.**

**БӘСӘЙ** *и. диал. ҡар.* **бәкәл I, 1, 2.** *Бәсәй быуыны.*

**БӘСӘК** (Р.: ба; И.: hullo! well; Т.: yapma!) *ымл. диал.*

Аптырауҙы белдергән һүҙ. □ Ба *(междометие, выражающее недоумение, удивление). Бәсәк, һин ҡайҙан килеп сыҡтың әле?*

**БӘСӘЛ I** (Р.: долго не начинающий ходить; И.: tardy in toddling; Т.: uzun zaman yürümeyen çocuk) *с.*

Оҙаҡ атлай алмай ултырған *(балаға ҡарата).* □ Долго не начинающий ходить *(о ребёнке). Бәсәл бала.*

**БӘСӘЛ II** *с. диал. ҡар.* **булдыҡһыҙ.** *Бәсәл егет.*

**БӘСӘТУН** (Р.: мерлушковая шуба; И.: lambskin fur coat; Т.: kuzu derisinden manto) *и. диал.*

**1.** Бәрән тун. □ Мерлушковая шуба, овечья шуба. *Бәсәтун кейеү.*

**2.** Баса тун. □ Шуба из шкурок лисьих и куньих лап. *Бәсәтун тектереү.*

**БӘҪ I** [фарс. بس] (Р.: опрятный вид; И.: neat appearance; Т.: düzenli) *и.*

**1.** Нәмәгә йәм, тәм биреп торған яҡшы сифат; күрк, йәм. □ Опрятный вид *(одежды),* вкус *(пищи). Бәҫен ебәреү. Аштың бәҫе киткән. Кейемдең бәҫе киткән.* ■ *[Килен:] Ҡәйнәм, ин инде тиҙерәк. Сәйҙең бәҫе китә бит.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Кеше ҡаршыһындағы ҡәҙер; күрк. □ Достоинство, солидность, степенность. *Бәҫте һаҡлау. Бәҫте ебәреү. Үҙ бәҫен дә белмәҫ икән кеше.* ■ *[Ҡунаҡбикә:] Йә, йә, юҡҡа ҡунаҡтың бәҫен ебәреп торма. Башҡа ваҡытта, урамда әрләшерһең.* Д. Юлтый. *Ҡыҙ алдында бына шулай үҙ ауылының бәҫен ярайһы уҡ күтәрә алыуынан ниндәйҙер кинәнес тапты Төлкөсура.* Н. Мусин. ● *Майыңды ҡыштан сығарма, ҡатыныңды бәҫтән сығарма.* Мәҡәл.

**3.** Эшкә һәләтле иткән көс, ғәйрәт. □ Сила, мощь. *Бәҫтән тайыу.* ■ *Һалдаттарҙың, оҙаҡ мәшәҡәтләнеп, бәҫе ҡайтҡан, ахыры. Штанга эргәһенә барырға береһе лә баҙнат итмәй.* Н. Мусин. *Малайҙарға ират башланғысын, егетлек бәҫен бәләкәйҙән үҫтереү зарур.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 10, 2010. ● *Ир намыҫы — ат бәҫе.* Мәҡәл.

**БӘҪ II** [дөйөм төрки һүҙе] (Р.: иней; И.: hoarfrost; Т.: kırağı) *и.*

**1.** Саҫҡау һыуыҡта ағасҡа йәки башҡа нәмәгә өрпәк кенә булып ҡуна торған ҡырау. □ Иней, изморозь. *Бәҫ баҫыу. Бәҫ ҡаплау. Ағастар бәҫ менән ҡапланған.* ■ *Туғайҙарға болот ҡатыш төшә аҡ томан. Мамыҡ төҫлө бәҫ бөркәнә әрәмә, ҡыуаҡ.* М. Тажи.

**2.** *диал. ҡар.* **томан 1.** *Бәҫ күтәрелде, яуыр.*

**3.** *диал.* Эҫе көндә ерҙән елберләп кенә сыҡҡан һауа. □ Тёплая волна на поверхности земли. *Йәй көнө ерҙән бәҫ сыға, ер ярыла.*

**БӘҪ III** *иш. ҡар.* **бәс.**

**БӘҪ IV** (Р.: фетр; И.: felt; Т.: fötr) *и. диал.*

Яҡшы йөндән баҫылған юғары сифатлы йоҡа беше кейеҙ. □ Фетр. *Бәҫ бәлтә кейгән әсәйем.*

**БӘҪ БАҪЫУ (бәҫ баҫ-)** (Р.: переживать горе; И.: experience grief; Т.: üzülmek) *ҡ.*

Ҡайғы-хәсрәт баҫыу. □ Переживать горе. *Бәҫ баҫҡан ҡатын зары.*

**БӘҪЕ КИТЕҮ (бәҫе кит-)** (Р.: потерять вид; И.: lose face; Т.: yüzü kalmamak) *ҡ.*

Йәме, ҡәҙер-хөрмәте юҡҡа сығыу. □ Потерять вид, вкус, достоинство. ■ *Ауылда туктапып бәҫе киткән Хисмәтулла яйлап төҙәлә һәм приискыға эшкә яллана.* Ә. Вахитов.

**БӘҪЛЕ I** (Р.: опрятный; И.: neat, tidy; Т.: iyi) *с.*

**1.** Нәмәгә йәм, тәм биреп торған яҡшы сифатлы; күркәм. □ Опрятный *(об одежде),* вкусный *(о пище). Бәҫле кейем. Бәҫле һый.*

**2.** Кеше алдында ҡәҙерле; абруйлы. □ Солидный, представительный. *Бәҫле ҡунаҡ. Бәҫле кешеләр. Бәҫле булыу.* ■ *Байтаҡ көндәр уҙған һуң, бәҫле ҡунаҡ булған һуң, Урал иртүк торған, ти. Һомайҙы саҡырып алған, ти.* «Урал батыр».

**БӘҪЛЕ II** (Р.: заиндевелый; И.: covered with hoarfrost; Т.: kırçlanmış) *с.*

Бәҫ (II, 1) менән ҡапланған. □ Заиндевелый. *Бәҫле урман.* ■ *Бәҫле, сап-сал бөгөн урман, ер ябынған ап-аҡ өрпәк ҡалын юрған.* Ҡ. Даян.

**БӘҪЛЕК I (бәҫлеге)** (Р.: приличие; И.: decency; Т.: terbiye) *и.*

Кеше алдында ҡәҙерле хәл. □ Приличие, вежливость, благопристойность. *Бәҫлек һаҡлау.* ■ *[Байбисә:] Йә, был ни тигән эш — ҡояш ауалағансы йоҡлау, был ниндәй бәҫлек?* Т. Хәйбуллин.

**БӘҪЛЕК II** (Р.: невысокий; И.: shortish; Т.: kısa boylu) *с. диал.*

Бәләкәй, тәбәнәк буйлы. □ Невысокий, низкорослый *(о человеке). Бәҫлек егет.*

**БӘҪЛӘНДЕРЕҮ (бәҫләндер-)** (Р.: индеветь; И.: become hoary with frost; Т.: kırçile kaplamak) *ҡ.*

Бәҫ (II, 1) менән ҡаплау. □ Индеветь. *Ағастарҙы бәҫләндереп ҡыш килде.*

**БӘҪЛӘНЕҮ (бәҫлән-)** (Р.: индеветь; И.: get covered with hoarfrost; Т.: kırağı ile kaplı olmak) *ҡ.*

Бәҫ (II, 1) менән ҡапланыу. □ Индеветь. *Ағастар бәҫләнгән.* ■ *[Аттың] иртәнге һалҡынға бәҫләнгән арҡаһынан боҫо борҡорап тора.* С. Агиш.

**БӘҪЛӘҮ (бәҫлә-)** [ҡыпсаҡ осоро һүҙе] (Р.: почитать; И.: honour, respect; Т.: saygı göstermek) *ҡ. диал.*

**1.** Хөрмәтләү. □ Почитать. *Ҡатынын бәҫләп тотманы.*

**2.** Ҡәҙерләү *(кейем-һалымға ҡарата).* □ Бережно относиться *(к одежде). Бәҫләп кейеү.*

**БӘҪТӘН СЫҒАРЫУ (бәҫтән сығар-)** (Р.: выводить из строя; И.: destroy; Т.: yapamaz hale getirmek) *ҡ.*

Ҡотон, ҡәҙер-хөрмәтен юҡҡа сығарыу. □ Выводить из строя, уничтожить. *Бер атты тукмап бәҫтән сығарҙы.*

**БӘҪТӘН ТАЙЫУ (бәҫтән тай-, бәҫтән тая)** (Р.: обессилеть; И.: grow weak, break down; Т.: güçsüzlenmek) *ҡ.*

Көсһеҙләнеү, дәрт-ғәйрәтте юғалтыу. □ Обессилеть, измотаться *(о пожилых людях). Бәҫтән тайған ҡарттар.*

**БӘҪҺЕҘ** (Р.: слабый; И.: feeble; Т.: güçsüz) *с.*

**1.** Арыған, талған, хәлһеҙ. □ Слабый, бессильный. *Ялан эшенән бәҫһеҙ булып ҡайтыу. Ауырыуҙан бәҫһеҙ булып ҡалыу.*

**2.** *диал.* Изгелекһеҙ. □ Неблагодарный. *Бәҫһеҙ малай.*

**3.** *диал.* Ҡәҙерһеҙ. □ Неухоженный. *Кейемде бик бәҫһеҙ кейәһең.*

**БӘҪҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ (бәҫһеҙләндер-)** (Р.: обессиливать; И.: drain of all strength; Т.: yorulmak) *ҡ. йүп.*

Көс, хәлдән яҙҙырыу, хәлдән тайҙырыу. □ Обессиливать, ослаблять, изнурять, изматывать. *Ауырыу бәҫһеҙләндергән.*

**БӘҪҺЕҘЛӘНЕҮ (бәҫһеҙлән-)** (Р.: обессиливать; И.: enfeeble; Т.: zayıflamak) *ҡ. йүп.*

Ныҡ арып, көс, хәлдән тайыу; арманһыҙ булыу. □ Обессиливать, слабеть, ослабевать. *Ауыр эштән бәҫһеҙләнеү.*

**БӘҪҺЕҘЛӘҮ (бәçһеҙлә-)** (Р.: обращаться небрежно; И.: be careless with one's clothes; Т.: yıpratmak) *ҡ.*

Әрһеҙ кейеп, ҡәҙерен ебәреү; ҡәҙерһеҙләү. □ Обращаться небрежно, неаккуратно *(с одеждой). Кейемде бәçһеҙләү.*

**БӘҪӘР.** (Р.: низкий; И.: undersized; Т.: kısa boylu) *с. диал.*

Бәләкәй кәүҙәле, бәләкәй. □ Низкий, низкорослый. *Бәçәр кеше.*

**БӘҪӘРЕҮ (бәçәр-)** (Р.: плесневать; И.: grow mouldy; Т.: küflenmek) *ҡ.*

**1.** Дым тартып, иçкереп, сереп, күк менән ҡапланыу; күгәреү. □ Плесневеть, покрываться плесенью *(от сырости). Бәçәргән бесән. Кейем бәçәргән.* ■ *Һандыҡ төбөндә бәçәреп ятҡан .. нәмәләр, ҡунаҡтар күрһен өсөн генә, урҙаға менгән.* Ж. Кейекбаев. *Түбә таҡталары күгәреп, бәçәреп бөткән.* И. Көçәпҡол. *Иçкергән, бәçәргән был өйҙөң эсе лә бик ярлы.* С. Агиш. *Бүрәнәләре бәçәргән, лапаштың бөткән өйҙәр күҙенә эләккәс, Төлкөсураның таң матурлығы биргән кәйефе бөтөнләй үҙгәрҙе, күрһенәп, ҡараштың аяғы осона төбәне.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ҡартайып, һүнеп, ҡарыуһыҙланыу. □ Ослабевать, обессиливаться *(от старости). Бәçәреп китеү.* ■ *Шулай, иçке тормошта күп тороп, ҡартайған ул элек, бәçәргән. Ләкин хәҙер яңы көстәр, яңы йәш рухтар менән йәшәргән.* М. Ғафури.

**БӘҪӘРТЕҮ (бәçәрт-)** (Р.: дать заплесневать; И.: let become mouldy; Т.: çürütmek) *ҡ.*

**1.** Киптермәй ятҡырып, күгәртеү, серетеү. □ Дать заплесневеть, подвергать гниению *(в сырости). Бесәнде бәçәртеү. Кейемде бәçәртеү.* ■ *Тәүҙә быçҡып ҡына, нәҙек кенә төтөн юлаҡтары күренде, тора-бара ул шәбәйҙе һәм оҙаҡламай урмандағы көҙгө ямғырҙар бәçәрткән үләндәрҙең, серек ҡыçҡаләрҙең еçенә әскелтем төтөн еçе ҡатнашты.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Быҡтырыу. □ Тушить. *Ҡурай еләгенең япрағын бәçәртеп сәй итеп эстек.*

**БӘТИӘ** [ғәр. بطيء] (Р.: медленный; И.: sluggish; Т.: yavaş) *с. иçк.*

**1.** Әкрен, яй. □ Медленный. *Бәтиә ҡыланыш.*

**2.** Ығыш. □ Копотливый, медлительный. *Бәтиә эшсе. Бәтиә ҡыҙ.*

**3.** Ялҡау. □ Ленивый, нерадивый. *Бәтиә егет.*

**БӘТЛЕК (бәтлеге)** (Р.: зло; И.: evil; Т.: kötülük) *и. диал.*

Яуызлыҡ, насарлыҡ, этлек. □ Зло. *Бәтлек ҡылыу. Ул бер бәтлек уйлап эшләгән. Бәтлек уйлап әйткәндер.*

♦ **Бәтлектән башы сыҡмау** үсләшеп йөрөү. □ Враждовать, задумать недоброе.

**БӘТСӘ** [фарс. بچه] (Р.: мальчик-слуга; И.: boy-servant; Т.: hizmetçi erkek) *и. иçк.*

Хеҙмәтсе малай. □ Мальчик-слуга. ■ *Ун дүрт-ун биштәргә еткәс, ишан уны [Мәтяҡупты] үҙенең бәтсәһе иткән, мыйыҡ сыға башлағас, бәтсәлектән сығарып, мәҙрәсәгә биргән.* А. Таһиров.

**БӘТӘШӘ** *и. диал. ҡар.* **босҡаҡ.** *Кун бәтәшәһе.*

**БӘҮБӘК (бәүбәге)** (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әй ҡәбиләһе аймағы. □ Баубәк *(название родового подразделения башкир племени ай). Бәүбәк аймағы башҡорто.*

**БӘҮ-БӘҮ** (Р.: баю-бай; И.: bye baby!; Т.: ninni) *ымл.*

Йәш баланы көйләп бәүеткәндә әйтелә; әүәй-әүәй. □ Бай-бай, баю-бай, баюшки-баю, баю-баюшки-баю. ■ *Бәү-бәү, бәү-бәү, йом күҙең, йокла, балам, йондоҙом.* Сәңгелдәк йырынан.

**БӘҮ-БӘҮ БУЛЫУ (бәү-бәү бул-)** (Р.: заснуть; И.: fall asleep; Т.: uyumak) *ҡ. бал.*

Йоҡлап китеү. □ Заснуть. *Балаға бәү-бәү булырға ваҡыт.*

**БӘҮ-БӘҮ ИТЕҮ (бәү-бәү ит-)** (Р.: спать; И.: sleep, be asleep; Т.: uyumak) *ҡ. бал.*

Йоҡлау. □ Спать. *Бәпес бәү-бәү итә.*

**БӘҮЕЛ** [ғәр. بول] ] (Р.: моча; И.: urine; Т.: bevil) *и.*

Матдәләр алмашыныу аҙығы булараҡ бөйөрҙән бүленеп, организмдан бәүел юлдары аша тышҡа сыҡҡан шыйыҡлыҡ; кесе ярау. □ Моча. *Бәүел ҡыуығы. Бәүел юлы. Бәүел итеү.*

**БӘҮЕЛГЕС** *и. диал. ҡар.* **бәүелсәк I.** *Бәүелгестә эйеү.*

**БӘҮЕЛДЕРЕК (бәүелдереге)** *и. диал. ҡар.* **бәүелсәк I.** *Бәүелдеректә бәүелеү.*

**БӘҮЕЛДЕРЕҮ (бәүелдер-)** (Р.: качать; И.: sway, rock; Т.: sallamak) *ҡ.*

Ян-яҡҡа сайҡалдырыу, бәүелтеү, тирбәлдереү. □ Качать, раскачивать *кого-что. Аяҡтарҙы бәүелдереү.* ■ *[Карт] аяҡтарын бәүелдереп арбала ғәмһеҙ генә ултырған .. малайға ҡысҡырҙы.* Я. Хамматов. *Тулҡындарҙы бәүелдереп, елбер-елбер ел уҙа.* С. Әлибаев. *Иртәгәһенә ҡыҙҙың иртүк, көйәнтәһенә элгән күнәктәрен бәүелдереп, һыуға китеп барғанын күргәс, [Уйылдан] һис ни уйлап тормаҫтан, кәртә артына сығып торҙо ла һыу алғыска йүгерҙе.* Н. Мусин.

**БӘҮЕЛЕҮ (бәүел-)** (Р.: качаться; И.: sway, swing; Т.: sallanmak) *ҡ.*

**1.** Берәй нимәлә бер яҡтан икенсе яҡҡа йәки аҫтан өҫкә сайҡалыу. □ Качаться, раскачиваться. *Бәүелсәктә бәүелеү.* ■ *[Булат:] Япма аҫтындағы дилбәгәне бәйләп, бәүелгес эшләнем дә .. башта үҙем бәүелеп ҡараным.* К. Кинйәбулатова. *Унда [баҡсала] ҡасандыр ҡартатайым бәүелеп уйнаған йыуан өйәңке.* Г. Ғиззәтуллина.

**2.** Торған йәки ултырған ерҙән ян-яҡҡа сайҡалыу. □ Качаться, раскачиваться. *Ағастар елгә бәүелә.* ■ *Урмандарҙа ағас бәүелгән, болот тетрәп, ямғыр түгелгән.* М. Кәрим. *Ат юрғалай. сана йомшаҡ һелкенә. Йәнοҙаҡ бара бәүелеп хыял иркенә.* А. Игебаев. *[Айһылыуҙың] аяҡ быуындары тотмай башлағандай итеп, елдә сайҡалған тал сыбыҡ шикелле бәүелеп торҙо.* З. Биишева.

**3.** *күсм.* Талғын ғына тирбәлеү, сайҡалыу. □ Качаться, колебаться. ■ *Турыҡайҙың кештәүенә яуап булғандай, әкрен генә иҫкән йылы ел менән йылҡы көтөүсеһенең моңло йыры бәүелә-бәүелә Вәхиткә килеп етте.* С. Ильясов.

**БӘҮЕЛЙЕТЕҮ (бәүелйет-)** (Р.: медленно качать; И.: rock slowly; Т.: yavaş yavaş sallamak) *ҡ.*

Яй ғына, еңел генә бәүелтеү, әкрен генә тирбәлтеү. □ Медленно качать, раскачивать. *Кәмәне бәүелйетеп кенә алып барыу.*

**БӘҮЕЛЙЕҮ (бәүелйе-)** (Р.: медленно качаться; И.: swing slowly; Т.: yavaşça sallanmak) *ҡ.*

Яй ғына, еңел генә бәүелеү, әкрен генә тирбәлеү. □ Медленно качаться, раскачиваться. ■ *Теплоходтар үтә бәүелйеп.* Я. Ҡолмой.

**БӘҮЕЛ КӨПШӘҺЕ** (Р.: мочеточник; И.: ureter; Т.: üreter) *и. анат.*

Бөйөрҙәрҙән бәүел ҡыуығына бара торған көпшәләр. □ Мочеточник. *Бәүел көпшәһе эшмәкәрлеге.*

**БӘҮЕЛ ҠЫУЫҒЫ** (Р.: пузырь мочевой; И.: urinary bladder; Т.: mesane) *и. анат.*

Кеше һәм хайуандарҙа бәүел йыйыла торғай тоҡсай һымаҡ эске ағза. □ Пузырь мочевой. *Бәүел ҡыуығы шартлау.*

**БӘҮЕЛМӘЛЕ** *и. ҡар.* **аҫмалы.** *Бәүелмәле күпер.*

**БӘҮЕЛСӘК I (бәүелсәге)** (Р.: качели; И.: swing; Т.: salıncak) *и.*

Бәүелеп уйнай торған ҡулайлама. □ Качели. *Бәүелсәктә бәүелеү.*

**БӘҮЕЛСӘК II (бәүелсәге)** (Р.: ухабистая дорога; И.: a bumpy road; Т.: sarsıntılı yol) *и.*

Соҡор-саҡыр юл. □ Ухабистая дорога. *Бәүелсәктән барыу.*

**БӘҮЕЛСӘК ЯБАЛАҠ (ябалағы)** *и. зоол. диал. ҡар.* **байғош.** *Бәүелсәк ябалаҡтар оса.*

**БӘҮЕЛТЕРЕК (бәүелтереге)** *и. диал. ҡар.* **бәүелсәк I.** *Бәүелтеректә бәүелеү.*

**БӘҮЕЛТЕҮ (бәүелт-)** (Р.: качать; И.: rock, swing; Т.: sallandırmak) *ҡ.*

Ян-яҡҡа сайҡалтыу; тирбәлтеү, бәүелдереү. □ Качать, раскачивать *кого-что.* ■ *Пароход артынан ҡаса барған бейек тулҡындар*

*һалды быуындары менән бәүелтә.* Ж. Кейекбаев. *Кеше ҡулындағы ҡурай иһә, берсә ыҙғы таштыҡындарҙағыса ярһыу көс менән, берсә эргәлә шым ғына сылтырап ағып ятҡан ҡаран тауышындай һәүетемсә көй һуҙып, бөтә тирәне моңонда бәүелтә бирә.* Н. Мусин. *Закир ҡабаланып тәҙрәгә боролдо. Унда ҡолонсаҡ шикелле шыма, йылғыр һынлы, һары сәсле һылыу бер ҡыҙ, зәңгәр күнәктәрен бәүелтә-бәүелтә, яй ғына үрге оска, йылғаға табан уҙып бара ине.* З. Биишева.

**БӘҮЕЛ ТОТҠАРЛАНЫУ (бәүел тотҡарлан-)** (Р.: задержание мочи; И.: retain (*urine*); Т.: idrar retansiyonu) *ҡ. мед.*

Бәүел ҡыуығының үҙ аллы бушаныу һәләтен юғалтыуы. □ Задерживаться *(о моче). Бәүел тотҡарланыуҙан яфаланыу.*

**БӘҮЕЛ ЮЛЫ** (Р.: канал мочеиспускательный; И.: urethra; Т.: sidik borusu) *и. анат.*

Бөйөрҙәрҙе бәүел ҡыуығы менән тоташтырыусы канал. □ Канал мочеиспускательный, уретра. *Бәүел юлы ауырыуҙары.*

**БӘҮЕТЕҮ (бәүет-)** (Р.: качать; И.: swing, rock; Т.: sallamak) *ҡ.*

**1.** Ян-яҡҡа сайҡау; тирбәтеү, бер тигеҙ генә һелкетеү. □ Качать, раскачивать *кого-что. Баланы бәүетеү. Сәңгелдәкте бәүетеү.* ■ *[Низам — ҡыҙына:] Сәңгелдәктә ятҡан саҡтарыңда, .. һине төнгө сәғәттәрҙә тороп бәүетә инем.* Р. Ниғмәти. *Емеш, ҡула ҡаҙанда иртәнге сәй ҡайнатып йөрөгән апаһының ниндәйҙер үтә моңло оҙон көйгә мөңрәүенә ҡолаҡ һала-һала, ҡыуышта сәңгелдәк бәүетеп ултырҙы.* З. Биишева. *Батша былар-ҙы шатланып ҡаршы ала. Вазифаңды үтәнең тип, мәскәйгә ҙур сәңгелдәк эшләтә, ике ялсы уны һәр ваҡыт тәрбиәләп, бәүетеп кенә торалар.* Әкиәттән.

**2.** *күсм.* Йөрәк, күңелде татлы хистәр менән наҙлау. □ Нежить, изнеживать сердце, душу. ■ *Беренсе һөйөүҙең йылы тулҡындары уның [Гөлйөҙөмдөң] йәш йөрәген иркәләп бәүетә.* Һ. Дәүләтшина. *Тулҡындарҙа бәүетәләр моңдо Ағиҙелкәй менән Ашҡаҙар.* Ғ. Рамазанов.

**3.** *миф.* Балаға һаулыҡ, муллыҡ, бәхет теләүгә йүнәлтелгән эш-хәрәкәт. □ Качать, раскачивать *(кого-л. или что-л.);* мифологизированное действие, направленное на обеспечение ребёнку здоровья, благополучия, счастливой судьбы. Существуют запреты, связанные с раскачиванием пустой колыбели. ■ *Буш сәңгелдәкте бәүетһәң, бала илаҡ була.* Экспедиция материалдарынан.

**БӘҮУАБ** [ғәр. بوّاب] (Р.: сторож; И.: watch(man), guard; Т.: bevvap) *и. иҫк.*

Ҡапҡа һаҡсыһы, ишек һаҡсыһы. □ Сторож.

**БӘҮУАБЕ ЙӘННӘТ** [ғәр. بوّاب الجنّة] (Р.: сторож райских ворот; И.: guard (at the Paradise gates); Т.: cennet kapılarının bevvabı) *и. иҫк.*

Ожмах ҡапҡаһының һаҡсыһы. □ Сторож райских ворот.

**БӘХАҠ** [фарс.-ғәр. بحق] (Р.: ради; И.: for the sake of; Т.: beha) *р. иҫк.*

*Кемдер* (*йәки ниҙер*) хаҡына, хаҡы өсөн. □ Ради, во имя *кого-чего.*

**БӘХЕР I** [ғәр. بحر] (Р.: море; И.: sea; Т.: bahr) *и. иҫк.*

Диңгеҙ. □ Море. *Бәхер буйы. Бәхер яры. Бәхерҙә һыу инеү.*

**БӘХЕР II** [ғәр. بحر] (Р.: большая река; И.: large river; Т.: büyük nehir) *и. иҫк.*

Оло йылға; иҙел. □ Большая река. *Бәхерҙә караптар.*

**БӘХЕР III** [ғәр. بحر] (Р.: размер арабского стиха; И.: metre of the Arabic verse; Т.: Arap şiiri boyutu) *и. иҫк.*

Ғәрәп шиғыр үлсәме. □ Размер арабского стиха.

**БӘХЕРНИСА** *и. диал. ҡар.* **баҡа I, 1.** *Күлдә бәхернисалар һикерешә.*

**БӘХЕТ** [фарс. بخت] (Р.: счастье; И.: happiness; Т.: mutluluk) *и.*

**1.** Бөтә яҡтан теүәл булып, ысын ҡәнәғәтлек, шатлыҡ биргән яҡшы тормош хәле һәм хисе; ырыҫ. □ Счастье. *Аҡ бәхет. Ил бәхете. Кеше бәхете. Бәхет табыу. Бәхет теләү.* ■ *Был донъяҡайҙарҙың рәхәтлеген күреп булмай бәхет булмағас.* Халыҡ йы-

рынан. *[Шәһиҙә әбей:] Ҡәйнешеңдең бәхете асылһын. Күрмәгә бик һәйбәт, бик һөйкөмлө бала.* Һ. Дәүләтшина. *Таиба әбейҙең бәхете, яҙғы Оло Эйек шикелле, ярҙарынан ашып сыкты: бынан аҙна-ун көн элек кенә уның өлкән улы Хаммат ҡайтып килгәйне.* З. Биишева. *Беҙҙең үҙ бәхетебеҙҙе һынап тораһы юк инде, балаларҙыҡын белергә кәрәк ине, — тип әйтте, ти.* Әкиәттән. *Һөрт йәшеңде! Ана, бөтә бәхет, ырыҫтарың ҡайтҡан, ишләнгән.* Д. Юлтый.

**2.** Эш, тормоштағы уңыш. □ Счастье, успех, везение. ■ *Ҡул эйәһе үҙенең йылҡы өйөрөнән иң яҡшы атты һайлап, Әбйәлилгә килтереп биргән. Әбйәлил көтмәгәндә килгән был бәхеткә ҡыуанып, арғымаҡҡа атланған да өйөнә сабып ҡайтып киткән, ти.* Әкиәттән. *[Мәғфиә:] Бәхетең — атайыңдар яусылатып өлгөрҙө. Юғиһә, .. Сәбиләне алыр инең.* Б. Бикбай. *[Бибеш:] Бына шулай итеп, бейем әйтмешләй, беҙгә бәхет артынан бәхет, шатлыҡ артынан шатлыҡ эйәреп килеп кенә торор!* З. Биишева.

**3.** Башҡа төшкән яҙмыш; өлөш. □ Доля. *Бәхете баланан. Бәхете эштән.* ■ *[Бабайҙың] Биктимер исемле кесе улына бер насар ғына ат ҡараған. ти. «Ярар. бәхетем шулдыр инде», — тип уйлаған, ти, Биктимер.* Әкиәттән. *Батшаның яҡын кешеләре тағы .. тауыш күтәрә. «Бәхетенә тура килгәс, ярар инде», — ти батша.* Әкиәттән. *Дөрөҫ, өйөр-өйөр йылҡы көтөп, икһеҙ-сикһеҙ урмандар, далалар гиҙеп, йәйләп йәшәү бәхете һәр кемгә лә тигеҙ теймәгән.* Ә. Хәкимов.

♦ **Аҡ бәхет** ғүмер буйына кеше менән бергә йөрөгән, яҙмышына бәйләнгән ҙур уңыш. □ Счастье. *досл.* Белое счастье. *Аҡ бәхет теләү.* **Аяклы бәхет** берәй ҡыуаныс алып килгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Вестник счастья *(о человеке, который принёс радостную весть).* ■ *Ғәлим ағай өйгә ҡайтып ингән аяклы бәхет булып күренде.* Д. Юлтый. **Бәхет асҡысы** бәхет биргән сәбәп. □ Ключи от счастья. **Бәхет асылыу** эш, тормош уңайға китеү. □ Счастье улыбнулось, счастье привалило *кому.* **Бәхет йондоҙо ҡалҡыу** гел генә уңышҡа ирешеп тороу, ыңғай килеп тороу. □ Процветать, счастье улыбнулось, нахлынуло, дела пошли на лад. ■ *Сабираның да бәхет йондоҙо ҡалҡты инде былай булғас.* И. Ғиззәтуллин. **Бәхете арткыр(ы)** берәүҙе йомшаҡ итеп орошҡанда йәки берәй эшенә һоҡланғанда әйтелә. □ Пусть счастье ему привалит. **Бәхете бар икән** берәү бер яҡшы хәлгә осрағанда әйтелә. □ Везёт же ему. **Бәхете булһын** теләк теләп әйтелә. □ Пусть счастье ему сопутствует. **Бәхете таш ярыу** көткән, өмөт иткән нәмә үҙенән-үҙе килеү. □ Счастье привалило *кому-л.* ■ *Бер көндө иртән Фәһимдең бәхете таш ярҙы. Фәйрүзә уны руль артына ултыртты.* Ә. Гәрәев. **Бәхеткә ҡаршы** берәй нәмәгә ҡарата ҡәнәғәтлек белдергәндә әйтелә. □ К счастью. ■ *Бәхеткә ҡаршы, Ҡола ҡашҡа бәләҡазаға дусар булманы.* С. Кулибай. *Бәхеткә ҡаршы, оҙаҡламай Хасбулат олатайҙың йөҙө тағы ла асылып, күҙҙәре ирәбеләнеп китте.* З. Биишева. **[Кемдеңдер] бәхетенән** берәүгә уңай килгән бер нәмә булғанда йәки булырын теләгәндә әйтелә. □ По счастью, к счастью. ■ *[Үмәр:] Балалар бәхетенән үҫеп китһә, аҙ булһа ла тамаҡлыҡ булыр.* Һ. Дәүләтшина.

**БӘХЕТ ҠОШО** (Р.: птица счастья; И.: heaven's bird; Т.: devlet kuşu) *и. миф.*

Бәхет сығанағы һәм бәхет символы, кемде бәхетле итергә теләй, шуға ҡуна. □ Птица счастья, которая садится на того, кого хочет сделать счастливым. *Бәхет ҡошо бик һирәктәргә генә ҡуна. Бәхет ҡошо ҡунғанда беленмәй, осоп киткәс беленә.* ■ *Әсмәнең йөрәгендәге үҙгәреште Заһир шунда уҡ һиҙеп алды, бәхет ҡошо уның ҡулына килеп ҡуна түгелме?* Л. Яҡшыбаева.

**БӘХЕТЛЕ** (Р.: счастливый; И.: happy; Т.: bahtlı) *с.*

**1.** Бәхете булған, бәхете бар. □ Счастливый. *Бәхетле кеше. Бәхетле ил. Бәхетле булыу.* ■ *Беҙ бәхетле бала булһаҡ, китмәҫ инек ил ташлап.* Халыҡ йырынан. *Алтынбайҙың күңеле елкенә, ҡанатлана, үҙен әллә ҡайҙарға*

*китер һымаҡ тоя, бәхетле булып тойолған яҙмыш, хыялдар ситкә саҡыра.* З. Ураҡсин. *Ул көндө Гөлбаныуға Тирәкленән дә матур ер, унан да бәхетле кеше юҡ кеүек тойолдо.* Т. Ғарипова.

**2.** Бәхет белдергән, бәхет менән һуғарылған. □ Счастливый. *Бәхетле ҡараш. Бәхетле йылмайыу.* ■ *Бәхетле генә тороп ятҡанда, Сөйәл байҙың әсәһе үлеп киткән.* Әкиәттән.

**3.** Уңыш, шатлыҡ бирерҙәй бер хәлваҡиғалы, бәхет менән тулы. □ Счастливый. *Бәхетле көн. Бәхетле бала саҡ. Бәхетле тормош. Бәхетле яҙмыш. Бәхетле йәшәү.* ■ *Яҡында ғына дөпөлдәгән тос, кескәй ялан аяҡ тауышы уны тағы бәхетле хыял донъяһынан тартып сығарҙы. «Кем булыр? Моғайын, Шәүрәләр. Уның аяғы шулай тос баҫа торған», — тип иренеп кенә уйланды Емеш.* З. Биишева.

♦ **Бәхетле бул** теләк теләгәндә әйтелә. □ Будь счастлив.

**БӘХЕТҺЕҘ** (Р.: несчастный; И.: ill-fated; Т.: bahtsız) *с.*

**1.** Бәхеттән мәхрүм булған, бәхете булмаған. □ Несчастный, несчастливый. *Бәхетһеҙ кеше. Бәхетһеҙ мөхәббәт. Бәхетһеҙ булыу.* ■ *Бәхетһеҙ башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй һаман зарығып, һарыға һабышҡан Зөлхизә.* Н. Иҙелбай. *Бәхеттең иң ҙуры беләһегеҙме ниҙә? Бәхетһеҙ кешене бәхетле итеүҙә.* М. Хәй. ● *Бәхетһеҙгә ел ҡаршы.* Мәҡәл.

**2.** Ҡайғылы, борсоулы һ. б. хәлде белдергән. □ Несчастный, печальный. *Бәхетһеҙ киәфәт.*

♦ **Бәхетһеҙгә ваҡытһыҙ** ҡыҫтау ваҡытта көтөлмәгән тоткарлыҡ килеп сыҡҡанда әйтелә. □ Некстати. ■ *Бәхетһеҙгә ваҡытһыҙ тигәндәй, геологтар килеп төштө.* Ә. Вахитов.

**БӘХЕТҺЕҘЛЕК (бәхетһеҙлеге)** (Р.: несчастье; И.: misfortune; Т.: bahtsızlık) *и.*

Бәхетһеҙ хәл йәки ваҡиға. □ Несчастье, беда. *Бәхетһеҙлеккә осрау.* ■ *Бәхет һәм бәхетһеҙлек, һөйөү, һөйөлөү хаҡында тик өмөтһөҙ генә уйларға өйрәнгән Закир ҙа ғүмерендә тәү тапҡыр осратҡан бына ошо саф, керһеҙ мөхәббәт алдында әҙ генә, бер генә минутҡа ҡаушап, икеләнеп ҡалды.* З. Биишева.

♦ **Бәхетһеҙлеккә ҡаршы** үкенесте, көйөнөстө белдергәндә әйтелә. □ К несчастью. ■ *Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, .. көн боҙолоп китте.* М. Тажи.

**БӘХЕТ-ЫРЫҪ** *и. йыйн. ҡар.* **бәхет 1.** *Бәхет-ырыҫ килеү.*

**БӘХЕШ** [фарс. بخش] *и. иҫк. кит. ҡар.* **бүләк I**. *Бәхеш итеү.*

**БӘХИЛ** [фарс. بحل] (Р.: благословляющий; И.: blessing; Т.: razı) *р.*

*Кемгәләр* үпкә, асыу тотмаған, эш, ҡылығына риза булған, эш, ҡылығын ғәфү иткән, ризалыҡлы. □ Благославляющий. *Бәхил итеү. Мин һинән бәхил.* ■ *[Атаһы — ҡыҙына:] Беҙҙең һүҙҙе тыңламаһаң, мәңге бәхил түгелбеҙ.* И. Көҫәпҡол.

**БӘХИЛ БУЛЫУ (бәхил бул-)** (Р.: прощать; И.: remember kindly; Т.: helal etmek) *ҡ.*

Риза булып ҡалыу, ғәфү итеү. □ Прощать, не поминать лихом. *Мырҙаҡайҙы бер күрмәһәм дә бәхил булыр инем.* ■ *Әйләнәтирәләге бөтә тауҙар, урмандар, сәскәләр ҙә, гүйә, Сәлимәнең һуңғы һүҙен ҡабатланылар: «Бәхил бул, әйнем! Бәхил бул...»* З. Биишева. *Был китеүҙән ҡайта алмаһаҡ, бәхил булың, туғандар.* Халыҡ йырынан.

**БӘХИЛЛЕК (бәхиллеге)** (Р.: прощение; И.: pardon; absolution; Т.: affetme) *и.*

*Кемдеңдер* эш, ҡылығын ғәфү итеп әйткән ризалыҡ. □ Прощение, помилование. *Бәхиллек алыу. Бәхиллек биреү. Бәхиллек һорау.* ■ *[Атаһы — улына:] Бәхиллек юҡ һиңә.. Беҙҙең йортҡа аяҡ баҫмаҫһың.* Ғ. Хәйри.

**БӘХИЛЛӘТЕҮ (бәхилләт-)** (Р.: получить согласие; И.: receive consent; Т.: razı ettirmek) *ҡ.*

Өҫтәге бер бурысты ҡайтарып, ризалыҡ алыу. □ Получить согласие. ■ *Әсә хәстәре! Ах, уны ни менән генә бәхилләтеп бөтөрмәк кәрәк.* Ф. Иҫәнғолов.

**БӘХИЛЛӘҮ (бәхилл-)** (Р.: прощать; И.: pardon, forgive; Т.: affetmek) *к.*

*Кемдеңдер* эш, ҡылығын ғәфү итеп, ризалыҡта ҡалыу. □ Прощать. *Ғәйепләне бәхилләү.* ■ *[Зиннәт:] Күрше булып, һеҙгә бер йәберем теймәне. Ә һеҙҙән күргәндәремде бәхилләнем. Хушығыҙ.* Х. Ибраһимов. *Һин минең ҡылған эштәремде бәхиллә, — тип ҡарт, ҡатынына ялынып илап ебәргән, ти.* Әкиәттән.

**БӘХИЛЛӘШЕҮ (бәхилләш-)** (Р.: прощаться; И.: bid adieu; bid farewell; Т.: veda etmek) *к.*

Үҙ-ара ризалыҡ алып, хушлашыу *(үлер алдынан йәки ауыр юл алдынан).* □ Прощаться *(перед смертью или долгой опасной дорогой). Бәхилләшеп китеү.* ■ *[Шафиҡ] ҡарт менән хушлашырға халыҡ күп йыйылды. Берәүҙәре бәхилләшеп сыға, икенселәре инә.* Ә. Вахитов.

**БӘХИЛЛӘШТЕРЕҮ (бәхилләштер-)** (Р.: получить согласие; И.: get consent; Т.: razı etmek) *к.*

Өҫтәге бер бурысты ҡайтарып, ризалатыу; бәхилләтеү. □ Получить согласие. ■ *[Сәмреғош:] Балаларымды ҡотҡарған өсөн .. нимә менән генә бәхилләштерәйем икән?* Әкиәттән.

**БӘХМҮС** *и. диал. ҡар.* **бәхмәт.** ■ *Умырзая тотоп, нисә тапҡыр кәкүктәрҙән хатта көнләшеп, ерән бәхмүсемдә һиңә саптым ҡалҡмаҫ элек ҡояш көндәшем.* С. Кулибай.

**БӘХМӘТ** (Р.: рысак; И.: trotter; Т.: paça) *и.*

Бик яҡшы йүгерек тоҡом аты. □ Рысак. *Бәхмәт тоҡомло ат.* ■ *— Һин ҡайһыһы уҙыр тиең? — Күге. — Уҙыр, уҙмай ни. Турыһы уҙа! — Турыһы кем айғыры һуң? — Кемдеке икәнен белмәйем. Илла ул бәхмәт тоҡомонан.* Я. Хамматов.

**БӘХР** [ғәр. بحر] *и. иҫк. кит. ҡар.* **диңгеҙ.** *Бәхре Сыяһ. Бәхре Сәфит. Бәхре Хәзәр.*

**БӘХРӘН** [ғәр. بحرا] (Р.: морским путём; И.: by sea; Т.: bahren) *р. иҫк.*

Диңгеҙ юлы менән, диңгеҙ менән. □ Морским путём.

**БӘХТЕЙӘР I** [фарс. بختيار ] (Р.: счастливый; И.: happy; Т.: bahtiyar) *с. шиғр.*

Бәхетле, ырыҫлы. □ Счастливый. ■ *Сер бирмәй, ҡырын ятып ҡарап торһам, шул ваҡыт мин был донъяның бәхтейәре.* М. Ғафури.

**БӘХТЕЙӘР II** [фарс. بختيار] (Р.: название родового подразделения башкир; И.: name of a Bashkir clanal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡаңны ҡәбиләһе аймағы. □ Бахтияр *(название родового подразделения башкир племени канлы). Бәхтейәр аймағы башҡорто.*

**БӘХШИШ** [фарс. بخشش] *и. ҡар.* **бүләк I.**

**БӘХӘС** [ғәр. بحث] (Р.: спор; И.: argument, controversy; bet; Т.: bahis) *и.*

**1.** *Берәй* мәсьәлә тирәһендәге төрлө фекер, һүҙ көрәше. □ Спор, пари. *Бәхәс асыу. Бәхәс ҡороу. Бәхәскә инеү. Бәхәскә килеү.* ■ *Ҡотлоғужа дилбегәне үҙ ҡулына алғанлыҡтан, һөйләшеү бәхәстәр ҡуҙғатманы.* Н. Мусин.

**2.** *Берәй нәмә* тураһында ҡапма-ҡаршы фекер булып, һәр кем үҙенекен дөрөҫ тип ныҡышҡанда, отолор кешегә алдан шарт ҡуйып эшләнә торған һүҙ көрәше. □ Спор, пари. *Бәхәсте отоу. Бәхәсте оттороу.*

